Талха Ғиниәтуллин

# Һин аҡ ҡайын янында тора инең...



Талха Ғиниәтуллин

# Кин ак кайын янында тора инең...

ПОВЕСТАР
ХИКӘЙӘЛӘР

КИТАП
Өфө
2007

УДК 821.512.141-3
ББК 84-4 (2 Рос = Баш)
Ғ 37

*Әмир Әминев тәржемәһендә*

**Талха Ғиниәтуллин**
Ғ 37 Һин аҡ ҡайын янында тора инең... Повестар, хикәйәләр. — Өфө: Китап, 2007. — 528 бит.

ISBN 978-5-295-04200-3

Башҡорт һәм рус прозаһының күренекле вәкиле Талха Ғиниәтуллиндың (Анатолий Генатулин) был китабының үҙәгендә — һуғыш, һуғыш ҡалдырған тән һәм йән яралары, шулай уҡ саф мөхәббәт тойғолары йөрөткән кеше яҙмыштары.

УДК 821.512.141-3
ТП — 105/07 ББК 84-4 (2 Рос = Баш)

ISBN 978-5-295-04200-3

© Т. Й. Ғиниәтуллин, 2007
© Ә. М. Әминев, тәржемә, 2007



ПОВЕСТАР

# *Бына һуғыш бөтөр ҙә...*

Һуғыш көнбайышҡа тәгәрәне. Көнбайыштағы сик буйынан Волга ярҙарынаса ғәйәт ҙур территорияны ҡанға батырып, үҙе артынан көлгә әйләндерелгән ауылдар, харабаға әйләндерелгән емерек ҡалалар, баҫыу-яландарҙа һәм юл буйҙарында ватыҡ металл өйөмдәре, күмелмәгән-ерләнмәгән кеше һөйәктәре, һалдат ҡәберҙәре ҡалдырып һуғыш артҡа, үҙе килгән яҡҡа, тәгәрәне, дошман шыңшый-шыңшый, ыңғыраша-ыңғыраша 1941 йылдың 22 июнендә үҙе башлаған ҡанлы өңөнә кире шыуышты.

Хәҙер, ҡырҡ бишенсе йылдың башында, фашист хәшәрәттәренән таҙартылған, һаҫыҡ һауанан арындырылған беҙҙең киң ерҙәр алыҫта, тыуған яҡтарҙа ята һәм беҙ, беҙҙең фронт, беҙҙең армия, беҙҙең дивизиялар һәм полктар, Германия сиктәренә етеп бара. Беҙ инде һуғыштың тиҙҙән бөтәсәгенә ышанабыҙ. Яҙға, уҙа барһа йәйгә, ул тамамланырға тейеш. Беҙ, һалдаттар, үҙебеҙҙең өй, йорт тураһындағы татлы хәбәрҙәребеҙҙә, һуғыштан һуң тормош ниндәй булырға тейеш тигән һөйләшеүҙәрҙә, унан килеп әсәйҙәргә, ҡатындарға, һөйгәндәргә яҙған хаттарҙа гел генә «Бына һуғыш бөтөр ҙә...» тигән өмөтлө һүҙҙәрҙе ҡушып һөйләйбеҙ, яҙабыҙ...

Беҙҙең өсөнсө гвардия кавалерия корпусы, былтыр Август ҡалаһы янында ташлаған листовкаларында аталған-

са «осликовский башкиҫәрҙәре» (мин ул саҡта был часта юҡ инем әле, һуңынан егеттәр әйтте), Нарев тирәһендәге ҡаты алыштарҙан һуң фронтты өҙҙө лә утлы өйөр булып Польша-Германия сигенә ырғылды. Быңдай саялыҡ беренсегә түгел — тәүҙә пехота немецтарҙың оборонаһында йомшаҡ урынды ҡапшай, унан ошо «ярыҡҡа» беҙ, «копытниктар», бәреп инәбеҙ. Белоруссияла ла ошо алым ҡулланылды. Польшаның Август ҡалаһы янында ла, кавалеристар артынан йыш ҡына фронт бикләнеп-тоташып ҡуя, немецтар корпусты ҡамарға, уны ҡапҡанға эләктерергә маташа, әммә атлылар һуғыша-һуғыша алға бара, немецтарҙы юлдарынан алып ташлап гел генә үҙебеҙҙекеләргә ҡушылыу әмәлен таба.

Мин, Ғәйнуллин Тәлғәт, йәки Ғәйнуллин Толя, 5-се дивизия штабындағы комендант эскадронында ат ҡараусы йәғни коновод булып хеҙмәт итәм. Коновод офицерҙың атын ашата, тәрбиәләй, эсерә, таҙарта, дағалай һәм, кәрәк булыу менән эйәрләнгән әҙер атты офицерға тотторорға тейеш.

Мин элемтә бүлегендәге капитан Харибовтың коноводы инем. Харибов «Ганс» исемле трофейға эләккән ҡара атты менеп йөрөнө. Яҡшы ат ине был, сафта ла үҙен ипле тотто, тик ҡурҡағыраҡ булды. Капитандың ҡулына ул Сталинград янында эләгә. Мин «Гансты» немец заразаһы тип атаным.

Форсированный марш менән барҙыҡ, йәғни ғәҙәттәгесә биш-алты саҡрымдан аттан төшөп атламаныҡ. Ҡышҡыһын тик тороп ял иткән аттар «повод» тигән бойороҡто ишетеү менән юртыуға күсә, әммә беҙ, «копытниктар», быңдай оҙаҡ һыбай йөрөүҙе онотҡанбыҙ, шунлыҡтан унлап саҡрым үткәс арҡа-бил тирәһендә талыу, аяҡ-тубыҡтарҙа арыу һиҙелә.

Польшаның көнбайышындағы йылы епшек ҡыш; барыуы ауыр, түбәндә генә аҫылынып торған һоро болоттарҙан туҡтауһыҙ эре, еүеш ҡар ҡойола. Ғинуар көнө ҡыҫҡа, әйтерһең дә, кис әлеге ҡар бөртөктәре менән бергә төшә. Ҡар баҫҡан яландар, тегендә-бында һерәйешеп торған ҡоро оҙон үләндәр, кәкре-бөкрө яланғас талдар араһынан бәләкәй ауылдар, утарҙар шәйләнә. Сүккән, ҡыйыҡтары ишелеп төшкән йорт ишараларының ваҡ тәҙрәләре таҡта киҫәктәре менән арҡыс-торҡос ҡаҙаҡланған. Һарайҙар, лапаҫтар емерек, ишелеп төшөп бөткән. Баштарындағы һаламды ел туҙҙырған. Был ауыл, утарҙарҙың береһендә

лә кеше уты ла, мейес торбаларынан сыҡҡан төтөн дә күренмәй — бар ер ташландыҡ, тормош юҡ. Кешеләр, күрәһең, үҙ ояларын күптән ташлап киткән. Кем булған улар, ҡайҙа киткән, ниңә киткән? Бәлки, үлеп бөткәндәрҙер һәм был ҡара-һоро емереклектәр — өйҙәр түгел, ә ҡәберҙәрҙер?

Сик буйына яҡынлашабыҙ, тинеләр.

Йоҡоһоҙ төнгө марш ифрат ауыр. Ҡасандыр пехотала хеҙмәт иткәндә мин барған көйө йоҡлай торғайным. Етмәһә, төштәр күрәм. Фронтта мин ағасҡа йәки окоп стенаһына һөйәлгән көйө лә йоҡларға өйрәнеп алдым. Ултырған йәки ятҡан көйө. Ҡар өҫтөндә, хатта бысраҡ эсендә йоҡлауға ла күнегелгәйне. Ә кавалерияла төнгө марштарҙа эйәр өҫтөндә йоҡлайым. Әлбиттә, ат атлап барғанда. «Повод» тигән бойороҡ бирелеп ат юртыуға күсһә инде йоҡо ҡаса, хәрәкәт, йөҙгә бәргән ел уны һыпырып ташлай.

Туҡтаныҡ. Дөм ҡараңғы. «Эскадрон, һоло алырға! Икмәк алырға!» — тигән бойороҡтар яңғырай. Харибов миңә «Ганс»ты тотторҙо ла элемтәселәр машинаһына китте. Аттарҙы ашаттыҡ, үҙебеҙ туң икмәк кимерҙек, унан йәнә төнгө ҡараңғылыҡҡа инеп сумдыҡ. Харибов үҙенең начальнигы, майор Власенко менән машинала бара, мин «Ганс»ты етәкләп алдым. Сикте үткәнбеҙҙер, беҙҙең аттар күптән немец еренән баралыр, тип уйлайым, әммә тирәяҡта — һаман шул ҡараңғылыҡҡа сумған яландар, ҡарайып күренгән ваҡ ҡыуаҡлыҡтар. Ҡай саҡ тормош уты һүнгән ауылдар аша үтәбеҙ, унан йәнә төнгө ялан, йөҙгә бәрелгән ел һәм эре ҡар бөртөгө.

Төн уртаһында алда ҡапыл «Катюша»лар йырлайзыңлай башланы. Әгәр уның залптарын ысынлап та йыр тип атап булһа, беҙҙең өсөн ул йыр һымаҡ яңғырай ине, ә дошман өсөн, моғайын да, шомло үлем тауышы һымаҡ яңғырағандыр. Көнбайыштың төнгө ҡараңғылығына утлы уҡтар оса, күпмелер ваҡыттан һуң алыҫта, алда, һаңғырау шартлауҙар гөрһөлдәй. Ә ярты сәғәтләп ваҡыттан түбәндә генә йөҙләгән болоттар араһында ал-ҡыҙыл ялҡындарын ялпылдатып ут тоҡана. Шул мәлдән беҙҙең хәрәкәт әкренәйә төштө. Иртәне ниндәйҙер бер ауылда ҡаршы алдыҡ, немец ерендәге тәүге иртәне мин хужалары ташлап киткән өйҙөң тышҡы стенаһына һөйәлгән һәм арыған аттарымдың йүгәндәрен тотҡан, һыуыҡтан тешем тешкә теймәй ҡалтыранған килеш ҡаршыланым. Яҡтыра килә көн асыл-

ғандай итте, тамам яҡтырғас мин Германияны, дөрөҫөрәге, үҙемде Германияла күрҙем.

— По коням!

Ура! Беҙ Германия буйлап барабыҙ!

Ике яғына ла ағас ултыртылған юл хужалары ташлап киткән, баштары шифер менән ябылған бер иш кирбес йорттар араһынан китте. Ситтә яңғыҙ утарҙар — уларында ла йәшәү уты юҡ — ҡала, ҡалҡыулыҡтар араһынан немец сиркәүҙәренең осло шпилдәре күренә. Польшала костелдәр ине, быларының нисек аталғанын мин әлегә белмәйем. Алда — янған, төтәгән, утҡа тотолған алғы һыҙыҡ. Беҙ, комендант эскадроны — ылауҙар, машиналар, кухня, ҡыҫҡаһы, ярайһы уҡ ҙур колонна — шул янған, төтәгән алғы һыҙыҡҡа китеп барабыҙ. Үҙ сиратында беҙҙең алдағы был алғы һыҙыҡ та, Германия эсенә шыла бара.

Штаб ниндәйҙер бер утарҙағы ҙур ағас йортҡа урынлашты. Байраҡ йөрөтөүселәр ҙә шунда тығылды, ә беҙ, бер нисә коновод (башҡаларҙың ҡайҙа боролғанын мин күрмәнем), аттарҙы таҡта аҙбарға индереп ҡуйҙыҡ. Аҙбарҙың сарҙағында бесән күп ине. Мин аттарҙы һуғарҙым, утлыҡсаны әлеге бесән менән тултырҙым да унан ашап алдым һәм аттарымдың томшоҡтары эргәһенә инеп яттым. Һис йоҡлап китеп булманы — һыуыҡ, йоҡоға китә башлау менән төш күрә башлайым. Имеш, боҙло һыуға батып барам, йәки шыр яланғас көйө ҡар өҫтөндә ятам. Унан, йоҡлап китеп үҙебеҙҙекеләрҙән тороп ҡалыуҙан да шөрләйем. Мин быны Сувалкиҙа саҡта уҡ аңлағайным: комендант эскадроны һиңә артыңдан күҙ яҙҙырмай ҡарап-тикшереп йөрөүсе взвод командиры ярҙамсыһы булған ябай пехота ротаһы түгел. Бында, комендант эскадронында, взводныйҙар һәм сержанттар булһа ла, һәр кем үҙе өсөн үҙе яуап бирә йәки иң яҡшы тигәндә, кешеләр бәләкәй-бәләкәй төркөмдәргә берләшә, шул рәүешле бер-береһен ҡарай, ә мин бында һаман һалынған ямау рәүешендә. Бөтәһе лә таралышып бөттөләр, ҡуҙғалырға бойороҡ булһа онотоп ҡалдырып киткәндәрен көт тә тор. Йоҡо аралаш төнө буйы алыҫта пулемет тыҡылдауын, пушкалар атыуын, ара-тирә «катюша»лар залпын, хатта һарайға һыйыша алмаған аттарҙың сыйылдашыу-кешнәүҙәрен дә ишетеп яттым. Шунан мине кемдер уятып маташты, төрткөләне, һүгенде. Бәлки, йоҡо аралаш шулай тойолғандыр ғына, сөнки йоҡо менән оҙаҡ айҡалаштым. Миңә ҡай

саҡ ҡыуышта йоҡлап ятҡан кеүек тә тойолоп китә, тауҙа бесән эшләп ятабыҙ, һалҡынса иртәнге һауа, ысыҡ, томан төшкән, торғо килмәй, ә бригадир Хәким ағай һаман төрткөләй, эшкә ҡыуа, имеш... Ҡапыл күҙемде асам — һарай эсе яп-яҡты, эргәмдә бер кем юҡ, үҙем дә аттарым. Киткәндәр, тороп ҡалғанмын!

Һикереп торҙом да ихатаға атылып сыҡтым. Башына кубанка кейгән ят майор өйҙөң бейек болдорона баҫҡан да тыныс ҡына ҡиәфәт менән алыҫҡа ҡарап тора. Янында — эйәрле атын тотҡан коноводы. Мин коноводтан башҡалар ҡайҙа китте, тип һораным. Ул ҡул һелтәй. Мин шул тарафҡа боролам: уйпатлыҡты үтеп (утар ҡалҡыулыҡта ултыра), ҡар баҫҡан һыртҡа менеп бара атлылар сылбыры. Ә ундағы уйпатлыҡтан, ваҡ ағаслыҡ яғынан, ҡар туҙҙырып, ике, әллә өс орудие һөйрәгән аттар саба. Минең ҡараш ҡапыл һулға, һарай артына, төштө: ауыл өҫтөндә ут ялпылдай. Унан, ауыл яғынан, беҙгә табан танкылар килә, өсмө, дүртме танк һәм бер үҙйөрөшлө орудие. Ап-аҡ ҡар өҫтөндә тәпәш, мөйөш-һәйешле, ала-сола тимер өйөмдәре, тимәк, һөжүмгә киләләр. Уныһы аңлашыла. Ә бына беҙҙең штабтыҡыларҙың артҡа, тылға китеү урынына фронт буйлап барыуҙары һис аңлашылмай. Йөрәкте ҡурҡыу ялманы, паника немец һөжүмен күреүҙән түгел — майор болдорға баҫып танкыларға, аттар һөйрәгән орудиеларға тыныс ҡына ҡиәфәт менән ҡарап тора икән, тимәк, ҡот осорлоҡ бер нәмә лә юҡ — мин үҙебеҙҙекеләрҙән тороп ҡалғаным өсөн, уларҙы ҡыуып етә алмауымдан ҡурҡтым. Харибовҡа ат кәрәк буласаҡ, ә мин юҡ. Һарайға йүгерҙем. Йүгәндәрен бәйҙән ысҡындырҙым да уларҙы һөйрәкләп тигәндәй ихатаға алып сыҡтым.

Майор һаман да болдорҙа тора һәм яҡынлашҡан танкыларға ҡарай. Артиллеристар орудиеларын борҙо, ездовойҙар аттарын туғарҙы ла урман яғына алып китте, ә расчет танкыларға ҡарай ут асты. Минең аттар сыҙамай, эскадрон киткән яҡҡа ынтыла — аттар бер-береһенән ҡалмаҫҡа тырыша шул. Мин ҙур ҡыйынлыҡ менән аяҡты өҙәңгегә тыҡтым. Һикереп менәйем тип ерҙән тибенгәйнем... эйәр менән ҡуша атым аҫтына әйләндем дә төштөм. Ҡабаланып эйәр бауын тартырға онотҡанмын. Етмәһә, «Ганс» аяҡһый. «Тик тор, немец заразаһы!» Барыһын да күреп торған майор үлтергес итеп миңә ҡараны ла, әсе итеп һүгенде. Ниһайәт, мин эйәргә менеп ултырҙым һәм аттарға ирек ҡуйҙым. Аттар башҡа аттар эҙенән бара — аҡ

ҡарҙа эскадрон эҙе бар ине әле. Орудиеларҙы тыл яҡлап урап үтергә кәрәклеген уйлап та өлгөрмәнем, аттар орудиелар менән танкылар араһындағы асыҡлыҡҡа табан саба башланы. Эй, ни булһа ла булыр! Күҙ ҡырыйы менән генә бер танкының төтөнгә сорналыуын, унан урынында зыр әйләнеүен һәм туҡталыуын күрҙем. Ҡалғандары пушкаларҙан, пулеметтарынан ата-ата яй ғына орудиеларға табан шыуышыуын белә. Артиллеристарҙың алдында ла, артында ла ут көлтәләре күтәрелә. Артиллеристар мине күреп ҡалды ла ҡулдарын болғай, нимәлер ҡысҡыра башланы, ә мин аттың елкәһенә үк яҡҡанмын да сабыуымды ғына беләм — ишетмәйем дә, күрмәйем дә. Улар алдында мин — аҡылдан яҙған кеше. Ҡолаҡ төбөнән пулялар һыҙғырышып оса, мин атты йәлләмәй ҡабырғаларын шпорҙар менән төйәм генә. Нисек тә уйпатлыҡҡа етергә кәрәк, артабан ҡурҡыныс түгел. Күҙ ҡырыйы менән генә йәнә шуны күрәм: һул яҡта, артта снаряд шартланы. Ошондалыр үлемем! Ошо ҡар баҫҡан яландалыр. Бөтә тәнемде ҡатырып икенсе шартлауҙы көтәм. Юҡ, төшмәне, артҡа осто шикелле. Саба торғас танкылар ҙа, орудиелар ҙа артта ҡалды. Мин, һуғыш яланын ике ат менән сабып үткән йоҡосо, һаман да арҡамда үлем һалҡынлығы тойоп һыртҡа күтәрелдем. Алыҫта ниндәйҙер ауылды, юлды, атлыларҙы күрҙем. Эскә йылы инде. Атымды бер аҙ тыйып юрттырыуға күскәс кенә «Ганс»тың ауыр барғанын, артҡы һул аяғына аҡһауын тойҙом. Артҡа боролдом: аҡ ҡарҙа ҡыҙыл ҡан һыҙығы һуҙыла ине. Яраланған! Харибовтан эләгә икән былай булғас.

Эскадронды мин ҙур ғына бер ауылда ҡыуып еттем. Дивизия штабы хәҙер шунда икән. Аттарҙы бәйләп (айғырҙың артҡы һул аяғы тубығынан тояғына тиклем ҡара ҡанға буялғайны) Харибовты эҙләп таптым да «Ганс»тың яраланыуын әйттем.

— Нисек яраланды, ҡайҙа?

— Аяғына.

— Ҡайҙа ут аҫтында ҡалды, тип һорайым.

Һөйләп бирҙем. Харибовтың кәйефе ҡырылды, ашығып аты эргәһенә килде, яраһын тотоп ҡарап илар сиккә етеп бойорҙо:

— Нимә тораһың? Бар, ветеринарҙы тап!

Ветеринар, оло ғына йәштәрҙәге старшина, «Ганс»ты ҡараны ла, атты дивизион ветеринар лазаретҡа алып барырға кәрәк, тине. Харибов миңә шул тиклем уҫал итеп

ҡараны, мин үҙем яраланһам еңелерәк булыр ине тип уйларға мәжбүр булдым хатта. Харибов атының елкәһенән ҡаҡты, хушлашҡандай ҡулын һелкте лә китеп барҙы. Мин уны бүтән күрмәнем.

Капитан Лысенко саҡырҙы, ниндәйҙер ҡағыҙҙар тоттorҙо ла «Ганс»ты лазаретка алып барырға, унан 17-се полк ҡарамағына, эскадронға, китергә бойорҙо.

Нишләйһең, полкка икән, полкка. Эскадрон икән, эскадронға. Етте, дивизия штабында ҡыҙыныу етте, алғы һыҙыҡҡа кире ҡайтырға ваҡыт. Шулай итеп, мин йәйәү, яралы «Ганс»ты етәкләп, ҡоралһыҙ, вещмешок менән генә, ғәскәр, штабтар, медсанбаттар, тыл хужалыҡтары араһынан ветеринар лазаретты эҙләп киттем. Күңелдә әллә ни көйөнөү юҡ: ни тиһәң дә икенсе тормош, алғы һыҙыҡтағы яңы тормош башланырға тора, унда, барасаҡ еремдә, минең менән нимә булыр — яраланырмынмы, үлерменме йәки еңеүгә тиклем тере ҡалырмынмы — әлегә белмәйем...

5-се кавалерия дивизияһы штабына мин Сувалкиҙа барып эләктем. Польшаның был бәләкәй генә ҡалаһында беҙҙең эвакогоспиталь тора ине, ошо госпиталдә мин санитар булып хеҙмәт иттем. Выборг янындағы һуғыштарҙа алған контузиянан һуң минең уң ҡолаҡтан ҡан ағып йөрөнө, торараҡ эренләргә тотондо һәм оҙаҡламай бөтөнләй ишетмәй башланым. Хәрби врач Рудина мине ҡолаҡ врачына алып барҙы, һиңә, моғайын, нестроевой бирерҙәр, йәғни һуғыш бөткәнсе госпиталдә санитар булып ҡалырһың, тине. Минең һис кенә лә госпиталдә ҡалғым килмәй ине, Выборгта торған үҙемдең часҡа, полкка ҡайтҡым килә, әммә капитан Рудина мине ебәрмәне — яраһы төҙәлеп бөтмәгән ауырыу тип үҙендә ҡалдырҙы ла ҡуйҙы. Түрәләр беләлер әле, тип уйланым мин, кәйеф ҡырылып, тимәк, миңә һуғыш бөткәнсе ошонда көн уҙғарырға яҙған. Мин Выборгка, үҙемдең батальонға, барып килдем, «Дан» ордены менән наградланыуым тураһындағы бойороҡтоң күсермәһен алдым һәм частан китергә мәжбүр булыуымды онотorға, яңы урындағы яңы хеҙмәтте дауам итергә ниәтләндем. Торараҡ беҙҙең эвакогоспиталь Польшаға, Сувалкиға күсте. Был ваҡытта актив хәрби хәрәкәттәр бармай ине инде. Ғәскәрҙәр оборонаға күсте, шулай булғас яралылар ҙа юҡ фиғеләндә. Мин төрлө осраҡлы эштәр башҡарҙым, һаҡта торҙом, йомоштарға йөрөнөм.

Капитан Рудина, тағы бер нисә хәрби врач ике ҡатлы йорттоң икенсе ҡатында йәшәй, медсестралар, санитарҙар, башҡа медперсонал — беренсе ҡатта. Ирҙәр айырым. Ҡатын-ҡыҙ врачтар погондарында капитан, майор йондоҙсоҡтары йөрөтһә лә, барыбер бисә булып ҡалды. Улар гел генә нимәнәндер ҡурҡты, төндәрен тышҡа сығыуҙан да шөрләй инеләр. Шунлыҡтан миңә төндәрен улар ишеге төбөндә һаҡта торорға, дөрөҫөрәге, ишектәре янындағы ултырғыста йоҡомһорап ултырырға тура килә ине. Мине тыныс холоҡло, башын иҫәргә һалып һуғыш бөткәнен ошонда көтөргә ниәтләнгән Горшков алмаштыра. Төнөн ишек төбөндә тороу ярты бәлә, шуныһы алама — өйҙә бәҙрәф юҡ, шунлыҡтан һәр иртә Горшков менән төнгө хәжәт өсөн тәғәйенләнгән бакты сығарып түгәбеҙ. Был эштең кәмһеткес икәнен аңлайым, икенсе яҡтан уйлаһаң, бер нәмә лә юҡ һымаҡ: һалдат ҡайҙа ла һалдат, бәҙрәф таҙартырға бойорһалар, таҙартаһың, пулеметҡа ҡаршы бар тиһәләр, бараһың... Шулай ҙа ялҡтым бак сығарыуҙан, хатта үҙемдең часҡа ҡасайым да ҡуяйым, тип тә уйлай башланым. Ә ҡасыу өсөн уңайлы мәл кәрәк ине.

Ҡалала беҙҙең эвакогоспиталдән башҡа 3-сө кавалерия корпусының штабы ла урынлашҡан. Ул беҙҙән йыраҡ та түгел. Бөтәһе лә, хатта рядовойҙар ҙа, итек кейеп йөрөй, итектәрендә шпорҙар ялтырай, погондарында зәңгәр ҡайма, офицерҙарының күбеһе кубанкала, һыбай йөрөгәндә яурындарына бурка һалалар. Уныһы ҡош ҡанаттары ише ике яҡҡа йәйелеп бара — чапаевсылар тип торорһоң! Ә рядовойҙарҙың эйәренә һул яҡлап ҡылыс аҫылған. Кавалерия! Казактар! Мин бик теләп барыр инем ошо фырт егеттәр араһына, тик алмаҫтар шул. Хатта беҙҙең медсестралар менән санитаркаларҙың ҡайһы бер кавалеристарға күҙҙәре төшөп йөрөй. Ах, нисек шылтырай шпорҙар, аттарҙа нисек оҫта йөрөйҙәр, нисек үбешәләр был казактар!

Бер көн ҡала урамы буйлап китеп барһам, ике кавалеристың башҡортса һөйләшеп торғанын ишеттем. Йәштәр түгел, утыҙ тирәһе генә барҙыр, шпорҙар тағылған итектәрҙә, ыҫпайҙар, фырттар. Туған телемде ишеткәс, ҡыуаныстан күҙҙәргә йәштәр төйөлдө. Улар башҡортса ғына һөйләшмәй, әсәйем һөйләшкән диалектта, беҙҙең ауыл, беҙҙең район һөйләшкән диалектта һөйләшә! Ауылымдан йыраҡта йөрөгәс, мин туған телемде бер аҙ онотоп та киткәнмен. Сөнки бында тик русса ғына аралашырға тура килә, хатта төштәрҙе лә русса күрә торғайным бит.

— Эй, һеҙ башҡорттармы әллә? — тинем мин башҡортсалап.

— Башҡорттар. Ә һин кем?

— Мин дә башҡорт.

— Башҡорт икәнеңде былай ҙа күреп торабыҙ. Ҡайҙан, ҡайһы частан?

— Госпиталдән.

— Яраландыңмы ни?

— Эйе, контузия.

— Ҡайһы райондан?

— Учалы.

— О-о-о! А-а! Яҡташ. Беҙ ҙә Учалынан бит. Ниндәй ауылдан һуң?

— Ураҙҙан.

— Мин Наурыҙҙан, ә ул Аҡҡужанан.

Наурыҙ беҙҙән утыҙ саҡрым алыҫлыҡта, Аҡҡужа — ун биш. Әммә сит яҡта осрашҡан башҡорт, икенсе ауылдан, хатта иң алыҫ райондан булһа ла иң яҡын туған һымаҡ ҡабул ителә.

— Кем улы? — тип һораны Аҡҡужа кешеһе.

— Миңлебайҙың.

— Ундай кешене белмәйем. Мин һеҙҙең ауылдан бөкрө Ғарифты ғына беләм.

— Уны мин дә беләм! — тип шатланды Наурыҙҙыҡы.

Бөкрө Ғарифты белеүебеҙгә барыбыҙ ҙа сикһеҙ шатландыҡ. Үҙенең бөкрөһөн бынан меңдәрсә-меңдәрсә саҡрым алыҫлыҡта йөрөткән Ғарифты беҙ ҡыуанышып хәтерләнек, әйтерһең дә, ул беҙҙең уртаҡ туғаныбыҙ һәм иҫ киткес һәйбәт кеше.

Бер аҙ һөйләшеп торҙоҡ, шунан яҡташтарым ҡайҙалыр ашыҡты, ҡуҙғалған саҡтарында:

— Кис кил. Беҙ анау өйҙә. Коноводтарҙы һораһың, — тинеләр.

Кисен килдем мин уларға. Икенсе ҡаттағы бүлмә, һикеләр, һикеләрҙә шинелдәр, һырмалар, шунда уҡ эйәрҙәр, йүгән, карабиндар, ҡылыстар, тир, ат еҫе, сылғау, махорка еҫе. Бәләкәйҙән таныш еҫтәр, улар ауылды иҫкә төшөрә, ауылдың ат һарайын, сбруйҙар келәтен күҙ алдына килтерә. Яҡташтарымдың гимнастеркаларында миҙалдар йылтырай, погондарында — сержант лычкалары, уларҙың кавалерист, коновод, сержант булыуҙары һәм ҡайҙалыр икенсе часта түгел, ә корпус штабында хеҙмәт итеүҙәре менән ғорурланыуҙары күренеп тора.

Фляга ҡуйылды, икмәк киҫтеләр, консерва астылар. Саҡ ҡына эсеп алдыҡ, ауылды, һуғышҡа тиклемге тормошто иҫкә төшөрҙөк. Йәнә өҫтәгәс, Наурыҙ кешеһе, Нурый ағай, һин госпиталдәге бөтә бисәләрҙе лә ҡапшап бөткәнһеңдер инде, тип шаяртырға, мәрәкәләргә тотондо, танышырға шунда матур ғына берәйһе юҡмы, тип тә ҡыҙыҡһынды. Мин төндә врач бисәләр йоҡлаған бүлмә ишеге төбөндә һаҡта тороуым, иртәнсәк улар бүлмәһенән бак сығарыуым тураһында һөйләнем... Яҡташтарым көлдө. Әгәр һин ысын башҡорт икәнһең, госпиталдә ятыуҙан оялырға тейешһең, тинеләр.

— Һуғыш оҙаҡламай бөтә, ә һинең бер наградаң да юҡ. Ауылда ҡыҙҙар яратмаясаҡ бит. Кит һин ул госпиталдән, беҙгә кил.

— Алырҙармы икән һуң?

— Нишләп алмаһындар? Һин дә бит егет кеше.

Мин «Дан» ордены менән наградланыуым тураһындағы бойороҡ күсермәһен күрһәттем, күрегеҙ, мин дә төшөп ҡалғандарҙан түгел, йәнәһе.

— Маладис, энекәш. Ул орденыңды беҙгә килгәс алырһың. Иртәгә үк майор Шагинға ин дә беҙгә күсереүҙәрен һора.

Иртәгәһенә мин корпус штабына барып майор Шагинды эҙләп таптым да, үҙемдең госпиталдән икәнемде, мөмкин булһа уларҙың часына күсереүҙәрен һораным. Яраланғанға тиклем ҡайҙа һуғышыуымды белеште майор, ҡулымдан бойороҡ күсермәһен алып, күҙ йүгертте лә папкаһына һалды.

— 5-се дивизияға коновод булып барырһың.

Коновод икән, коновод. Минең яҡташтар ҙа коноводтар бит, миҙалдары бар, тимәк, ундай хеҙмәт миңә лә ярай. Дөрөҫөн генә әйткәндә, коновод ниндәй эш башҡарырға тейешлеген мин ныҡлап күҙ алдыма ла килтерә алмай инем.

Ебәрмәҫ, тип уйлаһам да, капитан Рудина мине тотманы, өгөтләп тә маташманы, тик бошонҡо ғына тауыш менән:

— Мин һиңә яҡшылыҡ ҡына теләгәйнем. Үлһәң йәл буласаҡ, һуғыш бөтөп бара бит. Теләгеңә ҡаршы төшә алмайым, тик беҙҙе онотма, — тине.

Госпиталь, яҡташтарым менән хушлашып, кеҫәгә ҡағыҙ һалып мин ҡаланан сыҡтым да бынан биш саҡрымдар самаһындағы утарҙа урынлашҡан 5-се кавалерия дивизияһы ҡарамағына ҡарай атланым. Юл буйлап тегендә-

бында күҙгә һуғыштар ваҡытында ятып ҡалған немец һалдаттарының мәйеттәре ҡар аҫтынан сурайып күренә. Берәрләп тә, икешәрләп тә мине һыбайлылар уҙып китә, ҡаршыға осрай, улар миңә герой ҡиәфәтендә күренә, мин уларға ҡыуанып һәм һоҡланып ҡарайым, сөнки бынан ары мин дә улар ише кавалерист буласаҡмын.

Ветеринар лазареттан 17-се полкка мин һыбай килдем. Дөрөҫ, эйәрһеҙ һәм ҡоралһыҙ. Полк штабынан атым менән мине 3-сө эскадронға, капитан Овсянников ҡарамағына, ебәрҙеләр. Көнө буйы юлға ҡуҙғалған эскадрондың артынан барырға тура килде. Эйәрһеҙ ҡыйын ине, тар-мар ителгән бер утарҙа мамыҡ мендәр табып шуны аҫтыма һалдым һәм ҡасып киткән бер помещиктың биләмәһендә төнгөлөккә туҡтаған эскадронды кискә генә ҡыуып етә алдым. Киң ихатала төрлө йән эйәләре тәртипһеҙ рәүештә йөрөп ята: һауылмаған сыбар һыйырҙар мөңрәшә, сусҡалар сыйылдаша, яңғыҙ ат нишләргә белмәй сапсына, төрлө ерҙә усаҡтар яна, бешкән ит еҫе сыға, кемдер котелок тотоп яйһыҙ хәрәкәттәр менән һыйыр һауырға маташа — шундай ризыҡты әрәм итергә ярамай бит инде.

Овсянников мине беренсе взводҡа, өлкән лейтенант Ковригин ҡарамағына, ебәрҙе. Атымды етәкләп алдында усаҡ янған конюшняға килдем дә шунда торған ниндәйҙер сержантҡа, һеҙҙең ҡарамаҡҡа килдем, тинем.

— Кем килде? — тип һораны оҙон буйлы, ҡаҡса йөҙлө һәм хәйләкәр ҡарашлы сержант.

Мин үҙемдең хатамды аңланым һәм устав талап иткән буйынса яңынан рапорт бирҙем, йәнәһе, рядовой Ғәйнуллин дивизиондың ветеринар лазаретынан һеҙҙең ҡарамаҡҡа килде, дауаланғандан һуң атты ла алып килде. Сержанттың ирен ситтәрендә йылмайыу ғәләмәте шәйләнде, ул мине яңынан күҙҙән үткәрҙе лә талапсан ҡиәфәт менән:

— Ҡайышығыҙҙы тартығыҙ! — тине. — Тағы бер тишеккә тартығыҙ. — Ул минең менән ниңәлер «һеҙ» тип һөйләшә ине. — Бына шулай. — Ул минең ҡулдан йүгәнде алды, яратып аттың муйынына һуҡҡыланы, шунан эйелеп, һул аяғының ашыҡ һөйәгенән өҫкәрәк еренә еңелсә генә ҡағылды — ат тыңлаусан рәүештә аяғын күтәрҙе — дағалары яңы ине.

Мин атты конюшняға индереп бәйләнем дә ишек алдындағы усаҡ янында тороусылар, ултырыусылар янына

сыҡтым. Ят йөҙҙәр, ят тауыштар, миңә битараф ҡараштар. Бер аҙҙан ҡайһыһылыр иренеп кенә һорап ҡуйҙы:

— Яңыларҙанмы ни?

Ергә сүгәләнем дә, дивизия штабынан ебәрелеүем, унда коновод булыуым хаҡында әйттем.

— Беҙҙә лә коновод булырмын, тип уйлайһыңмы? — тине мыҫҡыллы ғына тауыш. — Шуны белеп ҡуй: беҙҙә ҡарттар ғына коновод, ә һиңә — «К пешему бою — слезай! Атакаға!»

Усаҡ янындағылар уны ҡеүәтләп, ҡәнәғәт көлөштө.

— Дарыны мин һеҙҙән бер ҙә әҙ еҫкәмәнем, — тинем мин, үҙем эстән генә, «Дан» орденымды күргәс, икенсерәк һөйләнерһегеҙ әле, тип уйланым.

Былар яңы ғына нимәлер ашаған — аяҡ аҫтарында кимерелгән, мөнйәлгән һөйәктәр ята, яшыҡ йөҙлө берәүһе ағасҡа ит киҫәге тыҡҡан да шуны ут өҫтөндә өйрөлтә-әйләндерә, ә минең бөгөн көнө буйы ауыҙға мәк бөртөгөләй ризыҡ кермәне һәм мин асығыуҙан саҡ баҫып торам. Түҙмәй, ҡайҙа ашарға була, тип һораным.

— Андрей-Марусяға бар, — тине берәүһе.

— Ниндәй Андрей-Маруся? — тинем, бер нәмә лә аңламай.

Йәнә көлөштөләр. Андрей-Маруся — ашнаҡсы, кухня ана тегендә, япма аҫтында, тип аңлатты олораҡтарҙан берәү. Котелок менән ҡалағым үҙем менән, моҡсайҙа, ғәҙәттә кавалерист үҙенең бөтә мөлкәтен эйәргә бәйләп үҙе менән йөрөтә, ә мин моҡсайҙы кәрәк була ҡалһа тип госпиталдән үк үҙем менән һаҡланым, бына кәрәк тә булды. Мин кухняны эҙләп таптым. Һырма өҫтөнән аҡ алъяпҡыс кейеп кухня тирәләй өйрөлгән һалдат янына барҙым да:

— Һин булаһыңмы Андрей-Маруся? — тип һораным.

— Ҡәбәхәт, күрһәтәм мин һиңә хәҙер Андрей-Марусяны! Иҫән сағыңда тай бынан! — тип ҡысҡырҙы ашнаҡсы, сыйылдаҡ тауыш менән.

— Ниңә, астан үлергәме ни? Мин яңы килдем. Бөгөн бер нәмә лә ашамағанмын, — тинем үпкәләгәндәй итеп.

— Шулай тиҙәр уны. Әтеү «Андрей-Маруся», имеш.

— Миңә бит «Андрей-Марусяға бар» тинеләр. Улар һүҙен генә ҡабатлайым.

— Ашатырмын әле мин уларҙы. Улар өсөн тырышаһың, ә улар һаман үсекләй... — Йомро ҡыҙыл йөҙлө, бәләкәй күҙле ашнаҡсы, күрәһең, асыуланыуҙан түгел, күберәк

үҙенең баһаһын күтәрергә тырышыуҙан һөйләнә ине, шикелле. — Бер нәмә лә ҡалманы бит әле, энекәш, вис ашап бөттөләр, күрәһеңме, ҡаҙандарҙы йыуып йөрөйөм.

— Тимәк, мин ас ҡалырға тейеш?

— Тейеш тип әйтмәнем бит әле. Сало бирәйемме?

Ул ҡайҙандыр сало килтереп сығарҙы, ярты буханка икмәк һондо. Ашнаҡсыға рәхмәт әйтеп мин взводҡа атланым. Утта ҡыҙҙырып салоны ашаным, икмәк төйҙөм, ҡойонан һыу эстем. Аяҡты сисеп сылғауҙарҙы киптерҙем, итек төбөнә ҡоро бесән йәйеп кейҙем. Хәҙер серем итеп алғанда ла ярай. Йоҡларға йорттоң беренсе ҡатына урынлаштыҡ (икенсе ҡатта — офицерҙар), әлбиттә, ҡарауылда тормағандар ғына инде, иҙәнгә һалам өҫтөнә ҡулайлаштыҡ. Сосораҡтар диван менән карауатты эләктерҙе. Һәр ваҡыттағыса кейем менән яттыҡ, йәғни гимнастеркала, салбарҙа, ҡайыш ҡына сиселде, мин хатта мамыҡ һырмамды ла һалманым. Яттым да шинелде ябындым һәм йоҡлап та киткәнмен. Кемдер төрткөләгәнгә уяндым.

— Эй, Ғәйнуллин һин булаһыңмы? Тор, давай, посҡа. Тиҙ бул!

Һикереп торҙом да ҡараңғыла кейендем, ҡайһыһылыр ҡулыма карабин, пулемет дискылары һалынған ауыр сумка тотторҙо. Күктән, аҡ ҡарҙан ихатала яҡты ине, мин үҙем менән сыҡҡан икәүгә иғтибар иттем. Икеһе лә сержант, береһенә утыҙҙар тирәһелер, күберәк булмаһа, кәүҙәгә лә ҡалҡыу, икенсеһе, мине төрткөләп уятҡаны, йәшерәк тә, буйға ла тәбәнәк.

— Исемең нисек? — тип һораны өлкәнерәге.

— Тәлғәт. Русса Толя инде.

— Татармы?

— Юҡ. Башҡорт.

— Башҡорттар полкта күп ине. Хәҙер әҙ ҡалды, — тине сержант, бер аҙ һүҙһеҙ барҙы ла өҫтәп ҡуйҙы. — Бына шундай эштәр, Толя, хәҙергә минең икенсе номер булырһың. Икенсе номерым еңелсә яраланды, медсанбатта. Пулемет менән эш итә беләһеңме? «Дегтярев» менән?

— Беләм. Пехотала пулеметсы инем.

— Яҡшы, хуп...

Сержанттың һаңғырау, ҡарлыҡҡаныраҡ тауышында миңә ҡарата ихласлыҡ, ололарса хәстәрлек бар ине, һәм мин уны һәйбәт кешеләр тип хәл иттем. Шулай ара-тирә һөйләшә-һөйләшә һыйыр аҙбары артына, унан ихатаны уратҡан кәртә аша сыҡтыҡ һәм әсе тауышҡа төртөлдөк.

— Стой, кто идет? — ҡараңғыла тәмәке уты бaҙланы.

— Үҙебеҙҙекеләр, — тип яуапланы йәш сержант. — Һеҙҙе фрицтар алып китмәнеме әле?

— Мине алып китерҙәй фриц донъяға тыумаған әле, — аҡ ҡарҙа ҡара күләгә булып күренгән берәү өндәште. Уның мыҫҡыллы тауышы миңә таныш ине инде. — Мозафаров, подъем! Фрицтар һөжүмгә килә.

— Килһендәр, — тип тауыш бирҙе ҡар өйөмө артынан берәү һәм ҡар эсендәге өңдән Мозафаров тип өндәшкән кеше килеп сыҡты (бәлки, яҡташтыр?), ул тапанды-тапанды ла татар акценты һәм ҡалтыранған тауыш менән. — Уң аяҡ өшөнө, Саня, ҡайҙа тәмәкеңде бер-ике һурайым әле, — тине.

Улар йәш сержант менән китте, беҙ өлкәне менән бында ҡалдыҡ. Бил тәңгәленән генә ҡаҙылған һәм ике кеше генә һыйырлыҡ итеп эшләнгән окопҡа һикереп төштөк. Йоҡлар өсөн — окоп арҡырыһына арҡыс-торҡос таяҡтар, таҡта киҫәктәре һалынған, плащ-палатка йәйелгән, ә өҫтән ярты метрҙай ҡар яуған. Сержант «Дегтярев» пулеметын брустверға һалды, махоркаһын төрҙө, трофей зажигалканан тәмәкеһен тоҡандырҙы ла:

— Тартаһыңмы? — тип һораны.

Тартмайым, тип яуапланым һәм оҙаҡҡа һүҙһеҙ ҡалдыҡ. Епшек ҡар яуа ла яуа, ике аҙымдан бер нәмә лә күрерлек түгел. Тирә-яҡта ҡолаҡ тондорғос тынлыҡ, әйтерһең дә, бөтә нәмә үлек, бөтә тереклек аҡ көрттәр араһында ҡалып туңған. Ә беҙ, ошо ҡар өйөмдәрендә аҙашҡан ике һалдат, бөтә ер йөҙөндә ике генә тере йән. Алда ниҙәр бар, нишләп ғәскәрҙәрҙең хәрәкәт итеүе, һуғыш тауыштары ишетелмәй? Беҙ, бәлки, немецтарҙың тәрән тылында тороп ҡалғанбыҙҙыр һәм улар беҙҙе уратып алып ҡыйратырға уйлайҙарҙыр? Окопты тәрәнәйтергә кәрәк — бәләһенән баш-аяҡ. Танкылар килһә? Ҡайҙа беҙҙең артиллерия? Күренмәйҙәр... Хәтеремә ашнаҡсы килеп төштө лә сержанттан, уны ниңә Андрей-Маруся тип йөрөтәләр ул, тип һораным.

— Ниңә улай тип атағандарын кем белһен инде? — тине сержант теләр-теләмәҫ кенә. —Уға һаҡал-мыйыҡ үҫмәй. Шуға беҙҙең юмористар шундай ҡушамат таҡҡан, йәғни ир ҙә түгел, бисә лә...

Йәнә тындыҡ.

Шинель, һырма, мамыҡ салбар аша һыуыҡ әлегә минең яшыҡ тәнемә барып етмәй, шулай ҙа кирза итектәр эсен-

дәге аяҡтар һыуына башланы. Аяҡтарымды алыштырғылап баҫам, бер-береһенә бәрәм, һикергеләп алам, бармаҡтарымды ҡыймылдатам. Эс бошорғос күңелһеҙ. Ҡайҙалыр яҡында ғына тауыштар ишетелеп ҡала, күрәһең, һаҡта торғандар бер-береһенә һүҙ ҡуша.

— Эй, Мозафаров, һинме унда? — тип һорай берәү.

— Юҡ. Баулин, — тип яуаплай сержант. — Нәмә кәрәк?

— Зажигалкаң бармы?

— Бар.

Ниндәйҙер һалдат килде, тәмәкеһен тоҡандырҙы, һөйләшеп торҙо («Ну, яуа, немец килһә, күрмәй ҙә үтеп китер әле»), унан үҙенә китте.

— Йоҡоң киләме? — тип һораны сержант, һалдат ҡараңғылыҡҡа инеп сумғас.

Серем итеп алырға бер ҙә ҡаршылығым юҡ, әлбиттә, шулай ҙа сержанттың үҙенең йоҡоһо киләлер тип уйлап, юҡ, тинем. Яңы урында тәүге тапҡыр посҡа баҫҡанмын, оялмай нисек китеп бараһың?

— Һеҙ ятығыҙ, мин торормон.

— Юҡ. Окопта йоҡлай алмайым, радикулит. Ә һин теләһәң, ят. Кәрәк булһаң, уятырмын.

Бүректең ҡолаҡсындарын төшөрҙөм дә өңгә сумдым. Бына һиңә кәрәк булһа — унда яҫтыҡ, етмәһә, йылы одеял, юрған! Һалдат барыбер ҙә рәтен таба, окопта ла мендәрҙә йоҡлай. Мин аяҡтарҙы одеялға ураным, ҡарышлауыҡ ише бөгәрләндем, яйлап йылындым һәм... йоҡлап та киткәнмен.

— Толя, подъем! — Сержанттың һаңғырау тауышы әллә ҡайҙан йыраҡтан ишетелә, әллә төш күрәмме? — Толя, сыҡ!

Йоҡоно ҙур ҡыйынлыҡ менән саҡ ҡыуып, мин туңҡаңлап өңдән сығам, дөрөҫөрәге, ярты метр ҡалынлығындағы көрт араһынан үтәм, аяҡҡа баҫам һәм окоп стенаһына һөйәлгән карабинды алам.

— Дискыларыңды ал, китәбеҙ, оборонала ятыу бөттө, — тине тауыш.

Ер өҫтө һаман ҡараңғылыҡ әсирлегендә, шулай ҙа тауыш-өндәр иртәнсәктеке, биләмәлә һыйырҙарҙың ҡайғылы мөңрәүе ишетелә, һалдаттар һөйләшә. Төтөн еҫе, янған йөн, тире еҫтәре танауға бәрелә, ашнаҡсы нимәлер бешерәлер, күрәһең. Ҡар һаман яуа, ул хәҙер ҡар бөртөгө рәүешендә түгел, ә йәбешкәк ямғыр рәүешендә. Биләмәгә килдек. Унда, конюшня ҡаршыһында, йәнә усаҡ яна һәм

бер нисә кеше котелоктарҙа нимәлер әллә бешерә, әллә ҡыҙҙыра — тәмле ит еҫенән хатта теш ҡаҙналары сәнсеп китте.

— Беренсе взвод, ашарға алығыҙ!

Ҡуйы, майлы эҫе ашты йоторға ла өлгөрмәнек, яңы бойороҡ яңғырай:

— Эскадрон, по коням!

Мин баш аша бер яурынға пулемет дискылары һалынған сумканы аҫтым, икенсеһенә — карабинды. Һәм башҡалар менән конюшняға атланым. Алдараҡ барғандар үҙҙәренең аттарын сығара ине инде. Аттар, кешеләр араһында буталып, үҙемдең атты эҙләйем, әммә һис таба алмайым. Кире сыҡтым — ихатала ла юҡ. Паникаға бирелер сиккә етеп, борсола уҡ башланым.

— Һинме яңы килгән? Мә, тот, үҙеңдең «Машкаң»ды, — оло ғына йәштәрҙәге һалдат миңә ҙур башлы, кәүҙәгә бәләкәй ҡола бейә тоттора. Эйәрләнгән. Бер нәмә лә аңламайым: лазареттан бына тигән йәш ат менән килдем, ә миңә «монголка» бирәләр.

— Был бит минең ат түгел! — тим мин асыуланып, һәм сержантты эҙләргә тотондом. — Иптәш сержант, иптәш сержант!

Таптым. Янына барһам хужаларса минең атты етәкләп тора! Эйәре лә бар. Бына һиңә кәрәк булһа!

— Иптәш сержант, мин лазареттан яҡшы ат менән килдем, ә миңә бынау «монголка»ны бирәләр! — тинем. Унын атты үҙләштерәсәген һиҙәм, шулай ҙа быға һаман ышанып етмәйем, ышанғы килмәй.

— Эскадронда барыһының да «монголка», — ти сержант. — Бына икенсе йыл инде ат составы яңырмай ҙа, тулыланмай ҙа. Ана, хатта лейтенант та бер ҡорсаңғы менеп йөрөй.

Сержанттың, взвод командиры ярҙамсыһының, атымды бирмәйәсәген аңлағайным инде, шулай ҙа күңелдә әллә үҙһүҙлелегем, иҫәрлек, малайҙарса үпкә ҡуҙғалды, әллә госпиталдә, һуңынан дивизия штабында армияның ҡаты тәртиптәрен онота төшкәнгәме, ярһыуымды эскә йота алманым.

— Был ат кәрәкмәй миңә. Үҙемдекен бирегеҙ!

— Нимә баҙар ойоштораһың? — быныһын төнөн беҙҙе постарға тараткан йәш сержант әйтте. —Бына тигән ат. Чихладзе менеп йөрөнө. Медсанбаттан ҡайтҡас, һинән барыбер һалдырып аласаҡ. Пока йөрө.

— Менмәйем ул атҡа! — тинем мин һаман кирелегемә барып.

— Рядовой Ғәйнуллин! — тоноҡ ҡараңғылыҡта мин взвод командиры ярҙамсыһының аҡыллы, теремек ҡарашы ҡапыл уҫалланғанын шәйләнем, ас яңаҡтарындағы һырҙар тартышты. — Кругом! Стройға баҫығыҙ!

Боролғайным, янымда ғына һалдат шинеле кейгән лейтенантты күрҙем. Взвод командиры. Ул өндәшмәне, әммә уҫал ҡарашынан еңелеп мин шундуҡ шиңдем дә шым ғына сафҡа барып баҫтым. Нишләйһең, ғәрәп арғымағы бирмәгәстәре ошо «Маша» менән һуғышырға тура килә инде. Дағаһы яңы тиерлек. Эйәре менән ҡырғысы лә тәртиптә, эйәргә тағылған ҡылысы ла бар.

— Са-дись!

— Эскадро-о-н, звеньями ма-а-рш!

Усадьба артта ҡалды. Оло юлға сыҡтыҡ һәм немец ерҙәренә нығыраҡ инә барып, ғинуар ҡары баҫҡан сит ерҙең ауыр саҡрымдарын һанарға тотондоҡ. Мин үҙемдең атымда бармағаным менән тамам килешкәйнем инде, улай ғына тиң, был бейә, «монголка», оҡшай ҙа башланы. Эйәре бик тә уңайлы булып сыҡты, бейә үҙе лә күңелле һәм теләп атланы, юртыуы ла ышаныслы һәм еңел ине.

Егермеләп саҡрым үткәс, форсированный марш менән беҙҙе фронттың икенсе участкаһына ташлағандарына төшөндөк. Эре ҡар бөртөктәре яуа, ул аттар, кешеләр өҫтөнә һылаша, күҙгә төшә, йөҙөбөҙҙә ирей, шинелдәребеҙ лыҡа һыу булды, ауырайҙы, плащ-палатка ябынғандарға еңелерәк, яурындарында бурка булғандарға бигерәк тә. Мин алдымда тик «Маша»ның башын да, аҡ фонда алға көмрәйгән арҡаларҙы, яурындар тәңгәленән өҫкә тырпайған карабин көбәктәрен генә күрәм. Аяҡтар талды, билдәр һыҙлай, ә аттарҙың хәле тураһында әйтергә лә түгел, ни тиһәң дә беҙ улар өҫтөндә ултырып киләбеҙ, ә улар, меҫкендәр, беҙҙе күтәреп бара, арынылар, саҡ атлайҙар. Оҙаҡ барҙыҡ. Күпме барғанды төндә, етмәһә, өҫтән ҡар яуып торғанда самалауы ла ҡыйын, бәлки, үткән ара илле, бәлки, йөҙ саҡрым менән хисапланалыр. Бер мәл, ниһайәт, бойороҡ яңғыраны:

— К пешему бою, слеза-а-ай! Передать коней коноводам!

Таң атып килә, нисектер яҡтыра төшкән һымаҡ. Йәнә ниндәйҙер биләмә, өйҙәр.Оҙон ферма, һыйырҙар торған кәртә. Коноводтар аттарҙы һыйыр һарайына алып китте.

Беҙ юл өҫтөндә ҡалдыҡ. Юл ферма янынан үтеп ике рәт булып теҙелгән ағастар араһынан ҡараңғылыҡҡа инеп юғала, әйтерһең дә, бушлыҡҡа төшә, ағастар артында — дошман. Бер аҙҙан эскадрон командирының ҡарлыҡҡан һәм ашығыс тауышы яңғырай:

— Взвод командирҙары, миңә!

Өлкән лейтенант командир янына барҙы ла бер нисә минуттан әйләнеп тә ҡайтты һәм киҫкен бойороҡ нервыларға бәрҙе:

— Взвод, приготовиться к бою! За мной!

Беҙ юлдың уң яғына, яланға ҡарай йүгерҙек. Бәрелеш буласағын тойған йөрәк шашып тибә башланы. Шулай ҙа әлегә дошман яғынан атыу ҙа, осҡан снарядтар ҙа юҡ, тик кешеләрҙең ҙур массаһы хәрәкәте тыуҙырған берҙәм тауыш — йүгергәндәрҙең ауыр тын алыуы, аяҡ тупылдауы, ыҫылдап ҡына тигәндәй сыҡҡан өҙөк-өҙөк бойороҡтар, һүгенеү. Юлдан ситкә ике йөҙ метрлап ара йүгергәс атлауға күстек, һыйынышып, бер-беребеҙҙе юғалтмай, бер-беребеҙҙән артта ҡалмай барырға тырыштыҡ. Ялан уртаһында туҡтаныҡ — бөтә эскадрон ҙур бер төркөмгә тупланды. Беҙҙе үҙенең ординарецы менән эскадрон командиры ҡыуып етте.

— Эскадрон... тыңла! — хәле бөткән командир ахылдап ҡысҡырҙы. — Ситуация былай. Немецтар ҡамауҙы йырып сыҡҡан, беҙҙең пехота аша үтеп үҙҙәренекеләргә ҡушылыу маҡсатында ошо йүнәлештә хәрәкәт итә. Беҙҙең бурыс: бер генә фрицты ла көнбайышҡа үткәрмәҫкә. Беҙҙең һул яҡтан да, уң яҡтан да икенсе эскадрондар килә. Немецтар беҙҙең аша үтә ҡалған хәлдә лә позицияны ташламаҫҡа, түңәрәк оборонаға күсергә һәм аҙаҡҡа тиклем һуғышырға. Был хәлгә төшмәбеҙ, тип уйлайым, ярты сәғәттән беҙгә пехота һәм танкылар килеп етергә тейеш. Беҙгә нисек тә ошо ярты сәғәткә түҙергә кәрәк. Хәл аңлашылдымы?

Яуап биреүсе табылманы, дөрөҫөрәге, командир аңлатҡан ситуацияға төшөнөп өлгөрөп һәм яуап биреп булманы, төнгө ҡараңғылыҡтан ике һыбайлы пәйҙә булды. Береһе бурка ябынған һәм кубанкала. Полк командиры полковник Шовкуненко ине шикелле.

— Овсянников, кешеләреңде саҡ ҡына һулғараҡ тупла! — Атын саҡ тыйып тотҡан полк командиры көслө тауышы менән шулай тип бойорҙо. — Пулеметтар араһындағы

дистанцияны киңәйт. Һәм окоптар ҡаҙырға! Ҡар өңөп кенә түгел, ә ерҙе соҡоп инергә! Мөмкин тиклем тәрәнерәк!

Командир ары сапты.

— Ковригин, тегендәрәк, юлға яҡынырак, урынлаш! Сорокин!..

— Беренсе взвод, минең арттан!

Һулға йүгерҙек. Кемгә ҡайҙа позиция биләргә икәнен взвод командиры үҙе күрһәтте. Беҙ Баулин менән һул флангыға, эскадрондың иң һул ҡанатына, тура килдек. Беҙҙән дә һулда кем икәнен белмәнем, тик икенсе эскадрон икәнен генә әйттеләр, яҡында берәү ҙә күренмәне. Ҡаҙырға кәрәк ине. Тик нисек ҡаҙырға, нимә менән ҡаҙырға һуң туң ерҙе? Саперҙар көрәге бик һирәктәрҙә генә бар, ә минең кавалерияла ул ҡорал бөтөнләй булманы. Ғәҙәттә ҙур сапер көрәктәре йәки утарҙарҙан алған оло көрәктәр менән ҡаҙа торғайныҡ, уларҙы ылауҙа йөрөттөк. Ә ул ылауҙар хәҙер ҡайҙа һуң, беҙҙән егерме саҡрым артта көрткә батып ултыралыр инде. Баулиндың да көрәге юҡ. Беҙ ҡарҙы көрәп алға бруствер һымаҡ бер нәмә өйҙөк тә шуның өҫтөнә пулеметты урынлаштырҙыҡ, үҙебеҙ туң ергә һуйлайышып яттыҡ. Әлегә немецтың еҫе-ҡоҫо күренмәй. Уларҙың был тирәлә күренеү ихтималлығы ла юҡ һымаҡ. Эре ҡар һаман яуа. Етмәһә ел ҡупты, яйлап ул буранға әйләнде. Ярай әле ул арҡаға өрә, күҙгә бәрмәй. Тамам яҡтырҙы. Мин аҡ офоҡҡа ҡарайым һәм алда ниндәйҙер ҡара нөктәләр хәрәкәт итә һымаҡ булып тойола, улар ҙур тиҙлектә беҙгә яҡынайған һымаҡ, шунан ҡар араһына инеп күҙҙән юғала, йәнә пәйҙә була.

Һул яҡлап ҡолағыма тауыштар ҙа салынып ҡала, кәүҙәләр ҙә бәүелешкән һымаҡ. Улар яҡынайғас, сержант аяғына баҫты, начальство килгәндер, ахыры, тип мин дә торҙом. Йәш кенә лейтенант һәм оло ғына йәштәрҙәге, башына бүрек, өҫтөнә плащ-палатка кейгән ҡарағусҡыл йөҙлө офицер миңә таныш түгел.

— Өсөнсө эскадронмы? — тип һораны плащ-палатка ябынғаны.

— Так точно, иптәш майор! — тип яуапланы Баулин.

— Йә, кәйефтәр нисек? Немец килһә ҡаршы тора алырһығыҙмы?

— Тейешбеҙ, иптәш майор.

Улар ары киткәс Баулин миңә:

— Майор Худ үҙе килгәс, хәл, ысынлап та, худо, — тине.

— Нишләп худо?

— Полкта бөтәһе лә шулай ти. Йәнәһе, ул алғы һыҙыҡ-ҡа килә икән, тимәк, эштәр ысынлап та хөрт.

— Ә ул кем?

— Полк замполиты.

— Ә Худ уның фамилияһымы? Мин ҡушаматылыр тип уйлағайным.

— Фамилияһы. Кавказдан ул. Адыгей шикелле. Яҡшы кеше, ябай.

Һул яҡта ҡапыл пушканан аттылар. Пушка, күрәһең, юлда, ферма янында торалыр һәм немецтар килергә тейешле яҡҡа тоҫҡалғандыр. Һәм шул яҡта, юлдың ике яғында теҙелешкән ағастар аҡ офоҡ менән ҡушылған ерҙә, ҡара ут өйөмө хасил булды. Янғын аҫтында — машинаға йәки бронетранспортерға ут тоҡанды, ахыры — әллә күпме кеше шәүләләре күренеп ҡалды, ҙур бер колонна килә, күрәһең. Колонна ҡапыл боролдо ла шоссеның уң яғына ағылды. Пушка йәнә атты, йәнә. Ә ҡара-һоро кеше массаһы — меңдәрсә, меңдәрсә немец — асыҡ яланға таралды.

Ә беҙ үтә аҙ, һанаулы ғына кеше теҙелешеп ятабыҙ, беҙҙең артта бер кем дә юҡ. Командир әйткән пехота килеп еткәнсе байтаҡ ваҡыт үтәсәк әле. Минең ҡот китте. Быға тиклем мин һуғышта гел һөжүм иттем, немецтарҙы баҫтырҙым, ошондай күп немецтың өҫтөмә килеүе — беренсе тапҡыр.

— Улар бит беҙҙе тапап ҡына китәсәк! — тинем мин Баулинға.

— Паникаға бирелмә, Толя, — тине Баулин тыныс ҡына.

Әммә яуап мине һис тынысландырманы. Ирекһеҙҙән артҡа боролоп ҡараным. Артта, беҙҙән саҡ ҡына һулдараҡ, кирбестән һалынған оҙон һыйыр аҙбарҙары урынлашҡайны. Бына шунда инеп йәшен дә тәҙрәнән генә атып ят ине ташҡын булып килгән немецтарға, тип хыялландым. Йәки окопыбыҙ тәрәнерәк булһа ла үҙебеҙҙе ышаныслыраҡ тойор инек, юҡһа асыҡ яланда, яланғас ерҙә ятабыҙ бит. Нимә уйлай икән тип мин йәнә сержантҡа күҙ һалдым — Баулин немецтар килгән яҡҡа бик иғтибар менән текәлгән, шулай ҙа борсолоуы ла юҡ түгел, әммә тыныс. Кем белә, бәлки, минең алда шулай тыныс булырға тырышалыр ғына. Ҡарашымды уңға күсерҙем, унда взвод, эскадрон командирҙары, тик уларҙың береһен дә күрә алманым. Ғөмүмән, улар ғына түгел, беҙҙекеләрҙән берәү ҙә күренмәй, бынан егерме аҙым самаһында бер генә һын шәйләнә

буран эсенән, Худяков шикелле. Юлда һирәкләп атҡан пушка тауышын иҫәпләмәгәндә, тирә-яҡ әлегә тын, ер өҫтөндә ел ҡыуған ҡар бөртөктәренең шылыуы, ҡайҙалыр яҡында беҙҙең һалдаттарҙың шым ғына һүҙ алышҡаны ишетелгеләп ҡала. Ә буран араһынан күренеп-күренеп ҡалған немецтарҙың ҙур төркөмө беҙгә яҡынайғандан-яҡыная. Ел уларға ҡаршы иҫә, шуга ла үҙҙәрен көткәндәрен самалаһалар ҙа улар беҙҙе күрмәй, ахыры. Атмайҙар, атһа ла алдағылар ғына ата ала, хәйер, беҙҙе күрә алмағас нисек атһындар?

Беҙҙән уң яҡта ҡапыл ут астылар, ә атырға бойороҡ булмағайны, һәр хәлдә беҙ ишетмәнек. Сержант та ҡушылды дөйөм эшкә. Мин сумканан тулы диск алып эргәмә һалдым һәм карабиндан ата башланым. Ҡарайып күренгән төркөмдөң ҡап уртаһына бәрәм, шунлыҡтан пулялар дошманға тейә һәм үлтерә һымаҡ. Әммә ғәжәп, өҫкә менеп килеүсе дошман атыуға бөтөнләй ҙә иғтибар итмәй, туҡтамай ҙа, сигенмәй ҙә, ергә лә ятмай, етмәһә алдағылары автоматтарынан ҡыҫҡа очередь менән беҙгә ҡарай ут асты. Сержант патрон йәлләмәй оҙон очередь менән ата, ә запас юҡ. Подсумкала барлығы ике диск ята, шинель кеҫәләрендә әҙерәк бар.

— Патрондарҙы һаҡла. Ҡыҫҡа очередь менән ат! — тип ҡысҡырам мин Баулинға. Әйтеүем бойороҡ һымаҡ яңғыраны һәм миңә оло кеше, тәжрибәле һуғышсы алдында нисектер йәпһеҙ булып китте.

Әлбиттә, ул мине тыңламаны. Ишетмәмешкә һалышты, оҙон очередь менән атыуын дауам итте, дискыһын бөтөргәс икенсеһен ҡуйҙы. Мин карабинды ергә һалдым да бушаған дискыны тултырырға тотондом. Ҡабаландым, бармаҡтар тыңламаны, үҙемде һаман, бына-быйна ҡурҡыныс ташҡын килеп етер ҙә беҙҙең һирәк кенә сафтарыбыҙҙы селтәрҙе өҙгөләгән ише өҙгөләр һәм тапап, туҙҙырып, иҙеп китер тигән тойғо ташламаны. Артҡа, ферма яғына, сигенергә бойороҡ ишетелмәҫме тип ҡолаҡ һалам. Берәйһе ҡалҡынып артҡа йүгерһә, моғайын, мин дә аҡылымды юйып, башымды юғалтып тылға сабыр инем, Аллаға шөкөр, ундайҙар күренмәне.

— Артҡа ҡарама, — тине сержант.

— Ниңә?

— Йүгереү теләге уяна.

Ул минең хәлде аңланы, элек, тәүге бәрелештәрендә, үҙе лә минең һымаҡ тойғолар кисергәндер, шуға ла теләктәшлек белдерәлер.

Ә немец һаман килә. Улар килмәй, берәмләп, икешәр-өсәр кешенән торған ваҡ төркөмдәр менән йүгерә. Саҡрым самаһына һуҙылған сафты һаҡларға тырышып, алдағы рәт артында өйкөм-өйкөм булып кеше ташҡыны ағыла. Ошо тере кеше массаһы өмөтһеҙлектөң сигенә етеп, ҡырағай тәүәккәллек менән беҙҙең пулемет, автомат уты аша үтеп көнбайышҡа, үҙҙәренекеләргә, сығырға ниәтләнә. Ҡайһы берҙәре йығыла, әлегә пуля теймәгәндәре иптәштәренең мәйеттәрен ашаҡлап сығалар ҙа ары, беҙҙең өҫкә, йүгерәләр. Уларҙың беҙҙе тапап китәсәктәренә мин хәҙер шикләнмәй инем инде — аҡылдарынан яҙған ошо ҡурҡыныс лаваны тотоп ҡара!

— Толя, мәле ата тор, мин тартып алам, — тине сержант Баулин, ситкәрәк шыуҙы, бүркенең ҡолаҡсынын ҡайтарып алдан уҡ әҙерләп ҡуйған сигараһын алды, йөҙөн елдән йәшереп зажигалка тоҡандырҙы. Мин дискылағы аҙаҡҡы пуляларҙы дошманға оҙаттым да дискыны ысҡындырҙым, яңыһын ҡуйғанда бармаҡтар казенникка тейгәйне, бешеп сыҡты — ҡыҙған. Казенникка ҡар баҫтым — пыш итеп китте, боҫ күтәрелде. Мин һаман килеүсе немецтарға аттым, прицель менән, ҡыҫҡа очередь менән аттым, хәҙер инде ҡолағандарын асыҡ күрәм — ҡар өҫтөнә танауҙары менән төртөләләр ҙә тынып ҡалалар. Мин кеше үлтерәм, әммә күңелдә кеше үлтерәм тигән үкенес тойғоһо юҡ, улар минең өсөн барыһы ла дошман. Ә улар һаман килә. Ҡар бураны аша уларҙың беҙҙән нисә метрҙа икәнен асыҡларлыҡ түгел, алғы рәттәгеләргә тиклем йөҙ метр ҙа юҡтыр, моғайын. Улар, ниңәлер, элекке кеүек ашығып, йән асығына йүгермәй хәҙер, йән фарман атлайҙар һәм ҡыҫҡа очередь менән автоматтарынан, винтовкаларынан аталар. Ҡысҡырышҡандары ла ишетелә, уң яҡтараҡ йыр тауышы ла ҡолаҡҡа салына — йырлайҙар, күрәһең.

Мин пулеметты сержантҡа ҡайтарып бирҙем, бушаған дискыға патрондар тултырырға керештем. Күпмелер ваҡытҡа ел болоттарҙы таратты, баш осонда зәңгәр асыҡлыҡ хасил булды, ҡар яуыу ҙа туҡтағандай итте һәм уң ҡулда әле генә йырлап барған немецтарҙың өсмөйөш рәүешендә теҙелеп беҙҙең эскадрон менән күрше эскадрон араһына кереп барғанын һәм, бер ниндәй ҙә ҡаршылыҡҡа осрамай, артабан хәрәкәт итеүен күрҙем. 4-се взвод үҙенең тотҡан позицияһын ҡалдырҙы ла беҙҙең яҡҡа йүгерҙе, бер нисә һалдат, күрше эскадрондағылар, күрәһең, артҡа, һыйыр һарайҙары яғына йомолдо. Күңелде

ҡапыл ниндәйҙер ҡырағай ҡурҡыу биләп алды, эх, шунда боҫ, йәшен ине тип, мин дә һарайҙарға күҙ ташланым... Шул саҡ һарай артынан һыбайлы берәү атылып сыҡты ла, нимәлер ҡысҡырҙы, һөрәнләне, сигенеүселәрҙең юлына арҡыры төштө. Сигенеүселәр туҡтаны, шулай ҙа ҡалдырған позицияларына кире әйләнмәне, туҡтаған урындарында ергә ятты, һыбайлы эргәһенә үк килеп еткән немецтарға пистолеттан ата-ата кирегә сапты. Һарай тәҙрәләренән дә аталар ине, ә буркалы һәм һоро папахалы оҙон кәүҙәле берәү мөйөштән автоматтан һиптерә. Туҡтауһыҙ атыш тауышынан, шаулы кешеләр хәрәкәтенән ҡурала һыйырҙар тыныcһыҙлана, баҡыра, мөңрәй. Һарай артынан кемдер сыҡты ла беҙҙең яҡҡа йүгерҙе.

— Патрондар бөттө! — тинем сержантҡа, уға һуңғы дискыны тоттороп.

Шинель кеҫәһенән бер нисә патрон табып, карабинды яһаным. Йәнә артҡа боролоп ҡарап шуны күрҙем: һыйыр һарайы артындағы йорттар араһынан грузовик килеп сыҡты ла немецтарҙың юлына арҡыры төштө, тәрән ҡарҙа бата-сума яйлап ҡына уларға ҡаршы китте; бер аҙҙан машина немецтарҙың танау осонда тигәндәй боролдо һәм кузов башындағы буркалы оҙон кеше немецтарға эре калибрлы пулеметтан ут һиптерә башланы. Немецтар аптырап ҡалды, туҡтаны, йығылғаны йығылды, берәүҙәре йүгереште, ҡайһылары машинаны урап үтеп юлдарын дауам итте, арттағылары тирә-яҡҡа һибелде, беҙҙең өҫкә килгәндәре килеп етә яҙҙы — хәҙер мин уларҙың шашыр сиккә еткән күҙҙәрен, ҡурҡыуҙан, өмөтһөҙлөктән салышайған йөҙҙәрен, асыҡ ауыҙҙарын күрәм хатта.

— Бөттө, шабаш! — Сержант бушаған дискыны пулеметтан ысҡындырҙы ла аяғына баҫты, кеҫәһенән кисет сығарып, тәмәке төрә башланы — ҡулы ҡалтырай, күҙ ҡараштары буш һәм бер нәмә лә күрмәй. Мин дә ҡалҡындым, штыкты астым — донъя хәлен белеп булмай, бәлки, ҡул һуғышына ла инергә тура килер, унан килеп немец аяғы менән тапап киткәндә ерҙә ятыу үҙе мәғәнәһеҙлек.

Ә немец төркөмө, йөҙләгән, бәлки, меңләгән кеше, ағыла ла ағыла, арттағылары алдағыларын тапап килә. Бына алдағылары беҙҙең һирәк ҡалған рәт аша үтә лә башланы.

— Артҡа, артҡа, сволочтар! Ҡайҙа киләһегеҙ?! — тип йән асыуына ҡысҡырҙы кемдер, асыҡ штыгын алға һоноп.

Мин дә ҡысҡырҙым, телгә ниндәй һүҙ тура килә шуны, әрләнем, һүгендем. Ә немецтарҙың беҙҙең менән ҡул һуғышына инергә теләмәүҙәре күренеп тора ине, мин быға аптыраным, улай ғына тиң, улар беҙҙе атып та йыға ала ине, ана, улар күпме, карабиндары ла яурындарында, әммә атмайҙар, етмәһә, беҙҙең яндан тиҙерәк китергә тырышалар, әйтерһең дә, беҙ һеҙгә теймәйбеҙ, һеҙ ҙә беҙгә ҡағылмағыҙ, үткәреп ебәрегеҙ. Ҡапыл башыма етте: беҙҙеке һымаҡ уларҙың да патрондары юҡ бит! Автоматсыларын һәм патрондары булған һалдаттарын улар алдан ебәргән, ә былар, арттағылар, буш килә!

Артҡа боролғайным, эре калибр пулеметлы грузовик яй ғына фермаға ҡарай китеп бара, бурка кейгән оҙон кәүҙәле кеше һелкенеп барған көйө ҡыҫҡа очередь менән атыуын дауам итә. Һыйыр аҙбары яғынан берәү беҙгә ҡарай йүгерә. Таныным, беҙҙең ҡарт коновод икән. Ҡулында — брезент биҙрәләр, тимәк, патрондар килтерә. Беҙгә килеп етә алманы, сөнки беҙҙең тыл яғынан пулеметтар атырға тотондо, пушкалар телгә килде һәм снарядтар беҙҙең эргәлә генә ярыла башланы. Сафты өҙөп тылға кергән немецтарға ҡарай аталар. Шул уҡ ваҡытта беҙгә, үҙебеҙҙекеләргә лә, бәрәләр.

Трра-бах-бах.

— Ятығыҙ!

Беҙ ергә ҡапландыҡ. Трра-бах-бах. Мин башты саҡ ҡына ҡалҡытып йәнә тирә-яҡҡа күҙ ташланым: ҡурала үрһәләнгән һыйырҙар күҙ алдында барған мәхшәргә түҙә алмай кәртәне емерҙеләр ҙә яланға сабышып сыҡтылар һәм ҡурҡыныс, үҙҙәренә аңлашылмаған күренештән ҡасып, ярылған снарядтар, немецтар араһында сабышырға тотондолар.

Ҡар өҫтөндә ятҡан коновод ҡалҡынды, эйелеп-бөгөлөп, ауыр итеп беҙгә ҡарай йүгерҙе. Ах та ух итеп килеп етеп, брезент биҙрәһенән беҙҙең шинель итәктәренә патрондар ҡойҙо, һәр ҡайһыбыҙға берәр «лимонка» тотторҙо, һаман хәл йыя алмаған көйө: «Тегендә комдив Чурилин немецтарға автоматтан ата», — тип ҡысҡырҙы ла ары, эскадрон командиры эргәһенә йыйылған егеттәр янына, йүгерҙе. Ялан буйлап тирә-яҡҡа һибелгән немецтар араһынан йүгерә ине ул, немецтар әллә үҙҙәренекеләргә, әллә коновод ҡа нимәлер тип ҡысҡыра. Әммә уға ҡағылмайҙар, күрәһең, коновод ҡайғыһы юҡ уларҙа. Ғәжәп, хатта сәйер күренеш ине был, кеше ышанмаҫлыҡ хәл, мөғжизә. Һуңы-

нан берәйһенә һөйләһәң, ысынлап та, ышанмаç. Беҙ дисҡыларға патрондар тултырырға тотондоҡ.

Күктәге зәңгәр асыҡлыҡты йәнә болоттар ҡапланы, йәнә ҡар яуа башланы. Пулеметтар тыҡылдауы, пушкалар гөрһөлдәүе яҡынайғандан-яҡыная, снарядтар хәҙер беҙҙең алда ғына ярыла. Немецтарҙың ҡырағайҙарса шашынып килеүен нимәлер тоҡтарланы, улар әйләнде-тулғанды, урындарында тапанды, ҡурала торған һыйырҙар кеүек үрһәләнде: берәүҙәре кире артҡа йүгерҙе, икенселәре беҙҙең тылға барыуҙарын дауам итте, хәҙер инде — баш остарына күтәрелгән ҡулдар менән, ҡоралһыҙ һәм нимә тураһындалыр үҙ-ара һөйләшкән, ҡысҡырышҡан хәлдә. Ҡоралдарын ташлап, улар күпләп әсирлеккә бирелде. Бер немец, утыҙ йәш тирәһе генә барҙыр, олораҡ булмаһа әле, оҙон кәүҙәле, яшыҡ, бит-йөҙөн һаҡал-мыйыҡ баçҡан, нимәлер ҡысҡыра-ҡысҡыра беҙгә яҡын уҡ килде лә бер ҡулын баш осона күтәреп, икенсеһен күкрәгенә ҡуйҙы.

— Иван, шис! — тине ул, күҙҙәрен аҡайтып. — Шис!

— Кит бынан, хәшәрәт! Йә пленға бирел, — тип һүгенде беҙҙекеләрҙән берәү.

— Йа, йа, плен, Себер.

Яуған ҡар пәрҙәһе аша беҙ үҙебеҙҙең «утыҙ дүрт»тәрҙе тиҙ генә шәйләй алманыҡ. Улар өçтәренә тейәлгән пехотинецтар менән ҡар бураны араһынан килеп сыҡтылар ҙа беҙҙең яндан ғына, немец мәйеттәрен иҙә-тапай, дошмандың тар-мар ителгән, әммә көнбайышҡа, үҙҙәренекеләргә ҡушыла алмаған частары яғына боролдолар. Мәйеттәр, мәйеттәр. Улар төрлө ҡиәфәттә ята. Йөҙҙәре ҡурҡыштан тартылып, үлем, ауыртыныу һәм аптырау йөҙө менән ята. Улар офоҡҡаса тиклем һибелеп, таралып ята. Мин был хәтле үлектәрҙе быға тиклем күргәнем юҡ. Һаман яуған ҡар яйлап уларҙы күмә, ҡаплай, оҙаҡламай уларҙың барыһын да ваҡ ҡалҡыулыҡтар рәүешенә индерәсәк...

Ә бер сәғәт самаһы үткәс, ниндәйҙер утарҙа наркомдың тәғәйен йөҙ грамын эсеп, Андрей-Марусяның ашын ашағас үҙемдең тәнемдә шул тиклем арығанлыҡ һиҙҙем, берҙән-бер теләк — берәй мөйөшкә сумырға ла оҙаҡ итеп йоҡлау ине. Сисенеп тә тормай бер бүлмәнең иҙәненә ауҙым да күҙҙәрҙе йомдом. Һәм һуғыш яланын күрҙем. Офоҡҡаса тиклемге иге-сиге булмаған асыҡлыҡта мәйеттәр, мәйеттәр...

Бала саҡта шулай була торғайны: көнө буйы йылғала балыҡ ҡармаҡлайһың, кисен ҡайтып йоҡларға ятҡас, күҙ

алдында ҡыҙыл ҡалҡыуыс һикергеләп тик тора. Бер бата, бер ҡалҡа. Йәки еләккә барғанда. Еләк йыйып ҡайтҡас ҡыҙыл еләктәр төнө буйы күҙ алдынан китмәй йонсота. Ә хәҙер — мәйеттәр, мәйеттәр...

Висланың теге яғы Померания тип атала икән. Висланы понтон күперҙәр аша сыҡҡас, беҙ Померания буйлап барҙыҡ. Бында ла Көнсығыш Пруссиялағы кеүек, кеше юҡ фиғелендә, ауылдарҙа, бәләкәй ҡалаларҙа, нигеҙҙә, ҡарт-ҡоро ғына күренә, Германияға ҡыуылып килтерелгән һәм помещиктарҙа, бауэрҙарҙа эшләп йөрөгән рустар, украиндар осрай. Беҙ, ярты Германияны һуғыштар менән үткән яугирҙәр, хәҙер инде Померания буйлап китеп барабыҙ. Яраланғанға тиклем пехотала булған кеүек, мин инде бындағылар араһында үҙ кеше булып киттем. Капитан Овсянников, эскадрон командиры — гражданкалағы совхоз директоры, взвод командиры өлкән лейтенант Ковригин — ауыл уҡытыусыһы, өлкән сержант Морозов — рядовойҙарға ла «һеҙ» тип өндәшеүсе — элекке колхоз бухгалтеры һәм «строиться» тигән бойороҡто «один татарин, два мордва, становись по два» тип үсекләгән, унын рус теленән (на «карман поставил») көлгән, шаяртҡанда «татар булып тыуҙым, татар булып үләм» тип яуаплаған татар Мозафаров һәм башҡалар, бигерәк тә сержант Баулин,Брянщина ауылы егете, пулеметсы (мин унын икенсе номеры) — улар бөтәһе лә хәҙер миңә туғандар кеүек яҡын.

Маршта, әгәр марш көндөҙ булһа, ат өҫтөндә йырлап барабыҙ. Төрлө йырҙар йырлана, шулай ҙа күпселектә — Стенька Разин хаҡында.

«Из-за острова на стрежень, на простор речной волны, выплывают расписные Стеньки Разина челны», — һәм шундуҡ ҡушымта:

Топится, топится
В огороде баня,
Женится, женится
Мой миленок Ваня...

Бәрелеш-һуғыштар юҡ. Һуғыш ҡайҙалыр ситтә, алыҫта бара, беҙ йыш ҡына орудиелар канонадаһын, яңғыҙ орудиеларҙың атҡанын ишетәбеҙ. Ферма янындағы алыштан һуң ике аҙнанан күберәк ваҡыт үтте, шунан бирле һуғыш-

ҡаныбыҙ юҡ, сөнки беҙҙең ғәскәрҙәр алған, азат иткән ерҙәр буйлап барабыҙ.

Күптән түгел генә госпиталдән сығып беҙгә килгән ҡарт һалдат бер көн былай тине:

— Нишләптер бер ҙә һуғышмайбыҙ, барабыҙ ҙа барабыҙ.

— Фрицты һағындыңмы әллә? — тинем мин.

— Һағынаммы, юҡмы, уныһы икенсе мәсьәлә. Оҙаҡламай һуғыш бөтә, ә мин бер фашисты ла үлтермәнем.

— Уны ниңә үлтерергә, ҡулдарың ҡысыймы ни?

— Атай, һин нисә фашисты үлтерҙең, тип хат яҙа бит малай. Ә мин берҙе лә үлтермәнем. Ҡайтҡас нимә тип әйтермен?

— Бер взводты ҡыйраттым, тип алдарһың, — тим.

— Һин нәмә, баланы шулай алдарға яраймы ни?

— Иртәрәк киләләр уны. Беҙ үлтерҙек, һанаманыҡ. Өлгөрөрһөң, улар күп әле.

Висла аръяғында спирт заводтары байтаҡ булып сыҡты. Кеше йәшәгән берәй төбәктә йәки ситтәрәк кирбес торба булһа, был инде мотлаҡ спирт заводы тигән һүҙ һәм беҙҙең трофей флягалар бер ҡасан да буш йөрөмәне. Бер-ике йотом йотоп алғас беҙ Баулин менән хәбәр һатабыҙ. Күберәк был патруль рәүешендә йөрөгәндә йәки пулемет янында дежур иткәндә була. Минең һөйләгәнде ул оло түҙемлелек менән тыңлай, кем белә, бәлки, үҙенең ҡайғыһына сумып бөтөнләй тыңламайҙыр ҙа. Ә үҙе башындағы уйҙарын теленә күсергәндәй бер үк хәбәрҙе ҡабатлай — ҡатыны тураһында һөйләй. Ҡайҙа һәм нисек танышҡандар, нисек осрашыуҙары, уның Баулинды көтөүҙәре.

— Ул минең күрше ауылдан, Козловканан, беҙгә өс кенә саҡрым. Һуғышҡа тиклем уларҙың ауылында ауыл советы, клуб бар ине. Беҙ шунда киноға, тансыға йөрөйбөҙ. Армияға тиклем бик барманым, әсәйем ебәрмәне: ул ауыл малайҙары беҙҙекеләрҙе йыш ҡына туҡмап ҡайтара торғайны. Ә действительныйҙан һуң, еткән егет булараҡ, йышланым, әтәстәр ҡысҡырғансы шунда олаға башланым. Зинаны күптән күҙләгәйнем, тик яҡын барырға ҡурҡыта. Егеттәр, тансыға саҡыр, ти. Бар ҡыйыулыҡты йыйып шулай бер көн саҡырҙым бит, егеттәр, бейенең, хәҙер оҙата бар, ти. Ҡапҡаларына тиклем оҙаттым, шунда бер аҙ тапандым да үҙебеҙҙекеләрҙе ҡыуып етәйем тип арттарынан йүгерҙем. Ауыл осонда Козловка егеттәре ҡаршы

алды. Ураттылар ҙа, бер юлға теймәйбеҙ, әммә Козловкаға юлды онот, Зинканың егете бар, ул һинең аяҡтарыңды һындыра һуғасаҡ, тип ҡурҡыталар. Хеҙмәт итеп ҡайтһам да малайҙарҙан шөрләнем, юҡ, ҡурҡманым, ә ҡыҙҙың ысынлап та егете бар икән, нишләп мин уларҙың араларына керергә тейеш, тип уйланым. Беҙ, Баулиндар, тыныс нәҫел. Юҡҡа-барға күтәрелеп бармайбыҙ, ярамай икән, ярамай, йәштәрҙе бүтән борсоп йөрөмәм тинем дә ошонан һуң Козловкаға барманым. Ауылда ҡыштарын кемдә булһа ла кис ултырырға йыйылабыҙ, унда инде кәрт һуғабыҙ, бейейбеҙ, ҡыҙҙар менән һөйләшәбеҙ, оҙатып ҡуябыҙ, ә йәйен — аҙбар, һарайҙар артындағы туғайлыҡта. Бер кис шулай артҡа сыҡһам, минең Зинка йөрөп ята! Аптыра ла кит. «Зина, нишләйһең бында?» — тим. Ул ниндәйҙер үпкә менән: «Беҙҙең дүрәктәрҙән ҡурҡтыңмы? Армияла ла хеҙмәт итеп ҡайтҡан бит әле», — тип яуаплай был. Шул көндән башланды осрашыуҙар. Мин Козловкаға бармайым, ул беҙҙең ауылға килә. Һуңынан ишетәм, Зина, шундай егетте ҡулдан ысҡындырһаң иҫәр буласаҡһың, тигән икән әхирәттәре. Көҙөнә ҡарттарға, өйләнәм, тим. Атай ҡарт, хеҙмәт итеп ҡайттың, йөрөп тә алдың, хәҙер мөмкин, ти. Риза. Әсәй, әҙерлек юҡ, йорт бәләкәй, ҡайҙа килтерергә уйлайһың йәш кәләште, тип икеләнә. Яңы өй һалырға, кейенергә кәрәк, костюмың юҡ, хром итек кәрәк, йәнәһе. Һаман армиянан кейеп ҡайтҡан менән йөрөйөм шул, ысынлап та. Ҡыҫҡаһы, бер аҙға кисектерергә булдыҡ туйҙы. Яңы йортҡа ағас йүнәткәнсе, костюм тектергәнсе, бер йыл үтеп тә китте. Ул арала, бац — фин кампанияһы. Военкоматтан повестка килде. Алдылар, яраланып ҡайттым һуғыштан. Өйләнештек, бала тыуҙы, тормош башланды — йәшә, шатлан, бала-саға үрсет. Юҡ шул. Йәнә һуғыш. Ҡырҡ өсөнсө йылда госпиталдә ятҡанда һеңлекәштән хат алам: «Йортто немецтар яндырҙы. Землянкала көн итәбеҙ. Зинаның ҡайҙа икәнен белмәйем. Әсәйем үлгәс ул Козловкаға ҡайтып киткәйне, һуңынан немецтар алып киткәнлеген ишеттем». Ҡайҙа алып киткәндәр, бала нишләгән — һис нәмә белерлек түгел. Тәүҙә бик ҡабул итеп булманы баланы, йәшлегемә барып аңлап етмәгәнмендер инде, тора-бара яҡын булды. Яраттым. Хәҙер төштәргә керә, ҡулда йөрөткән һымаҡмын. Ул шундай бәләкәй, йомшаҡ... Уянам да бала итеп карабинды ҡосаҡлайым. Шәп егет һин, Толя! Һиңә тере ҡалырға, йәшәргә кәрәк...

Одер аръяғынан икенсе Германия башланды. Был йылғаны ла беҙ пантон күперҙәр аша сыҡтыҡ — кавалерия йылғаларҙы кисмәй. Беҙҙең сығыу ҡаты һуғыштарҙан һуң үтте, шуға ла йылға һыуы миңә үтә буръяҡ, ят һәм уйсан күренде — йылға ҡуйынында беҙҙең күпме һалдат үлгән йәки яраланған, күпме ҡан аҡҡан һәм ошо тулҡындар күпме кеше ғүмерен йотоп диңгеҙгә ағыҙған!

Одер аръяғынан аҡ флагтар елберләгән, ҡасаҡтар эркелешкән, балалар коляскалары аунап ятҡан, юл буйлап мендәр йөндәре осҡан, пеләш башлы, цивиль немецтар Германияһы башланды. Халҡы бер ҡайҙа ла ҡуҙғалмаған ҡала өйҙәренең тәҙрәләренә һәм балкондарына эленгән әлеге аҡ флагтар. Кирегә, көнсығышҡа, ҡасаҡтар, ҡатын-ҡыҙҙар, ҡарт-ҡоро, бала-саға ағыла, ҡарттар беҙҙе күреү менән эшләпәләрен, кәпәстәрен һалып сәләмләй, күптәр балалар коляскаһына әйберҙәрен тейәп этеп бара, күптәр рюкзактар, төйөнсөктәр, сумаҙандар күтәргән; ҡайһы бер цивильныйҙар көнкүреш әйберҙәре лыҡа тулы өҫтө ябыҡ ауыр йөк арбаларында килә. Беҙҙең һалдаттар аттарын армия ылауҙары өсөн биргән, әлеге өҫтө ябыҡ ауыр йөк арбаларын юлдың ситенә сығарып ултырталар, кешеләр үҙ яҙмыштарына буйһоноп шунда мендәр-яҫтыҡтарын, башҡа нәмәләрен ташлап, иң кәрәктәрен һәм еңелдәрен ҡулдарына тотоп ҡасаҡтарҙың йәйәү төркөмөнә ҡушыла. Ел йыртылған мендәр эстәренән мамығын йолҡоп сығарып, февраль бураны һымаҡ юл буйында осороп-өйрөлтөп йөрөтә.

Һәм бына беҙ йәнә һуғыш киңлегенә инәбеҙ, оборонаға ятырға өлгөргән дошман менән бәрелешеү киңлегенә. Алғы һыҙыҡтың яҡынлығын белдереүсе тәүге нәмә — иртәнән бирле осҡан беҙҙең штурмовиктарҙың тауышынан һәм алыҫ гөрһөлдәүҙән тыш — ҡасаҡтар юғалды. Бара бирә ҡаршыға осраусы санитар машиналары йышайҙы, кузовтары брезент менән көпләнгән аҡ повязкалы машиналар пәйҙә булды. Һуғышҡа яҡынырaҡ килгән һайын һауа ла икенсерәк һымаҡ, шулай уҡ яландар бүтән, юлдар, ҡыуаҡлыҡтар башҡа төҫтә, әйтерһең, бөтәһе лә һалҡын һәм ҡурҡыныс төҫ менән яҡтыртылған. Унан беҙ үле танкылар һәм үле танкистар янынан үттек. Мин һуғышта күп нәмә күрҙем, төрлө хәл кисерҙем, әммә быңдай күренештәрҙе беренсегә күрә инем. Беҙҙең «утыҙ дүрт»тәр менән немецтарҙың «тигр»ҙары ике юл киҫешкән ерҙә осрашҡан. Беҙҙең танк немецтыҡының ҡабырғаһына килеп

бәрелгән, тегеһе туктаған, удар көсөнән уң яҡ гусеницаһын өҫкә күтәргән. Йәнә ике танк, беҙҙеке һәм немецтыҡы, маңлайҙары менән төкөшкән, броняларын кәкрәйтеп һәм башняларындағы орудие көбәктәрен бороп, аяғөҫтө баҫкан һымаҡ бер-береһенең өҫтөнә менгәндәр. Ике танк бер-береһенә терәп атҡандар ҙа икеһе лә янып ултыра. Ситтән ҡарағанда былар бөтәһе лә тәртипһеҙ рәүештә өйөлгән металл өйөмдәре кеүек, тимер ташландығы, машиналар сүплеге һымаҡ, бында ниндәй ҙур ике көстөң бәрелеше, бер-береһенә күрә алмаусанлыҡ тартышыуы, саялыҡ, тәүәккәллек — был машиналарҙың шулай бәрелеше-һуғышы ваҡытында ниндәй тауыш, гөрһөлдәү, шығырлау торған, һауала ике телдә ниндәй әрләшеү, һүгенеү, ҡарғыш һәм ыңғырашыу яңғырағанын тик күҙ алдына ғына килтереп була. Былар барыһы ла бер нисә минут эсендә барғандыр, моғайын. Беҙҙең янған «утыҙ дүрт»танкыһы янында күмергә әйләнгәнсе янған танкистарҙың кәүҙәләре ята. Икәүһе танкы янында, өсөнсөһө — ситтәрәк. Күмер һымаҡ ҡап-ҡаралар. Баштарындағы янған шлемдары ғына уларҙы кеше рәүешендә танырлыҡ итә. Аяҡтарын эстәренә тартҡандар, ҡулдары терһәктәрендә бөгөлгән, бармаҡтары йоҙроҡҡа төйнәлгән, әйтерһең дә, үле килеш һуғышыуҙарын дауам итәләр...

Бер аҙ барғас беҙҙең пехота өҙгән немец оборонаһын күрҙек. Окоптар, сыбар пушкалар, төрлө яҡҡа ырғытылған йәшниктәр, гильзалар, фауспатрондар, каскалар, ергә ҡаҙып ултыртылған үҙйөрөшлө «самоходка», туҙҙырылған пулемет оялары, дошман һалдаттарының мәйеттәре. Быларҙың барыһын да беҙ юлдан түгел — шоссе окоптарҙан ике йөҙ метр самаһы ситтә һәм ул тулыһынса аҡтарылған, ватыҡ техника менән тулған, етмәһә, арыраҡ бер тягач юлға арҡыры ҡуйылған — бөтә был мәхшәрҙе беҙ ошо емеректәрҙе урап үткәндә баҫыу өҫтөнән барғанда, окоптар һәм воронкалар аша барғанда ҡараныҡ. Окоптарҙа, окоптар янында бер нисә пехотинец ҡырынып ултыра, ҡалғандары, күрәһең, шоссеның һул яғындағы бәләкәй генә ауылда ял итә.

— Эй, «копытниктар», бейәләргә атланып ҡайҙа китеп бараһығыҙ? — тип ҡысҡырҙы өлкән генә сержант. Үҙе мыҫҡыллы ғына йылмая.

— Бәй, трофей йыйырға бараларҙыр, — ти икенсеһе.

— Фриц хәҙер күрһәтә һеҙгә трофейҙы.

— Кем кемгә күрһәтер бит әле.

Беҙҙе танк колоннаһы уҙып китте. Тейешле бойороҡ яңғырағас, беҙ биш саҡрым самаһы танкылар артынан юрттырып барҙыҡ. Һәм тағы бойороҡ:

— Эскадр-о-о-о-н, к пешему бою. Слеза-а-а-ай!

— Беренсе взвод, к пешему бою.

Йөрәк урынынан ҡупты. Бөтәһе лә яңынан башлана, быға тиклем әйтерһең дә, Көнсығыш Пруссиялағы ла, Померанияләғы ла һуғыштар булмаған, азат ителгән немец ерҙәре буйлап еңеүле марштар ҙа, еңеү көнөнә тиклем тыныс ҡына барып етербеҙ тигән йәшерен өмөт тә булмаған. Әлеге бойороҡтан һуң йәнә һуңғы минуттарҙы һанау башланды (нисәнсе тапҡыр), кем белә, бәлки, һуғыштағы иң һуңғы ара, иң һуңғы юл тап әлеге бойороҡтан башланалыр ҙа...

Шоссеның уң яғынан, баҫыу йүнәлешендә, дүрт танк килеп сыҡты, береһе юл буйлап китте. Алда ҡарағусҡыл стена булып ҡарағай урманы шәйләнә ине. Беҙҙең эскадрон йәйелде лә баҫыу аша әлеге танкылар артынан китте. Эскадрон командиры менән арала тороп ҡалған взвод командиры йүгереп беҙҙе ҡыуып етте һәм алдағы урманда немецтарҙың ҙур төркөмө ҡамауға эләккәнен әйтте. Урман ауыҙына тиклем бер саҡрым самаһы ара бар. Танкылар ошо араның яртыһын үтте лә туҡтаны, шунан орудиеларынан урманға ҡарай атырға тотондо. Шоссе буйлап барғаны шулай уҡ туҡтаны, люгы асылып китте һәм унан танкистарҙың береһе сығып башняға беркетелгән пулеметтан ут һиптерә башланы. Яҡтырткыс пулялар урманға инеп һүнде, әйтерһең дә, һыуға төштө. Әммә урмандан яуап уты юҡ, ғөмүмән, немец барлығын белгертеүсе шикле бер нәмә лә тойолмай. Атып-атып танкылар яй ғына ары ҡуҙғалды. Беҙ — улар артынан. Мин һәр ваҡыттағыса брезент сумкаларҙа пулемет дискыларын һелкетә-һелкетә Баулин менән йәнәш атлайым. Арыраҡ, уң яҡта, танкылар артынан бүтән взводтар ашыға. Урман ауыҙына өс йөҙ метр самаһы ғына ҡалды. Беҙ инде, урманда бер ниндәй ҙә фриц юҡтыр, улар булмағас алыш-атыш та булмаҫ тип уйлап, үҙ-ара һөйләшә-гәпләшә башлағайныҡ... ҡапыл урман яғынан орудие атып ебәрмәһенме! Һәм көслө шартлау. Беҙҙең алда барған танк һикереп китте, туҡтаны, ниңәлер әйләнде, икенсе шартлауҙан һуң бөтөнләй тынып ҡалды. Тәүҙә әллә ярыҡтарҙан, әллә снаряд тишкән тишектән зәңгәр төтөн сыҡты, унан ҡуйы ҡара ысын төтөн күренде. Шундуҡ тигәндәй урман ауыҙынан автоматтарҙан

ата башланылар. Беҙ ергә яттыҡ. Башҡа танкылар туҡтаны ла ут асты.

— Взвод, огонь!

Баулин пулеметын терәүескә ултыртты һәм урманға ҡарай яҡтыртҡыс пулялар менән ата башланы, Мозафаровтың «Дегтярев»ы, карабиндар эшкә кереште.

— Взвод, встать, вперед!

Бер кем дә ҡалҡынманы. Пулялар аҫтына барып инеү икеләнеүе бер нисә секундҡа һуҙылғандыр, ә миңә ифрат оҙаҡ тойолдо.

— Взвод, встать, вперед! Музафаров!

Мозафаров ҡалҡынды ла пулемет ҡайышын муйынына кейҙе, кәүҙәһен турайтты, шунан саҡ ҡына эйелеберәк атлап атырға тотондо. Баулин пулеметтың ҡайышын бер ҡасан да муйынына киймәй, уның ҡулдары көслө, пулеметын ул карабин тотҡан һымаҡ ҡулына тота ла биленән ата. Күтәрелгәс мин шуны шәйләнем, урман ауыҙынан атылған пулемет очереды баҫыуҙа саң-тупраҡ күтәрмәй, тимәк, танкистар дөмөктөрҙө нөктәләрен, өндәре сыҡмаҫлыҡ итте. Шулай ҙа айырым пулялар оса, күрәһең, винтовкаларҙан аталар, эскадрондың уң флангыһында пулемет атыуын дауам итә. Беҙ барыбыҙ ҙа эйелеп, һәр минутта ергә һырынырға әҙер булып барабыҙ, баҫыуҙың һәр метрын ҙур ауырлыҡ менән үтәбеҙ, әйтерһең дә, текә ярға үрмәләйбеҙ. Пулялар эргәнән оса, шөкөр, әлегә миңә теймәй. Янымдан атлаған Баулин да тере. Тирә-яғыма ҡарамайым тиерлек, бүтәндәрҙең алға барамы, юҡмы икәнен дә белмәйем, дөрөҫөрәге, күҙ сите менән генә шәйләйем, әммә бер нәмә лә ҡабул итерлек, уйларлыҡ хәлдә түгелмен. Шулай ҙа янған танк янынан үткәндә ҡыҙыҡһыныусанлыҡ еңде, боролдом һәм асыҡ люк уйымынан тышҡа һуҙылған ҡыҙыл ҡулды күрҙем. Ҡулы тотошлай ҡанға буялғаны тәүҙә аңға барып етмәне, ярҙам кәрәктер тип мин танкыға боролдом, ҡара төтөн ҡайнап сығып торған уйым төбөндә танкисты шәйләнем. Йөҙө ап-аҡ ине, ҡурҡыштан орбитаһынан сығырҙай булып күҙҙәре шарҙай асылған һәм улар миңә инәлгес ҡарай.

— Энекәш, тартып сығар мине... Ерҙә үлгем килә! — тип ыңғырашты танкист.

Мин ҡулымды һондом. Ул ҡанға батҡан, ҡалтыранған ҙур ҡулы менән минең ҡул суғымды әләктерҙе лә ауыртыныу, ғазап тойғолары менән тулы инәлгес ҡарашын минең күҙҙәрҙән алмай бөтә кәүҙәһе менән өҫкә тартылды. Мин

уны бар көсөмә өҫкә һөйрәнем, әммә уны һис ҡуҙғатырлыҡ түгел, шунан карабинды танкыға һөйәп ҡуйып ике ҡуллап тарта башланым. Был юлы ла ҡуҙғата алманым, әйтерһең дә, ул танкының тимер ҡарынына ҡыҫылған йәки таҙа, эре һөйәкле егет минең өсөн ауыр. Эргәмдән бейек кәүҙәле, көслө Воловик үтеп бара.

— Воловик, тартыш әле, бер үҙемдең көс етмәй, — тип мин уны саҡырҙым.

Воловик туҡтаны, янға килде, люкка эйелеп ҡараны, ҡапыл ағарып китте, шунан ҡоҫҡоһо килгәндәге ише ҡиәфәттә ауыҙынан бер нисә һүҙ һығып сығарҙы:

— Эсәктәре ҡойолоп сыҡҡан бит.

Һәм танкынан һикереп төштө лә ары йүгерҙе.

Меҫкен танкисты яңғыҙым тартып сығара алмаҫымды белеп һәм Баулиндан тороп ҡалыуымды аңлап мин бөтә көсөмдө һалып йәнә һөйрәп ҡараным, тик сығарырлыҡ түгел, ә танкист минең ҡул суғымды ла ебәрмәй, күҙемдән ҡарашын да алмай.

— Ебәр! — тип ҡысҡырҙым мин. — Ыҫҡындыр, хәҙер санитарҙар килеп етә, тартып сығарырҙар.

Ниһайәт, ҡанға буялған ҡулымды көс-хәл менән тартып ала алдым һәм арҡамда, елкәмдә уның инәлгес, ҡарғышлы ҡарашын тойоп танкынан һикереп төштөм дә үҙебеҙҙекеләр артынан йүгерҙем. Баулинды ҡыуып етер саҡта боролоп ҡараным һәм күреп өлгөрҙөм: шоссенан атҡан танк, юлдан төшөп, ҙур тиҙлектә урманға ҡарай елә ине. Уның өлгөһөндә башҡалары ла тиҙлектәрен арттырҙы, барған көйө юлдағы ваҡ ҡарағайҙарҙы тапай-иҙә алға йомолдолар. Ҡулдарын күтәреп немецтар ҡаршыға йүгереп сыҡты, тәүҙә икәү, өсәү, улар артынан взводтары, роталары менән. Ә беҙ, һуғыш еленән ҡыҙған, уларҙың пулялары аҫтында үлем көтөп ятҡан, ҡурҡыу кисергән кешеләр, туҡтала алмай йүгерҙек тә йүгерҙек, аттыҡ та аттыҡ.

Өлкән лейтенант Ковригин был ҡанлы мәхшәрҙе тыныс күҙәтте, хатта риза булып ниндәйҙер ҡәнәғәтлек тә кисерҙе шикелле. Өлкән сержант Морозов беҙҙең менән булһа атыуҙы туҡтатырға бойорор ине, тип уйланым мин, тик взвод командирының ярҙамсыһы коноводтар, аттар менән артта ҡалғайны шул.

Беҙҙең ҡаршыға ҡулдарын күтәреп бер немец йүгерә. Бысраҡ шинелдә, бит-йөҙөн һаҡал-мыйыҡ баҫҡан оло ғына йәштәрҙәге был кеше үҙе йүгерә, үҙе тырышып-ты-

рышып нимәлер ҡысҡыра. Мин уның «Эльзас», «Лотарингия» тигәнен генә аңлайым. Өлкән лейтенант уның нимә әйтергә теләгәнен, моғайын да, төшөнәлер, беҙ ҡайҙан айырайыҡ. Немец ярайһы ғына яҡын килгәс, Евстигнеев уға терәп тигәндәй атты һәм немец сапҡан ише йығылғас күкрәгенә шытырлатып штыгын ҡаҙаны.

— Ну, Евстигнеев, хәҙер улыңа мин дә немецты үлтерҙем тип һөйләй алаһың, — тинем мин, ерәнгес тойғо менән.

Ағарынған Евстигнеев миңә ҡырағай ҡарашын төбәне лә әсе итеп һүгенде.

Һуңынан, ҡалған көн буйы, мине тыныс уй-тойғоларға ҡайтармай, күҙ алдымда шул күренеш тик торҙо: танкистың люк уйымынан тышҡа һуҙылған ҡанлы ҡулы, уның ап-аҡ йөҙө һәм үлеп барған малайҙың өмөт-ышаныс менән тулған инәлгес зәп-зәңгәр күҙҙәре...

Германияға яҙ килде, иртә килгән ят яҙ. Ул мартта уҡ башланғайны, апрелдә бөрөләр тулышты, юл буйҙарында йәш үләндәр баш төрттө, йылы ел аҡһыл томанды, ялҡытҡыс ямғырҙарҙы ҡыуып ебәреп күк йөҙөн асты. Ҡояш нығыраҡ ҡыҙҙыра башлау менән ҡапыл йылытты һәм бер нисә көн эсендә ағастар япраҡ ярҙы. Ҡайын, тирәк япраҡтары ла Рәсәйҙә, минең Башҡортостандағы кеүек тәмле еҫле һәм йәбешкәк, ҡояш иркәләгән ер, баҫыу, йыраҡ тыуған яҡтарҙағы ише шулай уҡ тәмле еҫтәр, шатлыҡ-ҡыуаныстар, өмөт менән аңҡый. Күңелгә рәхәт һәм йылы. Беҙ, ауыл егеттәре, был ят ергә крәҫтиән күҙе менән ҡарайбыҙ — һуғыш баҫыуҙарҙы һалдат итеге менән күпме тапатһа ла, танк гусеницалары менән күпме иҙҙерһә лә һуғыштан һуң немец бауэрына кеше ҡаны менән һуғарылған ошо ерҙәргә мотлаҡ иген сәсергә тура киләсәк, сөнки терeләргә икмәк кәрәк...

Бер бәләкәй ауыл янындағы һәм шосселағы ике еңел бәрелештән һуң беҙ, беҙҙең эскадрон, беҙҙең полк, немецты тағы ла артҡа ҡыуып, дошмандың осраған ут нөктәләрен, ваҡ төркөмдәрен туҙҙырып, ташланған емерек техниканы урап үтеп, киңлеккә килеп сыҡҡан кеүек булдыҡ һәм бер ниндәй ҙә етди ҡаршылыҡҡа осрамай, төнө буйы барҙыҡ. Аттарыбыҙҙы атлатып та, юрттырып та, саптырып та барҙыҡ, төнгө ялан-баҫыуҙар аша, йоҡлаған ауылдар, утарҙар эргәһенән үттек һәм май баштарының йылы бер иртәһендә һуғышһыҙ ғына Перлеберҡҡа барып керҙек.

Ҡала урамдары буп-буш. Йорттарҙың бөтә ҡаттарындағы тәҙрә һәм балкондарына аҡ сепрәктәр эленгән. Өркәк тынлыҡты һоро таш түшәлгән тар урамдар буйлап барған беҙҙең тауыш — йөҙҙәрсә аттарҙың дағалары шаҡылдаған тауышы — ҡалаға оло бер шау рәүешендә килеп керҙе. Ә ҡала тере ине. Май иртәһенең һалҡынса һауаһында танауҙы яңы бешерелгән икмәҫ еҫе ҡытыҡлай, тимәк, пекарня эшләй. Хәйер, ҡала кешеләре лә йоҡлап ятмайҙыр был матур иртәлә. Беҙ беләбеҙ, һиҙеп торабыҙ: тәҙрәләрҙән, тәҙрәләр артындағы ҡорғандар аша йөҙҙәрсә, хатта меңдәрсә күҙ йәшенеп кенә беҙҙе күҙәтә.

Ҡала уртаһындағы майҙанда цивиль немецтарҙы ла күрҙек. Пожарниктар һәм эшләпә, фуражка кейгән бигүк йәш булмаған ирҙәр янғын һүндерә ине. Һүндереп бөткәндәр тиерлек. Тик өсөнсө ҡаттағы ике тәҙрәнән генә зәңгәрһыу төтөн сығыуын дауам итә. Немецтар эшләпәләрен, фуражкаларын сисеп беҙҙең менән, дөрөҫөрәге, беҙҙең офицерҙар менән, иҫәнләшеп пеләш баштарын эйҙе. Беҙ үҙебеҙҙе еңеүселәр тип хис иттек, оҫта кавалеристар, казактар итеп тойҙоҡ һәм ғорурлыҡтан эйәрҙәргә ҡайҡайышып ултырҙыҡ, бейеһендәр, баҫҡан урындарында үрәпсеһендәр өсөн шпорҙар менән аттарҙың ҡабырғаларын төйҙөк, тартҡандар трофей сигареттар тартты. Унан бойороҡ яңғыраны: «Запевай!» «Из-за острова на стрежень, на простор речной волны, — тип башланы Андреев. — Выплывают расписные Стеньки Разина челны», — тип алып киттек беҙ үҙебеҙҙең яратҡан йырҙы. Һәм бөтә эскадрон ҡушымтаны күтәреп алды:

Топится, топится
В огороде баня,
Женится, женится
Мой миленок Ваня.

Беренсе ҡатында ниндәйҙер лавка булған бер өйҙөң ишек алдында ҙур һәм оло ҡорһаҡлы, итләс йөҙлө, йыуан елкәле бер немец баҫып тора, мин уны күреү менән, ниңәлер, буржуйҙыр тип уйланым. Поляк һәм немец помещиктарын мин күргеләнем инде, ә бына ҡала буржуйын беренсегә осратыуым. Был ябай ғына йыуан немец булғандыр, әлеге лавканың хужаһы ла булмауы ихтимал, әгәр хужаһы икән, бигүк бай түгелдер, әммә миңә ул, беҙҙең плакаттарҙа, гәзиттәрҙә төшөргәнсә буржуй, бай, эксплу-

татор һымаҡ күренде. Цилиндр ғына етмәй, башы пеләш һәм яланғас. Был йыуан кеше янынан үткәндә беҙ барыбыҙ ҙа йәнләндек, көләштек. Ә ул беҙгә, үҙенән көләүселәргә, тыныс ҡына ҡарап тик торҙо — беҙҙең нимәгә көлгәнде аңламаны, күрәһең.

Бөтә ҡала аша үтеп беҙ ҡала ситенә сыҡтыҡ һәм тимер сыбыҡ менән уратылған бер ҡатлы оҙон бетон ҡоролмалар янына туҡтаныҡ. Әллә һалдат казармалары, әллә лагерь барактары. Ҡоролма ихатаһындағы асфальтта ниндәйҙер ҡағыҙҙар ҡыштырлай, аяҡҡа эләгә, фашист генералдарының, яланғас бисәләрҙең һүрәттәре төшөрөлгән гәзит-журнал йыртыҡтары. Һалам түшәлгән ике ҡатлы һәндерәләрҙә, коридорҙарҙа — буш шарап шешәләре, һөт банкылары, һалдат каскалары, хатта винтовкалар ҙа осрай. Тимәк, кисә генә бында, ошо һалам йәйелгән һәндерәләрҙә үҙҙәренең һуңғы көндәр йәшәүен аңлаған фашист һуғыш суҡмарҙары аунаған, эскән, ашаған, бет үлтергән, аҡылдарынан шашҡан — был инде армия түгел, ә ҡоралын ташлаған, магазиндар талаган ҡырағай өйөр. Уларҙың еҫе лә һаман бар һымаҡ, дошмандың ят, йыртҡыс ояһындағы еҫе.

Кухнябыҙ һаман килеп етмәй. «Эх, Андрей-Маруся, тебя не дождуся», — тип шаярабыҙ беҙ, астар. Командирҙар ҙа ҡайҙалыр юғалды. Дөрөҫөн әйткәндә, ошо сыуаҡ май иртәһендә ергә, ат янына ятып йоҡлауҙан башҡа бер ниндәй ҙә теләк юҡ. Сөнки ике төн йоҡламағанбыҙ. Күтәрелгән ҡояш аяуһыҙ ҡыҙҙыра башланы һәм беҙ, йылы ҡояш нурына әлһерәгәндәр, барактарҙың стена буйына таратылған һалам өҫтөнә ултырышып ялҡау ғына һөйләшә-гәпләшә башланыҡ; берәүҙәр тартты, икенселәр стенаға һөйәлеп йоҡларға тырышты, өсөнсөләр ятыу менән йоҡоға китте. Ҡулға йүгән осон урап мин дә яттым. Шундуҡ йоҡлап та киткәнмен — һуғыш та юҡ, атыу ҙа, борсолоу ҙа, уй ҙа, хатта төш тә күрмәйем. Унан мине кемдер оҙаҡ итеп төрткөләне.

— Толя, уян әле, — Баулиндың йыраҡтан килгән тоноҡ, әлеге мәлдә һис кәрәкмәгән тауышы. — Толя, тор.

— Нимә?

— Тор, бараһы ер бар.

— Ҡайҙа? — тип мөгөрләйем, күҙҙе һис аса алмай.

— Зинаиданы эҙләргә кәрәк. Ҡалала беҙҙең бисәләр күп, ти. Дөйөм ятаҡтарҙа йәшәйҙәр икән. Фабрикала эшләгәндәр. Өлкән лейтенант рөхсәт итте. Яңғыҙым барам

тигәйнем дә, иптәшкә бирәйһен ал, ти. Дөрөҫ әйтә, яңғыҙ ярамай. Һуғыш бөтмәгән бит.

Зинаиданы эҙләргә булғас барырға кәрәк, аңлауымса, был — бойороҡ. Күҙҙе астым. Йоҡоло күҙҙәрем менән Баулинға баҡтым һәм яйлап өнгә ҡайтып уның борсоулы йөҙөн, ҡараштарын күрҙем — күҙҙәрендә өмөт тә, өмөтһөҙлөк тә бар.

— Уяндыңмы? Бына яҡшы, — тине ул йомшаҡ ҡына. — Дискыларҙы ҡалдыр, карабиныңды ғына ал. Егеттәр, беҙ киттек. Андреев, ҡуҙғала ҡалһағыҙ, сумка менән дискыларҙы онотмағыҙ.

— Давай, Петрович, ҡатының менән әйләнеп ҡайтыуыңды теләйбеҙ, — тип хәйерле юл теләне Андреев.

Баулиндың ошо ҡалала ҡатынын осратыуына мин бөтөнләй ышанмайым. Иҫән булған хәлдә лә миллион ҡом бөртөгө араһынан бер бөртөктө табыу — үҙе бер мөғжизә.

Беҙ ҡалаға табан атланыҡ, ҡалаға керҙек. Ике «копытник», береһе оҙон кәүҙәле, икенсеһе бәләкәй, береһе урыҫ, икенсеһе башҡорт, шинель, пилотка, шпорлы итектәр кейгән ике һалдат немец ҡалаһы буйлап китеп бара. Мин карабинды яурыныма һалғанмын, Баулин тулы дискылы «Дегтярев»ын, ғәҙәттәгесә, арҡаһы аша элгән. Шәп атлау йоҡомдо осорҙо — мин оҙон ботло Баулин артынан саҡ өлгөрөп барам. Яңы ғына буш булған урамдар һалдаттар, ылауҙар, машиналар һәм танкылар менән тулып өлгөргән, йорттарға ниндәйҙер тыл частары, хужалыҡтар урынлашҡан. Юл сатында һылыу регулировщица фырт рәүештә флажоктар менән уйнай. Тротуарҙар буйлап беҙгә ихтирам менән һәм ҡурҡып ҡарап, ниндәйҙер ҡыҙыҡһыныусанлыҡ менән ҡала кешеләре уҙа. Орудиелы машина янында торған һалдаттар эргәһендә ҡыҫҡа салбарлы малайҙар әйләнә, һалдаттарҙан тәмәке һорай.

Бығa тиклем миңә төтәп яткан, тормош туҡталған һәм үлем янаған ҡала-ҡәберҙәре йәки ҡала-ҡәлғәләре генә күрергә тура килә торғайны. Һуғыш еле бөтөнләй ҡағылмаған тиерлек был ҡалала тормош бара, тәҙрә, балкондарҙан атмайҙар. Мин бөтөнләй икенсе күҙ менән ҡарайым был ҡалаға, аҡ сепрәктәр эленгән тәҙрәләр, магазин витриналары, осло ҡыйыҡлы өй баштары, скверҙарҙағы ағастарҙың йәшел япраҡтар менән аңҡыуын еҫкәү миңә рәхәт һәм ҡыҙыҡ. Магазин витриналарынан миңә яланғас манекендар, йәғни пластмасса түшле, оҙон муйынлы, ҙур зәңгәр күҙле, ҡып-ҡыҙыл иренле бисәләр ҡарай. Уларҙың

биленән түбән яғы юҡ. Мин шуларға ҡарап Баулиндан артта ҡалам, ул артына борола ла иркә генә ҡысҡыра:

— Толя, ҡалма.

Йәнәш атлағанда мин йылы яҙҙан, үҙемдең йәшлегемдән, тормошто байрам кеүек ҡабул итеүҙән, яңы тәьҫораттарҙан иҫереп һәм Германияның ҡап уртаһындағы ошо немец ҡалаһында еңеүсе булып йөрөп ятыуыма ҡыуанып Баулинға әллә нимәләр һөйләйем дә һөйләйем. Ә Баулин өндәшмәй. Мин уның борсолоуын аңлайым, ул пружина кеүек ҡыҫылған, өмөтһөҙлөктән йонсоған, мөмкин булмағанды көтөүҙән арыған. Мин хәбәремә яуап ала алмағас шулай уҡ тынам. Ҡалала йөрөгән, ҡала эсенә инә барған һайын мин ошо алыҫ немец ҡалаһында Баулиндың биш йәшлек улы менән ҡатынын таба алырына ышанмайым, дөрөҫөрәге, ышанысым кәмегәндән-кәмей. Рустар йәшәгән ул йорттоң ҡайҙалығын һорашырға кәрәк ине, ул, күрәһең, ҡала ситендәлер, ә беҙ һораған һалдаттарҙың береһе лә уны белмәй. Хәйер, ҡайҙан белһендәр? Бәлки, беҙ Германияға ҡыуылған рустарҙы осратырбыҙ, улар бит ҡалаға совет ғәскәрҙәре инеүен белә, шунлыҡтан, моғайын, урамдарға сығырҙар, ти Баулин. Әммә рустар беҙгә осраманы, цивиль немецтарҙан һорарға ниңәлер теләмәнек — әллә телде белмәйбеҙ тип һылтандыҡ, әллә кавалерист ғорурлығы уларға мөрәжәғәт итергә ҡамасауланы. Йөрөй торғас, мин шулай ҙа оло ғына йәштәрҙәге немецты туҡтатырға ҡарар иттем. Ул пеләшен ялтыратып эшләпәһен систе, ағарынып китте һәм беҙгә ярарға тырышып йөҙөндә йылмайыу ғәләмәте сығарҙы.

— Камрад, ҡайҙа бында рустар? Русиш фрау? — тинем мин, тауышты ярайһы ғына күтәреп.

Немецтың ҡулындағы эшләпәһе һелкенә. Ул, күрәһең, бер нәмә лә аңламаны, беҙ уның нимә типтер ауыҙ сәпелдәтеүенән бер нәмә лә төшөнмәнек. Ары киттек. Бер магазин алдында ҡулына немец винтовкаһы тотҡан, беләгенә ҡыҙыл сепрәк бәйләгән һаҡсыны күрҙек. Оҙон пальтола, козыреклы ҡара фуражкала, йәше лә байтаҡ булған немец ине ул. Шикле генә ҡарап мин уға яҡынайғас, ул йылмайҙы ла ҡулын козырегына ҡуйҙы.

— Мин поляк, поляк, — тине ул ихлас ҡына.

Ул рус ҡатын-ҡыҙҙарының ҡайҙа йәшәгәнен белә булып сыҡты һәм оҙаҡ итеп, аңлайышһыҙ итеп ҡала ситендәге ул йортто нисек табырға, ниндәй урам һәм тыҡрыҡтарҙан барырға икәнлеген аңлатты. Уның хәбәренән мин

тәүҙә ниндәйҙер Вильгельм-плацҡа, бынан күренеп үк торған кирхаға тиклем барырға, ул кирханан һулға боролорға һәм ары атларға икәненә генә төшөндөм. Юлды, бәлки, үҙең күрһәтерһең, тинем мин полякка, әммә ул эре генә итеп, мин бит магазинды һаҡлайым, посымды ҡалдырып китә алмайым, тип яуапланы. Ниндәй пост, кемдең магазинын һаҡлай, бында уны кем ҡуйған, аңлашылмай ине. Хәйер, беҙгә уныһы мөһим дә түгел, кәрәкмәй ҙә.

Беҙ кирхаға еттек тә бәләкәй өйҙәрҙән торған йәмһеҙ тар урамға бороддоҡ. Бында тып-тын, кеше-фәлән күренмәй, үҙебеҙҙең генә аяҡ тауышы, ауыр һалдат итектәренең тауышы ғына, таш йәйелгән һил урамға тарала.

Һирәкләп алда, тыҡрыҡ мөйөштәренән, берәй кеше, ир йәки ҡатын, башын ғына күрһәтә лә алан-йолан ҡаранып йүгереп тигәндәй подъезға йәки ҡапҡаға инеп юғала. Ҡурҡалар. Байтаҡ атланыҡ, ҡала ситенә яҡынайыуыбыҙ һиҙелә, йорттар бәләкәсәйә, хөртөрәк була бара, ике ҡатлылары, бер ҡатлылары китте. Йорттарҙа кешеләр барҙыр, улар беҙҙе күрәлер, күрһендәр өсөн мин юлдың уртаһынан атлайым. Әгәр был йорттарҙың берәйһендә беҙҙең ҡатын-ҡыҙҙар булһа күрһендәр, тип тәҙрәләрҙән күҙемде алмайым. Бөтә урамды яңғыратып: «Эй, рустар, һеҙ ҡайҙа?» — тип ҡысҡырғым килә. Ҡысҡырыу — иҫәрлектер, был һиңә ауыл түгел һөрәнләп йөрөргә, ни тиһәң дә ҡала, Европа, ә беҙ, еңеүселәр, үҙебеҙҙе олпат тоторға тейеш.

— Әйҙә, һорашайыҡ, — тим Баулинға.

— Кемдән? Берәү ҙә күренмәй бит.

Мин бер йортҡа боролам да ишегенә йоҙроҡ менән һуғам. Яуап юҡ. Итек менән тибәм. Оҙаҡ ҡына көттөргәндән һуң өркәк тауыш ишетелә.

— Ауфмах! — тип ҡысҡырам мин бойороҡ тонында.

Йоҙаҡ асыла, ишектә сал сәсле, тәбәнәк кенә буйлы ҡарсыҡ күренә. Уның төҫө уңған, йәшкәҙгән күҙҙәрендә бер ниндәй ҙә ҡыҙыҡһыныусанлыҡ, хатта ҡурҡыу ғәләмәте юҡ. Был донъяла байтаҡ нәмә күргән-кисергән кешегә ике рус һалдатының бәреп тигәндәй инеүе ҡурҡыныс тойолмағандыр, беҙҙе ят һалдаттарға ҡарағанда ябай кеше рәүешендә ҡабул иткәндер. Белгән немец һүҙҙәрен ҡабатлай-ҡабатлай һәм ҡул хәрәкәттәре менән үҙемә ярҙам итеп мин ҡарсыҡтан бында ҡайҙа рустар йәшәгәнен, русиш фрау, русиш медхен, тип һорай башланым. Ғәжәп, ул аңланы, фатирына кире инеп китеп иҫке генә һоро плащ, эшләпә кейеп сыҡты. Урамға сығып тро-

туарҙан атланыҡ. Ҡарсыҡ ваҡ аҙымдар менән алдан бара, беҙ уның атлау тиҙлегенә яраҡлашып — артта. Миңә ҡаршы урамдағы йорттарҙың тәҙрәләрендәге ҡорғандар саҡ ҡына асыла һәм ҡоттары алынған күҙҙәр беҙгә ҡарай һымаҡ: был рустар ҡарсыҡты ҡайҙа алып китеп бара икән тип уйлайҙарҙыр.

Ике йөҙ метр самаһы үтергә лә өлгөрмәнек, урамға сыҡҡан һәм беҙҙе күргәс ҡатып ҡалған бер ҡыҙҙы шәйләнек. Беҙ уға яҡыная төшкәс ул ҡапыл русса һөрәнләй-ҡысҡыра, башын юғалтыр хәлгә төшөп ҡаршы йүгерҙе.

— Ой, беҙҙекеләр, иптәш ҡыҙылармеецтар! Туғандар! Ҡайҙа, мин һеҙҙе ҡосаҡлайым әле, үбәйем әле!

Ул Баулинды ҡосаҡлап үпте, унан минең битте, һәм түгелеп иларға тотондо.

— Илама, һуғыш бөттө, — тинем мин.

— Шатлыҡтан илайым, шатлыҡтан...

— Ҡайҙа йәшәйһең, ҡайҙа бында рустар? — тип һораным.

— Әйҙәгеҙ, һеҙҙе ҡултыҡлап алырға мөмкинме? Ой, ышанғы ла килмәй...

Ҡыҙ иҫке генә йәйге пальтола, аҡ яулығы башына нисектер әбейҙәрсә, ауылса бәйләнгән.

— Исемең нисек?

— Оля.

— Ҡайҙан?

— Смоленск өлкәһенән.

— Ә Брянскиҙан юҡмы арағыҙҙа? —ныҡ тулҡынланыуҙан Баулиндың тауышы ҡарлығып сыҡты. — Арағыҙҙа Баулина Зинаида юҡмы?

— Баулина Зинаида? — нисектер битараф, уйһыҙ ғына һораны Оля. — Белмәйем шул. Беҙҙекеләр күп унда. Бәлки, барҙыр ҙа. Бына беҙҙең йорт.

Ҡыҙыл кирбестән һалынған, балконһыҙ, бер ниндәй биҙәү ғәләмәте булмаған өс ҡатлы был йортта миңә ниңәләр кеше йәшәмәйҙер һымаҡ тойолдо. Казармаға йәки төрмәгә тартым күңелһеҙ ҡоролма ине был. Йортона тура килеп баҫҡыстары ла йәмһеҙ, штукатуркаһы ҡубып төшөп бөткән, стеналары бысраҡ. Стеналарға кемелер биш мөйөшлө йондоҙҙар, ураҡ һәм сүкеш һыҙғылаған, йәнә лә «Хай сдохнэ Гитлер!» — тип яҙған. Күп йөрөүҙән тапалған, урыны-урыны менән цемент менән ямалған баҫҡыс буйлап икенсе ҡатҡа күтәрелдек. Баулин ауыр тын ала һәм

йөҙө ап-аҡ. Беҙҙән алғараҡ үтеп Оля ҡара дермантин менән көпләнгән ишекте асты ла ҡысҡырып ебәрҙе:

— Ҡыҙҙар, ҡунаҡтарҙы ҡаршы алығыҙ! Беҙҙекеләр килде!

Ишек артында ҡапыл ығы-зығы башланды: иҙән буйлап ялан аяҡ йүгерештеләр, ҡайһыһылыр сыйылдап ебәрҙе, кемелер көлдө. Бер аҙ көтөп торғандан һуң беҙ ярым ҡараңғы ҙур ғына бүлмәгә индек. Бүлмәгә тығыҙ итеп ике ҡатлы тимер карауаттар ҡуйылған; карауаттарҙа, зәңгәр одеялдар өҫтөндә йәки аҫтында беҙҙең килеүҙән тулҡынланған ҡатындар ултыра. Танауға кеше күплектән боҙолған тынсыу һауа бәрелде. Күрәһең, былар тамам яҡтырғансы ятырға йәки йоҡоларын туйҙырырға ниәтләнгәндәр, сөнки ҡалаға беҙҙең ғәскәрҙәр кергәс бөгөн эшкә барырға кәрәкмәй. Улар үҙҙәрен төрлөсә тота: берәүҙәр һынсыл ҡарай, икенселәр ҡурҡыбыраҡ һәм нимәлер көтөп, өсөнсөләре, беҙҙе урамда ҡаршы алған Оля кеүек, ҡыуана. Һуғыш ҡасан бөтә, немецтар әйтеүенсә, беҙ американдарға ҡаршы һуғышасаҡбыҙмы, тип һорайҙар. Чепуха, һеҙҙе алдағандар, американдар беҙҙең союзник, беҙҙекеләр Берлинды алды, һуғыш тиҙҙән бөтәсәк, тип яуапланым.

— Радионан, Гитлер үлгән, тинеләр, шул дөрөҫмө? — ти береһе.

— Дөмөктө, зараза! Үҙен-үҙе атҡан, тиҙәр, — ти икенсеһе.

— Алдайҙар! — тим. — Ҡасҡандыр, йә берәй ергә йәшенгәндер.

Тар ғына коридор һымаҡ нәмәлә һөйләшкәндә шундай яҡын йөҙҙәргә яратып ҡарайым, сит-ят ерҙәрҙә күпме йөрөп, рус ҡатындарын һағынғанмын, унан ҡарашым менән беҙҙе урамда ҡаршы алған Оляны эҙләй башланым, ул нисектер ҡыҙҙар араһында юғалды ла ҡуйҙы, ә мин уны оҡшатып та өлгөрҙөм — үпкәне һаман битемде яндырып тора.

— Һеҙ нишләп икәү генә? Башҡалар ҡасан килә? Беҙ бит бында күп, кейәүҙәр күп кәрәк буласаҡ, — тине берәүһе.

— Погондарығыҙ ҙа ҡыҙыҡ ҡына.Беҙ белмәнек, элеккесәлер тип уйланыҡ, — һәм Баулинға мөрәжәғәт итте. — Һеҙҙең нишләп өс һыҙыҡ ул, һеҙ командирмы?

— Командир, сержант, — тип яуап бирҙем мин Баулин урынына.

Баулин һүҙгә ҡушылманы. Төк баҫҡан бит-йөҙө аптырауҙы-һағайыулы, ул карауаттарҙа ултырыусы, ятыусы, ярым ятыусы ҡыҙҙарға ҡарай, улар араһынан үҙенең Зинаидаһын эҙләй, күҙҙәрендә миңә таныш өмөтһөҙлөк. «Шулай булырын белгәйнем дә, — тип уйланым мин. — Бында бер ниндәй ҙә Зинаида юҡ». Шунан йәнә бер уй килде башҡа: бүтән ҡаттарҙа ла ҡыҙҙар барҙыр бит инде. Баҫҡыс янында хәтәр шаулашалар ине, бында ла инеүселәр булды.

— Ҡыҙҙар, арағыҙҙа Баулина Зинаида юҡмы? — тип һораным мин шау-шыуҙы саҡ тыйып.

— Кем, кем?

— Баулина Зинаида Егоровна, — тине ҡарлыҡҡан тауыш менән Баулин.

— Яҡташығыҙ буламы әллә?

— Өсөнсө ҡатта Баулина. Һеҙ уны ҡайҙан беләһегеҙ?

— Ире эҙләй, — тинем ҡабаланып, ә үҙемдең йөрәк дарҫлап тибә башланы — әгәр ысынлап та ул булһа нисек осрашырҙар икән?

— Ой, ире эҙләй тиме?

Ҡыҙҙар сәйер генә тынды. Мин Баулинға ҡараным: йөҙө зәңгәрһыу булып күгәрҙе — пулялар аҫтында йөрөп һуғышҡанда ла мин уның бындай йөҙөн күргәнем булманы.

— Әйҙәгеҙ, бүлмәһен күрһәтәм, — тине бер ҡыҙ.

Шыбырлауға күскән һөйләшеүҙәр оҙатыуында беҙ бүлмәнән сыҡтыҡ та баҫҡыстан күтәрелә башланыҡ. Баулин ҡәҙәре үк булмаһа ла мин дә тулҡынланам (шулай ҙа, ул түгелдер, исем-фамилиялары ғына тура килеүелер, тигән шик бар ине әле), хәҙер мин, был тормошта мөғжизәләр бар икән, Баулин, ысынлап та, ҡатыны менән улын осратыр инеме ни тип, иҫем китеп уйландым.

Өсөнсө ҡатҡа мендек. Бына хәҙер ишек шар асылып китә лә Баулиндың ҡатынын күрәм. Мин уны, ниңәлер, сибәр, хатта бик сибәр итеп күҙ алдыма килтерәм — Баулин һымаҡ күркәм ирҙең ҡатыны йәмһеҙ булырға тейеш түгел.

Беҙҙе эйәртеп барған ҡыҙ шаҡымай-нитмәй генә бер ишектән керҙе лә шундуҡ кире сыҡты. Уның артынан сәстәрен ялбыратып ябыҡ ҡына бер ҡатын башын тыҡты. Яшыҡ ҡулдарын күкрәгенә ҡаушырып ул беҙгә таш кеүек ҡуҙғалмай бераууыҡ ҡарап торҙо, дөрөҫөрәге, ҡото алынып Баулинға текәлде. Йөҙөндәге шыйыҡ ҡыҙыллыҡ юғалды,

күҙҙәре аҫтындағы зәңгәрлек ҡуйырҙы, шунан ишетелер-ишетелмәҫ «ах» тине лә тупһа аша сыҡты, ҡулдары һәленеп төштө, хәле бөтөп ишек яңағына һөйәлде һәм яй ғына иҙәнгә шыуып төшә башланы. Баулин уны эләктереп алды ла ҡулдарына һалып тигәндәй бүлмәгә индерҙе. Мин баҫҡыс майҙансығында тороп ҡалдым, беҙҙе эйәртеп алып килгән ҡыҙ ҙа минең янда, аҫтан, икенсе ҡаттағы майҙансыҡта ҡалғандар, артабан ни булырын көтөп өҫкә ҡарай. Көсөргәнешле бер нисә минут баҫып торғас мин Оляны эҙләп аҫҡа төшөргә ниәтләнгәйнем генә ишек асылды ла Баулин килеп сыҡты.

— Толя, әйҙә кер.

Мин керҙем. Икенсе ҡаттағы бүлмәнән дә бәләкәйерәк, шулай уҡ ике ҡатлы карауаттар менән тулған бүлмә ине был. Баулин күтәреп индергән ҡатын — уның Зинаида икәнлегенә шик ҡалмағайны инде — өндәшмәй генә өҫтәл артында ултыра, йөҙө йәнһеҙ, йәмһеҙ, ҡатып ҡалған; ҡараштары бер нөктәгә текәлгән. Баулин карауат янындағы ултырғыста ултыра, ҡалтыранған ҡулдары менән тәмәке төрә, пулеметы ишек янындағы стенаға һөйәлгән. Мин карабинды һалдым да карауат ситенә ултырҙым. Өҫтәлдең теге башында — Баулин менән бер йәштәрҙә, бәлки, саҡ ҡына өлкәнерәктер, бер ир. Урыҫҡа оҡшаған. Уң яҡтағы өҫкө карауатта яланғас аяҡтарын аҫҡа һәлендереп сағыштырмаса йәш, әммә ҡарттарса, әбейҙәрсә кейенгән — монашка һымаҡ бөтә кейеме ҡаранан — йәнә бер ҡатын ултыра. Уның өҫтөндә, мөйөштә, шәм емелдәй. Мин, был ир өйҙә йөрөгән һымаҡ эске күлдәк менән генә ултырһа ла был бисәләргә гәпләшергә генә кергәндер, тип уйлап алдым. Нисектер үтә сәйер тойолдо ул миңә. Мин ингәс баҫып баш эйеп иҫәнләште, йылмайғандай итте, йылмайыуы ҡурҡаҡтарса ине, хатта цивиль немецтарҙың ҡыланыуы. Ҡарашы өркәк, ғәйепле. Малай бүлмәлә күренмәй.

— Осратырмын тип һис уйламағайным, — тине, ниһайәт, Зинаида. — Ниндәй һуғыш ине, күпме кеше ятып ҡалды!..

Йөҙөн беҙгә борҙо, ҡарашы битараф ҡына минең йөҙҙән йүгереп үтте — күҙҙәре ҡоро, биттәренә саҡ ҡына алһыулыҡ ҡунған. Ул мин күҙ алдына килтергәнсә, сибәр түгел ине, шулай уҡ йәмһеҙ тип атарға ла тел әйләнмәҫ. Егерме йәштәр тирәһендә һөйкөмлө генә булғандыр. Хәҙер ҡара сәстәре елкәһенә бәләкәй төйөн итеп йыйыл-

ған, иҫке күлдәге аҫтында тамам шиңгән имсәктәре самалана.

Ә минең баштан малай, Баулиндың биш йәшлек улы, сыҡмай ҙа ҡуя. Уның менән осрашыуҙары тураһында нисек хыяллана ине ул. Малай бында юҡ. Иң сәйере шул, Баулин үҙе лә, Зинаида ла уның хаҡында бер һүҙ ҡуҙғатмайҙар.

— Беҙ уның менән ошонда йәшәп ятабыҙ, — Зинаида өҫтәлдең теге башында ултырған иргә баш ҡаҡты. — Был бүлмә беҙҙең ғаиләләрҙеке иҫәпләнә. Ул тоҡкон. Йәшелсә-емеш консервалау фабрикаһында бергә эшләнек.

Мин хәҙер генә аңлай башланым, дөрөҫөрәге, аңланым, өҫтәлдең теге башында ултырған кешенең Зинаиданың ире йәки бергә йәшәгән бәндәһе икәнен. Ул Баулинды көтмәгән дә, ул ошо ир менән йәшәп ятҡан! Мин иргә иғтибарлап ҡараным. Әсирҙәргә бигүк йылы мөнәсәбәттә түгелбеҙ: беҙ мең үлем аша ярты Европаны үттек, ут-һыу кистек, баҫыу-яландарҙа һәләк булған иптәштәребеҙҙе ҡалдырып ҡанға, бысраҡҡа бутала-бутала алға барҙыҡ, ә был ир йораты әсир иҫән-һау һәм ҡурҡыу белмәҫ яугир бисәһе менән йоҡлап йөрөй! Мин уны күрә алманым, асыуым алҡымыма тығылды. Ә Баулин башын да күтәрмәй тарта ла тарта.

— Һин мине нисек таптың? — тип һорай Зинаида.

— Мин һине бөтә ерҙә лә эҙләнем, — тип яуаплай Баулин.

— Әсәй бит ҡырҡ беренсе йылда уҡ үлде, беләһеңме?

— Беләм. Нюранан хат алғайным.

— Ул ни хәлдә?

— Арыу, землянкала йәшәйбеҙ тип яҙа.

— Хәҙер беҙҙә нисек? — тип телгә килде тотошлайы менән ҡаранан кейенгән ҡатын. —Әтеү бөтәһе лә иҫкесә китте тип һөйләйҙәр бит. Сиркәүҙәргә табыналар, имеш. Ана, погондар таҡҡанһығыҙ ниндәйҙер. Совет власы бөттөмө әллә?

— Нишләп бөтһөн? Бар совет власы! — тинем мин, йәнем көйөп һәм шундай ҡолаҡҡа яҡмаған хәбәрҙәргә аптырап. —Ә был яңы погондар, Сталинградтан һуң бирҙеләр.

— Нимә тип әйтергә лә белмәйем инде, — тине Зинаида ҡыйыуһыҙ ғына. — Беҙҙең малай юҡ... Үлде. Ҡырҡ өсөнсө йылда уҡ...

Баулин хәрәкәтһеҙ ҡалды. Ул туҡтауһыҙ тәмәке тарта. Ныҡ итеп һурған һайын гәзит ҡағыҙы янып китә лә унын бармаҡтарын бешерә...

— Сигенгән саҡтарында немецтар беҙҙе көнбайышҡа ҡыуҙы, — бер аҙ тынысланған Зинаида дауам итте — һыуыҡ, етмәһә, аслыҡ. Ауыл тулы — немецтар. Һарайҙарҙа йоҡланыҡ мал кеүек. Имһә, имеҙер инем. Ауырып китте, үлгәс ике көн буйы ҡулымда күтәреп йөрөттөм. Шунан бер соҡорға күмеп киттем. Һөйәктәре ҡайҙа ятҡанын хәҙер белмәйем дә инде...

— Аллаһы тәғәлә уны йәлләгән дә үҙенә алған, — тине ҡаранан кейенгән ҡатын.

— Һеҙҙе ҡунаҡ итергә лә мөмкинлек юҡ, — тип ғәйепле генә йылмайҙы Зинаида. —Теләһәгеҙ, консерва бар, икмәк юҡ. Икенсе көн инде икмәкһеҙ...

— Эйе, ысынлап та, нишләп ултырабыҙ әле былай? — тип ҡапыл ғына ғауғаланырға тотондо өҫтәл башындағы ир, йөҙөнә ғәйеплелек сығарып. — Ҡәҙерле ҡунаҡтарҙы ашатырға кәрәк, беҙҙе ҡотҡарыусылар бит улар. Миндә спирт бар. Әйҙәгеҙ, еңеү өсөн, Совет Армияһы өсөн күтәрәйек! Зина!

— Юҡ, рәхмәт, — тине Баулин тоноҡ, һаңғырау тауыш менән һәм ҡалҡынды. —Беҙгә ярамай, служба. Һуғыш бөтмәгән әле.

Ул ишеккә табан атланы. «Дегтярев»ын алды, унын артынан мин дә ҡалҡынып карабинымды яурынға ташланым. Ир һаман эйелде-бөгөлдө, меҫкен генә йылмайыуын белде («немецтар кешене бына ниндәй хәлгә еткергән, — тип уйланым мин. — Ә бәлки, ҡурҡаҡ бер бәндәлер, беҙҙән ҡурҡалыр») һәм һөйләнде:

— Бына бит нисек килеп сыҡты, иптәш... званиеғыҙҙы белмәйем, беҙҙә ундай погондар түгел ине, беҙгә үпкә тотмағыҙ инде... Өмөтөн өҙгәйне тамам, ышанысы бөткәйне һеҙҙе осратырына, — ә үҙе, күренеп тора, беҙҙең ҡуҙғалыуға бик тә шат ине.

— Коля, мин оҙата сығайым, — тине Зина.

— Оҙат, оҙат, нишләп сыҡмай, ти...

Ир кеше бүлмәлә ҡалды. Зинаида беҙҙең арттан сыҡты. Икенсе ҡаттың баҫҡыс майҙансығында ҡатындар һаман тора ине әле.

— Тағы килегеҙ, бүтәндәрҙе лә алып килегеҙ.

— Яҡташтарҙы осратырбыҙ, бәлки.

— Йәш егет, — уныһын миңә әйтәләр, — тағы кил, беҙ һиңә кәләш табырбыҙ.

Аҫҡа төштөк, урам буйлап киттек. Зинаида ла беҙҙең менән.

— Кейем бөттө, — ул тамам тынысланғайны инде. — Магазиндарҙы таланылар, беҙ урамға сығырға ла ҡурҡып ултырҙыҡ. Поляктар магазиндарҙы һаҡларға үҙҙәренең кешеләрен ҡуйҙы.

— Ниндәй поляктар, улар ҡайҙан килгән һуң? — тип һораным мин.

— Эшселәр. Беҙҙең кеүек үк ҡыуылып килгәндәр. Фабрикала эшләнеләр, — тип яуапланы Зинаида. — Күлдәк, аяҡҡа алырға ине. Ҡышҡы пальтом да юҡ...

— Яҡын тирәлә магазин бармы? — тип һораны Баулин, Зинаға ҡарамай ғына.

— Бар, берәй нәмә ҡалһа... әйтәм бит, таланылар...

Быяла витриналы кескәй генә магазинға килдек. Әммә ул ябыҡ ине. Мин ишекте шаҡыным. Эстә кемдер күренеп ҡалды һәм бер нисә минуттан болдорға урта йәштәрҙәге немец сығып баҫты; ябыҡ йөҙлө һәм ҙур пеләш башлы немец ине был, баҫты ла, мин һеҙҙең ҡарамаҡта, тигәндәй башын эйҙе. Рус һәм немец һүҙҙәрен аралаштыра-бутай, күпселектә ҡулдар менән ишаралап, мин был рус ҡатынына күлдәк, пальто, аяҡ кейеме кәрәклеген аңлаттым. Немец йәнә бөгөлдө, шунан ашығыс рәүештә:

— Йа, йа, битте, — тине.

Беҙ ярым ҡараңғы магазинға индек. Прилавка артындағы кәштәләрҙә нимәлер бар ине.

— Нимә кәрәк, алығыҙ, — тинем мин Зинаидаға.

Зинаида, урлашҡандағы һымаҡ ҡулына нимә эләгә шуны ҡабалана-ҡабалана йыйырға кереште (бында пальтолар юҡ ине), ниндәйҙер кофталар, күлдәктәр, шунан аяҡ кейемдәрен кейеп ҡараны.

— Ҡабаланмағыҙ, яҡшыраҡтарын һайлағыҙ, — тинем мин йәнә.

— Эй, уңайһыҙ бит әле...

Ул йыйҙы-йыйҙы ла йәһәт кенә тышҡа сыҡты, әйтерһең дә, артынан баҫтыралар. Баулин гимнастеркаһы кеҫәһенән бумажнигын алды, Ленин һүрәте төшөрөлгән үҙебеҙҙең совет аҡсаларын һурып сығарҙы һәм немецтан, күпме бирәйем, тип һораны.

— Найн, найн! — аҡсаларҙы күргәс немец артына сигенде.

— Ал, ал, — тип ныҡышты Баулин.

— Биргәндә алып ҡал! — тинем мин ҡаты ғына.

Ҡалтыранған ҡулдары менән немец аҡсаны алды. Күпме икәнен мин белмәйем. Һораманым, Баулин да һанап торманы, ғөмүмән, Зинаида алған ул кейемдәрҙең совет аҡсаһы менән күпме торғанын ҡайҙан беләйек инде, немец үҙе лә иҫәпләмәне. Кеҫәһенә тыҡты ла нимә типтер мөгөрләүен һәм эйелеп-бөгөлөүен белде.

— Аҡса бирмәҫкә ине, — тинем Баулинға. —Үҙҙәре беҙҙе күпме таланы.

— Ярамай, Толя, түләмәй алырға, мин берәй талаусымы әллә? — тип яуапланы Баулин.

Зинаида беҙҙе урамда көтә ине. Баулин һәм уның элекке ҡатыны хушлашып, күпмелер ваҡыт бер-береһенең ҡаршыһында өнһөҙ генә баҫып торҙолар һәм гел ситкә ҡаранылар.

— Рәхмәт, Сережа, — тине Зинаида (бына бит, Баулиндың исеме Сергей, Сережа икәнен дә белмәй инем әле) — Сережа, һин мине күрә алмайһыңдыр инде?

— Юҡ, нишләп? — тине Баулин ишетелер-ишетелмәҫ кенә.

— Ой, Сережа! — Зинаида ҡапыл шарылдап илап ебәрҙе. —Ой, әгәр белгән булһам. Өмөттәрем өҙөлгәйне шул тамам. Яңғыҙыма нисек ауыр булғанын белһәң... Ул яҡшы кеше. Яралы көйө эләккән пленға. Мин һинең менән китер инем дә, йәлләйем... Ауыр саҡта ныҡ ярҙам итте. Мин дә уға өйрәндем. Курск өлкәһенән. Уның ауылына китербеҙ, ахыры. Сережа, Алла хаҡы өсөн һин мине ғәфү ит. Ҡана, исмаһам бер ҡосаҡлайым...

Улар ҡосаҡлашты, шул килеш күпмелер ваҡыт торҙолар, шунан айырылыштылар.

— Ну, ярай, ну, яҡшы, — тине Баулин, йылмайырға тырышып, —Һин улай үҙ-үҙеңде ғәйепләмә. Йөрәгең нисек ҡуша, шулай йәшә. Нишләйһең — һуғыш. Йә, ярай, хуш, Зинаида Егоровна, беҙгә китергә кәрәк.

Шәп атлап китеп барҙыҡ. Баулин бер тапҡыр ҙа артына боролманы, ә мин түҙмәнем, боролдом: Зина ла әйләнеп ҡарамай ғына йорттарына табан атлай ине. Һөйләшмәнек. Баулин өсөн хәл иҫ киткес ауыр ине. Уның ҡайғыһы минең ҡайғы түгел, уның күңелендә барған кисерештәрҙе мин кисерә алмайым, мин уның һыҙланыуын аҡыл менән генә күҙ алдына килтерәм, уны аңларға тырышам, уйланам, йәлләйем, әммә бер нисек тә ярҙам итерлек хәлдә түгел-

мен. Ул ҡапыл ғына бер нисә йәшкә ҡартайып киткәндәй булды, бит-йөҙөндәге һаҡал-мыйығы үҫте, күҙ ҡарашы тоноҡланды, битарафҡа әйләнде. Һәр ҡайһыбыҙ үҙ уйыбыҙға сумып һөйләшмәй генә бер квартал атланыҡ та ҡуйҙыҡ. Килә торғас ул миңә боролдо ла шундай төшөнкөлөк, ҡайғы менән өс кенә һүҙ әйтте:

— Бына шулай, Толя.

Һәм йәнә өндәшмәй атланыҡ.

Ҙур урамға сыҡтыҡ. Винтовка тотоп һаҡта торған полякка яҡынайғас, дивизия командирының хужалыҡ эштәре буйынса урынбаҫары майор Дорошенко һәм уның менән йөрөгән ниндәйҙер лейтенантты күрҙек. Ординарец уларҙың аттарын тотоп тора. Йәнәшәләренә еткәс честь бирҙек.

— Сержант, һалдатты ҡалдыр әле, — тип бойорҙо майор. — Ул кәрәк миңә.

Баулин ары атланы, мин майор эргәһендә ҡалдым.

— Ну,пан иптәш, һиңә рәхмәт, хәҙер ҡайтһаң да ярай. Мин үҙемдең часовойҙы ҡуям, — тине майор полякка.

Поляк честь бирҙе, «Добше, пан полковник!» — тине лә урам буйлап атланы.

Беҙ магазинға индек. Ул таланғайны. Кәштәләр буш, ҡалған тауары ла ваҡ-төйәк, уныһы ла тирә-яҡҡа ташланған, буталған. Иҙәндә ҙур төргәк туҡыма ята.

— Һалдат, рулонды күрәһеңме? Күрәһең. Бер кемгә лә бирмәҫкә! Башың менән яуап бирәһең! — тип майор төргәккә төртөп күрһәтте. — Оҙаҡламай штабтан машина килә, тейәп ебәрерһең. Төшөндөңмө?

— Төшөндөм, иптәш майор!

— Вәт, молодец!

Аттарына атландылар ҙа китеп тә барҙылар. Мин ишек алдында һаҡта ҡалдым — дивизия командиры урынбаҫарының бойороғон үтәмәй ярамай — ғүмереңде биреп булһа ла туҡыманы ҡарауылларға кәрәк. Егерме минут самаһы ваҡыт үтте, машина һаман юҡ, мин торам, йөрөштөргөләп алам һәм бер аҙҙан магазинға яҡынлашыусы төркөмдө күрәм. Гел бисәләр. Килеп еттеләр ҙә русса һөйләнә лә башланылар.

— Улым, магазинға үткәрһәң ине. Күрәһең бит, өҫтөбөҙҙә кейем юҡ, аяҡтарҙа ла бөткән. Смоленскиҙан беҙ, ҡайтырға йыйынабыҙ, кейенергә ине. Нисә йыл немецҡа буш эшләнек. Иптәш ҡыҙылармеец, индер беҙҙе магазинға, күп алмабыҙ.

— Ярамай! — тинем уҫал ғына итеп.

— Улым, хужаһы ҡасҡан бит, бөтәһе лә немецҡа ҡаласаҡ барыбер.

— Һиңә үҙеңдекеләргә йәлме ни? Беҙ ошо немецтарга оҙон өс йыл буйы бил бөктөк.

Кейемдәре, ысынлап та, һәләмә, иҫке. Бөтәһенең дә баштарында аҡ аулыҡ, яулыҡтарын ниңәлер оло йәштәге ҡатындар, хатта әбейҙәр ише бәйләгәндәр, ә үҙҙәре бер ҙә ҡарт түгел, киреһенсә, араларында йәштәр, йәш ҡыҙҙар күп, әммә әлеге баш кейеме уларҙы ҡарсыҡ итеп күрһәтә. Мин икеләндем — үҙебеҙҙекеләргә, рус ҡатындарына, кире һуғыу ауыр ине. «Эй, алһындар ҙа, — тип хәл иттем мин. Былай ҙа талағандар магазинды, ҡалғанын булһа ла алһындар. Минекелер шул». Һәм әйттем:

— Иҙәндә рулон ята, уға теймәҫкә! Ә ҡалғанын алығыҙ!

Бисәләр магазинға ташланды, ҡабалана-ҡабалана сумкаларына, тоҡсайҙарына сепрәк-сапраҡ, аяҡ кейеме, тараҡ, флакондар, башҡа нәмәләр тултырырға керешт е. Ҡулдарына эләккән барыһын да алдылар һәм берәйһе инеп кире ала күрмәһен, тигән һымаҡ йәһәт кенә тышҡа сыҡтылар.

— Рәхмәт, улым!

— Алаһы тәғәлә һаулығыңды бирһен!

— Әсәйеңә иҫән-имен ҡайтыуың өсөн доға ҡыласаҡмын.

Ун минут ваҡыттан һуң старшина, ике һалдат менән йөк машинаһы килеп туҡтаны, погондарында зәңгәр ҡайма бар, тимәк, үҙебеҙҙекеләр, «копытниктар».

— Браток, туҡыма рулоны бындамы?

— Бында.

Старшина менән һалдаттар магазинға инде лә рулонға тотондо. Шунда һалдаттарҙың береһе аптырап ҡысҡырып ебәрҙе:

— Ҡара! Беҙҙең туҡыма түгелме һуң? Русса яҙылған бит.

Старшина рулондағы ҡағыҙ киҫәген ҡараны ла:

— Дөрөҫ. Клеймоһы беҙҙеке, Краснодар фабрикаһы.

— Вәт, хәшәрәттәр, ҡайҙан алып килгәндәр!

— Туҡыма нимә ул, Смоленскиҙан бер ир үҙенең самауырын Данцигта тапҡан ти бит!

Рулонды тәгәрәтеп сығарып машина башына ырғыттылар ҙа киттеләр. Буш магазинды ҡалдырып мин үҙебеҙҙекеләр яғына атланым.

Эскадронға әйләнеп ҡайтһам ошондай күренешкә тап булдым: бөтәһе булмаһа ла күптәр йоҡлай ине. Берәүҙәр барактар янында уҡ ята, ерҙә, һалам өҫтөндә, аттарының аяҡ аҫтарында, икенселәр күләгәгә йәки барак эсендәге һикеләргә урынлашҡан. Аттарҙы ашатҡан, эсергәндәр шикелле, уларҙы берәрләп йә икешәрләп бер-береһенә бәйләп ҡуйғандар – баштарын эйеп йоҡлаған эйәләре өҫтөндә торалар. Минең «Машка» Баулиндың аты менән йәнәш йоҡомһорай. Ә Баулин йоҡламай. Ул барак стенаһына һөйәлгән дә һалам өҫтөндә ултыра һәм уйға батып тәмәке тарта, янында – ҡапҡасына икмәк һалынған минең котелок. Өлөшөмдө алып ҡуйған, тимәк.

– «Машкаң»ды ашаттым, эсерҙем, – тине Баулин. – Аша ла йоҡлап ал.

Мин ризыҡҡа ташландым. Һимеҙ итле һурпаны ашағас Баулин сәй һалынған үҙенең котелогын шыуҙырҙы, гәзиткә төрөлгән шәкәр киҫәктәре бирҙе.

– Толя, – тине ул шым ғына, – береһенә лә һөйләмә йәме? Мин егеттәргә Зинаиданы тапманым, тинем.

Мин баш ҡаҡтым.

Йылы сәй һемерҙем дә шунда уҡ, һалам өҫтөндә, йоҡларға йыйындым, тик һәр ваҡыттағыса, бәхетһеҙгә ел ҡаршы – ойоп ҡына бара инем бойороҡ бирелде:

– Эскадрон, поднимайся! По коням!

– Первый взвод, по коням!

Бер кем дә һикереп торманы, ҡуҙғалдылар, бороддолар, тирә-яҡтарына ҡарандылар. Мин ҡалҡындым, пулемет дискылары һалынған брезент сумканың ҡайышын яурын аша кейҙем, карабинды алдым. Йоҡламаған Баулин арҡаһына пулеметын аҫҡан, эйәр бауын тарта ине инде.

– Һаман яталар, һаман яталар, шайтандар! – тип ҡысҡырҙы эскадрон командиры Овсянников, ҡыҙара бүртеп. – Һуғыш бөткәнме ни? Тороғоҙ, инәгеҙҙе...

Һуҙыла-һуҙыла ҡалҡындылар, аттарын алдылар. Эйәр ҡайыштарын тартырға ла өлгөрмәнек, йәнә бойороҡ: «Садись!», «Повод!» Таш юлда дағаларҙы шаҡылдатып урамдар буйлап юрттырып киттек, ҡала ситенә сыҡтыҡ. Тиҙҙән шуны белдек: генерал етәкселегендә ҡамауға эләккән ниндәйҙер СС часы танкылар, бронетранспортерҙар ярҙамында ҡамауҙы йырып сығырға һәм ҡала аша үтеп көнбайышҡа ҡасырға самалаған. Әммә шоссела уларҙы беҙҙең артиллеристар ҡаршы алған: алдан килгәнен яндырғандар, ҡайһылыр полк ҡылыссылары генералды

әсирлеккә төшөргән, ҡалғандары — офицерҙар, рядовойҙар, бер нисә йөҙ кеше — урманға һибелгән. Юлда әҙер генә булып беҙҙең орудие тора, пушкалар янындағы снаряд йәшниктәре өҫтөндә беҙҙең артиллеристар ултыра, юл буйлап шулай уҡ беҙҙең һалдаттар атлай.

— Һуңланығыҙ. Беҙ һеҙһеҙ ҙә арт һабаҡтарын уҡыттыҡ! — тип һөрәнләне йәш кенә бер артиллерист. Күрәһең, яңы килгән, шунлыҡтан үҙенең һуғышта ҡатнаша алыуынан бик ғорурҙыр, ахыры.

Йыраҡ та түгел бер танк яна, уның артынан сыбар бронетранспортерҙар һуҙылған, уларҙың ҡайһы берҙәре юлдан ситкә сыҡҡан да ҡырынайып туҡтап ҡалған. Немецтар ҡасҡан һәр урындағыса, бында ла аяҡ аҫтында ҡағыҙ киҫәктәре ҡыштырлай, юл ситендә фаустпатрондар һибелеп ята.

— Воловик, фаустпатрондарҙы ал! — тип бойора өлкән лейтенант Ковригин.

Воловик фаустпатронды алды ла таяҡ һымаҡ итеп яурынына һалды. Ташланған техниканы үтеп беҙ һулға ҡайырылдыҡ һәм урманды һөҙөргә киттек. Бер-беребеҙҙе юғалтмай, күрә-күрә, бер рәткә теҙелеп барҙыҡ. Ҡарағай урманы ҡуйы, ҡойолған энәләрҙән аяҡ аҫты йомшаҡ, йылынған ыҫмала еҫе сыға. Мин һәр ваҡыттағыса Баулин менән йәнәш барам. Һөйләшмәйбеҙ. Мин, немецтар алыҫҡа киткәндер, бер ниндәй ҙә алыш булмаҫ, өҫтәренә барып сыҡһаҡ улар элекке кеүек үк әсирлеккә бирелерҙәр, һәм беҙ үҙебеҙҙең аттарға әйләнеп ҡайтырбыҙ, тип өмөтләнгәйнем. Әммә өмөт аҡланманы, беҙ барабыҙ ҙа барабыҙ.

Урман ыҙанына килеп сыҡтыҡ. Ыҙан Германияның бөтә ерҙәре кеүек үк тәртиптә, тап-таҙа, тәрбиәле — төпһәләр ҙә юҡ, сереп ятҡан утындар ҙа, ботаҡтар ҙа. Серегән былтырғы үлән араһынан йәштәре ҡалҡып килә, бында, тынлыҡта, бейек ҡояш та йәйҙәгесә ныҡ ҡыҙҙыра.

— Привал! — бойороҡ яңғыраны.

— Беренсе взвод, привал!

Асыҡлыҡта туҡтаныҡ та ергә һуйлайҙыҡ. Тартҡандар шундуҡ тәмәкеләренә йәбеште, икенселәр йөҙҙәрен ҡояшҡа ҡуйып ултырҙы. Беҙҙән уң яҡта — икенсе, өсөнсө, дүртенсе взводтар.

Бер нисә аҙымда ғына ҙур йомро таш ята. Тирә-яҡ шау урман, дымлы тупраҡ һәм — оло таш. Япа-яңғыҙ, әйтерһең дә, осраҡлы. Карель муйынында әлеге ише таштар — аҙым

һайын. Ә бында нисек килеп эләккән — аңлашылмай. Өлкән лейтенант Ковригин таш янына барҙы, тотҡолап, һуҡҡылап ҡараны, әйләнеп килде, ултырҙы һәм мине тамам аптырауға һалып, мин әле генә уйлаған уйҙы әйтте:

— Был таштың урман араһына ҡайҙан килеп сыҡҡанын кем белә? Бөтә билдәләр буйынса бында таш булырға тейеш түгел.

Өлкән лейтенанттың уҫал йөҙө яҡтырҙы, ул беҙҙе йәнә уҡытыусы ҡарашы менән тикшереп сыҡты, уҡытыусы йылмайыуы менән йылмайҙы һәм яуап көттө.

— Күктән төшкән, — тине Худяков.

— Үҫеп сыҡҡан, — тине Андреев.

— Ә Ғәйнуллин ни әйтер? — өлкән лейтенант миңә мут йылмайып ҡараны.

Минең буш башта күптән онотолған мәктәп белеменең бер остоғо ҡуҙғалып ҡуйҙы һәм мин барыһын да иҫемә төшөргән уҡыусы һымаҡ етеҙ генә яуап бирҙем:

— Уны боҙ ҡаҙып сығарған. Бында боҙ дәүере булған.

— Дөрөҫкә яҡын! — тип ҡыуанды өлкән лейтенант. — Тик боҙ ҡаҙып сығармаған, ә үҙе менән килтергән. Ундарса мең йыл элек төньяҡтан был яҡтарға километр ҡалынлығындағы боҙ ҡатламы килә, бына шул үҙенең юлында ҡаяның бер һыныған эләктерә лә ошонда килтереп һала.

Беҙ ташҡа иғтибарлабыраҡ ҡараныҡ. Әйт әле һин уны, ошонда меңдәрсә йыл ятҡан, ә мин был яҡты донъяла ни бары ун туғыҙ йыл ғына йәшәйем, һуғышта иҫән ҡалып ҡартайғансы көн итһәм дә, минең ғүмер уның ғүмере алдында бер мәл генә. Кешеләргә ошо мәлде тыныслыҡта, мөхәббәттә, бәхетлектә генә йәшәргә ине: тормошта бөтмәҫ һуғыш бара һәм кеше бер һуғыш менән икенсе һуғыш арауығында ғына тыныс йәшәп ҡала...

География дәресе тамам. Өлкән лейтенант аяғына баҫты. Йөҙөнән уҡытыусы йылмайыуын һыпырып ташланы ла һәр ваҡыттағыса тауышын бик күтәрмәй, ләкин ҡырҡыу итеп бойороҡ бирҙе:

— Беренсе взвод, встать, вперед!

Урман өйөнә беҙ ҡапыл килеп сыҡтыҡ. Беленер-беленмәҫ урман һуҡмағынан нисектер онотолоп, бер ниндәй әҙерлекһеҙ, ғәмһеҙ, таралышып бара инек, беҙҙең беренсе взвод — иң алдан. Ҡарағай араһынан әлеге өй ҡапыл хасил булды, әйтерһең дә, әкиәттәге өйҙе ҡаршыбыҙға килтереп ултырттылар. Хужалары ташлап киткәндер — шундай тын, кеше тауышы ла, хайуан-кейек тауышы ла юҡ. Өйгә килеп

еттек тигәндә, бына һиңә кәрәк булһа, ҡапыл — автомат очереды! Беҙ сәселеп ҡарағай төптәренә тәгәрәнек. Аңға килеп байтаҡ яттыҡ. Арттан эскадрон командирының ҡарлыҡҡан тауышы ишетелеү менән икенсе, өсөнсө, дүртенсе взводтар ҡалҡынды ла өйҙө уратып алыу маҡсатында ике яҡҡа йүгерҙе. Ҡыҫҡаһы, өйҙө ҡаманыҡ, тик кем ата, унда нисә немец бар икәнен әлегә беребеҙ ҙә белмәйбеҙ.

— Яҡыныраҡ, яҡыныраҡ, килегеҙ! — тип бойора Ковригин.

Бер ағас төбөнән икенсе ағас төбөнә йүгереп беҙ урман ауыҙына тиклем килеп еттек. Беҙҙең менән өй араһында йәш үлән ҡалҡҡан бәләкәй генә асыҡлыҡ. Өйгә тиклем яҡынса ҡырҡ метр, унан да яҡыныраҡтыр ҙа, бәлки. Йәнә автомат очереды — пулялар эргәнән, баш осонан осто, береһе мин төбөндә ятҡан ҡарағайға тейеп ҡайырыһын аҡтарып төшөрҙө.

— Сарҙаҡтан ата, — тине Андреев.

Бойороҡто ла көтмәй Мозафаров сарҙаҡҡа, уның тәҙрәһенә ҡарай ут асты, уға Баулин ҡушылды. Тәҙрә янындағы стенаға тейгән пулялар кирбес саңы күтәрҙе. Беҙҙекеләргә эйәреп өйҙөң теге яғындағы бүтән взводтар ҙа ата башланы, уларға немецтың оҙон очереды яуап бирҙе — өй тәҙрәһенән булды, ахыры. Беҙҙең пулялар немецтарҙы ала алманы, күрәһең, сарҙаҡтан йәнә очередь.

— Воловик, ҡана бир әле фаустпатронды, — тине өлкән лейтенант. Фаустпатронды алған взвод командиры баҫты, ҡарағай артындағы көйө ҡабаланмай ғына яурынына һалды, унан әйтте: — Мин атыу менән ҡалҡынаһығыҙ ҙа — алға!

Атыу тауышы яңғыраны, шул секундта уҡ сарҙаҡта шартлау ишетелде. Черепица ҡойолдо. Әммә күтәрелергә лә өлгөрмәнек, өй тәҙрәһенән пулемет очереды һибелде. Нисек ятҡанбыҙ, шул килеш ята бирҙек, Аллаға шөкөр, беребеҙҙе лә яраламаны, беребеҙҙе лә үлтермәне шикелле.

— Тағы бер нисә фаустпатрон эләктерергә ҡайҙан баш етмәгән, ҡәһәрең! Былай нисек алаһың?! — тип һүгенде Андреев.

— Бында пушка кәрәк, — быныһы Мозафаров.

— Һиңә, бәлки, «Катюша» килтерергәлер? — тип һөйләнде ҡарағай артына боҫҡан Евстигнеев.

Пушка түгел, беҙҙең хатта станковый пулемет та юҡ, улар тачанкаларҙа ятып ҡалды.

— Воловик, ҡысҡыр әле шул сволочтарға, ҡан ҡоймай ғына бирелһендәр ҙә ҡуйһындар. Ғүмерегеҙ һаҡланасаҡ тиң, — тип бойорҙо взвод командиры.

Воловик немецса нимәлер ҡысҡырҙы. Яуап итеп өйҙән дә нимәлер һөрәнләнеләр, артынса уҡ пулемет тырылданы.

— Нимә тиҙәр?

— Аңлап етмәнем, иптәш өлкән лейтенант. — Һүгенделәр шикелле.

Беҙ ҙә ҡысҡырырға, һөрәнләргә тотондоҡ — кем нисек булдыра ала:

— Бирелегеҙ! Гитлер капут!

— Них ишсен!

— Хенде хох! Инәгеҙҙе...

Һәм яуапҡа — пулемет очереды. Беҙҙең башҡа взводтар шулай уҡ алға китә алмай пуля ямғыры аҫтында яталыр. Был яҡҡа өс тәҙрә ҡарай, икеһе асыҡ, ошоларҙың берәүһенән, бәлки, икеһенән дә бер юлы аталарҙыр, өсөнсөһө ябыҡ, уныһында икенсе бүлмәлер. Атыуҙары тәртипһеҙ, нисек етте шулай, сәпһеҙ-ниһеҙ. Йорттоң һул яғындағы тәҙрәләр ҙә асыҡ. Уларҙан да пулеметтан, автоматтан атҡандары күренә. Йорттоң уң яғында тәҙрә бармы, юҡмы, белмәйбеҙ, сөнки ул яҡ беҙгә күренмәй. Хәйер, икенсе взвод яҡыная алмаған, уң яҡтан да барҙыр һәм унан да аталарҙыр. Әлбиттә, был өй беҙҙең өсөн ала алмаҫлыҡ ҡәлғә түгел, күп тапҡырҙар пулеметҡа ҡаршы барған саҡтар булды, бер нисә ай элек булһа бөтә эскадрон «ура» ҡысҡырып күтәрелер ҙә өйҙө гранаталар менән дөмбәҫләр инек, тере ҡалған фрицтарҙы атып бөтөрөр инек. Хәҙер һуғыш бөттө, тамам бөтмәһә лә оҙаҡламай бөтәсәк, шуға ла еңеүгә ике аҙым ҡалғас берәүҙең дә үлеп ятаһы килмәй. Был хаҡта һөйләшмәнек, әммә һәр кем тик ошо хаҡта ғына уйлағанын һәр кем белә. Эскадрон командиры менән взвод командирҙары ла был хәтәр аҙымға бармай. Әммә һуғыш һуғыш инде, эсэсовсыларҙы урман эсендәге ошо йортта һис ҡалдырып китергә ярамай, уларҙы йә тар-мар итергә, йә әсирлеккә алырға кәрәк.

Тәҙрәләргә аттыҡ, тик утты туҡтатыуыбыҙ була, шундуҡ тегеләрҙең пулемет, автоматтары телгә килә. Андреев карабиндан яндырғыс пулялар менән ата: бәлки, йортҡа ут тоҡаныр ҙа, беҙ шунан файҙаланып бәреп инә алырбыҙ, тик төтөн-фәлән һис күренмәй.

Өлкән лейтенант Ковригин йыуан бер ҡарағас артына йәшенгән. Ятҡан ерҙән башты саҡ ҡына ҡалҡытһам мин

уның йөҙөн күрә алам, ә йөҙө үтә борсоулы, һуғышта булғанса, тәүәккәл. Өлкән лейтенант уңышһыҙлыҡҡа осрауҙы яратмай, эскадронда ғына түгел, бөтә полк күләмендә ул иң ҡыйыу һәм эшлекле взвод командиры иҫәпләнә. Лейтенант уйлана. Мин уның ни турала фекер йөрөткәнен дә беләм һымаҡ. Бында бер генә юл: бөтә взводты күтәрергә лә «ура!» ҡысҡырып өйгә ташланырға. Беренсе булып, әлбиттә, Мозафаров ҡалҡынырға тейеш. Беҙ барып еткәнсе фрицтар тәҙрәнән ут асырға өлгөрә. Мозафаров беренсе булып ҡолай һәм ике «Дан» орденын, «Батырлыҡ өсөн» миҙалын тағып өйөнә ҡайта алмай... Ул әлегә минең эргәлә генә тиерлек ята, мин уның ағарған йөҙөн, малайҙарса йәшәргә теләгән һәм үлемдән ҡурҡҡан күҙҙәрен күрәм. Ул Ковригиндың «Мозафаров, давай!» — тигән ҡәтғи бойороғон көтә...

— Ғәйнуллин, — ҡапыл тыныс һәм ҡырҡа ғына әйтеп үҙенә саҡырҙы өлкән лейтенант. Йөрәк жыу итеп китте: мин уға нимәгә кәрәк булдым икән. — Гранатаң бармы?

Миндә «лимонка» бар ине, тик мин уны сумкала ҡалдырғайным, ә сумка онотолоп ятып ҡалған.

— Юҡ, иптәш өлкән лейтенант.

— Кемдең гранатаһы бар? — тип өндәшә Ковригин тирә-яғына ҡаранып.

— Минеке бар, — тип тауыш бирә Баулин.

— Ғәйнуллинға бир. Ғәйнуллин, иғтибар менән тыңла: Мозафаров менән Баулин минең бойороҡ буйынса тәҙрәләргә ҡарай ут аса, ә һин бер-ике һикереүҙә өйгә барып етәһең дә тәҙрәгә граната ташлайһың. Ҡабатлап әйтәм: тиҙ, бер ынтылышта. Аңдарына килеп өлгөрмәҫкә тейештәр. Һинең граната эстә шартлау менән беҙ атакаға күтәреләбеҙ. Бурыс аңлашылдымы?

— Аңлашылды, иптәш өлкән лейтенант, — тип яуапланым мин. Үҙем, был, бәлки, аҙаҡҡы һуғыштыр, Ковригин мине үлемгә ебәрә, тип уйланым.

Мин ярты юлды ла үтеп өлгөрмәйәсәкмен, немец тәҙрәгә тығыла ла тоҫҡап атып та ебәрә. Һуғыш бөттө тигәндә бынау урманда үлеп ят инде... Хәйер, командир бик дөрөҫ хәл итте бер уйлаһаң, барыһының да ғаиләһе бар, әсәләре, балалары, бөтәһенә лә йәшәргә кәрәк, улар тере әйләнеп ҡайтырға тейеш. Ә мин дөм етем, үлһәм илап ултырырлыҡ бер кемем юҡ. Кем белә, бәлки, өлкән лейтенант улай ҙа уйламағандыр, былар үҙемдең фантазиялыр, бәлки, ул бик үтә лә яуаплы бурысты минән башҡа бүтән бер кем дә

башҡарып сыға алмаҫ тип уйлағандыр, сөнки мин кәүҙәгә бәләкәй, еңел һәм етеҙ йүгерәм. Бәлки, барып етермен, гранатаны ташлармын да ергә һылашырмын һәм тере ҡалырмын...

Бер нисә секунд эсендә ошоларҙы баштан үткәреп мин карабинды ағасҡа һөйәнем, пулемет дискылары һалынған брезент сумканы систем. Баулин шинель кеҫәһенән граната сығарҙы ла шундуҡ бирмәне, усында тотоп торҙо, шунан үҙенең һул яғына, ергә һалды. Мин, икенсе номерға тейеш булғанса, Баулиндың уң яғында ятам.

— Огонь!

Мозафаров менән Баулин тәҙрәгә тоҫҡап ут асты, уға карабиндар ҡушылды, взвод командиры үҙенең трофей автоматынан һиптерҙе. Бер нисә секунд арауығында һауаны ярыр хәлгә килтереп, нервыны телгеләп пулемет, автоматтар тыҡылдауы, карабиндар атыуы, яндырғыс пулялар һыҙғырыуы яңғырап торҙо. Тороп йүгерер өсөн граната кәрәк, ә ул Баулиндың теге яғында, һулда ята, мин сержант уны яңылыш, тулҡынланыуынан буталып китеп һалғандыр тип уйлап (ҡатыны менән осрашҡандан һуң ул нисектер үҙгәрҙе) ҡалҡындым да Баулин аша гранатаға үрелдем. Баулин атыуҙан туҡтаны, бесәй етеҙлеге менән гранатаны эләктерҙе лә миңә сәйер, ҡырағай ҡарап ҡысҡырып үк ебәрҙе:

— Толя, ят!

Унын нисек һикереп торғанын мин һиҙмәй ҙә ҡалдым. Гранатаның чегын һурып алға ташланды. Оҙон кәүҙәһен тура тотоп тиерлек ул ярты юлды йүгереп үтте. Гранатаны ырғытыр өсөн ҡулын артҡа ташланы. Мозафаров, башҡалар ата бирҙе (тәҙрәләр ерҙән ярайһы уҡ бейек ине, шуға үҙебеҙҙең пулялар Баулинға тейер тигән ҡурҡыныс юҡ), мин тамам аптырауҙа, хатта атырға кәрәклеген дә оноттом, йәнә бер ынтылыш — өйҙән биш-алты аҙым ҡалғас Баулин гранатаһын тәҙрәгә ташланы ла шундуҡ ергә ауҙы. Өй эсендә шартлау, беҙ ҡалҡындыҡ та ҡысҡыра-ҡысҡыра өйгә ябырылдыҡ. Кемдер йәнә бер граната елләне тәҙрәгә, унан барыһы ла тигәндәй ихатаға, ишеккә йомолдо. Һул яҡлап дүртенсе взвод ҡалҡынды, һыйыр аҙбары, өйҙөң уң яғынан икенсе һәм өсөнсө взводтар йүгерешеп сыҡты. Һәр ваҡыт шулай: пулеметҡа ҡаршы тәүҙә беҙҙең беренсе взвод бара, шунан ғына башҡалар ҡалҡына. Үкенесле һәм сәйер ғәҙәт...

Егеттәр ата-ата өйгә бәреп инде, ә мин Баулин янына ашыҡтым. Ул йығылған көйө ята. Яраланғандыр, тип уйлайым. Барҙым, эйелдем, төртөп ҡараным — ҡуҙғалмай.

— Петрович! — мин уға беренсе тапҡыр атаһының исеме менән өндәштем. — Петрович!

Тауыш бирмәй. Ул уң битен ергә терәп йөҙтүбән ята; нығыраҡ эйелеп мин уның йөҙөнә ҡараным: күҙҙәре асыҡ, әммә үле. Тимәк, фриц барыбер ҙә атып өлгөргән, күрәһең, уң яҡтағы тәҙрәнән атҡан. Ниңә йүгерҙе икән һуң? Мин унан буйға бәләкәйерәк, еңелерәк, етеҙерәк тә йүгерер инем, бәлки, тере лә ҡала алыр инем. Зинаида менән осрашыуҙан һуң уның йәшәгеһе лә килмәгәндер? Улы үлгән, бисәһе икенсегә сыҡҡан — ни мәғәнә йәшәүҙән? Кем белә, бәлки, мине, маңҡаны, йәлләгәндер. Минең тере ҡалыуымды теләгәндер ҙә мине һаҡлап ут аҫтына керергә ҡарар иткәндер?.. Ул бит миңә гел генә һин яҡшы егет, тип әйтә торғайны, үҙ иткәндер, яратҡандыр...

Баулиндың үле кәүҙәһе янында йәнем әсеп торҙом да торҙом. Унан пулемет менән дискыларҙы алырға кәрәклеге иҫкә төштө — үҙем, икәүләп ятҡан ҡарағай ағасы артына барып сумканы яурын аша ташланым, пулеметты алып яңынан усадьбаға ҡарай атланым. Унда, ихатала, ҡара мундирлы эсэсовсыларҙы уратып болдорҙа беҙҙекеләр йыйылған. Унға яҡын фриц. Баштарын эйгәндәр, торалар шунда ҡараштарын ергә ҡаҙап. Аҡһыл башлы, ҡанға батҡан берәүһе аяғында саҡ баҫып тора. Бәрелеш ҡурҡынысын сағыштырмаса еңел үткәргән беҙҙекеләр немецтарға ниндәйҙер ерәнгес (эсэсовсыларҙы беренсегә әсирлеккә төшөрөүебеҙ), шул уҡ ваҡытта ҙур ҡыҙыҡһыныусанлыҡ менән ҡарай, һаман да еңеүҙән кисергән ярһыуҙары дауам итә — ҡысҡырып һөйләшәләр, бер-береһен шатлыҡлы шаяртышалар.

— Баулинды үлтерҙеләр, — тим мин.

Минең үҙемә лә, һүҙемә лә бер кем иғтибар итмәне.

— Баулинды үлтерҙеләр, — тип ҡабатланым мин, ҡысҡырып уҡ тигәндәй. Егеттәрҙең битарафлығына асыуым килде.

Барыһы ла фрицтар тирәһендә әйләнә, әйтерһең, Баулиндың үлеме уларҙың береһенә лә ҡағылмай, әйтерһең, ул эскадронда бөтөнләй булмаған, уны бер кем дә белмәй. Етмәһә, шул мәл үҙенең ординарецы Барсуков менән эскадрон командиры яныбыҙға килеп етте, эсэсовсылар-

ҙың һәр ҡайһыһын ентекләп ҡараны, Ковригин менән Воловик ярҙамында фрицтарҙан һорау ала башланы.

Болдорҙан Худяков төшөп килә. Ҡулында — кәрзин, кәрзин тулы тауыҡ йомортҡаһы. Гел генә ас йөрөгән Худяковтың йөҙө ҡәнәғәт, күҙҙәре яна.

— Баулинды үлтерҙеләр, — тинем мин уға.

Ул да мине аңламаны. Яуап урынына шатлыҡлы ҡысҡырып ебәрҙе:

— Егеттәр, йомортҡа!

Беҙҙең эскадрон ҡайҙалыр ҡасҡан ниндәйҙер фон-барондың имениеһында тора. Өс ҡатлы матур йорт быуаһы ла булған парк уртаһында, эргәләге тип-тигеҙ аҡланда беҙҙең «кукурузник»ка оҡшаған бәләкәй генә самолет ултыра, яғыулығы булмағанға осмағандарҙыр инде, күрәһең. Был йорт — замок, тине Ковригин. Тик замоктар башнялар менән була шикелле, ә бының башнялары юҡ, башы ябай осло ҡыйыҡ менән ябылған. Йорт эсендәге әйберҙәргә теймәгәндәр тиерлек. Стеналарҙа балаҫтар, картиналар, портреттар һәм пейзаждар, хатта киң караваттарҙағы ҙур яҫтыҡтар ҙа ятып ҡалған; беренсе ҡаттағы оҙон өҫтәлдәрҙә ниндәйҙер аҙыҡ ҡалдыҡтары боҙолоп-әсеп ултыра. Йорт хужалары яңы ғына ҡасҡан, тимәк.

Ял ваҡыттарында беҙ взвод командиры ярҙамсыһы Морозов ҡарамағына күсәбеҙ. Аттарҙы, ҡоралдарҙы таҙартабыҙ, амуницияны, үҙебеҙҙең өҫ-башты рәтләйбеҙ. Марштарҙан һәм һуғыштан һуң була торған был бөтә хужалыҡ ығы-зығыһы минең өсөн ифрат күңелһеҙ һәм кәрәкмәгән сара. Дымлы үләнгә тәгәрә лә йоҡоң туйғансы йоҡла йәки бер нәмә тураһында ла уйламай, парк буйлап йөрө ине ул. Әммә һалдатҡа төнөн дә, көндөҙөн дә тынғылыҡ юҡ, командирҙар фекеренсә, ул гел генә нимә менән булһа ла шөғөлләнергә тейеш. Ул барған көйө йоҡлай, барған көйө ашай. Ялан-туғай уның өсөн өй, ер — түшәк. Энә менән ҡырына, төтөн менән йыуына.

Тәмәке тартыу тәнәфесендә мин замок буйлап сәйәхәткә сығып киттем. Беҙҙең егеттәр байтаҡ аҡтарынып йөрөргә өлгөргәйне инде. Әммә һалдат өсөн кәрәкле әйбер таба алмағандар, әлбиттә. Балаҫ, картина, китаптарҙы рядовой «копытник» үҙенең сумкаһында алып китә алмай. Мине картиналар ҡыҙыҡһындырҙы. Мин бит һуғышҡа тиклем рәссам булырға хыяландым һәм майлы буяу менән яҙылған картиналарға, пейзаждарға йәки портрет-

тарға иҫем китеп ҡарай торғайным. Нисек шулай оҫта төшөрөргә мөмкин? Аҡыл етмәй. Ауыр алтын рамдарҙа ҡояш йәки ай нурҙары аҫтында диңгеҙҙәр шаулай, уйнай, һикерә, ярһый, елкәнле караптар йөҙә, рамдарҙан, асыҡ тәҙрәләрҙән ҡараған һымаҡ миңә берсә ғорур һәм олпат, берсә ҡуҡыр һәм тәкәббер (улар күптән үлгәндер) кешеләр ҡарай. Эполетлы мундирҙар кейгән хәрбиҙәр, түреләр, йондоҙҙар ялтыраған боронғо кейемдәрҙәге, нигеҙҙә, оло йәштәге олпат ирҙәр, бәрхәткә, ебәккә төрөнгән ҡатындар, бит-йөҙҙәре туҡ, йомро балалар... Шулай ҙа миңә күберәк ағастар, һуҡмаҡлы туғайҙар, ағас күләгәләре төшкән һыу өҫтө һәм күктәге болоттар һүрәтләнгән пейзаждар оҡшаны.

Бер картина алдында бигерәк тә оҙаҡ баҫып торҙом. Картинала һуғыш һүрәтләнгәйне. Әлегеһе түгел, тәүгеһе, минең олатай ҡатнашҡан Беренсе рус-герман һуғышы. Ялбыр йөнлө папахалар, ал лампаслы салбарҙар кейгән һаҡал-мыйыҡлы казактар, баш осонда яланғас ҡылыстарын уйнатып, һыбай килеш картинаның саңлы тәрәнлегенән немец окоптарына ҡарай саба. Ә һоро-йәшел шинель, осло мөгөҙлө каскалы немецтар станковый пулеметтарынан казактарға ут асҡан. Алдағы ат артҡы аяҡтарына баҫып үрәпсегән, уның артынан сабыусы һаҡаллы казак пуля тейеп һөрләккән атының башы аша осоп төшөп бара, йәнә бер ат өркөпмө, ҡурҡыпмы ситкә һикергән дә үлгән казактың өҙәңгенән ысҡынмаған аяғынан һөйрәп бара, артта, картинала фон рәүешендә генә, саң-туҙан араһында, ҡото алынған бер казак ҡурҡыуҙан атын артҡа бора. Немецтар окопта миңә арттары менән тора, мин уларҙың елкәләрен, ҡырылған баштарын һәм ҡолаҡтарын ғына күрәм. Рустың ярһыу ғәйрәтлеге менән германдың тимер һалҡын ҡанлылығы бәрелешә. Германдар еңә.

Пулеметтар барлыҡҡа килеү менән атлы һөжүмдәр үҙенең элекке тәьҫирен юғалта һәм йыш ҡына ҡырылыш һәм яу яланынан ҡасыу менән тамамлана. Беҙ был һуғышта пулеметтарға ат менән ҡаршы барманыҡ, һәр хәлдә минең барған булманы, шулай ҙа һуғыш башында пулеметтарға ғына түгел, хатта танкыларға ташланыу осраҡтары булғанын ишетеп беләм.

Шулай ҙа был картинала миңә нимәлер оҡшап етмәне. Алданған һымаҡ ниндәйҙер сәйер уңайһыҙлыҡ, борсоулы тойғолар кисерҙем. Сәбәбен үҙем тиҙ генә аңлап та етә алманым. Ә сәбәбе былай: рәссам картинаны немецтар

өсөн, немецтар күҙе өсөн яҙған, картина немец күңелдәрендә еңеү тойғоho, немец hуғышсанлығын, башҡа халыҡтарға ҡарата немец өҫтөнлөгөн күрhәтергә бурыслы, ә мин бар булмышым менән пулемет утынан hәләк булған казактар яғында, мин улар менән, улар араhында, улар менән бергә hәләк булам, hәм ҡыҙыҡ, уларҙың hәләкәтен немец окоптары яғынан, дошман арҡаhы яғынан күрәм, үлемгә дусар ителгән казактарҙы немецтар күҙе менән күрәм. Картиналағы hуғыш, ҡурҡыныс төштәге кеүек, бына шулай баш түбән әйләндерелгәйне...

Сәйер hәм ҡурҡыныс әлеге картина алдында оҙаҡ ҡына баҫып торғас, мин ары киттем hәм быяла менән көпләнгән шкафтар менән тулы бүлмәгә килеп юлыҡтым. Был шкафтар иҙәндән алып түшәмгә тиклем китаптар менән тултырылғайны. Һырттарына, тыштарына алтын хәрефтәр менән яҙылған ҙур форматлы, ҡалын китаптар. Мин уларҙы hурып алып ҡарай башланым. Ҡайhы берәүҙәре үтә иҫке, күн тышлы, ҡағыҙы hарғайып бөткән, уларҙан боронғолоҡ еҫе килә. Китаптар, әлбиттә, немец телендә, уларҙың биттәрендә, тығыҙ хәрефтәр араhында күпме фекер, аҡыл, өмөт, hағыш, шатлыҡ тупланғандыр, шуларҙы яҙған кешеләрҙең ҡыуаныстары ла барҙыр. Әлеге hуғыш hымаҡ уларҙа ла hуғыштарҙы, ҡан ҡойолоштарҙы hүрәтләгән юлдар, биттәр барҙыр, китап геройҙары беҙҙең тормоштағы ише яратышҡандыр, күрә алмағандыр, зарыҡҡандыр. Әммә былар бөтәhе лә минең өсөн йыраҡ, сөнки телде белмәйем, мин китаптарҙың hүрәттәрен генә ҡарайым, ә ҡыҙыҡлы hүрәттәр бик күп.

Урамда ҡапыл атыша башланылар. Автоматтарҙан, карабиндарҙан. Нимә уйларға ла белмәй мин аҫҡа йүгерҙем, ишектән сыҡтым hәм егеттәрҙең «ура!» ҡысҡырғанын, пилоткалар сөйөп, hауаға атҡандарын күрҙем. Төшөндөм: hуғыш бөткән. Ысынлап та, егеттәр янына килhәм, әле генә полк штабынан hуғыш тамамланыуы тураhында хәбәр иттеләр, тип торалар.

Һауаға атырҙай, пилотка сөйөрҙәй hәм «ура» ҡысҡырырҙай ташып-түгелеп барған шатлыҡ юҡ ине күңелдә минең. Шатлыҡ тойғоho барып етмәгәндер, бәлки, минең күңел Баулин фажиғәhенән hуң шатлыҡты ҡабул итергә әҙер түгелдер. Мин кисергән тойғо шатлыҡ та, ҡайғы ла, битарафлыҡ та түгел, ә бары шаңҡыу; бөгөн дә, иртәгә лә hөжүмгә күтәрелмәйәсәгемә, пулеметҡа ҡаршы бармаясағыма өйрәнелмәгән-күнегелмәгән уйҙан аптырап

тик торҙом... Яҙмыш тарафынан бүләк ителгән тормоштоң ҙурлығына аптырау, дөрөҫөрәге, ошо тормошто күтәрә алырмынмы һуң тигән борсолоу бар ине...

Еңеүҙе билдәләргә кәрәк ине. Старшина Дударев он, бер аҙ спирт тапты. Замоктан йыраҡ түгел йәшәгән ике йәш немканы Андрей-Марусяға ярҙамлашырға саҡырҙылар. Улар, уға тырнаҡ аҫтарың бысраҡ, ә ашнаҡсының ҡулдары таҙа булырға тейеш, тинеләр. Андрей-Марусяға еткән тырнаҡтарын ҡырҡырға тура килде. Замоктан өҫтәлдәр сығарып ҡарт, ялбыр имән төбөнә ултырттыҡ, ә ҡашығаяҡ — тәрилкәләр, сәнскеләр, ҡалаҡтар, рюмкалар замокта күп ине. Ашнаҡсылар бөтә эскадронға етерлек ҡоймаҡ ҡойҙо. Бит-йөҙөн таҙа итеп ҡырған, бөтә орден-миҙалдарын таҡҡан эскадрон командиры Овсянников өҫтәл башына ултырҙы, беҙ ҙә ултырыштыҡ. Рюмкаларға спирт ҡойҙолар. Командир рюмкаһын тотоп ҡалҡынды, беҙ ҙә торҙоҡ.

— Бына шулай, ҡәҙерлеләрем, — тип һүҙ башланы капитан Овсянников үҙенең ҡарлыҡҡан тауышы менән. — Еңеү көнөнә тиклем килеп еттек! Фашист хәшәрәтенең муйынын һындырҙыҡ! Әйҙәгеҙ, ҡәҙерлеләрем, үҙенең ғүмерен бөгөнгө еңеү өсөн, Тыуған ил өсөн биргәндәрҙе һәм ошо шатлыҡлы сәғәтте күрә алмағандарҙы иҫкә алайыҡ.

Өнһөҙ генә торҙоҡ, эстек, ултырҙыҡ та ҡоймаҡҡа йәбештек. Унан Еңеү өсөн эстек. Мин тиҙ иҫерҙем. Баулин баштан сыҡманы. Үлмәгән булһа әле минең менән йәнәш ултырыр, эсер һәм ҡоймаҡ ашар ине. Ә ул тегендә, урман ауыҙында, ята — плащ-палаткаһына төрөп ерләнек. Ҡапыл ҡыйын булып китте, күкрәкте нимәлер өттө, яндырҙы, бөтә тәнде ниндәйҙер эҫелек ялманы, күҙ йәштәре тығылды һәм мин үкһеп иларға тотондом. Һуғыш осоронда беренсегә илауымдыр, дөрөҫөрәге, һуғыш, алыш ваҡыттарында, башҡа иптәштәремдең үлемдәрен күргәндә лә иламағанды, һуғыш бөткәс илайым.

— Һин нәмә, Толя? — Андреев арҡаға һуға, — һуғыш бөттө, беҙ еңдек, шатланырға кәрәк, ә һин илайһың.

— Баулин йәл, — тинем һулҡылдап.

Һуңынан, бер нисә көн үткәс, белдем: Эльбаға етеп барғанда һуңғы алыштарҙа һәләк булған бөтә яугирҙәрҙе лә йыйып Виттенбергтағы туғандар ҡәберлегенә яңынан ерләгәндәр икән. Европаның ҡап уртаһына, ят ҡом ара-

һына Брянск егете Баулин Сергей Петровичты ла алып барып һалғандар, тимәк...

Беҙгә кубанкалар тектерҙеләр. Зәңгәр түбәле ҡаракүл кубанкалар. Бөтә полк өсөн... Яңы кейем дә бирҙеләр – иҫке гимнастеркалар, салбарҙар ҡояшта янып, күп йыуыуҙан төҫөн юғалтып, ямауҙар һалынып, тирҙән сереп бөткәйне, ҡайһы берҙәребеҙгә хатта яңы итектәр ҙә эләкте. Наградалар тапшырыу ҙа булды, уларын бөтә саф алдында полк командиры полковник Шовкуненко тапшырҙы. Күкрәктәргә орден, миҙалдар таҡҡас, кубанкаларҙы баштарға ҡырын һалғас, өр-яңы кейемдә беҙ ысын геройҙарға, ысын казактарға оҡшаныҡ та ҡуйҙыҡ.

Эскадрондың союзниктар – инглиздәр менән осрашыуға барырға тейешлеген белдек. Тәүҙә взводты, унан эскадронды теҙҙеләр, тәүҙә өлкән сержант Морозов, унан старшина Дударев беҙҙең кейемде, амуницияны ентекләп тикшерҙе, һәр һәҙәпте, гимнастеркалағы һәр йыйырсыҡты ҡараны, әйтерһең дә, кәләш әйттерергә йыйынабыҙ. Һәм ярты көн осрашыуға күнекмә үткәрҙек тә ҡуйҙыҡ. «Садись!», «Смирно!», «Шашки наголо!», «Эскадр-о-о-н, взв-о-од, звеньями повод направо ма-а-арш!» Икенсе көнөнә иртәнгене ашағас итектәрҙе ялтыратҡансы таҙарттыҡ, шпорҙарҙы рәтләнек, ҡырындыҡ, гимнастеркаларға яңы аҡ яғалар тектек һәм дағаланған, йыуылған-таҙартылған аттарҙа союзниктар менән осрашыуға киттек.

Урман уртаһындағы ҙур ғына аҡланда таҡталарҙан ҡабалан ғына бейек трибуна ҡағылған, алғы яҡтан ҡыҙыл туҡыма менән уратылған. Полк ошо трибуна алдына теҙелде. Полк тигәс тә, әлбиттә, ул тулы составында түгел, һәр взводта унар, ун бишәр генә кеше ҡалған, пулемет һәм хужалыҡ взводтары менән эскадронда күп булһа барлығы йөҙҙән ашыу ҡылыс иҫәпләнгәндер. Аттарҙан төштөк. Полк командиры полковник Шовкуненко яңы кителдә, күкрәге тулы орден, һәр ҡайһыбыҙға, аттарыбыҙға ентекле ҡарап, тикшереп, ҡабаланмай ғына строй алдынан үтте. Тораҡ машинаға ултырып корпус командиры генерал-лейтенант Осликовский, дивизия командиры генерал-майор Чурилин – шулай уҡ ордендарҙа һәм фуражкаларҙа – килделәр. Улар менән йәнә бер нисә полковник та бар ине. Дивизия менән корпус командирҙары, полк командирының докладын тыңлағандан һуң, трибунаға

күтәрелделәр. Полк командиры атҡа атланды, строй алдынан үтте, туҡтаны һәм көслө тауыш менән бойороҡ бирҙе:

— По-о-о-лк, слушай мою команду! Сад-и-ись!

Беҙ аттарға атландыҡ, шундуҡ йәнә бойороҡ яңғырай:

— Отставить!

Аттарҙан кире төштөк. Баҡһаң, бер кавалеристың эйәренең ҡайышы бушаҡ булғанмы, әллә бөтөнләй тартмағанмы, өҙәңгегә баҫып менгән саҡта эйәре әйләнеп төшә. Корпус командиры — элекке кавалеристың күҙ алдында!

— Һине кавалерияға кишеремә алдылармы ни? — тип ҡысҡырҙы генерал трибунанан, асыуынан сәсәр сиккә етеп.

Һәм йәнә бойороҡ:

— Сади-и-сь! Смирна-а-а! Шашки наголо! Шашки в ножны! Молодцы! Вольно. Слезай.

Генералдар трибунанан төштө, беҙҙең барлығыбыҙ тураһында онотоп үҙҙәрен уратып алған офицерҙар менән һөйләшергә тотондо.

Оҙаҡламай машиналарҙа 2-се Белоруссия фронты командующийы маршал Рокоссовский менән йәнә өс генерал килеп төштө. Осликовскийҙың докладынан һуң маршал беҙҙең менән иҫәнләште:

— Здравствуйте, гвардейцы-кавалеристы!

— Здравжлам!.. — тинек беҙ.

Яй ғына атлап маршал саф алдынан үтте. Ул оҙон һәм уҡлау һымаҡ төҙ кәүҙәле ине. Фуражкала, тәненә һылашып торған кителдә, түшендә орден колодкалары һәм Геройҙың Алтын Йондоҙо ялтырай. Һәр ҡайһыбыҙға бик иғтибар менән ҡараны, хатта йылмайыбыраҡ та ҡараны, һәм ул Баулинға ныҡ оҡшағайны. Шундай уҡ йөҙ, йылмайыулы ирендәр, тик буйға ғына оҙон, күпкә оҙон. Маршал һалдатҡа оҡшаш ине.

Ниһайәт, һары-сыбар машиналарында инглиздәр пәйҙә булды. Рокоссовский уларға ҡаршы китте, честь бирҙе һәм тоҡ һымаҡ һәленеп торған зәңгәр мундир, ниндәйҙер значоклы берет кейгән, кәүҙәгә тәпәш кеше менән күреште.

— Фельдмаршал Монтгомери, — тип шыбырланы өлкән лейтенант Ковригин.

Инглиздәрҙең бүтәндәре һары-йәшел мундирҙа, фуражкалары ла шулай уҡ йәшел һәм киң козыреклы, береттары ла шул төҫтә. Барыһы ла оҙон, тура салбарҙар һәм

ботинкалар кейгән. Ә йөҙҙәре миңә ниңәлер битараф, һауалы һәм тәкәббер күренде.

Фельдмаршал Монтгомери миңә тәү ҡарауҙа уҡ оҡшаманы. Йөҙө осло танаулы, ябыҡ ҡарсыҡтарҙыҡына оҡшаш. Әбейҙәрҙеке һымаҡ береты ла килешмәй. Беҙҙең генералдар менән сағыштырырлыҡмы! Улар, беҙҙең генералдар, олпаттар, эре һөйәклеләр, асыҡ ҡыҙыл лампаслы киң салбар, итек кейгәндәр — ҡарап туйғыһыҙ!

Өс инглиз саф алдына килеп, берсә сүкәйеп, берсә һикергеләп тигәндәй беҙҙе фотоға төшөрөргә керештеләр. Һары-йәшел төҫтәге, оҙон ботло инглиздәр эре сиңерткәләргә оҡшап тора ине.

— Егеттәр, был — тарих, беҙ тарихта ҡалабыҙ бит! — тине Ковригин.

Фельдмаршал, тағы бер нисә инглиз, маршал Рокоссовский, генерал Осликовский, башҡа генералдар трибунаға күтәрелде. Аттарға атланырға бойороҡ бирелде. Инглиздәр беҙҙе хәҙер һыбай көйө төшөрә башланы. Һәм йәнә бойороҡ:

— Полк! Сми-рно! Звеньями повод направо ма-а-арш!

Иң алдан полк командиры полковник Шовкуненко, уның артынан полк байрағын тотоп, байраҡ йөрөтөүсе, уның артынан офицерҙар һәм эскадрондар ҡуҙғалды.

— Шашки наголо!

Фельдмаршал уң ҡулын беретына килтерҙе. Беҙҙең маршал менән генералдар — фуражкаларының козыректарына.

— Повод!

Беҙ яланды урап, юрттырып трибуна алдынан үттек, ҡылыстарҙы баш осона күтәреп «ура!» ҡысҡырҙыҡ.

Бер аҙ барғас, ҡылысты ҡынға тыҡтым да артыма боролоп ҡараным: трибуна янында, ат тояҡтарынан күтәрелгән һары саң араһында аттар, улар өҫтөндә кавалеристар һелкенә, ҡылыстар ялтлай һәм «ура» тулҡын-тулҡын булып ҡабатлана. Килә торғас бер нәмәгә төшөндөм: беҙ көнсығышҡа йүнәлеш алғанбыҙ икән. Һуғыш башланғаны бирле беренсе тапҡырға көнсығышҡа китеп барабыҙ. Ә унда, көнсығышта, томанлы офоҡ аръяғында, урмандар, ялан-туғайҙар артында, күп михнәттәр, хәсрәттәр күргән илебеҙҙә беҙҙе тыныс тормош көтә ине...

# Кисеү

(Мөхәббәткә мәҙхиә)

*Әлиәгә*

Шепетовка тип аталған ярайһы уҡ ҙур станциянан поездар көньяҡҡа ла, көнсығышҡа ла, ҙур илдең башҡа тарафтарына ла юл ала. Станцияның санитар пропуск пунктында минең эске һалдат кейемдәремдән ике һимеҙ бет таптылар ҙа бөтә обмундированиены ҡыҙҙырырға ебәрҙеләр.

Шепетовка — минең өсөн әҙәби, романтик ҡала (Павел Корчагин). Бетле кейемдәрем эҫелә ятҡан арала мин поэма ижад итергә тотондом.

На узловой станции Шепетовке
Бомбами изрытый перрон.
Давно ли здесь били винтовки,
И в огне мчался эскадрон...

Кейемдәремде килтереп биргәндә мин үҙемдең ҡайһы яҡҡа китеремде белмәй инем әле. Көньяҡ тарафтар ҙа ымһындыра, Ҡырым ярымутрауы — мәктәп картаһындағы әкиәт иле; Мәскәүгә, Жмыховҡа ла барырға була. Беҙҙең отделениелағы Жмыхов тигән егет мин рәссам булып урынлашҡан полк клубына үҙенең ТТ пистолетын йәшерҙе. Ул үткән көҙ демобилизацияланды, хеҙмәтен тамамлағандарҙы тимер юл вокзалына оҙатыр алдынан плацҡа теҙҙеләр ҙә, майор Хоменко, замполит, фронтовиктарҙың уй-фекерҙәрен тыныс тормош яғына борорға кереште. Ә полк командиры полковник Кошкин үҙенең һалдаттары менән өндәшмәй генә хушлашты. Майор Хоменко тымғас, строй алдында ниндәйҙер капитан пәйҙә булды ла яңғырауыҡлы сыйылдаҡ тауыш менән былай тип бойороҡ бирҙе:

— Кемдә трофей ҡорал бар, шулар биш аҙым алға!

Стройҙа ҡуҙғалыусы булманы. Көттө-көттө лә ул ҡулындағы ҡағыҙға ҡараны.

— Паршин, стройҙан сыҡ! Вещмешоғыңды асып күрһәт.

Паршиндың вещмешогынан трофей «Вальтер» килеп сыҡты. Аранан берәй сволочы ошаҡлағандыр инде. Ҡайтыу урынына — штрафрота. Капитан пистолетты полковникка

бирҙе, ә уныһы ҡулындағы ҡоралды һелкә-һелкә һалдат алдына килеп баҫып дау ҡуптарҙы:

— Һин был пистолет менән кемде атырға теләнең? Һин, бәлки, совет власына ҡаршы сығырға уйлағанһыңдыр, ә?!

Паршин ни үле, ни тере баҫып тора, трофей пистолеты менән ҡайтырға өмөтләнгән «гражданка» — кемделер үлтерергә, совет власына ҡаршы көрәшергә түгел, ә ир-егеттең бар атыу, киҫеү ҡоралына булған ябай ҡыҙыҡһыныуы ғына. Әсәйемдең шатлыҡлы күҙ йәштәре, ҡыҙҙар, өйләнеү ҡыуанысы булған хыялдар бер секунд эсендә бер нисә йылға йырағайҙы, тип уйлағандыр, һаҡлағаны өсөн үкенгәндер, алдында торған командирҙарҙы өҙгөләп ташларҙай булғандыр меҫкен Паршин. Йәл ине егет, бер нисә тәүлектән тыуған яҡтарымда буласаҡмын, тип йөрөгән ерҙән штрафротаға китеп бар инде.

— Жмыхов, стройҙан сыҡ! Вещмешогыңды ас.

Жмыхов стройҙан сыҡты. Таҫтамал, запас сылғауҙар, тағы ниндәйҙер ваҡ-төйәк. Ә пистолет юҡ. Пистолет миндә.

— Кеҫәләреңде күрһәт!

Кеҫәләр ҙә буш. Капитан полковник янына барҙы, улар шым ғына нимә тураһындалыр һөйләштеләр, шунан полковник Жмыховҡа стройға кире баҫырға бойорҙо.

Кошкин егеттәрҙе һуғышта бер ҙә аяманы. Фронтта ул үҙенә буйһонған меңләгән һалдатты немец пулеметтарына ҡаршы ташланы, ә бөгөнгө тыныс иртәләргә етә алған егеттәр, һалдат уставын, ҡорал ауырлығын, бойороҡ вәхшилеген үҙ елкәләрендә бөтә тулылығы менән татыған егеттәр менән полковник Эльбаға ҡәҙәр барып етте, һөҙөмтәлә Померанияның ҡола яландарында ятып ҡалғандарҙың ҡаны алтынға, көмөшкә, бронзаға әйләнеп, уның кителендә ялтыраны, погондарына яңы йондоҙҙар булып ҡунды...

Ҡалыусылар ҡайтыусыларҙы оҙата китте. Тимер юл вокзалында мин йәшереп кенә пистолет төрөлгән төйөнсөктө Жмыховҡа бирҙем. Шат булды егет. Хушлашҡанда ул ҡулды ҡаты ҡыҫып йылмайҙы ла былай тине:

— Рәхмәт, Толя! Адресты беләһең, демобилизацияланыу менән туп-тура үҙемә, Мәскәүгә кил. Ваҡытлыса пропискаға индерермен, эшсе ҡулдар хәҙер һәр ерҙә лә кәрәк, так что эш табылыр.

Мәскәүгәме? Әммә Мәскәү мине ниңәлер ҡурҡыта шул. Мин, ауыл малайы, Сталин йәшәгән баш ҡалала

йәшәй алырмынмы һуң? Жмыховҡа әйтеүе генә анһат, кил, йәшәрһең, имеш, ул унда тыуған, үҫкән, өйрәнгән, ә мин?.. Булмай. Тимәк — көньяҡ. Ә унда мине кем көтөп тора? Ярар, ҡояшта ҡыҙынырмын да, ти, кипаристар күләгәһендә лә ятырмын, йылы диңгеҙҙә сумырмын, ә артабан? Юҡ, билдәһеҙ сит яҡтарҙа өйрәнеп-күнегеп китеүе, эш табыуы еңел булмаҫ, иң яҡшыһы — тыуған яҡҡа, тыуған ауылға ҡайтыу. Дөрөҫ, унда ла мине бер кем көтөп тормай, етемлектә үҫтем, асыҡтым, әммә ағас-һаламдан ҡоролған кеше умарталығында һары сәсле Ғәлиә исемле ҡыҙ йәшәй. Ауылға тартылыуымдың төп сәбәбе ошо ҡыҙ.

Үҙебеҙҙең клубта Баймаҡ артистарының спектаклен ҡарағандан һуң мин уны Ғәлиәбаныу тип йөрөтә башланым. Спектакль тап беҙҙең турала һымаҡ тойолдо миңә, дөрөҫөрәге, минең хаҡта. Сәхнәлә сибәр Ғәлиәбаныу, кире ҡағылған бай кейәүҙәрҙең мыҫҡыллы көлөүҙәренә, атаәсәһенең тыйыуына ҡарамай, ярлы егетте ярата, минең һымаҡ етемде өҫтөн күрә. Ә икенсе төрлөрәк драмалар барған тормошта Ғәлиә мине үҙ итмәне, гел күрмәмешкә һалышты. Ул күрмәмешкә һалышҡан һайын, мин уны нығыраҡ яраттым, шиғырҙарымда уны күктә яҡтыртҡан, ерҙә сәскәгә күмелгән бөтә нәмә менән сағыштырҙым, уның тураһында, уға бағышланған шиғырҙар менән дәфтәр тулды. Мин уны, ошо дәфтәрҙе, әхирәттәре аша Ғәлиәгә тапшыра торғайным: киләсәктә, бәлки, бөйөк шағир булып китер талантлы егетте нисек кире ҡағырға мөмкин, ә!? Йылға буйындағы муйылдарҙың иҫерткес тәмле еҫтәре аңҡыған, һандуғастар түгелеп һайраған яҙғы кистәрҙә мин тәҙрә ҡорғаны аша уның һынын булһа ла күрергә өмөтләнеп тулҡынлана-тулҡынлана ул йәшәгән урамға киләм. Ә икенсе урамда берәйһе гармунда «Ғәлиәбаныу» көйөн уйнап ебәрһә, минең йөрәк ярһырға тотона, ҡыҫыла, һыҙлай башлай, мин, үҙем дә һиҙмәҫтән, эстән генә көйләргә тотонам:

Тәҙрә төбө ҡаты бал,  
Ашағың килһә, ватып ал.  
Һөйөүҙәрең ысын булһа,  
Тәҙрәңдән тартып ал.

Фронттан күпме хаттар яҙҙым мин уға, шиғри хаттар, тик береһенә лә яуап килмәне. Шулай булғас, ниңә ауылға ашҡынам һуң әле? Элек яратмағас хәҙер ҙә яратмаясағы көн кеүек асыҡ бит инде. Хәйер, улай тиһәң, ул саҡта

Ғәлиә бәләкәй бала ине, хәҙер уға кейәүгә сығырға һәм балалар табырға ваҡыт. Һуғыштан һуң мин, бәлки, ауылда берҙән-бер кейәүҙер әле. Кавалеристың зәңгәр погонлы формаһында мин фырт егет күренәсәкмен — күкрәктә «Дан» ордены ялтырай, күн итектәрҙә шпорҙар сыңлай. Ҡыҙҙар, йырҙарҙа йырлағанса, мин урамдан үткән саҡта ҡойма ярыҡтарынан күрһенеп ҡарап ҡаласаҡ.

Вагон һәндерәһендә ҡабырғаларҙы ауырттырғансы ятып сыҡҡандың бишенсе көнөнә ауылымдан ҡырҡ саҡрым самаһы алыҫлыҡтағы Тирлән ҡасабаһында төшөп ҡалдым. Төн станция эскәмйәһендә үтте, иртүк юлға ҡуҙғалдым. Апрель аҙағы ине, уйһыулыҡтарҙа ҡар ирегән, иҙелеп ятҡан юлда итектәремә ботлап-ботлап быҫраҡ йәбешә. Алда Уралтауҙың көмрө һырттары шәйләнә, беҙҙең яҡта «Ҡәйнә теле» тип йөрөтөлгән боролмалы-боролмалы юлдан һыртҡа оҙаҡ күтәрелдем, бынан баш осонда ғына йөҙгән болоттарҙы ҡул менән дә тотоп алырлыҡ. Тау бите урманындағы ҡарға апрель йылыһы бигүк ҡағылмаған тиерлек, шулай ҙа ҡар аҡлығын юғалтҡан, ирегән ағастарҙа яҙ еҫе бөркә ине инде.

Ҡырҡ саҡрым марш-бросоктан һуң хәлдән тайған кеше һымаҡ, мин тамам арып, асығып тыуған йылғам Йайыҡҡа килеп еттем. Теге яҡ ярҙа — минең ауыл. Ауылдың һоро, тәпәш өйҙәре, унан сыҡҡан төтөндәр менән минең арала күп булһа ярты саҡрым ара, әммә Йайыҡ ярҙарынан сыҡҡан да тирә-яҡҡа йәйелгән — был яҡтан да, теге яҡтан да күпергә килә торған юл һыу аҫтында. Әүәле юлдың ике яғынан да таяҡтар ҡаҙайҙар һәм көндөҙҙәрен, тик көндөҙ-ҙәрен генә, ошо таяҡтар араһынан сығып йөрөй торғайны-лар. Әле улар юҡ, улар һыу тамам ҡайтҡас ҡына буласаҡ.

Ифрат киң йәйелгән һыу дарьяһының ситенә килеп, шомланып бурьяҡ тулҡындарға ҡарап торҙом. Ҡырҡ бишенсе йылда әлеге һымаҡ Одер тулҡындарына ҡарап торғайным. Ул саҡта йылғаны беҙҙән алда ғына штрафник-тар кискәйне, аҙаҡ, беҙ кискәндә, уларҙың әллә күпме мәйеттәре аҡты... Ә бөгөн ошо хәүефле йылғаның һалҡын тулҡындарында мине нимә көтә, ауылда нисек ҡаршы алырҙар, иң мөһиме — Ғәлиәбануу ни хәлдә икән?

Ныҡлап эңер төштө, ҡараңғыла һыуға төшөүе ҡурҡы-ныс. Йөрөлгән юлдан ситкә тайпылып соҡорға ҡолауың бар — уң яҡлап улар бигерәк тә тәрән. Бер аҙ көтөргә ҡарар иттем, бәлки, берәйһе СораҒолға барып һуңға ҡалып әйләнһә, оҙаҡламай килеп етмәй булмаҫ... Осраҡлы ылау-

ҙы күтәп ала алмағас, тәүәккәлләргә ҡарар иттем: салбар менән итектәрҙе сисеп вещмешокка һалдым, шинель салғыйҙарын күтәреп ҡайыш аҫтына тыҡтым. Күпергә тиклем йөҙ аҙым самаһы барырға кәрәк, күперҙең теге яғында ла шунса уҡ ара, ә даръя уртаһында ҡалған күпер — хәс тә яртылаш батҡан карап палубаһы.

Тәүҙә һыу һай ине, бара торғас, тәрәнәйә төштө, тубыҡтан ашты, бот төбөнә етте. Етмәһә, һыуыҡ, һыу төбөндә урыны-урыны менән тайғаҡ боҙ ҙа ята, саҡ йығылмай киләм. Бер аҙҙан һыу кендеккә етте, түшкә менде тигәндә, күпергә саҡ аяҡ баҫтым.

Күперҙә ҡоро таҡталарға ултырып саҡ ҡына хәл алдым да яңынан һыу даръяһына төшөп киттем. Табандарым менән таш, боҙ ҡатылығын тойоп киләм, ә һыу һаман тәрәнәйә бара. Тирә-яҡ ҡапыл ғына ҡараңғыланып китте, аҫтан ғына йөҙгән ауыр болоттар арҡаһында күк менән һыуҙы һис айырып булмай, ә ағым хыянатсыл рәүештә мине һаман уңға һөйрәй. Ниндәйҙер ярҙам көткәндәй, берәйһенең тәҙрәһенән ут күренмәйме тип, ваҡыт-ваҡыт ауыл яғына күҙ һалам, әммә бер ниндәй ҙә яҡтылыҡ шәйләй алмайым. Атлаған һайын һыу тәрәнәйгәндән-тәрәнәйә бара...

Хисаплауымса, күперҙән ярға тиклем араны яртылаш үткәс, һыу минең муйынға етте, шунан әллә ҡалҡыу бер урынды үттем, әллә соҡорға төштөм, абайламай ҡалдым — йәнә бер нисә аҙым атлағайным, аяҡтарым йылға төбөн бөтөнләй юғалтты ла ҡуйҙы. Тулҡын мине аҫҡа, апрель төнөнөң үлемесле һалҡын ҡосағына, ағыҙып алып китте. Күп тапҡырҙар үлемдең күҙенә ҡараған бар, әммә бындай ҙа ҡурҡыуҙы, бындай ҙа паникаға бирелеүҙе кисергәнем юҡ ине. Шуныһы үкенесле: Одер йылғаһын һалда кискәндә батманым — ә бит мина ямғыры аҫтында кистек — хәҙер килеп тыуған ауылымдың ситке өйөнән ике аҙымда ғына һыу төбөнә китергә тейешмен.

Бер айҙан, ташҡын йәйге ярҙарына ҡайтҡас, минең һәләмә һалдат кейемендәге күпкән мәйетемде, берәй ағас тамырына эләккән мәйетемде, ауылдан бер нисә саҡрым самаһы түбәндә табасаҡтар. Осраҡлы рәүештә табасаҡтар һәм, бәй, был Тәлғәт түгелме һуң, нишләп бында ята, ҡасан батҡан, бәләкәйҙән бәхете булманы инде меҫкендең, тип аптыраясаҡтар...

Ҡырҡ бишенсе йылда Одерҙы кисер алдынан целлофан тоҡсайға төргән ҡыҙылгвардеец кенәгәһе буйынса

беләсәктәр... Мин һалҡын һыуҙа йөҙә-бата ошоларҙы күҙ алдына килтергәндә тере ҡалыуға, йәшәүгә булған ынтылыш, ике аҙымда ғына Ғәлиә-Ғәлиәбаныуҙың булыуы (уны иртәгә күрәсәкмен) миндә йыртҡыс уҫаллығы уятты — мин ҡапыл үкереп ебәрҙем, ҡаты итеп һүгендем һәм йән асыуына йөҙөргә керештем. Юҡ, Яйыҡ, мине йота алмаясаҡһың, мин йөҙөп сығасаҡмын барыбер, мине унда Ғәлиә көтә!.. Шинель аҫҡа һөйрәй, йөҙөргә ҡамасаулай, һыуҙың боҙ һалҡынлығы тын алыуҙы быуа, хәлде ала... Ниһайәт, ҡул һыу өҫтөнә сығып торған ҡыуаҡ осона ҡағылды, мин шуға тотондом да бар көсөмә алға тартылдым. Йәнә бер нисә ынтылыштан һуң аяҡтар ҡатыға тейҙе, килә-килә һыу яйлап һайыға башланы, унан сығып илле аҙым самаһы атлағайным, кемдеңдер кәртәһенә килеп төртөлдөм.

Шинелдән шабырлап һыу аға, салбар менән итектәр вещмешокта, билдәле, улар ҙа һыу, баштағы бүрек кенә ҡоро. Кейенеп тороуҙан фәтүә юҡ. Ҡалтырана-ҡалтырана ауыл буйлап барыу ҙа килешмәҫ, саҡрымдан ашыу ара — өләсәй йортона еткәнсе тамам ҡатыуың бар. Иң яҡшыһы — ауыл осондағы Абдрахмановтарҙың ишеген шаҡыу. Моғайын, йоҡламағандарҙыр.

Һыу, шыйыҡ батҡаҡ кисеп мин Абдрахмановтар йортона илтеүсе урамға сыҡтым, йорттарын таптым, ҡапҡаларын асып ихатаға индем. Иҫке йортта ут та, тауыш-тын да юҡ. Солан ишеген дөбөрләтәм, шунан сыҡмайҙармы тип тыңлап торам, унан тағы ла дөбөрләтәм. Сыҡмағастары, тәҙрәләрен шаҡырға тура килде. Йәнә тауыш ишетелмәй. Ныҡ йоҡлайҙар. Нығыраҡ шаҡыным. Ниһайәт, йоҡоло ҡатын-ҡыҙ тауышы яңғыраны:

— Кем?

— Миникамал, иҫәнме, ас. Был мин, Тәлғәт.

— Төн уртаһында ниндәй Тәлғәт ти ул? Нимә кәрәк?

— Ғәйнуллин Тәлғәт. Армиянан ҡайтып киләм. Яйыҡты кисеп сыҡтым, һыуландым. Ас әле, йылынып сығайым исмаһам.

Әллә аптырауҙан, әллә асыуҙан аңлашылмаған мөгөрләү. Эстә кәрәсин шәме ҡабынды, мин ишеккә килдем. Һәм бына ялан аяҡ, еүеш шинелдә, трусик менән генә ҡатын-ҡыҙ алдында баҫып торам. Абдрахманова Миникамал ябыҡҡан, элекке матурлығы һаҡланһа ла, йөҙө ҡартайған, кипкән, йонсоған.

Миникамал менән Мөбәрәк минең класташтар ине. Миникамал ике-өс йәшкә олораҡ, үҙ тиҫтерҙәренән ике

йыл ҡалып уҡыны, сөнки ҡышын мәктәпкә йөрөргә аяғында булманы. Ә Мөбәрәк, оҙон кәүҙәле һары малай, минең көндәш ине. Миникамал менән Мөбәрәк Ғәлиә, уның һеңлекәштәре менән гел бергә булдылар, бергә һыу инделәр, еләккә йөрөнөләр. Мин Ғәлиәне Мөбәрәктән көнләшә лә торғайным.

— Танымaным бит, нисә йылдар үтте? Ете йыл, — ти Миникамал. Оҙаҡ көттөргәненә уңайһыҙланғандай итә. — Тауышың таныш та һымаҡ. Шинелеңде бынауында эл, — ул ҡайҙандыр ҡоро кейемдәр килтереп сығарҙы, Мөбәрәктекелер инде. — Кейен. — Үҙе түр яҡҡа инеп китте, ҡалған хәбәре шул яҡтан ишетелде. — Һине бит үлгән тигәйнеләр, похоронкаң килде бит.

— Күреп тораһың, мин тере, — тип яуапланым мин. — Ә Мөбәрәк ҡайҙа?

— Мөбәрәк армияла. Быйыл ҡайтырға тейеш.

Мейес янындағы епкә үҙемдең һыу кейемдәрҙе элеп, күп йыуыуҙан иҙрәп бөткән, иҫке, әммә таҙа ҡоро кейемдәр кейеп алдым. Ҡулдағы трофей сәғәт Шепетовка ваҡытын күрһәтә. Ваҡыт аралығын мин белмәй инем, шунлыҡтан Миникамалдан былай тип һораным:

— Нишләп улай бик иртә ятаһығыҙ?

— Нисек иртә? Оноттоңдамы ни, ауылда иртә ятабыҙ, иртә торабыҙ инде. Кәрәсин юҡ.

Миникамал самауыр өргән арала мин уның ярлы ғына көнитмешенә күҙ һалдым. Ылйырап бөткән балаҫ йәйелгән һике, ҡаҙанлы мейес, тәҙрәләргә марля эленгән. Өйҙән тик башҡорт йорттарына ғына хас еҫ килә. Әллә әсегән ҡатыҡ, әллә тире, төтөн, ҡоро утын еҫе... былар бөтәһе лә минең танауға, минең күңелгә ифрат яҡын, сөнки ул бала сағым менән бәйле, атайым, әсәйем, бәләкәй туғандарым менән бәйле. Хәтирәләргә төшөп ултыра торғас, йөрәк сәнсеп ҡуйҙы...

Һуңынан сәй эстек. Һөт һәм ҡаймаҡ менән. Икмәк ҡаты, эре ондан бешерелгән, ниндәйҙер үлән ҡушымтаһы ла бар. Миникамал ауыл хәлдәре, ауыл яңылыҡтары хаҡында һөйләне: кем һуғышта үлгән, кем яраланып ҡайтҡан, кем сирләп йәки ҡартайып вафат булған. Рудникта йәшәгән һеңлекәшем кейәүгә сыҡҡан да энемде эйәртеп Урта Азияға киткән икән. Уныһы минең өсөн яңылыҡ ине. Һуғыш йылдарында кешеләр ныҡ асыҡты, ти Миникамал, булған ғына мал-тыуарҙарын һуйып ашап бөткәндәр, хатта эттәргә лә барып еткәндәр. Фәрит, һабантуйҙарҙа бил

бирмәгән бәһлеүән, аслыҡтан аҡылынан шашҡан да бәләкәй ҡыҙын һуйырға маташҡан. Һиҙенеп ҡатыны өҫтөнә барып сыҡмаһа, меҫкен ҡыҙҙың ғүмере өҙөлә яҙған. Ҡышты саҡ сыҡҡан бала-саға йәшел үлән күренеү менән туғай-яланға, тау битләүҙәренә ташланған, йыуа, ҡуҙғалаҡ, ҡымыҙлыҡ, айыу көпшәһе ашаған, һарына, дегәнәк тамыры соҡоған...

Туҡта, был нисек була инде ул? Ҡырҡ бишенсе йылда беҙ Германияға бәреп ингәс, юлда осраған бар нәмәне яндыра, үртәй Эльба йылғаһына ынтылғанда таҙа, бөхтә, туҡ немецтарҙы күрҙек, әммә асыҡҡандарын осратманыҡ. Беҙҙең һымаҡ уҡ дүрт йыл һуғышҡан Германияла аслыҡтан үлеүсе булмағандыр. Крәҫтиән хужалыҡтарында байтаҡ миҡдарҙа аҙыҡ-түлек табып була ине, ҡош-ҡорт, мал-тыуар күп ине; беҙҙең һалдаттар һыйыр һауҙы, сусҡаларҙы автоматтан атып йығып тунаны, һуңынан, ярым ас армия бөтәһен дә һепереп алып бөткәс, аслыҡ башланды. Ҡыҫҡаһы, ярты донъяны ҡанға батырған Адольф Гитлер үҙенең халҡын аслыҡтан яфаламаны. Мин һуғышты тылда йөрөп үткәргән һәм, беҙ немецты колхоздар арҡаһында ғына еңдек, ә немецтар бөтә донъяны таланы, баҫып алған илдәренән икмәк, колбаса, хатта ҡара тупраҡ сығарҙы, тип тылҡыған ҡайһы берәүҙәргә, беҙҙең ҡара тупраҡлы, ҡара булмаған тупраҡлы баҫыуҙарға бер нисә Германия менән ул буйһондорған илдәрҙе бергә урынлаштырырға мөмкин дәһә, тип иҫбатларға тырышам. Шулай икән, беҙҙең юлбашсылар үҙебеҙҙең икмәкте ҡайҙа ҡуйҙы һуң? Бәлки, ул булмағандыр ҙа? Запасыбыҙ булмағандыр, тим. Армияны туйҙырыр өсөн колхоз һарайҙарынан ашлыҡты һуңғы бөртөгөнә тиклем алып китеп бөттөләр. Беҙ фронтта етер-етмәҫ булһа ла паек алдыҡ, ә тылдағы беҙҙең ҡусты-һеңлекәштәр аслыҡтан ҡырылған.

Был фекерҙең барыһы ла әле, ошо әйберҙе яҙған саҡта башҡа килде, ә ул саҡта, ҡырҡ һигеҙенсе йылда, ауыл осондағы йортта Миникамал менән сәй эскәндә, бындай һығымталар яһауҙан, әлбиттә, алыҫ инем. Миникамалдың күңелһеҙ хәбәрен тыңлағанда Ғәлиәбаныуҙы бер минутҡа ла иҫтән сығарманым. Һорарға ниәтләнәм, тик ҡыйыулыҡ етмәй ҙә ҡуя, сөнки тыуған ауылыма ҡайтыуымдың, яҙғы йылғаны кисеп сығыуымдың бушҡа икәнлеген ишетеүҙән ҡурҡам. Ауылда булмаһа йәки кейәүгә сыҡһа — бөттө, минең өсөн йәшәүҙең мәғәнәһе ҡалмай.

Әммә күңелһеҙ хәбәрҙе барыбер ишетергә тура килде.

— Һис онота алмайһың, ә? Ул бит ҡырҡ өсөнсө йылда уҡ Закирға кейәүгә сыҡты.

Был хәбәрҙе ишеткәс, бейек ярҙан ҡолап төшкән кеүек булдым, дөрөҫөрәге, төшөп барам, төшөп барам, үҙем ауыҙ асып һис өндәшә алмайым. Байтаҡ ултырып аңыма килгәс кенә саҡ һорай алдым:

— Ниндәй Закир?

— Налог агенты ине. Бронь буйынса һуғышҡа бармай ҡалды. Ауылдар буйлап темеҫкенеп йөрөнө инде шунда. Ҡорһағы менән ер һөрөрҙәй булып тырышты. Кырандасҡа ултырып килә лә әле береһенә тентеү ойоштора, әле икенсеһенә, налог түләмәгән өсөн сепараторҙарҙы алып китә. Ҡоҙаштан ул. Ғәлиә күҙенә салынғайны, көн һайын почтаға килер булып китте. Ул заманда Ғәлиә почтала эшләй ине бит. Ул тегенән көлә, мыҫҡыл итә, тыл ҡомағы, ҡара сурнай, тип мыҫҡыллай. Ғәлиә һуғышҡа тиклем үк Шәрифуллин Бәхтиәр менән йөрөгәйне, унан ҡара ҡағыҙ килгәс, әлеге шул Закирға сығырға мәжбүр булды. Нишләһен, зитына тейҙе тамам. Хәҙер ике балалары бар.

Бүлмә таҡтаһы артына яттым да, үлтергес арыуыма ҡарамаҫтан, тыуған ауылымдағы беренсе төндө бөтөнләй йоҡоһоҙ үткәрҙем, дөрөҫөрәге, өҙөк-йыртыҡ йоҡланым, һаташтым, баҫлыҡтым, уянғас төрлө уйҙарға баттым...

Бәхтиәр — килмешәк татар Ямалетдиновтың оҙон кәүҙәле, аҡһыл сәсле сибәр улы. Ҡайҙа инде ул миңә, бәләкәй кәүҙәле йолҡошҡа, шиғырҙар яҙып маташҡан һөнәрһеҙгә, уның менән ярышыу! Сит тарафтарҙа иптәштәремдең мәйеттәрен ҡалдыра-ҡалдыра мин Ленинградтан Эльбаға тиклем барғансы, Закир тылда ултырған, Ғәлиәбаныу менән йоҡлаған. Ә мин окоптарҙа, привалдарҙа серем иткәндә Ғәлиәбаныу төшкә керҙе лә керҙе. Бөтәһен дә алдан белгән булһам, был ҡәҙәре борсолмаҫ та инем. Ах, ниңә генә ҡайттым икән? Мәскәүгә, Жмыхов янына киткән булһам, минән дә аҡыллы кеше булмаҫ ине. Ә бит сәй эсә башлағанға тиклем өмөтләндем, хатта ышандым: иртәнсәк уны күрәм, ул мине, гвардия рядовойын, «Дан» ордены кавалерын, Европа буйлап йөрөгән, немец сибәрҙәрен татыған һәм ауылда беренсе кейәү хисапланыр егетте, күрер ҙә ҡосағыма ташланыр, тип уйлайым бит әле. Йәнәһе, мин уны ауыл Советына алып барам, яҙылышабыҙ, унан мунсала сабынып, йыуынып сыҡҡас, иҫ киткес ләззәтле төн кисерәбеҙ... Килеп сыҡманы, яҙмышыма

яҙманы. Үкенесле. Асыу йөрәкте өтә, башҡа иҫәр уйҙар килә: Жмыховҡа пистолетты бирмәҫкә кәрәк булған. Атып үлтерер инем мин ул Закирҙы. Төрмәнән дә алыҫ ебәрмәҫтәр ине әле.

Мәскәүгә юлланырға тура килер. Тик нисек, нимәгә? Трофей сәғәтте һатырмын. Ә ошо өйҙә ҡалғанда? Йәғни Миникамалға өйләнергә лә колхозсы булып ошонда йәшәргә. Хәйер, дөрөҫөн генә әйткәндә, колхоз ҡамытына һис егеләһе килмәй. Мин бит — шағир. Ғәлиәгә өйләнергә лә төнгө урамдар буйлап йөрөгән, йондоҙҙарға ҡарап шиғырҙар яҙған әҙиптәр ише мин дә Өфөлә йәшәргә теләгәйнем. Бөйөк шағир булып булмаһа, әллә ни оло бәлә юҡ, ер йөҙөндә шиғыр яҙмаған миллиондарса кеше йәшәй һәм яҙа алмағанына һис зарланмай. Ҡыҫҡаһы, шағир булмаһаң да, колхозсы булырға тейешһең!

Хәҙер, үҙемдең ҡайтыуым тураһында яҙғанда, Миникамалға өйләнеү тураһында уйлап йоҡоһоҙ ятҡанда мин шундай һығымтаға киләм: ул Ғәлиәнән яҡшыраҡ та, матурыраҡ та булған бит. Көслө, оҙон кәүҙәле, ике ҡалын толомло, матур күҙле, һутлы ҡалын иренле, йомшаҡ тауышлы, ҡабаланмай ғына һөйләшеүсе ҡатын ине. Мин уға, һин миңә оҡшайһың, мин һиндә ҡалам да ҡуям, тип әйтә ала инем. Әгәр ризалашһа, тормошобоҙ насарҙан булмаҫ ине. Тик быны әйтмәнем, әйтә алманым, яратмағандан түгел, йәшәй-йәшәй яратыр ҙа инем, эш олораҡ булыуында ла түгел — ул минән өс йәшкә өлкәнерәк — әйтмәүемдең сәбәбе шул: быларҙың барыһы ла төнгө уйҙар, төнгө хыялдар ғына ине.

Иртәнсәк, кибеп тә етмәгән кейемдәремдә кейеп (ҡыҙылармеец кенәгәһенә, яраланыуым тураһындағы справкаға һыу теймәгәйне) мин ҡапҡанан сыҡтым.

Тыуған ауылым. Бала саҡ иленең татлы өмөт-хыялдары тоҡанған, үҫмер саҡ мөхәббәтен татыған ауылым. Мин бында ете йыл булманым. Сит яҡтарҙа йөрөгәндә ауылды өҙөлөп һағындым, тип әйтә алмайым, ошо йорттарҙы, уларҙа йәшәгән кешеләрҙе лә һирәк иҫкә ала торғайным. Ялан-туғайҙарҙың сәскәгә төрөнөүе, йәшенле ямғырҙар, урам саңының үҙенә генә хас еҫе күберәк иҫтә ҡалған. Ә ҡыштан бер генә ваҡиға иҫтә. Беҙ ҙур ат санаһын тауға һөйрәп мендерҙек тә унлаған малай, ҡыҙ түбәнгә шыуып төшөп киттек. Ҡолаҡ төбөндә ел һыҙғыра, сана табаны шығырлай, үҙебеҙ көләбеҙ. Бара торғас, көрткә сумдыҡ. Ҡар араһында мин үҙемдең эргәлә генә Ғәлиәне күрҙем —

ҡар бөртөктәре менән ҡапланған матур йөҙө, мамыҡ шәле ситенән сыҡҡан ҡоңғорт сәстәре шул тиклем яҡын ине. Ул башҡалар кеүек кинәнеп көлә. Ошо мәлендә мин уны нисек ярата инем!

Һуңынан, байтаҡ йылдар үткәс, ҡыуаныслы ғәжәпләнеү менән мин Чеховтың «Шуточка» тигән хикәйәһен уҡыным. Унда бер үсмер беҙҙең кеүек сана менән тауҙан шыуып төшөп килгән саҡта ҡыҙға, мин һеҙҙе яратам, ти. Ә мин быны шаярып та әйтә алмаç инем. Мин уның һипкелле йөҙөн, шәл ситенән сыҡҡан сәстәрен, көлгән ирендәрен яҡындан күрә алыуыма ла бәхетле инем. Ҡайҙа инде ул Чехов геройы һымаҡ, мин һине яратам, тип әйтеү!..

Батҡаҡлы урам буйлап атлағанымда мин, башталы тимер менән ябылған йорттарҙы, төҙөк немец ауылдарын, тигеҙ, төҙ урамдарҙы күргән кеше, үҙемдең ауылдың меçкенлеген, ташландыҡлығын күреп аптыраным. Мин һуғышҡа тиклем иғтибар итмәгән нәмәләрҙе шәйләнем. Бәлки, ауыл ул саҡта был ҡәҙәре емерек тә булмағандыр. Йорттар үҙҙәренең таш йәки балсыҡ нигеҙҙәрен емереп сүккән, ергә һеңгән, ҡыйшайған. Ҡапҡалар, кәртәләр йығылған, ҡайһы бер йорттарҙа улар бөтөнләй юҡ, күрәһең, утынға яҡҡандарҙыр. Ә бәҙрәфтәр күренмәй, кәртә, һарай артына йөрөй торғайнылар элек, әле лә шулай йөрөйҙәрҙер, ахыры. Ауылда ҡалһам, иң беренсе сиратта бәҙрәф эшләйәсәкмен, тип ҡарар иттем мин. Нисек шулай ғүмер баҡый лапаç артына йөрөргә мөмкин? Бөтә ихаталар, урамдар ҡар аçтынан сыҡҡан тиреç өйөмдәре менән тулы. Ҡойолар юҡтыр, ахыры. Мин немец ауылдарында күргән колонкалар тураһында әйтеп тораһы ла түгел, эсер һыуҙы һаман йылғанан ташыйҙарҙыр.

Ваҡ ямғыр һибәләгән апрель иртәһендә урамда кеше юҡ. Ҡайһы бер тәҙрәләрҙә генә ҡатын-ҡыҙ йөҙө күҙгә салынып ҡала. Кемдеңдер улы армиянан ҡайтып килә, тип уйлайҙарҙыр. Ана, тәҙрә быялаһына минең ике туған Ғәйникамал өләсәй ҡапланды. Уның оло ағаһы Зәйнетдин һуғыштан ҡайта алдымы икән? Мине таныманы шикелле. Тәҙрә рамдарында — һуғыштан һуңғы осорҙағы һағышлы йөҙҙәр. Быны уҡытыусы Зиннурҙың өйө. Ҡасандыр тәҙрәлә сағылып ҡалған Ғәлиәнең йөҙөн күрһәм, минән дә бәхетле кеше булмай торғайны. Хәҙер ул ауылда юҡ, кейәүгә сығып, икенсе ауылда йәшәй, ир ҡосағында иркәләнә...

Бына мин тыуған һәм ун ике йәшкә тиклем генә йәшәгән йорт. Таш кәртә емерелгән, ел ҡапҡа ерҙә ята, ҡасан-

дыр һалам менән ябылған аҙбар бөтөнләй ҡыйыҡһыҙ. Йәй көндәрендә беҙ шунда йоҡлап йөрөй торғайныҡ. Һайғауға ултырып тауыҡтар төнәй, беҙҙең өҫкә тиҙәктәре төшә торғайны. Ситән аҙбар артындағы ҡар өйөмө һаман ирреп бөтмәгән, ихатала — үткән йылғы сүп үләндәренең ҡороған һабаҡтары, тимәк, бында бер кем дә йәшәмәй. Сит яҡтарҙа миңә йыш ҡына ошо тыуған ихата төшкә керә ине, имеш, арт яҡлап ихатаны сүп-сар баҫа, ул өй түпһәһына ҡәҙәр килеп етә, мин ошо сүп-сарҙы арт яҡҡа көрәйем, ә иртәгәһенә ул яңынан ихатаны тултыра, мин йәнә көрәйем, ул яңынан тула, мин йәнә ырғытам... Ул хәшәрәттән мин бер ҡасан да ҡотола алмам кеүек... Урамға сыҡҡан тәпәш, бәләкәй генә ике тәҙрә, ҡорғандары юҡ, уларҙан ҡараңғылыҡ, һағыш ҡарай. Эскә күҙ һалам: мейес ағарып ултыра, һике булған ерҙә ашыҡ-бошоҡ ҡаҙаҡланған өҫтәл, эскәмйәләр, стенаға ике ҡамыт эленгән. Колхоздың сбруйҙары ҡуйылған, ахыры.

Үҙемдең аймаҡтан үттем дә Мәсеттауға күтәрелдем. Тау битендә ҡасандыр мәсет була торғайны, утыҙынсы йылдарҙа манараһын бысып төшөрҙөләр ҙә клуб яһанылар. Тау башынан ауыл ус төбөндәге кеүек. Тәпәш һоро күк аҫтында, биттәрендә йолҡош-йолҡош ҡар өйөмдәре ятҡан ҡалҡыулыҡтар араһында оҙон ҡыштан арыған ауыл ирреп бөтмәгән ергә йәбешкән төҫһөҙ сүп-сар өйөмө һымаҡ. Башҡа сәйер генә бер уй килде: ел иҫкән теге яҡтан ауылға ут төртөргә лә нигеҙенә тиклем яндырып бөтөрөргә һәм немецтарҙыҡы кеүек тимер менән ябылған яңы кирбес йорттар төҙөргә!

Өҫтән мин өләсәйем йортон таптым. Бәләкәй тәҙрәләре ергә тейеп торғандай, башына кәҫ йәйелгән, йәйҙәрен сүп үләне баҫҡан солан. Колхоз ойошторолғанға тиклем өләсәйем тыҡрыҡ яҡлап ике өй аша ғына алты мөйөшлө, тимер менән ябылған ҙур йортта йәшәне. Әсәйем яғынан олатайым герман һуғышынан ҡайтҡас үлгән (былары мин тыуғансы булған хәлдәр), бай кеше булған. Мин таҡта менән ябылған лапаҫ, һарайҙарҙы күреп өлгөрҙөм. Уларҙан серле ҡараңғылыҡ бөркөлә, ҡоро бесән еҫе сыға торғайны. Өн менән тулы ларҙар, ҡаҙ түшкәләре эленгән амбарҙар ҙа хәтерҙә. Утыҙынсы йылда өләсәйҙе кулак тип иғлан иттеләр, алты стеналы өйҙө урталай бысып, бер яғын ҡайҙалыр алып киттеләр, амбарҙарҙы колхоз складтарына ҡуштылар, өләсәйгә «Зингер» машинаһы ғына ҡалдырып,

ваҡытты һанап һуға, иҙәнгә ултыртыла торған ҙур сәғәтте идараға алдылар. «Зингер» — минең төп уйын ҡоралым.

Оло улы, Мәхмүт ағай, кәләш алғас, яртыһы бысылған өйҙөң яртыһын өләсәй уға бирҙе, үҙе бәләкәй ҡыҙы, йәғни минең апай менән әлеге бәләкәй өйгә күсте.

Кулак тип мөлкәтен талау-туҙҙырыу, көн уртаһында тотоп талаған кеүек, ҡартайған өләсәйҙең тормошон тамам һындырҙы, күңелен ҡатырҙы, йөрәген үҙен бөлдөргән кешеләргә ҡарата күрә алмаусылыҡ менән ялманы. Асыулы, ярһыу саҡтарында ул дошмандарын ҡарғаны, ниндәйҙер бер ҡағиҙә менән ҡарғаны. Ағарған сәстәрен аҡылдан яҙғандағы ише туҙҙырып, күҙҙәрен алартып ҡурҡыныс тауыш менән мөлкәтен туҙҙырыусыларҙы ҡарғаны, әйтерһең дә, ҡаты ҡарашын улар күрә, ҡарғышын ишетә инде. Аллаһы тәғәлә ишеткәндерме, юҡмы, белмәйем, шулай ҙа тегеләрҙең береһе лә бәхетле йәшәй алманы.

Өләсәйҙең ҡанһыҙлығынан, ҡатылығынан мин дә йонсоном. Ағыулы битәрләүе менән ул минең башты бер мәл саҡ элмәккә тыҡманы. «Ялҡау, әрәмтамаҡ, кешеләрҙең балалары балалар ише, ә һин тығынырға ла... ғына беләһең...» Ул минән, етемлеген тик уйнағанда ғына оноткан ун өс йәшлек малайҙан, нимә теләгәндер, нимә өмөт иткәндер, белмәйем. Мин аҙбар эсенә керҙем дә бау алдым, бер осон элмәкләнем, икенсе осон түбә кәртәһенә бәйләнем һәм асылындым. Асылыныу бер нисә секунд ҡына дауам итте, муйын түҙеп торғоһоҙ ауырта башлағас, түҙмәй ҡыймылдағайным, шыйыҡ һыйыр буғына килеп төштөм: бау серек булып сыҡты — өҙөлдө.

Һәм бына ҡырҡ һигеҙенсе йыл мин Мәсеттауҙың башында өләсәйем йортона ҡарап торам. Ул моғайын да өйҙәлер, уның аң-күңелендә мин үлгәнмен, похоронка алған, мине оноткан. Бына хәҙер тауҙан төшәм дә ҡапҡанан ихатаға барып керәм.

Бала саҡтан таныш ел ҡапҡа сереп йығылған, үҙем яһап ҡуйған сыйырсыҡ ояһының төбө төшкән. Солан түбәһе тишек. Үлектәр араһынан яңынан тыуып, мин өләсәйем алдына баҫтым. Ә ул бер ҙә аптыраманы, иҫе китмәне, хатта шатланманы ла, әйтерһең дә, мин өйҙән кисә генә сығып киткәнмен. Ниндәйҙер битарафлыҡ менән ялҡау ғына һорап ҡуйҙы:

— Тәлғәт, һинме ни? Ә һиңә ҡағыҙ килде.

— Контузия алғас, иҫһеҙ ятҡанмын. Үлгән, тип уйлағандарҙыр, — тип яуапланым мин. — Ә ҡағыҙ ҡайҙа?

Бала саҡтан уҡ күреп үҫкән сәй һауытынан ул бер ҡағыҙ сығарҙы. Һоро ҡағыҙ битенә зәңгәр ҡара менән «Рядовой Ғәйнуллин Тәлғәт немец-фашист илбаҫарҙары менән алышта батырҙарса һәләк булды» тип яҙылғайны. Батырҙарса һәләк булды, тигәнме? Мин ҡасан улай батыр һуғыштым һуң әле? Мин бит һуғышҡа кергәндә һәр ваҡыт ҡурҡа торғайным, бигерәк тә миналар шартлағанда... Ҡурҡыу тигәнем һөжүмгә күтәрелгәндә генә юғала ине. Мине немецтар үлтермәгән, ә үҙебеҙҙекеләр юҡҡа сығарып ташлаған булып сыға түгелме? («Дан» орденын мин икенсе һуғышта, икенсе полкка күскәс, йәғни «үлгәс» алдым.)

Армиянан ҡайтҡан ейәненең, дөрөҫөрәге, теге донъянан пәйҙә булған ейәненең тамағын туйҙырырға кәрәк ине. Өләсәй самауырға күмер тултырып уны өргәнсе, мин ҡайттым, мин өйөмдә, тигән уй-тойғоларға сумып ултырҙым, шуларҙы үҙемә һеңдерергә, шуға ышанырға тырыштым. Бала саҡтан таныш стеналар, шул уҡ мейес, мөйөштә шул уҡ «Зингер» машинаһы, әммә әйләнеп ҡайтҡан, йәшәргә ҡалырға тейеш булған өй тойғоһо күңелдә һис юҡ. Мин үҙемдең өләсәйҙә йәшәй алмаҫымды аңланым, ғөмүмән, ауылда бөтөнләй ҡала алмам, ахыры.

Сәй эскәндә (таба икмәге, һөт, ҡаймаҡ) мин өләсәйҙән үҙебеҙҙең туғандар, күршеләр хаҡында һораштым. Хәҙисә апай шофер Шайморатҡа кейәүгә сыҡҡан икән, МТС-та йәшәйҙәр, Минзифа апай ирен көтөп ала алмаған — ҡара ҡағыҙ килгән — һаман да шул Ҡандыбулаҡта. Үгәй ҡыҙы уны ҡыуа икән. «Мин ҡайт тим, ә ул һаман нимәгәлер өмөтләнә». Бергә уйнап үҫкән иптәштәр Ғәли, Вәкил яу яландарында ятып ҡалған. Талип иҫән-һау ҡайтҡан, районда ниндәйҙер конторала ултыра икән. Башҡа хәбәрҙәр, башҡа яңылыҡтар...

Иртәгәһенә күк йөҙө һоро болоттарҙан әрселде, ҡояш күренде, йылыта башланы. Мин еүеш сепрәк менән итектәрҙе таҙарттым, шпорҙарҙы әләктерҙем, орден, миҙалдар күренһен өсөн шинелде киймәй, ауыл буйлап яланбаш сығып киттем. Бысраҡ иҙелеп ятҡан урамдан, ағас өйҙәрҙең дымлы нигеҙҙәре янынан парад формаһында фронтовик, гвардия рядовойы Тәлғәт Ғәйнуллин атлай. Эх, Ғәлиәбаныу тормошҡа сыҡмаған булһа йәки, һис юғы, үҙебеҙҙең ауылда йәшәһә икән! Урамда тап иткән кешеләр, зәғиф, яралы фронтовиктар янына туҡтаным, барыһының да

ҡараштарында һағыш, һурылған яңаҡтарында һуғыш шәүләһе. Минең орден, миҙалдар менән бында бер кемде лә аптыратырлыҡ түгел, ә бына ирҙәрен, егеттәрен көтөп ала алмаған ҡатындар, ҡыҙҙар мине күреүгә шатланған да һымаҡ, шул уҡ ваҡытта ҡараштарында көнләшеү ҙә бар: улар миңә, беҙҙең ирҙәр баштарын һалды, был иҫән-һау ҡайтҡан, хатта сыйылған ере лә юҡ, белергә ине, орден-миҙалдарын ниндәй батырлыҡтары өсөн бирҙеләр икән, тигән тойғо менән ҡарайҙар һымаҡ.

Ауыл буйлап йөрөгән һайын клубҡа кереп сыҡтым (элекке кеүек үк эсе бысраҡ, саң, тәмәке һаҫығы), магазинға һуғылдым (араҡы менән мискәләге кәрәсиндән башҡа бер нәмә лә юҡ) — юҡҡа ҡайттым, ахыры, тигән тойғо көсәйә генә барҙы. Һуғышҡа тиклемге ауыл, әйтерһең дә, икенсе күк аҫтында, бала саҡтың саф һауаһы солғанышында ҡалған. Бер яҡтан тауҙар араһындағы туғайға, икенсе яҡтан Яйыҡ йылғаһына йәтеш кенә һыйынып ултырған ул ауыл минең өсөн бөтә ғаләм үҙәге була торғайны. Ә ошо ғаләм, ошо донъя уртаһында — аҡ йөҙлө, һары сәсле ҡыҙ...

Һәм бына... ул ғаләм дә, ул ауыл да, ул ҡыҙ ҙа юҡ. Ул теге тау артында, икенсе ғаләмдә, икенсе донъяла, уның ҡатын-ҡыҙ нәзәкәтенә, минең өсөн сер, мөғжизә булған нәзәкәтенә, ниндәйҙер Закир хужа, уның бөтә матурлығы менән Закир ләззәтләнә. Алыҫтан булһа ла күрәһе ине — хәҙер ниндәйерәк икән Ғәлиәбаныу?

Төшкөһөн өләсәйем ниндәйҙер ярманан башҡа бер нәмәһе лә булмаған өйрә ашатты. Ул ҡарҙан әрселгән яландан башаҡ йыйған икән, шуны киптергән дә ҡул тирмәнендә тартҡан. Быға тиклем дә шуның менән туҡланған, миңә лә шуны бешерҙе.

Көрпә ашы, ҡатыҡ, иҫке таба икмәге менән туҡланып (ҡай саҡ туған-тыумасаларға, һуғыштан ҡайтмаған йәки һалдат хеҙмәтен тартҡан иптәштәрҙең ата-әсәләренә һуғылып, уларҙың ҡойто ғына ризыҡтарын бүлешәм) өләсәйҙә бер аҙна йәшәнем. Һәм эске бер һиҙенеү менән генә түгел, үҙемдең бөтә булмышым, бөтә күҙәнәктәрем менән өләсәйемә артыҡ тамаҡ икәнемде аңланым. Етмәһә, ул минең бала саҡта әйткән, әрләгән һүҙҙәре, шул тауышы менән һөйләшә башлаған да кеүек. Уның өсөн мин, күрәһең, һаман да шул елғыуар, ашарға һәм... белгән ялҡау малай.

Бер көн ул мине тамам аптыратты.

— Идараға бар, әҙерәк он яҙып биреүҙәрен һора. Һиңә, һалдат кешегә, тейеш. Һине ашатыр нәмәм юҡ.

Нишләп мин, Ғәйнуллин, 5-се гвардия кавалерия дивизияһының гвардия рядовойы, «Дан» ордены кавалеры, Эльба йылғаһында ат һуғарған һалдат, колхоздың ниндәйҙер һауалы түрәһенә баш эйеп бер нисә килограмм он өсөн йөҙ һыуымды түгергә тейеш һуң әле?

Асыҡһам асығам, әммә бараһым юҡ! Сәғәтте һатам да Жмыховҡа китәм. Мәскәүгә китеү килеп сыҡмаһа, Белоретка юлланырмын, заманында мин унда ФЗО-ла волочильщик һөнәренә уҡығайным. Моғайын да, СПКЗ-ға ғына алырҙар, дөйөм ятаҡтан урын да бирерҙәр.

Өләсәйҙә башҡаса ҡалырға мөмкин түгеллеген аңлағас, мин идараға, дөрөҫөрәге, ауыл Советына киттем, әммә барыуҙың маҡсаты он һорау түгел, ә икенселә ине. Ас ауылдан ысҡынып булмаһа, көн итерҙәй ҡыйыҡ тураһында уйларға кәрәк ине. Атай йортон һуғышҡа тиклем үк Рамаҙан ағайға һатҡайным. Был йортта, күреүемсә, сбруйҙар. Өйҙө кире ҡайтарып алып булмаҫмы икән?

Уңған гимнастеркаһына һыңар миҙал таҡҡан ауыл Советы рәйесе Һибәтулла ағай яһалма ҡыуаныс менән ҡаршы алды, ике ҡуллап күреште, тегене-быны һорашҡан булды, ниәтемде һөйләп биргәйнем, йөҙөндәге яһалма йылмайыуы шундуҡ юғалды.

— Бәй, һин бит йортоңдо Рамаҙанға һаттың. Ҡатыны менән һөйләшеп ҡара һуң.

Рәйестең һүҙенән Рамаҙан ағайҙың һуғыштан ҡайтмағанын аңланым.

— Унда бит ҡамыт-ыңғырсаҡ тултырылған.

— Ҡамыт-ыңғырсаҡ мәсьәләһе буйынса Ғәбделғәжәнгә мөрәжәғәт ит. Военкоматта теркәлдеңме?

— Юҡ. Мин китермен тим.

— Ә һин китмә. Колхозға эшсе ҡулдар бик кәрәк. Өй һалып инерһең, кәләш алырһың. Хәҙер беҙҙә ҡыҙҙар күп, любойын һайлап ал, — Һибәтулла ағай үҙенең һүҙенән үҙе ҡәнәғәт булып көлдө.

Рамаҙан ағайҙың ҡатыны миңә атай йортонда ваҡытлыса йәшәргә рөхсәт итте. Колхоз рәйесе Ғәбделғәжән, ярар, сбруйҙарҙы ат һарайына алырҙар, хәҙергә ял ит, сәсеү башланғас, эшкә сығырһың, тине һәм аванс рәүешендә биш килограмм он яҙып бирергә ҡушты. Мин уға китеүем тураһында әйтеп торманым, башты иҫәргә һалдым да «хәйер»ҙе барып алдым. Берлинды ҡамауҙа ҡат-

нашҡан, Эльба йылғаһына еткән, инглиздәр менән ораш-ҡан кешегә биш килограмм он бирәләр. Эс көтөрләй, ғәрлек килә, тик бер нәмә лә эшләп булмай...

Һәм бына мин, бала саҡтан байтаҡ йылдар үткәс, йәнә атай йортонда. Беҙҙең өҫтәл менән эскәмйәләрҙе алып киткәндәр, һикенең таҡталары соланға сығарып ҡуйылған, индереп яңынан ҡағырға тура килде. Мейес, Аллаға шөкөр, имен-аман, тик өй эсенән серек, ҡором, сей тире еҫе аңҡый.

Ҡыйшайған кәртә янында һаман эреп бөтмәгән ҡар өйөмө ята, көрт араһынан олатайҙың хан заманындағы һабан һаптары күренә, мин уны бәләкәй саҡтан бирле иҫләйем. Йәйҙәрен — ҡырағай сүп үләне араһында, ҡышын — ҡар аҫтында, ул мин үҙемде белә башлағандан бирле ошонда тора. Атайымдың ике тәгәрмәсле тимер һабаны бар ине, ә олатайҙың тимер төрәнле ағас һабанын ул ниңәлер ташламаны. Ындай һабан менән ерҙе бынан мең йылдар элек һөргәндәрҙер...

Өләсәйем һырыған юрған (минең атай-әсәйҙән ҡалған мөлкәттер, моғайын), мендәр, кейеҙ, сүлмәк, таба, иҫке самауыр бирҙе. Иҙәнде ҡырып йыуып сығарҙым, һикегә кейеҙҙе йәйҙем һәм атай-әсәй йортонда көн итә башланым. Кесе яраута ла, олоһона ла элеккесә ситән артына йөрөйөм. Германиянан алып ҡайтҡан хыялды — тәрән соҡор ҡаҙып уның өҫтөнә тишекле таҡта будка ултыртыу — тормошҡа ашырыу өсөн материал юҡ. Ә ул йылдарҙа пилораманың нимә икәнен дә белмәйҙәр ине әле. Шулайтып, яйлап онотола төшкән тыуған яҡ тәьҫораттары әйләнеп ҡайтты, стеналарҙағы, буялмаған түшәм-таҡталағы һүрәттәр иҫкә төштө. Түшәмдә ландшафт йәйелде, тауҙар төҫмөрләнде, йылғалар аҡты. Бала саҡта ауырыған мәлдәремдә, мин ошо йылғалар буйлап йөҙә, тауҙарға артыла, һаташҡан ваҡыттарҙа аяғыма баҫа ла ботаҡтарға яҡын килеп уның һәр һыҙығын ентекләп ҡарай торғайным. Ҡашығаяҡ кәштәһенең иң өҫтөндә ниндәйҙер һары шыйыҡса һалынған кескәй генә һауыт ултыра, мин уны бәләкәй саҡтан уҡ беләм. Алып һауытҡа нимә һалынғанын ҡарағым килә, әммә күпме тырышһам да, буйым етмәй торғайны. Ул һауыт һаман кәштәлә ултыра, тик уны алып ҡарау теләге хәҙер ниңәлер юҡ.

Был яҡ стена буйында эскәмйә була торғайны. Бер ваҡыт атайым шунда ултырған да илай. Мин уны йәлләп, ниңә илайһың, тим. «Атайым, һинең олатайың...» — ти

һаман һулҡылдап. «Ул ҡайҙа?» — «Үлде, үлде һинең олатайың, улым». — «Ҡасан үлде?» — «Күптән үлде. Пәйғәмбәр йәшендә үлде». Атайымды йәлләп ул саҡта мин үҙем иланыммы, юҡмы, иҫләмәйем инде, үҙе үлгәс ошо һикелә ятты, күкрәгенә икмәк бысағын һалдылар. Әсәйемдең дә үлеме ошо һикелә булды.

Ситән ҡалдыҡтарын, урамдағы сүп-сарҙы йыйып яғып, ондан ыумас һымаҡ нәмә бешереп, табала ҡоймаҡ ҡойоп, һөтһөҙ сәй эстем.

Сәғәтте һаман һата алмайым. Фронтовик Ниғмәткә тәҡдим итеп ҡарағайным, аҡсаһы булмай сыҡты, шуға ла, ярты бот он бирәм, тине. Шундай шәп сәғәткә ярты бот он! Аптыра ла ҡал. Был бит буш биргән кеүек. Ун алты ташлы, бәлки, швейцар сәғәтелер әле, мин уны үҙем үлтергән немецтан һалдырып алғайным. Был бит иҫтәлек! Һуғыш иҫтәлеге. Аслыҡ ишек ҡаҡмаһа, мин уны һатырға уйламаҫ та инем. «Юҡ, быңдай елле сәғәткә ярты бот он бик әҙ», — тинем Ниғмәткә.

...Йайлап аслыҡ яҡынлаша ине. Вагондың тамбур баҫҡыстарында Мәскәүгә барыу өркөтә, Белоретка йәйәү юлланыуҙы аҙаҡҡаса кисектерә килдем: уныһы — иң һуңғы сик, запас вариант. Өләсәйҙән берәй биҙрә картуф һораһаң — бирмәйәсәк. Нисектер бер көн, орлоҡҡа тигәнен дә ашай башланым, күҙҙәрен генә ултыртырға тура килмәгәйе, тип тора. Етмәһә, яҙы һуңланы, эре еүеш ҡар яуҙы, баҫыуҙар батҡаҡҡа әйләнде, сәсергә иртә. Юҡһа, яланға эшкә сығыр инем — насармы-яҡшымы дөйөм ҡаҙандағы ризыҡ менән тамаҡты алдатып булыр ине әле.

Төш ваҡыттарында мин күршеләргә, туған-тыумасаларға кереүҙән тыйылдым, керһәң, түргә саҡырырға мәжбүр булалар, баш тартһаң, эреләнә, әҙәмгә һанамай, тип уйлаясаҡтар. Һиңә лә оят, уларға ла уңайһыҙ. Шулай ҙа бер көн Зәйнулла ағайҙарға көрәк һорап керергә тура килде. Тыуған йорттан йыраҡта йөрөгәндә төшкә кереп йонсотҡан сүп-сар ысын мәғәнәһендә өй тупһаһына менеп килә ине. Ниәт — шуны көрәү. Зәйнулла, һуғышта үлеп ҡалған Хәйбулла ағайҙар — минең атай менән бергә үҫкән кешеләр. Атайҙың атаһы, тол ҡалғас, күрше йәш ҡатынға — ул да тол — өйләнә. Был ҡатын ошо ике бәләкәй малайын эйәртеп килә. Бала саҡта мин уларҙы бер туған ағайҙарым тип уйлай торғайным... Көрәк һорап керҙем, ә улар ашап ултыра. Саҡырҙылар. Тупһа эргәһендә тапандым-тапандым да ултырҙым инде. Ярма ашы эсендә ниндәйҙер

йәшелсә йөҙөп йөрөй, әммә картуф түгел. Нимә ул, тип ҡыҙыҡһынғас, Камилә апай аңлатты. Фармут менән Нурия, бәләкәйҙәре, Балаҡай тауына башаҡ йыйырға барғанда ярты биҙрә һарына ҡаҙып алып ҡайтҡандар икән.

— Бына шулай итеп улар беҙҙе ашата, — тине Камилә апай ниндәйҙер ҡыуаныслы ғорурлыҡ менән.— Башаҡтарҙы ыуабыҙ, ҡул тирмәнендә тартабыҙ ҙа бешерәбеҙ. Ә һарынаны ашҡа картуф урынына һалам.

— Былтырғы һарынаны нисек табаһығыҙ һуң? Ул бит тәрәндә.

— Ҡоро һабағы буйынса табып була, шунан көрәк менән ҡаҙып алаһың. Иртәгә лә барабыҙ, теләгең булһа, әйҙә, эйәр беҙгә.

Мин ризалаштым.

Иртәгәһенә иртәнсәк таба икмәге менән тамаҡ алдатып, Зәйнулла ағайҙарға керҙем. Һарына тамырын ҡаҙа торған көрәк мәҙәк кенә булып сыҡты. Нәҙек, осло ҡорос саҡ ҡына өҫтәрәк, көрәктең һабы ҡағылған ерҙә, аяҡ өсөн арҡыры бер тимер киҫәге ҡуйылған.

Ауылдан өс саҡрым самаһы алыҫлыҡта, тау итәгендә, тәүҙә ятып ҡалған башаҡтарҙы сүпләнек. Бына бит беҙҙең жнейка, лобоғрейка, комбайндарҙың яланда центнер-центнер ашлыҡ торғоҙоп ҡалдырыуының файҙаһы! Мин үҙебеҙҙең яланда атайым менән әсәйемдең иген йыйғанын, көлтә бәйләгәнен бик яҡшы иҫләйем. Бер бөртөк башаҡ ҡалдырмай торғайнылар арттарынан. Һуғыш башланған йылды, унан ҡырҡ икенсе йылда, мин ауылда булған саҡта әле, башаҡ йыйырға рөхсәт ителмәне, йыйғанды күрһәләр, тартып алалар ҙа беҙҙең һымаҡ бала-сағаны, бисә-сәсәне, әбей-һәбейҙе ҡыуа инеләр. Быны, сереһен, әрәм булһын, тик колхоздыҡына ҡағылма, тип аңларғамы? Ул саҡтағы мәғәнәһеҙлектәрҙе уйлай башлаһаң, уйылып китерлек...

Унан һарына артынан урманға керҙек. Мин ҡоро һабаҡты табып ҡаҙҙым, ә Фармут менән Нурия йыйып йөрөнө. Иген башағын мин әҙ йыйғайным, бер бешерерлек кенә, ә бына һарынам ярты биҙрә булды ла ҡуйҙы.

Оҙон һырт артында, бәләкәй генә йылғалы туғайҙа — Ҡоҙаш ауылы. Шул ауылда ул — Ғәлиә, Ғәлиәбаныу. Минең йәшлек хыялдарым, минең йырҙар, шиғырҙар, тәмле төштәр, емерелгән өмөттәр сәбәпсеһе булған ҡатын. Аңының, хәтеренең, исмаһам, бәләкәй генә мөйөшөндә миңә урын булдымы икән? Ул ошо мәлдә үҙенең йортонда

йәки ихатаһында йөрөп яталыр, яҡында ғына, тауҙың был яғында, минең башаҡ йыйғанды башына ла килтермәйҙер. Ихатаһына кер ҙә, иҫәнме, мине танынйһыңмы, тип һүҙ ҡуш ине.

Малайҙарҙы ҡайтарып ебәреп, мин һыртҡа күтәрелдем. Һырт түбәһе ташлы һәм тар. Урыны-урыны менән бер аяғыңды теге яҡҡа, икенсеһен һырттың был яғына һәлендереп ултырып була. Ташҡа сүгәләнем дә Ҡоҙаш яғы ландшафын ҡарарға тотондом. Һирәк ҡайындар үҫкән һырт артында ауыл төҫмөрләнә, ситтәге баҡса-кәртәләрҙе, ҡалҡыулыҡтарҙы урап ауылға йүгергән һарғылт юл күренә. Арыраҡ йәнә бер ҡалҡыулыҡ бар, уныһы быныһынан тәпәшерәк, яланғас, һоро төҫтә, офоҡҡа тиклем тулҡынтулҡын булып шуның ише бейек булмаған яланғас ваҡ тауҙар теҙмәһе һуҙыла. Тағы ла тегендәрәк, офоҡ томаны артында, һирәк ауылдар, казак станицалары һибелгән ялан. Ғөмүмән, тауҙың теге яғы, үләнһеҙ, йәшел урманһыҙ тарафтары, күңелһеҙ сүллеккә тартым.

Байтаҡ ултырҙым мин һырт түбәһендә. Ҡай саҡ башҡа тиле уйҙар ҙа килеп ҡуя: әллә ысынлап та Ҡоҙашҡа сығып китергә лә ауылда берәйһенән Ғәлиәнең ҡайҙа йәшәгәнен һорарғамы? Унан йәнә икеләнәм: уны күреү менән генә тормошомда, яҙмышымда нимә үҙгәрер икән һуң? Ул хәҙер әрпеш бер ауыл бисәһенә әйләнһә? Ниңә килдем тигән көнгә төшөрһөң.

Һәм миңә, атланып ултырған ошо һырт, әйләндереп һалып ҡуйған бысҡыны хәтерләткән тешле ошо тау, ғүмер буйы бергә йәшәргә хыялланған кеше менән арамды ялғанмаҫлыҡ итеп ҡырҡҡан һымаҡ тойола башлай...

Сәсеүгә һуң, ун икенсе май ғына, төштөләр. Үтескә алған биш килограмм ондо ҡайтарыр өсөн яланға сығырға кәрәк ине. Унан килеп шуныһы: бәлки, тартылған һолонан бешерелгән аш булһа ла бирерҙәр, тигән өмөт бар.

Яланда эшләү өсөн аяҡҡа кейем кәрәк. Немец итеген кейеүе йәл. Өләсәйҙә иҫке сарыҡтар табылды, тик ҡатынҡыҙҙарҙыҡы ине, һуғышҡа тиклем кейгән тубыҡтары ямаулы салбар килеп сыҡты. Миңә, арыҡ кешегә, улар таптаман булды ла ҡуйҙы.

Беҙҙең бригада, һуғышҡа тиклем үк, өсөнсө һанлы. Мышағыр битенән алып Туғыҙ ҡыуыш һыртына тиклем — беҙҙең ерҙәр. Йылға үҙ ярҙарына ҡайтҡан, һыу юлдың ике яғында ғына ҡалған. Ҡайтып килгәндә үҙемде йота яҙған

сөңгөл янынан үткән һайын гел генә ҡараңғы төндә иҫкә төшөрөр булдым һәм гел генә ҡурҡыу ҡатыш сәйер тойғо кисерҙем.

Беҙҙең бригада, дөрөҫөрәге, звено, нигеҙҙә, ҡыҙҙарҙан һәм малайҙарҙан тора, сөнки һуғыштан һуң үҫкән малайҙар — армияла, ике ҡыҙ, Сәлимә менән Ғәлибә — минең йәштәштәр, минең класташтар. Һуғыш балалары, һуғыш ҡатын-ҡыҙҙары. Ярым ас йөрөһәләр ҙә, хәлдән тайып арыһалар ҙа, икеһе лә көләкәс, әсе телле, күҙ ҡараштарында йәшәү дәрте, киләсәктә бәхетле буласаҡтарына өмөтләнгән ҡыҙҙар. Улар былай тип йырлай:

> Советская форма —
> Сто грамм норма.
> Ас та түгел, туҡ та түгел,
> Бер өйрәнгәс, буҡ та түгел.

Ауыр физик эш, ярлылыҡ арҡаһында улар иргә сыға алмай, бала бәхете күрә алмай ҡартаясаҡ, күптәре туберкулез менән яфаланасаҡ, астма, полиартрит менән ауырыясаҡ. Гитлерҙы беҙ, һалдаттар түгел, ә улар, ошондай ҡыҙҙар еңде, тип иҫәпләйем мин.

Малайҙар һәм ҡыҙҙар аттың йүгәнен тотоп туңға һөрөлгән ерҙе тырмата, мин бригадала берәү генә булған атлы сәскескә ултырҙым. Йылы май ҡояшы аҫтында терелгән ер еҫе мине, яланда тыуған, ҡара ер араһында үҫкән кешене, малай сағыма ҡайтарып, шул осор ҡыуаныстарымды, шатлыҡтарымды тергеҙҙе. Беҙҙең баҫыу еҫе ҡырҡ бишенсе йылда окоп соҡоп йәшерелгән йәки үлгән иптәштәребеҙгә ҡәбер ҡаҙыған ҡомло немец ерենең сөсө еҫенән ныҡ айырыла ине.

Беҙҙең бригадир — атайым яғынан миңә ағай тейешле «дүрәк» ҡушаматлы Ғәзим ағай. Һуғышҡа тиклемге тыныс тормошта ағайымды, ифрат шуҡ, һуғыш суҡмары, эскесе булды, тиҙәр, шуға ла мин, был армияла саҡта стройҙа нисек йөрөнө икән, тип аптыраным. Ауылда шундай хәлде һөйләйҙәр: бер ваҡыт ул бесән эшләгән мәлдә үҙенең «гвардеец»ын торғоҙған да шуға бер биҙрә һыуҙы элеп усаҡ янына килтергән икән. Ҡатын-ҡыҙ аптыраны, һоҡланды, тел шартлатты, баш сайҡаны һәм... ситкә боролоп төкөрөндө, тиҙәр. Ғәзим ағай һуғышта булған, һул ҡулын ҡалдырып ҡайтҡан, ҡырылып бөткән пинжәгендә һары миҙалы ла бәүелеп-сайҡалып йөрөй торғайны. Хәйер, һуғыш өсөн баш кәрәкмәй инде. Һуғыш — алама

нәмә, уны аҡылһыҙҙар сығара. Эйе, дөрөҫ, фашизмға ҡаршы көрәшергә кәрәк ине, әммә яуыз Гитлерҙың беҙгә һуғыш асыуын булдырмаҫҡа ла мөмкин булғандыр бит, йәғни беҙҙең дүрәктәрҙең баштары саҡ ҡына эшләһә, ул Гитлер тигән албаҫтыны һуғыштың тәүге айҙарында уҡ Днепр тирәһендә дөмөктөрөп була ине... Яланда, эштә Ғәзим ағай үҙенең иҫәрлеген, әлбиттә, күрһәтмәне, чапайланманы, беҙҙе ҡыйырһытманы, хатта йәлләне лә шикелле, берәй нәмә булһа: «Эх, һеҙ, маңҡалар!» — тип кенә ҡуйыр ине.

Яҙғы сәсеүҙән һуң мин үҙҙәренең шаярыу-шуҡлыҡтары менән яңғыҙлығымды оноттороп ғаилә йылыһы биргән ҡыҙҙар юҡлыҡтан күңелһеҙлеккә бирелеп, үҙемдең демобилизацияланған эшһеҙ тормошома кире ҡайттым. Яҙ килде, йылға аръяғында муйыл сәскә ата, һандуғастар түгелеп һайрай, миңә егерме ике йәш һәм минең һуғыш алып ҡалған йәшлегем кире ҡайтҡан кеүек. Әммә элекке ише мөхәббәт хаҡында шиғыр яҙылмай, тәмлетатлы ғазап урынына күңелдә ниндәйҙер бушлыҡ, һағыш. Организм, йәш организм ҡатын-ҡыҙ көҫәй ине.

Мин клубҡа сығырға ҡарар иттем. Яловый итектәрҙе ялтыратҡансы таҙартып, шпорҙарҙы эләктерҙем дә элекке мәсеткә килдем һәм ситтән генә тансыла өйөрөлгәндәргә ҡарап торҙом. Бер нисә егет ишараты, үҫмер йәш ҡыҙҙар сарыҡ, кирза итектәре менән саңлы иҙәнде шаҡылдата баҫып гармунға бейей. Мин бейемәйем, бейей белмәйем, стенаға терәләм дә унлы кәрәсин лампаһының һүрән генә яҡтыһы аша ҡыҙҙарҙы күҙәтәм. Әммә араларында яуапһыҙ ҡалған әсе мөхәббәтемде йөрәгемдән ҡыҫырыҡлап сығарырҙай кеше таба алмайым. Юҡ икән, юҡ, бәлки, бер ҡасан да булмаҫ, мөхәббәтемде тапмай тороп мин бер ҡасан да өйләнмәйәсәкмен. Миңә хәҙер бигүк йәш булмаған берәй тол ҡатын йәки мине аңлаған ҡыҙ кәрәк. Ә ундайҙар, күреүемсә, клубта юҡ.

Бер кис клубҡа ҡыйыуһыҙ ғына килеп ингән һәм стена буйына барып баҫҡан бер ҡыҙға иғтибар иттем бит. Әлбиттә, таныманым, мин юҡта үҫеп еткән ҡыҙҙыр, күрәһең. Уны сибәр тип әйтеп булмай, йәмһеҙ ҙә түгел, әммә ирҙәрҙе ылыҡтыра торған бер нәмәһе бар — түштәре ҙур. Беҙ бер-беребеҙгә ҡараныҡ. Осраҡлы түгел ине был ҡараштар. Бер аҙҙан ул миңә йәнә ҡараш атты ла клубтан сыҡты. Мин — уның артынан. Ҡараңғы ныҡлап төшкәйне инде. Ҡыуып еттем дә, оҙатырға яраймы, тинем.

— Беҙҙә оҙатмайҙар, кеше күрә,— тип яуапланы ҡыҙ шым ғына.

— Улайһа баҡса артынан барайыҡ.

Ул күндәм генә минең арттан эйәрҙе. Йылға буйына төштөк. Аръяҡта һандуғастар һайрай, муйыл сәскәләре еҫе килә. Муйыл ағастары араһында һайраған һандуғастар менән өсөн — йәш саҡтан уҡ мөхәббәт йырсыһы, хәҙер улар менән буш күңелдә тултыра.

— Әйҙә ултырайыҡ,— тип тәҡдим иттем мин. Яр буйындағы быҙауҙар ашап, ҡаҙҙар өҙөп өлгөрмәгән бәпкә үләнгә ултырҙыҡ. Йәш үлән ифрат йомшаҡ, наҙлы, унан ниндәйҙер саф һалҡынлыҡ бөркөлә. Һөҙәк ярҙан һайыҡҡан йылға башлана, аҫтағы, өҫтәге шаршыларҙа ғына уның аҡҡаны, таштар өҫтөнән һикергәне ишетелә һәм көмөш тәңкәләре ялтырап китә.

Ҡатын-ҡыҙҙы көсләргә мин һуғышта өйрәндем. Хәйер, өйрәндем тип әйтеү бында урынлы түгел, был эшкә өйрәнергә кәрәкмәй, ул еңелгән дошман ҡатын-ҡыҙы булһа бигерәк тә. Ә ул, дошман ҡатын-ҡыҙы, һиңә ерәнеп ҡарай, бирелеүе лә — ҡурҡыуҙан. Ҡыҫҡаһы, һуғышта мин, егет ҡорона саҡ кергән кеше, ҡатын-ҡыҙҙы көсләү тәжрибәһе алдым, был тәжрибә мөхәббәтһеҙ, яратыуһыҙ, үҙемдең физик теләгемде генә хайуандарса ҡандырыу була торғайны. Һәм ошо арҡала яратҡан кешегә өйләнеп беренсе төндә бәхеттән иҫереү, шашыу тойғоларын кисереү-татыуҙан мәңгелеккә мәхрүм ҡалдым. Янымда ултырған ошо ҡатын — һуғыштағы немка кеүек үк минең хайуани теләгемде ҡәнәғәтләндерәсәк объект. Мин ҡатынды тупаҫ ҡына итеп артҡа төртөп йыҡтым да, әллә ни ҡаршылашмағанын самалап, өҫкө кейемдәрен сисеп ырғыттым, әммә бер аҙҙан ҡулдарының ярһыу ҡаршылығына осраным. Түштәренә йәбешкәйнем, ғәжәп, түштәре ниңәлер ҡаты, шул уҡ ваҡытта үтә һалҡын тойолдо. Ҡапшай торғас, күкрәксәһендә әллә мамыҡ киҫәге, әллә сепрәк барлығын шәйләнем, ә аҫтында — бәләкәй генә тере тубырсыҡтар.

Ул ҡыҙ ине.

Эш бөткәс, мин уға:

— Ниңә мамыҡ ҡуяһың, бәләкәй булһа ла үҙеңдеке булһын,— тинем.

Ул өндәшмәне, күтәрелеп тә ҡарамай йылғаға төштө, йыуынды, унан йәнә күтәрелде, бер һүҙ ҙә әйтмәй яй ғына ауыл яғына атланы.

Оҙаҡ ултырҙым мин ҡараңғыла. Күңелде бушлыҡ ялманы, үҙемдең әле генә ҡылған ҡылыҡҡа үкенеү тойғолары

килде. Нишләнем мин, нимәгә кәрәк булды һуң был эш? Ул Германиянан һуң, ҡырҡ бишенсе йылдан һуң, ҡосағымда булған беренсе ҡатын ине, үҙебеҙҙең ҡатын, ауылдаш, уны бит мин яратырға, үҙем яратылырға тейеш инем, ә мин хайуандарса ҡыландым. Ә Ғәлиәгә ҡарата бындай эш уйға ла инеп сыҡманы, туйҙан һуң беренсе төндә асыҡ тәҙрә янында ултырып сығырбыҙ, тип хыяллана торғайным. Мин уға үҙемдең шиғырҙарҙы уҡыясаҡмын, таң ата башлағас йылға аръяғына алып сығасаҡмын да муйыл сәскәләре еҫенә иҫереп, яҙғы таҙа үлән кисеп туғай буйлап күтәреп йөрөтәсәкмен. Һандуғастар мөхәббәт тураһында һайрай, кәкүк кеше бәхетенең ниндәй ҡыҫҡа икәнлегенә үкенес белдереп уфтана...

Йылға аръяғындағы муйыл ағастары араһында һандуғастар һайрай, яҙғы тәмле еҫ танауҙы ҡытыҡлай, һирәк йондоҙҙар аҫтында, томанлы май күге аҫтында йылы, дымлы һауала йәшел ер иркен тын ала, сәскә атыу, мөхәббәт өсөн яратылған ошо ер өҫтөндә — минең һорау билдәһенә оҡшаған кәкре һыным. Күңелдә мамыҡ түшле ҡатын ҡалдырған юшҡындан башҡа бер нәмә юҡ. Эйе, уны йәлләргә кәрәк. Әммә ул саҡ һуғышта көйгән, тупаҫланған күңел менән мин уны йәлләй алманым, дөрөҫөрәге, йәлләй белмәнем. Ошо ваҡиғанан һуң байтаҡ йылдар үткәс, өлкәнәйгәс кенә йәлләнем. Үҫмер сағынан уҡ аслы-туҡлы йөрөгән, йәшләй генә ауыр ирҙәр эшен башҡарған меҫкен ҡыҙ ҡайҙан ҙур күкрәкле, тулы кәүҙәле булһын инде?..

Унынсы июндә колхоз һабантуйы булды. Һуғыштан һуң был беренсе һабантуй, тинеләр. Итекте таҙартып, шпорҙарҙы тағып, билде яҫы комсостав ҡайышы менән быуып мин Ҡоро йылға аръяғындағы ҡайын сауҡалығына килдем. Сауҡалыҡ араһындағы асыҡлыҡ уртаһында — ҡабығы таҙартылған ун-ун ике метр бейеклегендәге шыршы бағана. Осона бер нисә пар кирза итек эленгән. Шул тирәлә үк көрәш, тоҡ кейеп йүгереү майҙандары.

Ас ҡыштан йылы ергә аяҡ баҫҡан кешеләрҙең ҡараштары яҡты, көләс, кәүҙә-һындары ла турайған. Йөҙҙәре елгә ярғыланған ир-ат аҙ, күберәк ҡарт-ҡоро ла ҡыҙ-ҡырҡын. Ҡатын-ҡыҙ бөтә ҡайғыһын онотоп шатлана, әйтерһең дә, тамаҡтары туҡ, өҫтәре бөтөн, тормоштары етеш. Бригада ҡаҙандарында йылҡы ите бешә — колхоз, көтмәгәндә ихласланып китеп, ҡартайған, эштән сыҡҡан арыҡ атты һуйҙы.

Тәүҙә ат сабыштырҙылар. Өсөнсө бригаданың туры айғыры беренсе булып килде. Шул арала аштары ла өлгөрҙө. Ҡаҙан янына йәйелгән ашъяулыҡ, ашъяулыҡ тирәләй туғандарса ултырыштыҡ, ылауҙарҙан һауыт-һаба, икмәк — ҡыҫҡаһы, кем нимә килтергән барыһын да алдыҡ. Ә минең буш ашҡаҙандан башҡа бер нәмәм дә юҡ. Ярай әле, туған-тыумаса күп, ике, өс туған ағайҙар, апайҙар, башҡа фискалдар (әсәй яғынан нәҫел-нәсәпте шулай тип йөрөтәләр) бар, әммә мин фискалдар янына ултырманым, ҡан буйынса яҡын булмаһалар ҙа, Зәйнулла ағай менән Камилә апайға һыйындым. Улар миңә сеүәтә лә, ҡашыҡ та тапты.

Сеүәтә тулы итле һурпаны һелтәп ҡуйғас, Камилә апай минең аппетитты күреп, ахыры, йәнә аш һалдырып алды.

— Аша, бындай ризыҡ беҙгә һирәк эләгә,— тине ул йылмайып.

Шунда мин үҙемде борсоған бер мәсьәләне күтәрҙем: һуғыш бөткәнгә өс йыл, ә икмәккә һылап ашарҙай ҡара тупраҡта йәшәгән халыҡ һаман ас, беҙ, ҡырҡ бишенсе йылда Германияға бәреп кергәс, аслыҡтан яфаланған немецты күрмәнек, немец та беҙҙең һымаҡ дүрт йыл һуғыш алып барҙы, әммә илдә ризыҡҡа ниндәйҙер ҡытлыҡ булһа ла, кешеләр аслыҡтың нимә икәнен белмәне.

— Ой, Тәлғәт, Аллаға шөкөр, был аслыҡ түгел әле,— тине Камилә апай.— Һуғыш йылдарындағы аслыҡ бына ысын аслыҡ ине. Һуңғы бөртөгөнә тиклем алып китеп торҙолар бит игенде, наган тотоп йөрөнөләр, бер нәмә тапмаһалар ҙа, һәр ярыҡты тикшерҙеләр, эҙләнеләр. Урамда йығылып үлеүселәр ҙә булды, эт ашанылар. Йәй үлгәнде күмеп була әле, ә ҡышын... Йәш ирҙәр һуғышта, олораҡтар трудармияла, саҡ ҡуҙғалып йөрөгән ҡарттар ҙа, быуындары ҡатмаған бала-саға. Кем ҡаҙа ҡәберҙе? Һуғыш йылдарында ҡышы ла ниңәлер һыуыҡ була торғайны бит. Ер туң. Ышанһаң ышан, ышанмаһаң юҡ: мәйеттәрҙе тиреҫкә күмдек.

Зәйнулла ағай былай тип һүҙ ҡыҫтырҙы:

— Тәлғәт, һин аслыҡ, туҡ немецтар тураһында Ғәзим, Юламан алдында һөйләп ҡуйма тағы.

— Ниңә?

— Ошаҡларҙар. Немецты маҡтаны, совет власын һүкте, тип әйтәсәктәр. Үҙеңде һә тигәнсе алып та китерҙәр, орден-миҙалдарың да ярҙам итмәҫ.

Эс кәпәйгәнсе ашағас, мыйыҡҡа Зәйнулла ағайҙың иҫкәртеүен урап ҡуйҙым да көрәште ҡарарға ҡуҙғалдым.

Тығыҙ рәттәр булып баҫҡан майҙанда көрәш бара. Ергә ҡағылған таяҡҡа һарыҡ бәйләнгән. Мыҡты бер егет менән минең теге һыңар ҡуллы, «дүрәк» ҡушаматлы ике туған ағай көрәшә. Һул яурыны аша үткәреп, ул оҙон таҫтамалдың бер осон ҡул төбөнә бәйләгән, икенсеһе менән егеттең билен уратып алған да ифрат көслө уң ҡулы менән тегене кәкрәйткәнсе ҡыҫҡан. Ағай һуғышҡа тиклемге һабантуйҙарҙа ла көрәшә торғайны (ул саҡта ҡулы бар ине әле), иң ҙур хыялы — бәһлеүән Фәритте еңеү. Тик ул саҡта Фәрит туҡ һәм таҙа ине, һис еңерлек түгел. «Дүрәк» аяҡ сала, ҡағиҙәгә һыймаған башҡа хаслыҡтар эшләй, шунлыҡтан, йыш ҡына көрәште туҡтатып, уны майҙандан ҡыуа торғайнылар.

Кемдең еңерен дә көтмәй, мин Ҡоро йылғаға ҡарай атланым, йылғаны кисеп сығып, Мышағыр тауына йүнәлдем, дөрөҫөрәге, уның бойҙай сәселгән һөҙәк битләүе буйлап барҙым. Бойҙай саҡ баш ҡалҡыта — яҙ һуң килде, шунлыҡтан һуң сәстек (мин дә сәсештем).

Тауҙың төньяҡ һырты текә, тайғаҡ. Ҡаялар ситендәге ҡайындарҙы урап үтеп, ҡыуаҡлыҡтарға, үләнгә, ослайып сығып торған таштарға тотона-йәбешә үрмәләнем. Бөтә тирә-яғым серегән үлән, ағас, япраҡ менән ҡапланған, таштар ҙа байтаҡ. Бәләкәй саҡта мин таштарҙың йәндәре барҙыр, тип уйлай торғайным: улар менән һөйләшәм, ярыҡтарында үҫкән үләндәрҙе ел ҡуҙғытып ҡыштырлау тауышы сығарһа, уларҙың мөгөрләүе итеп ҡабул итәм.

Тауҙың түбәһенә менеп етеп, миләш ҡыуаҡлыҡтары янындағы ташҡа ултырҙым. Миләш ботаҡтарына төрлө төҫтәге таҫмалар, сепрәк киҫәктәре бәйләнгән. Был ағасҡа сепрәк бәйләүҙең мәғәнәһе күптән онотолған, ә бына ғәҙәт һаман йәшәй. Тирә-яҡҡа ҡарайым. Урал тау һырты, уның бәләкәйерәк башҡа һырттары тулҡын-тулҡын булып офоҡҡа барып тоташа, яҡынураҡта ятҡан ҡалҡыулыҡтар нисектер йәшел томанға сорналғандай, ул төҫ артабан зәңгәрһыу йәшелгә әйләнә, тағы ла арыраҡ томан зәңгәр төҫкә инә лә күк ҡабағына етеп олғаша.

Йәйҙәрен билгә тиклем үлән үҫкән, бал тәме һәм бешкән еләк еҫе аңҡытҡан туғайҙар, йылғала, уның таҙа һыуҙарында, шаршыла, ҡыҙғылт-һары ҡанаттарын беленер-беленмәҫ кенә һелкетеп ҡушбаш балығы ята, ағас тамырҙары аҫтында суртан, оптолар йоҡлай — ошолар янында минең ауыл, ағас һәм һаламдан яһалған кеше ояһының йыйылмаһы. Ә айырым кешене күреп тә булмай, өҫтән ҡарағанда кеше үтә бәләкәй.

Олпат йәшкә еткәс, мин Чеховтың матур ағастар янында тормош та матур булырға тейеш, тигән һүҙҙәрен уҡыным. Уҡыным да, ошо матур урмандар, тауҙар, ялантуғайҙар араһында йәшәгән кеше интегергә тейеш түгел, тигән һығымтаға килдем.

Аллаһы тәғәлә халыҡтарға ер өләшкән саҡта башҡорт булмаған — һуңлап ҡалған. Алла: «Ниңә һуңланың?» — тип һораған икән. «Ҡурайҙа уйнаным», — тип яуаплаған башҡорт. «Ярай, башҡорт, — тигән Алла. — Миндә ожмах ҡына бар, үҙемә ҡалдырғайным, ал, бирәм һиңә», — тигән икән. Башҡорттар шулай итеп ожмахта йәшәй.

Армиянан Баҡый — Зәйнулла ағайҙың уртансы улы, ә минең дуҫ, төрлө уйындар, шуҡлыҡтар, күршеләрҙең баҡсаларынан ҡыяр, колхоздыҡынан шалҡан урлау буйынса иптәш, ҡайтты. Ул ҡытайҙарҙың дөгө араҡыһын да алып ҡайтҡайны. Ул беҙҙең уртаҡ дуҫ Вәзихтең Хинганда нисек үлгәнен һөйләне — бормалы-бормалы ташлы ҡалҡыулыҡтарҙан аттар пушкаларҙы һөйрәп барғанда пушкаларҙың береһе ат менән ҡолап киткән дә бер нисә кеше менән Вәзихте лә баҫҡан икән. Баҡый иҫергәс, китаянкалар шәп ҡатындар, тип маҡтанды.

Ул тамам ир ҡорона кергәйне, кәүҙәгә лә тартылған, яурындары киңәйгән, ныҡлы эйәкле, матур йөҙлө — скульптура күҙлегенән ҡарағанда, камиллыҡтың бер өлгөһө. Күкрәгендә — «Батырлыҡ өсөн» миҙалы, аяҡтарында — гармун күреге һымаҡ ҡыҫылған итектәр, сержант һомғоллоғо.

Дөгө араҡыһын эсеп алғас, беҙ, немец менән японды еңгән ике һалдат, дары еҫен, мәйет һаҫығын етерлек еҫкәгән ике кеше, яңы ғына үткән бала сағыбыҙҙағы төрлө хәлдәрҙе хәтерләнек, кинәнеп көлөштөк. Ә бала саҡтағы көлкөлө, шулай уҡ күңелһеҙ ваҡиғалар күп ине. «Иҫеңдәме, хәтерләйһеңме?..»

— Егерме тинде хәтерләйһеңме? Егерме тин — ике ҡармаҡ хаҡы.

Беҙ, ҡатын-ҡыҙға булған ҡыҙыҡһыныусанлыҡ менән янған малайҙар, егерме тингә Сәхибә апайҙың иҫәрерәк ҡыҙын арбарға булдыҡ. Ҡыҙыҡай беҙҙе әсәһенә ошаҡлаған да ҡуйған. Сәхибә, ирһеҙ, шайлап торған көр тауышлы ҡатын, Баҡыйҙың елкәһенән эләктереп алды ла бөтә урамды тултырып ҡысҡыра-ҡысҡыра өйөнә һөйрәне: «Әйҙә, мин һиңә аҡсаһыҙ ҙа бирәм!» Баҡый илай, тартҡылаша,

шунан тегенең ҡулынан саҡ-саҡ ысҡынып, мунса эсенә кереп ҡотолдо.

— Хәтерләйһеңме, һин, мин, тағы Ғабдулла бар ине шикелле, Әлфиәгә өйләндек? — тип икенсе бер ваҡиғаны иҫенә төшөрҙө Баҡый.

Күрше ҡыҙы Әлфиәгә һигеҙ-туғыҙ йәш булғандыр, Баҡый менән миңә ун бер-ун ике. Бер көн Әлфиәне «ир менән ҡатын» тигән уйын уйнарға күндерҙек. Ҡыҙ ризалашты. Шулай ҙа бер шарт ҡуйҙы: урамдарындағы утынды соландарына ташырға. Нишләйһең, ташыныҡ. Эш тамамланғас, соландың элгесен элдек тә (Әлфиәнең ата-әсәһе эштә) һалҡын, ярым ҡараңғы соланда «уйнарға» керештек. Баҡыйҙан саҡ ҡына олораҡ, бигерәк тә сосораҡ булғас, мин — беренсе. Ҡыҙҙың өҫтөнә яттым да әкәләм менән аяҡтары араһына төртә башланым. Ҡытығы килгәндер инде Әлфиәнең, ул көлә, сыйылдай, боттарын ҡыҫа. Янымда ғына Баҡый ултыра һәм мине ҡабаландыра: давай, етәр, хәҙер мин! Ә мин һаман этенәм, үҙем ҡабаланам, тирләп сыҡтым, ниһайәт, ысынлап етәр, ололар ошолай итеп өйләнәләрҙер, тип уйланым да Әлфиәнең өҫтөнән төштөм. Әммә Баҡый салбарының шәлтәү һәҙәптәрен ысҡындырып та өлгөрмәне, ҡыҙ һикереп торҙо ла өҙә һуҡты: «Бүтән уйнамайым, мин кейәүгә сыҡтым инде, кейәүгә бер тапҡыр ғына сығалар! — тине һәм бармағы менән миңә төртөп күрһәтте: — Бына минең ирем».

Хәҙер Әлфиәне мин йыш күрәм, осрашҡанда иҫәнләшеп үтәм. Йәшәүе һаман шунда, урам аша ғына, минең өйгә ҡаршы. Ул өлгөргән, тулышҡан, һомғол ҡыҙға әйләнгән. Һылыу тип үк әйтмәҫ инем, әммә таҙа ҡыҙыллыҡ йүгергән киң йөҙөнә, ҙур ҡара күҙҙәренә, оҙон керпектәренә, тәмгә тулышҡан ирендәренә һис битараф ҡарап булмай.

Балалыҡ осороноң күңелһеҙ тарихтарын беҙ иҫләмәҫкә тырыштыҡ, эстән иҫләһәк тә, ауыҙҙан сыҡманы. Иң күңелһеҙе, моғайын да, ике ваҡиға булғандыр, тим. Йәшенмәк уйнап йөрөгәндә һарай сарҙағына йәшенгән Ғабдуллин Шамил Баҡыйҙың башына ярау иткәйне. Шамилдың оло ярауын күмәкләп йыуып төшөрҙөк төшөрөүгә, тик бына үпкәне, рәнйеүҙе нисек онотмаҡ кәрәк? Бала саҡтың күп нәмәһе хәтерҙән юйылған, ә быныһы һис онотолмай: «Был хәл Шамилдың Баҡый башына... йылда», «Ул Баҡый түгел, ә Шамил...» тип һөйләргә генә ҡалды. Бына шулай бәхете кирегә киткән кеше ине минең Баҡый дуҫым. Иҫтә ҡалған

икенсе күңелһеҙ ваҡиға — һыуға саҡ батманы. Октябрь аҙағы булһа кәрәк, беҙ ниңәлер йылғаның теге яғына сығырға ниәтләндек. Боҙ йоҡа, ныҡлап туңып өлгөрмәгән әле, йылға уртаһында хатта ағым күренеп ята. Шул уртаға ике һайғау һалдыҡ. Мин беренсе булып сыҡтым. Артымдан килгән Баҡый тайып китте лә — етмәһә, ағаһының ауыр буҫтау пальтоһын кейгәйне — боҙҙо ватып һыуға төштө лә китте. Батты, үлде, бүтән күрә алмам инде, мәйетен яҙ килгәс берәй тамыр йәки ағас төбөнән табырҙар, тип уйлап та өлгөргәйнем, ул минән биш-алты метр алыҫлыҡтағы икенсе асыҡ урында ҡалҡып та сыҡты. Тәрәнлек уның күкрәгенән ине, боҙҙо вата-емерә өҫкә күтәрелде, аяғына баҫты, аҡырып илай-илай өйҙәренә йүгерҙе...

— Ғәлиә менән эштәрең нисек, яусы ебәрмәнеңме әле? — тип һораны Баҡый.

— Ул бит күптән кейәүҙә.

— Бәй, шулаймы ни? Кемгә сыҡҡан?

— Ҡоҙаштағы Закир тигән кеше, тиме. Бронь буйынса ҡалып налог агенты булған.

— Ә мин һинең туйыңда рәхәтләнеп байрам итергә йыйына инем, яҙмаған икән.

— Һинең үҙеңдең нисек? Сәйфулла ҡыҙына күҙең төшөп йөрөй ине түгелме?

— Хат алышҡайныҡ былай. Көтөргә вәғәҙә лә биргәйне. Күрмәгәнмен әле. Кем белә, бәлки, ул да кейәүгә сыҡҡандыр. Ҡыҙҙарға ышанып буламы? Ә һин төкөр, уйланма. Әллә һаман яратаһыңмы?

— Яратам,— тинем мин, сөнки араҡы арҡаһында йомшарғанлыҡтан йәнә ярата башлағайным. — Беренсе мөхәббәт ғүмерлеккә, тиҙәр бит. Мин уның өсөн генә бында ҡайтҡайным, юҡһа Мәскәүгә йәки Көньяҡҡа китергә ине иҫәп.

Дөгө араҡыһы бутаған фекерҙәрен рәткә һалған ише Баҡый бер аҙ һүҙһеҙ ултырҙы, шунан ҡапыл ғына әйтеп ҡуйҙы:

— Әйҙә урлайыҡ.

— Нисек урлайыҡ? Ул бит ирҙә, ике балаһы ла бар, ти.

— Булһа һуң? Яратам, тиһең дә. Килтерәбеҙ ҙә һинең менән бергә бикләп ҡуябыҙ. Ире унан баш тартасаҡ һәм Ғәлиә — һинеке!

— Юҡ, булмай. Законлы ире бар өҫтөнән... Үлтерәсәк ул мине.

— Шул тыл ҡомағынан да ҡурҡҡас, һин ниндәй фронтовик һуң ул?

Баҡый һымаҡ иҫерек булһам да, мин хәбәр-ниәттең етди түгеллеген аңлай инем, хәйер, дуҫым үҙе лә быны ғына тоя торғандыр. Шулай ҙа:

— Барырбыҙ, ә ире өйҙә ултырһа нишләйбеҙ? — тинем мин.

— Бәйләп һалабыҙ.

— Әйттең һүҙ. Һин гел генә шағир булдың инде. Бындай эштәрҙә миңә таян.

— Йәйәү барабыҙмы? — тинем мин, нисектер ризалашҡан һымаҡ итеп.

— Нишләп йәйәү? Ат менән. Йә, ризаһыңмы?

Ғәлиәне урлау — иҫәр бер шаярыу, ике малайҙың, хәҙер ике фронтовиктың, шуҡлығы икәнен самалаһам да, ысынлап та, бәлки, йөрөп әйләнербеҙ, исмаһам күрербеҙ, әгәр ире өйҙә булһа, юл ыңғайы ғына һуғылдыҡ, ауылдаш бит, тип әйтербеҙ, тип ризалаштым.

Ярты сәғәт тә үтмәне, минең тәҙрә төбөнә бригадир Ғәзимдең үрелгән кырандасҡа егелгән айғыры килеп тә туҡтаны.

— Нисек бирҙе һуң һиңә? — Мин аптыраным. — Минең ағай булһа ла, хрен бирә ул.

— Бәй, мин бит Баҡый! — тип маһайҙы дуҫым.

Ҡалған араҡыны эсеп бөттөк тә тыҡрыҡтан боролоп сығып, Ҡоҙашҡа юл алдыҡ. Ике һалдат — мин парадтағы кеүек кейенгәнмен: шпорлы итектәр, ҡайыш; етеп киткән сәсте ел туҙҙыра, ә Баҡый бөтөнләй гусар — кеше бисәһен урларға китеп барабыҙ.

— Гвардия, алға! — тип һөрәнләй Баҡый.

Балаҡай тауына тиклем елеп кенә барҙыҡ, битләүенә оҙаҡ күтәрелдек, башына менеп еткәс теге яғына айғырыбыҙ йәнә сабып төштө — битләү һөҙәк булмаһа, мотлаҡ берәй ергә ауҙара ине. Ниһайәт, беҙ — Ҡоҙаш тигән бәләкәй генә ауыл урамында. Ауыл тимәһәң, хәтере ҡалыр: һуғыштан һуңғы йылдарҙағы бөтә ауылдар шикелле, был да ярлы, меҫкен, күңелһеҙ. Йылғалары ла тараҡан кисеп сығырлыҡ ҡына, тирә-яҡтағы тауҙары һөҙәк, урманы юҡ кимәлендә, унын ҡарауы таш күп. Нимә тип бында килгәндәр, аңламайым. Хәйер, аңлашыла, налог агентына сыҡҡан, тимәк, һуғыш йылдарында башҡалар һымаҡ асығыуҙың нимә икәнен белмәгән.

Юлда осраған бер бисәнән Ғәлиәнең ҡайҙа йәшәгәнлеген һораныҡ.

— Ҡайһы Ғәлиә? — тине был. — Улар беҙҙә икәү.

— Ураҙҙан төшкәне. Ире Закир.

— Ә, ул Ғәлиәме ни? Ана, бәләкәй баҡсаһында өйәңке үҫә, урыҫ ҡапҡалы йорт.

Өйрәткән йортҡа килеп еттек, атты штакетникка бәйләнек, бәләкәй ҡапҡанан керҙек. Киң маңлайлы, һары сәсле һәм Ғәлиәгә оҡшап торған дүрт-биш йәштәрҙәге ҡыҙ беҙгә таҫрайып ҡараны.

— Әсәйең өйҙәме? — тип һораны Баҡый.

Яуап биреү урынына ҡыҙ нәҙек кенә тауыш менән:

— Әсәй, һалдаттар килде! — тип ҡысҡырҙы.

— Ниндәй һалдаттар? — тигән тауыш ишетелде соландың асыҡ ишегенән.

Был уның, мин яратҡан Ғәлиәбаныуҙың, һаман онотолмаған яғымлы тауышы ине. Тауышынан йөрәк дарҫлап тибергә тотондо, тамаҡҡа төйөр тығылды, маңлайға тир бәреп сыҡты.

— Ә атайың өйҙәме? — тип һорарға өлгөрҙө Баҡый.

— Атайым яланда.

Ишектән Ғәлиә килеп сыҡты. Ғәлиә, Ғәлиәбаныу, минең мөхәббәт! Сит ир ҡатыны. Ә мин уның ҡаҡса, һомғол сағын хәтерләйем, дөрөҫөрәге, ул минең иҫемдә, күҙ алдымда һомғол кәүҙәле булып ҡалған, ә минең алға тулышҡан, ҙур күкрәкле, бер көтөү бала табырға һәләтле бисә килеп сыҡты, сәстәре ҡарайған, биттәре йәш сағындағы һипкелдәрен юғалтып, ҡәнәғәт тигеҙ-шымаға әйләнгән, миңә битараф һоро-йәшел күҙҙәрендә — ирҙәге тормошомдан ҡәнәғәтмен, уны бер кем дә боҙа, минән тартып ала алмаясаҡ, тигән ышаныс. Шиғырҙарымда йөҙөн ҡояш, ай, сәскәләр менән сағыштырған ҡыҙ миңә теге саҡтағы һымаҡ бер ҙә сибәр күренмәне, шулай ҙа әлеге йәш ҡатындың сәскә атыу осорон кисереүен күрмәү мөмкин түгел ине. Бигүк таҙа булмаған алъяпҡысына, ҡолаҡтарындағы аҡ тимер алҡаларына иғтибар итмәй, мин уға һоҡланып ҡараным.

— Һин уны таныйһыңмы? — Баҡый минең яҡҡа баш ҡаҡты.

— Нишләп танымай, ти, таныйым. Тәлғәт. Нимә эшләп йөрөйһөгөҙ?

— Һинең арттан килдек, — тип яуапланы Баҡый эре генә.

— Нисек минең арттан? Ҡунаҡҡамы ни?

— Һине күрергә килдек, — тинем мин.

— Бәй, ҡара һуң! Алдыңда торам бит.

— Давай, йыйын, беҙҙең менән Ураҙға ҡайтаһың. Бынан ары Тәлғәт менән йәшәйәсәкһең! — тине Баҡый.

Ғәлиә тәүҙә аптыраны, унан мыҫҡыллы ғына итеп көләмһерәне лә миңә ҡараны.

— Ғүмер буйы уның менән йәшәү тураһында ғына хыялланғайным! — тине.

— Ауылдаштарыңды өйөңә саҡырһаң ни була? — тинем мин.

— Хужа өйҙә юҡта мин ирҙәрҙе индермәйем. Көнләшә, бер туған энеләренән дә көнләй.

— Беҙ һинең арттан килдек, беҙ һине урлайбыҙ, — тине Баҡый, етди ҡиәфәттә.

— Шаярырға уйлаһаң, минең менән шаярма. Эскәнһең икән, бар, ҡайтып йоҡла.

Ғәлиә әйләнеп китергә боролғайны ғына, Баҡый уның яурындарынан эләктереп алды ла үҙенең сержант тауышы менән һөрәнләп ебәрҙе:

— Нимә ҡарап тораһың, әйҙә, кырандаҫка һалайыҡ!

Мин, һаман шаяртабыҙ, тип уйлап, бер ҡул менән ҡатындың ҡултыҡ аҫтынан тоттом, икенсеһе менән беләҙек һөйәгенән эләктерҙем. Ғүмеремдә беренсе тапҡыр мин уның ҡулына ҡағылдым, уның илерткес тән йылылығын тойҙом, ул йылылыҡ йөрәгемә тиклем барып етте. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, уның ҡулдары, ҡояшта янған бармаҡтары мине түгел, ниндәйҙер Закирҙы иркәләй шул...

— Һеҙ нимә, хулигандар, ну-ка ебәрегеҙ!

Ғәлиә тартышты, беҙҙең ҡул ҡоршауынан ысҡынырға тырышты, Баҡыйға типте, аяғынан калушы ысҡынып әллә ҡайҙа осоп китте, етмәһә,ҡыҙы сәрелдәй башланы. Тартыша торғас ысҡынды Ғәлиә, лапаҫ янына йүгереп барып, стенаға һөйәлгән көрәкте алды.

— Хәҙер мин һеҙҙе!..

— Һин нимә, туҡта, беҙ бит, нишләр икән, тип шаярттыҡ, — тинем мин, һелтәнгән көрәктән ялтанып.

— Шаярттым, имеш! Баланы ҡурҡыттығыҙ! Хулиган инегеҙ, хулиган булып ҡалғанһығыҙ икән. Бар, сығып китегеҙ, эҙегеҙ булмаһын бында!

Оятҡа ҡалып, беҙ сигендек. Ҡайтҡан саҡта айныҡ, күңелһеҙ инек.

— Мин һине казак тип уйлаған булам, шпорҙар йөрөтәһең бит, ә һин бер бисәгә лә менә алманың. Шағир! — тип әрләне Баҡый.

— Бисә — бейә түгел. Унан, һөймәгәнгә һөйкәлмә, тиҙәр, — тип аҡланған булдым мин, ә үҙем һаман Ғәлиәнең ҡулына ҡағылыуҙан ниндәйҙер яңы, быға тиклем таныш булмаған яндырғыс бер тойғо тәьҫирендә килә инем.

Кисен ҡамыт-ыңғырсаҡ, серек еҫе аңҡыған өйҙөң һикеһендә ятҡанда гел генә уны, Ғәлиәне, уйланым, үҙемдең уны һаман яратҡанымды, яңы бер хис-тойғо менән яратҡанымды аңланым. Ул элек хыялдарымда, һағышымда шиғыр, йыр, гармун моңо, һандуғас һайрауы ине, унын тәнен күреү, уны тотоп ҡарау һымаҡ түбән уй башҡа ла инеп сыҡмай торғайны. Хәҙер унын йәш тәненә ҡағылып ҡайнар йылылығын тойғас, үҙем утта яна башланым, уны теләнем, бөтә булмышым, һәр тамсы ҡаным менән тартылдым, унын ҙур, йомшаҡ түштәрен, эсен тотҡом, һыйпағым, күп итеп малайҙар, ҡыҙҙар яһайһым килде.

Тыуған теләктән, ҡапыл ябырылған ҡайғынан оҙаҡ йоҡлай алмай яттым, ыңғыраша-ыңғыраша серемгә китеүем булды, ниндәйҙер тауышҡа уяндым. Төн урталары булғандыр. Тәҙрә төбөнә арба туҡтаны, ат бышҡырҙы. Ишек эленмәгәйне, өйгә ниндәйҙер кешеләр кереп тулды, аяҡ баҫыуҙарына ҡарағанда — ирҙәр. Минең лампа юҡ. Ҡараңғылыҡты йыртып, таныш булмаған тауыш һораны:

— Тәлғәт бында йәшәйме?

— Бында, — тинем мин һәм тороп ултырҙым, — һеҙ кем, нимә кәрәк?

Йоҡо аралаш кем икәндәрен, төнө менән нишләп йөрөгәндәрен һис төшөнә алмайым. Ҡайһыһылыр шырпы яндырҙы, берәүһе миңә эйелеп ҡараны, ҡаты ҡулы менән сәстән матҡып тотто ла йөҙгә килтереп һуҡты. Иҙәнгә һөйрәп төшөрҙөләр. Унан ятҡан килеш ҡайһы ер тура килә, шунда һуғырға, типкеләргә тотондолар.

— Һеҙгә нимә кәрәк? — тип ыңғыраштым мин, ҡулдарым менән йөҙҙө, ҡанаған танауҙы ҡапларға тырышып. Кемдәр һәм ни өсөн туҡмағандарын самаларға өлгөргәйнем инде. — Егеттәр, ни өсөн?

— Ни өсөн икәнен яҡшы беләһең, — тип яуапланы ҡарлыҡҡан бас, шунан итеге менән түшкә типте. — Сәғит, һиндә бысаҡ бар, давай, күкәйҙәрен ҡырҡайыҡ.

— Кәрәкмәй, йә һуңынан яуап бирергә тура килер, — тип яуапланы Сәғит тигәне.

— Егеттәр, булды, етте, — тине йәнә бер тауыш.

Ҡарлыҡҡан бас йәнә бер типте лә былай тип ҡурҡытты:

— Б... тағы бер Ҡоҙашҡа килһәң, эсәктәреңде муйыныңа урап ҡайтарабыҙ, аңланыңмы?

— Аңланым, — тип ыңғыраштым мин.

Сыҡтылар, арба тауышы юғалды. Мин саҡ-саҡ ҡалҡындым да һикегә менеп ултырҙым. Танауҙа ҡуйы ҡан һулҡылдай, тын алыуы ҡыйын, ҡабырғаны ла һындырҙылар, ахыры, тип уйлайым. Тамам имгәтмәүҙәренең йәки үлтермәүҙәренең сәбәбе — аҙаҡ үҙҙәрен эҙләп табып белеүҙәренән ҡурҡыу. Ҡайҙа йәшәгәнемде һорағандарҙыр, ә Закирҙы барыһы ла белә. Баҡыйға барһалар, ул шундуҡ эштең ниҙә икәнен һиҙәсәк һәм миңә йүгереп килеп туҡмарға йөрөгәндәрен иҫкәртәсәк, тип уйлағандарҙыр. Бөтәһенә лә ул, Баҡый, ғәйепле. Иҫерек баш. Теге ваҡыт пистолетты Жмыховҡа биреүемә хәҙер килеп үкендем мин. Пистолет янда булһа, мин ул Закирҙың мейеһен сәсрәтә инем. Биш йылдан да артыҡты бирмәҫтәр ине әле. Мин бит — фронтовик, контузия алған кеше, справкам бар быны иҫбат итергә, ә контузиялы фронтовик ул — псих...

Иртәгәһенә көскә торҙом. Бөтә тән һыҙлай, әрней, ауырта. Йөҙҙө нишләткәндәрен ҡарарға ине, тик көҙгөм юҡ — миңә егерме ике йәш, ә мин һаман ҡырынмайым. Һыулы биҙрәгә ҡараным: инәһенең башы! Уң күҙ аҫты ҡара янып, ҡан төйөлгән, ирендәр ярыҡ, биткә ҡан ҡатҡан. Уйламаған ерҙә уйынҙан уймаҡ сығарҙыҡ.

Битемде көс-хәлгә йыуып, итектәрҙе кейәйем тиһәм, итектәр юҡ! Соланда ла тапманым, урамда ла. Төнгө «ҡунаҡтар» алып киткән, тимәк. Һыу эскеһеҙ итеп туҡманылар, етмәһә, аяҡ кейемһеҙ ҡалдырҙылар, сволочтар! Ғәлиәбаныуҙың ҡулын тотоу миңә үтә лә ҡыйбатҡа төштө.

Ҡасандыр ФЗО-нан алып ҡайтҡан, һеңлекәш кейгән, кейеп туҙҙыра алмаған иҫке эшсе ботинкаларҙы кейеп Баҡыйға барыр, уға, ҡара, шаярыуың нимә эшләтте, мине саҡ үлтермәнеләр, тип әйтер өсөн урамға сыҡтым. Ҡапҡаны ябыуым булды, күкрәгенә яра алған фронтовик Апуш килә.

— Былайтып кем биҙәне? — тип һораны ул аптырап.

— Әй, Баҡый менән һуғыштыҡ та, — тип алданым мин Апушты.

— Берәй ҡыҙҙы бүлешә алманығыҙмы әллә?

— Юҡ. Бергә эскәйнек, йәш саҡтағы үпкәләрен иҫләргә тотондо. Теге саҡ боҙ аҫтына мине һин эттең, ти. Әләгештек тә киттек. Туҡмарға китеп барам әле.

— Минең өсөн дә кәрәген бир. Ни өсөн икәнен үҙе бик яҡшы белә.

— Ярар.

Бәкый сәй эсеп ултыра ине. Йөҙҙө күрҙе лә тыныс кына:

— Закир килгән икән, — тине һуҙып кына.

Итектәрҙе алып киткәндәрен әйткәс, бындай тәкдим индерҙе:

— Давай, фронтовиктарҙы йыяйык та һөжүм ойошторайык, ә? Тыл команктарын укытайык, ә?

— Ниндәй фронтовиктарҙы йыяһың? Икебеҙҙән башкалары барыһы ла ғәрип-ғөрәбә бит. Апуш бармаясак, куркак. Мин һөжүмгә каршы. Етәр, һуғыштык.

— Ярар, улайһа ағайға әйтермен, — тине Бәкый, бер аҙ уйланып ултырғас, — район милицияһында уның фронтовик дуҫы эшләй. Давай, ултыр, сәй эс, мөхәббәт фронты инвалиды.

Бер көн үткәс, ул миңә һалмыш көйө инде лә, байтак һөйләшмәй ултырғандан һуң, күңелһеҙ генә былай тине:

— Китәм, был тиҙәккә сумған ауылда бүтән кала алмайым. Дүрәктәр йәшәһен, тик Бәкый түгел. Әлегә Тирләнгә тиклем йәйәү. Листопрокатныйға эшкә керәм, мужит Белоретка ла олағырмын.

— Шәүрәң?.. Уны үҙең менән алаһыңмы?

— Кәнтәй булып сыкты ул! — Бәкый йәмһеҙ итеп йөҙөн боҙҙо. — Гел минән касып йөрөнө. Керәм өйҙәренә. Шәүрә кайҙа? Юк. Кайҙа һуң? Белмәйбеҙ. Кисә Фуатка барҙым (Бәкыйҙың ике туған энекәше, ауыл гармунсыһы, фырт егет), һеңлекәштән һорайым, Фуат кайҙа, тип. Лапаҫ башында, бесәнлектә, ти. Бесәнлеккә менһәм, Шәүрә менән яталар.

Бәкый әсе күҙ йәштәре менән иланы. Уны нисек, нимә тип тынысландырайым икән һуң? Беҙ һуғыштык, еңдек, тыуған яктарға тере килеш әйләнеп кайттык һәм... өйҙә үҙебеҙ тулыһынса тар-мар ителеүгә дусар булдык. Иҫерек күҙ йәштәре менән битен йыуа-йыуа Бәкый өйҙән сыкты. Мин ауылда уны башкаса күрмәнем.

Артабан ул Тирләнгә барып, листопрокатныйға эшкә керәсәк, унан тар тимер юлында проводник булып эшләйәсәк, мөхәббәтһеҙ өйләнәсәк, кырк йәшендә туберкулеҙдан үләсәк. Әллә тура килеү, әллә яҙмышыңа яҙылғанды күрәһең инде тигәндәй — уның иртә үлеүенә йылға сәбәпсе булған. Тирлән быуаһы эргәһенән эшкә китеп барғанда, унда октябрь боҙонда малай-шалай уйнап йөрөй икән.

Ҡапыл боҙ ярылып киткән, малайҙар ярға йүгерешкән, ә берееhе өлгөрмәгән, hыуға батҡан, боҙ ситтәренә йәбешеп ҡысҡыра икән, ҡотҡарығыҙ, тип. Баҡый балаға ташланған, hөйрәп сығарған, тик үҙе лә hыуланған. Эшенә килhә, начальнигы ебәрмәй, йәнәhе, hине алыштырыр кеше юҡ, ә Баҡый лысма hыу кейеме менән тормоз майҙансығына киткән — өшөгән-ҡатҡан, үпкәhенә hыуыҡ тейҙереп аяҡтан йығылған. Унан — туберкулез, тубдиспансер, санаторийҙар. Бәлки, төҙәлер ҙә ине, тик эсә башлаған. Беҙҙең hуңғы осрашҡанда әйткәнемсә, hаулығына төкөрөп ҡараны. Ә Баҡыйҙың яратҡан ҡыҙын тартып алған Фуат, туйҙарҙа кешеләрҙе гармунына йырлата-уйната торғас, тамам эскегә hалышты, кеше ҡиәфәтен тамам юғалтып, йәш кенә көйө автобус туҡталышында ятып үлде.

Мин өйҙә ултырҙым, дөрөçөрәге, яттым hәм урланған итектәр өсөн ҡайғырҙым. Асыҡтым. Бер көн Ғәзим, минең бригадир ағай, керҙе. «Давай, бесән йыйырға», — тине ул. «Юҡ, булмай, ҡабырғалар ауырта». — «Нишләп, hуғыштыңмы әллә?» — «Эйе, бер дүрәк менән ҡыҙ өсөн талаштыҡ». — «Энекәш, hин дә миңә оҡшағанhың икән. Мин дә бит hинең hымаҡ йәш саҡта ҡыҙҙар арҡаhында күҙ күгәртеп йөрөй торғайным. Давай, ятма, сыҡ, саф hауала тиҙерәк hауығырhың. Кәбән hалмаçhың, hөйрәткескә тейәп кенә торорhоң. Итле аш ашарhың, бәлки, ҡымыҙ ҙа булыр. Иртәгә иртәнсәк әҙер тор, алырға керәм».

Иртәгәhенә иртәнсәк ул мине йылға аръяғындағы туғайҙарҙағы бригада бакуйҙарына алып китте. Бесән йыйыу — мөhим эш, етди эш, үҙеңә сапҡанда бигерәк тә. Сабыуға өс кенә көн ваҡыт бирелә, берәй оятhыҙы hинең бакуйҙарҙы йыйып алып китмәhә йәки иçерек көтөүсе малдан тапатмаhа, бөтә донъяңды онотоп сап та сап. Алла биреп сапҡас, көтмәгәндә-уйламағанда ямғырҙар башланhа, бесәнең бакуйҙа ятып сереүе лә бар. Шулай ҙа бесән эше — колхоздыҡы булhынмы, үҙеңдеке булhынмы — крәçтиәндең иң күңелле шөғөлө. Йәй көнө йылы, ялан үләндәренән бал еçе аңҡый, кипкәндәренән дә тәмле еçтәр килә. Берәй минут баш осоңа ҡарап торhаң, яландар өçтөндә бөйөк рәссам тарафынан тыуҙырылған иç киткес күренештәр асыла: бейек, ҡатлы-ҡатлы болоттар йә hабын ҡыуыҡтарын хәтерләтә, йә ҡар өйөмдәренә оҡшап китә. Ҡайын күләгәhе аçтында төтөн еçен еçкәп сәй эсеү — үҙе бер мөғжизә, үҙе бер ғүмер.

Һуғышҡа ҡәҙәр, бесән йыйған ваҡыттарҙа, кешеләр менән аттар ял иткән арала беҙ, һөйрәткес һөйрәттергән малайҙар, ҡысҡырыша-ҡысҡырыша һыу инә торғайныҡ. Бесәнде ҡуна ятып эшләгәндә ямғыр яуыуын теләй инек, яуһа, иртәгәһенә йыйыу юҡ: бесән һыу, беҙгә ауылға ҡайтыу мөмкинлеге тыуа. Ауылға, бәлки, кино килтергәндәрҙер. Ә саҡ ҡына үҫкәс һәм Ғәлиәне ярата башлағас, клубҡа уны күреү теләге йөрөттө. Ошо теләк, ошо уй-хыялдар ҡайҙа булды икән? Шул осорҙағы ағайҙарҙың, хатта бергәләп һыу ингән, ярлауға ырғыған малайҙарҙың, бөгөн күбеһе юҡ. Апайҙар олоғайҙы, ҡыҙҙар кейәүгә сығып бөттө йәки сыға алмай яңғыҙлыҡта ҡартая.

Эҫе яландарҙың шифалы һауаһынан, ҡойто ғына булһа ла бригада ризығынан мин саҡ ҡына тын алдым, тереләм, битемдән, күҙ төптәренән күк китте. Ә күңел һаман тынысланып етмәй ине әле. Шуныһы үкенесле: итекһеҙ ҡалдым. «Дан» ордены кавалеры, ярты донъяны фашизмдан ҡотҡарған һалдаттың берҙән-бер мөлкәте ине ул. Эйе, тағы сәғәтем бар, сәғәтһеҙ көн итеп була, бында берәү ҙә сәғәткә ҡарап йәшәмәй, ә итекһеҙ нишләргә һуң?

Икенсе борсоған нәмә — уныһы инде тәмле тойғо — Ғәлиә менән осрашыуҙы, ҡулына ҡағылыуҙы онотоп булмай. Мин уны һаман яратам, уны теләйем, кире ҡағылыуҙан, үҙемдең көсһөҙлөгөмдән йонсойом.

Йылға аръяғындағы туғайҙарҙағы бесәнде йыйып бөткәс, беҙҙең бригада Шишмәтауға күсте. Уның битләүендә лә беҙҙең бакуйҙар ята ине. Яҡындан ғына, тау башынан, ике колхоз сиге үтә, тауҙың теге яғында — Ғәлиә. Мин һаман уның тураһында уйлайым, итек тә иҫкә төшөп ҡуя.

Бер көн төшкә ҡәҙәр ныҡ ҡына ямғыр яуып үтте, йыйылған бесән һыуланды. Ҡыҙҙыра башлағас, беҙ уны әйләндерә, тарата башланыҡ. Ашағансы кибергә тейеш. Төшкө аштан һуң аттарҙы Талышман йылғаһына эсерергә алып киттек. Мин уйнап торған йәш айғырҙы мендем. Китеп барғанда ҡапыл ҡыйыу фекер килде бит башҡа: Ҡоҙашҡа барып әйләнергә! Закир бындай көндә өйҙә ултырмаҫ, моғайын да, яландалыр, Ғәлиә лә шундалыр. Эшкә киткәндә, һәр хәлдә һуғышҡа тиклем шулай ине, ишекте бикләмәйҙәр. Итекте, моғайын да, йәшермәгәндәрҙер, эҙләһәм табырмын, тауыш-тынһыҙ ғына алыр ҙа китермен.

Йылғаға барып етмәй төшөп мин Балаҡай тауына боролдом, унан иген баҫыуы буйлап саптым, тар һыртҡа еттем, бейек тауҙы атлатып үттем, тауҙың теге яғына сыҡ-

тым да түбәнләскә юрттырып төшөп киттем. Уң яҡта — ауылға алып бара торған юл, һул ҡулда — ҡайын сауҡалығы, арыраҡ — Ҡоҙаш йәшеренгән ҡалҡыулыҡ.

Сауҡалыҡ аша барғанда һирәк ҡайындар араһындағы туғайҙа бесән сапҡан бер ҡатынды шәйләнем бит. Миңә арҡаһы менән тороп теге яҡҡа ҡарай сапһа ла, һын-ҡиәфәте, тән-хәрәкәттәре нисектер таныш тойолдо. Ғәлиә түгелме? Бәй, ысынлап та, уға оҡшаған шул. Ниндәй осрашыу! Тирә-яҡҡа ҡараным — яҡында кеше-маҙар күренмәй. Һаҡлағанды һаҡлармын, тигән ти, күреп ҡалып көнсөл иренә еткерһәләр, йәнә төнөн килгәндәрен, сираттағы ҡабырғалар һыныуын, күҙ төптәре күгәреүен көт тә тор. Аттан төшөп, уны ҡайынға бәйләнем дә һаҡ ҡына Ғәлиә янына атланым. Итектәрҙе килтерһен, килтермәһә, үҙенә үпкәләһен, тип ҡурҡытырға, тип уйлайым үҙем, шунан артыҡ әллә ни пландар юҡ.

Үлән ҡыштырлауын ишетеп, Ғәлиә ҡапыл минең яҡҡа боролдо.

— Ой, ҡалай ҡурҡыттың,— тине, тауышы ҡалтырап сыҡты. — Бында нишләп йөрөйһөң?

— Һеҙгә китеп бара инем, һине күреп ҡалдым да туҡтаным,— тип яуапланым мин.—Һинең ирең дүрәк, энеләре менән килеп, ҡабырғаларҙы һындырғансы туҡманы, етмәһә, итектәрҙе алып киткән. Ҡабырғалар ялғаныр, ә итектәрҙе ҡайҙан алам? Ул бит — Гитлерҙы еңгән һалдат итеге, — уныһын алданым инде, дөрөҫөн әйткәндә, уларҙы һуғыштан һуң биргәйнеләр.— Әгәр иртәгә үк килтермәһә...

— Нимә юҡты һөйләйһең? Ниндәй итек? Мин бер ниндәй ҙә итектәр күрмәнем.

— Йәшергәндәрҙер. Тәлғәттең итектәрен алып киттек, тип һиңә әйтеп торалармы ни? Энеһе алғандыр. Ҡабатлап әйтәм: әгәр килтереп бирмәһә, мин фронтовиктарҙы йыйып алып барам да Закирыңды беренсе группа инвалиды яһайым, белдеңме?

Үҙем ошоларҙы һөйләп торам, үҙем йоторҙай булып Ғәлиәгә ҡарайым. Ағастар, тәмле үлән, бал еҫе таратып ултырған төрлө төҫтәге сәскәләр араһында бала сағымдан бирле яратҡан ҡатын баҫып тора, үҫмер сағымда яҙған шиғырҙарҙағы, төштәремдәге, фронттағы һағыш, яңғыҙлыҡ һәм аҡланмаған, тормошҡа ашмаған хыялдарым сәбәпсеһе, кем белә, бәлки, ул был ҡәҙәре мөхәббәткә тиң дә түгелдер, тик нишләйһең, йәш күңел шулай яратылған, уға бойороп та, ҡушып та булмай һәм ул ғүмер буйы берҙән-

бер булып ҡала. Ҡаштарына уҡ төшөрөп бәйләгән аҡ яулыҡ аҫтынан ҡараған күҙҙәр, асыҡ ҡоро ирендәр, ап-аҡ тигеҙ тештәр, сыбар күлдәгенең асыҡ иҙеүҙәре, тулы балтырҙар, бейек калуштар кейгән аяҡтар... Ауылдан йыраҡ ятҡан ошо туғайҙа, аҡ ҡайындар араһында икәүҙән-икәү генә бер-береңә ҡарап тор инде... Унан китеп бар, имеш. Быныһын, буш ҡына китеүҙе, бер ваҡытта ла үҙемә ғәфү итә алмаясаҡмын.

Тәүәккәллек килгәндә лә тулы ышаныс юҡ ине әле. Һуғышта мин немец ҡатындарын бер ниндәй ҡурҡыуһыҙ көсләй торғайным. Ә бында йөрәк дарҫлап тибергә керешге, башҡа ҡан бәрҙе. Ысын мөхәббәт бар саҡта тулҡынланмаған йөрәк булмағанын мин белмәй инем әле.

Ғәлиә салғыһын — осло, үткер, теләһә кемде һә тигәнсе үлтерә ала торған тимерҙе тотоп тора ине.

— Ҡайҙа, бир әле, сабып ҡарайым, әтеү күптән салғы тотҡан юҡ, — тинем.

Ғәлиә тыңлаусан ғына салғыһын миңә һондо, ә мин салғы ҡулыма эләгеү менән ситкә ташланым да, биленән ҡосаҡлап алып, бакуй өҫтөнә йыҡтым. Минең көтөлмәгән ҡылыҡтан был аптырап ҡалды, аңына килгәс, ҡаршылашырға кереште, ҡысҡырҙы, шыңшыны, битте тырнаны, төкөрөндө, эш уҙғас хәлһеҙләнеп ҡулдарын йәйҙе лә тынып ҡалды.

Мин һаман ята бирҙем, лексиконымда бөтөнләй булмаған мөхәббәт һүҙҙәрен мөгөрләй-мөгөрләй («йөрәгем минең», «мин һине яратам», «донъяла һинән сибәр ҡатын юҡ») ята бирәм. Йөҙөнән һис күҙҙе алып булмай, ҡаштарының һәр бөртөгөн, янған йөҙөндәге ваҡ ҡына бәпкә йөндәрен дә күрәм. Ул да миңә ҡарай, ғәжәп — ныҡлап ҡарай. Нимә бар һуң был ҡараштарҙа, ҡурҡыумы, әллә күрә алмаусылыҡмы? Мөхәббәттән башҡа бөтәһе лә.

Көс-ҡеүәтем йәнә өс тапҡырға етте — минең менән былдай хәлдең ошоғаса булғаны юҡ ине.

Һуңынан, эште тамамлап бакуйҙа ултырғанда, ул:

— Бына һин ниндәй икәнһең? — тине. Һәм түгелеп иларға кереште. Мин уны йәлләмәнем дә, тынысландырманым да.

— Мин һинең менән нимә эшләгәнемде ҡайтҡас ireңә әйт. Ул һине туҡмар ҙа ҡыуып сығарыр. Миңә килерһең йәшәргә. Балаларыңды тәрбиәләрбеҙ, үҙебеҙҙекен тыуҙырырбыҙ.

— Бына һин ниндәй, ә? — тип ҡабатланы Ғәлиә. — Үҙеңдең иҫәр башың менән уйлап ҡара: минең ир, ике

бала, йорт, хужалыҡ бар, ә һинең миҙалдарыңдан башҡа нимәң бар?

— Һаулыҡ булһын, донъя малы табылыр.

— Һинең менән табылыр, табылмай ни! — Ғәлиә асыулы күҙ һирпте лә өҫтәп ҡуйҙы. — Бел, мин һине бер ҡасан да яратманым, бер ҡасан да ҡатының булаһым юҡ, күрә алмайым мин һине, сволочь.

Ул ҡапыл ҡалҡынды ла йоҙроғо менән йөҙөмә килтереп һуҡты.

«Ярай, һәйбәт, — тип уйланым мин, — быға ҡәҙәр хыяллана ла алмағаныма бөгөн килеп ирештем, яратҡан ҡатын менән енси яҡынлыҡтан иҫ киткес ләззәт, рәхәтлек, тетрәнеү алдым, ул минең ҡатыным булған хәлдә лә бындайҙы, моғайын, татый алмаҫ инем».

— Үҙең беләһең, — тинем, ултырған еремдән ҡалҡынып, — етди ниәт менән әйткәйнем. Ә итекте иртәгә үк килтерһендәр, — һәм мин атым яғына ыңғайланым.

Ятыр алдынан эстән ишек тотҡаһына типке һалып ныҡлап бикләндем шулай ҙа. Әммә төн тыныс үтте, бер ҙә уянмай йоҡланым. Иртәнсәк тышҡа сыҡҡанда шпорлы итектәрем болдорҙа ултыра ине.

Ғәлиәбаныу менән булған хәлдән һуң күрше Әлфиәгә, үҙемдең бала саҡтағы «ҡатын»ға, иғтибарлыраҡ ҡарай башланым. Нишләйһең, тормошом яратҡан ҡатындан башҡа үтәсәге көн кеүек асыҡ. Бер ҡасан да яратманым, бер ҡасан да бараһым юҡ, тине. Был һүҙҙәр миңә тамсы ла өмөт ҡалдырмай. Әлбиттә, ҡартайғансы онотасағым юҡ, яратыуым да төшөмдә, уның йәш сағын хәтерләү рәүешендә генә буласаҡ.

Яҙын Әлфиәне йышыраҡ күрәм. Ҡапҡаһынан сыға ла өҫтөнә фуфайка кейгән, башына шәл ябынған, аяҡтарына резина итектәр кейгән күршем ферма юлына илткән тыҡрыҡҡа борола. Ул әллә һауынсы, әллә малсы булып эшләй. Ҡай саҡ урамда ла осратып ҡуям, иҫәнләшәм, үҙем һәр ваҡыт малай саҡтағы «өйләнешкән»де иҫкә төшөрәм. Бәлки, ул да хәтерләй торғандыр ул ваҡиғаны. Әлфиә яңғыҙы ғына йәшәй. Атаһы юҡ, һуғыштан ҡайтмаған — һөйәктәре йә Мәскәү, йә Сталинград янында ятып ҡалғандыр. Бер мәл, әсәйең ҡайҙа һуң, тип һорашҡайным, үлде, тине.

— Ауырыпмы ни? Йәш һымаҡ ине лә инде.

— Төрмәлә үлде.

— Нимәгә ултырткайнылар?

— Әсәйем, Зәйнәп, Хәҙисә апайҙар ҡышын ырҙын ҡарауылланы. Ярты тоҡ бойҙайҙы йәшергәндәр ҙә бүлешеп алғандар. Аслыҡ ине бит. Һинең дүрәк Ғәзим ағайың ошаҡлаған.

Йәй булғас, һыйырҙарҙы йәйге утлауыҡҡа ҡыуҙылар, һауынсылар Ҡоро йылға аръяғында йәшәне, ауылға мунсала йыуыныррға ғына ҡайтып йөрөнөләр, шунлыҡтан мин Әлфиәне оҙон йәй буйы бер тапҡыр ҙа күрмәнем. Үҙемдең тәҙрәнән уны күҙ еткәс, һыйырҙарҙы ҡышҡы һарайҙарға алып ҡайтҡас ҡына, күрә башланым. Ул шул уҡ фуфайкала, резина итектәрҙә, ферма юлына төшөр өсөн октябрь бысрағын кисә-кисә һаман тыҡрыҡҡа ашыға. Кистәрен тәҙрәһенән һүрән генә яҡтылыҡ һирпелә, кәрәсин лампаһы бик иртә һүнә. Аҙна аҙағында уның иҫке генә мунсаһы мөрйәһенән төтөн сыҡһа, минең башҡа шундай гонаһлы уй килә: ҡапыл ғына мунсаһына барып кер ҙә инәнән тыума яланғас ултырған ерендә тотоп ал ине. Унан урам аша йылт итеп төндәрен янына йөрө ине. Хыял. Үҙен ихтирам иткән ҡатын-ҡыҙ шуға риза буламы инде. Хәйер, уны бер ҡасан да ярата алмаясағымды, бер ҡасан да өйләнә алмаясағымды үҙем бик яҡшы беләм. Һүҙ ҙә юҡ, ул бөтөнләй үк насар ҙа түгел, тейешенсә кейендереп, сәстәрен тарап ебәрһәң, хатта бына тигәнгә әйләнәсәк, һәйбәт ҡатын буласаҡ. Әммә миңә әлеге көндә даими рәүештә «хәлен белеп» йөрөй торған бисә кәрәк. Ярайһы ғына туҡлана башланым, трудоденгә бер аҙ бойҙай бирҙеләр, оном бар, икмәк бешерергә, хатта ҡоймаҡ ҡойорға өйрәнеп алдым. Йәйен өләсәйҙең бесәнен саптым, ул миңә һөт, ҡатыҡ бирҙе, ҡай саҡ ҡаймаҡтан да өлөш сығарҙы. Ҡыҫҡаһы, тамаҡты туйҙырып һикелә ятҡанымда әллә нимәләр уйлайым, әллә нимәләр күҙ алдына килә, организм ҡатын-ҡыҙ һорай. Мамыҡ күкрәктәргә лә риза, тик өйгә алып ҡайтырға йәки, яңғыҙ йәшәһә, артҡы яҡлап ҡасып-боҫоп барырға кәрәк — хәҙер ҡара көҙ, йәйге кеүек йылға буйына алып барып булмай, иртәгәһенә бөтә ауыл һөйләйәсәк...

Мин үҙемде һаман шағир тип иҫәпләйем. Үҙемсә, тиреҫ еҫе аңҡып торған һауынсыға өйләнгән ауыл ирекәйе менән сағыштырғанда, миңә бөтөнләй икенсе яҙмыш бирелгән булырға тейеш. Үҙемдең алдағы тормошомдо бөйөк шағирҙың дан нурына күмелеп йәшәүендә күрәм. Әлбиттә, йәшәүем дә — бөтә шағирҙар йәшәгән Өфөлә. Ғәлиә — беренсе мөхәббәтем, наҙан ауыл бисәһе булһа ла,

мин ҡартайғансы уның менән йәшәйәсәкмен. Ул мине яратмаҒас, йырлы Өфөлә үҙемдең йырҙы, шиғриәтте аңлаған шиғри ҡатынымды осратасаҡмын. Әле йәшем уҙып бармай.

Мин мөхәббәт хаҡында поэма яҙасаҡмын. Әҫәрҙең сюжеты былай. Һуғыштан һуң һалдат ауылға ҡайта. Немецтарҙа әсирлектә булған, яҡындары уны үлгән тип уйлап бөткәндәр. Йылдар буйы һалдатты яратҡан ҡыҙы көтә. Әммә ҡыҙҙың атаһы, ауылдың бәләкәй генә түрәһе, бронь арҙамында фронтҡа бармай ҡалған тыл ҡомағы, йәштәрҙең бергә булыуына ҡаршы. Йәнәһе, әсирлектә йөрөгән, илгә хыянат ҡылған, ояты ни тора. Ҡыҙын икенсе бер түрәнең улына бирмәксе. Әммә ҡыҙ өйҙән сығып китә лә сусҡа ҡарауға инә һәм шундағы бәләкәй генә малсылар йортонда һөйгәне менән йәшәй башлай. Балалары тыуа. Ҡыҙҙың әсәһе иренән йәшенеп кенә быларға ризыҡ ташый, ейәнен бәүетә. Оҙаҡламай уҫал атай ҙа ейәне барлығын белә, йәштәр янына килә, бәпесте ҡулына алып, һеҙ нишләп тиҙәк араһында йәшәйһегеҙ әле, ҡайтығыҙ, тип йәштәрҙе ғәфү итә. Туй яһайҙар, ата-әсәһе яңы йорт һалып бирә, йәштәр әкиәттәге кеүек бәхетле тормош көтә башлай. Поэманың фекере уйымса шулай: мөхәббәт ике яҡлы булһа ғына бөтә кәртәләрҙе еңеп сыға ала.

Бер ваҡыт, шәмбе көн, Әлфиәнең мунса мөрйәһенән төтөн сыҡҡанын күрҙем. Кисен, шәменә ут алғас, барырға иҫәп: мендәр ҡосаҡлап күпме ятырға мөмкин? Ихатаһына индем, унан — соланға, ун йыл элек «ир менән ҡатын» булып уйнаған соланға, тупһа аша атланым — өйҙә юҡ. Тимәк, мунсала. Киттем. Мунса алдына индем дә эске ишекте тарттым. Эҫе пар араһынан ҡыуыҡһыҙ шәмдең һүрән генә яҡтыһында йәш ҡатындың һушты алырлыҡ яланғас кәүҙәһен күрҙем. Был мәлдә ул бактан эҫе һыу ала ине шикелле. Ишек тауышына ҡапыл ғына боролдо ла, мине шәйләп «Ой!» тип ҡысҡырып ебәрҙе һәм шундуҡ тигәндәй миңә эҫе һыу һипте. Эҫе һыу биткә килеп тейгәс, мунса алдына нисек атылып сыҡҡанымды һиҙмәй ҙә ҡалдым, асыуҙан шунда ятҡан утын ағасын алып ишеккә бәрҙем.

— Хулиган! — тигәне ишетелде Әлфиәнең.

Бер көн үткәс, уны урамда осраттым, иҫәнләштем дә:

— Ниңә эҫе һыу һиптең? — тинем. — Битте бешереүең йә һуҡыр ҡалдырыуың бар бит.

Ул ҡарашын ситкә алды, тулы ирендәре ҡалтырап китте, үҙе лә уңайһыҙланды шикелле.

— Ә һин кәрәкмәгән ергә тығылма.

— Мин бит һинең менән һөйләшергә кергәйнем.

Ул көлөп ебәрҙе.

— Ҡыҙҙар менән кем мунсала һөйләшә инде? Һөйләшер ниәтең булғас, өйгә кил.

Мунсалағы яланғаслығы үҙенә тартып, ылыҡтырып, ымһындырып тик торҙо, күҙ алдынан китмәне. Яратмаһам да, мин уны теләнем, бөтә тәнем-йәнем, ҡаным уға тартылды. Төндә генә янына барып бесәй һымаҡ эҫе түшәктә иркәләнгем, үҙен иркәләгем һәм, эште бөтөргәс ҡайт та кит ине, тип хыялландым. Мин үҙемдең хайуанлыҡ эгоизмы менән ҡатын-ҡыҙ үҙе һине теләйме, юҡмы, ғөмүмән, ул нимә теләй икәнен уйламай торған йәштә инем шул.

Иртәгәһенә, тәҙрәләргә һүрән ут ҡунғас, юл аша сыҡтым да күршенең ишеген ҡаҡтым. Шаҡымаһам да була ине — ул йылдарҙа кешеләргә шаҡымай инәләр ине әле.

— Кер. — Ул минең килгәнде белә ине.

Һуғыш алды йылдарынан бирле иҫке йорт эсендә үҙгәреш булмаған тиерлек, ағас стенаға осһоҙ обойҙар йәбештерелгән дә һике урынына тимер карауат өҫтәлгән. Өҫтәлдә — самауыр, Әлфиә яңғыҙ ғына сәй эсә. Ултырҙым. Ул соланға сығып сынаяҡ менән ҡаймаҡ индерҙе. Икәүләшеп сәй эсә башланыҡ. Әлфиә минең утә асыҡ, оятһыҙ ҡарауҙан тартынып ҡараштарын ситкә ала. Ҡатын-ҡыҙ һине сәй менән һыйлағанда, үҙеңде тәртипле күршеһе тип тыныс ҡына әңгәмә ҡорғанда, уға нисек яҡынаяһың да ҡайһы яҡтан киләһең икән?

Иртәгәһенә һуңыраҡ — ун икенселә керҙем. Иртә тороусы ауыл был мәлдә йоҡлай. Әлфиә ятмағайны әле. Күрәһең, ятырға йыйынып йөрөгәндер: ауыр толомдары биленә тиклем тағатылған, өҫтөндә — таҙа эске күлдәк. Тупһа аша атлау менән, үҙем дә һиҙмәҫтән, уны һығып ҡосаҡлап алдым. Ғәжәп, ул мине этмәне, бөтөнләй ҡаршылашманы, нисектер күндәм генә һылашты ла ҡуйҙы кәүҙәгә. Өндәшмәүен мин ризалыҡ билдәһе тип аңланым — йәһәт кенә үтеп, уны карауатына йыҡтым да эске күлдәген һалдыра башланым. Әммә ул тартышты, бөтә тәнен пружина кеүек ҡыҫты, күҙҙәрен ҙур асып миңә ялбарыулы ҡараны. Мин уның һайын ныҡышмалыраҡ, оятһыҙыраҡ ҡылана башлағас ҡына, тауышы сыҡты:

— Юҡ, юҡ, кәрәкмәй. Тәлғәт...

Ошонда үҙемдең ирегемдән тыш, теләгемә баш була алмай әйт тә һал:

— Мин һиңә өйләнәм!
— Өйләнгәс бирермен...
Хәлдән тайҙым, быуындар йомшарҙы, тороп өҫтәл яғына сигендем.
— Мине үҙеңә өйләндерергә теләйһеңме?
— Мин һинең б... булырға теләмәйем, — тип яуапланы Әлфиә. — Үҙең уйлап ҡара: бер нәмәң дә юҡ, кеше өйөндә йәшәйһең, ас-яланғас, бысраҡ йөрөйһөң...
— Мин һине яратмайым, ярата ла алмам, — тинем мин, оҙаҡ ҡына һүҙһеҙ ултырғас. «Бер мөлкәтең юҡ, ас-яланғас, бысраҡ йөрөйһөң», тигәне йәнгә тейҙе, шуға ла дорфа яуапланым, үҙен кәмһеткем килде.
Ул һиҙелер-һиҙелмәҫ көлөмһөрәне. Был көлөмһөрәүҙә нимә йәшеренгәнен мин аңламаным.
Уға мин бүтән барманым. Ике аҙна үтеп китте, тау биттәрен ҡырауҙар ағартты, көндәр һыуыҡҡа тартты. Мейесте мин иҫке кәртә ҡалдыҡтары менән йылыта башланым, ҡар яуғансы бригадирҙан ат һорап алып утынға барырға ниәтләндем. Атайҙың, хәҙер инде сит бәндәләрҙең өйөнә әйләнгән был йортта, оҙон ҡышты үткәрәһе бар.
Яҙмыштың нимә икәнлеге минең өсөн ят. Әммә маңлайыңа яҙылған тәҡдир йәки беҙҙең ихтыяр менән барлыҡҡа килтерелгән осраҡлы ваҡиғалар, ҡайһы бер шарттар тарафынан табылған тормошта беҙ үткән юлдарын таба алмайынса яңылышып, шуны берҙән-бер юл тип ҡабул итәбеҙ ҙә шуға буйһоноп йәшәйбеҙ. Быны хата юл икәнен белгән-аңлаған хәлдә лә ризалашып, ҡул һелтәп шул юл менән китеп тик барабыҙ.
Бер ваҡыт яҙмыш миңә Рамаҙан ағайҙың ҡатыны образында керҙе лә (атай йортон ҡасандыр мин уларға һатҡайным), йортто Дәүләтшин Ноғоман үҙенең улына алырға теләй, һиңә икенсе урын эҙләргә тура киләсәк, тине. Бына тағы, ауылға ҡайтҡан беренсе көндәге һымаҡ, мин ҡыйыҡһыҙ ҡалам. Өләсәйгә бара алмайым, барғым килмәй. Ҡайҙа төртөләргә, артабан нисек йәшәргә?..
Бер нисә көн уйланып, төрлө варианттар эҙләп үтте, ниһайәт, мин ошондай фекергә килдем: ни бысағыма кәрәк һуң ул мөхәббәт, яратыу тигәндәре, миңә бит нисек тә йәшәргә, көн итергә кәрәк; үҙемдең тәғәйенләнешемде беләм, поэма яҙырмын, китап сығарырмын, артабан күҙ күрер, бәлки, Ғәлиәне яратҡан кеүек берәйһен яратырмын, ә быны, Әлфиәне, айырырмын. Хәҙергә уны ҙур маҡсатҡа ирешеү өсөн файҙаланырға кәрәк...

Мин яҙмышыма буйһонорға ҡарар иттем. Кисен Әлфиәгә керҙем дә:

— Әйҙә өйләнешәйек, — тинем.

Ул йылмайҙы, бер аҙ өндәшмәй торҙо. Һүҙҙәремә ышанмағандай йәнә күҙҙәремә ҡараны, көттөрөп кенә яуап бирҙе:

— Әйҙә һуң.

Ауыл Советына барып яҙылыштыҡ, туй булманы. Әлфиәнең ике туған ағаһы килде ҡатыны менән, араҡы эстек, һарыҡ ите менән туҡмас ашаныҡ, кисен үҙемдең өйҙән ҡатын өйөнә яҫтыҡ, иҫке одеял, кейеҙҙе килтерҙем дә карауатына яттым.

Ул ҡыҙ ине.

Шулай итеп, минең карап һәләкәткә осраны. Етеҙ тулҡындар мине һил ярға ташланы. Сыҡҡан ярҙа — өй, һыйыр, өс һарыҡ, бер нисә тауыҡ, ҡаҙ һәм, әлбиттә, ҡатын. Етемгә, Ғәлиә әйтмешләй, орден, миҙалдарымдан башҡа бер нәмәм дә булмаған демобилизацияланған һалдатҡа, тағы ни кәрәк. Ғәлиәгә өҫтәп шуны ла әйтәйем, йәнә лә трофей сәғәт, шпорлы яловый итектәрем бар.

Әлфиә иртүк тора, өҫтәлдә ике бешкән йомортҡа, сынаяҡта ҡаймаҡ ҡалдырып, ғәҙәтенсә фермаһына сығып йүгерә. Ҡабалан ғына төшкө ашҡа ҡайта ла йүгереп йөрөп берәй нәмә әҙерләй, күберәген табала йомортҡа ҡыҙҙыра, унан йәнә һыйырҙары янына саба. Мин көҙҙән ашлыҡ һуғыуҙа йөрөнөм — ул саҡта молотилкаларҙы ҡайыштар ярҙамында тракторҙар эшләтә ине. Был эш бөткәс, фермаға мал ҡараусы булып барырға ла була ине, тик Әлфиә ҡаршы төштө: өйҙә ултыр, хужалыҡты ҡара, тине. Бәлки, икебеҙҙең дә тиреҫкә батып йөрөүҙе теләмәгәндер, бындай фекергә килеүенә, бәлки, мин белмәгән икенсе сәбәп тә булғандыр. Хәйер, эшләһәң өйҙә лә эш етерлек ине: мал аҫтын таҙартыу, утын ярыу, мейес яғыу, иҫке сепаратты әйләндереү, һирәкләп булһа ла ашарға бешереү. Алдан ҡалғансы ашарлыҡ ризыҡ юҡ, шулай ҙа асыҡманыҡ та. Һуғыштан һуңғы йылдарҙағы ярлы ауылда беҙҙеңсә көн итеүгә риза булырға кәрәк. Ашау, йәшәү, түшәк уртаҡ булһа ла, үҙемде бәхетле тойманым, сөнки Әлфиәне яратманым, яратып китә алманым. Нишләйһең, йөрәккә бойороп булмай шул инде. Был тойғоға мин үтә талапсан булғанмындыр, бәлки, уның нимә икәнен аңлап етмәгәнмендер.

Ә, ғөмүмән, нимә ул мөхәббәт? Ул, йырҙарҙа йырлағанса, татлы ғазап, иҫереү, кеше йөрәген яндыра, күмергә

әйләндерә торған уттыр. Әллә енси тартылыу ғынамы? Ҡатын-ҡыҙҙы яратыу булмаһа, иҫ киткес моңло башҡорт йырҙары ла тыумаҫ ине, тип уйлайым. Ниңә был тойғо бар кешегә лә бирелмәй, йәғни енси тартылыу тураһында ла уйланыу, кисереү тәрәнлеге, әҙәплелек менән тура килмәй? Ниңә әллә күпме ҡатын араһынан ир кеше берәүҙе генә һайлай, ҡатын бер генә иргә күҙ һала? Мин Әлфиәгә малай саҡта уҡ «өйләнгәйнем», әммә шул йылдарҙа уны түгел, ә икенсене яраттым. Дөрөҫөн әйткәндә, Әлфиә Ғәлиәнән бер ҙә кәм түгел, хатта матурыраҡ та. Йыуантаҡ бот-балтырҙар, тығыҙ түштәр, ике ҡалын ҡара толом, бына осам, бына осам тип торған ҡыйғас ҡаштар, ҡара-ҡоңғорт ҙур күҙҙәр, балаларса саф, ихлас йылмайыу. Бит остарынан бер ваҡытта ла һүнмәй торған ҡыҙыллыҡ, тулы ирендәр, ап-аҡ тештәр. Эйе, бындай ҡатынды ҡосаҡлап ятыуы рәхәт, уның бирелеүе, бер ваҡытта ла теләгемә ҡаршы төшмәүе лә оҡшай ине миңә. Шулай булғас, ниңә үҙемдең тәбиғи теләгемде ҡандырғас та, мин уға арҡамды ҡуйып ятам да аҡ ҡайынлыҡ уртаһындағы кескәй яланды, яландағы бейек үләндәр араһында йөрөгән аҡ алъяпҡыслы ҡатынды күҙ алдыма баҫтырам һуң?

Байтаҡ ҡына йәшәһәк тә, Әлфиә ниңәлер ауырға ҡалманы. Аптырағас, мин уны район больницаһына ебәрҙем, ул унан һөмһөрө ҡойолоп ҡайтты: һеҙҙең бер ҡасан да балағыҙ булмаясаҡ, тигәндәр. Тимәк, һуғыш йылдарының ҡаты һыуыҡтары, һәләмә кейем, аслыҡ, бала саҡтан уҡ ауыр эш, йыл әйләнәһенә кейелгән резина итектәр, тишек сарыҡтар үҙ эшен эшләгән... Бала беҙҙе бәйләр, араларҙы яҡынайтыр, арабыҙға йән өрөр, тигән өмөт тә юҡҡа сыҡты. Мин ниндәй бәхетһеҙ, хатта балам да булмаясаҡ, тип ҡайғырҙым мин. Хәйер, белгән кешеләр, дауаланырға мөмкин, һауыҡҡан, һуңынан бала тапҡандар ҙа бар, тип йыуатты-йыуатыуын, тик был һүҙҙәр генә өмөттө ялғаманы.

Аллаһы тәғәлә тарафынан онотолған бер ауылдың һауынсыһын кем ҡараһын да, Өфөгә кем алып барһын? Уға бит ваҡыт, аҡса, торор урын кәрәк. Доға, үләндәрҙән үҙе яһаған төрлө дарыуҙар, массаж менән дауалаған бер әбей табылды. Саҡырҙыҡ, һыйланыҡ, шунан ул доғаларын уҡыны, Әлфиәнең эсен ниндәйҙер май менән майлап оҙаҡ һыйпаны. Шулай кәрәк, тип ун тапҡыр килде был. Аҡса булмағанлыҡтан, беҙ уға йоморҡа, май менән түләнек. Һуңғы көн әбей былай тине: «Ҡатыныңа яҡыныраҡ ятып

йоҡла...» Мин уға элек тә яҡын ята торғайным, хәҙер инде, уның кәңәшен тотоп, Әлфиәгә тағы ла һылашыбыраҡ ята, элеккегә ҡарағанда ла йышыраҡ ҡосаҡлай, ярата башланым.

Ҡыш үтте, яҙ килде, һыйырҙарҙы йәйге көтөүлеккә ҡыуҙылар. Әлфиә шундағы ферма йортонда йәшәне (ул саҡта һауынсыларҙы ауылдан йөрөтөргә машина юҡ ине әле). Беҙҙең һыйыр колхоз малдары менән йөрөй, һарыҡтар ҙа көтөүлектә, ә тауыҡтарҙы, себештәрҙе, ҡаҙҙарҙы үҙем ҡарайым. Аҙна аҙағында мунса яғам — Әлфиә йыуынырға ҡайта. Ҡай саҡ, һағыныуҙан бигерәк үҙемдең ирлек бурысымды үтәү өсөн һәм сихырсы ҡарсыҡтың кәңәшен тотоп, фермаға киләм. Ҡатын уңайһыҙлана, ә һауынсылар мут йылмая, әгәр ямғыр яуһа, беҙҙе ҡалдыралар ҙа лапаҫ аҫтына сығып баҫалар, көн һәйбәт булғанда мин Әлфиәне урманға алып китәм.

Йәй үтте, ә ҡатын ауырға ҡалманы. Үҙенең ҡары, ҡыҫҡа көндәре, кәрәсин шәме яҡтыһындағы күңелһеҙ кистәре менән ҡыш килде. Үҙе менән эс бошоу, һағыш килтерҙе. Һәм, был минең тормош түгел, әлегеһе мин хыял иткән, мин көткән тормоштан бик алыҫ, тигән аңлау килде.

Минең аҡыллы, белемле кешеләр менән аралашҡы, яҙыусылар, шағирҙар менән китаптар тураһында ҡыҙыҡлы һөйләшеүҙәр алып барғы килә ине. Армияла полк клубында эшләгәндә — полктың бай китапханаһы бар ине — байтаҡ китаптар уҡыным, өс йыл эсендә бөтә рус классикаһы менән таныштым. Достоевскийҙың «Енәйәт һәм яза» романы тетрәндерҙе, ниндәйҙер Кнут Гамсунды табып, революцияға тиклемге хәрефтәр менән яҙылған томын яратып уҡыным, тик клуб мөдире капитан Михайлов, был китап тыйылған, уны уҡырға ярамай, сөнки Кнут — фашист, тип китапты алып китте. Ә бына Чехов күңелһеҙ күренде. Толстойҙы «еңә» алманым, шулай ҙа «Севастополь хикәйәләре» ныҡ оҡшаны. Унда күрһәтелгән һуғыш әшәкелеге һәм ахмаҡлығы, һалдат ғазаптары, бигерәк тә штабс-капитан Михайловтың үлеме иҫ киткес дөрөҫ, ышандырғыс яҙылғайны.

Ҡатынға былар тураһында һөйләү, бигерәк тә бәхәсләшеү — мөмкин булмаған эш. Ул дүрт класты ғына тамамлаған, Достоевскийҙы ла, Толстойҙы ла уҡымаған. Мәжит Ғафуриҙың «Ҡара йөҙҙәр»е менән таныш. Ғөмүмән, әҙәбиәт уның көндәлек мәшәҡәттәренән, көндәлек уйҙарынан бик алыҫ, ә хужалыҡ, һыйыр, тиреҫ тураһында һөйләшеү өсөн күп аҡыл талап ителмәй.

Ҡай саҡ ошоларҙы онотоп, дөрөҫөрәге, һөйләшмәй йөрөүҙе күтәрә алмай, шағирҙар, уҡыған китаптар тураһында хәбәр һата башлаһам, ҡатыным тыңлаған булып ҡылана — ә мин уның үҙенең уйҙарында йөҙөүен бик яҡшы күрәм — йыш ҡына мине тыңлап та бөтмәй өй мәшәҡәттәренә тотоноп китә. Икенсе ваҡыт ҡысҡырып башҡорт шағирҙарының шиғырҙарын уҡыйым да, оҡшанымы, тип һорайым. «Килештереп яҙылған», — тип яуаплай ул.

Әгәр ҡатыным Ғәлиә булһа, әлеге ише үҙемде яңғыҙ тойор инемме икән, тип тә уйлайым. Уның да бит әллә биш, әллә ете класс белем. Хәйер, беренсе мөхәббәт менән бер ҡыйыҡ аҫтында йәшәүе, бер түшәктә йоҡлауы бөтөнләй икенсе эштер, икенсе тойғолор. Ул малайҙар, ҡыҙҙар табыр ине, әҙәбиәт, китап, юғары материялар тураһында хәбәр һатырға ваҡыт та ҡалмаҫ ине.

Ә мин уны һаман онота алмайым. Ҡайындар араһындағы аҡланды һис хәтерҙән юйырлыҡ түгел. Ғәлиәнең аҡ алъяпҡысы, аҡ яулығы аҫтынан ҡараған ҡурҡыу ҡатыш һағайыулы ҡарашы күҙ алдында тик тора. Көсләнгәс, кәмһетелгән, йәберләнгән көйө ул аңына килә алмай бакуй өҫтөндә ултыра, илай, үҙе бер үк һүҙҙәрҙе ҡабатлай: «Бына һин ниндәй икәнһең!» — һәм йоҙроғо менән йөҙгә килтереп һуға. «Йөрәгем, мөхәббәтем минең!» — тим, эстән генә шуларҙы хәтерләп, уны йәлләп.

Әлфиә һаман ауырға ҡалманы. Ул нисектер шиңде, эскә йомолдо, һөйләшмәҫ булды. Бала таба алмағанына үҙен ғәйепле һиҙеүен аңлай инем. Был мине ярһыта, уның төшөнкөлөккә, меҫкенлеккә бирелеүе эсте бошора. Һөҙөмтәлә юҡ ҡына сәбәптән дә уға ҡысҡырам, иҫәр, тим, ә ул оҙон ҡаштарын күтәрә лә өнһөҙ генә миңә баға. Өндәшмәүе, яуапһыҙ ҡалыуы мине тағы ла нығыраҡ ярһыта, мин уға:

— Нимә таҫраяһың, күптән күргәнең юҡмы әллә? — тип ҡысҡырам.

Илленсе йылда иген емерелеп уңды. Һуғыш йылдарында етемһерәп ятҡан, үҫмерҙәр, ҡатын-ҡыҙҙар ғына эшкәрткән, урыны-урыны менән бөтөнләй ташландыҡҡа әйләнгән, сиҙәм үләне баҫҡан ер, күрәһең, ял итте, ысын хужаның ҡулын тойҙо. Көҙөн трудоденгә әллә күпме иген тараттылар, ә кешенең уны һалыр лары ла, тултырыр тоғо ла юҡ — арбанан ихата уртаһына бушаттылар ҙа киттеләр. Мөйөштәренә таҡталар ҡуйып, мин ашлыҡты соланға ташыным.

Тормош яйлап тыныс йүнәлешкә төштө, асығыусы булманы — асыҡһа ла бөтөнләй ҡараусыһыҙ ҡалған ҡартҡоро ла ата ялҡауҙар ғына асыҡҡандыр. Һуғыш, ниһайәт, онотола төшкәндәй итте, шулай ҙа ул кеше яҙмыштары артынан өҫтөрәлеүен дауам итте әле. Мин бының оҙаҡҡа, ғүмерлеккә икәнен ул саҡта белмәй, аңламай инем. Мине баш ауыртыуы йонсотто, ҡай саҡ юҡтан ғына йөрәк дарҫлап тибергә кереште, ҡулдар ҡалтыранды. Тиҙ ярһыным, ваҡ-төйәккә лә асыуландым, бер ваҡыт хатта әллә нимәгә Әлфиәне этеп ебәрҙем. Ул, әлбиттә, өндәшмәне, күҙҙәрен ҙур асып аптырап ҡараны.

Фронтовик Ханды үлтерҙеләр. Дөрөҫөрәге, имгәттеләр, үлеме больницала булды. Ул әсирлеккә төшкән булған икән, немецтарҙа ҡарауылда йөрөгән, һуғыштан һуң урман йыҡҡан, унан ғаиләһенә ҡайтҡан да шып-шым ғына йәшәп ятҡан. Әммә әсирлектә саҡта үҙе ҡыйырһытҡан кешеләр уны онотмаған — күрше райондан икәү оҙаҡ эҙләгән быны. Ниһайәт, тапҡандар ҙа бөйөрҙәрен төйгәндәр, умыртҡа һөйәген һындырғандар...

Шундай уҡ икенсе бер бәндә Ташкиҫеү ауылында колхоз рәйесе булып эшләгән. Бер ваҡыт ауылға ниндәйҙер кешеләр килеп, шундай-шундай бында йәшәйме, тип һорап йөрөгәндәр икән. Быны ишеткән рәйес лапаҫҡа ингән дә аҫылынған... Әсирлектә булған Зөлҡәрнәев Әнүәр тикшереүҙәр селтәрен үтеп ауылға ҡайта, өйләнә, башланғыс кластарҙа уҡытып йөрөй. Бер мәл уны ниңәлер хәрби комиссариатҡамы, ниндәйҙер икенсе конторағамы саҡырталар икән. Тормошта төрлө эштәр, төрлө саҡырыуҙар була, бындай осраҡта беҙ барыбыҙ ҙа тоҙаҡҡа эләккән ҡош һымаҡ тыпырсынырға керешәбеҙ. Әнүәрҙең дә ҡото алына һәм ул тауға ҡаса. Ҡасҡалаҡты тапҡандар (балта менән һелтәнгән килеш немец телендә нимәлер ҡысҡыра ла икән), тотоп бәйләйҙәр ҙә психбольницаға ебәрәләр. Тынысланып ҡайтҡан һымаҡ ине ауылға, әммә уҡыта алманы, урамға сыҡманы, йоҡлағанда мендәре аҫтына балта һалып ятты. Ҡатыны ташлап киткәс, эскегә һалышты, төшкөлөгөн ашар, мунсала йыуыныр өсөн рейс автобусына ултырып ҡалаға йөрөүҙе ғәҙәт итте. Һуңынан, байтаҡ ғүмер үткәс, конторала ултырыусы эҙәрлекләүсе һиҙгер кешеләрҙең оҙон ҡулы барыбер ҙә килеп етте быға. Бер ваҡыт эскән кешеләр алдында ике милиционер һалмыш Әнүәрҙе милицияға алып бара. Был ҡаршылаша, немец телендә әллә нимәләр ҡысҡыра икән. Тәртип һаҡсылары

эскән Әнүәрҙе кем тип ҡабул иткәндәрҙер, әммә шуныһы факт: үлтерә яҙғансы туҡмайҙар быны. Район больницаһында йән бирә.

Илле беренсе йылда пилорама ҡорҙолар. Халыҡ төҙөлөшкә тотоноп китте. Һуғыштан һуңғы йылдарҙағы йәштәр армияла хеҙмәт итеп ҡайтып кәләш әйттерҙе лә тоҡом арттырырға кереште һәм, атай-әсәйҙәре менән бергә йәшәргә теләмәй, яңы йорттар һалды. Мин дә таҡта ярҙырҙым. Өйгә түгел, ә күптәнге хыялымды тормошҡа ашырыу ине ниәт — немецтарҙыҡы һымаҡ бәҙрәф эшләнем. Әлфиә шундуҡ быcраҡ аяҡтары менән таҡтаға баҫты, мин, иҫәр, культуралы немецтар һымаҡ ултырып ярау ит, тип әрләнем быны. Ә ул: «Яланғас тән менән мин таҡтаға нисек ултырайым?» — ти. «Немецтар ултыра бит». — «Ҡайҙан беләйем. Мин һинең һымаҡ Германияла булғанмы ни?» — «Таҙарт, ҡомған индереп ҡуй, беҙҙең әсәйҙәр һымаҡ йыуынып сыҡ».

Үҙе, ирем ултырғыслы немец бәҙрәфе яһаны, тип күршеләргә маҡтанған. Етмеш йәшлек Гөлбикә исемле күрше әбей кереп бәҙрәфте ҡараны.

— Улым, миңә лә ошондай өй яһап бир әле, — тине. — Аяҡтар тотмай, баш әйләнә. Лапаҫ артына тышҡа сыҡһам, артҡа йығылам да китәм.

Яһап бирҙем инде, оло кешенең һүҙен нисек йығаһың? Ҡәнәғәт ҡалды, әсе бал, ҡоймаҡ менән һыйланы. Ул йылдарҙа кешенең араҡыға аҡсаһы юҡ ине, бал ҡоялар, шәкәр булмаһа, осһоҙ ғына мендәр кәнфит һалалар. Ҡышҡы яҡҡа беҙҙең аймаҡ кешеләренең күпселеге соҡорло бәләкәй «өйгә» йөрөй башланы. Ә мин ирекле хеҙмәткә түләү тәмен татыным, әммә уның бер көн көрсөккә килтереп терәйәсәген башҡа ла индермәнем.

Ҡышын поэма яҙҙым, «Тоғролоҡ» тип атала ине ул. Дөйөм дәфтәр тулды ла ҡуйҙы, яҙа торғас. Ҡатынға уҡып ишеттерҙем. Үҙенең эш-мәшәҡәттәренә сыға-йөрөй тыңланы был, шунан былай тине:

— Улай булмай. Һуғышҡа тиклем Барый менән Нәсимә бер-береһен яратышып йөрөнө. Барый пленда ҡайтҡас, Нәсимә уны күрергә лә теләмәне. «Пленный, һин миңә нимәгә кәрәк?» — тине. Йә Әнүәр менән Әсмәне ал. Әнүәр ауырый ғына башлағайны, Әсмә балаларын алды ла әсәһенә ҡайтты ла китте.

— Тормошта шулай. Яҙыусы бит булғанын яҙмай, ә булырға тейешлеген, булыу ихтималлығын яҙа. Бөтә китап-

тар ҙа уйлап сығарылған. Сусҡа фермаһын мин дә уйлап сығарҙым. Иң мөһиме — ҡыҙыҡ булһын. Бына һиңә ҡыҙыҡмы?

— Әкиәт кеүек,— тине Әлфиә, оҙаҡ ҡына өндәшмәй торғандан һуң.

Мин поэманы шундуҡ Өфөгә, журналға, ебәрергә ниәтләндем. Хыял ошондай күренеште һүрәтләй. Поэманы баҫып сығаралар, журналды асам: Тәлғәт Ғәйнуллин. «Тоғролоҡ». Поэма. Уны Башҡортостандың ауыл-ҡалаларында уҡыйҙар ҙа илашалар. Ғәлиәбаныу ҙа уҡый, бөйөк шағирҙы кире ҡаҡҡанмын бит, тип үкенә. Миңә аҡса түләйҙәр. («Гонорар» тигән һүҙҙе ул саҡта мин белмәй инем әле.) Кейем алырмын, бәлки, Өфөгә лә саҡырырҙар. Уҡыусыларҙан хаттар килер — поэманы уҡып, улар ситтән тороп миңә ғашиҡ булырҙар. Йәки Өфөгә барғас Уны — шиғриәтле, белемле, күп уҡыған, үҙемә тиң булған ҡыҙҙы осратырмын. Ә һауынсымды ҡайҙа ҡуйырмын һуң? Йәл инде, тик айырырға тура килер. Әллә күпме поэмалар, шиғырҙар яҙырмын, йырлы Өфөлә йәшәрмен, унан...

Поэманы тәүҙә «Ураҡ һәм сүкеш» исемле район гәзите мөхәррире Сәлимйәновҡа күрһәтергә булдым. Йәйәүләп сығып киттем ауылына (ҡала саҡ һалына башлағайны). Үҙе лә шиғыр яҙыусы һәм уларҙы үҙенең гәзитендә баҫтырыусы Сәлимйәновтың тышҡы ҡиәфәте бер ҙә шағирҙарҙыҡы ише түгел — кәүҙәгә бәләкәй, алға эйелеп йөрөй, күмер кеүек ҡара сәстәре терпе энәләре һымаҡ тырпайышып тора — башын ҡағыҙҙан ҡалҡытты ла тәмәке төтөнө араһынан миңә текәлде:

— Һеҙ миңәме?

— Эйе.

— Берәй нәмә алып килдегеҙме?

— Поэма яҙҙым, һеҙгә шуны күрһәтергә ине.

— Нимә тураһында?

— Мөхәббәт.

— Мөхәббәт тураһында булғас — яҡшы,— ул дәфтәр биттәрен асты.— Тик беҙ бындай ҙур әйберҙәрҙе баҫа алмайбыҙ. Шиғырҙар булһа икән... Шәп шиғырҙарҙы баҫабыҙ.

— Һеҙҙең менән кәңәшләшергә ине, поэманы Өфөгә, журналға, ебәреп булмаҫмы икән?

— Мөхәббәт тураһында, тинеңме әле? Мин дә шул турала яҙам. Ярар, уҡырмын. Ике аҙнанан керерһең.

Ҡайтыр юлға төштөм. Район гәзите булһа ла, редакцияға инеүемдән, мөхәррир, шағир менән һөйләшеүемдән

күңел болоттарға етмәле күтәренке, аяҡтарым яҙғы быс-раҡ юлдан мине ҡанаттар кеүек осороп ҡына алып бара. Ә өйҙә, кисен, теләһә нисек кейенгән, арыған, һыйыр, тиҙәк еҫе аңҡыған ҡатынды күргәс, былай тип уйланым: мин шағир, алдағы көндәрҙә данлыҡлы булып китәсәк ҙур шағир, мәңге ошо ҡәҙимге һауынсы менән йәшәрменме икән ни?

Ике аҙнанан колхоз машинаһы башында районға киттем. Сәлимйәнов был юлы йылыраҡ ҡаршы алды, тәмәке төтөнө аша былай тине:

— Әйҙә, үт, шағир. Ултыр, — ул алдына минең дәфтәрҙе сығарып һалды. — Дөйөм алғанда, һәләтең бар, тик размер тигән нәмәне белеп бөтмәйһең, рифмаларың теүәл түгел. Шулай ҙа эш икенселә, туған...

Мин һағайҙым, сөнки маҡтауҙы көткәйнем, ә был, белеп бөтмәйһең, теүәл түгел, тип ултыра, ә һәләтең бар, тигәне минең өсөн әҙ, бик әҙ.

Сәлимйәнов сираттағы папиросын тоҡандырҙы.

— Быны ни өсөн яҙҙың?

— Ну, яҙҙым инде, яҙғы килде, — тинем мин яурындарҙы йыйырып.

— Шуға һорайым: бындай поэмалар яҙһаң, һинән бер ҡасан да шағир сыҡмаясаҡ.

— Нишләп?

— Әйбереңде баҫыуҙарын теләйһеңме? Теләйһең. Әммә баҫмаясаҡтар. Сөнки поэманың идеяһы беҙҙең талаптарға тура килмәй. Һин һоҡланғыс һүҙҙәр менән әсирлеккә төшкән кешене маҡтайһың. Ә бит әсир беҙҙең өсөн герой түгел. Ул ҡоралын ташлаған, дошманға бирелгән, фактически хыянатсы! Шулай булғас, уны совет ҡатын-ҡыҙы ярата алмай.

Сәлимйәновтың әйткәндәре ҡатынымдың иҫкәрмәләре менән тура килеүенә шаҡ ҡаттым.

— Ә һин атаһын, үҙенең балаһына яҡшылыҡ ҡына теләгән намыҫлы коммунисты, ҡара буяуҙар менән һүрәтләйһең. Бындай хәл берәй ерҙә булыуы ихтимал, тик беҙҙең тормошта түгел. Беҙҙең тормош өсөн ул типик күренеш түгел.

Эйе, ундай хәл беҙҙә булғайны, тик киреһенсә булғайны, тип уйланым мин. Тимәк, Нәсимәнең Барыйҙан йөҙ бороуы — типик хәл.

— Миңә поэманы, бәлки, Өфөгә, журналға ебәрергәләр? — тинем мин, Сәлимйәновтан кәңәш һорағандай.

— Миңә ышанмайһың икән, ебәр,— тине мөхәррир, үпкәләгәндәй итеп.— Мин матбуғатта беренсе йыл ғына эшләмәйем, обстановканы яҡшы беләм, шуға күрә ышан: Өфөнән дә шулай уҡ яуап киләсәк. Йәки бөтөнләй уҡымаясаҡтар.

— Нишләп уҡымаясаҡтар?

— Ҡулдан яҙылғанды редакциялар ҡабул итмәй,— мөхәррир торҙо, ҡулды ҡыҫты.— Танышыуым өсөн бик шатмын. Яҙ, кергеләп йөрө.

Редакциянан сыҡтым да Пегастан шиғриәт юлы ситенә ырғытылып, яңынан ябай колхозсы Тәлғәт Ғәйнуллинға әйләнеп күңелһеҙ генә ауылым яғына атланым. Ҡайтҡас дөйөм дәфтәрҙе мөйөшкә ырғыттым, кисен ҡатынды юҡ сәбәпте бар итеп һуғып осорҙом, әйтерһең дә, минең уңышһыҙлыҡҡа ул ғәйепле. Әлфиә миңә сәйер бала ҡарашы менән ҡараны, әммә бер нәмә лә әйтмәне.

Шул кистән алып минең тормошта ҡара көндәр — мин уны үле осор тип атайым — башланды. Минән шағир килеп сыҡманы, ҡатынымды яратмайым, артабан ни эшләргә һуң? Башҡалар һымаҡ тиреҫтә ҡаҙынырға, ерҙә соҡонорға, араҡы эсергә, ҡартайырға һәм үлергәме? Ҡасандыр яратҡан, вәғәҙәләр биреп оҙатып ҡалған, әммә әсирлектә булған егеттән баш тартҡан ҡыҙ тураһында яңы поэма яҙыуға күңел төшмәй. Әҙәбиәт эшен, әҙәби мөхитте белмәһәм дә, киләһе әҫәрем поэма булмаҫын бик яҡшы самалайым. Минең тоғролоҡ тураһында, уртаҡ мөхәббәт тураһында яҙғым килә. Бүтән уй, бүтән сюжеттарым юҡ. Ә баҫа торған машинканы ҡайҙан алырға һуң? Өфөлә ҡулдан яҙылғанды ҡабул итмәйҙәр, ти ҙәһә Сәлимйәнов...

Ҡай саҡ алама уйҙарға бирелеп киткән саҡтар ҙа була. Ҡапыл ғына Ғәлиәнең ире үлеп китә, шул йылда уҡ минең ҡатын да вафат. Ике балаһы менән Ғәлиә минән башҡа кемгә кәрәк? Шағир даны килмәһен, кәрәкмәй ҙә, яратҡан ҡатын менән йәшәү барыбер ҙә тәмлерәктер. Бәлки, мөхәббәттән талант барлыҡҡа килер ҙә мин Пушкиндыҡынан бер ҙә кәм булмаған поэма ижад итермен. Әлбиттә, яратмаған ҡатындан китергә була ул, тик ҡайҙа? Үҙемдеке барыбер ҙә үҙемә эйәрәсәк. Сағыштырыу өсөн бер миҫал. Әйтәйек, төрмәгә эләккән меҫкен йылдар буйы стенаны тишә һәм бер көн ireккә сығыу урынына күрше камераға килеп юлыға. Ә мин үҙемдең камераның стеналарына күнегергә өлгөргәйнем инде...

Ауылға цивилизация килде: егерменсе быуаттың икенсе яртыһында электр үткәрҙеләр. Район үҙәгенән ары китмәгән, быяла һауыт эсендә ниндәй ут яна икәнен белмәгән өләсәйем: «Аллаға шөкөр, хәҙер кәрәсин кәрәкмәй», — тип ҡыуанды. Ул үҙенең ябай аҡылы менән, хәҙер лампочкаға кәрәсинде хөкүмәт бушлай тимер сымдар буйлап ебәреп тора, тип уйлай ине. Ә Фәрхетдин ҡарт, уны төнгөлөккә һүндереп буламы ул, әтеү йәш кәләш яҡтыла ояла, тип ҡыҙыҡһынды.

Пилорама электр ярҙамында эшләй башланы. Ауыл һуғыш емереклегенән яйлап арына ине. Тау артында яңы урам үҫеп сыҡты, уны Йәштәр урамы тип атанылар. Балта оҫталарына, шулай уҡ ҡулдары бер аҙ эш белгән ирҙәргә эш етерлек хәҙер. Тәрән соҡорҙар өҫтөндә бәләкәй таҡта «өйҙәр» күбәйҙе. Йорттарға радио индерҙеләр — ҡара көләпә тәүлек әйләнәһенә башҡорт, татар йырҙарын йырланы. Ҡай саҡ минең яратҡан «Ғәлиәбаныу»ҙы ла бирҙеләр. Ул саҡтарҙа йөрәк һыҡтап-һыҡтап ҡуя ине...

Ауылға Зәйнулла ағайҙың уртансы улы Талип (дуҫым Баҡыйҙан олоһо) ҡайтты. Ул районда собес конторанһында эшләй ине, пенсия эштәре менән етәкселек итте. Үҙе пенсияға сыҡҡансы шунда ултырһа булған да бит, юҡ, дөрөҫлөктө һәм законды фанатиктарса яҡлаусы тоғро кеше ине. Алға китеп шуны ла әйтәйем: үҙенең һуғыш инвалиды пенсияһын хатта ҡартайғансы юллай алманы. Ауыр контузиялы Талип асыҡ күҙҙәре менән йоҡлап йөрөнө, йоҡоһонда яман итеп ҡысҡыра ине, яраланыуы тураһында госпиталдә бирелгән справкаһын юғалтҡан. Район собесына ҡағыҙҙары булмаған әллә күпме кеше килә. Мәҫәлән, кеше ғүмере буйы старателдәр артелендә алтын йыуған, дәүләтте байытҡан, артелдәр таралғас, үҙҙәренән һуң ҡағыҙ-документтар ҡалдырмаған, был кеше ҡартайған, ә ҡағыҙ юҡ. Ҡулында ҡағыҙ булмағас, кем ул хөкүмәт өсөн? Сүп. Талип үҙенең конторанһында әллә ниндәй закондар ҡаҙып сығара, уларға төҙәтмәләр таба һәм меҫкендәргә пенсия юллап бирә. Билдәле, бындай закон һаҡсыһы, хаҡлыҡ юллаусы ниндәй түрәгә оҡшаһын? Һәм бының эшендә ваҡ етешһеҙлектәр табып, үҙ теләге менән китергә ғариза яҙҙыралар.

Беҙ, бер нисә йыл элек кенә шау-гөр килеп һуғыш уйыны уйнаған, хәҙер инде етерлек һуғышҡан, унан ялҡҡан ауылдың ике малайы, осрашҡас ифрат шатландыҡ. Гвардиясыларға хас булғанса иҫергәнсе эстек, ҡосаҡлашып ауыл буйлап йөрөнөк, һуғышта йырлаған йырҙарҙы йыр-

ланыҡ. Эшенән ебәрелгән район чиновнигының иҫке генә пинжәгендә Ҡыҙыл Байраҡ ордены йылтырай, «Батырлыҡ өсөн» миҙалы бәүелә.

Уға минең ҡатын оҡшаны. «Һин ауылдың иң сибәр ҡыҙын алғанһың. Ул һиңә нисек сыҡты ул, ә?» — тип аптыраны. Сибәр тип әйтеүе күңелде күтәрҙе, һиңә нисек сыҡты ул, тигәне зитҡа тейҙе. Талип тик үҙен генә Әлфиәгә тиң ир тип уйлай ине шикелле.

Мин уға поэма яҙыуым, район гәзите мөхәррире Сәлимйәновтың уны юҡҡа сығарыуы тураһында һөйләнем.

— Миңә лә уҡыт әле, — тине был.

Талип бәләкәй сағынан уҡ күп уҡыны, әммә мин, полк китапханаһы менән таныш кеше, уны күпкә артҡа ҡалдырғайным, шулай ҙа бирҙем, әллә ни тәрән фекер әйтә алмаҫ, тип икеләнеп кенә бирҙем. Уҡып сыҡты ла, дәфтәрҙе эре генә өҫтәлгә ташлап, былай тине:

— Утҡа яҡ йә бәҙрәфеңә элеп ҡуй. Вообще, урыҫтар әйтмешләй, буҡлы томшоғоң менән ҡалас рәтенә тығылма.

— Ниңә улай тиһең?

— Тураһын әйткәнгә үпкәләмә, һинең менән минең өсөн был тормошта нимә? Һуғыштан тере ҡайттыҡ. Беҙҙең ауылдан ғына күпме кеше ятып ҡалды. Ә һинең менән мин иҫән-һау! Хужалығың, өйөң, сибәр ҡатының бар. Һиңә тағы нимә кәрәк?..

— Мин уны яратмайым. Һаман Ғәлиәне онотоп булмай.

Талип бер аҙ өндәшмәй ултырҙы.

— Яратмаһаң ятаҡырһың, — тине шунан ҡәтғи генә.

Хәҙер килеп шулай уйлайым: үҙемдең талантҡа төкөрөп ҡарап, юғары тормошҡа ынтылыуҙан баш тартып иң түбәнгә төшөүемә Талиптың ауылға ҡайтыуы сәбәп булманымы икән? Грамоталы, матур почерклы егеткә ауыл контораһында эш табылманы, дөрөҫөрәге, түрәләр үҙҙәренән аҡыллыраҡ кеше килеүенән ҡурҡып алмағандарҙыр. Пулялар аҫтынан иҫән сыҡҡан, ҡырағай аслыҡтан үлмәй ҡалған ауыл халҡы йорттар һалырға тотондо, ә ҡулдары булған ирҙәрҙең баһаһы юғары ине. Егәрле, башы эшләгән Талип балтаға тотондо: йорттар, мунсалар, һарайҙар бураны. Тәүҙә — туғандарына, унан — бөтә ауылға. Ярҙамсы итеп мине алды. Ауыл егете бит — мин дә тиҙ өйрәндем яңы шөғөлгә. Күп тә үтмәй, бура бурау ғына түгел, тәҙрә рамдары, ишектәр яһай башланым. Зәйнулла ағайҙың лапаҫ аҫтында верстагы ултыра ине, шуны файҙаландым, кәрәкле инструменттары ла табылды.

Эшкә бик һирәктәр генә аҡсалата түләне, түләһәләр ҙә — бик аҙ. Күберәк тамаҡ хаҡына, эсеүгә эшләнек. Верхнеуралдың осһоҙ араҡыһы күп, кешелә көмөшкә лә, eләкемештән ҡойолғаны ла етерлек. Эштән һуң мин тупһаға саҡ ҡайтып йығылам — сисенеп тә тормай диванға ауам да йоҡоға китәм. Иртәнсәгенә кейемдәр сиселгән, тик емерелеп баш ауырта, кәйеф юҡ. Көн дә шулай.

Хәҙер уйлайым: эсмәҫкә булыр ине, әлбиттә, тик ул саҡта эсмәү мөмкин түгел ине. Хужалар һыйлағас, һинең менән бергә эшләгән ирҙәр эскәс, нисек эсмәйһең? Етмәһә, эсеү — эшең өсөн түләү, ә түләүҙән нисек баш тартаһың? Мин эсмәйем, аҡсалата бирегеҙ, тип әйтеп булмай бит инде. Эсмәһәң, бушҡа эшләгән һымаҡ килеп сыға. Иҫергән саҡта үҙемде ҙур, талантлы кеше итеп хис итәм, ауылдаштар алдында үҙемдең кемлегемде иҫбат итәсәкмен әле, тип уйлайым. Иртәгәһенә, баш сатнап ауыртҡанда, төшөнкөлөккә биреләм, мин — сүп, барыһы кеүек үк тиреҫ көрәге, ҡатын-ҡыҙ мине яратмай, шағир килеп сыҡманы, етем үҫтем, етем көйө үлермен дә, тип уйлайым һәм... үҙемде йәлләп, үҙемде күрә алмай илайым.

Эшкә сәсеү тамамланыу менән тотонабыҙ ҙа ураҡҡа тиклем йөрөйбөҙ, ураҡтан һуң — беренсе һалҡындарға ҡәҙәр. Ҡыш, билдәле, беҙҙе бер кем дә һыйламай, буш ваҡыттарҙа китаптар уҡырға, илһам килһә — поэма яҙырға мөмкин. Әммә ләкин ифрат мәкерле шул йәшел йылан тигәндәре, уның ҡотҡоһона ҡаршы тороуҙары, ай-һай, ҡыйын. Тәүҙә кәйеф күтәрелә, күңелһеҙ көндәлек ығызығы ярынан күңелле тулҡындарға һикерәһең, унан әллә ни ҡайғырмай ғына үҙеңдең ул тулҡындар араһынан сыға алмаясағыңды аңлайһың. Хәйер, теләһәм — бөгөндән, теләһәм — иртәгәнән эсеүҙе ташлай алам, тип уйлаған булаһың, батырланып. Тик быға инде һуң, көсөң етмәйәсәк. Ул хәшәрәтте бөтә ҡаның, бөтә күҙәнәктәрең һорай, һорай ғына тиһең, талап итә, бер йотом эсмәһәң, мотлаҡ үлерһең һымаҡ. Көн һайын иртән машинаға бензин ҡойған кеүек, ауыҙға нимә булһа ла ҡойорға кәрәк. Шешәләштәргә китәм, күршеләрҙән бал теләнселәйем, ҡатындан бер нисә һум инәлеп алып магазинға өҫтөрәләм.

Бына шулай бер нисә йыл эсендә тиҫтәнән ашыу йорт төҙөп, Верхнеурал араҡыһын йылғалай эсеп, мин бөткән алкоголикка әйләндем. Был бар ауырыуҙан да насарыраҡ. Хәл хөртәйеп, араҡыға аҡса ҡалмағас, ҡатындан, бар бирәйһенән һора әле, тип инәләм, ирем үлә, тип әйт, тим (баш төҙәтмәй өс алкоголик теге донъяға китте).

Сираттағы эскенән һуң, йыш ҡына Талип менән эскәндән һуң, шайығымды ағыҙып мин ауыл буйлап йөрөйөм, кемдеңдер өй алдындағы баҡсаһы буйына йығылам йә өйгә көскә ҡайтып етеп, ҡапҡа төбөнә ауам.

— Әлфиә, сыҡ, мин һине туҡмайым.

Эскән килеш һуғышҡаным да, ҡатынға тейгәнем дә булманы. Ҡурҡытыу өсөн генә һелтәнгән булам инде шунда.

— Әлфиә!

Ҡапҡанан сыға ла өгөтләй ҡатын:

— Бында ятма, тор, өйгә ин. Кешеләрҙән оят бит.

— Мин хәҙер һине туҡмайым.

— Туҡма, тик бында ятма.

Ҡай саҡ Әлфиә үҙе мине бәргесләргә тотона. Иҫерек булһам да, йоҙроҡтарының тослоғон тоям. Үҙе һуға, үҙе һөйләнә:

— Дурәк, алкаш, бына һиңә, бына һиңә!

Эш мине һөйрәп өйгә индереү, сисендереп диванға яткырыу менән тамамлана. Эскәс, мин ҡаты йоҡлайым, ә иртәгәһенә... иртәгәһенә бөтөнләй уянмаһам да риза.

Йәшел йылан торған һайын минең рухты һындырҙы, аңды томаланы. Етмәһә, ҡатынды көнләшә башланым. Яратмаһам да көнләштем. Хәҙер уларҙы иртәнге, киске һауынға машинала йөрөтһәләр ҙә, ферма мөдире Камил менән сыуалалыр, тип уйлайым. Әлфиә менән йоҡлау һирәк, шуға күрә, балаһыҙ бисә, иркәләүҙәргә, юхалауҙарға ҡаршы тора алмай Камилға тиҙ биреләлер, тип фараз итәм һәм ҡыуаҡлыҡтар араһынан фермаға киләм дә ағас араларын тикшереп йөрөйөм: йәнәһе, ҡатын мөдир менән урман эсендә ятмаймы? Үҙемдең шиктәрҙе Әлфиәнең үҙенә лә әйтәм һәм былай тип ҡурҡытам:

— Белһәм — үлтерәм!

— Тамам иҫәрләндең, — тип яуаплай ҡатын.

Иркәләнергә маташһа, дорфа ғына итеп ситкә этәм:

— Кит, һинән һыйыр еҫе килә.

Ҡай саҡ күрә алмауым шул кимәлгә етә: (ни өсөн икәнен үҙем дә белмәйем) уны үлтергем килә башлай. Айныҡҡас, үҙемдең һаташыуҙарҙан, үҙемдең уйҙарҙан ҡурҡам. Аяҡ һуҙһам, Ғәлиә ишетер ҙә әйтер ине: «Эткә эт үлеме». Ниңә һуғышта ғына үлмәнем икән? Башымдан бер нисә сантиметрҙа ғына күпме пуля, мина, снаряд ярсыҡтары һыҙғырып үтте, хатта похоронка ла килгән. Ә мин тере, һаман йәшәп ятам. Тамам эскегә бирелеү, кәртә буйында

ятып үлеү өсөн йәшәүме был? Күрәһең, эш шуға китеп бара — ауылға ҡайтҡан батыр гвардеецтан бер нәмә лә ҡалманы. Яловый итектәр туҙҙы, шпорҙары ҡайҙалыр төшөп ҡалды, «Дан» ордены ла юҡ, тик трофей сәғәт кенә миңә кәрәкмәгән ваҡытты һанаған була. Ҡатындың аҡсаһын урлай башланым бер мәл. Ах, ниңә генә теге саҡ һыу төбөнә китмәнем икән?

Ә Талип минән һерерәк булып сыҡты. Эсте, баш төҙәтте лә эшләне. Дегәнәк араһында ятманы. Бер мәл уголовный кодексты уҡырға әүәҫләнеп китте, ауыл, район бюрократтарын закондарҙы боҙоуҙа ғәйепләп гәзиткә, прокуратураға яҙҙы, әммә шикәйәттәре эҙһеҙ юғала торҙо. Унан ауыл китапханаһындағы Ленин томдарына (улар бөйөк классиктарҙың әҫәрҙәренә ҡарағанда ла күберәк ине) йәбеште. Нисектер бер ваҡыт мин унан, быларҙы ни бысағыма уҡыйһың, тип һорағайным, «Ҡайҙа яңылышҡанбыҙ, ҡайҙа китеп барабыҙ икәнен аңларға теләйем», — тип яуапланы был. Ҡай саҡ, ныҡ иҫерек түгел саҡта, беҙ икәүара һөйләштек, бәхәсләштек.

— Беҙҙә кешене баһаламайҙар, кеше беҙҙә сүп, — ти торғайны ул. — Беҙ һинең менән ташландыҡ бер нәмә, бүк!

— Бүк түгел, ә тиреҫ, — тип ҡаршы төшәм мин. — Берәүҙәр тиреҫте йылғаға түгә, икенселәр баҫыуға сығарып тупраҡты ашлай. Беҙ һинең менән Гитлерҙы еңдек, тимәк, киләһе быуындар өсөн тупраҡты ашланыҡ. Шулай булғас, беҙ һинең менән файҙалы тиреҫ. Файҙаһыҙ тиреҫ тә бар, уны ваҡыт йылғаһы ағыҙып алып китәсәк, ундай тиреҫ беҙҙә бик күп.

— Тағы бер революция кәрәкмәйме икән, тип уйлай башланым әле.

— Ауыҙыңды самалап ас.

— Ниңә?

— Бүк, тағы бер революция тигәнең тейешле органдарға барып етһә, бына шунда һине ысынлап та бүккә әйләндерәсәктәр.

Торараҡ Талип ниндәйҙер сиргә тарыны, байтаҡ ҡына ваҡыт больницала ятты, унан һаңғырауға әйләнеп ҡайтты. Ни булғандыр ҡолағына, белмәйем. Һаңғыраулыҡ уны яңғыҙлыҡҡа дусар итте, һуғышта алынған яралары ла үҙен һиҙҙергәндер — аңы томаланды. Бер аҙҙан байлыҡ, алтын, тип һаташа башланы. Пугачев үҙенең алтынын Мышағыр тауы битенә йәшергән, тип һөйләнде, киләһе йәй шуны эҙләйәсәге тураһында әйтте. Ә бер ваҡыт уның телеграф

бағанаһын ҡосаҡлап әйләнгәнен күрҙем. Нишләйһең, тип һорағайным, миңә буш, тоноҡ күҙҙәре менән ҡараны ла өндәшмәне. Күпмелер ваҡыттан һуң уны психбольницаға һалдылар, ул ҡайҙа яңылышҡаныбыҙҙы, ҡайҙа китеп барыуыбыҙҙы белә алмай шунда үлеп ҡуйҙы...

Беҙҙең өй йылға яры башында ғына тиерлек. Баҡса уның ярына уҡ килеп терәлә. Йылғаға беҙ баҡса аша йөрөйбөҙ — бәләкәй ел ҡапҡанан сығабыҙ ҙа һуҡмаҡ буйлап кисеүгә төшәбеҙ.

Ул көндө Әлфиә кер йыуҙы. Мин иртәнән бирле баш ауыртыуы менән яфаландым. Ҡатындан, бер шешә бир инде, тип инәләм. Элегерәк, ныҡлап эсә башлағанға тиклем, ул мине ҡотҡара торғайны, хәҙер икенсе төрлө һөйләй: «Бер тин дә бирмәйем, былай ҙа күпме урланың, аҡса еңел табыла тип уйлайһыңмы?» Күрәһең, мин уны шул көнгә төшөргәнмендер. Хәйер, ул ике туған ағаһы Мостафа менән еңгәһе ҡотортоуына барып шулай ти. Әлбиттә, аҡса бар, һауынсыларға яҡшы түләйҙәр, әммә Әлфиә уны минән йәшереп тота. Әүәлерәк мин аҡсаны түшәк аҫтынан, көҙгө артынан таба торғайным, һуңғы ваҡытта ул икенсе ергә йәшерә.

Керен йыуып бөткәс, ул ике ҙур биҙрәгә һалды ла баҡса аша йылғаға китте. Ярҙам һорамаһа ла, мин өсөнсө биҙрәне тоттом, ярҙамлашһам, ҡатындың күңеле ирер, тип уйлайым инде үҙемсә. Артынан эйәргәндә, бир, был һуңғы тапҡыр, тип ялбарам. Әлфиә өндәшмәй, өндәшмәгән һайын минең асыу килә, минең эскегә һалыныуға һин үҙең гәйепле, бала тапмайһың, ҡыҫыр һыйыр, һинең менән минән башҡа кем йәшәһен, тип әрләйем, китәм, тип ҡурҡытам.

Ел ҡапҡанан сыҡтыҡ та яр буйындағы һуҡмаҡҡа төштөк.

— Кит, мин һине тотмайым, — тине ул бер аҙҙан, артына әйләнеп ҡарамай ғына.

Был хәбәрҙе һис көтмәгәйнем, башҡа һуҡҡан кеүек булды. Мин уны бер ҡасан да туҡмағаным булманы, ҡай саҡ тубыҡ менән генә төртөп алам, уныһы ла шаярыу ҡатыш. Үҙем дә аңғармаҫтан килеп сыҡты: йән көйөүҙең иң юғары нөктәһе — артына тип тә ебәр! Әлфиә һөрлөгөп китте, ҡысҡырып ебәрҙе, биҙрәләре менән аҫҡа тәгәрәп төшөп китте лә һыуға сумды. Йөҙә белмәй. Төртөүем батырырға теләүҙән түгел, әлбиттә. Тулҡын йыуған яр эргә-

һендә ул ҡәҙәре тәрән түгелдер, тип уйлайым. Шулай ҙа ағым көслө, ул Әлфиәне сөңгөлгә алып китте. Ул тыпырсына, ҡулдарын болғай, бер аҙҙан башы күренмәй башланы, унан яңынан ҡалҡты. Ҡарашын күрҙем... Ул ҡарашты бер ҡасан да оноторлоҡ түгел. Уның батмаясағын беләм, ағым уны һай урынға алып барып сығарасаҡ. Батмаҫына ышанып, кер һалынған биҙрәне яр башына ултырттым да елдереп өйгә ҡайтып киттем һәм ҡабаланып аҡса эҙләргә тотондом. Элек һалған ерҙәрендә юҡ. Ҡапыл ҡарашым ҙур иҫке самауырға туҡталды, электр самауыры һатып алғас, беҙ уны тотонмай инек. Һиҙемләүем дөрөҫкә сыҡты: аҡсалар самауыр эсендә! Һанап та тормай бер нисә ҡағыҙ аҡса алдым да магазинға сығып йүгерҙем. Ике шешә араҡы алдым, был бер үҙемә күп булыр тип, Талипҡа киттем. Камилә апай ихатаһында йөрөй, Талип өйҙәме, тигән һорауыма уҫал итеп: «Өйҙә!» — тине. Дуҫым бер нөктәгә текәлеп өҫтәл янында ултыра, иҫәнлегемде лә алманы. Әллә ҡаты уйға талған, әллә Пугачев алтыны хаҡында уйлай — белмәҫһең. Шешәләрҙе күргәс кенә йән керҙе быға.

— Мин бисәне һыуға батырҙым, — тинем, бер стаканды эскәс.

Яуап ҡайтарманы был, әйтерһең дә, ишетмәне.

Икенсе стакандан һуң саҡ тауышы сыҡты:

— Динамит табырға ине.

— Нимәгә ул?

— Мышағырҙағы бейек ҡаяны шартлатырға. Пугачев алтыны шунда йәшерелгән булырға тейеш.

— Табырбыҙ, шартлатырбыҙ.

Икебеҙгә ике шешә эскәс, Камилә апайҙан әрләнәәрләнә мин урамға сыҡтым да, өйгә етә алмай, Ҡарағужин Ринаттың бәләкәй баҡсаһы янында ауҙым. Киске яҡҡа ғына уяндым, баш ауырта, саҡ-саҡ өйгә ҡайтып еттем, солан ишеге янына еткәйнем, күтәрмәлә иҫке кейеҙ, иҫке одеял, яҫтыҡты шәйләнем. Әлфиәгә өйләнгәс алып килгән минең мөлкәт. Шунда уҡ иҫке итектәр, салбар, күлдәк тә ята. Тимәк, Әлфиә батҡан, тип уйланым мин, хәҙер бында Мостафалар килгән, мин уларға ят кеше, урамға ҡыуып сығара. Солан ишеген тарттым — бикле. Икенсе уй башҡа килде: тимәк, батмаған, ул өйҙә.

Ишекте дөбөрләтергә тотондом. Асмай. Аяҡ менән типтем.

— Ас, иҫәрләнмә!

Келә ысҡынды... Ҡатынымдыҡы урынына Мостафаның асыулы йөҙө пәйҙә булды. Шул ыңғайына ул эскә килтереп типте, мин күтәрмәнән ергә остом, артымдан төшөп елкәмдән һөйрәп торғоҙҙо ла артыма тибә-тибә ҡапҡаға һөйрәкләп алып китте, унан урам буйына төрткөләп сығарҙы.

— Бында тағы аяҡ баҫһаң, хайуан, мин һине үлтерәм, белдеңме?! — Ул минең сепрәк-сапраҡты йөҙөмә бәреп, ҡапҡаны элеп тә ҡуйҙы.

Эңер төштө. Күршеләрҙең тәҙрәләре миңә битараф ҡарай, ҡайһыһылыр ихатаһына сыҡты, ҡапҡаһы төбөндә торҙо, әммә яныма килмәне. Мин кейеҙгә ултырҙым да уйға ҡалдым. Эйе, был — сик, алда бушлыҡ, артҡа ла юл юҡ. Гитлерҙы еңгән гвардия рядовойы Тәлғәт Ғәйнуллин меҫкен булып ерҙә ултыра...

Тереһең икән, ҡайҙалыр йоҡларға, нимәлер ашарға кәрәк. Өләсәйгә бараһым юҡ — тауҙар араһында боҫоп ултырған бер ауылдан улы менән апайым — тол ҡатын — әйләнеп ҡайтты. Бәләкәй генә өйҙә өсәүләп йәшәйҙәр хәҙер. Яңыраҡ төшөргән көйө инеп сыҡҡайным, апайым иң алама һүҙҙәр менән әрләп сығарҙы, йәнәһе, мин эскесе, елғыуар, бөтә нәҫелде оятҡа ҡалдырып йөрөйөм. Ҡапҡа төбөндә йоҡларға тура килер, ахыры. Кейеҙҙе аҫҡа йәйҙем, баш аҫтына яҫтыҡты һалдым, одеялды ябындым. Әлфиәнең бәхетһеҙ ирен йәлләүенә, Мостафа ҡайтып киткәс сығып алырына иҫәп тотам. Сыҡмаһа инде, иртәнсәк кешеләр уның мине нисек итеп урамға ҡыуып сығарғанын күрһен. Ҡалтыранам, өшөйөм, бахмур кәкрәйтә генә. Ауыл буйлап йөрөп берәйһенән бал тапҡанда инде? Элек бирәләр ине, хәҙер бирмәҫтәр шул. Хәҙер күрә алмайҙар, ниндәй шәп бисәне һыуға батырырға самаланы был алкаш Тәлғәт, тиҙәр.

Өшөп уяндым, Әлфиә сыҡманы. Һыуыҡ кейеҙ, тишек-тошоҡ одеял аша үтеп, һөйәктәргә үк барып етә. Торҙом да ҡапҡаны тартып ҡараным — бикле. Бәләкәй баҡсаға инеп, тәҙрә быялаһын шаҡыным.

— Әлфиә, ас, өшөнөм.

Өй эсенән берәй тауыш сыҡһасы!

Зәғиф Мәрғүбә ҡарсыҡтың үлеүе иҫемә төштө. Ул саҡ-саҡ һөйләшә, һул аяғы уңынан ҡыҫҡараҡ, ҡороған һул ҡулын терһәгенән гел бөгөп йөрөй торғайны, меҫкен. Ата-әсәһе үлеп, ҡустыһы һуғышта һәләк булғас, килене унан баш тартты. Колхоз уға мунсанан саҡ ҡына ҙурыраҡ өй һалып бирҙе лә үҙ-ара ярҙам кассаһынан үлмәҫлек кенә

ашанты бүлеп торҙо. Күрше урамдағы ошо емерелергә торған йорт хәҙер буш.

Үҙемдең сепрәк-сапраҡты йыйҙым да Мәрғүбә ҡарсыҡ йортона атланым. Ишеге асыҡ. Танауға һаҫыҡ еҫ бәрелде. Ағарып мейес ултыра, һикелә — балаҫ ишараты. Ут юҡ. Кейеҙҙе балаҫ өҫтөнә йәйеп яттым, әммә, бахмурҙан шундуҡ йоҡлап китә алмаған һымаҡ, был юлы ла йоҡлай алманым, етмәһә, минең тирәлә тараҡандар йүгерешә башланы. Улар шул ҡәҙәре күп, ризыҡ эҙләп эркелешеп йөрөйҙәр. Йөҙөм буйлап бер нисәһе йүгереп үткәс, одеялды бөркәнеп ятырға мәжбүр булдым.

Иртәнсәк, үҙемдең яңы төйәгемдә тикшергәс, шундай һығымтаға килдем: был — ҡәбер үк булмаһа ла, ҡәбер алды. Һәләмә сепрәк-сапраҡ, плитәлә — йәмшәйгән кәструл, мөйөштәрҙә — үрмәкес ауы, ауыр еҫ.

Уянғас нимәлер ҡапҡыларға кәрәк, иң мөһиме — баш төҙәтергә... Әлбиттә, иң тәүге бурыс — Әлфиәнең хәлен белеү. Тороп үҙемдең йортҡа киттем. Йөҙө тәҙрәнән күренеп юғалғанда урамдың ҡаршы яғында инем әле, ишекте бикләргә китте, күрәһең. Баҫып керергә ниәтем юҡ, ялбарып йөрөү менең холоҡта түгел. Үҙе яныма килеп тубыҡланмағайы...

Эсергә табырға кәрәк. Ауыҙға ҡотҡарғыс шыйыҡсаны ҡойорға ла был тормошто оноторға! Почта начальнигы Сәләховты иҫемә төшөрҙөм. Минең трофей сәғәт менән ҡыҙыҡһынғайны — һуңғы байлығымды нисә һумға биргәнемде лә оноттом инде. Юҡ ҡына аҡсаны бер аҙна эсендә эсеп бөтөрҙөм. Итектәрҙе лә һатып, хәйер, итек тип әйтерлеге ҡалмағайны, ҡуныстарын ауыл итексеһе Илһамға олаҡтырҙым. Лампочка алғайным да, счетчикты аҡтарып алып киткәндәр булып сыҡты. Тимерсыбыҡтарҙы тура-нан-тура тоташтырып утты рәтләнем дә тараҡандарҙан ҡурҡып яҡтыла йоҡлап йөрөнөм. Быҫраҡ сепрәк-сапраҡ араһында, һыҡра, йыуылмаған тән еҫенә тонсоғоп, артабан ни булырын белмәй, белергә лә теләмәй был эт ояһында нисә көн, нисә аҙна йәшәгәнемде үҙем дә белмәйем. Бер көн ҡатын килеп: «Әйҙә ҡайт, дүрәк», — тип әйтеренә ниндәйҙер өмөт бар ине әле. Ҡайтыр инем, юҡ, тәүҙә киреләнгән, үсеккән булырмын, күҙ йәштәре менән инәлә башлаһа ғына ризалашырмын...

Тик Әлфиә килмәне. Оҙаҡламай төньяҡтан һоро-ҡара болоттар күренә башланы, улар торған һайын ергә яҡынырак төштө, ваҡ ямғырҙар йышайҙы. Ә ҡарсыҡтың утыны

юҡ ине, кәртәһен һүтеп яғырға тура киләсәк, тимәк. Ҡыш яҡынлай — яғылмаған өйҙә Тәлғәт Ғәйнуллиндың туңған мәйете бөтә ысынбарлығы менән күҙ алдыма баҫа.

Бер көн иртәнсәк, бахмурҙан баш сатнап ятҡанда, өйгә ауыл Советы рәйесе Сафин менән колхоз рәйесе Мөбәрәков килеп инде. Мөбәрәков беҙҙең ауыл кешеһе түгел, партия райкомы тарафынан беҙгә тәғәйенләнгән сираттағы йолҡкос, колхоз байлығын туҙҙырыусы, урлаусы, етмәһә, эскесе. Эшләһә бер-ике йыл эшләр, бушҡа йорт төҙөр һәм, эскәне, мораль тотанаҡһыҙлығы өсөн урынынан алынғас, йортон һатып, ҡайҙан килгән шунда китер йәки партия райкомы күрше берәй колхоздың елкәһенә ултыртыр.

— Нишләп ятаһың бында? — тип һораны Сафин, боҙоҡ телефон аша өйҙән ҡыуылып сыҡҡанымды, ошо емерелергә торған йортҡа кереп йығылыуымды яҡшы белһә лә.

— Ятам әле, ярамаймы ни? — тинем мин, одеял аҫтынан сыҡмай ғына.

— Ярамай шул. Йортто һүтәбеҙ. Был урынға иптәш Мөбәрәковҡа яңы йорт һалабыҙ.

— Ә миңә ҡайҙа барырға бойораһығыҙ?

— Ҡайт, ҡатыныңа ҡайт.

— Ул мине керетмәй.

— Ниңә эсәһең һуң? Етмәһә, һыуға батырғанһың. Давай, тай, хәҙер төҙөүселәр килә.

Мин баш төҙәтергә киттем, эсеп алып ауылды гиҙҙем, кемгәлер нимәлер иҫбатланым, кем алдындалыр аҡландым, кисен Мәрғүбә ҡарсыҡтың өйөнә имгәкләп тигәндәй ҡайтһам, үҙемдең ваҡытлыса ғына йәшәгән оям урынында сүп өйөмдәре, ватыҡ кирбес, йәмшәйгән кәстрүлде генә тап иттем. Ярым серек бүрәнәләр бер ергә өйөлгән, минең әйберҙәр кәртәгә эленгәйне.

Гитлерҙы еңгән гвардия рядовойы Ғәйнуллин октябрь күге аҫтындағы шәп-шәрә ерҙә яңғыҙ тороп ҡалды. Ояһынан йығылып төшкән ҡош балаһы үлемгә дусар. Ҡыш алдынан өйҙән ҡыуып сығарылған кеше лә шул уҡ хәлдә. Кем йәлләр, кем һыйындырыр икән һуң мине? Өләсәй ҡартайҙы, апай яратмай. Яңыраҡ өс туған ағайға керергә ниәтләнгәйнем, тупһаһынан да ары үткәрмәне. Баланы ҡурҡытаһың ти. Мин ҡараҫҡы, тимәк. Әлфиәгә шаҡып ҡарағанда? Юҡ. Бөткән кеше булһам да, кеше сүп-сары булһам да, бисәгә инәлер башым юҡ!

Төн яҡынлаша, бахмур зәңкетә, эсергә кәрәк. Унан һуң ҡайҙа йоҡлаһам да барыбер. Магазин бикле. Һатыусы

Зарифа араҡыны өйөндә лә һата. Унан бер шешә барып алдым да ауыл буйлап сығып киттем, сөнки араҡыны ҡайҙалыр ултырып эсергә кәрәк ине, һәм мин ат һарайының сбруйҙар ҡуйылған бәләкәй өйөн иҫкә төшөрҙөм. Ул һәр ваҡыт асыҡ, егеттәр ике-өс кешегә бер шешә бушатыр өсөн йыш ҡына шунда һуғылалар. Керҙем, утты тоҡандырҙым, өскә бүлеп шешәне түңкәрҙем: баш төҙәлде. Мин шуны асыҡ төшөндөм: артабан йәшәүҙең мәғәнәһе юҡ. Талантым да булғандыр, бөйөк башҡорт шағиры ла була алыр инем, әммә бер нәмә лә килеп сыҡманы, рәтле башҡа һөнәр менән дә шөғөлләнергә булыр ине, яратҡан ҡатынға өйләнһәм йәки Әлфиә бала тапһа, бер нисә баланың атаһы булыр инем. Килеп сыҡманы, әгәр араҡы булмаһа, әгәр эш өсөн араҡы менән түләмәһәләр, Әлфиә менән дә бына тигән йәшәй алыр инек. Был ниндәй тормош һуң ул, ә? Магазинда сәй алып булмай, араҡыны көтәсәккә лә бирәләр. Тәүҙә, ныҡлап эсә башлағанда, еңел һымаҡ, ә-ә-ә, бер нәмә лә булмаç, тип фекер йөрөтәһең, шунан аҫҡа тәгәрәгәнеңде һиҙмәй ҙә ҡалаһың икән.

Ул саҡта тап ошолай уйлағайныммы, юҡмы икәнен хәҙер иҫкә төшөрә алмайым, дөрөҫөн генә әйткәндә, хатта үлге лә килмәгәндер, ә йоҡларға, шул йоҡонан бер ҡасан да уянмаҫҡа, тигән уй булғандыр башта, сөнки үлем — ауыртыныу, һыҙланыу аша килә торған әйбер. Тупикка килеп терәлгән иртәгәһе көн минең өсөн ул ауыртыныу, һыҙланыуҙан да ҡурҡыныссыраҡ ине, өйһөҙ, аҡсаһыҙ ҡалғанмын, етмәһә, бахмур бөгә, тәнем дә һаҫып бөткән.

Арҡалыҡты минең өсөн махсус элеп киткәндәр төҫлө. Түбәлә уны эләктерер-элер ҡаҙаҡ юҡ. Электр шнуры мине күтәрә алмай. Ҡараш күкрәк бейеклегендәге ишек тотҡаһына туҡтаны. Муйынға ҡайышты элгәнде, икенсе осон ҡыҫҡа ғына итеп ишек тотҡаһына бәйләгәнде саҡ-саҡ ҡына иҫләйем. Бәйләнем дә аҫҡа тартылдым. Ауыртҡаны ла хәтерҙә юҡ. Юғалдым, юҡҡа сыҡтым, ҡайҙалыр түбәнгә остом...

Ҡайҙа икәнемде тәүҙә һис аңлай алмай йонсоном. Ҡамыт-ыңғырсаҡтар ҡуйылған йортҡа кергәнемде саҡ ҡына иҫләп ҡалам. Эскәнем дә, муйынға ҡайыш элгәнем дә хәтерҙә, ҡалғанын, хет үлтер, иҫләмәйем. Бәлки, мин теге донъялалыр?

Теге донъяның барлығына мин бала, үҫмер саҡта ысынлап та ышана инем. Аллаһы тәғәләнең үҙемде ожмахҡа үткәрәсәген дә беләм. Ожмах былайыраҡ күҙ алдына баҫа.

Ифрат тәмле емешле мәңге йәшел ағастар араһында сәскә атып ултырған туғайҙар; еләç ышыҡтарға балаç-кейеҙ йәйелгән, улар өçтөндә — ашъяулыҡтар, ашъяулыҡтарҙа — ҡоймаҡ, ҡаймаҡ, еләк, ҡымыҙ, тағы әллә ниндәй затлы ризыҡтар. Унда бер ҡасан да төн булмай, ҡыш та килмәй, ямғыр ҙа яумай. Ебәк кейемле кешеләр туғай буйлап йөрөй, бер-береһе менән ашыҡмай ғына һөйләшә, йырлай, арып китһәләр, ашъяулыҡтар янына сүгәләйҙәр ҙә ашап алалар, эсәләр. Унда бер кем дә ҡартаймай, ауырымай, үлмәй, унда бер кемгә лә күңелһеҙ, яманһыу түгел. Тик, әсәйем һөйләгәнсә, ожмахта барыбер ҙә кешегә үҙенең ҡыçҡа ғына ер тормошонда булған ниндәйҙер тәмле, кәрәк нәмәһе етмәй икән. Быны ниме икәнен кеше үҙе лә белмәй. Ул — йоҡо. Ожмахта кешеләр бөтөнләй йоҡламай, ти.

Мәктәпкә барғас, мин шуны белдем: Алла ла, ожмах та юҡ. Ә тамуҡ, баҡһаң, — ерҙә, мин уны һуғышта күрҙем. Ергә лә ожмах киләсәк икән бер мәл. Ул ожмахтың исеме — коммунизм. Тирләмәй-арымай ғына эшләү, күпме теләйһең шул ҡәҙәре ашау. Ғалимдар ҡышты йәйгә әүерелдерә ала, ямғыр кешегә кәрәк саҡта ғына яуа. Кеше йөҙ йыл йәшәйәсәк, хатта үлемһеҙгә әйләнәсәк...

Әммә мин уянып киткән ерҙә ожмах күге урынына аҡ түшәм, һары стеналар ине, фәрештә урынына яныма аҡ халатлы, аҡ башлыҡлы ер ҡатыны килде. Пульсты тикшерҙе лә ҡабаҡтарҙы асып күҙгә текәлеп ҡараны. Больница! Тимәк, ниндәйҙер бер дүрәге мине элмәктән ысҡындырып бында килтереп һалған!

Нисә көн аңыма килмәй ятҡанмындыр, белмәйем, аң өҙөк-йыртыҡ, томанлы ине, торорға маташып ҡараным, әммә баш әйләнде, ҡоçҡо килде. Ярты стакан, бер стакан араҡы эскәндә хәл кереп тороп кителер ине лә, ҡайҙан алаһың уны. Хәйер, ниңә тороп китергә лә, ни бысағыма һауығырға һуң әле? Элмәктән ысҡындырып ҡайһыһылыр мине ҡотҡармаған, ә үлтергән...

Һуңынан, муйынды элмәккә тығып аçылынғас, нимә булғанын хәтерләргә тырыштым. Уйлана торғас, шундай һығымтаға киленде: бер нәмә лә булмаған. Бушлыҡ. Был рәхәт ине. «Рәхәт» дөрөç түгел, урынлы түгел, ул булмышты, ул хәлде һүҙ менән аңлатып булмай. Бәлки, ожмах шулдыр. Тимәк, тормош — тамуҡ, ә үлем ожмах булып сыға?

Дауаланылар, укол ҡаҙанылар, таблеткалар ашаттылар, ниндәйҙер врач, психиатрҙыр, ахыры, тормош мәғәнәһе,

эсеүҙең зарары тураһында һөйләп йөҙәтте. Ә мине бахмур бөгә, бахмур кәкрәйтә, тау үренә йүгергәндәге һымаҡ йөрәк дарһылдап тибә — эсмәһәм, үлеп ятырмын кеүек. Медсестранан, хет илле грамм ғына спирт бир, тип ялбарам. «Ишь, нимә кәрәк һиңә?» — тип көлә. «Үләм бит», — «Үлмәçһең, йөрәгең таҙа».

Бәүелә-сайҡала бәҙрәфкә барҙым. Ҡулйыуғыс өçтөнә ҡуйылған көҙгөлә үҙемдең йөҙҙө күрҙем: муйында быуылған эҙ юҡ, ҡайыш урыны ғына ҡыҙарып тора. Элмәк түбәлә булһа икән дә бит, ишек тотҡаһына аçылынып булалыр шул.

Бер көн Әлфиә килде. Сумкаһынан ҡаймаҡ, бер нисә бешкән йомортҡа сығарып тумбочка өçтөнә ҡуйҙы ла шым ғына:

— Хәлең нисек? — тип һораны.

— Ниңә килдең? — тинем мин асыулы итеп.

— Ниндәй булһам да ҡатының бит әле.

— Ҡатын? Бетләгән эт һымаҡ урамға ҡыуып сығарҙың да хәҙер, ҡатының, тип тораһыңмы?

— Ул ҡәҙәре ҡыланмайҙар уны. Саҡ батманым бит һыуға.

Ул илап ебәрҙе, йәшерергә тырышып үкһене. Мин уны йәлләмәнем, артым менән боролоп ултырҙым.

— Сығып кит. Бүтән килмә! Хәйерең̡де лә ал.

Әлфиә ризыҡтарын ҡалдырып сығып киткәс, палаталағы күршем, ҡырҡтар тирәһендәге ир:

— Ниңә ул ҡәҙәре дорфа һөйләшәһең? — тип һораны.

Күңелем менән Әлфиәнең бер ниндәй ҙә ғәйебе юҡ икәнен аңлайым, әммә ул саҡта үҙемдең ғәйепте танырға һәләтле түгел инем, шуға ла күршегә:

— Ҡылығына күрә таман, — тинем, йән көйөп.

Хәҙер йәшәлгән йылдар бейеклегенән ул хәлдәргә ҡарайым да ваҡыт томаны артында тик уңған буяуҙарҙы, онотола барған ваҡиғаларҙың юйылған һыҙыҡтарын ғына күрәм, ә бына яҙмышымдың боролоштарын, бөгөлөштәрен, бүленештәрен бик яҡшы таныйым. Күпме тапҡыр яңылыш юлға боролоп, бушлыҡтың һәм үлемдең йөҙөнә ҡараным, күпме тапҡыр тыныс, әммә талапсан эске тауышты ишеттем: яңылыш киттең. Тик был турала шул мәлендә уйламаным, һығымта яһаманым, һөҙөмтәлә — хаталандым. Бындай осраҡта гел генә тигәндәй юлымда аҡыллы, ярҙамсыл кешеләр, изгелекле ҡатын-ҡыҙ тап булды ла ҡолаған ерҙән йолоп ҡалды.

Шундай кешеләрҙең береһе палаталағы күршем Әмирхан ине. «Әмирхан тип кенә атағыҙ», — тине ул. Өфөнән икән, һөйләшә торғас, мин уның гәзиттә эшләгән журналист икәнен белдем, беҙҙең районға командировкаға килгән дә ауырып киткән. Ҡан баҫымын тикшерҙеләр, йомшаҡ еренә укол һалдылар, таблеткалар ашаттылар. Тәүге мәлдә тартынибыраҡ аралаштыҡ, мин бит белемле, интеллигент кешеләрҙән тартына торғайным. Бер-беребеҙҙең фронтовиктар икәнде, бигерәк тә бер фронтта булғаныбыҙҙы белгәс, уртаҡ тема барлыҡҡа килде, һәм беҙ һөйләшә-һөйләшә яҡынайып киттек. Тик минән байтаҡҡа өлкән, званиеһы менән дә ҙур кешенең миңә «һеҙ» тип өндәшеүе генә уңайһыҙландыра ине.

— Йәл, немецтарҙың аяуһыҙ ҡаршы тороуы арҡаһында Европаның иң матур ҡалаларының береһен емерергә тура килде, — тине Әмирхан. — Миңә яңыраҡ ҡына Калининградта булырға тура килгәйне, үҙгенә бөтәһе лә бер иш, ҡотһоҙ дүрт ҡатлы йорттар төҙөгәндәр. Ярай әле, Канттың ҡәбере иҫән.

— Кем ул Кант?

— Ун һигеҙенсе быуатта йәшәгән немец философы.

— Ә философияһы нәмә тураһында?

— Мин уның хеҙмәттәренә ҡаршы яҙылған тәнҡитте генә уҡыным. Нисек әйтергә? Материаль донъяны аңлап булмау, төбөнә төшә алмау тураһында ул, ҡыҫҡаса ғына әйткәндә. Фекерҙәренең ҡайһы берҙәре миңә оҡшамай. Ул, мәҫәлән, былай ти, донъяла иң матуры — беҙҙең өҫтәге йондоҙло күк, беҙҙәге мораль закон. Кеше — средство түгел, ә маҡсат.

Мин уны тыңлайым һәм бер нәмәне лә аңламайым, дөрөҫөрәге, шуны аңлайым: мин ҡалай наҙан икән!

Һөйләшмәгәндә, йоҡоға бирелгән ваҡытта, Әмирхан уҡый. Китап-журналдарҙы ул тумбочка янында торған һары портфеленән ала. Бер көн ул асыуланып сығып киткәндә өй ишеген япҡандағы ише ҡалын башҡорт журналын шап иттереп япты ла миңә ҡарап былай тине:

— Һеҙ уҡыйһығыҙмы?

— Элек уҡый торғайным. Армияла саҡта полк китапханаһын уҡып бөттөм, — тип яуапланым мин, ә үҙем, Әмирхан ҡыҙыҡлы берәй нәмә уҡырға тәҡдим итәлер, тип уйланым. Ә минең һис уҡығы килмәй, был шөғөлдө күптән ташлағанмын, дөрөҫөрәге, алкоголь менән ағыуланған мейем ташҡа баҫылғанды ҡабул итеү һәләтен юғалтҡан.

— Һуғыштың нимә икәнен беҙ һеҙҙең менән бик яҡшы беләбеҙ, беҙ уның эсендә булдыҡ. Бынау журналда һуғыш тураһында повесть баҫылған. Ҡыҙыҡ өсөн уҡып сығығыҙ әле.

Повесть һуғыш тураһында булғас мине ҡыҙыҡтырҙы, уҡый башланым, тик яртыһына еткәс, шуны аңланым: әҙәби һуғыш беҙҙекенә һис кенә лә оҡшамағайны, хатта унан бик йыраҡ ине. Үтә еңел, күңелле ине барыһы ла, әҫәр гел батырлыҡтарҙан тора. Бына бер генә эпизод: кавалерия эскадроны танк колоннаһына һөжүм итә һәм уны граната-лар, яндырғыс шешәләр менән туҙҙыра. Госпиталдән һуң мин кавалерия часына эләктем, бер ниндәй ҙә атта һөжүм-дәр булманы — пехота кеүек, беҙ ҙә «йәйәү һөжүмгә, аттан төшөргә!» — тигән бойоростан һуң һөжүмгә йәйәү китә торғайныҡ. Ғөмүмән, пулемет уйлап сығарғандан һуң кава-лерия һөжүмдәре һирәк ойошторола, булған хәлдә күп ҡан ҡойоуға килтерә ине.

Хәйер, эш унда ла түгел. Һуғышта ошондай бер йәки бер нисә осраҡ булыуы мөмкин, бәлә шунда: яҙыусы һуғыш психологияһын, һалдат кисерештәрен тасуирларға тейеш, ә бында ул юҡ. Ғәҙәттә, тәүҙә — шөрләү менән ҡатыш ниндәйҙер ҡыуаныс, ә окоптан йәки ерҙән ҡал-ҡынғас был тойғолар юғала, уларҙы ярһыу, дыуамаллыҡ алыштыра. Миңә ҡалһа, яҙыусының бурысы — ана шул ҡатмарлы кисерештәрҙе яҡтыртыу.

— Йә, нисек? — тип ҡыҙыҡһынды Әмирхан, мин жур-налды япҡас.

— Автор үҙе һуғышмағанға оҡшай, барыһын да уйлап сығарған һымаҡ.

— Һуғышыуын һуғышҡан ул, мин уны беләм.

— Ә нишләп улай яҙған һуң?

— Икенсе төрлө яҙһа, баҫмаҫтар ине. Беҙ еңдек, тимәк, беҙ — геройҙар, уҡыусыға беҙҙең героизмды күрһәтергә кәрәк, тип уйлай. Ә ҡорбандарҙы, түгелгән ҡанды уҡыу-сыға күрһәтергә ярамай. Әлбиттә, героизм да бар ине, геройҙар ҙа бар ине, әммә беҙ халыҡтың түҙемлеге, һере-леге арҡаһында еңдек. Ҡанһыҙлыҡ та күп булды.

— Немецтарға булған ҡанһыҙлыҡты әйтәһегеҙме?

— Юҡ, үҙ халҡыбыҙға ҡарата булған ҡанһыҙлыҡты әйтәм.

Мин уның менән килештем. Карель ҡултығында гранит ҡаяларына һөжүм итеп, батальон тулыһынса һәләк бул-ғанын мин үҙ күҙҙәрем менән күрҙем. Артподготовкаһыҙ (минометтарҙың был таштарға теше үтмәй) һөжүм арты-

нан һөжүм. Бейеклекте алырға, бер нәмәгә ҡарамай алырға! — Бөттө-китте. Ә еңеү өсөн ошо бейеклек шул тиклем мөһим инеме лә, ошо яланғас таштар йөҙҙәрсә кисәге үҫмер малайҙарҙың тормошонан ҡәҙерлерәк инеме? Ул бейеклекте урап үтергә лә мөмкин булғандыр бит? Әммә ул картаға төшөрөлгән, алырға бойороҡ бирелгән, алһалар, полк командиры менән комбатҡа орден эләгәсәк. Кем белә, уны, бәлки, Маннергейм линияһындағы доттарҙы бомбаға тотҡан кеүек бомбаға тоторға кәрәк булғандыр?

— Һуғышты бөтә дөрөҫлөгөндә яҡтыртыу ваҡыты етмәгән әле. Ун йәки егерме йылдан һуң һуғышҡа икенсе ҡараш буласаҡ, кешенең дөрөҫлөктө белгеһе киләсәк, ә хәҙергә ошондай әҫәр ҙә ярай, — тине Әмирхан.

Мин тоттом да, үҙемдең поэма яҙыуым, уны бер мөхәрриргә уҡырға биреүем һәм уның, был әйберҙе бер ҡасан да баҫмаясаҡтар, тип әйтеүе хаҡында һөйләп ташланым.

— Поэма нимә тураһында?

Мин йөкмәткеһен һөйләнем.

— Ул хәл булғайнымы?

— Бөтәһе лә киреһенсә ине шул. Ҡыҙ, көтһә лә, элекке әсиргә тормошҡа сығырға теләмәне. Коммунист атаһы, абруйлы кеше, быңдай хәлде хурлыҡҡа иҫәпләне, — тип яуапланым мин һәм һораным: — Бәлки, миңә тормош дөрөҫлөгөн уйлап сығарып яҙырға кәрәк булғандыр?

Әмирхан уйланып ултырҙы.

— Беләһегеҙме, һеҙ тормошта нисек булған шулай яҙһағыҙ, был поэма булмаҫ ине. Һеҙ булырға тейешле ваҡиғаны яҙғанһығыҙ, унда мөхәббәт, тоғролоҡ еңергә тейеш. Поэманы миңә уҡырға бирмәҫһегеҙме?

— Ҡайҙа ятҡанын да онотҡанмын инде. Ташлағанмындыр йәки мейескә яҡҡанмындыр...

— Мөхәррир кире ҡаҡты, тип кенә ҡулъяҙманан баш тартырға ярамаҫ ине.

— Шундай һорау: мин һуғыш тураһында яҙа алыр инемме?

— Нишләп яҙмаҫҡа? Тик дөрөҫөн, ниндәй генә рәхимһеҙ булһа ла, дөрөҫөн яҙырға кәрәк. Әлбиттә, материал өҫтөндә нык эшләргә, факттарҙы художестволы дөрөҫлөк кимәленә күтәрергә кәрәк. Художестволы дөрөҫлөк тормош дөрөҫлөгөнән бер нисә башҡа юғарыраҡ булырға тейеш. Әҙәбиәт быуаттар буйы өс һорау өҫтөндә уйлана: мөхәббәт, үлем, һуғыш. Ғүмәр, Шекспир, Толстой, Чехов... Һуғыш — мөхәббәттең ҡан дошманы, үлем һәм ғазап союз-

дашы. Әлбиттә, Толстойҙы, Шолоховты уҡып ҡына кешелек донъяһы һуғыштан баш тартмаясаҡ, сәйәсмәндәр, генералдар ул китаптарҙы яҡшылап уҡыған тиһеңме ни? Шулай ҙа ҡасан да булһа был көн киләсәк, кешегә һуғыштың афәт икәнен аңлау киләсәк.

Байтаҡ йылдар үткәс, Әмирхан менән булған әңгәмәләрҙе хәтерҙән ҡағыҙға төшөргәндә улар нисектер үтә ябай, бер ҡатлы тойолдо. Ә ул саҡта, больница карауатында ятҡанда, был әңгәмәләр минең өсөн яҙмыш билдәһенә әйләнде. Полк китапханаһындағы китаптарҙы уҡып сыҡһам да, шунда мин үҙемдең үтә наҙан, мәғлүмәтһеҙ икәнемде аңланым. Иң мөһиме — мин уйлай, фекерләй белмәй инем. Ә бит был донъяға мин ниндәйҙер яҡшылыҡ эшләргә тыуғанмын, әҙәбиәткә ихлас тартылыуым бар, талантым да булғандыр, шиғырҙар яҙҙым, поэма яҙҙым, әммә ошоларҙың барыһына ла ҡул һелтәп шешә менән ҡосаҡлаштым да кәртә буйына йығылдым. Был ҡылыҡты бөтөрөргә кәрәк, кеше булырға кәрәк, тип уйландым мин ул саҡ баш асылып, күҙ алдары яҡтырып киткән саҡтарҙа.

— Проза яҙып ҡарағанығыҙ булманымы? — тип ҡыҙыҡһынды Әмирхан.

— Юҡ.

— Яҙып ҡарағыҙ, килеп сығыр. Һөйләгән теге бейеклек өсөн һуғышты яҙығыҙ. Дөрөҫөн, нисек булған шулай итеп. Ваҡыты еткәс, баҫырҙар. Әле һеҙ йәш, бөтәһе лә алда, — тине ул һәм һораны. — Ремарктың «На западном фронте без перемен» тигән романын уҡырға тура килмәнеме?

Мин ул яҙыусы тураһында беренсе тапҡыр ишетеүемде әйттем.

— Миндә ул китап икәү. Ригала алғайным, бәрәүһен ебәрермен.

Ул минең адресты яҙып алды.

Әлбиттә, мин уға эскегә һалышҡанымды, аҫылынырға маташҡанымды һөйләмәнем. Оят ине. Уның да хәбәре үҙ тормошонан ситтә йөрөнө. Эше хаҡында бер ни ҡәҙәр телгә алды. Әйтеүенсә, журналист икмәге еңел бирелмәй икән. Гәзит журналисының төп бәләһе — үҙе теләгәнде түгел, ә гәзиткә кәрәк булғанды яҙыу.

— Ниндәйҙер һауынсының рекордлы һауыны булған төпкөл колхозға бараһың. Уға «Почет билдәһе» ордены бирергә, үҙен Мәскәүгә ВДНХ-ға ебәрергә хәл иткәндәр, ә бының өсөн гәзиттә уның уңыштары хаҡында ҙур очерк сығыуы кәрәк. Киләһең дә күрәһең, был материал гәзиткә

кәрәкмәй, дөрөҫөрәге, яҙырлыҡ түгел. Һауынсыға, әйтәйек, егерме һыйыр беркеткәндәр, ә көтөүҙә иҫәпкә кермәгәндәре, йәғни «батрактар» тип аталғандары ла йөрөй, әлеге һауынсы шуларҙы ла һауа, ә күрһәткескә беркетелгән егерме һыйырҙың һөтө генә теркәлә. Һөҙөмтәлә, алдынғы колхоздың алдынғы һауынсыһы шунса һыйырҙан шунса һөт һауып ала, тип яҙырға тейешһең. Тап ана шул алдау, күҙ буяу, ялған күрһәткестәр хаҡында яҙғы килә, ә бөтә мөмкинлектәр ҙә тыуҙырылған һауынсы тураһында маҡтап яҙырға мәжбүрһең. Ул йә председателдең нәҫел тейешлеһе, йә... үҙең аңлайһың. Бына һеҙгә тормош дөрөҫлөгө, гәзит дөрөҫлөгөнән ни менән айырылғанына бер миҫал...

Бер-ике мәртәбә Әлфиә килде. Мин уға бүтән ҡысҡырманым, ҡыуманым, күңелдә хатта уны йәлләү тойғоһо ла уянды. Әллә уколдарҙан, таблеткаларҙан, әллә ҡан үҙе организмдан алкоголь ағыуын ҡыуҙы, яйлап мин һауыҡтым. Аңда ниндәйҙер үҙгәреш барлыҡҡа килде, мин ваҡыт-ваҡыт шул һүҙҙәрҙе ҡабатланым: башҡа эсмәйем, башҡа эсмәйем...

Әмирханға больницанан сығыу мәле лә етте. Ул яҡшы һоро костюм кейҙе (күкрәгендә байтаҡ ордендар колодкаһы), галстук бәйләне. Оҙон кәүҙәле, ҡуйы сәстәре ағара башлаған, аҡыллы ҡарашлы кеше булып күңелгә һеңде был башҡорт интеллигенты. Байтаҡ йылдар үткәс, Өфөлә, миңә Салауат Юлаев премияһын тапшырғандан һуң, яныма ордендар колодкалы, һоро костюмлы сал ҡарт киләсәк, мин көскә больницалағы палаталаш күршемде таныясаҡмын...

Мине больницанан алырға председатель машинаһына ултырып Әлфиә килде. Атайҙың тунын да һалған. Яландарҙа йоҡа ғына ҡар ята, ҡыш яҡынлығы һиҙелә, һауа саф, таҙа, тын алыуы еңел. Күңелдә, ниңәлер, ауылда ниндәйҙер яңылыҡ, шатлыҡ көтөп торған тойғо бар, бөгөндән башлап татлы тормош башланыр төҫлө. Эйе, өйгә, тап өйгә ҡайтып барам. Күпме этләткәндән һуң, бигерәк тә һыуға төртөп төшөргәндән һуң да ҡатын минең арттан килгән бит әле, тимәк, мин уның өсөн кәртә буйында ятҡан сүп түгел.

Идара эргәһендә машинанан төшкәс, Әлфиәне тағы бер этләтергә теләп (беҙ ниңә шулай икән?) ат һарайы яғына атланым.

— Эй, һин ҡайҙа? — тип аптыраны Әлфиә.

— Ҡайҙа булһын, ат һарайы йортона.

Ул мине ҡыуып етте лә тун түшенә йәбеште:

— Әйҙә ҡайт өйгә, кеше көлдөрмә!

— Һин бит мине тағы ҡыуып сығарасаҡһың.

— Ҡыумам.

— Ярай, һин нисек теләйһең,— тинем мин, йәнәһе лә өйгә ҡайттым ни, ат һарайы йортона киттем ни, миңә барыбер, һиңә инәләһе башым юҡ.

Шул көндө мунса яғып, ул мине йыуындырҙы, еткән сәсемде алды. Мин йыуынған-ҫайынған, таҙа кейемдә, әйтерһең дә, донъяға яңынан тыуғанмын, ҡатын менән сәй эсеп ултырам. Кисенә ғәҙәт буйынса диванға ятырға самалағайным да, ҡәтғи бойороҡ яңғыраны:

— Карауатҡа ят!

Саңлы дегәнәк япраҡтары, кеше баҡсалары янындағы кесерткән, тараҡан тулы ҡаҡ һике, тәмәке, тир, ҡайыш еҫе һеңгән ат һарайы йортонан һуң — ҡабарып торған яҫтыҡ, таҙа түшәк, йылы юрған! Ятыу менән иҙерәп йоҡлап та бара инем инде. Ҡатын юрған аҫтына инде лә күкрәгемә йөҙө менән терәлде. Ул элеккесә яҡын, танһыҡ ине...

Иртәгәһенә мин уға былай тинем:

— Колхозсыны, аҡса таба торған кешене кире ҡайтарҙым, тип уйлаһаң, яңылышаһың. Минең колхозда эшләйһем юҡ. Мин китап яҙасаҡмын.

— Яҙ, тик эсмә,— тип яуапланы Әлфиә.

Больницала барыбер ҙә тулыһынса төҙәлеп булманы. Баш ауырта, йоҡоноң да рәте юҡ. Ҡай саҡ юҡтан ғына йөрәк дарҫлап тибергә тотона, ҡулдар һыуына. Быны, контузияның касафатылыр, тип уйланым. Эсеү ҙә сирҙе көсәйткәндер. Өй-ҡаралты тирәһендә эшләп йөрөнөм шулай ҙа. Арттағы бесән кәбәне, утын ҡырҡып-ярып өйөп ҡуйылған — быларҙың барыһын да Әлфиә яңғыҙ эшләгән. Мин малға бесән төшөрҙөм, аҫтарын таҙарттым, ҡар көрәнем.

— Бер нәмә лә эшләмә, үҙем эшләрмен,— тине ҡатын.— Һин бит китап яҙам тинең, яҙ.

— Яҙыр өсөн машинка, ҡағыҙ кәрәк.

Дөрөҫөн әйткәндә, яҙырмынмы-юҡмы икәнен үҙем дә белмәй инем әле. Эш машинкала ла түгел, ҡулдан яҙып, һуңынан машинкала үткәреп була (идарала бер ҡыҙ баҫып ултыра), прозаны ла шиғырҙар кеүек башта йөрөтөргә кәрәк икән, деталдәр, нигеҙҙә, яҙған мәлдә килә, ә минең башта әлегә бер нәмә лә юҡ. Шулай ҙа эстә нимәлер йөрө-

гән, тауыш биргән һымаҡ, томан араһынан кеше йөҙҙәре шәйләнә, ишетелер-ишетелмәҫ тауыштары ла ҡолаҡҡа салына, пулеметтар тыҡылдауы, ярылған миналар тауышы яңғырай... Тик һис башлай алмайым, тәүге һөйләмде төҙөй алмайым да ҡуям. Алдыма ҡалын дөйөм дәфтәр һалам, ручканы ҡағаға манам, шунан ҡурҡып, ҡыйыуһыҙланып туҡталып ҡалам. Ҡай саҡ бер нисә һөйләм яҙам, тик оҡшамай, мин уйлағанса түгел — битте йыртам да йомарлап мейескә ырғытам.

Мин әҙәбиәттең мөһабәт һарайы алдында тапанған йәки болоттар ҡаплаған тау бейеклеге алдында икеләнеп баҫып торғансы, почтальон ҡатын бандероль килтерҙе. Ул Өфөнән, Ғүмәров Әмирхандан ине. Тулҡынлана-тулҡынлана астым. Эрих Мария Ремарк. «На Западном фронте без перемен». Роман. Русса. Бер ҡат уҡып сыҡтым, икенсегә. Шунан ғына аңланым: ошондай китап, ошондай әҙәбиәт булған өсөн донъяла йәшәргә була, йәшәргә кәрәктер, моғайын. Ҡайһылай дөрөҫ һәм ҡыйыу яҙылған барыһы ла! Үҙең хаҡында ғына яҙырға түгел икән, үҙең ҡатнашҡан, үҙең күтәрелгән һөжүмдәр, хатта мәйеттәр, һалдаттың үлемдән ҡурҡыуы, уның тормошҡа булған ынтылышы, ут, снаряд, бомба аҫтында үҙен нисек тоя, нисек кисерә, нисек күрә, нимә уйлағаны хаҡында яҙырға кәрәк икән. Романды уҡығандан һуң башта йөрөгән төрлө тауыштар, өндәр нығыраҡ ишетелә башланы, икеләнгән әйберҙәр асыҡлана төштө.

Бер көн ихатала эшләп өйгә керһәм, өҫтәлдә ниндәйҙер коробка ултыра, дөрөҫөрәге, футляр. Ҡыҙыҡһынып ҡапҡасын астым... Эсендә өр-яңы яҙыу машинкаһы ине...

Байтаҡ йылдарҙан һуң минән былай тип һораясаҡтар: «Һеҙ нисек яҙыусы булдығыҙ?» Мин шаяртып яуаплайым: «Бүтән эшкә ярамау арҡаһында. Алдыңда — ҡағыҙ, ручка. Ултыр ҙа яҙ. Саңһыҙ эш, етмәһә, түләйҙәр».— «Һеҙ нисек башланығыҙ?» — тип һораһалар дөрөҫөрәк булыр ине. Мин былай башланым. Машинкаға идаранан һорап алған ҡағыҙҙы ҡуйҙым, ике бармаҡ менән әҫәрҙең исемен сүкенем («Таштар араһында») һәм ҙур ауырлыҡ, хаталар өҫтөнә хаталар менән тәүге битте баҫтым. Шулай ҙа, яҙыусы булдым, тип иҫәпләмәйем, сөнки минең машинка һәм типография станогы араһында, минең машинкала баҫылған бит һәм журнал бите йәки китап бите араһында егерме йыл аралыҡ ята ине. Әммә үҙемдең яҙыусы була алырыма

ышанып («Графоман» һүҙе ул саҡта минең лексиконда юҡ ине әле) яҙыуҙы, ике бармаҡлап машинкала баҫыуҙы дауам иттем, тик ниңәлер ситкә, күрше клавишаларға һуҡтым — был мине ярһытты, мин асыуландым, һүгендем йәки бер нисә хатаны, урынына «төшмәгән» хәрефте күреп, баҫылғанды йыртып алып, машинкаға икенсе ҡағыҙ бите ҡуйҙым.

Хәтерҙең нимә икәнен берәйһе беләме икән? Ул — һоро матдә, ит киҫәге эсендәге килоға яҡын нәмә, баш һөйәге эсендә ята, унда бөтәһе лә: мин күргән-кисергәндәр, унда йөҙҙәр, исемдәр, әсәйемдең тауышы, йөҙҙәрсә китап йөкмәткеһе, көйҙәр, йыр һүҙҙәре, ғүмерем буйы һаҡланасаҡ беренсе мөхәббәт... Унда шулай уҡ һуғыш күренештәре, һуғыш тәьҫораттары.

Ғалимдар нейрондар, күҙәнәктәр, ниндәйҙер кислоталар, электр импульстары, таламус хаҡында һөйләй — пулялар тейеүҙән зәғифләнгән ҡайындар, һыҙғырып осоусы мина тауышы, батальон командирының сыйылдаҡ тауышы, яраланған Ивановтың үҙәк өҙгөс аҡырыуы ошо кескәй генә мейегә нисек һыйҙы ла, шуларҙың барыһын да ошо көнгә тиклем үҙендә нисек һаҡлай алды икән?

Мин бар иғтибарымды, хәтеремде эшкә еккәс, Карель ҡултығындағы ваҡиғаларға ике тиҫтә йыл үтһә лә, улар кисә генә булған кеүек күҙ алдына баҫты. Меңдәрсә йәш ирҙәр — уларҙың күптәре кисәге мәктәп балалары, ауыл малайҙары, фэзэошниктар — тамуҡҡа кергән кеүек эре ташлы Карель урманына керҙе һәм күптәре шунда ятып ҡалды. Ҡайһыларын санитарҙар алып сыҡты, ҡайһылары госпиталдә үлде, бик һирәктәре генә тыуған ер буйлап таяҡта йәки аҡһап-туҡһап атлап йөрөй. Ә мин тере ҡалдым, контузия ғына алдым. Бәлки, был унан һуңғы һуғышта Аллаһы тәғәлә миңә осҡан пуля, мина, бомба ярсыҡтарын башҡаларға һөйләү, таштар араһында баштарын һалғандар тураһында яҙыу өсөн ситкә һирпеп торғандыр?

Шуныһы ҡыйын: мин үҙемдең уй-фекерҙе проза формаһында бирә белмәй инем. Шиғырҙа ул еңелерәк — размер, рифма үҙе өйрәтә, үҙе ярҙам итә. Ә прозала һүҙҙәр, нөктәләр, өтөрҙәр, ике нөктәләр, йәйәләр сүплегендә үҙеңде көнбағыштар араһында аҙашҡан бала рәүешендә тояһың. Бала саҡтан һөйләшкән туған башҡорт теле ул тиклем туған булып сыҡманы, йәғни телдә китап яҙырлыҡ кимәлдә белмәйем икән. Егерме тирәһе бит өҫтөндә тамам йонсоғас, йәнә Ремарк китабына күҙ һалдым, унда

Пауль Боймер үҙенең һуғышта ҡатнашҡанын беренсе заттан һөйләй. Әгәр мин дә «ул уйланы», «ул әйтте» тип түгел, ә «мин уйланым», «мин әйттем» тип яҙғанда, йәғни мин, Ғәйнуллин Тәлғәт, үҙем тураһында һөйләгәндә нисек булыр ине икән? («Беренсе заттан» тигән һүҙбәйләнешен мин ул саҡта белмәй инем әле.) Яҙғанды йыртып ырғыттым да икенсе биткә яңынан яҙа башланым, был юлы һөйләш теленә, Мостафа йәки күршеләге Гөлбикә ҡарсыҡ теленә яҡын итеп. Һөҙөмтәлә тасуирлау байтаҡҡа теремекләнеп китте — Ғатауллин Бәлхиә һалдат таштар араһындағы алыш тураһында үҙенең ауылы телендә һөйләй башланы.

Тәҙрә, ҡапҡа артында һуғыштан йыраҡ һил тыныс тормош бара, ә мин машинка артына ултырғанмын да бөтә хәтерем, күңелем менән ҡырҡ дүртенсе йылдың пулялар һыҙғырған, миналар шартлаған эре ташлы Карель урмандарында йөрөйөм. Һөжүмгә күтәреләм, үлемдән һәм яраланыуҙан ҡурҡып таштарға һыйынам, «Алға!» тигән бойороҡҡа буйһоноп пулеметтарға ҡаршы йүгерәм... Бер юғалып, бер күренеп ошо ваҡыт эсендә эргәмдә ҡатын йәшәне. Төнөн машинкала баҫҡанда ул йоҡлай, иртәнсәк уянғанда янымда булмай. Өҫтәлдә — иртәнге аш, төшкөлөккә тиреҫ, силос еҫе таратып ферманан йүгереп ҡайта ла мине ашата, өйҙәге эштәрен бөтөрә, тышҡа ашығып сыға. Быларҙың барыһын да бесәй йәшәгән өйҙәге сысҡан кеүек шым эшләй, унан йәнә фермаһына сығып саба. Тегендә әхирәттәренә ниндәйҙер ғорурлыҡ менән, моғайын да, минеке китап яҙа, тип һөйләйҙер әле.

Һирәкләп ҙур стажлы алкоголик Тәлғәттә, моғайын, баш төҙәтергә берәй нәмә табылыр, тигән өмөт менән минең элекке шешәләш дуҫтар килә. Әлфиә өйҙә булһа,ындайҙарҙы тәҙрә аша күреп ҡала ла ҡаршыларына сыға, тупһаға баҫып:

— Бар, бар, йөрөмә, уның ваҡыты юҡ, ул китап яҙа, — тип өйгә индермәй.

Үҙ-ара һөйләшеү юҡ кимәлендә. Һөйләшһәк тә, хужалыҡ мәшәҡәттәре тураһында ғына: оҙаҡламай һыйыр быҙаулаясаҡ, күрмәй ҡалмаһаҡ ярар ине, баҙҙа картуф шыта башлаған, бәлки, төнлөктө асырға кәрәктер, бесән, һалам етерме икән?.. Минең яҙғандар менән Әлфиә ҡыҙыҡһынманы, ҡыҫылырға хаҡым юҡ, ул минең эш түгел, тип иҫәпләне шикелле. Был осорҙа сәйәсәт менән бигүк ҡыҙыҡһынмай инем әле, ә радио индергәстәре һәм стенаға эленгән түңәрәк ҡара тәрилкә йырлай, Хрущев

шәхес культы тураһында һөйләй башлағас, минең башта уй-фекерҙәр яралды, мин уларҙы күптән белгән, уйлаған һымаҡмын тойолдо — үҙ алдыма, дөрөҫөрәге, ҡатын алдында һөйләй, бәхәсләшә башланым. Ул өндәшмәй генә тыңланы, әммә, һиҙеүемсә, үҙенекен уйлап йөрөнө, тик тауышын сығарманы. Һуңынан ишетеүемсә, ферма өйөнә йыйылған малсылар, һауынсылар тормош, Мәскәүҙә нисек йәшәгәндәре тураһында һөйләргә тотонһалар, ҡатын һүҙмә-һүҙ тигәндәй минең һүҙҙәрҙе ҡабатлай икән. Бөтәһе лә аптырай, шаҡ ҡата. «Быларҙы һин ҡайҙан беләһең?» — тип һорайҙар икән. «Радио тыңларға кәрәк», — тип яуаплай икән Әлфиә, серле генә итеп.

Ҡайһы саҡ йоҡлар алдынан, әгәр миңә уның менән бергә ятырға тура килһә, бер аҙ һөйләшеп тә алабыҙ, дөрөҫөрәге, ул һөйләй, мин тыңлайым. Кем кемгә өйләнгән, кем айырылған, кем ҡатынын туҡмаған, фермаларында малсы Нурғәлиҙе бүлешә алмай һауынсылар Фатима менән Сажиҙә нисек һуғышҡан. Ә бер көн Нурғәли, эскесе һәм һуғыш суҡмары, яңылыш баҫып кормозапарникка йығылып төшә лә: «Бисәләр, ҡотҡарығыҙ, бешәм!» — тип һөрәнләй икән. Ярай әле, соҡорҙа һыу ныҡ ҡайнап өлгөрмәгән, юҡһа яна ине. Быны белгән Нурғәлиҙең ҡатыны: «Ниңә сығарҙығыҙ, бешһен, янһын ине шунда»,— ти икән...

«Таштар араһында» тигән повесты апрель аҙағына тамамланым да Өфөгә, журналға, ебәрҙем. Икенсе повесҡа ултырҙым, уның «Бына һуғыш бөтөр ҙә...» тип атала ине. Йыр бар ине ул заманда: «если завтра война, если завтра в поход...» Мин ҡырҡ бишенсе йылда Германияла шул һуғыштың нисек тамамланғанын күрһәтергә теләнем әлеге повеста.

Беҙ еңдек, немец халҡын фашизмдан ҡотҡарҙыҡ. Донъяны азат иттек — уныһы аңлашыла, ә бына немец халҡы был «ҡоллоҡ»тан ҡотолорға теләнеме икән һуң? Был хаҡта бәхәсләшергә урын бар, минеңсә. Әгәр ул, немец халҡы, фашизмды теләмәһә, Мәскәү янындағы тәрән көрттәрҙә, Сталинград емереклектәре араһында уның өсөн үлмәҫ ине. Крупп заводтарында ҡорал етештермәҫ ине. Эйе, һуғыштан һуң улар дәррәү рәүештә Гитлерҙы, фашизмды, һуғышты ғәйепләргә тотондо, йәнәһе лә, үҙҙәренең ғазаптарында үҙҙәре, йәғни немец халҡы түгел, ә уларҙы алдатҡан фюрер ғына ғәйепле. Күргән ауырлыҡтарҙа Гитлер, рустар түгел, ә үҙҙәре ғәйепле икәнен аңлау өсөн уларға байтаҡ йылдар кәрәк булды.

Ул саҡта еңеүсе Ҡыҙыл Армия һалдаттарында, беҙ немец халҡын ҡотҡарабыҙ, тигән уй юҡ ине. Был турала һуңынан ғына һөйләй, яҙа башланылар. Улар беҙҙең ярты илде таланы, яндырҙы, емерҙе. Күптәребеҙҙең атайҙары, ағайҙары һәләк булды. Беҙҙең өсөн һәр немец — һалдатмы ул, офицермы, ҡатын-ҡыҙмы — барыһы ла фашист ине. Беҙ уларға ғәҙәти кешеләр, йәғни үҙебеҙ кеүек кеше итеп ҡарай алманыҡ. Беҙгә ҡулдарын күтәргән немец һалдатын үлтереү йәки тап булған немканы көсләү бер нәмә лә тормай ине. Беҙ, ярты донъяны ҡанға батырған фашизмдан үс алабыҙ, тип уйланыҡ.

Автобиографик характерҙағы повестың йөкмәткеһен һөйләп тороуҙың кәрәге юҡтыр. Төп фекерҙе былай ҙа әйттем шикелле. Шулай ҙа әсир төшкән немец менән булған хәлде һөйләмәй булдыра алмайым.

Взводта Фомичев фамилиялы утыҙҙан үткән һәм беҙгә, ун һигеҙ йәштәгеләргә, ҡартлас күренгән һалдат бар ине. Ул ветеринар лазаретта хеҙмәт итте, алғы һыҙыҡҡа һуғыш бөтөр алдынан ғына килде. Бик үлтергеһе килә ине уның немецты, әммә бер нисек тә хыялын тормошҡа ашыра алмай ҙа ҡуя, сөнки немецтар был арала яҡын һуғышҡа инмәй, ә алыҫтан ҡасып барған фрицҡа атырға Фомичев насар атыусы. Беҙ унан былай тип һорайбыҙ: «Ниңә уны шул ҡәҙәре үлтергең килә һуң?» — «Нисек инде? Һуғышта булдым, ә бер фрицты ла үлтерә алманым,— тип яуаплай был.— Балаларым, һин нисә немецты үлтерҙең, тип һораһа, нимә тип әйтәйем?»

Бына бер ваҡыт немец офицерын әсиргә алдыҡ. Ҡупшы шинель, бейек офицер фуражкаһы кейгән зәңгәр күҙле ариец. Сержант Андреев уның сәғәтен һалдырып алды, лейтенант әсирҙе полк штабына илтергә ҡушты. Фомичев алып китте немецты, тик бик тиҙ әйләнеп ҡайтты. Ниңә улай бик тиҙ, тигәс: «Уны ҡайҙалыр алып барыу нимәгә хәжәт, аттым да йыҡтым»,— тип яуапланы.

Әммә повесты беренсе заттан, йәғни «мин оҙата киттем», «мин үлтерҙем» тип яҙырға кәрәк ине, шуға ла Фомичев урынына Ғатауллин Бәлхиәне «ҡуйҙым». Тасуирлау уның исеменән алып барыла.

«Мин уны тыл яғына алып киттем, полк штабының ҡайҙа икәнен белмәйем. Биш саҡрым ғына барҙыр, унан да күберәк булмаһа әле. Унан үҙемдең взводҡа нисек әйләнеп ҡайтам? Кешеһеҙ ҡалған һирәк утарҙар эргәһенән үткән урман юлы буйлап алып барам. Тирә-яҡ — дошман ере,

һәр ағас, һәр ҡыуаҡ артынан үҙ частарынан бүленеп ҡалған эсэсовсылар килеп сығып, офицерҙарын ҡотҡарыу өсөн ташланыуҙары бик ихтимал. Һуғыш бөттө тигәндә үлге килмәй бит әле... Бар, фриц, ҡас, йүгер, бүтән ҡулға эләкмә, тип ебәрергәме әллә? Юҡ, иң яҡшыһы — уны атып йығыу һәм бик йыраҡ китмәҫ элек взводҡа әйләнеп ҡайтыу. Һуғыш бөтөп бара, ә мин бер немецты ла үлтермәнем, өйҙә һораһалар, мин нимә тип яуап бирермен һуң? «Хальт!» — тип ҡысҡырҙым мин ҡапыл. Немец тертләп китте, туҡтаны, бер мәлгә арҡаһы менән ҡатып торҙо, унан яй ғына миңә боролдо. Мин карабиндың затворын үҙемә тарттым. Немец ағарынды, ә мин — тып-тыныс. Тыныс ваҡытта миңә кеше атырға ҡушһалар, үҙем менән ни булырын күҙ алдына ла килтерә алмайым. Ә минең алдымда, ул саҡтағы аңлауымса, кеше түгел (уға мин дә кеше түгел), дошман армияһы һалдаты, фашист баҫып тора. Әгәр ул мине кеше тип хисапләһа, атма, ебәр, тип инәлер, ялбарыр ине. Әммә, уның уйынса, алдында варвар, кеше булып етлекмәгән азиат йөҙлө йән эйәһе тора, ситкә ҡыйшайған шапка-ушанкалы бәләкәй генә кәүҙәле был һалдат ишаратының ҡыйыш күҙҙәрендә бер ниндәй ҙә кешелек сифаттары юҡ. Башын юғары ташлап, ул өҫкә ҡараны, ағарған, тартышҡан йөҙө буйлап күҙ йәштәре аҡты. Ул илай ине. Һеҙ ҡасан да булһа илаусы фашисты күргәнегеҙ бармы? Моғайын да, ниндәй йәл, йәш ғүмерем бынау ҡырағай азиат ҡулынан өҙөлә, хәҙер атыр, минең кәүҙәм бынау саңлы юл уртаһында ятып ҡалыр, тип уйлап илағандыр. Әсәһен, һеңлекәштәрен, ҡусты-энеләрен, яратҡан ҡыҙын иҫенә төшөргәндер. Улар уның һөйәктәрен ҡайҙағы сүп үләндәре баҫып киткәнен бер ҡасан да белмәйәсәк...

Былар, әлбиттә, һуңынан уйланған уйҙар. Ә ул саҡ миңә немецты атырға ла тиҙерәк үҙемдең взводты ҡыуып етергә кәрәк ине. Мин уның күкрәгенә аттым — ул ҡырҡылған кеүек ергә ауҙы».

Байтаҡ йылдар үткәс, бер уҡыусым былай тип һораны: «Ниңә һеҙ үҙегеҙҙе шулай ҡанһыҙ итеп һүрәтләнегеҙ?» Ул кешегә, мин үҙемде күрһәтмәнем бит, тип аңлатыу файҙаһыҙ ине, икенсенән, ул — булған хәл, мин уны уйлап сығарманым, иң мөһиме — бының менән мин һуғыштың аҡылһыҙлығын, әхлаҡты ла, мәрхәмәтлекте лә белмәй-аңламай, ҡабул итмәгән кешелеккә ҡаршы күренеш икәнен күрһәтергә теләнем.

Быны дин кешеһе йәки, әйтәйек, пацифист күҙлегенән фаразлап ҡарайыҡ. Аллаһы тәғәлә әҙәм балаһына уйлау, изгелек менән яуызлыҡты айырыу өсөн мейе биргән. Һәм һайлау ирке. Үҙенең өлкәһендә тарих дәрестәрен, тарих һығымталарын кисереү мөмкинлеген биргән. Ә улар, билдәле булыуынса, бер нәмәгә лә өйрәтмәй. Ә бер көн ҡапыл өйрәтә башлаһа? Ах, һеҙ, агрессив йәндәр, ҡан көҫәйһегеҙме, үлем теләйһегеҙме, улайһа һуғышығыҙ, үҙ туғандарығыҙҙы үлтерегеҙ, шунан үҙегеҙ ҡылған эштәрегеҙҙе күреп ғәжәпләнерһегеҙ ҙә: «Ә Алла ҡайҙа?» — тип ҡысҡырып ебәрерһегеҙ. Мин бында, янығыҙҙа, һеҙҙе изгелекле, миһырбанлы, саф күңелле итеп яһай ала инем, тик һеҙгә яҡшылыҡ теләп, иркегеҙҙе ихтирам итеп, хаҡлыҡты үҙегеҙҙең аҡылығыҙ менән табыуығыҙҙы, кешене үлтереүҙең мәғәнәһеҙлеген аңлауығыҙҙы теләнем. Уйлап ҡарағыҙ: һуғыштан берәй ваҡыт берәйһе ниндәйҙер файҙа, отош таптымы, үҙе ише кешене үлтереп үҙен бәхетле итә алдымы? Үҙ тарихығыҙҙың мәғәнәһеҙлеген аңлағас ҡына, ә һеҙҙең тарих тулыһынса тип әйтерлек һуғыштарҙан, ҡотолғоһоҙ хаталарҙан тора, быны беләсәкһегеҙ, бер-берегеҙҙе үлтереүҙән туҡтаясаҡһығыҙ. Ә мин көтөрмөн, минең ваҡыт — мәңгелек...

«Бына һуғыш бөтөр ҙә...» повесын йәй буйы яҙҙым — машинка янынан бер нисә көнгә йәки бер аҙнаға ғына киткелде — картуф утау, һыйырға бесән әҙерләү. Бер нисә мәртәбә бригадир кереп (хәҙер минең ағай түгел, ә икенсе, йәш кеше) мине колхоз эшенә ҡыуырға маташты. «Булмай, мин китап яҙам», — тинем. «Ниндәй китап, китап яҙырға һин яҙыусымы ни?» — тип мыҫҡыллы ғына көлөмһөрәне бригадир, минең ҡыйыҡ ҡыйшайған тип уйланы, ахыры. Әлфиә лә өйҙә ине һәм был йәш егеткә: «Эйе, ул яҙыусы, китап яҙа, башы менән эшләй, ҡай берәүҙәр шикелле эт һуғарып йөрөмәй», — тип яуапланы. «Яҙыусы», — тине бригадир, әйтерһең дә, был һүҙ насар әрләү һүҙе ине. Һәм бүтәнсә борсоп йөрөмәне. Халыҡ араһына ошо һүҙҙе минең ҡушамат рәүешендә тап ул таратты ла шикелле. Яҙыусы... Берәй малай ҡапҡаһын асып йөҙөн күрһәтә лә, мин уны уҙып киткәс, арттан: «Эй, яҙыусы!» — тип ҡысҡырып ҡала. Эскән берәйһе иҫәнләшеп ҡулды ҡыҫа һәм мотлаҡ: «Нихәл, яҙыусы!» — тип йылмая. Ҡайһыһылыр беҙҙең ҡапҡаға ҡара буяу менән «яҙыусы» тип яҙып китте. Мин саңлы дегәнәк араһында ятҡанда, Мәрғүбә ҡарсыҡтың өйөндә аунағанда бер кем дә ғәйепләмәне, ниңә улай-

тып йөрөйһөң, тип борсолманы, дөрөҫ юлға төшөрөргә теләмәне, ҡушамат йәбештермәне, ә бына яҙа башлағайным, ауыл ҡабул итмәне лә ҡуйҙы. Ғәжәп...

Бер көн ауыл Советына саҡырҙылар. Ҙур бүлмәлә йөҙөнә түрәлек маскаһы ябынып таныш булмаған кеше ултыра. «Нишләп ижтимағи-файҙалы эштә ҡатнашмайһығыҙ?» — тип һораны ул. «Китап яҙам», — тип яуапланым мин. «Нимә тураһында инде ул китап?» — «Һуғыш тураһында». — «Нимә, һеҙ яҙыусымы ни? — «Шулайыраҡ». — «Яҙғанығыҙҙы күрһәтегеҙ әле». Мин йүгереп ҡайтып килдем дә бының алдына тамамланмаған ҡулъяҙманы һалдым. Асты, ҡайһы бер биттәрен уҡыны, аҡтарҙы, унан ҡайтарып бирҙе лә былай тине: «Ярар, яҙығыҙ. Беҙҙең районда ла, исмаһам, бер яҙыусы булһын әле».

Ошо ваҡыт эсендә түҙемһеҙлек менән Өфөнән хәбәр көттөм, өмөт өмөтһөҙлөккә әйләнде — баҫмаҫтарҙыр. Кем белә, бәлки, барып етмәгәндер, юлда юғалғандыр. Ә мин, ауыл белекһеҙе, әҫәрҙе копировка аша баҫырға кәрәклеген, шуның бер нисә данаһын үҙемдә ҡалдырыуҙы башыма ла килтермәнем.

Ниһайәт, сентябрҙә почтальон ҡатын ҡалын бандероль тоттороп китте. Йөрәк жыу итеп ҡалды: «Баҫҡандар, журнал ебәргәндәр!» Тышҡы ҡағыҙҙы йырттым, ә унан үҙемдең повесть килеп сыҡты. Тамаҡҡа төйөр тығылып, шуға төшөндөм: кире ҡайтарғандар. Папкаға машинкала баҫылған бер бит ҡағыҙ ҙа һалынғайны: «Хөрмәтле Ғәйнуллин иптәш, беҙ һеҙҙең повесть ҡулъяҙмаһын кире ҡайтарырға мәжбүрбеҙ, сөнки ул беҙҙең журналдың идея-художество талаптарына тура килмәй. Повесығыҙҙа һуғышты һеҙ үҙегеҙҙең субъектив ҡабул итеүегеҙ аша күрһәтеүегеҙҙе маҡсат итеп ҡуйғанһығыҙ, был һеҙҙе дөрөҫлөктән ситкә алып китә: беҙҙең һалдаттар үлемдән ҡурҡһа, һеҙ яҙғанса, хыянатсыл рәүештә шөрләһә, Бөйөк Ватан һуғышында кем еңде һуң?.. Окоп дөрөҫлөгө, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ремаркизм менән аңҡый, ә уның төп пафосы — буржуаз пацифизм. Ҡулъяҙмағыҙҙы кире ебәрәбеҙ. Ижади уңыштар теләйем. Проза бүлеге редакторы Хөснуллин К.»

«Пафос», «пацифизм» тигән һүҙҙәр миңә ят ине (һуңынан китапханала һүҙлектән эҙләп ултырҙым), уның урынына Өфө журналисы Әмирхан арҡаһында мин Ремарктың кем икәнен, буржуаз пацифизмдың нимә икәнен белә инем инде. «На Западном фронте без перемен» әҫәре иҫ киткес талантлы һәм дөрөҫ, әгәр проза бүлеге редакторы

мине Ремарк менән сағыштыра икән, минең дә Аллаһы тәғәлә биргән талантым бар булып сыға! Тик шуныһы аңлашылмай: ниңә талантлы әҫәр кире ҡағыла һуң? Эйе, һүҙ ҙә юҡ, совет һалдатының батырлығын күрһәтергә кәрәк. Әммә окоптан күтәрелгәндә бер минуттан һуң һәләк буласағыңды аңлау героизм түгелме ни? Мина ярылған, пулялар осҡан яландан дошман окоптарына йүгереп барып етеү героизм түгелме ни?

Ҡыш урталарында «Бына һуғыш бөтөр ҙә...» повесын тамамланым да шул уҡ журналға ебәрҙем. Саҡ ҡына ял иткәс, икенсе әҫәргә ултырҙым («Кисеү»). Сюжетты үҙемдең тормошта булған бер ситуация «бүләк итте» — минең һымаҡ уҡ армиянан ҡайтып килеүсе һалдат Яйыҡты кисеп сыҡҡанда сөңгөлгә эләгеп саҡ батмай ҡала. Башына мина ярсығы тейгән Атнабаев ялан эвакуация госпиталенә эләгә. Тыуған ауылын, ҡатынын, балаларын ныҡ һағына. Үҙенең атлар хәле барлығын самалағас, ул төнөн, санитарканың йоҡомһорап ултырғанынан файҙаланып, тора ла шым ғына һауығыусылар командаһы йоҡлаған палатаға керә һәм, ҡайһыһыныңдыр шинелен, итектәрен, пилоткаһын кейеп, юлға сыға. Ниндәйҙер бәләкәй станцияға етеп, үтеп барыусы тауар поезына йәбешә һәм бөтә Рәсәй буйлап тыуған яҡтарына ҡайта. Урал станцияларының береһендә төшөп, ауылына йәйәү атлай. (Мин бында ауырыуҙың һаташыуына оҡшаш уның күргән-кисергән бөтә мажараларын тәфсирләп яҙҙым.) Ниһайәт, арыған, йонсоған ас һалдат тыуған йылғаһы буйына килеп етә, ул өйҙә тиерлек, әммә ҡойма ямғырҙарҙан һуң йылға ташҡан, ярҙарынан сыҡҡан, тирә-яҡтағы туғайҙарҙы баҫҡан, ә күпер йылға уртаһында ҡалған. Төн, ямғыр яуа. Атнабаев кисә башлай, күпергә етә, ары атлай. Йылға ярында ғына — ауылы, Атнабаевтың йорто — иң ситтә. Билдән һыу кисеп саҡ ҡына атлаһа, ҡатынын ҡосаҡлаясаҡ, балаларын үбәсәк. Бына яртылыҡ юлды, күпер менән яр араһын үтә, үҙ йортоноң тәҙрәләрендә янған утты шәйләй — ауылда уның өйөндә генә ут яна. Балалары йоҡлайҙыр, ә ҡатыны йоҡламай, ятҡан йөрәге ирем эргәлә, ҡайтып килә, тип һиҙенәлер. Ағым һалдатты барған һайын уңға ҡайыра. Атнабаев белә: унда — соҡорҙар. Бына ул ҡапыл муйынына тиклем батып китә, аяҡтары ташҡа теймәй башлай, йөҙөргә маташа, әммә һыуланған ауыр шинель, итектәр төпкә һөйрәй. Ул бөтә көсөн һалып йөҙә, ҡараштарын өйөнән сыҡҡан яҡтынан алмай, ағым уны һаман аҫҡа ағыҙа, уттар

алыҫлаша бара. Бына бер мәл улар һүнә, тирә-яҡ дөм-ҡараңғыға сума. «Зәкиә! — тип ҡысҡыра Атнабаев һуңғы көсөн йыйып. — Балаларым!» Һәм йортонан йөҙ метр йыраҡлыҡта ағым уны бөтөнләйгә йота...

Повесть ошондай һүҙҙәр менән тамамлана: «169-сы уҡсы полктың өсөнсө рота рядовойы Атнабаев Ғайса башына алған ауыр яранан аңына килә алмай эвакогоспиталдә үлде...»

Апрелдә Өфөнән йәнә бер бандероль алдым. Эсендә нимә барлығын алдан белгәнлектән, тыныс ҡына астым да папка эсенә һалынған ҡағыҙ битен уҡыным. Шул уҡ Хөснуллин былай тип яҙа: «Хөрмәтле Ғәйнуллин иптәш, журналда биреү мөмкинлеге булмағанлыҡтан, повесығыҙҙы кире ҡайтарабыҙ». Редактор тапҡан күп етешһеҙлектәр араһында шулары ла бар ине: материалды ойоштора белмәй, тасуирлау йомшаҡлығы, документализм, натурализм. Тағы ошондай юлдар: «Беҙҙең һалдаттың немецты атыуы кире тойғо уята. Һеҙ уны немец офицеры күҙе менән бирергә теләйһегеҙ: азиат йөҙлө, кеше булып етмәгән бәндә. Тик уны беҙҙең уҡыусы аңламаясаҡ, ул немец һалдаттары менән беҙҙең алама ғына бүрек-ушанка кейгән меҫкендәр һуғышҡан икән, тип уйлаясаҡ. Һөйләүсе, яҙыусы, күрәһең, авторҙың фекерен сағылдырып, немец офицерын йәлләй. Йәлләү, фашист илбаҫарҙарын дөйөм ғәфү итеү совет әҙәбиәтенә хас түгел».

Йәйен «Кисеү»ҙе кире ҡайтарҙылар. Хөснуллин был повеста ҡайһы бер уңышлы яҡтарҙы билдәләгән, хатта еңелсә генә маҡтаған да. Тик шул уҡ үлемгә тиң баһаны биргән: «Баҫырлыҡ түгел!» Баҡһаң, ҡотҡарыусы совет һалдаты һаташҡанда ла тылға йүгерергә тейеш түгел, ә алға, тик алға, көнбайышҡа барырға бурыслы. «Һыу рубежын кисеп барған Атнабаев алда, яр башында, үҙенең өйөн түгел, ә дошман окоптарын күрһә, һеҙҙең повесть бөтөнләй икенсе төрлө яңғыраш алыр ине. Иң насары — һеҙҙең повесть Амброз Бирстың «Случай на Совином ручье» тигән хикәйәһенә ныҡ оҡшаған».

Амброз Бирс хаҡында беренсегә ишетеүем, хикәйәһе менән дә танышлыҡ юҡ. Үҙем һыуға батмаһам, был повесты яҙмаҫ та инем...

Шулай итеп, минән яҙыусы килеп сыҡманы. Ҡатынға былай тинем: «Ун йыл һинең елкәңдә ултырҙым, тау-тау ҡағыҙ бысраттым, барыбер яҙыусы була алманым». Ул тыныс ҡына: «Эш менән мәшғүл булдың, эсеп йөрөмәнең», —

тине. Тимәк, әҙәбиәт мине алкоголизмдан йолоп алған булып сыға.

Яҙыусы килеп сыҡмағандың сәбәбен шунан күрҙем: мине Өфө журналисы, ниндәй генә аяуһыҙ булһа ла тик дөрөҫөн яҙ, тип юлдан яҙҙырҙы. Әҫәрҙәре журналда баҫылған әҙиптәр кеүек яҙырға кәрәк булған миңә. Тик был журналда бит бик түбән кимәлдәге проза әҫәрҙәре нәшер ителәә. Мин сағыштыра алам. Ремарк менән түгел, әлбиттә. Беҙҙең ауыл китапханаһы «Новый мир», «Знамя» исемле рус журналдары алдыра, уларҙа бына тигән повестар, хикәйәләр донъя күрә. Уларҙа, күрәһең, редакторҙар аҡыллыраҡтыр, цензура йомшаҡтыр. Әгәр русса яҙа белһәм йәки берәйһе минең әйберҙәрҙе руссаға тәржемә итһә, мин уларҙы Мәскәүгә ебәреп ҡарар инем. Ә башҡорт журналдарында үтерлек повестар яҙа белмәнем, унан һуғыш тураһында күңелле һабантуйҙағы ише яҙырға теләгем дә юҡ. Һәм мине бер ҡасан да баҫмаясаҡтар, уңышһыҙлыҡҡа осраясағыңды алдан уҡ белә тороп, ул эш менән ниңә шөғөлләнергә һуң әле, тип мин үҙемде яҙыусы тип иҫәпләүҙән туҡтаным, машинканы чехолына һалып, соланда ултырған иҫке шкафтың аҫҡы тартмаһына тығып ҡуйҙым. Тәҙрә төптәрендә йөрөгән ҡулъяҙмалар папкаһын мейес алдына ырғыттым да ҡатынға:

— Һиңә ут тоҡандырырға ҡағыҙ, бөтәһен дә яҡ! — тинем.

Һәм ябай, рядовой колхозсы тормошо менән йәшәй башланым, хатта ижтимағи-файҙалы эш менән шөғөлләндем: бесән йыйырға сыҡтым, көҙөн фермала һарайҙарҙы ремонтларға йөрөнөм. Мин үҙем дә, ҡатыным да минән яҙыусы сыҡмағанына үкенмәнек. Баҡһаң, тормош яҙыусылыҡтан башҡа ла мөмкин икән, ваҡыты-ваҡыты менән хатта ҡыҙыҡ тә, тәмле лә. Крәҫтиән тормошо — үҙе яҙылмаған роман. Боҙ, ҡар ҡатламдары аҫтында ятҡан ерҙең, ағастарҙың уяныуы, йәйге мәшәҡәттәр, ығы-зығы, бесән еҫе, ут өҫтөндә ҡайнаған сәй еҫе, юлда күк күкрәүе, кәбән төбөндә ҡатын-ҡыҙ менән ултырыу, уларҙың әсе теле, көләүе, ҡыҙҙар йыры, ҡыуышта йоҡлау, еләккә йөрөү, ихаталарҙан сыҡҡан тәмле варенье еҫе — былар бөтәһе лә үҙ-үҙҙәренән гүзәл һәм иҫ киткес. Көҙҙөң үҙ буяуҙары, болоттары һәм елдәре. Беренсе ҡар, беренсе һепертмә буран. Ноябрҙә — ҡаҙ өмәһе, ҡунаҡҡа йөрөүҙәр, араҡы, бал, мул һыйлы өҫтәлдәр, өсәр-дүртәр көнгә һуҙылған туйҙар. Больницанан һуң мин байтаҡ йылдар ауыҙға араҡы

алманым, хәҙер ҡунаҡта саҡ ҡына төшөрә алам, иртәгәһенә баш ауыртыу менән яфаланмайым. Йәнә бер ләззәт бар — мунса. Йыуындыра, дауалай торған учреждение. Беҙ ҡатын менән оҙаҡ йыуынабыҙ, иҫтәр яҙғансы сабынабыҙ, шунан соланға сығып ултырабыҙ, ял иткәс, мәтрүшкә ҡушып бәйләнгән ҡайын миндеге менән йәнә туҡмашабыҙ... Ҡыш, ҡабарынҡы ҡар өйөмдәре, ат юлы, еңел ҡар бөртөктәренең ҡабаланмай ғына ергә төшөүе, мейес йылыһы, радионан яңғыраған йырҙар, кистәрен китап уҡыу, марттағы аҡман-тоҡман, ҡыйыҡтан аҡҡан беренсе тамсылар. Боҙ китеү, һыу ташыу, умырзаяның сәскә атыуы, йылға аръяғындағы муйылдарҙың сәскәгә төрөнөүе, бөтә ауылға яҙғы тәмле еҫтәр таратыуы, һандуғастар һайрауы. Йәнә йәй... Тәүге ҡарамаҡҡа был әйләнештә бөтәһе лә ҡабатлана кеүек, әммә улай түгел, бөтәһе лә яңыса, барыһы ла беренсе тапҡырға, бөтәһе лә ҡыҙыҡ, серле, тәмле. Тормош был!

Әлфиә менән беҙ тыныс йәшәнек. Баштан үткәргәндәр, уңышһыҙ тамамланған яҙыусылыҡ эшенән һуң мин тынысландым, аҙ һөйләштем, уйсанға әйләндем. Ҡатынды яраттыммы һуң? Юҡтыр. Дөрөҫөрәге, Ғәлиәбаныуҙы ятратҡан кеүек ярата алманым барыбер ҙә. Өйрәндем, байтаҡ йылдар бер түшәктә йоҡлағас, күнектем. Кем белә, бәлки, ул яҙмышым да булғандыр, ә яҙмыштан китеп тә, ҡасып та булмай. Йыш ҡына кеше үҙ яҙмышын белә, ә таный алмай, хатта бәхетлеһен дә. Юҡ, был минең яҙмыш түгел. Әлфиә менән мин үҙемде бәхетле тойманым, үҙемде бәхетһеҙ тип тә иҫәпләй алмайым. Ҡай саҡ, был мине яраталыр, тип тә уйлап ҡуям, тик ҡатын-ҡыҙ мөхәббәтенә тулыһынса ышанып буламы ни? Ҡатын-ҡыҙ, колхоз аты кеүек: кем егә — шуны һөйрәп бара. Иң ҡыҙығы шунда: мин Әлфиәгә ун ике йәшлек малай саҡта уҡ «өйләндем». Ул саҡ, соланда, ул бит мине һайланы. Һәм бына шул ваҡиғанан күп йылдар үткәс, ул минең ҡатыным булып китте. Ошо яҙмыш түгелме ни?

Яҙмышмы, түгелме, әммә шуныһы асыҡ: ғүмеремдең аҙаҡҡы көндәренә тиклем мин уның менән йәшәйәсәкмен дә башымды уның тубыҡтарына һалып үләсәкмен. Шуныһы йәл: бала таба алманы, әйҙә, балалар йортонан тәрбиәгә ерәй бала алайыҡ, тип әйтеп ҡарағайным да, теләмәне. Яратыр-һөйөр бәләкәйҙәр бар ине уға: Мостафаның балалары. Күберәген беҙҙә йәшәгән бәләкәйе Эльвираны бигерәк тә үҙ итте. Минең дә һөйөр кешеләрем бар: Үзбәкстанда йәшәгән энем Рауил, һеңлекәшем Әлиәнең балалары.

Ҡай саҡ минең дә балаларым барҙыр һымаҡ тойолоп китә, тик уларҙы мин бер ҡасан да күрә алмам төҫлө, улар ҙа аталарының кем икәнен белмәйәсәктәр. Һуғыштан һуң Украинала күпме немец балалары тыуғанын кем иҫәпләгән? Германияла әллә күпме Ивандар барҙыр әле. Һуғыштар йөҙәр йылдар буйы расаларҙың һәм халыҡтарҙың ҡанын бутаны. Кем белә, сағыштырмаса файҙа ла барҙыр был күренештә, сөнки тоҡом яҡшыра. Һыйыр аҙбарына индереп көсләгән немка ла бала таба ала ине, әйтәйек. Эргәлә генә һыйырҙар мышнай, минең тубыҡтар ауырта, немка нимәлер шыбырлай, әллә әрләй, әллә йәлләй, һис аңламайым. Мин, немецса ике-өс кенә һүҙ белгән кеше, «гут, гут» тип яуаплайым. Йәки ниндәйҙер ҡалалағы сибәр фрау. Йәки әллә ни йәш булмаған һәм минән «них кранг» тип һораған ҡатын тапҡандыр. Икенсе сибәр ҡатын да таба ала ине. Ғүмерем буйы минең ундай сибәр ҡатыным булманы, ундай ҡатын тыныс тормош шарттарында минең менән һөйләшеп тә тормаҫ ине. Ә тыуған илгә ҡайтҡанда улар Германияла, Польшала күпме булды? Уларҙың ҡайһы берәүҙәре, моғайын да, йәш, таҙа һалдаттан ауырға ҡалғандыр ҙа һуғыш ығы-зығыһы ваҡытында аборт эшләтә алмағандыр йәки баланы юғалтырға теләмәгәндер. Һөҙөмтәлә ҡайҙалыр, Германияла, ҙурайып бөткән улым йәшәйҙер, үҙенең башҡорт Тәлғәттән тыуғанын белмәйҙер...

Нисектер урамда Абдрахманова Миникамалды осраттым. Төнөн Яйыҡты кисеп өйөндә ҡунып сыҡҡандан һуң күп булһа бер йәки ике тапҡыр ғына тап иткәнмендер. Ул уҡытыусы Шәйәхмәтов Ильясҡа тормошҡа сыҡты ла ире менән Ҡоҙашҡа, Ғәлиәбаныу ауылына, йәшәргә китте. Ҡартайған, аҡ тимер тештәр ҡуйҙыртҡан, түбән урам осонда йәшәгән Мөбәрәк энеһенә килгән икән. Иҫәнләштек, осрашыуға ҡыуаныштыҡ, тормош, көнкүреш хаҡында һөйләштек, һаулыҡтарҙы һораштыҡ. Гел генә ҡысҡырып һөйләшкән Миникамал бер мәл тауышын түбәнәйтте лә былай тине:

— Тәлғәт, һиңә бер сер сисәйем әле, тик бер кемгә лә әйтмә, йәме.

— Ярар, әйтмәм, ниндәй сер?

— Ғәлиә һинән малай тапты бит.

— Әкиәт һөйләмә.

— Нишләп әкиәт булһын? Ғәлиә миңә үҙе әйтте. Арағыҙҙа нимә булғаны миңә ҡараңғы, ә ҡатын-ҡыҙ кемдән, ҡасан ауырға ҡалғанын яҡшы белә. Улы шул тиклем һиңә оҡшаған...

Мин урам яңғыратып көлөп ебәрҙем.
— Нимәгә ул тиклем көләһең ул?
— Ә ниңә, илайыммы ни?

Үҙгәртеп ҡороу... Нимә ул, уны нимә менән ашайҙар икәнен дә бер кем дә белмәне, ә ирҙәр, беҙ ауылды үҙгәрттек инде, беҙгә тағы нимәне ҡорорға, тип һөйләнде, эскәндәр магазин кәштәләренән араҡы юғалғас ҡына үҙгәртеп ҡороуҙың нимә икәненә төшөндө. Ошо айҡанлы таҡмаҡтар ҙа уйлап сығарҙылар:

— Әй эт өрҙө, эт өрҙө,
Тышта берәү йүткерҙе.
Рәхмәт инде Горбачевҡа —
Араҡыны бөтөрҙө.

Минең кеүек эсмәгән кешегә араҡының юғалыуы бер ҙә үҙгәртеп ҡороу билдәһе булманы. Алкоголиктар, хатта ул ҡәҙәре ныҡ эсмәгәндәр ҙә сафтарында ҡайһы бер иптәштәрен юғалтты. Кемдер техник спирт менән ағыуланды, кемдер тараҡан ағыуы эсеп үлде. Үҙгәртеп ҡороуҙы мин яңыраҡ ҡына район универмагынан һатып алған телевизор экранында күрҙем. Горбачевтың сығышы ине ул — үҙгәртеп ҡороуҙың йөҙ-сырайы матур ине, тауышы ла ҡолаҡҡа ятышлы, хәбәре лә аңлайышлы. Ысынлап та ниндәйҙер үҙгәрештәр булыр, тип йөрәк ҡуҙғалып ҡуйҙы, яңы тормош, ирек килер. Китап-журналдарҙы ситкәрәк ҡуйып, гәзит уҡыуҙы ғәҙәт итеп алдым. Республика гәзиттәрендә үҙгәртеп ҡороу тураһында үтә тыйнаҡ, һаҡ яҙҙылар, ниндәйҙер ажиотаж һиҙелмәне. Илдә нимә барғанын аңларға тырышып, үҙәк матбуғатҡа яҙылдым. Ҡайһы бер мәҡәләләрҙе ҡысҡырып ҡатынға ла уҡыным. Ул тыңланы, һәр хәлдә тыңлаған һымаҡ ҡыланды. Бәлки, тыңламағандыр ҙа, шулай ҙа ҡай саҡ минең уҡыу араһында ошондайыраҡ һүҙҙәр ҡыҫтырҙы: «Һин шуларға ышанаһыңмы? Улар бит вәғәҙә генә бирә, ә халыҡҡа бер нәмә лә эшләмәйәсәктәр, коммунизмды үҙҙәре өсөн генә төҙөйәсәктәр» йәки «Фермала бисәләр Горбачевтың ҡатыны Стәрлетамаҡтан, башҡорт икән, тип һөйләйҙәр, шул ысынмы?»

Дөйөм алғанда, магазиндарҙан араҡы юғалыуын иҫәпләмәгәндә, үҙгәрештәр гәзит биттәрендә генә барҙы. Кешеләр Горбачевтың маңлайындағы тамғаһы менән сибәр йөҙөнә тиҙ өйрәнде, уның оҙон сығыштары оҙаҡламай бер кемде лә ышандырмай башланы. Мәскәүҙән,

Съездар һарайынан, алыҫ башҡорт ауылы, зыян күреп эшләгән колхозы, иҫерек ирҙәре, ауыр эштән иртә ҡартайған ҡатындары, баҡсаһы, ваҡ мал-тыуары менән йәшәне һәм ниндәйҙер үҙгәртеп ҡороуҙан йүнле нәмә өмөт итмәне. «Һуғыш ҡына булмаһын», — тине кешеләр. Иң ҙур теләктәре шул ине.

Сентябрь аҙағында, көнөн теүәл генә хәтерләмәйем дә инде, ундар, ун берҙәр тирәһендә, иртәнсәк килтереп ауҙарған бесәнде һарай башына ырғытып йөрөйөм. Иртәнге һауымдан ҡайтҡан Әлфиә миңә булыша. Мин — бесән түккән арт яҡта, ҡатын — башта, шуға ла ихатаға кем кергәнен шәйләмәнем дә. Беҙҙе өйҙә лә, ихатала ла тапмай, әммә тауышты, бесән шауын ишетеп бер кеше артҡы ҡапҡанан килеп сыҡты ла минең менән иҫәнләште.

— Ғәйнуллин Тәлғәт һеҙ булаһығыҙмы? — тип һораны ул.

— Эйе. Ә һеҙ ниндәй йомош менән?

Ят кеше яҡшы пальто, эшләпә кейгән, ҡулында портфель, район түрәләренә оҡшап тора.

— Мин Өфөнән, һүҙ бар ине.

Баштан төрлө уйҙар йүгерешеп үтте, тик был кешенең Өфө һынлы Өфөнән ниндәй йомош менән йөрөгәнен барыбер самалай алманым. Әлфиә лә лапаҫ башынан төштө. Өйгә индек. Эшләпәһен сисеп, ят ҡунаҡ өҫтәл янына ултырҙы.

— Тимәк, һеҙ яҙыусы Ғәйнуллин?

— Ниндәй яҙыусы ти инде мин, — тинем, үҙемдең әллә ҡасанғы, хәҙер инде тамам онотолған ҡушаматымды иҫемә төшөрөп.

— Юҡ, һеҙ яҙыусы. Беҙҙең журналға повестарығыҙҙы ебәргәнһегеҙ бит.

— Ҡасандыр ебәргәйнем шул, тик береһен дә баҫманылар. Һеҙ Хөснуллинмы әллә?

— Юҡ. Хөснуллин күптән беҙҙә эшләмәй. Мин һеҙҙең повестарҙы уҡығайным, әҙерәк редакторлағанда, уларҙы баҫырға ла мөмкин ине, тик, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ул саҡта үтерлек түгел ине. Хәҙер ваҡыт үҙгәрҙе, һеҙ ҡулъяҙмаларығыҙҙы беҙгә бирә алмаҫһығыҙмы?

— Мин уларҙы утҡа яҡтым, — тинем мин.

— Нисек? Һеҙ повестарығыҙҙы утҡа яҡтығыҙ? — Кеше миңә шул тиклем аптырап, ҡурҡып ҡараны, әйтерһең дә, мин уға ҡатынымды үлтереүем тураһында әйттем. — Ҡаралама, икенсе, өсөнсө даналары барҙыр бит?

— Бер нәмә лә ҡалманы.

Өфө кешеһе ҡалтыранған ҡулы менән пеләш башлы маңлайын ышҡыны.

— Ҡайһылай йәл. Ә талантлы әйберҙәр ине. Башҡа әйберҙәр яҙманығыҙмы? Хикәйәләр, мәҫәлән.

— Юҡ. Ул шөғөлдө мин күптән ташланым инде. Ул саҡта минең яҙмалар береһенә лә кәрәкмәй ине.

— Шулайҙыр, тик яҙылғанды яндырыу, ғәфү итегеҙ... Һеҙ күренекле яҙыусы булып китә ала инегеҙ. Беҙгә хәҙер һуғыш тураһында дөрөҫ повестар, романдар кәрәк. Йәл, йәл, ниндәй ҙур юғалтыу. Шул ҡәҙәре ышанып килгәйнем... — Өфө кешеһе йәнә маңлайын ышҡыны, кәйефе боҙолоп, китергә йыйынды, эшләпәһен ҡулына алды. Ҡунаҡты сәй эсерергә теләп, Әлфиә урынынан ҡалҡынды. Һөт, варенье, ҡаймаҡ ултырған соланға сығып, шундуҡ тигәндәй әйләнеп керҙе лә ҡуша бәйләнгән папкалар өйөмөн өҫтәлгә һалды.

Мин үҙемдең «үлемһеҙ» әҫәрҙәрҙе таныным. Күҙҙәргәме, әллә иларғамы белмәй, мин Әлфиәнән:

— Бәй, яндырманыңмы ни? — тип һораным, аптырап.

— Мин уларҙы иҫке шкафҡа йәшерҙем, — тине Әлфиә тыныс ҡына, үҙе ҡунаҡҡа өндәште. — Китмәгеҙ, сисенегеҙ, сәй эсербеҙ.

Сәйҙән һуң беҙ ҡунаҡ менән ҡулъяҙмаларҙы барланыҡ. «Таштар араһында», «Бына һуғыш бөтөр ҙә...», «Кисеү» — барыһы ла урынында ине. Мин яҙмаларға ғәжәпләнеп ҡараным: ошоларҙың барыһын да мин яҙҙыммы икән? Ҡулдан яҙылған «Тоғролоҡ» поэмаһы ла һаҡланған хатта.

Мин ҡунаҡҡа, ҡунып китегеҙ, бер нисә көн беҙҙә йәшәгеҙ, тип әйтергә йыйынғайным ғына, ҡапҡа төбөнә еңел машина килеп туҡтаны. Редакция кешеһе уны күреп ҡабалана башланы. Баҡһаң, ул бында район гәзите машинаһында килгән икән, ә шофер, беҙҙең ауыл егете, бер ыңғайҙан ата-әсәһен күреп сыҡҡан. Машинаға ултырғас, ҡунаҡ минең ҡулды ныҡ итеп ҡыҫты.

— Минең фамилия Алдаров, ҡулъяҙма өҫтөндә эшләгәндә мин һеҙгә хәбәр итермен, йәки килеп сығырмын, — тине һәм өҫтәне: — Ҡатынығыҙға рәхмәт, әҫәрҙәрегеҙҙе һаҡлап ҡала алған.

Алдаров китте, күңелгә өмөт, татлы көтөү тойғолары һалып китте. Элекке кеүек минең тормош тағы ҡыҙыҡлыға, тынғыһыҙға әйләнде.

Октябрь аҙағында Алдаровтан машинкала баҫылған хат килде. Ул өс повестың да журнал редакцияһы тарафынан ҡабул ителеүе һәм баҫырға тәҡдим ителеүе тураһында яҙғайны. «Таштар араһында» тигәне, бәлки, киләһе йылдың беренсе һанында ла булыр, тигән. «Повесть әллә ни ҙур эш талап итмәне, ҡайһы бер урындарын саҡ ҡына ҡыҫҡарттым, стилистик йәһәттән төҙәткеләнем».

Һәм бына өмөт, өмөтһөҙлөк менән тулы көндәр, айҙар башланды. Ваҡыт үҙгәрһә лә, күрәһең, бөтөнләйгә түгел, тип фекер йөрөтәм, берәй түрә-ҡара уҡыр ҙа оҡшатмаҫ. «Тәлғәт Йосопович, ғәфү итегеҙ, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы...» Хәйер, бындай хаттар алып өйрәнгәнмен инде, түҙермен. Мин үҙемдең икеләнеүле уйҙарым менән борсолоп йөрөгәндә, ҡатын тыныс ҡына былай тине:

— Ярар, баҫмаһындар ҙа, ниңә шул тиклем уйланаһың? Быға тиклем йәшәнек бит, артабан да йәшәрбеҙ.

Мин асыуландым. Ул был турала башҡа һүҙ ҡуҙғатманы. Ә кешеләр менән был турала һөйләшмәнем, ҡатынға ла һөйләнеп йөрөмәҫкә ҡуштым. Ғинуар башында китапханаға һуғылғылай башланым — беренсе һанды көттөм. Тик егерменһендә генә китапханасы Рауза урамда осрап былай тине:

— Журналда һинең әҫәрҙе баҫмағандарҙыр ул?

— Белмәйем, бәлки, минекелер, — йөрәк терт итеп ҡалды. — Күрһәт әле.

— Үҙемдә юҡ, уҡырға алдылар.

Ошо һөйләшеүҙән бер аҙна үткәс керҙем — һаман ҡайтармағандар ине. Тағы бер аҙнанан һуғылһам, бөгөн генә алдылар, тип тора. Береһенә лә бирмәй тор, тинем, вәғәҙәләне. Унынсы февралдә почтальон ҡатын ҡалын бандероль килтерҙе. Астым: өс журнал! Тәүге биттән үк минең повесть. Исеме аҫтына ваҡ ҡына шрифт менән минең турала яҙылған, йәнәһе, Тәлғәт Ғәйнуллин — беҙҙең әҙәбиәттә яңы исем, ул ауылда йәшәй һәм ижад итә, талантлы яҙыусының әҫәрҙәре артабан да... һ. б., һ. б. Һинең һүҙҙәр баҫылған журнал иҫ киткес тәмле еҫтәр менән аңҡый икән! Шулай ҙа әҫәр нәшер ителеүе башты юғалтырлыҡ шатлыҡ килтермәне. Көтөп, икеләнеп, өмөтләнеп янғанмындыр, күрәһең.

Авторлыҡтың илерткес кисерештәре, журналды ҡат-ҡат асыу ҡыуанысы өсөнсө көнгә үтте, тормош үҙенең элекке юҫығына төштө. Идара янында, урамда осраған ирҙәр генә миңә нисектер иғтибарлыраҡ ҡараны, ныҡ

итеп ҡулды ҡыҫты, ә Сәмиғуллин Шәфҡәт хатта «һеҙ» тип өндәште.

Бер ҡасан да журналдар уҡымаған, мәктәптән һуң бер китап та асып ҡарамаған Әлфиә повесты өс көндә уҡып сыҡты. «Йә, нисек?» — тип һораным мин. «Шыма яҙылған, тик һуғыш тураһындағыһы ҡыҙыҡ түгел», — тип яуапланы ул. «Ә һин нимә тураһында уҡырға теләр инең?» — «Белмәйем». — «Бәлки, беҙҙең мөхәббәт тураһында яҙырғалыр?» — «Кәрәкмәй. Һуғыш ваҡытында беҙҙең бында нисек йәшәгәнде, асыҡҡанды яҙ». — «Һеҙҙең бында нисек йәшәгәнде белмәйем бит, мин булманым, әгәр үҙем кисерһәм, яҙа алыр инем». — «Ә мин һиңә һөйләрмен. Әсәйемде ултыртып ҡуйғас, мин яңғыҙ ҡалдым. Ҡырҡ дүртенсе йылдың ҡышында кешеләр аслыҡтан үлә башланы. Сажиҙә апай ҙа асыҡты. Әсәйемде төрмәгә алып киткәндә әйтте: һыйырҙы һуя күрмә, һыйырһыҙ йәшәй алмаҫһың. Күптәр һыйырҙарын ҡырҡ өсөнсө йылда уҡ һуйып ашап бөткәйне, ә ҡырҡ дүрттең яҙына бала-сағаға һөт тә, ҡатыҡ та ҡалманы. Яҙына мин шешендем, көскә-көскә йөрөнөм, һыйыр быҙаулағансы үлермен, тип ҡурҡтым. Сажиҙә апайға рәхмәт, өйрәтте: соланда эшкәртелмәгән бер кәзә тиреһе ята ине, шуның йөнөн өттөм дә тирене туҡмас һымаҡ нәҙек кенә итеп киҫеп бешереп ашаным. Мартта, быҙаулар алдынан ғына, һыйырҙан саҡ ҡолаҡ ҡаҡманым. Йоҡлап ҡалмаҫ өсөн төнөн бер нисә тапҡыр лапаҫҡа сығам. Бер сыҡҡанымда лапаҫ ишеге шар асыҡ, керһәм, эстә бер ир тора. Бында нишләйһең, тим, ҡараңғыла таныманым. Ул өндәшмәй, шунан сыҡты ла ҡапҡаға йүнәлде. Ҡулында балта, үҙе аҡһай. Таныным: Аҡһаҡ Хәйҙәр. Мин ни, иҫәр, аңламаным әле уның лапаҫҡа ниңә килгәнен. Сажиҙә апайға һөйләгәйнем, аптыраны, ҡурҡты. Ул үрге ауылда төнөн кемдер Сабира ҡарсыҡтың һыйырын үлтергәнен, салмайынса артҡы ботон сапҡылап алып киткәнен һөйләне, үҙеңде нисек үлтермәгән, тип ғәжәпләнде. Һыйырыңды соланға индер, тине. Йәйгә тиклем һыйыр быҙауы менән соланда йәшәне».

— Ярар, был турала яҙырмын, — тинем мин һәм былай тип һораным. — Ә аҡса яратаһыңмы?

— Күп түләйҙәрме?

— Күпме икәнен белмәйем.

Аҡсаһын март башында алдыҡ. Һауынсылар һәйбәт алып эшләй, тип хисаплана ине, ә бына повеҫҡа түләгән аҡса ҡатындың йыл ярым эшләгән ҡәҙәре булды ла ҡуйҙы.

Мин повестар яҙыуҙы ҙур эшкә һанаманым — йылыла өҫтәл артында ултырып машинкаға сүкеүҙе, мәҫәлән, тракторсы, йыл әйләнәһенә һыйыр буғы араһында йөрөгән фермалағы мал ҡараусы йә һауынсы эше менән сағыштырып булмай бит инде, шуға ла бушҡа аҡса түләнеләр йә хаталанып яңылыш күп ебәргәндәрҙер һымаҡ тойолдо. Шулай ҙа, әгәр биргәндәр икән, тимәк, урынлы, уның нимәһенә баш ватырға, тип уйлап, ҡатынға былай тинем:

— Аҡса һинеке, нимә теләйһең, шуны ал.

— Юҡ, тәләфләмәйек әле, йә кире һорап торорҙар.

Үҙебеҙҙең наҙанлыҡтан, хәйерселеккә күнеккәнлектән, был тормоштан бер ниндәй ҙә яҡшылыҡ көтөп өйрәнмәгәнлектән, мин ҡысҡырып көлөп ебәрҙем:

— Һин бит һыуыткыс алырға теләй инең, әйҙә ал, — тинем.

Һыуыҡыс алдыҡ — Әлфиәнең ағаһы Мостафа, колхоз шоферы, Магнитогорскиҙан алып ҡайтып бирҙе. Ваҡ-төйәк, кейем-маҙар алдыҡ, ҡалған аҡсаны Әлфиә һаҡлыҡ кассаһына һалды.

«Бына һуғыш бөтөр ҙә...» повесы яҙын, Еңеү көнөнә бағышланып сыҡты. Апрель, май һандарында. Бер ваҡыт, май аҙағында, Эльвира йүгереп килеп инде лә тупһанан уҡ:

— Радионы ебәрегеҙ, һеҙҙең турала һөйләйҙәр! — тип ҡысҡырҙы.

Мин динамиктың ручкаһын борҙом — әлеге повестан өҙөк тапшыралар ине, Эльбала американдар менән осрашыуҙы тасуирлаған өлөшөн. Радио аша үҙең яҙғанды тыңлау, етмәһә, сит кеше уҡыуында тыңлау күңелле икән, унан килеп һинең әҫәреңде ҡолаҡтарын ҡарпайтып меңдәрсә кеше тыңлағанын белеү, иртәгә йоҡонан үҙеңдең данға күмелеп уянасағыңды тойоу йөрәккә май булып яғыла. Ә мин әллә ни тулҡынланмаған ҡиәфәттә ултырған булам, йәнәһе, тапшыралар икән, әйҙә тапшырһындар, миңә нимә?

Июндә, икенсе повесть өсөн байтаҡ аҡса алып, мин ҡатынды, ниһайәт, тиреҫтән азат итергә ниәтләндем. Ой, уны ферманан йолоп алыуы ниндәй ауыр булды! Пенсия йәшенә тиклем эшләйһе килде. Фермаһыҙ, һыйырҙарһыҙ ул үҙен, күрәһең, нисектер етем тойҙо һәм яйлап холҡо боҙола башланы. Йә көнө буйы һөйләшмәй ултыра, йә юҡ ҡына сәбәп табып ҡысҡырырға керешә. Шунан бер аҙға тыныслана, фермаһына сығып китә — һыйырҙарын, әхирәттәрен күргәс, асыуы саҡ баҫыла. Ҡиммәтле тун, сит

ил итектәре алып биргәс кенә, бер аҙ күңелләнде. Артабан мин уны үҙебеҙҙең ике һыйырҙан, быҙауҙарҙан, һарыҡтарҙан ҡотҡарырға уйланым — ихатала ҡаҙ-тауыҡтар йөрөһә еткән. Ошо уйымды әйткәс, бының күҙҙәре шар булды.

— Һин нимә, был турала оҙаҡ уйланыңмы? Нисек мин һыйырһыҙ?! Мин һыйырһыҙ йәшәй алмайым...

— Беҙ олоғайып барабыҙ, бесән әҙерләүе йылдан-йыл ауырлаша. Һыйыр буғынан һаман ялҡманыңмы ни әле?

— Буҡһыҙ һөт булмай. Һин бит көн дә сәйҙе һөтләп эсәһең.

— Аҡса бар, һатып алырбыҙ.

— Аҡса бөгөн бар, иртәгә юҡ. Ә һыйыр ашата, һуғыш йылдарында һыйыр мине үлемдән ҡотҡарҙы. Һин теләһәң ни эшлә, мин һыйырға теймәйем.

Әлфиә тыңлаусан, көнкүреш мәсьәләләрендә сигенеүсән була торғайны. Һыйырына килеп терәлгәйнек, тиҫкәреләнде лә китте. Мин уның йоҡоһо туймауҙан, тиреҫ араһында йөрөүҙән ваҡытынан алда ҡартайыуын теләмәйем. Был тойғо — яратыуҙан йәки йәлләүҙән бигерәк тормошта уның кәрәк булыуынан, яйлап ҡартлыҡ килеүҙән тыуған уй. Яңынан бесән эшләргә, лапаҫты йылытырға, тиреҫ түгергә, ҡышҡылыҡҡа комбикорма, һалам йүнләргә тура килде.

Повестан өҙөктәрҙе радионан бер нисә мәртәбә тапшырҙылар, тинеләр. Мин динамикты тыңламаным, шуға ҡасан тапшырғандарын да белмәнем. Октябрҙә магазин янында энеһенә ҡунаҡҡа килгән Абдрахманова Миникамалды осраттым. Класташымды күреүемә һәр ваҡыттағыса шат инем. Ул да ҡыуанды. Урам буйлап бергә атланыҡ, мин — үҙемә, ул — түбән ауылға. Повестарыңды уҡып барам, оҡшай, тине һәм миңә «һеҙ» тип өндәшә башланы.

— Нишләп һин миңә «һеҙ» тиһең?

— Һеҙ бит хәҙер — яҙыусы, ҙур кеше.

— Ташла, ниндәй ҙур кеше булайым! — тип асыуланғандай иттем мин, шунан тауышты баҫып ҡына. — Минең малай унда нисек әле? Ысынлап та минеке булһа инде, — тип һораным.

— Ой, Тәлғәт, ышанмаҫһығыҙ ҙа, ышанмаҫһың да, үҙеңә күрергә ине. Армияла хеҙмәт итеп ҡайтты, өйләнде, балаһы бар, ейәнең үҫә, — тине шым ғына Миникамал.

— Үҙенең улы түгел икәнен Закир беләме?

— Юҡ, ҡайҙан белһен?

— Һиҙенәлер, тим.

— Юҡ. Хәҙер ул эскегә һалышты. Ғәлиә журнал алдыра, һинең повестарыңды уҡый, ә ире, әпәт Тәлғәтеңде уҡыйһыңмы, бар, сығып кит, тип ҡысҡыра. Ғәлиә уға, һин алкашҡа сыҡҡансы Тәлғәткә сығырға кәрәк булған, яҙыусы бисәһе булыр инем, ти.

— Нишләп мине, уға өйләнһә, яҙыусы булып китер, тип уйлай икән?

— Ә ниңә булмаҫ инең?

— Сөнки минең бөтә повестарҙы ла үҙем түгел, ҡатыным яҙҙы.

Миникамал бер аҙ өндәшмәй торҙо.

— Әйҙә беҙгә, сәй эсербеҙ, — тинем мин, өй менән тәңгәлләшкәс.

— Ой, юҡ-юҡ, — тине ул ҡурҡҡандай итеп һәм ашығып китеп барҙы.

Миникамал менән һөйләшеү тупаҫланған тойғоларҙы бер нисә көнгә яңыртып, йәнләндереп ебәрҙе. Ҡара һин уны, Ғәлиәбаныу һинең повестарыңды уҡый, тиме? Иренә, яҙыусы бисәһе булыр инем, тигәне, әлбиттә, иҫәрлек. Ә бына улымдың үҫеүе, ейәндең тыуыуы — яҙмыштың матур бүләге. Күрергә ине, улым менән һөйләшергә, ейән менән уйнарға ине. Үлем хәленә еткергәнсе туҡмаған Закир булмаһа, барыр ҙа инем. Хәҙер Ғәлиә нисегерәк ҡабул итер ине икән? Йәнә гонаһлы уйҙар башҡа килә: Закир үлеп кенә ҡуймай бит. Аллаһы тәғәлә, ғәфү ит мине, шундай уйҙарым өсөн, кешегә һис баҙ ҡаҙырға ярамай ҙа һуң...

Ә ҡатынға улым барлығын бер ҡасан да әйтмәнем. Бисәләрҙең боҙоҡ телефоны ул хәбәрҙе уның ҡолағына, бәлки, килтереп тә еткергәндер. Хәйер, Әлфиә был йәһәттән миңә үпкәләй алмай, сөнки Ғәлиә менән мин уға өйләнгәнгә тиклем булдым бит...

Ҡышын республиканың ике ҙур гәзитендә минең повестар хаҡында мәҡәләләр баҫылып сыҡты. Маҡтағандар. Йәнәһе, башҡорт әҙәбиәтендә үткән һуғыштың әсе дөрөҫлөгөн яҙыусы әҙип күренде. Унда шулай уҡ иркен һәм ихлас яҙыу хаҡында ла һүҙҙәр бар ине. Ғинуарҙа, йәнә беренсе һанда, «Кисеү» повесын баҫтылар. Икенсе һанда — повесть хаҡында ҙур мәҡәлә. Тәнҡитсе, ниндәйҙер Рәми Бүләков, повесты тикшереп, үҙемдең уйҙа ла булмаған әллә ниндәй фекерҙәр, тәрәнлектәр тапҡан. Мин, баҡһаң, философ та икән. Ә бына Амброз Бирс тураһында

бер һүҙ ҙә юҡ. Бәлки, минең һымаҡ, ул да был авторҙы уҡымағандыр.

Әллә яҙғандарым тураһында мәҡәләләр уҡығандан, талантым хаҡында маҡтау һүҙҙәре ишеткәндән һуң, әллә байтаҡ йылдар яҙмай йөрөгәнгә, миндә йәнә яҙыу теләге тоҡанды, повесть, хикәйә сюжеттары барлыҡҡа килде. Башта әҙер материал булмаһа ла, ҡапыл ишетелгән хәбәр, ҡолаҡҡа салынған ләҡәп, ҡай саҡ ләстит шундуҡ сюжет һыҙығына ята, ҡай саҡ хатта әҙер осланыш менән ята. Уларҙы аҡ ҡағыҙға төшөрөүе ҡыйын түгел.

Һәм бына мартта эвакогоспиталь, ундағы яралылар, ауыртынған, интеккән, үлгән, Карель муйынында үҫкән ҡарағас ағастарынан ҡуйылған палаткаларҙа сирҙе еңгән һалдаттар тураһында «Ылыҫ еҫе» исемле яңы повесть сюжеты барлыҡҡа килгәс, соландағы иҫке шкафтың аҫҡы тартмаһынан машинканы алып өҫтәлгә ултырттым да уға таҙа аҡ ҡағыҙ бите ҡуйҙым...

Яҙын, йәйен өҫтәлгә үҙемде һирәк бәйләнем — баҡса, бесән, утын, яңы йортҡа ағас әҙерләү менән үтте. Крәҫтиәндең хужалыҡ мәшәҡәттәре бөтәме ни — ул тәмле, шул уҡ ваҡытта үҙең тураһында, йәнәһе лә, мин яҙыусы, тимәк, кешелектең һайланма өлөшөнә ҡарайым, тигән алдаҡсыс тойғоно аңдан ҡыҫырыҡлап сығарҙы. Ә ауылда йәшәүем, тиреҫтә соҡоноуым аҡылдан һәм талантлы кешенең ябайлығынан килә. Толстой ҙа бит ер һөргән, ялан аяҡ йөрөгән, крәҫтиән көпөһө кейгән.

Октябрҙә мине йәнә иҫкә төшөрҙөләр — Өфөгә яҙыусыларҙың сираттағы съезына саҡырҙылар. Һуңынан белеүемсә, ҡунаҡ рәүешендә булған икән, сөнки мин Союз ағзаһы түгел. Бәләкәй, ябыҡ кәүҙәмә тоҡ кеүек ултырған яңы костюмымды кейҙем, башҡа эшләпә һалдым. (Эшләпәһеҙ ниндәй яҙыусы ти ул!) Киттем. Минең быға тиклем баш ҡалала булғаным юҡ. Европа ҡалаларында, Львов, Киев урамдарында йөрөгәнем бар, ә бына Урал һыртының теге яғында ғына ятҡан тыуған Өфөлә үҙемде ят итеп тойҙом, ҙур ҡыйынлыҡ менән журнал редакцияһын эҙләп таптым. Ғәжәп, Башҡортостандың баш ҡалаһында, минең уйымса, яҙыусылар, шағирҙар йәшәгән, минең повестар баҫылған журналды уҡыған ҡалала, редакцияның ниндәй урамда урынлашҡанын бирәү ҙә белмәй. Баш мөхәррир кабинетына барып керҙем, бер нисә телефонлы киң өҫтәл артында ултырған Алдаровты таныным. Мине күреүгә ул бик шатланды. Юҡ-бар һөйләшеп, тормош тураһында,

нимә яҙаһығыҙ, тип һорап, ара-тирә телефон шылтырауҙарына яуап биргән, ҡағыҙҙар тотоп кешеләр кергән арала Алдаров ҡайҙалыр шылтыратып алды. Редакция шоферын саҡыртты. Уныһы ҡунаҡханаға алып барып, мине ваннаһы, телефоны булған номерға урынлаштырҙы.

Иртәгәһенә беҙҙе, туп-тулы бер автобус бөйөк яҙыусыларҙы, мәҙәниәт һарайына алып киттеләр. Мин бер яҡ ситкә генә ултырырға уйлағайным да, ниндәйҙер бер яҙыусы — мин уны танымайым — үҙе менән алып китте лә иң беренсе рәткә ултыртып ҡуйҙы. Мин яҡындан ғына президиумды күрҙем, барыһы ла — мин портреттары буйынса белгән «классиктар». Башҡорт әҙәбиәте тураһында оҙон доклад булды, сығыш яһаусы кемделер маҡтаны, кемделер еңелсә генә семетеп алды. Мин, Өфө әҙәбиәтселәренең тормошонан һәм яҙғандарынан алыҫ, һуңғы йылдарҙа тик Мәскәү журналдарын ғына уҡыған кеше, быларға әллә ни иғтибар итмәнем, докладсы «перспективалы яҙыусы Тәлғәт Ғәйнуллин» тигән фразаны әйткәс кенә, күкрәктә нимәләр ҡуҙғалып ҡуйҙы. Ниңә перспективалы, тип уйлайым мин, минең ниндәй перспектива булһын, мин бит юлдың осона сығып барам, яҙырын яҙғанмын, баҫылған повестарҙан арыуырағын хәҙер бирә алмам да.

Тәнәфестә әҙәбиәтселәр фойела эркелеште. Күптәнге таныштар, дуҫтар һымаҡ бер-береһенә килде, шатланды, һөйләште. Яҡшы кейенгән ирҙәр ҡатын-ҡыҙҙарҙың ҡулдарын үпте. Ә мин улар араһында ятһынып, тоҡ шикелле һәленеп торған костюмдан оялып, стена буйына һыйындым. Ҡайһы берәүҙәр миңә ҡарап та ала, таныған булалар ҙыр, тик яныма килмәйҙәр. Шулай ҙа икәүһе килде эргәмә. Оҙон кәүҙәле егет телекамера объективын миңә йүнәлтте, ә сибәр ҡатын, тәмле хушбуй еҫтәре менән солғап, ауыҙым эргәһенә микрофонын килтерҙе лә мине исемем, атайым исеме менән атап (ҡайҙан белгән тиң?) «Һуңғы ваҡытта һеҙ — иң уҡылған әҙип», — тип маҡтаны, шунан һорауҙар бирергә тотондо. Мин бөтөнләй ҡаушап ҡалдым — күҙҙәремә ҡараған камера ҡамасауланы. «Ижадығыҙға ниндәй башҡорт яҙыусыһы тәьҫир итте», — тигән һорауға, Мәжит Ғафури, тинем (үҫмер саҡта повестарын яратып уҡый торғайным), «бөгөнгөләрҙән» тигәнгә, мин рус яҙыусыларын ғына уҡыйым, тинем. «Хәҙер нимәләр яҙаһығыҙ?» — тип һораны һылыу ҡыҙ. Мин былай тинем: быйыллы-былтырғы сыҡҡан повестарымды мин бынан егерме йыл элек яҙғайным, хәҙер бер нәмә лә яҙмайым, колхозда эшләйем,

яңы йорт һалам. Минең был һүҙҙәрҙән һуң күңелдәре ҡайтты шикелле, хушлашып та тормай, китеп барҙылар. Унан оҙон кәүҙәле таҙа йәш егет эргәмә килеп, үҙен таныштырҙы ла: «Беҙ һеҙҙе Яҙыусылар союзына ҡабул итергә уйлайбыҙ, ғариза яҙығыҙ, иртәгә банкетта мин һеҙҙе табырмын», — тип китте.

Кисен китап магазинына инеп ҡағыҙ, ручка һатып алдым, көскә — был һиңә повестар яҙыу түгел — ғариза сыймаҡланым, ә иртәгәһенә иртәнсәк, банкет башланғансы, теге яҙыусылар түрәһе килеп ғаризамды алды, хәбәр итербеҙ, тине. Яҙыусылар эсеп-ашап алғас, яныма бигүк йәш тә булмаған пеләш башлы, булған ғына һирәк сәстәре төрлө яҡҡа тырпайып торған берәү ултырҙы ла һөйләй башланы:

— Ғәфү итегеҙ, һеҙ Ғәйнуллин бит әле? Повестарығыҙ буйынса мин һеҙҙе йәшерәк тип күҙ алдына килтергәйнем. Ярар, уныһы мөһим түгел. Баҫылған бар повестарығыҙҙы ла уҡыным. Һеҙ — ҙур яҙыусы. Ауылда йәшәйһегеҙме? Шулай икән, бер кәңәш: Өфөгә килә күрмәгеҙ. Саҡырһалар ҙа, фатир бирәбеҙ, тиһәләр ҙә, ултырығыҙ шул ауылығыҙҙа.

— Нишләп? Интеллигенция, яҙыусылар...

— Бында һеҙҙе ашаясаҡтар. Көнсөллөк, дуҫ-ишлек, групповщина... Ниндәйҙер тере классиктан талантлыраҡ икәнһегеҙ, юл бирмәйәсәктәр. Бындағы бал менән кем етәкселек иткәнен беләһегеҙме? Белмәйһегеҙ. Ә мин беләм. Так что ултырығыҙ ауылығыҙҙа. Ер һөрөгөҙ, повестар яҙығыҙ. Уңыштар теләйем.

Ул нисек килеп ултырған шулай тиҙ генә ҡалҡынды ла китеп тә барҙы, исемен дә әйтмәне. Шулай ҙа мин уның хәбәренән Өфө яҙыусылары араһында бигүк таҙа мөнәсәбәттәр булмауын аңланым.

Бер аҙ ултырғас, мин ресторандан сыҡтым да, ҡатынға берәй төрлө бүләк алырға ниәтләнеп, магазин эҙләп киттем. Үҙем теге төшөрөп алған яҙыусының һүҙҙәре тураһында уйлайым. Тейешле баһа алмаған даһимы, әллә уңмаған асыулы кешеме? Өфөләге, йырлы һәм шиғырлы ҡалалағы тормош минең төшөмә лә инеп сыҡҡаны юҡ. Көнләшеү миңә ҡағылмаҫ, сөнки минән көнләшәсәк тере классиктар түштәрен наградалар менән тултырған, үҙҙәренең бөйөклөктәренә ышанған инде.

Мәҙәниәт һарайындағы һүҙ буҡкаһы, рестораңдағы эске банкеты егерме йыл элек булһа, мин үҙемде, бәлки, яҙыусы тип уйлар, кемгә көнләшкәндәрен белер инем.

Баш ҡала магазиндарында тауар, аҙыҡ-түлек беҙҙең район үҙәгендәге менән сағыштырғанда, әлбиттә, күберәк, ҙур универмагка барып еттем, бүләктәр, сувенирҙар бүлегендә ҡыйбатлы шәл һатып алдым. Иртәгәһенә ҙур ҡыуаныс менән поезға төштөм. Ҡайтып етеп ҡапҡанан керҙем, ихата уртаһында ҡатыным баҫып тора. Миңә ҡарай һәм йылмая. Һаман да йәш йөҙө, ҡуйы ҡаштары араһындағы таҙа күҙ-ҡараштары, ике яҡҡа осоп барыусы ҡаштары миңә ифрат яҡын, илерткес. Мин үҙемдең уны ныҡ һағынғанымды, улай ғына ла түгел, яратҡанымды аңланым.

«Тәлғәт Ғәйнуллин ауылда йәшәй һәм ижад итә...» тип уҡыным мин бер республика гәзитендә. Эйе, нишләйһең, ауылда йәшәйем шул, ижад та итәм. «Ҡыҙҙар тауы хикәйәләре» тигән китап яҙҙым, Союзға алдылар, йәнә Өфөгә барып ҡайттым, яҙыусылар билетын бирҙеләр, журнал редакцияһында булдым. «Ҡайһы бер яҙыусылар һине Союзға алырға ҡаршы төштө, — тине Алдаров. — Мостай Кәрим яҡлап сыҡҡас ҡына ҡабул иттеләр». Шунан Алдаров миңә бер уҡыусының «Бисәләр хужалығы» исемле хикәйәгә ҡарата яҙылған хатын тапшырҙы. Мин инде сираттағы маҡтау, һоҡланыу хатылыр, тип уйлап кеҫәгә һалдым да оноттом. Нәшриәткә керҙем — яҡшы ҡаршы алдылар, китабым, тәүге китабым баҫыла икән, тышлыҡ өлгөһөн күрһәттеләр. Ҡара фонда арҡаһы менән торған ҡара кеше фигураһы, кейеме, пилоткаһы буйынса һалдат, артабан ҡаралыҡ, ошо ҡаралыҡта ауыл өйөнөң һыҙыҡтары төҫмөрләнә, ике тәҙрәһенән яҡтылыҡ ағарып күренә, яҡтылығы аҫҡа төшкән күләгәһе буйынса йорттоң йылға яры буйында ултырғанын шәйләргә мөмкин. Һүрәттең идеяһы миңә оҡшаны, тик күңелһеҙерәк тойолдо.

Теге хат тураһында поезда ғына иҫкә төштө. Дәүләкәндән бер уҡытыусы яҙған. Бындай баһа ишеткәнем юҡ ине әле хикәйәләремә. Ул мине туған халҡымды яратмауҙа, унан да бигерәк ҡатын-ҡыҙҙы ихтирам итмәүҙә ғәйепләй. Хатта ошондай юлдар бар: «Мин һеҙҙең бысраҡ хикәйәләрегеҙҙе үҙемдең уҡыусыларға ла, үҙемдең балаларыма ла уҡытаһым юҡ. Ихтирамлы журнал нисек итеп шундай әҫәрҙәрҙе баҫа икән?..»

Хикәйә — өйләнмәгән йәш ирҙең еңел яраланып һуғыштан ҡайтыуы, ҡайтҡас ферма мөдире итеп тәғәйенләнеүе, ирһеҙ һауынсыларҙың, малсы ҡатын-ҡыҙҙың, тол ҡалғандарҙың, ауылда берҙән-бер ир булараҡ, енси телә-

ген ҡәнәғәтләндереүсегә әйләнеүе тураһында. Ҡатындар үҙ-ара уның өсөн һуғышып бөтә, бер-береһен әрләй, көҙәтә һәм... бер-бер артлы балалар таба. Иргә сығырға бер ниндәй ҙә өмөттәре ҡалмаған, шулай булғас законлы ирҙәрҙән бала таба алмаясаҡ ул ҡатындарҙы әхлаҡһыҙлыҡта ғәйепләп буламы? Юҡ, әлбиттә. Эйе, хикәйә ярайһы уҡ яланғас, урыны менән натуралистик буяуҙар менән яҙылған, әммә был тормоштағы булған хәл.

Үҙемдең балаларыма уҡырға бирәһем юҡ, тип яҙа Дәүләкән уҡытыусыһы. Мөхәббәт һынлы мөхәббәт уның күңелендә шундай ерәнеү, нәфрәт тойғолары тыуҙыра икән, уның балалары ҡайҙан һәм нисек тыуҙы икән һуң? Был турала китапҡа яҙырға ярамай, тип иҫәпләйҙер ул. Дөрөҫ, XIX быуат классиктарында (совет яҙыусылары тураһында әйтеп тормайым) ул турала юҡ. Асыҡтан-асыҡ юҡ, әммә текст артында барыбер ҙә бар. Ул саҡ сиркәү власы ныҡ була. Толстойҙың «Крейцер сонатаһы» тирәләй, ана, ниндәй шау-шыу күтәрәләр. Диндә әллә күпме ике йөҙлөлөк. Пәйғәмбәрҙең дүрт ҡатыны булған, ундарса заложницаһы. Солтандар, шаһтар гарем тотҡан, ҡатын-ҡыҙҙың йөҙөн пәрәнжә менән ҡаплағандар, ә мөхәббәт өсөн таштар менән бәргесләп үлтергәндәр. Әле егерменсе быуаттың икенсе яртыһы, уның аҙағында яланғас ҡатын-ҡыҙ матурлығы оят, оятһыҙлыҡ билдәһе булып иҫәпләнмәҫ тә әле.

Өфөнән ҡайтҡандың икенсе аҙнаһында ауыл урамы буйлап китеп бара инем, Ришат Һәүбәновтың ҡапҡаһынан бер малай килеп сыҡты ла миңә өндәште:

— Ағай!

— Әү. — Мин туҡтаным.

— Һине телевизорҙан күрһәттеләр.

— Нисек, оҡшанымы һуң?

— Юҡ.

— Нишләп?

— Һин насар кеше.

Китап сыҡты, беҙҙең магазинда ла һатылды, автограф алырға килделәр. Егерме дана һатып алып, күҙ алдында торһон һәм йөрәкте йылытһын өсөн, өҫтәлгә теҙеп һалдым. Тик бер аҙнанан мин уларҙы йөрәгем менән күрмәй, уларҙан сыҡҡан тәмле еҫте тоймай башланым. Йылдар буйы түҙемһеҙләнеп көткән байрам ысын байрамға әүерелмәне. Ошо китап егерме йыл элек сыҡһа икән...

Уның урынына ҡулға байтаҡ аҡса керҙе, уға иң шатланғаны, әлбиттә, ҡатын ине. Әммә уны тотоноуҙан, сарыф

итеүҙән ҡурҡты ниңәлер. «Кейен,— тим уға.— Боярыня кеүек йөрө».— «Кейенеп ҡайҙа барайым һуң? Һыйыр фермаһына фуфайка кейеп тә йөрөй алам». Магнитогорскиға барҙыҡ, ҡара көрән төлкө яғалы ҡиммәтле пальто, сит ил итектәре алдыҡ. Унан тыш күлдәк, кофта, башҡа ваҡтөйәк. Ҡунаҡҡа барһа, магазинға сыҡһа, хәҙер яңы кейемдәрен кейә. Бындай мәлдә мин уға һоҡланып бөтә алмайым, яратып ҡарайым: «Һин ниндәй сибәр!»— тим. Ҡатын-ҡыҙға күп кәрәкме ни, ҡыуана, көҙгө алдында өйөрөлә.

Һирәк кенә булған, юҡ, бәхәстәрҙе лә түгел хатта, ә беҙҙе бер ҡайҙа ла ебәрмәй бәйләп тигәндәй тотҡан, әйтәйек, санаторийға, Мәскәүгә, турист рәүешендә берәй ергә йөрөүҙе тормошҡа ашырырға мөмкинлек бирмәгән һыйырҙар, башмаҡтар, быҙауҙар арҡаһында әйткәндәремде, ҡасан шул тиреҫеңдән арынаһың да ял итә башлайһың инде, тип асыуланғанымды хисапламағанда, беҙ тыныс, килешеп йәшәнек. Йылдар үтә килә бер-беребеҙгә нығыраҡ эйәләштек, эҫенештек, күңелдәребеҙ ҙә беректе, беҙ бер-беребеҙҙе ярты һүҙҙән, ҡараштан аңланыҡ. Әлбиттә, үҙемде яҙыусы тип хисаплаған, байтаҡ китаптар уҡыған булһам да, үҙемде унан аҡыллыраҡ тип иҫәпләмәнем, ә ҡатмарлыраҡ, төрлө комплекслы, юҡҡа ғына күңелһеҙлек өйәнәктәре килгән, тойомлауҙар солғанышында йәшәгән кеше тип иҫәпләнем. Ә ул үтә лә ябай, ышаныусан, бер ҡатлы ине. Уй-ниәттәрем менән уртаҡлашам, әҙәбиәт эшендәге пландарым менән уртаҡлашам, йыш ҡына хикәйә сюжеттарын тикшерәм, әгәр инде ҡатыным улай булмай, улай миңә оҡшамай, тиһә, үҙгәртергә тырышам, икенсе сиселештәр эҙләйем. Әйтергә кәрәк, ул йыш ҡына хаҡлы булып сыға.

Журналда повестар баҫылды, «Ҡыҙҙар тауы хикәйәләре» тигән йәнә бер китабым нәшер ителде. Бер нисә хикәйәне руссаға ауҙарып «Литературная Россия»ға ебәрҙем, икәүһен баҫтылар.

Мотоцикл һатып алдым. Машинаға һелтәнергә ҡыйыулыҡ етмәне, сөнки минең йәштә йөрөтөргә өйрәнеү еңел булмаҫ ине, унан килеп, күҙ ҙә насарланды. Хәҙер бесәнгә йәки еләккә мотоциклда йөрөйбөҙ. Яңы мунса һалдым, яңы өйҙөң бураһы һаман баҡса артында ултыра — мүккә көҙөн күтәрергә ниәтләндек.

— Хәҙер беҙҙең бөтә нәмә лә бар,— тине нисектер бер ваҡыт Әлфиә.— Йәшәргә лә йәшәргә.

— Йәшәрбеҙ, — тинем мин. — Йөҙгә тиклем йәшәрбеҙ, Алла бирһә.

Уның тыныс йөҙөнә ҡай саҡ ни сәбәптәндер шомдоң һоро күләгәһе ята. Ике тапҡыр гипертоник кризис булғандан һуң йыш ҡына күкрәк ауыртҡас, ул минең ғүмер өсөн дә борсола ине. Мин инде, тормошом килеп сыҡты, һуғыштан тере ҡайттым, эскелеккә бирелмәнем, элмәктә үлмәнем, яҡшы ҡатын тура килде, Аллаһы тәғәлә етемде йәлләне, әллә яҙмыш миңә шулай һәйбәт булды, ауылда йәшәп, тиреҫ, бысраҡ араһында йөрөп билдәле яҙыусы булып киттем, тип уйланым. Бер генә ҡәнәғәтләнмәгән йәшерен нәмә бар: тәки улымды, ейәндәремде күрә алманым. Йәнә гонаһлы уйҙар килә башҡа: бынау Закир үлеп китһә, Ғәлиә ҡарсыҡҡа барыр ҙа ҡолағына ғына, минең кем икәнде әйтмә, улым менән ейәндәремде күрһәт әле, тип үтенер инем.

Бына бер көн ҡатынға, бесәнлекте ҡарап ҡайтам, сабырға ваҡыт түгелме икән, тип әйттем дә Талышман йылғаһынан тауҙар аша Ҡоҙашҡа илтә торған юлға боролдом. Ауыл ҙурайған, матурланған (мин бында ҡырҡ йыл булмағанмын) яңы ҙур йорттар күп, бәләкәй баҡсаһында өйәңке үҫкән элекке иҫке йорт урынында — башы тимер менән ябылған биш мөйөшлө өй. Ғәлиә өйҙәме икән, улым ҡайҙа икән? Хәйер, Ғәлиәне күрһәм дә, таный алмаҫ инем. Мине, күҙлек кейгән кешене, ул да танымаҫ ине. Урамға ҡараған, дүрт тәҙрәһе лә зәңгәр яңаҡлы ҙур йорт ҡапҡаһы алдында биш-алты йәштәр тирәһендәге бер малай уйнап йөрөй. Мин мотоциклды туҡтаттым.

— Исемең нисек?

— Йәмил.

— Йәмил, олатайыңдың исеме кем?

— Олатай.

— Ә өләсәйең кем?

— Өләсәй.

— Маладис, икеһенә лә сәләм әйт, йәме.

— Ярар.

Малайға берауыҡ ҡарап торҙом, әммә уның ҡоңғорт йөҙөндә үҙемә тартҡан бер һыҙат та тапманым, берәйһен күрә алмаммы икән, тип өмөтләнеп ихатаға, тәҙрәләргә ҡараным да, кеше-фәлән күренмәгәс, кире ҡуҙғалдым. Ҡайтҡас ҡатынға, сабырға иртәрәк әле, үлән бешмәгән, тинем.

Июлдең икенсе яртыһында көндәр боҙолдо: аҙна буйы көнөн дә, төнөн дә ҡара болоттар араһынан йәшенле

ямғыр ҡойҙо, йылға ташты, ярҙарынан сығып, тирә-яҡ туғайҙарҙы баҫты. Бындай ҙур һыу ғәҙәттә яҙ көнө генә була торғайны. Көтөлмәгән был июль ташҡыны кешеләргә байтаҡ бәлә-ҡаза килтерҙе. Йылға үрендә быуаны асҡас (район ҡалаһы һыуҙы шунан эсә), һыу баҡсаларҙы баҫты, яландарҙағы күбә-кәбәндәрҙе ағыҙып алып китте, йәшен үргә ауылдан бер һыйырҙы, ҡаланан машина башында ҡайтып килгән Ситдиков Рәйесте атып үлтерҙе. Тирләндән өҫтә Ағиҙелдең плотинаһы йырылған да поселоктың түбән яғында ултырған өлөшөн алып киткән икән. Үлгән кешеләр ҙә бар, тип һөйләнеләр.

Емерелеп ямғыр яуған көндө башмағыбыҙ ҡайтманы. Ул элек тә юғалғылап ала торғайны. Йылғаның ауыл яҡлап туғайындағы үләнен ашап-тапап бөтөп, башмаҡтар, быҙауҙар йылғаның аръяғына сыға ла үҙҙәренә генә билдәле һуҡмаҡтар буйлап тауға менә һәм инеш-йылғасыҡтар буйында үлән таба. Йәки һаҙлы ҡайынлыҡ, түмгәктәр аша Семенов туғайҙарына барып сыға, ә ул туғайҙар аръяғында — руда ташландыҡтары. Һөйләүҙәренсә, ҡасандыр ошонда ниндәйҙер Семеновтар алтын йыуған, үҙҙәре китһә лә, исемдәре ҡалған.

Йәш үгеҙҙәр, быҙауҙар ул яландарҙа аҙналар буйы олағып йөрөй. Хужалары юғалды тип уйлап бөтә, әммә улар ҡайтыу юлын белә, ихаталарын, үҙҙәренең хужабикәләрен һағына, эҫе, томра көндәрҙә серәкәй, күгәүендән йонсоп сабышып ауылға ҡайта. Уларҙы шулай уҡ көндәрҙең насар тороуы ла өй яғына ҡыуа.

Марта исемле беҙҙең быҙау ҙа ҡайтмағас, Әлфиә тамам хафаға ҡалды. Теге яҡта ҡалһа ауыл яғына нисек сығыр икән? Һыйырҙар йөҙә белә бит, тип әйтеп ҡарайым, ул да оҙаҡламай ҡайтыр, борсолма, тим. Әммә көндәр артынан көндәр үтте, Марта ҡайтманы. Әлфиә ямғыр аҫтында йылға ярына барып «Марта, Марта!» — тип ҡысҡырып та йөрөнө, ҡайтып килһә, керә алмай тормаһын тип, ҡапҡаны бикләмәй ҙә яттыҡ. Берәй тауыш ишетһә, ҡатын һикереп тороп ихатаға йүгереп сыҡты.

— Ниңә шул ҡәҙәре борсолаһың? Бер ҡайҙа ла китмәҫ, ҡайтыр, — тип тынысландырған булам — ҡайҙа, минең әйткәнгә генә тыныслана буламы һуң инде?

— Йәшен атып үлтерһә... Һаҙлыҡҡа батып ятмаймы икән?

— Юҡты һөйләмә, йәшен кешене генә ата ул, малға теймәй.

— Ул миңә бала кеүек. Өс ай буйы елендән айырманым, тиҙерәк үҫер,ологайған һыйырҙы алмаштырыр, тип уйланым,— үҙе саҡ иламай.— Әйҙә, аръяҡҡа сығып әҙләйек, ә?

— Нисек сығаһың? Тәрән, һин йөҙә лә белмәйһең.

— Төнөн ямғырҙа нисек тора икән? Бүреләр килеп сыҡһа?

— Һыйыр һатып алырбыҙ, аҡса бар бит, — тинем.— Ярар, сығырмын.

— Юҡ, бер үҙең сыҡмайһың, башың әйләнер, йөрәгең туҡтап ҡуйыр.

— Иҫәр, быҙау өсөн дә шул ҡәҙәре борсолмаһаң...

Мин брезент роба, ҡатын полиэтилен япҡыс кейеп, баҡса артындағы кисеүгә килдек. Ямғыр бер шәбәйә, бер тынғандай итә. Ҡоро йылда был кисеүҙән бисәләр калош менән дә сығып йөрөй, хәҙер йылғаның үҙенә тиклем һыу баҫҡан туғай буйлап барырға кәрәк.

— Йәшен йәшнәгәндә һыуҙа булырға ярамай.

Әлфиә өндәшмәне, резина итектәрен систе лә һыуға инде.

— Миңә тотоноп атла, — тинем мин һәм ҡулынан тоттом.

Һыу билгә етте, йылға уртаһында түштән булды. Аҫҡа ынтылған буръяҡ һыуҙың ҡаты ағымы беҙҙе аяҡтан йығырға, тәрән сөңгөлдәргә алып барып сумырырға тырыша. Мин һул ҡулым менән ҡатындың уң ҡулынан ныҡ итеп тотҡанмын, уңында — резина итектәр. Баш осонда ғына ялағай ялтланы, уғы беҙҙән йыраҡ та түгел һыуға килеп ҡаҙалды.

— Ой, ҡурҡам!

— Ҡурҡһаң, әйҙә, кире әйләнәйек.

— Юҡ, сығып етәбеҙ.

Мин әрләшә башланым, һүгенеп тә алдым. Дөбөр-шатыр күк күкрәгәндә, йәшен атҡанда, етмәһә өҫтән ямғыр яуғанда түштән һыу кисеп барыу бигүк күңелле шөғөл түгел шул.

— Ярар, әрләмә,— тине ҡатын ниндәйҙер инәлгес, йәлләткес тауыш менән.

Теге яҡ ярға сығып еттек, итектәрҙе кейеп алдыҡ та бысраҡ һуҡмаҡ буйлап тау яғына атландыҡ. Бер һыртты үтеп, Йыйыҡтың ҡушылдығы Ҡаралан йылғаһына боролдоҡ, юлһыҙ, ваҡ, һирәк ағаслыҡ аша артабан атландыҡ.

— Марта, Марта! — тип ҡысҡырҙы Әлфиә.

Бер тере йән эйәһе юҡ тирә-йүндә. Һаҙлыҡлы ерҙә күтәрелеп торған Баймаҡай исемле йәнә бер ҡалҡыу-

лыҡҡа еттек, түбәһенә тиклем күтәрелдек. Ҡайҙа, ямғыр томаны аша берәй нәмә күрерлекме инде! Быҙау-башмаҡтар, бында булған хәлдә лә, урманда, ағас ышығында тора инде ул.

Мартаны таба алмай, һыуланып, арып йылғаға кире килдек, имен-аман ғына кисеп сығып өйгә саҡ ҡайтып йығылдыҡ. Кисен, Мостафа ағаһына барып килгәс, Әлфиә былай тине:

— Семенда ниндәйҙер быҙауҙарҙы күргәндәр. Иртәгә шунда барайыҡ.

— Үтә алһаҡ, — тип яуапланым мин.

Семенов туғайҙарына йә күперҙән сығып түмгәктәр аша, йә беҙҙең ише түбән ауыл яғындағы кисеүҙән сығып барырға кәрәк. Тик әле түгел. Сөнки йылға аръяғындағы юл-һуҡмаҡтар ямғыр яумаған көндәрҙә лә бысраҡ, тайғаҡ, хәҙер тамам һаҙлыҡҡа әйләнгәндер.

Иртәнсәк күпергә килдек. Йәшене юҡ, шулай ҙа бысҡаҡ ямғыр һибәләй. Һыуытҡан. Ун йыл элек күперҙең ике яғын да бер метрға яҡын күтәргәйнеләр, һыу хәҙер ер аҫтына һалып ҡалдырылған торбалар буйлап аға, машина, трактор тәгәрмәстәре соҡоған урындарында өҫкә ҡалҡҡан, күләүектәр барлыҡҡа килтергән. Күпергә аяҡ баҫҡанда мин һәр ваҡыт һул яҡта ҡамыштар менән ҡапланған соҡор-сөңгөлгә күҙ һалам да үҙемдең армиянан ауылға ҡайтҡан яҙҙы иҫкә төшөрәм...

Ҡоро көндәрҙә күперҙе сығыу менән, шундуҡ тигәндәй боролоп, түмгәктәр аша туғайҙарға сығырға мөмкин. Хәҙер улар һыу аҫтында, Яйыҡ менән Ҡоро йылға буйлап һуҙылған һаҙлыҡтар араһында киң йәйелеп һыу ағып ята. Тормош менән хушлашыу өсөн икенсе юл таба алмаһаң, ошонда кил.

Аптырап, нишләргә белмәй урыныбыҙҙа ҡаттыҡ та ҡалдыҡ. Бер аҙҙан Әлфиә итектәрен сисә башланы.

— Нишләйһең, аҡылыңдан яҙҙыңмы әллә? — тинем мин, асыуланып.

— Барғың килмәһә, мин үҙем генә барам.

— Бармайһың! Күрмәйһеңме ни, нисек йәйелгән! Әйҙә, Мышағырға күтәреләйек. Тау башынан унда быҙауҙар бармы-юҡмы икәне күренер.

Әлфиә минең менән килешкәндәй итте, итектәрен кире кейҙе. Артабан атланыҡ, борсаҡ яланын үтеп, тауҙың текә яғынан яртылығына мендек — Семенов туғайҙары бынан да ус төбөндәге ише күренеп ята. Кәбәндәрҙән

башҡа бер нәмә лә юҡ. Быҙауҙар унда булһа, йә күбә төбөндә, йә ҡыуаҡлыҡтар араһында торалыр.

— Ҡара әле, ҡара, күбә янында ниндәйҙер аҡ нәмә бар!

Ағарған нәмә, бәлки, булғандыр ҙа, тик, күҙ насар күргәнлектән, мин бер нәмә лә абайламаным. Хәйер, күбә янында быҙауҙар булған хәлдә лә, беҙ ул тарафҡа барыбер ҙә үтә алмаç инек. Ике тау араһындағы тәрән үҙән буйлап Ҡоро йылға аға. Ямғыр яумаған былай көндәрҙә был йылға исеменә есеме тура килеп бөтөнләй ҡорой яҙа, һыуы арба тәгәрмәсенең күсәренә лә етмәй, хәҙер инде ул сынйырынан ысҡынған януар кеүек ажарланған да Яйыҡҡа ҡушылырға ашҡынып-ашҡына. Ҡыçҡаһы, Семенов туғайҙары төрлө яҡтан да һыу менән уратып алынған булып сыҡты.

— Унда бер нәмә лә күренмәй, — тинем мин. — Нишләп һин, Марта шундалыр, тип уйлайһың? Ул, бәлки, бөтөнләй икенсе ерҙә йөрөйҙөр.

— Унда нимәлер ағарып күренгән кеүек... Сыбар башмаҡ, — тип ҡабатланы Әлфиә һаман.

— Күренһә лә, беҙ унда үтә алмайбыҙ.

Өйгә ҡайттыҡ. Ниндәйҙер төçһөҙ, күңелһеҙ көн ине, әйтерһең дә, ҡояшһыҙ түбән күк ерҙе аçҡа ҡыçа. Тирә-яҡтағы бөтә нәмә еүеш, һарайҙың иçке бүрәнәләренән, кәртәләренән серек еçе килә, аяҡ аçтында тиреç менән ҡушылған бысраҡ шарпылдай. Бындай йонсоу көндәрҙә минең һөйәктәр һыҙлай, күкрәк сәнсә, үҙем төшөнкөлөккә биреләм.

Мин Марта өсөн борсолмайым. Ә бына Әлфиә бик бошондо, ҡара ҡайғыға батты ла ҡуйҙы. Мал өсөн дә шул ҡәҙәре... Был минең асыуҙы килтерҙе, ну, ярай, һаҙлыҡҡа батты, ти, бүре лә тамаҡлаһын, ти, шуның өсөн үҙеңде ашарға, бөтөрөргә ярамай ҙа инде? Малдан үҙ һаулығың ҡәҙерлерәк, тип уйлайым мин, әммә Әлфиәне рәнйетеүҙән ҡурҡып өндәшмәйем.

Мунса яҡтым. Бындай көндәрҙә, бигерәк тә кәйефтең алама сағында, иң яҡшы дауа — мунса. Һәр ваҡыттағыса оҙаҡ һәм кинәнеп йыуындым. Әлфиә мине бала кеүек йыуындырҙы, башымдан алып аяҡ бармаҡтарыма тиклем йыуҙы ла ҡуйҙы. Мин әләүкәлә һуҙылып ятам, ул мине уттай эçе миндек менән саба, шунан мин уны сабам, арҡаһын йыуам.

Кисен ҡабаланмай ғына сәй эстек. Ул таçтамалды башына ураған, һирәк кейгән сыбар ебәк халат әләктергән. Янған ҡыҙыл йөҙө тыныс, ҡараштары уйсан, ниндәйҙер

йылылыҡ менән ҡарай. Унан сәстәрен төшөрөп тағатып тараны, кипкәс йоҡларға ятты. Мин гел һуң ятам, машинкала баҫам, көндөҙ башлаған битте яҙып бөтәм,унан гәзит уҡырга тотонам. Ниһайәт, тынысланды, тип уйлап, мин ҡәнәғәтлек кисерҙем, кис буйы быҙау тураһында бер һүҙ ҡуҙғатманы. Ул тигеҙ тын алды, еңелсә генә хырылдай ҙа башланы, мин һаҡ ҡына янына яттым да утты һүндерҙем. Йоҡламаған икән, ҡапыл йөҙө менән миңә боролдо ла ҡыҫып алды, йылы ҡулы менән күкрәкте һыйпаны, битем, сәстәр буйлап йөрөттө. Унан еҫле һабын, йыуылған таҙа эске күлдәк еҫе килә. Ул элек тә мине ихлас ярата торғайны, тик быны нисектер тартынырыраҡ, оялыбыраҡ башҡарһа, бөгөн ҡулдарының ҡағылыуында мин икенсе наҙ, ихласлыҡ барлығын тойҙом...

— Һин мине яратаһыңмы? — тип һораным мин. Бындай һорау биреүем оҙон ғүмер эсендә беренсе тапҡырға.

— Яратам, — тине ул шундуҡ, шунан бер аҙ өндәшмәй ятты, әйтерһең дә, мин уның ошо һүҙен нисек ҡабул итеремде көттө.— Мин һине гел яраттым, малай сағыңда ла, егет булғас та оҡшай торғайның.

— Соланда нисек ир менән ҡатын булып уйнағанды иҫләйһеңме?

Ул йөҙө менән минең күкрәккә ҡапланды ла тыйнаҡ ҡына көлдө, әммә яуапҡа бер һүҙ ҙә әйтмәне. Ул да минең үҙен яратыуым тураһында һүҙемде көттө, ахыры. Тик Ғәлиәбаныуҙан башҡа мин мөхәббәт һүҙҙәрен бер кемгә лә (уға ла шиғырҙарымда ғына) әйткәнем булманы. Ә үҙемдең ҡатынға, оҙаҡ йылдар бергә йәшәгән, үҙемде кеше иткән ҡатынга, ниңәлер әйтә алманым, ниндәйҙер эске тормоз туҡтатты.

— Һин һуғышта саҡта мин Аллаһы тәғәләнән һинең иҫән-һау йөрөп ҡайтыуыңды һораным, ә һин Ғәлиәгә хаттар яҙҙың,— тине ул ҡапыл үпкәле тауыш менән, берауыҡ һүҙһеҙ ятҡандан һуң өҫтәп ҡуйҙы:— Беҙ һинең менән һәйбәт йәшәнек, мин ҡәнәғәт, мин бәхетле. Ә үҙем гел генә, һин минән китерһең, тип уйлай торғайным. Ғүмер буйы шулай.

— Нишләп улай? Ул уй башҡа ла инеп сыҡманы.

— Бала таба алманым бит...

Мин уны ярһып үбергә керештем. Һуңғы йылдарҙа үбешеү һирәк була торғайны. Ә ул кис беҙҙең икебеҙгә лә ифрат рәхәт ине...

Иртәнсәк, һәр ваҡыттағыса, ул эргәмдә юҡ ине. Ул минән иртәрәк тора, һыйыр һауа, уларҙы көтөүгә ҡыуа,

ашарға бешерә. Мин ихатаға сыҡтым, Әлфиә ихатала ла күренмәне. Ғәҙәттә, мунса төшкәндең иртәгәһенә ул мунсала кер йыуа. Әммә мунсала ла булмай сыҡты. Ағаһына китмәнеме икән? Өйгә кире әйләнеп кергәйнем, тамам аптыраным: иртәнге сәй әҙерләүҙең эҙе лә юҡ. Башҡа үҙем дә ҡурҡҡан уй килде: әллә яңғыҙы ғына быҙауҙы эҙләргә сығып киттеме? Мостафаға барҙым. Унда ла юҡ. Үҙемде шулай тип тынысландырҙым: йылға аръяғынан йәки үтә алмаған Семенов туғайы яғында эҙләргә ул ҡәҙәре иҫәр түгел дә. Моғайын да, иген баҫыуында эҙләйҙер йәки Ташморонға киткәндер. Осҡолонға, ҡайындар араһына, юлланыуы ла ихтимал. Йөрөр-йөрөр ҙә ҡайтыр. Мартаны табып алып ҡайтыр. Тапмай әйләнһә лә оло бәлә юҡ. Мал ашаған еренә ҡайтмай буламы?

Йоморҭҡа бешереп, сәй эсеп алдым, ярты көнгә тиклем үҙ эштәрем менән булаштым. Төш етте — Әлфиә юҡ.

Төштән һуң мотоцикл менән иген баҫыуҙары яғына киттем. Көн яйлап асылды, күктәге болоттар өҫкә күтәрелде, ямғыр туҡтаны, тирә-йүнгә тәмле еҫтәр таралды. Юлдар батҡаҡ, һис үтерлек түгел — Ҡыҙҙар тауының һыртына көскә күтәрелдем. Мотоциклды ҡалдырҙым да тауға мендем. Оҙаҡ торҙом тирә-яҡты байҡап. Быҙау ҙа, Әлфиә лә күренмәй. Ҡайынлыҡҡа боролғайным да, үрҙе менеп булманы, шуға сиҙәмдән барҙым, саҡрым-саҡрым ярым самаһы ер үткәс, һөрәнләп ҡысҡырҙым, унан кире әйләндем. Ташморонға боролорға ниәтләгәйнем дә, сусҡа фермаһы янында мотоциклым батты...

Ҡапҡанан кереүемә ҡатыным ихата уртаһында тора һәм ҡәнәғәт йылмая, ә мин уны әрләргә тотонам, ул, ниңә ҡысҡыраһың, быҙауҙы таптым бит, тип әйтеп ҡаршы алыр, тип өмөтләнеп ҡайттым, тик Әлфиә өйҙә юҡ ине.

Мышағыр тауына киттем, яртыһына тиклем күтәрелеп, Семенов туғайында береһен дә күрә алманым. Хәйер, ул унда нисек сыҡһын инде? Ҡайтышлай Мостафаға һуғылдым. Ул һеҙгә китте, тине Гөлшат.

— Бер ҡайҙа ла юҡ, — тинем мин. — Иҫәр бисә, һаҙлыҡҡа киткән йәки аҙашҡандыр...

— Минең атты ал да Ҡыҙылташ тауына барып әйлән. Үткән йыл мин үҙемдең башмаҡты шунан табып алып ҡайтҡайным.

— Семенов туғайында ул, нимәлер күрҙем, ти ине, ә мин бер нәмә лә күрмәнем. Әгәр ул унда ҡайынлыҡ, һаҙлыҡ аша китһә, батҡаҡҡа сумасаҡ. Йә быҙауҙы шунда

тапҡандыр ҙа һөйрәп сығарырға маташалыр, — тигән һығымтаға килдем мин. — Ҡоро йылға аша сығып ҡарайым улайһа.

Атҡа атландым да, күперҙе үтеп, Ҡоро йылғаны йөҙҙөрөп тигәндәй сыҡтым, Семенов туғайына йүнәлеш алдым. Күбәләр янында быҙауҙар юҡ. Атты ҡалдырып, урманға индем, түңгәктәр аша барҙым, аяҡ тубыҡҡа тиклем бата, — шул килеш йөҙ метр самаһы ғына барғанмындыр, ҡысҡырҙым, һөрәнләнем, ҡатындың исемен әйтеп ҡысҡырҙым, тик артабан, һаҙҙа ултырған зәғиф ҡайындарҙың теге яғына, үтерлек түгел ине. Кире әйләнергә тура килде — Ҡоро йылғаға кире бармай Пүшков күлдәре янынан Ҡыҙылташ тауына йүнәлдем. Унда ла бер ни юҡ. Төнөн генә әйләндем, Яйыҡ аша сыҡтым, ауылға инеп тыҡрыҡтан боролғайным, бына шатлыҡ, өйҙә яҡты бар! Еңел булып китте, тик ҡыуанысым оҙаҡҡа барманы — мине Әлфиә түгел, Мостафа менән уның ҡатыны ҡаршы алды. Гөлшат һыйырҙарҙы һауған, ашарға бешергән. Мәйет күмеп ҡайтҡандағы кеүек ише шып-шым ғына ултырып ашаныҡ. Улар ҡайтып китте. Мин яңғыҙым ҡалғас, ҡайғылы уйҙарға батып төндө йоҡоһоҙ үткәрҙем. Утты ла һүндермәй өҫтәл янында ултырҙым, һәр тауыш, һәр ҡыштырлауға һикереп торҙом, ихатаға ла сыҡҡыланым, бер нисә тапҡыр йылға ярына барып төн ҡараңғылығына текәлеп баҫып торҙом. Яҙыусы булғас ни, төрлө сюжеттар башҡа килә: һаҙлыҡҡа батҡан, һаҙлыҡ упҡан да, ағас тамырына йәки ботағына йәбешеп мине көтә. Иртәнгә тиклем ҡайтмаһа, кеше йыйып ара-тирәләге бөтә урман, һаҙлыҡты һөҙөп сығырға кәрәк булыр.

Таң атып килгәндә диванға ятҡайным йоҡлап киткәнмен. Ҡапҡаға һуғыуҙарына уяндым. Ниһайәт, ҡайтты! Атылып ихатаға сыҡтым һәм... түбәнге ауылда йәшәүсе, бер ҡасан да миңә кергәне булмаған Ғариф менән төкәштем. Былай иртүк килгән икән, тимәк, сәбәбе бар. Йөҙөнән, ҡарашынан шундуҡ аңланым: бәлә!

— Ҡайҙа?

— Мин уны ярға һөйрәп сығарҙым. Йомағужаның баҡсаһы артында ята. Арба кәрәк.

Миндә нимәлер өҙөлдө, ҡатып ҡалды, ниндәйҙер тынысլыҡ килде. Һуңынан аңлауымса, ҡурҡыныс көн өсөн көстө һаҡларға һаҡланыу реакцияһы булған икән. Ҡайғы, күҙ йәштәре һуңынан...

Китеп барғанда Ғариф шулай һөйләнде:

— Резина кәмә менән йөҙөп бара инем. Ҡоро йылғa яҡлап мурҙалар һалам. Тәрән сөңгөлдө үттем, боролошҡа етмәҫ элек күрәм: һыуға батҡан ағас ботағында сепрәк тирбәлә. Бөткәнме ни сепрәк-сапраҡ, тип үтеп китеп барһам, ҡул күренә, эргәһенә барһам — Әлфиә...

Гөлшат шундуҡ сарылдап иларға тотондо. Атты ектем дә, ҡуҙғалдыҡ. Иртә ине әле, шуға кеше-фәлән булманы, белһәләр, шау-шыу, йүгереш башланыр ине. Әлфиә Йомағужа баҡсаһының кәртә буйында ята ине. Йөҙтүбән. Ялан аяҡ. Күрәһең, сискән дә итеген ҡулына тотоп барған. Тере һымаҡ ята, сибәр, тик төҫө үҙгәргән. Күҙҙәре яртылаш йомоҡ. Өйҙән сығып киткән халаты тәненә һылашҡан. Мин тубыҡландым, ҡолаҡты һалҡын күкрәгенә терәнем — ул үле ине.

Һуңынан, ҡатҡан баш бер аҙ тынысланып фекер асылғас, мин шуға төшөндөм: эйе, уға Семенов туғайындағы күбә янында ағарып күренгән нәмә һис тыныслыҡ бирмәгән. Таң менән тороп халат ҡына кейгән дә (ямғыр туҡтағайны инде) йылғаға йүгереп барған, уны кисеп түңгәктәр аша туғайға илтә торған юлға төшөргә теләгән. Сөңгөлдән үрҙәрәк һай ғына кисеү бар, ҡоро килгән йылдарҙа уны ат менән дә, йәйәү ҙә еңел генә кисеп кем бесәнгә, кем баланға, кем быҙауын эҙләп теге яҡҡа сығып йөрөй. Шаршынан һуң йылға йүгереүен әкренәйтә, яры ла бейегәйә, әйтерһең дә, ҡаршы яҡтағы йылғаға эйелгән ҡыуаҡлыҡтар күләгәһендә ял итә, шул тирәлә һыуҙан ағас ботаҡтары, тамырҙар һерәйеп сығып тора. Түбән ауылдың малайҙары ошонда йөҙөргә өйрәнә, өйрәнеп алғас, текә ярҙан йүгереп килеп баштары менән һыуға һикерә. Кисеүгә табан йылға һайығая, тарая — бынан арба менән сығалар, мал кисә. Һыу баҫҡан ялан буйлап Әлфиә ошо кисеүгә табан ыңғайлаған, һыу тәүҙә тубығынан ғына булғандыр. Әгәр ул ошо арба менән сығып йөрөгән кисеүҙе дөрөҫ тапһа, һыу уның күкрәгенән, бәлки, саҡ ҡына тәрәнерәк булыр ине, ул теге яҡҡа еңел сыға алыр ине, тик ул яңылышҡан, һулғараҡ тартҡан, буръяҡ һыу аша күренмәгән ярлауҙы шәйләмәй, етмәһә, иртән ҡуйы томан да төшкәйне, бейек ярҙан сөңгөлгә осҡан... Һыу буйында үҫкән, ә йөҙә белмәй, ғәжәп. Күрәһең, һуғыш йылдарында үҫкән үҫмергә йөҙөргә өйрәнергә, һыу инергә ваҡыт булмағандыр. Уның ҡурҡыуын, ҡысҡырыуын, йөҙөргә маташыуын, тик уны упҡын йотҡанын, тамырҙарға килтереп һуҡҡанын бик яҡшы күҙ алдына килтерәм...

Ул көн алама төш кеүек булды. Өйҙә ҡатын-ҡыҙ уны йыуып-кейендергәнсе, мин таш кеүек ҡатып ихатала баҫып торҙом. Әлегә юғалтыу, ҡайғырыу тойғолары кисермәйем, сөнки Әлфиә һаман өйҙә һымаҡ. Күп йыйылды кеше, яныма килделәр, ҡатын-ҡыҙ күҙ йәштәрен һөрттө, ир-ат ҡайғы уртаҡлашып ҡулымды ҡыҫты. Шунан аҡ кәфенгә төрөлгән Әлфиәне зыяратҡа алып барып ҡәбергә төшөрҙөк, ләхет бағаналары ҡуйып, уға ҡарағай таҡталары теҙҙек, тупраҡ ырғыта башлағас, миңә таҡталар араһында киң ярыҡтар ҡалған кеүек тойолдо, тупраҡ ҡатынымдың аҡ кейеменә төшөп торған һымаҡ күренде. Шунан кешеләрҙең ҡабаланыуы, тиҙерәк күмергә тырышыуҙары аптыратты, әйтерһең дә, унан тиҙерәк ҡотолорға ла үҙҙәренең көндәлек эштәренә тотонорға теләйҙәр. Бәлки, миңә шулай тойолғандыр ғына. Бына ҡәбер өҫтөндә ҡалҡыулыҡ хасил булды. Рәшәткәһен, мәрмәр һәйкәлен һуңынан ҡуйырмын.

Әлфиәне күмгән көн Мостафа менән Гөлшат миндә йоҡланы. Мостафа, еңеләйтер, ҡайғыны баҫыр, тип эсергә тәҡдим иткәйне лә, мин баш тарттым — ҡайғыны араҡы менән йыуғы килмәне.

Һуңынан — яңғыҙлыҡ. Бушлыҡ, күңелдә шалтырап торған һәм аңлашылмаған бушлыҡ. Ул тәнем, йәнем ине, көн һайын, сәғәт һайын янымда булды, һәм беҙ бер кешегә әүерелгәйнек. Ул минең ҙур, яҡшы яртым ине. Был аяуһыҙ тормошта унан башҡа мине кем яратты? Ҡайҙа ул? Тупраҡ аҫтындамы? Шуның менән ул бөттөмө, юғалдымы? Юҡ, абсурд был! Ергә күмеп ҡуйыу менән генә кеше бөтмәй ҙә, юғалмай ҙа! Әгәр Аллаһы тәғәлә бар икән, ниңә ул оҙаҡ йылдар буйы минең тормошто һаҡланы, ә уның тормошон, минекенән яҡшыраҡ, таҙараҡ тормошон, һаҡлай алманы?

Үлер алды кисендә ул мине нисек яратты, наҙланы, йылы һүҙҙәр әйтте. Үҙенең үлерен һиҙеп минең менән хушлашыуы шул булғандыр, бәлки, һиҙмәгәндер ҙә, ҡайһылай тойғоларым тулышып китте, тип уйлағандыр. Ә үҙе, мине яратаһыңмы һуң, тип һораманы ла, өндәшмәй генә көттө. Көтөп ала алманы. Мин дә һине яратам, тип әйтеүе миңә ҡыйын инеме ни? Ниңә генә шул һүҙҙе әйтмәнем икән?

Үҙемде ғәйепле тойоу тойғоһо баҫты. Ул тойғо ҡайғынан да хәтәрерәк — уның үлемендә мин генә, тик мин генә ғәйепле! Мин, иҫерек идиот, күп йылдар элек, уны һыуға төртөп төшөрҙөм, тимәк, үҙем аңлап етмәһәм дә, үлемен

теләгәнмен булып сыға. Һөҙөмтәлә ниндәйҙер хәйерһеҙ көс ошо хәлде күреп-ҡарап торған да әле килеп йылғаға әйҙәгән...

Күмгәндең өсөнсө көнөнә генә ҡайтты быҙау. Тәҙрәнән күреп мин ихатаға сыҡтым, ҡапҡаны астым. Хайуан хайуан инде, бер нәмә лә булмағандай инде лә алан-йолан ҡаранып алдына ашлы ялғаш ултыртыусы хужабикәне эҙләне.

— Беҙҙең әсәй юҡ инде, һин иҫәр арҡаһында үлде,— тинем. Йәнем көйҙө, тик уны әрләүҙән, туҡмауҙан ни файҙа?

Илап ебәрҙем, быуа йырылды, ниһайәт. Бала саҡтан бирле бер ҙә иламаған кеше, ошо көндән алып көн һайын иланым. Оҙон ғүмер йәшәп, беҙҙең быуын өлөшөнә төшкән бөтә ауырлыҡтарҙы күреп-кисереп йөрөгән кеше, тимәк, һере, сыныҡҡан кеше, ошо көндән башлап илаҡ бер ҡартҡа әүерелде лә ҡуйҙы. Сәбәпсеһе — әлеге быҙау. Һыйырҙарҙы күрһәм — улар хужабикәнең юҡлығын һиҙәләрҙер, тик кеше үлемен аңламайҙарҙыр — күҙгә йәштәр тығыла. Ашарға бешерәм — был кәстрүлгә Әлфиәнең ҡулы тейгән. Туны, пальтоһы, яулығы, бүтән әйберҙәре элеүле торған шкафты асырға түгел. Күлдәк, кофталарынан Өфөлә һатып алынған ҡиммәтле хушбуйҙар еҫе аңҡый — йәнә илайым. Уның еҫе... Мәйеттең әйберҙәрен туғандарына, йыуған, кейендергән кешеләргә бирәләр. Мин туны менән яулығын ғына үҙемдә ҡалдырҙым да башҡа кейемдәрен тараттым.

Бер көн зыяратҡа барҙым. Ерләгәндән һуң тәүгегә килеүем ине. Тимер рәшәткәһе бар — Мостафа ҡуйҙы. Тупраҡ өйөмө аҫтында ул, Әлфиә ята, дөрөҫөрәге, уның һалҡын тәне ята. Ә рухы ҡайҙа? Мине яратыу тойғолары ҡайҙа? Тәбиғәттең ғәжәп күренеше булған кеше рухы тарҡалған, серегән тән менән бергә юғалыуы мөмкин түгел. Мин быға ышанмайым, сөнки, рух ул — материаль төшөнсә. Шуға ла Әлфиә эргәлә һымаҡ, тик ул беҙҙең күҙгә күренмәй, әммә беҙҙе күрә, ишетә. Мин ул тере саҡта әйтергә тейешле һүҙҙәрҙе ниңәлер әйтмәнем, ниңәлер ҡалдыра килдем, алдағы көндәрҙә әйтергә форсат булыр әле, тип уйланым — арабыҙҙағы мөнәсәбәттәрҙең, тойғоларҙың ысын мөхәббәт, ысын бәхет икәнен аңлап бөтмәгәнмен икән. «Мин һине яраттым, Әлфиә, мин һине яратам, ғүмер буйы яратасаҡмын! Һин мине ишетәһеңме?..»

Ярты йыл үткәс, күп илауҙан күҙ йәштәрем сыҡмай башлағас, бер нисә йылға ҡартайып, мин ошо повесты яҙырға ултырҙым. Йөҙ бит самаһы яҙғас, ҡағыҙ бөттө лә уның артынан ҡалаға барырға мәжбүр булдым. Аҙыҡ-түлек магазины янында Абдрахманова Миникамалды осраттым. Көскә таныным үҙен — ифрат ныҡ ҡартайғайны. Аяуһыҙ ваҡыт һоро күҙле, таҙа кәүҙәле сибәр ҡатынды тешһеҙ, аҡһаҡ әбейгә әйләндергән дә ҡуйған. Бер-беребеҙҙе саҡ танып иҫәнләшкәс, мине йәлләп илап ебәрҙе. Ике йыл элек ирен ерләгән, ҡалала ҡыҙында йәшәй, ауырый, аяҡтары һыҙлай икән. Аҙаҡтан, хушлашыр алдынан ғына, көҙ Ғәлиәбаныуҙың ире Закирҙың да мәрхүм булыуын әйтте...

Был повесымда мин, нисек кенә сәйер яңғырамаһын, Талха Ғиниәтуллин исемле демобилизацияланған һалдат 1948 йылда Шепетовка тигән ҙур станцияла тыуған яҡтарына китеүсе поезға ултырһа, уның менән нимә булыр, яҙмышы нисек килеп сығыр ине икән, тигән һорауға яуап бирергә тырыштым. Әммә мин әлеге станцияла икенсе тарафтарға йүнәлгән поезға ултырҙым, икенсе ҡатынды осраттым һәм уның менән бәхетле тормошта йәшәнем...

## *Ҡара баҫыу*

(Әҡлимә һеңлемдең һөйләгәндәре буйынса)

1

Минең ун алтынсы ҡышым. Һуғыштан һуңғы беренсе ҡыш, һыуыҡ, ас, осо-ҡырыйы күренмәгән ҡыш,ниһайәт, бөтөп килә. Март айы. Өсҡолон тауы башына ҡунаҡлаған ҡояш үҙенең йылы нурҙарын һибә, ҡыйыҡ баштарында ятҡан ҡалын ҡар ирей, тамсылар тама, хатта юлдар ҡарая башланы. Әммә ҡапыл, һис көтмәгәндә, аҡман-тоҡман, ҡыштың һуңғы бураны, уйнап алды ла китте. Аҡман-тоҡман: «Һыйырҙарҙың мөгөҙөн, ҡатын-ҡыҙҙың көйәнтәһен һындырам»,— тип килә, тиҙәр бит. Урал һыртында, Йайыҡ йылғаһы буйында ултырған ике йөҙләп өйлө беҙҙең ауылды ла урап үтмәне ул. Ҡырағай яландарҙа тыуған аҡ буран өйөрөлөп ауылға килде лә олой-һыҙғыра тыҡрыҡтар буй-

лап йөрөнө, ҡапҡаларҙы, тәҙрә ҡапҡастарын шаҡылдатты, лапаҫ баштарындағы иҫке һаламдарҙы йолҡҡоланы, тәпәш тәҙрәләргә ҡар һыланы, мәке һуҡмағын күмеп китте. Төндәрен баҡса артлап ас бүреләр килде лә ыжғыр буранға ҡушылып олоно. Әйтерһең, беҙҙең ауылдың ике урамын бер итеп асыулы дәү ғифрит йөрөй һәм бар көсөнә йә әшәүәтһеҙ ҙур һепертке, йә төбө-тамыры менән йолҡоп алған берәй ағасы менән өй стеналарына һуға. Һуғышҡа тиклем үк һалынған, хәҙер серей башлаған, сүккән, ҡыйыҡ таҡталары бурһып йәшелләнгән, бүрәнә аралары һары балсыҡ менән һыланған, мүген турғайҙар йолҡҡолап бөткән ошо иҫке өйҙәрҙә кешеләр көн итә. Өйҙәр һыуыҡ, өшәнес, ярым ҡараңғы. Ауылда күберәк ҡатын-ҡыҙ, бала-саға, ҡарт-ҡоро, балалы һалдаткалар, ә эшләрҙәй ирҙәр юҡ сүрәтендә. Һуғыштан имен-аман, яраһыҙ-ниһеҙ ике генә кеше ҡайтты. Үрге ауылдан бөкрө Мөбәрәк (әсирлектә булған, шуға уға барыһы ла ҡырын ҡараны), түбәнге ауылдан дүртенсе бригада бригадиры «Буралҡы» ҡушаматлы Камал ағай.

Көндөҙ аҡ бурандар араһынан буш урамда яңғыҙ һындар күренеп ҡала. Ат ҡараусы Кәрим бабай — ат һарайына, беҙҙең күрше Асия апай мәкегә һыуға бара. Балалар мәктәпкә йөрөмәй. Мәктәптә дүрт синыф ҡына, һәр синыфта балалар һаны биш-алтынан да артмай. Бишенсе, алтынсы, етенсе синыфтарҙы бөтөнләй яптылар, сөнки дәрескә йөрөүсе юҡ: берәүҙәрҙең — ашарына, икенселәрҙең аяғына, өҫтөндә бөттө, өсөнсөләр фермаға эшкә сыҡты. Мин дә эшләйем — колхоз һарыҡтарын ҡарайым. Киске мәктәп асып ҡарағайнылар ҙа — берәү ҙә килмәне. Яңғыҙым ғына етенсе синыфҡа йөрөй инем — бер аҙҙан ташланым, хәҙер өйҙә генә шөғөлләнәм.

Ауылда икмәк юҡ, күп ғаиләләр асыға, бигерәк тә һыйырҙарын һуйып ашағандарға ҡыйын. Яҙға тиклем түҙә алманылар — ҡышҡа етерлек бесән әҙерләргә хәлдәренән килмәне. Беҙҙең ҡоба һыйыр ҡыш сыҡты. Көҙөн өләсәйем былай тине: «Асыҡһаҡ асығырбыҙ, һыйырға теймәйбеҙ». Бәләкәй кәбәнебеҙ бар ине, колхоздан бер аҙ һалам ала алдыҡ. Һәм бына мартта, тап аҡман-тоҡман ҡоторған көндәрҙә, һыйырыбыҙ быҙауланы.

Ул кисте беҙ йоҡларға ятманыҡ. Энекәшем генә йоҡланы. Өләсәйем, һыйыр бөгөн мотлаҡ быҙаулаясаҡ, сөнки башын ҡиблаға һалып ятты, тине. Кистән ныҡ итеп мейескә яҡтыҡ, иҙәнде йыуып сығарҙыҡ, бер ҡосаҡ һалам ин-

дерҙек, унан өләсәйем һикегә ятып бер аҙ серем итеп алды. Мин шәмде туҡандырҙым да «СССР тарихы»н уҡырға керештем. Тышта буран ҡотора, ихата яҡлап тәҙрәбеҙ ҡапҡаһыҙ, шуға ла мин көрттөң түбәһен яҡшы күрәм.

Төн уртаһы ауышҡайны инде, йоҡо баҫа башланы. Ҡапыл өләсәйем: «Ишеттеңме?» — тип, һикереп торҙо. «Юҡ, бер нәмә лә ишетмәнем». — «Тәҙрәгә килеп, һыйырығыҙ быҙауланы, тип ҡысҡырҙылар бит». — «Бер кем дә ҡысҡырманы». — «Ҡысҡырҙы, Мәүзифа ҡарсыҡ тауышы менән ҡысҡырҙы». — «Эйе, килде ти, Мәүзифа әбей өсөнсө төшөн күреп яталыр әле». — «Ул үҙе түгел, уның тауышы менән лапаҫ эйәһе ҡысҡырҙы». Минең арҡа зымбырлап китте. Лапаҫтың бер мөйөшөндә өләсәйем әйткән лапаҫ эйәһенең йәшәгәненә мин ышана инем. Көндөҙ ул йоҡлай, төндәрен ихата буйлап йөрөй, ҡай саҡ ҡапҡаны асып, малды урам буйына ла сығарып ебәрә. Шәмде туҡандырып, һүнмәһен өсөн бишмәт салғыйы менән ҡаплап, ихатаға сыҡтыҡ.

Һыйыр беҙҙе наҙлы әсә мөңрәүе менән ҡаршыланы, йәнәһе, ҡарағыҙ, минең кемем бар. Үҙе һалам өҫтөндә ятҡан еүеш ерән быҙауын ялай, күҙҙәрендә — арығанлыҡ, балаһын йәлләү, уның яҙмышы өсөн борсолоу. Өләсәйем быҙауҙы күтәрҙе, аяғына баҫтырып, томшоғон һыйырҙың елененә төрттө. «Орғасы, — тине ул ҡәнәғәт тауыш менән. — Алла бирһә, быныһын да ҡалдырырбыҙ, һыйырҙы ике баш итеп аҫрарбыҙ». Быҙауҙы өйгә мин күтәреп индерҙем. Һыйыр йәнә хәлһеҙ генә мөңрәне, был юлы, ярар, индерегеҙ, йылыла торһон, тине шикелле. Хәҙер һөт буласаҡ. Юҡһа, һуңғы осор бер картуф менән генә туҡланабыҙ. Әлбиттә, һөт сәй ағартыр өсөн генә буласаҡ, уның күп өлөшөн өләсәйем сепараторҙан үткәрер ҙә май һығыр, район баҙарына алып барып һатыр, аҡсаһына һабын, шырпы, кәрәсин алып ҡайтыр. Уның ҡарауы, ҡатығыбыҙ мул буласаҡ, ә картуф менән ҡатыҡ — бөгөнгө көндә ҙур байлыҡ.

Әгәр март айында тауыҡ күләүектән һыу эсһә, яҙ иртә килә, йәиһә марттың һуңғы, апрелдең тәүге аҙнаһында күләүекте боҙ тартһа, ҡурҡмай бер аҙнаға сана юлы менән сығып китергә була, ти өләсәйем. Егерме бишенсе мартта мин ялғашҡа һыу ҡойҙом да төнгөлөккә урамда ҡалдырҙым. Иртәнсәккә һыу туңмағайны.

Һүҙ ыңғайында өләсәйем, беҙҙең нәҫел-нәсәп тураһында ла әйтеп китәйем әле. Өләсәйем фискалдар туҡомонан,

тимәк, әсәйем яғынан беҙ фискалдар булып сығабыҙ. Кем ул фискал, ни өсөн фискал, ҡайҙан — бер кем дә белмәй. Өләсәйем — ауыр холоҡло, ҡырыҫ тәбиғәтле, әрем телле ҡаты кеше. Асыуымды килтергән һәр кемде ҡарғышым менән ҡәбергә тыға алам, ти торғайны ул. Ҡарғыштары тамаҡ төбөнән сыҡҡан сәйер һүҙҙәр менән башлана: «Аллаһы тәғәлә язаһы башыңа төшһөн». Был һүҙҙәр ҡабаланмай, һәлмәк итеп әйтелә, артынса ҡатлы-ҡатлы ҡурҡыныс һүҙҙәр теҙелеп китә. Ул һүҙҙәр яҡынса ошондайыраҡ: «Ер һине тереләй йотһон, ҡәберең шатланып ҡаршы алһын, күҙҙәрең һытылып аҡһын, ҡартайған көнөңдә балаларың күтеңә тибеп өйөңдән ҡыуып сығарһын, өй беренсә хәйер һорап йөрө!» Ә бына мине иркәләтте. Йыш ҡына: «Әминә, ҡыҙым, кил әле, ҡана, яратайым үҙеңде», — ти торғайны. Мин башымды уның тубығына һалам, ул иркәләй, арҡамдан һөйә, һыпыра, эленән-эле: «И-и, йөрәкәсем!» — тип әйтеп ҡуя. Ул, күрәһең, мәрхүм әсәйем алдында һуңлап булһа ла үҙенең ғәйебен һиҙгәндер. Олатайым үлгәс, хужалыҡтағы бөтә эш әсәйем елкәһенә төшкән. Әле тормошҡа ла сыҡмаған көйө ул ер һөргән, иген сәскән, бесән сапҡан, кәбән һалған, ҡара көҙ еткәнсе мал көтөп яланда ҡунып йөрөгән, утын әҙерләгән, лапаҫтан тиреҫ сығарған. Ана шул көс еткеһеҙ эш арҡаһында ул йәшләй үлгәндер ҙә инде...

Ә атайым яғынан беҙ — бәғәрәктәр. Ул һүҙҙең дә мәғәнәһен белмәйем. Беҙҙең телдә ул һүҙ юҡ шикелле. Урал аръяғында, беҙҙең ауылдан төньяҡтараҡ, Бәғәрәк йылғаһы аға. Шул исемдәге ауыл да бар. Минең ата-бабаларымдың шул тарафтарҙан килеп сығыуы бик ихтимал. Беҙҙең ҙур типтәр ауылына элек-электән төрлө милләт кешеләре килеп ултырған: татарҙар, мишәрҙәр, ноғайбәктәр, хатта урыҫтар. Ауыл тирәһендә алтын йыуа башлағас, сит халыҡ бигерәк тә ишәйҙе. Олатайым старатель булған. Яҙын үҙенең өлөшөн сәскән дә бесәнгә тиклем кәйләгә йәбешкән, бесәндән ураҡҡа тиклем йәнә кәйлә менән көрәккә тотонған, ҡыш буйы йәнә ташлы Урал ерен соҡоған.

Бәғәрәктәр тураһында былай тиҙәр: «Аҡыллы дүрәктәр». Был, бәлки, уларҙың утә лә ҡыҙыу ҡанлы, һуғыш суҡмарҙары булыуына ишаралыр. Һәр бәғәрәктә шайтан ултыра, тиҙәр. Ҡарттар минең олатай хаҡында, бигерәк шайтан кеүек нәмә ине, кәбән һалғанда ел сығып китһә, сәнсәм тип һәнәге менән елгә ҡаршы ташлана, уны әрләй, һүгә, әйтерһең дә, ел тере йән, тип һөйләй торғайны.

Өләсәйем: «Үләнгә аяҡ баҫһаҡ, икмәккә етербеҙ», — ти. Тик ер һаман ҡар аҫтында, уға ирергә, йылынырға кәрәк. Уға сәсәсәк орлоҡ әлегә келәттә, аҙбарҙа ята, баҫыуҙа үҫәсәк иген — әлегә хыял, өмөт. Шулай ҙа тәбиғәттә барыһы ла рәтле, ышаныслы, ғәҙел. Ҡыш үтә, яҙ килә, йәй тыуа, унан — икмәкле көҙ. Шулай буласаҡ, шулай булырға тейеш. Түҙергә, ҡара тир түгеп эшләргә, көтөргә генә кәрәк.

Унынсы апрелдә өләсәйем: «Һыйырҙы Ҡыҙҙар тауына алып сыҡ, ер еҫкәп ҡайтһын», — тине. Ҡыҙҙар тауы башында, унын битләүендә ҡар ирегәйне. Аяҡ аҫтында — былтырғы үлән. Һыйыр, ысынлап та, ерҙе еҫкәй, моронон әле бында, әле тегендә төртә, уфылдай. Унын шулай тәрән һулап һауаны оло шау менән тышҡа өрөүе нимәне аңлата икән? Ас малдың әллә мул үләнле йәйге туғайҙарҙы иҫенә төшөрөүеме, әллә ерҙең терелергә, йәнләнергә йыйынғанын һиҙгән һыйырҙың ҡыуаныслы йырымы? Хәйер, икеһе лә барҙыр. Әлеге тәмле еҫтәр унын аңында һутлы, тығыҙ, бал тәме биреп торған йәшел үләндәрҙе пәйҙә итәлер, иң ауыры артта ҡалды, саҡ ҡына түҙәйем, оҙаҡламай ер йәшелгә төрөнөр, мине туйҙырыр, тип йәнен тынысландыралыр. Ҡара ергә сығар, тип өләсәйем юҡҡа әйтмәҫ. Ҡапыл баш осонда ҡош һайрауын ишеттем. Һабантурғай! Әлегә ҡыйыуһыҙ, әлегә яңғыҙ, әммә йырлай! Әүәле, һуғышҡа тиклем, өләсәйем был мәлдә ҡамырҙан һабантурғай һындары әүәләй, уларҙы мейестә бешереп ҡаршылаһаң, йыл икмәкле килә, ти торғайны. Ҡыҙарып көйгән ҡамыр ҡоштарҙы мейестән алыуға беҙ ифрат шатланабыҙ, уларҙы тәҙрә төбөндәге һауыттарҙа үҫкән тамсыгөл бәбәктәренең ал буяуына буяп ашайбыҙ. Яҙ көнөндә иң шатлыҡлы ваҡиғаларҙың береһе була торғайны был.

Бына йәнә бер яҙ килә, әммә һабантурғай һындарын ауылда берәү ҙә бешермәй...

## 2

Беҙҙең дүртенсе бригада сәсәсәк ерҙәр Мышағыр менән Күк тейен тауҙары араһында ята һәм «Мүкле һаҙ яғындағы баҫыуҙар» тип йөрөтөлә. Улар — Урал аръяғында, беҙҙеңсә әйтһәк, Йайыҡ аръяғында. Йайыкты сығаһың, күперҙән Сурағол юлы буйлап саҡрым самаһы китһәң, әлеге яландар башлана. Мүкле һаҙ, ташлы ҡалҡыулыҡтар янынан улар йыраҡҡа һуҙыла, Ослобейек тауға етә яҙа. Мышағыр битләүе, ауылдан килгәндә юлдың уң яғы, «Итек

юғалған баҫыу» тип атала. Ҡасандыр, һуғышҡа тиклем, уны трактор менән һөргәндәр. Хәкимйән ағай — трактор бригадаһының хисапсыһы. Һөрөлгән гектарҙарҙы сажин менән үлсәй ҙә баҫыу башына, үлсәгән урынында берәй билдә ҡалдыра — бүрек, пинжәк, итек. Артабан иһә шул урындан үлсәп алып китә. Бер ваҡыт шулай үлсәгән, тейешле һандарын дәфтәренә яҙып ҡуйған, шул урынға һыңар итеген ултыртып киткән. Бер сәғәт самаһы үткәс, төшкө аштан һуң, килһә — итек юҡ. Юғалған итек. Таба алмай өйөнә һыңар итек менән ҡайтып киткән. Шул ваҡыттан бирле кешеләр был яланды «Итек юғалған баҫыу» тип атай.

Бына ошо баҫыуға, Сурағол юлының уң яғында ятҡан Итек юғалған баҫыуға, килде лә инде беҙҙең икенсе звено. Ә юлдың уң яғы, уйпатлыҡта, Күк тейен тауының битләүенә тиклем — беренсе звено ерҙәре. Юл буйлап баҫыу ситендәге ҡаҙаҡҡа ҡағылған таҡта киҫәгенә эре итеп «Орлоҡ участкаһы» тип яҙылған.

Юлдың уң яғындағы, беҙҙең звено ерендәге, ҡайын эргәһендәге һалам башлы, быялаһы сатнаған бер генә тәҙрәле бәләкәй өй. Өйҙә мейес тә, һике-фәлән дә юҡ. Иҙәнендә былтырғы һалам туҙышып ята, баҙҙан серек ағас, күгәргән еҫ, ҡышҡы һалҡынлыҡ килә.

Беҙҙең икенсе звенола ун өс ат, дүрт үгеҙ, бер һыйыр бар. Үгеҙҙәрҙе тырмаға ғына егәсәкбеҙ, сөнки һөрә алмайҙар, бураҙнаны боҙалар. Бер үгеҙҙең ҡушаматы — Венера. Үгеҙ булғас, ниңә Венера — һис аңлашылмай. Кем шулай ҡушҡан, белмәҫһең. Ул кеше Венераның ҡатын-ҡыҙ исеме икәнен белмәгәндер, ахыры, белһә лә, ғәҙәт буйынса — һуғыш йылдарында ауылдағы тормош, нигеҙҙә, ҡатын-ҡыҙ елкәһендә булды, бөтә эште ҡатын-ҡыҙ заты алып барҙы — ҡушҡандыр. Бына ошо үгеҙҙәр, арыҡ аттар менән беҙгә, ҡатын-ҡыҙ затына, бала-сағаға, йөҙ илле гектар самаһы ерҙе һөрөп, иген сәсеү бурысы тора.

Звенола ун алты кеше. Әхмәтйәр, Ғәлиулла олатайҙар, икеһе лә ныҡ ҡартайған инде. Рәсим, Ғаяз, Рәйес, Рәшиҙә, Фәриҙә исемле малайҙар һәм ҡыҙҙар — тырмаға егелгән үгеҙҙәрҙе ҡыуыусылар, Нәжип — ат ҡараусы, Мәүлит, миңә туған тейешле Зәки, Фәйзулла (уларға ун алтышар йәш) һәм Нәсимә апай — плугарҙар. Хәлиҙә апай — ашнаҡсы. Фәүзиә апай — орлоҡ ташыусы. Әхмәҙулла — сәсеүсе. Нәсимә апай, Фәүзиә апай, Хәлиҙә апай — барыһы ла егерме алтынсы йылғылар.

Беҙгә тағы бер кеше, ҡыуыусы, етмәй ине. Мин үҙемдең ун бер йәшлек энемде — Рауилды алдым. Барыбер мәктәпкә йөрөмәй. Күҙен дүртенсе синыфҡа барғайны ла — ташланы: ас ҡорһаҡ менән ниндәй уҡыу ти инде. Бер сәғәт нисек кәрәк түҙеп ултыра ла: «Әйҙәгеҙ, малайҙар, башаҡ йыйырға!» — тип иптәштәрен алып сыға ла китә икән. Һәм Рауил, Рәсим, Ғаяз — барыһы ла бер класс малайҙары — ауыл осондағы урылған баҫыуға йүгерә. Йыйған башаҡтарын ыуып, ашлығын ҡул тирмәнендә тарттыралар ҙа өйрә бешерәләр. Яңы йыл алдынан буранлар башланғас, Рауил уҡыуҙы бөтөнләй ташлап ҡуйҙы — аяғында юҡ ине. Яҙға тиклем өйҙә ултырҙы. «Ялҡау, өйҙә һауа боҙоп ултырғансы, әйҙә, яланда эшләрһең, унда һоло өйрәһе булһа ла бирерҙәр», — тип үҙем менән алып сыҡтым. Зәки менән Әхмәҙулланан башҡаларының аталары һуғышта үлгәйне.

Икенсе звеноның етәксеһе — мин. Идара ултырышында тәғәйенләнеләр. Булдыра алмам, тип ҡаршылашып ҡарағайным да, бүтән ҡуйыр кеше табылманы. Ике ҡарт та бигерәк оло йәштәләр, Фәүзиә апай нисектер үтә ҡыйыуһыҙ, гел генә төшөнкө кәйефле. Булмышы шулай. Хәлиҙә апай ҙа йомшаҡ, етмәһә, һаулығы юҡ, Нәсимә апай теше-тырнағы менән ҡаршы торҙо. Нишләйһең, ризалаштым инде.

Беҙ бөтәбеҙ ҙә — ҡарттар, малайҙар, ҡыҙҙар — ас инек, ябыҡ инек. Өҫтөбөҙҙә лә ямау өҫтөнә ямау һалынған, тишек-тошоҡ иҫке кейем. Барыбыҙҙың да аяҡтарында иләнмәгән тиренән үҙебеҙ тегеп кейгән сарыҡтар. Калуш ише ябай ғына аяҡ кейеме инде шунда. Табанында ҡаты нәмә юҡ, төбөнә олтораҡ һалабыҙ, ҡуныстары буҫтауҙан тегелә, улар йөн ептәр менән уратып балтырға бәйләнә.

Рәсимә атаһының ямаулы иҫке бишмәтен кейгән, билен ҡайыш менән быуған, оҙон еңдәрен төргән. Башында — иҫке буденовка, Шәмсетдин ағайҙың әрме хеҙмәтенән алып ҡайтҡан кейеме. Ғаяздың өҫтөндә лә атаһының таушалған, төҫөн күптән юғалтҡан бишмәте. Урталай һынған козыреклы ҙур фуражкаһы малайҙың күҙенә төшөп тора. Рәйестең дә кейгәне атаһының иҫке бишмәте менән уңған кәпәсе. Энем Рауил минән ҡалған ҡыҙҙар пальтоһында йөрөй. Башында — козырекһыҙ фуражка. Ә үҙем өләсәйемдең ҡәҙимге пальтоһын туҙҙырам. Иҫке берет, уйнаҡлап торған ҡара толом, күп йыуыуҙан төҫөн юйған күлдәк (йоҡлауым да, йөрөүем дә, эшләүем дә шуның менән), аяҡта ҡунысы ямаулы сарыҡтар; хәйләһеҙ, һәр

нәмәгә ҙур ҡыҙыҡһыныу менән ҡараған ҙур күҙле асҡаҡ йөҙ (шул йылдарҙағы фотоһүрәтем һаҡланған) — ул саҡтағы тышҡы ҡиәфәтем бына шулай. Мәүлит менән Зәкиҙең, Нәсимә, Хәлиҙә, Фәүзиә апайҙарҙың кейеме лә беҙҙекенән әллә ни артыҡ түгел. Әхмәтйәр олатай һарыҡ тиреһенән тегелгән (йөнөн ҡайсы менән ҡырҡып үҙе тегеп алған) салбарҙа, буҫтау сәкмәндә йөрөй, уны ҡыҙыл сатин билбау менән быуған. Башында бесәй тиреһенән теккән бүрек, ҡолаҡсындары ҡаушырып бәйләнмәй, эт ҡолаҡтары ише һәлпелдәп йөрөй. Ғәлиулла олатай ғына башҡаларға ҡарағанда арыуыраҡ кейемдә: һырма мамыҡ бишмәт, салбар, аяғында калушлы бийма.

Ҡарттарҙың икеһе лә — ҡурмастар нәҫеленән, ике туғандар. Һөйләүҙәренсә, ҡурмастар бойҙайҙы һуҡмаған, ондан икмәк бешермәгән, бойҙайҙы ҡыҙҙырып ҡына ашағандар. Ниңә улайтҡандар, белмәйем. Әхмәтйәр олатайҙың йәнә бер ҡушаматы бар — «Ҡарун». Һаран, тимәк.

Ҡарун тураһында шундай әкәмәт тә һөйләйҙәр. Әхмәтйәр олатай тураһында түгел, әлбиттә, — ә ғөмүмән. Ҡасандыр Ҡарун исемле бай йәшәгән, ти. Һарандың да һараны булған икән. Бер ваҡыт хеҙмәтселәре бының һарыҡтарының йөнөн ҡырҡа, ти. Ҡараһалар, яндарына хәйерсе килә ята. Ҡарун уны шәйләгән дә хеҙмәтселәренә былай ти икән: «Мине йәһәт кенә йөн араһына йәшерегеҙ, әтеү, ул минән хәйер һораясаҡ». Хеҙмәтселәре хужаны тыңлаған — уны йөн араһына күмгән. Хәйерсе быны күргән, эргәләренә барып еткәс: «Аллаһы тәғәлә, шуны көйәгә әйләндерһәңсе», — тип шыбырлаған, ти. Ярлы үтеп киткәс, хеҙмәтселәр хужаны сығарайыҡ тип йөн өйөмөн таратһалар, бына ғәжәп, хужа юҡ! Көйә мыжғый! Шунан бирле һарандарҙы «Ҡарун» тип атай башлағандар икән, ә көйә йөнгә эйәләшер булған, ти...

Бына шулай, Әхмәтйәр олатай ауылда һаран кеше хисапланды. Он тултырылған бураны, икмәк һалынған һандыҡты йоҙаҡлап тота, асҡыстарын үҙе менән генә йөрөтә, ҡарсығына ризыҡты бизмәнләп кенә бирә, бер грамм артығын һалмай, тип һөйләйҙәр ауылда. Уларҙың балалары нишләптер юҡ. Ҡарсығы үлгәс, Әхмәтйәр олатай өйләнергә ниәтләнде, тик ауылдағы яңғыҙаҡ әбейҙәрҙең береһе лә уға барырға ризалашманы.

Уның хаҡында көлкөлө хәбәр ҙә һөйләйҙәр. Бер мәл, әбейе иҫән саҡта әле, туған-тыумасаларын ҡунаҡҡа саҡырыу уйы менән былар бал ҡоя. Бал мейес башында әсеп

ултыра. Быҧа бер көн Ҡарун ҡарт көтмәгәндә сырхап китә бит. Бил ауырта, мейес башына менеп йылытып ятайым әле, ти был. Менә, ярты көн ятып төшә, йүнәлгәндәй итә. Иртәгәһенә йәнә «ах, ух», йәнә мейес башына менә. Тамам сырхай, көндәр буйы ята Ҡарун ҡарт, билен йылытып. Балды ҡурынан айырыр өсөн ҡарсығы бер көндө мейес башына менһә, мискә яртылаш ҡына ҡалған! Быҧа шулай «йонсоған» ҡарт биле менән, балды эсеп бөтә яҙған. Һөҙөмтәлә ҡунаҡ йыя алмағандар... Емерелергә етешкән өйөндә уның нисек йәшәгәнен, нимә менән туҡланып көн иткәнен бер кем дә белмәй. Шулай ҙа бөтәһе лә ҡарттың баҫырмаһы барлығын, йәшереп нимәләр бешергәнен һөйләй.

Беҙҙең дүртенсе бригаданың бригадиры — Камал ағай. Абдрахманов Камал. Ниңәләр сәйер кеше итеп күрәм мин уны. Сәйерлеге иң тәүҙә тышҡы ҡиәфәтендә һымаҡ: ыҡсым, хатта бәләкәй танаулы, йоҡа иренле, алһыу яңаҡлы йөҙө ҡатын-ҡыҙҙарҙыҡына тартым. Ә быҧа күҙҙәре, ысынлап та, сәйер. Улар кешегә мыҫҡыллы, һөмһөҙ ҡарай, әйтерһең дә, һәрмәй, ҡармай. Бригадирҙың ҡарашы ҡай саҡ һағышҡа ла сума, өркәккә лә әйләнә. Ул гел генә шәп йөрөй, алға эйелеберәк, көмрәйеберәк атлай, оҙон аяҡтарын киң һәм арҡыры баҫа, әйтерһең дә, йүгереп килеп алдында пәйҙә булған соҡорҙо һикереп сығырға йыйына. Ҡулында һәр ваҡыт сыбыртҡы, хатта йәйәү йөрөгәндә лә. Арбаһына йәбешкән малайҙарға һелтәнә, ҡапҡа аҫтында ятҡан эткә лә һелтәп китә. Ҡушаматы «Буралҡы». Камал Буралҡы. Мин уның һуғышҡа тиклем төрмәлә ултырғанын да беләм — колхоз ырҙынынан иген урлап тотолған.

Камал ағай тураһында, һуғыш сыҡмаһа, бер ҡасан да бригадир була алмаҫ ине, тиҙәр. Уны ҡырҡ беренсе йылда алалар, ҡырҡ бишенсе йылда ғына әйләнеп ҡайта: яраланыу түгел, хатта сыйылған-һыҙырылған ере лә булмай. Ә үҙе кешеләрҙе, мин ҡаты контузия алдым, шуға ҡыҙыумын, тип ышандырырға тырыша. Уның тураһында төрлөһөн һөйләйҙәр, берәүҙәр хатта, ул пленда йөрөгән, ти. Ә оло улы, атайым немецтар тылында партизанлыҡ иткән, ордендары ғына бишәү, әллә күпме миҙалы бар, тип маҡтана.

Беҙҙең «Красный маяк» колхозы председателе — Ислам ағай, Хөснуллин Ислам. Һуғышта арт һыны яраланған. Ауыл ирҙәренә тел сарлау өсөн бер сәбәп. Уның тураһында ла, һуғыш сыҡмаһа, бер ҡасан да председатель була алмаҫ

ине, тиҙәр. Сөнки һуғышҡа тиклем ул ябай колхозсы булып эшләне. Һуғышта отделение менән дә етәкселек итмәгән, ә бында ҡапыл председатель булды ла китте. Ҙур колхоздың етәксеһе булып алғас, район толкучкаһынан кейелгән ҡара френч һатып алды, тауышын ҡалынайтып ебәрҙе, уң ҡулы, йоҙроҡҡа төйнәлеп, ҡара түгелеп бысрап бөткән өҫтәлгә торған һайын йышыраҡ төшә башланы. Идарала берәй «ялҡау»ҙы, «разгильдяй»ҙы «фронттағыса» бешерергә тотонһа, ғәйепле ябай колхозсы йөҙөнә төкөрөктәре сәсрәй. Ул йылдарҙа Ислам ағай минең өсөн ихтирамлы кеше, ихтирамлы етәксе булды. Дөрөҫөн әйткәндә, уның берҙән-бер етди етешһеҙлеге яҡшы түрә булырға, халыҡ араһында абруй яуларға тырышыуы ине.

Парторгыбыҙ — Юнысов Хәйбулла ағай. Ҡыҙыл партизан, колхоздың беренсе председателе, кулактар үлтергән Юнысовтың бер туған энеһе ул. Һуғышҡа тиклем Хәйбулла ағай ауыл Советы председателе булды. Уҫал, әммә ғәҙел, кешене аңлай, баһалай белә торған председатель ине. Эскеселәр, ялҡауҙар, һуғыш суҡмарҙары, колхоз милкенә ҡул һуҙыусылар унан ҡурҡты, ә йомшаҡтар, бигерәк тә йүнһеҙ ирҙәре тарафынан ҡыйырһытылған ҡатындар, уның ярҙамына мохтаж ине. «Хәйбулла сельсоветҡа саҡыра!» — тигән һүҙҙән ауылдағы ҡайһы берәүҙәрҙең быуындары ҡалтырап төшә торғайны, тип һөйләйҙәр.

Һуғышҡа ул үҙ теләге менән киткән. Күкрәген үтәнән-үтә пуля тишкән, үпкәһе сереп-ҡанһырап йөрөй. Ял итергә, дауаланырға ине лә уға, юҡ, серәшеп эшләй бирә. Ә беҙгә, бала-сағаға, мәктәпкә барырға, ҡарт-ҡороға мейес башында һөйәктәрен йылытырға ине лә, юҡ, ҡайҙа. Сөнки беҙҙең иң яҡшы игенселәребеҙ, емереп эшләй торған йәш ирҙәребеҙ үҙҙәренең һабандарына, тракторҙарына әйләнеп ҡайта алманы. Шулай булғас, беҙгә бер кем дә ситтән килеп баҫыуҙарыбыҙҙы һөрөп, тырматып, орлоҡ сәсеп бирмәйәсәк. Бөтә өмөт үҙебеҙҙә...

3

Яратам мин яҙғы ерҙе! Ер оҙон ҡыш буйы ҡар аҫтында ятҡанда, мин уны һағынам. Иҫләйем әле, бәләкәй саҡтарҙа, беҙҙең баҡса артындағы ҡалҡыулыҡтар яланғасланһа, йүгереп сығам да шуларҙы уратып йөрөйөм, һалҡын ерҙе ҡулдарым менән һыйпап шатлана торғайным... Уйпатлыҡтарҙа, соҡорҙарҙа былтырғы үлән араһындағы һарғылт

һыу быялаланып туңа. Аяҡ аҫтындағы ер һыуыҡ. Бер тере йән юҡ. Шулай ҙа яҙғы ер ифрат яҡын, ҡара тупраҡтың дымлы еҫенән ниндәйҙер боронғолоҡ, баҡыйлыҡ еҫе килә. Ҡолаҡ төбөндә иҫкән елдә лә бар ошо еҫ. Ялан елендә һабантурғайҙың өҙөк-өҙөк тауышы ла ишетелә.

Мин атлап барған ер бына дүрт йыл инде һөрөлмәгән, сиҙәмгә әйләнеп бөтөп бара. Ике йыл элек бында сусҡа көттөләр, ә сусҡа фермаһын ауылға яҡынайтып күсереп һалғас, баҫыу тик ятты. Сурағол юлы буйлап тар ғына һыҙат һөрҙөләр, ә үткән йыл, «Сәсеү майҙандарын арттырырға!» тигән ҡарар сыҡҡас, Мышағыр битендә утыҙ гектар зәп күтәрҙеләр, бына быйылғы яҙҙа ошонда һабан ашлығы сәсәсәкбеҙ. Мин зәпкә тиклем килеп еттем дә аптырап ҡалдым: баҫыу эреле-ваҡлы таш менән тулы! Етмәһә, йүнләп һөрөлмәгән, бөтөнләй һабан теймәгән урындар ҙа бар, бигерәк тә үрге яҡта. Күрәһең, үгеҙ егеп һөргәндәр, малайҙар һөргән. Ошо ергә нисек сәсербеҙ икән һуң? Ҡарттар менән кәңәшләшмәй булмаҫ.

Өйгә әйләнеп ҡайттым да ҡарттарға әйтәм:

— Ғәлиулла бабай, Әхмәтйәр бабай, әйҙәгеҙ әле туңға һөргән ерҙе барып ҡарайыҡ. Йүнләп һөрөлмәгән, етмәһә, таш...

— Учетчик ҡыҙым, — ти миңә Әхмәтйәр бабай (ул мине бер ҡасан да исемем менән әйтмәй, әллә белмәй, әллә онота, әллә звеньевой тигән һүҙҙе әйтә алмай), — учетчик ҡыҙым, минең һиңә кәңәшем шул: бөгөн эш башлама!

— Ниңә?

— Бөгөн йома, борондан йома көн бер эшкә лә тотонмағандар. Уңмаҫһың.

— Ул бит борон, — тим мин, иҫем китмәй генә.

— Улай тимә, борон кешеләр беҙҙән бер ҙә иҫәр булмаған. Аҡыллыраҡ булмаһа әле.

Өсәүләп Мышағырға ҡарай атланыҡ. Ғәлиулла олатай ҡашын төйөп, йөҙөн һыта, малайҙар һөргәйне шул, ай, сей ҡалдырып һөргәндәр икән, тип уфтана, баш сайҡай.

— Бригадирға әйт, комиссия ебәрһен, яңынан һөрөргә кәрәк булыр.

— Әхмәтйәр бабай, ә һин ниндәй кәңәш бирәһең?

— Мин, учетчик ҡыҙым, бер нәмә лә белмәйем, — ул яманһыу итеп ҡайҙалыр ситкә ҡарай, күҙҙәре йәшләнә, ел уның һирәк кәзә һаҡалын туҙҙыра, башындағы бесәй тиреһенән тегелгән бүрегенең йөндәрен йолҡҡолай. — Бөгөн эш башлама. Хыҙыр бәлә килтереүе бар. Күптән

булған хәл инде, мин егет саҡта, Күгәрсенташ янында бесән күбәләй башланыҡ шулай. Ярай, булмаһа тотонайыҡ, йә ямғырҙар китер, бесәнде серетер, ти атай. Төш алдынан ҡустым шишмәгә һыуға китте. Күрә: ағас төбөндә ап-аҡ бер ҡарт тора. Ыштаны ла, тубығына тиклемге кейеме лә аҡ, ти. Ҡустым ҡото осоп әйләнеп ҡайтты ла, мин ап-аҡ ҡартты күрҙем, ти атайыма. Атай шул тиклем ҡурҡты, ағарып китте хатта, телен саҡ әйләндереп, Хызыр был, йома көн эш башланыҡ, бәлә килә, тиҙерәк өйгә ҡайтайыҡ, ти. Йәһәт кенә йыйындыҡ та ҡайтырға сыҡтыҡ. Юлда ысынлап та бәләгә тарыныҡ: ат түбәнләскә сабып төшөп китте лә арба түңкәрелде, ҡустым салғыға ҡаҙалды. Эсәктәре килеп сыҡты. Ҡабаланып салғыны бәйләмәгән булғанбыҙ. Өйгә алып ҡайтып еткерә алманыҡ, юлда үлде... Был һиңә фәһем булһын. Бөгөн эш башлама, учетчик ҡыҙым...

Хызыр ғәлиәссәләм — кешеләр күҙенә аҡ ҡарт һүрәтендә күренеп, уларға яҙмыштарын юраған ил гиҙеүсе үлемһеҙ пәйғәмбәр хаҡында ишеткәнем бар ине. Өләсәйем, Хызыр Фәррух ҡартҡа һуғыш алдынан күренгән, тип әйтә торғайны. Фәррух ҡарт Алексей тирмәне янынан үтеп бара икән. Ҡараһа, ҡыуаҡлыҡтар араһынан юлға ап-аҡ һаҡаллы, аҡ күлдәкле, аҡ ыштанлы бер ҡарт сығып баҫа. Фәррух ҡарт быға яҡыныраҡ бара. Аҡ ҡарт илай, ти, тик бер күҙенән ҡан аға, икенсе күҙенән бойҙай ҡойола, ти. Фәррух атын саптырып ауылға ҡайтҡан да туп-тура Хажиәхмәт ҡартҡа барған (Хажиәхмәт олатай зыялы кеше ине, ҡасандыр Мәккәлә хажда булған, хәҙер мулла вазифаһын башҡара). Хажиәхмәт ағай, ниндәй хәл, юлда ап-аҡҡа кейенгән бер ҡартты осраттым, бер күҙенән ҡан аға, икенсеһенән бойҙай ҡойола, тигән. Хажиәхмәт олатай уға былай тип яуаплаған: Хызыр ғәлиәссәләм килгән. Быйыл уңыш мул буласаҡ, тик йыйырға кешеһе булмаҫ, һуғыш башланыр. Июндә ысынлап та һуғыш башланды...

Мин үҙем дә Хызырға ышана инем, тик ул килә тип кенә оҙон бер көндө юғалтып булмай бит инде.

Орлоҡ участкаһына бригадирҙы эҙләп киттем.

Беренсе звено баҫыуында, Күк тейен тауы битендә, трактор бураҙна яра. Тракторсы — Сания апай, плугары — ун дүрт йәшлек Фәрит, һуғыш ваҡытында сихут сиренән үлгән Фәтҡулла ағайҙың улы. Үткән яҙ Фәрит менән ҡыҙғаныс та, мәрәкә лә бер хәл булғайны. Һаҙлыҡ яғында ер һөрәләр ине. Трактор гусеницаһының бер палецы

сығып йонсота икән. Сания апай тракторын туктата ла әлеге палецты кувалда менән һуға, туктата ла кувалда менән һуғып кире индерә икән. Бер шулай сыкканында, Фәрит кабинаға ингән дә рычагтар менән уйнай башлаған. Трактор капыл урынынан кузғалып китмәһенме! Сания апай ситкә тайшанып өлгөрә алмаған, бер аяғы гусеница аҫтында калған. «Ах, ен һуккыры малай! — тип һөрәнләй икән үҙе. — Аякты тапаттың бит». Фәрит кабинанан һикереп төшкән: «Сания апай, нишләнем мин, әрәм иттем, һындырҙым, йөрәгем минең, ак йөҙөм, шикләнмә, мин һиңә өйләнәм, мотлак өйләнәм», — тип һөйләнә икән һыктай-һыктай. «Ах, кейәү, имеш, берәү, маңка танау, — тип ыңғыраша икән Сания апай (уға егерме дүрт йәш), — бар, тиҙ генә тракторҙы артка бир!» Бәхеткә каршы, тупрак йомшак, һөрөлгән ер бит. Сания апайҙың аяғын гусеница тупракка һеңдергәнсе батырған ғына була, һөйәктәренә кағылмаған. Шулай ҙа ул байтак вакыт акһап йөрөнө. Ә малайҙар, малайҙар ғынамы, өлкәнерәктәр ҙә ошонан һуң Фәритте үсектереп бер булдылар: «Эй, кейәү, туйығыҙ касан?» Бына әле ул бик етди киәфәт менән һабанда китеп бара, оҙон һаплы кырғыс менән һабан төрәндәрен кыра. Һабан менән йәнәшә, алға нык эйелеп, сыбырткыһын һөйрәп — әйтерһең дә, тракторҙы һыҙырырға йыйына — салыш атлап, бригадир Камал ағай килә.

— Һин бында нишләп йөрөйһөң? — тип һораны ул аптырап, мине күргәс.

— Камал ағай, беҙҙең баҫыуға сәсерлек түгел, — тип һөрәнләнем мин, трактор тауышын еңергә тырышып. — Һөрөлмәй калған урындар күп, ташы ла байтак. Яңынан һөрөргә кәрәк.

— Нисек «яңынан һөрөргә?» — Ул тағы ла нығырак аптыраны. — Көҙҙән һөрҙөк, һөрөлдө тип районға сводка бирҙек. Икенсе тапкырға сводка бирергә бер кем дә рөхсәт итмәйәсәк.

— Ышанмаһағыҙ, комиссия ебәрегеҙ, — тип һөрәнләйем мин, уның артынан калмаҫка тырышып.

— Ниндәй комиссия тағы? — Ул капыл туктаны. — Мин һиңә нимә куштым? Бар, эшеңдә бул! Төш етеп килә, ә һин һаман йөрөйһөң. — Ул сыбырткыһы менән ергә һукты. — Марш бынан!

Ул, капыл кузғалып, трактор артынан атланы.

Ун алты йәшем менән барһам да, тормошта мин байтак нәмәне аңламай инем әле. Шуға ла бригадирҙың кылы-

ғына шундыҡ тигәндәй аҡлау таптым: ул баҫыуҙы күрмәне, баҫыуҙы күрмәгәс, һөрөлмәй ҡалған ерҙәрҙе лә, таштарҙы ла күрмәне, сөнки эше күплектән, ваҡыты юҡлыҡтан унда бара алманы, әгәр барһа, минең, яңынан һөрөргә кәрәк, тигән тәҡдимде, моғайын да, хуплар ине. Беҙ баҫыуҙы яңынан һөрөп сыҡһаҡ, унан маҡтау һүҙҙәре генә ишетәсәкбеҙ.

Шулай ҙа күңел һис тыныс түгел, баштан «сводка» тигән һүҙ сыҡмай ҙа ҡуя. Бер тапҡыр һөрөлдө тип сводка бирҙек, икенсегә бирергә беҙҙең хаҡыбыҙ юҡ, тине. Ул сводканы ниңә ҡабаттан биреп тороу кәрәклеген һис аңламайым, уны бит бөтөнләй бирмәҫкә лә мөмкин. Ғөмүмән, ул сводканың нимә икәненә мин төшөнөп тә етмәйем. Беҙҙең тормошта ҡағыҙҙың ниндәй ҙур роль уйнағанын мин аңлап етмәй инем әле.

— Камалға нимә, Камалға үгеҙ үлһә ит, арба ватылһа утын. Уға сводка бирергә генә булһын,— тине Ғәлиулла олатай, уға бригадир менән һөйләшеүемде әйткәс.— Һөрөлмәгән ерҙә иген үҫтереп булмай, ҡыҙым. Былайтайыҡ. Үрге яҡ ҡырҙағы насар һөрөлгән ер ун гектар самаһы булыр. Шуны кире һөрәйек. Ике көнлөк эш. Ә Мүкле һаҙ янында ер матур, уны тырмата башлайыҡ. Нисек тырматырға беләһеңме? Тәүҙә — арҡырыға, унан — буйға, унан йәнә — арҡырыға. Камал бәйләнһә, бөтәһен дә миңә япһар. Ғәлиулла олатай шундай кәңәш бирҙе, тиң.

Йәнә бер кәңәшләштек тә шундай ҡарарға килдек: Зәки менән Фәйзулла баҫыуҙың тау яғын һөрә башлай, Рәсим, Рәйес, Рәшиҙә, Фәриҙә тырматырға төшә. Сәсеүсе Әхмәҙулла, ат ҡараусылар Нәжип менән Нәсимә апай Аҡбай шишмәһенә бесәнгә бара. Беренсе звенонан бесәнгә өс арба китте, ә беҙгә бригадир бер ҡарт алашаны ғына бүлде. Уның менән күп ташып булмаҫ, шуға ла мин алдан уҡ, бесән запасын булдырыу маҡсатында, бер ыңғай өс ат, Венера ҡушаматлы үгеҙҙе ектерҙем. Ғәлиулла олатай беҙҙең өй ишаратын рәткә килтерәсәк, һалам менән башын ябасаҡ, Әхмәтйәр олатай, йылғаға төшөп, кисеүҙең ике яҡ ситенә таяҡтар ҡаҙап сығасаҡ — туғайлыҡты, күпергә тиклемге юлды һыу баҫҡас, соҡор-саҡырға төшөүҙән ҡурҡмай йөрөү мөмкинлеге асыла. Хәлиҙә апай аш-һыу менән була. Ә мин энекәшем Рауил, Ғаяз менән баҫыуҙан таш йыясаҡбыҙ.

Яҙғы болоттар бейек күк буйлап йөрөй. Болоттарҙан төшкән шәүлә юғалды, ҡояш ҡараны. Тегендә, йылға арьяғындағы күңелһеҙ ауылда, ҡышҡы бурандар ваҡытында

йән йылыһын, бала-саға ғүмерен һаҡлап ҡалған ваҡ өйҙәрҙең береһендә, кемдеңдер бәләкәй генә тәҙрәһе йәй көнөндәге һымаҡ ҡапыл ялтлап китте, баш осонда һабан турғайының һайрауы ишетелде.

Беҙ таш йыябыҙ. Ваҕыраҡтарын мин баҫыу ситенә ырғытып барам, эреләрен сығарып өйәм. Эйелгәндә күҙ алдарым ҡараңғыланып китә. Ғаяз менән Рауил — бәләкәй, яшыҡ, һәләмә кейемле малайҙар — баҫыу буйлап саҡ-саҡ ҡуҙғалып йөрөйҙәр, ауырлыҡ менән эйеләләр ҙә бер генә таш күтәреп яй ғына баҫыу ситенә сығалар, йөрөй-йөрөй эште бөтөнләй ташлап та ҡуялар. Күңелһеҙ генә берәй уйын уйнарға тотоналар — ҙур таш өҫтөнә һалынған бәләкәй ташты кем бәреп төшөрә ала? Мин уларҙы йәлләйем, уйындарын һис туҡтатҡым килмәй. Әйҙә, уйнаһындар, бала-саға бит әле. Беҙ йыш ҡына өй яғына күҙ һалабыҙ — ҡаҙан аҫтында ут янмаймы? Нишләйһең, асбыҙ. Ә ваҡыт, ҡарышҡан кеүек, ифрат яй үтә.

Баҫыуҙың өҫкө яғында, Мышағыр итәгендә, ҡышты бесән, һаламда ғына сыҡҡан арыҡ аттар ауырлыҡ менән һабан һөйрәй. Ҡабырға һөйәктәре беленеп торған һырттарында — күбекле тир, Зәкиҙең сыбыртҡы эҙҙәре. Мин аттарҙы яратам, уларҙы йәлләйем. Улар тормошто аңлай, кешеләрҙе ярата, уларға тыңлаусан хеҙмәт итә, түҙем рәүештә ауырлыҡтарҙы, бөтә эште уртаҡлаша. Зәкиҙең ҡарт туры бейәһе менән йәшерәк алаша бер мисәүгә егелгән. Алаша ялҡау һәм хәйләкәр. Сыбыртҡы уға күберәк эләгә, әммә постромкаларҙы бушатырға, бик тызыраймай ғына тартырға сосайып алған. Туры бейә быны һиҙә, шуға ла тештәрен ыржайтып йәшерәк иптәшен тешләргә уҡталып-уҡталып ҡуя, йәнәһе, ялҡауланма, ул һабанды мин генә тартырға тейешме ни? Саҡ ҡына аҫтараҡ Нәсимә апай һабаны менән булаша. Унын янына Мәүлит бара, хәҙер икәүләшеп йүнәтергә тотоналар. Мүкле һаҙға яҡынраҡ ерҙә малайҙар тырмата. Һәр үгеҙгә икешәр тырма тағылған. Рәйес менән Рәсим үгеҙҙәрҙе етәкләп бара, ҡыҙҙар, Рәшиҙә менән Фәриҙә, эләгә-йығыла, таяҡтары менән һелтәнә-һелтәнә яндарынан атлап, малҡайҙарҙы ҡыуалай. «Әминә апай, нишләйек, үгеҙ ятты ла тормай?» — тип ҡысҡыралар. Үҙем дә шәйләйем, үгеҙ ята, Рәшиҙә йүгәненән тарта, Рәсим таяҡ менән туҡмай, таяғы ҡыуа торған таяҡ түгел, ә йыуан, ботаҡлы ҡайын, етмәһә, йыуан яғы менән тондора. Һуҡҡан һайын меҫкен үгеҙ һелкенеп, ҡалҡынып китә. «Эй, туҡмама! — тип һөрәнләйем. — Саҡ ҡына ял итһен, шунан үҙе ҡалҡыныр ул».

Хәлиҙә апай йүгереп килгән. «Өйрә бешерәйемме, көлсәме?» — тип һорай. Елгәрелмәгән һолонан йөҙ грамм он. Өйрә бешерһә, көлсә булмай, көлсә бешерһә, ҡайнар өйрә ашай алмайбыҙ. «Өйрә бешер», — тип яуаплайым. Беренсе звеноның тағаны аҫтында күптән төтөн сыға, ә беҙ һаман эшләп йөрөйбөҙ. Ашыбыҙ ҙа бешмәгән. Ат менән үгеҙҙәрҙе туғарһаң да, ашарҙарына бер нәмә юҡ — бесәнгә киткәндәр һаман ҡайтып етә алмай.

Ҡояш төшләктән байтаҡ уҙғас ҡына туғарҙыҡ малдарҙы. Бесәнгә киткәндәрҙе көтөп ала алманыҡ. Әхмәтйәр олатайҙың йылға буйынан ҡайтыуына ла байтаҡ ваҡыт үтте. Ғәлиулла олатай өйҙө тәртипкә килтереп бөттө — эсен таҙартып сығарып, иҙәненә яңы һалам түшәне, башын япты. Хәлиҙә апай ҡаҙан тирәһендә өйөрөлә. Беҙҙең бар уй-хыялыбыҙ — һоло ононан бешерелгән ҡайнар өйрә. Уның тәмле еҫтәр сығарып быҡырлап ҡайнауынан минең ашҡаҙан һурылып-һурылып һыҙлай. Киндер тоҡсайҙарыбыҙҙан сеүәтә, ҡалаҡтарыбыҙҙы сығарып ергә йәйелгән бишмәттәребеҙ өҫтөнә һалабыҙ, һөтлө шешәләребеҙҙе, ҡайын туҙынан яһалған һауыттарға һалынған ҡатыҡты алға ҡуябыҙ ҙа уттан бик алыҫ китмәй түңәрәкләп ултырышабыҙ. Хәлиҙә апай сеүәтәләребеҙгә ҡайнар өйрә һала ғына башлағайны, атҡа атланып бригадир Камал ағай килеп етте, әйтерһең, ултырғаныбыҙҙы көтөп кенә торған. Моғайын да, беренсе звенола ашағандыр, беҙҙең янға йәнә берәй сеүәтә өйрәгә өмөт итеп килеүелер. Ә уның өлөшө бында түгел, тегендә. Ул атынан төштө лә сыбыртҡыһын һөйрәтеп беҙҙең янға килде.

— Нишләп улай бик һуң ашайһығыҙ? — тип һораны ул.

— Бесәнгә киткәндәрҙе көткәйнек. Аттарға барыбер ашарҙарына юҡ бит.

Бригадир аттарҙы, үгеҙҙәрҙе ҡарап сыҡты, өс арбаны, бер билле арбаны тапмағас, ҡапыл ҡысҡырырға кереште:

— Эш аттарын бесәнгә егергә һиңә кем ҡушты? Һин нишләп баш-баштаҡланаһың, нишләп миңә әйтмәй эшләйһең? Бесәнгә бит ат бүленде, шуны ебәр. Эш аттары ял итергә тейеш!

Ололар ҡысҡырғанда мин гел юғалып ҡалам, үҙемдекен аңлатырға йәки аҡланырға тейешле һүҙ таба алмайым да ҡуям. Бына әле лә күпмелер ваҡыт телдән яҙып торҙом, унан ҡыйыуһыҙ ғына:

— Ас көйө улар нисек ял итһен? — тинем.

Камал ағай тишерҙәй булып ҡарай, йоҡа ирендәрен асыулы ҡыҫып, яңаҡ мускулдарын уйнатып миңә йәнә

асыулы һүҙҙәр әйтергә йыйына. Тап шул мәлдә Хәлиҙә апай, ашнаҡсы, бына маладис, ҡунаҡсыл хужабикә тауышы менән иркә генә итеп:

— Камал ағай, әйҙә ултыр, өйрә һалам, — тип һүҙ ҡыҫтыра.

Бригадирҙың йөҙө йомшара төшә, үҙенең бырау һымаҡ ҡарашын баҫыу яғына күсерә, минең ҡылыҡ менән ризалашҡан һымаҡ, хәҙер инде тауышын күтәрмәй генә, әйтеп ҡуя:

— Ҡара уны, ҡыҙыҡай, планды үтәмәһәң, икебеҙгә яуап бирергә тура киләсәк.

Беҙ бөтәбеҙ ҙә бергә, бер ғаилә булып түңәрәк яһап ултырабыҙ, тик Әхмәтйәр олатай, Ҡарун ҡушаматлы ҡарт, сеүәтәһен ала ла ситкә китә һәм беҙгә арҡаһын ҡуйып ултыра.

— Әминә, ҡара, ҡарттың усында көлсә бар, — тип шыбырлай Зәки минең ҡолаҡҡа.

Ашағансы, бесәндән ҡайтҡандарҙың арбаларын бушатҡансы, аттарҙы, үгеҙҙәрҙе ашатҡансы кис булды ла ҡуйҙы. Ҡарттар менән бәләкәйҙәрҙе ҡайтарып ебәрҙем — яланда ҡунырға һыуыҡ ине әле. Өйҙә Рауил энем менән мин, ат ҡараусы Нәжип, Фәүзиә апай ҡалдыҡ. Пальто, бишмәттәр менән ябынып һалам өҫтөнә теҙелешеп ятыуыбыҙ булды, арыған малайҙар йоҡлап та китте. Беҙ Фәүзиә апай менән бер аҙ шыбырлаштыҡ, шунан үҙебеҙ ҙә һиҙмәҫтән әүен баҙарына киткәнбеҙ. Мин: «Аллаға шөкөр, сәсеүҙе яҡшы ғына башлап ебәрҙек, Хыҙыр беҙҙең янға килмәне, бәләҡаза килтермәне, бригадир Камал ағай ғына ҡысҡырынды», — тип саҡ уйлап өлгөрҙөм...

## 4

Бер аҙҙан йылы көндәр килде, тауҙарҙа ҡар ирей башланы, соҡор-саҡырҙар, йәйҙәрен бөтөнләй ҡорой торған бәләкәй шишмә-йылғасыҡ үҙәндәре буйлап түбәнләскә һыуҙар аҡты. Тыныс, йәйге селләләрҙә тауыҡ кисеп сығырлыҡ беҙҙең Яйыҡ бер нисә көн эсендә танымаҫлыҡ булып үҙгәрҙе лә ҡуйҙы. Баҫыуҙарҙағы ҡара тупраҡты йыуыуҙан буръяҡланған йылға боҙ, ағас тамырҙары, һалам, башҡа сүп-сар менән тулышып тәүҙә яр тиңенән аҡты, унан ҡапыл ташып китте, тирә-яҡтағы туғайға йәйелде, был яҡтан картуф баҡсаларын баҫты һәм ҙур

йылға һымаҡ ағырға тотондо. Юлдың ике яғына ҡағылған таяҡтарҙың бер нисәһе генә һерәйеп ҡалды, ә йылға урта-һында ҡалған күпер батҡан карап палубаһын хәтерләтте.

Беҙ ауылдан ҡырҡылып ҡалдыҡ, һөҙөмтәлә барыбыҙ ҙа ҡуна ятып эшләй башланыҡ. Тик бригадир Камал ағай ғына сводка бирергә ауылға ҡайтып йөрөнө. Ул юл ыңғайы сәсеүселәр өсөн һөт, ҡатыҡ та килтерә ине. Бригадир иртүк, төнгө һалҡынлыҡ арҡаһында һыу бер аҙ ҡайтҡан мәлдә, йөрөй. Арбаһына баҫа, сөнки арбаға һыу сыға, Әхмәтйәр олатай ҡаҙап сыҡҡан таяҡтарға ориентир тота. Ә Мәрхәбә соҡоро тип аталған соҡор тирәһенә ҡуйылған-дарын ағым йолҡоп алып киткән. Әүәле, һуғышҡа тиклем әле, унда Ғәлимнур ҡаҙаҡтың ҡатыны Мәрхәбә батып үлгәйне — шуның өсөн юл янындағы был шомло урын Мәрхәбә соҡоро тип атала.

Ғәлимнур ҡаҙаҡ түгел ине, әлбиттә: оҙаҡ йылдар ҡаҙаҡ далаларында йәшәгәнлектән, башҡорт һүҙҙәрен шул тел һүҙҙәре менән бутап һөйләшеү ғәҙәте бар ине. Бер нәмәгә лә иҫе китмәй торған вайымһыҙыраҡ бәндә ине шикелле. Бер мәл ҡатыны, улы менән Тирлән баҙарына барған был. Барған, «знакум»ында ҡунаҡ булған арала көслө ямғыр яуып үтеп, Йайыҡ ярҙарынан сыға, туғайлыҡты һыу баҫа. Ҡайтып килгәндә, Ҡайын сауҡалығында быға, йылға ныҡ ташты, йөрөмә, көт иртәнсәккә тиклем, тиҙәр. Ә ул, герой, тыңламаған, төнгә ҡарай Йайыҡты сығырға булған. Йылғаға еткәс, үҙе атҡа атланған, улын, йәбешеп ултыр, тип алдына ултыртҡан, Мәрхәбәһе арбала ҡалған. Юл күрһәтеүсе таяҡтар юҡ. Күперҙе уҙғас, Ғәлимнур юлды юғалтҡан бит, саҡ ҡына уңға тартыуы була, соҡорға эләгә: һыу арбаға сыҡҡан, ат йөҙә башлаған, Ғәлимнур ҡатынына, ныҡ ул-тыр, тип һөрәнләгән дә атын ҡыуырға керешкән, йәнәһе, тиҙ генә сығып етә. Әммә алғы күсәр ысҡынған, арбаның артҡы яғы өйөрөлмәккә эләккән дә аҫҡа, сөңгөлгә төшөп киткән. Ярға сыҡҡан Ғәлимнур һыҡтай икән: «Ай, Мәрхә-бәжан, йөрәгем минең, һыуға батып үлергә яҙмышың ҡушҡандыр инде!..»

Өс көн тигәндә беҙ ун биш гектарға яҡын ерҙе яңынан һөрҙөк, дүрт һабан менән ҡалдау ер күтәрҙек. Беренсе зве-нонан артта ҡалғанлыҡтан — уларҙың тракторҙары бар, дөрөҫ, һуңынан ул боҙолдо, бына икенсе көн инде Сания апай үҙенең «кейәүе» Фәрит менән моторҙа ҡаҙына — мин Әхмәҙуллаға сәсеүҙә йөрөгән аттарҙы ла һабанға егергә ҡуштым. Бригадир быны белһә лә, өндәшмәне. Ғөмүмән,

ул был арала әрләшмәй, ҡысҡырмай, күберәк орлоҡ участкаһына йөрөй, икенсе сеүәтә өйрә ашарға ла, өйҙә йоҡларға ғына килә. Малайҙар үгеҙ егеп тырмата. Уларҙың елгә ярғыланған ирендәре, тиреһе һыҙырылған танауҙары шау ҡором. Эш шунда: баҫыуҙың теге яғында, юл буйлап, былтыр бойҙай сәселгәйне — ул тар ғына һыҙат булып Мүкле һаҙға ҡәҙәр һуҙыла — шуның һаламын үртәнеләр. Урылған ҡырҙа башаҡтар ҡалған. Ул башаҡтар күмерләнеп, орлоҡтары янып-бешеп сыҡҡан, малайҙар баҫыу осона сығалар ҙа, үгеҙҙәрен ташлап, һалам өйөмдәренән ашлыҡ йыялар, устарында ыуып ҡурмас урынына ашайҙар. Мин уларҙың был ҡылығын күреп торам, тик тыймайым, сөнки улар ас, шыйыҡ өйрә менән генә тамаҡтары туймай.

Тырма артынан Әхмәтйәр олатай менән Ғәлиулла олатайҙар күҙ-ҡолаҡ. Әхмәтйәр олатай — аҫҡы, Ғәлиулла олатай үрге яҡта, Мышағыр битендә, тырмаларҙы сүп-сарҙан таҙартып ебәреп торалар. Мин иртәнсәктән бирле Фәүзиә апайға таш йыйыуҙа ярҙамлаштым. Унан һөрөүселәр янына барып һөрөү сифатын тикшерҙем, Мүкле һаҙға, тырматҡан ергә, киттем. Күрәм: үгеҙҙәр тора, ә малайҙар янған һалам араһында ҡурмас йыйып йөрөй. Әхмәтйәр олатай һүгенә, күҙҙәре йәшләнә, кәзә һаҡалы һелкенә.

— Тыңламайҙар, маңҡалар, дармоедтар!

— Малайҙар, ҡыҙҙар, йәгеҙ әле эшкә тотоноғоҙ!

— Әминә апай, үгеҙҙәр арыны.

Йөҙ-биттәре ҡором, тештәре генә ялтырай.

Ҡарт оҙаҡ ҡына итеп миңә ҡарап тора һәм ҡапыл:

— Һин кем ҡыҙы булаһың? — тип һорай.

— Миңлебайҙың, — тип яуаплайым. Ә үҙем, минең кем ҡыҙы икәнде һаман белмәйме икән ни, тип уйлайым.

— Миңлебайҙың? Яҡшы кеше ине. Егәрле булды. Йәшләй үлде, — ҡарттың йөҙө яҡтыра. — Ана, күрәһеңме, анауында атайыңдың ере ине, эргәһендә минеке. Көмөшәй йылғаһы буйлап бесән саптыҡ. Нисәнсе йыл ине икән, иҫләмәйем дә инде, колхоз бар ине, ана тегендә бесән йыйбыҙ, һин — имсәк балаһы, ҡайын ышығында сәңгелдәктә ятаһың. Инәйең, мәрхүмә, һине имеҙергә китте. Барып етте лә ҡысҡырып ебәрҙе. Атайың менән эргәһенә йүгерешеп барҙыҡ, нимә булды, ниңә ҡысҡыраһың, тип һорайбыҙ. Ә ул һаман ҡысҡыра, ҡулы менән һинең яҡҡа күрһәтә. Ҡайынға яҡыныраҡ барабыҙ, унда һинең өҫтөңдә тәгәрмәс һымаҡ бөгәрләнеп йылан ята. Атайың тayaҡҡа йәбеште, һуғырға йыйына, ә мин, теймә, тим, ҡурҡытаһың,

ҡурҡҡас, баланы сағыуы бар, ҡайын күләгәһе сәңгелдәккә төшһә, ул үҙе китәсәк, тим. Шулай килеп сыҡты ла: күләгә һинең өҫтөңә ятыу менән, йылан ҡыймылданы, яй ғына шыуышып ергә төштө. Бына шулай итеп мин һине, учетчик ҡыҙым, үлемдән ҡотҡарҙым.

Сәйер ҡарт инде был Ҡарун бабай. Йә көндәр буйы бер һүҙ әйтмәй йөрөй, йә әрләшә, йә тота ла тормошонан кеше аптырарлыҡ хәлдәр һөйләп ҡуя...

Баҫыуҙың үрге осона киттек. Малайҙарға үгеҙҙәрен ҡыуышам. Мишка ҡушаматлы йәш ерән үгеҙ йәнә һөрөлгән ер өҫтөнә һуйлайҙы. Күпме ҡыуһаң да тораһы юҡ.

— Әминә апай, мин уны нисек торғоҙорға икәнен беләм, — ти сос, төрлө нәмә уйлап сығарырға әүәҫ Рәсим.

Ятҡан Мишканың томшоғо алдына ғына ул соҡор ҡаҙҙы, унан дүртәүләп үгеҙҙең мөгөҙҙәренән тотоп башын аҫҡа, шул соҡорға, баҫтылар, аяҡтары менән үгеҙҙең танау тирәһенә йомшаҡ тупраҡ өйҙөләр ҙә тапанылар. Меҫкен үгеҙ, тын ала алмағас, башын һелкте, оло тауыш менән үпкәһендәге һауаны тышҡа бөрктө лә һикереп тигәндәй тороп аяғына баҫты.

Баҫыу ситенә саҡ барып еттем. Унда Ғәлиулла олатай беҙҙе көтөп тора ине. Мамыҡ бишмәтен сисеп ташлаған, бүреген дә һалған, башын ҡояшта ҡыҙҙырып баҫып тора. Ул бер нисә көн инде ҡарышмай йөрөй, яңаҡтарына, танау аҫтына, эйәгенә һирәк шырт аҡ йөндәр сыҡҡан.

— Ай, малайҙар, маладистарһығыҙ ҙа инде! — тип йылмайып ҡаршы алды ул беҙҙе. Тырманы күтәреп сүп-сарын алды ла уны үҙе йыйған өйөмгә алып барып һалды. Малайҙар, ҡыҙҙар үгеҙҙәрҙе түбәнгә алып төшөп киткәс, бураҙна ситенә бишмәтен йәйеп ултырҙы ла, башлаған хәбәрен дауам иткәндәй, үҙ алдына һөйләнде. — Балалар шул әле, уйнарға кәрәк, ә улар эшләй, уйнарға ваҡыт юҡ, арыйҙар, былай ҙа маладистар инде, тырышалар, тыңлайҙар. Арыһағыҙ йыр йырлағыҙ, йыр менән еңелерәк була, тим. Эх, һуғыш булмаһа, уларҙы эшләргә мәжбүр итер инекме ни?

— Һуғыш булмаһа, бабай, һин үҙең дә эшләмәҫ инең.

— Минме? Юҡ, һикһәнде ҡыуһам да, эшһеҙ ултыра алмайым. Үлемде көтөп ултырайыммы ни? Күңел ҡартаймай бит, аяҡтар ғына ҡартая. Тауҙар, битләүҙәр буйлап тай кеүек сабып китер инем, аяҡтар ғына ауырта. Һуғыштан һуң тормош еңеләйер, икмәкте лә туйғансы ашарбыҙ. Ҡай саҡ шулай тип тә уйлап ҡуям: мейестән генә сыҡҡан

икмәкте күкрәккә терәп ҡырҡ та ҡайырып тотоп туйғансы бер аша ине. Ул саҡта үлергә лә мөмкин...

Оҙаҡ, ай, оҙаҡ әле төшкә тиклем! Ҡояш ифрат яй күтәрелә, әйтерһең дә, күк баҫыуы буйлап ауыр тырма һөйрәп бара. Беҙҙе аслыҡ ҡырҡа, ул йөрәктәрҙә балалыҡ ҡыуаныстарын бөтөрә, яҙғы ҡояш нурҙары аҫтындағы серле, мөғжизә тулы яландар төҫһөҙ, моңһоҙ күренә башлай. Беҙ бала, һаман бала бит әле, беҙгә туҡлыҡлы ризыҡ кәрәк, беҙ итле аш еҫен, мейестән сыҡҡан икмәк тәмен күптән онотҡанбыҙ. Шуныһына иғтибар иттем: тамаҡ мәсьәләһендә малайҙар ҡыҙҙарға ҡарағанда түҙемһеҙерәк икән. Улар гел генә ашау тураһында уйлай, һүҙ-хәбәрҙәре лә шул хаҡта ғына. Төшкөһөн ашағандан һуң аттарын еккән саҡта Зәки менән Фәйзулла бер үк нәмә тураһында бәхәсләшә: Әхмәтйәр олатай өйрәле сеүәтәһен тотоп башҡаларҙан ситкә киткәндә йәшереп икмәк ашаймы, юҡмы? Зәки, ашағанын бер нисә мәртәбә күрҙем, тип ант итә; Фәйзулла, уның бер ниндәй ҙә икмәге юҡ, бармаҡ араларынан икмәк түгел, кукиш күренә, тип иҫбатлай. Ҡай саҡ Хәлиҙә апай өйрә урынына көлсә бешерә. Көлсәләре ваҡ, сынаяҡ ҙурлығында, ҡағыҙ ҡалынлығында йоҡа була. Ҡатыҡ йәки һөт менән бара инде, ә ҡайһы берәүҙәрҙең бит һөтө лә, ҡатығы ла юҡ, ундайҙар һыу менән ҡәнәғәтләнә. Туймағанлыҡтан беҙ яйман, йоҡоло, төшкө аштан һуң башыбыҙ ергә тейеүе була, йоҡлап та китәбеҙ һәм аттар, үгеҙҙәр ашағансы ҡояш нурҙары аҫтында ҡаты серемгә талабыҙ. Бәләкәйҙәр генә йоҡламай, улар әле һөрөлмәгән баҫыуға ҡурмас ашарға йәки сауҡалыҡҡа ҡайын һуты эсергә китә. Ер ысын мәғәнәһендә байлыҡ, муллыҡ биреүсе; ҡояш саҡ ҡына йылыттымы, унда тормош йәнләнә, тормош башлана, тәндәге тамырҙарҙан аҡҡан ҡан кеүек, ҡайын тәненә шәкәрле тәмле һут тулыша. Оҙаҡламай ташлы тау итәктәрендә ҡырағай һуған, ҡырағай һарымһаҡ, ашарға яраған башҡа үләндәр баш ҡалҡытасаҡ.

## 5

Көн асыҡ һәм һалҡынса булып тыуҙы. Ҡояш алыҫ тауҙар артынан ҡалҡыу менән, тирә-яҡ күҙ ҡамаштырғыс бер яҡтылыҡҡа сорналды, әйтерһең дә, ул янды, үҙендәге бөтә нурҙы күктең көнсығыш өлөшөнә һипте. Көнсығышта тауҙың көнбайыш биттәре күләгәлә. Был күләгә баҫыу-

ҙар өҫтөнә төшә, шуға ла улар ҡара булып күренә. Күк тейен тауынан төшкән күләгә юлға тиклем йәйелгән, беҙҙең өйҙән, аттарҙан, үгеҙҙәрҙән, арбаларҙан барлыҡҡа килгән күләгә Мышағыр тауына тиклем етә яҙған. Ниндәйҙер бәхет килеү, бәхет яҡынлашыу, әллә байрам көтөү тойғоһонан татлы итеп йөрәк һикергеләп ҡуя...

Малайҙарҙы көскә ҡалҡыттым, һис торғолары килмәй. Сыйылдайҙар, тибешәләр, шаяралар. Йәл дә, нишләйһең, өҫтәрендәге тундарҙы, пальтоларҙы, одеялдарҙы тартырға тура килә.

— Эй, маңҡалар, торoғоҙ әле! — ти Әхмәтйәр олатай.

— Малайҙар, малайҙар, Аллаһы тәғәлә бәхетте иртәнсәк кенә тарата, йоҡлап ҡалмағыҙ, — ти иркә генә итеп Ғәлиулла олатай.

Беҙ бөгөн сәсеүгә төшәсәкбеҙ. Кисә Ғәлиулла олатай усына бер төйөн тупраҡ алды ла, оҙаҡ ҡарап торҙо, унан ҡулын күкрәге тәңгәленә килтерҙе, шунан төйөндө ергә төшөрөп ебәрҙе. Ул ватылып таралып китте.

— Ер өлгөргән, — тине ул ниндәйҙер бер ҡәнәғәтлек менән, — Ҡағиҙә шулай: ер йылынырға, әммә ныҡ кибеп тә китергә тейеш түгел.

Беренсе орлоҡ участкаһында сәсәләр ине инде. Кисә Камал ағай миңә былай тип асыуланды: «Артта ҡалаһың, Әминә, планды үтәмәйһең». Улар бит һөрөлмәй ҡалған ерен яңынан һөрмәне, унан килеп тракторҙары ла бар, аттары ла көр, кешеләре лә өлкән, беҙҙәге кеүек бала-саға түгел. Ниңә бригадир беҙҙе улар менән сағыштыра икән?

Хәлиҙә апай бешергән һоло өйрәһен эстек тә эшкә йыйындыҡ. Әхмәҙулла аттарҙы сәскескә екте, мин орлоҡ үлсәп (үлсәгес менән орлоҡто бер аҙна элек килтереп ҡуйғайныҡ) — бер гектарға ике йөҙ илле килограмм, ә орлоҡ участкаһына ике килограмға күберәк, орлоҡто сәскескә бушатып, баҫыуға, Мүкле һаҙ яғына, ҡуҙғалдыҡ. Тыр-пыр, шаҡ-шоҡ — сәскесебеҙ эшләмәй, сәсмәй, сәсә торған катушкаһы әйләнмәй — бер бөртөк орлоҡ ергә төшһәсе исмаһам! Әхмәҙулла нимәнелер бора, сүкеш менән һуға, игәү менән шестерняларҙы игәргә тотондо. Төшкә тиклем маташтыҡ, сәскесте барыбер рәтләп булманы. Ашар алдынан Камал ағай килде лә, атынан да төшмәй, ҡысҡырынырға тотондо:

— Нишләп тораһығыҙ?

— Сәскес эшләмәй.

— Ваттығыҙмы, йүнһеҙҙәр! — Ул зәһәр ҡараштарын миңә ҡаҙаны. — Һеҙ бит ашарға ла, йоҡларға ғына беләһегеҙ.

— Беҙ ватманыҡ, — тинем мин һәр ваҡыттағыса ҡыйыуһыҙ ғына. — Уны шулай боҙоҡ көйө килтергәндәр.

— Нисек килтергәндәрен белмәйем, сәскес эшләһен, кискә тиклем ошо участка сәселгән булһын!

Атының йылтырап торған һимеҙ осаһына ҡамсыһын тамыҙҙы ла бригадир беренсе звено участкаһына китте. Ул көн беҙҙең янға бүтән килмәне, хатта икенсе сеүәтә өйрәне лә онотто.

— Маңҡалар, — тип йәнә һуҡрана Әхмәтйәр олатай, үҙе эстән ҡыуанған да һымаҡ. — Әйттем мин һеҙгә: йома көн эш башламағыҙ, тинем, уңмаясаҡбыҙ, тинем. Бына сәскесегеҙ ватылды.

— Ғәлиулла бабай, нишләйбеҙ? — тип ҡартҡа мөрәжәғәт итәм.

— Белмәйем шул, ҡыҙым. Ауылға, Сергей ҡартҡа, барырға кәрәктер. Йүнәтә алмаҫмы икән? Эшкә индерә алмаһа, ҡул менән сәсәбеҙ инде.

— Ҡул менән сәсә белмәйбеҙ бит.

— Нишләйһең, беҙгә, ҡарттарға, егелергә тура киләсәк. Әхмәтйәр ҡарт Мүкле һаҙҙа нисек сәскәнен, моғайын, онотмағандыр. Тик шуныһы: тырыз юҡ, — ул тынып торҙо, уйланды, унан өҫтәне. — Бына нимә, ҡыҙым, һин ауылға ҡайт та тимерлеккә бар, Сергей ҡартҡа әйт: сәскес эшләмәй, тиң, төҙәтә алмайым, тиһә, килешләй ике тас ал. Тырыз хәҙер береһендә лә юҡ, шуға тастың ҡолаҡтарына еп бәйләрбеҙ ҙә муйынға аҫырбыҙ.

Мин бесән ташырға тәғәйенләнгән ҡарт ҡоланы мендем дә ауылға киттем. Шөрләтә — көн уртаһында һыуҙың иң ташҡан мәле. Күпергә тиклем үк һыу атымдың эсенә етте, ә бында, һыу баҫҡан туғайҙа, ағым ул ҡәҙәре көслө түгел, күперҙең теге яғында, асыҡлыҡта, ағым шәп, етмәһә, ярҙарға ҡуйылған таяҡтарҙы ла ташҡын алып киткән. Мәрхәбә соҡорона эләктеңме — бөттөң. Ат һыу кисеп бара, ҡолаҡтарын ҡайсылай, атлауы ла һаҡ, әйтерһең дә, аяҡтары менән ерҙе һәрмәп-һәрмәп баҫа. Уға йылғаның һәр соҡоро, һәр ташы таныш, сөнки ул был донъяла күп йәшәгән, был кисеүҙән күп тапҡырҙар үткән, йәш ҡыҙҙы алып сығып барғанын да аңлайҙыр был аҡыллы йән эйәһе, тип уйлайым.

Тирә-яҡҡа ҡарауы ҡурҡыныс. Бурьяҡ ташҡын минең аяҡ аҫтынан ғына аға, ат тирәһендә өйөрөлә, ҡайнай, беҙҙе

уңға, соҡорға, һөйрәй. Бына Мәрхәбә соҡоро... Минең баш әйләнә, йөрәк күкрәктән сығырҙай булып тибә. Юҡ, был мәхшәргә ҡарамауың хәйерлерәк. Алға, ауылға, остағы Әбдрәшитовтар өйөнә, текәләм. Уф-ф, ҡурҡыныс урынды үттек, ниһайәт. Беҙ — ярҙа.

Ауыл аша үтеп, тимерлеккә киләм. Сергей олатай, уның ярҙамсыһы Әмирхан ағай ҡыҙҙырылған тимер киҫәген сүкейҙәр. Сергей олатай ялтырап торған күн алъяпҡыста, бейәләй кейеп ҙур ҡыҫҡыс менән һандал өҫтөнә тимерҙе һалған да бәләкәй сүкеш менән әлеге тимергә тондора. Мәрәкә инде ҡарап тороуы. Сергей олатай һыуынған тимер киҫәген янып ятҡан күмерҙәр араһына тыҡты. Әмирхан ағай күрек менән уны өрҙөртә башланы.

— Атыңды дағалатырға килтерҙеңме? — тине ҡарт тимерсе, мине шәйләп.

— Юҡ, Сергей бабай, мин дүртенсе бригаданан. Итек юғалған баҫыуҙа сәсәбеҙ, беҙҙең сәскес эшләмәй...

— Эшләмәйәсәк тә! — тип гөрөлдәп ебәрҙе ҡарт тимерсе, минең һөйләп бөткәнде лә көтмәй. — Мин бит әйттем Камалға, сәскес боҙоҡ, тип. Ә ул тыңларға ла теләмәне, баҫыуға илтергә ҡушты. Баш менән уйларға ине әҙерәк. Мин председателгә лә әйттем, әйҙә, мәйтәм, боҙоҡ сәскесте списать итәйек тә икәүһенән берәүҙе йыяйыҡ, тинем. Техниканы ватырға хаҡыбыҙ юҡ, тине. Ана, хәҙер икеһе лә боҙоҡ ултыра. Шуларҙы туңбаш тимә инде. Юҡ, мин шестерняны эшләй алмайым. Шул үк хәбәрҙе заседаниела ла туҡыным, ҡолаҡ һалманылар. Так что, ҡыҙым, был мәсьәлә менән минең янға зря килгәнһең. Председателгә бар, боҙоҡ сәскесте нисек ремонтларға икәнен ул уйлаһын.

Идарала мин сатан Зиннурҙан башҡа кешене осратманым. Председатель Ислам ағай менән парторг Хәйбулла ағай бригадаларға киткәйне.

Бер тасты үҙебеҙҙән алдым, икенсеһен — Ғәлиулла олатайҙың әбейенән һәм, йәнә ҡурҡа-ҡурҡа, эргәмдә ҡайнаған буръяҡ һыуға ҡарамаҫҡа тырышып, теге яҡҡа сыҡтым. Әхмәҙулла һаман сәскес менән маташа ине.

Уйлаштыҡ-уйлаштыҡ та шундай ҡарарға килдек: Ғәлиулла, Сергей олатайҙар ҡул менән сәсә, Фәүзиә апай тырмаларға күҙ-ҡолаҡ булып йөрөй, сәсеүсе Әхмәҙулла әлеге шул боҙоҡ сәскесе менән маташыуын дауам итһен, бәлки, төҙәтә алыр, мин ҡарттарға орлоҡ ташып торам. Хәлиҙә апай менән ат ҡараусы Нәжип эштәре бик тығыҙ булмағанда баҫыуҙың өҫкө яҡ ситендә таш йыясаҡ.

Берәйһе ҡәнәғәтһеҙлек белдерһәме, ҡартлығына, ауырыуына һылтанһамы! Дөрөҫөн әйткәндә, Әхмәтйәр олатай ҡул менән сәсеүгә ҡаршы төшөр, мин ҡарт инде, үҙемдекен етерлек сәстем, етте, тип кәзәләнер тип көткәйнем. Ғәлиулла олатай, уның ике туған ағаһы, аяҡтары һыҙлаған оло кеше, баш тартманы ғына түгел — был эште үҙе тәҡдим итте. Әхмәтйәр олатай, ғәҙәтенсә, һуҡранып алды:

— Эй, маңҡалар, ҡарттар булмаһа, нишләр инегеҙ икән, ә?

Орлоҡ игене тултырылған тоҡтарҙы баҫыуҙың теге ситенә, Мүкле һаҙ яғына, алып барып ҡуйҙыҡ. Ҡарттар тастың тотҡаларына еп бәйләнеләр ҙә яурындары аша аҫып, алдарына орлоҡ һибә-һибә баҫыу буйлап атлап киттеләр. Мин тоҡтан биҙрәгә орлоҡ бушатып алам да ҡарттар янына йүгерәм. Әле — берәһенә, әле — икенсеһенә. Саҡ өлгөрәм. Берәһенә алып барһаң, икенсеһенең тасы бушай, уныһына һалһаң, тәүгеһе ашыҡтыра. Баҫыу буйлап үҙҙәренә орлоҡ алып йөрөү уңайһыҙ, ваҡытты ла күп юғалтырҙар, тиҙ арырҙар ҙа ине.

Орлоҡтарҙың нисек ятҡанын ҡарайым. Һәйбәт, тигеҙ төшкәндәр, буш урындар юҡ тиерлек — ҡарттар эште белә шул. Тәжрибә. Әхмәтйәр олатай — ҡарун булһа ла, уның тураһында әллә ниндәй насар хәбәрҙәр һөйләһәләр ҙә — эшкә бик тә тилбер, һәр нәмәне белеп башҡара. Ғәлиулла олатай оҙаҡламай ҡышҡы бүркен сисеп ташланы, түбәтәйҙә ҡалды, үҙе эстән генә нимәлер көйләп тә йөрөй. Шуныһы: ауыртҡан аяғына аҡһай. Әхмәтйәр олатай бишмәтен һалды, ә бесәй тиреһенән тегелгән бүреген сисмәне. Кәзә һаҡаллы йөҙө ҡырыҫ, күҙҙәренән туҡтауһыҙ йәш аға. Беҙҙән йыраҡ түгел, Сурағол юлы буйында, малайҙар тырматып йөрөй. Йөҙҙәре ҡором — ҡамыл араһында ҡурмас эҙләргә лә өлгөргәндәр, тимәк.

Тоҡтар бушаны, мин ҡарттарҙың тасына һуңғы ике биҙрәне бушаттым да яңы тоҡтар килтереү өсөн өйгә киттем. Әхмәҙулла һаман сәскес менән маташа ине.

## 6

Бесәнебеҙ бөттө. Ҡарт алашаға күп итеп тейәп булмай шул. Ҙур арбаны яртылаш ҡына тейәйһең, ул шуны ла саҡ һөйрәй. Нишләйек икән, тип Нәсимә апай менән кәңәшләштем. Тыңланы ла ҡолағыма шыбырлай:

— Камалдың аты буш тора бит, үҙе йоҡлағас, шуны егәйек тә китәйек.

Шулай килештек тә. Йоҡларға ятҡан булдыҡ та, бригадир хырылдай башлағас, шым ғына тороп тышҡа сыҡтыҡ, арбаға атын егеп, Аҡбай шишмәһенә бесәнгә киттек.

Айлы май кисе. Ай яҡтыһында күптән таныш тауҙар нисектер икенсе, яңыса — серле һәм өнһеҙ күренә. Шомло ла. Тулы ай беҙҙең ерҙәге тормошҡа йәлләп ҡарай, уның яҡты һирпкән дүңгәләге эсендә яурындарына көйәнтә һалған ҡыҙ һыны төҫмөрләнә, һылыу Бибисараның емерек баҫмаға баҫып һыу алғаны, баҫма ватылып китеп, уның һыуға батыуы тураһында йырланған һағышлы бер йыр иҫкә төшә. Айлы төндә төпһөҙ ҡараңғылыҡҡа, тауҙар һыҙатына, болоттарға ҡараһаң, ниңәлер күңел тулып, йырлағы йәки илағы килә...

— Нәсимә апай, әйҙә йырлайыҡ, — тим мин.

— Йыраҡҡараҡ китәйек, йә Камал ишетер.

Нәсимә апайға егерме йәш. Ул тулы кәүҙәле, оҙон, ирҙәр һымаҡ көслө ҡыҙ. Киң йомро йөҙө алһыуланып тора, ошо алһыулығы өсөн уны Ҡыҙыл Нәсимә тип йөрөтәләр. Ә нисек матур итеп йырлай ул!

Өйҙән саҡрым самаһы киткәс, тауҙар яғына йөҙ борҙоҡ. Нәсимә апай йыр башланы. Һағышлы оҙон көй «Зарыҡай»ҙы йырланы. Зарыҡай исемле егет, үҙен баҫтырыусы казактар отрядынан ҡасып, Ирәмәл менән Әүәләк тауҙарын биш мәртәбә әйләнеп сыға, атынан бишмәте төшөп ҡалғас шуны алырға булып, атын туҡтата. Ергә төшһә, быны казактар ҡыуып етә лә ҡылыс менән тураҡлап үлтерә. Мин, ниңә ул бишмәт өсөн туҡтаған инде, тип һорарға йыйынғайным ғына, Нәсимә апай «Азамат»ты башланы, унан «Зөлхизә»не. Ул йырҙар миңә лә таныш, шуға Нәсимә апайға ҡушылдым.

Мине күптән, бала саҡтан бирле, һағышлы башҡорт йырҙарының тәрәнлеге тетрәндерә, улар миңә ҡалһа, — йыр-һыҡтау, йыр-әсенеү, яуапһыҙ мөхәббәт, йәш ҡыҙҙың яратмаған кешегә көсләп кейәүгә бирелеүе, ҡайғынан һарғайыуы, ахыр сиктә һәләк булыуы, гүзәл тыуған яҡ менән айырылышыу тарихы...

Беҙ йырлайбыҙ, тәрән тынлыҡҡа сумған дөм ҡараңғы тирә-йүндә беҙҙең генә тауыш яңғырай, уны шомло тауҙар, шомло ҡара урмандар, ялан-баҫыуҙар, юл ситендәге ҡыуаҡлыҡтар ғына тыңлай.

— Эх, Әминә һеңлем! — тип тәрән көрһөнә Нәсимә апай, йырын туҡтатып. — Беҙ ҡайғы-хәсрәт өсөн генә тыу-

ғанбыҙ, тип уйлайбыҙ, ә донъяла бит ошондай гүзәл төндәр ҙә бар. Кем белә, берәй заман бәхет беҙгә лә килер әле.

Һәм ул йәнә йыр башланы.

Беҙ Мышағыр тауы менән Ялпаҡ тауҙары араһындағы билде үттек, Аҡбай шишмәһенә барып еттек. Башланған эҫкертте табып, фуфайкаларҙы сисеп ташланыҡ та тейәргә тотондоҡ. Нәсимә апай ырғыта, мин арбала ҡабул итеп, тапап торам. Тейәнек тә кирегә боролдоҡ. Күберәк тә тейәгәнбеҙ — ат тау үренә, ике тау араһындағы билгә, саҡ-саҡ менә. Бик тарта алмай башлағас миңә алдан йүгәндән тотоп барырға, Нәсимә апайға йөктө арттан этергә тура килде. Бригадир аты тирләп сыҡты. Ниһайәт, һырт түбәһенә менеп еттек, йөк башына ултырҙыҡ та түбәнләскә юрттырып төшөп киттек.

— Ниңә ул бишмәт артынан төшкән? Атын туҡтатмаһа, тота алмаҫтар ине бит, — тип һорайым мин Нәсимә апайҙан.

— Зарыҡайҙы әйтәһеңме ни? Кем белә инде? Йә кейеме йәл булғандыр, йә кеҫәһендә берәй документы-фәләне ятҡандыр. Атайым уныһын һөйләмәне.

— Ә казактар ниңә үлтергән?

— Уныһын атайым былай тип һөйләне. Беҙҙең яҡта алтын бар. Әүәле Ҡалҡанда, Ҡайын сауҡалығында алтын йыуғандар, Миндәктә әле лә йыуалар. Ҡоро йылға буйындағы ҡалҡыулыҡтарҙы, соҡорҙарҙы һин нимә тип уйлайһың? Йыуылған ҡом өйөмдәре. Яйыҡ буйындағы бөтә типтәр ауылдары алтын йыуҙы. Артель менән дә, яңғыҙ ҙа, һинең атайың — Пушковта, минеке — Алексей карьерында. Ул саҡта бөтә эш ҡул менән башҡарылған: кәйлә, көрәк, лебедка, кәрзин. Ҡоро йылғаны быуғандар, быуанан түбән улаҡтар ҡуйғандар. Тоҡомдо грабаркалар менән ташыйҙар. Беҙгә хатта сит ил алтын промышленниктары ла килгән. Беҙҙең ауылда алтынды Андрей бай һатып алған. Бөгөнгө сельпо — уның йорто. «Миндә Әндрәй ҡаҙнаһы бар тип уйлайһыңмы әллә?» тигән һүҙ тап беҙҙең яҡта килеп сыҡҡан. Ул һүҙ әлеге Андрейҙан киткән.

Алтын сығарыу — ифрат ауыр, мәшәҡәтле эш, күп кенә шахталар буш булып сыға, эш өсөн бик аҙ түләйҙәр, етмәһә, алдайҙар. Ошоға асыуҙары килгән типтәр ауылдары баш күтәрә. Башлыҡтары Аҡҡужа ауылы кешеһе Зарыҡай була. Верхнеурал урядниги казактар саҡырта. Бунт күтәреүселәрҙе тотоп волость майҙанында ҡамсы менән яралар, ә Зарыҡай тауҙарға ҡаса. Ул Ирәндеккә етеп бара,

унда ҡалын урман, шунын эсенә кереп сумһа, мәңге таба алмаҫтар ине, тик бәлә: бишмәте төшөп ҡала, алам тип туҡтаган арала эләктерәләр ҡәбәхәттәр. Ғәзим ағай, Зарыҡай ат ҡарағы булған, ти, Яйыҡ казактарының аттарын урлаған, йәнәһе, ә мин, ат ҡарағы тураһында халыҡ бер ҡасан да шундай һағышлы йыр сығармаҫ ине, тип уйлайым. Ана тегендә, Ослобейек тауы ҡаяларында, элек ҙур-ҙур бөркөттәр оялаған, көтөүҙән һарыҡтарҙы алып киткәндәр, хәҙер улар юҡ, бөттө.— Нәсимә апай һөйләүенән туҡтаны, күпмелер ваҡыт өндәшмәй килгәс: — Их, Әминә, һин бер нәмә лә белмәйһең шул әле,— тине тәрән көрһөнөп,— бер нәмә лә аңламайһың, бәләкәйһең. Быгаса бер кемгә лә һөйләгәнем юҡ ине, һиңә генә әйтәм: миңә Камал бәйләнә бит.

— Нисек бәйләнә?

— Бәй, ирҙәрҙең ҡатын-ҡыҙға нисек бәйләнгәнен белмәйһеңме ни? Ул бында ҡунған саҡта мин ситтән ятырға ҡурҡам, шуға ла балалар араһына инеп ятам. Үткән йәй мин сплавта, һал ағыҙыуҙа эшләнем. Дүрт кеше бүлергә райондан наряд килгәйне. Нәсимәнән башҡа кем барһын? Йәш, таҙа, ирһеҙ. Ә быйыл яҙ Камал өй янынан үткән һайын ҡотом алынып торҙо. Күргән һайын ҡурҡам, аяҡтарҙың быуыны бөтә. Ысынлап та, бер көн керҙе лә: «Давай, сплавҡа йыйын!» — тине. «Шул сплавҡа бармаҫ өсөн берәй бабайға кейәүгә сығырға что ли?» — тим. Бер аҙ өндәшмәй торҙо ла: «Ярай, быйыл ебәрмәйем, түлке минең бригадала эшләйһең». Унын башында ниндәй уй булғанын кем белгән. Сплавтан алып ҡалғандың хаҡын ҡайтарырға ниәтләнә. Өсөнсө көн килде лә һабанды төҙәткән булып ҡылана, үҙе: «Барыһы ла йоҡлағас, былтырғы һалам эҫкерте янына сыҡ, көтәм», — ти. «Был бит гонаһ, — тим, — һинең ғаиләң, балаларың бар». — «Ташлайым мин уларҙы, китәм, һине алам»,— ти. Шул ҡарт кәзә тәкәһе миңә бик хәжәт ине. Ҡурҡам мин унан, Әминә, харап итеп кенә ҡуя инде.

— Ә һин ауыл Советына барып әйт.

— Һин нимә? Ундай эштәрҙе ошаҡлап йөрөп буламы ни? Иртәме, һуңмы былай ҙа белерҙәр.

Был һөйләшеү мине нык аптыратты, хафаға һалды. Ололар тормошон бигүк аңлап етмәйем шул. Хәйер, ике бабайҙан, өс ҡыҙҙан, бригадирҙың үҙенән башҡа эргәмдә бүтән оло кеше лә юҡ инде. Ҡарттарҙы иҫәпләмәгәндә, улар араһында беҙҙән, үҫмерҙәрҙән, айырмалы рәүештә, ярайһы уҡ ҡатмарлы, ауыр мөнәсәбәттәр барлығы тура-

һында мин уйламай инем, ә өлкән йәштәге, ғаиләле ирҙең йәш ҡыҙға бәйләнеүе бөтөнләй башҡа һыймаҫлыҡ хәл. Бына нисек икән, бына ниндәй ниәттәр бар икән Камал башында, тигән уй һис баштан сыҡманы.

Ай яйлап тоноҡланды ла тау артына тәгәрәне. Өс ҡолон тауы башындағы ҡыҙғылт-һары күктә болоттар ҡуйы ҡыҙыл төҫкә мансылды. Тәрән йоҡоға талған ер өҫтөндә бер тауыш та юҡ, беҙҙең арба тәгәрмәстәре дөбөрләүе, ат тояҡтарының йомшаҡ ергә баҫыуы, әгәр ныҡлап ҡолаҡ һалһаң, ауыл этәстәре ҡысҡырыуы ғына ишетелә.

Өйгә яҡынлағас, Ғәлиулла олатайҙың беҙгә ҡаршы килгәнен шәйләнем. Ҡулдарын һелкә — шымыраҡ йәки тиҙерәк килеп етегеҙ, тип ишаралауылыр, ахыры. Аттың башынан алды, бесән бушата торған урынға борҙо.

— Сыҡһам, ат та юҡ, арба ла юҡ, — тип шыбырлай ҡарт. — Эштең нимәлә икәнен шундуҡ һиҙҙем. Бына көтөп торам. Камал уянып ҡына ҡуймаһа ярар ине, тим. Ышан уға, һеҙгә ҡул күтәреүе лә бар. Давай, йәһәт кенә бушатығыҙ.

Ҡарт атты туғарҙы, уны ситкә, арбалар янындағы үгеҙҙәр, баҫҡан көйө генә йоҡлаған аттар яғына, алып китте. Беҙ бесәнде бушатырға тотондоҡ. Ғәлиулла олатай ҙа ярҙамлашырға керешге. Бушатып бөткәс кенә еңел һуланыҡ: Аллаға шөкөр, Камал уянманы.

## 7

Иртүк, һыу ҡайтыу саҡта, орлоҡ артынан (Фәүзиә апай һыуҙан ҡурҡа) ауылға ҡайтып килергә булып, ҡоба атты йәшниккә (беҙ орлоҡ ташыу өсөн тәғәйенләнгән йәшникле бейек арбаны шулай тип йөрөтәбеҙ) ектем дә юлға сыҡтым. Күперҙең теге яғында һыу күсәрҙән уҙып китһә лә, йәшник төбөнә етмәне. Яй ғына сыҡтым, ҡурҡа-ҡурҡа ғына. Кладовщица Зөһрә апайҙы уятып, орлоҡ тейәнем дә, юл ыңғайы үҙебеҙгә һуғылдым.

Өләсәйем торғайны, һыйырын да һауған — миңә туптулы көрөшкә һөт һалып бирҙе. Һикелә ултырам, тәҙрәгә ҡарайым һәм көтмәгәндә шәйләйем: өләсәйем йәһәт кенә ихатанан сыҡты ла, бур шикелле тирә-яғына ҡаранып, йәшниктәге тоҡтоң ауыҙын сисә башланы. Тәүҙә аптыраным, унан ҡурҡтым, йүгереп урамға сыҡтым. Өләсәйем

тоҡто сискән, зәңгәр сеүәтәгә услап орлоҡ һала. Ҡабалана, ҡулдары ҡалтырай.

— Өләсәй, нишләйһең ул? — тим.

— Ҡыҙым, саҡ ҡына иген алам, һиңә көлсә бешереп бирермен, — тип яуаплай өләсәйем ғәйепле төҫ менән.

Белмәйем, ҡайһыбыҙ нығыраҡ уңайһыҙланғандыр был хәлгә: минме, әллә өләсәйемме? Миңә шул тиклем йәлһеҙ, шул тиклем оят, хатта өләсәйемә күтәрелеп ҡарарға ла ҡурҡам, әйтерһең, ул түгел, ә мин үҙем урлашам, шул уҡ ваҡытта ул да йәл.

— Өләсәй, ярамай! — тим, тирә-яғыма ҡаранып. — Был бит орлоҡ, һәр грамы иҫәптә. Кире һал.

— Ярамай икән, ярамай.

Ул сеүәтәне кире тоҡҡа бушатты ла ғәйепле төҫ менән өйгә инеп китте. Мин тоҡ ауыҙын бәйләнем дә атты ҡуҙғаттым. Ә башымда — өләсәйем. Көтөлмәгән был ҡылығы өсөн мин уны эстән генә әрләнем дә: исмаһам, һораһын ине. Әлбиттә, бер грамм да бирмәҫ инем. Йәлләнем дә: уға ла еңел түгел көн итеүҙәре, ниәтен аңларға була. Яҡшымы, насармы, беҙ баҫыуҙа ашайбыҙ, ҡай саҡ көлсәһе лә, һоло өйрәһе лә була, ә өләсәйем бер ҡатыҡ менән йән аҫрай. Һәйбәт уңыш йыйҙа трудоденгә әҙерәк иген ал ине...

Пожар тауынан ҡаршыма парторг Хәйбулла ағай төшөп килә. Уның өйө шунда, тау битендә. Әле генә өйөнән сыҡҡан да идараға барыр алдынан битләүҙә баҫып торғандыр — унан бөтә ауыл ус төбөндәге кеүек. Һалдат шинеле менән һалдат бүркендә, обмотка урап ботинка кейгән. Ҡаҡса, гел йәшкәҙәп торған күҙҙәре менән ныҡ текәлеп ҡарай, етмәһә, быуылып-быуылып йүткерә. Мин туҡтаным.

— Орлоҡ алып китеп бараһыңмы? Маладис! — ти ул һәм йылмайырға тырыша. — Бына нимә, ҡыҙым, Шәрипова Ғәлимәгә кер әле, хәлдәре хөрт, асығалар. Балалары шешенеп бөткән. Унда һеҙгә кеше кәрәкмәйме? Ат ҡараусымы шунда.

— Ат ҡараусы бар, Нәжип.

— Ярар, шуның ярҙамсыһы булып йөрөр. Оло малайын ал һин баҫыуға. Ашатырыҙ. Әтеү, әрәм булып ҡуйыр.

Ғәлимә апай ауылдың түбәнге яғында йәшәй. Ире, Шәрипов Сәмиғулла, ҡырҡ икенсе йылда һуғышҡа китеп хәбәрһеҙ юғалды. Ике малайының йәнен саҡ аҫрай Ғәлимә апай, үҙе һаман иренең ҡайтыуына өмөт итә. Ҡышын — картуф, һөт, ҡатыҡ, йәйен кесерткән, ҡуҙғалаҡ, ҡырағай

һуған, ҡымыҙлыҡ, саранка, еләк менән туҡландылар. Көҙ өҫтәлдәре саҡ ҡына байыраҡ булды: башаҡ йыйҙылар, шуны ҡул тирмәненд тарттырып, устай ғына онға ала-бута, кәбәк бутап көлсә бешергеләнеләр. Әммә быйыл Ғәлимә апай бигерәк хәлһеҙләнде, йылға аръяғындағы ҡыуаҡлыҡтар араһынан сапҡан әҙ генә бесәнен ашатып бөттө лә һыйырын һуйҙы. Яҙға картуфы ла ҡалманы.

Ергә сүккән тәпәш өйҙөң ҡараңғы, бәләкәй тәҙрәләре ауырыу ҡарсыҡтың һырҙар менән йырмасланған йөҙөндәге ҡайғылы күҙҙәренә оҡшап тора. Ҡорғанһыҙ тәҙрә төбөндә гөл дә юҡ. Солан да юҡ. Ярым ҡараңғы ҡыҫыҡ өйгә керәм, танауға шунduҡ етемлек, ярлылыҡ һулышы бәрелә. Мейес янмай, самауыр шыжламай. Һикелә — ниндәйҙер иҫке сепрәк-сапраҡ, йыртыҡ одеял, йөндәре сығып бөткән яҫтыҡ. Ғәлимә апай һәр ваҡыттағыса иртә торғандыр, тик бер нәмә лә эшләргә кәрәкмәгәнлектән — һыйыр һауаһы түгел, ҡамыр баҫырға оно, балаларын ашатырға ризығы юҡ — моңһоу ҡараштарын иҙәнгә текләгән дә таш кеүек ҡатып һикеһендә ултыра. Сәстәре таралмаған, йөҙө шешмәк, күҙҙәрендә һағыш, хәсрәт. Оло малайы, тубыҡтарын эсенә тартып, яҫтыҡ өҫтөндә ята, бәләкәйе уның янында ултыра һәм туҡтауһыҙ тырнана — ябыҡ тәнен осло тырнаҡтары менән ҡанатып бөткән. Иҫәнләштем. Ғәлимә апай иҫәнлекте алманы, килеүемдең сәбәбен дә һораманы.

— Ниңә ул ҡәҙәре тырнайһың? — тип һорайым малайҙан.

— Бет тешләй.

— Мунса яғырға, кейемдәреңде бешерергә кәрәк.

— Бешерҙек. Әсәйем, улар ас кешенең эсенән сыға, ти.

— Нимәгә килдең? — тип һораны, ниһайәт, Ғәлимә апай, башын ҡалҡытып.

— Оло малайыңды баҫыуға алып китәм. Парторг Хәйбулла ағай ҡушты.

— Ал. Шешенде. Мин үҙем дә барыр инем, үҙемә тейгән өйрәне уларға бирер инем, тик ауырыйым, бер ҙә генә хәлем юҡ.

Ул малайҙы күтәрҙе, шунда ятҡан сепрәк-сапраҡҡа ураны ла сығарып арбаға ултыртты; ҡулына сеүәтә, ҡалаҡ, көрөшкә һалынған киндер тоҡсай тотторҙо. Һәм беҙ ҡуҙғалып киттек. Малайҙың шеш йөҙөндә битарафлыҡ, күҙ ҡараштарында бер ниндәй ҡыҙыҡһыныусанлыҡ та, шатлыҡ та, өмөт саткылары ла юҡ — балалығы бөтөнләй ҡалмаған.

— Исемең кем? — тип һорайым.

— Исмәғил, — тип яуаплай был нәҙек кенә тауыш менән.

Китеп барам, уйлап барам: нимә ашатырға һуң был балаға, нисек аяҡҡа баҫтырырға? Уға һөт, икмәк кәрәк. Һөтө булыр, ә бына икмәк мәсьәләһендә барыһының да өлөшөнә кереп, көлсә бешерергә тура киләсәк. Һыйыр бар, беҙ уны һирәкләп тырмаға егәбеҙ. Һауабыҙ ҙа. Ике литр самаһы һөтө сыға. Бынан ары бик екмәбеҙ, малайға һөтөн һауып эсерербеҙ инде.

Яй ғына теге яҡҡа сыҡтыҡ. Ҡояш байтаҡ күтәрелде, әлегә ул томанлы болоттар араһында булһа ла йылыта, иртәнге һалҡынлыҡ яйлап тарала. Томан аша тауҙар әллә ҡайҙа, ифрат йыраҡта кеүек күренә. Яр буйындағы талдар бөрөләнә, юл ситендә урыны-урыны менән йәшел үлән морон төртә. Һабантурғай һайрауы ишетелеп ҡала, һаҙлыҡтан торналар тауышы килә. Танауға дымлы баҫыу еҫе бәрелгәндәй була, иртәнге йоҡо томалаған аңға ниндәйҙер күренештәр салына һәм күңелдә шундай тойғо: әйтерһең дә, тормошомда яҡты, күркәм нәмә бар йәки буласаҡ, ә нимә икәнен үҙем дә белә, аңлай алмайым.

Өйгә килеп еттек. Халыҡ иртәнгелекте ашарға ултырған. Барыһының да алдында — өйрә һалынған сеүәтә, һөтлө шешә, ҡайын туҙынан яһалған һауыттарҙа — ҡатыҡ. Улар һәммәһе лә бергә, бер түңәрәктә, тик Ҡарун бабай ғына, һәр ваҡыттағыса, ситтә, бар халыҡҡа арҡаһын ҡуйып ултырған.

— Яңы эшсене ҡабул итәһегеҙме? — тинем мин. Миңә улар нисектер сәйерһенеп, һағайып ҡараған һымаҡ тойолдо. Үҙемдең бер ҡатлылығыма барып, йәнә бер тамаҡ өҫтәлеүе аптыратты, ахыры, былярҙы, тип уйлайым, шуға ла һорау-фәлән биргәнсе өҫтәй һалдым: — парторг Хәйбулла ағай ҡушты. Әтеү, шешенеп бөткән, һыйырҙы бынан ары екмәбеҙ, һауырбыҙ.

— Камалды осратманыңмы? — тип һораны Нәсимә апай, һағайып.

— Юҡ. Ә нимә булған?

— Ой, атын еккәнен белгәс нисек туҙынғанын күрһәң! Тамам ҡотороғо сыҡты. Үлтерәм мин ул Әминәне, хәҙер артынан ҡыуып етәм дә муйынын һындырам, миңә ундай звеньевой кәрәкмәй, ҡыуам, ти. Артыңдан киткәйне бит. Имгәтеп ҡуймаһа ярар ине, тип беҙ ҡурҡышып ултырабыҙ, шөкөр, ҡаршыңа осрамаған икән.

— Туҡмай алмаç, хаҡы юҡ, атын егеп уйнап йөрөмәгән,— тинем, мөмкин тиклем тыныс булырға тырышып, шулай ҙа ҡурҡыныс хәл көтөүҙән йөрәгем тертләп ҡуйҙы. Малайҙы арбанан күтәреп төшөрҙөм дә кешеләр янына килтерҙем.— Хәлиҙә апай, ашат әле.

— Таратып бөттөм шул, һинең өлөш кенә ҡалды.

— Бир шуны.

— Ә һин?

— Түҙермен, мин өйҙә һөт эсеп килдем.

— Э-э, улай ярамай,— тип һүҙгә ҡыçылды Ғәлиулла олатай.— Һин, улым, сеүәтә алдыңмы? Вәт маладис. Һиңә үҙемдекенән саҡ ҡына ҡояйым. Миңә етә, ҡатығым да бар. Һиңә ҡапыл күп ашау ярамаç, эсең ауыртыр.

Мин, Хәлимә апай, Ғәлиулла олатай үҙебеҙҙең туçтаҡтарҙан малайҙың ағас туçтағына өйрәбеҙҙе ҡойҙоҡ, ҡатыҡ өçтәнек тә алдына ултырттыҡ. Исмәғилде мин, ризыҡҡа шундуҡ ташланыр, тип уйлағайным, ә ул беҙгә ҡарап тик ултыра. Әллә ояла, әллә шул ҡәҙәре аш биргәндәренә ышанмай.

— Аша, улым, шикләнмә. Етемдең ашҡаҙаны етәү, нимә бирәләр — барыһын да ашарға тейеш,— ти Ғәлиулла олатай.— Эшкә сыҡҡанһың икән, оҙаҡламай аяҡҡа баçырһың, саф һауала хәл керер.

Ҡарттың йөҙө шеш. Ауыҙына ҡалағын килтерә — ҡулы ҡалтырай. Ашағандан һуң ҡалҡынғайны, билен турайта алмай аҙапланды. Ыңғыраšты, аяҡтарын саҡ ҡуҙғатып атлап китте.

— Олатай, һин әллә ысынлап ауырый башланың инде?

— Был кисәге эштән һуң. Бөтә тән ауырта. Ҡояшта ҡыҙынһам, ебәрер ул. Улай ғына булыр инде...

Тоҡтарҙағы орлоҡто мин баçыу ситенә алып барҙым, беҙ сәсә башланыҡ. Ҡарттарға орлоҡ илтәм, йүгереп йөрөйөм, саҡ-саҡ өлгөрәм. Малайҙар Мышағыр тауы битендә көнсығыш яҡлап тырмата, ә түбәндәрәк, Ҡайын сауҡалығына алып бара торған юлға яҡын, Зәки, Фәйзулла, Мәүлит, Нәсимә апай һөрә. Хәлиҙә апай менән ат ҡараусы Нәжип таш йыя. Өй янында бер Исмәғил генә ултырып ҡалды.

Төш яҡынлағанда түбәндән, өй яғынан, беҙҙең янға кешеләр килгәне күренде. Начальство. Камал ағай ҡулындағы ҡамсыһын һелтәп-һелтәп атлай, хәрәкәте ҡыҙыу, киçкен. Парторг Хәйбулла ағай, председатель Ислам ағай йәнә таныш түгел бер кеше. Самаланым: районда килгән упол-

номоченный. Йөрәк жыу итеп китте: юҡҡа йөрөмәйҙәр, Камал *ошаҡлағандыр*, тикшереү, әрләүҙе күтәргә кәрәк, эштән дә ҡыуыуҙары ихтимал. Ҡарттар янына барҙым.

— Начальство килә, — ти Ғәлиулла олатай һуҙып ҡына, — Йыйыкты сығырға ҡурҡмағандар, тимәк, беҙгә асыуҙары ҙур.

Түрәләр яҡынайғандан-яҡыная. Килеп еттеләр. Парторг Хәйбулла ағай — ҡарттар янына, ә Ислам, Камал ағайҙар, уполномоченный — туп-тура миңә.

— Тыңламай! — Камал ағайҙың иң тәүге һүҙе шул булды, мине ҡарашы менән быраулап-быраулап алды. Иҫәнләшеү ҙә юҡ.— Башына нимә килә, шуны эшләй. Зәпте яңынан һөрҙө, хәҙер баҫыу буйлап таш йыя. Плугарҙарҙы, хатта поварҙы шул эшкә ҡуша. Һорамай-нитмәй бригадир аты менән бесән ташый. Сәскесте ваттылар, сәскес аттарын һабанға егә. Бына ҡарағыҙ: ҡул менән сәсәләр. Планды тултырмай. Колхоз буйынса иң артта һөйрәлгән звено. Мин, понимаешь, фронтовик, контуженный, ул минең бер һүҙемде лә тыңламай. Тыңлата алмайым, нервыны бөтөрҙө.

— Нишләп бригадирҙы тыңламайһың, нишләп планды тултырмайһың? — тип асыулы ҡарай миңә председатель Ислам ағай.— Ниңә бригаданы артҡа һөйрәйһең?

Унын артабанғы хәбәрен мин ишетмәнем, сөнки наҡҡа әрләһәләр, мин гел генә һаңғырауланам. Был юлы ла шулай ишетмәҫ булдым да ҡуйҙым һәм, һөрөлмәгән ерҙә, ташлы ерҙә иген үҫмәйәсәген оло кешеләр белмәйме икән ни, тип ғәжәпкә ҡалдым. Уларға тик план ғына бир.

— Ниңә планды тултырмайһың? — тигән ят тауыш ишетәм ҡапыл, айнып китеп.— Артабан да шулай ҡыланырһыңмы?

Бынаһын уполномоченный — кәүҙәгә ҡаҡса, бәләкәй, ҡырынмаған, йоҡоһо бөтмәгән, йонсоған йөҙлө ағай һорай икән.

— План техника бирәмегенә ҡарап бирелә,— тинем мин тыныс ҡына, шунан ҡапыл, үҙем дә һиҙмәҫтән ҡыҙа, ярһый башланым — миндә бәғәрәк ҡаны уянды, асыуым, нәфрәтем ҡуҙғалды.— Ана тора һеҙҙең техникағыҙ. Уны беҙ ватманыҡ, уны ватыҡ көйө килтерҙеләр. Әгәр миңә ышанмаһағыҙ, тимерсе Сергей олатайҙан һорағыҙ. Ул был турала бригадирға ла, председателгә лә әйткән. Тимәк, һеҙ унын ватыҡ икәнен белә тороп килтерткәнһегеҙ.

— Ишеттегеҙме? — тип ҡыуанды бригадир. — Ул һәр ваҡыт бына шулай: мин уға — бер һүҙ, ул миңә — ун һүҙ. Мин уның менән артабан эшләй алмайым. Алла хаҡы өсөн алығыҙ, миңә икенсе звеньевой бирегеҙ.

Тап шул мәлдә беҙҙең янға парторг Хәйбулла ағай килде. Килде лә йомшаҡ, тыныс ҡына тауыш менән һораны:

— Йә, ҡыҙым, эштәр нисек?

Мин шундуҡ тынысландым һәм уға бөтәһен дә түкмәй-сәсмәй һөйләп бирҙем. Нисек итеп өс көн буйы зәпте яңынан һөргәнде, бригадир боҙоҡ сәскес килтергәнен, беҙ шул арҡала ҡул менән сәсергә мәжбүр булыуыбыҙҙы, ат менән үгеҙҙәргә ашарға етмәгәнен, сөнки бригадир беҙгә бының өсөн ҡарт атты беркеткәнен... Ә яландан ташты беҙ йә арыған аттарға ял биргән саҡта йыябыҙ, йә мин ул эште баҫыуҙа туранан-тура эшләмәгәндәргә ҡушам: ашнаҡсыға, ат ҡараусыға, орлоҡ ташыусыға. Шуныһын да әйтергә онотманым парторгка: кешеләр үҙҙәрен йәлләмәй ҡараңғынан-ҡараңғыға тиклем эшләй, бер кем дә ашау наҡыҫлығына, ҡартлығына, ауырыуына зарланмай, бер кем дә, был эш минең көстән килерлек түгел, тип баш тартмай, ҡайҙа ҡуш — барыһын да еренә еткереп үтәйҙәр...

Үҙем һөйләйем, үҙем парторгтың йәш аҡҡан аҡыллы, тыныс күҙҙәренә ҡарайым да шуны уҡыйым: «Ҡыҙым, мин һиңә бер нисек тә ярҙам итә алмайым. Түҙ, бирешмә!» Хәйер, мин унан бер ниндәй ҙә ярҙам өмөт итмәйем, мин уның беҙгә трактор ебәрә, сәскескә запас частар бирә алмаҫын бик яҡшы аңлайым.

Һуңынан, өй яғына йүнәлгәс, унан ауылға киткәс, начальствоның нимә һөйләшкәнен мин белә алманым. Бригадирҙы әрләнеләрме, әллә уның ялған ошағына ышанып, бар ғәйепте миңә япһарҙылармы? Шулай ҙа бригадир беҙҙең участкала ул көн башҡаса күренмәне, сводканы ла илтмәне. Ат менеп, Мәрхәбә соҡорона батыуҙан ҡурҡа-ҡурҡа, йәнә минең үҙемә ауылға сығырға тура килде.

Бер минутка ғына өйгә һуғылдым.

— Камал һиңә ҡул күтәрҙеме ни? — тип һораны өләсәйем, йөҙө ҡарайып. — Ул Буралҡы нимәһенә ҡотора?

— Күтәрмәнесе. Әрләне генә.

— Ә миңә, һуҡҡан, тинеләр. Етем баланы рәнйетһә, башына ҡарғыш төшөрөнән ҡурҡмаймы икән? Ҡанлы йәштәр менән илағыры, һыуыҡ ергә тереләй яткыры нәмә! Мин уны...

## 8

Яланда иң күңелле мәл — кис. Һалҡынса ай кистәре, оҙаҡлап ҡараңғы төшөү, усаҡ йылыһы, төтөн, ҡайнар өйрә еҫе, еңелсә арығанлыҡ, күңел тыныслығы һәм йоҡо көтөү...

Итек юғалған баҫыуға эңер иртәрәк төшә, дөрөҫөрәге, ҡояш Мышағыр тауы артына көндөҙ үк тәгәрәй ҙә ҡуя. Өс ҡолон, Ҡыҙҙар тауы, көнсығыштағы башҡа йыраҡ тауҙар яҡтылыҡҡа сорналып ята, ә ҡояш Мышағырҙың түбәһенә ышыҡланғанлыҡтан, беҙҙең баҫыуға ҡараңғылыҡ менән һалҡынлыҡ иртә килә, һабантурғайҙар тына, ҡарғалар юғала.

Ниһайәт, тау күләгәһе бөтә баҫыуҙы ҡапланы, ҡояш әле — Урал һыртының иң бейек өлөшөндә. Беҙ аттарҙы, үгеҙҙәрҙе туғарҙыҡ та өй яғына ыңғайланыҡ. Мин иң аҙаҡтан барҙым — сажин таяғы менән һөрөлгән ерҙе үлсәргә, сифатын тикшерергә кәрәк ине.

Ҡайнар өйрә ашаныҡ, унан тамам ҡараңғы төшкәнсе кем янған ҡамыл араһында ҡалған ҡурмас ашарға, кем ҡайын һуты эсергә, кем сарыҡ төбөнә йәйергә былтырғы кипкән күрән йыйырға тип Мүкле һаҙға китте. Унан барыбыҙ ҙа өй янына йыйылабыҙ, ҙур итеп усаҡ яғабыҙ, берберебеҙгә һырлығышып ултырабыҙ ҙа сылғауҙарҙы, сарыҡтарҙы киптерәбеҙ. Шунан башлана хәбәр. Һүҙ тәүҙә осраҡлы — тегенән-бынан, тора-бара бәйләнешлерәк була бара, ҡыҙыҡлы нәмә тураһында бәхәс китә. Бындай осраҡта мин йыш ҡына, был ҡайҙан, нимәнән башланды һуң әле, бәхәстең сәбәбе нимәлә булды, тип аптырайым һәм бер ҡасан да уның башын, был темаға кем бороп ебәргәнен белә алмайым. Бына әле лә төшөп киткән хәбәрҙәре миңә ифрат ҡыҙыҡ тойолдо. Хыялланырға яратыусы, һөйкөмлө Ғаяз барған бәхәскә ҡапыл килеп ҡушылды ла, туҡтатып ҡуйыуҙарынан ҡурҡҡан һымаҡ, ҡабалана-ҡабалана һөйләргә кереште:

— Малайҙар, бына Сабит ағай әйтә, ҡара бесәйҙе тоторға ла төнөн мунса ҡаҙанында ҡайнатырға кәрәк, ти. Һөйәктәре генә ҡалғансы ҡайнатырға. Шул һөйәкте ауыҙыңа ҡапһаң, һин әкиәттәге кеүек күҙгә күренмәй торған кеше булаһың да ҡуяһың, ти. Тик төндә бешереүе ҡурҡыныс икән, уны ҡараңғыла ғына ҡайнатырға кәрәк. Унан шайтандар, ендәр, албаҫтылар сыға ла һине ҡурҡытырға, ҡотоңдо алырға тырыша, ҡурҡмаһаң, гел генә бисмилла

әйтеп торһаң, улар һиңә тейә алмай, ти. Төн уртаһында әтәс ҡысҡырыу менән әлеге шайтан, ендәр ҡасып бөтә. Шунан һөйәкте ҡабаһың — һине бер кем дә күрмәй, үәт!

— Һине берәү ҙә күрмәһә, нишләр инең? — тип һорай Фәйзулла Ғаяздан.

— Минме? Мин бөтә фашистарҙы ла ҡырып бөтөрөр инем.

— Ауылда фашистар барҙыр шул.

— Мин уларҙың тылына керер ҙә автоматтан тр-тр-тр. Атайымдың үсен алыр инем.

— Ай, дүрәк! Һин һуғыштың былтыр уҡ бөткәнен белмәйһеңме ни? — тип көлә Фәйзулла. — Фашистарҙы һинһеҙ ҙә ҡырып бөттөләр, һуңланың.

Ҡыҙҙар хихылдашты. Ғаяз тынды, уңайһыҙланып малайҙарға ҡараны. Ул әллә ысынлап та һуғыш бөткәнен белмәй ине, әллә белһә лә оноҡкан — һаман да аслыҡ, көн итеүҙәре һуғыш йылдарындағы ише ауыр, ҡай саҡ минең үҙемә лә һуғыш һаман баралыр кеүек булып китә. Бәлки, уның атаһы өсөн ныҡ үс алғыһы килгәндер, ҡайғыһы һаман йөрәген өтәлер, шуға ла һуғышты, фашистарҙы уйлап сығарғандыр.

— Ә мин, ә мин, — тип һикереп үк торҙо Рәсим, — поезға ултырыр ҙа ҡалаға барыр инем. Китеп барам, ә мине, ә мине бер кем дә күрмәй. Машиналар эшләгән заводты эҙләп табыр инем дә трактор, сәскес өсөн бер тоҡ запчастар алып ҡайтыр инем.

— Урлашырға итәһеңме ни? — тип һүҙ ҡыҫтыра Рәшиҙә. — Оят түгелме һиңә?

Хәҙер Рәсим уңайһыҙлана, сөнки уның бер ҙә бур булғыһы килмәй.

— Ә һин, Рауил, күренмәй йөрөй алһаң, нишләр инең? — тип һорай Фәйзулла минең энекәштән. Ярата Фәйзулла Рауилдың берәй ҡылығынан көлөргә. Шунан ниндәйҙер ләззәт таба. Әле лә Фәйзулла энем көлкөлө, мәҙәк берәй нәмә күрһәтер тип көтә, үҙ сиратында Рауил да быны аңлай. Уның ҡамыл араһынан янған бойҙай эҙләгәндә ҡоромға буялған йөҙөндә хәйлә сағылып үтте.

— Ә мин ләүкә аҫтына инер инем дә Яхъя ағай менән Сафия апайҙың мунсала нисек йыуынғандарын күҙәтер инем, — тине Рауил, иҫе китмәй генә.

Уның был яуабына хатта ҡарттар ҙа көлөштө.

— Ай, шаян малай, ай, тел биҫтәһе! — тине Ғәлиулла олатай, башын сайҡай-сайҡай.

Быға мин генә көлмәнем. Энекәшемдең иҫәр ҡылығы өсөн миңә оят ине.

— Хулиган, маңҡа! — тинем дә уның елкәһенә ҡундырҙым.

— Былар бөтәһе лә әкиәт, — тип дауам итә Рауил, бер ни булмағандай. — Берәү ҙә кеше күҙенә күренмәй йөрөй алмай. Шайтан да, өй эйәһе лә, Хызыр ҙа юҡ. Уларҙың барыһын да наҙандар уйлап сығарған.

— Ай, яңылыш һөйләйһең, малай, Хызыр артында ғына баҫып тора, һүҙҙәреңде ишетә, — тине уҫал итеп Әхмәтйәр олатай.

Ҡолаҡсындары тырпайған бесәй бүреге, боларған һирәк кәзә һаҡалы, ҡойолоп бөтөп барған һары тештәре менән ул үҙе ошо минутта яуыз Хызырға оҡшай ине. Малайҙар йәлп иттереп арттарына, ҡараңғылыҡҡа борола, ҡыҙҙар сырылдаша, ҡапыл барыбыҙға ла ҡыҙыҡ, шомло, ҡурҡыныс булып китә, арҡалар сымырлай...

Утҡа ағас өҫтәй-өҫтәй, беҙ шулай хәбәр һүтәбеҙ, булған, булмаған төрлө хәлдәр һөйләйбеҙ. Торған һайын төн ҡуйылана бара, һауа һалҡыная, тирә-йүндә, ялан-баҫыуҙарҙа тауыштар тына. Беҙҙең арттағы ҡараңғы ер миңә ҡапыл бынан йөҙ йәки мең йылдар элек булған кеүек үк ҡырағай, ташландыҡ булып тойола, миңә әлеге көн — элекке ваҡыт, ә беҙ үҙебеҙ боронғо кешеләр һымаҡ күренә башлай. Ошондай берсә аңлайышһыҙ, хатта сәйер, берсә осраҡлы уйҙарҙан һуң мин, үҙем менән йыш ҡына булғанса, көтөлмәгән, әммә ябай ғына асыш яһайым. Әгәр хыял иткән киләсәккә үткән заман күҙлегенән ҡараһаң, ә уға, үткән дәүергә, алыҫ киләсәктән күҙ һалһаң, бөгөнгө көн — ул беҙҙең киләсәк. Һәм бына мин бөгөнгө көнгә алдағы көндәр бейеклегенән ҡарайым да ошондай һығымтаға киләм: ябай, хатта примитив, ауыр тормоштоң һыуыҡ май төнөндә тәүтормош усағы яна, ерҙе боронғо һабандар менән һөрөүсе, һәләмә кейемле, бысраҡ, ярым ас, шайтандарға, Аллаға, Хызырға ышанған, йыуаш, ҡурҡаҡ, бер ҡатлы кешеләр ошо ут тирәләй һырлығышып ултыра. Ҡанлы һуғыштар барған, кешеләр бер-берен үлтергән, асыҡҡан, серек һалам, тиреҫ, сүп-сар, хәйерселек араһында, емерелергә торған меҫкен йорттарҙа көн иткән ошо заманды, тәүтормош осоро түгел тип, йә, кем әйтә ала?.. Был һығымталарым ҡай саҡ үҙемә лә сәйер тойола, уларҙы мин бер кемгә лә һөйләмәйем, һөйләһәм, аңламаҫтар, көлөрҙәр, тип ҡурҡам...

Усаҡ янында ултырһаҡ та, ваҡытты бушҡа үткәреү юҡ. Мин, Нәсимә, Фәүзиә, Хәлиҙә апайҙар сүс ептең осон төкөрөкләп ҡалын энә күҙәүенән үткәрәбеҙ ҙә уны ялангас тубыҡтарҙа өйөрөлтөп-ишеп сарыҡтарҙы ямайбыҙ. Үҙебеҙҙекен генә түгел — бөтә звеноныҡын. Һүҙ яйлап икенсе юҫыҡҡа төшөп китә: әле генә шайтандар, ендәр, Хызыр хаҡында һөйләйҙәр ине, хәҙер бер ҡасан да ҡыш булмаған йылы көньяҡ илдәре, йыл әйләнәһенә ағастарында икмәк, төрлө емеш-еләк үҫкән алыҫ Урта Азия, бай Ташкент ҡалаһы тураһында хәбәр башлана. Әхмәтйәр олатай, ул яҡтарҙа тик мосолмандар ғына йәшәй, улар барыһы ла аҡтан кейенә, мәсеттәргә барып Аллаға табына, тип һөйләй...

Ҡапыл ҡараңғылыҡты йыртып ниндәйҙер тауыш ишетелә, арба булһа кәрәк. Ул яҡынайғандан-яҡыная — Сурағол юлынан кемдеңдер был яҡҡа килеүе төҫмөрләнә. Беҙ тынабыҙ ҙа һағайып ҡараңғылыҡҡа бағабыҙ. Кемдер оло юлдан беҙҙең яҡҡа боролоп төштө лә өйгә яҡынлашты. Ат туҡтаны, берәү усаҡҡа табан атланы.

— Дүртенсе бригадаға сәләм!

Ә-ә, өсөнсө бригада бригадиры Мөхәмәт ағай икән. Өсөнсө бригада ла Йайыҡ аръяғында ҡуна ятып эшләй, бынан алыҫ ҡына. Мөхәмәт ағайҙың бишмәтенең буш еңе кеҫәһенә тығылған да ҡуша тегелгән, сарыҡ ҡуныстары лысма һыу. Йөҙө ябыҡ, елгә ярғыланған, эйәген һирәк һаҡал баҫҡан.

— Иҫәнме, һаумы, әйҙә, утҡа яҡыныраҡ кил! — тип ҡаршылай уны Ғәлиулла олатай. — Төнөн разбойник йөрөгәнсе, ҡунаҡ йөрөгәне яҡшыраҡ.

— Үәт бәлә, — ниндәйҙер ҙур үкенес менән шулай ти Мөхәмәт ағай, тауышын күтәреп (ул гел ҡысҡырыбыраҡ һөйләшә). — Бригадала оҙаҡлап киттем дә ҡайтырға һуңлап сыҡтым. Күпергә етһәм, һыу арбаның өҫтөнә сыға, артабан барырға ҡурҡытты. Ҡараңғы, бер нәмә күренмәй. Днепрҙы кискәндә батмағанды хәҙер өйҙән ике аҙымда батып ятып булмаҫ инде, тинем дә кире боролдом. Шунан һеҙҙең утты күреп ҡалдым. Таң атҡанды көтәйем, тим. Быйыл ташҡын шәп. Һыу һаман арта.

— Быйыл эт йылы, — тине Ғәлиулла олатай. — Ҡыш ҡарлы булды, яҙ һуңлай. Иген уңасаҡ.

— Эт йылы, тиһең инде? Белмәгәйнем. Иген уңыуы һәйбәт. Ярай, мин атты туғарайым әле.

Мөхәмәт ағай атын туғарҙы ла ут янына сүгәләне, аяғын систе, сарыҡтарын, йөн ойоғон ике йәпле ағасҡа элеп ҡуйҙы, унан беҙҙең йәшәү, эш тураһында һорашырға тотондо. Ҡул менән сәсәбеҙ, тибеҙ, беҙҙең бригадир, план давай, планды үтәгеҙ, тип ҡысҡыра, ә үҙе боҙоҡ сәскес килтергән, тибеҙ. Төнөн бригадир атын егеп бесәнгә барыуыбыҙ, быны белгәс уның яман туҙыныуы, начальствоны килтереүе, мин фронтовик, мин контуженный, Әминә мине тыңламай, нервыларымды ашап бөттө, тип ошаҡлауы, шунан колхоз председателе Ислам ағайҙың төкөрөктәрен сәсә-сәсә әрләшеүе хаҡында һөйләнек.

— Фронтовиктар баштарын һалды, ҡайтҡаны ла яраланып ҡайтты, ә уларҙың береһе арт яғына яраланған, иkenсеһенең бер сыйылған ере юҡ, тылда ултырғандарҙыр әле, — тине Нәсимә апай.

— Һуғышта төрлөһө булды, — тине йомшаҡ ҡына итеп Мөхәмәт ағай. — Берәүҙәр һуғышҡа инеп тә өлгөрмәй үлеп ҡалды, иkenселәре ҡаты бәрелештәрҙән дә иҫән сыҡты. Мине лә бит тәүҙә еңелсә яраланы, йомшаҡ ергә автомат пуляһы тейҙе. Ә иkenсе ваҡыт эре калибрлы шартлатҡыс пуля ҡулды селпәрәмә килтерҙе.

— Камал ағай немецтар тылында партизан булып йөрөгән, тиҙәр. Ордендары бишәү, миҙалдары ла бар. Шул ысынмы? — тип һорай Фәйзулла.

— Белмәгәс, күрмәгәс, әйтә алмайым, — тип яуаплай Мөхәмәт ағай. — Уны беҙҙән алданыраҡ алдылар. Уны, Шәрипов Сәмиғулланы, Мөбәрәкте. Мөбәрәк әйләнеп ҡайтты, пленда йөрөгән. Ә Сәмиғулла, бахыр, ҡайҙалыр башын һалды.

— Ул хәбәрһеҙ юғалды, — ҡыйыуһыҙ ғына был тауыш Исмәғилдеке, аслыҡтан хәл ала башлаған малайҙыҡы.

— Дөрөҫ, энекәш, хәбәрһеҙ юғалды. Һин уның улымы әллә? Атайыңа тартҡанһың шул. Һәйбәт егет ине атайың.

— Мөхәмәт ағай, «хәбәрһеҙ юғалған» нисек була ул? Юғалған ғынамы, үлмәгәнме, иҫән ҡалыуы ла ихтималмы? — тип һорай Нәсимә апай.

— Эйе, шулайыраҡ инде. Һуғышта аңлашылып бөтмәгән нәмәләр күп. Мәҫәлән, берәй алыштан һуң Иванов, Петров юҡ. Барлағанда таба алмайҙар. Писарь быны өйөнә «Батырҙарса һәләк булды» тип яҙа ла ебәрә. Ә ул үлмәгән, яраланған ғына, йүнләп эҙләмәгәндәр. Шулай килеп сыға: кеше тере, ә өйгә ҡара ҡағыҙ килә. Һөжүм барғанда, ярай, яраланһаң — санитарҙар таба ла медсанбатҡа оҙата,

үлһәң — похорон командаһы ерләй, документтар буйынса ҡайһы частан, ҡайҙан саҡырылғанын беләләр. Бына сигенгәндә ҡыйын. Яраланып йығылдың, иптәштәрең үҙҙәре менән алманы, йәки тирә-яҡта алырҙай кеше юҡ — бына шунда хәбәрһеҙ юғалаһың да инде. Ҡайһы саҡ шулай ҙа була: снаряд телгеләп ташлай йәки окопҡа күмелеп ҡалаһың. Минең үҙемде лә саҡ танк һытманы бит. Һөжүмгә күтәрелдек, немецты беренсе траншеянан бәреп сығарҙыҡ, алда әллә күпме траншея, дот... Башты ҡалҡытырлыҡ та түгел — аталар. Ә командирҙар алға, тик алға барырға бойора, йәнәһе, дошманға аңдарына килергә мөмкинлек бирмәйек. Ҡалҡынғайным ғына — шаҡ! — килтереп бәрҙе, утын ағасы менән тондорҙолармы ни! Ҡараһам, ҡулды селпәрәмә килтергән, терһәк ҡан тамырҙарында, һеңерҙә генә аҫылынып тора. Ауыртыуын тойорға ла өлгөрмәй ҡалдым, йығылдым да иҫте юғалттым. Уянып китһәм, тирә-яҡта шау-шыу, тауыш, башты ҡалҡытһам — эргәмдә генә беҙҙең взвод егете Никишкин Коля ята. Иҫән ҡулым менән төртәм, тереһеңме, тим. Яуап бирмәй, ыңғыраша. Бына бер мәл яҡында ғына танк тауышы ишетелә. Баҡһаң, немец танкыһы туп-тура беҙҙең өҫкә килә, иҙергә килә. Һуғышта ҡурҡыныс мәлдәр күп, әйтәйек, бомбежка аҫтында ҡалаһың, мина утына эләгәһең, әммә ҡара тәреле танк килеүҙән дә ҡурҡыныcыраҡ нәмә юҡ. Ярай әле, траншеянан алыҫ түгелбеҙ, төбөнә төшөп ятһаң, ҡотолорға була. Нисек тә шыуышып барып өлгөрөрмөн, ә йәш егетте нишләтергә һуң? Ҡалдырып китһәң, йәл. Танк эргәлә генә, анау ҡайынға тиклемге арала. Мин Никишкинды окопҡа этәм, түмәр кеүек әйләндереп төшөрәм. Яралы ҡул ҡамасаулай, ҡанға буялып бөттөм. Егетте траншеяға төртөп төшөрҙөм дә, гусеница аҫтында ҡалдым инде тигәндә, өҫтөнә шыуышып төштөм. Танкының беҙҙең яҡҡа үтеп киткәнен, өҫкә тупраҡ ишелгәнен, күмелгәнебеҙҙе генә иҫләйем, артабан йәнә иҫемде юғалттым. Уянып тирә-яғыма ҡараһам, янымда аҡ халатлы санитарка баҫып тора. Тимәк, санбаттамын, тип уйлайым. Һуңынан, операциянан һуң, иҫ ҡайтҡас, сестранан, мине нисек килтерҙеләр, тип һораным. Машина менән, ти. «Минең менән йәш һалдат Никишкин бар ине, ул ҡайҙа?» — «Белмәйем, унда бит һеҙ күп инегеҙ, фамилияларын һорап тораһыңмы? Һиңә нисә йәш?» — «Егерме биш». — «Йәш кенәһең, ә сәстәрең уже ап-аҡ». Аптыраным. Аяҡҡа баҫып йөрөй башлағас, бераүҙән көҙгө ярсығын алып ҡараһам, сәстәрем, ысынлап та, ап-аҡ!

Ә Никишкинды күрә, осрата алманым. Бәлки, үлгәндер, бәлки, икенсе палатала ятҡандыр ҙа, тылға минән алдараҡ оҙатҡандарҙыр...

Мөхәмәт ағай кипкән ойоҡтарын кейҙе, һыңар ҡулы менән сарыҡтарының олтораҡтарын ҡыйын итеп һала башлағайны, мин ярҙамлаштым, сарыҡтарын да кейҙерешеп, бәйҙәрен тартып бәйләп ҡуйҙым.

— Рәхмәт, Әминә,— тине ул, шунан Исмәғилгә боролдо.— Бына шулай энекәш, һинең атайың терелер ҙә, сит яҡтарҙа ҡаңғырып йөрөп яталыр, бәлки, ҡайтып та килер. Ярай, малайҙар, ҡыҙҙар, һеҙҙең менән һөйләшеп ултырыуы күңелле, шулай ҙа таң атҡансы саҡ ҡына серем итеп алайым.

Ул өйгә инеп киткәс, мин малайҙарға:

— Ну, һеҙгә лә йоҡларға ваҡыт, иртәгә байрам түгел,— тинем.

Малайҙар артынан ҡарттар ҙа йоҡларға ҡуҙғалды. Ут янында мин, Фәүзиә, Хәлиҙә апайҙар ғына тороп ҡалдыҡ. Нәсимә апай ҙа китте, арыным, күҙ йомолоп бара, тине. Бөтә звеноның сарыҡтарын ямап, тегеп ултырабыҙ. Уларҙың исеме генә сарыҡ, барыһынықы ла йыртылып, тишелеп бөткән. Рауилдыҡының үксәһе айырылып сыҡҡан, олторағы төшөп бара, Рәшиттеке шул ҡәҙәре туҙған — ҡайһы еренән тотоп рәткә килтерергә лә белеп булмай, Зәкиҙекенең ҡуңыстары бөткән. Башҡаларҙыҡы ла шулай. Усаҡҡа утын ташлайбыҙ, ул тағы шәберәк яна башлай, ялҡын телдәре бейеккә күтәрелә, беҙгә йылыһын күберәк бирә. Ә артыбыҙҙа — һыуыҡ, күҙгә төртһәң дә күренмәҫлек ҡараңғылыҡ. «Ҡулъяулыҡтар сигәм, бүләк итер кешеһе юҡ, яратҡан йәрең булмағас, һыҙыла йөрәк»,— тип ебәрҙе Фәүзиә апай. Нәсимә апай кеүек, уға ла егерме йәш. Аҡ йөҙлө, һирәк ҡара сәсле, балаларса ябай, ҡыйыуһыҙ, ябыҡ был апай нисектер өркәк, хатта сирле кеүек тойола миңә, шунлыҡтан мин уны йәлләйем. Хәлиҙә апай кәүҙәгә бәләкәй, ҡарағусҡыл йөҙлө, йәмһеҙ, шул уҡ ваҡытта ифрат тыңлаусан, еңел һөйәкле. Ул гел генә йылмайып йөрөй, барыһы менән дә ихлас һөйләшә, барыһы ла уны үҙ итә. Хатта бригадир Камал да уға ҡысҡырмай.

Беҙ шым ғына Фәүзиә апайға ҡушылдыҡ, мин кейәүгә сығырға йыйынған ҡыҙҙарҙың ҡышҡы оҙон кистәрҙә кемдеңдер ҙур өйөндә эҫе итеп яғылған мейес янында ултырмаға йыйылғанын, уларҙың туй күлдәктәре әҙерләгәнен иҫемә төшөрҙөм. Кейәү егетенә бүләктәр — мамыҡ

шарфтар, бирсәткәләр, ҡулъяулыҡтар, тәмәке янсыҡтары, күлдәктәр. Сарыҡтар өсөн йөн ауҙар — аймаҡ бала-сағаһына еңгә бүләктәре. Балдыҙҙар өсөн алъяпҡыстар, һыу юлы күрһәткән еңгәләр өсөн күкрәксәләр... Һәм бына усаҡ янында иҫке бишмәттәр кейеп, яулыҡтарын әбейҙәр ише күҙҙәренә үк төшөрөп бәйләп, бөгөн тотоп кейәүгә бирерлек ҡыҙҙар ултыра — (хәҙер яусы ҡарсыҡтар юҡ, беҙҙең ауылда һуғышҡа тиклем бер ҡыҙ ҙа егермегә тиклем тормошҡа сыҡмай ҡалмай торғайны) — серегән күрән, тир еҫе аңҡытып, сарыҡ рәтләйҙәр. Юҡ, кейәүҙәрен көтөп алаһы түгел уларға. Һуғышҡа алынған егерме беренсе, егерме икенсе, егерме өсөнсө, егерме дүртенсе, егерме бишенсе йылдарҙа тыуғандар араһынан ауылға бармаҡ менән генә һанарлыҡ егеттәр әйләнеп ҡайтты, улары ла зәғиф, яралы. Беҙҙең аймаҡтан ғына ла Зәйнетдин, Мәхмүт, Шәмсетдин, Мождаба, Барый ағайҙар ҡайта алманы. Ҡыҙҙарҙың йомшаҡ, йылы ҡулдары әҙерләгән ул бүләктәр һандыҡ мөйөштәрендә ятып сереүгә дусар...

Ҡыҙҙарҙың йоҡоһо килә, күҙҙәре йомолоп, баштары күкрәктәренә төшөп бара.

— Бар, йоҡлағыҙ, — тим. — Әхмәтйәр олатайҙың һыңар сарығы ғына ҡалды, үҙем ямап бөтөрмөн.

Ҡыҙҙар өйгә инде, усаҡ янында яңғыҙым ҡалдым. Әлеге сарыҡты ямайым һәм татлы йоҡо яҡынлашҡан аралаш төндөң өн-тауыштарына ҡолаҡ һалам. Артымдағы ҡараңғылыҡта аттар бесән кетерләтә. Яткан үгеҙҙәр ауыр һулай. Мүкле һаҙ яғынан әллә берәй ҡоштоң, әллә берәй йәнлектең сәйер ҙә, ҡурҡыныс та тауышы ишетелеп ҡала. Яҡын һәм аңлайышлы, алыҫ һәм аңлайышһыҙ ошо өн-тауыштарҙан тыш, төн йөҙөндә йәнә лә бер саҡ-саҡ ҡына ишетелгән ауаз бар. Ошо ауазда ниндәйҙер хәүеф, хатта янау яңғырап китә һымаҡ. Ҡолаҡта шаулаған ҡан тауышын ишетәмдер, бәлки? Ҡапыл таныш тауыш тота ҡолағым, ул да булһа арба шығырлауы — Сурағол юлы буйлап йәнә ҡайһыһылыр килә. Шығырлау яҡынайғандан-яҡыная, өй яғына ыңғайлай. Төн уртаһында кем йөрөй икән тағы? Боролоп ҡараңғылыҡҡа текәләм дә ут яҡтыһында ат башын шәйләйем, ир кешенең «тпру» тигәнен ишетәм. Усаҡ янына башына бүрек, аяғына итек кейгән, киң һалдат ҡайышы менән билен быуған кеше килә. Шинеленең салғыйҙары һыу.

— Һаумы, һеңлекәш! — Ир кешенең кәйефе юҡ. Йөҙө һытыҡ. — Бына бәлә, саҡ батманым, теге яҡҡа сыҡҡанда

һыу арба күсәренән генә ине, был яҡҡа йөҙөп тигәндәй сыҡтым.

— Соҡорға төшкәнһегеҙҙер.

— Ҡайҙа төшкәнмендер, белмәйем, ат булмаһа, бөткәйнем. Районға барҙым. Ҡатын больницала ята. Ураҙҙа йоҡларға кәрәк булған да бит, ҡабалан: балалар өйҙә үҙҙәре генә. Ҡаҙаҡколдан мин.

Төнгө ҡунаҡ ут янына сүгәләне, итектәрен сисеп, һыуын түкте, лысма һыу сылғауҙарын һыҡты, уларҙы йәпле ағасҡа элеп ҡуйҙы. Ҡайышын ысҡындырып пальтоһының салғыйҙарын һирпеп ебәрҙе лә усаҡҡа яҡынraҡ килде.

— Утты күрҙем дә, ҡайҙа, мәйтәм, кибенеп китәйем әле, әтү, юл йыраҡ, төн һалҡын,— ирҙең йөҙө Ҡаҙаҡкол башҡорттарыныҡы ише яҫы.

— Кем ҡыҙы булаһың?

— Миңлебайҙың.

— Магазинда эшләгән Миңлебаймы?

— Эйе.

— Беләм. Яҡшы кеше ине. Үлгән, тип ишеткәйнем, шул дөрөҫтөр? Йәш ине бит әле. Нимәнән үлде һуң?

— Чахотканан.

— Ой, был чахотка,— ул шулай тине лә тынып ҡалды.—Ауылығыҙҙа һуғыштан иҫән ҡайтыусылар бармы? Уҡытыусы Насиров ҡайттымы? Беҙ уның менән бергә алынғайныҡ.

— Насиров ағай һәләк булған.

— Ә Рәхмәтулла? Мортаза?

— Рәхмәтулла ағай ҙа ҡайтманы, Мортаза аяҡһыҙ ҡайтты. Ислам ағай, хәҙер ул беҙҙең председатель, бөкрө Мөбәрәк ағай, Хәйбулла ағай ҡайтты.

— Хәйбулланы беләм. Һуғышҡа тиклем ауыл Советы председателе ине. Яҡшы кеше.

— Ул хәҙер парторг. Мөхәмәт ағай ҙә иҫән-һау, ул әле ошо өйҙә, йоҡлап ята, тағы Камал ағай...

— Ниндәй Камал? Фамилияһы Абдрахманов түгелме?

— Эйе, Абдрахманов.

— Оҙон? — Төнгө ҡунаҡ ҡулдарын йәйеп ебәрҙе.

— Беҙҙең ауылда бер генә Камал.

— Туҡта, нисек була инде? — Ят кеше аптыраны, аяғына баҫты, ул хатта кемдәндер ҡурҡҡандай ҙа тойолдо.— Бәй-бәй, мин уны күптән атҡандарҙыр тип уйлағайнымсы.

Мин уға ғәжәпләнеп, ышанмай ҡараным, «атҡандарҙыр» тигәненең мәғәнәһенә һис төшөнә алманым.

— Ул хәҙер беҙҙең бригадир.

— Етмәһә, бригадир, түрә! Нисек улай килеп сыҡты һуң? — Ағай ҡапыл сүгәләне, ҡулдарын эйәгенә ҡуйып, утҡа текәлде, ул, күрәһең, нимәлер уйлай, иҫенә төшөрә ине, унан асыу менән шәп-шәп һөйләй башланы. — Ул бәндә — беҙҙең дошман, үҙе теләп пленға бирелде, немецтарға хеҙмәт итте, лагерҙа охранник булды!

Шаңҡып ҡалдым, йөрәк, алда ниндәйҙер ваҡиға буласағын һиҙенеп, дарҫлап тибергә кереште. Ә аҡыл ҡолаҡ ишеткәнде һис ҡабул итә алманы: беҙҙең ауыл кешеһе, дүртенсе бригада бригадиры Камал ағай — лагерь охранниғы...

Төнгө ҡунаҡ тынды, ҡапыл ғына ҡартайып киткән йөҙөн ҙур ҡулдары менән һыпырып, теш араһынан шундай һүҙҙәр һығып сығарҙы:

— Ул сволочь, нисек ҡайта алды икән һуң? Уны нисек үткәргәндәр беҙҙең яҡҡа?

Һәм ҡабаланып итектәрен кейә башланы. Кейҙе, һынын турайтты, биленә ҡайышын быуҙы, шунан миңә, бөтөнләй таныш булмаған ҡыҙға, балаға, Камал тураһында әйткән һүҙҙәренән үкенгәндәй, тыныс ҡына былай тине:

— Ә һин, һеңлекәш, мин һөйләгәндәрҙе пока бер кемгә лә өндәшмәй тор. Был — бик етди мәсьәлә. Һыу саҡ ҡына ҡайтыу менән районға, военкоматҡа, барам. Һин мине күрмәнең, ишетмәнең. Аңланыңмы? Ярай, иҫән бул!

Ул атын борҙо ла ҡараңғылыҡҡа кереп юғалды. Күпмелер ваҡыт юлда арба тығырлауы ишетелеп торҙо. Мин йәнә ҡараңғы төн солғанышында ҡалдым. Барыһы ла күҙгә күренде генә һымаҡ: ҡараңғылыҡ эсенән ат, сәйер кеше килеп сыҡты ла, усаҡ янына сүгәләп, миңә ҡурҡыныс төштәрҙә генә керә торған хәбәр һөйләп, кире ҡараңғылыҡҡа кереп сумды. Мин ныҡ өшөгәндәге ише ҡалтырана башланым. Өйгә индем, бөркәнеп йылынырға, йоҡларға ниәтләндем, тик йылынып та булманы, күҙгә лә йоҡо ҡунманы.

Элек тә мин бригадирҙың кешеләргә булған аҫтыртын дошманлығын, аҫтыртын ҡарашын тойған һымаҡ инем — яуыз фашистан башҡа кемдең шулай килешле танаулы, алһыу йөҙө, йоҡа ирендәре, һөмһөҙ, шул уҡ ваҡытта төпкә батырылған шиксел, ҡурҡаҡ күҙҙәре булыуы мөмкин һуң?! Бына мин уны уйымда фашист формаһына «кейен-

дерәм»: күҙҙәренә ҡәҙәр батырып кейгән иҫке кепка урынында — бейек фуражка, өҫтөндә — йөндәре сығып йөрөгән бишмәт, ямаулы салбар түгел, беләгенә ҡара свастика төшөрөлгән, затлы буҫтауҙан тегелгән сөм ҡара мундир, аяғындағы сарыҡтар урынына — бейек ҡуныслы яңы итектәр — былар барыһы ла уның алға эйелеберәк йөрөгән һонтор кәүҙәһендә килешһеҙ ултыра. Шунан бригадирҙы йәнә үҙенең иҫке-моҫҡоһона, уңған кепка, тирле бишмәт, йыртыҡ сарыҡтарына «кейендерәм» дә үтеп барыусы төнгө кешенең һөйләгәндәренең ысынлығына шикләнә башлайым. Эйе, Камалды былай ҙа күркәм кеше тип әйтеп булмай: бураҡы, бур, төрмәлә ултырған, эсә, һуғыша, шулай ҙа кулак түгел, ябай ир, колхозсы, барыһы һымаҡ, уның да әсәһе, ҡатыны, балалары бар. Мин тормошто ла, кешеләрҙе лә аңламайыммы әллә? Кешенең тышҡы ҡиәфәте менән тура килмәгән ҡатлы-ҡатлы күңелдәрендә нимә барлығына һис төшөнөрлөк түгел.

Таң алдынан ғына ойоп киткәнлектән, ҡот осҡос төш күрҙем. Ослобейек тау яғынан беҙҙең ауылға немецтар һөжүм итеп килә, имеш. Улар нисек Уралға тиклем килеп етә алдылар икән һуң, тип аптырайым үҙем. Дошман һөрөлгән ҡара баҫыу өҫтөнән бер иңкеүлеккә төшөп, бер ҡалҡыулыҡҡа күтәрелеп, тулҡын-тулҡын булып килә. Баш остарына һаҫыҡ туҙан болото күтәрелә. Тауҙар артынан бер нисә урында ҡара төтөн шәйләнә — Сурағол, Байрамғол, Ҡолой, Ҡотой ауылдары, совхоз яна. Дошмандың был ҙур ғәскәрен бригадир Камал алып килә. Тәүҙә мин бригадирҙың ундалығын белмәнем, абайламаным: колонна яҡынлай төшкәс, ҡалҡыулыҡҡа күтәрелгәс кенә, таныным. Ҡара мундирының түшендә тәре, һәр ваҡыттағыса салыш атлай, ныҡ алға эйелеп һәм сыбыртҡыһын һөйрәп килә. Мышағыр битендә, һөрөлгән ҡара баҫыуҙа, беҙ — икенсе звено, нигеҙҙә, малайҙар һәм ҡыҙҙар, бала-саға, ике ҡарт — ерҙе соҡоп үҙебеҙгә окоп эшләйбеҙ. Артта — беҙҙең ауыл. Унда ҡатындар, балалар, ҡарттар, минең өләсәй. Бөтә өмөт беҙҙә, тик беҙҙә. Был ҡара яуҙың беҙҙе еңәсәген, ҡара ерҙә һытып китәсәген беләбеҙ, аңлайбыҙ — минең йөрәктә, беҙҙең йөрәктәрҙә ысын ирҙәрсә һәләк булыу тойғоһон һиҙемләү бар. Үҙебеҙҙең бер ҡасан да сигенмәйәсәгебеҙҙе, һуңғы тамсы ҡаныбыҙ ҡалғансы һуғышасағыбыҙҙы яҡшы беләм...

## 9

Урал аръяғында көн боҙолдо. Ҡап-ҡараңғы, дымлы ауыр күк шул ҡәҙәре аҫҡа төштө — Ослобейек тауҙың да, Мышағырҙың да түбәләре күренмәй башланы. Һыуытты, баҫыу өшәнес бер урынға әйләнде. Һабантурғайҙар һайрауҙан туҡтаны. Ҡара ҡарғалар нисектер көҙгөсә һағышлы ҡарҡылданы, асылырға торған ҡайын бөрөләре кире йомолдо.

Беҙ Ҡайын сауҡалығына алып бара торған юлға яҡын ерҙә сәсәбеҙ, былтыр һөрөлмәй ҡалған Сурағол юлы буйын һөрә башланыҡ.

Фәүзиә апай орлоҡ артынан ҡайтҡанында (Яйыҡ ярҙарына төштө, хәҙер ауыл яғына ҡурҡмай сығып йөрөп була) орлоҡ ҡына түгел, яңылыҡтар, ләстит хәбәрҙәр ҙә килтерҙе. Бөтә ауыл, Камал менән Нәсимә йөрөй, тип һөйләй икән. Ә бригадирҙың ҡатыны Зарифа еңгә баҫыуға килергә һәм үҙенән ирен, балаларынан атаһын тартып алырға ниәтләнгән Нәсимәнең сәсен йолҡҡоларға, битен тырнарға йыйына, ти. Ысын булһа, ауылға ҡайтмаһын, күҙемә күренмәһен, тип әйткән, имеш.

Киске яҡҡа еүеш ҡар ҡатыш боҙ төштө. Ғәлиулла ҡарттың аяҡтары һыҙланы. Өшөп-ҡалтыранып беҙ ут янына йыйылдыҡ, йоҡларға ла бер-беребеҙгә терәлешеп яттыҡ, ябынған юрған, тун, пальтолар өҫтөнән һалам һалдыҡ. Иртәнсәк мин өшөп, тирә-яҡта ниндәйҙер яңылыҡ тойоп уяндым — тышта ифрат тын һәм һил ине. Торҙом, ишекте астым да саҡ ҡысҡырып ебәрмәнем — бөтә ер ап-аҡ! Төнөн ҡар яуған, әйтерһең дә, ҡыш әйләнеп килгән, тик ул ҡышҡы ҡар һымаҡ аҡ түгел, ә зәңгәрһыу. Ҡайындарҙы аҡ мәрйендәй эре ҡар бөрсөктәре һырыған, сибек, кескәй йәшел япраҡтар бөрөшкән. Ә ҡар бөрсөктәре әллә үҙҙәренең ауырлығынан, әллә һауа һелкенеүенән ботаҡтарҙан ысҡынып, ағас аҫтында күпереп ятҡан зәңгәрһыу мамыҡҡа төшә. Кисә генә аҫта йөҙгән болоттар күтәрелгән, ҡатҡан, ойошҡан, улар артынан сығып килеүсе ҡояштың нурҙары күренә.

— Ҡар яуған! — тинем мин барыһы ла ишетерлек итеп.

Малайҙарҙың ҡайһы берҙәре ҡуҙғалып ҡуйҙы, әммә берәү ҙә торманы. Быларҙы уятырғамы, әллә бер аҙ йоҡлаһындармы? Ҡуҙғатмаҫҡалыр, сөнки бынау ҡарҙа һөрөп тә, тырмап та, унан да бигерәк сәсеп тә булмай. Тәбиғәт беҙгә ял бирҙе. Ғәлиулла олатай менән Хәлиҙә апай ғына ҡал-

ҡынды. Ғәлиулла олатай һәр ваҡыт барыһынан да алда тора, ә Хәлиҙә апайға иртәнге тамаҡҡа әҙерләргә кәрәк.

— Эт йылы, шуға ла һыуыҡ килә, — тип һөйләнә Ғәлиулла олатай. — Яҡшыға был. Ҡары ла, ямғыры ла файҙаға. Ерҙә дым күп буласаҡ. Ә был ҡар оҙаҡ ятмаҫ, ямғыр ашап бөтөрөр.

— Бөгөн эшләмәйбеҙме? — тип һорайым мин Ғәлиулла олатайҙан, малайҙарҙы торғоҙорғамы, әллә уятмаҫҡамы икәнен һаман хәл итә алмайынса.

— Бына нимә, ҡыҙым, — тип яуаплай Ғәлиулла олатай. — Берәйһен ауылға ебәр, мунса яҡһындар, юҡһа барыбыҙ ҙа керләнеп бөттөк, йыуынғы килә. Минең һаҡал да етеп китте, ҡайтҡас әбей танымай ҙа торор инде. Иртәнгене ашарбыҙ ҙа ҡайтырбыҙ. Ҡарҙа эшләрлек түгел.

Мин ат ҡараусы Нәжипте уяттым да ауылға ебәрҙем: беҙҙең звенола кемдең яланда эшләгән кешеһе бар, шулар мунсаларын яғып, сәсеүселәрҙе көтһөн, ҡайтабыҙ, тип әйтергә ҡуштым. Хәлиҙә апай өйрә өлгөрттө, барыһы ла йәһәт кенә ашаны ла ике арбаға тейәлешеп ҡайтырға ҡуҙғалды. Минән, Нәсимә апайҙан башҡалары.

Мин үгеҙҙәр менән аттарҙы, унан да бигерәк сәсеү орлоғон ташлап китә алмай инем, ә Нәсимә апай Зарифа еңгәнән ҡурҡты. Ғауға сығарасаҡ, бөтә ауылға рисуай итәсәк, ҡайтып тормайым, тине. Уның ҡалыуына мин шат инем. Эшһеҙ ваҡыт ифрат оҙаҡ үтә икән, нишләргә, нимәгә тотонорға белеп булмай ҙа ҡуя. Усаҡ янында ултырҙыҡ, үҙебеҙҙең сарыҡтарҙы ямап кейҙек, бер-беребеҙҙең баштарын ҡараштыҡ. Нәсимә апай тора-тора ла шул бер хәбәрен ҡабатлай: Камал уға һаман бәйләнә, эҙәрлекләй икән. Алдарға, мыҫҡыл итергә самалай. «Шуның бәйләнеүҙәрен күргәнсе, һалға китһәм, яҡшыраҡ булыр ине», — ти ул.

Сәғәт ундарға ҡояш күренде, һәм осраҡлы яуған епшек йылы ҡар күҙгә күренеп ирей башланы. Баҫыу тиҙ арала ала-солаға әйләнде, ҡалҡыулыҡтар әрселде, баҫыу өҫтөнә һабантурғайҙар ҡайтты. Нәсимә апай эшһеҙ ултыра алмай ине. «Бесәнгә барып ҡайтайым әле», — тине лә оҙон арбаға ерән бейәне егеп Аҡбай шишмәһенә китте. Төш ауып байтаҡ үткәс кенә әйләнеп ҡайтты. Уның ҡайтыуына мин бер аҙ өйрә бешереп ҡуйҙым. Бесәнде бушатып, ашарға ултырырға ғына тора инек, күпер яғынан Әхмәтйәр олатайҙың килгәне күренде. Был ҡарт ниңә ял итеп өйҙә ултырмай икән, эште һағынып та өлгөргәнме, тип уйланым тәүҙә, унан, килһен, беҙгә төндә күңелһеҙ булмаҫ, дөрө-

çөрәге, ҡурҡыныс булмаç, ҡарт булһа ла, ир кеше бит әле, тинем дә һөйөнөп ҡуйҙым.

— Мунсанан һуң нимә тип киләһең инде, бабай? — тим. — Башҡалар менән килер инең әле.

— Э-э, учетчик ҡыҙым, өйҙә яңғыҙым нишләп ултырайым? Ҡарсыҡ юҡ, ашарға юҡ. Минең паек бында, баçыуҙа. Ҡана, минең өлөштө лә бешереп бир әле.

Бына нисек, ҡарт үҙенең өлөшөн ашарға килгән икән.

Шулай үтте көн. Киске яҡҡа ҡар иреп бөттө. Эңерҙә усаҡ яғып бер аҙ ултырҙыҡ та йоҡларға яттыҡ. Әхмәтйәр олатай — стена яҡлап ситтә, дөрөçөрәге, иң төптә, Нәсимә апай менән беҙ бергә, бер одеял аçтында. Әҙерәк шыбырлаштыҡ та тындыҡ. Нәсимә апай тиҙҙән йоҡлап та китте, мин дә ойоп ҡына бара инем, ишетәм: өй янына арба килеп туҡтаны: «Тпру!» Тауышын шундуҡ таныным: Камал. Төнгә ҡарай нимә эшләп йөрөй икән?

Атын туғарҙы, өйгә инде.

— Бәй, уже йоҡлайһығыҙҙамы ни? Иртә ятҡанһығыҙ. Бөгөн мин дә бында ҡалырға булдым әле. Тегеләй-былай йөрөп ялҡтырҙы.

Һәм ул һалам шытырлата башланы — Әхмәтйәр олатай менән беҙҙең арағa ятмаҡсы.

Нәсимә апай уянды ла ҡолаҡҡа шыбырлай:

— Әминә, ҡайҙа һинең теге яғыңа ятайым. Ҡурҡам.

Оҙаҡ йоҡламай яттыҡ: тынлыҡты, бригадирҙың тын алғанын, йүткергәнен тыңлап. Ҡапыл миңә фашист менән бер окопта йәки блиндажда ятабыҙ һымаҡ булып китте (Фронтта ундай хәлдәр ҙә булды, тип һөйләнеләр), һәм беҙ, бер-беребеҙгә дошмандар, тынлыҡта һаҡ ҡына бер-беребеҙҙе күҙәтәбеҙ... Ята торғас, бригадир хырылдай башланы. Оҙаҡламай мин дә йоҡлап киткәнмен. Әллә өшөп, әллә ниндәйҙер тауышҡа, хәүефле тауышҡа уяндым. Өй тәҙрәһендә ҡараңғылыҡ шыйығайған. Эргәмдә Нәсимә апай юҡ. Камал да юҡ. Ҡолаҡтарҙы ҡарпайтып тыңлайым. Тышта Нәсимә апайҙың борсоулы тауышы ишетелә:

— Камал ағай, ебәр, ебәрмәһәң, ҡысҡырам!

Бригадирҙың нимә тигәнен һис аңларлыҡ түгел: бу-бу-бу-бу.

— Әминә, Әхмәтйәр бабай! — Баçынҡы ғына, үтә ышанысһыҙ сыға тауышы Нәсимә апайҙың.

Минең йөрәк дарçлап тибә башланы, тамаҡ кипте. Одеялды һирптем дә Әхмәтйәр олатайҙы һелкетергә тотондом.

— Әхмәтйәр бабай, уян, Камал Нәсимә апайға бәйләнә.

— Йоҡла, учетчик ҡыҙым,— тип яуаплай ҡарт тыныс ҡына, тауышы ла йоҡоло түгел, тимәк, йоҡламаған, бөтәһен дә ишетеп ятҡан.— Һин бәләкәйһең әле, ундай эштәргә ҡыҫылма. Улар оло кешеләр, үҙҙәре белә.

Бына һиңә кәрәк булһа! Мин, ҡарт шундуҡ һикереп торор ҙа Нәсимә апайҙы бәләнән ҡотҡарырға ташланыр, тип уйлаған булам. Тимәк, минең үҙемә һуғышырға ҡала Камал менән. Һәм мин, ун алты йәшлек ҡыҙ, үҙемдән дүрт йәшкә олораҡ ҡыҙҙы яҡлау теләге менән ярһып өйҙән атылып сығам. Күрәм: ҡайындар янындағы бесән өҫтөндә Камал Нәсимә апайҙы ойпалай. Улар ерҙә көрмәкләшкән малайҙар кеүек көрмәкләшә. Камал — көслө, йәш ир — Нәсимә апайҙы еңә бара.

— А ну, туҡта, нимә эшләйһең? — тип ҡысҡырып ебәрҙем мин, бөтә тәнем менән ҡалтырана-ҡалтырана. Камал ялп итеп боролоп ҡараны, аяғына баҫты ла миңә текәлде: йөҙө ҡурҡыныс, нисектер ят, әшәке ине.

— Өнөңдө тыҡ, сволочь! — тип ҡысҡырып ебәрҙе ул. Йөҙө асыуҙан салышайып китте.

— Китмәйем, уйлама ла!

Камал арбаға ташланды, шунда ятҡан дуғаны эләктерҙе лә күтәреп башыма киҙәнде... Ҡапыл мин уны фашист формаһында «күрҙем»: ҡара форма нәҙек оҙон кәүҙәһендә бик килешле ултыра. Мин, иҫке, бысраҡ пальто кейгән, ялан аяҡлы ябыҡ ҡына ун алты йәшлек ҡыҙыҡай, бала, вәхши дошман алдында баҫып торам, минең баш осомда дуға түгел, ә күкрәгемә ҡара көбәкле автомат тоҫҡалған. Һәм үҙемде ҡапыл һуғышсы итеп тойҙом. Мин бит әүәл-әүәлдән һуғышта ҡатнаша алмағаныма, дөрөҫөрәге, ҡатнашыр өсөн һуңыраҡ тыуғаныма йыш ҡына үкенә торғайным. Иртәрәк тыуһам, беҙҙең уҡытыусы Миникамал апай кеүек, мин дә медсестраға уҡыр инем дә һуғыш яланынан яралы һалдаттарҙы сығарыр йә радистка булып парашют менән дошман тылына һикерер инем. Бәлки, Зоя кеүек батырҙарса һәләк булыр инем... Ә дошманым менән барыбер ҙә осраштым. Йөҙгә-йөҙ осрашыуым ысын һуғыш яланында түгел, ә иген баҫыуында.

— Үлтерәм! — тип ысылдай «фашист».

Хәҙер ул атасаҡ. Мин унан алдараҡ өлгөрөргә тейеш. Ҡулымда — автомат. Мин алдараҡ атырға тейеш. Хәйер, ҡулымда бер ниндәй ҙә автомат юҡ. Минең һүҙҙәрем генә бар, уны үлтереү дәрәжәһенә еткерерлек хаҡ һүҙҙәрем... Һәм мин тауышыма тимер сыңы һалып ҡысҡырам:

— Охранник! Фашист! Үлтереп кенә ҡара!

Һәм мин уны атып йыҡтым. Мин ҡаршымда ап-аҡ маска, ап-аҡ баш һөйәге күрҙем — бәләкәй күҙ урындарында ҡырағай ҡурҡыу шәйләнем. Дуғаһын күтәргән килеш ҡатты ла ҡалды, өйгә йүгереп инеп киткән Нәсимә апай артынан мин кергәндә лә ул шул килеш тора ине әле. Мин бөтә тәнем менән ҡалтыранам, тешем тешкә теймәй. Ә Нәсимә апай илай...

— Ай, Әминә, һин сыҡмаһаң, бөтә инем, мыҫҡыл итә ине. Рәхмәт һиңә, һис онотасағым юҡ, — ул, саҡ ҡына тынысланғас, былай тип дауам итте. — Сыҡтым шул тышҡа, йоҡлайҙыр тип уйланым, ә ул минең арттан... йыртҡыс кеүек ташланды... Һис ысҡынырлыҡ түгел... Һин ниндәй ҡыйыу икән. Ҡурҡманың. Ул хайуандың ысынлап үлтереп ҡуйыуы ла бар ине бит.

Күрәһең, Камалды нисек туҡтатыуымды ул аңламаған, бәлки, һүҙҙәремде ишетмәгәндер. Ә Әхмәтйәр олатай һаман ҡаты йоҡлаған кеше булып хырылдап ята. Тышта тынлыҡ. Оҙаҡламай Камал китте.

Иртәнсәк, ҡояш ҡалҡыу менән, Нәсимә апай менән таған аҫтына ут яғып ебәрҙек, бешерергә һоло өйрәһе ҡуйҙыҡ. Бер аҙҙан кешеләр килде: йыуынған малайҙар, таҙа күлдәкле ҡыҙҙар, Ғәлиулла олатай таҙа итеп ҡырынған — ун йәшкә йәшәреп киткән һымаҡ. Минең менән, Нәсимә апай менән төндә нимә булғанын, күңелемдә ниндәй ҡурҡыу, шул уҡ ваҡытта еңеү тантанаһы йөрөткәнемде бер кем дә белмәй. Бәлки, шуғалыр ҙа улар миңә ниндәйҙер икенсе, йыраҡ тормош менән йәшәгән һымаҡтар... Ашаныҡ, ҡояш саҡ ҡына күтәрелгәнен һәм ерҙе киптергәнен көттөк тә эшкә тотондоҡ.

Мин орлоҡ тултырылған тоҡтарҙы баҫыуға илттем, йәнә биҙрә менән әле бер ҡартҡа, әле икенсе ҡартҡа ташырға керештем. Ғәлиулла олатай бер ураны ла былай тине:

— Мунсанан һуң еңеләйткән һымаҡ ине лә, тағы ауырайтты. Эшләп китһәң, нисауа кеүек, саҡ ҡына ултырып алһаң, аяҡтар тыңламай ҙа ҡуя.

Ул тоҡ өҫтөнә ултырҙы.

— Мин сәсеп ҡарайыммы? — тим.

— Маташтырып ҡара, тик һәр эштә кәрәккән оҫталыҡ бында ла кәрәк. Орлоҡ тигеҙ, бер-бер артлы төшөп ятырға тейеш.

Елкә аша тырызды элдем дә баҫыу буйлап атлап киттем. Усыма һыйған ҡәҙәр орлоҡ алам да әле уң, әле һул яғыма

ҡайырылып һибәм, бер аҙым атлайым да йәнә һибәм. Юҡ, килеп сыҡмай, орлоҡ һибелмәй, гел бер тирәгә төшә, бер тирәлә ятып ҡала. Ҡайһы урында күп, ҡайһы урында бөтөнләй һирәк.

— Юҡ, улай сәсмәйҙәр, — ти Әхмәтйәр олатай уфтанып һәм һәр ваҡыттағыса үҙенең хәбәрен өҫтәй. — Эй-э, маңҡалар, ҡарттарһыҙ бер нәмәгә лә эшкинмәйһегеҙ шул.

Төшкә табан Ғәлиулла олатай шулай ҙа рәткә килде, элеккесә эшләй башланы, ялға һирәгерәк туҡтаны. Ул көн беҙҙең сәскән майҙан күп булмаһа ла, насар эшләмәнек.

Камал ағай күренмәне.

Кисен, өйрә ашағас, һәр көндәгесә бер аҙ усаҡ тирәләй ултырҙыҡ та өйгә инеп һаламға һибелдек,одеялдар, тундар, пальтолар ябындыҡ, әммә тиҙ генә әүен баҙарына китеп булманы: ҡыҙҙар шыбырлашты, Рауил малайҙарға әкиәт һөйләне. «Борон-борон заманда, кәзә генерал булғанда, әбей менән бабай йәшәгән, ти. Уларҙың булған, ти өс улы, өсөнсөһө иҫәр булған, шулай ҙа ике ағаһынан аҡыллыраҡ икән, һәм падишаһ ҡыҙын кәләш итеп алған...» Ҡапыл ишетәбеҙ: кемдер килде. Арба егеп түгел, һыбайлы. Камалдыр, моғайын. Ишекте асты ла тауышын бик күтәрмәй генә:

— Әминә, сыҡ әле, һүҙ бар, — тине.

Йөрәк дарҫлап тибергә тотондо, бар тәнгә һалҡынлыҡ йүгерҙе. Башҡа төрлө насар уйҙар килде. Ниңә төнө менән йөрөй, нимәгә саҡыра? Лагерь тураһында кешеләргә һөйләмәҫ элек ҡурҡытырға самалаймы? Бәлки, үлтерергә лә уйы барҙыр...

— Әминә, сыҡма! — тип шыбырлай ҡолағыма Нәсимә апай.

Нишләп мин унан ҡурҡырға тейеш һуң әле? Ул мине бер нәмә лә эшләтә алмай — шаһиттар күп. Ҡулы күтәрелмәйәсәк, ҡурҡасаҡ. Хәҙер ул үҙе минән ҡурҡа... Һәм мин йәнә һалдатҡа «әйләнеп», үҙемде аяуһыҙ дошманға ҡыйыу рәүештә ҡаршы барған итеп тойоп, шул уҡ ваҡытта берәй төрлө бәлә килеп сығыуынан ҡурҡа-ҡурҡа ишеккә атланым.

— Ситкәрәк китәйек, — тине Камал, мин ихатаға сыҡҡас.

Арба янына барҙыҡ.

— Әминә, һеңлекәш, — бригадирҙың тауышы тоноҡ, баҫынҡы, нисектер йылы, хатта ҡайғылы (ул минең менән бер ҡасан да былай һөйләшмәй торғайны), — һеңлем, кисә

һин миңә нимә тип ҡысҡырҙың ул? Минең турала ул хәбәрҙе кемдән ишеттең?

Өндәшмәнем. Дөрөҫөн әйткәндә, нисек яуап бирергә лә белмәнем, сөнки теге ағай хәҙергә бер кемгә лә әйтмәҫкә ҡушҡайны бит. Ләкин түҙмәнем, үҙ-үҙемде ҡулға ала алманым (хәл ниндәй ине бит), башҡа кешегә түгел, тап Камалдың үҙенә әйттем дә ҡуйҙым шул. Хәҙер, бер нәмә лә белмәйем, алданым, асыуҙан барыһын да уйлап сығарҙым, тиһәм, барыбер ышанмаясаҡ. Сөнки теге ағайҙың дөрөҫ әйткәне күренеп тора — Камал нисек ҡурҡты, ағарҙы, телһеҙ ҡалды ла ҡайтып китте бит. Мин дөрөҫөн әйтергә булдым.

— Ошонан үтеп барыусы бер кеше һөйләне. Мин кис ут яҡтыһында сарыҡтар ямап ултыра инем, ул эргәмә килде. Һыуланып бөткән, йылғаға саҡ батманым, ти. Өҫтөн, аяғын һалып киптерҙе, ауылығыҙҙан кемдәр иҫән ҡайтты, тип һорашты. Хәйбулла, Мөбәрәк, Мөхәмәт, Камал ағайҙар, тинем. Абдрахманов Камалмы, тине. Мин, эйе, тигәс, ул бит үҙе теләп пленға бирелде, немецҡа хеҙмәт итте, лагерҙа охранник булды, тине.

Мин тындым. Камал да өндәшмәне. Ҡараңғыла мин уның йөҙөн күрмәй инем. Һыуыҡ, өшөйөм, тиҙерәк өйгә инге килә, тик һис урынымдан ҡуҙғала алмайым, әйтерһең дә, Камал мине ниндәйҙер тылсымлы күҫ менән тотоп тора.

— Ул тағы нимәләр һөйләне?

— Һыу ҡайтыу менән районға барам, военкоматҡа керәм, тине.

Камал йәнә һүҙһеҙ ҡалды.

— Ниндәй ауылдан икәнен әйтмәнеме?

«Ҡаҙаҡҡолдан» тип саҡ ысҡындырманым. Ваҡытында тыйылдым: Камалдан барыһын да көтергә була, төрлө юлдарын табып, яуаплылыҡтан ҡотолорға тырышасаҡ. Теге кешене эҙләп табып өгөтләйәсәк, ошаҡламауын үтенәсәк, күндерә алмаһа, яйын табып үлтереп китеүе лә ихтимал. Ә мин беҙҙең ауылда һуғышта үлгәндәрҙең иҫтәлегенә төкөрөп, ғәҙел һуғышҡандар, яраланып, имгәнеп, ғәрипләнеп ҡайтҡандар, һалдат әсәләре, һалдаткалар араһында Камал һымаҡ хыянатсы кешенең йәшәүен һис теләмәйем.

— Ҡайһы ауылдан икәнен әйтмәне, — тип яуапланым мин.

Камал йәнә тынды, шунан йомшаҡ, хатта ихлас тауыш менән:

— Бар, кер, — тине.

Ул атына атланып китеп барҙы.

Мин өйгә индем, юрған аҫтына сумдым.

— Нимәгә саҡырған? — тип һораны Нәсимә апай шыбырлап ҡына.

— Кисәге хәлде бер кемгә лә һөйләмәгеҙ, Зарифа еңгәгеҙ белеп ҡалһа, эштәр хана, тине, — тип алданым мин.

— Шуға килгәндер тип уйлағайным да, — тине Нәсимә апай.

Иртәгәһенә Фәүзиә апай ауылға орлоҡ артынан ҡайтты һәм ҡот осҡос хәбәр алып килде: Камал аҫылынған! Үлеүен үлмәгән. Зарифа еңгә һәр ваҡыттағыса һуң ятҡан, йоҡоға китергә лә өлгөрмәгән — иренең ҡайтҡанын ишеткән. Тик тегеһе өйгә кермәй ҙә кермәй икән. Ята торғас, башына шик төшкән: бәлки, был Камал түгелдер, берәйһе ихатаға кергән дә урлашып йөрөйҙөр? Тышҡа сығып ҡараһа, Камал лапаҫ аҫтында тора. Ҡараңғыла бик күренмәй ҙә, нимә эшләй һуң ул: ергә ҡағып ҡуйған бағана ише ҡымшанмай ҙаһа! «Эй, нишләйһең унда?» — тип ҡысҡыра икән Зарифа апай. Яуап юҡ. Янына барһа, был арҡалыҡ менән аҫылынған — аяҡтары саҡ ҡына ергә тейә, тубыҡтары бөгөлгән, ҡайыш һыҡҡан муйыны һуҙылған, ҡулдары һәленгән. Зарифа еңгә юғалып ҡалмай, салғы алып, арҡалыҡты ҡырҡып өҙә, муйынынан сисеп ала ла ирен һелкетергә тотона. Аңына килә Камал, иҫе ҡайта. Зарифа еңгә саҡ ҡына һуңлаһа, бөгөн ауыл ирҙәре ҡәбер ҡаҙырҙар ине. Хәҙер ул һикелә стенаға текәлеп ята, ти, һөйләшмәй ҙә, урамға ла сыҡмай, ти. Ауылда, Камал Нәсимә өсөн аҫылынған, тип һөйләйҙәр. Йәнәһе, Зарифа еңгә уны өйөнә индермәгән, иң алама һүҙҙәр менән әрләгән, ә был иҫәр асыуынан, ғәрлегенән тоҡкан да башын элмәккә тыҡҡан.

Был хәбәр Фәүзиә менән Хәлиҙә апайҙарҙы, ҡарттарҙы нык уйға һалды, дөрөҫөрәге, аптыратты, ә мине тетрәтте. Иртәме, һуңмы Камалды ҡулға аласаҡтарын самалай инем, тик ул минән башҡа, минһеҙ генә буласаҡ, тип уйлай инем. Эйе, мин уны яратып етмәйем, шулай ҙа уға судья булғым килмәй. Мин ун алты йәшлек кенә ҡыҙ әле, бала, ауыр үс алыу ҡылысына хәлһеҙ ҡулдарымдың көсө етмәй. Теге саҡ ниңә генә әйттем икән? Дуға менән тондорһа, еңелерәк булыр ине... Серле төнгө юлаусы хаҡында әйтмәҫкә кәрәк булған. Элмәккә башын тығырын кем белһен инде. Хәҙер мин әллә үҙемде ғәйепле һиҙеүҙән, әллә ҡылған хатанан ҡурҡа инем...

Төш ваҡытында начальство килде: председатель Ислам ағай менән парторг Хәйбулла ағай. Ислам ағай уҫал түрә ҡарашы менән телеп үтте, шулай ҙа өндәшмәне. Хәйбулла ағай эш барышы менән ҡыҙыҡһынды. Мин, эш бара, беренсе звенонан ҡалышмайбыҙ, ҡамылды һөрәбеҙ, тиҙҙән бойҙайҙы тамамлайбыҙ, һоло сәсә башлайбыҙ, тинем.

— Маладистар! — тине ул тантаналы рәүештә. Шунан шым ғына өҫтәп ҡуйҙы: — Бында берәй тәртипһеҙлек булһа, тура үҙемә кил, тартынма. Ә Ғәлимә малайы ни хәлдә?

— Терелде. Һөт эсерҙек, уға ғына көлсә бешерҙек. Ат ҡараусыға ярҙамлаша.

Шунан улар ҡарттар янына барҙы, улар менән һөйләштеләр — Камал башын элмәккә тығырлыҡ бында нимә булды һуң, тип һоранылар, ахыры. Ғәлиулла олатай бер нәмә лә белмәй, Әхмәтйәр олатай ҡайһы бер нәмәләрҙе һиҙә, тик, үткән төндәге ваҡиғаларҙы түрәләргә һөйләгәндер, тип уйламайым, сөнки ҡарт ифрат хәйләкәр булып сыҡты. Уның шулайлығына һаман аптырап йөрөйөм. Хәйер, Камалдың холҡон председатель дә, парторг та белә инде. Башҡалар һымаҡ улар ҙа, бригадир Нәсимә арҡаһында ғына аҫылынғандыр, тип уйлайҙыр; ә бәлки, был хаҡта бөтөнләй һорашмағандарҙыр, эш менән генә ҡыҙыҡһынғандарҙыр.

Ә Камал ағай дүртенсе бригада участкаһына бүтәнсә килмәне. Оҙаҡламай уны ҡулға алғандарын ишеттем. Йәнә төрлө һүҙ, хәбәр, ләстит китте. Күптәр, ул орлоҡ игенен урлаған, ҡайһыһылыр күргән дә тейешле ергә ошаҡлаған, тип уйланы. Уның ҡулы таҙа түгеллеген бөтәһе лә белә ине. Ә мин ысын хәлде бер кемгә лә һөйләмәнем...

## 10

Май айы бөтөп килә. Тауҙар йәшелләнде. Максим тауы итәгендә ужым арышы елгә сайҡала. Өй ышығындағы ҡайындар ҡояш нурҙарында дымлы ялтырашҡан йәшел япраҡтарға төрөндө. Ап-аҡ ҡайын тәнендәге ошо йәшел кейемде мин нисек ярата инем! Миңә ҡайындар ҡатын-ҡыҙ затынан кеүек тойола, улар беҙҙең әхирәттәр, хатта әсәйҙәр кеүек, уларҙың хәлен аңлайым да һымаҡ, һылыу-лыҡтарынан, кейемдәренән көнләшәм дә... Яҙғы сәскә атыу мәле етте. Тәүҙә тау битләүҙәрендә умырзая сәскә атты, башҡа йылдарға ҡарағанда һуңыраҡ атты, сөнки быйылғы яҙ һыуыҡ килде.

Умырзаяның ғүмере ҡыҫҡа. Һалҡын, дымлы тупраҡ араһынан сибек кенә булып килеп сыға ла бар булмышы менән ҡояшҡа ынтыла. Ике көн эсендә ике ҡарыш самаһы тартылып, сәскә лә атып ебәрә ул! Сәскәләре аҡ, һары, шәмәхә. Йөҙҙәрен ҡояшҡа ҡуйған кеүек, көндөҙҙәрен улар асыла, ә төндәрен ябыла. Малайҙар умырзая сәскәләре менән үҙҙәренең фуражкаларын, ат йүгәндәрен биҙәй. Мин уларҙы йыйып, быяла һауыт менән тәҙрә төбөнә ултырттым.

Бер нисә көндән умырзая һулый, унан бөтөнләй шиңә, һабағы ла ҡалмай хатта. Әйтерһең дә, булмаған, әйтерһең дә, шундай матур сәскә яҙғы иртәлә төшкә генә кергән. Тиҙ үткән йәшлек йәки берәйһенең ҡыҫҡа ғүмере йырҙарҙа юҡҡа ғына умырзая ғүмере менән сағыштырылмай икән...

Торараҡ Яйыҡ буйлап муйыл сәскә атты. Ике яр ҙа аҡ томанға төрөндө гүйә. Мүкле һаҙҙан ағып сығыусы бәләкәй генә Көмөшәй йылғаһы ярындағы еректәр араһында һандуғастар һайрай, кәкүк саҡыра.

Ҡояш менән бергә тороп, аҡ томан аша һандуғастар һайрауын, һабантурғай тауышын тыңлап мин күңел күтәренкелеге кисерәм, ошо донъяла йәшәүемдән, тирә-яғымдың йәшеллеккә күмелеүенән үҙемде иҫ киткес бәхетле, килгән яҙ кеүек мәңгелек итеп тоям. Күңел елкендерерлек шатлыҡ, шул уҡ ваҡытта тойолор-тойолмаҫ һағыш менән яҙғы офоҡҡа бағам. Нимә күрәм һуң унда? Болоттар аҫтында ятҡан тау һәм урмандар ғына салынмай күҙемә. Мин башҡа бер киңлектә, башҡа ваҡыт яҫылығын, алдағы тормошомдоң сағыу рәүешен дә күргән һымаҡмын. Унда мөхәббәт серлелеге, бәхетле киләсәгемдең яҡты тантанаһы...

Тауҙарҙа, баҫыуҙың иген үҫтереп булмаған ерҙәрендә, әллә күпме ашай торған үлән ҡалҡты. Ҡырағай һуған, ҡырағай һарымһаҡ, кәзә кәбеҫтәһе, башҡа үләндәр. Ул саҡта беҙ «витамин» тигән һүҙҙе белмәй инек, йәш организмға ҡояш, һыу, ер тыуҙырған төрлө матдәләр кәрәклеген дә аңламай инек. Беҙ, саҡ ҡыш сыҡҡан ас януарҙар кеүек, яңы ризыҡҡа ташландыҡ. Хатта төшкө ашҡа туҡтаған ҡарттар ҙа өйрәләрен ашап бөткәс ял итергә ятмай, тешһеҙ урттары менән һуған, һарымһаҡ ашар өсөн Мүкле һаҙға ҡәҙәр һуҙылған ташлы оҙон һыртҡа бара. Беҙ ул һарымһаҡты күп итеп йолҡтоҡ. Хәлиҙә апай уны өйрәгә тураны һәм беҙҙең шыйыҡ ризыҡ байтаҡҡа ҡуйырып китте, хатта туҡлыҡлыраҡ та тойолдо.

— Йәшелгә аяҡ баҫтыҡ, хәҙер үлмәбеҙ,— тип һөйләнә Ғәлиулла олатай.— Үлән — кеше өсөн төп ризыҡ. Икмәк үҙе лә үлән бит. Ә һөт, ит? Улар ҙа үлән.

Беҙ һоло сәсер урынды, Сурағол юлы буйлап һуҙылған ерҙе, һөрөп бөттөк тә тырматырға керештек. Тырмаға һабандан бушаған аттарҙы ектек. Мышағыр итәгенә ҡул менән аҙаҡҡы бойҙайҙы сәстек, унан тырматтыҡ.

Көндәр йылы, хатта эҫе торҙо. Ниһайәт, йылындыҡ, тик хәҙер эҫенән, томранан йонсойбоҙ. Малайҙар үҙҙәренең тишек-тошоҡ сарыҡтарын ташлап, яланаяҡҡа күсте, Ғәлиулла олатай резина калуштар кейҙерелгән быймаларын сисеп, сарыҡтарын кейеп алды, мамыҡ салбарын да һалды. Хәҙер аҡ ыштан менән йөрөй. Тик Әхмәтйәр олатай ғына һаман үҙенең йылы кейемдәрендә, бесәй бүрегендә бешеп йөрөнө. Бүтән кейеме юҡтыр, күрәһең.

Төш ваҡытында тауҙар артынан ҡапыл ҡалын болоттар пәйҙә булды ла яйлап көнсығышҡа йөҙә башланы. Килә-килә улар ауырайҙы, ҡарайҙы, беҙ ямғыр көттөк, тик болоттар ары, ялан яҡҡа, боролдо. Һәм бына, күпмелер ваҡыттан һуң, күк күкрәгәнгә оҡшаған дөбөрләү ишетелде. Әйтерһең дә, алыҫта күк ҡабағы емерелеп төштө, шуның ватыҡтарының ауырлығынан ер һелкенде. Майҙың беренсе күкрәүе көнбайыштан килә, ул Урал өҫтөндә, тик быны беҙ әлегә күрмәйбеҙ, сөнки яҡынайып килгән болотто Мышағыр ышыҡлай. Дөбөрләү яҡынайҙы. Ауыр болоттар баҫҡан, һыу ҡыҫырыҡлаған һауа көнсығышҡа ағылды. Беҙ ағастар эйелгәнен, ҡара ҡойондоң юл буйлап йүгереп киткәнен күрҙек. Унан болот ҡояшты ҡапланы, тирә-яҡ ҡараңғылыҡҡа сорналды, баҫыу өҫтөнә шомло күләгә ятты. Ямғыр тамсылары тәүҙә Ослобейек тауҙың түбәһенә төштө, бер минуттан бөтә тауҙы ҡапланы. Шуныһы, был ниндәйҙер ғәҙәти булмаған ямғыр, артынан ҡара юл ҡалдырып төшкән эре, аҡ бөртөклө ине.

Беҙ баҫыуҙың теге яҡ осонда, ауыл яҡлап һоло сәсәбеҙ — унда ер әҙер. Йоҡлап йөрөгән өйҙән Мүкле һаҙға тиклем араны малайҙар арҡырыға тырманы. Ямғыр башланыр алдынан барыһы ла, минең энем, Ғаяздан башҡалары, өйгә яҡын ине. Рауил менән Ғаяз, сираттағы түңәрәкте яһап, Мүкле һаҙға яҡын йөрөнөләр. Ямғыр Ослобейек тауҙың был яғына сыҡҡас, ялағай ялтлауы, күк күкрәүе бөтөнләй яҡында ишетелә башланы. Ғәлиулла олатай ямғыр килгән яҡҡа ҡарап торҙо ла:

— Ишетәһеңме, ҡайһылай гөрһөлдәп килә? — тине.

Мин иғтибарлабыраҡ ҡолаҡ һалдым: ҡойма ямғырҙың тигеҙ һәм тос тауышы Ослобейек тау яғынан яҡынлаша. Әле ярайһы уҡ алыҫ булған ямғырҙың ҡеүәте шундай булалыр, тип уйланым һәм:

— Был — тауҙағы ағастар шауы бит, — тинем.

— Юҡ, был — боҙ тауышы, — тип ҡаршы төштө ҡарт. — Эре боҙ яуа. Бар, бөтәһенә лә әйт, өйгә йүгерһендәр.

— Ә ат менән үгеҙҙәрҙе туғарырғамы?

— Торһондар, уларға бер ниҙә булмаҫ. Ямғырға арттарын ҡуялар ҙа торалар ул. Ә малайҙарҙы имгәтеүе бар.

— Рауил менән Ғаяз Мүкле һаҙ янында бит.

— Бүректәр ал, үҙеңдең башыңды берәй нәмә менән ҡапла ла йүгер яндарына.

Беҙҙең ике генә бүрек барлығы иҫемә төштө. Береһе өйҙә ҡаҙаҡта эленеп тора, икенсеһе — Әхмәтйәр олатайҙың башында. Мин уның янына йүгереп барҙым да:

— Олатай, тиҙ генә бүркеңде бир! — тинем.

— Ә мин бүрекһеҙ нишләйем?

Ҡарт менән бәхәсләшеп торорға ваҡытым юҡ, бесәй тиреһенән тегелгән бүркен ҡаҡ башынан тартып алдым да өйгә саптым. Кереп, Ғәлиулла ҡарттың ҡаҙаҡтағы бүркен, кемдеңдер бишмәтен эләктереп кире атылып сыҡтым. Ҡаршы иҫкән ҡаты ел саҡ аяҡтан йыҡманы. Ул ҡайындарҙы эйелтте, япраҡтарын өҙгөләне, ҡалған бесәнде өйрөлтөп баҫыу буйлап таратты. Буш биҙрә ҡолап төштө лә дөбөр-шатыр тәгәрәп китте. Кешеләр өйгә ашыға. Ямғыр тыны килеп етте. Мин бар көсөмә Мүкле һаҙ яғына йүгерҙем. Йомшаҡ тупраҡтан, етмәһә елгә ҡаршы йүгереүе ифрат ҡыйын. Ике йөҙ метр самаһы үтеп тә өлгөрмәнем, теге башты, малайҙар тырматҡан баҫыу башын, күктән төшкән ап-аҡ стена ҡапланы ла ҡуйҙы. Бер минуттан ялағай ялтланы, ер һелкетеп күк күкрәне һәм шомло шаулап өҫкә боҙ ҡойолдо. Эре — күгәрсен йомортҡаһы дәүмәле. Мин фуфайканы бөркәндем дә йүгереүемде дауам иттем. Яланаяҡмын, боҙ балтырға бәрә. Үҙем, малайҙар ҡаршыма килеп сығыр, тип өмөтләнәм, үҙем бар көсөмә ҡысҡырам:

— Рауил, Ғаяз!

Аяуһыҙ күк стихияһы минең бәләкәй генә кәүҙәмде тапарға, тупраҡ менән бутарға тырыша, йәшен тауышында — ниндәйҙер ғифрит тауышы. Ялағай ялтланы, шул секундта уҡ эргәмдә генә йәшен атып, көкөрт еҫе сыҡты, мин балалар гәҙәте буйынса, кемдәндер ярҙам көткәндәй, шыбырларға тотондом: «Бисмилла, бисмилла!»

Яландың түбәнлеккә төшөп барыуын самалап, үҙемдең Мүкле һаҙға яҡынлағанымды аңланым, әммә боҙ стенаһы аша бер нәмә лә күрерлек түгел.

— Рауил, Ғаяз!

Үҙемдең тауышты үҙем генә ишеттем шикелле — ҡысҡырыуым үтә көсһөҙ ине.

Ниһайәт, аттар күҙемә салынды. Постромкаларына буталып, улар арттарын Ослобейек тау яғына борғандар ҙа баштарын эйеп түҙем генә баҫып торалар. Аттар янында малайҙар юҡ. Кире йүгерҙем, улар өйгә киткәндәрҙер, тимәк, беҙ ҡайҙалыр аймылыш булдыҡ, тип уйлайым үҙем. Күпмелер ара йүгергәс, осраҡлы рәүештә генә, малайҙарға барып төртөлдөм. Улар бер-береһенә һыйынышҡандар ҙа, баштарын ҡулдары менән ҡаплап, ергә сүкәйгәндәр. Эре боҙ уларҙың баштарын, ҡулдарын, яурындарын төйә. Был мәхшәр башланғас та улар, күрәһең, өйгә ҡарай йүгергәндәр, боҙ стенаһы аша бер нәмә лә күрә алмағас, аҙашҡандар, ауыртыныуҙан, ҡурҡыуҙан, яланғас баштарын, аяҡтарын һаҡлау ниәте менән, ергә сүкәйгәндәр. Мин уларҙың баштарына ҡарттарҙың бүректәрен һалдым, Рауилды етәкләнем, Ғаяз уға йәбеште, һәм өй яғына йүгерҙек. Беҙҙең тирәләй — баш өҫтөндә, аяҡ аҫтында — ялағай ялтлай, күк күкрәй. Ниһайәт, ахаллыға төшөп өйгә килеп еттек — өй ишеге асыҡ, Ғәлиулла олатай тупһала тора. Осоп тигәндәй индек өйгә. Ҡыҙҙарҙың ах-ухтары, малайҙарҙың шаярыу-көлөүҙәре, дөйөм хәбәр китте. Барыһынан да бигерәк Әхмәтйәр ҡарт ярһый, нығыраҡ уның тауышы ишетелә:

— Ә-ә, Хызыр юҡмы? Хызыр юҡ, тип әйтә инегеҙ. Бына ошо була инде Хызыр. Күрмәгәнегеҙҙе күрһәттеме? — ти ул ниндәйҙер ҡәнәғәтлек менән. Үҙе Рауилдың башынан һыпырып алған бүркен һелккеләй.

— Ул йәшен атҡан һайын, бисмилла, бисмилла, тип уҡына, — тип хыянатсыл рәүештә көлә Ғаяз Рауилдан.

— Әһә, бисмилла иҫеңә төштөмө? Шулай була ул, — тип әләктереп ала ҡарт. — Ярай, бүрек башта ине. Әгәр минең бүрек булмаһа, иҫәр башыңды боҙ тишә ине бит.

Рауил бер нисә урындан шешеп сыҡҡан башын һыйпай, ғәйепле генә йылмая, тик өндәшмәй. Ә Әхмәтйәр ҡарт, әгәр минең бүрек булмаһа, башың тишелә ине, тип байтаҡ ваҡыт әйтеп йөрөйәсәк әле.

Боҙҙо ямғыр алыштырҙы. Йәшен ары китте, бер аҙҙан ямғыр бөтөнләй туҡтаны, ҡояш күренде. Беҙҙең ҡайындар

бойоҡ — байтаҡ ботаҡтары һынған, япраҡтары һирәгәйгән. Ҡояшта ялтырап ерҙә боҙ өйөмдәре ята. Улар күҙ алдында ирей. Тышҡа йүгерешеп сыҡҡан малайҙар боҙ йыя, тешләп ҡарай, бер-береһенә бәрә.

... Йәнә бер аҙнанан һолоно сәсеп бөттөк. Беренсе звенонан ике көнгә һуңға ҡалып. Барлығы ике көн. Ошо уңай менән Ғәлиулла олатай былай тине:

— Ҡул менән сәсһәк тә, әллә ни артта ҡалманыҡ бит. Ҡыҙым, ике ҡарт оло бер баҫыуҙы ҡул менән сәсеп бөттө, тип беҙ үлгәс балаларыңа һөйләрһең. Ниндәй ҙур эш эшләнек тәһә!

Эҫе июнь көнөнөң төш ваҡыттарында беҙ арбаларға һабандарҙы, тырмаларҙы, үлсәгесте, юрған-мендәрҙәрҙе, тундарҙы, бишмәттәрҙе, сеүәтә-ҡалаҡтарҙы тейәнек тә ҡайтырға сыҡтыҡ. Ҡарттар, малайҙар, Нәсимә, Фәүзиә, Хәлиҙә апайҙар, мин арбала барҙыҡ, арба артынан бәйләнгән үгеҙҙәр һөйрәлде. Мәүлит, Фәйзулла, Әхмәҙулла, ат ҡараусы Нәжип — һыбайҙар. Яйыҡҡа яҡынлағас, мин артҡа боролоп ҡараным. Айҙан ашыуыраҡ йәшәгән беҙҙең өйҙөң һыңар ғына тәҙрәһе етемһерәп ҡарап тора. Өй янындағы ҡайындар ҙа бер-береһенә һыйынышып һағышлы ҡиәфәттә беҙҙе оҙата һымаҡ. Ә сауҡалыҡҡа илтә торған юлдан Мүкле һаҙға тиклем баҫыу — йөҙ илле гектар ер йәйелеп ята. Ул яланды беҙ, малайҙар һәм ҡыҙҙар, һөрҙөк, сәстек. Минең йөрәктә еңеү дәрте, башҡарған эштән алған ҙур ҡәнәғәтлек тойғоһо ҡайнай, шатлыҡлы күҙ йәштәрен эркелдерә. Баҫыу ҡап-ҡара булып ята, тик өҫкө яғына, май башында уҡ сәселгән өлөшөнә, еңелсә йәшеллек ҡунған. Ҡара төҫ — күңелһеҙ, үлем, ҡайғы-хәсрәт төҫө, тиһәләр ҙә, миңә Урал аръяғының ҡара тупраҡлы баҫыуҙары араһында тыуып үҫкән кешегә, ҡара төҫ — иң беренсе сиратта, — һөрөлгән ер төҫө, яҙ төҫө, шатлыҡ, изгелек төҫө, икмәк үҫтергән төҫ.

Үҙебеҙҙең баҫыуҙы мин йәшел төҫтә күрәсәкмен әле. Июнь аҙағында беҙ — председатель Ислам ағай, парторг Хәйбулла ағай, дүртенсе бригаданың яңы бригадиры Ғәзим ағай (миңә туған тейешле кеше), беренсе орлоҡ участкаһы звеньевойы Зәкиә апай һәм мин — баҫыуға киләсәкбеҙ. Сурағол юлының һул яғында, шытымдар тигеҙһеҙ, урыны-урыны менән бөтөнләй юҡ, ә беҙҙең баҫыуҙа бойҙай шундай тигеҙ, тығыҙ сыҡҡан. Ҡарауы күңелле!

— Ҡыҙым, маладис! — тип маҡтаясаҡ мине парторг Хәйбулла ағай. — Атайыңа, Миңлебай ағайға, оҡшап һин дә егәрле, эштең рәтен белгән кеше икәнһең!

Ә председатель Ислам ағай беренсе звеноның баҫыуына һытыҡ йөҙ менән ҡәнәғәтһеҙ ҡарап торасаҡ, унан асыулы тәүәкәллек менән «Орлоҡ участкаһы» тип яҙылған таҡтаны ерҙән тартып алып, юл ашаһында ятҡан беҙҙең баҫыуға килтереп ҡағасаҡ. Шулай итеп, беҙҙең баҫыу орлоҡ участкаһы булып китәсәк.

Ә хәҙергә беҙ тейәлешеп ауылға ҡайтып барабыҙ. Бына күперҙе сыҡтыҡ, ташҡын йыуған таҙа ҡырсын юл буйлап киттек. Буръяҡ һыу ҡоторған үҙән беҙҙе аҡ, һары сәскәләр йәйғоро менән ҡаршыланы. Мәрхәбә соҡоронда һыу бар ине әле. Күперҙе сығыу менән, йыр башланыҡ. «Йәш йөрәктәр», «Ауыл көйө» башҡарылды. Ауылдың ситендә, Әбдрәшитовтар өйө тапҡырында, Миңһылыу апай беҙҙе һыулы биҙрә менән көтөп тора. Боронғо ышаныу бар: сәсеүҙән ҡайтыусыларҙы һыу менән ҡаршылаһаң, уңыш мул булыр. Арба Миңһылыу апай тәңгәленә етеүе булды, ул йүгереп килеп тулы биҙрәһен беҙҙең өҫкә һипте. Ҡысҡырыш, сырылдау, ҡыҙҙар көлөүе. Унан биҙрә тотоп Сания еңгә йүгереп сыҡты... Шулай — уңдан, һулдан — әбейҙәр, ҡатындар, ҡыҙҙар сығып беҙҙе һыуға ҡойондора торҙо. Үҙенең өйө янында арбанан бөтә кейеме һыу Ғәлиулла олатай төшөп ҡалды. Ҡапҡа төбөндә уны ҡарсығы — Сәлиха өләсәй ҡаршыланы. Унан Әхмәтйәр олатай төштө. Туны һыу, кәзә һаҡалы йәбешеп тырпайған. Уны ҡаршы алыусы булманы. Йәл булып китте ҡарт. Бер ай эсендә мин уға өйрәнеп, эҫенеп бөткәйнем, ул да беҙгә өйрәнгәйне — барыбыҙ бер ғаилә булып йәшәнек бит. Етемһерәгән өйөндә яңғыҙы нисек йәшәр икән һуң?

Беҙгә һаман һыу һибәләр. Беҙ баштан-аяҡ сыланған килеш, эҫе ҡояш нурында йылынып, көлә-көлә, байрам төҫөн алған ауыл буйлап барабыҙ ҙа барабыҙ...

Көҙөн мин Белорет педагогия училищеһына уҡырға керҙем. Һәр көн иртән студенттарҙың дөйөм ятағынан училищеға барғанда, дәрестәр бөткәс училищенан кире дөйөм ятаҡҡа ҡайтҡанда беҙ, ҡыҙҙар, металлургия заводы янынан үтәбеҙ. Завод эргәһендәге тимер юлдарында әсир немецтар эшләй: шпал алыштыралар, рельс һалалар. Үткән һайын беҙ туҡтайбыҙ ҙа йыраҡтан ғына әсир төшкән немец илбаҫарҙарына ҡарап торабыҙ. Уйҙарыбыҙ ҡат-

марлы: күңелдәребеҙҙә һөмһөҙ ҡыҙыҡһыныусанлыҡ та (ҡарасы, бынау фашистарҙың бер нәмәһе лә беҙҙеке ише түгел, мундирҙары ла, төҫ-баштары ла, телдәре лә икенсе бит әле), ғәҙел, хаҡ һуғышта еңгән халыҡтың еңелеүсегә мәрхәмәтле йәлләүе лә бар, шулай уҡ кеше бәхетһеҙлегенә һөйөнөүгә оҡшаш (Уралға тиклем етергә хыялланғайнығыҙ, еттегеҙме?!) тойғолар бар, тик күрә алмаусанлыҡ ҡына юҡ. Беҙ бер генә немецты ярлыҡаманыҡ шикелле — таҙа кәүҙәле, ерән немецты. Уға төртөп күрһәтеп, кешеләр, ул Зояны аҫҡан, тип һөйләй торғайнылар. Ысынлап та шулаймы ул, әллә уйлап сығарғандармы — әйтә алмайым...

Бер көн немецтар юғалды, эскә, завод территорияһына, күсергәндәр, тинеләр. Улар урынында төрмәлә ултырған беҙҙекеләр эшләй башланы... Үтеп барам, таныш йөҙ: Камал ағай! Мин бағаналай ҡатып ҡалдым. Ул да мине таныны. Күпмелер ваҡыт беҙ бер-беребеҙгә текәлеп ҡарашып торҙоҡ. Ныҡ ябыҡҡан, йонсоған, йөҙө тағы ла бәләкәйләнеп ҡалған. Күҙҙәре һағышлы, хәсрәтле ҡарай. Хәҙер мин унда дошман күрмәнем, дөрөҫөрәге, дошманды ғына түгел, ә ауылдашымды, боҙоҡ, аҙғын, юлдан яҙған, кеше араһында үҙенең хаҡ бәхетен таба алмаған, бәхетһеҙ һәм шикле бәндәне күрҙем. Йәл ине ул миңә. Сумкамда студент карточкаһына алынған өс йөҙ грамм икмәк бар. Мин тоҡондар янына атланым да, конвойҙың: «Эй, ҡайҙа, ярамай!» — тип асыулы һөрәнләүенә лә ҡарамай, Камал ағайҙың усына үҙемдең көндәлек паегымды тыҡтым. Ул икмәкте алды ла һулҡылдап иларға тотондо...

## Капка

Ауылдың тар һәм саңлы урамы буйлап тәпәшәк утын арбаһында өлкән йәштәге кеше китеп бара. Арбаһы кеүек ябай, ярайһы уҡ таушалған өҫ кейемдәре араһынан киң тирәсле яңы эшләпәһе генә күҙгә салынып айырылып тора. Эшләпәһен ул батырып, ҡаштарына тиклем төшөрөп кейгән. Яловый итекле аяҡтарын алға һуҙып, ул юлда сабып алған йәш үлән өҫтөнә йәйелгән иҫке брезент плащ өҫтөндә ултыра һәм яй ғына атлаған атын ҡыумай, урамдың ике яғына теҙелгән төкәтмәле бейек өйҙәрҙе күҙҙән үткәрә. Ҡайһы бер йорттар бигерәк тә мөһабәт, ҙур тәҙрәле солан менән һалынған, ихаталары бейек ҡоймалар,

тактта капкалар артына йәшерелгән. Баштары тимер менән ябылған алты мөйөшлө йорттар башкорт ауылдарында касандыр хәлле йәшәү билдәһе була торғайны. Һалам башлы, ситән өйлө боронғо ауылда такта капканы ауыл байҙары менән муллалар ғына ултырта ала, ярлыларҙыкы һайғауҙан йәки кәртәнән генә эшләнә. Үҙ-үҙен ихтирам иткән һәр сәмсел хужа үҙенең күршеһен өйө менән генә түгел, ә капкаһы менән дә уҙҙырырға тырыша: кәрниздәрен семәрләй, тактанан шыршы һүрәте яһай, буяй — бигерәк тә зәңгәр менән йәшел төҫ юғары баһалана — һәм, әлбиттә, ул дүңгәләк элгәсле булырға тейеш. Ә утыҙынсы йылдарҙа, ауыл еңелерәк тын ала башлағас, байтак егәрле һәм сос ауыл ирҙәре, бындағыса әйткәндә, урыҫ капкалары ултыртырға керешеп китте, күрәһең, уларҙы боронборондан күрше касабаларҙа, приискыларҙа, урман кордондарында йәшәгән урыҫтарҙан күрмәксе яһағандарҙыр.

Арбала килгән әлеге кеше тыумышы менән ошо ауылдан, тик күптән инде бынан киткән, бөгөнгө көндә тауҙағы рудникта йәшәй, ун йылға якын кайтканы юк, шуға ла элекке иҫке өйҙәрҙе, иҫке капкаларҙы ғына хәтерләй һәм ошо кыҫка ғына вакыт эсендә ауылдың яңырыуына ғәжәпләнә, хатта ышанып та етмәй.

Туҙанға баткан акациялар араһынан кыйыуһыҙ ғына карап ултырған бер йорт янынан үткәндә юлаусы уның капкаһына айырыуса иғтибар итте. Был — ошо рәттәге иң иҫке, ергә сүккән йорт, һуғышка тиклем һалынған, ә бына капкаһы вакыт елдәренә һис бирешмәгән, һаман нык. Сөнки бағаналары таҙа, үҙағаслы карағастан. Йәшелгә буялған капкаға кыҙыл менән «Был йортта колхоздың алдынғы һауынсыһы Әбсәләмова Нурия йәшәй» тип яҙылған такта киҫәге каҙакланған.

Юлаусы тыкрыкты әйләнде лә атын үҙенә туған тейешле Ғәйникамал карсык капкаһына борҙо. Уның өйө лә сағыштырмаса яңы, дүрт тәҙрәһе урам яғына карай, түбәһе тимер менән ябылған, өйө алдындағы бәләкәй баксаһының рәшәткәләре зәңгәр төҫтә, матур итеп эшләнгән капкаһы һаман карамаған. Дөрөҫөн әйткәндә, килгән кеше үҙенең туғанының элекке тормошон хәтерләткән бер нәмә лә тапманы. Уның йорто — тыкрыктан өсөнсө йорт, быны ул бала сағынан бирле белә, шуға ла ышаныслы рәүештә атын ошо капкаға борҙо. Арбаһынан төшөп, бәләкәй капканан инде лә һайғауҙы алып, ҙур капканы асты. Бейәһе ихатаға атланы. Тәҙрә өлгөһөндә Ғәйникамал кар-

сыҡтың аптыраулы йөҙө күренде. Килгән кеше атының арҡалығын төшөрҙө, брезент плащ аҫтынан йәш үлән йолҡоп алып уны малҡайҙың алдына ташланы ла өҫ-башын ҡаҡҡылап болдорға атланы. Шул уҡ мәлдә тигәндәй, уң аяғына аҡһаңҡырап, йөн ойоҡтарының ҡунысынан сыҡҡан киң салбар балаҡтарын ялпылдатып, Ғәйникамал үҙе лә килеп сыҡты. Көтөлмәгән ҡунаҡ уның ныҡ ҡартайғанын шәйләне: кипкән, бөрөшкән. Ирекһеҙҙән үҙен уның менән сағыштырып шатланып ҡуйҙы — ҡарсыҡтан биш кенә йәшкә йәшерәк — Аллаға шөкөр, йәштәрсә ныҡ, таҙа әле. Ҡарсыҡтың күҙҙәре һаман теремек, йәшәү дәрте һүнмәгән. Ул ихатаһына ингән кешене, ниһайәт, таныны, аптыраулы йөҙөнә йылмайыу ҡунды.

— Ғәйникамал апай, һаумы! — Килгән кеше ике ҡуллап ҡарсыҡтың ҡаҡ һөйәккә ҡалған бармаҡтарын ҡыҫты. — Йә, нисек кенә йәшәп ятаһың, балаларың, ейән-ейәнсәрҙәрең ни хәлдә?

— Э-э-эй, кем икән тип торам, Зәйнулла бит! Аллаға шөкөр, арыу әле. Йәштәр эшләй, мин бала-сағаға, өйгә күҙ-ҡолаҡ булып ултырам инде. Үлергә лә йыйынғайным — аяҡ-ҡулды фалиш тигән нәмәкәй һуҡты — тик үлеп булманы, минең ваҡыт етмәгәндер инде. Шулай... Әйҙә, өйгә кер.

Һәм ҡарсыҡ соланға туйтаңланы, газ плитәһе янына барып ҡулына шырпы алды. Ҡунаҡ ишек төбөндә итектәрен һалып эскә үтте, өй эсен күҙҙән үткәрҙе — мейес, һике, түр яҡта сыбар япҡыс түшәлгән диван, аяҡ аҫтында аҫалы балаҫ, мөйөштә ҙур көҙгө — шунан эшләпәһен сисеп сөйгә элде лә һикегә барып ултырҙы. Газ плитәһенә сәйнүк ҡуйып, Ғәйникамал керҙе. Әлеге ялпылдаған балаҡтарын иҙәнгә һөйрәп, ашъяулыҡ йәйелгән һикегә сынаяҡтар, ҡаймаҡ, варенье ултыртты, шул арала үҙе тормош-көнкүрешен һөйләп тә өлгөрҙө («Ҡартайҙым инде, өс балаңды ҡарап үҫтерҙем, етер һиңә бала табыу, тим киленгә, әрләйем, ҡарт көнөмдә тыныс ҡына йәшәргә ирек бир, тим»). Үҙе ҡунаҡтың ни әйтерен көтә, хәбәренән туҡтап тора: ҡайҙа юл тотҡан, ни йомош менән килеп сыҡҡан тыуған ауылына?

— Һин беҙҙе тамам оноттоң, Зәйнулла. Ҡайтмауыңа ун йыллап ҡына барҙыр?

— Может ишеткәнһеңдер, мин бит үткән йыл Зәкиәне ерләнем, — тине ҡунаҡ. Тауышы ҡалтыранып сыҡты.

— Ишеттем, нишләп ишетмәй, ти. Ундай хәбәр тиҙ килеп етә. Беҙ уны, меҫкенкәйҙе, бында бик йәлләнек.

Ниндәй тилбер хужабикә ине бит. Бысраҡ ҡашығаяҡ ултырғанын күрмәнем, иҙәне лә гел ялтлап ятыр ине, үҙе лә ифрат бөхтә булды. Ә баҫыуҙа нисек эшләне! Һуғышҡа тиклем һайыҫҡан шарында көлтә бәйләгән саҡ һис онотолмай. Беҙ көнөнә көскә-көскә ике йөҙгә еткерәбеҙ, ә ул өс йөҙгә тиклем бәйләй...

— Ауылдар буйлап йөрөнөм, — тине ҡунаҡ йәнә ҡалын һәм ҡалтыраҡ тауыш менән. — Ҡатын эҙләйем. Ҡаҙаҡҡолда, Ҡотойҙа, Ҡолошта булдым, тик күңелемә ятҡанын осратманым. Ҡартайғаны кәрәкмәй. Минең хужалыҡ бар, ике һыйыр, ат, бесән сабырға кәрәк. Берәү ризалашҡайны ла, сихут булып сыҡты. Миңә йәшерәк, һау-сәләмәт бисә кәрәк...

— Билдәле, йәшерәк булһа яҡшы инде. Һин үҙең дә типһәң тимер өҙөрҙәй ир уртаһы бит әле. Яңғыҙ ҡатындар ауылда бер көтөү. Һауынсылар барыһы ла тигәндәй ирһеҙ. Һиңә кемде ҡоҙаларға икән һуң? — Ҡарсыҡ берауыҡ уйланып ултырҙы. — Ибрайҙың ҡыҙы ризалашмаҫмы икән?

— Ә Нурия нисек? Ирҙәме? — нисектер һаҡ, шиксел генә һораны ҡунаҡ.

— Юҡ, ирҙә түгел. Уға кем генә яусы ебәрмәне инде. Райондың иң ҙур түрәһе Үзбәков та ымһынып йөрөнө. Ышанһаң ышан, ышанмаһаң юҡ — барманы шуға! — Ҡарсыҡ йәнә шымды, шунан ҡапыл ғына тоҡанып китте. — Күпме һыйыр ҡойроғон бororға була? Ир ҙә, бала ла юҡ. Ҡартайып, эшлектән сыҡҡас кемгә кәрәге ҡала? Сaҡырайым әле. Көндөҙгө һауындан һуң как раз өйҙә. — Ғәйникамал ҡарсыҡ ауа-түнә ашығып ихатаға сыҡты. — Фәниә, Фәниә-әү! Дамир, Фәниә апайың ҡайҙа? Фәниә, тим!

— Нимә булған? — тип көттөрөп кенә тауыш бирҙе ҡарсыҡтың өлкән ейәнсәре Фәниә лапаҫтан, дөрөҫөрәге, үрҙән, тауышы бесәнлектән сыҡты — уйнайҙар, күрәһең.

— У-у-у, ер йоҡкоро нәмә! Саҡырғанда ниңә тауыш бирмәйһең? Бар, йүгереп кенә Нурия апайыңа барып кил, өләсәйем саҡыра, тиң.

Ҡыҙ аҙбар башының бәләкәй генә ишегенән башын тығып ҡараны ла баҫҡыс буйлап ергә төштө.

— Ниңә саҡыра, тип һораһа, нимә тип әйтәйем?

— Бер нәмә лә әйтмә, белмәйем тиң. Хәҙер үк килһен.

Нурияның йорто йылғаға яҡын ғына. Урам буйлап килгәндә күренеп тора: терәлешеп тигәндәй алты мөйөшлө йорттар, бейек ҡапҡалар теҙелгән; уларҙың ҡарағай бүрә-

нәләрендә, ҡалын таҡталарында, зәңгәр ҡашағаларҙа ниндәйҙер ныҡлыҡ, яңылыҡ бар. Һуғыштан һуң эшкә сәмсел тотонған ирҙәрҙең ҡаралтылары, мәңгелеккә булмаһа ла оҙаҡҡа, үҙенән һуң балаларына, ейәндәренә лә ҡалырлыҡ итеп төҙөгәндәре күренеп тора. Бына ошо алты мөйөшлө бейек, яңы йорттарҙан торған ныҡлы рәт ҡапыл ғына өҙөлә лә Нурияның ергә сүккән, бер яҡҡа ҡыйшайған бәләкәй генә йорто хасил була. Был емерек йортҡа иғтибар итмәү мөмкин түгел, хатта көн һайын күреп, өйрәнеп-күнегеп бөткән ауылдаштарына ла. «Бына Самат йорто, яҡшы йорт. Тирләндән әҙер бура алып килтереп ултыртҡайны. Ғарифтың өйө лә ныҡ әле. Соланын да эшләп ҡуйҙы. Ә быныһы...» Ҡасандыр, һуғыштан һуңғы йылдарҙа, Нурияның йорто ауылда иң насарҙан иҫәпләнмәгәндер, йылдар үтә килә иң хөрттәрҙең береһе булып ҡалды ла ҡуйҙы шул, нишләйһең. Ике тәҙрәһе урам яҡҡа ҡарай, өй алдында һары акация ҡыуаҡтары үҫкән бәләкәй генә баҡсаһы ла бар. Ул йылдарҙа өйҙө таш йәки бетон нигеҙгә ултыртыу ғәҙәте юҡ ине, түбәһен дә хәҙергесә тимер йәки шифер менән япманылар. Эйе, серегән, ергә сүккән шул Нурияның йорто. Бейек булып үҫеп киткән һары акациялары аша йорттоң йәшелләнеп, мүкләнеп бөткән таҡта ҡыйығы саҡ күренә, ә ике тәҙрәһе урам яҡтан бөтөнләй шәйләнмәй ҙә.

Бер аҙ иҫкерә төшкән, ямғыр ҡарайтҡан бейек ҡапҡаһы ғына һаман бейек, төҙ. Был ҡапҡаны һуғыш алдынан ғына, өйләнешкән йылдарында, ире Бәхтейәр ҡуйғайны. Ниңә, беҙ башҡаларҙан кәмме ни, тине лә ике ат менән йыраҡҡа, Урал аръяғына, сыҡты китте ҡарағас бағаналар артынан. Уны көҙ, ураҡ бөткәс, ултырттылар. Ярҙамға Хәйрулла, Ибрай ағайҙар килгәйне. (Икеһе лә һуғышта ятып ҡалды.) Ҡайныһы ла булышты. Нисек тырышҡайны Бәхтейәр, осоп йөрөп эшләгәйне! Донъя көтөргә ифрат сәмсел, тырыш, әрһеҙ ине. Үҙенең яратҡан йәш ҡатыны алдында бер аҙ маҡтанып, бына ҡара, мин ниндәй етеҙ һәм таҫыллы, балтам ҡулымда уйнап ҡына тора, тигән кеүек эшләне бит. Көндө еткерә алмай, айлы төндәрҙә лә туҡылданы. Эшләгән ирҙәргә Нурия ҙур зәңгәр сәйнүк менән бал ташыны. Хәйбулла менән Ибрай ағайҙар ваҡыт-ваҡыт әлеге сәйнүккә күҙ һала, балталары, сүкештәре торған һайын нығыраҡ туҡылдай, хәбәрҙәре лә күберәк, көләүҙәре лә шәберәк була бара. Хәйбулла ағай йыр башлай, был инде, етте, туҡтайыҡ, хәл алайыҡ, тигәнгә ишара. Балта,

сүкеш тауыштары тына... Аҙна эсендә бер тәпән бал эселеп бөттө, таҙа ҡарағас еҫе бөркөп торған ҡапҡа, Нурия менән Бәхтейәрҙең ҡыҫҡа ғүмерле бәхеттәренә инер ҡапҡа, аҙна эсендә ултыртылды ла. Һуңынан Нурия ғүмер буйы ошо ауыр ҡапҡаларҙың шомло шығырлауын, асҡан һайын тимерлектә эшләнгән келәнең асылып-ябылыу тауышын, Бәхтейәр менән төн уртаһына тиклем бәләкәй баҡса янындағы эскәмйәлә ултырып, көнбағыш яра-яра, күрше ҡарттарҙың үҙ тормоштарынан ғибрәтле һәм ҡыҙыҡ хәлдәр бәйән итеүен тыңлай торғайны. Ниндәй бәхетле саҡтары булған!

Төштәренә иң йыш һәм ҡат-ҡат ингәне — әлеге ҡапҡа. Нурия бала сағынан төштәргә ышана. Яҡты, төҫлө төштәр күрһә, ул шатлыҡ, өмөттәренең тормошҡа ашыуын көтә, буталсыҡ, ҡара төштәр күрһә, борсола — былары инде бәхетһеҙлеккә. Һәм бына төшөнә ҡапҡаһы керә, дөрөҫөрәге, йорто, тик Бәхтейәр бар саҡтағы йорто. Һикегә сагыу кейеҙ йәйелгән. Һикелә, стена яҡлап, йоҡа ҡалай таҫма ҡаҙаҡлап биҙәлгән һандыҡ ултыра, өҫтөнә яҫтыҡтар, мендәрҙәр, юрғандар өйөлгән, голландка мейес, ҡашығаяҡ өсөн яһалған аҫмалы шкаф. Ағастан яһалған һәм сәғәт һайын ҡысҡыра торған иҫке сәғәт (ҡәйнәһе үлгәс, уны ҡайынһеңлеһе Ғәлимә үҙенә алды), тәҙрә төбөндәге яран гөл — бергә башлаған тормоштарының бәхетле шаһиттары. Һәм көтөү. Бәхтейәрҙе тәҙрә аша күреп ҡала. Ниндәйҙер ылауҙан төшөп ҡалды ла атланы, юҡ, йүгерҙе ҡапҡалары-на табан. Әйләнеп ҡайтты бит барыбер! Хәрби кейемдә, арҡаһына тоҡ аҫҡан. Нурия ихатаға, ҡапҡаға атыла. Бына болдор, болдорҙан ҡапҡаға етергә кәрәк бит әле — ошо бер нисә аҙым да уға шундай оҙаҡ тойола — унан ҡапҡаны асаһы бар... Бына ҡапҡа. Тиҙерәк, тиҙерәк! Келәгә йәбешә. Тик ҡапҡа асылмай. Ай эттәгенәһе, ҡапҡа бикле бит! Ике ҡапҡаны бергә япҡан арҡыры һайғау бар. Нурия бағана-ларҙағы скобалар араһына кейҙерелгән һайғауҙы бер яҡҡа шыуҙырырға итә, тик һис ҡуҙғата алмай: ботаҡлы, дымлы оҙон һайғауҙы тимер скобалар ебәрмәй ҙә ҡуя. Бәхтейәр-ҙең ошонда, ҡапҡа артында ғына баҫып торғанын һиҙә Нурия, тоҙаҡҡа эләккән ҡош һымаҡ бәргеләнә, әммә ике тимер араһындағы бикте ысҡындыра алмай этләнә, шунан илай башлай. Ҡысҡыра, ялбара, Бәхтейәрҙең үҙенән ярҙам һорай... Һайғауҙы ҡырҡырға кәрәк, тигән уй килә башына, бының өсөн балта кәрәк. Соландан балта алып сыға ла ҡабаланып һайғауға сабырға тотона. Ағас ҡырҡыла, ҡапҡа

асыла. Нурия атылып урамға сыға, ә унда бер кем дә юҡ. Урам тып-тын. Ул тегеләй йүгерә, былай йүгерә, ҡысҡыра, исемен әйтеп һөрәнләй һәм... уянып китә...

Тәүге төштән һуң Нурия ҡапҡаһын төнгөлөккә бикләмәй ятты. Ун йыл бикләмәне, һуғышта хәбәрһеҙ юғалған Бәхтейәрем бына-бына ҡайтып төшөр ҙә керә алмай яфаланыр тип уйланы. Үлгәненә ышанманы. Өмөтләнде. Асыҡ ҡапҡаға ҡайтһын да солан ишеген шаҡыһын. Нурия уяныр ҙа соланды асып ҡосағына ташланыр...

Ҡаланан, районДан килгәндәр ауыл буйлап үтә, береһе насар уй менән, ҡара, колхоздың алдынғы һауынсыһы ниндәй өйҙә йәшәй, тип көлөп, мыҫҡыллар, икенселәре аптырап, былай ғына, бөгөнгө көндә лә ошондай йорттар булыр икән, тип мотлаҡ рәүештә Нурияның йортона күрһәтер. Йәки ситтә йөрөп ҡайтҡан берәйһенә ауылдаштары, өйөн танылйһыңмы, һаман ултыра, тип ишаралар. Дөрөҫөн әйткәндә, Нурияның йорто тыштан ғына шулай меҫкен ул, эстән бик тә күркәм. Полировкалы шифоньер, сервант, трюмо, тахта, уйлап ҡараһаң, ауылда иң бай өй йыһазылыр әле. Унан килеп, өй эсе ғәжәп бөхтә. Иҙәнгә өр-яңы балаҫтар йәйелгән, тәҙрәләр ялтлап тора, мейесе ағартылған, бер ерҙә лә туҙан, сүп-сар тапмаҫһың. Әйтерһең дә, хужабикә көн дә ҡәҙерле ҡунаҡтар көтә.

Ауыл урамы буйлап үҙенең ҡойолоп бөтөп барған «ИЖ» мотоциклында көнөнә йөҙ тапҡыр үткән парторг Нурияның иҫке өйөнә тирә-яҡтағы матурлыҡты боҙоп ултырыусы өй ҙәһә был, тиеберәк ҡараны. Торараҡ башына матур уй килде — иң яҡшы колхозсыларҙың ҡапҡаларына «Бында колхоз ветераны йәшәй» йәки «Бында алдынғы һауынсы...» тип яҙылған таҡта ҡаҙаҡларға. Нурияның ҡапҡаһына ла ҡаҡтылар. Һәм шунда ҡапмаҡаршылыҡлы нәмә килеп сыҡты: алдынғы һауынсы емерелергә торған өйҙә йәшәй! Әйткәндәй, бер шулай ауыл буйлап үтеп барғанда, райкомдың беренсе секретары Сәйфуллин Нурияның өйө тапҡырында парторгтан: «Был кем емереге?» — тип һорай ҡуйҙы. «Былмы? Бында Нурия йәшәй». — «Ниндәй Нурия?» — «Әбсәләмова. Һауынсы». — «Һинең иң яҡшы һауынсың иң алама өйҙә йәшәй икән», — тип шелтәле, хатта зәһәр итеп әйтеп ҡуйҙы Сәйфуллин. Шул көндөң кисенә үк парторг Нурияны кабинетына саҡыртты. Аптыраны Нурия, нимәгә саҡырта икән, тип ҡурҡып китте. Парторг ғәҙәттә уның менән фермала һөйләшә, ә был юлы идараға саҡырған, тимәк, эш етди.

Әрләргә тиһә, ни өсөн? Һауым буйынса әлегә беренсе урында бара... Парторгтың өҫтәле ҡаралмаған-уҡылмаған гәзит-журналдар менән тулы, аҡ шнурлы телефон ҡуҡырайып ултыра. Парторг былай ябай кеше. Фермала булһынмы, яланда булһынмы кешеләр менән тауышын күтәрмәй, йылмайып һөйләшә, ә бына үҙенең кабинетында, өр-яңы аҡ телефонлы ҙур өҫтәле артында тауышы түрәләрсә ҡалын, ҡәтғи килеп сыға.

— Ултыр әле, Нурия апай,— тине ул көтөлмәгәнсә тыныс һәм әкрен генә тауыш менән, хатта нимәгәлер уңайһыҙланғандай ҙа ине.— Бына ниндәй мәсьәлә буйынса саҡырҙым мин һине... Ниңә өйөңдө яңыртмайһың?

— Эй-эй, яңғыҙ башыма нимәгә ул яңы өй? Үҙ ғүмеремә быныһы ла етә.

— Яңы йортта йәшәгең килмәйме ни? Хәҙер бит һинеке һымаҡ иҫке йорт ауылда юҡ. Транспорт менән ярҙам итербеҙ, оҫталар бүлербеҙ. Аҡсаң юҡмы әллә?

— Аҡсаны энекәшкә бирә барам. Ул төҙөһөн әйҙә. Уның ғаиләһе ҙур, ә миңә кәрәкмәй.

Парторг уға шелтәле ҡараны, оҙаҡ ҡына өндәшмәй ултырҙы, унан ҡоро, асыулы итеп:

— Ә бына Сәйфуллинға өйөң оҡшаманы. Шулай ҙа уйла әле,— тине.

Нурия ҡырҡтан уҙғайны инде. Кейәүгә сыҡҡанда ун етеһе лә тулмағайны. Яратып сыҡты. Оҙон-оҙаҡ йөрөү, ныҡыш көйләү-сөйләү һымаҡ нәмәләр булманы, әйтерһең дә, тап шулай булырға тейеш ине барыһы ла — ауылдың иң сибәр ҡыҙы ауылдың беренсе егетенә сыҡты. Бәхтейәр армияла хеҙмәт итеп ҡайтты, оҙон салғыйлы кавалерия шинелендә йөрөнө, егеттән ниндәйҙер ирлек, героик тормош ялҡыны һирпелә ине. Клубта осраштылар, бейенеләр, бер-береһенә бер нисә һүҙ әйттеләр ҙә аңлаштылар: улар бер бөтөн, быны үҙҙәре генә түгел, бөтә ауыл аңлағайны һәм шулай булырға тейеш тә, тип хәл иткәйне. Шулай ҙа кешеләр алдында осрашҡанда — ҡараштары оялсан, кистәрен клубта бейегәндә, төрлө уйын ваҡыттарында — һағынышыу тойғолары, ә «өсөнсө артыҡ» уйыны мәлендә — ҡул ҡыҫышыуҙар. Ауырттырғансы — Бәхтейәрҙеке, йомшаҡ ҡына яуап — Нурияныҡы. Йәшерен хатлашыу ҙа булды. Алыҫта ҡалған ул йылдарҙа егет менән ҡыҙ асыҡтан-асыҡ йөрөй, осраша алмай ине. Кеше күҙенән ҡасып, баҡса арттарында, ауыл осонда ғына осрашалар. Бәхтейәр

менән Нурия хат аша тойғо-хистәрен белдерһәләр ҙә, туйға тиклем бер ҙә осрашыуҙар булманы, нисектер тура килмәне. Хәйер, бер генә тапҡыр булыуын булды шикелле: Бәхтейәр клубтан алдараҡ сыҡты ла Нурияларҙың ҡапҡа төбөнә боҫто, ҡайтып еткән ҡыҙҙы туҡтатып ҡулын ҡыҫты, тик ҡыҙ нимәнәндер ҡурҡты, ҡулын тартып алды ла йүгереп кереп китте — бәләкәй ҡапҡа егеттең танау осонда ғына шартлап ябылды...

Бер йылға яҡын кейәүҙәге тормошоноң бик әҙе генә хәтерендә һаҡланған. Әйтәйек, тәүге төндәге ҡурҡыуы, ауыртыныуы, йоҡламауы, балаларса бер ҡатлылыҡ менән «быныһы булмаһа ла ярар ине, мин уны былай ҙа яратам» тип уйлауҙары. Тәүге мунса. Оялыуы, сисенә алмай тартынып ултырыуы... Ул иренә бөтә ҡатын-ҡыҙ булмышы менән асылып ҡына өлгөрҙө, ә бына балаға уҙырға өлгөрә алманы. Әйтерһең дә, ҡыҙ килеш торҙо ла ҡалды. Бала тапмағас, күкрәк һөтөн имеҙмәгәс тән-кәүҙәһе ҡыҙҙарҙыҡы ише һомғол һәм төҙ, нәзәкәтле көйө һаҡланды. Ошо йәшкә етеп, бар тештәре лә иҫән. Йылмайһа — ап-аҡ тигеҙ тештәренән бөтә йөҙө яҡтыра ла китә. Ҡара толомонда бер аҡ сәсе юҡ. Ҡара күҙҙәрендә йәшлек, ниндәйҙер ҡырағайлыҡ саҡҡылары йәшеренгән, ә ҡуңыр йөҙө ғәҙәттә йомоҡ, гел генә ниндәйҙер уй уйлап йөрөгән һымаҡ. Тулы ирендәре хәсрәтле ҡымтылған, ҡарашы һаҡ, һынсыл. Көлөп ебәрһә инде, тигеҙ аҡ тештәре ут көлтәһе кеүек ҡапыл ялтлап китә, көлөүе — бәхетле кешенеке. Әйтерһең, был йөҙ икенсе бер, башҡа яҙмышлы, башҡаса уй-хисле, эске донъяһы бүтән ҡатындыҡы...

Элекке райисполком рәйесе, ҡатыны үлгәс Нурияны алырға ниәтләнгән Үзбәков (ниндәйҙер конференцияла танышҡайнылар) уға, һинең фигураң — ҡала ҡатын-ҡыҙы фигураһы, тигәйне. Нурия ҡала ҡатын-ҡыҙы фигураһы ауыл ҡатын-ҡыҙы фигураһынан ни менән айырылғанын белмәй һәм үҙенең тән-кәүҙәһендә һоҡланырҙай бер нәмә лә тапмай. Һуңынан, Үзбәков уға үҙенә кейәүгә сығырға тәҡдим яһағас, был көтөлмәгән һәм башына һыймаған хәбәрҙән йоҡоһонан яҙҙы. Үзбәков — отставкалағы полковник, юғары белемле, абруйлы кеше, ә ул, Нурия, кем инде? Һауынсы. Юҡ, ундай кешегә Нурия иш түгел, Үзбәков оҡшай тип тә әйтә алмай — ҡыҫҡа ғына аяҡтар, бәләкәй кәүҙә, бүлтәйеп сығып торған йомро ҡорһаҡ. Көслө һәм сибәр Бәхтейәр менән сағыштырғанда, сағыштырыу һис тә уның файҙаһына түгел.

Ситтән ҡарағанда, Нурия көтөп йәшәгән кеүек. Кемде көтә, нимә көтә? Байтаҡ йылдар элек, һуғыштан һуңғы йылдарҙа, ул, ысынлап та, ниндәйҙер өмөт менән йәшәне. Бәхтейәрен көттө. Ул осор бөтә һалдаткалар ҙа үҙҙәренең хәбәрһеҙ юғалған ирҙәрен көтәләр ине. «Похоронка»лары килгәндәрҙе лә көтәләр ине. Ғәжәп, ҡайтып килеүселәр ҙә булды бит! Тирә-яҡ ауылдарҙа хәүефле һәм өмөттәрҙе уятыусы хәбәрҙәр йөрөнө: бер ауылға үлгән тип хисапланған һалдат ҡайтып төшкән, икенсе ауылда... Шуға ла Нурия өмөтөн һүндермәне. Тик көтөп ала алманы. Һәм көтөүҙән туҡтаны... Хәйер, туҡтанымы икән?

Ауылда Нуриялар икәү. Уны, Әбсәләмова Нурияны, күптән һауынсы Нурия тип йөрөтәләр. Икенсеһен, ире, гараж мөдире Карам Сәләхов буйынса, Карам Нурияһы тиҙәр. Ул да һауынсы, әммә һауынсы тимәйҙәр... Һауынсы... Ҡасандыр, һуғыштан һуңғы йылдарҙа, һауынсы һөнәре ауыл телендә нисектер икенсе мәғәнәлә яңғырай ине, әйтәйек, «һалдатка», «тол ҡатын», «ирһеҙ» тигән һымағыраҡ. Ул осорҙа һауынсы булып йә яңғыҙ ҡатындар, йә балаһыҙҙар эшләне. Ҡышын ҡараңғынан ҡараңғыға тиклем фермала, йәйен иртә яҙҙан алып тәүге ҡар төшкәнсе ауылдан биш саҡрымдағы йәйләүҙә. Таҡта вагондарҙа йәшәйҙәр. Бала ҡайғыһымы бындай шарттарҙа, унан килеп, ниндәй ир ҡатынын оҙон йәйгә ебәреп ултырһын? Хәҙер генә хәлдәре бер аҙ еңеләйҙе — һауынға машина менән алып баралар, машина менән алып ҡайталар, машина менән һауалар.

Ҡышын колхозға «Ураҡ һәм сүкеш» район гәзитенән корреспондент килгәйне. Парторг Ғилманов Нурияны алдан уҡ, беҙ корреспондент менән фермаға киләбеҙ, беренсе сиратта ул һиңә мөрәжәғәт итер, һин уға нисек итеп колхозда беренсе булып аҙыҡҡа ҡош тиҙәген ҡушып ашатыуың тураһында һөйлә, тип иҫкәртте. Ҡара уны, оялып, тартынып торма... Һәм бына фермаға килделәр, корреспондент һораүҙарын яуҙыра башланы, йәнәһе, нисек эшләйһегеҙ, ниндәй уңыштарығыҙ бар? Бер кем алдында ла әллә ни ҡаушап бармаған Нурия, хатта колхоз йыйылыштарында ла сығып һөйләй, был юлы нишләптер юғалды ла ҡалды — алдан әҙерләгән һүҙҙәрен онотто ла ҡуйҙы. Дөрөҫөрәге, ул белә ни хаҡында һөйләргә кәрәклеген, тик ҡайҙан, нимәнән башларға, матурыраҡ килеп сыҡһын өсөн сығышын нисегерәк ойошторорға тип апты-

рай һәм, үҙе лә һиҙмәҫтән, бөтөнләй икенсе нәмәләр хаҡында бәйән итеп алды китте:

— Нисек эшләйбеҙме? Биштә торабыҙ, фермаға ун минутлыҡ юл. Аппараттарҙы, йылы һыулы биҙрәләрҙе алабыҙ, бидондарҙы проходҡа ҡуябыҙ. Һыйырҙар ята. Уларҙы торғоҙабыҙ. Ҡалҡыналар ҙа сысырға, һейергә керешәләр. Буҡтарын таҙартабыҙ, һыҡраларын йыуып төшөрәбеҙ. Унан елендәрен йыуабыҙ ҙа таҙа таҫтамал менән һөртәбеҙ. Моторҙы ебәрәләр, аппараттарҙы сығарабыҙ, һауын башлана. Аппарат алып бөтөрмәгәнен ҡул менән һауып бөтөрәбеҙ. Һөттө биш ҡат марля аша үткәрәбеҙ. Учетчик яҙып ала. Һауындан һуң — дрожжевание. Аҡбур, он — уларҙың барыһын да бергә ҡушып кистән үк запарникта быҡтыралар...

— Бына һин үҙең, Нурия апай, нисек эшләйһең? — тип бүлдерҙе уны ҡәнәғәтһеҙ генә тыңлап торған парторг. — Һауымды арттырыу өсөн, мәҫәлән, ниндәй яңы ысул ҡулландың?

— Колхозда беренсе булып мин аҙыҡҡа ҡош тиҙәге ҡушып ашаттым. Һөҙөмтәлә фураждағы һәр һыйырҙың продуктлылығы 319 килограмға артты. Мин һәр фураж һыйырынан өс мең килограмм һөт һауырға йөкләмә алдым, — тип яуапланы Нурия ышаныслы итеп, әйтерһең дә, шатырлатып ҡағыҙҙан уҡыны.

Һөйләшеп бөткәс, парторг, һауындан һуң кейемеңде алмаштыр, орденыңды таҡ, фотоға төшөргә клубҡа кил, тине. Клубта корреспондент уны стенаға эленгән Почет таҡтаһы алдына ултыртып ҡуйҙы ла объективтың зәңгәр күҙҙәре менән текәлде.

— Апай, йылмайығыҙ!

Нурия йылмайҙы, йәштәрсә, бәхетле итеп йылмайҙы һәм корреспондент уның йәш, алсаҡ, һөймәлекле йөҙөн төшөрҙө. Ә киске һауында, корреспондент менән булған һөйләшеүен һаман онота алмай, әхирәттәренә былай тине:

— Ой, ҡыҙҙар, әллә нимәләр мығырланым, үҙемә оят. Тиҙәк тә, һейҙек хаҡында һөйләнем. Ә ул барыһын да блокнотына яҙып барҙы. Барыһын да гәзиткә бирһә?..

Һауынсылар, дөрөҫ һөйләгәнһең, ул егет һөттөң ҡайҙан алынғанын, тубыҡтан тиҙәк кисмәй тороп һөт булмағанын белһен, тип көлөштө...

Ул һауынсы булып һуғыштың тәүге йылында уҡ эш башланы. Ауыр осор әле лә төштәренә инеп йонсота. Гел генә тигәндәй бер үк ҡурҡыныс төштө күрә ул. Ферма.

Малға ашатырға аҙыҡ юҡ. Бесәндәре күптән бөттө — ҡыраулы, һалҡын яҙҙан һуң йәй ҡоро килде, үлән үҫә алманы, көйҙө. Һалам, йәй бәйләгән миндек биргән булалар. Оҙаҡламай улары ла бөттө. Ферманың ситән стеналары аша эскә буран тула, ел уйнай. Аяҡ аҫтындағы таш кеүек туңған тиҙәкте ҡар ҡаплаған. Ә һыйырҙар ҡорһаҡтарынан аҫып түбә һайғауҙарына күтәртеп ҡуйылған. Ҡабырғалары, ҡалаҡ һөйәктәре һерәйеп сығып тора, елендәре буш тоҡ һымаҡ һәленгән. Бына Нурия беренсе һыйыр аҫтына ултыра ла һауырға ниәтләнә, әммә елен һыуыҡ — туңған! Икенсе һыйыр аҫтына сүгәләй, өсөнсөһөнә — барыһының да елендәре боҙ кеүек ҡаты. Уға бер нисә тамсы булһа ла һөт кәрәк. «Хоҙайым, һыйырҙар барыһы ла туңған бит!» — тип саҡ төшөнә Нурия. Ул бит үлгән һыйырҙарҙы һауып маташа! Уға ҡапыл ҡурҡыныс булып китә, бөтә тәне ҡалтырана башлай. Эсендә буран уйнаған бынау үлек һарайҙа ул бер үҙе йөрөп ята, имеш...

Һуғыштан һуңғы йылдарҙа «һауынсы» тигән һүҙ ауылда, бигерәк тә ирле, иркен тормошта йәшәгән ҡатындар тарафынан, икенсе мәғәнәлә, нисектер әшәке рәүештә лә әйтелә торғайны. Һауынсы, һалдатка, ирһеҙ, тимәк, йөрөгән бисә. Бригадир Әхмәтвәли кисә төнгә тиклем ҡайҙа йөрөгән? Ҡайҙа булһын, әлбиттә һауынсылар янында. Йәйләүҙә, вагонда. Гараж мөдире Карам мотоциклында ҡайҙа елдерә, тиһең? Ҡайҙа булһын, әлбиттә һауынсылар янына. Икенсе бригаданан тракторсы Марат һабантуйҙа кемде урман эсенә алып ингән, тиһең? Кемде булһын, иҫерек һауынсыны. Ана, Хәҙисә, ирһеҙ көйө биш бала тапты, бишеһе биш атанан. Тәүге балаһын тапҡас ҡына ғәйепләнеләр, һуңынан күнектеләр, ҡул һелтәнеләр. Ҡара, хәҙер, ана, нисек йөрөй, күкрәген киреп, ирле бисәләргә эре генә ҡараш атып йөрөй. Арыу алып эшләй, береһенән-береһе матур булып балалары үҫеп килә, миҙал менән бүләкләнеләр.

Шулай ҙа ауыл ҡатындары үҙҙәренең йүнһеҙ ирҙәрен күберәк Нуриянан көнләште, шикелле. Йәш, ымһындырғыс сибәр, кейемен алмаштырып ебәрһә, бигерәк тә. Ауыл урамы буйлап ҡаласа атлап үткән сагында артынан йәш ирҙәр генә түгел, йәшкәҙәгән күҙҙәрен сырт-сырт йомғолап ҡарттар ҙа ҡарап ҡала, ә ирле ҡатындар көнсөл ҡараштары менән ашарҙай булып ирендәрен ҡымтый. Әммә Нурияға көнләшеүҙәре бөтөнләй нигеҙһеҙ ине...

Нисектер бер кис хисапсы Рауил уның ишеген ҡаҡты. Нурия йоҡларға ятҡайны, ишек keләһен элгәйне. «Кем

анда?» — «Мин, Рауил». — «Нәмә кәрәк?» — «Ас әле, эш бар», — «Төн еткәс ниндәй эш ти ул?» — «Ас инде». — «Асырмын, шундай итеп асырмын, ҡайтыр юлыңды ла таба алмаҫһың, белдеңме?»

Йәнә бер ваҡиға иҫендә Нурияның. Уныһы көтөүсе Кейекбай менән булды. Ферманан ауылға ҡайтырға сыҡтылар. Кейекбай ураү юлдан, иҫке приискының отвалдары аша, китте бит. Еләк ҡапҡыларбыҙ, йәнәһе. Алексей карьеры янында атын ситкә ҡайырҙы. Арбанан төштөләр. Кейекбай тотто ла йәбеште бит быға. Нурия тегенең көтөлмәгән был ҡылығынан йығылып китте хатта, шулай ҙа өҫтөнә ауған көтөүсенең ҡосағынан шылып сығып аяғына баҫа алды. Баҫты ла ҡорһаҡ аҫтына тибеп тә ебәрҙе. Көтөүсе әсе итеп һүгенә-һүгенә артына ауып китте, йән ерен ике ҡуллап тотоп ергә тәгәрәне. «Үлтерҙең, судҡа бирәм мин һине». — «Ә һин сит ҡатындарға бысраҡ ҡулыңды һонма». — «Мин шаярттым ғына бит». — «Бисәләр менән нисек шаярырға икәнен икенсе юлы белерһең».

Ирҙәр уның тураһында: «Урам буйлап ир китеп барһа, еҫе кермәһен тип, Нурия тәҙрәһен яба», — тип һөйләй.

Йылдар үтә килә «һауынсы» һүҙе үҙенең икенсе мәғәнәһенән, алама мәғәнәһенән, яйлап ҡотола барҙы. Һауынсылар үҙҙәре лә олоғайҙы (йәштәр фермаға бик килмәй, килгәндәре лә оҙаҡҡа сыҙамай, модалы итеккә аҡса эшләй ҙә, тая, йә кейәүгә сыға, йә ҡалаға һыпырта), колхоздың штаттағы ҡара эшселәренә, әрһеҙ һалдаткаларға, ирһеҙ ҡатындарға мөнәсәбәт тә үҙгәрҙе: уларға ихтирам менән, хатта ниндәйҙер көнсөллөк менән ҡарай башланылар. Колхозда иң күп алып эшләгән кем? Һауынсы. Иң яҡшы итеп кем кейенә? Һауынсы. Культура йортондағы Почет таҡтаһында кемдең портреты эленеп тора? Һауынсыныҡы. Гәзиттәрҙә кем тураһында күберәк яҙалар? Һауынсы тураһында. «Почет Билдәһе» ордены менән кем бүләкләнгән? Һауынсы Әбсәләмова Нурия.

Хәбәрсенең фермала булып китеүенә бер аҙна үткәс почтальон Хәлимә районның «Ураҡ һәм сүкеш» гәзитен килтереп бирҙе — Нурия беренсе биттә үҙенең ҙур портретын күрҙе. Ҡапыл ғына йөрәге дарҫлап тибергә тотондо һәм ул ҡабаланып фото аҫтындағы һүҙҙәрҙе уҡыны. «Һүрәттә: «Маяҡ» колхозы һауынсыһы Нурия Әбсәләмова. Колхозда беренсе булып ул мал аҙығына тауыҡ тиҙәге ҡушып ашатты, һөҙөмтәлә фураждағы һәр һыйырҙың продуктлылығын 319 кг. арттырҙы. Әбсәләмованың быйылғы

йөкләмәһе — үҙенә беркетелгән һәр һыйырҙан 3 мең кг. һөт һауыу. Нурияның алған йөкләмәһен үтәү өсөн бөтә нигеҙ бар».

Шунан ул оҙаҡ итеп портретына ҡарап торҙо. Үҙенә оҡшаған да, оҡшамаған да һымаҡ. Гәзиттә ул йәшерәк, йөҙө асығыраҡ, һөйкөмлөрәк. Матур сыҡҡан. Уның ошо портретын башҡа ауылдарҙа ла күрәсәктәр, ҡалай сибәр, бәхетле ҡатын был Нурия, тип уйлаясаҡтар. Ошо минутта, хатта көнө буйы, Нурия үҙен ысынлап та бәхетле тойоп йөрөнө.

Киске һауынға тиклем байтаҡ ваҡыт бар ине әле. Нурия кер йыуырға булды. Кер үҙенеке түгел, килененеке, ул яңыраҡ ҡына бала табыу йортонан ҡайтты — бишенсене тапты; бала тапмаһа ла йыуыр ине: яңғыҙ ҡатынға был эш нимә инде, унан килеп, киленен яҡын күрә, уға ярарға, яҡшылыҡ эшләргә тырыша. (Энеһе күршелә генә йәшәй, ихаталарҙы бүлеп торған кәртә аша ел ҡапҡа бар.) Ул үҙенең бәләкәй туғандарын бик ярата һәм уларҙың күлдәк-ыштандарын йыуыу үҙе бер кинәнес. Ә улар, береһенән-береһе кесе малайҙар, күберәк ихаталағы тиреҫ, сүп-сар араһында уйнай, йылға буйындағы балсыҡта, йылға үләнсайында ҡаҙына, күлдәк-ыштандарына һыйыр тиҙәктәре, баҡса тупрағы йәбешә, оло ағас ҡалаҡ менән бутҡа ашағанда ауыҙҙарынан ҡойолғаны түштәренә йәбешеп ҡатып йөрөй. Һәр иртәлә килене уларҙы тап-таҙанан кейендереп сығара, ә кисенә бысраҡ кейемдәрен өҫтәренән һыпырып алып кер һауытына ташлай. Етмәһә, иң бәләкәйе, хәйер, ул хәҙер иң бәләкәйе түгел инде, туғаны тыуҙы, эсе менән яфалана. Ыштанын алмаштыралар, ул уны шундуҡ тигәндәй бысратып та ҡуя, уға ағаларының итәк кеүек киң трусиктарын кейҙерәләр — уйнарға йүгереп сығып китә лә йәнә бысрата, туҡтай, ҡабығынан сыҡҡан себеш ише трусик эсенән һурылып сыға, трусигын һыйыр тиҙәктәре, саң-туҙан араһында ҡалдырып бестәтәү көйө тыҡрыҡ буйлап йәнә йылға буйына саба.

Керҙәрен соланда ултырған кер йыуыу машинаһына тултырҙы ла электр утына тоташтырып, Нурия тауыҡ кетәгенә йүнәлде. Ҡара тауыҡ кәрәкмәгән саҡта баҫырға ултырырға маташа, Нурияның икенсе тауыҡтан сыҡҡан себештәре йүгереп йөрөй. Ҡара тауыҡты был эшенән төңөлдөрөргә тырыша, әле лә ҡыуып төшөрөп, фарфор изоляторҙы (мая урынына) ғына ҡалдырып ике йоморт-

ҡаны алды... Машинаһы тейешле ваҡыт әйләнгәс, керен алып һыҡты, унан, ике биҙрәгә тултырып, йылға буйына сайҡарға китте.

Һәм Әнүәргә тап булды. Ул ҡатын-ҡыҙ кер сайҡай торған баҫмала ултыра һәм бик етди ҡиәфәттә йыйылмалы тимер метрлыҡ менән һыу тәрәнлеген үлсәй. Нурия уның менән осрашмаҫҡа, мөмкин булғанда урап үтергә, юлына тап булмаҫҡа тырыша. «Нишләп йөрөй икән инде, ниңә больницаға ғына һалып ҡуймайҙар?» — тип уйланы Нурия, уға тап булыуынан кәйефе ҡырылып.

Әнүәр мәктәптә отличник ине. Башлы малай үҫә, ти торғайнылар уның тураһында. Һүрәт төшөрә, шиғыр һөйләй, драма түңәрәгендә ҡуйған спектаклдәрҙә ысын артистар һымаҡ килештереп мулла, байҙарҙы уйнап көлдөрә. Ҡолаҡтары тырпайып торған йоп-йомро башлы малай өлкән кластарҙа аҙ һүҙлегә, ҡараңғы сырайлыға, яй хәрәкәтлегә, оҙон кәүҙәлегә, ҡараштары аҡыллы-мыҫҡыллыға әйләнде — Нурияның хәтерендә Әнүәр шулай булып ҡалған. Бейек маңлайын асып, тәртипһеҙ тырпайып торған сәстәрен артҡа тарап йөрөнө. Мәктәп йылдарында шундай йола бар ине: иҫтәлеккә тип альбом тултыралар. Ошо альбомға, ҡалын дәфтәрҙәргә нимә генә яҙмайҙар: үҙҙәренең йәки башҡаларҙың ниндәйҙер шиғырҙары, мәңгелеккә дуҫ булып ҡалырға бирелгән анттар, мөхәббәт һүҙҙәре. Нурия ла үҙенең дәфтәрен, иҫтәлеккә һин дә берәй нәмә яҙ әле, тип Әнүәргә биргәйне, ул оҙон шиғыр яҙҙы, шиғыры матур һәм һағышлы ине. Ғүмер яҙғы умырзая сәскәһе кеүек ҡыҫҡа, яҙғы туғайлыҡ — беҙҙең йәшлек, ә умырзая — беҙ: сәскә аттыҡ, шиндек... Әнүәрҙең шулай килешле итеп яҙа алыуына, уның матур һүҙҙәр таба алыуына Нурия ифрат аптырағайны ул саҡ.

Ауылдағы ете йыллыҡ мәктәптән һуң ул район үҙәгендә уҡыны,унды бөткәс, Өфөгә барып юғары уҡыу йортона инергә йыйынды.

Әммә һуғыш башланды.

Һуғыштан Әнүәр йәрәхәтләнеп ҡайтты. Дөрөҫ, аяҡ-ҡулы имен-аман, тик немецтың снаряд ярсығы башына тейеп аҡылына зәғифлек килтергәйне. Әсәһе менән йәшәне (атаһы, старатель, забой емерелеп төшөп, һуғышҡа тиклем үк үлгәйне), бәләкәй генә пенсия алды.

Ауылға ҡайтҡас та һуғыш уны үҙ ҡосағынан «ебәрмәне»: ихатаһында блиндаж ҡаҙҙы, осраған һәр кемгә, немецтар килә, бомбить итәсәктәр, тип әйтеп йөрөнө.

Ниндәй немецтар, беҙ уларҙы еңдек бит, тиһәләр, юҡ, улар беҙҙе еңде, «Тигр» танкылары Урал тауҙарына етеп килә, тип яуапланы.

Яраланғандан һуң йоҡлаған мейеһе икенсе төштәр күрә башланы. Баш ҡаланы ауылға күсерергә хыялланды. «Ғәйбәт тауына Кремль төҙөп ҡуяйыҡ». Унан йылға буйына төшөп йыйылмалы тимер метрлыҡ менән уның тәрәнлеген үлсәп йөрөргә тотондо. «Ер шары ҡорой, ундағы һыу кибә, йылға һайыҡты, шулай, Ҡояшта атом яна. Тиҙҙән барыбыҙ ҙа һыуһыҙ ҡалабыҙ ҙа һыуһауҙан үләбеҙ. Ахыризаман килә!..»

Бер мәл Әнүәр Нурия янына килде лә аҡылдан шашҡан ҡырағай күҙҙәрен уға текләп (тауышы ишетелер-ишетелмәç, һаҡ һәм шым, әйтерһең дә, оло мөғжизә аса): «Һинең Бәхтейәрең тере, уны Магнитогорскиҙа күргәндәр», — тине ҡапыл. «Хоҙайым! — тип ҡысҡырып уҡ ебәрҙе Нурия көтөлмәгән хәбәрҙән. — Кем күргән, ҡайҙан беләһең?» — «Беләһеңме, ул һинән ҡасып йөрөй». — «Иçәр һин, ул минән нишләп ҡасып йөрөһөн?» — «Өйләнгән ул, мәрйә бисәһен алған, шуға ҡасып йөрөй. Миңә ышанмаһаң, уҡытыусы Ғөбәйҙуллиндан һора». — «Ниндәй Ғөбәйҙуллин тағы?» — «Районда йәшәй». «Хоҙайым, әгәр был ысынлап та шулай булһа? — тип уйланы Нурия. — Ул ҡайҙа ғына йәшенһә лә, кемгә генә өйләнһә лә, тере генә булһын, тере генә булһын ине». Бушҡа икәнен белһә лә, районға барып Ғөбәйҙуллин фамилиялы уҡытыусыны эҙләп йөрөнө. Ысынлап та шул фамилия йөрөткән уҡытыусы булған, фронтовик, тик үткән йыл һуғышта алған яраларынан үлгән икән... Һуңынан, былар барыһы ла онотола төшкәс, Әнүәр бер көн йәнә Нурияны аптыратты: «Бәхтейәр Белоретта. Баҙарҙа күргәндәр». Шунан бирле Нурия Әнүәр менән осрашмаçҡа тырыша...

— Нурия апай, һине өләсәйем саҡыра.

Нурия кер элеп йөрөгән еренән боролоп артына ҡараны. Ғәйникамал ҡарсыҡтың ейәнсәре икән.

— Нимәгә?

— Белмәйем, ниңә икәнен әйтмәне, тиҙ генә килһен әле, тине.

Ҡыҙ артынан елдәр иçте.

Нимәгә тип һораһа ла, Ғәйникамал ҡарсыҡтың үҙен нимәгә саҡырғанын Нурия самалай — беренсе тапҡыр түгел. Быға тиклем эш танышыуҙан, өҙөк-йыртыҡ оялсан

һөйләшеүҙән ары китмәне. Ул һәр ваҡыт уны, буласаҡ ирен, әгәр сыға ҡалһа инде, олпат, әммә таҙа, ныҡ егәрле һәм эсмәгән кеше итеп күҙ алдына килтерергә тырыша. Ниндәйҙер сырамытта Бәхтейәргә оҡшаһа ине тип уйлай. Әгәр ошо йәшкә тиклем йәшәһә, ул ысынлап та хыялында йөрөткән ир булыр ине, ауылда иң аламаларҙан иҫәпләнмәҫ ине — быныһына Нурия һис шикләнмәй. Тик гел генә өмөт-хыялдары селпәрәмә килә лә ҡуя. Йә ҡорһағы һәленеп төшкән, бәләкәй кәүҙәле йыуан Үзбәков, йә күрше ауылдан һөйкөмһөҙ, етмәһә эскесе ир яусылай. Ундайға нимә тип сығаһың? Ашатырға, ҡоҫҡолоғон таҙартырға, бысраҡ, һаҫыҡ салбарҙарын йыуырғамы? Был юлы ла шул уҡ хәл ҡабатланасағын белеп торһа ла, һәр ваҡыттағыса тулҡынланды, яңы кейемдәрен: өҫтөнә кофта, башына кешмир яулыҡ ябынды, аяғына ялтырап торған лаклы туфлиҙар кейҙе. Бушҡа ғына барғанын, осрашыуҙан бер нәмә лә килеп сыҡмаҫын һиҙеп тора, шулай ҙа йөрәкһей. Ҡыҙыҡ, мәрәкә... Алдан шуныһын да белә, уға ул үҙе беренсе күреүҙән үк оҡшаясаҡ — Ғәйникамал ҡарсыҡ унын эшкә бөтмөр икәнен дә, ордены барлығын да, етмәһә, Үзбәковтың яусылағанын да һөйләп бөткәндер. Үҙенең бер ҡасан да кейәүгә сыҡмаясағын бик яҡшы белә, шулай ҙа барһын, ҡараһын, кем икәнен күрһен әле. Һәм күршеһененең өйө яғына атланы Нурия. Ҡапҡаны асҡайны, оҙон утын арбаһын күрҙе. Иң тәүге уйы шул булды: оло кеше. Бындай арба менән ололар, пенсионерҙар йөрөй. Аты көр, сбруйҙары яңы, ғөмүмән, һәммәһе лә ныҡлы, тимәк, өй-ихата, хужалыҡ кешеһе. Кем булыуы ихтимал? Күршеһененең болдор баҫҡыстары буйлап яйлап,ҡыйыуһыҙ ғына күтәрелгәндә йөрәге тағы ла нығыраҡ тибә башланы, әйтерһең дә, ул йәп-йәш ҡыҙ һәм ҡыҙ бағыу йолаһын үтәргә кереп бара. Иҫәрлек! Бер нәмә лә булмаясаҡ, булырға тейеш тә түгел. Ишекте асты, ир кешене күрҙе. Ҡарт ирҙе. Сәсен ҡырҙырып алдырыуы шундуҡ оҡшаманы. Таныны. Зәйнулла ағай. Ҡасандыр күрше булып та йәшәгәйнеләр. Һуғыш йылдарында уҡ Аршаға күсеп киткәйнеләр. Шунан бирле күргәне юҡ. Нимә тип килде икән? Хәйер, Ғәйникамал апай уға туған тейешле шикелле. Ҡапыл хәтеренә төштө: бәй, ул бит хәҙер тол ир... Юҡ, булмаҫ, Нурияны һоратырға килмәгәндер, икенсе йомош менән йөрөйҙөр. Зәйнулла ултырған еренән ҡалҡынды, ниңәлер ағарынды, юғалып ҡалғандай итте һәм ҡабаланып ҡулын һуҙҙы. Ул Нурияның хәтерендә йәш, оҙон кәүҙәле

булып ҡалған, ә хәҙер ҡаршыһында тәбәнәк буйлы, ярайһы уҡ оло сырайлы ҡарт баҫып тора. Нурия тағы бер нәмәгә иғтибар итте, элек уны, бәлки, күрмәҫ тә ине, Зәйнулланың ҡулдары бик оҙон, көрәк һымаҡ ҙур икән дә. Усы һалҡын, тирле... Нурия һике ситенә ултырҙы. Һүҙ башланды. Нурия, ни хәлдәһегеҙ, нисек килеп сыҡтығыҙ, иҫәнлек-һаулыҡ, тип һорашты шикелле. Зәйнулла яуап биргәс, уның һорауҙарына үҙе лә яуапланы. Шулай ҙа хәбәр осраҡлы, өҙөк-йыртыҡ, тартыныулы ине. Нурия элекке күршеһенең күҙенә ҡарамаҫҡа тырыша, ҡарашын ситкә ала, үҙенең хәтерләүҙәрендә, уй-тойғоларында бутала-бутала, ихтирам менән ҡараған элекке Зәйнулла ағайҙы бөгөнгө оҙон ҡуллы, сәсе ҡырып алынған ҙур ялтыр башлы һәм бөтөнләй ят, алыҫ булып киткән ошо кеше менән сағыштырып ултыра. Һоратырға килһә, нимә тип яуаплар икән һуң? Хәйер, уға ҡатын була алмаҫ кешеме ни Нурия? Йәш аралары әллә ни күп түгел. Ә кире һуға ҡалһа, нисек йомшағыраҡ итеп әйтергә икән? Башҡаларға яуаплаған һымаҡ, туп-тура әйтә алмай, сөнки ул үҙҙәренең ауылынан, етмәһә, элекке күршеһе, оло ҡайғы кисергән... Әгәр, юҡ, ағай, булмай, тип өҙә генә һуға алмаһа? Ул Зәйнулланы үҙенең ире итеп күрҙе лә бер мәлгә генә хатта енси яҡынлыҡтарын, ошо оҙон ҡуллы кеше менән күптән онотолған шул эште башҡарасаҡтарын күҙ алдына килтерҙе. Һәм уға нисектер ерәнгес булып китте. Әммә быға тиклем килгән яусыларға әйткән, «юҡ», тигән ҡәтғи һүҙ әйтергә әҙер түгел ине. Һөйләшһен, әйткәндәрен тыңлаһын, бәлки, ул бөтөнләй икенсе ниәт менән килгәндер.

Ғәйникамал ҡарсыҡ быларҙың икеһен генә ҡалдырып ҙур яҡҡа сығып китте.

— Ишеткәнһеңдер, Зәкиә апайың үткән йыл үлеп ҡалды бит,— тине Зәйнулла ҡалтыранған тауыш менән, шунан ҡабаланып пинжәгенең кеҫәһенә тығылды, бигүк таҙа булмаған ҡулъяулыҡ сығарып тирләгән маңлайын һөрттө. Ҡулы еңелсә генә ҡалтырай ине үҙенең.

— Меҫкенкәй,— тип яуапланы Нурия, үҙе эстән генә, эйе, шик ҡалманы, һоратырға килгән, тип уйланы.— Бигерәк һәйбәт апай ине.

— Әйтмә лә, һәйбәт ине ысынлап та. Етем ҡалдым да ҡуйҙым. Балалар үҫеп төрлөһө төрлө яҡҡа таралды. Өйҙә хәҙер япа-яңғыҙмын. Һарайҙай өй, хужалыҡ, ат, ике һыйыр, һарыҡтар. Үҙем пенсияла. Шулай ҙа эшләп йөрөйөм. Йәйен лесхозда сайыр йыям. Хужабикәһеҙ ауыр.

Күпмелер ваҡыт өндәшмәй ултырҙылар. Нурия элекке күршеһенең ҡарашы менән осрашмаҫ өсөн күҙҙәрен йәшерҙе, ишек төбөндәге сөйҙә элеүле торған яңы эшләпәне шәйләп, Бәхтейәр иҫән булһа, ул да ошондай эшләпә кейер ине, тип уйланы; шунда уҡ үҙе, нимә тип әйтергә, күңелен китмәй нимә тип яуапларға тип уйланы. Ҡуй, тип ҡәтғи рәүештә ҡырҡа һуҡмай, шул уҡ ваҡытта өмөтләндермәй һуҙырғалыр, бәлки? Аңлап, башҡа борсоп йөрөмәҫ ине.

— Миңә ҡапыл ғына яуап биреүе ҡыйын, Зәйнулла ағай. Минең йәштә былдай аҙымға барыуы...

— Мин һине ҡабаландырмайым. Уйла, хәл ит. Оло улым Урта Азияла, ҡыҙым да шунда, уҡытыусы. Һирәк ҡайталар. Уртансыһы Белоретта, иң бәләкәйе армияла. Былай мин тыныс кеше, йәшәгән еремдәге халыҡ һәйбәт. Мин һиңә адрес ҡалдырам. Хәл иткәс яҙырһың. Риза булһаң, килермен. Юҡ, тиһәң дә яҙ, — ул пинжәк кеҫәһенән ручка сығарҙы. — Ғәйникамал апай, бирәй ҡағыҙ киҫәге бир әле.

Ҡарсыҡ ейәнсәренең дәфтәренән йыртып бер бит ҡағыҙ килтерҙе. Зәйнулла уны тәҙрә төбөнә һалды ла адресын яҙа башланы. Яҙғанда ҡулы йәнә ҡалтыранды. Яҙып бөттө, дәфтәр битен дүрткә бөкләне, китергә тип ҡалҡынған Нурияның ҡулына тотторҙо. Ҡағыҙ киҫәген нисек алғанын да, Зәйнулла менән хушлашҡанын да йүнләп хәтерләмәй Нурия. Ихатаға сыҡҡас ҡына үҙендә еңеллек һиҙҙе, әммә нишләргә, нисек хәл итергә, ризалашырғамы, әллә кире һуғырғамы тигән һорауҙар ауыр булып йөрәгенә ятты...

Зәйнулла ҡапҡанан сығып йыраҡ та китергә өлгөрмәне, Ғәйникамал ҡарсыҡҡа күршеһе Ишбикә килеп керҙе. Ул шул ҡәҙәре ябыҡ һәм төҙ, әйтерһең дә, ситса күлдәк аҫтында һөйәктәре шығырлап йөрөй. Кипкән ҡулдарына, ҡара бәләкәй йөҙөнә ер төҫө, фанилыҡ кергән. Уның һөйләүе ҡапыл-ҡапыл, мыжыҡ, кеше алдында үҙе кеүек ҡартайып барған берҙән-бер ҡыҙын, шуҡ ейәнен әрләп йөрөй. «Үәт, ләғиндәр, минең үлгәнде көтәләр! Бына бит хәҙер нindәй йәштәр китте». Ул Ғәйникамал ҡарсыҡҡа хәбәр һатыр өсөн, йәки йыш ҡына, өйҙәгеләре юҡта сәй эсергә кәрәк булһа, плитәләге газды тоҡандырып биреүен һорап килә. «Ҡурҡам шул газдан, зәп-зәңгәр булып яна, шартлап китер һымаҡ», — ти. Ә Ғәйникамал ҡарсыҡҡа был эш бер

ҙә ауыр түгел, хатта ғорурлыҡ тойғоһо уята, сөнки ул үҙен күршеһенән йәшерәк, эшлеклерәк күрә. Был юлы Ишбикә ҡарсыҡ тупһанан уҡ:

— Калуштарыбыҙ алмашынған бит, әллә кемдекен кейеп ҡайтҡанмын, — тип һөрәнләне.

Күрше әбей-һәбей бер-береһенә кергән саҡта ысынлап та калуштарын алмаштырып кейеүсән. Соланда уҡ йәки өй тупһаһын аша үткәс сисә лә, сыҡҡанда үҙенекен айыра алмай кешенекен кейә лә ҡуя, сөнки бөтә калуштар ҙа бер иш сөм, эсе алһыу төҫтә, үлсәме менән генә айырыла. Хәйер, ҡарсыҡтарҙың аяҡтары ла бер сама инде. Унан бөтә ауыл буйлап эҙләп йөрөйҙәр, бәхәсләшеп бөтәләр, хатта әрләшеүгә барып етәләр.

— Юҡты һөйләмә, минең үҙемдеке, — Ғәйникамал соланға сығып калуштарын алып керҙе. — Ҡара, минекенең эслеге таушалмаған, шул көйө, ә һинекенең сепрәге туҙған.

— Хоҙай һуҡҡыры, әтеү кемдә ҡалдырып киттем икән һуң? Асияла түгелме икән? — Шунан ул хәбәрҙе йәһәт кенә икенсегә бора. — Зәйнулла нимәгә килгән?

— Ҡатын эҙләй. Ҡотойҙа булдым, Ҡаҙаҡколда булдым, ти. Берәү табылғайны ла үпкә ауырыуҙы булып сыҡты, ти.

— Ауырыу нимәгә кәрәк, йәште алһын.

— Һауынсы Нурияны һоратты.

— Барһын Нурия, ҡалған ғына ғүмерен кешеләрсә йәшәп ҡалыр, исмаһам. Бисәгә ирһеҙ ҡыйын, тормош түгел инде ул. Минең Шәрәф ошо көндә иҫән булһа, береһенән дә тел тейҙертмәҫ ине. Әтеү бит үҙемдең ҡыҙым ҡасан үлеремде көтөп йөрөй. Ә Нурия ризалыҡ биргәнме һуң?

— Асығын ғына әйтмәне. Уйлармын, риза булһам, хат яҙырмын, тип ҡалды.

— Нимәһен уйларға инде? Зәйнулла ныҡ, таҙа әле, ҡартаймаған. Ярай, Асияға керәйем, әләйһә. Уның менән алышынғандыр.

Ишбикә юлды аша сыҡты ла туп-тура Асияға, үҙе һымаҡ уҡ яңғыҙ, әммә йыуан ҡарсыҡтың йортона инде лә тупһанан уҡ һөрәнләп ебәрҙе:

— Калуштарыбыҙ алмашынған, бир миңә үҙемдекен!

Асия ике бармағы менән генә калуштарының ситтәренән тотоп иҙәндән күтәрҙе лә Ишбикәнең йөҙөнә яҡын килтерҙе.

— Ниңә юҡты һөйләйһең? Үҙемдеке, һинеке аяҡтарыңда, бер ҙә алышынмаған, һинең калуштарҙы мин таныйым, сис әле.

Ишбикә ҡарсыҡ бер калушын систе.

— Беҙҙеке бер алышынғайны инде, шуға мин һинекен таныйым. Бына ҡара, һулының эслеге аҡтарылған.

— Шулаймы? Ай, иҫәр, ҡартайҙым, үҙемдең калушты танымайым. Ғәйникамалға Зәйнулла килгән, ҡатын эҙләй. Бөтә районды йөрөп сыҡҡан, гел генә үпкәһе сирләләр тура килә лә ҡуя, тип әйтә ти. Һауынсы Нурияны һоратҡан.

— Нурия ризалыҡ биргәнме һуң? — Асияның йоҡоло йөҙөндә ҡыҙыҡһыныу барлыҡҡа килде.

— Нишләп ризалашмаһын? Зәйнулла шап-шаҡтай әле. Иҫәр баш ҡына ундай ирҙән баш тартыр. Ул тегендә ҙур түрә булып эшләй ти ҙәһә. Көрәп аҡса ала, үҙенең аты менән йөрөй. Көҙгә тиклем көтөргә булғандар. Әле бит һауынсыларҙың күп алып эшләгән сағы. Күп итеп аҡса эшләр, өйөн һатыр, шунан Аршаға китер. Дөрөҫ эшләй. Һыйыр ҡойроғон күпме бороп йөрөргә була? Хәтижәгә керәйем. Улына әллә ҡасан телеграмма һуҡҡайнылар, һаман яуап юҡ. Бына нисек бит ул бөгөнгө балалар! Әсәләре үлеп ятҡанда ла ҡайтмайҙар.

Асиянан дүрт йорт ары, Пожар тауының битләүендә, бына икенсе көн инде яңғыҙы ғына көн иткән Хәтижә ҡарсыҡ ана үләм, бына үләм тип ята. Кисә кистән уға күршеһе Гөлъямал нимәгәлер керһә, был йоҡлап ята икән. Уята башлаған, уянмай, шунан тотҡолап ҡарай — тәне былай йылы, тын да алған һымаҡ, ти. Фельдшер Тәғзимәне саҡырған. Тәғзимә пульсын тикшерә лә, хәле хөрт, янынан китмәгеҙ, ти. Гөлъямалдың ире, сатан Искәндәр, шкафтағы сепрәк-сапраҡ араһынан ҡарсыҡтың ҡайҙалыр Төмәндә бурмастер булып эшләгән берҙән-бер улының хатын эҙләп таба ла почтаға йүгерә, алтмыш тингә «Әсәйеңде ерләргә ҡайт» тигән телеграмма һуға.

Хәтижәнең кескәй өйөнә күрше ҡарсыҡтар, тиңдәштәре, әхирәттәре йыйылған да үлергә йыйынған ҡарсыҡты уратып һикегә ултырышҡан. Улар барыһы ла үлемгә яҡын ғына йәшәй — ғүмерҙәре осланыуға һанаулы ғына йылдар һәм ул көн килеренән ҡурҡалар, шуғамылыр үлем күҙҙәренә яҡындан ҡарағылары килә, уға өйрәнеп, күнегеп, уның әллә ни ҡурҡыныс түгеллеген, тыуымдан да, хатта тормоштоң үҙенән дә ябайыраҡ икәнлегенә үҙҙәрен йәнә бер

ышандырырға тырышалар. Үлеп барған әхирәттәре янында кисергән тойғолары ҡатмарлы һәм шомло, шулай ҙа уларҙы бер нәмә, үҙҙәре лә аҙағынаса аңлап етмәгән бер нәмә тулҡынландыра. Был — йәшерен ҡыуаныс тойғоһо, ә ҡыуаныстары шунан ғибәрәт: «Бына бит минән йәшерәк, йәки минең тиңдәш Хәтижә үлергә ята, ә мин, Аллаға шөкөр, иҫән, йығылмағанмын, тағы бер нисә йыл йәшәрлегем бар әле».

Ишбикә ишек төбөндә калуштарын систе лә ҡарсыҡтар янына үтеп ултырҙы.

— Улы һаман юҡмы? — тип һораны ул, Хәтижәнең йөҙөнә күҙ һалғандан һуң. — Телеграмманы алманымы икән әллә? Хәҙер бит ярапланда ғына осалар, ҡайтып етергә тейеш инде. Ғәйникамалға Зәйнулла килгән. Ҡатын эҙләй, ти. Һауынсы Нурияны һоратҡан.

Был яңылыҡ ҡарсыҡтарҙы шул тиклем тулҡынландырҙы — шулай булмай ни, кейәүгә бит бөтән түгел, ә тап Нурия, ғүмер буйы һалдатка булып йәшәгән, хатта Үзбәковҡа ла бармаған кеше сыға — әбей-һәбей үлергә ятҡан әхирәтен дә, үлемде лә бөтөнләй онотоп, бер-береһен бүлдерә-бүлдерә, йәштәрсә, шат, аптыраулы тауыш менән һауынсыны һоратыуҙары, уның кейәүгә сығыу-сыҡмауын һөйләргә тотондо. Улар үҙҙәренең оҙон ғүмерҙәрендә ҡатын, әсә булып йәшәне, күп бала тапты, уларҙы тәрбиәләп үҫтерҙе, башҡа тормошто, ирһеҙ тормошто күҙ алдына ла килтерә алмайҙар ине.

Оҙаҡ, бигерәк тә һуңғы көндәге онотолоп ятыуҙан һуң Хәтижә ҡарсыҡ ярым йоҡо аралаш тигәндәй кешеләрҙең шым ғына мөгөрләгәнен ишеткәндәй булды, хатта айырым һүҙҙәрҙе лә аңғарҙы. Хәбәрҙәре ҡыҙыҡ түгел ине. Һәм уның ҡолағына ҡапыл ниндәйҙер яңы һүҙ килеп инде, ул яңылыҡ Нурия менән, һауынсы Нурия менән бәйле ине. Яңылыҡ Нурияның үҙендә түгел, яңылыҡ уның кейәүгә сығырға йыйыныуында. Кемгә бара икән һуң? Ниндәйҙер Зәйнулланы телгә алалар. Бына ошо Зәйнулла тигән кешенең кем икәнен бик белгеһе килде Хәтижәнең. Ҡыҙыҡһыныуы күңелен болоҡһотоп, йөрәген тулатып алды китте, тамырҙары буйлап ҡан йөрөшө көсәйҙе, башы асыҡлана төштө, эргәһендәгеләрҙе өркөтмәҫ өсөн күҙҙәрен йомоп ҡуҙғалмай ғына ятҡан ҡарсыҡ бар иғтибарын туплап хәбәрҙе тыңларға кереште. Ә, Аршала йәшәгән Зәйнулла хаҡында икән һүҙҙәре, уның ҡатыны үлгән, имеш, тип ишетелгәйне шул.

Кинәнеп хәбәр һатҡандан һуң ҡарсыҡтар өйҙәренә таралышты — кемгәлер ейәнен йәки ейәнсәрен бағырға кәрәк, кемдеңдер тамағы сарсап киткән — һәм үлем түшәгендә ятҡан ҡарсыҡ күпмелер ваҡытҡа яңғыҙы тороп ҡалды. Күршеләренең үҙенә ниндәй сәбәп менән йыйылғандарын һис аңлай алманы. Барыһы ла ҡайтып китеп бөткәс, ул аяғына баҫты, хәлһеҙлектән сайҡала-сайҡала ихатаһына сыҡты. Саф һауа тын юлдарын киңәйтеп тәнен еңеләйтте. Зәйнулланың һауынсы Нурияны һоратыуы тураһындағы яңылыҡ менән бүлешкеһе килде. Ихатаһында саңда соҡонған тауыҡтарҙан башҡа йән эйәһе булмағас, ҡарсыҡ ҡапҡа тышына сыҡты, бер аҙ тирә-яғына ҡаранып торҙо, унан туп-тура Ғәйбәт тауына тәнтерәкләне. Ауыл уртаһындағы тау башында тип әйтерлек ултырған эскәмйәлә — бер-нисә ҡарсыҡ, эшләмәгән бисә-сәсә. Хәтиженең күршеһе, сатан Искәндәр (ул пожаркала тәүлек әйләнәһенә дежурҙан һуң өйҙә ял итә) тәҙрәһенән һин дә мин атлаған ҡарсыҡты күргәс үҙ күҙҙәренә үҙе ышанманы.

— Ҡарале, үлергә ятҡан ҡарсыҡ терелгән, етмәһә тауға менеп бара! Ә мин алтмыш тинемде сарыф итеп улына телеграмма һуғам. Ҡайтып килһә, йәпһеҙ була бит әле, — тип ул аптырап торҙо-торҙо ла икенсе телеграмма һуғырға тип почтаға сығып йүгерҙе.

Ә Хәтижә ҡарсыҡ эскәмйәгә килеп етте, үҙенә сәйерһенеп, ғәжәп итеп, хатта ҡурҡып ҡараған бисә-сәсә шылып уға урын бирҙе. Ҡарсыҡ ауыр итеп осаһын эскәмйәгә терәп тынын тигеҙләгәс, былай тине:

— Ишеттегеҙме, Зәйнулла килеп китте. Аршала йәшәгән. Һауынсы Нурияны һораҡан ти ҙәһә...

Зәйнулланың Нурияға тәҡдим яһауы хаҡында кисен бөтә ауыл белә ине инде. Хатта туй ҡайһы көнгә билдәләнгәнен, кейәүҙең нисә баш һыйыры, һарығы, һаҡлыҡ кенәгәһендә күпме аҡсаһы барлығын да беләләр ине...

Иртәнге алтынсы яртыла Нурияның тәҙрәһе тапҡырына машина килеп туҡтаны ла оҙон итеп сигнал бирҙе. Йыуыулы зәңгәр халатын сығып барған көйө кейә-кейә ул ишеген шап итеп япты ла (ишеген ул бер ваҡытта ла йоҙаҡҡа бикләмәй) урамға йүгереп сыҡты.

Үрҙән, кузовтан, уға Сания менән Хәтимә ҡарай. Ҡулдарында һәр ваҡыттағыса — бәйләм. Сания йөн ойоҡ бәйләй, Хәтимә — кофта. Кабинанан бригадир Хәйбулла йылмая. Майлы күҙҙәре ятһыҙ, мыҫҡыллы ҡарай. Уның ауыҙ

йырыуынан Нурия Зәйнулла килгәнен һәм үҙенә тәҡдим яһауын белгәнен аңланы. Хәйер, улай тиһәң, бригадир Нурияны күргән һайын ауыҙын йыра инде. Сания менән Хәтимә лә ул турала белгән кеүек һәм ниндәйҙер аҫтыртын уй менән ҡараған һымаҡтар. Шаталаҡ, әсе телле, биш бала әсәһе, бишеһен биш атанан тапҡан Хәтимә бигерәк тә. «Беләбеҙ, беләбеҙ!» — тип ҡысҡырып тора уның йүгерек әрһеҙ күҙҙәре, ныҡ ҡымтылған ирендәре мыҫҡыллы — аптыраҡ һүҙҙәрҙе ҡысҡырып әйтмәй саҡ түҙеп торған төҫлө. Ә бәлки, улар бер нәмә лә белмәйҙер, Нурияға шулай тойолалыр ғына? Белһәләр тағы. Тормошта була торған хәл, етмәһә, Нурия менән беренсе тапҡыр ҙа түгел... Аяғын машина тәгәрмәсенә ҡуйып ике ҡулы менән бортҡа тотоноп Нурия икенсе аяғын ирҙәрсә борт аша ташланы ла алдағы эскәмйәгә барып ултырҙы. Шофер Самат машинаһын ҡапыл ҡуҙғатты, аяғөҫтө торған Хәтимә сайҡалып китте лә саҡ йығылманы, һуңғы мәлдә бортҡа тотоноп өлгөрҙө, шунан ултырҙы ла йоҙроғо менән кабинаны төйҙө.

— У-у, эшкинмәгән! Ниңә ул тиклем ҡапыл ҡуҙғатаң? Утын алып бараһыңмы әллә? Йығылып имгәнһәм, кем ала мине?

«Белә, шуға ла төрттөрә», — тип уйланы Нурия, Хәтимә унан йәшерәк, шуға ла туранан-тура, Нурия апай, һин ысынлап та тормошҡа сығаһыңмы, тип һорай алмай, һорарға ҡыйыулығы етмәй. Ғөмүмән, унан бер кем дә асыҡтан-асыҡ һорамаясаҡ, белгән хәлдә лә өндәшмәүҙе хуп күрәсәктәр, уның үҙенең асылып һөйләүен көтәсәктәр. Ә һөйләгәс, бөтә сер уртаҡҡа әйләнәсәк, бөтәһе лә кәңәш бирергә керешәсәк. Уның нимәһен һөйләһен инде Нурия? Сөнки кейәүгә сығыу уйында ла юҡ. Башында шул ғына уй: «Нишләргә, ни ҡылырға, ни тип яуап бирергә?..»

Фәниәнең, ирле йәш ҡатындың, Ғәйникамал ҡарсыҡтың күршеһенә, туҡтанылар. Самат сигнал бирҙе. Фәниә ҡапҡаһынан йүгереп килеп сыҡты ла бер аяғын машинаның тәгәрмәсенә баҫты, икенсеһен борт аша ташланы. Ултырҙы ла шундуҡ Нурияға ҡараны. «Белә, бөтәһен дә белә», — тип уйланы Нурия, ҡараштары осрашҡас. Сәлимә ҡапҡаһы янында туҡтанылар, хисапсы Мәликәне алып сыҡтылар, ә моторист Хәй инструменттары һалынған дерматин сумкаһын тотоп өйө алдындағы бәләкәй баҡсаһы янында быларҙы үҙе көтөп тора ине. Сәүиәне, йөк тейәүсе Исмәғилде ултырттылар, иң аҙаҡтан гараж мөдире Карам-

дың ауылдың түбәнге осондағы өс бүлмәле яңы өйө тапҡырына туҡтанылар. Карамдың үҙенең «Волга»һы булып, ҡатыны Нурияны, фермаға машинаһында гына йөрөтһә лә, ҡай саҡ бисәһе башҡалар менән бергә лә барғылай. Шуға ла Самат гараж мөдире өйө янында туҡтап китеүҙе ғәҙәт иткән. Карам Нурияһы егәрле, теремек ҡатын, фермала беренсе булып машина менән һауырға өйрәнгән кеше, әле беренселекте тотоп килә. Тап уның тураһында парторг Ғилманов, әгәр ул эсмәһә (ун биш тәүлек ултырып сыҡты) күптән герой булып йөрөр ине, тип һөйләй. Ул иренән йәшенеп тә эсә, икәүләп тә эсәләр. Карам бөтә ирҙәр һымаҡ «нормаль» төшөрһә һәм аяғында баҫып торорлоҡ хәлдә булһа, Нурия лаяҡыл иҫергәнсе һала ла ҡуя. Ауылдың беренсе шаяны, Ишбикәнең ейәне, шофер Айбулат, әллә ысын, әллә буш, былай тип һөйләй. Йәнәһе, һайыҫҡан шары буйлап барһа, зәңгәр «Волга»ны күреп ҡала. Машинаһын туҡтата ла эргәһенә бара. Ҡараһа, Карам үҙенең Нурияһы менән лаяҡыл иҫерек көйө йоҡлап ята. Нурияның күлдәге оятһыҙ рәүештә өҫкә күтәрелгән, етмәһә. Тоттом да арттарын дегет менән буяп киттем, тип һөйләй Айбулат. Алдай инде. Хәйер, унан бөтәһен дә көтөргә була. Карам Нурияһын бәхетһеҙлегенән эсә, тигән булалар. Ә ниндәй бәхетһеҙлек? Ауылдағы иң шәп йортта йәшәй, өр-яңы «Волга» машинаһына ултырып йөрөй, өйөндә ҡала йыһазы, стеналарында балаҫтар, кейенгән, нәмә теләй шуны ашай. Шул бәхетһеҙлек буламы? Бөтә бәхетһеҙлеге шулдыр — балаһы юҡ. Һуғыш йылдарында ниндәй тоҡтар күтәреп ташыны, уларҙы ҡайһы бер ирҙәр ҙә күтәрә алмай ине. Биртенгән, эсен төшөргән. Уның ҡапҡаһы янында туҡтап сигнал бирҙеләр. Сыҡманы, тимәк, «Волга»һында киткән. Күптән тегендәлер. Ауылды, күперҙе үттеләр, Миләштауҙың эргәһенән елдерҙеләр. Берәүҙәр тын ғына барҙы, икенселәр хәбәр һатты, көлөшөп тә алдылар, Сания ойоҡ, Хәтимә кофта бәйләне, соҡор-саҡырҙа һикерткән саҡта сыйылдаштылар, юлдың насарлығына зарландылар, шофер Саматты әрләнеләр. Был тауыштар барыһы ла Нурияға әллә ҡайҙан, йыраҡтан ишетелгән һымаҡ, барыһы ла урынһыҙ, мәғәнәһеҙ, алдаҡ һымаҡ. Ул уйы менән Һаман Ғәйникамал ҡарсыҡ өйөндә, һаман Зәйнулланың тоноҡ тауышын ишетә, күҙе алдында уның ҙур ҡулдары, быжыр йөҙө, сәсе ҡырып алынған йылтыр башы. «Шул кеше минең ирем булырмы икән ни? Нишләргә? Риза булырғамы, әллә кире һуғырғамы?..» Нурия ауылдан сыҡ-

ҡандарын, күперҙе үткәндәрен дә һиҙмәне, машина туҡталғас ҡына иҫенә килде... Тау битләүе. Тауҙың исеме юҡ, тау тиҙәр ҙә ҡуялар. Ул тигеҙлектә ҡалҡып тора һәм Еләклек тип йөрөтөлә — элегерәк еләккә ошонда йөрөйҙәр ине, хәҙер ҡайындар араһындағы яландарҙа еләкте күпме эҙләһәң дә юҡ, мал тапандыһына әйләнде. Һыйыр һауыу станоктары ике рәт булып тора. Көтөүселәр көтөүҙе килтергән, һыйырҙарҙың ҡайһылары ятҡан, ҡайһылары баҫып тора, көйшәнәләр, томшоҡтарында — оҙаҡламай башланасаҡ һауымды түҙемле генә көтөү, үҙҙәренең кәрәклеген тойоу ғәләмәте. Нурия бәләкәйҙән үк малдың кеше һымаҡ уйлай һәм тоя белеүенә ышанып үҫте, шуға ла уның Матурҡайы, Зорькаһы, Йондоҙсоғо, Алаҡайы, Ҡараҡайы һауын станоктары янына аңлап киләләрҙер төҫлө...

Машинанан һикерешеп төштөләр ҙә вагондарҙағы аппараттары янына атланылар. «Йөҙгә йәш әле, быжырлығы ғына бар. Бәхтейәр тере булһа, ул да шулай оҙон, ҙур ҡуллы, ялтыр башлы ҡартҡа әйләнер инеме икән? Әллә ризалыҡ бирергә лә ҡуйырғамы? Таныш кеше, етмәһә, элекке күрше...»

Киске һауынға Карам Нурияһы килмәгән булып сыҡты. Ире менән ҡалаға олаҡҡандарҙыр. Тағы ла уның һыйырҙарын һауырға тура килә инде. Ярай, беренсе тапҡыр түгел дәһә. «Адресын яҙғанда ҡалай ҡулдары ҡалтыранды. Ныҡ тулҡынланды, ахыры. Хәҙер минән хаттар көтәлер инде...» Һауын аппараттарын — резина шлангыларҙы, тимер стакандарҙы таратып алдылар. Хәй моторҙы тоҡандырҙы. Уның тырылдаҡ көр тауышы тирә-яҡтың тынлығын йыртып керҙе лә шундуҡ күптән күнегелгән, өйрәнелгән бер ауазға әйләнде. Көтөүселәр Вәкил, Кейекбай, бер күҙе зәғиф йөк тейәүсе Исмәғил вагон янына ҡырын төшөп яттылар ҙа майланып, ҡарайып бөткән кәрт сығарҙылар. Һауын имен-аман ғына башланып китһә, уларға моторист Хәй килеп ҡушыласаҡ, хатта бригадир киләсәк һәм башлана әллә ни оҙаҡҡа һуҙылмаған кәрт һуғыу!..

Нурия Сибәркәйе янына барҙы — һыйыр көйшәп ята ине. Ул хужабикәһенә ҡараған да һымаҡ, ҡарамаған да һымаҡ, йыраҡтан танып, уның тураһында уйлай, нимә өсөн килгәнен белеп тора. Нурия уның йылы елкәһенән һөйҙө. Һыйыр ауыҙындағы көйөшөн йотоп ебәреп, көрһөндө, шунан ауырлыҡ менән арт һынын күтәрҙе, алғы аяҡтарына баҫты, арҡаһында хужабикәнең йылы ҡулын

тойоп рәхәтләнеп килелде лә һауын станоктары яғына атланы. Өйрәнгән урынына барып баҫты, алдындағы ҙур тоҙ киҫәген кинәнеп яларға кереште. Һауынсы йылы һыу менән ҙур алһыу еленде, тулышҡан имсәк баштарын йыуҙы, уларға алюмин стакандарҙы кейҙерҙе — резина-тимер механизм сөскөрөп-бышҡырып торҙо ла бер ритм менән эшләп алып китте... Уның уйында һаман Зәйнулла — ниңәлер үҙен тегендә, сәйер генә исемле Арша ҡасабаһында итеп тойҙо. Ул Аршаны бер ваҡытта ла күргәне юҡ, ул тарафтарҙа булырға тура килмәне, шулай ҙа хыялында уны ошондай рәүештәрәк күҙ алдына баҫтыра: таш-ҡырсынлы урын, унда илткән юл да таш-ҡырсынлы һәм һағышлы. Ул юл Уралдың иң бейек һырты буйлап бара, ҡасабаның буш урамдарында саңлы ел иҫә, шыҡһыҙ өйҙәрҙең ҡараңғы тәҙрә ҡапҡастары шығырлап шап-шоп ябыла ла асыла. Шунан әлеге Аршанан бөтөнләй икенсе тормоштағы Нурия ошо ферманы, көтөүҙе, үҙенең һыйырҙарын күрҙе лә күңеленә ҡыйын булып китте. Әлегесә, мотор эшләп торор, ирҙәр вагон эргәһендә кәрт һуғырға ултырыр, ә ул, Нурия, бында булмаҫ... Уның Сибәркәйен, Зорькаһын, Алаҡайын, Ҡараҡайын кем һауыр икән? Сибәркәйе уның иң яратҡан һыйыры, ят кешегә бик эймәй, һөтөн биреп бөтөрмәй, уны икенсе станокка индерһәң дә оҡшатмай — ул үҙенең, тик үҙенең урынына ғына өйрәнгән... Нурия үҙ тормошон фермаһыҙ, һыйырһыҙ күҙ алдына килтерергә тырышып ҡараны, әммә килтерә алманы — ошо тау битләүе, вагон, иртәнге, көндөҙгө, киске һауындар — барыһы ла унһыҙ буласаҡ. Хәтимә, Сания, Фәниә, Сәүиә, ошо фермала ҡартайған, ревматизм менән яфаланған хисапсы Мәликә менән айырылышыуҙы ла күҙ алдына килтереүе ҡыйын. Хәҙер улар тегенән, Аршанан күренгәс, баҡһаң, Нурия уларҙың барыһын да яратҡан икән. Көтөүселәрҙе лә яратҡан, бригадирҙы ла. Көтөүсе Вәкил фермаға малай ғына көйө килде, һуңынан, армияла хеҙмәт итеп ҡайтҡас, ҡулына йәнә сыбыртҡы алды, бөгөнгө көндә ул — күркәм ир, биш бала атаһы. Ә Кейекбай? Бына кем ул ысын көтөүсе! Аллаһы тәғәләнән бирелгән ысын көтөүсе — тап Кейекбай. Ул инде ҡырҡты уҙған, балалары үҫеп бөткән, олоһо институтта уҡый, ул һаман көтөүсе. Ордены бар, ихтирамлы кеше. Ә нисек матур итеп таҡмаҡ әйтә! Әртистәрең ары торһон. Күңелле лә, һағышлы ла уның таҡмаҡтары. Гел генә йырлап йөрөй, бигерәк тә көтөүҙә саҡта, хатта төнөн дә йырлай. Тауышы нәҙек, йомшаҡ, шулай ҙа

ялан яңғыратырлыҡ — кинәнеп тыңлайһың. Ғүмере буйы көтөүсе сыбыртҡыһын һөйрәп йөрөгән, төнгө йәшенле ямғырҙарҙа һыуланған, әсе елдәрҙә өшөгән ошо бәләкәй генә, ҡаҡса, холоҡ-фиғеле менән тыныс кешене йәлләү тойғоһона уның йырҙарын тыңлағанда ниндәйҙер яҡынлыҡ, яҡтылыҡ, рәхмәт тойғолары Нурияның йөрәген тултыра... Нурия әллә ҡасан, йәш саҡтарында булған ваҡиғаны иҫләп йылмайып ҡуйҙы — бер мәл Кейекбай уны отваллар аша алып китеп аулаҡта йығырға маташҡайны... Улар байтаҡ йылдар бергә эшләп күп нәмәләр кисерҙе, нисә көндәр, нисә төндәр яланда үткәрҙе, ямғырҙарҙа һөйәктәренә тиклем һыуланды, йылғаларға торошло һөт һауҙы... Бына шуларҙың барыһын да ташлап кит, имеш. «Әйҙә, Алаҡай, әйҙә һауайым үҙенде. Ә һин, Зорька, тор». Һыйыр елендәренә йәбештерелгән стакандар һөт һура, резина шлангылар һелкенә, тирә-яҡты тауыш менән тултырып мотор дерелдәй... Ә туғандары, энеһенең ул-ҡыҙҙары — Ришат, Рәмил, Марат, Дилә, яңы тыуған балаһы һуң? Уларһыҙ нисек йәшәр Нурия? Нурия әбей, тип кем әйтер, уларҙың йүргәктәрен, ыштан-күлдәктәрен кем йыуыр?..

Һауынды тамамлап, бидондарҙы йыуып, аппараттарҙы вагонға индергәйнеләр генә, Ҡоро йылға яғынан зәңгәр «Волга» күренде — гараж мөдире Карам ҡатыны артынан килә. Тимәк, уныһы ҡалаға китмәгән! Карам ҡатынының бында юҡлығын белмәйҙер ҙә әле. Туҡтаны. Ҡабаланмай ғына машинаһынан сыҡты, ишеген шартлатып япты ла тирә-яғына ҡаранмай ғына ирҙәр яғына атланы. Тегеләрҙең ҡулдарын ҡыҫты, шунан күмәкләп тәмәке тоҡандырҙылар, нимәлер тураһында гәпләшеп алдылар. Йөк ташыуҫы Исмәғил генә тызырая-тызырая һөтлө бидондарҙы траншеяға төшөп ултырған машинаға тейәй ине. Карам тирә-яғына ҡараны ла:

— Бисәне күрмәйемсе, — тип әйтеп ҡуйҙы.

— Һин уның артынан килһәң, ул бында юҡ, — тине бригадир Хәйбулла тыныс ҡына, шул уҡ ваҡытта мыҫҡыллы ғына итеп.

— Нисек инде юҡ? Мин уны бөгөн алып килә алманым, икенсе бригадала эш күп булды, һеҙ өй янында туҡтамай үтеп киткәнһегеҙҙер?

— Туҡтаныҡ, биш минут самаһы ҡыҫҡыртып торҙоҡ, — тип яуапланы бригадир.

— Эскәндер ҙә йоҡлап ятальр, һыйыр,— Карамдың яңаҡтары уйнаны.— Кәнтәй, күрмәгәнен күрһәтермен әле.

— Һин иплә, бик ҡыҙып китмә,— тине бригадир.— Беҙ бында үҙебеҙ ҙә асыҡларбыҙ ниңә килмәгәнен.

— Асыу килә! — тине Карам, тешләнеп, шунан ҡапыл ғына йомшарҙы ла машинаһы янына атланы, ишеген асҡас, артына боролдо.— Йә, ҡыҙҙар, кемегеҙҙе алып ҡайтайым?

Карам үҙенең ҡатыны артынан килгәндә һәр саҡ быны шулай ҡыҙҙарҙы «Волга»һында йөрөргә саҡыра, әммә уға берәү ҙә ултырмай, сөнки Нурияһы йөҙөнә шул тиклем ҡәнәғәтһеҙлек сығара, әйтерһең дә, кабинаға берәйһе керһә, уға урын ҡалмай. Хәҙер, Нурияһы булмаһа ла Карамдың тәҡдимен ҡабул итергә кемдең ҡыйыулығы етһен? Ҡатыны бит «Волга»ны үҙенеке тип иҫәпләй. Шул мәл Әбсәләмова Нурия менән ниҙер булды, ниндәйҙер шаян, йәш тойғо йөрәген ҡуҙғатты ла ебәрҙе — әллә оҙаҡламай тормошо үҙгәрәсәге, әллә икеле-микеле уйҙары, борсолоуҙары күңелен болоҡһотто — ҡапыл ғына зәңгәр «Волга»ла елдергеһе килде лә китте. Уның бит бер ҡасан да еңел машинаға ултырғаны юҡ!

— Әйҙә, мине алып ҡайт! — тине ниндәйҙер ҡыйыу, шат тауыш менән, йөҙө яҡтырҙы, күҙҙәрендә нур уйнаны.— Ғүмер эсендә исмаһам бер тапҡыр «Волга»ға ултырайым әле.

Ул алдағы урынға ултырҙы, ишекте шартлатып япты. Ҡуҙғалып киттеләр. Машина эсендә тире һәм буяулы тимер еҫе аңҡый. Был еҫтәр, шулай уҡ барған саҡтағы еңеллек, уңайлыҡ, рәхәтлек ифрат оҡшаны Нурияға. Ул бит кузовта һелкенеүгә, йөҙөнә бәрелгән елгә, саңтуҙанға өйрәнгән. Бында уларҙың береһе лә юҡ, етмәһә, юл шул тиклем яҡын, эргәлә генә. Шуға ла тиҙ генә үтеп киткән Ҡоро йылға ла, Мышағыр битләүе, иҫке отвалдағы үләндәр, уң яҡтағы иген баҫыуы уға нисектер икенсе төрләрәк булып күренә, әйтерһең дә, ул ҡәҙимге донъяға бүтән, башҡа бер тиҙлектәге тормоштан ҡарап бара. Күперҙе аша сыҡтылар, ауылдың осонда Нурия:

— Туҡтат, был яғына атлап ҡайтам,— тине.

— Ултыр, өйөңә тиклем илтәйем инде, — тип яуапланы Карам уға ҡарамай ғына.

Ҡапҡа төптәренә баҫҡан ҡарсыҡтар, Ғәйбәт тауы башында ултырған бисә-сәсә артта ҡалды, улар Нурияны әлбиттә, таныманы, әммә өйөнә яҡынлашҡан машина

яйлағас, күршеләре танышы һәм уларҙың йөҙҙәрендә Нурия ниндәйҙер көнсөллөк, мыҫҡыллы кинәйә шәйләне, әйтерһең дә, барыһы ла «ҡара, ҡара, Карам ферманан үҙенекен түгел, икенсе Нурияны алып ҡайтып килә» тип әйтәләр төҫлө тойолдо.

Һәм бына Нурия үҙенең ҡапҡаһы тапҡырына килеп етеп, оялышынан акациялар араһына йәшеренгән бәләкәй, ергә суккән өйөн күргәйне, йөрәген һағыш ҡыҫты. Ул үҙен ҡайҙандыр йыраҡтан ошо өйөн һағынып ҡайтҡан кеүек хис итте, уға унда, әлеге алыҫ ерҙә, ҡыйын ине, ошо көнөн, гүйә, саҡ көтөп алды. Ошо изге ояны ни йөрәге менән ташлап китһен, ул бит ҡасандыр ошо йортта Бәхтейәр менән бәхетле йәшәне, ошонда бөтә ғүмере үтте, ҡартайҙы. Арҡыс-торҡос таҡта ҡаҙаҡланған тәҙрәләре янынан һауынсы әхирәттәре туҡтамай ҙа үтеп китәсәкме? Тулышҡан күңеленә ауыр булды ла, ҡапыл ғына аңы асыла, зиһене яҡтыра төштө. «Юҡ, бармайым, — тип уйланы ул. — Бер ҡайҙа ла китмәйем». Үҙенең был ҡарары ахырғы, тамам хәл ителгән уйы икәнлеген аңлаһа ла, нишләргә, ни тип яуап бирергә, тигән һорау уның йөрәген байтаҡ өҙгөләйәсәк әле...

Малсыларҙың быйылғы слеты өсөн урынды Ҡоро йылғаның уң яҡ ярында — тигеҙ, әлегә мал тапап өлгөрмәгән, шунлыҡтан тиҙәкләмәгән матур ғына аҡланды һайланылар. Ҡоро йылға бынан йыраҡ түгел, иҫке приискылар аръяғында баш ала ла отвалдар араһынан биш саҡрым самаһы йүгергәс (ҡасандыр уның ярҙарында алтын йыуғандар) ваҡ сауҡалыҡ, ерек, муйыл, ҡара ҡарағат ҡыуаҡлыҡтары аша күперҙән саҡ ҡына аҫтараҡ, ауылға яҡын ғына ерҙә, ҙур йылғаға — Уралға, урындағы халыҡ әйткәнсә, Яйыҡҡа, килеп ҡушыла. Ҡоро тип, моғайын да, шуға аталалыр, ҡайһы бер ҡыуан килгән йылдарҙа ул тамам кибеп бөтә. Әле йылға тулы һыулы, ағымы етеҙ, шишмә кеүек саф. Ә слет үткәреү өсөн һайланған урынды, быуанан саҡ ҡына өҫтәрәк мал һыулаған урынды, кешеләр күптән инде үҙ иткән. Яҙын унда тракторсылар ашай, йәйен бесәнселәр ял итә, бер йәй хатта палаткалар ҡороп геологтар ҙа йәшәне. Эҫе көндә һыуһаған, ҡайнар ҡояштың нурҙарынан әлһерәгән бесәнсегә йәки көтөүсегә ерек, муйыл ағастарының күләгәһенә, дымлы үлән, ҡамыш, күрән еҫтәре тулған ышыҡҡа сумыуы рәхәт. Ярҙан арыраҡ, әлеге муйыл, ерек ҡыуаҡлыҡтарынан ситтәрәк,

берәм-һәрәм ялбыр ҡарт ҡайындар ултыра, уларҙың күләгәһе усаҡлы, тағанлы баяғы аҡлан уртаһында ята...

Колхоз юлдары буйлап үҙенең быҫраҡҡа, саң-туҙанға батҡан иҫке «ИЖ»ында бөтә ергә өлгөрә торған Ғилманов елә. Ҡаршыһына иҫкән ялан еле уның ямғыр, ҡояш ашаған, яңаҡтары ослайып сыҡҡан ҡара тутлы йөҙөнә юл туҙанын һылай, күҙенә сүп-сар, ләпәк тултыра. Шулай ҙа ул йөрөй, сөнки мәшәҡәте ифрат күп, һис өлгөрә алмай. Ҡымыҙ бешкән фермаға барып малсылар слетына иң шәп ҡымыҙҙы әҙерләгеҙ, тип бойороп китте: кеше башына ике литр һәм дә ҡунаҡтар өсөн. Колхоздың художестволы үҙешмәкәр түңәрәгенә йөрөүселәр — бейеүселәр, йырсылар, ҡурайсы ҡарт — йәшәгән икенсе, өсөнсө бригадаларға һуғылып уларға иртәгә үк үҙәк усадьбаға, йәғни культура йортона, репетицияға килергә ҡушты. Унан сельмаг мөдире менән һөйләште, прилавка аҫтындағы ҡайһы бер дефицит тауарҙарҙы: йөн кофталар, ситса, тәҙрә селтәрҙәре, кешмир яулыҡтар, эйтәйек — слетҡа сығарып малсыларға һатырға бойорҙо. Сельпо прәниктәр, печенье, кәнфит, лимонад менән һатыу итәсәк, тик бер тамсы ла спиртлы эсемлек булырға тейеш түгел — парторг быныһын ҡат-ҡат иҫкәртте. Эйе, Ғилмановтың тәжрибәһе ҙур: үткән слеттар йыш ҡына иҫергәнсе эсеүҙәр менән тамамлана торғайны...

Һәм бына күптән көткән слет көнө лә етте. Ҡоро йылға ярындағы аҡланда ҡаҙан аҫтылар —һарыҡ итенән һурпа бешәсәк. Иң бейек, иң тарбай ҡайын күләгәһенә ике өҫтәл ҡуйҙылар, аҡлан уртаһындағы нәҙек оҙон һырғауылда флаг — слет асыу тантанаһында уны осҡа күтәрергә тейештәр. Саҡ ҡына арыраҡ борттары асылған машина ултыра, оҙаҡламай ул сәхнә вазифаһын үтәйәсәк. Ә ике ҙур һауытка һалынған ҡымыҙҙы йылғаға төшөрөп һыуға ултырттылар.

Көндөҙгө һауын булманы. Иртәнгеһенән һуң һауынсылар өйҙәренә таралышты ла кейенеп-яһанып йылға буйына килде. Һәм бына ферманан ситтә, күп йыуылыуҙан төҫһөҙләнгән халатта түгел, ә байрамса кейемдә, улар тәүге тапҡыр осрашҡан кеүек, бер-береһенә яңы уйҙар, яңы тойғолар менән ҡараны. Кемдер һынаулы баҡты, кемдер үҙенең кофтаһын йәки костюмын әхирәтенеке менән сағыштырҙы, ҡайһыһылыр аптыраны: ҡарале, Карам Нурияһы ҡалай матур күлдәк кейгән! Беҙҙең сельмагтан түгеллеге күренеп тора. Ә Әбсәләмова Нурия ҡаланан

һатып алған ҡара-зәңгәр костюмда. Ҡасандыр ошо костюмында ул Үзбәковҡа оҡшағайны. Үзбәков уға, һин хәс тә ҡалала йәшәгән ҡатын, фигураң ҡаланыҡы, тип әйткәйне. Аяҡтарында лак ялатылған туфли — улар менән үләндән, йомшаҡ яландан түгел, ә асфальттан атларға кәрәк тә бит. Күкрәгендә «Почет Билдәһе» ордены йылтырай. Нурия орденын бик һирәк таға, уға һаман өйрәнә-күнегә алмай. Әле берсә ҡыуанып, берсә ғорурланып, берсә оялып күкрәгенең һул яғына ҡарап-ҡарап ала...

Өс литрлы банкылар, канистрҙар, клеенкалар, ҡалаҡ, сеүәтә, башҡа әйберҙәр һалынған сумкалар тотоп килделәр. Барыһы ла шат, ҡысҡырып көлөшә, алда торған йыйылыш тантанаһы, доклад тыңлау (унда алдынғыларҙың фамилияларын әйтәсәктәр), бүләкләү, саф һауала ашау, тәмле ҡымыҙ эсеү уларҙың кәйефен байрамса итә. Өҫтәл артына түрәләр ҡунаҡлағас — парторг Ғилманов, председатель Мәүлетбаев, баш зоотехник Моталлапов — һауынсылар һөйләшеү-көлөшөүҙән тынды ла йылы үләнгә плащтарын йәйеп ҡайын күләгәһенә ултырышты. Парторг Ғилмановтың малсылар слетын асыҡ тип иғлан итеүе булды, баян уйнап ебәрҙе, әлегә тыныс ҡына һелкенгән флаг тантаналы рәүештә яйлап зәңгәр күккә ынтылды, туҙы һыҙырып алынған нәҙек ҡайын һайғауҙың осона еткәс тағы ла нығыраҡ елберләргә тотондо. Унан президиум һайланылар. Әбсәләмова Нурия, әлбиттә, беренселәрҙән булып өҫтәл артына барып ултырҙы — йыйылыштарҙа үҙен президиумға ултыртҡандарына ул күптән күнеккәйне, быны хатта алдан уҡ әҙерләнеп-көтөп тора һәм үҙ урынын алғас аҫтағыларға (залдағыларға, бөгөн — үләндәгеләргә) ҡарата ниндәйҙер өҫтөнлөк, власть тойоп йөҙөнә рәсмилек сығара, эшем эйәһенә әйләнә. Парторг Ғилманов доклад өсөн һүҙҙе баш зоотехник Моталлаповҡа бирҙе...

Иртәгәһенә районның «Ураҡ һәм сүкеш» гәзитендә бөгөнгө слет тураһында ҙур булмаған хәбәр баҫып сығарасаҡтар. «Колхоздың баш зоотехнигы Моталлапов иптәш малсыларҙың ярты йыллыҡ эше тураһында доклад яһаны, фекер алышыуҙа «Почет Билдәһе» ордены кавалеры Әбсәләмова Нурия өс мең рубежын уҙырға вәғәҙә бирҙе», «социалистик ярышта еңгән беренсе бригадаға Ҡыҙыл Байраҡ, 150 һум аҡсалата премия тапшырылды», «ферма эшсәндәренең слеты үҙешмәкәр артистарының ҙур концерты менән тамамланды», тиеләсәк унда.

Концерттан һуң ярты сәғәт самаһы сельпо, сельмаг машиналары араһында йөрөнөләр, кофталар, күлдәктәр ҡапшанылар, күпләп прәниктәр, кәнфиттәр алдылар. Әлбиттә, уларҙың барыһын да ҡәҙимге көндәрҙә лә алып була, әммә бында, яланда, байрам мәлендә, бигерәк тә кеше араһында, улар байтаҡҡа тәмле, яңы, ҡәҙерле, слет күстәнәсе тигән һүҙе лә бар ине.

Нурия үҙенә бер нәмә лә алманы — мохтажлығы юҡ. Килене менән һылыуы* Диләгә ике кешмир яулыҡ, бәләкәйҙәргә өс кило прәник алды. Ул арала аш өлгөрҙө, ирҙәр йылғанан ҡымыҙҙы алып килде. Уны канистрҙарға, өс литрлы быяла банкыларға таратып ҡойҙолар — кеше башына икешәр литр. Һурпа өләштеләр, итте бүлделәр. Икмәк, колбаса, прәниктәр, бешкән йомортҡа, йәшел һуған ҡуйылған клеенка уратып ике Нурия, Хәтимә, Сания, Сәүиә, көтөүсе Кейекбай ултырышты. Түрә-ҡара айырым ашаны.

Нурия үҙен бәхетле тойҙо. Тулыһынса уҡ түгел, сөнки туп-тулы, түп-түңәрәк бәхете юҡ, уға ышаныу, өмөтләнеү, уны көтөү генә бар, шулай ҙа уға бөгөн ифрат рәхәт, күңелле ине. Йөрәге елкенде, бәлки, түрәләрҙең уны маҡтауынандыр, бәлки, дөйөм байрам кәйефе уға ла күскәндер, итле һурпа ашау, ҡымыҙ эсеү мәлен көтөүҙәндер. Ул яланда, усаҡта бешкән ашты ашарға ярата, кешеләр менән күмәкләп ултырып ризыҡ ейеүҙән, ҡымыҙ эскәндән һуң еңелсә генә баш әйләнеүенән йәм таба. Кейекбай алты литр һыйҙырышлы зәңгәр канистрҙы алды, тимәк, өс кеше нормаһы (тағы дүрт литр кәстрүлдә), көрөшкәләргә ҡойоп таратыр алдынан тегене һелкетеп болғатырға тотонды. Шул мәл Карам Нурияһы түрә-ҡара ултырған яҡҡа күҙ һирпте лә әғүәсе** тауыш менән шыбырланы:

— Кейекбай, ҡымыҙыңды ҡоймай тор әле, миндә ҡатырағы бар. Ҡыҙҙар, әйҙәгеҙ, Ғилманов күрмәгәндә генә төшөрөп алайыҡ. Үҙебеҙҙең байрам даһа...

Ул сумкаһынан аҡбашты тартып сығарҙы, тегенең бөкөһөн тештәре менән һә тигәнсе асып Кейекбайҙың һауытын үҙенә яҡыныраҡ шыуҙырҙы ла шешәһен йәшерәҡаплай ҡойорға кереште. Сания менән Сәүиә араҡынан баш тартты, Әбсәләмова Нурия, миңә саҡ ҡына, төбөнән генә, тине. Һөҙөмтәлә араҡы өс кешегә: Карам Нурияһына,

---

* һеңлеһе — диал. — Ә.Ә.

** ҡотҡосо — Ә.Ә.

Хәтимәгә, Кейекбайға бүленде. Йәһәт кенә эстеләр ҙә ҡымыҙ менән ҡаплап ҡуйҙылар. Әбсәләмова Нурия араҡыны бик һирәк эсә, шуғалырмы бер нисә йотомдан да иҫерә лә ҡуя. Күкрәгенә йылы таралды, аяҡ-ҡулдары ауырайҙы, әйтерһең дә, үҙенеке түгел. Ҡалағы сеүәтәнән яҙа төртөлә, был мәрәкә, янындағыларҙың хәбәрҙәре лә мәрәкә, йөҙҙәре, хәрәкәттәре мәҙәк, ашлы сеүәтәләр, ҡалаҡтар, ҡымыҙ һалынған көрөшкәләр мәҙәк, улар барыһы ла зыр әйләнә, йөрөй, түңкәрелә, әйтерһең дә, Нуриянан ҡаса. Һәм Нурия көлә... Етмәһә, араҡы башына сыҡҡан Кейекбайҙың теле асылды. Хәтимә уға:

— Кейекбай, таҡмаҡтарыңды әйт әле, — ти.

Теге:

— Градус етмәгән, — тип яуаплай.

— Ә һыйырҙарға айныҡ көйө лә йырлайһың бит.

— Ул бөтөнләй икенсе эш. Мин уларға фәнни яҡтан йырлайым бит.

— Нисек инде фәнни? Шулай ҙа буламы ни?

— Нишләп булмаһын, була. Ғалимдар помидорҙы музыка менән һәм музыкаһыҙ үҫтереп ҡараған. Һөҙөмтә нисек? Музыка «тыңлап» үҫкәндәре мул уңыш биргән, ә музыкаһыҙҙары сибек булған, помидорҙары ла әҙ булған. Был нәмә хаҡында һөйләй? Был шул турала һөйләй: бөтә үҫемлек тә музыка аҫтында һәйбәт үҫә. Йәғни мин йырлайым — үлән үҫә, һыйырҙар аппетит менән ашай, елендәренә һөт йыйыла, һеҙҙең һауым арта. Миңә орденды юҡҡа ғына биргәндәр тип уйлайһығыҙмы ни? Йырлағанға, һөттө арттырғанға биргәндәр.

— Эй, көлдөрҙөң, Кейекбай, — тип һыны ҡата Хәтимәнең. — Мин һине шәп йырсы тип кенә уйлаһам, һин матур итеп әкиәт тә һөйләй беләһең икән!

— Ниңә көләһең? Гәзит уҡырға кәрәк!

Кейекбай бөгөн матур кейенеп килгән. Өҫтөндә — буйлы ҡара-көрән костюм, башына яңы һоро фуражка һалған, түшендә — «Почет Билдәһе» ордены, миҙал. Дөрөҫ, костюмы ҙурыраҡ, пинжәге тубығына етеп тора, әйтерһең дә, үҫмер яурынына һалынған атай кейеме.

Нурияның да һөйләшкеһе, берәй ҡыҙыҡ хәбәр әйтеп башҡаларҙы көлдөргөһө килә.

— Ҡыҙҙар, беләһегеҙме, мин саҡ кейәүгә сыҡманым бит, — тип һүҙ башлай ул көлә-көлә. — Зәйнулла ағайға, — тип өҫтәй, шунан ҡыйыу ғына итеп әйтеп ҡуя: — Ышанаһығыҙмы, юҡмы, кире ҡаҡтым!

Бер нисә секунд тынлыҡ, әллә аптырашалар, әллә аңламайҙар. Күренеп тора, был турала бөтәһе лә белә, тик Нурия хәҙер, ошо минутта, әйтер тип береһе лә көтмәгән.

Беренсе булып Карам Нурияһы телгә килде:

— Зерә кире һуҡҡанһың. Кеше ирҙәре менән буталғансы сыҡҡаның лутсы булыр ине.

Был һүҙҙәр Нурияға тәүҙә көлкө булып тойолдо: ул, Әбсәләмова Нурия, ғүмер буйы тол көн иткән Нурия, ир-ат еҫен күтәрә алмаған Нурия, кеше ирҙәре менән буталамы? Көлкөмө? Көлкө. Ул рәхәтләнеп көлдө лә Карам Нурияһына күтәрелеп ҡараны. Ә тегеһе көлмәй, көлөргә, шаяртырға уйламай ҙа, иҫерек күҙҙәре уға зәһәр итеп ҡарай. Шунда ғына аңланы Нурия Карам бисәһенең шаяртмағанын һәм башына бер уй килтереп тә һуҡты: уға, иҫәргә, «Волга»ға нимә тип ултырып ҡайтырға кәрәк булған? Ғүмер буйы машина башында йөрөнө, теге көндә лә ҡайтыр ине әле.

— Ошо йәшкә етеп... — тип һүҙ башланы Нурия, яйлап, тауышын күтәрмәй генә, үҙе һаман йылмая, үҙе Карам бисәһенең күҙҙәренә ҡарай.

— Йөрөһәң дә шпилькаларыңды ҡалдырма! — Карам бисәһе плащ кеҫәһендә ҡаҙына башланы, шпильканы тапты ла Нурияның йөҙөнә бәрҙе. — Мин шпилькалар ҡаҙамайым — минеке түгел тип әйтә алмайһың.

— Юҡҡа бәлә яғаһың, — Нурияның сырайы боҙолдо. — Ул бит мине өйгә тиклем генә килтерҙе.

— Өйөңә килтергәнме, әллә икенсе ергә алып барғанмы, уныһы миңә ҡараңғы.

Рәнйеүе уҡ шикелле йөрәгенә ҡаҙалды, нахаҡ алҡымынан алды, ҡайҙа, байрам мәлендә бит әле, зәһәр һүҙҙәр уны тәүҙә аяҡтан йыҡты, шунан Нурия эсендә нимәнеңдер ҡайнауын тойҙо — бер секунд эсендә йөҙө таштай ҡатты, ҡулдары тартылып йоҙроҡтары төйнәлде, алдында ултырған ошо эскесе, боҙоҡ ҡатындың йөҙөнә бәреп нимәлер әйткеһе килде. Әммә әйтә алманы, әҙәплелеге ирек бирмәне, шулай ҙа айныҡ саҡта үҙе лә оялыр бер һүҙҙе саҡ һығып сығарҙы:

— Әгәр ireң өсөн бик ҡурҡһаң, уны итәгеңә бәйләп йөрөт, йәме.

— Бисәләр, ә, ҡыҙҙар, һеҙ нимә? — Бисәләр талашыуын ҡыҙыҡһынып, хатта кинәнеп тыңлаған Кейекбай шулай тигән булды. — Ҡуй, байрамды боҙмайыҡ юҡ-бар менән.

— Һин, кәнтәй, минән көләһеңме әле? — Карам Нурияһы һурпалы сеүәтәне ауҙарып һикереп торҙо ла йоҙроғо менән Нурияның йөҙөнә килтереп һуҡты. Ауыртыуына түҙергә була, Нурияны унынһы түгел, ошо хәлдең килеп сығыуы шаңҡытты. Тормош әле генә иҫ киткес гүзәл ине, ул президиумда ултырҙы, уны маҡтап һөйләнеләр, башҡаларға өлгө итеп ҡуйҙылар, үҙе лә һүҙ тотто, иғтибар менән тыңланылар, хатта ҡул саптылар, Карам Нурияһы ла сәпәкәй итте — ул да әхирәте өсөн шат һымаҡ ине. Эйе, барыһы ла матур, тыныс ине. Сәсрәп кенә китһен бынау араҡыһы, әллә ҡайҙан килеп сыҡты бит, хәбәр, көләү-шаярыу, бынау Карам бисәһенең йөҙөнә һуғыуы... Нурияға ҡапыл ғына, уға бер Карам бисәһе генә түгел, ошонда ултырған барыһы ла һуҡҡан кеүек тойолдо, бөтәһе лә уға ҡаршы, ике аҙаштың асыуланышыуынан ниндәйҙер ләззәт табалар, ана бит ниндәй шаттар, ҡәнәғәттәр... Нурия ситкә боролдо, ҡулдары менән битен ҡапланы, шунан табынды ташлап китте. Киткән саҡта ул әллә ишетте, әллә күҙ ҡырыйы менән генә күрҙе, табын янына парторг йүгереп килеп етте, тауышын күтәреп нимәлер әйтте, алыҫтан Карам Нурияһының иҫерек тауышы яңғыраны:

— Эйе, мин һуҡтым, әйҙә, тағы ун тәүлеккә ултырт. Битемдән көлмәһен. Алдынғы, имеш, берәү.

Лаклы туфлиҙар менән тигеҙһеҙ ерҙән атлауы ҡыйын: Нурия соҡор-саҡырға төшөп һөрлөгә, ҡоро сытыр-мытырға эләгеп абына торғас түҙмәй аяҡ кейемен систе лә ойоҡсан бара башланы, шул килеш йылғаны кисте. Атлаған һайын йөрәгендә ауыр, йәбешкәк үпкә тойғоһо үҫә барҙы, үҫә барҙы. Уның менән гүйә, ниндәйҙер алама, төҙәтеп булмаҫлыҡ хәл булды, бынан һуң бәхетле йәшәү тураһында уйларға ла ярамай — быға тиклемге тормошо уға ысынлап та бәхетле булып тойолдо — ошо тойғо ауыл яғына атлаған һайын үҫте, ҙурайҙы, ауырыраҡ була барҙы. Шулай ҙа күңел төпкөлөндә ниндәйҙер өмөт тә бар: уның байрамды ташлап китеүе — үҙ теләге менән түгел — кешеләрҙе оло борсоуға һалырға тейеш, бындай хәлдең булыуын һис көтмәгән әхирәттәре Карам Нурияһын эттән алып эткә һалып һүгер ҙә артынан йүгереп килеп етер. Юҡ, кире боролмаҫ Нурия, бөтәһе лә миңә ҡаршы, әхирәттәрем мине яратмай, тигән ҡурҡыныс тойғо күңелен ҡыра. Яҡынлашып килгән мотоцикл тауышын ишеткәндә ул байтаҡ ара китергә өлгөргәйне инде. Уны парторг Ғилманов үҙе ҡыуып етте, етте лә, уҙыбыраҡ, юл уртаһында туҡтаны.

— Һин нимә, Нурия апай? — тине ул үкенесле, хатта ғәйепле төҫ менән. Шунан ҡапыл: — Давай, борол, ултыр, кире барабыҙ! — тип өҫтәне ҡәтғи генә тауыш менән.

Нурия мотоциклды урап үтте лә атлауын дауам итте. Ғилманов уның йәнәшәһенән бара башланы.

— Был номер уның өсөн былай ғына үтмәҫ! — тип ҡысҡырҙы парторг. — Накажем, строго накажем!

— Зинһар, теймәгеҙ уға! — тине Нурия, үҙенең арҡаһында кемгәлер яза биреүҙе, оятлы итеүҙе ул ысынлап та теләмәй ине — Карам Нурияһына булған үпкәһе бер аҙ баҫылғайны, үҙе лә күпмелер дәрәжәлә тынысланa башлағайны инде. Хәҙер ул ваҡиғаларҙы Нурия икенсерәк сүрәттә күрә, икенсе төрләрәк баһалай, әхирәте уны «Волга»ларына ултырып ҡайтҡаны өсөн түгел, ә Нурия яңғыҙ, ирһеҙ, тимәк, яҡлаусыһыҙ булған өсөн һуҡты, тип ҡарай. Түшенә ниндәй генә орден таҡмаһындар, ниндәй генә президиумда ултырмаһын, уның тураһында күпме генә маҡтап яҙмаһындар, маҡтап һөйләмәһендәр, ул бер ҡасан да тулы бәхетле булмаясаҡ. Теге иҫәргә, эскесегә яза бирҙеләр ҙә ти, йәнә ун биш тәүлеккә ултырттылар, ти, бынан Нурияның хәле еңеләймәйәсәк...

— Ярай, кире барғың килмәһә, әйҙә, өйөңә тиклем илтеп ҡуйым, — тине Ғилманов.

— Унан һинең ҡатының да шпилькалар тапһынмы?

— Ниндәй шпилькалар? — Парторг аңламаны.

Нурия һорауға яуап ҡайтарып торманы, хатта әйләнеп тә ҡараманы, атлауын белде. Ә парторг һаман йәнәш килә... Нурия ҡапыл һулға ҡайырылды ла иҫке прииск отвалдары, соҡор-саҡырҙар араһынан бара башланы, шунан ағас-ҡыуаҡлыҡтар шырлығына инеп китте. Парторг уның артынан нимәләр тип ҡысҡырҙы, тик Нурия ишетмәне лә, боролманы ла, атлауын белде. Ҡоро йылғаның һул ярына сыҡты, ҡыуаҡлыҡтарҙы артта ҡалдырҙы, яңынан отвалдарға менде, ураү һуҡмаҡты ҡырҡып түтәнән ауылға йөҙ тотто. Отвалдан һуң дымлы туғай китте, бара торғас туғай түңгәкле, оҙон ҡамышлы һаҙлыҡҡа ялғанды. Килә торғас, ултырған урынында сумкаһын торғоҙоп ҡалдырғаны иҫенә төштө, суҡынып китһен дә, юғалмаҫ, юғалһа тағы, тип ҡул һелтәне.

Ул түңгәктәр араһынан бара. Бейек булып үҫкән күрән аяҡ-ҡулдарын сыя, атларға ҡамасаулай, әйтерһең дә, ҡаршыһына килә, уларҙың һөжүменән Нурия әле тегеләй, әле былай ялтанырға мәжбүр. Томра, аяҡ аҫтында мурт үлән,

һаҙ еҫе сығып торған йылы һыу шаптырлай. Ҡолаҡтары шаулай, тамағы кипте, һыу эскеһе килә. Бынау ҡырағай, һөмһөҙ төпһәләр, уҫал күрән араһында ул үҙен бер кемгә лә кәрәге ҡалмаған ташландыҡ әйбер итеп күрә. Уның капрон ойоҡ, лаклы туфлиҙар, байрамға ғына кейә торған костюм кейеүе кемгә кәрәк булды? Ордены ла кәрәкмәне. Президиумға нимәгә сығып ултырҙы ҡуҡырайып, кемгә телмәр тотто — барыһы ла бер секунд эсендә юҡ булды, аяҡ аҫтына һалып тапалды. Ул әрләнгән, туҡмалған хәлдә һаҙлыҡ кисеп китеп бара, ә тегендә, слетта, бергә эшләгән әхирәттәре бер нәмә лә булмағандай аш ашай, ит һоғона, ҡымыҙ һемерә, етмәһә, моғайын да, уны сәйнәп, унан көләп ултыраларҙыр әле. Ә Нурия уларҙың барыһын да ярата. Ниңә улар Нурия артынан килмәне, туҡтатманы, әйләндереп алманы? Уның менән ошондай хәл булғандан һуң нисек тыныс ҡына ашап-эсеп ултырырға мөмкин икән? Юҡ, артабан былай йәшәргә ярамай. Ҡартлығы ла йыраҡ түгел, оҙаҡламай тормошонан уңмаған яңғыҙ ҡарсыҡҡа әйләнәсәк. Артына әйләнеп ҡараһа, нимәнән ғибәрәт һуң үткәне? Ферма, һыйырҙар, иртәнге һауын, киске һауын. Бөттө-китте. Эш, ғүмер буйы эш тә эш. Ә ғаилә, бала-саға, ир наҙы, көслө зат яҡлауы ҡайҙа? Бәхете ҡайҙа? Ҡустыһы, килене, туғандары? Уларҙың бит үҙ тормоштары. Ул бер ямау ғына уларға. Ғәйникамал ҡарсыҡ: «Сыҡ һин Зәйнуллаға, сыҡ, уйлап та торма. Зәйнулла ныҡ ир әле, бай йәшәй, ҡураһы тулы мал-тыуар, арыу пенсия ала, етмәһә эшләп йөрөй. Май эсендәге бөйөр кеүек кенә йәшәрһең», — ти. Икенсе бер әбей, Ишбикә ҡарсыҡ, Нурия унан кәңәш-фәлән һорамаһа ла: «Исмаһам бер тыңла әле, миңә оҙаҡламай үлергә, шуға ялғанды һөйләмәм. Ирһеҙ тормош тормош түгел, балалар — бүҙәнә балалары: үҫеп етеүҙәре була таралышып та бөтәләр. Ә ир — янында. Юҡҡа ғына, утыҙ улың булғансы, уҫыраҡ абышҡаң булһын, тимәйҙәр бит», — тигән кәңәш бирҙе. Ә энеһе былай тине: «Нимә әйтергә лә белмәйем, апай, һин бит минән оло, үҙең уйла. Һинән айырылыуы ҡыйын, сыҡма тип тә әйтә алмайым, үҙ яҙмышыңды үҙең ҡорорға тейешһең». Кәңәшләшер бүтән кеше лә юҡ... Бер уйға килергә кәрәк, һуң булмаҫ элек нисек тә хәл итергә кәрәк...

Кисен тәҙрәһендә ут оҙаҡ һүнмәне. Ғәҙәттә, ул эңерҙән ята — үҙенең һыйырын һауып сәй эсә лә түшәгенә сума. Сөнки иртә торорға кәрәк. Ә киске сәйҙе Нурия энеһендә

эсергә ярата, ни тиһәң дә ғаилә ҡосағында күңеллерәк, яңғыҙлыҡ онотола. Әммә бөгөн уларға барманы, үҙендә лә хәстәрләмәне — сәй ҡайғыһы түгел. Береһен дә күргеһе килмәй, шул иҫәптән киленен дә. Хәбәр уға килеп еткәндер. Ҡыҙҙары кереп, нишләп сәйгә инмәйһең, тип һорап китте. Нурия, бөгөн бара алмайым, ныҡ арығанмын, башым да ауыртып тора, тип ҡалды. Нурияға ҡыҙыҡай нисектер икенсе төрлө ҡараған һымаҡ тойолдо, моғайын, әйткәндәрҙер һәм ул барыһын да белә, шуға ла ҡарашы әсәһенеке кеүек шикле. Бала сығып йүгергәс, Нурия шкафтан фотолар менән тулы ҡалын альбомын алды, ҡабаланмай ғына сисенеп, утты һүндермәй генә әлеге альбомды тотоп түшәгенә ятты...

Бына бит булған тормош, бынау малай-шалайҙың, егеттәрҙең, ҡыҙҙарҙың, ҡатындарҙың, ирҙәр һәм бабайҙарҙың ҡасанғылыр тормошо — уларҙың йәшәгән ваҡыты, уй-фекере, тойғолар, төрлө тауыштар, тамырҙарҙа ҡан тибеше. Берҙән-бер ваҡыт, фотоаппараттың мөғжизәле объективы алдында күҙҙәрен ҙур асып, ирендәрен ҡымтып ҡатып ҡалғандар. Шунан ундағы кешеләр таралышҡан, йәнә үҙҙәренең көндәлек мәшәҡәттәренә сумған, хәрәкәтләнгән, уйнаған, эшләгән, ашаған, юҡһынған, шатланған, оҙаҡ йылдар көн иткән, яйлап үҙгәргән, бәләкәйҙәр үҫкән, йәштәр ҡартайған, ҡарттар үлеп ергә әүерелгән, ә тормоштарының бер мәле ошо ҡағыҙ киҫәктәрендә мәңгелеккә теркәлеп ҡалған... Бына атаһы менән әсәһе. Атаһы сәсен ҡырҙырып алдырған, башында — түбәтәй, өҫтөндә — таушалған пинжәк, күлдәк иҙеүенә әллә күпме һиҙәп тағылған. Олпат ултыра, ни тиһәң дә, хужа, ғаилә башлығы, ризыҡ табыусы. Әсәһе ирендәрен ҡымтыған, еңһеҙ камзул кейгән, камзулы ике рәт итеп боронғо көмөш тәңкә менән ҡаймалған. Энеһе — әсәһенең тубығында. Уға күп булһа йәш ярым, ике йәштер. Ҡамыт аяҡтарын алға һоноп, ҡаштарын йәмшәйтеп ултыра, фотоаппараттан ҡурҡҡан йәки ғәжәпләнгәндер. Бына Нурия үҙе. Әсәһенең яурынына һыйынған. Өҫтөндә әсәһенеке кеүек камзул, көмөш тәңкәләре генә аҙыраҡ. Яулыҡ ябынған, ауыҙы балыҡтыҡы кеүек асыҡ. Ҡапҡа алдында төшкәндәр. Ҡапҡалары яңы, ботаҡлы таҡталары ла яңы, тимер элгесле. Нурияға бала сағы иҫенә төшә.

Ҡапҡа алды тышта уйнау өсөн бигерәк тә уңайлы була торғайны. Көндөң эҫе мәлендә, ҡояш төшлөктө уҙғас, бында күләгә төшә, һалҡынса, һил була, ә һыуыҡта, Урал һыр-

тынан әсе ел иҫкәндә бында тыныс, йылы. Киске эңерҙә уйнауҙары айырыуса күңелле ине. Ҡояш алыҫ тау һыртына тәгәрәй, көндөҙгө тауыштар тына. Йорт алдарындағы эскәмйәләргә ололар сығып ултырып хәбәр һата, ҡыҙҙар туп уйнай, малайҙар шаяра...

Атаһы күрше приискыла старатель ине, ташлы Урал ерендә алтын эҙләне, шунда үҙенә ҡәбер ҙә тапты — өҫтөнә забой емерелеп төштө. Нурия уны саҡ-саҡ ҡына хәтерләй, йөҙө лә, тауышы ла иҫендә юҡ, ә кейгән сарыҡтары иҫендә. Тишек-тошоҡ сарыҡтары менән ауыр атлап — ҡуңысына һары балсыҡ йәбешкән (быныһы ҡыш көндәре), әйтерһең дә, балсыҡ быймалар кейгән, ул көн һайын приискынан атлап ҡайта торғайны... Ә әсәһе бынан ун йыл элек донъя ҡуйҙы...

Бына йәнә бер фото. Уҡыусылар. Дүртенсе класта уҡыған саҡтары булһа кәрәк. Бүрәнәнән һалынған мәктәп стенаһы алдында төшкәндәр. Кейгән кейем генәләре төрлөсә һәм үтә лә ярлы. Малайҙар таушалған пинжәктә, күп йыуыуҙан ылбырап бөткән күлдәктә, баштарында — ҙур козыреклы фуражкалар, нindәйҙер кәпәстәр, әле рудникта инженер булып эшләгән Зиннуров Фәрит таҡыр башына тирәсе өҫкә ҡаратып бөкләнгән ҙур эшләпә кейгән. Ҡыҙҙар төрлө төҫтәге алъяпҡыстар кейгән, галстуктар таҡҡан. Нурия артҡы рәткә баҫҡан. Матур сағы. Үҙенә оҡшай ошо фотоһы. Уртала — уҡытыусы Фатима апай. Сыбар сарафан кейгән, йәш кенә ваҡыты. Хәҙер ап-аҡ сәсле ҡарсыҡ. Шуныһы ғәжәп, шул саҡтағы малайҙар, ҡыҙҙар бөгөнгө оло ҡиәфәттәренә бик тә оҡшаған. Йөҙҙәрендә, балаларса бер ҡатлы ҡараштарында, әлеге холоҡфиғелдәрен самалап була. Бына Кейекбай. Атаһының ҙур фуражкаһын кейеп алған, башын ҡыйыш һалып уйсан, хатта күңелһеҙ ултыра. Шул замандан бирле үҙгәрмәгән дә тиерлек...

Бына бәләкәй Бәхтейәрҙең берҙән-бер фотоһы. Атаһы менән әсәһе уртаһында эскәмйәлә ултыра. Ыштаны ҡыҫҡа, тубыҡтарын саҡ ҡаплаған, яҡшылап шнурланған яңы ботинкалар кейгән, фуражкаһы күҙҙәренә үк төшөп тора, үҙе нисектер асыулы итеп маңлай аҫтынан ҡарай. Ошо бәләкәй генә бала йөҙөндә, ҡарашында оло Бәхтейәрҙең холҡо төҫмөрләнә. Хәтеренә уйылып ҡалған: бына ул, кескәй генә ҡыҙыҡай, баҡса алдындағы әлеге эскәмйәлә бәләкәй Бәхтейәр менән йәнәш ултыра. Малай уға ҡыҙыҡ, нисектер ололарса ҡыҙыҡ. Ул үҙен бер ҙә бәләкәй тип хис

итмәй. Эскәмйәлә оло кеше ултыра һәм ололарса һөйләшә. Һөйләшкән темалары ла өлкәндәрсә. Малайҙың ҡулына, аяҡтарына ҡағылғанын, ошо ҡағылыуҙың сәйер рәхәтләгән һаман хәтерләй Нурия...

Ҡайныһының фотоһы ла бар. Ялтас башына түбәтәй һалған, һаҡалы һирәк. Ҡәйнәһе күҙҙәренә үк төшөрөп яулыҡ ябынған, йыуаш йөҙлө. Онотолған, ярым онотолған күренештәр бер мәлгә күҙ алдына баҫа, тауыштар ишетелә. Бәхтейәр Нурияны өйөнә алып ҡайтҡас, ҡайныһы тупһа алдына тәртешкә ташлағайны, йәнәһе, буласаҡ килен күтәреп алырмы, әллә ашаҡлап сығырмы? Күтәреп урынына илтеп ҡуйһа — белекле, егәрле, ә ашаҡлап сыҡһа — ялҡау, аңды-тоңдо айырмай булып сыға. Нурия был һынауҙың мәғәнәһен аңланы ла тәртешкәне эйелеп алды... Ҡырҡ икенсе йылда ҡайныһын хеҙмәт армияһына ебәрҙеләр. Армияла ул ҡаты ауырыған, госпиталдә ятҡан, бер сама һауыҡҡас уны ҡайтарып ебәргәндәр. Көҙгө бысраҡта һалҡын ямғыр аҫтында ул район үҙәгенә ике тәүлек йәйәү килә. Бер ауылға инеп йоҡлап сыға, икенсеһендә йылына, сәй эсә, оҙаҡ туҡтарға уйы юҡ — ҡайтып етергә ашыға. Районда ауылдашын осрата, шул ауылдашы уны, ни үле, ни тере тигәндәй өйөнә алып ҡайтып еткерә. Мунса яғып сабындыралар, картуф ҡоймағы ашаталар, (икмәк юҡ) мәтрүшкәле сәй эсерәләр. Өсөнсө көнөнә тамам хәлһеҙләнеп ул ҡатынына, йәғни Нурияның ҡәйнәһенә, янына ултыр әле, тип саҡыра ла башын уның тубығына һалып шым ғына йән бирә... Ҡәйнәһе ҡартая килә һуҡырайҙы — Бәхтейәре өсөн илап күҙен бөтөрҙө. Ҡайтһын ине Бәхтейәрем, исмаһам, битемдән һыйпап бер яратһын ине, тип илай торғайны, бахырың.

Бәхтейәрҙең йәнә бер фотографияһы бар. Уныһын армиянан ебәргәйне. Буденовка, шинель кейгән. Петлицаһында ике өсмөйөш — командир. Ҡыйғас ҡаштар, ҡылыс танау, үҙһүҙле, осҡор ҡараш, осло яңаҡ һөйәктәре, көслө эйәк. Бөтөнләй йәш, бөгөнгө Нурияға ул булырлыҡ йәштәрҙә. Һуғыштан фотоһын ебәрмәне, бер нисә хаты ғына килеп өлгөрҙө. Бына улар, һарғайып, мөйөштәре, бөкләнгән урындары таушалған өсмөйөшлө хаттар. Химик ҡәләм киҫәге менән яҙылған, хәрефтәре уңған, саҡ-саҡ ҡына беленә, ә Нурия хаттарҙың барыһын да яттан белә. Өсмөйөштәрҙең береһен асҡайны, Бәхтейәрҙең ярым онотолған тауышы ишетелгәндәй булды. «Ялҡын кеүек ҡайнар, Урал тауҙары ише ҙур сәләмдәр ебәрә һиңә, Нурия, ирең

Бәхтейәр. Һинең исемең «нур» һүҙенән алынған, ошо нурҙар сит яҡтар ҡараңғылығын яҡты йондоҙ кеүек яҡтырта миңә...» Артабан Бәхтейәр үҙенең әлегә запас полкта тороуы, урманда, землянкала йәшәүҙәре тураһында яҙа. Бына тағы бер хаты. «Йыш ҡына беҙҙең тауҙар, баҫыуҙар, туғайҙар иҫкә төшә. Бигерәк тә бригада менән бесән сапҡан Айыуташ, ҡуна ҡалып малайҙар менән баҫыу тырматыу, Максимовка тауы, ҡыштарын саңғы, сана шыуған, иртә яҙҙа умырзаяға барған, ҡайын һыуы эскән Миләштау йыш хәтергә килә. Ә һин, ҡәҙерле ҡатыным, бер ҡасан да иҫемдән сыҡмайһың, гел генә һине уйлап йөрөйөм. Хыялымда үҙебеҙҙең өйгә ҡайтам, ҡапҡаны асам да ихатаға атылып керәм, ҡаршыма һин йүгереп сығаһың... Яңыраҡ сәйер төш күрҙем. Мин ҡайтҡанмын, имеш, өйгә йүгерәм, ҡапҡаны асырға ниәтләнәм, ә ул эстән бикле. Ышанаһыңмы, юҡмы, шул тиклем ҡыйын булды, үҙем, Нурия эстән ныҡлап бикләгән, тимәк, мине көтмәй тип уйлайым. Тәки ихатаға керә алмай уянып киттем...» Был хаты фронттан яҙылған: «Урманда ултырабыҙ. Икенсе тәүлек инде ямғыр ҡоя. Өҫтән дә һыу, аҫта ла. Ағастарға тарттырып бәйләнгән плащ-палатка аҫтында ултырабыҙ. Плащ-палатка ҡанға буялған — яу яланынан яралы һалдатты һалып алып сыҡтылар. Бөгөн телефонисты йәшен атып үлтерҙе. Тирә-яҡта снарядтар ярыла, пулялар һыҙғыра, етмәһә, бынау йәшене. Маңлайға ни яҙылған, шуны күрәбеҙ инде...» Һуңғы хатында шундай һүҙҙәр бар: «Еңеүгәсә тере ҡал да, өйгә, һиңә, минең ҡәҙерлем, ҡайт ине. Ауылда, өйҙә яңынан йәшәй башла, колхозда эшлә ине — миңә шунан да ҙурыраҡ бәхет кәрәкмәй ҙә...»

Иртәгәһенә ғәҙәттәгесә иртүк торҙо. Һыйырын һауып көтөүгә ҡыуҙы. Һөтөн сепараторҙан үткәреп бөтөүгә ҡапҡа төбөндә машина сигнал бирҙе. Халатын кейә-кейә, Нурия урамға йүгереп сыҡты. Бөтәһе лә элекке кеүек. Кабина эсендә мыҫҡыллы ғына йылмайып Хәйбулла ултыра, машина башынан Сания менән Хәтимә ҡарай, Сания — ойоҡ, Хәтимә кофта бәйләй. Әммә бөтәһе лә икенсерәк, икенсе төрлөрәк. Нурия бер аяғын тәгәрмәскә ҡуйҙы, икенсеһен борт аша ташланы. Машина ҡуҙғалды ла ауыл буйлап китте. Карам Нурияһынан башҡаларҙы алып фермаға йүнәлделәр. Бәйләйҙәр, һөйләшәләр, көлөшәләр, әммә Нурия һиҙеп тора: бөтәһе лә кисә булған хәлде уйлай, берәүҙәре Карам Нурияһын әрләй, шул эскесене, һуғыш

суҡмарын, ҡайһылары, кисә бер нәмә лә булманы тип иҫәпләһә лә, артабан, йәғни бөгөн осрашһалар нимә булыр икән, тигән аҫтыртын уй менән килә. Эйе, уларға ҡыҙыҡ, мәрәкә.

Карам Нурияһы фермала ине инде — ире «Волга»һында килтергән. Ул һыйырҙарын һауыу станоктарына яҡынайтҡан да аппараттар менән булаша. Йөҙө айныҡ, айныҡ булған саҡтағыса аҡыллы, эшсән, етди, әйтерһең дә, кисә бер ни ҙә булмаған. Тик Нурия яғына ҡарамай, әммә Нурия уның да кисәге ваҡиға хаҡында уйлағанын һиҙеп тора, кем белә, бәлки, ҡылығы өсөн үкенәлер ҙә әле. Шуныһын да белә Нурия, Карам бисәһе нисек кенә үкенһә лә бер ҡасан да уның янына беренсе булып килмәйәсәк, ғәфү үтенмәйәсәк. Ундай нескә һәм нәзәкәтле нәмәләр улар араһында булғаны юҡ — улар, һауынсылар, ҡай саҡ әрепләшеп китһәләр ҙә бер ҡасан да һөйләшеп аңлашмай, булған бәхәс нисектер үҙенән-үҙе онотола ла ҡуя, һәм улар йәнә, бер нәмә булмаған кеүек, һөйләшеп алалар ҙа китәләр. Хәйер, дошманлашһаң да, дуҫлашһаң да барыбер түгелме ни? Бөгөн Нурияның Карам бисәһенә бер ниндәй ҙә үсе, асыуы юҡ. Ул элекке әхирәтенән нисектер айырылды, икенсе тормошҡа күсте.

Кисәге кеүек, ҡәҙимгесә мотор эшләй, һыйырҙар, көйшәй-көйшәй, иренеп кенә һауыу станоктары янына атлай, унан түҙем генә, дөрөҫөрәге, битараф ҡына һөттәрен бирә, кисәгесә, бығаса башҡа бихисап көндәрҙәгесә, Вәкил менән Кейекбай вагон янына ултырҙы ла кәрт һуға башланы, оҙаҡламай уларға бригадир Хәйбулла ҡушылды. Ә Нурияға былар барыһы ла әллә ҡасан булған һәм бер ҡасан да кире әйләнеп ҡайтмаҫ кеүек тойола, ул һәммәһенә лә ситтән ҡарай һәм өнһөҙ генә хушлаша. Күңеле менән икенсе, хыялында йөрөткән икенсе тормошта йәшәй... Ҡайтыу менән мунса тоҡандырыр, кереп сисенеп тә өлгөрмәҫ, ишек асылыр ҙа таҡыр башлы, оҙон ҡуллы Зәйнулла пәйҙә булыр. Нурияның беренсе теләге — ҡысҡырыу, унан яланғас тәнен берәй нисек ҡаплау булыр, шунан ҡулына эләккән нәмәне ҡартҡа бәрер...

Хәйер, ниңә улай ҡырағайҙарса ҡыланырға? Хәҙер бөтәһе лә барыбер, бөгөн булмаһа, иртәгә... Өйөндә Зәйнулла кейем шкафын асыр — Нурияның танауына нафталин еҫе бәрелер. Элгестәрҙә — мәрхүмә хужабикәнең пальтоһы, күлдәктәре, камзулдары. Күптән моданан сыҡҡан кейемдәр. Сепрәк-сапраҡ иҫкереп тә өлгөрмәгән,

уларҙа үлгән ҡатындың еҫе ҡалған... Зәйнулла ниҙә күрһә-тә икән? Нурияның барыбер кейәһе юҡ... Мотор дерелдәй, шлангылар, стакандар һелкенә. «Әйҙә, Сибәркәй, һауайым үҙеңде. Оҙаҡламай айырылышабыҙ. Минең хужабикә ҡайҙа булды, тип аптырарһың әле. Кем ҡулына ғына эләгерһең икән?» Ғәҙәт иткәнсә, иртүк тороп, Зәйнулланың икеме, өсмө һыйырын һауған ваҡытта, Урал һыртының теге яғында, тәҙрәләренә арҡыс-торҡос таҡта ҡағылған иҫке, бер яҡҡа ҡыйшайған йорто янынан, һауынсылар иртәнге һауынға үтеп йөрөйәсәк. Машина туҡтамаясаҡ, баштағылар битараф ҡына ҡараш ташлап үтәсәк... Мотор һаман дерелдәй, таныш тауыш, таныш өндәр... Былар барыһы ла әллә ҡасанғы, икенсе тормоштағы булған тауыш, ваҡиғалар...

Һауынды Нурия иң аҙаҡҡы булып тамамланы. Һөтлө бидондарҙы машинаға тейәп һауынсылар кузовҡа менеп ултырғанда, ул аппараттарын саҡ йыуа ине әле.

— Йәһәтерәк бул, һине көтәбеҙ бит! — тип ҡысҡырҙы уға бригадир Хәйбулла.

Карам бөгөн бисәһе артынан килмәне, тимәк, Нурия аҙашы менән бергә ҡайтырға, хатта йәнәш ултырырға тура киләсәк, тип уйланы ла:

— Көтмәгеҙ, мин Һары йылға буйындағы бесәнлекте ҡарап ҡайтам, — тип яуапланы.

Бармаясаҡ бесәнлегенә, былай ғына әйтте, хәҙер уға Һары йылғаның, бесәндең ни хәжәте? Ул хәҙер бесәндә Зәйнулла менән тегендә, тауҙар араһында, сабасаҡ...

Ул ҡайтырға сыҡты. Оҙаҡламай ошо юлдан һуңғы тапҡыр үтәсәк. Машина башында түгел, йөк ташый торған арбала. Артта сумаҙан, сумкалар, төйөнсөктәр, тәртәгә мисәүләп бәйләнгән һыйыры. Атаһына нисек тормошҡа сығыуын әсәһенең һөйләгәне иҫенә төштө. Әсәһе күрше ауылда йәшәгән, бай балаларын ҡарап, керҙәрен йыуып көн күргән етем ҡыҙ ҡалымһыҙ кейәүгә сыҡҡан. Өйө кәҫ менән ябылған, берҙән-бер тәҙрәһенә мендәр тығылған ас-яланғас кешенең ҡайҙан булһын инде түләрлек ҡалымы? Һәм кемгә ҡалым? Өйләнешкәнсе улар бер-береһен бер тапҡыр ҙа күрмәгән. Мөхәббәт тураһында һүҙ булыуы ла мөмкин түгел. Буласаҡ атаһы буласаҡ әсәһен утын арбаһына ултыртҡан да ауылына алып ҡайтҡан. «Һелкенә-һелкенә китеп барам артта ултырған көйө, үҙем, бынау ят бәндә менән нисек йәшәрмен икән һуң, тип уйлайым. Юл буйы бер һүҙ ҡушманы, исмаһам, артына боролоп

ҡараһасы! Әллә берәй төрлө асыуы булды, белмәҫһең. Яйлап ауылға яҡынлашабыҙ. Бына бер мәл ул ҡапыл, һис көтмәгәндә, сыбыртҡыһы менән атҡа һуға, ат үрәпсеп китә лә алға ынтыла, мин тәгәрәп төшөп ҡалам. Ә атайың әйләнеп тә ҡарамай. Көскә тороп баҫтым да ҡарап торам: нимә эшләргә, артынан барырғамы, әллә ҡайтып ҡына китергәме? Уға кейәүгә сыҡҡас, ауылына барырға кәрәктер, тип уйлайым шунан. Күпергә еткәс кенә артына боролдо был. Көтөп алды. Ултырҙым. Ҡуҙғалдыҡ. Йәнә ләм-мим, бер һүҙ юҡ. Һуңынан йыш ҡына ошо ваҡиғаны иҫкә төшөрөп көлөшә торғайныҡ. Ниндәй иҫәр булғанбыҙ...» Бына бит минең дә әсәйемдеке һымаҡ килеп сығырға тора — Зәйнулла ағайҙың арбаһы шығыр-шығыр китеп бара, артта мин ултырам һәм бынау ҡартлас менән нисек йәшәрмен икән, тип уйлайым...

Нурия Яйыҡ аша һалынған күпергә еткәс, һулға, әрәмәлеккә боролдо — кисәге ваҡиғаны белгән кешеләрҙең күҙенә күренеп, ауыл аша йөрөгөһө килмәне. Ауылдан күпергә табан ҡырағай ереклек, муйыл, ҡарағат, гөлйемеш ҡыуаҡлыҡтары араһынан тар ғына һуҡмаҡ һалынған, ялан аяҡ, уйһыҙ йөрөгән дәүерҙәге һуҡмағы. Ул шул һуҡмаҡ буйлап бара һәм тирә-яҡты байҡай. Ниндәй үҙгәреш! Ағастар бәләкәйләнеп ҡалған, барған һуҡмағы ла йылға ярынан ғына үтмәй, ул әллә эскәрәк кергән, әллә яр үҙе һуҡмаҡтан алыҫлашҡан... Нурия ҡапыл түңәрәк бер яланға килеп сыҡты. Әлегә тапалмаған үлән өҫтөндә һары ҡаҙаяҡтар һикерешә, сабыйҙарҙың саф зәңгәр күҙҙәре кеүек күгәрсен күҙҙәре мөлдөрәп ҡарай — уның яратҡан сәскәләре. Тәмле булып гөлйемеш еҫе аңҡый. Ерек менән муйыл ағасының ҡуйы йәшел япраҡтары йырып сыға алмаҫлыҡ стена хасил иткән. Муйыл аҫтында — ерек ботаҡтарынан эшләнгән ҡыуыш. Эсендә — кипкән ҡоро бесән. Малайҙар уйнағандыр инде. Таныны... Был туғайға күптән килгәне юҡ.

Ул мәл яҙ ине. Яр буйын тултырып муйыл сәскә атҡайны. Хуш еҫе һуң! Һулап туйғыһыҙ. Тиҙ үтеүсән йәшлек осоронда ғына сәскәләр шулай тәмле еҫле булаларҙыр инде. Һуңынан, ғүмер буйы ошо муйыл сәскәһенең еҫе уға берҙән-бер яҙҙы, мөхәббәт менән тулы ҡыҫҡа ғына бәхетле яҙҙы иҫенә төшөрҙө лә торҙо... Түҙемһеҙ Бәхтейәр — кискә тиклем генә көтөргә кәрәк ине — мөхәббәте ташып барған Бәхтейәр, уны аулаҡҡа, йылға аръяғына алып сыҡты. Ҡулға-ҡул тотоношоп йылғаны кистеләр, ағас араһына

сумдылар ҙа ошо аҡланға юлыҡтылар. Бынау муйыл ышығында ҡосаҡлаштылар, унан... Нурия ояլды, яңылыштан берәйһе өҫтөбөҙгә килеп сыҡмаһын тип, ҡурҡты. Уны серәкәй таланы, кесерткән саҡты... Шул уҡ муйыл, тик олоно йыуанайған, ҡарайған, ҡартайған, йәйелгән, емешле ягын малай-шалай ботарлап бөткән. Нурия ҡыуыш эсенә керҙе. Ҡыуыштың һалҡынса ышығында кипкән сәскә, үлән еҫтәре танауҙы ҡытыҡлай. Бәхтейәр менән үткән берҙән-бер йәйе. Ул йыл улар Урал һыртында, Һары йылға буйында, бесән сапты. Бәхтейәр алдан төштө, киң һелтәнеп, күп алып сапты. Нурия ла унан ҡалышманы, дөрөҫөрәге, ҡалышмаҫҡа тырышты. Бакуйҙы сыҡҡас, улар туҡтап яныуыстарын алды, Бәхтейәр — ҡунысынан, Нурия — алъяпҡыс кеҫәһенән. Икәүләшеп яныйҙар ҙа, бер-береһенә йылмайышып ҡарап, йәнә төшөп китәләр...

Уларҙың ҡыуышы шишмә янында ғына, бейек үлән, сәскә араһында. Эңер төшкәс ҡарттар ҡайтып китә, Нурия менән Бәхтейәр үҙҙәре генә ҡала. Усаҡ яғалар, ҡабаланмай ғына сәй эсәләр, шунан ҡыуышҡа инеп сумалар. Көс-ғәйрәттәре ташып торған, бер-береһенә эҫенә барған, енси яҡынлыҡ серҙәрен яңы аса башлаған йәштәр ҡосаҡлаша, үбешә, яратыша, шаяра... Унан тәмле бесән еҫен еҫкәп ҡаты йоҡоға талалар. Айыу килеп сыға ҡалһа тип, Бәхтейәр ҡоролған мылтығын янына һалып ята. Ә Нурия айыуҙан ифрат ҡурҡа. Йыртҡыс эргәлә генә тигәндәй йөрөй, ҡырмыҫҡа ояларын туҙҙыра, ҡурай еләге ашай, шулай ҙа кешенән ҡаса. Бәхтейәр, ул төнөн ҡыуыш янына килә, бер шулай төнөн сыҡһам, һүнеп барған усаҡ янында артын йылытып тора, тип Нурияның ҡотон ала. Таңдарын тирә-яҡ ауылдарҙа көтөүселәрҙең сыбыртҡы шартлатып һайт-һайтлауы ишетелә... Ҡасан ғына булған хәлдәр бит, уйлап ҡараһаң...

Нурия ҡояшлы йәшлеге үткән аҡланда байтаҡ ултырҙы хәтирәләргә сумып. Улар хәҙер бер ҡасан да кире ҡайтмаясаҡ, барыһы ла үтте, ул уларҙың барыһы менән дә күңеленән хушлашты, яңғыҙ һалдатка һәм һауынсының бәхетһеҙ оҙон тормошона сик ҡуйырға кәрәк тип хыялланды... Ҡыуыштан сыҡты, берауыҡ уйға батып баҫып торҙо, унан ағас араһынан яй ғына йылға ягына атланы. Йылғаны кисеүе уға ниндәйҙер рубежды, сикте үткән кеүек булды, әйтерһең дә, ҡаршы яҡ ярҙа уны өр-яңы яҙмыш көтөп тора...

Ҡаршы ярҙа ул Әнүәргә тап булды. Ул тимер линейка менән йылғаның тәрәнлеген үлсәй ине. Нурияны шәйлә-

гәс, башын ҡалҡытты ла аяғына баҫты. Шунан шым ғына, бер үк ваҡытта ниндәйҙер тулҡынланыу менән, хәбәр һалды:

— Ҡайҙа йөрөйһөң? Бәхтейәр ҡайтты бит, ҡасандан бирле көтә, — тине.

Нурияның йөрәге тибеүҙән туҡтаны, күҙҙәрендә ҡояш һүнде, теҙ быуындары йомшарҙы.

— Ысынмы? — тип ҡысҡырып ебәрҙе ул, ҡурҡышынан, тулҡынланыуынан ирендәрен саҡ ҡуҙғатып.

— Ниңә, мин һине алдағаным бармы ни? — Әнүәрҙең яуабы бер ҙә иҫәр кешенекенә оҡшамағайны.

Нурия йүгерҙе. Бәхтейәре ҡайтҡан, ул өйҙә! Бөгөн уның тураһында уйлауы юҡҡа булмаған, тере һымаҡ иҫенә төшөүе, теге аҡландағы ҡыуышҡа инеп йәш саҡтарын хәтеренә алыуы ҡайтырына булған! Тимәк, һиҙенгән, күҙ алдына килгән. Ниндәй икән? Олоғайғандыр, сәстәре ағарғандыр, олпат иргә әйләнгәндер. Осрашҡас бер-берեһенә ниндәй һүҙҙәр әйтерҙәр икән? Ҡайҙан ҡайтҡан һуң, нишләп һуғыш бөткәс тә ҡайтмаған, ниңә исмаһам бер хат та яҙмаған? Уның кеүек һуңлап ҡайтыусылар булды. Ана, Ҡолойҙа йәшәгән Ильяс тигән кеше илле бишенсе йылда ғына ҡайтып килде бит. Госпиталдә ятҡан, шундағы медсестра, ирһеҙ йәш татар ҡатыны, быны, аяҡһыҙ һалдатты, йәлләп үҙенә һыйындырған. Ун йыл Пермь ҡалаһында йәшәгәндәр, әммә Ильяс сит-ят яҡҡа түҙә алмай өйөнә, үҙенең ҡатынына, әйләнеп ҡайтҡан. Нурия ла Бәхтейәрҙе ҡабул итер, үҙе ғүмер буйы, нишләп ҡасып йөрөнөң, нишләп һуғыш бөтөү менән ҡайтманың, тип йәнен ашар. Ә бәлки, уға ҡайтырға ярамағандыр, хат яҙырға ла рөхсәт булмағандыр, бәлки, ул берәй илдә разведкала йөрөгәндер. Өйләнгән булып, уны, Нурияны, күреп китер өсөн генә һуғылған булһа? Сәй эсә-эсә һөйләшер-аңлашыр ҙа тағы айырылышырҙар. Улай ҙа ярай. Иң мөһиме — тере! Ә бәлки, яңы тормош та башларҙар. Яңы йорт һалырҙар. «Давай, парторг, трактор бир, оҫталар тап. Һин бит минең яңы йорт һалып кереүҙе бик теләй инең», — тип Ғилмановҡа барыр. Энеһенән аҡсаһын алырға тура килер, тәләфләп бөтмәҫ элек. Өй генә түгел, ҡапҡаларын да яңыртырҙар. Бәхтейәр йәнә ҡараңғы төшкәнсә балтаһы менән туҡылдар...

Нурия йүгерә. Әләгә-йығыла, абына-һөрөнә йүгерә. Баҡса кәртәһен һикереп кенә сыҡты, картуф араһынан йүгерҙе, ихатаһына атылып инде... Тауыҡтары йөрөп ята,

этәсе ҡысҡыра, ҡаҙ бәпкәләре йылға буйынан ҡайтҡан да ашарға таптырып ҡаңғылдаша. Ҡайҙа Бәхтейәр? Өйҙәме? Хәҙер ысынлап та уны күрәме?.. Бәй, өйҙә юҡсы. Әйберҙәре лә күренмәй — сумаҙаны йәки кейеме. Энеһендәме икән әллә? Эйе, шундалыр, Нурия өйҙә булмағас, эҙләп шунда киткәндер. Ике ихата араһындағы ҡойма буйында ятҡан утын ағастары өҫтөнә балаҫ йәйеп Дилә менән күрше ҡыҙы Флүрә өй уйнай. Уларҙың уйын менән мауыҡҡан йөҙҙәрендә Бәхтейәр ҡайтҡан шатлыҡты күрмәне Нурия. Солан ишеге асылды, килене күренде, ул тыныс ҡына ҡиәфәттә Нурияға ҡаршы сыҡты ла гәҙәтенсә йылмайғандай итте, шунан һәүетемсә генә:

— Нишләп улай бик һуң? Һеҙҙекеләр күптән ҡайтты бит инде? — тип һораны.

Нурия килененә бер ни тип тә яуап бирмәне. Бераууыҡ өнһөҙ генә уның йөҙөнә текәлеп, ҡарашынан Бәхтейәрҙең бындалығын белергә тырышып торҙо, тик яңыраҡ бәпесләгән бәхетле ҡатындың битараф йылмайыуынан иренең бында юҡлығын аңланы. Иҫәр кешенең сираттағы һаташыуы. Киленен тамам аптыратып, ул, бер ауыҙ һүҙ ҡатмай, ҡапҡанан сыҡты, үҙенең өйөнә инеп диванына ауҙы. «Ҡара, шул иҫәргә, аҡылы бер төрлө нәмәгә ышандым. Беренсегәме һуң инде уның алдауы», — тип уйланы. Тимәк, ул, Нурия, Бәхтейәрҙең үлеменә бер ҡасан да ышанмаған, ышанһа, өмөтөн өҙһә, башын юғалтыр хәлгә етеп ашығып ҡайтыр инеме? Хәбәрһеҙ юғалыу — үлде, һәләк булды тигән һүҙ түгел бит әле. Ул уның үлгәнен дә, ҡәберен дә күрмәне... Һуңынан, көнө буйы, кискә тиклем ул Бәхтейәрҙең иҫән икәнлегенә, дөрөҫөрәге, тере булыу ихтималлығына ышанып йөрөнө. Ул ҡайҙалыр тегендә, тауҙар артында, сикһеҙ далалар артында, ул йыраҡ, ул алыҫ, сит күк аҫтында йәшәй, тик саҡ ҡына оло һын кергән — Әнүәр менән осрашҡандан һуң тыуған тулҡынланыу уны ебәрмәне лә ҡуйҙы, көнө буйы Бәхтейәрҙең ҡатыны булып йәшәне, уны яратты, үҙе лә яратылды. Һәм Бәхтейәрҙән башҡа бүтән бер кемдең дә ҡатыны була алмаясағын аңланы. Кисен, Бәхтейәрҙең бөгөн дә ҡайтмаҫын, ҡапҡа ҡаҡмаҫын аҡылы менән аңлаһа ла, шулай ҙа кем белә — әллә нисә йылдарҙан һуң тәүге тапҡыр ҡапҡаһына тағы ла бик һалмай ятты...

# Йонсоу көндәр

Ҡыҙҙарҙың олоһо биш йәше менән бара, исеме — Гөлнара. Бәләкәйе — Лилә — өс йәштә. Улар аталары менән генә йәшәй — фермала эшләгән әсәләре ошо ҡыш һалам быҡтыра торған ҡаҙанға йығылып төшөп бешеп үлде. Ҡыҙҙар уның мәйетен күрә алманы; әсәләрен ерләгәндә Мәрзиә апайҙарының мейес башында ултырҙылар һәм үҙҙәрен харап байыған кешеләр хисаплап — апалары уларҙың кеҫәләрен кәнфит менән тултырғайны — ололарҙың ҡайғыһынан ситтә ҡалып, балалыҡ битарафлығы менән шуларҙы һурҙылар, йөндәре ҡойолоп бөткән ҡурсаҡтары менән уйнанылар. Ҡайтҡас, өйҙәре байрамдар алдынан ғына була торғанса таҙа итеп йыуылғайны, йыйыштырылғайны, хушбуй еҫтәре аңҡый ине, тик өй эсе нисектер ҙур, киң, һалҡынса булып ҡалғайны. Өнһөҙ аталары ҡыҙҙарын йәлләне, ҡытыршы ҡулдары менән килбәтһеҙ рәүештә арҡаларынан һөйҙө, баштарын һыйпаны, ә үҙенең күҙҙәре тоноҡ, ҡайғылы, гел генә ҡайҙалыр ситкә ҡарай ине. Ҡыҙҙар әсәләрен көтә, ә ул ҡайтмай ҙа ҡайтмай. Әсәйегеҙ ҡалаға китте, тине аталары (бер йыл элек тә ул ҡалаға барғайны, ҡыҙҙарына ҡурсаҡ алып ҡайтҡайны), ә оло ҡыҙы, Гөлнара, әбейҙәрҙең урамда һеңлеһен йәлләгәндәрен ишеткәнлектән («Йәтим ҡалды инде, бахыр»), әсәһенең үлеүен аңланы. Быға тиклем үлгән кешене күрмәгәнлектән, әсәһен үлгән итеп бер нисек тә күҙ алдына килтерә алмай үҙе. Ҡыҫҡа ғына ғүмерендә бер генә тапҡыр тере йән эйәһенең нисек үлгәнен күрҙе — ул да булһа ауырыу себеш. Ул башҡа себештәр менән әсәһе артынан эйәреп йүгереп йөрөнө, артта ҡалмаҫҡа тырышты, әсәһенең аяҡтары араһынан нимәлер табып суҡый, шунан туҡтай ҙа күҙҙәрен йомоп ҡымшанмай бер урында тора, әйтерһең, баҫҡан килеш йоҡлай, шунан уяна ла байтаҡ китеп өлгөргән әсәһе артынан йүгерә. Бер мәл ул ҡапыл бәүелеп китте, йығылды, йыш-йыш тын алды, һары йөнлө тәне ҡалтыранырға тотондо, күҙҙәре тоноҡланды, суҡышы асылды һәм нәҙек кенә аяҡтарын тартыштырып сүпле урам уртаһында хәрәкәтһеҙ ҡалды. Ә әсәһе быны күрмәне лә, ҡытҡылдай-ҡытҡылдай тиҙәк өйөмөндә тибенә бирҙе, аяҡтары араһында сыйылдай-сыйылдай бүтән балалары ем сүпләне — улар туғанының үлеменә бөтөнләй битараф ине...

Әсәһенең үлеме Гөлнара тарафынан, әлегә өйҙә юҡ, тип кенә ҡабул ителә, әйтерһең, ул ысынлап та ҡайҙалыр

киткән, әммә был өйҙә юҡлыҡ, Гөлнара белеүенсә, бер ҡасан да бөтмәйәсәк, дөрөҫөрәге, хәҙер әсәһе бер ҡасан да ҡайтмаясаҡ. Шуға ла атаһы, әсәйең ҡалаға китте тигәс, Гөлнара түҙмәне.

— Юҡ, китмәне, әсәйем үлде, мин беләм, — тине.

— Эйе, ҡыҙым, һин аҡыллы, әсәйегеҙ үлде шул, — тине атаһы шым ғына, оло ҡыҙына нисектер сәйер ҡарап.

Ә бәләкәйе, Лилә, иҫәр әле, әсәһенең ҡалаға китеүенә ышана — ул оҙаҡламай ҡайтасаҡ, уға әллә күпме күстәнәс алып ҡайтасаҡ, тип уйлай.

Ҡыҙҙарҙың атаһы Фәйзулла, кешеләр атағанса, көтөүсе Фәйзулла, йәйҙәрен колхоз малын көтә. Ҡай саҡ ҡыҙҙарын йәйге лагерға үҙе менән дә ала торғайны. Улар унда таҡтанан эшләнгән, эйәр, ат һәм тәмәке еҫтәре аңҡыған бәләкәй генә вагонда йәшәй. Атаһы көтөүҙе тауҙарға ҡыуған саҡта ҡыҙҙар үҙҙәре генә ҡала, вагон тирәһендә уйнай, шишмә ярында йөрөй, ҡом менән балсыҡтан быуа быуа, уны төрлө ҙурлыҡтағы, төрлө төҫтәге таштар менән биҙәй. Атаһы тауҙарға юлланғанда вагондан йыраҡҡа китмәҫкә, урманға бармаҫҡа ҡуша — урманда аҙашыуҙары, унда бүрегә осрауҙары бар, ә бүре уларҙы һә тигәнсе ашаясаҡ, һөйәктәре лә ҡалмаясаҡ, айыу килеп сығып, уларҙы урманға алып китеүе лә ихтимал.

Ә ауылда булған саҡта аталары араҡы эсте. Иҫерек көйө аҡырып йыр йырлай йәки иламһырап: «Ғәлиә, һин нишләп үлдең инде, мине ҡыҙҙар менән яңғыҙ ҡалдырҙың бит, эшкинмәгән бисә», — тип һөйләнә. Фәйзулла ҡыҙҙарын иркәләргә, яратырға маташа, тик ҡыҙҙар иҫерек аталарынан ҡурҡа: ҡулдары ҡаты, ҡытыршы, унан араҡы, тәмәке еҫе аңҡый. Һөйләнә-һөйләнә лә сисенмәгән дә көйө диванда йоҡлап китә, ә ҡыҙҙар урамда йөрөй. Әсәһен һағынып бәләкәйе, Лилә, йыш ҡына илай, әсәһен саҡыра. «Илама, һин бит хәҙер ҙур», — тип тыя уны олоһо, шунан үҙе лә уға ҡушылып... һыҡтарға керешә.

«Маяҡ» колхозының дүртенсе бригадаһына ҡараған бәләкәй генә Ҡоҙаш ауылы ҙур булмаған йылға ярындағы ике тау араһында ҡыҫылып тигәндәй ултыра. Кистәрен ҡояш байыған яҡта — урмандар менән ҡапланған тауҙар, ә зыярат янынан, йылға аша, юл китә, һәм ул ниңәлер «Тирлән юлы» тип атала. Шул юлдан ҡыҙҙар аталары менән йәйге лагерға бара торғайны. Икенсе яҡлап яландар асыла, яландарҙан һуң тауҙар китә, тик был яҡтағы тауҙар яланғас, ташлы-ҡырсынлы, һары-йәшел төҫтә. Ул тарафҡа

ла юл бар, тик ҡыҙҙарҙың ул яҡҡа барғандары юҡ, шунлыҡтан ул тау артында нимәләр барлығын белмәйҙәр. Шулай уҡ уларға үҙҙәренең ҡасан һәм ҡайҙан барлыҡҡа килеүҙәре лә мәғлүм түгел, сөнки улар был ерҙә әллә ҡасандан бирле йәшәгән һымаҡ, улар өсөн ауыл — бөтә донъя: күк тә, ҡояш та, ямғырҙар ҙа, йылға, үләндәр, ҡышҡы бурандар, зәңгәр ҡар көрттәре, кешеләр, ҡорттар, әбейҙәр, балалар һәм башҡа тереклек, башҡа йән эйәләре — барыһы ла. Әлеге тауҙар, урмандар артында бүтән донъя, бүтән тормош бармы, юҡмы? Ҡыҙҙарҙың был турала нисектер уйланғандары юҡ. Шулай ҙа өлкәне, Гөлнара, ауылдары тирәһен яҡшы белә: йылға аръяғына ул былтыр әсәһе менән ҡарағатҡа барҙы; баҡсалар артынан башланған ҡайын сауҡалығын күргәне бар; ҡайындар араһына кереңкерәһәң, тау битләүендә ҙур ялан асыла — әсәһе менән шунда еләк йыйғайнылар.

Йәйге көн оҙон. Атаһы бөгөн дә көтөүгә барманы. Кисә көнө буйы иҫерек булды, иртүк әсегән бал эсте лә йәнә диванға ауҙы, Мәрзиә апалары килде, атаһын әрләй башланы:

— Балаларыңды уйлаһаң ине исмаһам, иҫерек баш. Былайтып ятҡансы, ҡатын эҙлә!

— Ике бала өҫтөнә кем килһен? Мин уларҙы детдомға бирәм, — тип яуапланы атай кеше.

Оҙаҡ итеп әрләне Мәрзиә апалары аталарын, ҡыҙҙарға сәй эсереп, эшенә сығып йүгерҙе шунан. Ҡыҙҙар йәнә иҫерек аталары менән тороп ҡалды. Ферма мөдире Шәкүр ағай килде, көтөүгә барырға кәрәк, тип атаһын торғоҙорға маташты. Фәйзулла мышнаны, ыңғырашты, һүгенде. Ҡыҙҙар ярты көн урамда уйнаны. Асыҡтылар, һыуһанылар, тик аталары сәй ҡайнатманы, ашарҙарына ла бешермәне. Гөлнара менән Лилә, түҙмәй, өйгә инеп ҡатҡан икмәк һынығын саҡ һындырып уртаға бүлделәр ҙә Мәрзиә апалары аҡ кәстрүлдә ҡалдырған һөткә ҡушып ашанылар. Тамаҡ ялғағас, Гөлнараның башына шундай уй килде: былайтып өйҙә ултырғансы, йылға аръяғына ҡарағатҡа барырға! Кем белә, бәлки, еләк тә бешкәндер.

— Әйҙә, ҡарағатҡа барайыҡ, — тине ул һеңлеһенә. — Түлке аяғыңа ботинка кей, йә йылан сағыр.

Гөлнара үҙе резина итек кейҙе. Ике итеге лә бер аяҡҡа ине. Гөлнараның һыңар итеге йыртылды, Лилә үҙенең һыңарын йылға буйында юғалтып ҡайтты — сискән дә ҡалдырған, кире әйләнеп килһәләр, уңы ғына ята. Уны Гөл-

нара хәҙер һул аяғына кейҙе. Һеңлеһенең итеге уға бәләкәй — ҡыҫа. Ярай инде. Уйынсыҡ биҙрә тотоп ҡыҙҙар еләккә китте: йылғаны кисеп сыҡтылар ҙа ағастар араһында еләк эҙләргә тотондолар. Әммә еләк йәп-йәшел ине, йыйырлыҡ та, ашарлыҡ та түгел.

— Әйҙә, ҡайынлыҡҡа барайыҡ, — тине Гөлнара.

Ауылға кермәй генә улар ҡайын сауҡалығына китте. Лилә һәр ваҡыттағыса өндәшмәй генә апаһы артынан өҫтөрәлә. Урманға төртөлөүҙәре булды, ул ҡапыл ауыл яғына атланы.

— Һин ҡайҙа киттең?

Бәләкәй әйләнмәне лә, һорауға ла яуап бирмәне.

— Ярай, ярай, — тине Гөлнара, — өйҙә ултыр, ялҡау. Биҙрәне тултырып еләк алып ҡайтһам, бер бөртөгөн дә бирмәйем, бына!

Ул берауыҡ, барырғамы, әллә миңә лә өйгә ҡайтырғамы, тип һеңлеһе артынан икеләнеп ҡарап торҙо, әммә ап-аҡ ҡайындар менән ҡапланған, үләндәр, сәскәләр үҫкән, үткән йыл әсәһе менән еләк йыйған алан уны үҙенә тарта, өгөтләй, саҡыра ине. Ҡыҙыҡай үләндәр араһына йәшенгән ҡып-ҡыҙыл еләктәрҙе күрә, тәмдәре лә теле осонан китмәй, һәм ул яңғыҙы ғына барырға ҡарар итте. Бына ул биҙрәһен еләк менән тултырған, ҡайтҡас Лиләгә, күрҙеңме, мин күпме йыйҙым, ә һинең барғың килмәне, ти, һеңлеһе илағас ҡына, усына бер нисә бөртөк еләк һала... Әсәһе менән барған алан ауылға яҡын ғына булып иҫендә ҡалған: бына баҡсалар, бына ағастар башлана, шул ағастар араһынан саҡ ҡына барһаң — алан. Гөлнара ҡыйыу рәүештә урман эсенә керҙе лә ағастар араһынан туп-тура тау итәгенән өҫкә ҡарай менеп китте. Урмандан ҡурҡмай ул, ошонда үҫкән ҡыҙ бит, шуға ла ағастар араһында уның өсөн ят, аңлашылмай торған бер нәмә лә юҡ. Дөрөҫ, урманда бүре йәшәй, ул һарыҡтарҙы быуа, һыйырҙарҙың еленен йәбешә, бәләкәй ҡыҙҙарҙы ашауы ла бар. Тик әсәһе, бүреләр төнөн генә йөрөй, көндөҙ ул үҙе кешенән ҡурҡа һәм соҡорҙа йәшенеп ята, ти торғайны. Тимәк, урманда Гөлнара ҡурҡырлыҡ бер нәмә лә юҡ. Ҡыҙ, бына хәҙер, хәҙер еләкле теге яланға килеп сығам, тип барҙы ла барҙы, тик теге ялан һаман күренмәне лә күренмәне. Ә бит ул яп-яҡын булып хәтерендә ҡалғайны; әсәһе менән улар үҙҙәренең баҡсаһы аша сыҡтылар ҙа ваҡ мал йөрөгән көтөүлекте үттеләр, урманға ла керҙеләр. Хәҙер ул йылға яғынан килде, үҙҙәренең өй-ҡура артын, картуф баҡса-

рын күрҙе, тик шунан һуң ғына урманға ҡарай атланы. Тимәк, дөрөҫ бара. Улайһа, нишләп еләкле ялан һаман юҡ та юҡ һуң? Бер йыл эсендә генә ҙур ағастар үҫеп ҡаплап өлгөрмәгәндер бит? Саҡ ҡына барһа — асыҡлыҡ, асыҡлыҡта — туп-тулы еләк. Ул тағы бер аҙ атлай. Ә туғай һаман юҡ та юҡ.

Ҡыҙ барған һайын ағастарҙың йыуаныраҡ, бейегерәк була барыуын шәйләне, үләндәр ҙә, «үҫә» килә, «үҫә» килә, биленә етте, уйлана торғас, былтырғы еләкле яландың тау битендәрәк икәнлеге иҫенә төштө, ә ул хәҙер тауҙан түбән төшкән кеүек. Был хәл тамам аптыратты Гөлнараны. Ҡапыл алда, үҙенән йыраҡ та түгел ерҙә, үләндәр араһынан тертләткес, шомло тауыш менән ниндәйҙер ҙур бер нәмә осоп сыҡты ла көрән йомро нәмә рәүешендә урман ҡуйылығына сумды. Ҡыҙ ҡурҡты, ҡапыл туҡтаны, тик уны үләндәр араһынан күтәрелгән нәмә түгел, ә ҡанаттар ҡағыуы өркөттө. Ул быының ниндәйҙер ҡош икәнен аңлағайны инде. Тирә-яғына ҡолаҡ һалды: ағас остары шаулай, ҡайҙалыр алыҫта һайыҫҡан шыҡырлай. «Мин дөрөҫ килмәйем, ахыры», — тип уйланы Гөлнара. Тағы бер аҙ барҙы. Ағастар тағы ла ҡуйылана төштө, тағы ла ҡырыҫланды. Кире әйләнергә кәрәк ине. Тик ҡыҙ барҙы ла барҙы, әйтерһең, артынан кемдер этәй, кемдер урман ҡуйылығына әйҙәй. Байтаҡ ҡына ер үткәс, Гөлнара, ниһайәт, юҡ боролайым, тип хәл итте, барған яҡҡа арҡаһы менән бороллдо, тимәк, йөҙө менән урмандан сығыу яғына, ауылға ҡарай баҫты һәм атлап китте. Еләкле яланды таба алмауы, буш ҡайтыуы үкенесле ине. Ярар, тип уйланы үҙе йәнә, иртәгә тағы сығырмын, мотлаҡ табырмын теге яланды. Хәҙер ул урман ауыҙына килеп юлыға, шунан картуф баҡсаларын, йорт-ҡура арттарын, магазиндың ҡыҙылға буялған башын, үҙҙәренең өйөн күрә...

Планерка, йәки, бындағыса әйткәнсә, наряд, теүәл һигеҙҙә башлана. Ун биш минуттан һигеҙ тигәндә өҫтөнән бер ҡасан да һалмай торған ҡуйы зәңгәр костюмын кейеп, зәңгәр галстугын тағып Ильясов кабинетына килеп керҙе лә өҫтәле артына ултырҙы. Өс Ҡолон тауынан байтаҡ күтәрелгән ҡояш идара йортоноң ҙур тәҙрәһен яҡтырта ине инде. Блокнотын асып, кисәге эш яҙыуҙарын ҡараны, бөгөн нимәләр эшләргә кәрәклеген башынан үткәрҙе — ул тынғыһыҙ, мәшәҡәтле көнгә әҙерләнде. Секретарша Нәсимә «Маяҡ» колхозы буйынса 15 июлгә ҡарата булған күрһәткестәрҙе машинкала баҫҡан да өҫтәленә һалған.

«Министр» ҡушаматлы Хафиз — хәҙер инде пенсионер, һуғыш ветераны (ҡырылып, майланып бөткән пинжәгендә орден-миҙалдары йылтырай), эре һөйәкле, таҙа, холҡо-фиғеле менән сәйерерәк ҡарт. Ул йыш ҡына шулай идараға керә, әллә ни эше, йомошо булмаһа ла, ситкә генә барып ултыра ла хәбәргә ҡолаҡ һала. Ҡарап йөрөй, еҫкәнеп йөрөй, етешһеҙлектәрҙе, колхоздағы тәртипһеҙлектәрҙе министрлыҡҡа, райкомға, обкомга, гәзиткә яҙа, тип һөйләйҙәр ауылда уның тураһында. Тәүҙә Ильясов хужалыҡты ҡабул итеп алған көндәрҙә, ҡарт уның йәнен көйҙөрә ине, әйтерһең дә, ул: «Йә, ҡарап ҡарайыҡ әле, ниндәй председатель булырһың икән?» — тип ҡарай һәм хәйләкәр генә күҙәтеп йөрөй. Тора-бара Ильясов ҡартҡа өйрәндекүнекте, идараға инһә, күрмәмешкә һалышты. Әммә бөгөн уның кәйефе юҡ, шунлыҡтан ҡаты ғына итеп һораны:

— Нимәгә килдең? Мин һине саҡырҙыммы?

— Ҡайһы бер нәмәләрҙе аңлай алмайым, — тине ҡарт тыныс ҡына, ҡулдарын йәйҙе, хәбәрен дауам итергә ниәтләнде.

Ҡарттың нимәне аңларға ниәтләнгәнен Ильясов самалай ине. Саҡ ҡына өндәшмәй ултырҙы ла тауышын күтәреп яуапланы:

— Аңлай алмаясаҡһың да, ағай! Аңлау өсөн минең урында ултырырға кәрәк.

— Ултыртмаҫтар шул. Ҡартайҙым. Унан баш та тишек.

— Эйе, бында ныҡ баш, тимер нервылар кәрәк, — тине Ильясов. Был юлы тауышын йомшарта төштө, йөҙөнә йылмайыу ғәләмәте сығарҙы.

Баш белгестәр инде — завхоз Исламовтан, завгар Сәйфуллиндан башҡалары — барыһы ла йәш кешеләр, саҡ утыҙҙарын тултырғандар. Председателдең тиңдәштәре тиерлек. Стена буйындағы эскәмйәләргә ултырҙылар. Сырайҙары ҡараңғы, күҙҙәре һағайыулы.

Планерка ярты сәғәт барҙы. Ильясов ҡаштары аҫтынан ғына ҡарап быйаса йәшәп килгән тәртип буйынса һәр белгес менән айырым һөйләште. Һөйләшеүҙе баш инженер Атнабаевтан башланы. Эш бөгөнгө көнгә ошолай тора. Витамин оно агрегатында гранулятор һынған, уны төҙәткәнсе витамин онон тоҡтарға һалырға тура киләсәк, әммә тоҡтар бик аҙ. Рудникта бирергә вәғәҙә итәләр, тиҙ арала барып алырға кәрәк. Машина етмәй, ике йөк машинаһының вкладышын алыштырыу талап ителәр, тик уларҙы ҡайҙан табырға? Нисә көн «Урал» йөк менән ултыра —

дүртенсе бригада өсөн яңы кормосмеситель алып ҡайттылар — бушатырға кран юҡ. «Сельхозтехника» ебәрә алмай, крандар бүтән колхоздарҙа, шуға күрә ҡалаға барып автобаза менән һөйләшергә кәрәк. Сенаж һалырға «Беларусь»тар етешмәй. Яҙ башынан бирле ике «К-700» тракторын ремонтлай алмайҙар — запчасть юҡ. Бөгөн ун алтынсы июль, ә бер бөртөк тә эҫкерт һалынмаған; бер йыллыҡ үләндәр күтәрелмәй. Икенсе ферманың көтөүсеrange Ҡара Йылға янындағы бесәнлекте быҙауҙарҙан тапатҡан; быҙауҙар ашамай, ә үләнде тапай ғына. Шунда уҡ, икенсе фермала, һауыу агрегаттарының яртыһы эшләмәй, һыйырҙарҙы ҡул менән һауалар. Дүртенсе фермала көтөүселәр юҡ, береһе эсеп ята, икенсеһе мотоциклдан йығылып аяғын һындырған. Бына шулай һәр ваҡыттағыса: әле береһе, әле икенсеһе, бишенсеһе, унынсыһы... Ҡыҫҡаһы, Ильясовтың өмөтһөҙлөккә бирелгән саҡтарында әйтергә яратҡанынса, егеттәр, эш бармай, ай, бармай...

Планерканан һуң баш белгестәр өҫтәлдән бесән әҙерләү мәғлүмәттәрен алып кеҫәләренә тыға-тыға тиҙ, әйтергә кәрәк, ҡабалан рәүештә бүлмәнән сыҡты; әйтерһең, идаранан сығыу менән шундуҡ эшкә тотонасаҡтар. Әммә Ильясов уларҙың өйҙәренә ҡайтып, ҡабаланмай ғына сәй эсәсәктәрен, үҙенең фарманы, бойороғо бригада, фермаларға һуңлап, йомшарып барып етәсәген бик яҡшы белә. Барыһы ла: баш агроном да, баш зоотехник та, башҡалары ла иҫкелеккә, көндәлек ығы-зығыға, мәшәҡәттәргә, тәртипһеҙлектәргә, етешһеҙлектәргә сумасаҡ, улар, билдәле, уның әйткәндәрен эшләмәйәсәк; берәүҙәре — йүнһеҙлектән, вайымһыҙлыҡтан, икенселәре — теге йәки был эште башҡара алмауҙан; нимәнелер ваҡытында килтермәгәндәр, тәьмин итмәгәндәр, ҡайһыһылыр бөтөнләй эшкә сыҡмаған, кәйеф-сафа ҡорған, эскән. Колхоз ҙур, күпме генә йүгерһәң дә, барыһына ла үҙең өлгөрөргә тырышһаң да, барыһын да күҙ уңында, контролдә тотоу мөмкин түгел, бөтәһен дә баш белгестәргә ышанып тапшырыу ҙа ярамай. Улар үтә түбән кимәлдә, көндәлек ығы-зығынан, примитив көнкүрештән күтәрелә алмаған кимәлдә көн итә, ҡалҡынырға ла теләмәй, ижтимағи, дәүләт кимәлендә фекер йөрөтөргә ҡулдарынан килмәй. Әгәр һүҙ буҡҡаһынан бер ни тиклем арындырһалар, ауыл хужалығы идаралығына, райсоветҡа, райкомға, һәр төрлө ултырыштарға саҡыртып ваҡытын әрәм итмәһәләр ул эштәрҙең күбеһен үҙ елкәһенә алыр ине. Бөгөн дүртенсе бригадаға барырға кәрәк —

көтөүселәр менән ни хәл килеп сыҡҡанын урында хәл итергә, унан икенсе фермаға боролоп агрегаттар менән ни булғанын, ни өсөн үлән тапатылғанын асыҡларға кәрәк.

Планерканан һуң бер сәғәте телефондан һөйләшеүгә, төрлө ҡағыҙҙар тултырыуға, ғаризаларға ҡул ҡуйыуға, бойороҡтар яҙыуға китте. Унан ниндәйҙер бер ҡатын килеп күрше ауылдан ҡоҙаларын килтереү өсөн машина һораны, ҡыҙы кейәүгә сыға икән. Ильясов һирпелеп кенә ҡарап, бирә алмайым, буш машина юҡ, тип яуапланы. Ҡатын сығып киткәс, Ильясов секретарша Нәсимәнән ул ҡатындың кем икәнлеген һораны. Баҡһаң, колхоздың иң алдынғы һауынсыһы икән, ике ордены ла бар, имеш, Ильясов уны ҡайҙан белһен инде, был ауылда эш башлауы яңы ғына бит. Ул әле хатта баш белгестәренең исемдәрен дә йүнләп белмәй. Кәйефе боҙолдо председателдең. Хәйер, белгән хәлдә лә машина бирә алмаҫ ине, исмаһам, әҙәмсә һөйләшеп ҡалыр ине.

Сәғәт унда Ильясов тамаҡ ялғарға ҡайтты. Өйөндә берәү ҙә юҡ. Ҡатыны — уҡытыусы, әле Өфөлә семинарҙа, ҡыҙы — пионерлагерҙа. Йоморҡа ҡыҙҙырҙы, сәй эсте, унан, ГАЗигына ултырҙы ла дүртенсе бригадаға китте. Дүртенсе бригада — үҙәк усадьбанан ун саҡрымда. Ҡасып тигәндәй китте, секретаршаһына әйтеп тә торманы, партком секретары Наил менән осрашып ҡуйырмын, тип уйланы, үҙенә эйәреүенән ҡурҡты. Ильясов парторг менән йөрөргә яратмай, сөнки Наил — бындағы кеше, бөтәһен дә белә, уны ла beләләр, шуға ла бар һорау менән кешеләр председателгә ҡарағанда күберәк уға мөрәжәғәт итәләр. Ә был Ильясовтың сәменә тейә, ул үҙен авторитетһыҙ, үҙ аллы түгел тип иҫәпләй.

Дүртенсе бригадаға килеп етте, ауылда туҡталып торманы, урам буйлап үтте лә тауға, йәйге фермаға, тартылды. Тәүҙә шунда барайым, унан ҡайтыу яғына әйләнгәс, ферма мөдире менән һөйләшермен, тип уйланы. Көтөүселәр етешмәй колхозда. Кешеләрҙе механизация, техника ҡыҫырыҡлай бара. Элекке көтөүселәр пенсияға китеп бөткән йәки үлгән. Ә йәштәр был эшкә кәмһенеп ҡарай. Дүрәктәр юҡ шул. Барыһына ла машина бир. Йәштәр, ғөмүмән, ҡалаға ҡарап ҡына тора, мәктәпте бөтөү йәки армиянан ҡайтыу менән, ҡалаға һыпырта. Унда ауырыраҡ эш башҡара, дөйөм ятаҡта көн итә, уның ҡарауы асфальттан атлай, йәшәүе кәнфит түгел, әммә ерҙән, тиҙәк-тиреҫтән алыҫ.

Ильясов ҡабаланмай. Йырғыланып бөткән тәрән машина юлы тау бите буйлап борғалана, саҡ ҡына өҫтәрәк, бейегерәктә, ҡалын урман башлана — ҡайын, уҫаҡ, һирәкләп ҡарағай күренә, урыны-урыны менән ағасы ҡырҡылған ерҙәр, йәш үҫентеләр ултыртылған урындар шәйләнә. Йыраҡта, һул яҡлап, бөҙрәләнгән ағастар өҫтөнән, ҡырыҫ һоро ҡая күтәрелә.

Тыумышы менән Ильясов был тирәнән түгел, тыуған яғында бындағы ише тауҙар юҡ. Шуға ла ул асыҡлыҡҡа, даланың әрем еҫенә күнеккән, урманда ул үҙен нисектер йәнһеҙ, уңайһыҙ, хатта шомло тоя һәм һәр ваҡыт, тауҙар — Ер шарының иң файҙаһыҙ өлөшө, тип уйлай, унда иген сәсеп булмай, бесән сабырға ла, мал йөрөтөргә лә мөмкинлек юҡ. Шулай булғас, ул таш өйөмөнөң ни кәрәге бар? Ҡыҫҡаһы, яратмай Ильясов тауҙарҙы... Тар юл тау ҡыҫымдары араһынан алға, һаман бейеккә бара...

Фермаға килеп етеү менән, тәртипһеҙлектәр күҙенә салынды: был мәлдә һыйырҙар тауҙарҙа, үләнле битләүҙәрҙә йөрөргә тейеш, ә улар һаман фермала бикле тора, аҫтарында — тиҙәк ҡатыш ҡара шыйыҡ батҡаҡ. Кәртә бағаналарына бидондар эленгән, сепрәк-сапраҡ, марлялар кибә. Шишмә ярында таҡтанан эшләнгән вагон, мейес торбаһы һерәйеп тора. Иртәнге һауындан һуң көтөүсе һыйырҙарҙы көтөүгә ҡыумағанға оҡшай. Иртәгә беренсе секретарь өҫтәленә «Маяҡ» колхозы буйынса һауым күрһәткесе ятасаҡ һәм иртәнге нарядта Латипов мотлаҡ, ниңә һөттө кәметтегеҙ,тип шылтыратасаҡ, тип уйланы Ильясов. Уға көндәрҙең насар тороуы, көтөүселәрҙең эшкә сыҡмауы, боҙолған агрегат тураһында әйтеп була әле, әммә иртәгә шул уҡ күрһәткестәр обкомға барып етә, уныһы инде — район буйынса, ә унда тауҙар араһындағы ферма тураһында белмәйҙәр ҙә, белергә лә теләмәйҙәр, артта һөйрәлгән колхоз председателе Ильясовтың барлығы ла мәғлүм түгел; улар алдында — һандар, улар алдында — план, ә планды үтәргә кәрәк, үтәү мөмкин булмағанда ла үтәргә тейештәр. «Район буйынса күрһәткестәр ниңә улай бик түбән? Сараһын күрегеҙ! Әллә Ильясов эшләмәйме, ул артҡа тартамы районды? Уны тиҙ арала бында ебәрегеҙ. Шелтәләре нисәү?..»

Председатель пипелдәтте, машинаһынан сыҡты, вагонға ҡарай атланы. Ҡаршыһына ишектән көтөүсе күренде — йоҡоло, бер нисә көн ҡырынмаған, таушалған ир. Ул алдан уҡ күңелһеҙ һөйләшеүгә әҙер ине шикелле, йөҙө

һағайыулы, үпкәле. Ильясов унының менән ҡул бирешеп иҫәнләште лә, эштәр нисек, тип һораны.

— Эш билдәле инде, — тине көтөүсе һүрән генә. Ҡарашын йәшерҙе, шаҙралы киң яңаҡлы йөҙөн һытты.

— Эштәр бармай бит, ағай! — Ильясов сәғәтенә ҡараны. — Сәғәт беренсе китте, ә һыйырҙар һаман бысраҡта ята. Был, һинеңсә, эшме?

— Эш түгел инде, — тип ризалашты көтөүсе һәм ҡапыл ғына үпкәһен белдерҙе. — Нишләп һин тәүҙә, ағай, нисәнсе көн алмашынмай көтәһең әле, тип һорамайһың?

— Сменщиктарың кем һуң?

— Кем? Билдәле кемдәр икәне. Мәүлит менән Фәйзулла. Мәүлит аяғын һындырған. Ә Фәйзулла аҙна буйы эсеп ята. Мин ферма мөдиренә, әгәр иртәгә иртәнсәк алыштырмаһаң, көтөүгә сыҡмайым, ташлайым, суҡынып китегеҙ, тинем. Үткән айҙа ла шулай Мәүлит менән алышынмай көттөк, кишер ҙә түләмәнеләр. Эш шулай буламы?

— Ярай, ағай, мөдир менән һөйләшермен, алмаштырырбыҙ.

— Ә һин бында йышыраҡ кил, — тине көтөүсе, хәҙер инде тауышын әкренәйтеп, килешеүле әйтте. — Бер ай элек парторг һуғылғайны, шунан бирле юлды оноттоғоҙ. Беҙ бында нисек йәшәйбеҙ, нисек көн итәбеҙ — бер кемдең дә уйлағаны юҡ, ә һөт таптырырға, план талап итергә бик beләһегеҙ...

Ильясов ни әйтергә лә белмәне, шуға күрә өндәшмәне лә ҡуйҙы. Ситкә ҡарап баш ҡағыу менән генә сикләнде. Көтөүсе вагонға атланы. Ҡаҙаҡтан сыбыртҡыһын алды ла ҡысҡыра-ҡысҡыра һыйырҙарҙы ҡыуа башланы. Кәйефе ҡырылған Ильясов кире ауылға китте — ферма мөдире, унан эсеп ятҡан Фәйзулла менән ныҡлап һөйләшеү ине ниәте. Ҡышын кормозапарник тигән ҡаҙанға йығылып төшөп үлгән һауынсының ире икәне иҫенә төштө Ильясовтың. Ул запарник тигәне — аҙыҡ цехының ҡыҫыҡ, ҡараңғы бүлмәһендәге метр ярым тәрәнлектәге соҡор, ул тәүлектәр буйы һыуынмай, унан һәр саҡ ҡуйы пар бөркөлөп тора, тирә-яҡта бер нәмә лә күрерлек түгел. Һауынсы тайып киткән дә йығылып төшкән әлеге соҡорға, эҫегә бешкән һәм больницала үлгән. Ике балаһы ҡалды. Кем ғәйепле? Зоотехник! Һаҡланыу сараларын күрмәгән, соҡорҙо кәртәләмәгән. Таҡталар менән япһа ла булыр ине. Еңел ҡотолдо: эшенән генә алдылар. Бүтән бригадаларҙың аҙыҡ цехтарында бер йыл элек үк аҙыҡ бутағыстар ҡуй-

ҙылар, дүртенсе бригадаға агрегат та килтерҙеләр, тик һаман машинанан бушата алмайҙар — крандары юҡ.

Ауылға яҡыная килә, Ильясов киң соланлы, верандалы, биш стеналы йорттарҙы шәйләне. Барыһының да ҡапҡалары йыуан бағаналар ултыртып эшләнгән, зәңгәр йә йәшел төҫкә буялған. Кәртәләре бейек, ихаталары иркен — урман яҡын ғына шул: сыҡтың — алдың. Председатель тыҡрыҡтан ферма яғына, сенаж соҡорона боролдо, унан трактор тауышы килә. Унда бригадир Нәжип кенә булып сыҡты. Йәш, оҙон кәүҙәле, алһыу йөҙлө һәм, был ауыл халҡына хас булғанса, тыныс, яй кеше. Уның ҡабаланыуын, нимәгәлер борсолоуын бер нисек тә күҙ алдына килтереп булмай: бында борон-борондан ситтә, тау итәгендә, оло юлдан һәм тиҙ, ҡабалан тормоштан алыҫта йәшәргә күнегеп-өйрәнеп бөткәндәр, күрәһең. Нәжип таҙа, шыма йөҙөндә председателгә ниндәйҙер ихтирам остоғо күрһәтергә тырышып ирен сите менән генә йылмайған булды, ҡулын биреп иҫәнләште. Хәйер, уның булмышында, яй хәрәкәтендә таҙа, тыныс, үҙ баһаһын белгән кешенең һәр саҡ эш тип сабыусы, сабырһыҙ кешегә мыҫҡыллы мөнәсәбәтте күреүе ҡыйын түгел ине. Сенаж, аҙыҡ цехы, ҡаҙандарҙы ремонтлау тураһында һөйләшкәндән һуң, Ильясов көтөүселәр хаҡында һорашты. Был турала ферма мөдире Шәкүр менән һөйләшергә кәрәк, сөнки ферма уның эше, ундағы бар эш өсөн ул яуаплы, тине Нәжип. Машинаға ултырҙылар ҙа Шәкүр йортона киттеләр. Сигнал бирҙеләр. Асыҡ тәҙрәнән бригадир һымаҡ уҡ таҙа, алһыу йөҙлө Шәкүр күренде. Сәй эсеп ултыра икән.

— Әйҙә, керегеҙ, сәй эсерһегеҙ, — тине ферма мөдире.

— Сәйләп ултырырға ваҡыт юҡ, сыҡ әле, һүҙ бар, — тине Ильясов.

Шәкүр урамға сыҡты ла председатель менән күреште.

— Нисек аңларға: көтөүсе нисә көн алышынмай көтә, һыйырҙар төшкә тиклем бысраҡта ята?..

— Значит, эш былай... Көтөүселәрҙең береһе мотоциклдан йығылып аяғын һындырған, балниста, икенсеһе эсеп ята. Барһаң — иҫерек, етмәһә, һүгенә, әрләй. Уны кем менән алмаштырайым? Берәү ҙә бармай. Значит, былай... Үҙемә барырға тура килә. Малды икенсе фермаға күсереү тураһында һүҙ булғайны бит, мужит, шулай яҡшыраҡ булыр, ә?..

— Һүҙ булды, тик күсермәйбеҙ! — тип өҙә һуҡты председатель. — Еңел тормошҡа сығырға уйлағайнығыҙмы? Теге көтөүсе ҡайҙа йәшәй?

Фәйзулланың йәшәүе — магазиндан башланған йыраҡтағы бәләкәй генә урамда. Машинаға тейәлештеләр ҙә ауылдың шул осона юлландылар һәм иҫке генә йорт алдындағы ҡапҡа эргәһенә туҡтанылар. Йорттоң йәше байтаҡҡа оҡшай: ергә һеңгән, бүрәнә аралары балсыҡ менән һыланған, ә быны йәшелгә буялған ҡапҡаһы яңы кеүек. Ихатаға үттеләр. Лапаҫ аҫтында тап-топ, юныҫҡы, утын ағастары араһында бысраҡ күлдәкле, бысраҡ битле бәләкәй генә ҡыҙ уйнап ултыра. Урамдарына инеүселәрҙе күрҙе лә, ҡурсаҡтарынан айырылып, аяғына баҫты, шунан нәҙек кенә сыйылдыҡ тауыш менән:

— Атайым иҫерек, йоҡлап ята, Гөлнара урманға еләккә китте, — тине.

Өй ишеге асыҡ ине, солан тулы тауыҡ, өй эсендә, аш-һыу менән булаша торған яҡта, себен мыжғыуы ишетелә — өҫтәлдәге иҫке клеенка буйлап йөрөйҙәр, аҡ мейесте, йыуылмаған ҡашығаяҡты һырығандар. Фәйзулла йорттоң ҙур яғындағы диванда ята. Иҙәнгә, карауатҡа одеялдар, ниндәйҙер сепрәк-сапраҡ һибелгән; өйҙән хужаһыҙлыҡ, етемлек, әсегән бал еҫе аңҡый. Нәжип йоҡлаған көтөүсене төрткөләргә тотондо.

— Фәйзулла, тор әле, тор. Председатель килде, һинең менән һөйләшергә теләй.

Фәйзулла мышнаны, уфтанды, башын ҡалҡытты ла аяҡтарын иҙәнгә төшөрөп тороп ултырҙы.

— Ә-ә, начальство...

Ирендәрен ҡыймылдатып йылмайыуға оҡшаш нәмә килтереп сығарҙы көтөүсе, тоноҡ, битараф күҙҙәре председателгә мәғәнәһеҙ ҡараны: шешенгән йөҙ-битен, эйәген, өҫкө иренен һирәк ҡара һаҡал-мыйыҡ баҫҡайны.

— Нишләп эшкә сыҡмайһың, нишләп эсеп ятаһың?

Фәйзулла шундуҡ яуап бирмәне, күпмелер ваҡыт башын һәлендереп ултырғандан һуң ғына төҫһөҙ ҡарашын председателгә текәне:

— Минең ҡайғы бар, һин аңлайһыңмы шуны? Ҡыҙҙарым, әсәй ҡайҙа, тип һорай. Мин уларға нимә тип яуап бирергә белмәйем. Үлде әсәйегеҙ, тим, олоһо аңлаған да һымаҡ, ә бәләкәйе ышанмай, һаман көтә...

— Эскәнсе, һин шул ҡыҙҙарың тураһында уйла.

— Ә һин ҡысҡырма! Һәр осраған печник, лесник, коновал ҡысҡыра башлаһа, ҡайҙа китә ул?!

— Кеше тегендә биш тәүлек алышынмай көтөү көтә, ә һин эсеп ятаһың. Намыҫың释 бармы, юҡмы? Ҡысҡырма, имеш! Ҡысҡырырһың да...

Фәйзулла өндәшмәне, председателдең дәлилдәрен башынан үткәрҙе шикелле, унан тупаҫ аптырау менән председателгә ҡараны ла айыҡ, асыулы итеп һөйләй башланы:

— Алыштырам, барам мин унда, барам, һин нисек... Фәйзулла тамам бөткән кеше икән, тип уйлайһыңмы әллә? Фәйзулла егерме йыл көтөүҙә, йыл һайын премия ала. Ҡара, Почет грамоталары менән стена тулған. Әйткәнмен икән — сығам!

Урамда Ильясов бригадирҙан һораны:

— Нисек уйлайһың, барырмы?

— Сәменә тейҙек, барыр. Эсмәгәндә һәйбәт көтөүсе ул. Запой — аҙна буйы, унан да һуҙылмаһа әле.

Кем-кем, ә Ильясов белә запойҙың нимә икәнен. Үҙе лә ошо ауырыу менән йонсой торғайны бит. Хәҙер, һәр дауаланған алкоголик һымаҡ, эскеселәрҙе йәне һөймәй.

Нәжип председателде сәйгә саҡырҙы, әммә Ильясов баш тартты. Шуны уйлап баш тартты — сәй янында мотлаҡ ҡатыраҡ берәй нәмә буласағын ул бик яҡшы белә. Ә уның эсергә һис теләге юҡ. Эсеү булмаған осраҡта ла сәйҙән һуң ферма мөдире, бригадир менән элекке рәсми эш мөнәсәбәте булмаясаҡ, әшнәлеккә килтерәсәк. Ғөмүмән, бер ситтә, тау араһында йәшәгән, күңелле һәм оҙаҡ итеп сәй эскән был халыҡ менән һаҡ булырға, ниндәйҙер ара тоторға кәрәк.

Председатель кәйефе ҡырылып юлға сыҡты. «Печник, лесник, коновал». Печниктың кем икәнен Ильясов белмәй, ә бына лесниғы — партком секретары Наил; ауыл хужалығы институтын бөткәнсе ул лесничествола лесник булып йөрөгән икән. Коновалы — Ильясов үҙе, сөнки уның һөнәре — зоотехник, аттар буйынса белгес. «Печник, лесник, коновал». Юл буйы ошо өс һүҙ председателдең башынан китмәне, икенсе уй уйларға тырышһа ла, хәтеренә төшөп аптыратты.

...Ә урман һаман бөтмәне лә бөтмәне. Бейек, үтеп сыҡҡыһыҙ ҡалын һәм ҡурҡыныс ине ул. Ҡыҙ бала ҡороһарыға, ер өҫтөнә сығып ятҡан йыуан тамырҙарға эләгәйығыла барҙы ла барҙы, алға атлаған һайын, бына хәҙер ағастар һирәгәйә, бына хәҙер асыҡлыҡҡа килеп сығам, тип өмөтләнде. Әммә ағастар бөтмәне, асыҡлыҡ, унан ҡасҡан кеүек, һаман йыраҡлаша ғына барҙы.

Үҙе кейеп үҫкән һары капрон куртка эҫе була башланы, ахырҙа һәҙәптәрен ысҡындырҙы; һеңлеһенең һул итеге

аяғын ҡыҫты — сис тә ялан аяҡ йүгер ине лә, ярамай — берәй осло ағасҡа баҫыуы йә йылан сағыуы бар.

Ваҡыт-ваҡыт уйланып та ала Гөлнара. Мәрзиә апаһы атаһын былай тип әрләгәне иҫендә: «Ошолайтып ятҡансы, ҡатын алыр инең, иҫерек баш!» Ҡатын, тимәк, икенсе әсәй. Гөлнара икенсе әсәйҙе күҙ алдына килтереп ҡарай, тик һис ҡабул итә алмай, аңында, күҙ алдында үҙенең әсәһенең хәҙер инде тоноҡлана уҡ башлаған йөҙ-һыны тик тора. Дөрөҫөрәге, йөҙө лә иҫенә төшмәй, ә тауышы, «Гөлнара, ҡыҙым!» — тип яратып әйткәне ҡолағында яңғырай. Әсәһен ҡырынмаған, шешенеп бөткән, диванда йоҡлаған иҫерек атаһы «алмаштыра», Гөлнара уны әсәһенең һүҙҙәре менән әрләй: «У-у, дүрәк, ҡасан шул араҡың менән сәсрәрһең икән?» Шунан бәләкәй генә һары себештең нисек үлгәне хәтеренә төшә: суҡышы асыҡ, әйтерһең дә, эсергә һорай, күҙҙәре тоноҡланған, аяҡтары тырпайған, ә янында, бер ни булмағандай, әсәһе ҡытҡылдап йөрөй, аяҡтары араһында башҡа себештәр ҡайнаша. Һуңынан үҙҙәренән биш өй аша йәшәгән иҫәрерәк малайҙы иҫенә төшөрә Гөлнара. Малай быларҙың ихатаһына килә лә, һорап та тормай, уның уйынсыҡтары менән уйнай башлай; үҙенең танауынан һәр саҡ йәшел маңҡалары ялтырап йөрөй, шуға туҡтауһыҙ танауын тарта (Мәрзиә апаһы, был малай атаһы араҡы эскәнгә иҫәр булып тыуған, ти торғайны) һәм маңҡаһын эскә тартып ала... Шунан ҡурсағы иҫенә төштө. Ул уға яңы күлдәк тегәсәк; лапаҫ аҫтындағы уйынсыҡ өйҙө күҙ алдына килтерҙе, өй эсендә — уйынсыҡ диван, өҫтәл, көҙгө, иҙәнгә балаҫ йәйелгән. Гөлнара ҡурсағы менән йәшәй, һеңлеһе уға ҡунаҡҡа килә. «Аяҡтарыңды һөрт, әле генә иҙәнде йыуҙым, үт, ҡунаҡ булырһың, хәҙер сәй әсәбеҙ», — ти.

Ә бер көн теге иҫәрерәк малай, Ғәдиб, килде лә уның йортонда йәшәй башланы. «Ярай, килгәс йәшә инде, — тине Гөлнара, — йәшәр урының булмағас, нишләйһең, кеше тупһаһында йөрөүҙәрең етте, тик танауыңды һемгер, һабын менән йыуын». Уйынсыҡ биҙрәһен ҡыҙ һаман үҙе менән йөрөтә — уны әсәһе иҫән саҡта магазиндан алғайнылар, шунан уның менән еләккә, ҡарағатҡа йөрөнө. «Атайым айныҡҡас, һаҡал-мыйығын ҡырғас, тағы ла бер биҙрә алыуын, көйәнтә эшләп биреүен һорайым. Унан һыуға йөрөйөм, өй менән булам...»

Гөлнара яйлап арый башлағанын һиҙҙе, туҡтап хәл йыйып алды, йөрәге дарҫлап типте; тик торғанда, аяҡ

аҫтында үлән ҡыштырламаһа, кипкән ағастар һынмаһа, ҡыҙ урман тынлығын ишетә. Тынлыҡта төрлө тауыш: ҙур ҡоштарҙың ҡанат ҡағыуын, үлән араһында урман кейек-бөжәктәренең атлау-шыуышыуын, бәләкәй ҡоштарҙың һыҙғырыуын айыра. Тик ауыл тауышы ғына ишетелмәй — эт өрөүе лә, әтәс ҡысҡырыуы ла, яланда эшләгән трактор тауышы ла юҡ. Әммә ул ауылдың эргәлә генә икәненә һаман ышана һәм үҙенең теге асыҡлыҡҡа килеп сығырына өмөтөн өҙмәй. Ултырып хәл йыйып алғас, Гөлнара атлауын дауам итте, ҡабаланып атланы; ана, ҡайындар, шуларға етһә, теге асыҡлыҡ йыраҡ та ҡалмаҫҡа тейеш. Ҡайындарға етте, әммә уның артында — йәнә үтеп сыҡҡыһыҙ ҡалын ҡара урман. Юлын ауған ағастар, кипкән ботаҡтар быуа, ҡыҙ уларҙы ашатлап уҙа, эйелеп аҫтарынан сыға, әммә ҡай саҡ шундай йыуан, оҙон ағастар осрай — ҡыҙға уны урап үтергә тура килә. Барған һайын йығылған ағастар күберәк тап була, тирәһендә бейек, ҡуйы үләндәр үҫә, ергә һеңеш-кән, бейеккә ҡалҡып торған кипкән ботаҡтарға уралып үҫә. Гөлнара яйлап үҙенә таныш булмаған урмандан барғанына төшөндө — әсәһе менән йөрөгән ерҙә быңдай ҙур, йыуан ағастар, йығылған ҡайындар юҡ ине лә баһа! Үләндәр ҙә икенсе һымаҡ, ят һымаҡ, хатта дошман һымаҡ. Шулай ҙа ҙур ҡырағай урманға кереп барыуына үҙе һаман ышанмай ине. Үҙенең дөрөҫ барыуына ул шикләнмәй, ә бына инеп киткән урман ауыҙындағы асыҡлыҡтың нишләп һаман булмауын бер нисек тә аңлай алмай.

Урман эсенә яйлап ҡараңғылыҡ төштө, ерҙән, үлән араһынан һалҡынлыҡ бөркөлдө. Себен күбәйҙе, ул көндөҙ ҙә бар ине, әммә хәҙер, томра тынлыҡта, улар ҡыҙҙың баш өҫтөндә болот һымаҡ өйөрөлдө. Себен өйҙәрендә лә бар, әммә улар — эре себендәр, өй себендәре; улар икмәккә ултыра, өҫтәл, тәҙрә быялаһы буйлап йөрөй, йоҡлағанда битте, ирене ҡытыҡлай, әммә тешләмәй. Ә был ваҡ ҡына урман себендәре әсе итеп тешләй, етмәһә күҙгә, танауға, ауыҙға тулып йонсота. Гөлнара асыуланып ҡулдары менән әрһеҙ ләпәктәрҙе ҡыуа, ауыртыуҙан ҡысҡырып ебәрә, тешләгән ерҙәрен тырнай...

Оҙаҡламай ҡыҙ үҙенең тауға табан атлағанын аңланы. Был уны һағайтты. Ә бит ул ауылдан сыҡҡас та үргә атлағайны, сөнки еләкле урын ылыҫлы урмандың һөҙәк тау битләүендә ине. Һәм уны беренсе тапҡыр һиҙенеү шаңҡытты: бәй, ул бит ауыл яғына түгел, бөтөнләй икенсе яҡҡа китеп бара! Йәнә бер аҙ атлағайны, тау тағы ла бейекләнде,

урман һауаға, болоттарға олғашты. «Тауға менергә ярамай, түбәнгә төшөргә кәрәк», — тип уйланы ул һәм кире боролдо. Күпмелер ваҡыт ул йығылған ағастар өҫтөнән сыға йәки уларҙы урап үтә-үтә алға барҙы әле, теге аҡланға бына етәм, бына етәм, тип өмөтләнде, ә урман һаман һирәкләнмәне, ағастар ҙа ваҡланманы. Уңарсы булмай күк йөҙө тамам ҡуйыланды, урман эсенә кис ҡараңғылығы төштө. Ул сыҡҡанда ҡояш бейек ине әле, хәҙер тауҙар артына йәшенде — башына беренсе тапҡыр, аҙаштым, тигән ҡот осҡос уй килде.

«Аҙашыу» тигән һүҙ Гөлнараға таныш. Атаһы: «Урман эсенә кермәгеҙ, аҙашырһығыҙ», — ти торғайны. Һеңлеһе менән икеһенә: «Аҙашһағыҙ, бүре ашар», — тип йыш ҡына ҡабатлай ҙа ине. Шуға ла «аҙаштым», «бүре» тигән һүҙҙәр уның аңында бер үк мәғәнәлә йөрөй. Бүренең ни икәнен дә белә ҡыҙ: һүрәтле китабы бар, бүре ул китапта эткә оҡшатып төшөрөлгән, әммә ҙур башлы, ҡыҫҡа муйынлы, янып торған ҙур уҫал күҙле. Үткән ҡыш күрше Ишбулат бабайҙарҙың быҙауын ашағайны, ошо яҙ атаһының көтөүенән бер һыйырҙың еленен өҙгөләгәйне... Гөлнара үҙенең аҙашҡанына тамам ышанғас, бүре тураһында уйлай башлағас, ҡапыл ҡурҡып китте, бәләкәй генә кәүҙәһе ҡалтырана башланы, аяҡтары ауырайҙы. Ҡысҡырып илап ебәрҙе, ҡото алынып һөрәнләргә тотондо, унан «әсәй, әсәй» тип шыңшыны, әсәһенең үлгәнен, барыбер ҙә ярҙам итә алмауын белгәс, «а-тай, атай» тип атаһын саҡырырға кереште. Ҡысҡырып арыны, һөрәнен бер кем дә ишетмәҫен аңланы — атаһы алыҫ, етмәһә, иҫерек. Шунан ул үҙ-үҙен йәлләп, сыйылдауға оҡшаш шыңшыу ғына сығара башланы. Аҙымдары ауырайҙы, кинәт ағас ботағына эләгеп йығылып китте, саҡ-саҡ ҡалҡынды, атлауын дауам итте, бара торғас, ҡулында биҙрәһе юҡлығын аңғарҙы. Йығылған саҡта төшөргәндер, ахыры. Шул тиклем йәл биҙрәһе, ә кире барыуы ҡурҡыныс. Шулай итеп, ҡурҡыуына биҙрә ҡайғыһы ла өҫтәлде.

Ҡараңғылыҡ тәүҙә үлән араһына төштө, бәләкәй ҡыуаҡлыҡтарҙы ялманы, унан, яй ғына күтәрелеп, ағас остарына менде. Яҡты саҡта барыһы ла аңлайышлы ине, әллә ни ҡурҡыныс та түгел һымаҡ ине, хәҙер, төн етеп килгәндә, таныш үлән-ағастар ят һәм ҡурҡынысҡа әйләнде, һәр ҡыуаҡ ҡараңғылыҡ өйөмө ине, ике аҙымдағы үләндәр араһында — ҡара соҡорҙар. Тамам ҡараңғы төшкәс, уны уратып төрлө ҡиәфәттәге, төрлө ҙурлыҡтағы шәүләләр

йөрөй, бейей башланы, унда ағастар араһында, бәләкәй, ҙур йәнлектәрҙең йүгерешкән-сабышҡандары күренде, бүреләрҙер, ахыры, ә артынан арҡаһына, елкәһенә эҫе тынын бөркөп ниндәйҙер ҙур ҡара йөнтәҫ нәмә йүгерә. Тик был йәнлек-януар ниңәлер ташланмай, йәнәшәнән йүгерә, үләндәр араһынан шыуыша һәм теште́рен шаҡылдата: өҫтөнә ырғыуҙан, күрәһең, ҡыҙҙың ҡысҡырыуы өркөтә.

Ҡыҙҙың аҙымдары бөтөнләйгә әкренәйҙе, аяҡтарын саҡ алыштырып баҫты, йығылыуы ла йышайҙы. Ағастарға бәреләэләгә килә лә өҫкә сығып ятҡан тамырға йәки үләндәр араһындағы ҡоро-һарыға эләгеп йәнә ҡолап китә, көс-хәл менән ҡалҡына ла ауа-түнә юлын дауам итә. Ул хәҙер бер нәмә тураһында ла уйламай, еләкле асыҡлыҡ та онотолдо, был ҡырағай ҡалын урмандан сығырына ла өмөтләнмәй, артынан килгән теге ҙур, ҡара, йөнтәҫ нәмә генә ҡурҡыта, ҡотон ала, ул ғына арыған аяҡтарын алыштырып баҫырға мәжбүр итә. Ул бер аҙым да ҡалмай артынан килә, йәнәшәнән атлай һәм бына-бына өҫтөнә ташланыр һымаҡ... Төндөң был ҡурҡыныс йән эйәләренән бик ҡасыр ине лә — йүгерә алмай шул, хәле юҡ. Бына ул йәнә нимәгәлер абынып йығылып китте — был юлы ҡалҡына алманы. Башын ҡулдары менән ҡапланы, аяҡтарын бөгәрләп, күҙҙәрен йомдо, иларға, һыҡтарға, ҡысҡырырға кереште. Йыртҡыстар яҡыныраҡ килде, үлән араһында шыуышты, оҙон ҡанаттарын елпене, йөҙөнә һаҫыҡ тындарын өрҙө, ҡанлы ҙур теште́рен шаҡылдатты...

* * *

Гөлнараның юҡлығын кис еткәс кенә белделәр, дөрөҫөрәге, һыйырҙарын һауырға, ҡыҙҙарҙы ашатырға килгән Мәрзиә апалары белде. Ул йоҡлап ятҡан Фәйзулланы төрткөләп уятты, уныһы күҙҙәрен көс-хәл менән генә асты ла бер нәмә лә аңламаған ҡиәфәттә ике туған һеңлеһенә аптырап ҡараны. Оло ҡыҙының юҡлығы ауыртҡан башына барып еткәс, битараф ҡына мығырланы:

— Ҡайтыр. Ҡайҙа булһын, кешеләрҙә йөрөйҙөр.

Әммә ҡыҙы ҡайтманы. Төн яҡынлашты, Гөлнара юҡ та юҡ. Фәйзулла тынысһыҙлана башланы, урамға сыҡты, тегеләй-былай йөрөнө, саҡырып һөрәнләне, өйгә инеп йоҡлаған бәләкәй ҡыҙын уятып, апаһының ҡайҙалығын һораны.

— Еләккә китте, — тип яуапланы Лилә йоҡо аралаш.

— Ҡайҙа, ҡайһы яҡҡа китте?

— Ошо яҡҡа.

— Ҡайһы «ошо яҡҡа»? Урманғамы ни?

Фәйзулла ҡул ишараһы менән тәҙрәнән ҡарайып күренеүсе тауҙарға күрһәтте.

— Эйе.

Ҡыҙынан йүнле хәбәр ала алмағас, атай кеше Мәрзиәгә йүгерҙе.

— Закираның балалары менән лапаҫ башында йоҡлап ятмаймы икән? — тине уныһы.

Ғиләжевтарға барҙылар. Улар, Гөлнара бөгөн күренмәне, тине. Өйгә кире ҡайттылар ҙа яңынан Лиләне уяттылар.

— Апайың менән бөгөн ҡайҙа барҙығыҙ? — тине Мәрзиә.

— Йылға аръяғына сыҡтыҡ. Ҡарағат эҙләнек.

— Гөлнара ҡайҙа ҡалды?

— Ул еләккә китте.

— Ҡайҙа?

— Урманға.

— Аҙашҡан, — тип бөтөрөндө Мәрзиә. — Эҙләргә кәрәк.

— Ҡайҙан эҙләргә һуң? — тип һораны Фәйзулла, аптырап.

— Йылға аръяғынан. Ана, йылғаның теге яғында йөрөнөк, ти ҙәһә.

Улар урамға сыҡты ла йылғаға йүгерҙе. Тауҙар менән урмандар бергә ҡушылып ҡарайғайны, унан ниндәйҙер шом, серлелек, ҡырағайлыҡ бөркөлә. Тирлән юлы менән йылғаға тиклем барғас, Фәйзулла менән Мәрзиә кисеүҙән сыҡтылар ҙа: «Гөлнара, Гөлнара!» — тип ҡысҡырырға тотондолар. Унан берауыҡ тыңлап торҙолар: тауыш-маҙар юҡ, тик ауыл яғынан ғына, күрәһең, клубтың асыҡ тәҙрәһенәндер, музыка һәм һөйләшкән тауыштар ишетелә — кино күрһәтәләр. Юл буйлап тегеләй-былай йөрөп, төнгө ҡараңғылыҡҡа һөрәнләй-һөрәнләй, ҡара урман эсенә керергә шөрләп, кире ҡайттылар. Юл буйына Мәрзиә Фәйзулланы әрләп бер булды.

— Бына нимәгә килтерә һинең араҡың? Яҡшыға алып барамы ни ул? Берәй нәмә килеп сығыр әле, тип күңелем һиҙә ине.

— Ҡысҡырма!

— Нимә «ҡысҡырма!» Балаға бынау ҡара урман эсендә нисек икәнен һин үҙеңдең иҫерек башың менән уйланыңмы? Ҡурҡышынан йөрәге ярыла бит.

Фәйзулла өндәшмәне. Өйөнә ҡайтҡас, йоҡларға ятты, әммә йоҡлай алманы, ҡыҙы тураһында уйланды. Өмөт бар ине әле: Гөлнара йә берәй күршенең балалары менән ҡараңғыға тиклем уйнаған да ҡунып ҡалған; етем баланы йәлләгәндәр, ашатҡандар ҙа йоҡларға һалғандар, йә, атайым фермалалыр, тип уйлап шунда киткән. Күпме ятһа ла, Фәйзулланың күҙенә барыбер йоҡо ҡунманы, тәүге әтәстәр ҡысҡыра башлағас, ҡалҡынды ла йүгәнен алып туғайға юлланды — уның туры аты шунда йөрөргә тейеш. Эҙләп табып менде лә фермаға китте. Үҙе юлдың әле уң, әле һул яғына сығып, ҡыҙының исемен әйтеп һөрәнләй-һөрәнләй барҙы. Ҡыҙының тауышы түгел, үҙенең тауышы ғына урмандан ҡаҡлығып кире ҡайтты. Фермаға килеп етте. Иртә ине әле, әммә көтөүсе, Фәйзулланың алмашсыһы Сафуан, һыйырҙарҙы кәртәгә индергән, кем белә, бәлки, яланға бөтөнләй сығармағандыр ҙа. Үҙе вагонда йоҡлап ята. Фәйзулла уны төрткөләп уятты.

— Килдеңме, алыштыраһыңмы? — тип һораны ул, күҙен асҡас та.

— Минең ҙур ҡыҙыҡай бында түгелме?

— Юҡ, нишләп бында булһын? Юғалдымы ни? — Көтөүсе кәйефһеҙ генә ҡалҡынды.

— Кисә урманға киткән дә — ҡайтманы.

— Ә мин һине, алыштырырға килгәнһең, тип уйлағайным. Мин бригадирға әйттем: бөгөн алыштырмаһаң, көтөүҙе ташлайым. Миңә генә кәрәкме ни ул колхоз малы? Аҙна өйҙә булған юҡ. Һинең намыҫ тигәнең бөтөнләй ҡалмаған икән.

— Ярай, ҡысҡырынма! Кискә килермен. Миңә ҡыҙҙы табырға кәрәк әле. Бала бит. Аҙашһа, урманда нишләп йөрөй икән инде?..

— Әҙерәк эсергә кәрәк.

— Уныһы һинең эш түгел!

Фәйзулла йәне көйөп вагондан сыҡты, атына атланды ла ҡайтыу яғына йүнәлде. Ашыҡмай ғына барҙы. Йәнә юлдан ситкә сығып, урман эсенә керә биреп, ҡыҙының исемен әйтеп һөрәнләй-һөрәнләй барҙы. Ә үҙенең күңеле барыбер ҙә тыныс: ауылға ҡайтһа, ҡыҙы өйҙә ултыра, тип уйлай.

Магазин янында Йомабикә ҡарсыҡты осратты, иҫәнләште.

— Ҡайҙан киләһең, шул яҡта берәй быҙау күренмәнеме? — тип һораны ҡарсыҡ. — Кисә иртәнсәк яланға ҡыуғайным, кистән ҡайтманы, ҡайтмағас, бәләүәт тотҡандыр ҙа япҡандыр, тиһәм, юҡ. Бүре-маҙар тамаҡлап ҡуймаһа ярар ине.

— Табылыр, йөрөйҙөр берәй ерҙә. Бына минең ҡыҙ юғалды әле. Кисә йылға аръяғына ҡарағат йыйырға тип сыҡҡан да ҡайтманы. Мин дә кисәнән бирле эҙләйем — бер ҡайҙа ла юҡ.

— Атаҡ-атаҡ, шулаймы? Берәйһе алып китмәнеме икән? Ана, ниндәйҙер ауылда бер ҡыҙҙы алып киткәндәр, ти бит, — ҡарсыҡ һағайыулы ҡараны Фәйзуллаға. — Кисә ауыл аша бер еңел машина үтте. Магазин янында туҡтаны, унан Тирлән яғына йүнәлде. Шулар урламанымы икән, тим.

— Сит-ят кешегә минең ҡыҙҙың ни хәжәте бар?

— Ә-ә, улай тимә. Уныһын инде Аллаһы тәғәлә генә белә. Төрлө кеше бар донъяла. Балаһыҙ кешеләр ҙә бар. Һин Тирләнгә кит, милицияға әйт, аңлат хәлеңде.

Ҡарсыҡ тамам аптыратты Фәйзулланы. Шулай ҙа, өйөнә яҡынайғанда, бәлки, ҡайтҡандыр, табылғандыр, тигән өмөтө һүнмәгәйне әле. Йортона инеп, Гөлнараның юҡлығын белгәс, тамам ҡойолоп төштө. Бәләкәй ҡыҙын Мәрзиәгә илтте лә, сәй эсеп, ауылдан егерме саҡрымда, тау артында ятҡан Тирлән ҡасабаһына китте.

Атын атлатып ҡына барҙы, баяғыса юлдан ситкә тайпылып, урманға керә биреберәк: «Гөлнара!» — тип һөрәнләне, унан юлға сығып барыуын дауам итте. Айныҡ сағында Фәйзулла, нигеҙҙә, кеше менән әллә ни һөйләшеп, аралашып бармай, уйланып йөрөй һәм кемдәрҙер тарафынан үҙен ҡыйырһытылған, ситләтелгән кеше тип иҫәпләй, мине ихтирам итмәйҙәр, бар бәхетһеҙлек минең башҡа ғына килә, тип уйлай. Бына бит йәнә бәлә килде — был юлы ҡыҙы юғалды.

Миңә бала саҡтан уҡ нимәлер ҡаршы килеп тик тора, тип иҫәпләй Фәйзулла. Имсәк имә, йүргәк бысрата ғына башлағайны — һуғыш сыҡты. Әсәһенең һөйләүе буйынса, атаһын, колхоз бригадирын, фронтҡа беренселәр рәтендә ебәргәндәр. Һуңғы мәртәбә улын ҡулына алып, ҡайғы-хәсрәтен араҡы менән томалаған да гармун иңрәүе аҫтында алыҫ һуғыш яланына киткән. Әсәһе бер генә хат алған, унан башҡа хаты ла, похоронкаһы ла килмәгән — Рәсәй киңлектәрендә ятып ҡалған. Ҡырҡ алтынсы йылда ғына

«Ирегеҙ хәбәрһеҙ юғалды» тип район военкоматынан ҡағыҙ ебәргәндәр.

Ирҙәр эшен башҡарып, яҙмышын ҡарғап һәм йәштәрен түгеп, әсәһе уны яңғыҙы тәрбиәләне. Фәйзулла көскә-көскә дүртенсе класҡа етте лә китап-дәфтәр менән мәктәпте бөтөнләйгә ташланы ла ҡуйҙы. Еңел ташланы, сөнки уҡыуға барымы юҡ ине. Кем белә, бәлки, кластан класҡа һөйрәлеп күсеп тә йөрөр ине, уларҙың кескәй генә ауылында башланғыс ҡына мәктәп ине шул, ете йыллыҡ мәктәбе булған ҙур ауыл уларҙан ете саҡрымда. Көн дә шул араны нисек йәйәү йөрөмәк кәрәк? Ул мәл ризыҡҡа туйынып етмәгән осор, өҫ-башында ла йүнле кейем юҡ. Фәйзуллаға колхозға эшкә сығырға тура килде: тәүҙә шул йәйҙе бесән ваҡытында волокуша һөйрәтте, унан бесән йыйҙы, торараҡ ерен дә һөрҙө. Һуңынан быҙау көтөүен тапшырҙылар, егет ҡорона ингәс, армияға тиклем һыйырҙар көттө.

Армиянан үҫеп-тартылып, егет булып ҡайтты. Хәйер, яраткан ҡыҙы булманы бер ҡасан да, үтә оялсан ине — был етемлектәндер, бәлки, — клубта гел ситтә торҙо, ҡыҙҙарға яҡынайырға тартынды. Армиянан һуң кешеләрсә йәшәп китергә ине лә, Фәйзулланы йәнә бәлә һағалап торған булып сыҡты: әсәһе ауырыуға һабышты — һуғыш йылдары ауырлығы, ир-ат эше, аслы-туҡлы йәшәү касафаты. Башы больницанан сыҡманы әсәһенең: ҡан төкөрҙө, күҙгә күренеп кипте, ҡартайҙы. Береһе өҫтөнә икенсеһе, тигәндәй, бәлә бер ҡасан да яңғыҙ йөрөмәй бит ул. Ҡышын әсәһе, болдорҙан тайып йығылып, уң ҡулын һындырҙы, ул ҡыйыш уңалды ла бик ауырлыҡ менән хәрәкәтләнде. Теләйһеңме, теләмәйһеңме — өйләнергә кәрәк ине Фәйзуллаға. Әсәһе лә ике һүҙенең береһендә шуны туҡыны. Киленен дә тапты: уҡытыусы, бригадир Сирайҙың ҡыҙы. Ниңә, уҡытыусыны ла ала ала ине ул саҡта Фәйзулла. Йәш, киң күкрәкле, көслө ҡуллы таҙа егет. Тик бына уҡытыусы, белемле кеше уға, көтөүсегә, сығырмы икән һуң? Әгәр Фәйзулла шофер, тракторсы, бригадир йәки идарала ултырған хисапсы булһа — икенсе эш. Көтөүсе көтөүсе инде. Юҡ, килмәҫ, кәмһенер. Егет уға элек ҡарамай ҙа торғайны, әсәһе, «кәләш ал» да «кәләш ал» тип ҡаңғырта башлағас ҡараһа, тегенең тырнаҡтары буялған, сәстәре ҡыҫҡа итеп ҡырҡылған һәм бөҙрәләтелгән, имеш. Ундай ҡош улар менән йәшәй буламы ла, ул уға балалар табып бирә буламы? Юҡ, уға ябайыраҡ, үҙе һымаҡ уҡымаған кәләш кәрәк.

Тормошта бына бит нисек килеп сыға: Фәйзулла үҙен уҡытыусының оҡшатҡанын, үҙенә кейәүгә сығырға теләге булғанын һуңынан ғына белде. Эй үкенде, эй үкенде Фәйзулла, әммә терһәкте тешләп булмай шул, һуң инде инде: Сирай ҡыҙы икенсегә сығып китте. Ә Фәйзулла өйләнде, өйләнергә мәжбүр булды утыҙ етеп барғанда — был ваҡытта әсәһе өйҙә бер нәмәгә лә өлгөрә алмай, айҙар буйы больницала ята ине. Донъяһына төкөрөр хәлгә еткәс алды кәләште, сөнки ныҡлап эскелеккә бирелә башлағайны, ҡатын-ҡыҙға ла битараф ине. Ә кәләш алыуы былайыраҡ килеп сыҡты. Әсәһе больницала, өйҙә тәртип тә, йылылыҡ та юҡ. Һыйырын Мәрзиә һауа. Этләнде, йонсоно Фәйзулла яңғыҙы һәм бер көн өйләнергә ҡарар итте. Икенсе фермала күрше ауылдан Ғәлиә исемле бер ҡыҙ һыйыр һауа ине, тәүге йәшлеге үткән, үҙе һымаҡ уҡ етем: атаһы һуғыштан ҡайтмаған, әсәһе йәшләй генә үлгән. Ғаиләлә оло бала булараҡ, һеңлеһен, ҡустыһын ҡарай икән. Етемлектең, аслы-туҡлы йәшәүҙең нимә икәнен ишетеп түгел, үҙ елкәһендә татыған. Әлбиттә, Ғәлиәне сибәр тип әйтеп булмай, әммә ул ҡәҙәре йәмһеҙ ҙә түгел. Фәйзулла уны электән белә ине, сөнки бер йыл икенсе фермала эшләп алды, һуңынан үҙе әле эшләгән дүртенсе фермаға күсте.

Әҙерәк төшөрөп алған Фәйзулла малсылар слетында Ғәлиә янына барҙы ла өйләнешеү тураһында һүҙ ҡуҙғатты. «Ярар, мин риза», — тине лә ҡуйҙы бит ҡыҙ! Егет ҡыҙҙы слеттан һуң туп-тура өйөнә алды ла ҡайтты. Әсәһе больницанан сыҡҡанда, йортҡа йәш ҡатын хужа булып алғайны инде.

Әсәһе уҡытыусыны алмағанын ғәфү итмәне, шунлыҡтан беренсе көндән үк киленен яратманы. «Яҡшынан, белемленән баш тартып, бер бысраҡ нәмәне килтергәнһең», — тине ул асыҡтан-асыҡ.

Әсәһе — үҙе хужа булырға өйрәнгән, таҙалыҡ яратыусы ҡатын. Ә хәҙер, килен барыһын да юҡҡа сығарыр, бөтөрөр, ауылындағы һеңлеһе менән ҡустыһына туҡтауһыҙ ашанты ташыр, тип ҡурҡты. Бөтәһенә лә бәйләнә башланы: икмәк һала белмәй, керҙе таҙа йыумай, хәйерсе һымаҡ кейенеп әрпеш йөрөй. Һүҙгә лә килешеп китәләр ине ошо нигеҙҙә. Әйтешкәндәрендә Ғәлиә лә һүҙ һайлап тормай, сәсрәткәнсе әйтә лә ҡуя. Фәйзулла айныҡ сағында өндәшмәй, хәбәрҙәренә ҡыҫылмай, эстеме — әсәһен яҡлай, ҡатынын әрләй. Әсәһе ныҡлап түшәккә яҡкас, Ғәлиә уны үҙ әсәһе кеүек тәрбиәләне, шулай ҙа бер көн ағыулы

һүҙҙәр менән йәнен ҡыйҙы: «Буҡҡа бутаның да, хәҙер, үлергә ятҡас, кәрәгем тейҙеме?»

Әсәһе үлгәс, тәү ҡарамаҡҡа тыныс ҡына йәшәп киттеләр. Әммә Фәйзулла запой менән эсә башланы, торған һайын түбәнгәрәк тәгәрәне. Ҡатынын йонсотто, үҙе йонсоно, балалары тере атайҙары бар көйө етем фиғелендә үҫте, тормошо арҡыс-торҡос китте. Быларҙың яҡшыға алып бармаҫы көн кеүек асыҡ ине. Бына бер көн көткән бәлә килде лә: ҡатыны бешеп үлде, хәҙер ҡыҙы юғалды.

Йүнһеҙ тормошон уйлай-уйлай, йөрәген өйкәгән хәлваҡиғаларҙа ҡаҙына-ҡаҙына Фәйзулла Тирләнгә килеп етте. Тәүҙә милицияға керҙе, ҡыҙы тураһында һөйләне. Тышҡы төҫ-ҡиәфәтен, йәшен, исемен яҙып алдылар, берәй яңылыҡ булһа, хәбәр итергә вәғәҙә бирҙеләр. Милициянан Фәйзулла байтаҡ йылдар бында йәшәгән бер ауылдашына һуғылды: сәй эсте, ҡайғыһын һөйләне, ҡайтыу яғына әйләнде. Юл буйы ҡыҙын уйланы, үкенде, үртәлде, араҡыны әрләне, яҙмышына зарланды. «Гөлнара табылһа, эсеүҙе ташлайым, ант итәм. Ҡыҙҙарҙы балалар йортона ебәреү юҡ, үҙем ҡарайым, — тип аҡыллы ғына фекер йөрөттө ул. — Аллаһы тәғәлә, моғайын да, барҙыр. Аллаһы тәғәлә, ҡыҙымды тап, кире ҡайтар, бына мин әле ҡайтып киләм, ҡайтыуыма ул өйҙә ултырһын. Үтенәм, ялбарам. Әгәр булһаң, ант итәм: эсеүҙе ташлайым, ул ағыуҙы ауыҙыма ла алмаясаҡмын, донъяла минән дә айығыраҡ кеше булмаясаҡ. Алла, Алла, ярҙам ҡулыңды һуҙ, Ал-лам...»

Ауылға кергән саҡта, ҡыҙым табылғандыр, тигән өмөтө бар ине әле. Әммә Гөлнара өйҙә юҡ ине. Саҡ ҡына хәл алды, атын эсереп, бер нисә телем икмәк ҡаптырҙы ла яңынан урманға инеп китте. Йәнә Тирлән юлы менән барҙы, был юлы эскәрәк, тау битенәрәк керҙе һәм: «Гөл-нара, Гөлнара!» — тип һөрәнләне. Ҡабатланып-ҡабатланып унның күңелһеҙ тауышы ҡырағай тау, ҡараңғы, ҡалын урмандар өҫтөнән шаңдау булып кире үҙенә әйләнеп ҡайтты...

«Маяҡ» колхозының партком секретары Салахов Наилдең китапта уҡыған, киноларҙа күргән идеал парторгтарға бик тә оҡшағыһы килә ине; улар бит ыңғай, аҡыллы, ҙур абруйлы булған, колхозсыларҙың аталары рәүешендә йөрөгән, председателдәр уларҙың кәңәш, ярҙамынан башҡа бер аҙым да ситкә атлай алмағандар. Әммә тормош — кино түгел, уның үҙ закондары. Кешеләр өсөн ул, Наил, үҙенеке, ошо ауылдыҡы, уны бөтәһе лә белә, маң-

ҡаһы ағып йөрөгән сағынан уҡ таныш — берәүҙәр уның менән йәшенмәк, ҡасыш уйнаған, сит баҡсаларҙан ҡыяршалҡан урлаған, мәктәптә уҡыған; икенселәре менән иҫәр йәшлектәрендә бергә эскән, ҡыҙҙар артынан сапҡан. Етмәһә, ярты ауыл — туғандары, яҡындары, ҡоҙа-ҡоҙағыйҙары. Кешеләр уның урманда эшләгән сағындағы ҡайһы бер мутлыҡтарын да белә, институтҡа кергән саҡта математиканан имтиханды уның өсөн ике туған ағаһы биргәнен дә иҫләй. (Нишләйһең, был предметтан Наилдең барымы юҡ ине шул.) Ҡыҫҡаһы, ғүмер буйы парторг йәки бүтән түрә булып йөрөй алмаҫһың, үҙ ғүмереңде шул уҡ ҡоҙа-ҡоҙағыйҙарың, туғандарың араһында һәм үҙ ауылыңда осларға тура килер. Бәлки, шуғалыр ҙа ул үҙен күрһәтеп барманы, тығылманы, абруй артынан ынтылманы, йәғни китаптарҙағы, киноларҙағы төрлө йәһәттән дә килгән идеал парторгка һис оҡшай алманы. Ғөмүмән, ул үҙен, үҙ урынында түгел, тип иҫәпләй. Зоотехник ҡына булып эшләһә, колхозға күберәк тә файҙа килтерә алыр ине. Ә райком бюроһында уға колхоздағы сәйәси-тәрбиәүи эштең насар ҡуйылыуы, ауылдың бысраҡ санитар торошо өсөн ҡаты шелтә сәпәгәстәре, бөтөнләй кәйефе китте.

Ильясовҡа тиклем председатель булып эшләгән Шакиров колхоз эшен үҙ ағышына ҡуйҙы, дөрөҫөрәге, бар эште парторг менән бригадирҙар елкәһенә һалды. Үҙе хәтәр һунарсы, балыҡсы ине, ике елле генә атты һайлап ала ла аҙналар буйы тауҙарҙа юғала, Ағиҙел үрендә бәрҙе тота, болан йыға, бер мәл хатта торна ла атты. Ҡатынының торна ите ашағыһы килгән икән, тип һөйләнеләр. Ә был яҡтарҙа ул ирекле ҡошҡа береһенең дә ҡул күтәргәнен хәтерләмәйҙәр ине. Бына шундай ине Шакиров.

Ниһайәт, бер көн уны председателлектән алдылар ҙа бүлексәгә башлыҡ итеп ҡуйҙылар. Һәм, көткәнсә, райком колхозға председателде йәнә ситтән, «варяг»ты (килмешәктәрҙе Наил шулай тип атай) тәҡдим итте. Эйе, хужалыҡ етәкселәрҙән бер ҙә мантыманы шул. Колхоз башланғандан бирле ундан ашыу председатель алмашынды, шуларҙың берәүһе генә — ошо ауылдан. Хоҙайбирҙин фамилиялы (хәҙер мәрхүм) кеше ине ул; колхозды ойошторған, һуғышҡа тиклем етәкселек иткән, шунан районға алғандар ниндәйҙер түрә итеп. Һуғыштан һуң йәнә үҙ колхозына ҡайта, үҙен дә, кешеләрҙе лә аямай эшләй һәм эшләтә, һүгә, ерләй, бөлгән, таралыр хәлгә еткән хужалыҡты күтәрә. Район түрәләре уны яратмай — үҙ һүҙле, үҙ

аллы кешене кем үҙ итһен инде, ә өсөнсө, дүртенсе бригадала бигерәк тә күрә алманылар. Былары инде — ситтә йәшәп өйрәнгән, урлашҡан, колхоз эшен яратмаған, шул арҡала председателдән әрләнгән, тыныслыҡтарынан мәхрүм ителгән кешеләр. Ошаҡ, шикәйәттәр яҙырға тотондолар, йәнәһе, үтә тупаҫ, һүгенә, әрләй, йәшәргә ирек бирмәй. Сүп өҫтөнә сүмәлә тигәндәй, район етәкселеге лә председатель эшмәкәрлегендә ниндәйҙер закон боҙоуҙар тапты (эҙләһәң, табылмаймы ни?!) һәм Хоҙайбирҙинды урынынан осорҙолар. Унан һуң ситтән килтерелгән председателдәр дәүере китте — осраҡлы кешеләр, етәкселек итә белмәгән, йыш ҡына эскеселәр, бушбоғаҙҙар. Уларҙың күбеһе хужалыҡта бер йыл да эшләй алманы. Бына шул ундан ашыу етәксенең һуңғыһы ғына, Ильясов Марат, юғары белемле, ауыл хужалығы академияһын бөтөргән. Бынан ҡырҡ саҡрымдағы үҙенең тыуған колхозында тәүҙә зоотехник булып эшләгән, һуңынан председатель булған. Хужалыҡты бөлдөргән, эскегә һалышҡан, шунан дауаланған, дауаланғандан һуң «Маяҡ»ҡа ебәргәндәр. Бында ла ныҡлап тамыр ебәрмәҫкә шикелле уйы: үҙенә өй төҙөмәй, колхоз йортонда йәшәй, сумаҙандары тултырыулы.

Парторг Наил, председатель итеп урындағы кешене, үҙебеҙҙең колхоздан һайларға кәрәк, тигән ныҡлы уйҙа. Етәксе ошо ерҙең тамырынан сығырға, баҫыуҙарҙы, ялан-туғайҙарҙы белергә, улар буйлап ялан аяҡ йөрөп үҫергә тейеш. Мәҫәлән, бөгөнгө көндә ауыл Советы рәйесе булып эшләгән Исхаҡов Рәйес — тап шундай кеше. Хәйләкәр, хужалыҡлы, ауылда бик абруйлы түрә. Нисектер бер нисә йыл әүәл ул Наилгә, әллә ысын, әллә шаяртып (йәшерә алмаған үкенесе лә бар ине): «Колхозға йәнә килмешәкте килтерҙеләр. Ниңә, мин председатель булып эшләй алмаҫлыҡ кешеме ни? Ун биш йыл бригадир булдым, хужалыҡты, кешеләрҙе беләм. Быныһы ла оҙаҡ тора алмаҫ. Күрерһең, унан һуң мин председатель буласаҡмын», — тигәйне. Әммә райкомдың үҙенең уй-ниәте, ул Наил менән Рәйестән һорап тормай — сираттағы «варяг»ты килтереп ултырттылар ҙа ҡуйҙылар.

Наил яңы председатель менән тәүге көндән үк уртаҡ тел таба алманы. Ильясов һуңғы йылдарҙа вазифаларынан төшөрөлгән күп кешене урындарына кире ҡайтарҙы. Парторг ҡаршы төшмәне, сөнки беренсе секретарҙың: «Алыу, ҡыуыу — иң еңеле, ә һин кешене тәрбиәлә, эшләргә өйрәт», — тигән һүҙҙәрен бик яҡшы хәтерләй ине. Илья-

сов Әхмәтшин Юлайҙы икенсе ферманың мөдире итеп ҡуйырға ниәтләнгәс, Наил ҡырҡа ҡаршы төштө. Юлай эскесе, ялҡау бер бәндә ине, склад мөдире булған саҡта урлап тотолдо, умартасылыҡҡа ҡуйҙылар — таш һарайҙа колхоздың бөтә ҡортон үлтерҙе. Ә ниндәй көслө күс ине! «Мин бында партком секретары булған саҡта, Юлай бер ниндәй ҙә яуаплы вазифа биләмәйәсәк!» — тигәйне ул саҡта Наил. Шунан бирле председателдең мыҡты кәүҙәһен, үгеҙҙеке ише йыуан, ҡыҫҡа муйынын (Наил эстән генә уны «үгеҙ» тип атаны ла), һәр ваҡыт һаҡ, шиксел ҡараған һоро күҙҙәрен күрһә, парторгтың тәнен ҡорош-тора, кәйефе китә, йөҙө ҡарая.

Планерканан һуң Наил икенсе ҡаттағы үҙенең кабинетына инде, ултырҙы ла кисә кистән яҙа башлаған докладын уҡырға керешә — шәмбе көн асыҡ партия йыйылышында сығыш яһарға тейеш. Һәр саҡ кәйефле, хушбый еҫе аңҡып торған ауыл Советы башлығы инде, ҡул биреп күреште лә:

— Дүртенсе бригаданан шылтыраттылар. ЧП — бер ҡыҙ юғалған, көтөүсе Фәйзулланың ҡыҙы. Кисә урманға киткән, ҡайтмаған. Фәйзулла төнө буйы эҙләгән, таба алмаған.

«Шул ғына етмәгәйне беҙҙең хәйерсе башҡа», — тип уйланы Наил.

Һүҙ таба алмай аптырашып ултырҙылар.

— Эҙләүҙе ойошторооуы ауыр буласаҡ, — тине Рәйес, байтаҡ өндәшмәй ултырғас, парторгтың уйын тойомлағандай. — Әммә ойошторорға кәрәк, баланың урманда үлеп ятыуы бар.

Председателгә инделәр. Ильясов уларҙы тыңланы ла ҡаштарын төйҙө, асыулы итеп бер нисә һүҙ әйтте:

— Әҙерәк эсергә ине. Кисә булдым мин өйөндә. Лаяҡыл иҫерек, балалары тырым-тырағай. — Председатель бармағы менән өҫтәлде туҡылдатты ла өҫтәне: — артыҡ кеше юҡ, транспорт юҡ. — Шунан блокнотын асты, — ике ГАЗ-51, ЗИЛ-103 — ремонтта, «Урал» йөк менән ултыра, кран юҡ, бер машина — Ҡаҙағстанда, берәүһе АВМ-ға йәшел масса ташый, бар «Беларусь»тар сенажда. Мәғәфүров һауынсыларҙы йөрөтә, көндөҙ — сенажда. Бөттө.

— Эҙләүгә йәштәр бригадаһын сығарһаҡ? — тине Наил ҡыйыуһыҙ ғына. Председателдең быға ла ҡаршы төшөрөн парторг белеп тора ине. Ауылдан ете саҡрымдағы тауҙа бесән сабып ятҡан йәштәр бригадаһын тоҫмаллай ине Наил.

— Йәштәрҙе бирмәйем, — тине Ильясов, бәхәскә урын ҡалдырмаҫлыҡ итеп, үҙе ҡаш аҫтынан парторгка уҫал ҡарап алды. — Ауырлыҡ менән ойошторҙоҡ ул бригаданы, эҙләргә ебәрһәк, таралышып бөтәсәктәр. Яңынан нисек йыябыҙ? Синоптиктар, Урал артында ямғырҙар башланасаҡ, ти, ошо ситуацияла бер көн әрәм итеү — хыянат. Уларҙы алған хәлдә лә, транспорты кәрәк, ун саҡрымды йәйәү йөрөй алмайҙар ҙа инде. Ана, тағы телефонограмма килде — әрләйҙәр. Бөтә күрһәткестәр буйынса ла артта һөйрәләбеҙ.

Эйе, председатель хаҡлы. Көскә-көскә яйға һалынған эш көнө буйы туҡталып торасаҡ. Бер көнгә генә туҡталһа әле. Яҙ һалҡын килде, ҡоро булды, үләндәр һуң ҡалҡты, әле июль уртаһы, колхоздың бер кәбән бесәне юҡ. Бер йыллыҡ үләндәрҙе сабырға иртәрәк, ул күтәрелгәс, йыш ҡына булғанса, ямғырҙар китәсәк, ул сағында инде туғайяланға «Вихрь»ҙар, «Беларусь»тар инеүенә өмөт тә итмә. Элекке председатель булғанда, Наил, оҙаҡ уйлап тормай, кешеләрҙе тиҙ генә ойоштороп, ҡыҙҙы эҙләргә сығара алыр ине. Балаға ғына түгел, хатта оло кешегә бер үҙең урманда ҡуныуы ҡурҡыныс.

— Значит, юғалған ҡыҙға төкөрәйек тә ҡуяйыҡмы, улай булғас? — тине Наил, ағарып.

— Төкөрәйек, тип кем әйтте? Эҙләргә кәрәк. Ауылда кеше бөткәнме ни? Йәш үҫмерҙәрҙе ойошторoғоҙ, урамда күпме бала буҡ тибә, йылға буйында ята, мотоциклда йөрөй. Дүртенсе бригадала ла эшһеҙҙәр тубыҡтан.

— Ул ғына етмәй.

— Етә. Бер төн эсендә әллә ҡайҙа китергә өлгөрмәгәндер. Ауыл тирәһендә йөрөйҙөр йәки берәй ҡыуаҡ төбөндә яталыр.

Бер нисә үҫмерҙе табып булыр инде, ул турала ғына Наил үҙе лә уйлағайны, тик быларға нимәгә ултыртып алып барырға һуң? Үҙенең ГАЗигына биш кешенән артыҡ һыймай. Дүртенсе бригаданан тағы ун кеше табылыр, тип хисаплайыҡ. Барыбер аҙ.

Төш етеүгә һигеҙ үҫмерҙе таба алдылар. Шуларҙың икәүһе ҙурҙар ине, ун класты бөтөргәндәр, өйҙә ултыралар, институтҡа инергә әҙерләнәләр. Тракторсы Сабрайҙың улы Эдуардтың мотоциклы бар, үҙенең артына пожарник Шәйхисламдың улы Уралды ултыртты, коляскаһына — уның бәләкәй ҡустыһын. ГАЗикка биш малай тығылды. Дүртенсе бригадаға килеп еттеләр — Ҡоҙаш

ауылына. Урал һыртының алыҫ бер битләүендәге бәхетле тыныслыҡҡа, ярым йоҡоға талған һил ауыл ине был. Кәртә бағаналарына ҡунған һайыҫҡандар шыҡырлаша ла йомортҡа һалып ояларынан сыҡҡан тауыҡтар ғына ҡытҡылдай. Ауыр кәүҙәле, яй хәрәкәтле бигадир Нәжип, йә, эштәр нисек, тигән һорауға күн фуражкаһын елкәһенә шыуҙырҙы ла шырт ҡара сәсен һыпырҙы, шунан ғына, ауыл егеттәрен Тирлән юлы буйлап эҙләргә ебәрҙем инде, тине. Ҡыҙҙы ҡайһы тирәнән эҙләргә икәнен йүнләп берәү ҙә белмәй: Лилә, еләккә китте, ти, ҡайһы яҡҡа китте, тип һораһаң, урманға, тип яуаплай, ә ҡайһы урман икәнен әйтә алмай. Бында бит төрлө яҡтан да урман. Шулай булғас, ҡайһы яҡҡа юлланғанын белеп ҡара. Бригадир Нәжиптең ҡатыны Зәкиә, ауыл аша Тирлән яғына ниндәйҙер еңел машина үткәнен күргәндәр, ҡыҙҙы шул машиналағы кешеләр алманымы икән, тип һөйләне. Баҡһаң, ниндәйҙер ауылдарҙа бәләкәй балаларҙы урлау осраҡтары булған икән.

Машина менән мотоциклды бригадирҙың ҡапҡа төбөнә ҡалдырҙылар ҙа йылға яғына атланылар, уны кисеп, ике төркөмгә бүленделәр. Бер төркөмдө юлдың һул яғы буйлап Нәжип менән Рәйес алып китте, икенсеһен Наил үҙе етәкләне. Малайҙарҙың үҙҙәрен генә ебәрергә ҡурҡтылар — урманды йүнләп белмәйҙәр, аҙашһалар, үҙҙәрен эҙләргә тура киләсәк. Быйыл ун класты бөткән Эдуард менән Урал да Наил төркөмөндә, уларҙан тыш йәнә ике уҡыусы бала ла бар. Йәмғеһе биш кеше. Бер-береһенән унар-ун бишәр аҙым ҡалдырып һибелделәр ҙә ҡыҙҙың исемен һөрәнләй-һөрәнләй яйлап ҡына урман эсенә атланылар. Бара биргәс, яуап тауышы йәки илау ишетелмәҫме, тип туҡтанылар, тик ҡатлы-ҡатлы шаңдауҙың әйләнеп ҡайтыуынан башҡа тауыш ишетелмәне. Шулай бер ҡысҡырып, бер туҡтап килә торғас, малайҙар шаярыша башланы, тәртипһеҙ ҡысҡырыуҙар, аҡырыуҙар китте. Тау битләүҙәренә күтәрелделәр, ҡалын урмандар эсенән атланылар, ҡырылған делянкаға, урман юлына килеп сыҡтылар, ҡайынлыҡты үттеләр...

Наилгә йәштәр артынан эйәреүе ҡыйын ине. Һуңғы йылдарҙа ул ауырайҙы, йәйәү йөрөүҙе онотто, ҡорһағы сыҡты. Ул пинжәген systе, кеҫәһенән тарағы, бумажнигы, ручкаһы төшөп ҡалмаһын өсөн, һаҡ ҡына ҡулында тотоп барҙы. Тағы бер сәғәттән уның тамам хәле бөттө, кәйефе ҡырылды, һәм ул, ҡалын урман, тауҙар араһында бәләкәй

генә ҡыҙҙы эҙләү бесән эҫкертендә энә эҙләү һымаҡ мәғәнәһеҙ, өмөтһөҙ эш инде ул, тип уйлай башланы. Унан килеп күп илауҙан, ҡысҡырыуҙан ҡыҙҙың күптән тауышы бөткәндер, уны эргәһенән үтеп барғанда ла ишетәһе түгел. Бушҡа ваҡыт, көс әрәм итеү генә. Малайҙар ҙа арыны, тәүҙә ҡыҙыҡ күренгән сараның һөҙөмтәһеҙлегенән улар кәйефһеҙләнде, бергә йыйылды, тауыштары онотҡанда бер сыға башланы. Ял итергә ултырҙылар.

— Эт менән эҙләргә кәрәк, былайтып табып булмаясаҡ, — тине Эдуард.

Наил үҙе лә шуны уйлай ине. Иртәнсәк милицияға шылтыратырға онотҡандар. Уларһыҙ ҙа табырбыҙ, тип уйланылар, урманға барырҙар ҙа шундуҡ табып алырҙар йәки улар Ҡоҙашҡа килгәнсе, баланы табып ҡуйғандар.

Ултырҙылар, ял иттеләр, унан аҫҡа, юл йүнәлешенә атланылар һәм оҙаҡламай тап йәйге ферма тапҡырына төштөләр. Дүртенсе бригада егеттәре менән Нәжип төркөмө лә шунда ине. Ҡыҙҙы улар ҙа тапмаған. «Көтөүселәр менән эштәр нисек әле унда, алыштырҙылармы, юҡмы?» — тип һораны Наил Нәжиптән. «Сафуан ағайҙы ферма мөдире Шәкүр үҙе алыштырҙы, ә Фәйзулла иртәнән бирле урманда ҡыҙын эҙләй», — тип яуапланы бригадир.

— Ну китте эштәр, ауылда көтөүгә ҡушырлыҡ та кеше юҡ, — тип көрһөндө Наил.

— Юҡ инде, йәштәрҙең был турала ишеткеләре лә килмәй, ололарҙан Һибәтулла ҡартайҙы, Иҙрис ауырый, — тине ғәйепле генә тауыш менән бригадир.

— Фәйзулла яҡшы эшләй ҙә ул, тик эсһә — бөттө.

— Уның эсмәгән сағы бармы һуң?

— Элек ҡатыны нисек тә тота ине әле, хәҙер бөтөнләй аҙҙы — тыйыусы кеше юҡ.

Малайҙар йылға буйлап үргә атланы, йәнә шаяра, көлә, бер-береһенә һыу сәсрәтә башланы. Наил эйелеп таҙа, һалҡын һыу эсте, битен йыуҙы, ҡулъяулығы менән һөртөндө; Рәйес менән Нәжип тә уның өлгөһөнә эйәрҙе. Унан Наил асыҡ вагон ишегенән ҡараны. Ҡараны ла һүгенде. Бер аҙна элек кенә ебәргән плакаттар, диаграммалар мөйөшкә ырғытылған, кнопкалар ҡумтаһы иҙәндә ята, һикелә — кейем-һалым, әллә ниндәй сепрәк-сапраҡ, мейестә — бысраҡ кәстрүл, мөйөштә «бормотуха»ның буш шешәләре ултыра. Тәртипһеҙлек, вагондағы бысраҡ өсөн Наилдең ферма мөдирен күпме әрләгәне булды — бер ниндәй ҙә фәтүә юҡ. Партком секретары эскә атланы, әрләй-әрләй

плакаттарҙы кнопкалар менән стенаға йәбештереп ҡуйҙы, сыҡты ла күтәрмәгә, Рәйес менән Нәжип янына ултырҙы.

Теләр-теләмәҫ кенә тегеһе-быныһы тураһында һөйләштеләр, унан барыһы ла ауылға ҡарай атланы. Урамдан барғанда ҡапҡаларынан сығып кешеләр, әбей-һәбей, ҡарт-ҡоро һорап ҡалды:

— Тапманығыҙмы?

— Юҡ.

— Ҡайҙарҙа эҙләнегеҙ һуң?

— Тирлән юлы буйлап фермаға тиклем барҙыҡ.

— Бәй, бәләкәй ҡыҙы бит, еләккә китте, тигән. Ә беҙҙә еләккә Тирлән юлынан йөрөмәйҙәр. Еләк урыны ана тегендә, ҡайын сауҡалығында, — тип ҡулы менән ишаралап күрһәтте бер ҡарсыҡ, картуф баҡсалары артындағы ҡайынлыҡ яғына төртөп. — Шунда киткәндер, шунда йөрөйҙөр.

Бригадир Нәжиптең ҡатыны ла шулай тине, Мәрзиә лә шул фекерҙе яҡланы. Ул иртүк урманға барғайны инде, тик яҡында ғына йөрөнө, эскә керергә ҡурҡты. Тимәк, ҡыҙҙы асыҡлыҡ, ҡайынлыҡ тирәһенән эҙләргә кәрәк. Ауыл малайҙары шундуҡ өйҙәренә таралышты ла бөттө, ә Эдуард бер нисә үҫмер менән ГАЗик янында ҡалды. Наил Нәжип менән кәңәшләште, уныһы, урындағы халыҡтан хәҙер кешеләр йыйып ҡарайым, тине, Рәйес тә, кис етергә йыраҡ әле, эҙләүҙе дауам итергә кәрәк, тигән фекер белдерҙе.

— Бына нимә, егеттәр, әйҙәгеҙ, теге урманға күсәйек тә шунан мөмкин тиклем эскәрәк керәйек, — тине Наил, үҫмерҙәр янына килеп. — Аңлайым, йөрөп арынығыҙ, тамағығыҙ ҙа асҡандыр, тик саҡ ҡына түҙегеҙ, ҡыҙ бит тәүлек буйы ас.

Һөмһөрҙәре ҡойолдо үҫмерҙәрҙең, барыһы ла ситкә, аяҡ аҫтарына ҡараны, шунан Эдуард былай тине:

— Булмай, беҙгә ҡайтырға кәрәк.

— Нишләп булмай?

— Сәғәт етелә Штирлицтың дүртенсе серияһы, — тип яуапланы Эдуард. Наил сәғәтенә ҡараны, ун минуттан алты тула ине.

— Ҡалай кино тип үлгән кешеләр! Икенсе ваҡыт ҡарарһығыҙ.

— Нисек икенсе ваҡыт? Икенсе ваҡыт бүтән серияһы була шул, уны ҡабатламайҙар.

«Шайтан алғыры икән дә! — тип эстән генә һүгенде Наил. — Тура килеүен әйт әле һин уның».

— Эх, һеҙ, егеттәр! — тип үпкәле көрһөндө үҙе. — Һеҙ бит бала-саға түгел, өлкән егеттәр. Телевизор ҡарайбыҙ тип, ҡыҙ баланы бәләлә ҡалдырайыҡмы ни инде, ә?!

Малайҙар баштарын эйҙе, өндәшмәнеләр. Былар таҙа кәүҙәле, аслыҡтың, яланғаслыҡтың нимә икәнен белмәгән, ҡала универмагынан алынған джинсы салбарҙары кейгән, оҙон сәсле замана егеттәре шул. Хәйер, улар насар егеттәр түгел, белемле, аҡыллы, математиканы, физиканы беләләр, тик бына көндәлдәрен генә белемле тип әйтеп булмай.

— Ул фильмды мин дә ҡарайым, — Наил ысынлап та ул киноны кинәнеп ҡарап бара ине. — Ярар, дүртенсе серияһын ҡарай алманыҡ, ти, шунан донъя емереләме әллә? Ҡарағандар һөйләр! — Ул егеттәрҙе өгөтләй, күндерә алыуына ышана ине әле.

— Бына нимә, егеттәр, мин һеҙгә инәлмәйем, мин һеҙгә ауыл Советы председателе буларак рәсми рәүештә әйтәм, — тип һүҙгә ҡушылды Рәйес, бераүыҡ һүҙһеҙ торғандан һуң. Һәр ваҡыттағыса тауышын бик күтәрмәй, әммә һүҙҙәрен пистолеттан атҡан ише өҙөп-өҙөп, һығып сығарҙы. — Белегеҙ, эш бик етди һәм мөһим, кеше ғүмере менән бәйле. Әгәр ҡыҙ үлә ҡалһа, ғәйеп һеҙҙең өҫкә лә ятасаҡ.

Малайҙар мыҫҡыллы ғына йылмайышты, йәнәһе, һин, ағай, үҙеңә бик күпте алаһың түгелме, ә беҙ һинән бөтөнләй ҡурҡмайбыҙ.

— Рәйес ағай, эҙләнек бит инде, тапманыҡ. Ысынлап та берәйһе машина менән алып киткәндер, — тине Эдуард.

— Ярар, телевизорығыҙ менән ҡаҙалып китегеҙ, — тауышын күтәрмәй, тәү ҡараште бик тыныс ҡиәфәт менән шулай тине Рәйес, ә үҙенең эсендә вулкан ҡайнай ине. Егеттәргә арты менән әйләнде лә, — бындай буш күңелдәр ҡайҙан барлыҡҡа киләлер, — тип өҫтәне.

— Ҡайҙан булһын, — тип көлдө Наил, — үҙебеҙ үҫтерәбеҙ.

Малайҙар мотоциклды ҡыҙҙырҙылар ҙа өсәүләп ултырып китеп тә барҙылар.

— Ә беҙ нишләйбеҙ? — тине ҡалған егеттәрҙең береһе.

— Һеҙ ҙә Штирлицҡа ҡабаланаһығыҙмы? — тип аптыраған булып ҡыланды Наил. — Бер нәмә лә эшләп булмай, китергә тура килә.

Ул ГАЗикка ултырҙы ла бригадир Нәжипкә былай тине:

— Давай, урындағы малайҙарҙы йый ҙа кискә тиклем эҙлә. Ә иртәгә иртәнсәк күберәк кеше сығарып, көнө буйы

урманды һөҙөргә кәрәк. Яңылыҡ булһа, миңә хәбәр ит. Мин бөгөн үк милицияға шылтыратам, эт ебәрһендәр.

Малайҙар артҡы креслоға өймәкләште һәм машина ауылдан сығып китте. Наилгә нисектер ауыр ине. Ауырлыҡ ошо мәлдә ҡара урманда ас йөрөгән ҡыҙҙы уйлауҙан да түгел хатта, күңел кителеүе үҙе менән ҡәнәғәт булмауҙан, эҙләүҙе тейешле кимәлдә ойоштора, бынау маңҡа малайҙарҙы ышандыра, дөрөҫөрәге, урманға барырға тыңлата алмауҙан. Һәм Наил күңеленә ауыр булғанда үҙен тынысландыра торған ниндәйҙер уй, сәбәп эҙләргә кереште. Уның башына ошо ҡотҡарғыс уй, үҙенең ҡылығын аҡлаусы уй килде — бәлки, ҡыҙҙы ысынлап та машина менән алып киткәндәрҙер, ә? Алып киткән хәлдә бит унан, башҡаларҙан ғәйептең ниндәйҙер өлөшө алына, насар эҙләгәнгә күрә тапманылар түгел, ә ҡыҙ эҙләгән ерҙәрендә юҡ ине, булыуы ла мөмкин түгел ине. Әйҙә, милиция эҙләһен, эҙләү иғлан итһендәр, ҡыҙҙың юғалыуы тураһында мәғлүмәтте гәзиттәрҙә баҫһындар.

Ауылға ҡайтҡас, улар Рәйес менән шундуҡ ҡалаға, милицияға, шылтыраттылар.

— Ҡасан юғалды? — тинеләр теге оста.

— Кисә.

— Кисә юғалған, ә бөгөн кис еткәс кенә шылтыратаһығыҙмы? — тине трубкалағы асыулы тауыш. — Бөгөн сыға алмайбыҙ, бөтә эттәр ҙә эш менән мәшғүл.

— Ҡасан киләһегеҙ һуң?

— Көтөгөҙ... — Теге башта трубканы һалдылар.

...Ул өшөп уянды, ер, урман һыуығынан бәләкәй, яшыҡ кәүҙәһе туҡтауһыҙ ҡалтырана ине. Яҡтырған да һымаҡ, иртәнге яҡ яҡынлаша, ахыры. Гөлнара үҙенең урманда яңғыҙы ғына төн уҙғарғанын аңланы, һалҡын, еүеш ерҙә ятҡан; кисә үҙенең урман шырлығында йөрөүен, ҡараңғыла ҡурҡыуын хәтерләне, бынау йәшеллек араһында өмөтһөҙ яңғыҙлығын тойҙо. Ошоларҙы уйланы ла яңынан иларға, ярҙам һорап ҡысҡырырға тотондо. Байтаҡ һыҡтағас, бер аҙ тынысланды, көн тыуыу менән ниндәйҙер өмөт тә уянды — тиҙҙән урман ауыҙына барып сығыр, бөгөн уны мотлаҡ табырҙар, атаһы, Мәрзиә апаһы табыр. Ҡыҙ торҙо ла атлап китте.

Иртәнге яҡтылыҡ юғарынан ҡарай — тәүҙә ул ағастарҙың өҫкө ҡатында йөрөнө, унан аҫҡараҡ төштө, тиҙҙән ергә үк килеп етте лә бәләкәй ҡыуаҡлыҡтар, үләндәр ара-

һынан төн ҡараңғылығын бөтөнләй ҡыуып ебәрҙе. Йомшаҡ ел иҫеп, ҡайын баштары һелкенеп шыбырлашты, ниндәйҙер ҡош тауыш бирҙе. Таныш өн-тауыштарҙы ишеткәс, ҡыҙҙың күңеленә йылы инде. Унан күҙ алдына шундай күренеш килеп баҫты: киске яҡҡа айныҡҡан атаһы Лиләнән: «Гөлнара ҡайҙа?» — тип һораясаҡ. «Урманға еләккә китте», — тип яуап бирәсәк һеңлеһе. Шунан атаһы борсолоп урманға йүгерәсәк, әммә ҡараңғы төшөп өлгөрә, һәм атаһы ағастар араһынан уны таба алмай; ә хәҙер яҡты, атаһы йәнә урманға эҙләргә киләсәк, апаһы Мәрзиә лә эҙләй, бригадир Нәжип эҙләй, бөтә ауыл эҙләй, тиҙҙән уны табасаҡтар.

Ҡыҙ атлауынан туҡтаны ла шым ҡалып тирә-яғына ҡолаҡ һалды: япраҡтар шаулаша, ҡоштар сутырлай, ҡайҙалыр алыҫта һайыҫҡан шыҡырлай, ҡарға ҡарҡылдай, ә бына кеше тауыштары ниңәлер һаман ишетелмәй. Ишетергә теләгән тауыштарҙы ишетмәгәс, ҡыҙ яңынан иларға тотондо, дөрөҫөрәге, ныҡлап түгел, ә бер төрлө генә һыҡтай: «Аа-аа-аа!» Үҙе бара, үҙе бер туҡтауһыҙ һыҡтай; аҙымдары бәләкәй, аяҡтарын саҡ-саҡ һөйрәтә, улар үләнгә урала, ҡыҙ һөрлөгөп йығылып китә.

Асығыуҙы ул бөтә тәне менән тоя, ауыртыуҙы тойған кеүек тоя. Гөлнара элек бер ваҡытта ла ас йөрөмәй торғайны. Атаһы бер нәмә лә бешермәгән сағында ғына ашағыһы килә, бындай саҡта икмәкте һындырып ала ла ашай. Икмәк тураһында уйлай башлағас, туҡта әле, тип аяҡ аҫтына, үлән араһына иғтибарлабыраҡ ҡарарға тотондо — ашарлыҡ берәй нәмә табыр, бәлки. Бөтә ашарлыҡ нәмә ерҙә үҫкәнен ул бик яҡшы белә: баҫыуҙарҙа иген бешә, өй артындағы баҡсала — картуф, ауылдың теге яғындағы тау һыртында — ҡырағай һарымһаҡ, йылғаға табан һөҙәклектә ҡуҙғалаҡ йәшелләнә; йылға аръяғындағы ереклек менән муйыллыҡта эҙләнһәң, ҡыҙыл, ҡара ҡарағат ҡыуаҡлыҡтарын табырға була, ҡайын араһындағы аҡландарҙа, ҡуйы үләндәр эсендә өлгөргән еләк йәшеренә. Яҙҙарын баҫыуҙа ҡымыҙлыҡ ҡалҡа. Бында ла, ҡырағай урманда, үләндең төрлөһө бар, тик уларҙың береһе лә уға таныш түгел, шуға ла Гөлнара уларҙы ашарға яраймы, юҡмы икәнен белмәне.

Тирә-яғына, аяҡ аҫтына, үләндәргә, ҡыуаҡлыҡтарға, ағас ботаҡтарына күҙ һалып, ҡыҙ һәр ерҙә лә тормош барғанын күрҙе: һорғолт иләүҙәрендә ҡырмыҫҡалар ҡайнаша, улар шулай уҡ аҡ ҡайын олоно буйлап йөрөй; үлән япрағы буйлап ниндәйҙер ҡуңыҙ шыуыша, бейектә, ағас баштары

араһынан ҡоштар үтеп китә. Кисәге кеүек бөгөн дә, оҙон ҡанаттарын һелтәгәндә шомло тауыш сығарып, ҙур бер ҡош осто.

Ҡояш хәҙер ағас баштарын яҡтырта, тимәк, көн тыуған. Үҙенең ояныуынан һуң күпме ваҡыт үткәнен ҡыҙ белмәне, урман эсендә үҙенең күпме йөрөгәнен дә самалай алманы. Ҡай саҡ былай йөрөүе әллә ҡасандан бирле бара һымаҡ, кем белә, бәлки, ул гел генә ошолай аҙашып, әйләнгеләп йөрөгәндер, ә уның ауылдағы бала саҡ тормошо, атаһы, һеңлеһе икенсе донъяла, икенсе тормошта булғандыр — ул тормош хәҙер онотола ла башланы. Улар барыһы ла, бәлки, төшөндә генә булғандыр?.. Хәйер, аҡылы менән аңлай ҡыҙ: урманда ул бер генә төн үткәрҙе, тимәк, уның өйҙән китеүенә икенсе көн бара. Асығыуҙан, арыуҙан уның аяҡтары атламай башланы, күҙ алдары ҡараңғыланды, башы әйләнергә тотондо. Бара торғас, ул ҡолап китте. Шулай оҙаҡ ятыр ине, тормаҫ та ине — тоноҡлана башлаған аңы аша бәләкәй генә өмөт уянды: урман алды, урман ауыҙы бына-бына ғына тора, ул яҡында, Гөлнара хәҙер килеп сығырға тейеш... Атаһы урман ҡыҙырып уны эҙләй, оҙаҡламай тауышын да ишетәсәк. Мәрзиә апаһы ла эҙләй, бөтә ауыл эҙләй, тик әлегә улар йыраҡ, уның янына килеп етә алмайҙар. Ҡыҙ ҡалҡына, бер нисә аҙым атлай ҙа йығыла, йәнә тора, йәнә атлай һәм туҡтауһыҙ шыңшый... Тағы ҡолап китә, йөҙө менән ниндәйҙер үләнгә төртөлә, унан яй ғына арҡаһына әйләнеп ята. Бейек-бейектә яҡты күк көмбәҙе йәйелә, тора-бара Гөлнараға ул тәрән соҡорҙа ятҡан кеүек булып китә, ә бөтә тормош, ауыл, ундағы кешеләр — бөтәһе лә шунда, күктә йөрөй төҫлө, унан, бейектән, уны бер кем дә күрмәйәсәк, тапмаясаҡ, тартып сығармаясаҡ. Бынау түбәнлектән шунда күтәрел ине лә бейектән урман алдын, ауылды, бөтә тирә-яҡты күр ине... Шулай уйланып-хыялланып ята ҡыҙ, кескәй йөрәгенең тибеүен ишетә. Хәҙер инде торғоһо ла килмәй, хәле лә бөткән, әммә урман ауыҙы, асыҡлыҡ ошо тирәлә генә булырға тейеш, тигән өмөт уны яңынан аяҡҡа баҫтыра. Баҫтыра ла йәнә алға этәрә... Асығыуҙың сигенә еткән ҡыҙ ниндәйҙер үләнде өҙөп алды ла уның тәмһеҙ һабағын сәйнәргә тотондо, әммә ул ифрат әсе булып сыҡты: ауыҙын ҡурҙы, төкөрөргә елем һымаҡ йәбешкәккә, ҡуйыға әйләнде. Күрәһең, үләндең ашарға ярамағаны эләккәндер — Гөлнара сирылып уны кире төкөрҙө лә башҡаса ашарға ынтылманы.

Бер мәл уға исемен әйтеп ҡысҡыралар һымаҡ ишетелеп ҡалды. Ҡатын-ҡыҙ тауышы ине. Ул был тауышты аяҡ аҫтындағы үлән ҡыштырлауы аша ишетте лә ҡапыл туҡтаны, таш кеүек ҡатып ҡалды, шатлыҡтан кескәй йөрәге һикереп-һикереп ҡуйҙы, әммә тауыш бүтәнсә ҡабатланманы. Бер аҙ торғас, аяҡтарын саҡ һөйрәп ҡуҙғалды, аяғы аҫтында үлән ҡыштырлай ғына башлағайны — йәнә «Гөлнара!» тигән тауыш яңғыраған дай булды. Яҡында ғына ҡысҡыралар ине, ул барған яҡта, ҡаршылағы, ана, теге ағастар артында. Ҡыҙ яңынан шып туҡтаны — йәнә тынлыҡ. Ишетелер-ишетелмәҫ һайыҫҡан шыҡырлауы, япраҡтар шауы ишетелә. Гөлнара ҡапыл йән асыһына ҡысҡырырға тотондо: ишетһендәр, уның быndалығын белһендәр. Үҙе ҡатын-ҡыҙ тауышы килгән тарафҡа атланы. Ауыр итеп, көскә-көскә генә үтте ул бер нисә тиҫтә аҙымды — бейек үләндәр аша, йығылған ағастар аҫтынан, тап булған ваҡ ҡыуаҡлыҡтарҙы урай-урай атланы. Әммә тоҫмаллаған ағастар артында бер кем дә булмай сыҡты. Ул ары атланы һәм... йәнә үҙен саҡырған ҡатын-ҡыҙ тауышы ҡолағына салынды. Ул был юлы ла яуап итеп бар көсөнә ҡысҡырҙы ла шул йүнәлешкә өҫтөрәлде.

Ҡояш урман түбәһендә ине, нурҙары, ҡуйы япраҡтар аша үтеп, йәшел ергә ҡаҙала. Ҡай саҡ йылы нурҙар сәстәре туҙған башына ла төшә, йөҙөнә ҡағыла, ҡыҙ уны кемдеңдер наҙлы, тынысландырғыс ҡағылышы һымаҡ күрә, әйтерһең дә, ниндәйҙер ҙур, ихлас йән эйәһе үҙенең ярҙамға мохтаж балаһын хуплай, өмөтләндерә, борсолма, һине барыбер табасаҡтар, тип шыбырлай...

Был көндө «Маяҡ» колхозының башҡа өс ауылында ла Ҡоҙашта ҡыҙ бала, көтөүсе Фәйзулланың ҡыҙы юғалғанлығын беләләр ине инде. Ишеткәндәрҙең һәр ҡайһыһы был ҡайғы тураһында үҙенсә уйланды, көндәлек эш, мәшәҡәттәр араһында был хәл хаҡында үҙенсә фекер йөрөттө.

— Ҡоҙашта биш йәшлек ҡыҙ бала аҙашҡан, ти бит. Урманға киткән дә ҡайтмаған, — тип һүҙ башланы киске сәйгә ултырғас бер апай, ҡайғылы яңылыҡ ишетеүҙән еңелсә тулҡынланып, ә яңылыҡ уның ғәҙәти көндәлек мәшәҡәттәрен, юлға һалынған ҡылыҡтарын боҙа ине, һәм кемгәлер килтергән оло ҡайғы хаҡында үтә еңел һөйләйем түгелме һуң, тип оялыуҙан көрһөнөп, былай тип өҫтәгән булды: — Йәл инде меҫкен, үлеп ҡуйһа, ата-әсәһенә оло хәсрәт.

— Табырҙар әле, эҙләйҙәр, ти бит, йыраҡ та китмәгәндер, ҡыш көнө түгел, — тип эләктереп ала ире.

— Бөгөн көнө буйы эҙләгәндәр, ти бит, тапмағандар.

— Тимәк, насар эҙләгәндәр.

Йәки йәш әсә үҙенең биш-алты йәшлек малайҙарына былай ти: — Бына һеҙҙең кеүек бәләкәй ҡыҙыҡай урманда аҙашҡан. Һеҙ ҙә көнө буйы йылға буйында юғалып йөрөйһөгөҙ, — ҡайғырыуҙан бигерәк шатлыҡтан әйтә, сөнки уның балалары иҫән-һау, береһе лә юғалмаған, тәрән итеп көрһөнә. — Алла һаҡлаһын, Хоҙай күрһәтмәһен...

Ә эңер төшкәс, әгәр инде көн арыу булһа, кешеләр берәйһенең ҡапҡа төбөндәге эскәмйәгә йыйыла, бригада эштәре, бесән, сәйәсәт хаҡында төрлө хәбәр, ләстит араһында юғалған ҡыҙ тураһында ла һүҙ сыға.

— Юҡ, юғалмағандыр, алып киткәндәрҙер, — ти араларынан берәүһе. Уға ҡыҙҙың урманда аҙашыуы үтә ябай ваҡиға күренә, тормоштоң осраҡлы хәлдәрен барыһын да яҙмыш уйнауы йәки насар бәндәләрҙең этлеге тип ҡабул итә. — Ауылдары аша машина үтеп киткән, тип әйтеп торалар ҙаһа!

Был фекер менән күптәр ризалаша, быға аңлатма ла табыла:

— Балаһыҙ булғандарҙыр. Детдомдан бала алған кешеләр ҙә бар, ти бит.

— Ҡараусыһыҙ, яңғыҙ йөрөгән ҡыҙҙы күргән дә инде, алдап үҙенә саҡырып килтергән дә ултыртып алған да киткән.

— Хәҙер детдомдан уҡ алалар, ти бит. Бала үҙенең атаәсәһе түгеллеген белмәһен өсөн шулайталарҙыр инде. Берәй иҫәр гулять һалдырып йөрөй ҙә таба, шунан баш тарта, роддомда ҡалдырып китә.

— Аптыраҡ, шул ҡәҙәре йонсоп тапҡан баланан нисек баш тартырға кәрәк икән? Таш йөрәклеләрҙер ул. Әстәғәфирулла...

— Аптырама. Йәштәр хәҙер ана нисек китте. Иман да юҡ, оят та юҡ. Ҡалала бит бала урынына эт тоталар, тип һөйләйҙәр.

— Һөйләмә инде! Беҙ генә ул, иҫәрҙәр, бишәр ҙә, етешәр бала табып ултырҙыҡ.

Шулай һөйләште әбей-һәбей, ҡатын-ҡыҙ, аҙаҡтан шундай уртаҡ фекергә килделәр: әгәр ҙә баланы ысынлап та шул машиналағы кеше үҙенә ҡыҙ итеү теләге менән алып киткән икән, ул ҡәҙәре лә оло бәхетһеҙлек түгел — ҡыҙҙың

атаһы барыбер ҙә уны балалар йортона тапшырырға йыйынған икән...

Тау, йылға буйы туғайлыҡтары яғынан, ауылға йәбешкәк ҡараңғылыҡ шыуышты. Туғай-болондарға, һаҙлыҡлы, дымлы урындарға һоро төнгө томан ятты, июль төнөнөң тынлығы йоҡоло ер өҫтөн ҡапланы. Ауыл урамдарын да, ихаталарҙы ла, ҡапҡа төптәрен дә — хатта кеше йәшәгән урындарҙы ҡараңғылыҡ менән бергә буш яландарҙан, тау араһы үҙәндәренән, төнгө урмандарҙан килгән ниндәйҙер үле, шомло ҡырағайлыҡ баҫты. Эскәмйәләрҙәге хәбәр туҡталды, ундағы кешеләр өйҙәренә таралды, йомшаҡ мендәрҙәргә ятты, үҙҙәренең тормоштарын йылы одеялдар аҫтына йәшерҙе лә көндәлек ығы-зығынан, мәшәҡәттәрҙән, эштәрҙән, уй-хәсрәттәрҙән ситләште. Ул кешеләрҙең бик һирәктәре генә өйөнән, кешеләрҙән алыҫта, ҡырағай урман эсендә, томан араһында, һыуыҡта йөрөгән бәләкәй кешенең ҡыл осонда торған ғүмерен күҙ алдына килтерә һәм, уның урынына үҙен ҡуйып ҡарап: «Аллам һаҡлаһын!» — тип шыбырлай ине.

Ҡоҙаш ауылында бер ҡыҙҙың юғалыуы хаҡында «Министр» белмәй ине әле. Дөрөҫөрәге, был хәл тураһында бер «Министр» ғына хәбәрҙар түгел ине. Сәбәбе йыраҡлыҡтан, Пожар тауының теге яғында, ауылдың иң ситке өйөндә йәшәүенән генә килмәй, ә өйөндә ҡатын-ҡыҙ — ауыл яңылыҡтарын көн дә килтереп тороусы ике аяҡлы урам гәзите юҡ. Ул, етмәһә, ҡолаҡҡа ла ҡатыраҡ, шунлыҡтан урамдағы осраҡлы хәбәрҙәрҙе тыңлай алмай. Ҡыҙ тарыған бәлә ҡолағына килеп салынһа, ул мотлаҡ рәүештә янып-көйөп китер, тыныслығын юғалтыр ине — ауылда берәй төрлө тәртипһеҙлек күрһә йәки берәйһе менән килеп сыҡҡан бәхетһеҙлек хаҡында ишетһә, ул бер ваҡытта ла битараф ҡала алмай.

«Министр» — ҡушаматы, ә исеме — Хафиз йәки, йәшерәк ауылдаштары атағанса, Хафиз ағай. Уға хатта бер туған һеңлеһе лә «Министр» тип өндәшә. Ә йәштәр уның ысын исемен бөтөнләй белмәй. «Министр» ағай, ти ҙә ҡуялар.

Хафиз ҡартты ауылдаштары ниңә улай «Министр» тип атағанын йүнләп бирәү ҙә аңлата алмаҫ. Берәүҙәр, ниндәйҙер йыйылышта, һәр колхозсы министр һымаҡ уйларға, фекер йөрөтөргә тейеш, тип сығыш яһағанынан һуң йәбеште ул ҡушамат, ти; икенселәр, Хафиз ғүмер буйы

ауылдағы, районлағы тәртипһеҙлектәр тураһында төрлө министрлыҡтарға хаттар яҙҙы, тип иҫбатлай; өсөнсөләр инде уға, бөтөнләй аҡылынан яҙған, тип ҡул һелтәй: йәнәһе, ул үҙен ҙур ҡалала, ҙур кабинетта, ҙур өҫтәл артында ултырған министр һымаҡ хис итә һәм бөтә мәсьәләләрҙе, проблемаларҙы хәл итә.

Һуғыш Хафиздың тормошо, яҙмышы буйлап утлы өйөрмә булып уҙҙы — тәнен йәрәхәтләне, рухын көйҙөрҙө. Йәш сағында ул ныҡ таҙа егет ине, шунлыҡтан исеме лә, дөрөҫөрәге, ҡушаматы ла икенсе ине — «Хафиз баһадир» йәки «Хафиз бәһлеүән». Һабантуйҙарҙа бил бирмәҫ беренсе көрәшсе булды. Кем генә маташманы уны еңергә! Икенсе райондарҙан киләләр ине хатта. Бер йыл ҡаҙаҡ далаларынан үҙҙәрендә еңелеү белмәгән Ташбаев тигән берәү килде. Ауылдаштарының дәртләндереп ҡысҡырыу тауыштары аҫтында уны ла ике ҡабырғаһына һала Хафиз бәһлеүән. Еңелгәне өсөн Ташбаев Хафизды Верхнеурал юлында аңдып тороп (уныһы баҙарҙан ҡайтып килгән икән), бысаҡ менән ташлана. Әммә Хафиз ябырылған ҡаҙаҡтың яңағына шундай итеп тондора — теге аңын юғалтҡан да ҡуйған. Хафиз уны әләктергән, дилбегә менән бәйләгән, эйәренә ултыртып тегенең атын ҡаҙаҡ далаһы яғына ҡыуған. Ул йылдарҙа ошондай легенда йөрөй ине.

40-сы йылда армия хеҙмәтен тултырып ҡайтҡас, яңғыҙ әллә ни оҙаҡ та йөрөмәне, Рәхмәтулланың Сания исемле ҡыҙын алды. 17 йәшлек Сания уға бала табып та өлгөрмәне, һуғыш башланды. Хафиз һуғышҡа китте. Тере ҡайта алырмын, тигән өмөтө юҡ ине. Смоленск янында ҡамауҙан сыҡты, ҡышын Мәскәү янында аяғына яраланды, госпиталдә ятты, унан — йәнә часть. Запас полктан һалдат теплушкаһы уны тағы фронтҡа илтте. Сталинградта икенсегә яраланды, был юлы ла аяғына, юрамал кеүек, был юлы ла — уңына. Бәхете, һөйәгенә теймәгәйне — бер айҙан һуң Хафиз йәнә пехота сафында атлай ине инде.

Бер мәл ҡапыл ғына ҡатынынан хат туҡтаны бит. Хафиз борсола, уйлана башланы, тартмаған көйө тәмәкегә йәбеште, тыуған яҡтарына бер-бер артлы һалдат өсмөйөштәре оҙатты: нишләп яҙмайһығыҙ, өйҙә нисек? Ниһайәт, хат килде. Әсәһе яҙған, дөрөҫөрәге, уның әйтеп тороуы буйынса һеңлеһе яҙған. «Белдергем килмәгәйне лә, нишләйһең, ҡасан да булһа әйтергә тейешмен. Киленебеҙ был яҡты донъянан китеп барҙы. Яҙ көнө үлде. Мэтэсҡа тракторсыға уҡырға ебәргәйнеләр. Уҡып бөткәс, тракторын

мэтэстан ауылға ҡуҙғатҡан. Анау һайыҫҡан сауҡалығы янындағы текәне башҡа ҡатындар имен-аман үткән, ә Санияның тракторы артҡа киткән дә ауған. Сибәр киленебеҙ тере кеүек ята ине тракторы янында. Бер ниндәй яра-йәрәхәте юҡ тәнендә, ҡурҡыуҙан меҫкендең йөрәге ярылғандыр инде...»

Нур һүнде Хафиздың күҙҙәрендә, йөҙө ҡарайҙы, дегет кеүек ҡара сәстәре араһында аҡ һыҙаттар барлыҡҡа килде. Тешен ҡыҫып эстән янды. Йәшәһә лә, үлһә лә уға хәҙер барыбер ине — үҙенең шундай ҙур кәүҙәһен немец пулялары, мина ярсыҡтары аҫтына ҡуйып, аңлы рәүештә үлем эҙләне, әммә дошман тимере гел ситкә осто, ҡарышҡан кеүек, теймәне.

Шулай ҙа немец минаһы уны Днепрҙа ҡыуып етте. Ярсыҡ башын ярып ебәрҙе, яранан ҡара ҡан аҡты... Бер ҡырағай күренештәр менән тәмле һаташа-һаташа, бер госпиталдең ярлы күренештәренә ҡайта-ҡайта, Хафиз әллә нисә ай ҡуҙғала ла алмай ятты, шунан инвалидлыҡ биреп, өйөнә ҡайтарып ебәрҙеләр. Яраһы йөнһөҙ тире менән тартылды, ҡырылған, зәңгәрһыу баш һөйәгендә пеләш ялтыраны, пеләш аҫтында — тере мейе тын ала. Саҡ ҡына борсолһа ла, башы ауыртыр булып китте, тирә-яғы ҡараңғылана, баштүбән йөрөргә тотона.

Хафиз ирҙәр булмағанлыҡтан етемлек, үлем тынлығы хөкөм һөргән ас ауылға ҡайтып төштө. Әсәһе Санияның үлеме тураһында яңынан һөйләне, уның тракторы янында тере һымаҡ ятыуын ҡат-ҡат әйтте. Ҡатынының ҡәберенә барҙы Хафиз, һығылып иланы, ҡайғыһын әсе бал менән йыуа-йыуа көн итә башланы.

Кәүҙәһе һаман мөһабәт ине әле — сәсе ҡырып алдырылған башы, үгеҙҙеке ише ҡалын елкәһе менән ул әүәлгесә бәһлеүән, һабантуйҙарҙа ғына көрәшеп йөрөрлөк. Әммә һабантуйҙар хәҙер үткәрелмәй, үткәрелгән хәлдә лә, Хафиз көрәш майҙанына сыҡмаҫ ине. Хәҙер уның ғүмерен һаҡлаусы көс юҡ, йоҡа ғына зәңгәрһыу тире аҫтын бер нәмә лә һаҡламай һымаҡ. Малай-шалай ҡай саҡ һорап та ҡуя: «Хафиз ағай, яраңды күрһәт әле?» Бәһлеүән кәпәсен сисә, эйелә. «Тотоп ҡарарға яраймы?» — Малай-шалай бармаҡтары менән тын алған тирене һаҡ ҡына тотоп ҡарай һәм ҡыуана, аптырай, тел шартлата.

Ағас эшенә бик оҫта ине атаһы. Һуғышҡа тиклем үк әле Хафиз уға бура бурау, урыҫ ҡапҡалары яһау эшендә ярҙам итә торғайны. Ҡайтҡас, Хафиз йәнә балтаға, бысҡыға,

ҡасауға тотондо, тора-бара быныӊ ғүмерлек икмәге булырына төшөндө. Атаһы менән эшләне. Һуғыш йылдарында иҫкергән, ауған һыйыр, быҙау аҙбарҙарын төҙәттеләр, яӊыларын төҙөнөләр. Бигүк еӊелдән булмаһа ла, тыныс, бер төрлө ине эштәре, балта-бысҡыға тотоноу, өрлөк, бүрәнәләр күтәреү өсөн Хафиздыӊ көсө бар ине әле.

Ауыл артындағы Йайыҡ һымаҡ, ваҡыт та һиҙелмәй генә аға торҙо. Һуғыш бөттө, тере ҡалған ир-егеттәр ҡайтты, аслыҡ, емереклектән һуӊ ауылдағы тормош яйлап булһа ла рәтләнә башланы. Әлбиттә, үтә әкрен барҙы ул үҙгәреш, яланда ла, фермала ла күберәк һаман шул уҡ ҡатын-ҡыҙ бил бөктө, әммә икмәк бар ине инде.

Илленсе йылдарҙа ауыл ныҡлап төҙөкләнеүгә йүнәлеш алды. Һуғыштан ҡайтҡан ирҙәр, үҫеп еткән һәм армияла хеҙмәт итеп ҡайтҡан егеттәр әллә ҡасан һалынған бәләкәй, һуҡыр өйҙәр урынына биш стеналы бейек йорттар һалырға, ихатаны урыҫ ҡапҡалары менән биҙәргә тотондо. Мәүлетбаев Хафиз оҫта барыһына ла кәрәк ине. Кеҫәһенә аҡса керҙе, күп эсмәне, эсһә, Волганан алып Днепрға ҡәҙәр үҙе менән бергә атлаған һалдаттарҙыӊ «Ой ты, Галя, Галя моло-дая...» тигән йырын һуҙҙы, йә мәрхүм ҡатынын иҫенә төшөрөп һыҡтап иланы... Әсәһе, өйлән, тип әйтә башланы — һуғыштан һуӊ ауылда тол килендәр күп ине — әйҙә, иркенләп һайлап ал. Әсәһенеӊ һайлағаны ла бар — Камалетдиндыӊ таҙа, ҡыйыу, телдәр, баҫҡан ерендә ут сығарып йөрөүсе ҡыҙы Хәлиҙә. Әммә Хафиздыӊ йөрәгендә бүтән ҡатын-ҡыҙ өсөн урын юҡ, тәне лә уларҙыӊ наҙына битараф, үҙенеӊ дә уларҙы иркәләргә теләге тыумай. Унан килеп, тишек баш менән ниӊә миӊә ғаилә ҡорорға, атай менән әсәйҙә йәшәүе ҡыйын түгел, тип фекер йөрөттө.

Йылға аҡты, ваҡыт үтте. Ваҡыттыӊ да йылға кеүек тыныс урындары, етеҙ һәм ҡояшлы ағымдары, ҡара сөӊгөлдәре бар. Апаһы кейәүгә сыҡты, атаһы мәрхүм булды, әсәһе ҡартайҙы, Хафиз үҙе лә олоғайҙы. Ә ул һаман яӊғыҙ. Оҙаҡламай кешеләр уныӊ сәйер яҡтарын шәйләй башланы. Күршеләре йәки апаһы керә, ә ул инеүселәргә бөтөнләй иғтибар итмәй бер нөктәгә текәлеп бағана кеүек ултыра, әйтерһеӊ дә, ниндәйҙер тәрән уйға батҡан йәки урам буйлап бара һәм үҙ-үҙе менән һөйләшә, мөгөрләй: «Ҡайҙа барабыҙ? Ҡайҙа?! Юҡ, дөрөҫ бармайбыҙ!» Балта эшен ташланы, һыйырын һатты, инвалидлығы өсөн алған пенсияһына ғына көн күрә башланы. Уныӊ өсөн картуфты

Зөһрә апаһы ултыртты, сәйлек һөттө лә ул индерҙе. Танау аҫтынан мөгөрләп йөрөүе бер нисә йылға һуҙылды, шунан ул ҡапыл үҙгәргәндәй булды; уның көрәшсе, балта оҫтаһы булған ҙур кәүҙәһенә, әйтерһең дә, икенсе рух кереп ултырҙы. Ҡасандыр ҡунаҡҡа йөрөр, байрамдарҙа кейер өсөн алған, әле лә яңы пинжәгенә сәй һауытында ятҡан орден-миҙалдарын таҡты, яурынына ҡырылып бөткән иҫке дермантин сумкаһын аҫты, унда блокнот, ручка-ҡәләмдәр һалып колхоз, бригадалар буйлап сығып китте. Фермаларға барҙы, йәйге көтөүлектәргә, баҫыу-яландарға һуғылды, сит ихаталарға керҙе: нимәлер һорай, тикшерә, күҙәтә башланы һәм танау аҫтынан мөгөрләй-мөгөрләй күргәнен блокнотына теркәне.

— Нимә эҙләйһең? — тип һораны кешеләр.

— Эҙләгән әйбер һинең аҡыл етә торған нәмә түгел, понял? — тип яуапланы Хафиз (һәр ике-өс һүҙ аша хәбәренә шул урыҫ һүҙен ҡыҫтыра торған ғәҙәте бар).

— Буш йөрөгәнсе, миңә мунса бурап бирер инең.

— Бында һинең мунсаңдан мөһимерәк эштәр бар әле, понял?

— Понял, понял.

— Аңланың буғыңды! — тип әрләште Хафиз. — Контра кире ҡайтты, һәр ерҙә ҡоротҡослоҡ.

Хафиз йыйылыштарҙа сығыш яһарға әүәҫләнеп китте. Мотлаҡ һүҙ һорар булды. Һүҙ бирҙеләр, тыңланылар. Урындан ғына һөйләмәне, ә трибунаға сыҡты, хәбәрен гел генә: «Ағай-эне, һеңлекәштәр!» — тип башлай. Үҙенең таушалып бөткән блокнотына ҡарай-ҡарай тәнҡитләргә тотона: көтөүсе Фәйзулла иҫерек көйө эйәрҙән йығылып төшкән, үҙе йоҡлаған арала һыйырҙар һоло баҫыуын тапаған; һөт заводы заведующийы Сәлиха көн дә май, ҡаймаҡ алып ҡайта өйөнә; кисә Аҡ ташта эсерелмәгән быҙауҙар баҡырышҡан; ДДТ колхоз ҡортон ҡоротҡан һәм ағастарҙы йыҡҡан; медпункттағы фельдшер ҡатын бысраҡ халатта йөрөй һәм бер ниндәй ҙә дарыу юҡ; шул мәсьәләне лә уйларға кәрәк: ниңә йәйге селләлә, йылды көн туйҙырған саҡта, ауылға араҡы килтерәләр? Был бит — ҡоротҡослоҡ! «Ағай-эне, һеңлекәштәр, һеҙ барығыҙ ҙа Асия ҡарсыҡты беләһегеҙ. Һикһән йәшкә етеп бара, ире менән берҙән-бер улы һуғышта баштарын һалды, үҙе бөтә ғүмерен колхозда эшләп үткәрҙе, һөрҙө, сәсте, тырматты, иртә яҙҙан ҡара көҙгә тиклем ялан аяҡ йөрөнө, ҡыш тишек-тошоҡ сарыҡта, фуфайкала булды, йә фермала, йә ураҡта эшләне.

Хәҙер, ҡартайғас, кәрәге ҡалмағас, барығыҙ ҙа уны оноттоғоҙ. Берәйегеҙ керҙәнегеҙ, емерелеп бөткән өйөндә ул нисек көн итә, тип ҡыҙыҡһынғанығыҙ бармы? Түбәһе емерелеп төшөп, уны баҫһа? Шул ҡарсыҡҡа яңы өй һалып бирергә колхоздың хәле юҡмы ни? Ағай-эне, һеңлекәштәр, беҙ барыбыҙ ҙа министр һымаҡ уйларға, министр һымаҡ яуап бирергә тейеш...»

— Дөрөҫ! — тигән тауыштар ишетелде залдан. — Хаҡ һүҙҙәр һөйләйһең, Хафиз ағай.

Ваҡыт үтә торҙо, Хафиз колхоз буйлап йөрөүен ташламаны, яҙҙы, йыйылыштарҙа сығыш яһаны, тәртипһеҙлектәрҙе әрләне, тәнҡитләне, идараға барып тауыш күтәрҙе, ҡай саҡ иркен, таҙа йәшәгән колхозсылар ихатаһына күҙ һалып, танау аҫтынан мөгөрләнеп йөрөнө: «Кулактар кире ҡайтты, кулактар». Берәүҙәр уны хаҡлыҡ эҙләүсе, дөрөҫ һөйләүсе тип иҫәпләне, икенселәр башындағы яраһына ишараланы, йәнәһе, ағайҙың ҡыйығы ҡыйшайған. Ҡыҫҡаһы, сәйерҙәргә, реаль тормошта түгел, ә ҡайҙалыр һауала осоп йөрөгән бер төрлөрәк кешеләргә күнеккән һымаҡ, Хафизға ла күнектеләр, иң мөһиме — ауылдаштары уның әйткәндәре менән килеште: «Дөрөҫ һөйләйһең, ағай, дөрөҫ». Пинжәге ҡырылды, орден-миҙалдары ялтырағын юғалтты, кәпәсе уңды, ҡыҫҡа алдырылған сәсе, елкәһендәге үҫентеләре ағарҙы, хатта кәүҙәгә лә бәләкәйләнеп ҡалған кеүек булды Хафиз. Оҙаҡ йылдарға һуҙылған «эшмәкәрлегенән» файҙа шул булды — Асия ҡарсыҡҡа йорт һалдырыуға иреште.

Тора-бара «Министр» район түрәләренә йөрөргә тотондо. Тәүҙә секретаршалар уны «үҙенә» индермәне, эше күп, ваҡыты юҡ, кеше бар, мөһим йыйылыш тинеләр, әммә Хафиз бирешә торғандарҙан түгел, һәре кеше, ҡыйыуланып йәки, бәй, мин нимә юғалтам һуң әле, тип уйлай ҙа секретаршалар эргәһенән төрлө дәрәжәләге түрәләр янына инә лә китә. Шуныһы ғәжәп: уның менән юғары кабинет хужалары ла килеште: «Дөрөҫ һөйләйһең, ағай, дөрөҫ, мотлаҡ хәл итербеҙ». Әммә бер нәмә лә үҙгәрмәне, хәл ителмәне, шунан «Министр» өлкәләге министрлыҡтарға, гәзиттәргә яҙырға тотондо. Әммә яуап килмәне, әйтерһең дә, улар зәңгәр почта йәшнигенән бөтөнләй алынманы, шунда ятыуын дауам итте. Дөрөҫ, уларҙың берәүһенә, «Гараж мөдире Сәйфуллин бик ҡалын йәшәй, машина алды, ниндәйҙер аҡсаға бетон гараж төҙөнө» тип яҙғанына, яуап булды: ҡаланан ниндәйҙер комиссия килде.

Әммә гараж мөдире һыуҙан ҡоро сыҡты, документтар килтерҙе: машина законлы рәүештә үҙ аҡсаһына алынған, эш хаҡынан йыя барған, баҙарға ит сығарып һатҡан, гараждың да осо осҡа ялғана...

Дүртенсе бригадала көтөүсе Фәйзулланың ҡыҙы юғалыуын белгән көндө иртәнсәк «Министр» өлкә үҙәгенә ике хат яҙғайны. Береһенең йөкмәткеһе былай: ауылда ҡайһы берәүҙәр магазиндан һатып алған икмәкте малға ашата. Икенсеһендә һүҙ колхозсыларҙың шәхси малына иң алама көтөүлекте бүлеүҙәре, ә бында үлән тапалып бөтөүе, тупраҡҡа тиклем ашалыуы хаҡында ине. «Министр» ике хатын да почта йәшнигенә төшөрҙө лә ике ҡатындың — Асия ҡарсыҡ менән үрге урамда йәшәгән һыйыр һауыусы, эскесе Сабираның — хәл-әхүәлен белешергә китте. Колхоз Асияға яңы йорт һалып бирһә лә, башын толь менән генә япҡайны. Толь иҫкерҙе, тишелде, унан һыу үтә башланы. Хафиз тәүҙә уға керҙе. Ҡарсыҡ һуңғы мәлдәрҙә яңылыша башлағайны, улым һуғышта үлмәгән, оҙаҡламай ҡайтасаҡ, тип көтә ине. «Министр» тегеһен-быныһын һорашты, һаулығын белеште, складтан толь киҫәге һорап алып ҡыйыҡтағы тишекте ямарға вәғәҙә бирҙе. Сығырға ғына йыйынғайны, Асия ҡапыл:

— Һин Англияның ҡайһы яҡта икәнен белмәйһеңме? — тип һораны.

— Диңгеҙ аръяғында, бынан йыраҡ, — тип яуапланы «Министр». — Англия һиңә нимәгә кәрәк булды һуң әле?

— Ҡайһы берҙә шулай тип тә уйлайым: улым шул Англияла түгелме икән?

— Бик ихтимал. Хат яҙайыммы һуң?

— Яҙ әле, яҙ, йөрәгем!..

«Министр» ҡарсыҡҡа ҡойонан ике биҙрә һыу килтерҙе лә Сабираға йүнәлде.

Сабира — ирҙәре Волганан алып Эльбаға тиклемге аралыҡтағы киң яландарҙа башын һалған ҡатындарҙың береһе. Әрһеҙ, егәрле һыйыр һауыусы ғүмер буйы яшыҡ һыйыр имсәгенән дәүләткә бик кәрәк һөт һурҙы, ҡышын, йәйен саҡрым-саҡрым бысраҡ кисеп резина итектә йөрөнө, тау-тау тиреҫ, тиҙәк, силос ташыны, полиартрит менән ауырыны, ә ҡартлыҡ көнөндә эскегә һалышты...

Ҡасандыр колхоз һалып биргән, әле бигүк иҫке булмаған өйҙөң тәҙрәләрендә ҡорғандар юҡ, сәскәләр ултырмай. Ишекте асыу менән «Министрҙың» танауына әсеһаҫыҡ, серек еҫ бәрелде. Бысраҡ иҙәнгә иҫке сепрәктәр

ташланған; иҫке, ҡырылған клеенкалы өҫтәл өҫтөндә йыуылмаған һауыт-һаба араһында буш араҡы шешәһе ултыра. Иҫерек Сабира майланған, төҫөн юғалтҡан одеял өҫтөндә йоҡлап ята. Күтәрелгән итәгенән полиартритлы тубыҡтары күренә. Күрәһең, кисә пенсия алған һәм иҫергәнсе эскән, ә бөгөн баш төҙәткән. Пенсияһын эсеп бөтәсәк, унан инде өй беренсә йөрөп бал һоранасаҡ. Хафиз ҡатындың күлдәген тартты ла яурынына төрттө.

— Тор, давай, нимә көпә-көндөҙ йоҡлап ятаһың?

Сабира мышнаны, ауыр итеп тын алды, ҡабырғаһына боролдо, күҙен асты, тоноҡ ҡараштары менән Хафизға ҡараны.

— Нимә?

— Тағы эстеңме? Тағы дауаланырға ебәрәйемме?

— Ебәр, — тип яуапланы ҡатын битараф ҡына.

Тороп ултырҙы. Таралмаған, әллә ҡасан үрелгән һоро сәстәре башында иҫке, саңлы йөн кеүек тәртипһеҙ ята. Үҙенән араҡы еҫе аңҡый.

— Өйөңдө әҙерәк йыйыштырыр инең, исмаһам, — тип мөгөрләне Хафиз. Үҙе бысраҡ һауыт-һабаны шкафҡа алып ҡуйҙы. Ҡойоға һыуға барып килеп, иҙән йыуырға тотондо.

— «Министр», һин миңә башҡа килмә, — тине байтаҡ өндәшмәй ултырғандан һуң Сабира. — Әтеү кеше, һөйәркәһе, тип уйлар.

— Бик кәрәгең бар ине. Һинән ниндәй һөйәркә?

— Улай булғас, нимә тип киләһең һуң?

— Йәлләп киләм һине, иҫәрҙе.

— Мине ниңә йәлләргә? Эш уҙған инде. Аяҡ һуҙырға ла күп ҡалманы. Тапмаһалар, бәләкәй ҡыҙ йәл буласаҡ бына.

— Ниндәй ҡыҙ?

— Бәй, ишетмәнеңме ни? Магазинда бисәләр һөйләп торҙо: көтөүсе Фәйзулланың биш йәшлек ҡыҙы урманға киткән дә юғалған бит. Һаман таба алмайҙар, ти.

«Министр» юғалған ҡыҙ тураһында шулай белде, белде лә тамам тыныслығын юғалтты...

Кис булғансы, дөрөҫөрәге, төнгө ҡараңғылыҡ төшкәнсе барҙы ҡыҙ. Атларға хәле ҡалмағайны инде. Оҙаҡламай йығылды ла имгәкләргә тотондо. Уны һаман әлеге шул өмөт ҡыуа: урман ауыҙы яҡында, эргәлә генә. Гөлнараны йәнә лә бер уй етәкләй: үҙен эҙләргә сыҡҡандарына ышана. Ул туҡталмай илай, дөрөҫөрәге, үҙенә илаған һымаҡ тойола, ә ысынында иһә тауышы тамам бөткән, ҡарлыҡ-

ҡан, тамағынан сыйылдыҡ ҡына бер өн сыға, ифрат эскеһе килә, тамағы, теле кипкән, янып бара, шуғамылыр ҡолаҡ төбөндә һыу ағыуы ишетелеп тик тора: йылға унын эргәһендә, анау ҡайындар артында ғына кеүек; ул ныҡышмал рәүештә шунда шыуыша, тик унда шул уҡ ҡайындар, шул уҡ үләндәр менән ҡапланған ер булып сыға, ә шишмә тауышы тағы ла алыҫҡараҡ китә, ҡыҙ уны йәнә ишетә һәм йәнә шул тауыш килгән яҡҡа йүнәлә. Ул йәнә, хәҙер нисәнсе тапҡыр инде, үлән ашарға ниәтләнә, тик шешкән теле ирек бирмәй.

Тамам ҡараңғы төшкәс, ҡыҙ икенсе төн килгәнен аңланы, һыуыҡ, ҡурҡыныс төн; уны һаман тапмайҙар. Юйыла барган иҫ-аңын бер ҡурҡыныс уй телеп үтте лә, ҡотолоу өмөтө ҡалын стенаға бәрелде һәм селпәрәмә килде: уны бер кем дә эҙләмәй, иҫерек атаһы һаман йоҡлап ята, ә Мәрзиә апаһы унын ҡайҙа икәнен белмәй. Ул, көтөүсе Фәйзулланың ҡыҙы Гөлнара, ошо урманда үлә, әсәһе, бәләкәй себеш үлгән кеүек үлә. Бәләкәй себештең нисек үлгәнен хәтерләй әле ул, унын бер кемгә лә кәрәкмәгән тормошо нисек һүнгәнен хәтерләй: күҙҙәре тоноҡланды, ҡолап китте, ҡалҡынды, йәшәргә, тере ҡалырға тырышып йәнә ҡалҡынды, унан тағы йығылды, йығылды ла оҙаҡ, ауыр итеп үлде; йомшаҡ һары йөн менән ҡапланған бәләкәй генә кәүҙәһе тартышты, шунан нәҙек кенә аяҡтарын тарбаңландырып тынып ҡалды. Ә эргәһендәге әсәһе ҡытҡылдай-ҡытҡылдай тиреҫ, сүп-сар тибә, үлеп барған балаһына иғтибар ҙа итмәй, бөтөнләй битараф, әйтерһең дә, тынсыу ояла үҙе баҫып сығарған себеш түгел... Ошо хәлде лә күҙ алдына килтергәс, шуны аңланы Гөлнара: уны ташланылар, оноттолар, ул бер кемгә лә кәрәкмәй, был төндә лә урманда бер үҙе ҡала... Һәм унын ыуалсыҡ бала рухы һынды. Йығылды ла күҙҙәрен йомдо, йомғаҡ кеүек йомарланды һәм башҡаса күтәрелмәне. Ул себешкә, бөтә терееләр тарафынан кире ҡағылған, онотолған бәләкәй себешкә әйләнде...

Икенсе көндө дүртенсе бригада бригадиры Нәжип ҡыҙҙы эҙләүҙе ойоштора алманы. Иртәнсәк уға, ҡайның үлде, тип шылтыраттылар. Ҡайныһы үҙәк усадьбала йәшәй ине, олоғайғайны һәм күптән ауырый ине инде. Эске һыҙланыуҙарына түҙә алмай, төндәрен ҡысҡыра торғайны: «Ҡарсыҡ, үләм, духтырҙы саҡыр!» Ҡәйнәһе медсестра артынан сығып йүгерә, укол ҡартты бер аҙ тынысландыра,

ауыртыуын баҫа, әммә оҙаҡ та үтмәй, яңынан ҡысҡыра башлай: «Үләм!..» Ниһайәт, һыҙланыуҙарынан ҡотолған икән.

Ҡәбер ҡаҙғансы, табут әтмәләгәнсе, ярты көн үтеп тә китте. Ҡайныһын ерләгәс, Нәжип сварщик менән рәшәткә, обелиск яһау тураһында һөйләшеү өсөн МТМ-ға барҙы, унан өйөнә ҡайтыр алдынан (ҡатыны әсәләрендә ҡалды) колхоз идараһына һуғылырға уйланы. Унда кереүҙең әллә ни кәрәге лә юҡ ине, түрәләргә күренергә кәрәк, тип кенә фекер йөрөткәйне: бәлки, берәй төрлө әмер булыр. Дөрөҫөн әйткәндә, ул түрәләргә инергә бик яратмай ҙа. Ике ҡатлы идара бинаһына ул һәр саҡ тулҡынланыу менән аяҡ баҫа, әйтерһең дә, бында уны ниндәйҙер күңелһеҙлек, ҡайғы көтөп тора; аҫта, вестибюлдә, тәмәке, саң, ҡағыҙ еҫе аңҡый, кәнсәләрҙең ошо үҙенсәлекле еҫтәре Нәжипкә уйсан, етди, мөһим тормош булып күренә. Учреждениелар, ҡабул итеү бүлмәләре, оҙон коридорҙар, ихтирам менән ҡарарға мәжбүр иткән түрәләрҙең фамилиялары, инициалдары яҙылған дерматин ишектәр, машинкаларҙың туҡтауһыҙ тыҡылдауы, телефондан һөйләшеүҙәр, оҙон өҫтәлдәргә эйелгән битараф йөҙлө, күп тартыуҙан ҡарлыҡҡан тауышлы начальство, уларҙың урынбаҫарҙары — ҡыҫҡаһы, был тормош Нәжипкә аңлайышһыҙ, ят, һәм ул үҙен унда һәр саҡ ғәйепле, бәләкәй һиҙә.

Идараға ул үҙе булып, ҡабаланмай, үҙ-үҙенә ышанып барып инде, икенсе ҡатҡа күтәрелде, коридор буйлап атланы; председатель кабинетының ишеген күргәйне, кәүҙәһе бәләкәйләнде лә ҡалды, рухы һынды, үҙен түрә күҙе менән күрә башланы: эшендә әллә күпме етешһеҙлектәре, файҙаланылмаған мөмкинлектәре булған, һөҙөмтәлә үҙен ирләргә лә ирләргә тейешле дүртенсе бригада бригадирына әйләнде һәм ғәҙәт буйынса юғары тонда һөйләшеү көттө. Әммә Ильясов идарала булмай сыҡты. Был Нәжиптең кәйефен күтәрҙе. Парторг Наил бында ине, уның менән Нәжип үҙен тынысыраҡ, иркенерәк тоя, сөнки парторг — үҙ кеше, ошо ауыл кешеһе, һүҙ-хәбәр асыулы булһа ла, күңелгә ауыр ятмай, унан килеп, парторг ирләшмәй, көләмһерәп һөйләшә, эләктереп алырға, оялтырға тырыша. Парторг кабинетында «Министр» ҙа бар ине. Ҡарт алйот, урыҫтар әйтмешләй, һәр тишеккә бөкө. Нәжип икеһе менән дә ҡул бирешеп иҫәнләште, фуражкаһын систе, ултырҙы.

— Йә, эштәр нисек? — тип һораны парторг.

— Бына, ҡайны ҡартты ерләп киләм, — тип яуапланы Нәжип.

— Беләм, ишеттем, ҡайғыңды уртаҡлашам. — Наил йөҙөнә ҡайғылы һыҙат сығарҙы. — Ә юғалған ҡыҙҙы тәки таба алманығыҙмы?

— Кем эҙләгән һуң? Әле береһе, әле икенсеһе. Кисә кис урман буйлап йүгерешеп әйләндек, ҡысҡырҙыҡ-һөрәнләнек. Бар эҙләү шул. Бөгөн уны табыуы икеле, юғалыуына өсөнсө көн бит, бала түгел, оло кеше лә түҙә алмай, ҡысҡырырға тауышы юҡ, атлай ҙа алмай, берәй үлән араһында яталыр инде...

— Эх, егеттәр, егеттәр! — Парторг баш сайҡаны. — Яңыраҡ ҡына телевизорҙан биргән йырҙағыса килеп сыға инде: өй яна, ә мин ҡарап торам... Бар өмөт милиция эттәрендә.

— Ә ниңә һаман килмәйҙәр һуң?

— Бандиттарҙы тоталар. Элекке көн Буйдала магазинды талағандар — ҡыйыҡтан төшкәндәр, мейес мөрйәһен алғандар. Ә кисә ҡалала көпә-көндөҙ бер фатирҙы таҙартып сыҡҡандар. Бөгөн килергә вәғәҙә биргәйнеләр ҙә, һаман юҡтар. Аптыраҡ. Һинең бөгөн ҡайғылы көнөң инде, шулай ҙа егеттәрҙе өгөтләп-үгенеп ҡара әле, яҡтыла йәнә урманға барып әйләнһендәр.

— Ярар һуң... Тик бында бер момент бар. Беҙ кешеләрҙе бушҡа йонсотмайбыҙмы икән?.. Ҡыҙҙың аҙашҡанына хәҙер бер кем дә ышанмай, барыһы ла, машинаға ултыртып алып киткәндәрҙер, тип һөйләй. Ниндәйҙер әбей күргән. Фәйзулла үҙе лә эҙләмәй...

— Әгәр берәү ҙә алып китмәгән булһа, әгәр ул һаман урманда булһа? — тип «Министр» һүҙгә ҡушылды.

Хәбәргә мауығып уны бөтөнләй иҫенән сығарған Нәжип «Министр»ға бороллдо ла иғтибарлап уға ҡараны. Йәш сағында көрәшсе булған, тип һөйләйҙәр ине, хатта әле лә, олоғайған, сәстәре ағарған хәлдә лә, «Министр» бәһлеүән һымаҡ. Һуғыштан инвалид булып ҡайтҡан, балта оҫтаһы булды, унан эшен ташланы, ниндәйҙер сәйер кешегә әйләнде, аҡылына зәғифлек килде шикелле, хәҙер колхоз буйлап йөрөй, бөтәһен дә тәнҡитләй, бөтәһенә лә аҡыл өйрәтә, барыһының да өҫтөнән шикәйәт яҙа. Хәйер, уны күптән инде береһе лә етди ҡабул итмәй. Ҡырылған пинжәгенә төҫөн юғалтҡан ике орден, миҙалдар тағылған. Был ихтирам итергә мәжбүр итә, сәсе ҡыҫҡа ғына ҡалдырып алынған башының түбәһендә мина ярсығы тейгән пеләш тибә, тын ала, һикерә...

— Эҙләйбеҙ бит...

— Насар эҙләйһең! Һин атакаға барҙыңмы? Барманың. Ә бына мин күп тапҡырҙар барҙым. Ана шул атакаға, һуғышҡа барған кеүек эҙләргә кәрәк, понял?

— Понял, Хафиз ағай, понял, дөрөҫ әйтәһең, — тип ризалашты Нәжип.

— Аңланың буғыңды, — тип һүгенде «Министр». — Кем арҡаһында юғалған ул бала? Һинең ғәйеп арҡаһында!

— Бына һиңә кәрәк булһа! — тип аптыраны Нәжип. — Уның урманда осраҡлы рәүештә юғалыуына мин ғәйепләме?

— Во, во, понял?! Һин ғәйепле. Мин бына үҙемдең тишек баш менән шулай уйлайым. Урманда аҙашып балалар үлә икән, беҙ, ололар, бөтәбеҙ ҙә ғәйепле. Бригадирҙан башлап министрға тиклем, понял?

— Дөрөҫ, Хафиз ағай, — тине парторг, көләмһерәп. — Алтын һүҙҙәр.

— Ярай, мин китәйем. Бер-бер хәл булһа, шылтыратырмын.

Нәжип фуражкаһын кейҙе, һаубуллашты ла кабинеттан сыҡты. Күңеле менән ҡарттың ниндәйҙер кимәлдә дөрөҫ әйткәнен таныһа ла, бик кәйефе ҡырылғайны. Ҡара, һин ғәйепле, тип ташланасы, әйтерһең, баланы урманға ул алып барып ташлаған... Нәжип ғәҙәте буйынса күккә ҡараны. Төш ауған. Ҡояш һаман ҡыҙҙыра, шулай ҙа асыҡ, таҙа күктә ниндәйҙер үҙгәреш башланған һымаҡ. Нимәлер күсә, йөрөй, һына, һауа ағымдары зәңгәр фонда тәртипһеҙ һылаштырылған оҙон аҡ болоттарҙы әйләндерә, өйөрөлтә, һура. Ә көнбайыштан, алыҫтағы тешле-тешле тауҙар артынан, ниндәйҙер шомлолоҡ яҡынайған төҫлө. Оҡшаманы быңдай күк Нәжипкә, «ямғыр булмаһа ғына ярар ине», — тип борсолдо.

Төндө йоҡоһоҙ үткәрҙе Гөлнара, дөрөҫөрәге, ҡоро һөйәк тә тирегә ҡалған, йомғаҡҡа әүерелгән, куртка эсендә туҡтауһыҙ дерелдәгән кәүҙәһе йоҡламаны, ә аңы юҡ ине инде. Ҡыҫҡа ғына ваҡытҡа иҫе ҡайтҡан мәлдәрендә түҙеп торғоһоҙ һыуыҡты, ерҙән бәргән дымлылыҡты тоя. Ә иртәнсәк ағастар, япраҡтар араһынан ҡояш нурҙары төшкәс, күҙен асһа, йәнә шул уҡ йәшел тирә-яҡты, йыуан-йыуан ағас олондарын, бейек үләндәрҙе күрҙе — ул бынан ғүмерҙә лә сыға алмаҫ, ахыры... Бер аҙ йылынғас, йәнә ойоп китте. Шунан ҡапыл үҙен урман ауыҙында ғына хис

итеп уянды, йөҙөнә асыҡ, еләҫ ялан елдәре ҡағылғандай булды, әммә күҙҙәрен асҡас, тағы шул уҡ битараф аҡ ҡайындарҙы, бейек үләндәрҙе, йәшел япраҡтарҙы күрҙе. Күҙҙәрен кире йомдо, аңын юғалтты...

Уны күк күкрәүе уятты. Күҙен асҡайны, күктең ҡараңғылығын күрҙе, тимәк, йәнә кис яҡынлай. Төшөп килгән ҡараңғылыҡ хәҙер уға ул ҡәҙәре ҡурҡыныс түгел, өйрәнде, күнекте, унан нимәнәндер шөрләргә хәле лә ҡалманы. Күк күкрәүе яҡында ғына булды, ахыры, ҡыҙ үҙенең аҫтындағы ерҙең һелкенеүен тойҙо хатта. Шунда ғына ул бының күк күкрәү икәнлеген аңланы, ә унан бик тә ҡурҡа ине. Ҡото алынып, ул бөтә көсөнә кәүҙәһен йомарланы, тешен ҡыҫты, күҙҙәрен йомдо. Сираттағы күкрәү тап уның баш осонда яңғыраны, был шул тиклем көслө булды, әйтерһең, күк көмбәҙе үҙе ярылып китте, ҡойоп ямғыр яуырға кереште, әйтерһең, һыу ошо ярыҡ көмбәҙҙән ҡойолорға тотондо. Ул бер йәлләмәй ҡыҙҙы үҙенең ауыр, һыуыҡ ҡамсылары менән бәргеләне, курткаһынан үтеп, бөтә тәнен һыуланы. Ябыҡ керпектәре аша ул йәшен ялтлауын һиҙҙе, ә йәшен — ҡоторған ут ялҡыны менән бер. Ҡолаҡ тондорғос тауыш яңғырап тирә-йүн яп-яҡты булғас, ҡыҙ йәнә тертләп китте, терһәктәренә таянып ҡалҡынды ла шешенгән йөҙөн ямғырға ҡуйҙы: ялағай ялтлаған арала аҡ ағастар араһында күктән ергә ҡаҙалған ямғыр сыбыҡтарын күрҙе. Ялағай яҡтыһы һүнеп, тирә-йүнгә йәнә үле ҡараңғылыҡ һарылғас, йөҙтүбән ҡапланды. Ул аңын юғалтты...

Йәшенле ямғыр кистән башланды. Һыу күктән биҙрәнән ҡойған кеүек ҡойолдо; ер, һыуға тонсоғоп, был ҡәҙәре күп дымды һеңдерә алманы. Һөҙөмтәлә уйпатлыҡтар, соҡорҙар тиҙ арала һыу менән тулды, тау яғынан, бейеклектәрҙән, ҡалҡыулыҡтарҙан, юлдарҙан, ауыл урамының ике яғынан ул ташҡын булып аҫҡа, йылға яғына, йүгерҙе. Туҡтауһыҙ күк күкрәне, күк менән ерҙе тоташтырып ялағай ялтланы. Һауала көкөрт еҫе аңҡыны. Ер өҫтөндәге һыу, электр ташҡыны фонында кеше тормошо бәләкәй һәм көсһөҙ ине. Был ҡараңғы, ҡурҡыныс төндө тәбиғәттең һүҙһеҙ-өнһөҙ балалары — урман ҡоштары ҡайҙа йәшенә лә ҡайҙа ҡасып ҡотола икәнен берәү ҙә белмәй. Ә кешеләр үҙҙәренең өйҙәренә инеп боҫто, мейес йүшкәләрен, тәҙрәләрен ныҡлап япты ла уҡынырға тотондо. Йәшен атып, подстанцияны сафтан сығарҙы. Ут булмағас, өйҙәр ҡараңғы, шомло мәмерйәләргә оҡшап ҡалды; ҡайһыларында

етеле шәмдәре һаҡланған, уларҙы тоҡандырғас, күҙҙәр күптән онотҡан насар яҡтылыҡ кешеләрҙең тормошон илле, хатта йөҙ йылға артҡа ташлаған һымаҡ булды ла ҡуйҙы. Ә өйҙәрҙең стена артында һыу ташҡыны гөрһөлдәй, өйҙәр күктән тоташ аҡкан һыу эсендә бер-береһенән айырым торған утрауҙар кеүек, ә ауыл артында, бынан йөҙ йыл элекке кеүек, ҡырағай урмандар шаулай, асыҡ яландар ята, йыраҡ тауҙар ултыра, уларҙа бер йән эйәһе лә булырға тейеш түгел һымаҡ. Әммә ләкин урман ҡыуыштарында, таҡта вагондарҙа көтөүселәр бар, улар йоҡламай, кемдер йәшен-ялағайҙан ҡурҡып, кешенең тормошо тәбиғәт алдында бигерәк тә ышаныcһыҙ, көсһөҙ тигән уйҙарға батып юл буйлап һыбай килә. Ҡайҙалыр тау араһында бесән эшләүсе егеттәр, ҡыҙҙар бер өйөмгә өйөлгән дә ҡурҡыуҙарын күңелле көлөшөү менән йәшереп, тәбиғәт ҡотороуына үҙҙәре лә ҡотороп, йырҙар йырлай, лаҡаптар, көлкөлө ваҡиғалар һөйләгән була. Һәм ҡайҙалыр урманда аҙашҡан ҡыҙ бала урман ауыҙына сыға алмай яфалана. Күптәрҙең башына хафалы уйҙар килә, намыҫтары ҡуҙғала (мин йылыла, ышыҡта ултырам, ә ул ямғыр аҫтында, йәшен-ялағай уйнаған тауҙа), тик улар барыһы ла ялағай ише ҡыҫҡа арала була, сөнки ул ҡыҙҙың хәлен күҙ алдына килтерә алмайҙар, улай уҡ мөмкинме икән ни, тип уйлайҙар, һаман шул еңел, ҡотҡарғыс, үҙ-үҙҙәрен аҡлар уйға йәбешәләр: «Моғайын да, алып киткәндәрҙер. Бынау көндә урманда йөрөмәҫ...»

Иң йәнгә тейгәне, бигерәк тә йәштәр өсөн — телевизорҙың эшләмәүе. Бөгөн «Штирлиц»тың алтынсы серияһын күрһәтәләр, тик ут юҡ, ҡарай алмайҙар, клубта ла кино булмай, тансылар ҙа юҡ. Кисә унда биш-алты малайшалай лаҡап, ләстит, анекдот һөйләшеп болдорҙа тапанды-тапанды ла өйҙәренә таралышты. Ут биреүҙәрен көткәйнеләр ҙә — булманы.

Шундай йәшенле-ялағайлы кистә, өйрәнелгән, оҙаҡ йылдар эсендә юлға һалынған көндәлек тормоштары боҙолған, электр тогы һәм телевизоры булған кешеләр, әүәле (уҙа барһа егерме йыл элек) ошо электрҙан, телевизорҙан башҡа нисек йәшәнек икән һуң, тип аптырашты. Йәшен уларҙың ауылына береһенә лә аңлашылмаған, әммә барыһы ла өйрәнгән-күнеккән ток, яҡтылыҡ тип аталған нәмәне килтергән нәҙек кенә тимер сыбыҡты зарарлағайны, уларҙың тормошо элекке заманға әйләнде лә ҡайтты. Был кис улар Штирлиц менән нимә булғанын белә алманы,

Хәлимә апай киске сәйҙе эсә алмай ятты — газы бөткәйне, ә электр плитәһе, билдәле, токһыҙ эшләмәй; самауыр ҡуйыр ине лә, мейестә күмере юҡ. Йәшен менән ялағай төнө буйы ҡоторҙо, тик иртәнге яҡҡа ғына саҡ көнсығышҡа, ялан яҡҡа, күсте, ә бында көҙгө көндәрҙәге ише быҫҡаҡ, һыуыҡ ямғырын ҡалдырып китте. Ҡарттар, бындай йәшенде быға тиклем күргәнебеҙ юҡ, тине. Грамоталы кешеләр был хәлде, хәҙер бит Ҡояшта шартлауҙар бара, шуға ерҙә электричество ҡотора, тип аңлатты. Ә ҡарттар үҙ фекерен яҡланы: Ҡояштың бында ҡыҫылышы юҡ, бөтәһенә лә атом ғәйепле, атом менән күкте тишкеләп бөттөләр, атом арҡаһында йә ике йыл рәттән ҡоролоҡ килә, йә йәй буйы ямғыр ҡоя — беҙҙең бөтә бәләләр шул атомдан, уның беҙгә күрһәтеүҙәре алда әле, йәнәһе.

Идараға Ильясов ғәҙәте буйынса сәғәт һигеҙгә килде. Болдорҙа уны ауыл Советы рәйесе Исхаҡов Рәйес көтөп тора ине. Күрештеләр, Рәйес, әле генә милицияға шылтыраттыҡ, килергә вәғәҙә бирҙеләр, әммә тулыһынса ышандырмайҙар, сөнки ошондай ҡаты ямғырҙан һуң эт эҙҙе ала алмай, иң яҡшы эт эҙҙе һигеҙ сәғәт эсендә генә табыуға һәләтле икән, тип һөйләне. Унда ла эҙҙәр тапалмаған йәки ямғыр йыумаған булһа ғына. Ә ҡыҙҙың урманда йөрөүенә бөгөн өсөнсө көн.

Дөрөҫөн әйткәндә, ошо мәхшәр ямғыр, ул тыуҙырған мәшәҡәттәр арҡаһында теге юғалған ҡыҙ нисектер онотолоп та киткән, нисектер икенсе планға күскән, унан килеп, Ильясовты ла күптәрҙе тынысландырған уңайлы фекер ойота: бәлки баланы ысынлап та алып киткәндәрҙер...

Һөйләшә-һөйләшә икенсе ҡатҡа күтәрелделәр.

— Гарантия бирә алмаһас, нимәгә киләләр һуң?

— Ҡыҙҙың ҡайһы яҡҡа киткәнен теүәл генә белергә кәрәк, тиҙәр. Ул бала хәлдән тайып йығылғандыр инде, үлән араһында яталыр, бынау ямғырҙан һуң тере ҡалһа әле. Кеше уны шәйләмәй, күрмәй эргәһенән үтеп китәсәк, ә эт табасаҡ. Шулай ҙа эткә өмөт аҙ, беҙгә кешеләрҙе ойоштороп алып сығырға кәрәк, машина кәрәк.

Председатель кабинетында уларҙы парторг Наил көтөп ултыра ине. Йөҙө ағарған, һөмһөрө ҡойолған (Ильясовҡа ерһә, ул нишләптер гел генә ағара). Һүҙ әлбиттә, ҡыҙ һәм машина тураһында буласаҡ. Ҡыҙ өсөн ул, Наил ғына, борсола, ә был, килмешәк Ильясов Марат, дыуамал, үҙ һүҙле бәндә, төкөрөп ҡарай. «Әйтерһең, ул машиналар минең үҙемә кәрәк! Бирәм мин һиңә бөгөн машина, бирәм, сөнки

бөгөн буш машиналар бар», — тип уйланы Ильясов парторгтың ҡулын ҡаты итеп ҡыҫҡан саҡта, үҙе Рәйескә боролоп былай тине:

— Ике машина етәме?

— Етер тип уйлайым. Бынау көндә ике машиналыҡ кеше йыя алһаҡ әле, — тип яуапланы Рәйес.

— Значит, былай: АВМ-ға йәшел масса ташыған бортовойҙы бирәйек, икенсеһе — Сыртланов машинаһы, — тине Ильясов. Наил менән кәңәшләшкәндәй итеп уға ҡараны, унан тағы Рәйескә мөрәжәғәт итте. — Складтан брезент алығыҙ — кешеләр һыуланмаһын, ябынып ултырырҙар. — Председатель үҙенең урынына барып ултырҙы ла бөтөнләй икенсе тон менән Наилдән һораны. — Ут юҡлығын хәбәр итмәнеңме?

— Подстанцияға шылтыраттым. Совхоз менән рудник араһында бер бағананы йәшен атҡан, икенсе урындарҙа ла өҙөктәр бар, — тип тыныс ҡына яуапланы Наил. Йөҙөнөң ағарыуы бөттө, ҡыҙыллыҡ йүгерҙе. Шулай ҙа парторгтың бик ҡәнәғәт түгеллеген Ильясов һиҙә ине, сөнки һүҙ бәхәскә әүерелмәне, дөрөҫлөк-хаҡлыҡ өсөн уга, Наилгә, был юлы көрәшергә, һүҙен һүҙ итергә тура килмәне. Ни тиһәң дә, уларға артабан да бергә эшләргә, ғөмүмән алғанда, Наил былай насар кеше түгел. — Төш ваҡыттарында ут булыр, тинеләр.

— Улар гел генә төш ваҡыттарына вәғәҙә бирә, — тип көлөмһөрәне Ильясов.

— Значит, мин планеркаға ҡалып тормайым, кеше йыйырға китәм.

— Ваҡыт таба алһаң, кормоцехҡа кереп сыҡ әле, кормосмесителдең нигеҙен һалып бөтмәнеләрме икән?

Рәйес менән парторг сығып китте, улар артынан уҡ тигәндәй планеркаға баш белгестәр керҙе, хәйер, бөгөн ниндәй планерка булһын инде — көнө нисек, хатта сыуаҡ көндәрҙә лә идараға һирәк йөрөгән кешеләр ҙә килгәйне: механизаторҙар, таҡта ярыу цехы эшселәре, — уларҙың күптәрен Ильясов белмәй ҙә — түшенә орден-миҙалдарын, яурыны аша ялан сумкаһын аҫып «Министр» ҙа кергән.

Йырып сыҡҡыһыҙ бынау йонсоу көндә, етмәһә, электр юҡта нимә эшләргә, нимә ҡылырға икән һуң, тип һөйләштеләр. АВМ эшләмәй, МТМ тора. Әллә алама көн тыуҙырған кәйефһеҙлектән, күңелһеҙлектән, әллә эшһеҙлектән колхоздағы етешһеҙлектәргә төшөп киттеләр, тәнҡитләүгә күстеләр. Бүтән көндәрҙә күрмәгән, күрһәләр ҙә өндәшмә-

гән хужаһыҙлыҡ, юҡлыҡ, эшләп еткермәү һымаҡ күренештәрҙе әйттеләр. Тәртип бөттө инде колхозда, тормош баш түбәнгә әйләнде, этеп-төртөп кенә эшләйбеҙ, техниканы һаҡлау, тәрбиәләп тотоу юҡ. Берәй лапаҫ һымаҡ ышыҡ төҙөп, шунда комбайндарҙы индереп ҡуйғанда, ҡалай килешер ине. Техника яланда тороп ҡала. Бында сәскес ултыра, тегендә тырма ташлап ҡалдырылған. Ана, ҡарағыҙ, тауыҡ фермаһы эргәһендә үткән йылдан бирле тросы менән бергә волокуша ята, юл ситендә генә, барыһы ла шуның эргәһенән үтә, күрәләр, ә берәү ҙә алмай, тейешле урынға ҡуйыу хәстәрен күрмәй, ҡыш килгәс, ҡар аҫтынан эҙләйәсәкбеҙ. Әүәле колхоз атының муйынын ҡырҙыртһаң да, ҡороҡкослоҡ тип штраф түләттеләр, хөкөмгә тарттырҙылар, хәҙер һәр бер ахмағы эскән килеш тракторға ултыра ла техниканы боҙа — бер нәмә лә булмай, бер ниндәй ҙә яуапҡа тарттырылмай.

Һүҙ артынан һүҙ сығып, йәнә бер тарихты хәтерҙәренә төшөрҙөләр. Ул тарих күп йылдар элек булған, хәҙер көләмәс рәүешендә генә иҫкә алына. Район буйлап ниндәйҙер ҙур түрә үтергә тейеш икән. Әҙерләнә башлайҙар осрашыуға. Кешеләрҙе эштәренән айыралар, тәртип урынлаштырырға тотоналар, бигерәк тә әлеге түрә үтергә тейешле юлдар тирәһен ҡарайҙар. Алла һаҡлаһын, берәй ватыҡ йәки ташлап ҡалдырылған техника ятмаһын, төрлө тимер-томор, сүп-сар була күрмәһен. Үткән яҙ Максим тауы итәгендә, юл өҫтөндә генә тиерлек, дүрт корпуслы һабан ҡалдырғандар. Ямғырҙар башланды, һабанды баҫыуҙан төшкән тупраҡ-батҡаҡ баҫып киткән. Ямғырҙар тынғас, әлеге батҡаҡ ҡорғаҡһып ҡата, үлән баҫа, әммә өҫкө өлөшө күренеп тора. Түрә күрһә — бөттө! Сығарырға кәрәк. Тик нисек? Трактор таға алмай, трос менән тарттырып ҡарайҙар, әммә трос өҙөлә, ә һабан ҡуҙғалырға ла уйламай. Шакиров, Ильясовҡа тиклемге колхоз рәйесе: «Күмегеҙ, аҙаҡ нисек тә ҡаҙып алырбыҙ әле», — ти. Бульдозер килтерәләр ҙә һабанды күмеп ҡуялар. Теге түрә икенсе юлдан китә, ә һабанды көҙ еткәс кенә иҫтәренә төшөрәләр...

Йәки бына электрҙы ал. Йәшен булған һайын — авария. Өс көн колхоз яҡтыһыҙ ултыра. МТМ эшләмәй, фермалар эшләмәй, ҡул менән һауалар. Ә ҡыш килһә? Боҙлауыҡ — йәнә авария. Фермала һыйырҙар ас тора, быҙауҙар туңып үлә, сусҡа балалары ҡырыла, мәктәптә батареялар шартлай, идарала белгестәр тун, толоп кейеп ултыра.

— Быйыл ғына етенсе авария, — тип ҡапыл һүҙгә ҡушылды «Министр». Хәбәргә ҡолағын ҡарпайтып, быға тиклем өндәшмәй ултырғайны ул ирекһеҙҙән тыуған был йыйылышта. Ялан сумкаһына шаҡылдатып һуғып алды, — минең бында бөтәһе лә яҙылған. — Һәм һығымта яһап ҡуйҙы. — Хужа юҡ, хужа, бына сәбәп нимәлә...

— Уттың хужаһы — «Сельэнерго», — тине Атнабаев Хафизға ҡарамай ғына.

— Ә бында кем хужа? Һин. Хужа булараҡ, әйҙә, «Сельэнерго»нан талап ит, понял?

— Понял, понял.

— Аңланың буғынды. Аңлаһаң, ғәйепте үҙеңдән ситкә осороп ултырмаç инең.

— Ул линияға хәҙер егерме йыл, бағаналар иçкергән, серегән, ҡыйшайған. Саҡ ҡына ел иçтеме — ҡыçҡа замыкание, етмәһә бынау йәшене, — тип яуапланы Атнабаев.

— Талап итмәй, әйтмәй, тип уйлайһығыҙмы әллә? — Һүҙгә Ильясов ҡушылды. — Был турала бюрола, пленумдарҙа күпме һүҙ булды, күпме хат, үтенес яҙҙыҡ...

— Насар талап итәһең, значит. Һин бит бисә-сәсәгә генә шәпһең, ә тегендә шып-шым, артың менән тын алып ултыраһың да ҡағыҙҙан уҡыйһыңдыр әле. Әллә дөрөç әйтмәйемме?

— Дөрөç әйтәһең, Хафиз ағай, дөрөç. Тик һүҙеңде киләһе йыйылышҡа ла ҡалдыр, — тине Ильясов.

— Йыйылышҡа ла ҡалыр, берәүгә түгел, унына ла етер, миндә барыһы ла яҙылған, — «Министр» йәнә ялан сумкаһына һуғып алды. — Бында тел сарлап ултырырға түгел, эш менән шөғөлләнергә кәрәк. Бына күпме ултырабыҙ, бушты бушҡа ауҙарабыҙ, ә урманда ҡыҙ бала әрәм була.

— Эҙләйбеҙ бит... Хәҙер кешеләрҙе ойоштораcаҡбыҙ... Ике машина бүлдем. Эт менән милиция ла килеп етергә тейеш...

— Ике машинаға хәрап күп кеше тейәрһең инде! Колхоздағы булған бөтә техниканы сығарырға кәрәк, бөтә ауылды күтәрергә кәрәк, балаларҙан алып олоһона тиклем. Урман ундарса саҡрымға һуҙыла, бәләкәй бала урман эсендә ҡом бөртөгө кеүек. Урманды арҡырыға ла, буйға ла һөҙөргә, төнөн дә, көндөҙөн дә эҙләргә кәрәк. Эткә ышанамы кеше, баланың юғалыуына бөгөн өсөнсө көн, эҙҙе таба алмаясаҡ — шул ҡәҙәре яуыуға эҙ ҙә, еç тә юҡ хәҙер.

— Йөрөнөк бит инде, таба алманыҡ...

— Икенсе ерҙән эҙләгәнһегеҙ, значит. Иҙәнгә тимер аҡса төшөп китһә, ҡайҙан эҙләйһең? Ул шунда ятамы?

Юҡ, мотлаҡ ситкә тәгәрәй. Урманға юлыҡҡан кеше лә шулай, гел ситкә тартыла. Һин һөжүмгә барҙыңмы? Барманың. Ә бына мин барҙым. Күп тапҡырҙар барҙым. Ана шул һөжүмгә барғандағы ише эҙләргә кәрәк баланы. Бөтә халыҡты күтәрергә кәрәк, һуғышҡа күтәргән кеүек күтәргә кәрәк. Понял?

— Әле һуғыш түгел бит. Заманы икенсе, икенсе... — тип ҡаршы төштө Атнабаев.

— Риза түгелмен! — Тулҡынланыуҙан «Министр»ҙың йөҙөнә ҡыҙыллыҡ йүгерҙе, яңаҡтарындағы аҡ һаҡал-мыйыҡ төпһәләре тағы ла ағарып киткәндәй булды. — Беҙҙең өсөн көн һайын һуғыш!

— Ярар, иптәштәр, булды! — тине Ильясов, тауышын ҡырҡа ғына күтәреп, артабан да «Министр»ҙың хәбәрен тыңларға теләмәүен аңғартты — ауылдағы күптәр һымаҡ, ул да ҡартты етдигә алмай ине, — конкрет эш тураһында һөйләшәйек.

Шулай хәл иттеләр: өсөнсө һәм дүртенсе бригадаларҙа сенаж һалыуҙы дауам итергә, тауға йәштәр бригадаһы артынан машина ебәрергә. Төҙөүселәр ҙә эште туҡтатмай. Ут булыу менән, механизаторҙар мастерскойға барырға тейеш.

Балта элерлек төтөн йыйылды. Бүтән саҡтарҙа Ильясов кабинетында тартырға рөхсәт итмәй торғайны, бөгөн әллә ни рәүешле килеп сыҡты бит — колхоз уға идара итә алмаҫлыҡ хәлгә төшкән һымаҡ тойола башланы.

Сәғәт ундарҙа саҡ таралдылар. Күпмелер ваҡыттан һуң Ильясов тәҙрәнән УАЗик менән милиционерҙар килгәнен күрҙе, уларҙың береһе ауыл Советына керҙе; тағы ла ярты сәғәттән бина алдына ике йөк машинаһы килеп туҡтаны, кузовтағы оҙон брезент аҫтында кешеләр ултыра ине. Кабинанан Наил һикереп төштө, ауыл Советынан милиционер менән Рәйес сыҡты, парторг УАЗикка ултырҙы. Машиналар ҡуҙғалып китте, ә Рәйес болдорҙа тапанды-тапанды ла, күләүектәрҙе урап үтә-үтә, ҡайтыу яғына атланы.

«Министр» ауыл буйлап китте. Ниәте — һәр йортҡа кереп барыһын да ҡыҙҙы эҙләүгә сығарыу. Беренсе булып күршеһе Әхмәтвәлигә, ветеринарға, инде. Ул ат тота, мотоциклы ла бар; үҙенең ваҡыты булмаһа, төпсөк улын ебәрә ала, тип уйланы «Министр». Ветеринарҙың ихатаһында иҫке генә «Запорожец» тора, тимәк, совхоздан бажаһы килгән. Шулай булып сыҡты ла: йомшарған, ҡыҙарышҡан

бажалар өҫтәл артында ултыра, яйлап ҡына хәбәр һата, ҡатыны быларға сәй яһай. Ҡырҡ йәштәр тирәһендәге йомшаҡ күңелле Әхмәтвәли «Министр»ға былай дуҫтарса мөғәмәләлә. Күрше булараҡ та бына тигән: кәрәк саҡта ярҙам да иткеләй, йомошон да биреп тора.

— Әйҙә, әйҙә, Хафиз агай, кер, — тип саҡырҙы ул «Министр»ҙы өҫтәл янына, иҫерек күҙҙәрен йылтыратып. Ҡатыны Хәтижә батмусҡа йәнә бер сынаяҡ ултыртты.

— Юҡ, юҡ, рәхмәт, мин бер генә минутҡа, — «Министр» ветеринарҙан файҙа сыҡмаясағына төшөнгәйне инде. — Улың өйҙәме?

— Иптәштәре менән Ирәмәлгә китте. Нимәгә кәрәк һуң? — тип ҡыҙыҡһынды Хәтижә.

— Ниңә тип ни... Көтөүсе Фәйзулланың ҡыҙын эҙләшергә кәрәк. Күберәк кеше йыйырға ла урманға барырға әйтәм.

— Хафиз ағай, юҡ менән булаһың, — тине Әхмәтвәли, аптырап һәм ниндәйҙер үпкәле ҡараш һирпеп. — Бынау ямғырҙа кем урманға барһын инде, ә? Үҙең уйлап ҡара...

— Эҙләнеләр бит, тапманылар. Уны бит машинаға ултыртып алып киткәндәр, тип һөйләйҙәр, — тип йәнә һүҙгә ҡушылды Хәтижә. — Әйҙә, ултыр, нимә ишек төбөндә тораһың?

«Министр» өндәшмәй генә сыҡты ла икенсе йортҡа йүнәлде. Механизатор Ваккастың да мотоциклы бар. Ул әле генә мунсанан сыҡҡан икән — ҡыҙарып-бүртенеп, күкрәгенә таҫтамалын һалып диванда ята.

— Һөйләһәң һөйләйһең дә инде хәбәрҙе, мунсанан һуң урманға китеп барайыммы? — тип аптыраны Ваккас, сырайын һытып. — Буш эш менән йөрөйһөң, Хафиз ағай. Бында армия кәрәк, тауҙа урынлашҡан һалдаттарға мөрәжәғәт итергә. Бер полк һалдат. Шул саҡта ғына урмандың арҡырыһын, буйын йөрөргә була. Ә былай, һин, мин... — Ваккас күҙҙәрен түңәрәкләндереп ауыҙын ҡыйшайтты ла йөнтәҫ күкрәген ышҡырға тотондо.

Йәш ир Юлай баҡса артында мунса бурай. «Министр» менән ул һөйләшеп тә торманы:

— Нимә? Ҡамасаулап йөрөмә. Эш менән булғанды күрмәйһеңме ни?

«Министр», ике пенсионер йортон уҙып, көтөүсе Фуатҡа инде. Фуат үҙе көтөүҙә, Рифат исемле улы ҙур бүлмәлә ултыра.

— Юҡ, юҡ, уның ваҡыты юҡ. Ул институтҡа инергә әҙерләнә. Көнө буйы, төнө буйы китап өҫтөндә ултыра,

хәҙер килеп ямғыр аҫтында урманға ебәрәйемме? — тип ҡыҫҡылданы егеттең әсәһе Зәкиә. — Йәл инде ҡыҙ, тик беҙ нимә генә эшләй алабыҙ? Бөтә нәмәне ташлап, бөтәбеҙ ҙә урманға сығып йүгерәйекме ни?

Тағы ла унлап өйҙә булғас, халыҡты күтәрә алмаясағын аңланы «Министр». Былай ҡарауға барыһы ла һәйбәт кешеләр, барыһына ла ҡыҙ йәл, әммә береһенең дә эҙләргә барғыһы килмәй, дөрөҫөрәге, береһе лә бара алмай. Уларға, бәлки, өҫтән берәй төрлө бойороҡ йәки күрһәтмә кәрәктер?.. Һәм «Министр» районға, түрәләргә, Латиповтың үҙенә барырға ҡарар итте. «Районды күтәрергә кәрәк, шунһыҙ булмай», — тип уйланы ул.

Сәғәт ун бергә тиклем Ильясов төрлө ҡағыҙҙар менән ултырҙы, телефондан һөйләште, унан ашарға ҡайтып китте. Ямғыр һаман яуа: берсә ваҡ ҡына һыу туҙаны рәүешендә һибәләй, берсә биҙрәнән ҡойған кеүек ҡоя. Һыу тулы ауыр һоро-ҡара болоттар аҫтан ғына йөҙә, уларҙың ялбыр остары Урал тауының түбәләрен генә түгел, хатта күршеләге, эргәләге ваҡ түбәләрҙе лә ҡаплаған. Урамдар шыйыҡ батҡаҡҡа әйләнде, идара алдында оло бер күләүек хасил булды.

Ильясов ситтән килгән белгестәр өсөн колхоз төҙөгән ике квартиралы кирбес йортта йәшәй. Ҡабалан ғына сәй эсте лә шалтырап бөткән УАЗигына бата-сума саҡ барып етеп, бригада, фермалар буйлап сығып китте. Әлбиттә, телефон да бар, әммә Ильясов телефон аша һөйләшеүгә һис ышанмай: һөҙөмтәһен күрмәй, кешеләрҙе эшләгән урындарында ҡабаландырмаһаң, ҡайыҙламаһаң, ямғыр һылтауы менән хәҙер ял ойоштороорға, мунса яғырға, эсергә тотонасаҡтар. Унан килеп, бер ниәте лә бар: һауыу агрегатын «Беларусь» тракторы ярҙамында эшләтеп булмаҫмы икән? Өсөнсө бригадаға килде. Тып-тын. Өсөнсө ферма мөдире Әмирхановҡа керҙе лә үҙенең уйы менән уртаҡлашты. Тегеһе елкәһен тырнаны, тапҡанһың ваҡыт, тигән һымаҡ, йөҙөн сирылтты: «Булаштырып ҡарайыҡ һуң», — тине шулай ҙа. Тракторсыны эҙләп табып, «Беларусь»ты фермаға килтерҙеләр. Агрегатҡа тоташтырҙылар, әммә трактор тартманы, көсө етмәне. «Ах, эш бармай, егеттәр, эш бармай!» — тине Ильясов, кәйефе ҡырылып.

Ильясов үҙәк усадьбаға әйләнеп ҡайтты, район түрәләре таптырыр, тип бер аҙ идарала ултырҙы, подстанцияға шылтыратты. Линияны ремонтлайҙар икән, бына-бына ут бирәсәктәр. Төш етеп бара, «бына-бына» тигәндәре,

моғайын, кискә генә булыр, ҡыҫҡаһы, көн юғалды, тип иҫәплә. Арыған, ас рәйес өйөнә, үҙенең яңғыҙлығына, ҡайтып килде — уның хафалы уйҙары, туҡтауһыҙ нервыларын ашау хәсрәткә, көсһөҙ асыуға әүерелде. Ҡатыны менән ҡыҙы янында булғанда, Ильясовты нисектер тынысландыралар, насар уйҙарын тараталар ине, хәҙер буш фатирҙа, етмәһә бынау ямғырлы көндә бер үҙең нисек түҙеп ултырмаҡ кәрәк?!

Ул кухняла газ тоҡандырҙы, һыу һалып кәстрүл ултыртты, шкафтан макарон эҙләй башланы. Шул саҡ ишек асылып ябылды ла, кемдер өйгә керҙе.

— Хужа өйҙәме? — тине Рәйес, бүлмәгә инеп.

Рәйес күрше квартирҙа йәшәй. Үҙенең йортон өйләнгән улына бирҙе лә яңыһын төҙөгәнсе бында, буш торған колхоз фатирына, күсте.

— Өйҙә, өйҙә, әйҙә үт, — тип яуапланы Ильясов. Үҙе, ауыл Советы рәйесе ниндәй эш менән йөрөй икән, тип уйланы.

Рәйескә Ильясов күптән инде һаҡ иғтибар менән ҡарай. Ул берсә ябай, киң күңелле булып тойола, берсә ябай булып ҡыланған, үҙе менән дуҫ булырға ынтылған, ләкин уның тураһында эсенән насар уйлаған һәм үҙенең баһаһын бик яҡшы белгән кеше һымаҡ та күренә. «Ҡарайыҡ, һынайыҡ, һинән ниндәй председатель сығыр икән?» — тип уйлай Рәйестең киң битендәге ярым ҡыҫыҡ көлкөлө-мыҫҡыллы күҙҙәре.

— Күрше, әйҙә, беҙгә керәйек әле. Ҡаланан ағай ҙа килде, — тине Рәйес.

Ильясовтың уларға барырға һис теләге юҡ, кергәнең, ҡунаҡ менән эсергә тура киләсәк. Дауаланғандан һуң ул үҙенә, ҡатынына, бүтән бер ҡасан да, хатта байрамдарҙа ла, ҡунаҡта ла, өйҙә лә ауыҙға бер тамсы ла һалмаясаҡмын, тип ант итте. Бында, яңы урында, сит ауылда, бигерәк тә ярамай.

— Рәхмәт, булмаҫ. Мин эсмәйем бит.

— Мотлаҡ эсергә тимәгән. Ағайым менән һөйләшерһең. Беҙ ҙә эскесе түгел, — тип ныҡышты Рәйес. — Беҙҙең ауылда саҡырған ерҙән баш тартмайҙар.

Бүтән башҡорт ауылдарындағы һымаҡ, Ильясовтың ауылында ла ҡунаҡтан баш тартыу ҡабул ителмәгән, был хужаларҙы ихтирам итмәү тип һанала — ул беҙҙән ерәнә, тип уйлауҙары бар. Кермәһәң, Рәйес мотлаҡ, яңы председатель мине әҙәмгә һанамай икән, тип уйлаясаҡ, ә уға,

Ильясовҡа, Исхаҡов менән бергә йәшәргә, бергә эшләргә кәрәк. Өйҙә ултырыуы ла эс бошорғос күңелһеҙ, ашарға бешереү ҙә бер яфа. «Ярай, барайым, һөйләшеп кенә ултырырмын, тамаҡты ла туйҙырырға кәрәк, шул арала, бәлки, ут та бирерҙәр», — тип уйланы Ильясов. Газын һүндерҙе лә Рәйескә эйәрҙе.

Исхаҡовтың ағаһы ла эре һөйәкле, ҙур йөҙлө кеше икән, шундай уҡ ҡара күҙҙәр. Улар, ярым йомолоп, Ильясовҡа мыçҡыллы, һынсыл ҡараны. Бер-береһенең исемдәрен әйтешеп ҡулдарын ҡыçыштылар. Ҡунаҡ яҡшы костюмда ине: шуға ла Ильясов уның кем булып эшләүен тойомлай алманы — берәй түрәме, инженермы, эшсеме?

Рәйес шешә асты ла, Ильясов алдына ҡуйылған стаканға эйелтеп, былай тине:

— Күрше, мин һиңә йөҙ грамм ғына ҡоям. Теләһәң — эсерһең, теләмәһәң — үҙең беләһең.

Рәйестең ҡатыны Сания өçтәлгә ҡыҙҙырылған балыҡ менән ҙур таба ултыртты. Ағалы-энеле ирҙәр эсте лә ашарға тотондо. Өçтәл артындағы хәбәр һәр ваҡыттағыса юҡ-бар һүҙҙән башланды.

— Йылға буйында йәшәйбеҙ, ә магазиндан һатып алынған ниндәйҙер балыҡ ашайбыҙ, — тине Рәйес. — Ҡайҙан тотҡандарын бер кем дә белмәй. «Хек» икәне генә мәғлүм. Ә бит ҡасандыр беҙҙең йылғала суртандар, оптолар, ҡорбан балыҡтары, ҡушбаштар мыжғып йөрөй ине. Хәҙер ташбаш та ҡалманы бит.

Һүҙ яйлап колхоз, хужалыҡ эштәренә төшөп китте, Рәйестең агаһының колхоздың ниңә рентабелһеҙ икәнен белгеһе килде, ул һораны, аңлайышлы, шул уҡ ваҡытта ике-өс һүҙ менән генә шуның сәбәбен аңлатыуҙы талап итте.

— Белмәйем, — тип тура яуаптан ҡасырға маташты Ильясов. Колхоздың ниңә зыянлы эшләүенә уның үҙенең фекере бар ине. — Һеҙгә беҙҙең экономист менән һөйләшергә кәрәк. Ул һатып алыу хаҡтарының ниңә улай юғары икәнен, дәүләткә фураж орлоғоноң килограмы өсөн күпме түләгәнде, колхоздың ер структураһын, нисә баш мал, күпме «батрак» барлығын аңлатыр ине...

— Ниндәй «батрак» тағы?

— «Батрак» тип беҙҙә хисапҡа алынмаған малды атайҙар, — тип яуапланы Ильясов һәм телен тешләне: «Шайтан алғыры, быларҙы һиңә нимә тип һөйләп ултырам һуң әле?» — Әйтәйек, фермала фураж малдары дүрт йөҙ, ти,

иҫәпләнгәндәре — өс йөҙ. План өс йөҙ башҡа төшөрөлә. Үҙегеҙ аңлап тораһығыҙ, дөйөм һауым күрһәткесе юғары. Төшөнмәнегеҙме? Нисегерәк аңлатайым икән һуң? Мал һанын туҡтауһыҙ арттыра алмайбыҙ бит инде, йөрөтөр көтөүлек самалы. Ә кормаһыҙ, туғай-яланһыҙ һөт тә юҡ. Бына шулай итеп юлдарын табырға тырышабыҙ.

— Значит, приписка менән шөғөлләнәһегеҙ?

— Нишләп приписка булһын ул? Планды бит үтәйбеҙ, — тип яуапланы Ильясов. — Һаман аңламанығыҙ.

— Мин һеҙҙән, ниңә колхозығыҙ файҙа ала алмай, йәғни зыянлы эшләй, тип һораным, ә һеҙ әллә ниндәй «батрак» тураһында һөйләйһегеҙ, — тип ныҡышты ҡунаҡ.

— Азат, ҡуй әле, кешенең башын ҡатырма, — тип һүҙгә ҡыҫылды Рәйес. — Үҙем яуап бирәм. Яуабы ябай ғына: колхоз шуның өсөн зыянлы эшләй, сөнки беҙ үҙебеҙ насар эшләйбеҙ. Бөтә бәлә шунда.

— Дөрөҫ. Ысынлап та илке-һалҡы эшләйбеҙ, кешеләрҙә эшкә хужаларса, «беҙҙеке», «минеке» тигән мөнәсәбәт юҡ, — тип килеште Ильясов. — Мин бына атайымды хәтерләйем. Кисәге әсегән ашты ашар ҙа эшкә сығып китер ине. Мыжыманы ла, талап та итмәне, көҙ еткәс үҙенең килограмдарын ала аламы, юҡмы — ул турала ла һүҙ ҡуҙғатманы. Ҡайһы йылды ала торғайны, ҡайһы йыл таяҡ өсөн дә йөрөнө. Элек беҙ колхозда йырлап эшләнек, тип «Министр» ҡарт дөрөҫ әйтә. Ә хәҙер нимә? Мин бына өсөнсө көн йәштәр бригадаһына барҙым: берәүһе саҡ ҡуҙғалып эшләп йөрөй, бүтәндәре кәрт һуға. Кисә урамда бер егетте осраттым. Тегенән: «Нишләп эштә түгелһең?» — тип һорайым. Ә ул миңә шарт ҡуя: «Яланда ҡымыҙ булһа, барам». — Ильясов ҡыҙы юғалған көтөүсе Фәйзулла тураһында һөйләргә уҡталғайны ла һуңғы мәл тыйылды — күңелһеҙ тарихты болғатҡыһы килмәне. — Бына шулай эшләйбеҙ.

— Бөтәһе лә етәксенән, — тип ысҡындырҙы Рәйес, балыҡ сәйнәй-сәйнәй. — Ергә ысын хужа кәрәк.

— Эх, барыһы ла шулай еңел генә булһа икән. Бөтәһе лә етәксенән генә тормай шул. Хужа, хужа тип һөйләйҙәр, гәзиттәргә яҙалар, ә шул хужа өҫтөндә күпме хужа ултырғанын беләһеңме? Оло-оло портфелдәре менән. Уға күрһәтәләр, уға бойоралар, уның ете ҡат тиреһен тунайҙар, планды тултыр, продукция бир тиҙәр, ә үҙенә ярҙам итеүсе юҡ. Миҫалға запчастар мәсьәләһен генә алайыҡ. Беҙҙең өсөн ул — мәңгелек проблема. Уны беҙгә райком бирмәй,

сельхозуправление бирмәй, «Сельхозтехника» бирмәй, ниндәйҙер бер вкладыш табыр өсөн ҡыҙған табалағы бөрсә кеүек һикерәһең. Ҡаҙағстанға барабыҙ, ағас, таҡта тейәп китәбеҙ ҙә бер нисә бөртөк шестерня алып ҡайтабыҙ. Шул да булдымы эш...

— Юҡ, эштең туҡһан проценты барыбер ҙә етәксенән тора, — тип бүлдерә Ильясовты Рәйес. — Мәрхүм Хоҙайбирҙин, грамотаһыҙ мужик, һуғыштан һуң колхозды нисек күтәрҙе тиһең? — Ул өҫтәлгә эйелде лә күҙҙәрен ҙур асып Ильясовҡа текәлде. — Сөнки ысын хужа булды. Ә һине мейеңде эшләтер өсөн биш йыл буйы уҡытҡандар. Илар өсөн, зарланыр өсөн түгел, ә эшләр өсөн уҡытҡандар. Белдеңме?

Был асыҡтан-асыҡ ҡаршы сығыу ине. Рәйес унның күҙҙәренә туп-тура ҡарап шуны әйтте: һин насар председатель. Ильясовтың күңелендә нимәлер һынды, шартлап өҙөлдө: ҡунаҡҡа саҡырҙылар ҙа дөмбәҫләргә тотондолар. «Әллә китергәме?» — тип тә уйлай башланы Ильясов, ҡуҙғалһаң хужа үпкәләйәсәк, ә унның менән бәхәскә һис ингеһе килмәй. Асыуынан, эс бошоуынан күңелендә ниндәйҙер төшөнкөлөк тойоп, ул үҙе лә көтмәгәндә стаканды алды ла эсеп ебәрҙе. Шундуҡ иҫерҙе, әйтерһең, тәрән соҡорға ҡолап төштө. Китте бынан һуң иҫерек һөйләшеү, Ильясов һаман Рәйес менән унның ағаһына, бөтәһе лә унан, председателдән генә тормай, колхоздың утһыҙ ултырыуында минең ғәйеп юҡ, «Сельхозтехника» кормосмесителде бушатыу өсөн кран бирмәй, запчастар етмәй, АВМ-дағы грануляторҙы ремонтламайҙар, тип иҫбатларға маташты.

Ултыра торғас, кемдер керҙе. Рәйестең «Яйыҡ» колхозында йәшәгән бажаһы икән. «Жигули» машинаһы менән килгән, ҡунаҡҡа саҡыра, имеш.

— Йыйынығыҙ. Фәриҙә бәлеш бешерә, алырға килдем. Ильясов тайырға самалағайны ла, ебәрмәнеләр.

— Рәйестең ҡунағы — минең ҡунаҡ, — тине бажаһы, — бындай алама көндә нимә эшләргә кәрәк? Ҡунаҡҡа йөрөргә, араҡы эсергә!

Машинаға бишәүләп кереп ултырҙылар ҙа икенсе ауылға, «Маяҡ»тан ун саҡрым алыҫлыҡта ятҡан «Яйыҡ» колхозына, киттеләр. Унда йәнә эстеләр. Ильясов менән Рәйестең ағаһы унда ла бәхәсте дауам итте: хужалыҡтың ниңә улай зыянлы эшләүе, етешһеҙлектәр... Рәйес тә, унның бажаһы ла ҡала ҡунағы яғын алды.

Ә ҡунаҡ бөтөнләй аҡылға һай бәндә булып сыҡты, тоноҡ, уҫал ҡарашын Ильясовҡа ҡаҙап, уға бәйләнергә тотондо:

— «Батрак»тар, тиһең инде, күрһәткестәр, имеш, ә мин һинең ишеләр арҡаһында май түгел, маргарин ашайым!

— Йөҙөңә ҡарағанда бер ҙә маргарин ашағанға оҡшамағанһың әле, — тип яуапланы Ильясов, көләмһерәп.

— Ә һин минең йөҙгә ҡағылма! — Рәйестең ағаһы Ильясовтың түшенән матҡыны.

— Азат, кешегә бәйләнмә, тип әйттем бит. Ебәр! — тине Рәйес тауышын күтәреп. Унан Ильясовҡа ҡарап былай тине: — Һин уға үпкәләмә инде, ул былай һәйбәт егет, тик эсһә, бәйләнсеклеге бар.

Әммә Ильясов үпкәләгәйне инде, өҫтәл артында ултырғандарҙың барыһына ла үпкәләгәйне; Азаттың ҡулдарын ситкә һирпте лә урамға сыҡты. Ниәте — йәйәү булһа ла ауылына ҡайтыу.

Ямғыр аҫтында күләүектәрҙе кисә-кисә, ботинкаларына бысраҡ индерә-индерә сит ауыл урамдары буйлап йөрөгәнен, үҙенең ауылына алып бара торған юлды табырға тырышып атлағанын саҡ-саҡ иҫләй; килә торғас, нисектер онотолдо, иҫе ҡайтҡанда кемдеңдер ҡапҡа төбөндәге эскәмйәлә ята ине. Кейеме лысма һыу, үҙе туҡтауһыҙ дерелдәй. Иҫереклеге әҙерәк сыҡҡан, әммә бөтә кәүҙәһе ҡалтырана, үҙе уҡшый, балтырҙарын көҙән йыйыра, йөрәге бер дарһылдай, бер тибеүҙән туҡтай. Әгәр хәҙер үк башын төҙәтмәһә, үлер һымаҡ. Рәйестең бажаһына кире бара алмай: бөтәһе лә, ағаһы менән Рәйес тә суҡынып ҡына китмәгәйҙәре! Тирә-яғына ҡаранып, Ильясов урамдың теге яғында ҙур тәҙрәле ниндәйҙер кирбес йорт күрҙе. Бәй, был бит — аҙыҡ-түлек магазины! Быяла артында, ҡараңғылыҡта аҡ нәмә ҡыбырлай — аҡ халатлы һатыусы. Ильясов кеҫәләрен тикшерҙе — бер тине лә юҡ. Күләүектәр уртаһынан магазинға ҡарай атланы. Керҙе. Алһыу битле, тулы кәүҙәле һатыусы бер ҡарсыҡҡа дөгө үлсәй. Кәштәләргә аҡ шешәләр теҙелгән. Ильясов аҡсаһын эҙләгән булып прилавка янында тапанды, ҡарсыҡ сыҡҡас, һатыусыға ҡыйыуһыҙ ғына өндәште:

— Апай, иртәгәгә тиклем бурысҡа бер шешә араҡы бирегеҙ әле. Аҡсаһын иртәнсәк үк алып киләм... Мин — «Маяҡ»тың председателе.

— Беҙ бурысҡа һатмайбыҙ! — тине һатыусы ҡәтғи генә, өҫтө һыу, күшеккән-бөрөшкән, меҫкен һәм таныш

булмаған кешегә мыҫҡыллы-һауалы ҡарап. — Нишләп улай «Маяҡ»тың председателе беҙҙән бурысҡа араҡы һорап йөрөй ул?

— Һеҙ миңә ышанмайһығыҙмы?

Һорау, әлбиттә, төптө урынһыҙ ине: һатыусы уны белмәгәс, нишләп ышанырға тейеш һуң? Зәңгәр костюмы, ситкә шыуған галстугы буйынса уның председатель икәнен тоҫмалларға бурыслымы ни һатыусы? Ильясовты таныған хәлдә лә бурысҡа бирмәҫ ине. Уның уйҙарын белгән һымаҡ, ҡатын тап шулай тине лә:

— Ышанаммы, ышанмайыммы, барыбер бирмәйем.

— Мин пинжәгемде ҡалдырам. Иртәгә иртүк...

— Пинжәгегеҙ кәрәкмәй.

— Тимәк, бирмәйһегеҙ?

— Юҡ.

Ильясов магазиндан сыҡты. Ямғыр һаман яуа. Бысраҡ, һоро күләүекле урам шөкәтһеҙ. Исмаһам, берәйһе үтһә, исмаһам, берәйһе магазинға килһә, өс тәңкәгә пинжәген бирер ҙә баш төҙәтер, йылыныр, үкшыуын баҫыр ине. Артабан ни булыуы тураһында ул уйламаны, уйлағыһы килмәне. Ул, Ильясов Марат, ысҡынды, ул — ваҡ, меҫкен, ҡатыны әйткәнсә, йомшаҡ характерлы кеше, шуға ла насар председатель, ана Исхаҡов Рәйес тә бит уны эшкинмәгән председатель тип иҫәпләй, тимәк, башҡалар ҙа шулай тип уйлай. Ильясовтың ҡола яланда ятып үлгеһе килде. Күңеле буш, дөрөҫөрәге, үкенес, үҙ-үҙен күрә алмау, ғазап менән тулы...

Ильясов урам буйлап китте, юлды ҡарап-эҙләп йонсоманы, тайҙы, ботинкалары эсенә шыйыҡ батҡаҡ тулды, салбар балаҡтары һыуланды. «Һаҙлыҡ һымаҡ ятҡан бынау урамдарға ҡасан асфальт түшәрҙәр икән», — тигән уй башына килде атлай торғас. Уйының мәғәнәһеҙ һәм буш икәнен аңлағас, ул йәнә үҙенең ниндәй ваҡ йәнле, түбән, бәхетһеҙ икәнен уйларға тотондо.

Ауылды сыҡҡас, уны ҡара «Волга» ҡыуып етте. Ильясов туҡтаны, машина боролдо, туҡтатайым, тип ҡулын күтәрергә булғайны ла кире уйланы: ҡара «Волга»ла ғәҙәттә ҙур түрәләр йөрөй. Уның тәңгәлендә машина тиҙлеген кәметте. «Дворниктар» йөрөгән тәҙрәләрҙе ямғыр йыуа, һыу тамсылары, ҡаҡлығып, томан хасил итә — Ильясов киң, ҡаты тирәсле эшләпәһен ауыр йөҙөнөң маңлайына төшөргән кешене күрҙе, һәм ул уға бик таныш тойолдо. Машина туҡталмай эргәһенән үтеп киткәс, ҡабырғалағы көҙгөлә ул түрәләрсә ныҡ, ҡалын елкәне шәйләне.

«Латипов! — Ильясовтың йөрәге туктала яҙҙы. — Ысынлап та шулмы? Ул, ул, бүтән кем булһын?! Ҡайҙа китеп бара икән? Танығандыр.Туктарға уйланы ла, иҫерек икәнде күргәс, туктатманы. Райкомдың беренсе секретарына юл буйлап иҫерек председателдәрҙе йыйып йөрөү генә етмәгәйне».

Уны «жигули» ултыртып алды — гараж мөдире Сәйфуллиндың ҡалала йәшәгән улы ауылдағы ата-әсәһенә ҡайтып бара икән. «Катастрофа, бөтә тормош емерелде, юкка сыкты», — тип уйлап аяҡ баҫты өйөнә Ильясов. Керҙе, өҫтөндәге лысма һыу, бысраҡ кейемен һалып ташланы ла диванға һуйлайҙы. Кис буйы ятты ла ҡуйҙы — бер нәмә лә уйламаны, бер нәмә лә теләмәне, бөттөм, тип ауырыуҙан һыҙланған кеше кеүек һыҙланыуын белде. Йоҡоға талды, йоҡоһо тынысһыҙ булды. Иртәнге яҡҡа ғына уянды, уяныу менән күҙе алдына беренсе секретарь Латиповтың ауыр йөҙө, ҡалын елкәһе килеп баҫты — юлда тап уның ҡыуып етеүенә ул хәҙер бер секунд та шикләнмәне. Тыуасаҡ көн Ильясовҡа ҙур ҡазалар килтерәсәк. Ул сәйнүктән һыу эсте лә кире ятты.

Эйе, тормошо килеп сыкманы Ильясовтың. Ауыл хужалығы академияһында укыған сағында бер ҡатлы уй-хыялдар менән йәшәй ине: диплом яклай ҙа ауылына ҡайта һәм үҙенең кем икәнен күрһәтә барыһына ла. Ярым-йорто белемле, наҙан, ҡарт председателдәрҙе юғары белем алған йәш белгестәр алыштырҙы. Яңыса, фәнни нигеҙҙә хужалыҡ итергә була, бөтә шарттар ҙа тыуҙырылған. Ә Ильясов тәүҙә үк көндәлек ығы-зығыға, ваҡ мәшәҡәттәргә батты, битараф, ялҡау, илке-һалҡы, тәртипһеҙ тормошка килеп инде лә уның элекке ғәҙәти юлынан китте лә барҙы. Үҙ аллы, инициативалы булырға тырышһа, уға ҙур портфелле иптәштәр былай тине: «Һин йәш әле, үҙеңә ул ҡәҙәре күп алма», «Һин үҙеңде генә аҡыллы тип уйлайһыңмы, ә беҙ, һинеңсә, дүрәктәрме?» Етмәһә, ярты ауыл нәҫел-нәсәп, дуҫтар: ҡунаҡка саҡыралар, түрҙән урын бирәләр, кәрәген ҡулына тотторалар. Үҙен түгел, ә түрәне яратҡандарын Ильясов тәүҙә аңлай алманы, баҡһаң, тирә-яғында дуҫтар булмаған, ялағайҙар, тәрилкә тотоусылар, тотолмаған бурҙар, ришүәтселәр өйөрөлгән икән. Быларҙы аңлай башлағанда һуң ине инде... Шунан бында, «Маяҡ» колхозына, күсерҙеләр. Ят ауыл, кешеләрҙе лә, ялан-баҫыуҙарҙы ла белмәй. Һәр ҡайһыһы, ярай, күрәйек, ниндәй фигура икәнһең, тип шикле, һынсыл ҡарай. Парторг менән ауыл

Советы рәйесе һинең менән бер мисәүҙә лә һымаҡ, ә нимә уйлағандарын, ниндәй фекер йөрөткәндәрен белерлек түгел. Улар өсөн Ильясов барыбер ҙә — килмешәк, иң насары — эш бармай. Әле береһе, әле икенсеһе. Бер тишекте ямап өлгөрмәй, икенсе ерҙән бүҫелә. Бесәнгә төшөр ваҡыт еткән — ямғырҙар башлана, электр тапшырыуында авария. Фермаларҙы ҡышҡа әҙерләргә кәрәк, ниһайәт, дүртенсе бригада өсөн аҙыҡ бутағыс килтерҙеләр — бушатыр өсөн краны юҡ. Өҫтәүенә, бынау ҡыҙыҡайы юғалып ҡуйҙы... Кем белә, шул аҙык бутағысты колхозға ике йыл элек бирһәләр, ҡыҙҙың әсәһе лә тере булыр, бала ла етем ҡалмаҫ ине, урманға сығып китеп аҙашмаҫ та ине. Ильясов, үҙенең тормошо, эше менән ҡыҙҙың юғалыуы араһында бер ниндәй ҙә бәйләнеш юҡ, тип үҙ-үҙен тынысландырырға тырышып ҡараһа ла, һис аҡлана алманы, барыбер ҙә ниндәйҙер ҡылығы, һүҙе, эшләнеп етмәгән эше бәләкәй кеше яҙмышына барып тоташа һымаҡ... Өҫтәүенә — бынау ысҡыныуы, тамам оятҡа ҡалыуы. Хәҙер нимә булыр? Тағы берәй ергә күсерерҙәрме? Ҡатыны ни әйтер?

Иртәнсәк башы сатнап уянды, бер тороп, бер ятып күпмелер ваҡыт этләнгәндән һуң, ҡаты ғына сәй эсеп шулай ҙа китте идараға. Үҙенең кабинетына сит кеше һымаҡ аяҡ баҫты. Уйында, кәйефендә ул хәҙер председатель түгел ине инде: эш тураһында уйлау, башланған көн мәшәҡәттәренә сумыу — файҙаһыҙ, мәғәнәһеҙ шөғөл. Парторг Наил керҙе, һәр ваҡыттағыса ҡул биреп иҫәнләште. Ильясов, ҡыҙҙы таптылармы, юҡмы, тип һорап торманы — тегенең йөҙөнән тапмағандары күренеп тора ине; хәйер, бала тураһындағы уй уның башына ҡыҫҡа ғына ваҡытҡа инеп сыҡты — бөгөн бала ҡайғыһымы, унан мөһимерәк эштәр бар. Парторгтың да кәйефе юҡ, ҡарашын ситкә ала, кисәге ваҡиғаны беләлер, күрәһең. Уның өсөн Ильясов хәҙер бөтөнләй ят, уның бында ултырыр-ултырмаҫы — хәл ителгән мәсьәлә. Эйе, гәҙәт буйынса ул әлегә өҫтәл артында ултыра, иртәнге кәңәшмәне үткәрҙе хатта, эш тураһында һөйләне, бурыстар ҡуйҙы, әммә былар барыһы ла төштәге һымаҡ. Ул дауыл көтә, шытырлатып урынынан алып ырғытыуҙарын көтә.

Сәғәт туғыҙҙа телефон шылтыраны. Йөрәге туҡтар хәлгә етеп Ильясов трубканы алғайны, Латиповтың ауыр бас тауышын ишетте:

— Латипов. Йә, эштәр нисек?

— Ҡаты ямғыр, линияла авария булыу сәбәпле, кисә көнө буйы тик торҙоҡ, — тине Ильясов.

— Беләм, — тип асыулы өҙҙө уны беренсе секретарь. — Һин, давай, һауа торошона һылтанма. Тағы: юғалған ҡыҙ менән нимә булды? Нишләп мин ул турала иң аҙаҡтан ишетәм? Һинән түгел, ә «Министр»ҙан?

Ильясов өндәшмәне, бите янғанын, маңлайына тир бәреп сыҡҡанын тойҙо, көскә-көскә генә:

— Беҙ уны эҙләнек, ике көн эҙләнек, таба алманыҡ... — тип яуапланы.

— Таба алманығыҙ ҙа тынысландығыҙмы? Йәштәрҙе ойоштороғоҙ, мәктәп балаларын сығарығыҙ. Мин бында пионерлагерҙан өлкәнерәк йәштәге малайҙарҙы ебәрергә команда бирҙем.

...Һәм трубканы һалды.

Күпмелер ваҡыт Ильясов шаңҡыған кеүек ултырҙы, шунан Латипов менән булған һөйләшеүҙе яңынан башынан үткәрҙе. Уйлана торғас, мейеһенә шул барып етте: беренсе секретарь кисәге ваҡиға тураһында бер һүҙ ҙә әйтмәне. Ильясов Латиповтың холҡон яҡшы белә. Шундуҡ әрләһә, һин шулай ҙа былай, тип ябырылһа, асыуын сығарып бөтөрөр ине, эш ҙурға китмәй, «оргвывод»ҡа етмәй туҡталыр ине. Әле өндәшмәгән икән, аҙаҡ ярлыҡау көтмә. Әле ҡысҡырманы, кисәгене иҫенә төшөрмәне, тимәк, мәсьәлә бюрола хәл ителәсәк...

Ильясов парторгка керҙе. Парторгтың кабинетына элек бер ҙә ингәне юҡ ине, әле керҙе. Керҙе лә Латиповтың шылтыратыуы тураһында әйтте. Уйлаштылар-уйлаштылар ҙа шәкәр сөгөлдөрөн утаған юғары класс уҡыусыларын алырға булдылар. Улар — ауылдан ете саҡрымдағы хеҙмәт лагерында, ямғырҙан һуң баҫыуға төшә алмай, моғайын да, палаткаларында яталарҙыр. Һауынсыларҙы йәйге фермаға йөрөткән автобусты ебәрергә кәрәк. Ә улары бөгөнгә бортлы машинала йөрөп торор.

Бер сәғәттән районДан пионерҙар килеп төштө лә, хеҙмәт лагерындағы йәштәргә ҡушылып, дүртенсе бригадаға юлланды. Ҡуҙғалған саҡта Ильясов тәҙрә янына килде һәм ҡала автобусының ямғыр тоноҡландырған тәҙрәһе аша «Министр»ҙың ҡыҙыл йөҙөн, аҡ һаҡал-мыйығын шәйләне...

Ҡыҙҙы таптылар. Тик бер айҙан һуң ғына. Дөрөҫөрәге, һөйәктәрен генә таптылар. Ауылдан биш саҡрымда, икенсе ферманан йыраҡ та түгел урында. Көтөүсе Сабит ҡурай еләге эҙләгән сағында һөйәктәренә килеп төртөлгән. Бала

приискының Ҡоро йылға эргәһендәге ташландыҡ тау тоҡомдары өйөмөнә тиклем шыуышып килеп еткән, тик уға күтәрелергә хәле етмәгән, күрәһең. Шул әллә ни бейек тә булмаған, йырып үткеһеҙ ҡуйы ерек, муйыл ҡыуаҡлыҡтары араһын үтһә, туп-тура көтөүселәргә юлығыр ине... Уны һары курткаһы, резина итектәренән танынылар. Итектәренең икеһе лә бер аяҡҡа ине...

## *Томан эсендәге яңғыҙ йорт*

Тормоштоң арҡыс-торҡос килеүе төндә телефон шылтырауынан башланды. Мышағыр ҡаяһынан тәгәрәгән таш һымаҡ аҫҡа осто китте әлеге тормош тигәнең. Көнө-төнө колхоз малы тип сапҡан ферма мөдире Мифтахов Рәйестең өйөнә ҡуйылған был аппарат ошоғаса уны һирәк борсоно. Әллә ни хәжәте лә юҡ ул телефондың, әммә юғарылағы түрәләрҙең тауышын әллә ҡайҙан да ишетһендәр өсөн бар белгестәргә лә штат буйынса ҡаралғас, нишләтәһең.

Ул кисте телефон бик үк һуң шылтыраны тип тә булмай, әммә үтә лә ваҡытһыҙ ине. Рәйес, «Шайтан» ҡушаматлы күршеһе Сәмиғтең көмөшкәһен байтаҡ һемергәндән һуң, диванына ауып ҡаты йоҡоға талғайны һәм, үҙенең ысын тормошон, күңеле һыуынған ҡатынын тамам онотоп, төшөндә малсы Шәүрәне баҫтыра ине. Ҡыуып етеп, бытовкаға төрткөләп индереп, этеп йыҡҡайны ғына... телефон шылтыраны. Рәйес телефонға үрелде. Йоҡо аралаш бынау ваҡытта кем борсоуын белергә тырышты — һуң шылтыратыуҙар бер ваҡытта ла йүнлегә түгел, етмәһә, үҙенсә юрауы ла бар: төшөңдә бисә-сәсә күрҙеңме — яҡшылыҡ көтмә.

— Але.

— Рәйес, партбилетың ҡайҙа ята?

Был — колхоздың бер һөмһөҙө, үҙ ғүмерендә араҡы һалынған стакандан да ауырыраҡ нәмә күтәрмәгән Әхмәтов Азат ине. Оҙаҡ йылдар идарала ыштан туҙҙырҙы: бухгалтер ҙа булды, профсоюз әһеле лә булып йөрөнө, һуңғы йылдарҙа — парторг.

— Төн уртаһында минең партбилет һиңә нимәгә кәрәк булды әле?

Рәйестең уйы йәшен тиҙлеге менән тырым-тырағай йүгерә башланы һәм тиҙҙән бер фаразға килеп төртөлдө: иртәгә районға, «үҙенә» бюроға — партбилетыңды өҫтәлгә һал, тиһә — нишләргә? Нимә өсөн? Хәйер, эҙләһәң, сәбәбен «һә» тигәнсе табырға була. Фермала тәртип юҡ, малсылар эшкә илке-һалҡы йөрөй. Йәйен ярай инде — үләне тамырына тиклем ашалған көтөүлектә һыйырҙар әҙ-мәҙ көрәйә, елендәре һөт менән тула. Малсыларҙың айныҡ сағы һирәк. Комбикорма урлайҙар, өйҙәренә ташыйҙар йә араҡыға алмаштыралар. Әрләү, тыйыу — файҙаһыҙ. Улар бит барыһы ла — туған-тыумаса, мәктәптә бергә уҡыған дуҫ-иш. Бөгөн — һин ферма мөдире, иртәгә — ул. Ә йәшәргә, мал аҫрарға кәрәк. Яҙғы яҡҡа мал ҡырыла, мартта тыуған быҙауҙарҙың һирәге генә күгүләнгә аяҡ баҫа. Ферма мөдиренә акт төҙөргә һәм ҡул ҡуйырға ғына ҡала. Билдәле, документтар урыҫ теләндә тултырыла, һыйырҙы «үлде» тип яҙыуы әллә нисек һымаҡ, сөнки ул кеше түгел, әммә кешегә ғәзиз, уны ризыҡландырыусы йән эйәһе. Шулай булғас, ул бөтә акттарға ла «ауҙы» тип яҙа. Малдан яман, кеше ҡырыла. Бынан бер аҙна элек кенә малсы Йәүҙәт көмөшкә эсеп үлде. Көмөшкәнән һуң «тройной» одеколон өҫтәгән икән, тинеләр, шунан мунсаға киткән, ныҡ сабынған да, хәле бөтөп, эләүкәлә йән биргән.

Мөдирлектән кит, етмәһә, партбилетыңды сығарып өҫтәлгә һал, тиһәләр, ҡайҙа башын тығыр Рәйес? Йәүҙәт урынына сығырмы? Эйе, авторучканан да ауырыраҡ нәмә күтәрмәй торған, төрлө «саңһыҙ» эштән элек тә бушаттылар — бригадир булып йөрөнө, ялҡауҙар, эскеселәр менән әрләште, келәт мөдире вазифаһын атҡарҙы, әйткәндәй, ихтирамлы һәм тамағың туҡ йөрөй торған эш, ите-балы үҙ ҡулыңда. Шешәләш дуҫтары күбәйеп китте, ҡайҙандыр быға тиклем белмәгән туған-тыумаса табылды. Апаһының улы уҡыған институттың ректорына егерме килограмм бал биреп ебәрҙе. Ул балды үлсәп тора буламы, ҡағыҙға нисә тип яҙаһың, шунса була ла ҡуя. Әммә ҡайһыһылыр ошаҡлаған, китте хәбәр, китте һүҙ. Алдылар эшенән. Ярай ҙа, мал тиҙәге кисеп йөрөргә ебәрмәнеләр, ә шул кисеп йөрөүселәрҙең начальнигы иттеләр, йәғни ферма мөдирлегенә генә күсерҙеләр. Сөнки тереләрҙән тере Владимир Ильич профиле төшөрөлгән ҡыҙыл ҡатырғаһы — һәр батып барыусыны ҡотҡарған ҡалҡыуысы бар ине. Тормош даръяһына төртөп төшөрәләр икән, батма, түҙ, кем белә, бәлки, берәй утрауға йөҙөп барып етерһең, кибенерһең,

шунан йәнә берәй ҡалҡыулыҡҡа үрмәләп менергә тырышырһың. Ә был юлы ҡотолоу мөмкинлеге ҡалдырмай ырғытырҙар, ахыры...

— Һин, нимә, радио тыңламайһыңмы ни?

— Нимә булған һуң?

— «Нимә булған, нимә булған?» — Азат асыуланып Рәйестең һүҙҙәрен ҡабатланы. — Мәскәүҙә переворот. Верховный Советты ҡулға алғандар, хөкүмәт таратылған, коммунистарҙы стенаға терәйҙәр.

— Кемдәр терәй?

— Кемдәр икәне билдәле инде: совет власы дошмандары. Коммунистар списогын мин яндырҙым, ҡайһы бер иптәштәрҙе иҫкәрттем, ә һин Мәрфуғаға әйт. Партбилеттарығыҙҙы яндырмағыҙ, баҡсағыҙҙың берәй мөйөшөнә күмеп ҡуйығыҙ.

Был тауыҡ тиҙәге һалынған көмөшкә эскән дә, аңы томаланып, мине шаярта, тип уйланы тәүҙә Рәйес, шуны һорайым тигәнсе, тегеһе трубканы ташлап өлгөрҙө. Партбилет һынлы партбилет менән шаярмайҙыр инде, тигән уйға килде үҙе тағы, Азаттың әйткәндәре зиһененә ныҡлап барып еткәс, бар булмышын ҡурҡыу баҫты, башы томаланды. Хәйер, үҙенең меҫкен яҙмышы ғына пыран-заран килерен көткән аңы ишеткәндең мәғәнәһенә барыбер ҙә төшөнөп етә алманы — тимәк, өйрәнгән, күнеккән тормоштоң ахыры килде. Албырғаған мейеһе иһә бер генә һүҙҙе: «Булыуы мөмкин түгел, булыуы мөмкин түгел», тигәнде ҡабатлап тик торҙо.

Мәрфуға урам аша ғына тора. Ул — ауылда ҡатын-ҡыҙҙарҙан берҙән-бер коммунист. Көс ярҙамында барлыҡҡа килтерелгән һәм бөгөнгө көнгә тиклем йәшәгән Сталин социализмын тотоп торған миллион ҡатын-ҡыҙҙың береһе, һуғыштан һуңғы ауыр йылдарҙа йәш кенә көйө тракторҙа ер һөрҙө, өҫтәүенә, колхоз уны йылдың-йылы урман ҡырҡыу, һал ағыҙыу һымаҡ иң ауыр эштәргә лә ебәрә торғайны, һуңынан, ғүмер буйы, тамам эшлектән сыҡҡансы, ҡолаҡ ишетмәгән әллә күпме сир йыйып, һыйыр тиҙәге кисте, кәкерәйеп бөткән бармаҡтары менән колхоз һыйырҙарының елененән һөт һыҡты. Үҫмер сағы һуғыш осорона тура килгәнлектән, мәктәпкә йөрөй алманы, ҡара наҙан тороп ҡалды. Төнгө күктәге йондоҙҙарға бер ҡасан да уйсан күҙ һалмаған ауылдағы күпселек ҡатын-ҡыҙ ише, ул да ҡыштың ни өсөн йәй менән алмашыныуын, ҡояш сығыуҙың, ҡояш батыуҙың сәбәптәрен белмәй ине. Егәрле

малсы булғаны өсөн уны партияға алған саҡта, нимә ул коммунизм, тигән һорау биргәстәре, «әҙерәк эшләйәсәкбеҙ, күберәк ял итәсәкбеҙ» тип яуап биргән. Ирҙәр унын бер ҡатлы хыялынан рәхәтләнеп көлә, ә ысынлап та егәрле, тынғыһыҙ икәнен, таң һарыһынан тороп эшкә китеүен, ҡараңғы төшкәс кенә ҡайтыуын бик яҡшы беләләр. Кешеләрсә ял да итә белмәне: ял йортона бушлай путевка бирәләр, бер нисә көндән ҡасып ҡайта, йәнәһе, өс аҙна буйы һыйырҙары унһыҙ нишләр?

Иргә лә сығып ҡараны. Күрше ауылдан дөм эскесе Әхмәй, ҡатыны ҡыуып сығарғас, уға өйҙәш инеп, тамам елкәһенә ултырҙы. Ауырға ҡалды, ауыры төштө — Әхмәйе эсенә һуҡҡанмы, типкәнме, тип һөйләнеләр ауылда. Мәрфуғаның Вәзих менән Мәүлит исемле бер туған һәм ике туған ҡустылары шунын өсөн Әхмәйҙе һыу эскеһеҙ итеп туҡмағандар ҙа, арбаға бәйләп һалып, старателдәрҙән ҡалған һыу тулы шурф янына алып барғандар, тағы беҙҙең ауылда күренһәң, мәйетең ошонда булыр, тип ҡурҡытҡандар.

Мәрфуғаның сатлама һыуыҡтарҙа туңған, йәйге селләләрҙә көйрәгән йөҙөн сибәр тип әйтеп булмай, шул уҡ ваҡытта йәмһеҙ тип атарға ла тел әйләнмәҫ: һомғол буйлы, мул түшле ҡатын, йәш сағында бик тә һөйкөмлө, ылыҡтырғыс ине ул. Үҙенән ун йәшкә өлкәнерәк булһа ла, хатта Рәйес тә уға һеләгәйен ағыҙып йөрөгәйне заманында. Бер ваҡыт, ниндәйҙер йомош менән кергәнендә, өйөндә уны оҙон сәсен тағатҡан килеш, ябай һәм ымһындырғыс итеп күргәс, үҙен-үҙе тыя алмай ҡыҙышты ла китте бит. Ташланғас, әллә ҡурҡышынан, әллә аңышлығынан, Мәрфуға ҡаршылашманы ла ҡуйҙы. Рәйестең ҡатыны ауырлы, шунлыҡтан «ас» йөрөгән сағы. Урланған ләззәт ифрат татлы тойолдо уға, һәм күршеһенә йышланы. Сираттағы ултырыштан йәки йыйылыштан һуң баҡса артынан ғына килә лә, ел ҡапҡаны шым ғына асып, бикһеҙ соланға инә...

Ҡатынының холоҡ-фиғелендәге үҙгәреште ул оҙаҡ һиҙмәй йөрөнө. Бер ваҡыт колхоздың элекке парторгы Рәсүлев саҡырта: «Һин ир кеше, мин ир кеше, һин дә бисәләр яратаһың, мин дә яратам, тик давай, һин алдыңды-артыңды ҡарап йөрө», — ти. Баҡһаң, ошо һантый Мәрфуға кергән дә Рәйестең бисәһенә: «Ирең миңә йөрөй, нишләйем, йөрөһөнмө, әллә тыяйыммы?» — тигән. Ә бисәһе барған да парторгка ошаҡлаған. Шунан бирле Рәйес күршеһенә аяҡ баҫҡаны юҡ.

Рәйес ун биш йыллап кермәгән ихатаға керҙе, солан ишеген тартты ла шаҡыны. Аяҡ тауыштары ишетелде.

— Кем?

— Был мин — Рәйес, ас әле.

— Төн уртаһында нимә кәрәк?

Иҫәр бисә, күрше иҫке йомошо менән килгән, тип уйланы, ахыры.

— Үбешергә килмәнем, мөһим эш бар, ас.

Асты. Рәйес ҡараңғы солан аша яҡтыртылған бүлмәгә инде. Теге ваҡыттарҙан бирле өйҙә бер нәмә лә үҙгәрмәгән. Шул уҡ йыһаз, шул уҡ көнкүреш әйберҙәре. Ҡәҙимге, бигүк бөхтә булмаған тормош.

— Партбилетың ҡайҙа?

Көтөлмәгән һорау бисәне тамам ҡурҡыуға һалды — күпмелер ваҡыт күҙҙәрен ҙур асып өнһөҙ торҙо, яйлап аңына килеп, тамаҡ төбөнән бер нисә һүҙ һығып сығарҙы:

— Мин взностарҙы ваҡытында түләй барам.

— Партбилетың ҡайҙа, тип һорайым. Взносың миңә кәрәкмәй.

— Бәй, шкафта, пенсия кенәгәһе менән бергә ята.

— Алыҫҡараҡ йәшер.

— Ниңә?

— Мәскәүҙә переворот. Верховный Советты ҡулға алғандар. Коммунистарҙы аталар, ти.

Йәнә оҙаҡ ҡына өндәшмәй торғандан һуң, ҡатын:

— Мине лә атырҙармы икән? — тип һораны.

— Аталар, һин дә коммунист бит.

— Ой, мужит, бисәләргә теймәҫтәр, ә?

— Белмәйем. Ә партбилетыңды ышаныслы ергә йәшер.

— Ҡайҙа йәшерәйем һуң?

— Ҡайҙан беләйем, әммә йәшер! — тине Рәйес, тауышын күтәреп. Шунан күршеһенә йәнә бер аҡырайып ҡараны ла ишекте шарт ябып сығып китте.

Иртәгәһенә иртәнсәк ауылға, райкомдың беренсе секретары иптәш Латиповты кабинетында инфаркт йыҡҡан, больницала, реанимацияла ята икән, тигән хәбәр килеп етте.

Кейеменә тупраҡ, тиреҫ еҫе һеңгән, һауа торошонан гел генә афәт көтөп йәшәгән ауыл халҡының, үҙ хужалығында һәм фермала бил бөккән әҙәм балаларының донъяла иң ҡурҡҡаны — боҙ яуыу, июндә ҡырау төшөү, үлтергес эҫелек. Ошоларҙан ҡоттары алынып бөткән колхозсы

иргә, колхозсы ҡатынға тешле-тешле Кремль стеналары артында нимә эшләнгәне — үтә алыҫ һәм аңлашылмаҫ нәмә. Хәйер, улар быныӊ менән ҡыҙыҡһынмай ҙа. Теге төнгө телефон шылтырауынан һуң Рәйестең көнкүрешендә лә, үҙ мәшәҡәттәренә сумып көн иткән ауылдаштарының тормошонда ла бер нәмә үҙгәрмәне. Бисәләр элекке кеүек үк таң һарыһынан тороп һыйыр һауҙы, һыуға барҙы, кисәге эскенән баштары сатнаған ирҙәр баш төҙәтеү сараһын эҙләне.

Больницанан сыҡҡан беренсе секретарь үҙенең кабинетына кире ҡайтманы, уның йомшаҡ креслоһына ныҡлап икенсе секретарь, йәшерәк кеше, күсеп ултырҙы. Коммунистарҙы ҡулға алманылар, күптән һөрөлгән кулак Ғәлимдәрҙең таш аҙбар стенаһына терәмәнеләр, ун туғыҙынсы йылда ауыл кулактары ҡыҙыл партизан Саҙрыйҙы һәнәк менән сәнскән һымаҡ, ауылдың баш коммунисын сәнсмәнеләр, утыҙ етенсе йылдағы кеүек, атлы милиция оҙатыуында арестанттар тейәлгән ылауҙар ауыл буйлап үтмәне. Әлхәмдилилла!

Ярты йылдан һуң, яртылыҡ банкыға тығып баҡсаһына күмгән партбилетын ҡаҙып алғас (Мәрфуға таба алманы, ҡурҡышынан ҡайҙа йәшергәнен онотҡайны), Рәйестең тормошонда нимәлер үҙгәрә, һына башланы. Тәүҙә тауыштынһыҙ ғына колхоз председателе Илһамов осто, дөрөҫөрәге, аҫтындағы йылы креслоның ҡаҡшай башлағанын һиҙеп шым ғына юҡҡа сыҡты ла ҡуйҙы. Илһамов бригадир Муллаәхмәттең улы ине. Колхоз түрәләренең балаларына хас булғанса, ситтән тороп ауыл хужалығы институтын тамамланы ла үҙен игенселек буйынса ҙур белгес итеп һананы. Ә ғәмәлдә арпаны бойҙайҙан саҡ айыра, сөнки бер ваҡытта ла сәсмәне, урманы, һуҡманы. Уның урынына, күрше рудниктағы ирҙәр әйтеүенсә, теле телгә йоҡмай һөйләргә өйрәнеп алғайны. Ул аҡыллы фекерҙәр әйтеп социализм ҡоролошо өсөн нисек удар рәүештә тирләпбешеп эшләргә кәрәклеген өйрәткән саҡта, колхозсылар шым ғына тыңлай торғайны. Ә теге креслоһынан төшөү менән, хәтәр ҡыйыуланып киттеләр, телдәрен оҙонайттылар, хатта «демократ» тип әрләргә тотондолар. Быға тиклем күңелдәренә йыйып йөрөгән уйҙарының бөтәһен дә әйттеләр: колхоз иҫәбенә өс йорт һалды, ике машинаһы бар, «Нива»һы, «Волга»һы, ҡатын-ҡыҙ менән типтерҙе, йыш ҡына күҙ алмалары ҡыҙарып йөрөнө — быныһы инде хужаның эскелегенән йонсоған бауыр сиренән.

Тамам ҡыйыуланып киткән колхозсылар оҙаҡламай шуға барып етте: йәнәһе, ул һыйыр фермалары, келәттәр төҙөү өсөн килмешәк әрмәндәрҙе яллаған, әрмәндәрҙең бригадиры ведомосҡа ҡул ҡуйған, әммә аҡсаның тик яртыһын ғына алған, икенсе яртыһының ҡайҙа икәнен колхоздың бухгалтеры ғына белә. Ә бухгалтер — председателдең туғаны. Бындай хәбәрҙе әүәле колхозсылар туғантыумасаһына, күршеһенә, хатта хәләл ҡатынына ла һөйләмәй торғайны — ишетһәләр, бәләһенән баш аяҡ, эштән сығарыуҙары, хатта ултыртып ҡуйыуҙары ла ихтимал. Шулай итеп, ҡыйыуланып киткән колхозсылар ҙур түҙемһеҙлек менән, Илһамовты район прокуроры саҡыртыр һәм ул тыуған илдең бейек күгенә төрмә рәшәткәһе аша ҡарап ултырыр, тип көттө. Ысҡына алһа йә түрәләр өйөрө уны йәлләй ҡалһа, колхозсылар уны кәм тигәндә элек үҙе хужа булған мал фермаһы эшселәре араһында күрҙе...

Илһамов урынына әллә тәғәйенләнеләр, әллә һайланылар, тигәндәй, хәйер уның айырмаһы ла юҡ инде, кем белә, бәлки, үҙе менеп ултырғандыр, колхоздың келәт мөдире Шайморатов Хәким председатель булып китте. Быға тиклем түрәлектә йөрөмәгән, боҙолмаған, уғрылыҡта тотолғаны юҡ, күҙ ағы таҙа, машинаһы ла юҡ, бер генә йорт ултыртҡан кеше, утыҙынсы йылда кулактан тартып алынған таш келәт хужаһы. Ә келәт тулы аҙыҡ-түлек, ризыҡ, шуға ла ул үҙенең күп һанлы туғандары араһында ғына түгел, район, хатта өлкә түрәләре араһында ла билдәле кеше. Әсәһе — уҡытыусы, атаһы ғүмер буйы ауыл Советы председателе булып эшләгән, ауыл хужалығы институтын шулай уҡ ситтән тороп тамамлаған. Һөнәре генә икенсе — инженер-механик.

Ситтән тороп белем алған бөтә аграрниктар кеүек үк, уның да колхозды хужаһыҙлыҡтан, ялҡаулыҡтан, эскеселектән тартып сығарыу хыялы бар — бер көн, данын бөтә Башҡортостанға таратып, түшендә Алтын Йондоҙ миҙалы ялтырауын көҙгөлә күрәсәк ул...

Эште Хәким ферманан башларға булды. Тиреҫ баҫҡан иҫке фермала арыҡ һыйырҙар ҙа, хатта төнөн, комбикорма кәрәкмәйме, тип мал аҙығын араҡыға йәки көмөшкәгә алыштырған иҫерек малсылар ҙа борсомай уны: яңы председатель фекеренсә, ферманың серек, емерелә барыуында улар түгел, ә ферма мөдире ғәйепле. Ҡайһы ҡабырғаһынан эләктерергә, нindәй ғәйеп тағырға һуң? «Колхозсы урлашмай, үҙенекен ала, — тиәсәк Рәйес. — Алмаҫ ине, колхоз уға

эш хаҡы түләмәй. Эйе, эсә. Һин ауылда эсмәгән берәй кешене таба алаһыңмы? Һин — председатель, үҙеңдең хужалығыңда, әйҙә, үҙең тәртип урынлаштыр».

Колхоздың һәр етәксе-заочнигының тәғәйен үҙ транспорты бар. Председатель «Нива»ла йөрөй, ҡалғандар: ике агроном, бригадирҙар, зоотехник, баш механик — шытырлыҡтары сыҡҡан төрлө машиналарҙа. Бер Рәйес кенә, үҙе йөрөтә белмәгәнлектән, — водитель тотоуы ҡыйбат — атта. Йәйҙәрен — ат тире, ат тиҙәге еҫкәп ҡойолорға әҙер иҫке арбала, ҡышын — кашауайҙа.

Бер мәл, шайтан ҡотортҡандыр инде, әлеге кашауайы төбөнә ярты тоҡ комбикорма һалды ла өҫтөнә бер ҡосаҡ бесән ташлап ҡайтырға сыҡты. Ҡапҡа төбөндә Хәким менән ауыл Советы председателе Рифҡәт көтөп тора. Хәким ҡулы менән бесән аҫтын һәрмәне лә тоҡто һөйрәп сығарҙы: «Урлашаһыңмы?» — «Әйтерһең, һин үҙең урлашмайһың?» — тип әтәсләнде Рәйес. «Мин үҙем һымаҡ бурҙарҙыҡын урлайым, ә һин һөт биргән файҙалы малдың аҙығын урлайһың, — тип яуапланы председатель. — Етмәһә, үҙеңдең ҡул аҫтында эшләгәндәргә насар өлгө күрһәтәһең».

Ике түрә ҡараңғылыҡ эсенә инеп юғалғас, Рәйес байтаҡ ҡына уйланып баҫып торҙо, шунан, барайым, йә акт төҙөргә килерҙәр, тип фермаға кире китте. Килмәнеләр, төҙөмәнеләр, әммә иртәгәһенә үҙенең «тиреҫле» вазифаһынан осто Рәйес. Икенсе ҡалҡыу урынға күсеп ултырыу өсөн партбилеты ла ярҙам итмәне, сөнки ҡыҙыл билет үҙенең элекке юғары күтәреү ҡеүәтен юғалтҡайны инде. Өҫтәүенә, бер ҡалҡыу урын да буш түгел ине. Ябай малсы булып эшкә сығырға ғорурлығы ирек бирмәй, унан килеп, үҙенең барыбер ҙә ябай түгел, ә яҡты коммунизм төҙөүсе етәксе икәненә инанған фекере, халыҡ ҡабул иткән түрә исем-вазифаһы ла бар бит әле. Шулай итеп, ул яҡты көндәргә илтеүсе киң магистраль юлдың ситендә тороп ҡалды. Үҙенә ситтән, ауылдаштар күҙе менән ҡарап, күңелһеҙлеккә бирелде, әйтерһең дә, бәләкәй генә кәүҙәле ир ишаратынан кейемен һалдырып алдылар ҙа бөтә ғәм алдында яшыҡ ҡабырғалары беленеп, бөкрөһө күренеп торған имәнес бәндә рәүешендә баҫтырып ҡуйҙылар. Урамға сыҡҡыһы, кешеләр күҙенә салынғыһы килмәне. Уларҙың ҡарашында әлегә әйтелмәгән, әммә күпмелер ваҡыт үткәс мотлаҡ әйтеләсәк ҡәнәғәтһеҙлек күрҙе: әһә, кәрәгеңде алдыңмы, донъя — ҡуласа, әйләндереп бер баҫа, ниһайәт, Рәйес, һине лә баҫты!

Ә былай, тыштан ҡарағанда, бер нәмә лә үҙгәрмәгән төҫлө. Бисәләр әүәлгесә таң һарыһынан тороп һыйыр һауа, ирҙәр тиҙәк таҙарта, тәмәке көйрәтә, йәй көндәрендәге һымаҡ урам буйлап йырлап-ҡысҡырып йөрөмәһәләр ҙә, ауылда айныҡ кешене табыуы ҡыйын. Уларҙың мейеһендә нимә булғандыр, изге уй йәки тормош ғибрәттәренә ҡарата битарафлыҡмы, бер кем дә белмәй, хәйер, уй-хыялдары ла зәғиф, етлекмәгән, бейеккә, йондоҙҙарға осоп етерлек булмағандыр, хәбәрҙәре күберәк һыйыр, тиреҫ, ашау, эсеү тураһында. Айныҡ саҡтарында баштарын тормош ауырлығы, тормош ғәҙелһеҙлеге, телевизорҙан, радионан һөйләнгән алдаҡтан ауыр уйҙар биләһә, кешеләр күнеккән ғәҙәт буйынса өндәшмәй, фекер алышмай, хатта ҡатындарына ышанмай, бисаралар.

Сәғәт ундарҙа, тәҙрәләрҙә уттар һүнгәс (телевизоры булғандар ҡараңғыла ҡарай), ауыл бынан йөҙ, ике йөҙ йыл элекке халәтендә, ҡар өйөмдәренә күмелеп, ауыр тынлыҡҡа сума...

Шулай ҙа үҙгәрештәр бар ине. Иң ҡыҙығы шул: председатель Илһамов, колхозсылар көткәнсә, аҫҡа тәкмәсмәне, улар менән фермаға эшкә сыҡманы, киреһенсә өҫкә үрләне — райондың ауыл хужалығы идаралығы начальнигы булып китте. Ул үҙен төрмә рәшәткәһе артында йәки, иң яҡшыһы, фермала үҙҙәре менән бергә шыйыҡ тиҙәк кисеп йөрөүселәр араһында күрергә теләгәндәргә кукиш күрһәтте лә телефонлы ҙур өҫтәл артындағы тағы ла йомшағыраҡ креслоға барып ултырҙы. Йылы һәм тыныс кабинет, ҙур ҡабул итеү бүлмәһе, килеүселәрҙе ҡаршы алып ултырыусы мул түшле йәш секретарша.

Партбилеттарын ҡайҙа йәшергәндәрен онотмаған бүтән түрәләр ҙә йә күрше кабинетҡа, йә яңы креслоларға күсте. Уларҙы администраторҙар тип йөрөтә башланылар. Ауыл Советы бинаһы ҡыйығында ҡурай үләне төшөрөлгән флаг елберләне, яңы һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр барлыҡҡа килде: «баҙар», «баҙар иҡтисады шарттары». Ауылдың наҙан әбейҙәре, ҡалала яңы баҙар асыла икән, унда һөт, ҡаймаҡ, ҡорот алып барып һатырға була, тип һөйләнде. Ә «капитализм» һүҙен дөрөҫ аңланылар — хеҙмәтсән халыҡтың ҡан дошманы, ул беҙгә йә «һалҡын һуғыш» менән килә, йә халыҡтан икенсе икмәкте тартып алыр өсөн совет баҡсаларына колорадо ҡуңыҙын ебәрә. Тораҡ «олигарх» һүҙе пәйҙә булды. Ҡайһыһылыр, ул һүҙ беҙҙең телдә «бур» тигәнде аңлата икән, тип асыҡлыҡ индерҙе. Ауылда

иң урлашҡан кеше Сәмиғ-шайтан иҫәпләнгәс, уны бынан ары «олиғарх» тип йөрөтә башланылар.

Рәйес һаман эшһеҙ ята. Уны бер кем дә сираттағы ҡалҡыулыҡҡа саҡырмай. Үҙен кәрәкһеҙ тойоуҙан, асыу-үпкәһенән ул нык ҡайғырҙы, кәмһенде, был тойғо кешеләрҙе, шунан етәкселекте, үҙен кәмһеткәндәрҙе, беренсе сиратта, Шайморатов Хәкимде күрә алмауға килтерҙе. Бер тапҡыр әҙ генә комбикорма, бер ҡосаҡ бесән сәлдергәйне, шундуҡ тотолдо. Сәсрәйһеңме ни?! Кеше көн һайын ташый — бер ҙә эләкмәй. Үткән йылғы һыуыҡ яҙҙан, ҡыуан килгән йәйҙән һуң бесәнде етерлек әҙерләй алмағайнылар шул, март айында уҡ һаламға күстеләр, ә быҙаулар һыйырҙарға яҡшы, туҡлыҡлы аҙыҡ кәрәк. Ферманан, кеше кеүек, әҙерәк комбикорма, бесән алып ҡайта алмайһыңмы ни, тип ҡатыны игәне лә игәне бит. Бөтә бисәләр кеүек, уның да иҫәр бисәһе ирен, Рәйесте, намыҫы таҙа, ғәҙел етәксене, уғрылыҡ юлына этәрҙе. Малсылар урлай, әммә улар бер ҡасан да уның ише йүләрҙәрсә тотолмай. Ә Рәйес бер тапҡыр алды һәм эләкте. Нисек эләкте бит әле! Ҡайтып еткәс, ике түрә тарафынан тотолдо. Элекке заманда партбилетлы Рәйескә, шул бер ҡосаҡ бесән менән ярты тоҡ комбикорма алған тип, бер кем дә иғтибар итмәҫ ине. Ул саҡ коммунистар урлашмай ине, урлашһа ла, коммунисты ултыртмайҙар ине.

Сволочь булып сыҡты ла инде был Хәким! Класташ, армияға ла бергә киттеләр, бер йылда өйләнештеләр, берберееһенең туйында йөрөнөләр... Рәйестең эсе ҡайыша, үс алыу теләге менән яна. Әлегә иң шатлыҡлыһы шул: коммунистар йәнә власта, партбилет элекке кеүек үк мөғжизәле көскә эйә. Кем белә, Рәйес, ауылда иң тоғро коммунист булараҡ, колхоз председателе лә булып китер әле. Ниңә булмаҫҡа, ҡарт түгел, етәкселек итеү стажы ҙур, халыҡ менән эшләү тәжрибәһе лә етерлек. Ә Хәкимдең урыны — ферма, эше — колхоз һыйырҙарының ҡойроғон бороу. Үҙенең малына берәй ус комбикорма алып ҡараһын — председатель булып алһа Рәйес, уны нишләтергә белер ине...

Асыуынан һәм үпкәһенән, ошо ауыр көндәрҙе берәй ҡараңғы мөйөшкә сумып йоҡлап үткәрәһе килә Рәйестең. Ирҙәр Сәмиғ-шайтандың ишеген тәүлектең теләһә ҡайһы сәғәтендә шаҡыйҙар йәки шаҡымай ғына инәләр. Хужа ауылдаштарының был ҡылығына өйрәнеп бөткән, ҡатыны ла мыжымай. Еҙ торбалы аппарат аша ҡыуған «Сәмиғулла»

тип аталған эсемлекте кемдер үтескә, кемдер осһоҙға ғына һатып ала. Урыҫса «сами гоним» тигән һүҙ шулай итеп кеше исеменә әүерелгән дә киткән халыҡ араһында.

Ошо көмөшкәне ҡыуҙырыусы Сәмиғулла — «Контра» ҡушаматлы балта оҫтаһы Абдулланың улы. Колхоз эшенән ситләшкәне өсөн, һуғыштан һуңғы йылдарҙағы хужалыҡ етәксеһе Хоҙайбирҙин уға шулай тип ҡушамат таҡҡан. Ул, ысынлап та, дөйөм эшкә сыҡмай берәйһенә өй йәки мунса бураған, күрше приискыла йәки алыҫ совхозда шабашкала йөрөгән икән. Ауылда оҫталар, гармунсылар эскегә һалышып, иртә китте теге донъяға. «Контра» ла, ҡалала йәшәгән ҡыҙын, «Шайтан» ҡушаматы тағылған әлеге Сәмиғулланы етем ҡалдырып, бауыр сире менән йәшләй генә үлеп китте. Сәмиғулланы «Шайтан» тип маһир бур булғаны өсөн генә түгел, хатта бер ҡасан да тотолмағаны өсөн дә түгел, ә бер үк ваҡытта колхоздың бер нисә яланында була алыу һәләте өсөн атағандар.

Бер ваҡыт Абдрахманов Мәхмүттең бисәһе үҙҙәренең бесәнлегенә килһә — Сәмиғулла шунда, ти. Салғыһын яный, кеше яланын сабырға йыйына. Мәхмүт бисәһе: «Һин бында нишләйһең, был бит беҙҙең сабынлыҡ»,— ти икән. «Юҡ, минеке, йылдың-йылы мин ошонда сабам»,— тип яуаплаған был, бер ҙә иҫе китмәй. Мәхмүт бисәһе быны әрләгән-әрләгән дә, еңә алмаҫын самалап, ауылға иренә ошаҡларға ҡайтып киткән. Ире күршеһенән мотоцикл һорап тороп, яланға елдергән. Барһа, бер кем дә юҡ! Ауылға кире әйләнеп ҡайтҡан, Сәмиғулланың ҡатынына кереп, иренең ҡайҙалығын һораған. «Талышманға бесәнгә китте»,— тигән бисәһе. Мәхмүт Талышманға китә. Барһа, Сәмиғулла үҙенең яланында бесән сабып йөрөй!

— Минең бисә һине, беҙҙең яланда саба, тип ҡайтып әйтте ләһә?

— Ҡасан күргән?

— Яңыраҡ, бер сәғәт, сәғәт ярым самаһы элек.

— Бәй, нишләйем мин һинең бесәнлегеңдә? Булманым мин унда, үҙең беләһең, мин ғүмер буйы ошонда сабам.

— Алдаймы икән ни әтеү?

— Белмәйем. Үҙең уйлап ҡара, һинең бесәнлеккә тиклем ете саҡрым, шул арала мин ошонда килеп етә аламмы?

Ошондай сәйер хәлдәр байтаҡ була. Икенсе ваҡыт Сәмиғулланы Ҡоро йылға буйында күрәләр. Был ҡыуаҡлыҡтар араһында көтөүҙән урлаған һарыҡты сала икән. Ирҙәр бурҙы тоторға һәм, ниһайәт, үҙҙәрен күп тапҡырҙар

тишек шоманға ултыртҡан әҙәмдең кәрәген бирергә йылға буйына йүгерә. Барһалар, бер кем дә юҡ. Ә Сәмиғулла ошо мәлдә күршеһенә өрләк күтәрешеп йөрөй... Бындай хәлде Сәмиғ-шайтан ошолай аңлата: шайтан уны яратмай, ул Сәмиғкә әүерелеп әле бында, әле тегендә кешеләрҙең күҙенә күренә, күҙ бәйләй һәм гел генә нимәнелер урлаған һымаҡ ҡылана. Был — ауыл халҡын уға ҡаршы ҡотортоу, уның намыҫлы колхозсы исемен бысратыу маҡсатында эшләнә. Берәүҙәр Сәмиғтең хәбәренә ышана, икенселәр, уның сихырсы өләсәһен хәтерләп, Сәмиғ ысынлап та шайтан менән бәйләнештә, ул ғына Сәмиғте әле бер ергә, әле икенсе ергә осортоп алып барып ташлай, тип иҫәпләй. Алма ағасынан йыраҡ төшәме?

Сәмиғ-шайтан көмөшкәне совет осоронда ла ҡыуҙы, тик йәшертен генә. Ауылда намыҫлы колхозсылар күберәк ине ул заманда. Төнөн тышҡа сыҡһалар, һиҙәләр, әһә, Сәмиғулла ҡыуа теге нәмәһен! Ә иртәнсәгенә участковый Йәғәфәров аппаратын алып китә, штраф һала йәки уны-һынан да аламараҡ нәмә уйлап сығара. Унан бер стакан «первач» менән генә ҡотолормон тимә. Былары элек ине, хәҙер власҡа демократтар килеп, совет власының ҡаты тәртиптәрен юҡҡа сығарғас, Сәмиғулла бер кемдән дә өркмәй-ҡурҡмай, эшен киң йәйелдереп ебәрҙе, шәхси предприятие асты.

Ифрат ҡаты килеп сыға Сәмиғулланың көмөшкәһе. Сәмиғ-шайтан уға тауыҡ тиҙәге лә ҡуша, тип һөйләйҙәр. Тауыҡ тиҙәге хаҡында, әгәр уны мунса ташына һипһәң, кеше шул тиклем иҫерә, ағыулана икән, шайтандар, бапаҡтар менән бергә йыуынған һымаҡ күҙенә күренә башлай, мунсанан сыҡҡас, ҡатынын да танымай тора, ике стакан эскәндән һуң кеше шундай ләззәткә сума, һуңынан, айныған, әлеге эсемлекте көҫәп тик йөрөй, имеш.

Сәмиғ-шайтан үҙенең көмөшкәһен эсмәй тиерлек, эсһә лә бик әҙ миҡдарҙа ғына. Дегустацияны, гәҙәттә, ҡатыны Мәликә яһай. Ҡасандыр Рәйес уға ғашиҡ булып йөрөгәйне, армиянан әзмәүер кәүҙәле Сәмиғ ҡайтып төштө лә урланы ҡуйҙы ҡыҙҙы. Көмөшкәне тәмләй-һынай торғас, Мәликә яйлап үҙе лә эскесегә әйләнде. Рәйес сибәр ҡатынға һаман тамшана,теләгән ҡандырыу өсөн уның яңғыҙын, иҫерек, хәлһеҙ-көсһөҙ сағын тура килтерергә тырыша.

Көмөшкә ҡыуырға Сәмиғ-шайтанға уның ун биш йәшлек улы ярҙамлаша: буш шешә йыя. Ә ул тауар һыу буйында, тәбиғәт ҡосағында, көтөүселәр усағы янында,

бесәнселәр йәйләүендә әллә күпме. Әйтергә кәрәк, Сәмиғ-шайтандың улы — талантлы малай, бына тигән итеп һүрәт төшөрә белә. Аллаһы тәғәлә биргән ошо талант көмөшкә ҡыуыу эшендә бик тә ярап ҡалды: ҡағыҙ киҫәктәренә ул араҡы этикеткалары төшөрә лә, «Самогон» тип яҙып, шешәләргә йәбештерә. Тәүҙә атаһы быны күреп елкәһен ҡашый, шунан, былай бармай, ниндәйҙер мәғәнәле исем уйлап табырға кәрәк, ти. Уйлап таба бит талантлы малай! Самогон — урыҫ һүҙе, мәғәнәһе — «сами гоним», йәғни үҙебеҙ ҡыуабыҙ, атаһының исеменә яҡын яңғырашлы.

Шулай итеп, «Маяҡ» колхозында матур этикеткаға «Сәмиғулла» тип яҙылған иҫерткес шыйыҡса шишмә булып аға башланы. «Сәмиғулла»ны Сәмиғ-шайтан магазин араҡыһынан өс тапҡыр арзаныраҡҡа һата. Китте көмөшкәнең даны район эскеселәре араһында! Ауыл ирҙәренә бурысҡа ла бирә. Ә бурысты бер кем дә аҡсалата ҡайтармай, шуға ла әлеге шыйыҡсаны яратыусылар — ә ундайҙар ифрат күп — бесән эшендә, утын әҙерләүҙә Сәмиғ-шайтанға батраклыҡ итә.

«Сәмиғулла»нан килгән аҡсаны Сәмиғ-шайтан тәүҙә үҙе һанап ала ине. Унан, әллә кемдәрҙең усында йомарланып, еүешләнеп, майланып бөткән ҡағыҙ аҡсаларҙы тотоуҙан ялҡып, был эште ҡатынына тапшырҙы. Уныһы, айныҡ көнө һирәк булһа ла, йөҙләктө унлыҡтан ғына айыра белә.

Сәмиғ-шайтан улына мотоцикл алып биреп ҡыуандырҙы, унан, ҡаланан тотонолған «Жигули» һатып алып, үҙенә-үҙе бүләк эшләне. Оҙаҡламай уға «Олигарх» тигән ҡушамат таҡтылар. Кеше өсөн шайтаны ла, олигархы ла барыбер. Машина йөрөтөргә уның праваһы юҡ, шулай булғас, машина йөрөтөү тәжрибәһе лә юҡ, әммә шайтан шайтан инде — район буйлап үҙенең эсемлеген маһир таратып йөрөнө. Йөрөй торғас, бер мәл колхоздың самосвалы аҫтына барып керҙе, икенсе тапҡыр юл буйындағы бағананы төкөнө. Ныҡ ҡына имгәнде машинаһы, шулай ҙа моторы, совет кешеһе һымаҡ, әрһеҙ ине: сөскөрҙө, бышҡырҙы, әммә хужаһын кәрәк еренә йөрөтә бирҙе.

Ә гаишниктарҙың барыһы ла тигәндәй таныш, дөрөҫөрәге, танышып бөттө. Тәүҙә был юл хулиганына үҙҙәренән ныҡ ҡына әләгәсәген күрһәтергә маташҡайнылар ҙа, ултырғыс аҫтынан сығарылған «Сәмиғулла» шешәләрен күргәс, йомшарҙылар һәм, юл ҡағиҙәләрен боҙһа ла, артабан туҡтатмай башланылар. Уға шул ғына кәрәк ине.

Йәмғиәттең иң түбәнге баҫкысына тәгәрәп төшкәненә нык ҡайғырҙы Рәйес, шулай ҙа, аҡыллы кеше булараҡ, бының ул ҡәҙәре лә үлемесле хәл түгеллеген дә аңлай, «Сәмиғулла» уның ҡайғыһын ваҡытлыса ғына баҫҡанын да белә — иртәгә сатнап башы ауыртасаҡ, иң насары — ҡот осҡос эс бошоу киләсәк, шуға ла нисек тә башын юғалтмаҫҡа тырышты. Хәйер, бирешмәҫ тә ине, әгәр малайы, ун дүрт йәшлек Эмиле, булмаһа.

Вазифаһында саҡта Рәйестең үҙенә беркетелгән аты, арбаһы, сбруйы бар ине. Ат уға бесән әҙерләү өсөн генә түгел, беренсе сиратта, улына кәрәк булды. Эмиль мотоциклды ла, велосипедты ла үҙһенмәне, бергә үҫкән дуҫындай күреп атты яратты. Ашатты, эсерҙе, һыулауға төшөрөп йыуындырҙы, урам буйлап һыбай сапты.

Мөдирлектән төшөргәстәре, ошо атты, сбруйҙы, арбаны яңы кешегә — Әхмәтов Рауилға тапшырырға тура килде. Рәйестең ҡатыны, Сибәрбикә, иренең эштәге уңышһыҙлыҡтарына өйрәнеп бөткән, шуга өндәшмәне, иртәнсәк тора ла пластмасса шешәләргә һөт тултырып, ҡала баҙарына юллана. Шып-шым ҡайтып өй мәшәҡәттәренә тотона, кисен йәнә өндәшмәй-нитмәй уның янына ята. Малайы ла һөйләшмәй. Рәйес ауылдың иң хөрт кешеһе булмаған саҡта үҫте Эмиль. Атаһы әле ферма мөдире түгел, әммә председатель уны берәй ергә хужа итеп ҡуйыр, тик шуныһы ҡыҙғаныс: аты юҡ, Эмилгә дуҫ юҡ. Рәйес улының күҙенә ҡарай алмай, эйе, уның ҡарашында атаһын ғәйепләү юҡ-юҡлыҡҡа, шулай ҙа ҡараш төбөнә яңғыҙлыҡ йәшеренгәнлеге күренеп тора.

Бер нисә көн Рәйес ҡырынмай йөрөгәйне, шунан, күнегелмәгән һаҡал-мыйыҡтан арынырға теләп, ҡырынғыс алды ла көҙгө ҡаршыһына баҫты. Көҙгөнән уға яралы, йөйлө, төк баҫҡан йөҙ ҡарай ине, әйтерһең, был йөҙҙө тормош үҙе бысраҡ итектәре менән тапап үткән. Иң ҡурҡынысы шул: һаҡал йөндәре араһында элек шәйләмәгән аҡтары ла күренә. Уға әле илле лә юҡ, ә ҡарт бабайға әүерелгән. Эйе, ғүмер тигәне үтеп бара, ейән-ейәнсәрҙәренә һөйләр, ҡай саҡ ҡарттарса шаяртып маһайырҙай бер нәмә лә эшләмәгән. Ҡыҙғаныс. Теләйме, теләмәйме, ул — сиккә, һуңғы ыҙанға килеп терәлгән.

Үлем тураһындағы ҡара уйҙарға төшмәҫкә, һис юғы улы хаҡына йәшәргә ниәтләнеп, ул олигарх-шайтан ишеген шаҡырға булды. Олигархтың уға бурысы бар, был — кеҫәгә һала торған ябай бурыс түгел, ә күпкә етди эш.

Келәт мөдире булып эшләгәндә, Рәйес иген келәтендә ашлыҡтың кәмегәнен һиҙҙе. Сысҡандар ғына улай ыратып ашай алмай, тимәк, кемдер урлай. Йоҙаҡ ышаныслы, пломба урынында, түбә ныҡ, стеналар йыуан ҡарағайҙан. Ҡарауылсы Ғәйнан фронтта алған контузияһынан һуң бик ишетмәй, етмәһә, күҙе лә насар күрә.

Бурҙы Рәйес үҙе һағаларға ҡарар итте. Ҡарауылсы будкаһынан ике төн келәтте күҙәтте. Шикле кеше күренмәне. Өсөнсө төн йонсоу килде — ауылды тәпәш төшкән ҡара болоттар ҡапланы, быҫҡаҡ ямғыр яуҙы. Ҡараңғылыҡҡа сумған ауыл йоҡлай, тирә-яҡта зыярат тынлығы, хатта эттәр ҙә өрмәй.

Иген келәте эргәһендәге бетон ҡаралты тыштан аҡбур менән аҡланған, һәм ошо аҡлыҡ дөм ҡараңғы төндә лә нисектер айырылып тора. Төнгө сәғәт икеләрҙә Рәйес ҡара шәүләнең әлеге аҡ фондан үтеп киткәнен шәйләне бит. Рәйес будканан сыҡты, һаҡ ҡына баҫып келәттең арт яғына килде һәм, мөйөштән муйынын һоноп ҡарап, нигеҙ буйында кемдеңдер ҡаҙынғанын самаланы. Бер аҙҙан шәүлә юҡ булды, әйтерһең дә, соҡорға төштө. Шәүлә юғалған ергә килһә, Рәйес ысынлап та соҡор барлығын абайланы. Тимәк, бур келәт аҫтынан соҡор ҡаҙыған, көндөҙ кеше күҙенә ташланмаһын өсөн таҡта ярҡалары менән ҡаплаған да өҫтөнә тупраҡ һипкән, тупраҡ өҫтөнә дегәнәк, кесерткән, бүтән ҡый үләндәренең һабаҡтарын ырғытҡан... Рәйес, эстәге ҡыштырлауҙы тыңлай-тыңлай, бурҙы көтә башланы. Байтаҡ ваҡыт үтте. Ниһайәт, соҡор ауыҙында нимәләр күренде — теге кеше тоҡҡа тултырылған ашлыҡты тышҡа этергә тотондо. Тоҡ үтмәне, һыйманы, бур ыҫылданы, ауыр тын алды. Ныҡ йонсой тип, Рәйес тоҡтоң тышҡа сыҡҡан өлөшөнән эләктерҙе лә үҙенә тартты, артынан, күрәһең, тоғоноң һауа тултырылған шар һымаҡ еңел генә өҫкә күтәрелеүенең сәбәбен аңларға ла өлгөрмәгән бур сыҡты. Хатта ҡалын болоттар ҙа, дөм-ҡара төн дә был кешенең кем икәнен йәшерә алманы. Был — Сәмиғ-шайтан ине. Рәйесте танығас, ҡурҡып китте, аптыраны, шунан тынысланды.

— Урлашаһыңмы?

— Саҡ ҡына алғайным шул.

— Алғайным, имеш. Урланым, тиң.

— Ну, урланым, һинекен түгел бит, колхоздыҡын.

— Колхоздыҡы булыуы бигерәк тә насар. Хәҙер идараға барабыҙ ҙа акт төҙөйбөҙ.

— Ҡуй, юҡ менән булма, эште ҙурға ебәрмә, — тине Сәмиғ, тауышы ҡалтыранып китте. — Беҙ бит күршеләр. Мин улһәм, һин күмерһең, һин улһәң — мин. Ә самогонды ғүмер буйы бушлай эсерһең.

— Кәрәкмәй миңә самогоның.

— Улай тимә. Ғүмер оҙон, алда әллә нимәләр булыр әле.

Һүҙһеҙ ҡалдылар. Шырпыһын оҙаҡ эҙләп, Сәмиғ тәмәке тоҡандырҙы. Шырпы яҡтыһында күршеһенең осло яңаҡ һөйәктәрен, ҡуңыр йөҙөн күрҙе лә Рәйес ҡапыл Мәликәне иҫенә төшөрҙө. «Ниндәй бисәне эсергә өйрәтте, хайуан! — тип әсенде, шунан хәл итте: — Төрмә һикеһендә ҡаҡлайым мин һине».

Һәм баҡса артынан алдағы көндәрҙә үҙенең сибәр күршеһенә барыуҙарын күҙ алдына баҫтырҙы, ләкин шундуҡ тигәндәй улының ҡарашына төртөлдө. Был ҡараштa тормош матурлығына һоҡланыу осҡондары һүнгән, ул осҡондар тирә-яғындағы кешеләрҙә, ата-әсәләрендә булған үҙгәрештәрҙе аңларға, төшөнөргә тырышыу уйсанлығы менән алышынған...

— Кире индереп түк, соҡорҙо күм, — тине байтаҡ өндәшмәй ултырғандан һуң Рәйес. — Тағы тотһам, үҙеңә үпкәлә.

Ул төндөң ҡалған өлөшөн йоҡларға ҡайтып китте, «Шайтан»дың ашлыҡты кире индереп бушатҡанмы, юҡмы икәнен белә алманы, һуңынан да һораманы, шулай ҙа соҡор күмелгәйне, дөрөҫөрәге, сүп үләндәре менән ныҡлап ҡапланғайны. Оҙаҡламай Рәйес икенсе эшкә күсте, төнгө осрашыу тураһында онотто.

Һәм бына, вәғәҙә ителгән буш көмөшкәне иҫенә төшөрөп, ул күршеһенең ишеген шаҡыны. Эсте, йәнә эсте, урамға сыҡҡайны, үҙен бәүелсәктә бәүелгән кеүек хис итте лә ҡуйҙы — бала сағындағы һымаҡ еңел, күңелле ине уға. Күлдәге, тулҡындарҙы көслө ел ҡыуып йөрөткән төҫлө, аяғы аҫтындағы ер тулҡын-тулҡын булып уға ҡаршы килә, ошо тулҡындар өҫтөнән атлап бара һымаҡ тойолдо. Ул бик бәхетле ине әлеге минутта. Тормошонда булған һуңғы ваҡиғалар алыҫайҙы, улар Рәйескә үтә ваҡ, мәғәнәһеҙ күренде. Уңышһыҙлыҡҡа осраған, ҡыйырһытылып йәшәгән йылдарында атаһының әйткәндәрен иҫенә төшөрҙө. «Тормош — тәгәрмәс кеүек, әйләнер-әйләнер ҙә бер заман үҙ урынына ҡайтыр», — тигәйне ул. Рәйес ҡараңғы, тын урамға ҡысҡырҙы: «Мин һеҙҙең тиреҫкә батҡан фермағыҙһыҙ ҙа юғалмам, мин үҙемдең кемлегемде һеҙгә күрһәтермен әле!..»

Торараҡ ауыл халҡының теленә «пай», «фермер» тигән һүҙҙәр килеп инде. «Пай» һүҙенең мәғәнәһе аңлашыла: колхоз еренең бер өлөшө. Дөрөҫ, уныһы ла ҡағыҙҙа ғына. Ә фермер тигәне нимә һуң? Фермер менән ферма мөдире араһында айырма бармы? Булһа, ниндәй? Баҡһаң, фермер ерҙе арендаға ала һәм, хосуси милексе кеүек, унда үҙе генә эшләй ала икән. Ә кулактан нимәһе менән айырыла? Бер ниндәй ҙә айырмаһы юҡ, иң ғәжәбе — батрак тотһа ла, кулакты һөргән кеүек уны һөрә алмайҙар икән. Ғүмере буйы колхозсы булып эшләгән кешеләрҙең береһе лә быға ышанманы. Беҙгә колхозда ла насар булманы, тине ябай колхозсылар, ә түрәләр, бигерәк тә баҫыу, ялан-туғайҙарҙы идара йорто тәҙрәһенән генә күреүселәр, беҙ коммунизмда йәшәнек инде, тип ышандырырға тырышты. Һәр кем үҙен уйланы, нимә булһа ла колхоздан йолҡоп була, әйтәйек, малыңа бесән, ырҙын табағынан комбикорма йәки иген. Был бурлыҡҡа һаналмай — үҙемдең колхоз, тимәк, үҙемдекен алам. Бына шундай фәлсәфә. Рәйестең ҡәйнәһе, Таһира ҡарсыҡ, бер һөйләшеп ултырғанда был турала бик тасуири рәүештә әйтеп ҡуйғайны: «Колхоз — һауын һыйыры, һау ҙа һау». Колхозда ялҡауҙар ҙа, эскеселәр ҙә рәхәт йәшәне. Үтә намыҫсан, ғәҙел кешеләргә генә ауыр ине. Шулай булғас, нимәгә хәжәт ул беҙгә фермер тигәндәре? Колхозды кооперативҡа үҙгәртеп, үҙебеҙ колхозсылар булып ҡалһаҡ ярамаймы ни?

Ҡыҫҡаһы, бер кем дә фермерлыҡҡа атлығып торманы. Колхозсы һемәйеүҙән ҡурҡты: уға колхоз тигән һауын һыйырының имсәгенән яҙыу — үлем менән бер. Ул бит күмәк хужалыҡта бер ҡасан да тирләп эшләмәне, ә фермерға, әйтеүҙәренсә, ныҡ ҡына тирләргә тура киләсәк. Юҡ, һис ҡулай түгел уларға был яңылыҡ.

Кооперативтың тыуған колхоздарынан ниндәй айырмаһы барлығын да бер кем белмәй. Кооператив та колхоз һымаҡ уҡ емерелә, бөлә, шөрөп-гайкалар урлана, ә ирҙәр гәзиттәрҙә яҙылғанды уҡып көлә, йәнәһе, колхоз ҡоролошон һаҡлайбыҙ, сит өлкәләр менән сағыштырғанда беҙҙә колхоздар бар, йәшәй. Хәйер, уны туҙҙырырға тигән бер ниндәй ҙә указ сыҡманы, ауылдарына демократтарҙан берәү ҙә килеп саҡ-саҡ көн иткән, йылдар буйы хеҙмәтсән халыҡты ашатҡан-туйындырған хужалыҡтарын емерергә, тигән иғлан уҡып йөрөмәне.

Һәр ауылдың сәйер кешеләре бар. Ул Миңлебайҙа ла табылды. «Маяҡ» колхозында, дөрөҫөрәге, кооперативын-

да элекке ферма мөдире, элекке коммунист Мифтахов Рәйес фермер булырға ҡарар итте. Башына был ҡыйыу уй «Сәмиғулла»ның сираттағы стаканын эскәндә килгәндер, етмәһә, Олигарх-шайтан яңылыштан йәки белә тороп мул ғына итеп тауыҡ тиҙәге лә төшөрһә. Айныҡ башынан ул был фекерҙе, төрлө шиксел уйҙарҙы ҡыуыр ҙа ине. Фермерҙың үҙенең ере булырға тейеш, тик ул ер — колхоздыҡы, уның хужаһы — ауыл хужалығы идаралығы, йәғни шул уҡ Шайморатов Хәким. Ерҙе бүлеп бирҙеләр ҙә, ти, ә техниканы ҡайҙан табыр? Бына бит мәсьәлә нимәлә.

Башҡа барыр ере булмағанғамы, эшһеҙ йәшәй алмағанғамы, әллә, барыбер берәй нәмә килеп сығыр әле, тигән өмөт менәнме, Рәйес идара тупһаһын аша атланы ла кабинет хужаһына үҙенең фермерлыҡ менән шөғөлләнергә теләүен белдерҙе. Шайморатов мыҫҡыллы ғына йылмайҙы, унан сәғәтенә текәлеп өндәшмәй ултырҙы, көттөрөп кенә әйтте:

— Килеп сыҡмаясаҡ.

— Нишләп?

— Сөнки беҙгә фермерҙар кәрәкмәй.

Рәйес асыуы ҡайнап: «Сволочь һин, Хәким»,— тип уйланы, тик уйын әйтмәне — алдағы көндәрҙә лә барыбер ошо сволочҡа инәлеп килергә тура киләсәк.

Еңмәйенсә туҡтамаҫҡа, тигән маҡсат ҡуйып, ул райондың баш ҡалаһына, үҙәк майҙанында Ильич һыны торған, халыҡ телендә «аҡ йорт» тип аталған өс ҡатлы административ бинаға китте. Бейек, ҡалын ишек артында район түрәләре ҡала халҡын нисек итеп ашатыу, эсереү хаҡында оҙаҡ итеп баш ватҡансы — ҡала ауылдар менән уратып алынған, тик уларҙа күптән инде колхоздар юҡ, бары тик пенсионерҙар, уларҙың аҡсаһына көн итеүсе алкоголиктар, Хәким һымаҡ заочниктар, тыумыштан иҫәр бер нисә кеше генә ҡалған — Рәйес түштәре ике футбол тубы ҙурлығындағы секретарша янында көтөп ултырҙы. Район түрәләре мейеләренә көндәлек эштәрендә ҡулланыр өсөн әллә күпме аҡыллы фекерҙәр тултырып сыҡҡас, Рәйес ҡурҡа-ҡурҡа саҡ ҡына асыҡ ҡалған кабинет ишегенә тығылды. Хәйер, Илһамов ишеген уның ҡасан ҡурҡмай асҡаны бар? Илһамов уга шатланғандай итте, хатта өҫтәл артынан сығып, ҡаты итеп ҡулын ҡыҫты. Рәйес уның ябай халыҡ яратҡан ҙур түрә ролен уйнауын бик яҡшы аңлай. Ҡулын ҡаты итеп ҡыҫыуы ла — колхоз эшендә эшләп өйрәнмәгән, күнекмәгән ҡулдарҙың уйнауы ғына. Шулай

ҙа был кешегә Рәйестең ихтирамы бар, ярата ла — бергә үҫтеләр, байтаҡ йылдар колхозды бергә тарттылар, бер-береһе хаҡында күп нәмә беләләр, ныҡ ҡына төшөргән саҡтарында серҙәре лә уртаҡ булды...

Рәйестең сәйер хәбәрен тыңлағас, Илһамов ниңәлер телефонға текәлеп ултырҙы, әйтерһең дә, кемдеңдер шылтыратыуын көтә ине. Шунан ҡалын ҡаштарын күңелле генә итеп маңлайына сөйҙө лә ҡыуаныслы тауыш менән әйтте:

— Ярар һуң, — саҡ ҡына пауза яһап, өҫтәне: — булдырырһыңмы, көсөң етерме?

— Тырышырмын, — тип яуапланы Рәйес.

— Улайһа, уңыш теләйем.

— Рәхмәт, тик Хәким ҡаршы.

— Үҙем һөйләшермен.

Илһамов өҫтәл артынан сыҡты, әңгәмәнең тамам икәнен аңғартып, Рәйестең ҡулын ҡыҫты. «Прәме министр, — тип уйланы Рәйес кабинеттан сыҡҡанда. — Эшем уңды. Илһамов кеүек дөрөҫ кешеләр барҙа, тормош улай уҡ насар түгел». «Сәмиғулла»һыҙ ҙа үҙен бай фермерҙай хис итеп, ул төҙөләсәк яңы йортоноң тәҙрәһе аша болдоро янында өр-яңы «Волга» машинаһы, арыраҡ алтын төҫөнә инеп сайҡалышҡан бойҙай баҫыуын күрҙе...

Рәйес автобуста ауылына ҡайтып барған мәлдә, Илһамов тыуған колхозы «Маяҡ»тың идара йорто номерын йыйҙы. Шайморатов Хәкимдең тоноҡ «але»һын ишеткәс:

— Миңә Рәйес керҙе, фермер булырға йыйына, — тине.

— Унан ниндәй фермер сыҡһын инде? — тип яуапланы Хәким, оятһыҙ анекдот һөйләгәндәге ише тыйнаҡ ҡына көлөп. — Ул үҙенең баҡсаһында картуф та үҫтерә алмай бит.

Илһамов та көлгәндәй итте, шунан саҡ ҡына пауза яһаны ла тыныс ҡына былай тине:

— Шулай ҙа уға мөмкинлек бирәйек, эшләп ҡараһын.

— Әйтәм бит, булмай унан. Үҙең беләһең, баҫыуҙар әҙ, техника ла бирә алмайым. Хәҙер бөтөрәсәк.

— Һин мине аңламаның...

— Аңланым.

— Минең әйткәнде былай тип аңларға кәрәк. Тап Рәйес ише дүрәктәр фермер булырға тейеш. Беҙҙең атайҙар совет власы, колхоз ҡоролошо өсөн баштарын һалды, ҡулдан килгәнсе үҙебеҙ ҙә ошо колхозда эшләнек, илде лә ашаттыҡ. Ә демократтар нимә ҡылана? Улар бит кулактар-

ҙы, помещиктарҙы кире ҡайтарырға ниәтләнә, ә колхозсы уларға батраклыҡ итергә тейеш... Ҡыҫҡаһы, былай: бир һин уға арыуыраҡ ер бүлеп. Орлоҡ, техника, яғыулыҡ менән ярҙам ит. Шунан ниндәй фермер сыҡҡанын ҡарарбыҙ. Хәҙер аңланыңмы?

— Аңлауын аңланым да, тик нишләп мин уға арыу ер бирергә тейеш һуң?

— Һаман төшөнөп етмәнең. Уның эше, үҙең әйтмешләй, барыбер килеп сыҡмаясаҡ. Әгәр насар ер бүлһәң, ташлы урынды, сүпле баҫыуҙы бирҙеләр, тип һөйләнәсәк. Быйыл ярҙам итәйек. Артабан үҙе ҡарар. Колхозсынан фермер сыҡмағанын бөтәһе лә күрһен. Бына эш нимәлә. Тағы. Беҙҙең арала был һөйләшеү булманы, тип иҫәплә. — Шулай тине лә Илһамов трубканы һалды.

Рәйес үҙенең һуңғы көндәренә тиклем ике заочниктың уның тураһында нимә һөйләшкәнен белә алманы. Сөнки коллектив тормошҡа өйрәнгән һәм тик коллектив уйлауға һәләтле ябай ғына мейеһе тиреҫтән сығып, «аҡ йорт»тоң йылы кабинетына тиклем күтәрелгән кешенең уйҙарын тойомларға һәләтһеҙ ине.

Ерҙе Һары йылғаның һул ярынан бүлделәр. Ун дүрт гектар — ҡатынының, үҙенең, ҡәйнәһенең пайҙары. Ерҙә йәшәгән һәм үҙен уратып алған тауҙарға, урмандарға, йылғаларға исем биргән халыҡ ошо бәләкәй генә йылғаны ла онотмаған һәм Һары тип исемләгән. Ә һыуы таҙа, бер ҙә һары түгел. «Һары»лығы батшалар заманынан килә: йылға тамағында старателдәр алтын йыуған, һыуын балсыҡ менән буйратҡан.

Әбей батша башҡорттарҙың һәм Яйыҡ казактарының төп йылғаһына Урал тип исем биргән. Был исем батша йөрәген, күрәһең, ҙур ҡурҡыуға һалмағандыр, унан килеп, Яйыҡ тигән азиат исеменә ҡарағанда немец был исемде еңелерәк әйтә алғандыр. Ә Һары йылғаға Әбей батшаның ҡулы етмәй, ул әлегә тиклем Һары, Урал атамаһы — географик карталарҙа ғына.

Колхоз ойошторолғанға тиклем был ерҙәр Хилаж исемле бай крәҫтиәндең — ауылдаштары уны ихтирам йөҙөнән Хилажбай тип йөрөттө — ерҙәре ине. Уның йылҡы көтөүе лә бар ине, ауылда лавка ла тотто. 30-сы йылда уны кулак иттеләр, ерҙәрен тартып алдылар, өйөнән ҡыуып сығарҙылар ҙа ҡайҙалыр дала яҡтарына һөрҙөләр. Хилажбай заманында, хатта колхоз булған ваҡыттарҙа, трактор төрәндәре

йырғыслағанда, ауыр гусеницалар аҫтында ла был ерҙәр ҡый үләндәренә бирешмәне, йылдың-йылы мул уңыш бирҙе. Шунан уны яйлап сүп баҫты, ергә иғтибар бөттө, ашлама индерелмәне, һөҙөмтәлә уңыш кәмене.

Рәйес бойҙай сәселгән баҫыу буйлап атлағанда аяғы аҫтындағы ер уның кемлеген аңлаған һымаҡ тойолдо: эйе, ул — ябай бер колхозсы түгел, ә хужа, сүп үләндәренә үҫергә ирек бирмәй ерҙе яратырға әҙер хужа. Әммә ер тәбиғи булмышы менән — кешегә файҙалы үҫемлекме, сүп үләнеме, — айырмай, күкрәгендә һәр йәшел ҡыяҡты йомарт үҫтерә. Бойҙайҙан бер аҙнаға алда билсән баш ҡалҡытты, шулай ҙа ваҡытында яуған май ямғыры ерҙе етерлек миҡдарҙа дымлап өлгөргәйне, үҫентеләр йәшел бәрхәт булып баҫыу өҫтөн ҡапланы. Ә июндә, башаҡ ебәргәс, игендәр тығыҙ булып ҡалҡты, билсән тәүҙә ҡыйыуһыҙ ғына улар араһынан күренһә лә, оҙаҡламай бөтөнләй юғалды. Июлдә башаҡтарҙың һөтләнеүен, унан ҡоҫоуын көтәһе, август төндәренең һалҡынын үткәрәһе бар.

Июлдә баҫыуҙарҙы йылы ямғыр ҡойондорҙо, август көньяҡ далаларҙан ҡоро елдәр алып килде, һөҙөмтәлә ашлыҡ үҙ мәлендә өлгөрҙө: бойҙайҙың туҡ башаҡтарына ҡарап тороуы — үҙе бер кинәнес. Ундай күренеш был ерҙәрҙең хужаһы кулак Хилажбай заманында ғына була торғайны. Быйыл тәбиғәт, гүйә, үҙ ихтыяры менән Рәйескә, яңы ғына барлыҡҡа килгән фермерға, мул уңыш үҫтереп алырға форсат бирергә уйлай ине.

Һәм ул, Мифтахов Рәйес, колхоз ауылы тарихында беренсе фермер, бригада ерҙәрендә гектарынан 10 – 12 центнер иген йыйып алынғанда, 25-те йыйҙы ла ҡуйҙы. Ураҡ осоронда председатель Хәким техника менән ярҙам итмәне: «Һиңә түгел, колхозға ла солярка юҡ әле», — тине. Комбайн менән күрше «Урал» колхозы рәйесе ярҙам итте — ул Рәйестең өс туған һеңлеһенә өйләнгәйне. Кейәү, тимәк. Хәйер, ярҙамы туғанлыҡ арҡаһында булманы, уға Рәйес өс тонна бойҙай бирҙе. Унан игенде пайҙар буйынса бүлде, бер нисә тоннаһын көньяҡ райондарҙан килгән алыпһатарҙарға һатып ебәрҙе — ул яҡта быйыл иген уңмаған икән. Тағы ҡалды әле, байтаҡ ҡалды, уныһын, ҡайҙа ҡуйырға белмәй, ихата эсенә түкте, шунан ҡәйнәһенең боронғо келәтен иҫенә төшөрөп, уны һеперепп-таҙартып сығарҙы ла шунда күсереп һалды.

Аҡсаны Рәйес ҡатынына тапшырҙы. Күпселек ауыл бисәләре һымаҡ, Сибәрбикә лә аҡсаны тота белә ине:

ҡулына эләктеме, бүтән күрермен тимә, әллә ҡайҙарға йәшереп ҡуя, милиция эте менән дә эҙләп таба алмаҫһың. Шулай ҙа бер мәртәбә йомшарҙы ла, һиңә, фермерға, былай килешмәҫ, арыуыраҡ кейенеп йөрөргә кәрәк, тип үтеп барыусы сығандарҙан күн куртка һатып алып бирҙе.

Фермер булыу менән Рәйес яңы йорт һалыу тураһында хыяллана башланы. Ауылда берҙән-бер кирбестән һалынған ике ҡатлы йорт буласаҡ ул. Уны башҡорт теленә ят һүҙ менән атайҙар — коттедж. Йорт төҙөү ниәте тәүҙә томанлы ғына ине, яйлап, тора-бара, икеле-микеле уйҙары нығынды, хатта йорттоң айырым өлөштәре, ҡиәфәте күҙаллана башланы. Коттеджды атаһының иҫке йорто нигеҙенә һалмаясаҡ, уның ултырырлығы бар әле: улы үҫеп өйләнһә йә башҡа сығарыр, йә (Рәйестең башына гонаһлы уй ҙа килеп ҡуя) ҡатынын шунда ҡалдырыр ҙа яңы йортҡа йәш хужабикә алыр. Кем белә, бәлки, бынау Сәмиғ-шайтан үлеп китһә йә берәй тотолоп төрмәгә эләкһә, Мәликә, уның ҡосағына ташланмай, ҡайҙа барыр тиһең? Алыр ҙа эсеүен ташлатыр, һәм бына тигән итеп йәшәр ҙә китерҙәр. Ә йортон ул ситкә, ауыл осона, үҙәнең баҫыуына яҡыныраҡ һаласаҡ. Беренсе ҡаты, әгәр кирбес таба алмаһа, шлакобетондан булыр, икенсе ҡаты — ҡарағай бура, бер ҡыйыҡ аҫтында — ҙур һәм киң балкон. Аҫҡы ҡатта — кухня, мейес, газ плитәһе, өҫкөһөндә — ике бүлмә, береһе — йоҡо бүлмәһе, икенсеһе — улы йәки килгән ҡунаҡтар өсөн. Йәйен балконда тәбиғәт хозурлығына һоҡланып сәй эсеп була. Йорт бейек ҡойма менән уратып алынасаҡ, ҡапҡа бейек һәм ул ышаныслы йоҙаҡланырға тейеш. Өйгә терәтеп — тәҙрәле киң веранда, ул өйҙө уратып ихата яғына ла сығып китә, унан өйгә йәнә бер ишек булыр, уныһы хужалыҡ ҡаралтыларына, мунсаға илтеүсе көпләүле галереяға ҡушыла. Быныһы инде — ҡышҡы һыуыҡтарҙа, ыжғыр буран, әсе февраль елдәренән ҡурҡмай сығып йөрөү өсөн.

Йорттоң тәҙрәләре тиҙәктән мәңге арынмаған төйәкте, уның дүрәктәрен, эскеселәрен күрмәҫ өсөн ауыл яғына ҡарамаясаҡ, ә иркен яланға — үҙәнең туҡ башаҡлы иген баҫыуына ҡараясаҡ. Ауылды Рәйес яратмай, ул унда тиреҫ начальнигынан да юғарыраҡ күтәрелә алманы, партбилеты булмаһа, ғөмүмән, сүп булыр ине. Ауылда бәләкәй кәүҙәһе өсөн ҡыҙҙар ҙа үҙ итмәне, яратҡан ҡыҙы уға кейәүгә сығыуҙан баш тартты: «Мин һинең менән нисек

ҡунаҡҡа йөрөрмөн һуң?» — тине лә ҡуйҙы, мыҫҡыллы ғына көлөп. Хәҙер, ана, Сәмиғ-шайтан менән йәшәй һәм эскесегә әйләнеп бара. Арыраҡ, томан эсенән, Рәйес ҡапҡа алдында, юҡ, ихатаһында, «Волга» машинаһын күрҙе. Машинаһы мотлаҡ «Волга», мотлаҡ аҡ төҫтә булырға тейеш. Ел менән ярышып ул әле Өфөгә, әле Магнитогорскиға елдерәсәк, унан тауар алып ҡайтасаҡ. Ҙур төҫлө телевизор, улына мотоцикл алыр. Һеҙ, Рәйес бер нәмәгә лә ярамаған, ҡулынан бер ниндәй ҙә эш килмәгән меҫкен, тип уйлайһығыҙмы? Яңылышаһығыҙ, иртәрәк һыҙаһығыҙ иҫәптән, дуҫтар, ул үҙенең кем икәнен барығыҙға ла күрһәтер әле...

Ураҡты тамамлап, ашлыҡты урынлаштырыу мәшәҡәттәре бөтөү менән, Рәйес өйҙө ҡайҙа ултыртыу хаҡында уйлана башланы. Үрге ауыл осонда, урман ауыҙында, күл янында, колхоздың унлаған гектар ерен баҫып алып, Себерҙә эшләгән байҙар, ҡалын кеҫәле вахтовиктар, әлбиттә, түрәләр йорттар һалған. Әйтәйек, шул уҡ Илһамов үҙе «аҡ йорт»та ултыра, ә өйө, хәйер, өй тиң, һарайы, бына мин ниндәй, күҙегеҙ ҡыҙамы, тигән һымаҡ, ошонда. Рәйескә шунда тығылырға ер бирерҙәр тиһеңме ни? Кем белә, бәлки, инәлеп, баш эйеп барһа, бирерҙәр ҙә ине, тик Рәйестең ул кешеләр менән күрше булып йәшәгеһе килмәй, ә бына уларҙы һуңғы юлға оҙатырға бик теләп барыр ине.

Бер көн ауылдың түбәнге осонда йөрөгәндә (бында ла тыныс тормошҡа уңай ерҙәр шундай уҡ сос кешеләр тарафынан баҫып алынған да уратып кәртәләнгән) Рәйес 20—25 сотый буш ергә, ташландыҡ урынға юлыҡты. Бушлыҡты ҡый үләне баҫҡан, күрәһең, бер кем дә таҙартырға, биләргә ҡыйыулығы етмәгән. Рәйестең бында ҡасандыр тиреҫ түккәндәрен ишеткәне бар ине.

Һәр үҫемлек кеүек, ҡый үләне лә тиреҫте ярата. Игенселек өсөн зарарлы ниндәй генә үлән юҡ бында: әрем, алабута, билсән, дегәнәк, кесерткән, — әйтерһең дә, бөтә баҫыуҙарҙан ҡыуып сығарылған суп үләндәре ошонда йыйылған да әҙәмдәй бейек булып үҫеп ултыра.

Был урын әүәл-әүәлдән ниңәлер серле, хатта ҡурҡыныс иҫәпләнде. Йәй аҙаҡтарында, көндөҙҙәрен әле эҫе, ә төндәрен һалҡынайтҡан саҡта, яр буйындағы туғайлыҡтар, һаҙлыҡҡа әйләнеп барған ваҡ күлдәр, түмгәктәр, серек торф ятҡылыҡтары өҫтөндә ҡуйы һөттәй аҡ томан күтәрелә лә, яр буйы ҡыуаҡлыҡтарына йәбешә-һырыша,

йылға аша был яҡҡа сыға, ниндәйҙер албаҫты һымаҡ яй ғына туғайлыҡтарға шыуыша. Томан шулай уҡ ҡый баҫҡан әлеге ташландыҡ өҫтөн дә ҡаплай. Ялан-туғайҙан һуңға ҡалып ҡайтҡан кешеләр бушлыҡ янынан ҡабаланып, тирә-яғына ҡаранып үтә: ҡурҡаҡтар, төрлө хөрәфәткә ышанғандар, бисәләр бында килергә шөрләй. Сүп араһынан ҡара нәмәләрҙең һикерешеп сыҡҡандарын, шул тирәлә йүгерешеп-сабышып, тәкмәс атып йөрөгәндәрен, унан йәнә сүп-сар, томан араһына инеп юғалғандарын күргәндәр. Ташландыҡта йыш ҡына ниндәйҙер ут та күрәләр, бисәләренән ҡасып ирҙәр ошонда йыйыла ла эсеп, тәмәке тартып ултыра икән. Ҡай саҡ һөйләшкән, һүгенгән, хатта илаған тауыштар ишетелә, имеш. Ә алдаҡсы, теләһә нәмә һөйләү буйынса районға даны сыҡҡан Ситдиҡов Апуш, бер ваҡыт мин шайтандарҙың шунда ут яғып кәрт һуғып ултырғандарын күрҙем, тип тә һөйләне. Кистәрен балыҡ ҡармаҡлап ҡайтҡанда Рәйес ошо бушлыҡ янынан үтә, әммә ҡурҡырлыҡ бер нәмә лә шәйләмәйсе. Һәм, төрлө имеш-мимешкә ышанмай, Рәйес үҙенең йортон ошонда, тап ошо ташландыҡ ергә, һалырға ҡарар итте. Бынан йыраҡ та түгел йөҙәр йылдар буйы кулактарға ла, ярлыларға ла он тарттырған һыу тирмәне бар ине. Утыҙынсы йылда тирмәнсене кулак тип һөрҙөләр. Әммә пар тирмәне ҡуйғансы, баяғы һыу тирмәне әйләнде әле, торараҡ ташланылар, быуаны астылар, һөҙөмтәлә быуа һаҙлыҡҡа әйләнде, уны үлән баҫты. Ошо тирмәнде эшкә индергәндә нисек булыр ине икән? Яйыҡтың түбәнге яғындағы ниндәйҙер бер ауылда уларҙыҡы ише тирмәнде сафҡа индергәндәр, тип һөйләйҙәр бит ана. Сабаҡ ебәреп, балыҡ тоторҙар ине, ҡоштар һайрар ине, кешеләргә лә күңелле булыр ине. Рәйес үҙенең хужалыҡлы йөрәге менән ошо ерҙе ярата ине инде, уның матурлығына оҙаҡламай яңы өйөнөң тәҙрәләренән ҡарап хозурланып ултырасаҡ.

Колхоздың иҫке генә бульдозеры бар. Иҫке булһа ла, һәр уртаҡ техника һымаҡ, ул да ифрат әрһеҙ нәмә, ун ҡат ремонттан һуң да пых-пых килеп йөрөп ятыуын белә. Бер шешә өсөн Мышағырҙың төбөнә тиклем аҡтарырға әҙер бульдозерсы Ришат менән һөйләште Рәйес әлеге бушлыҡты тигеҙләп төҙөлөш өсөн майҙан әҙерләргә. Шунан үҙҙәрен бер ниндәй тартыныуһыҙ «профессиональ алкоголиктар» тип атаған — ә ауылда уларҙы «батрактар» йәки «ҡәбер ҡаҙыусылар» тип йөрөтәләр — Әхәт менән Ғарифты табып, нигеҙ өсөн траншея ҡаҙҙырырға килеште.

Шул көндө үк урамда Мәхмүт ҡартты осратты Рәйес. Кипкән, тештәре ҡойолоп бөткән был ҡарт һуғышта булған, — иҫке генә пинжәгенең түшендә «Дан» ордены һелкенә — ҡырҡ үлемдән ҡалған, үҙе һаман йәшәй ҙә йәшәй. Хәҙер инде туҡһанды үтте. Әйтеүҙәренсә, ул — утыҙынсы йылда кулак тип һөрөлгән Хилажбайҙың оло улы, тимәк Рәйес еренең элекке хужаһының улы булып сыға. Хилажбай сит яҡтарҙа үлеп ҡалған, ә Мәхмүт һуғыштҡа тиклем үк ауылға әйләнеп ҡайтты, бынан егерме йыллап элек ҡатыны үлде, шунан башҡаса өйләнмәне — улы менән килене ниндәйҙер ҡара уй менән уның әбей алыу ниәтенә ҡаршы сыҡҡан, тинеләр. Атай мөлкәтен кем менәндер бүлешкеләре килмәгәндер, күрәһең.

Ауылда туҡһан йәшлектәр икәү генә: әлеге Мәхмүт тә Ибрай. Мәхмүт Хилажбайҙың улы булһа, Ибрай — коллективлаштырыу активисы, Аллаға ҡаршы сыҡҡан, мәсетте емерткән кеше. Хилажбайҙы ла ул һөрҙөрткәйне.

Был ҡарттар, береһе — аптырап һәм ҡайғырып, икенсеһе — ризаһыҙлыҡ белдереп һәм нәфрәт менән, ят итеп, хатта теге донъяға ҡараған кеүек ҡарайҙар ине бөгөнгө ысынбарлыҡҡа. Яңғыҙлыҡтан йонсоған ҡарттарға аралашырға кеше юҡ, тиҫтерҙәре, йәшлек шуҡлыҡтары буйынса иптәштәре үлеп бөткән, үҙҙәренән кеселәрҙе улар маңҡа тип хисапланы, ә йәштәрҙе бөтөнләй ҡабул итмәне, әйтерһең дә, улар аңлайышһыҙ сит телдә һөйләшә. Бәлки, шуғалыр ҙа бер-береһен яратмаған был ике боронғо ҡарт һөйләшеү өсөн бер-береһенә тартыла. Улар бер үк аймаҡта, бер-береһенән биш йорт аша ғына йәшәй, уларҙың кибеп бөткән кәүҙәләрендә, аяҡтарындағы шығырлап торған быуындарында таяҡҡа таянып булһа ла бер-береһенең ҡапҡа төбөнә барып етергә генә көстәре бар әле. Мәхмүт ҡарт Ибрай ҡапҡаһына барырға атлығып тормай, йышыраҡ Ибрай уға килә, күңелендә — үткән ғүмер һағышы, бөгөнгө көнитмешкә ҡаты асыу. Бәләкәй ҡапҡаһы янындағы эскәмйәлә уйсан ғына ултырған Мәхмүт Ибрайҙы өндәшмәй генә ҡаршылай ҙа, саҡ ҡына ситкәрәк күсеп, урын бирә. Ибрай гел генә бер нәмәне тылҡый: бөгөнгө тәртиптәрҙе әрләй, дөрөҫөрәге, тәртипһеҙлектәрҙе, йәнәһе, бөтәһен дә емерәләр, ә колхоз ниндәй ине — районда беренселекте тота ине. Хәҙер халыҡты тамам аҙҙырҙылар, эшләмәйҙәр, урлашалар, эсәләр. Ошолор инде ахырызаман килеүе. «Беҙгә Сталин кәрәк!» — ти Ибрай. «Әгәр ул һинең Сталиның булмаһа, бөгөн тәртип булыр ине, һин

үҙең бит эшләрҙәй, егәрле ирҙәрҙе һөрҙөң, улар киткәс, ялҡауҙар менән һинең һымаҡ тел бисҭәләре генә ҡалды», — ти Мәхмүт тыныс ҡына. Ҡарттарҙың икеһе лә ҡолаҡҡа ҡаты, шунлыҡтан ҡысҡырып һөйләшәләр, ә күршеләренә, урам буйынан үтеп барғандарға улар әрләшә, хатта бына-бына һуғышып китер төҫлө тойола. Һуғышыуын һуғышмайҙар, шулай ҙа ҡай саҡ Ибрай асыуынан урынынан тороп уҡ китә лә таяғын һелтәп ҡысҡыра: «Һин ельцинист. Сталин һинең ул Ельциның менән...» — «Сталин түгел, ә батша кәрәк беҙгә, — тип яуаплай уға йәнә Мәхмүт тыныс ҡына итеп. — Батша ваҡытында урлашмайҙар ине, мәсеткә лә йөрөнөләр. Ә һин шул мәсеттең манараһын бысып төшөрҙөң, ололарҙы мәсеттән ҡамсы менән ҡыуҙың. Вәт һөҙөмтә...»

Кешеләр күптән онотҡан, әммә Мәхмүт ҡарттың күп йәшәгән башында ҡалған ошо дөрөҫлөктө күтәрә алмай Ибрай, дошманының ҡапҡаһы янына бүтән аяҡ баҫмаҫҡа ант итеп, ҡайтып китә. Аҙна үтә. Киске эңер төшкәс, ҡартты йәнә яңғыҙлыҡ тойғоһо баҫа, төнгө урмандан, ялан-туғайҙарҙан, тау араларынан ауылға төшкән ҡараңғылыҡ шөбһәләндерә башлай. Ҡарттың йоҡоһо юҡ, һәм ул, тегендә, ҡәберҙә, моғайын да, ошоноң ише ҡараңғылыр, тигән уйҙарға төшә башлай. Килә ятҡан төндән ҡурҡып, Ибрай ҡарт йоҡлап өлгөрмәгән тауыштарҙы ишетер өсөн ҡапҡа тышына сыға, эскәмйәһендә бер аҙ ултыра ла йәнә Мәхмүт ҡапҡаһы яғына атларға мәжбүр була.

Ул кисте Мәхмүт ҡарт яңғыҙы ғына ултыра ине. Иҫке генә түбәтәйҙә, орден тағылған иҫке пинжәктә — таяғын тубыҡтары араһына тыҡҡан ҡарт киске эңерҙә һәләмә әйберҙәр өйөмө һымаҡ. Рәйес уның ҡапҡаһы тапҡырына еткәс, ҡарт яй ғына башын ҡалҡытты ла ҡулы менән ултырырға ишараланы. Рәйес эскәмйәгә сүгәләгәс, былай тине:

— Ташландыҡ ергә өй һалаһың икән, тип ишеттем. Унда һалма өйөңдө.

— Нишләп?

— Насар урын...

— Нишләп насар? Шайтан ояһымы әллә?

— Ниңә насар икәнен теүәл генә әйтә алмайым, шулай ҙа унда һалма.

— Буш хәбәр, бабай, — Рәйес шулай тине лә, кәйефе ҡырылып, ары атланы.

Иртәгәһенә бульдозеры менән Ришат килде, сүп үләндәрен тамырынан ҡырҡтырып ситкә эттерҙе. Рәйес ерҙең

ҡайһы бер урындарын көрәк менән тигеҙләп сыҡты, таштарын йыйҙы. Тупраҡ, ҡый-ғыпыр араһынан әллә күпме шешә, ҡашығаяҡ ватыҡтары, әллә күпме тутыҡ тимер-томор сыҡты. Эйе, сүп-сар түгә торған урын булған икән шул. Рәйес байтаҡ йөрөнө, аяғы менән тиреҫ араһынан сусайып ятҡан ҙур ғына ташты төрткөләп бер генә көрәк ҡаҙғайны... кешенең баш һөйәге килеп сыҡты. Үле бушлыҡ булып ҡараған күҙ соҡорҙары. Улар ҡасандыр күкте, ҡояшты, үҙ тирә-яғындағы туғай-яландарҙы, тауҙарҙы күргән. Ике аҙау тештән башҡа бөтә тештәре лә бар. Ҡасандыр ошо тештәр ризыҡ сәйнәгән, ашап туйғас, йылмайғанда, ап-аҡ булып ялтлағандыр. Кем булған икән был кеше, ниңә уның башы бында сереп ята? Шулай ҙа Рәйес баш һөйәгенә әллә ни аптыраманы, үҙе өсөн аңлатма ла тапты. Был ерҙәр буйлап яу үткән, борон башҡорттар урыҫ батшаһы менән һуғышҡан, ә казактарҙың большевиктар менән бәрелешеүе, Яйыҡ буйлап әле ҡыҙылдарҙы, әле аҡтарҙы ҡырып комбриг Мортазиндың йөрөгәне инде олатаһының хәтерендә. Улары — сағыштырмаса яңыраҡ булған ваҡиғалар. Рәйес тағы биш баш һөйәге, әҙәм балаларының әллә күпме башҡа һөйәктәрен ҡаҙып сығарҙы. Ике баш һөйәге балаларҙыҡы ине. Быныһы Рәйесте бер аҙ уйға һалды — Ришат эткән тиреҫ ҡатыш сүп-сар өйөмөндә һөйәктәр бының менән генә бөтмәйҙер...

Иртәгәһенә «батрактар» килде, килеү менән баш төҙәтергә һораны. Ике шешә «Сәмиғулла» килтерһә лә, быларҙың стаканды еҫкәү менән эш ҡайғыһы китәсәген Рәйес самалай ине, шуға бирмәне. Батрактар ҡәнәғәтһеҙлек белдерҙе, шулай ҙа лом менән көрәккә тотондо. Траншея ҡаҙғанда йәнә дүрт баш һөйәге сыҡты, береһе — баланыҡы. Батрактарҙың был хәлгә иҫе китмәне, сөнки Әхәт аптырау тойғоһон күптән эсеп бөткәйне, ә Ғариф: «Рәсәйҙә ҡайҙа гына ҡаҙма, шунда кеше һөйәге ята», — тип кенә әйтеп ҡуйҙы фәлсәфәүи рәүештә.

Төш етәрәк, ауыл яғынан Мәхмүт ҡарт күренде. Юлһыҙ ерҙән бер саҡрым самаһы ара үткән ҡарт Рәйес баш һөйәктәрен бер урынға йыйған майҙан ситенә килеп сыҡты. Рәйес ҡарт янына барҙы ла, бында кеше һөйәктәре нишләп улай күп һуң ул, тип һораны. Ҡарт яуапты шундуҡ бирмәне, байтаҡ ҡына өндәшмәй торҙо. Тишекле баш һөйәген ҡулына алды, әйләндергеләп тикшерҙе, шунан ғына:

— Мишканың башы, — тине.

— Ниндәй Мишка?

— Ғәббәстеке. Уны Мишка тип йөрөттөләр. Ай, таҙа кеше ине. Атты күтәрә, ломдарҙы бөгөп бәйләй торғайны. Һабантуйҙарҙа уны еңә алған кеше булманы.

— Уның башы икәнен ҡайҙан беләһең?

— Бынау тишекте күрәһеңме? Ҡырҡ өсөнсө йылда яраланып ҡайтты һуғыштан. Госпиталдә баш тиреһен теккәндәр, ә һөйәге — тишек. Шул көйө йөрөнө.

— Уның башы бында нисек килеп ятҡан, зыярат урыны түгел дәһә?

— Егерме беренсе йылда ярты ауыл аслыҡтан үлде, ҡырҡ өсөнсө йылда ла кеше күп ҡырылды. Ғәббәстең дүрт бала, ҡатыны ауырыу, һыйырҙарын көҙҙән үк һуйҙылар, картуфтары март айына тиклем генә етте. Шешенә башланылар. Балалары күгүләнгә саҡ аяҡ баҫты, ә Ғәббәс үлде. Кеше күберәк ҡыш үлә, ас, хәлһеҙ халыҡ ҡайҙан ҡәбер ҡаҙа алһын — шуға ла мәйеттәрҙе ошондағы тиреҫкә күмә торғайнылар.

— Ашарға шулай бер нәмә лә юҡ инеме ни?

— Юҡ ине шул. Һин йәшһең, ул замансы белмәйһең. Хөкүмәт һуңғы башаҡҡа тиклем һыпырып алып бөтә торғайны бит. Ярамай бында йорт ултыртырға, кеше һөйәктәре өҫтөндә йәшәү килешмәй.

— Ул һөйәктәр миңә ҡамасаулаймы ни?

— Ай, яҙыҡ һүҙ һөйләйһең, Рәйес. Улар бит тиреҫкә ясинһыҙ күмелгән, йәндәрен фәрештәләр алмаған. Шуға ла улар өйһөҙ хәйерсе һымаҡ ғазапланып ята. Бына нимә, һөйәктәрҙе йыйып бер ҡапсыҡҡа тултыр ҙа зыяратҡа илтеп күм. Ҡабатлап әйтәм: ултырма бында, башҡа урын бөткәнме ни һиңә?

— Юҡты һөйләйһең, бабай, — тине Рәйес.

Ҡарт өндәшмәне, әйтерһең, үпкәләне, шунан Мишканың баш һөйәген ергә һалды ла ҡабаланмай ғына ауыл яғына атланы.

«Сәмиғулла»нан ауыҙ иткән батрактар, килергә вәғәҙә биреп, төшкә ҡайтты, әммә килмәнеләр, эсеүҙе ауылда дауам иткәндәрҙер. Рәйес өйөнән ике буш ҡапсыҡ килтерҙе, һөйәктәрҙе тултырҙы ла зыяратҡа алып барҙы һәм, ошо көндәрҙә мотлаҡ күмеп ҡуйырға үҙенә үҙе һүҙ биреп, эс яҡтан ҡойма буйына түгеп китте.

Октябрҙә иҫерек батрактар ярҙамында шулай ҙа нигеҙҙе ҡоя алды Рәйес. Ә бына зыяратҡа илткән баш һөйәктәрен күмергә һис ҡулы етмәне. Оҙаҡламай ваҡ күҙле

ямғырҙар китте, йәйге эҫенән йонсоған ҡайындар һарғайҙы, япраҡтар ҡойола башланы. Көньяҡтан иҫкән елдәр болоттарҙы тауҙар артына ҡыуып, дымлы ерҙе иркәләп, әбейҙәр сыуағы башланғас, йылға аръяғынан, серек һаҙлыҡтан ауыл яғына ҡуйы аҡһыл томан шыуышты, йылға үҙәндәренә ятты, туғай-яландарҙы ялманы һәм Рәйес нигеҙ ҡорған бушлыҡта бағаналар булып өҫкә ҡалҡты ла аҡ һәйкәлдәр һымаҡ хәрәкәтһеҙ ҡалды.

Ҡыш бауыры нисек кенә оҙон булмаһын, өңдәренә, мейесле өйҙәренә ҡыуып индерелгән йән эйәләренә нисек кенә ялыҡтырғыс тойолмаһын, хатта ки ғинуарҙан һуң уләндең йәшел төҫө, йылы ел иҫеүе, япраҡ шауы онотола башлаһа ла, ер өҫтөнә яҙ үҙ ваҡытында әйләнеп ҡайтты. Ҡышҡы һыуыҡтарҙа үлеүҙән ҡурҡҡан ҡарттар еңел тын алды — Аллаһы тәғәлә уларға йәнә бер яҙ, йәнә бер йәй бүләк итте. Буйҙаҡ йәштәр, ҡандары ҡайнау сәбәпле, ҡыҙҙарға иғтибарлыраҡ булды, йышыраҡ күҙ ата башланы, класс таҡтаһынан, уҡытыусыларҙан ялыҡҡан уҡыусы балалар йәйге каникул башланыр көндө һананы. Ә колхозсы ирҙәргә, эсмәгән һәм эш рәтен белгәндәргә, йоҡоло ҡыштан һуң яҙ мәшәҡәтле осор килтерҙе.

Рәйес яҙҙы яңы тойғолар, яңы өмөттәр менән ҡаршыланы. Баҫыуҙы сәсергә лә көҙгә өй туйлау өсөн төҙөлөшкә ныҡлап тотонорға кәрәк ине ошо яҙ, йәй эсендә. Колхоз техника, яғыулыҡ менән ярҙам итерме икән? Сәмиғ-шайтанға йәнә берәй центнер иген бирергә тура килер. Техника бензин һалмайынса урынынан ҡуҙғалмай, төп яғыулыҡ булмаһа — кешеләр уны валюта йәки прогресты хәрәкәткә килтереүсе *тип* атай — ауылдағы бар эш тә тик торасаҡ.

Үҙ баҫыуына килде Рәйес. Уңдырамы, туңдырамы инде быйыл ере? Уңыш булһа — ҡулдан трактор һатып алам, тип хыял беркетте. Унан өй нигеҙе янына барҙы. Имеш, өйө һалынып бөткән, тип күҙ алдына килтереп, байтаҡ торҙо. Ҡапыл көҙ ҡалдырған һөйәктәр иҫенә төштө, зыяратҡа китте. Кәртә буйында һөйәктәр юҡ ине — йә зыярат түрәһе Шәрифуллин Фәгәл шәйләп берәй ергә күмгән, йә эттәр таратып бөткән.

Колхоз ерҙәрендә тракторҙар геүләй башлағас, Рәйес, миңә лә ваҡыттыр, тигән ҡарарға килеп, идараға китте. Хәким уны һөмһөрө ҡойолоп ҡаршыланы. Рәйестең, сәсеүгә ярҙам ит, тигәненә шундуҡ өҙә һуҡты:

— Булмай. Миндә һинең өсөн трактор ҙа, яғыулыҡ та юҡ. Запчастар, яғыулыҡ менән эштең нисек торғанын бик

яҡшы беләһең, — тине һәм ҡарашын күтәрмәй, саҡ ҡына өндәшмәй торҙо. — Беҙ һиңә үткән йыл ярҙам иттек. Яҡшы уңыш йыйҙың, трактор менән һабан һатып алырға мөмкинлегең бар ине.

— Быйыл алам.

— Алам, имеш...

Рәйес әйткәне өсөн аҙаҡтан ғәрләнеп йөрөгән һүҙен әйтте:

— Улайһа, миңә ни эшләргә һуң?

— Мин ҡайҙан беләйем? Һин ул һорауҙы фермерлыҡты уйлап тапҡан кешегә бир. Мин, колхозсынан фермер сыҡмаясаҡ, тип былтыр уҡ әйттем түгелме?

Рәйес түҙмәне, кеçәһендә йөрөткән кукишты күрһәткән йәки ҡуйынындағы ташты сығарып бәргән кеүек, әйтте лә һалды:

— Сволочь һин, Хәким.

Әйләнеп сығып барғанда, Хәкимдең:

— Ну, рәхмәт, — тигәнен ишетте.

«Минән фермер сыҡмаймы? Ҡабаланма, ҡарайыҡ, — тип уйланы Рәйес. — Әлегә ер минеке, нисек тә һөрөргә, сәсеп ҡалырға тейешмен. Хәким кеүек сволочтарға үс итеп, өйҙө лә төҙөп бөтмәһәмме?..»

Рәйес «Йыйыҡ»ҡа, кейәү тейешле кешеһенә, китте. Тик ул да ярҙам итә алманы — яғыулығы юҡ, запчасы юҡ, техникаһы һүтелеп ята. «Ураҡ осоронда, бәлки, комбайн биреп тора алырмын. Ә һин ҡамылға сәс», — тип кәңәш бирҙе кейәүе. Шулай итеп, «Маяҡ»тан да буш ҡул менән ҡайтты Рәйес.

Йылға аръяғында, Мышағыр итәгендә, икенсе бригада сәсә ине. Рәйес шунда йүнәлде. Сәсеүселәрҙең баçыу осона сыҡҡанын көтөп торҙо. Былар Шәрифулла менән Апуш ине. Шәрифулла — тракторҙа, Апуш — сәскестә.

— Сәсербеҙ, — тине Шәрифулла, Рәйес үҙенең йомошон әйткәс. — Орлоғоңдо, биш шешә «Сәмиғулла»ңды әҙерлә. Председатель күрһә инде, ғәфү ит, бара алмаçбыҙ.

Икенсе көнөнә Рәйес күршеһе көтөүсе Рифаттан ат алып тороп, орлоҡтарын баçыуға алып барҙы ла көнө буйы тегеләрҙе көтөп ултырҙы. Эңер төшөр мәлдә саҡ килделәр. Шундуҡ эсергә һоранылар, унан ҡараңғыла ашыҡ-бошоҡ сәстеләр, һөрөлмәгән ергә, ҡамыл төбөнә, орлоҡ нисек ятҡанын алдағы көндәр күрһәтер, ә былай Рәйес тегеләрҙең эштәренән бик ҡәнәғәтһеҙ ҡалды. Эштән һуң, техниканы баҡса арттарында ҡалдырып (иртәгәһенә икенсе

баçыуға күсергә тейештәр), сәсеүселәр Рәйескә керҙе. Өсөһөнә өс шешә көмөшкә бушаттылар. Нык иçергән Апуш, телен көрмәлдерә-көрмәлдерә, бер ваҡыт Рәйескә аҡыл өйрәтергә тотондо:

– Колхоз ерендә фермерлыҡ һиңә ни хәжәтемә ул? Мин шулайтып этләнеп йөрөһәмме? Никогда! Колхозсы булып тыуғанмын, колхозсы булып үләм. Атай ҙа колхозсы ине. Колхозда фермер булып булмай, улар һиңә эшләргә ирек бирмәйәсәк. Беҙ бөтәбеҙ ҙә фермерға әйләнһәк, идарала ултырғандар астан үләсәк бит. Күр, беҙҙең елкәлә нисә кеше ултыра. Улар эш хаҡын ай һайын ала, ә мин, көнө-төнө эшләгән крәçтиән, икенсе йыл бер тин күргәнем юҡ. Һине, Рәйес, оҙаҡламай кулак яһап һөрәсәктәр.... Давай, мин һиндә генә йоҡлайым, ә? Был көйө ҡайтһаң, бисә әрләй. Йә, үҙемде тыя алмай, үлтерә һуғырмын да ҡуйырмын, бәләһенән баш аяҡ.

Шулай ҙа Шәрифулла тел биçтәһе Апушты һөйрәп тигәндәй алып сығып китте, тегеһе бер ыңғай башланған шешәне лә эләктерергә онотманы.

Сәсеүҙән һуң Рәйес бөтә уй-хыялын, ынтылышын йорт төҙөүгә йүнәлтте. Икенсе ҡатҡа ҡарағай бураны ул үткән көҙ үк буратып ҡуйғайны, шуны баҡса артынан нигеҙе янына килтерҙе, мүкте Торна һаҙлығынан йолҡто. Мәктәп котельныйынан өс самосвал шлак килтереп ауҙарҙы. Батрактарҙы ауыл кешеләре бесәнгә таратып алып бөтмәç элек тәүге ҡатты ҡойорға кәрәк ине. Әхәт, Ғариф, Уралдың ризалыҡтарын алды, ҡасандыр ауыл хужалығы академияһын ҡыҙыл дипломға тамамлаған, хәҙер эскесегә әйләнгән Ринат киләм тине. «Ашау, эсеү булыр, йортто бөтөү менән эш хаҡын түләрмен, – тип вәғәҙәләне Рәйес, тик бер шарт ҡуйҙы: – эш алдынан, эш мәлендә эсеү юҡ, төшкө аш ваҡытында – йөҙәр грамм, ҡалғаны – эштән һуң. Беренсе ҡатты тамамлағас, елле генә итеп йыуырбыҙ».

Батрактар ҡәнәғәтһеҙлек белдерҙе, йәнәһе, эш ауыр, әҙерәк эсмәй ҙә булмай инде, әммә Рәйес ҡаты торҙо:

– Риза түгелһегеҙ икән – дүрт яғығыҙ ҡибла. Кеше табырмын – һеҙҙең һымаҡтар ярты ауыл.

Китмәнеләр, һөйләнә-һөйләнә эшкә тотондолар. Эсмәгәндә эшкә былай сымыры инеләр, әммә төш ваҡытындағы йөҙ грамдан, туҡлыҡлы аштан һуң эш кәйефтәре китә, тартырға йыш туҡтайҙар, күҙҙәре майлана, йөҙҙәрен күңелһеҙлек, битарафлыҡ баçа.

Шлак, бетондан торған беренсе ҡатты егерменсе июнгә тамамланылар. Икенсе ҡатҡа бураны ултыртыр өсөн Рәйес өмә ойошторорға булды, сөнки эштең оҙаҡҡа һуҙылыуы бар, унан һуң былай сағыштырмаса осһоҙға ла төшәсәк. Әлеге ике батрактан тыш, өмәгә бер йәшник «Сәмиғулла»һын тотоп Сәмиғ-шайтан, Шәрифулла, Апуш, Ринат килде, Рәйес өндәшмәһә лә, МТМ-дан һорауһыҙниһеҙ алып киткән краны менән бульдозерсы Ришат (ашау-эсеү мөмкинлеге булған бер өмәне лә ҡалдырмай) пәйҙә булды.

Был ҡәҙәре кешене ашатырға ла кәрәк бит әле. Рәйес һарыҡ һуйҙы, ашауҙы шунда уҡ, төҙөлөш эргәһендә, ойошторҙо. Ни тиһәң дә, эш ерендә ит бешкәндә, уның тәмле еҫе танау тишектәренә инеп ҡытыҡлағанда, йәйге ҡояш нурҙарында шешәләр ялтырағанда, кеше, тиҙҙән саф һауала, тәбиғәт ҡосағында буласаҡ ашау-эсеүҙе көтөп, эшен еренә еткереп башҡара, унан килеп, аҙаҡ күберәк тейәгәндәре табында бәхәс ойошторһа, һуғышһа, өйҙәге ише ҡашығаяҡ ватылмай, ҡан тамған урындар ҡалмай.

Өйҙән өсаяҡ килтерҙеләр, бригада ҡаҙанын алдылар һәм Сибәрбикә эшкә лә тотондо.

Сәғәт ун икеләрҙә, арығанды бер аҙ баҫайыҡ, кәйефте күтәрәйек тип, еңелсә генә ашап, йөҙәр грамм һуҡтылар, сәғәт етеләргә бураны күтәреп мүккә ултырттылар, өрләктө һалдылар, атламаны ҡорҙолар. Иҙән түшәү, тәҙрә, ишектәр ҡуйыу — яйлап эшләнә торған эштәр, иң мөһиме, ҡороп ултыртылды.

Мәликә килеп Сибәрбикәгә ярҙамлашырға тотондо. Ҙур брезент өҫтөнә тәрилкәләр, сеүәтәләр, стакандар ҡуйҙылар, аш өләштеләр, йылғала йыуынып йәки һыу инеп килгән өмәселәр ашарға ултырҙы.

Июнь ҡояшы тау баштарына терәлһә лә, аяҙ зәңгәр күк йөҙө һаман көйҙөргөс эҫелек бөркә, утлы шыйыҡса эскән кешеләргә был мәғәнәһеҙ эҫелек кәрәкмәгәнлеген тәбиғәт бер ҙә аңламай, ҡояш тиҙерәк тау артына төшөп китһә йәки бөтөнләй һүнеп ҡуйһа яҡшы булыр ине. Рәйес Сәмиғ-шайтандың «Сәмиғулла»һына тауыҡ тиҙәген кәрәгенән артыҡ ҡушҡанын тиҙ самаланы, сөнки икенсе стакандан уҡ, ҡуйы һурпалы һарыҡ ите ашауҙарына ҡарамаҫтан, кешеләрҙең йөҙөнә ауылдың диуанаһы Вәликәйҙең йөҙө һымаҡ иҫәрҙәрсә буш, мәғәнәһеҙ йылмайыу ятты. Шыйыҡсанан ағыуланған өмәселәр үҙҙәрен төрлөсә тота башланы, дөрөҫөрәге, улар үҙҙәренең ҡылығын контролдә

тота алмай ине инде. Берәүҙәр тоноҡ ҡараштарын бер нөктәгә төбәп тынып ҡалды, икенселәр тамаҡ ярып һөйләргә, бәхәсләшергә кереште. Ғариф күңелһеҙлеккә бирелде, бына-быва илап ебәрер төҫлө. Айныҡ сағында тыныс, иҫке өйөндәге яңғыҙаҡ тормошон асып бармаған Ринат ярһып, һәр ваҡыттағыса, барыһын да әрләргә тотондо. Хәбәрендә алама һүҙҙәр юҡ, иң насарҙары — «навоз», «мусор». Ул ошо ике һүҙҙе тик русса ғына әйтә, дөрөҫөрәге — ҡысҡыра. Иҫергәс, ул майлы иҫке кейемендә берәйһенең ҡапҡа төбөнә барып ауа һәм үҙе сүп өйөмөнә оҡшап ята.

... — Мин колхоз председателе булырға тейеш инем, — тип һөйләй Ринат, — ә мине, академикты, завгар итеп ҡуялар.

— Ҡуйсәле, председатель була алмайһың һин, — тип ҡул һелтәй Апуш, — сөнки характерың юҡ, эсергә лә яратаһың.

— Ситтән тороп уҡығандар идараға бер кереп алһа, һис ҡасан уҡығандарға урын бирмәй. Ә мин председатель булһам, шундай итеп эшләр инем... Минең эш фәнни нигеҙгә ҡоролор ине. Сөнки мин академик, академияны бөткән кеше. Һеҙ һис юғы НОТ-тың нимә икәнен беләһегеҙме? Юҡ, белмәйһегеҙ, сөнки һеҙ барығыҙ ҙа — заочниктар. Рәсәйҙә гел генә заочниктар идара итте, шуға беҙҙә бөтәһе лә — мусор...

Күңелһеҙ генә ултырған Ғариф ҡапыл тоҡанып китте лә ҡысҡырып ебәрҙе:

— Академик, өнөңдө тығаһыңмы, юҡмы? — Шунан ҡалҡынып Ринаттың түшенән матҡып алды, брезенттан ситкә һөйрәне. Академик бер аҙ шымып ятты ла элекке урынына кире килеп ултырҙы.

Ә Рәйес Мәликәнән күҙен алманы, ул уны эскән сағында бигерәк тә ныҡ ярата ине. Мәликә, Рәйестең ҡарашын тойоп, уның янына ултырҙы ла йомшаҡ ҡына тауыш менән былай тине:

— Күрше, Сәмиғ йөрөй бит.

— Йөрөһә ни?! Булдыра алғанға йөрөй. Сыҡҡанһың икән — түҙ.

— Һиңә сыҡҡан булһам, һин дә йөрөр инеңме?

— Юҡ.

— Ышанмайым, һин дә Сәмиғ һымаҡ йөрөр инең.

Мәликә шулай тине лә урынына китте.

Һимеҙ кәүҙәһенең һәр күҙәнәге спирт менән ағыуланған Уралға түҙгеһеҙ эҫе була башланы. Мәктәптә химияны

өйрәнмәһә лә, ул спирттың, бигерәк тә «Сәмиғулла»ның, яна торған нәмә икәнен яҡшы белә. Ул үҙенең ҙур кәүҙәһенә ошо ағыуҙы ике литр самаһы ҡойҙо, был литрҙар унын башынан алып аяғына тиклем бөтә организмы буйлап таралды, ҡанына һеңде һәм эҫегә ҡыҙып яна башланы. Уралға тәненең барлыҡ тишек-тошоғонан төтөн сыға кеүек тойола, бына хәҙер ул һаламға ут тоҡанған кеүек тоҡана ла шарт та шорт яна башлаясаҡ, унан көл өйөмө генә тороп ҡаласаҡ.

— Егеттәр, мин янам! — тип ҡысҡырҙы ул, ултыра торғас.

— Янһаң, бар, һыу инеп кил, — тип кәңәш итте Апуш.

Бәүелә-сайҡала, бер йығылып, бер ҡалҡынып, урыны-урыны менән мүкәйләп, Урал йылға яғына китте, бейек ярға еткәс, ҡулдарын йәйеп эсе менән сөңгөлгә һикерҙе лә өйөрөлмәктә юҡ булды. Бүтәнсә уны бер кем дә күрмәне.

Ғариф ауыл яғына тәнтерәкләне, эскесе Фәрхиҙәгә барыу ине ниәте. Ҡатынһыҙ ирҙәр ауылда ҡырҡҡа яҡын. Шуларҙың унлабы бер ҙә өйләнмәгән, ҡалғандарының — түҙә алмай, сибек йәки ауырыу бала тапмаҫ өсөн — ҡатындары ҡайтып киткән. Ошо яңғыҙ ирҙәр, әллә ниҙә бер булһа ла ҡеүәттәре уянғас, үҙҙәре һымаҡ эскесе ҡатынға йәки ирһеҙ бисәгә бара.

Ғариф тәүҙә аруҡ ҡына атланы, килә торғас, үҙен берсә Мышағырҙың текә яғынан менгән һымаҡ, берсә унын битләүенән аҫҡа тәгәрәгән төҫлө тойҙо, аҙаҡтан мүкәйләүгә күсте. Фәрхиҙәгә ул һәр ваҡыттағыса баҡса артынан керергә самаланы. Баҡса кәртәһенә еткәс, кәртәгә эсе менән ятып, бер аяғын теге яҡҡа ташланы, тик икенсе аяғын ташларға хәле етмәне лә кәртә өҫтөндә эленеп ҡалды — йәйен-ҡышын һалмаған ауыр резина итекле аяғының береһе — баҡса яғында, икенсеһе — тыш яҡта. Унын спирт менән шыйығайтылған ҡаны тәне буйлап башына китте лә мейеһендәге үлем алды ғазаптарын баҫты. Иртәнсәк быҙауын эҙләргә сыҡҡан Үрге ауыл Сәкинә, уны шәйләп, кемдеңдер иҫке кейем-һалымы эленеп тора, тип уйлаған.

Ринат төнө буйы ауыл буйлап, тәҙрәләр тапҡырына туҡтала-туҡтала: «Һеҙ барығыҙ ҙа — заочниктар, навоз, мусор!» — тип ҡысҡырып йөрөнө. Шунан үҙенең ҡапҡа төбөнә йығылды ла йоҡлап китте. Апуш бер ҡайҙа ла ҡуҙғалманы, ашаған-эскән еренд̌ә ҡалды һәм таң атҡансы шунда йоҡланы.

Иртәгәһенә Рәйес өй һалыу мәшәҡәтенә сумыу сәбәпле яҙҙан бирле аяҡ баҫмаған баҫыуына китте. Бармағаны яҡшыраҡ булыр ине, дөрөҫөрәге, был баҫыуҙың бөтөнләй булмағаны хәйерлерәк булыр ине. Баҫыуҙы билсән баҫҡан. Бойҙай баш ҡоҫҡан, тик, сүп үләндәренең әрһеҙ ҡыҫырыҡлауына ҡаршы тора алмағанлыҡтан, сибек һәм зәғиф. Ул билсән ниңә иген баҫыуында үҫә икән? Кеше өсөн бөтөнләй файҙаһыҙ был үҫемлек үтә лә хәйләкәр, аяуһыҙ. Үткән йыл һөрөп сәселгән баҫыуҙа ул әлеге ише күп түгел ине, әммә көҙ, ураҡ мәлендә, комбайн ашлыҡ менән бергә уны ла сапты һәм уның йомшаҡ мамыҡ башын туҙғытты, ел уны бөтә баҫыуға таратты. Билсәндең башына, парашюттағы ише, орлоҡ йәбешкән, шул ергә килеп тә төшә, үҫеп тә сыға. Тәбиғәт, әгәр кешене яратһа, бөтәһен дә уға файҙалы итеү хәстәрен күрһен ине — шулай барып төшкән орлоҡтарҙан баҫыуҙарҙа игендәр үҫһен дә сыҡһын ине...

«Әйләнәһенә һигеҙ, ун центнерҙан да артмаҫ, — тип әсенде Рәйес, — быйыл булманы, быйыл өй тип йүгерелде, киләһе йыл ныҡлап тотонормон инде...»

Бесән башланды. Был эште Рәйес бер ҡасан да ауыр шөғөлгә иҫәпләмәне, әммә йылдың-йылы тап ошо мәлдә генә аҙна-ун көн ямғыр яуыуы теңкәһенә тейә. Шундай мәғәнәһеҙ көндәрҙә, быҫҡаҡ ямғыр аҫтында, Рәйес яңы өйөнә барҙы һәм, уны уратып йөрөй-йөрөй, уйы менән тотош төҙөп бөтөрҙө. Икенсе ҡаттың киң балконын көпләмәҫ, кистәрен сәй һемерә-һемерә, яландарҙың бал тәмен һулай-һулай, эңер шәфәғенә һоҡланып шунда ултырыр. Ҡояш байығас, ай ҡалҡҡанын күҙәтер, йәш сағында хыял йөрөткәнсә, тегендә, йыраҡ офоҡта, тауҙар артында шулай уҡ ай сығалыр, кемдер юл буйлап киләлер йәки үҙенең йорто алдында ултыралыр һәм Рәйес һоҡланған ошо уҡ айҙы күрәлер, тип фараз итер. Ай яҡтыһында ҡайҙалыр китеп барған йәш һылыу ҡатын да күҙенә салынғандай булыр... Тәҙрә ҡашағаһы менән кәрниздәрҙе семәрләп яһатыр, зәңгәр төҫкә буяр. Фронтонда матурлыҡ өсөн бәләкәй генә балкон эшләтер. Ә веранданы, бүлмәләр кеүек үк, йоҡа ҡарағай таҡталар менән көпләтһә яҡшы булыр. Ҡоймаларҙы, шулай уҡ ҡапҡаны зәңгәр итер... Ҡайсаҡ ул бер мәлгә генә, үҙенең төҙөп бөтөлмәгән, өҫтөнә ямғыр яуған өйөн күҙ уңынан ысҡындырып, имеш, әҙер йортоноң эсенә инә башлай: керә лә йомшаҡ сөм креслоға сума, ҙур төҫлө телевизорын ҡабыҙып һуңғы яңылыҡтар-

ҙы тыңлай... Яңынан реаль тормошҡа әйләнеп ҡайтҡас, Рәйес ҡурҡып китте: «ҡыйығы ҡыйшайҙымы», әллә галлюцинация башландымы? Әммә кисәге эскене иҫенә төшөрөп, минең бит баш ауырта, тимәк, «Сәмиғулла» ғәйепле, ул әллә ниндәй уйҙарға төшөрә, тигән һығымтаға килде.

Ямғыр арҡаһында бесән айға һуҙылды. Июль аҙағында Рәйес тағы баҫыуына китте. Әммә баҫыуҙы ла, бойҙайын да тапманы. Бойҙайҙа, дөрөҫөрәге, яҙын бойҙай сәскән урында, колхоз аттары йөрөй ине. Эскесе көтөүсе ҡарамаған көтөү һыу аша сыҡҡан да инде емләнгән ашлыҡты бөтөнләй тапап бөткән. Урыны-урыны менән билсән генә башын юғары тотоп һерәйеп ултыра...

Рәйестең табаны аҫтында ер сайҡалып китте лә ҡапыл Мышағырҙың төньяҡ битләүендәй текәгә әйләнде. Рәйес, меҫкен, үҙен тиреҫ кәҫендәй, ошо битләүҙән һикерә-һикерә аҫҡа тәгәрәгәндәй тойҙо. Зәңгәр тәҙрә ҡашағалы ике ҡатлы өйө, «тиреҫкә батҡан иҫерек ауылдан ситкәрәк китеп мул, бәхетле тормош менән йәшәргә» тигән зәңгәр хыялдары һүнде, әйтерһең дә, уның ошо өмөтөн серек һаҙлыҡтан шыуышып сығып килеүсе ҡуйы томан күмеп китте...

Ай буйы эсте лә ҡуйҙы Рәйес баҫыуына барып ҡайтҡандан һуң. Өмәселәренән ҡалған «Сәмиғулла»ны эсеп бөттө, иҫерек көйө үҙен-үҙе әрләне. «Фермер булырға теләгәйнеңме, заочник? Килеп сыҡманы». Ҡатынының мыжыуҙарын ҡолағына ла элмәне, улын күрмәне, күҙенә салынһа, уның аптыраулы ҡарашынан ҡасты. Эсергә бөткәс, айнырға теләп, көнө буйы башы сатнап үлә яҙҙы, шунан «Сәмиғулла» артынан Сәмиғ-шайтанға барырға мәжбүр булды.

Ә Сәмиғ-шайтандың, йәғни «Олигарх»тың эштәре майланған кеүек көйлө бара ине. Ауылдың айырым ихатаһында ул капитализмдың тәүге болон уңышлы йыйҙы. Өр-яңы «Волга» машинаһы алды, өйөнә төкәтмә эшләтте, әйтеүҙәренсә, шунда кафе асҡан, төҫлө телевизор ултыртып ебәргән, ауылдағы берҙән-бер «видак» та унда. Кафе ҡапҡаһына күңелле яҙма ҡаҙаҡлап ҡуйған: «Кәйеф», уны русса «кайф» тип тә аңларға була. Ул «Кәйеф» тигәненә хатта ҡаланан, күрше ауылдарҙан, ҡасабаларҙан оҙон ботло, биҙәнгән-төҙәнгән ҡыҙҙар ҙа килә, имеш.

Сәғәт киске унынсы китеп бара, көндөҙгө бөтмәҫ мәшәҡәттәрҙән арыған крәҫтиән синыфы йоҡларға йыйы-

на, бигерәк тә ҡатын-ҡыҙ иртә төнәй. Йәш-елкенсәк кенә клуб янында тапана.

Урмандан, үҙенең үҫеп бөткән балаларын эйәртеп, инә бүре килеп сыҡты ла тирә-яғына ҡаранырға тотондо: һуңлап ҡалған аңра быҙауҙы йығыу ниәте, әгәр ул осрамаһа, һис юғы балаларына өтөк ауыл эттәренең өрөүҙәрен тыңлатыр, тиреҫ еҫен еҫкәтер, сөнки алдағы һунарҙа уларға былар бик кәрәк буласаҡ.

Һүрән генә яҡтыртылған соланға кергәс, Рәйес киң тимер карауатта ятҡан Мәликәне күрҙе. Иҫергәнсе эскән дә сисенмәй-нитмәй барып ауған, күрәһең. Күрше бүлмәләге ҙур төҫлө телевизорҙан яҡтылыҡ һирпелә, ваҡыт-ваҡыт тәмәке уты баҙлап китә. Ҡуйы тәмәке төтөнө аша кемдәрҙеңдер йөҙҙәре шәйләнә. Сәмиғ-шайтан майканан ғына бүлмә уртаһындағы тәпәш өҫтәл артында ултыра, ҡулын эргәһендәге креслолағы ҡыҙҙың яурынына һалған. Өҫтәл шешә, стакан, бокал, ниндәйҙер аҙыҡ һалынған тәрилкәләр менән тулы. Төпкө мөйөштәге шаршау артында ҡатын-ҡыҙ хихылдауы, ир кешенең тамаҡ төбө менән мөгөрләүе ишетелә. Тауҙар, ҡуйы урман араһында ултырған ошо башҡорт ауылында кешеләр ябай ғына көн итә, төнгө серле тормош улар өсөн ят, шуға ла телевизорҙа, өйҙә ниндәйҙер серле нәмә барғанын самаланы Рәйес һәм, шайтан — шайтан инде, тип уйланы.

— Ултыр, күрше, әйҙә, башыңды төҙәт, — тине Сәмиғ-шайтан һауалы ғына. Ул Рәйестең хәлен белеп-аңлап тора ине.

Рәйес ҡарағусҡыл шыйыҡсалы шешәне алды, ниндәйҙер шарап ине шикелле, ә ул шәрбәт әйберҙәрҙе эсмәй, эсә алмай.

— Араҡың юҡмы ни?

— Араҡыһы ла булыр, — тип яуапланы Сәмиғ-шайтан — Мәликә! — тип ҡысҡырҙы.

Яуап булмағас, ул үҙе ҡуҙғалып, ҡайҙалыр барып, бер шешә «Сәмиғулла» тотоп инде. Рәйес һыу эсә торған ҙур бокалға көмөшкә ҡойҙо, өтәләнеп ауыҙына ҡапланы, тәрилкәнән нимәлер алып ауыҙына ҡапты. «Сәмиғулла» эсен яндырып төшөп китте (тауыҡ тиҙәген байтаҡ һалғандыр), тәненә таралды, башына бәрҙе, аяҡтары еңеләйеп, кәүҙәһен иҙәндән айырып, өҫкә күтәргәндәй булды. Бүлмә, бүлмәләге кешеләр унан алыҫлашҡандан-алыҫлаша, Рәйес уларға юғарынан ҡараған һымаҡ, гүйә, өҫтәренән осоп йөрөй. Төтөн менән тулған ярым ҡараңғылыҡтан, ят еҫле

шайтан ояһынан ҡотолорға теләп, бүлмәнән сығырға ниәтләнде Рәйес — көскә урынынан ҡалҡынды, ишек яғына бер-ике аҙым атланы ла, нимәнелер иҫенә төшөрөп, кире боролдо һәм Сәмиғ-шайтанға асыу менән:

— Һин, давай, Мәликәне ҡыйырһытма! — тине.

Аҫтан, иҙәндән, яуап ишетте:

— Иҫерҙең дә һаташаһың. Бар, ҡайт, йоҡла.

Рәйес йәнә күршеһенең туҡ йөҙөнә текәлде.

— Теге ваҡыт һине ултыртырға кәрәк булған, — тине. Шунан сайҡалып китте, ҡайһы аралалыр соланға барып сыҡты һәм йоҡлап ятҡан Мәликәне күрҙе. Матур йөҙөнә оҙаҡ итеп ҡарап торҙо, шунан һелкетергә тотондо. — Мәликә, уян әле, тор!

Мәликә башын ҡалҡытты ла йоҡоло мыжыҡ тауыш менән:

— Нимә кәрәк? — тине.

— Тор, тим. Әйҙә, китәйек бынан.

Ҡатын тороп ултырҙы, күршеһен таныны.

— Ә-ә, Рәйес, һин икәнһең.

Мәликә Рәйес артынан атланы. Рәйес уның ҡулынан тотоп ихатаға алып сыҡты. Яҡындағы ҡалҡыулыҡ артынан һонолоп ҡараған һарғылт ай ауыл урамын һүрән генә яҡтырта. Рәйескә улар Мәликә менән ерҙән айырылғандар ҙа ай яҡтыһында осоп баралар кеүек тойола. Ауылға яҡынлашыусы бүреләр еҫен һиҙеп, эттәр өрөргә тотондо. Тыңлаусан ғына эйәреп барған Мәликә ҡапыл:

— Рәйес, һин мине ҡайҙа алып бараһың? — тип һораны.

— Үҙемә, яңы йортҡа, — тип яуапланы Рәйес.

Ғарифтың ауырға етешкән йортона еткәс тыҡрыҡҡа боролдолар ҙа мал йөрөгән утлауға килеп сыҡтылар. Утлауҙың теге яғында, йылға ярына яҡын ерҙә, бейек йорттоң ҡара шәүләһе шәйләнде.

— Һин бит уны төҙөп бөтмәгәнһең, — тине Мәликә.

— Бөттөм, күрмәйһеңме ни? — тип яуапланы Рәйес, ышаныслы итеп. — Ҡара, ул шау зәңгәр төҫтә, кәрниз, наличниктар семәрле, ҡара, ниндәй ҙур тәҙрәләр, балкон, веранда. Веранда — ҙур, үҙе бер бүлмә. Ҡара — бар тәҙрәләрҙә лә ут яна. Тыңла — музыка уйнай. Так что миндә йәшәрһең, үҙеңдең Шайтаныңдан китерһең дә...

Ауылдан бер арый ситтәге яңғыҙ өй барыбер ҙә төҙөлөп бөтмәгән көйө ҡалды. Буш тәҙрәләргә, яланғас атламаларға ҡарауы эс бошорғос ине, әйтерһең дә, мәрхүмдәрҙең

һүнгән ғүмер усағы. Йылға буйынан һуңлап ҡайтып килеүсе кеше, әлеге өңрәйгән тәҙрәләргә ҡарап, шомло тынлыҡҡа ҡолаҡ һалып, аҙымдарын ҡыҙыулата. Ә көндөҙҙәрен өй янына берәү ҙә килмәй. Оҙаҡламай тирә-яҡты ҡабаттан бейек сүп үләне баҫты. Хәйер, Апуш, юҡ-бар уйлап сығарырға әүәҫ Апуш, бер үткәнемдә тәүге ҡатта ут күрҙем, ниндәйҙер тауыштар ишеттем, тип һөйләп йөрөнө.

Сентябрҙә йылға аръяғынан, һаҫыҡ һаҙлыҡтың серек төпһәләре тирәһенән ялан-туғайҙар өҫтөнә томан шыуышты, ул бушлыҡты, өйҙө ҡапланы. Томан араһынан өй эргәһендә маска-халаттар кейгән һалдаттар кеүек гигант аҡ һындар ҡалҡты ла, ҡаш өҫтөнә ҡулдарын ҡуйып, оҙаҡ итеп ауыл яғына ҡарап торҙо.



## ХИКӘЙӘЛӘР

# *Үзбәк*

Ҡапыл башланған һуғыш өмөтләнгәнсә тиҙ һәм күңелле еңеү менән бөтмәне лә бөтмәне, киреһенсә, ҡыҙа, вәхшиләнә генә барҙы. Үҙенең ҡанлы яланына ауылдың эшкә ярарлыҡ барлыҡ ирҙәрен алып китеп бөттө, икмәктән мәхрүм итте, кеше тормошона йоҡоһоҙ шом һәм ҡара ҡайғы булып инде. Ауылға аслыҡ шыуышты, үлем күләгәһе ятты, әллә ниндәй ҡалдыҡ-боҫтоҡтан бешерелгән, ер кеүек ҡап-ҡара һәм ҡомо теш араһына тулған көлсәле көн килде. Күҙ терәп торған ризыҡтары — һөт тә бәрәңге. Яҙ етеү менән бар халыҡ йыуа, ҡымыҙлыҡ, тағы әллә ниндәй үлән һәм тамырҙар эҙләп ялан-туғайҙарға, урманға эркелде. Баҫыуҙан былтырғы башаҡтарҙы йыйыу ниңәлер ҡәтғи тыйылған. Бер-ике йылдан ябыҡ мал-тыуарын һуйып, орлоҡҡа ҡалдырылған бәрәңгене ашап бөткәндән һуң кешеләр аслыҡтан эстәре күбә башлаясаҡтарын, тоҙло һыуҙа тире һәм ҡайыштарын ҡайнатасаҡтарын, ә түбәнге ауылда йәшәгән Юламан ағайҙың аслыҡтан аҡылынан яҙасағын, аҙаҡ аҫылынып үләсәген әлегә бер кем дә күҙ алдына килтермәй ине әле.

Мин, ун биш йәшлек үҫмер, «Ташкент — икмәкле ҡала» тигән китапты уҡыным да унда икмәктең күп булыуына ышандым һәм, Мишка Додонов һымаҡ, Урта Азияға шылырға ҡарар иттем. Ҡуйынға көлсә менән өләсәйҙең тауыҡ

ояһынан сәлдергән ике йомортҡаны тығып, ауыл осона сығып баҫтым да алма, хөрмә баҡсалары араһында ултырырға тейешле йылы, икмәкле Ташкент яғына атланым.

Сит яҡтарҙан ҡурҡыу юҡ. Был, күрәһең, алыҫ юлдарҙың ауырлыҡ-мәшәҡәттәрен, ят кешеләр араһында йөрөүҙең ҡыйынлыҡтарын күҙ алдына килтерә алмаған малайлыҡ ғәләмәте генә булмағандыр, ә етемлек саялығы менән миңә бер нимә лә юғалтырға түгел, тип уйлай инем — ауылда атай менән әсәй ҙә, йыйған байлыҡ та ҡалмай бит. Мине яратмаған өләсәй тыңламаҫ, ялҡау һәм китап ене ҡағылған ейәне тураһында оҙаҡ ҡайғырыр тиһеңме.

Юл мине ауылдан ете саҡрымдағы марганец рудникғына килтерҙе. Руданы машиналар менән Магнитогорскиға ташыйҙар. Өләсәйҙең тауыҡ ояһынан алған ике йомортҡаны урыҫ шоферына тоттороп, мин киске яҡҡа йөк машинаһының кабинаһына инеп ултырҙым да иртәнсәк Магнитогорск ҡалаһының тимер юл вокзалында төшөп ҡалдым.

Ҙур, күп халыҡлы ҡалала беренсе тапҡыр инем, һөйләшеүҙәре лә тик урыҫса ғына. Дөрөҫ, был телде бәләкәй саҡтан уҡ ишеткәнем бар барлыҡҡа: күрше прииҫкылағы зәңгәр күҙле оҙон кешеләр, мәрхүм атайым да, ауыл тимерсеһе Сергей ағай, унан Тирлән заводынан килгеләгән таныштары менән ошо телдә һөйләшә торғайны, мәктәптә лә өйрәтеп маташтылар. Һуғышҡа тиклем бер нисә ай элек әле, Миндәк поселогындағы пионер лагерына килгәндә үҙем дә урыҫса һөйләшергә маташып ҡарағайным, шул телдә китаптар уҡыным һәм ярты-йорто ғына булһа ла уларҙы аңлай инем инде. Ҡыҫҡаһы, кеше күплеге, асыулы әҙәмдәрҙең етеҙ ҡырҡа хәрәкәттәре, төрлө тауыш, гудоктар Ташкентҡа китә торған һәм шунан әйләнеп килгән поездарҙың гөрһөлдәүе, мазут, бензин, май, янған ташкүмер еҫе, завод торбаларының ҡуйы ҡара төтөн бөркөп ултырыуы мине шаҡ ҡатырһа ла, һөйләшеү мәсьәләһе бигүк борсоманы — кеше хәбәрен нисек тә аңлай, үҙем әйтергә теләгәнде аңлата алырыма ышана инем.

Алып сыҡҡан көлсәне шул көндө үк ашаным. Кеҫәмдә һуҡыр бер тин дә юҡ. Асыҡтырҙы. Вокзал тирәләй темеҫкенеп йөрөй торғас, яҡында ғына баҡсалар барлығын шәйләнем дә, эңер төшөү менән кәртә аша шунда һикерҙем. Түтәлдәрҙә нимәлер үҫә. Киң япраҡлы ниндәйҙер үҫемлекте күрҙем — ҡараңғыла ул миңә бик тә тәмле булыр һымаҡ тойолдо. Өҙҙөм дә ҡабаланып сәйнәргә керештем, әммә

тәмһеҙлегенән шундуҡ кире төкөрөргә тура килде. Тәмәке! Мин тәмәке япраҡтарын ашағанмын икән.

Түтәлдәр араһында сабылған ыҙанда кәбән бар. Ҡунырға шунан да йәтешерәк урын табып булмаç тип, бесәнде йолҡколап өң эшләнем дә, шунда кереп ултырҙым. Йылы кәбән был төнгө һыуыҡта ауылдағы ише нисектер яҡын, уңайлы ине. Ҡабаланмай ғына ай ҡалҡа, ә йыраҡта ҡала ҡайнай.

Мине аслыҡ һәм Ташкентҡа илтәсәк поездың ҡасан ҡуҙғалыуын тиҙерәк белергә теләү тойғоһо уятты. Китергә, берәй вагонға йәбешеп булһа ла ысҡынырға бынан!

Аслыҡ мине һәр төрлө еçкә һиҙгер булырға ла өйрәткәйне. Әллә буфет, әллә рестурандың асыҡ верандаһынан килгән тәмле аҙыҡ еçе тәҡәтте алды бит. Түңәрәк өçтәл артында ҡаласа бөхтә кейенгән кешеләр тәрилкәнән миңә таныш булмаған аш ашайҙар ине. Ситкәрәк барып баçтым да, һарыҡ көтөүен һағалаған бүре шикелле, ҡарашымды тәрилкәләргә, ҡулдарындағы ҡара икмәккә ҡаҙаным. Ҡайһылары ашап бөтмәй, икмәк киçәктәрен дә ҡалдыра. Веранданы вокзал алдындағы майҙандан тәпәшәк кенә таҡта ҡойма айырып тора — минең ише аҡсаһыҙ берәҙәккә бында тығылыуҙан һис фәтүә юҡ. Әммә аҙыҡ тороп ҡала бит, официантка бер нисә ҡалаҡ ризыҡ ҡалған тәрилкәләрҙе бер-береһенә өйә лә ҡайҙалыр алып китә. Мин ҡапыл, аслыҡтан шашҡанымды һис тыя алмай, ҡылығымдың шул ҡәҙәре оятһыҙ икәнен белә-аңлай тороп, әлеге таҡта ҡойма аша һикереп тигәндәй сыҡтым да, иң ситтәге ултырғыстың ҡырына ғына ултырып, ике тәрилкәләге ҡалған ашты береһенә бушатып, ҡырынан күтәреп эстем, ҡалған икмәк һыныҡтарын кеçәгә тығып, кирегә һыпырттым. Береһе лә күрмәне, күрһәләр ҙә иғтибар итмәне шикелле. Әлбиттә, был ғына туйҙырманы, киреһенсә, тағы ла ашағы килеү теләген генә уятты. Берәйһе тәрилкәһендә тағы аш ҡалдырмаçмы тип көтөргә булдым. Шул ваҡыт минең янға ниндәйҙер малай килеп баçты. Аҡһыл сәсле, зәп-зәңгәр ҙур күҙле, быҙауҙыҡы ише аҡ керпекле урыç ине был. Кәүҙәгә бәләкәй, ябыҡ, майка менән дә бәреп йығырлыҡ, ә бына йәшкә минән олораҡтыр. Һипкелле яшыҡ йөҙө, ярылып бөткән ҡалын ирене менән йәмшек танауы ла бик күркәмдән түгел. Мин һағайҙым, әммә унда үҙемә ҡарата асыу ҙа, янау ҙа, ҡурҡытырға тырышыу ҙа абайламаным.

— Ирektə йөрөйhөңме? — тине ул, нəҙек кенə тауыш менəн, тəмəкенəн hарғайған тештəрен күрhəтеп.

— Ауылдан килдем.

— Ə, колхоз малайы. Урлаша белəhеңме?

— Юҡ.

— Урлаша ла белмəгəс, нисек ирektə йөрөйhөң hуң? Ҡалдыҡ менəн туйынаhыңмы? Ашағың киләме? — тип hораны был. — Əйҙə, керҙек, мине бында беләләр.

Беҙ верандаға инеп, буш өҫтəл артына ултырҙыҡ. Маша апай тигəн официантка ашарға килтерҙе, ашағас, яңы танышым мине йəнə аптыратып, кеҫəhенəн hимеҙ кошелек сығарҙы ла ун тəңкəне тегегə hуҙҙы.

— Сдача кəрəкмəй.

— Ныу, Вася, — тине Маша апай, əллə аптырап, əллə шатланып.

— Хəҙер майҙанға киттек, — тине Вася. — Исемең нисек?

— Тəлғəт.

— Ə мин — Вася. hине Толик тип кенə йөрөтөрмөн.

Майҙан беҙҙеңсə, минең ауыл телендə — hабантуй, дөрөҫөрəге, hабантуй үтə торған урын, ялан. Мин, аңлап етмəй, ҡайҙа, ниндəй майҙанға алып барғанын hораным.

— Баҙар. Урлашабыҙ, — тип яуапланы был. — Миңə булышырhың.

Быға тиклем бер нəмə лə урлағаным булманы тип əйтə алмайым. Өлəсəйемдең тауыҡ ояhынан йомортҡа сəлдереп магазиндан ҡармаҡтар алғылай торғайным, кеше баҡсаhынан инеп ҡыяр ҙа сүплəгəнем булды, тик бында, ҡалала, шөрлəй инем. Əммə асығыуҙың сигенə килеп етеп өмөтhөҙлөккə бирелгəн, хатта ҡалдыҡҡа үрелгəн ваҡытымда ҡотҡарған кеше hорағас, минең баш тартырға хаҡым юҡ.

— Тотhалар?

— Тотhалар — колония. Миңə өйрəнергə түгел. Яңы ғына Златоуста ултырып ҡайттым. Туҡмағандарында ғына ҡурҡыныс. Сибекмен бит, үлтергəнсе hуғыуҙары бар. Ə hин ҡурҡма. Берəй нəмə булhа, «атанде» тип ҡысҡырырмын, ə hин тай. Минəн ҡалма. Тамағың туҡ йөрөр. Бер үҙемə ҡыйын. Тауыҡ күҙ мин, кис булhа, күрмəйем дə ҡуям.

— Миңə бит Ташкентҡа китергə ине. Əйҙə бергəлəп барайыҡ.

— Барырбыҙ. Көҙгә табан. Әлегә бында йөрөйөк. Бында кеше өйрәнмәгән, белмәй, бурҙар юҡ.

Беҙ трамвай туҡталышына атланыҡ. Минең бер ҙә трамвай күргән юҡ ине. Кеше күп. Минән арыуыраҡ кейенгән Вася — ҡаҡса тәнендә һалпайып торған ҙур, иҫке генә пинжәк, әлегә ямау белмәгән салбар һәм ботинкалар — туҡталыштағы намыҫлы хеҙмәтсәндәрҙән әллә ни айырылмай ҙа.

— Трамвай килә, — тине Вася. — Быныһына ултырмайбыҙ. — Ул кеҫәһенән кошелегын сығарҙы ла миңә бирҙе. — Эләктерһәләр, барыбер алалар. Һиндә йөрөһөн.

Уның эләгеүен һис теләмәй инем, шулай ҙа тотолоп ҡуйһа, кошелек менән аҡсалары миндә ҡала, ул саҡта мин Ташкентҡа ысҡына аласаҡмын, тигән уй ҙа башҡа килә ине.

Бына трамвай тигән оҙон һары вагон килеп туҡтаны. Тәҙрә аша тыштағы донъяға битараф кешеләрҙең тоноҡ йөҙҙәре, бер-береһенә терәлешеп ҡатып ҡалған кәүҙәләре күренә. Туҡталыштағы халыҡ ишеккә ташланды, этештетөртөштө, айҡала-сайҡала былай ҙа туп-тулы трамвай эсенә тығылды. Вася ла кеше тулҡынына сумды ла, бүтәндәр ыңғайына әйләнде-тулғанды, тегеләй-былай тартылды, тик ниңәлер эскә үтергә тырышманы, ә кире уйлаған кеше һымаҡ, яңынан сығырға теләй ине, шул уҡ ваҡытта мин уның ҡулын кешеләр араһында йөрөткәнен, бер нәмә уйламаған хәйләһеҙҙәрҙең кеҫәләрен һәрмәгәнен күрҙем. Ниһайәт, Вася кире сыҡты, кеше көтөүе ишеккә тағы нығыраҡ һарылды һәм трамвай ҡуҙғалып китеп барҙы. Вася кеҫәһенән таушалған кошелек сығарҙы ла һап-һары тештәрен күрһәтеп:

— Күрҙеңме? — тине.

Аҡсаһын алды ла, ниндәйҙер ҡағыҙҙары менән кошелекты шунда уҡ ергә быраҡтырҙы.

Икенсе трамвай менән беҙ баҙарға киттек.

Һуғыш барһа ла, Көньяҡ Урал баҙарҙары бөтөнләй буш түгел ине әле. Магнитогорск баҙары шау-шыу килә: кеше күп, тегеләй ҙә, былай ҙа үтәләр; туҡтайҙар, ҡарайҙар, һатыулашалар, әммә бик алып бармайҙар, сөнки бөтә нәмә ҡиммәт. Тау яғы башҡорттары бал, май, ит килтергән — һатып алыусыны көтөп, арбалары янында тапаналар. Икмәк хаҡы ла бик юғары. Уны өлөшләп, хатта телемләп, бик һирәк бөтөн көйө һаталар. Уны инде һатыулашып тормай алалар, ҡулдарынан йолҡалар, бигерәк тә сыбар

түбәтәйле ҡара кешеләр, Вася миңә уларҙың үзбәктәр, трудармеецтар икәнлеген аңлатты.

Беҙ икмәк һатып алдыҡ. Мин, бер литр һөттө эсеп күңелләнеп алғас, урлаша белһәң, иректә лә йәшәп була икән, тип уйланым. Вася иһә һөткә ҡағылманы, икмәк кенә төйҙө, минең эс китә, нимә генә ашаһам да файҙаһы юҡ, туп-тура төшә, тип зарланды. Тора ла әбрәкәйгә йүгерә. Ҡай саҡ өлгөрә алмай, берәй ышығыраҡ ергә ултыра.

Беҙ йәнә урлаштыҡ. Мин Васяның өйрәтеүе буйынса кеше араһында этешәм-төртөшәм, кемгәлер ҡамасаулайым, йәнәһе, һатып алырға йыйынам — бурлыҡтың был ябай ысулын мин тиҙ үҙләштерҙем. Ә Вася был ваҡытта кеше кеҫәләрен, ҡатын-ҡыҙҙарҙың ридикюлдәрен аҡтара. Уның етеҙ хәрәкәттәренә иҫең китер! Нәҙек оҙон, әммә етеҙ ҡулдары табыш эҙләй, ә минең уға ҡарап ҡына ла быуындар ҡалтырай. Был көн ул, үҙе әйтмешләй, арыу ғына кейенгән бер фраерҙың кеҫәһенән туп-тулы папирослы портсигар сәлдереп, табышына бәләкәй бала шикелле эй шатланды, эй ҡыуанды — тәмәке уға теләһә ниндәй аҙыҡтан да тәмлерәк ине шул.

Ирекле тормошомдоң икенсе кисе лә яҡынлашты. Тамаҡ туҡ, әммә йоҡлар урын тураһында ла ҡайғыртырға кәрәк. Васянан ҡайҙа йоҡларға уйлағанын һорағайным, ул, ҡайҙа тура килә, ҡараңғы ҡайҙа ҡыуып етә — шунда, сөнки, тауыҡ күҙ булғас, эңер төшөү менән күрмәй башлайым, йыш ҡына ошонда, баҙарҙа төнәйем, тип яуапланы.

— Әйҙә вокзалға барайыҡ, — тинем мин.

— Юҡ, мин вокзалға ашар өсөн генә барам. Йоҡларға — юҡ. Милиция ҡыуа.

— Ундағы бер баҡсала кәбән бар. Шуның эсенә кереп йоҡларбыҙ.

Беҙ вокзал яғына ҡуҙғалабыҙ. Унда барып еткәнсе тамам ҡараңғы төштө. Вася «һуҡырайҙы», аҡ керпектәрен бер асты, бер йомдо, бушлыҡҡа текләне. Күндөҙгө етеҙлеге, кеше әйберенә, кеше байлығына ҡарата йыртҡыс ынтылышы ҡайҙа булған тиң: былай ҙа сирләшкә малай хәҙер бөтөнләй ауырыу һәм ҡыҙғаныс хәлдә, хатта һөйләшеүе лә меҫкендәрсә. Мин уның ҡулынан тотоп, һөйрәп тигәндәй барам. Атай-әсәйең юҡмы ни, тип һорағайным, юҡ, мин беспризорник, детдомдан, дүрт йыл колонияла ултырып сыҡтым, тип һөйләп алды.

— Урлашыуыңды ташла ла берәй эшкә кер.

— Ниндәй эшкә ярайым инде. Таҙалыҡ юҡ бит. Оҙаҡҡа бармам, ахыры. Иректә үлһәң икән...

Беҙ ҡойма аша сыҡтыҡ. Кәбәндең аҫҡы өлөшөндә өң яһаным. Ҡоро. Эҫе йәй еҫе аңҡып торған бесәнгә яттыҡ та күмелдек. Вася бер аҙ шыңшып-ыңғырашты ла йоҡлап китте, ә минең күҙҙәргә йоҡо ҡунманы, үҙемдең әлеге хәлемде уйлап яфаландым. Ауылдан килеүемә ике генә көн. Урам буйындағы яланаяҡ йөрөгән эҙҙәрем юйылып та өлгөрмәгәндер, ә үткән ғүмер менән мине әллә күпме йылдар айырып торған кеүек. Ике көн элек кенә бөтөнләй белмәгән ҙур ҡала ситендәге сит-ят баҡсала төрмәлә ултырып сыҡҡан кеҫә буры менән йәнәш ят инде — бындай хәл иң ҡурҡыныс төшкә лә инмәҫлек бит. Оҙаҡламай ҙур, һары ай ҙа сыҡты. Ул ауыл малайының нисек һалҡын тормошта билдәһеҙ яҡтарға китеүен ҡарап-күҙәтеп торған яҙмыш күҙе һымаҡ тойолдо. Ай минең ауылыма ла ҡарайҙыр, мин хәҙер бер ваҡытта ла ҡайтмаясаҡ өләсәйем йортона ла бағалыр. Мин ҙурайғансы көнбайышта барған һуғыш та бөтөр, ахыры. Тиҙҙән, булған йәшемә икене өҫтәп, паспорт аласағымды, бер йылдан һуң һалдат сафында атлаясағымды һәм ун ете йәшемдә беренсе һөжүмгә күтәреләсәгемде белмәй инем әле.

Шулай итеп Магнитогорскиҙа кеҫә буры Вася янында тороп ҡалдым. Аҡсанан өҙөлмәнек, тамаҡ та туҡ ине. Аҡса тултырылған янсыҡты һаман үҙемдә йөрөттөм. Вася табышты бер ҡасан да хисапламаны, ә мин, хәйләкәр ауыл малайы, һәр килеп кергән аҡсанан бер нисә унлыҡты йәшерә барам: салбарҙың бил тирәһенән лезвие менән ҡырҡып тишек эшләп алдым да ҡағыҙ аҡсаларҙы йомарлап шунда тығам.

Шулай итеп, яйлап ҡына яңы һөнәргә — бур һөнәренә өйрәндем. Васяның ярҙамсыһы ғына булып, теге йәки был кешене эткеләп-төрткөләһәм йәки берәй асыҡ ауыҙҙың иғтибарын ситкә йүнәлтһәм дә, быларҙы инде хәҙер бер ниндәй ҡурҡыуһыҙ башҡарам, быуындар ҙа ҡалтырамай. Бурҙар теленән әллә күпме әсе һүҙҙәр ҙә отоп алдым.

Әммә ваҡыт үтә килә Васяның ярҙамсыһы ғына булыуым, ашау-эсеү мәсьәләһендә уның ҡарамағында йөрөүем йәпһеҙ була башланы. Үҙемдең дә аҡса тапҡы килде, унан Васяны әләктереүҙәре лә бар бит әле, яңғыҙ ҡалһам, нишләрмен? Ул саҡта астан ҡырҡылырға йәки тағы өҫтәлдән ҡалдыҡтар йыйырға тейеш булам. Унлыҡтар һалынған

янсыкты сәлдереп, беҙ ҙә төшөп ҡалған егеттәрҙән түгел, тип, Вася алдында үҙемде күрһәткем килде.

Бер ваҡыт аҡ икмәк һатҡан ир янында халыҡ ҡайнашҡанын күрҙем, был ирҙең икмәкте сығарыуы булды, бер нисә кеше тегегә ташланды. Бер-береһен терһәктәре менән этә-төртә аҡса һуҙалар, тик әллә хаҡына килешә алмайҙар, әллә ҡайһыһына һатырға белмәй аптырай был ир, ҡысҡырышалар ҙа ҡысҡырышалар. Араларында бер үзбәк трудармеецы ла бар. Курткаһының түш кеҫәһендә ерән дерматин бумажникты шәйләнем. Бына ҡайҙа ул табыш! Күп уйлап тормай, кеше араһына барып индем дә, Вася эшләгәнсә терһәгемде алға һуҙған килеш, һул ҡулымды өҫкә күтәреп, һул яҡ ҡабырғам менән алдағыларҙы этә-төртә үзбәктең артынан тип әйтерлек бумажнигына уң ҡулды һуҙырға әҙерләндем. Быңа ул, эргәлә генә аҡса менән тыңҡыслап тултырылған бумажник, кеҫәһе лә тәрән түгел икән, бумажник яртылаш сығып тора. Үзбәк үҙе лә этешә, ауыҙ эсенән нимәлер мығырлай. Минең йөрәк сығырҙай булып тибә — бумажникты ике бармаҡ менән еңел генә тартып сығарҙым да күлдәк эсенә тыҡтым. Кеше араһынан сығыуы ҡыйын булманы.

— Үзбәктән һыйпаным, — тинем, Вася янына килеп.

— Маладис!

Беҙ һатыу рәттәре артына атланыҡ. Бумажникта аҡса күп ине, ниндәйҙер ҡағыҙҙар ҙа бар.

— Икмәк карточкалары, — тине Вася. — Һатырбыҙ.

Бер аҙҙан беҙ баҙарға кире барҙыҡ та, йөрөй торғас, үзбәктең кеҫәһенән аҡса сәлдергән урынға килеп сыҡтыҡ. Ҡараһаҡ, әллә күпме халыҡ нимәгәлер ҡысҡырған берәүгә ҡараған да ҡатып ҡалған. Әммә береһе лә өндәшмәй. Яҡыныраҡ барғас, мин теге түбәтәй кейгән трудармеецты таныным. Илауҙан йәмһеҙләнгән йөҙө менән үҙен уратып алған кешеләргә асыулы, шул уҡ ваҡытта инәлгес ҡараш ташлап ҡулдарын әле тирә-яҡҡа йәйеп, әле түбәтәйенә килтереп, йән асыуына әллә нимәләр ҡысҡыра. Мин уның «карточка» тигәнен генә аңлайым. Кескәй генә һаҡалына сал ҡунған, йөҙө, елкәләре ҡарайғансы янған, күп эшләгән ҙур ҡулдар. «Карточка, карточка!» — тип һаман илай ине үзбәк.

Ситкәрәк киткәс, Вася:

— Көнө бөттө үзбәктең, ай бөтмәйенсә яңы талон бирмәйәсәктәр, аҡса ла юҡ, ят та ул, — тине.

— Әйҙә бумажнигын кире бирәйек,— тинем үзбәктең хәле ысынлап та үтә аяныслы икәнлегенә саҡ төшөнөп.

— Бына... тотһон! — тип һүгенде Вася, ҡулы менән кендегенән аҫҡараҡ күрһәтеп.

— Йәл бит.

— Беренсе тапҡыр аҡса сәлдерҙе, йәл тип тә тора. Ә беҙҙе берәйһе йәлләйме? Бирһәң, рәхмәт әйтер тип өмөтләнәһеңме? Ул һине тәүҙә рәхәтләнеп туҡмаясаҡ, унан милицияға алып барасаҡ. Беләм мин уларҙы.

— Вася, әйҙә барыбер ҙә кире бирәйек,— тип ныҡышам һаман.

— Кит бынан! — тип яңынан һүгенә Вася. Уның ябыҡ йөҙөнә асыу бәреп сыға, ҡурҡынысҡа әйләнә, күҙҙәре ниндәйҙер һалҡынлыҡ менән йылтырай. Минең алда яңы ғына төрмәнән сыҡҡан бур, үҙенең ҡорбандарына аяуһыҙ, йәлләү-аңлауҙың нимә икәнен белмәгән йыртҡыс баҫып тора ине.— Падла, ысҡын, һин шулай үтә кеше йәнле икәнһең, кире ауылыңа ҡайт!

Һәм ул минең яндан китеп барҙы.

Мин ғәрлектән, үҙемдең көсһөҙлөктән илар сиккә етеп торҙом-торҙом да, лавочкалар артындағы үләнлеккә барып ҡапландым: һалҡынса үләндән тыуған ауылым, яңы ғына үткән бала сағым аңҡый ине. Иларға керештем. Ят ерҙең үләненә битемде, танау-ирендәремде тейҙереп, һулҡылдап-һулҡылдап үкһенем. Минең ҡылыҡ арҡаһында сит-ят ерҙә икмәкһеҙ, эшһеҙ ҡалған үзбәкте йәлләп иланым. Ағара башлаған һаҡаллы, сыбар түбәтәйле ҡарттың баҙарҙағы өнһөҙ кешеләргә инәлеүе, ялбарыуы, нисек тә ярҙам итеүҙәрен һорауы, үҙен аҡсаһынан, икмәк карточкаларынан мәхрүм иткән бәндәне ҡарғағаны һис күҙ алдымдан китмәй. Үҙ-үҙемде — сәңгелдәктән төшөп, бер генә лә туған-тыумасаһы булмаған ят таш ҡалала, юғалған етем ауыл малайын йәлләп иланым. Үҙемде төрмәлә күңеле ҡатҡан, иреккә сыҡҡас, йыртҡыс хәленә еткән бур менән бәйләнгән юлдан яҙған кеше рәүешендә күреп, уның ыңғайына үҙем дә бур булып киткәнем өсөн иланым. Иртәгә үк Ташкентҡа юлланырға, ашар ризыҡты намыҫлы хеҙмәт менән табырға кәрәк. Бәлки, ауылға кире ҡайтырғалыр? Тик йәнә икеләндем.

Кемдер йомшаҡ ҡына итеп яурынға ҡағылды һәм мин Васяның нәҙек тауышын ишеттем:

— Ярар, юҡ-барға мышҡылдама. Әйҙә, булмаһа, ашап киләйек.

Мине кире ҡаҡманы, барыбер әйләнде бит. Сөнки эҙер төшөү менән «һуҡырайған» Вася яңғыҙ йөрөй алмай, унан миңә өйрәнеп тә бара, күрәһең. Ана бит, тауышы ла иркә, дуҫтарса. Мин уның яныма килеүенә шатланып та ҡуйҙым хатта. Дөрөҫөн әйткәндә, быны көткәйнем дә, ни тиһәң дә, әлегә унһыҙ көн итә лә, яңғыҙ ят ҡалала йәшәй ҙә алмайым.

Кеше янсығына бүтән үрелмәнем. Эйе, урланғанды ашай инем — минең тарафтан булмаһа ла, барыбер урланған инде. Быны аңлағанға күрә, уйланыуҙарҙы тәрәнгә төшөрмәҫкә тырышам, хатта, мин етем дәһә, ҡойма буйына тәгәрәп астан үлеүем дә бар ине бит, тип, үҙемде-үҙем аҡларға тырышам. Ташкентҡа барып эләгеү менән намыҫлы йәшәй башлаясаҡмын, тип йыуанам. Вася ҡарамағында йөрөгән әрәмтамаҡ тип тә хисаплайым үҙемде, сөнки Вася үҙе миңә мохтаж, шулай икән, ашатһын әйҙә. Минең ҡасандыр ябай, ауылса таҙа күңелем яйлап ҡатыланды, тирә-яҡтағы кешеләрҙең ҡайғы-хәсрәтенә һаңғырауланды. Әммә үкһеп илаған теге үзбәк оҙаҡ ваҡыт күҙ алдымдан китмәне.

Мин уның ғүмерлеккә икәнен, бәлки бөтә тормошомда ҡылынған иң ауыр гонаһтарымдың береһе буласағын, хатта ауыр яҙмыш һәм ғазапланыуҙар, тир түгеп хеҙмәт итеү һәм һуғышта ҡойолған ҡан да ғәйебемде йыуа алмаясағын белмәй инем әле.

Августа, Көньяҡ Урал төндәре ҡараңғы, һыуыҡҡа әйләнеп, һалҡын ямғырҙар яуа башлағас, беҙ йылы яҡҡа, Ташкентҡа ҡуҙғалдыҡ. Нисек тура килә, шулай барҙыҡ: вагон башында, ишек тупһаларында, проводник беҙҙе шәйләп туҡталышта төшөрөп ҡалдырғансы, вагон эсендә. Соль-Илецк тигән станцияла төшөп ҡалдыҡ та бер нисә көн баҙар тирәһендә йөрөнөк, батырға теләһәң дә батырмай торған тоҙло күлдә һыу индек.

Баҙар ҙур булмаһа ла, Магнитогорскиҙыҡынан байыраҡ ине. Мин ошонда беренсе тапҡыр ҡарбуз ашаным. Вася йәнә аҡса сәлдереп, уны миңә бирҙе, ә мин бер нисә унлыҡты йәнә билдәле тишеккә тығып ҡуйҙым. Ә бер көн Васяны эләктерҙеләр... Уны мыйыҡлы таҙа ир туҡманы, ергә йыҡты ла итектәре менән типкеләргә тотонды. Ябыҡ, бәләкәй генә Вася типкән һайын, саңлы баҙар майҙанында ҡурсаҡ һымаҡ һикергеләп-әйләнеп китә ине. Мин кеше араһында Васяны нисек үлтергәндәрен ҡарап торам, уның ярҙам һораған ҡарашын да тоям, әммә бер нисек тә ярҙам итә алмайым. Күпмелер ваҡыттан милиционер

килеп сығып, ҡанға батҡан, аяғында саҡ баҫып торған Васяны һөйрәп тигәндәй алып китте, төрмәгә, күрәһең. Мин, бәлки, сығарырҙар әле, тип уны йәнә ике көн көттөм дә артабан ҡуҙғалырға мәжбүр булдым. Вася ныҡ йәл ине — үтә лә ябыҡ, ауырыу кешенең шул ҡәҙәре туҡмалыуҙан һуң тере ҡалыуы икеле. Шулай ҙа күңелдең иң йыраҡ бер мөйөшөндә ҡәнәғәтләнеү тойғоһо ла бар — ниһайәт, унан айырылдым, минең үҙемде лә шулай эләктереп, һыу эскеһеҙ итеп туҡмауҙары ихтимал ине бит... Аҡсалар миндә ҡалды. Ташкентҡа барғансы ғына етер, ә унда күҙ күрер, икмәкле ҡала тиҙәр ҙәһә.

Байтаҡ ваҡыт тауар вагонында барырға тура килде — тоҙло тупраҡлы, серле ҡалҡыулыҡтар менән тулы һары дала әйләнә-өйөрөлә артта ҡала, алда, офоҡта, әллә ҙур күл, әллә диңгеҙ ялтырай, әммә поезд һыуға килеп етер саҡта ғына ул йә артҡа сигенә, йә күҙ алдымда боҫҡа әүерелгән шикелле бөтөнләй юғала. Был яндырғыс ҡаҙаҡ далаларында уйнаған сағымдар ине, шикелле.

Килә торғас, бер станцияла пассажир поезына күсеп ултырҙым. Төнөн ул утһыҙ. Күрше вагон да буш. Ҡот осҡос шатырлап, төндө йыртып, кешеһеҙ бара. Бер кемгә лә хәжәте булмаған был поезд ерҙең сигенә, көньяҡ упҡынына ебәрелгән һымаҡ тойола. Дөм ҡараңғы вагондар буйлап йортһоҙ, ас эттәр шикелле, көтөү-көтөү булып, ҡырағайланып бөткән малай-шалай йөрөй. Вагонда минән башҡа оло йәштәрҙәге ҡатын да бар ине, ниңәлер сирле һымаҡ та күрҙем мин уны, ыңғыраша. Әллә күпме төйөнсөктәре, кәстрүл, сүлмәктәре бар үҙенең. Һүрән генә тәҙрә яҡтыһында унын үтә ябыҡ йөҙөн, ифрат ҙур күҙҙәрен шәйләнем. Унда әллә күпме хәсрәт, һағыш, ҡотом алынып, ирекһеҙҙән мин үҙ урыныма сигенергә мәжбүр булдым.

Бер ваҡыт вагонға малай-шалай көтөүе килеп тулды. Араларынан оҙон кәүҙәлеһе, фуражкаһын күҙенә тиклем батырып кейгәне, күрәһең, башлыҡтарылыр, шырпы һыҙып ҡатындың йөҙөн яҡтыртты.

— Әһә, жидовка, Ташкентҡа ҡасып китеп бараһыңмы? — тине был ололарса ҡалын тауыш менән. — Шакалдар, йәгеҙ әле, ханымды тентегеҙ!

«Жидовка» тигән һүҙҙе беренсе мәртәбә ишеткәнлектән, унын мәғәнәһен тулыһынса аңламаным да. Әммә мин белмәгән берәй төрлө милләтте шулай әрләйҙәрҙер тигән һығымтаға килдем.

Шакалдар ҡатынға ябырылды: ҡайһыһылыр уның аҫтынан төйөнсөгөн тартып сығарҙы, кемелер кәстрүлдәрен бырғытты. Ҡатын ҡырағай тауыш менән ҡысҡырып ебәрҙе лә,байлыҡтарына сат йәбешеп, әрләшергә, урыҫ һүҙҙәре менән сит һүҙҙәрҙе аралаштыра-аралаштыра талашырға тотондо.

— Сепрәк-сапрағын ташлағыҙ, алтын эҙләгеҙ. Алтыны күптер, — *тине башлыҡтары.*

Урынымдан торҙом да яндарына барҙым. Теге оҙон малайҙың ҡатынды һәрмәгәнен күрҙем. Тегеһе ҡысҡыра, ыңғыраша, ә быныһы ҡулын тегенең түшенә тыҡты ла нимәһендер өҙөп тә алды.

— Кит хулиган! Бандит! Минең беттән башҡа бер нәмәм дә юҡ.

— Малайҙар, ҡағылмағыҙ уға, ул сирле, — тинем мин.

— Ә һин кем? Һин дә Ташкентҡа ҡасып барыусымы? — тине теге һонтор, миңә боролоп.

— Мин Урал буры, — тип яуапланым, әҙ генә булһа ла тегеләрҙең ихтирамын яулар өсөн.

— Урал буры?! — Малай һыны ҡатып көлөргә тотондо. — Шаҡалдар, һеҙ ҡасан да булһа Урал бурын күргәнегеҙ бармы? Күрмәһәгеҙ, күрегеҙ, бына ул. Тай бынан, падла, юҡһа хәҙер маңлайыңды сәсрәтәм!

Мин артҡа сигендем. Ҡатындың әрләшеү-ҡысҡырыуына ҡарамай, малайҙар уның төйөнсөктәрен тегеләй-былай ырғыттылар ҙа күрше вагонға киттеләр. Ә поезд тәгәрмәстәре: «Ташкент, Ташкент!» — тип дөбөрләп алға сабыуын белде.

Ташкент — йәшел һәм йылы ҡала ине, әммә, һуғыш осороноң бөтә ҡалалары һымаҡ, бында ла икмәк тулып ятмай. Ҡала фронттан алыҫ булһа ла, бар нәмәгә һуғыш күләгәһе төшкән, һуғыш кешеләрҙең йөҙҙәрендәге йыйырсыҡтарға ҡунған, һаҡ ҡараштарына оялаған.

Бер нисә көн Аллай баҙарында темеҫкендем. Көньяҡ баҙары шау-шыулы, өлгөр, етеҙ, ятһыҙ һәм сыбар. Магнитогорскиҙың һалҡын, тыныс, яй баҙарынан ныҡ айырыла ине. Ишәктәр ҡысҡыра, үҙ тауарын маҡтап йәки һатыулашып, хужалары ҡысҡырыша. Толчокта бихисап кеше — көнбайыш өлкәләрҙән эвакуацияланып килгәндәр үҙҙәренең сепрәк-сапрағын икмәккә алыштыра. Һөйләшеүҙәрҙең дөйөм тауышында мин үҙемдең башҡорт теленә оҡшаш хәбәрҙәр ҙә ишетәм. Бөтә лавкалар, кәштәләр артында — Магнитогорскиҙағы үзбәк трудармеецтары-

ның баштарындағы ише сыбар түбәтәй, буйлы-буйлы бишмәт кейгән үзбәктәр. Ағарған һаҡаллы ҡарттар миңә бумажнигы менән икмәк карточкаларын алған теге трудармеецты хәтерләтә лә, йөрәгем жыу итеп китә. Ҡайсаҡ мин уны ниндәйҙер бер ҡартта төҫмөрләйем дә һымаҡ — ҡараштарында шелтә һәм нәфрәт тоям.

Унлыҡтар оҙаҡҡа барманы. Йөҙөм, ҡауын, хөрмә, сәтләүек кеүек тәмле емештәрҙе минең беренсе тапҡыр күреүем ине, барыһын да ашап ҡарағы килде, барыһы ла ҡыйбат. Лавкалар аҫтында йоҡлап йөрөнөм, уларҙа көндөҙгө селләнән һуң йылы булһа ла, иртәнге яҡҡа көньяҡтың үтә күренмәле күге аша ергә һалҡын төшә лә һөйәккә тиклем ҡалтырата. Бер мәл шулай тәҙрә аша парк кассаһына индем дә иҙәнгә яттым. Төнөн парк буйлап әллә кемдәр йүгерешеп йөрөнө, пистолеттан атышты — бәлки, ҡамауҙар булғандыр, йә бурҙар бер-береһе менән һуғышҡандыр, кем белә инде.

Йөрөй торғас, үҙем ҡамауға эләктем һәм беҙҙе, бер нисә баҙар шакалын, милиционерҙар ҡайҙалыр алып китте. Тимер сыбыҡ артына ултыртып ҡуйырға теләйҙәр, тип уйланым да беренсе мөмкинлек сығыу менән тайҙым: тар ғына тыҡрыҡ осрағайны, шунда ялтандым да йән-фарманға йүгереп сыҡтым да киттем. Әллә һиҙмәнеләр, әллә баҫтырырға йыбандылар, һәр хәлдә, арттан төшөүсе булманы.

Бурҙарҙан Сәмәрҡәндтә баҙарҙың арыуыраҡ икәнен ишеттем. Үзбәктәр ҙә урлауға күнекмәгән, бер-береһе менән һуғышыусы төркөмдәр ҙә, милиция ла аҙыраҡ икән. Тауар поезына ултыр ҙа кит тә бар. Әммә бер аҙ киткәс, Урсатьевск тигән станцияла төшөп ҡалдым, былай, ҡыҙыҡһыныуҙан, ниндәй ҡала икәнен белергә теләүҙән. Унан, ашарға ла берәй нәмә табырға кәрәк ине. Район масштабындағы ошо ҙур булмаған ҡала яҙмышыма килеп керер ҙә уның исеме минең тәүге паспортыма яҙылыр, унан Каукмен районы Урсатьевск ҡалаһы райвоенкоматынан саҡырылған тип теркәлеп, хәрби билетымда мәңгелеккә ҡалыр тип кем уйлаған инде...

Был — тыныс ҡына ҡала, ситтәрендәге алма баҡсалары, йөҙөм ҡыуаҡлыҡтары араһында бер-береһенә һырығышып йәнәш, ялпаҡ саман йорттар, ә тирә-яҡта дөйә ҡыуаҡтары, ҡамғаҡтар, ҡылғандар күренгеләгән һапһары дала, көньяҡтараҡ — түбәһенә ҡар ҡунаҡлаған тауҙар. Ҡала миңә оҡшаны. Бер ни тиклем ваҡытҡа бында

ҡалырға булдым. Туҡланыу урыны баҙар. Көндәрҙе лавкалар, прилавкалар араһында йөрөп үткәрҙем, төндәрен тимер юлындағы тупиктарҙа торған буш вагондарға инеп йоҡланым.

Аҡса бөттө. Һуңғы һумдарға бер үзбәк ҡатынынан көлсә һатып алып ашаным да яңынан аслыҡ ҡарамағында ҡалдым. Аслыҡ тәүҙә аңды, һушты биләй, ризыҡ тураһындағы уй баштағы бүтән уйҙы ҡыҫырыҡлап сығара, унан тәнде ялмай, хәлһеҙләндерә, ауырыған һымаҡ тойғо уята. Инерция буйынса йәшәгән дә һымаҡһың, әммә ҡанға ерҙең туҡлыҡлы һуттары кермәй — был инде үлемдең башы. Ауыҙға бер төрлө лә тәғәм ҡапмауҙың икенсе көнөнә күҙ алдары ҡараңғыланды. Нисек булһа ла ризыҡ табырға кәрәк ине, юҡһа йығылырға, яйлап йән сығарырға ғына ҡала. Баҙарҙа тау-тау булып өйөлөп ятҡан ҡарбуздарҙы күрҙем, улар күп, ә эргәһендә берәү ҙә юҡ. Һәм мин, асығыуҙың сигенә етеп, аҡылды юя башлапмылыр, ғүмеремдә икенсе тапҡыр урлашырға йыйындым. Ҡарбуз өйөмө янынан үткәндә уларҙың береһен эйелеп алдым да бер ни булмағандай ары атланым. Ашығып атлаған аҙымдар ҡолаҡҡа бәрелгәндә әллә ни алыҫҡа ла китергә өлгөрмәгәйнем, ныҡ ҡына итеп арҡаға килтереп һуҡтылар. Ҡарбуз ҡулдан төшөп китте лә ярылды, үҙем дә ҡоланым, йығылған арала үзбәктең асыулы ҡара йөҙөн, ут һымаҡ яныусы нәфрәтле күҙҙәрен шәйләнем. Ул миңә, ятҡан кешегә, йомшаҡ итеге менән йәнә типте лә, һикереп торғас, елкәнән эләктереп алды, һүгенә-һүгенә ҡайҙалыр өҫтөрәргә тотондо. Милицияға! Эйе, ҡаптым, хәҙер рәшәткәнән ҡотолормон тип уйлама ла. Мин ҡапыл үҙемдең башҡорт икәнлегемде хәтерләнем, тимәк, мосолман, тимәк, үзбәк менән бер диндә. Хәтерләнем дә башҡорт менән үзбәк һүҙҙәрен бутай-бутай:

— Әкә, ебәр инде, мин бит мосолман, мосолман! — тинем, инәлеп.

Теге туҡтаны, миңә иғтибарлыраҡ ҡараны — әллә аптыраны, әллә икеләнде, аңламаҫһың.

— Мосолман булғас, ниңә урлашаһың? — тине ул. — Асыҡһаң, һора, бирерҙәр. Бар, бүтән урлашып йөрөмә!

Йәнә бер көн асыҡҡандан һуң, берәҙәктәр өйөрөнә тап булдым. Уларҙың иң олоһона ун ике, ун өс йәш самаһы. Ҙурҙан урлаша белмәйҙәр ине, күберәк талайҙар, ашхана, вокзал рестораны тирәһендә йөрөйҙәр, ташланған ҡалдыҡтарҙан да ерәнмәйҙәр. Һәр береһендә тиерлек —

яурын аша аҫылған йәки биленә бәйләнгән бысраҡ консерва банкаһы, икәүһендә хатта йәмшәйеп бөткән кәстрүл. Былар инде астың хәленә керә, йәлләй беләторған ашнаҡсының ҡалған ашты йәки ҡалдыҡ-боҫтоҡто биреү ихтималын уйлап эшләнгән.

Урта Азияла ашхана, ресторан мейестәре урам яҡлап яғыла икән. Малайҙар төнөн ошо мейес алдына йыйыла ла эҫе көлдә шәкәр сөгөлдөрө бешерә. Уны тауар вагондарынан сәлдерәләр — һаҡсының составтың икенсе башына китеүен көтөп кенә торалар ҙа, берәй ҡыйыуырағы платформаға менеп, сөгөлдөрҙө ергә ташлай. Төтөндән, ҡоромдан малайҙарҙың йөҙө ҡап-ҡара булып бөтә, күҙҙәре менән тештәре генә ялтырай. Теткеләнеп бөткән һәләмә кейемдәре бет менән тулы, үҙҙәрен яңы ғына тартып алып ингән был мәхшәр донъяға күҙҙәре ҡурҡып ҡарай, әммә йәшәргә ынтылыу, тере ҡалырға тырышыу теләге ифрат көслө. Уларҙың йылы, таҙа түшәктәре ҡайҙа икән дә, уларҙы урамға кем ҡыуып сығарҙы икән? Минең кеүек өйҙән ҡасҡан етемдәрме, әллә туған-тыумасаһы булмаған ташландыҡтармы? Араларында алты йәшлеге лә бар бит. Шул йәштә үҙеңә-үҙең ашарға табып ректә йәшәү, айһай, ҡыйын бит ул! Олораҡтары был малайға ағайҙарса йылы, хәстәрлекле ҡараны, яҡланы. Ғөмүмән, улар бер-береһе менән бик дуҫ ине, тапҡан бар ризыҡты тигеҙ бүлеште. Был уларға бөтә ҡыйынлыҡтарҙы еңеп сығырға, һуғыш тыуҙырған рәхимһеҙлек алдында ҡаушап төшмәҫкә ярҙам итте. Әгәр шул малай өйөрҙән тороп ҡала икән, астан үләсәге көн кеүек асыҡ. Йыш ҡына улар ошо һыуынған мейес алдында бесәй балалары шикелле бергә өйөлөшөп йоҡлай. Милициянан, ҡамау-облаваларҙан, детдомға ебәрелеүҙән ныҡ шөрләйҙәр. Милиция күренһә, «атанде!» тип һөрәнләйҙәр ҙә консерва банкаларын шалтырата-шалтырата тырым-тырағай ҡасырға тотоналар.

Бер нисә көн мин ошо өйөрҙә йөрөнөм, унан малайҙар ҡайҙалыр ғәйеп булды. Әллә ҡамауға эләкте, әллә Сәмәрҡәндҡә юлланды, белмәҫһең, һәр хәлдә, урын алыштырыу хаҡында һөйләшәләр ине былай. Шәкәр сөгөлдөрө тейәлгән платформа ла киткәйне. Мин йәнә асыға башланым. Аяҡ аҫтында ятҡан ҡарбуз тыштарына ла күҙ һалдым, әммә күтәреп алырға ҡыйыулыҡ етмәй ине. Вася ла иҫкә төшә: әгәр ректә урлаша белмәһәң, хәйер һорарға ғына ҡала. Ә урлашырға ҡарбуз менән булған теге ваҡиғанан һуң ҡурҡам.

Аслыҡ мине ҡала ситенә килтерҙе — бында алма баҡсалары бар. Бер нисә алма өҙһәм, әллә ни оло бурлыҡҡа хисапланмай бит инде. Был эҫелә һары саман өйҙәр үлгән һымаҡ. Мин белмәгән осло, йомро башлы көньяҡ ағастары стеналарға, саңлы урамға һалҡынса күләгәләрен ташлап ҡатып ҡалған. Ҡайҙалыр, саман ояларынандыр, ахыры, бала-саға тауышы һарҡыла, арыҡтан һыу ағыуы ҡолаҡҡа салына. Ҡолаҡ сыңлай, ул миңә эстә аслыҡ сыңлаған һымаҡ.

Һаҡ ҡына ихаталарға күҙ һалдым. Алмалар йыйылған. Шулай ҙа бер баҡсала бешкән емешле ағас бар. Саҡ торған еңел ҡапҡаны астым да һаҡ ҡына урамға аяҡ баҫтым. Кеше юҡ, был эҫелектән барыһы ла өйҙәренә йәшенеп бөткән. Эскәрәк кереп, теге алмаға ҡулымды ғына һуҙғайным, кемдер эргәлә генә көрһөндө бит. Ҡат та ҡал, ҡасып киткәнсе, террасала ултырған кешене шәйләнем. Оло ғына йәштәрҙәге үзбәк аяҡтарын бөкләгән дә иғтибар менән мине күҙәтә. Алдында — кескәй генә сәйнүк, кәсә, бер нисә көлсә. Ағара башлаған кескәй һаҡал, башында — түбәтәй. Бер мәлгә генә Магнитогорскиҙа икмәк карточкаларын урлаған теге үзбәк-трудармеец һымаҡ күренде был миңә.

Тайырға, мөмкин тиклем тиҙерәк табанды ялтыратырға кәрәк ине. Шул мәлдә ҡапыл икенсе бер үзбәк — ҡарбуз урлағанда тотоп еңелсә генә һуҡҡылаған һәм «һорап ал, бирерҙәр» тигән үзбәк иҫкә төштө. Мин терраса янына атланым. Һораманым, ҡулды ла һуҙманым, үзбәккә ҡараным ғына. Ас кешенең ҡарашын төшөнөп булмаймы һуң инде! Ҡарт кәсәһенән сәй уртланы ла күҙ ҡырыйы менән генә миңә һирпелде. Шунан ҡалҡынып, өйөнә инеп китте лә биҙрә тотоп сыҡты. Төбө ҡоролоҡтан ярғыланып бөткән урам уртаһындағы соҡорға күрһәтеп:

— Арыҡтан һыу ташы, — тине.

Мин эшкә тотондом. Тура мөйөшлө соҡор ярты метрҙан тәрәнерәк булып арҡыры-буйы яҡынса бер метрға ике метр самаһы ине. Уны тултырыу өсөн нисә биҙрә һыу кәрәк икән һуң? Һанаманым, ташыным да ташыным. Мәңге ошо эш менән мәшғүл һымаҡ, ә соҡор тулманы ла тулманы. Күҙ алдарым ҡараңғылана башланы, ҡолаҡтар шауланы. Эштән һуң ҡарт миңә бер нисә алма алырға рөхсәт итер тигән өмөт кенә мине аяҡта тота ине. Ташларға ла, алманы икенсе йорттан эҙләп китергәме? Унда ла әлеге ише берәй ҡарт ултырһа? Соҡор тулырға бер нисә ҡарыш

ҡалғас, ҡарт мине ҡулы менән террасаға саҡырҙы, кейеҙгә ултырырға ишараланы. Минең алға сәйле кәсә ҡуйҙы, бер көлсә һалды.

Аһ, был үзбәк көлсәләре! Йоҡа ғына, йомро, уртаһы наҙлы-йомшаҡ, ә сит-ситтәре ҡытырлап торған был ризыҡтан да тәмлерәк аҙыҡ бармы икән донъяла!

Көлсәне ашап, сәйҙе эскәс (әлбиттә, туйманым, ашағы килеү көсәйҙе генә) ҡарт бер нисә алма өҙөп бирҙе. Рәхмәт әйтеп, ихатанан сыҡтым, алманы ашай-ашай урам буйлап байтаҡ барғас, бер ағас күләгәһенә ятыуым булды, шундуҡ йоҡлап та киткәнмен.

Аслыҡ мине иртәгәһенә йәнә шул урамға алып килде — үзбәктең моғайын да берәй эше табылыр, тип уйланым. Ул террасала кисәгесә сәй эсеп ултыра ине. Янына барып, урыҫса иҫәнләштем, сөнки үзбәксә ни рәүешле һаулыҡ ҡушҡандарын белмәй инем әле. Ул мине таныны, ниңә килеүемде лә төшөндө, шулай ҙа бик иселеп китмәне, миңә ҡарамай ғына нимәлер уйлай һымаҡ ине. Унан ҡалҡынды ла, өйҙән миңә таныш биҙрәне сығарып, ҡулыма тотторҙо.

— Һыуҙы арыҡҡа түк.

Мин бер мәлгә генә аптырап ҡалдым, кисә генә соҡорға тултыр ҙа, бөгөн килеп, шул һыуҙы арыҡҡа кире бушат, имеш. Мин асмын, уйланырға, икеләнергә урын юҡ, бер кәсә сәй, бер көлсә хаҡына теләһә ниндәй мәғәнәһеҙ эште лә башҡарырға мәжбүрмен.

Һыуҙы кире түккәс, үзбәк, кисәгесә, мине кейеҙгә саҡырҙы, сәй яһаны, алдыма көлсә һалды, ағастан бер нисә алма өҙҙө.

Иртәгеһенә йәнә лә үзбәккә барайыммы икән тип уйлағайным да, кире дүндем. Бармауымдың сәбәбе — ике көн буйы һыуҙы әле бында, әле тегендә түгеү-тултырыу һымаҡ буш һәм ялҡытҡыс эш башҡарыуҙа түгел, ә шул мәғәнәһеҙлекте аңлауымда.

Бер ҡатлы аҡ йорт янынан үткәнемдә иғлан күреп ҡалдым: ФЗО. Ғариф исемле минән саҡ ҡына олораҡ күршемде яҙ көнө ФЗО-ға алғайнылар. Ай самаһы ваҡыт үткәс, ҡасып ҡайтып килде был. Райондан милиционер юллап килгәс, баҡса артындағы сүп үләндәре араһында йәшенеп ҡалды. Мин унан ФЗО-ла ашатҡандарын, эшкә өйрәткәндәрен белдем. Бына хәҙер ФЗО минең өсөн иң ҡулай тип уйланым да, йорттоң ишеген асып, тимер юлсы формаһындағы оло ғына йәштәрҙәге кеше алдына барып баҫтым.

— Бөтә Советтар Союзын йөрөп сыҡҡанһыңдыр инде, — тине ул күңелһеҙ генә, минең ялан аяҡтарыма ҡарап. — Нисә йәш?

— Ун ете, — тип алданым, ысын йәшемә икене өҫтәп.

Начальник, әлбиттә, ышанманы, икеләнеп, бер аҙ өндәшмәй торҙо. Шулай ҙа, һонтор кәүҙәмә яңынан бер ҡараш ташлап, улай ғына барҙыр, тип уйланы шикелле.

— Паспортың бармы?

Ун биш йәшлек ауыл малайының ҡайҙан паспорты булһын инде, булырға ла тейеш түгел.

— Юҡ.

Начальник йәнә уйға ҡалды.

— Ярар, мин һине ҡабул итәм, әммә әлегә кейем бирмәйем. Яңы ботинкалар алырһың да ҡасырһың. Ундайҙар булды.

— Ҡасмам, — тип яуапланым мин.

Шул ботинкаларҙы кейеп, мин һуғышҡа киттем...

# *Сибәркәй*

Белореттағы алты айлыҡ ФЗО-нан һуң эшкә ебәргән Ревданан ҡасып ҡайтҡас, ҡышын тыуған колхозда «объездчик» булып эшләнем — баҫыуҙар ҡарайым, бесән кәбәне, һалам эҫкерттәре, ырҙын табағын һаҡлайым. Ә үҙем һаман көтәм: бына-бына закон һаҡсылары килеп төшөр ҙә таш зинданға ябыр өсөн алып китер. Тик шаулап-гөрләп яҙ ҙа үтте, йәйҙең ҡайнар тын алышы һиҙелде — улар күренмәне. Июнь айында колхоз мине урман ҡырҡырға ебәрҙе. Эш еребеҙ — тауҙарҙа, Белорет менән Запрудовка araһындағы тар колеялы тимер юлының йөҙөнсө саҡрымында. Ағасты Белорет металлургия заводы өсөн әҙерләйҙәр. Яҙмыш мине йәнә ошо завод, тыуған ауылымдан алтмыш саҡрым йыраҡлыҡтағы металлургтар ҡалаһы менән бәйләне.

Йөҙөнсө саҡрымға килеү менән, уттан ҡасып, ялҡынға эләккәнемде аңланым. Фронтҡа эшләүсе Ревда заводында мин ун икешәр сәғәт бил бөгә торғайным. Етмәһә, сменанан һуң миңә, ун биш йәшлек хәлһеҙ малайға, мартен цехында кокс бутап торорға ҡушалар. Арыуҙан, ашау етмәүҙән аяғөҫтө йоҡлап китәм, йыш ҡына ҡолап та ятам.

Шуныһы: сменанан һуң матрас өҫтөндә, таҙа түшәктә йоҡлайым, карточкаға һигеҙ йөҙ грамм сейле-бешле икмәк, төшкөләккә бер нисә бөртөк туҡмас менән бәләкәй генә май күҙе йөҙгән баланда алам. Планымды үтәһәм-үтәмәһәм дә үҙемдең ярым ас паегымды бирәләр ине. Ә бында ағастар араһындағы таҡта баракка урынлаштырҙылар, яланғас таҡталарға ятып йоҡлап йөрөйбөҙ, әлеге һигеҙ йөҙ грамм сей икмәк ишаратын алыр өсөн мотлаҡ рәүештә норманы үтәргә кәрәк, йәғни, йығаһың, ботайһың, әгәр үтә лә йыуан ағас икән — яраһың да. Норма — кеше башына ике ярым кубометр. Уларҙы, етмәһә, тәҫләп өйөргә, ботаҡтарын йыйып үртәргә лә кәрәк. Норманы тултыра алмайһың икән, дүрт йөҙ грамм ғына эләгә, ә баланда бөтөнләй юҡ, кубтан ҡайнаған һыу ғына һемерергә мәжбүр булаһың.

Урман йығырға килеүемде мин Ревда заводынан ҡасҡан өсөн яза рәүешендә ҡабул иттем. Тапһалар, хөкөмгә лә тарттыра алалар ине бит. Ун биш йәшлек кенә малай тип йәлләп тормаҫ ине закон һаҡсылары. Ревдала ун алты йәшлек ас тоҡкондарҙы күрҙем — улар ифрат йәл ине миңә. Бында, урманда, исмаһам, ҡыҙыл погонлы конвоирҙың алюмин күҙҙәре һине быраулмай, һалдат та винтовка приклады менән арҡаңа төрткөләмәй.

Иптәшкә үҙемдең йәштәш бер ҡыҙҙы бирҙеләр. Ул бөтөнләй ишетмәй, һаңғырау булып сыҡты. Минең ауылдан туғыҙ ғына саҡрымдағы ауылдан икән. Ә үҙе шул тиклем сибәр! Һуш китерлек сибәр. Биленә тиклем төшкән аҡһылһары ҡалын толом, һиҙелер-һиҙелмәҫ һипкелле йөҙ, ҡуйы оҙон керпекле ҙур һоро күҙҙәр. Унда, бәлки, ниндәйҙер кәмселек тә булғандыр, әйтәйек, кәүҙә төҙөлөшөндә, ярлы кейемендә, әммә мин, ҡатын-ҡыҙҙы башынан аяғына тиклем күҙҙән үткәреп баһалай белмәгән үҫмер малай, уның йөҙөн, күҙҙәрен, толомон ғына күрә инем.

Мәрйә апайы, уҫал, ғоролдоҡ тауышлы мөдир, һәр ваҡыт аптырай һәм бот сабып һөйләнә:

— Батюшки, ниндәй сибәр — башҡортҡа бөтөнләй оҡшамаған, етмәһә, һаңғырау.

Беҙҙең башҡорт һәм типтәр ауылдарында, Көньяҡ Уралдың алтын приискыларына йөҙәрләгән йылдар дауамында килгән кешеләрҙән, буталып йөрөп әллә күпме ҡан тороп ҡалған: бында татарҙарҙың, мишәрҙәрҙең, ноғайбәктәрҙең, сыуаштарҙың, мордваларҙың, хатта Михельсон гренадерҙарының тоҡомдарын табырға була. Зәңгәр күҙ-

ле, оҙон аҡһыл толомло башҡорт ҡыҙҙары беҙҙең ауылдар өсөн һирәк күренеш түгел. Әммә был һаңғырау ҡыҙ нисектер икенсерәк, ылыҡтырғысыраҡ ине. Мин уны үҙем өсөн генә Алтынсәс тип атаным. Исемен белмәйем, хәйер, ишетмәгәс, ул минең әйткәнгә барыбер ҙә яуап бирә алмаҫ ине.

Бәләкәй сағында ҡаты ауырып, шулай һаңғырау булып ҡалған икән. Әсә тауышы, өй, ихата, тирә-яҡтағы һауа тулы тормош ауаздарын, йәшен йәшнәүен, ел иҫеүен, иртәнсәк ҡысҡырған әтәсте, урман шауын, һандуғас һайрауын, кәкүк саҡырыуын, шишмә сылтырауын, гармун һәм йырҙы ишетмәй. Ниндәй йәл! Сибәрлеге менән яҙмышының тура килмәүенә иҫең китер... Уны урман йығырға кем ебәрҙе икән? Йөрәге булмаған шул ауыл түрәһенең йөҙөнә ҡара ине. Иҫәп өсөн оҙатҡандарҙыр инде. Миңә ике ярым, уға ике ярым — икебеҙгә биш кубометр. Үтәмәһәң — яза: дүрт йөҙ грамм сей икмәк менән ҡайнаған һыу.

Беҙ йыуан-йыуан ҡарағай, шыршы йығабыҙ, улар тирәяғындағы ваҡ ағастарҙы һындыра-һындыра шаулап ергә ҡолай. Мин ағастарҙың тере йән икәнен белә инем инде, беҙ шундай ҙур, мөһабәт, әммә яҡлаусыһыҙ ағастарҙы үлтерәбеҙ. Ошо ваҡиғаларҙан һуң байтаҡ йылдар үткәс, мин Толстойҙың «Өс үлем» тигән әҫәрендә ағастарҙың үҙ үлемдәрен тыныс, ғорур ҡабул итеүҙәре тураһында уҡыным, тимәк, мин малай сағымда уҡ тере йәндәрҙе үлтереүебеҙ хаҡында белгәнмен.

Тәүге көндә үк аңланым: был ҡыҙ менән биш кубометрҙы әҙерләп булмаясаҡ. Йығыуын икәүләп йығабыҙ, унан үҙем генә ботайым, ә ул шул арала ҡайҙалыр юғала, йә, ағас төпһәһенә ултырып, уйға сума (һүҙҙәрһеҙ нисек уйлай икән?), йә асыҡ күҙҙәре менән йоҡоға тала. Мин уны уятам — артабан бысырға кәрәк бит — унан йәнә барыһын да үҙем эшләйем. Ул миңә йәл, ҡулымдан килһә, уны бөтөнләй эшләтмәҫ инем. Смена аҙағына өс кубометрға саҡ еткерәбеҙ.

Беҙҙең мастер булып утыҙҙар тирәһендәге ир кеше йөрөй. Белореттан ине шикелле. Башҡорт булғандырмы, әллә татармы, белмәйем, әммә үҙен урыҫ тип һанай ине. Ул беҙҙең менән бер ҡасан да башҡортса һөйләшмәне. Борис Григорьевич тип өндәшәләр, фамилияһы Ханов. Беҙҙең эште ул яҙып бара, норма үтәлмәһә лә, бик әрләмәй, ботаҡтарҙы йүнләп йыймаһаҡ йәки оҙон төпһәләр ҡалдырһаҡ ҡына бәйләнә торғайны. Тыуған яҡтарынан беренсе

тапҡыр алыҫҡа киткән һәм урыҫса белмәгән ауыл малайҙары Хановтан ҡурҡа. Ә мин элекке фэзэошник, заводта ла эшләгән, бойороҡло урыҫ теленә өйрәнгән, ул телдә ярайһы уҡ өйрәнеп алған кеше, мастер алдында бигүк юғалып барманым, хатта иргәләшергә лә күп һорамай торғайным.

Бер көн ул миңә былай ти:

— Һин, шпана, Белоретта ФЗО-ла уҡымаnыңмы?

— Юҡ, — тип яуапланым.

— Ай-һай, фэзэошникка оҡшап тораһың.

Мин — Урал тауҙары битләүендә тыуған кеше. Беҙҙең мөхит таулы булһа ла, асыҡ, тауҙар араһында киң үҙәндәр, әгәр беҙҙең ауылдан ике һыртты артылһаң, Урал арты тигеҙлеге асыла. Беҙгә ел арыш, әрем еҫе менән иҫә, асыҡлыҡтарҙа ҡамғаҡ тәгәрәй, үлән араларында бытбылдыҡ тауыш бирә, ялан өҫтөндә һабан турғайы һайрай. Ялтас тау битләүҙәрендә, тәпәш ҡыуаҡлыҡтарҙа ҡайын, йүкә һәм кизил ҡыуаҡлыҡтары үҫә. Ә бында, йөҙөнсө саҡрымда, беҙ ҡуйы ылыҫлы урман ҡамауында, күберәк шыршы, урыны-урыны менән ҡарағай, ҡайын сағыштырмаса әҙ. Ошо ҡара стена артында тау ҙа, офоҡ та күренмәй, хатта күк көмбәҙе офоҡта тарая һәм көндөҙгө яҡты мәл ошо тауҙар, бейек ағастар ышығында ҡыҫҡара. Бындағы еҫ тә бала саҡтан өйрәнгән еҫ түгел.

Ошо дымлы, ел үтмәгән урман ҡараңғылығынан минең дала иркенлегенә, ҡайын сауҡалығына ҡасаһым килә, үҙемде ситлеккә бикләнгән кеүек хис итәм. Хәйер, ул теләк миндә генә булдымы икән? Тик беҙ ҡайһы яҡтан килтергәндәрен дә, ауылыбыҙҙың ҡайһы тарафтарҙа икәнен дә белмәйбеҙ. Беҙҙең бараҡтан саҡрым ярым самаһы алыҫлыҡта тар тимер юлы уҙа. Шулай юл буйлап көнөнә бер нисә тапҡыр урманды ҡара төтөнгә тултырып, әсе һыҙғырта-һыҙғырта платформаларына ағас тейәлгән паровоз үтә. Шпалдар буйлап атлаһаң, был тимер юлы заводтың Тирлән ҡасабаһына килтерәсәген, артабан Белоретка еткерәсәген самалай инек. Тик уларҙың ҡайһы яҡта икәненә генә һис төшөнөрлөк түгел.

Нисек кенә ас йөрөмәйек, нисек кенә эш ауыр булмаһын, беҙҙең танауға еҫ керә башлағайны инде. Йәш үҫмерҙәр араһында серле, беҙ белмәгән, әммә тойған, көткән мөғжизәләр күп. Шуларҙың иң ҙуры — ҡатын-ҡыҙ. Эйе, ул турала беҙ күпмелер дәрәжәлә беләбеҙ, үҙебеҙҙең үҫмерҙәр компанияһында маҡтанған да булабыҙ хатта, әммә

ҡыҙҙар янына барыуҙан ояла быҙ. Уйындарҙа, шаярған мәлдәрҙә мөмкин, ул саҡтарҙа ҡыҙҙарҙы юрамал ғына этеп ебәреү йәки ҡулына ҡағылыу — икенсе эш. Бер мәл ауылда «Өсөнсө артыҡ» тигән уйында оҡшатып йөрөгән Сәлиәнең ҡулын тотоп торҙом, һуңынан оҙаҡ ваҡыт ошоно онота алмай йөрөгәйнем.

Эштән ни тиклем генә арыһаҡ та, кистәрен барак янындағы асыҡлыҡта ауылда уйнаған ябай ғына уйындарҙы уйнарға керешәбеҙ. «Өсөнсө артыҡ», «Кем һуҡты?», тағы ниндәйҙер уйындар. Минең Алтынсәс тә уйнай. Был телһеҙ ҡыҙ мине үҙенең алтын нурҙары менән торған һайын нығыраҡ ҡойондора. Эштә бергә булғас, мин уны үҙемдең ҡыҙ тип иҫәпләй ҙә башланым инде. Оялсан ауыл малайҙары араһында миңә, ҡасҡан фэзэошникка һәм шпанаға, көндәштәр юҡ.

Ямғыр яуһа, баракта уйнайбыҙ, мин гел генә Алтынсәс янына ултырам. Бер мәл ҡараңғыла мин һаҡ ҡына ҡыҙҙың биленән ҡосаҡланым. Ул ҡулымды алманы.

Беҙ ҡаҡ таҡта өҫтөндә йоҡланыҡ: малайҙар һикенең бер яғында, ҡыҙҙар — икенсе яғында. Мендәр ҙә юҡ, ябыныр нәмә лә. Ауылдан килтерергә беребеҙҙең дә башы етмәгән. Ҡайһы берәүҙәрҙең фуфайкалары бар. Алтынсәс иң ситтә ята, мин дә малайҙар рәтенең ситендә. Ә бер ваҡыт төнөн шым ғына ҡыҙҙар яғына шыуыштым да Алтынсәстең янына ятып уны ҡосаҡланым. Ул был юлы ла ҡаршылыҡ күрһәтмәне. Кем белә, йә йоҡлағандыр, йә минең ҡосаҡта уға йылыраҡ булғандыр. Ошо төндән башлап мин уны үҙемдең ҡосаҡ менән йылыта башланым. Мин уның ауыр толомдарында ниндәйҙер туғанлыҡ хисен, йәш баланың тәмле тир еҫен, йөҙө менән миңә ҡарап ятһа — тын алышының иҫерткес тәмен тойҙом.

Оҙаҡламай мин алтын әкиәт уйлап сығарҙым. Ул әкиәттә Алтынсәс гел генә янымда йөрөй. Беҙ һөйләшмәйбеҙ, тыныс ҡына йәшәйбеҙ, тауыш-тынһыҙ ғына бер-беребеҙҙе яратабыҙ. Шулай ҙа мин уның тормошон һәм минең тауышты ишетеүен теләйем — мин уны Өфөгә врачтарға алып барам. Уны дауалайҙар, ул яйлап һөйләшергә өйрәнә, шунан беҙ бер туҡтауһыҙ һөйләшәбеҙ ҙә һөйләшәбеҙ...

Мин уның биленән генә ҡосаҡлайым, әммә уйым бер ваҡытта ла түбән, оят яғына төшмәй, дөрөҫөрәге, ул яҙыҡ уй башҡа ла инеп сыҡмай, ирендәрем менән хатта битенә ҡағылырға ла ҡурҡам. Кейем аша ҡағылыу ғына бар, ә башҡаһы — үҙем уйлап сығарған әкиәт.

Бер ямғырлы кис беҙҙең үҫмерҙәр компанияһына мастер Ханов килде. Килде лә уйынға ҡушылып китте. Беҙҙең бер егетте дорфа ғына этеп, ул Алтынсәс эргәһенә килеп ултырҙы ла биленә ҡулын һалды. Ҡыҙ, ҡапыл ғына тороп, минең икенсе яғыма күсеп ултырҙы. Уйын бөтөүен дә көтмәй, Ханов китеп барҙы. Иртәгәһенә миңә бәйләнергә тотондо бит: ниңә төпһәләрҙе оҙон ҡалдырҙығыҙ, ботаҡтарҙы йүнләп йыймағанһығыҙ, ағастарҙы матурлабыраҡ өйөргә ине... Өндәшмәнем. Кисен ул йәнә беҙҙең баракка килде һәм йәнә Алтынсәс янына ултырырға маташты. Ҡыҙ ҡалҡынды, йәнә минең икенсе яҡтан ултырҙы, ә мин юрамал уның биленән ҡосаҡланым. Утыҙ йәштәге ир тәүҙә асыулы ҡараны, унан мыҫҡыллы итеп көлдө һәм, ҡырт баҫып кисәге һымаҡ сығып китте. Иртәгәһенә йәнә яныма килде.

— Һин, шпана, нишләп нормаңды тултырмайһың?

— Минең напарница менән бер кем дә норманы тултыра алмай. Ул йәш, бала ғына, көсө юҡ.

— Ун алты йәштә кеше бала буламы ни? Ә һин үҙеңдең ике ярымыңды ниңә тултырмайһың?

— Тултыра алмайым, асмын, хәл юҡ...

— Һуғыш бара, ә ул ас...

(Ҡыҙыҡ, үҙе ниңә фронтта түгел икән?)

Шунан ул, ҡараштарын ергә төбәп, әле генә йығылған ҡарағай эргәһендә баҫып торған ҡыҙ янына барҙы, мыҫҡыллы ҡараш менән уның башынан аяғына тиклем тикшерә башланы.

— Бәйләнмә! — тинем мин, түҙмәй. — Һин бит уға ҡарт, ул бала ғына.

Ханов ҡыҙ эргәһенән китте, уҫал ҡарашы менән мине телде.

— Шпана, мин һинең ҡасҡан фэзэошник икәнеңде белмәй тип уйлайһыңмы? — тине ул теш араһынан. — Нормаңды тултырмайһың, йәштәрҙе аҙғынлыҡҡа өйрәтәһең, ҡоротҡослоҡ эше менән шөғөлләнәһең. Әгәр ҙә иртәгәнән башлап нормаңды тултырмаһаң, әле алған дүрт йөҙ грамдан да ҡолаҡ ҡағасаҡһың. Мин һинең турала тейешле органдарға еткерәсәкмен. Аңланыңмы?

— Аңланым, — тип яуапланым мин.

Ул китте. Мин, балтамды ергә ташлап, йығылған ағасҡа ултырҙым да уйға баттым. Ҡасыуҙан башҡа сара юҡ. Бар ҡасаҡтарҙыҡы кеүек, минең дә бөтә мөлкәтем — өҫтөмдә. Мин ҡыҙҙы ҡосаҡланым, беренсе тапҡыр битемдә уның

йөҙөнә тейҙерҙем һәм ҡулым менән тимер юлы яғына ишараланым, йәнәһе, китәм. Шунан әйттем, һүҙҙәр менән әйттем:

— Мин килермен.

Һәм урманға ҡарай атланым. Ҡыҙ бер аҙ минең арттан барҙы ла тороп ҡалды — ниәтемде аңлағандыр инде. Мин тимер юлына сыҡтым, дөрөҫ кенә барыуымды белмәһәм дә Тирлән яғы моғайын да ошолор тип, шпалдар буйлап атланым. Ағас тейәлгән поезд ҡыуып еткәнсе, байтаҡ ара китеп өлгөргәйнем инде, тимәк, Тирләнгә бара — мин вагонға йәбештем дә тормоз майҙансығына мендем. Бара торғас ҡына башҡа уй бәрҙе: ҡыҙҙы ла үҙем менән алырға кәрәк булған бит! Нишләп ул унда этләнергә тейеш һуң әле? Тик майға буялып бөткән паровоз мине алға, бараҡтан алыҫҡа алып китте.

Ауылыма ҡайтҡас, мин йәнә ҡасҡалаҡҡа әүерелдем. Урта Азия, йәнә ФЗО, был юлы тимер юлын ремонтлау эшсеһенә уҡыным, унан армия, фронт, һуғыштан һуң ғына демобилизацияландым, Кавказ, Мәскәү, институт...

Алтмыш икенсе йылда тыуған яҡтарға ҡайттым, бала сағым үткән һуҡмаҡтар буйлап йөрөнөм, Яйыҡ ярында ултырҙым, тауҙарға күтәрелдем — тормош башлаған мәлдәге тойғоларҙы, кисерештәрҙе кире ҡайтарғы килә ине.

Алтынсәсте, әлбиттә, онотмағайным, шулай ҙа ул йәшәгән ауылға барыуҙы көндән-көн кисектерә килдем. Эйе, ҡыҙыҡһыныу бар: тормошо нисегерәк килеп сыҡты икән? Ә һорашырға кеше юҡ. Минең менән йөҙөнсө саҡрымға барған малайҙарҙан берәү ҙә ауылда түгел: ҡайһылары һуғышта үлде, ҡайһылары ситкә олаҡты, ике ҡыҙ алыҫ ауылдарға кейәүгә сығып китте.

Бер көн район баҙарына барғайным, бер егет яныма килде.

— Тәлғәт! — тип ул минең исемде атаны. — Һин Тәлғәт бит?

— Эйе, Тәлғәт, ә һин кем?

— Вәкил, иҫләмәйһеңме ни? Беҙ һинең менән ҡырҡ икенсе йылда йөҙөнсө саҡрымда ағас әҙерләп яттыҡ таһа.

— Ә, иҫемә төштө, — тигән булдым мин, үҙем, үлтер, бер ниндәй Вәкилде хәтерләмәйем.

Ул минең ҡайҙалығымды, кемлегемде, тағы әллә нимәләр һорашты, яуаплаған булдым, шунан, түҙмәй:

— Беҙҙең менән һаңғырау ҡыҙ эшләгәйне, шуның яҙмышын белмәйһеңме? — тип һораным.

— Гөлшатмы? (Бына бит, уның исеме Гөлшат булған, ә мин белмәгәнмен). Ул бит шул саҡта үк үлде.

— Нисек үлде? — тәүге уйым, ағас баҫҡандыр, ине.

— Уны мастер Ханов көсләне. Һуңынан йыйыштырыусы итеп баракка күсерҙе, тулы паек тәғәйенләне, асыҡтан-асыҡ тигәндәй уның менән йәшәне. Шунан Гөлшат ҡасты, тик йыраҡ китә алмаған — шпалдар буйлап Тирлән яғына атлағанда, поезд бәргән.

— Үҙ-үҙенә ҡул һалманымы икән? — тинем мин, был хәбәргә һаман ышанмай.

— Юҡ. Хәтерләйһеңме, бер боролош бар ине. Шунда машинист быны шәйләп ҡала, гудок бирә, составты туҡтатырға маташа, тик һуң була. Һаңғырау ни, ишетмәй гудокты. Өҙгөләнеп бөткән, ит киҫәктәре лә, сепрәк-сапраҡ ҡына ҡалған...

— Ә ниндәй сибәр ҡыҙ ине, — тип уфтандым мин һәм, үҙем дә аңламаҫтан, — толомо һуң ниндәй ине! — тип өҫтәнем.

— Тәгәрмәс бына шул оҙон толомонан эләктергән шул, — тип дауам итте Вәкил. — Баш тиреһе менән бергә йолҡоп алған, баш һөйәге бөтөнләй яланғас ине.

Тәндәр зымбырлап, күңел тулып китте. Мин, Вәкил менән хушлашып та тормай, ситкә атланым....

# Һыҙлай иҫке яралар

Алтынсы тиҫтәне тултырып килгән колхоз шоферы Шәмғолов Хәйрулла үҙенең тормошо менән, нигеҙҙә, ҡәнәғәт, ошо йәшкә еткәс ул үҙен хатта бәхетле кеше тип иҫәпләне. Һуғыштан иҫән-имен ҡайтты, унан һуң да байтаҡ йәшәне, әлеге көндә лә йәшәп ята, балалар үҫтереп, уларҙы оло юлға сығарҙы, төрмәгә эләкмәне, йөҙ ҡыҙартырлыҡ бүтән яңылыштары ла юҡ. Өс бүлмәле ҙур йорт һалып керҙе, уны йыһаз менән тултырҙы, телевизоры бар. Яңыраҡ ҡына янғын һүндереү эшенә — хеҙмәтенең һуңғы вазифаһына, үҙенең тоҫмаллауы буйынса, тыныс һәм тир түкмәй генә эшләй торған вазифаға — күсте. Ҡойолорға етешеп бөткән иҫке йөк машинаһында алама юлдар буйлап йөрөмәй хәҙер, бер тәүлек дежурҙа була ла ике тәүлек — өйҙә. Ҡыҫҡаһы, пенсияға тиклемге бер йылды тынысыраҡ йәшәгеһе килде уның, сөнки һуңғы мәлдә

арый башлауын һиҙә, йыш ҡына арҡаһы ла һыҙлап-һыҙлап ала. Һуғышта алған яралары, имгәнеүҙәре яйлап тышҡа сыға, күрәһең. Һул балтырында снаряд ярсығы ултыра (операцияға ятырға күпме өгөтләп ҡаранылар, әлегә бөрсомай әле, тип гел баш тарта килде), торған һайын үҙен ныгыраҡ һиҙҙерҙе, әйтерһең дә, ҡартая барған тәнендә, ул, әлеге немец тимере, әйләнә, тулғана һәм тышҡа сығарыуҙарын һорай ине...

Бер көндө, төнгө дежурҙан ҡайтып иртәнгене ашаны ла, ул өй мәшәҡәттәренә сумды — отпускыға ҡайтҡан оло улы менән төшкә тиклем баҡса артында утын ярҙы, шунан бажаһының самосвалын һорап тороп (ул да шофер), әлеге утынды тейәп ихатаһына килтереп ауҙарҙы һәм бәләкәй малайы Рәмил менән һарайға терәп, өйә башланы. Эше бара, малайҙары ярҙам итә — ҡәнәғәт Хәйрулла. Ул ҡәнәғәтлекте бөтә тулылығында Хәйрулла асыҡ ҡына аңлаптөшөнөп тә етмәй, шулай ҙа был тойғо уның күңел тыныслығынан, йәшәүгә булған теләгенән, кешеләргә булған мәрхәмәтенән, көндәлек ығы-зығынан өҫтөнөрәк булырға тырышыуҙан, тыуып-сығып торған ваҡ-төйәккә бик иғтибар итмәүҙән киләлер, тип уйлай. Ҡабаланмай, осонмай эшләй, ихлас, яратып эшләй, ултырып тартып ала, йәнә тотона, башында әллә ниндәй уйы ла юҡ. Уға рәхәт, күңелле.

— Эй-й! — Һәр ваҡыттағыса иркә генә ҡысҡырҙы бер мәл ҡатыны, болдорға сығып. — Ғарифа килгәйне, ҡунаҡҡа саҡыра.

— Ҡайһы Ғарифа? — тип һораны Хәйрулла.

Ауылда өс Ғарифа бар, әммә береһе лә уларға нәҫел түгел, һәм береһенең дә уны ҡунаҡҡа саҡырырға сәбәбе юҡ.

— Сабурҙың ҡатыны... Улы менән килене ҡайтҡан, ҡунаҡ күрһәтә.

— Икебеҙҙе лә саҡырамы?

— Юҡ, һине генә.

Тағы Сабур!.. Был исемде ишетеү менән, Хәйрулланың балтырындағы тимер ярсығы ҡуҙғалды ла осло яғы менән ятҡан урынын түгел, ә йөрәген телеп ебәрҙе. Һуғыш бөтөп байтаҡ йылдар үтһә лә, Сабур уның йөрәгендә бөтмәҫ һыҙлау булып һаман йөрөй шул.

... Улар йәштәш ине. Бер аймаҡ малайҙары. Хатта күршеләр. Хәйрулланың әсәһе юҡ, ә үгәй әсә өсөн ул — артыҡ

тамаҡ, ялҡау, киҫекһеҙ, бур. Шәкәр һауытынан кем шәкәр сәлдерә? Әлбиттә, Хәйрулла. Кем мөгәрәпкә төшөп һөт өҫтөнән ҡаймағын һөҙөп ала? Хәйрулла. Үгәй әсә былар-ҙың барыһын да атаһына ошаҡлай, ә атаһы, уның үҙ атаһы, үгәй әсәгә ышана ла Хәйрулланы ҡайыш менән яра. Мин ашаманым, тип әйтеү файҙаһыҙ. Был ғәҙелһеҙлек малай-ҙың шул ҡәҙәре асыуын килтерә, хатта өйҙән ҡасып сығып китеү йәки барыһына ла үс итеп һыуға батып үлеү һымаҡ насар уйҙарға тарыта... (Һуңынан, байтаҡ йылдарҙан һуң, ир ҡорона ингәс, инде үҙе атай булғас, Хәйрулла төшөргән сағында атаһына ошо хаҡта әйткәйне, ҡарт өндәшмәй генә тыңланы ла иланы.) Ә Сабур — иркен йәшәгән ғаиләнән. Сабурҙың бил ҡайышлы, баҡыр төймәле аҡ бәз курткаһы Хәйрулланың иң ныҡ көнләшкән әйбере ине. Итектәре лә, ай-һай, Хәйрулла өсөн буй етмәҫлек байлыҡ... Ихлас малай Сабур, өйөнән икмәк алып сыға ла Хәйрулла менән яланға ҡаса, һәм икәүләп үләнгә һуйҙайып урланған икмәкте ашайҙар. Ул икмәк иректә, саф һауала, бигерәк тә тәмле тойола...

Сабурҙы хеҙмәткә алманылар — ниндәйҙер сир тапты-лар. Ә үҙе хәрби хеҙмәт тураһында ныҡ хыялланды, хәрби кейемдең төҫөн, еҙ төймәләрен, яҫы ҡайышын яратты. Ете кластын тамамлағас, идарала хисапсы булып эшләне — шул заман ауылы өсөн грамоталы иҫәпләнде; ҡара буҫтауҙан тегелгән галифе, гимнастерка кейҙе, портупеялы комсос-тав ҡайышы быуып йөрөнө. Фырт, төҫкә-башҡа күркәм, яҡшы, етеш ғаиләнән сыҡҡан Сабур ауылда беренсе егет һәм ҡыҙышырлыҡ кейәү ине.

Хәйрулла оҙон кавалерия шинеле, буденовка кейеп хәрби хеҙмәттән ҡайтып төшкәндә, Сабур уҡытыусының сибәр ҡыҙына өйләнеп, атай булырға өлгөрһә лә, элеккесә гимнастерка, галифе кейеп йөрөй, яҫы комсостав ҡайышы быуа, уң яҡ ҡабырғаһына һары тиренән тегелгән яңы кобура аҫҡан ине. Тик кобураһы буш. Ауыл урамы буйлап велосипедта үткәндә — ул заман өсөн ҙур байлыҡ — арты-нан малай-шалай ҡысҡырып ҡала: «Сабур, буш кабур!» Армия еҫе килгән ысын ҡыҙылармеец Хәйрулла янында Сабур нисектер кесерәйеп-бәләкәйләнеп ҡала, төҫө уңа, көләгәгә күсә. Русса иркен һөйләшкән Хәйрулла ауылдың беренсе егете хәҙер, ә ғаиләле Сабур тәүге әтәстәр ҡыс-ҡырғансы клубта йөрөй алмай, ҡараңғы төшөү менән йәш ҡатыны янына йоҡларға ята. Хәйрулла өйләнергә ашыҡ-

май, ҡыҙҙар һайлай, ә төндәрен иренән айырылып ҡайтҡан балаһыҙ сибәр ҡатынға һуғыла...

Һуғыш...

Уның донъяны һәм кешеләр йөрәген тетрәткән шомло гөрһөлдәүе фонында тормош-көнкүреш ығы-зығылары ваҡ-төйәк булып ҡалды: яңы ғына армия хеҙмәтенән ҡайтып, әле йүнләп ял итеп тә өлгөрмәгән Хәйрулланың да, строевой хеҙмәткә яраҡһыҙ табылып армияға бармай ҡалған Сабурҙың да хоҡуҡ һәм бурыстарын тигеҙләп ҡуйҙы. Уларҙы бергә саҡырҙылар, ауылдан беренсе итеп саҡырҙылар. Хәрбилекте, хәрби кейемде ныҡ яратҡан Сабур, башҡаларға күрһәтергә тырышмаһа ла, ҡапыл ғына шиңде лә ҡуйҙы. Ни тиһәң дә, йәш, сибәр ҡатыны, туп һымаҡ тәгәрәп йөрөгән улы ҡала, етмәһә, ир ҡорона баҫтырып ҡайтара торған строевой хеҙмәткә барманы, ә ысын һуғышҡа китә. Ә унан күптәр әйләнеп ҡайтмай. Сабурҙан айырмалы рәүештә, Хәйрулла мобилизацияны шулай тейеш тип ҡабул итте, хатта эстән ҡыуаныс та кисерҙе: ул үҙен күрһәтәсәк, хатта командир ҙа булып китер әле...

Оҙатыу ҡайғыларынан шашыр сиккә еткән күрше рудник мәрйәләре ҡысҡырып илай-илай ирҙәрен, улдарын алып китеүсе арба арттарына тағылып, саңлы юл буйлап тәнтерәкләне, ә тауышланып илай ҙа, һамаҡ та әйтә белмәгән башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары шым ғына яулыҡ остары менән күҙ йәштәрен һөрттө. Гармун иңрәне, иҫерек Сабур, ҡатынын ҡосаҡлап, ул саҡта бик таралған йырҙы һуҙҙы:

> Мы простимся с тобой у порога
> И, быть может, навсегда...

Сабурҙың атаһы ла иҫерек, ул, йоҙроғо менән түшенә һуға-һуға, ҡайғыһын маҡтаныу менән баҫырға маташа: «Минең улым герой булып ҡайтасаҡ, командир булып ҡайтасаҡ! Бына күрерһегеҙ, мин әйтте тиерһегеҙ! Беҙ Арыҫланов фамилияһын юҡҡа ғына йөрөтмәйбеҙ!» Тик үҙенең улын башҡаларға ҡарағанда нығыраҡ белгән, йөрәге менән аңлаған һәм йәлләгән Сабурҙың әсәһе Рәхимә апай ғына йәш аралаш Хәйруллаға туҡтауһыҙ: «Һин уны үҙең менән генә йөрөт инде, ул бит йыуаш, иркә үҫте, ауылдан бер ҡайҙа ла сыҡмаған бала, һаҡлай ғына күр инде», — тип тыҡыны.

Ылауҙар ҡуҙғалды һәм саң-туҙан араһынан ҡатын-ҡыҙҙың, ҡарт-ҡороноң, бала-сағаның ҙур төркөмө, Хәйрулланың һөйгән ҡатыны ла, улы ла, әсәһе лә булмаған ауыл да, киткән һайын бәләкәйләнә барып, алыҫлашҡандан-алыҫлашты. Хәйрулланы уйлаусы, һағынып көтөүсе, уның үҙенең дә һағыныр, юҡһыныр кешеһе ҡалманы ауылда...

Ныҡлап онотолоп та өлгөрмәгән армия тормошона Хәйрулла еңел инде, әйтерһең, бөтөнләй демобилизацияланмаған. Ә Сабур өсөн яңы тормош көтөлмәгәнсә ауыр бирелде. Ике-өс рус һүҙен дә бергә ялғай алмаған кешегә үҙе һымаҡ таҡыр башлы, әммә төрлөһө төрлө — ихлас, шаян, бәләкәй генә кире эшеңде лә ғәфү итә белмәгән уҫал, яһил, үҙ һүҙле, тәкәббер ауыл малайҙары араһында үҙен иҫбатлау, шулар араһында үҙ урынын табыу бик ауырға төштө. Хатта командирҙарҙың талапсанлығы ла уға ҡанһыҙлыҡ һымаҡ күренде. Армияла бит ирҙәр хеҙмәт итә, ирҙәр һуғыша, ул һиңә бисә менән йоҡлау түгел, әгәр үҙең бисәләр кеүек икәнһең, ҡырҡ ҡат тирең сығасаҡ, һинән ир һәм яугир яһаясаҡтар барыбер. Өйҙәге иркен ашап йөрөүҙән һуң самалы һалдат паегына оҙаҡ өйрәнә алмай интекте Сабур. Ярым ас йөрөү уның хәлен алды, хатта кәмһетелеүҙәргә алып барып еткерҙе. Запас полкта торғанда киндерҙән тоҡсай теккән дә, кухняла дежур иткән ваҡытында шул тоҡсайға арпа бутҡаһы тултырған, шуны шинель салғыйы аҫтына тығып алып сыҡҡан һәм казарма һикеһе аҫтына йәшергән. Шул әсеп бөткән бутҡаны төндәрен йәшереп кенә ашай икән был. Тоҡсайҙы таптылар һәм уны бөтә строй алдында ояҡҡа ҡалдырҙылар. Хәйрулла быны алданыраҡ белмәй ҡалды, белһә, бындай уҡ хәлгә еткермәҫ ине. Хәйер, асығыуҙың сигенә сыҡҡан кешене нисек туҡтатаһың, ти, ул бүтән юлын табыр ине. Һәм Сабур, үҙенең алдында Хәйрулланың өҫтөнлөгөн танып, унан гел генә яҡлау эҙләне, ә Хәйрулла уның малай сағында өйҙән икмәк урлап сығарып үҙен ашатҡанын онотмағанлыҡтан һәм әсәһенең дә үтенесен иҫендә тотоп, күршеһен күҙ уңынан ысҡындырманы, ҡулынан килгәнсә ярҙам итте.

Бәхеттәренә, уларҙы айырманылар. Фронтҡа ла бергә киттеләр, бер взводҡа, хатта бер отделениеға эләктеләр. Вязьма эргәһендә Сабур баш һалды. Уның нисек, кем ҡулынан һәләк булғанын Хәйрулланан башҡа бер кем дә белмәй. Һуғыштан һуңғы йылдарҙа Хәйрулла был турала

онотоорға тырышты. Онотоп та бөткәйне инде, бына бөгөн килеп йәнә иҫенә төшөрҙөләр...

— Нимәгә саҡыралар? — тип аптыраны Хәйрулла. Хәйер, тоя, самалай: ул бит Сабур менән китте һуғышҡа, фронтта ла бергә булдылар, һәм уның нисек һәләк булғанын үҙ күҙҙәре менән күрҙе («Күҙ алдымда һәләк булды, — тип әйткәйне һуғыштан ҡайтҡас тиҫтеренең ҡатынына. — Немец пуляһы тейҙе».) — Юҡ, бармайым!

— Бына һиңә кәрәк булһа! Нисек бармайһың? — тип ғәжәпләнде ҡатыны. — Ҡунаҡ күрһәтергә саҡыра, тип әйттем бит. Һине генә. Уңайһыҙ ҙа инде — кеше әҙерләнгән, көтәләр.

Моғайын да, ҡатыны хаҡлылыр — саҡырғас, бармау килешмәҫ... Хәйрулла кереп йыуынды, яңы костюмын кейҙе, башына эшләпәһен һалды һәм Сабурҙың, дөрөҫөрәге, ҡартайып барған тол ҡатындың, яңы өйөнә ҡарай атланы...

Еңеүҙең утыҙ йыллығына колхозда һәйкәл ҡуйырға ҡарар иттеләр. Бөтә район буйынса һәйкәлдәр яһап йөрөгән Винников фамилиялы скульптор ишаратын таптылар. Проект-смета төҙөлдө — колхозға өс меңгә төштө. Әлеге Винниковҡа берҙән-бер шарт ҡуйылды: һалдаттың йөҙө башҡорт сырайлы булһын. Скульптор эшкә тотондо. Уға беҙҙең ике егет ярҙамлашты. Һәйкәлдең гипс күсермәһе әҙер булғас, комиссия төҙөнөләр. Ауыл Советы рәйесе Фәтҡуллин күсермәне төрлө яҡлап бик оҙаҡ тикшерҙе: һалдат хәйләкәр күренә, хатта мыҫҡыллы йылмая, тип тапты. Винников дәғүәне ҡәнәғәтһеҙ генә тыңланы, шулай ҙа өндәшмәне, шунан һалдаттың йөҙөн ыуғылап-ҡырғысланы, һәм йөҙ уйсан-ҡайғылыға әйләнде лә ҡуйҙы. Һалдатты бетонға ҡойҙолар, постаментҡа мендереп ҡатырҙылар, бронза буяу менән буянылар, тимер рәшәткә менән уратып алдылар, киндерҙән япма тектеләр ҙә һәйкәлгә яптылар. Ҡояшлы, еләҫ яҙғы бер көн ауыл халҡы — бала-сағанан алып ҡарт-ҡороға тиклем — митингыға йыйылды, оркестрҙың гимн уйнауы аҫтында әлеге япманы тартып төшөрҙөләр. Бейек постаментта һалдат тора — плащ-палаткала, эйелеңкерәгән башы яланғас, йөҙө уйсан-ҡайғылы, һул аяғын саҡ ҡына алғараҡ баҫҡан, уң ҡулы автомат прикладында ята, һулы менән каскаһын тотҡан. Йөҙө башҡорттоҡо. Постаментҡа ҡалҡыу хәрефтәр менән «1941 —

1945 йылдарҙа илебеҙ азатлығы өсөн һуғышта һәләк булған геройҙарға дан!» тип яҙылған. Пионерҙар һәйкәл алдына тәүге яҙ сәскәләре һалды, ҡатын-ҡыҙ күҙ йәшен һөрттө...

Хәйрулла, һәләк булған ауылдаштарының исемлеген уҡыу теләге менән, һәйкәл янына барҙы. Исемлек алфавит буйынса яҙылғайны — ике йөҙгә яҡын кеше. Беренсе булып Арыҫланов Сабур тора... Хәйрулла тәүҙә үҙ күҙҙәренә үҙе ышанманы, күҙе алдамауына төшөнгәс, бөтәһе лә ишетерлек итеп: «Иптәштәр, бында хата киткән, Арыҫланов Сабурҙың урыны бындай изге ерҙә түгел! Ул бер ниндәй ҙә герой булманы, уға ниндәй дан?» — тип ҡысҡырғыһы килде. «Ошо минутта уҡ ауыл Советы рәйесенә дөрөҫөн һөйләп бирергә» тигән уй ҙа тыуып ҡуйҙы хатта күңелендә. Тик нисек һөйләйһең? Уға кем ышана? Сабурҙың ҡатыны эргәлә генә тора: йөҙө яҡты һәм һағышлы, күҙҙәре тулы йәш, әйтерһең дә, был Сабурҙың ҡәбере, әйтерһең дә, Сабурына һәйкәл ҡуйғандар...

Хәйер, ныҡлап уйлаһаң, Сабурҙың алйоттарса үлемендә Хәйрулланың да ғәйебе бар бит... Һәйкәлдән уның исем-фамилияһын хәҙер ҡырып ташлаһындармы ни? Сабурға был барыбер, ә туғандары, ҡатыны өсөн шаңҡытҡансы һуғыу буласаҡ. Уларҙы ауыр ғазапҡа һалғансы, әйҙә, үҙе генә борсолһон Хәйрулла. Ә ул үлгәс, Сабурҙың нисек һәләк булғанын берәү ҙә белмәйәсәк...

Ошо көндән һуң Хәйрулла ауыл Советы ҡаршыһындағы бетон һалдат янына бүтәнсә аяҡ баҫманы. Үҙенең тәҙрәһенән йәки ауыл Советына, колхоз идараһына барғанда күрһә лә, постаменттағы һалдатҡа ҡарамаҫҡа тырышты. Онотто. Йылдар үтә килә, башына инеп тә сыҡманы. Кем белә, бәлки, унда Сабурҙың исем-фамилияһы булыуына күнеккәндер ҙә. Бына бөгөн килеп йәнә Сабур!..

Хәйрулла күптән, армиянан ҡайтҡаны бирле, булғаны юҡ Сабур йортонда. Әлбиттә, элекке йорт түгел инде хәҙер, төкәтмәле, террасалы, яңы ҡарағай бүрәнәләрҙән һалынған ҙур йортта йәшәй Ғарифа. Болдорҙан күтәрелгәндә ҡапыл ғына күңеле ифрат бошонҡоланды Хәйрулланың, йөрәге ҡыҫылды: бар, боролоп кире ҡайт та кит. Аяҡ быуындарының хәлһеҙлеген саҡ еңеп, ул көскә менеп етте. Өҫтөнә йәшел кофта кейгән, яңы кәшәмир яулыҡ ябынған, һаман да төҫ ташламаған Ғарифа ҡаршы сыҡты.

— Әйҙә, әйҙә, күптән көтәбеҙ! — тине ул шатлыҡлы йылмайып һәм өйгә саҡырҙы.

Хәйрулла ботинкаларын һалып өйгә үтте, ашыҡмай ғына атлаған ыңғайы стеналағы зәңгәр обойҙарға, тәҙрәләрҙәге селтәрҙәргә, сағыу ҡорғандарға иғтибар итте, полировкалы шкафты, диванды, ҙур көҙгөнө, радиоалғысты, фотоларҙы шәйләне, ҡунаҡ бүлмәһендә Сабурҙың улы менән киленен күрҙе. Сабурҙың улы Хәйрулла күңелендә ниңәлер ике төрлө тойғо уятты: ул оҙон, кәүҙәгә ҡалын, Хәйрулланан бер башҡа бейегерәк. Һуғышҡа киткән саҡтарында туптай тәгәрәп йөрөгән малай... Яҡшы костюм, аҡ күлдәк кейеп, галстук таҡҡан, бөтә тышҡы ҡиәфәте менән ул үҙенә ылыҡтыра ла, шул уҡ ваҡытта күңелгә ят та, алыҫ та ине. Фырт йәш ир Хәйруллала һүнеп бөтмәгән көнсөллөк ҡуҙҙарын терелтеп ебәрҙе: ҡайһылай мөһабәт һәм ниндәй ышаныслы баҫып тора! Ирекһеҙҙән, уны үҙенең оло улы Шамил менән сағыштырҙы: үҙе кеүек бәләкәй кәүҙәле, пеләш башлы улы бының янында ярайһы ҡайтыш шул. Бигүк оҡшамаған да Сабурҙың үҙенә. Ә бына киленен бөтөнләй оҡшатманы Хәйрулла: сағыу туҡыманан тегелгән киң салбар кейгән, ошо салбар ундағы булған бөтә матурлыҡты йәшерә, бәләкәй генә һөйкөмлө йөҙ, ҡабарынҡы аҡһыл сәстәр, һауалы ҡараш...

Иҫәнләшеп ултырыштылар. Ғарифа менән килене өҫтәл әҙерләп бөткәнсе тигәндәй һөйләшмәнеләр. Күстәнәс коньякты эсеп алғас ҡына хәбәр ялғанды: һауа торошо, иген, тормош, эш. Ҡайҙа эшләйһең, ниндәй вазифала, тип һораны Хәйрулла. Түбәндә инженер икән. Эш хаҡы насар түгел, отпускыһы ҙур, әле көньяҡҡа ялға китеп барышлай бер нисә көнгә әсәһен күреп китер өсөн һуғылыуҙары. Хәйрулла ла үҙ тормошо тураһында һөйләне, балаларының уны гел генә ҡыуандырып тороуҙарын телгә алды. Өлкәне — аспирант, бер ҡыҙы — уҡытыусы, икенсеһе — студентка. Һөйләшкән арала үҙе, ирекһеҙҙән, Сабурҙың стеналағы фотоларына ҡарап-ҡарап алды. Бөтә фотографияларҙа ла тиерлек — Сабур, бала сағындағыһын иҫәпләмәгәндә (төшөргәндәр бит, ә уның, Хәйрулланың, малай сағында төшкән бер фотоһы ҡалмаған), Сабур — хәрби кейемдә һәм батыр егет ҡиәфәтендә. Икеме, өсмө фотографияһында ул буш кобура менән төшкән.

Ниһайәт, өҫтәл артындағы һөйләшеү яйлап ҡына һуғыш темаһына ауышты — Хәйрулла бының ҡотолғоһоҙ икәнен аңлай ине. Саҡырыуҙарының маҡсаты ла шул бит. Әлбиттә, үҙе һүҙ ҡуҙғатмаҫ ине, үткәндәрҙә соҡонғоһо,

иҫке яраларҙы ҡуҙғатҡыһы килеп тә тормай. Сабурҙың үтә лә әҙәпле, иғтибарлы улы нисектер һиҙҙермәй генә хәбәрҙе шул юҫыҡҡа борҙо ла ебәрҙе бит, ҡәһәрең.

— Хәйрулла ағай, — тине ул, — һеҙ минең атай менән фронтта бергә булғанһығыҙ, шулай бит?

— Эйе, бергә булдыҡ. Бергә алындыҡ, аҙаҡка тиклем бергә... — Хәйрулла һағая төштө.

— Һеҙ уның нисек һәләк булғанын күрҙегеҙме?

— Күрҙем. Барыһы ла минең күҙ алдында булды.

— Ғәфү итегеҙ, Хәйрулла ағай, мин, бәлки, һеҙҙең өсөн ауыр хәтирәләрҙе ҡуҙғатамдыр, шулай ҙа уның нисек һәләк булғанын һөйләгеҙ әле.

Нисек үлде һуң Сабур?

Смоленск эргәһендә уларҙың полкы ҡамауға эләкте. Боеприпастары бар саҡта оборона тоттолар, байтаҡ кешеләрен юғалттылар, шулай ҙа, үҙебеҙҙекеләр йырып керер ҙә ҡотҡарыр, тигән өмөттәре бар ине. Немецтар самолеттарҙан «Әсирлеккә бирелһәгеҙ, ғүмерегеҙҙе һаҡлайбыҙ», тигән листовкалар ырғытты. Хәйрулла менән Сабур былай һөйләште: нимә генә булһа ла — айырылмаҫҡа, береһе һәләк булһа, икенсеһе үҙ ҡулдары менән күмергә тейеш; береһе яраланһа, икенсеһе ташлап китмәй, ҡамауҙан алып сыға. Полк ҡырылып бөтмәҫ элек тип, йән асыуына ҡамауҙы өҙөргә ташландылар — урмандан сыҡтылар ҙа картуф баҫыуына һибелделәр, әммә миномет, пулемет утына эләктеләр. Тере ҡалғандар ҡаршылағы урманға кереп өлгөрҙө лә Мәскәү йүнәлешенә йөҙ тотто. Көнө буйы барҙылар, әммә үҙҙәренекеләргә юлыға алманылар. Немецтар Мәскәүгә ынтыла, бөтә тирә-яҡ немец менән тулы, төндәрен мотор геүләүе, гусеницалар шаҡылдауы, мотоциклдар гөрөлдәүе, ят телдә һөйләшеү, ят бойороҡтар яңғырай, күккә ракеталар оса. Ҡарағай урманы ауыҙында бер аҙ хәл йыйҙылар ҙа, немецтарҙан эҙ яҙҙырыу еңелерәк булһын өсөн, икегә бүленделәр. Хәйрулла менән Сабур эләккән төркөмдө бер лейтенант алып китте. Хәйрулла уның фамилияһын иҫендә ҡалдырмаған, (бәлки, белмәгәндер ҙә, сөнки ул бүтән ротанан ине), ә үҙҙәренең взвод командиры картуф баҫыуында ятып ҡалды.

Октябрь айы. Япраҡ ҡойола, аяҡ аҫтындағылары оло тауыш сығарып ҡыштырлай, ҡоро ботаҡтар шартлап һына. Урман тиһәң, хәтере ҡалыр, үтәнән-үтә күренгән ағаслыҡ инде шунда. Өйкөм-өйкөм ултырған ағастар араһындағы асыҡлыҡтарҙы, баҫыу-яландарҙы йүгереп йәки шыуышып

үтергә тура килә, ә немец бөтөнләй яҡын булһа инде, йәшенеп яталар ҙа төн еткәнен көтәләр. Арығанлыҡтан, асығыуҙан, һыуыҡтан, ҡурҡыуҙан кешеләрҙең хәле бөтә, талсыға, унан да аламаһы — өмөтһөҙлөккә бирелә. Үлемдән бигерәк әсирлеккә төшөүҙән ҡурҡалар. Шуныһына йәндәре көйә: еңелеү белмәҫ Ҡыҙыл Армия нишләп сигенә һуң, Мәскәүгә ҡул һуҙымындай ғына ара ҡалып бара бит?..

Ауылға яҡын килеүҙән ҡурҡалар, баҡсаларға төшөү мөмкинлеге лә юҡ — картуфы ҡаҙып алынған. Ашарҙай үлән дә, емеш-еләк тә бөткән мәл урманда, булған ғына бәшмәктәрҙе ҡойолған япраҡ ҡаплаған, һирәкләп тапҡандарын сейләй ашанылар, унда ла урыҫ егеттәре генә. Хәйрулла менән Сабур, элек ашағандары булмағас, ағыуланыуҙан ҡурҡып, ҡағылмайҙар. Асығыуҙан тамам хәлдән тайып, күҙ алдары ҡараңғылана башлағас, былай булмай, ауылға керергә лә ашарға һорарға кәрәк, тигән фекергә килделәр. Бер ауылға килеп төртөлгәс, немец юҡмы, тип урман ауыҙынан ҡарап-күҙәтеп яттылар. Иң ситтәге йорттоң мөрйәһенән һүрән генә төтөн килә, тимәк, нимәлер бешерәләр. Лейтенант, кемегеҙҙе ебәрергә икән һуң, тигәндәй, барыһын да күҙҙән үткәрҙе, шунан ҡарашы менән Хәйрулланы тотто ла шым ғына бойороҡ бирҙе: «Шәмғолов!»

Хәйрулла эйелеп баҫыуҙы йүгереп үтте, баҡса артына етте, кәртә аша һикереп төштө лә, алан-йолан ҡаранып, өйгә инде. Уның йөн баҫҡан, ҡарайған яшыҡ йөҙөн күреп, оло ғына йәштәрҙәге хужабикә ҡурҡып китте.

— Ауылда немецтар бармы? — Иҫәнләшкәс, Хәйрулланың тәүге һорауы шул булды.

— Беҙҙә юҡ, Шастовта бар, тиҙәр.

Урыҫ мейесендә һуңғы торомбаштар яна, өҫтәлдә ҡамырлы күнәк тора. Хужабикә еңдәрен төрөп ҡамыр баҫа, ҡамырҙы кәбеҫтә япраҡтарына һала. Икмәкте кәбеҫтә япрағында бешергәндәрен Хәйрулла беренсе тапҡыр күрә. Күп нәмә онотолған: үҙен ошо йортҡа ебәргән лейтенанттың йөҙө, ҡамауҙан сыҡҡан иптәштәренең исемдәре, ә бына кәбеҫтә япрағына һалынған икмәк әле лә күҙе алдында, әйтерһең дә, кисә генә күргән.

Өс көн инде бер нәмә ҡапҡаныбыҙ юҡ, бер аҙ икмәк бирһәгеҙсе, тине Хәйрулла хужабикәгә. Бер телем дә икмәгем юҡ, бына ҡамыр баҫам, бер аҙ он бирә алам, тип яуапланы хужабикә. «Ондо нишләтербеҙ икән һуң», — тип уйлап алды Хәйрулла, һәм ҡамыр һораны. Хужабикә

яурынын йыйырҙы, йәнәһе, үҙегеҙ ҡарағыҙ. Хәйрулла ҡамыр һалынған ике кәбеҫтә япрағын шинель итәгенә төрҙө лә иптәштәре янына ашыҡты. Уларҙың кәйефе төштө, ҡамырҙы сей көйө ашарға ла маташтылар, ә Хәйрулла, ҡайғырмағыҙ, мин һеҙгә көлгә һалып, башҡорт күмәсе бешерәм, тине. Ут яҡтылар, торонбаштар янып бөткәс, Хәйрулла ҡамырҙы йәйҙе лә көлгә күмде. Ул бешкәнсе, иптәштәренә бер башҡорттоң ҡала баҙарында көлдә бешкән күмәс эҙләп-эҙләп тә таба алмағас ныҡ аптырағанын һәм: «Баҡһаң, ҡалала ундай икмәкте бешермәйҙәр, ә нимә ашап йәшәйҙәр икән һуң?» — тип әйткәне тураһында ләҡәп һөйләне.

Тамаҡ ялғанғас, көнө буйы, төнгә тиклем атланы ла ҡуйҙылар. Төн ауышҡас, быҫҡаҡлап яуған ямғырҙан лысма һыуланып, арыуҙың, асығыуҙың сигенә сығып, йәнә ауыл ситендәге бер өйгә, текә ярлы соҡор ситендә генә ултырған өйгә, яҡынайҙылар. Был тарафтарға хас булғанса, өйҙән йыраҡ ҡына бүрәнәнән һалынған бесән һарайы ултыра. Өйгә лейтенант был юлы үҙе китте, ҡалғандар әлеге һарайға ышыҡланып көтөп ҡалды. Лейтенант әйләнеп сыҡты ла, немецтар юҡ ауылда, хужабикә сөгөнгә картуф бешерергә ҡуйҙы, икмәк тә килтерәсәк, тине. Хужабикә күпмелер ваҡыттан һуң, ысынлап та, бешкән картуф, икмәк килтерҙе. Ашап алғас, һарайҙағы бесәнгә күмелеп, йылынып йоҡоға талдылар. Шул тиклем арманһыҙ булғандар, хатта һаҡсы ҡуйырға ла онотҡандар.

Ҡарт хужа йүгереп килеп, егеттәр, тороғоҙ, ауылға немецтар килде, тип төрткөләп уятҡанда, һарай ҡыйығы ярыҡтарынан яҡтылыҡ нурҙары һарҡыла ине. Һикерешеп тороп соҡорға йүгерҙеләр. Хәйрулла артынан — Сабур. Обмоткаһы һүтелеп киткән дә ерҙән һөйрәлә ине, йүгерә-йүгерә саҡ йыйып алды. Соҡорҙо үттеләр, ҡалҡыулыҡҡа менеп, ҡыуаҡлыҡҡа сумдылар. Бәрелешкә инеүҙән мәғәнә юҡ ине — патрондар менән гранаталары һанаулы ғына, булғанын, үҙебеҙҙекеләргә йырып сығырға тура килһә, кәрәгер, тип һаҡлайҙар. Хәйрулла Сабурҙың дискылар һалынған брезент сумкаһы юҡлығын күрҙе лә (Хәйрулла — ҡул пулеметы пулеметсыһы, ә Сабур — уның икенсе номеры, дискылар һалынған сумка уның ҡарамағында), бәй, сумкаң ҡайҙа, тип һораны. Һарайҙа онотоп ҡалдырғанмын, тип яуапланы Сабур. Хәйрулла һүҙһеҙ ҡалды. Тулы өс дискы ине сумкала, өҫтәүенә, утыҙлап патрон. Әлбиттә, Сабур сумканы юрамал ташлап китмәгән, ҡаба-

ланыу арҡаһында оноткан. Әммә аҡланыр сәбәп түгел был, уларҙың хәлендә алтын бәрәбәрендәге дискыны ул һис оноторға тейеш түгел ине. Төркөмдә берҙән-бер ҡул пулеметы бар, хәҙер уныһы ла яртылаш дискы менән генә ҡалды.

Тәүге уйы — һарайға үҙе йүгереп барып килеү ине. Өлгөрөрмөн, тип уйланы. Соҡорға нисегерәк төшөргә, теге яҡҡа нисек күтәрелергә икәнен уйлап алды, ә унан һарайға ҡәҙәр илле аҙым самаһы ғына ҡала. Уйлап та бөтмәне, немецтарҙы күреп ҡалды Хәйрулла. Бишәүҙәр. Ауыл урамы буйлап ашыҡмай ғына атлайҙар һәм, һәр йортҡа туҡтала-туҡтала, нимә тураһындалыр һөйләшәләр. Ауылға кире барыу хәҙер аҡылһыҙлыҡ ине. Шундуҡ атып йығасаҡтар. Әлбиттә, үҙҙәрен дә юҡ итеп була, тик, атыу тауышын ишетеп, башҡалары килеп етәсәк һәм эҙәрләргә керешәсәктәр бит. Шулай ҙа сумка тураһында лейтенантҡа өндәшмәй ярамаҫ. Юҡһа, Сабур юрамал ташлап киткән, тип уйлауы бар. Башынан һыйпамаҫ. Хәйрулла шым ғына Сабурға, сумка тураһында лейтенантҡа әйт, тине. Сабур ҡурҡты, ҡыйыулығы етмәне. «Хәҙер үк әйт, юҡһа, юрамал ташлап киткән, тип уйлар». — Хәйрулла Сабурҙы икенсегә киҫәтте.

Яһаулы пулемет дискыларын һарайҙа ҡалдырғанды белгәс, лейтенант ярһыны. «Нисек инде... ҡалдырҙың? — тип уҫал ҡарашы менән һөҙҙө ул Сабурҙы. — Дискылар хәҙер үк бында булһын! Һин беҙҙе ниндәй хәлгә төшөргәнеңде аңлайһыңмы?» Сабур ағарҙы, төҫһөҙ күҙҙәре менән Хәйруллаға ҡараны. «Унда бит немецтар...» — тине шунан саҡ ишетелерлек итеп. «Бер нәмә лә белмәйем, һиңә — өс минут ваҡыт!» — Лейтенант кобураһынан пистолетын тартып сығарҙы. Хәйрулла йәнә, бәлки, үҙемә генә барырғалыр, тип уйланы. Тик ғәҙеллек тойғоһо тыйҙы: ул түгел, Сабур ҡалдырған даһа дискыларҙы, тимәк, үҙенең хатаһын үҙе төҙәтергә тейеш. Кем белә, бәлки, үлем ҡурҡынысы ла туҡтатҡандыр — Хәйрулла һуңғы секундта ниәтенән кире ҡайтты. Сабур көскә-көскә «Есть!» тине лә иҫерек кешеләй сайҡала-бәүелә аҫҡа, соҡорға, атланы. «Шәмғолов, кәрәк булһа, ут менән араларһың! — тип бойорҙо лейтенант. — Егеттәр, алышҡа әҙерләнегеҙ!»

Сабур соҡорға төштө, теге яҡ ярға үрмәләй башланы. Немецтар бер өй тапҡырында туҡтанылар ҙа лапылдашып тик торалар. Хәйрулла уларҙы сәпкә алды. Сабур ярға менде, хәҙер уға нисек тә тегеләрҙең күҙенә салынмай һарайға

йүгерергә, ишектән йылт сумырға ла, сумканы эләктереп, кирегә сабырға кәрәк. Бына эйелеп ысынлап та һарайға йүгерҙе. Ә немецтар һаман шунда. Һарай ишеге, эйе, урам яҡлап. Сабур хәҙер уға етер ҙә стенаға һырлығыр (немецтар һарайҙың теге яғында), аҙ ғына хәл йыйып алыр, шунан мөйөштән башын сығарып ҡарар ҙа, мәлен тура килтереп, ишеккә йомолор, тип көттө Хәйрулла. Сабур урынында булһа, ул тап шулай эшләр ине. Әммә Сабур һарайға етте лә, туҡталып уны-быны тикшереп-ҡарап та тормай, ишеккә йүгерҙе. Немецтар быны шәйләне, дөрөҫөрәге, береһе күреп ҡалды, ҡапыл ҡысҡырып ебәрҙе, автоматына йәбеште, шунан башҡалары ла күрҙе, барыһы ла һөрәнләй-һөрәнләй һарайға йүнәлде. Хәйрулла ах итте, тештәрен ҡыҫты, маңлайына тир бәреп сыҡты; Сабур артҡа, соҡорға, йүгерә башлау менән, атырға йыйынып, немецтарға тоҫҡаны. Тик Сабур йәнә хата яһаны: артҡа боролманы, йүгермәне, урынында бағаналай ҡатты ла ҡалды, унан винтовкаһын ташланы, ҡулдарын күтәрҙе... Һаташыуғамы, төшкәме тиң аңлайышһыҙ һәм ҡурҡыныс мәл ине был. Хәйрулла лейтенанттың ҡәтғи тауышын ишетеп айнып китте: «Шәмғолов!»

Хәйрулла лейтенанттың үҙенән нимә талап иткәнен аңланы, Сабурҙың арҡаһына автоматынан очередь бирҙе — ауылдашы урталай һынды ла яй ғына йығылды, ә дискыһындағы ҡалған патрондарын Хәйрулла немецтарға атты...

Ҡамауҙан сыҡтылар. Ҡыҫҡа ваҡытлы бәрелештә ике егет үлде, лейтенант яраланды. Үҙҙәренекеләргә тиклем уны ике һайғауға бәйләнгән плащ-палаткаға һалып күтәреп барҙылар.

Мәскәү өсөн барған һуғыштарҙа Хәйрулла ла яраланды, госпиталгә эләкте, бер сама һауыҡҡас, ул, сержант, запас полктағы йәш һалдаттарҙы һуғыш алымдарына өйрәтте, унан шулар менән фронтҡа китте, ауыр контузия алды, йәнә госпиталгә ингәйне, инвалидлыҡ биреп, өйөнә ҡайтарып ебәрҙеләр...

Инде бына байтаҡ йылдарҙан һуң Хәйрулла Сабур өйөндә ҡунаҡта. Юҡ, ул хәтерләмәй, уға хәтерләргә кәрәкмәй ҙә Сабурҙың үлемен: ғүмер буйы һыҙлаған фронт яраһы һымаҡ, уны ғүмере буйы яфалай, төнгө йоҡоларынан яҙҙыра йөрәгендәге ошо яра — әле, бер мәлгә генә, иҫенә төшөрҙө. Ауылдашының нисек үлгәнен Хәйрулла уның ҡатынына ла, улы менән килененә лә һөйләй алмай.

һөйләһә, Сабурҙың ысын ир-егет, батыр һалдат булып үлгән, тигән образын юҡҡа сығарыр, үҙенең алдында бер ниндәй ҙә ғәйептәре булмаған кешеләрҙең тормошон ағыулар ине. Быны эшләргә уның хаҡы юҡ, әйҙә, Сабур ғүмер буйы уларға тыуған ил бойондороҡһоҙлоғо өсөн яу ҡырында батырҙарса һәләк булған ир, атай булып ҡалһын...

Әммә Сабурҙың улының һорауына нимәлер тип яуап бирергә кәрәк ине Хәйруллаға.

— Һуғышта һәләк булды... Немецтар беҙгә һөжүмгә күтәрелде... Алыш ҡаты булды...

— Уныһы аңлашыла. — Сабурҙың улы быны йомшаҡ, әммә ниндәйҙер үкенес менән әйтте. — Нисек һәләк булғанын конкрет белгем килә минең. Әлеге алышта ул үҙен нисегерәк тотто, үлер алдынан берәй һүҙ әйтеп өлгөрмәнеме?.. Был хәл ҡайҙа, ниндәй өлкәлә...

Сабур улына атаһының үлеме хаҡында ябай хәбәр түгел, ә батырҙарса һәләк булыуы тураһында хәбәр кәрәклеген аңланы Хәйрулла... Был егет өсөн атаһы иң тәүҙә — һалдат-герой, һәр ваҡыт, бала сағынан бөгөнгө көнгә тиклем герой, атаһының хәрби формала төшкән фотоһын күрһәткәндән алып герой. «Был — һинең атайың. Ул — һалдат. Ул һуғышта немецты ҡыйратып һәләк булды», — тип үҫтергәндәр уны. Хәрби гимнастерка кейгән, яҫы ҡайыш быуған, кобуралы, етди ҡарашлы фырт егет герой булмай кем булһын, эйе ләһә. Ә малай кобураның буш икәнен белмәй. Һуңынан, үҫкәс, ауылына отпускыға ҡайтҡан һайын ул ауыл Советы йорто алдындағы һәйкәл янына бара — һәләк булыусылар исемлегендә атаһының исем-фамилияһы иң башта тора. Бына ҡайҙан килә ул герой образы...

Хәйрулланың башында шундуҡ — күпмелер дәрәжәлә үҙе кисергән, үҙе күргән, оҙон һуғыш йылдарында ишеткән йәки һуғыштан ҡайтҡас һөйләгәндәрҙән — Сабурҙың батырҙарса һәләк булыуы тураһында хикәйә тыуҙы.

— Былай булды. Вязьма янында беҙ ҡамауға эләктек. Ротала бөтәһе иллеләп кенә кеше ҡалды, шунан да күп түгел, ә беҙҙең взводта — лейтенант менән биш кеше. Патрондар бөттө, ашарға ла юҡ. Һыуыҡ, бысраҡ көндәр тора, етмәһә. Ҡарағай урманы ауыҙында ер соҡоп оборонала ултырабыҙ. Иртәнсәк немецтар көтмәгәндә йылғаны кисте лә беҙгә ташланды. Ҡырмыҫҡа кеүек киләләр. Атайың пулеметсы ине, мин — уның икенсе номеры.

Патрон аҙ, бер генә дискы ҡалды. Ҡыҫҡа-ҡыҫҡа очередь менән атабыҙ — патрондарҙы һаҡлайбыҙ. Ә немец беҙгә минометтан бәрә. Миналары ағастарға тейеп ярыла ла аҫҡа, беҙҙең өҫкә, яуа. Бер егетебеҙ үлде. Йәш кенә ине. Себерҙән. Ниндәй милләттән икәнен онотҡанмын, бүрәтме, яҡутмы инде шунда. Окопта нисек ултырған — шул көйө генә ҡатты ла ҡуйҙы, хатта күҙҙәре лә йомолоп өлгөрмәне. Шунан лейтенант яраланды. Ә немецтар бөтөнләй яҡында, сволочтар, пулемет өҫтөнә менеп киләләр, «Рус, сдавайсь!» тип ҡысҡыралар. Рота командирынан элемтәсе килде: оло юлға сигенергә бойороҡ бирелгән. Тап шул мәлдә немецтар оҙон һаплы гранаталар ташларға тотондо. Шуларҙың береһе яныма ғына төштө, тейеүен теймәне, шулай ҙа ныҡ ҡына шаңҡытты. Өсәүбеҙ: мин, һинең атайың, Горький өлкәһенән бер урыҫ егете. Лейтенантты һуғыш яланынан алып сығырға кәрәк. Ҡанын күп юғалтты. Яраһын бәйләгән арала немецтар уратып та алды, уңдан да, һулдан да керәләр. Эштең хөртәйә барыуын күргән атайың былай ти: «Егеттәр, давай, һеҙ сигенегеҙ, командирҙы ҡотҡарырға кәрәк, ә мин фрицтарҙы тотҡарлап ҡалам. Һин, Хәйрулла, иҫән-имен ҡайта алһаң, минең малайҙы ҡосаҡлап үп, үҫә төшкәс, һәләк булыуым тураһында һөйлә!» Шулай тине лә, ҡалҡынып, күкрәген кирәп, немецтарға ҡаршы атланы. Китеп бара, атып бара, үҙе ҡысҡыра: «Ватан өсөн!» Артабан уның менән нимә булған, нисек һәләк булған, дөрөҫөн әйткәндә, мин күрмәнем. Сөнки беҙ ашыҡтыҡ — лейтенантты нисек тә ут аҫтынан алып сығырға кәрәк ине...

Өйҙә тынлыҡ урынлашты. Сабурҙың улы ҡабаланып сигарет тоҡандырҙы, Ғарифа күҙ йәштәрен һөрттө.

— Һин быны элек һөйләмәгәйнең, — тине ул аптырауҙы ҡараш менән.

— Ә һинең һорағаның булдымы һуң? — тине Хәйрулла, һорауға һорау менән яуаплап.

Ул артабан бында ҡала алмай ине. Нишләп улай ҡабаланаһың әле, ултыр ҙа ултыр, тип өгөтләүҙәренә лә ҡарамай, ҡайтырға сыҡты. Сабурҙың улы уны ҡапҡаға тиклем оҙатып, хушлашҡанда ҡаты итеп ҡулын ҡыҫты.

Оҙаҡ, бик оҙаҡ онота алмай йөрөнө Хәйрулла ул кисте. Үҙенең ҡунаҡҡа барыуына, Сабурҙың ҡатыны менән улын, киленен алдағанына үкенде. Шул уҡ ваҡытта күңеленә ниндәйҙер еңеллек тә килде, сөнки һуңлап булһа ла

Сабур алдында үҙенең ғәйебен, дөрөҫөрәге, ҡатыны, улы алдында уның хыянатын йәшерә алды...

Ә, бәлки, ваҡиғалар ысынлап та ул һөйләгәнсә булғандыр, Хәйрулла ауыр контузиянан һуң нимәнелер бутағандыр. Сабур ысынлап та Хәйруллалар ҡаты яралы лейтенантты ут аҫтынан алып сыҡҡанда, уларҙы ҡаплап ҡалып, батырҙарса һәләк булғандыр...

## *Миҙал*

«Вәликәй» ҡушаматлы Вәлиәхмәт ҡарт оло йәшкә етте, инсульт үткәрҙе һәм ҡартлыҡ йүләрлегенә бирелде. Ҡарсығын таный ине әле, уны күргән-шәйләгән саҡтарында хатта әрләп тә маташты, ә бына ҡыҙын, кейәүен, ейәнсәрен күҙенә лә элмәне.

Ул иҫке өйҙә ятты. Ҡасандыр ҡунаҡ яғы тип йөрөтөлгән яртыһында, хәҙер инде ул яҡ ташландыҡҡа әйләнгән, иҫке-моҫко әйберҙәр менән тулы, унан ер һәм һыҡыра еҫе аңҡый. Ҡарт тар ғына тимер карауатта ята, һаҫыҡ матрас өҫтөндә простыняһы ла юҡ, теткеләнеп бөткән одеял ябына. Йыш ҡына ул аҫтына ла ебәреп ҡуя, шуға ла йәйге ҡояшлы көндәрҙә матрасын ихатаға киптерергә сығаралар. Оло хәжәтенә ул үҙе йөрөй, әммә бәҙрәфкә барып етергә хәле етмәгәнлектән, күтәрмә эргәһенә генә сүкәйә лә ҡай саҡ тороп китә алмай үҙенең ярауына ултырып та ҡуя. Уның ялбарыулы мөгөрләүенә ҡарсығы сыға ла әрләй-әрләй ҡартын торғоҙоп ҡомған менән артын йыуа.

Ҡарсығы, Сания, йәш сағында сибәр ине. Хәҙер, шулай уҡ ҡартайып ауырыуға әйләнгәс, элекке йәш сағынан көр тауышлы әсе теле, теремек хәрәкәте менән сая ҡарашы ғына ҡалған. «Йонсой, үлеп кенә ҡуйһа арыу булыр ине», — тип уйлай ул ҡай саҡ иренә ҡарап. Ҡышын китер тигәйне лә, булманы, бына хәҙер яҙ етте, апрель тыуҙы, ә ҡарт һаман йәшәй әле.

Апрель аҙағында ҡарт ҡатынын ымлап янына саҡырҙы ла ниҙер әйтергә ниәтләнде: ҡарттың тешһеҙ ауыҙы ҡыйшайып, аңлайышһыҙ ниндәйҙер өн сығарҙы. Ҡарсыҡ шунда ныҡлап ауырығанға тиклем ҡарттың йыш ҡына: «Бына еңеүҙең илле йыллығына етәм дә миҙал алам. Унан үлһәм

дә ярай,» — тигәнен иçенә төшөрҙө. «Миҙалмы ни?» — тип һораны ул шуға күрә. Ҡарт яуап урынына тамаҡ төбөнән ниндәйҙер өн сығарҙы, башын һелкетте. «Булыр, килтерерҙәр», — тине ҡарсығы.

... Вәлиәхмәт һуғышҡа ҡырҡ беренсе йылда алынды. Өйләнгәйне, ҡыҙы йүгерә башлағайны инде (ғүмер буйы эскесе ир менән йонсоп күптән түгел генә үлде). Ҡамауға эләгеп, уны йырып сыҡты, ҡырҡ икелә Калининград янында яраланды — снаряд ярсығы аяғына тейгәйне, ул ҡыйыш үçеп уңалды һәм ғүмер буйы һул аяғына һылтыҡлап атланы.

Пенсияға тиклем колхозда эшләне — бригадир ҡайҙа ҡуша, шунда йөрөнө. Үҙе һымаҡ иçке фуфайка, кирза итек кейгән ирҙәрҙән бер ни менән дә айырылманы, хәйер, уларҙан айырмаһы шунда булғандыр: ул аҡһаҡ төçкә-башҡа сибәр ҡатындың ире. Бер ҡасан да үҙенең фронтта күргән михнәттәре, яралы аяғы өсөн кемдер нимәлер тейешле тигән өмөт йөрөтмәне. 9 май клубҡа саҡырғас та (табын да ойошторғайнылар) ул бик уңайһыҙланып ҡына барҙы. Туғандарына ҡунаҡҡа килмәгән, ә колхоздыҡын ашай, тиһәләр? Ә бына Латифаның улы Рифат, афған һуғышында ҡатнашҡан йәш егет, эскесе, һуғыш суҡмары, миңә нимә эшләһәм дә ярай тип иçәпләне, ахыры, шул уй менән йәшәне лә. Магазинға арыу әйбер килһә, аяҡ кейеме йәки курткамы — беренсе сиратта уға, бер генә бөртөк һыуытҡыс алып ҡайтҡандар — уға. Өйҙө лә бит колхоз һалып бирҙе.

Вәликәй йәштән үк Санияға ғашиҡ ине, әммә ул сибәр ҡыҙ, үҙенә тиң түгел тип иçәпләне. Уға колхоз рәйесенең улы Хәйҙәр, гармунсы Фуат, буйҙаҡ уҡытыусы Ғөбәй, бүтән арыу егеттәр өйләнә алыр ине. Хеҙмәтенән ир ҡорона етеп, ҡыйыуланып ҡайтҡас та Сания янына барып һүҙ ҡушырға ҡурҡты. Бер йыл өйләнмәй йөрөгәйне, ата-әсәһе килен тураһында һүҙ ҡуҙғата башланы, йәнәһе, әйт, күңеленә кем яҡын, яусы ебәрәбеҙ. Ул тотто ла Сания тине. Былай ғына, шаяртып, бер нәмә лә килеп сыҡмаçын белә тороп әйтте. Һоратырға барғайнылар, теге риза булған да ҡуйған! Вәлиәхмәт аптыраны, ышанманы, бәхетенән иçерҙе. Туй көнөнә тиклем дә юҡ ине әле ышанысы: кире уйлар тип ҡурҡты. Унан ғүмер буйы ризалыҡ биреүенең сәбәбенә төшөнә алмай аптырап йәшәне, сөнки үҙенә тиклем һоратҡандарын да ишеткәйне: кире һуҡҡан, ә үҙе был турала һорашырға ҡыйманы. Гел генә, Сания мине ярат-

май сыҡты тигән уй менән йәшәне, бәлки, ата-әсәһе өгөтләгәндер, яҡшы ғаилә, егәрле егет, тигәндәрҙер, унан, күрше ауылдың колхоз рәйесе улы һората бит, әгәр сыҡмаһаң, урлайым, тип ҡурҡытыуы ла тәьҫир иткәндер.

Һуғышҡа киткәндә иҫерек башы менән, командир булып, орден алып ҡайтасаҡмын, тип һүҙ бирҙе ҡатынына. Герой булып ҡайта инде, йәнәһе. Ә орденһыҙ, етмәһә, аяғын яралап ҡайтты. Мөхәммәттең «Дан» ордены, Рәйестең «Батырлыҡ өсөн» миҙалы, Тәлғәттең «Ҡыҙыл йондоҙ»о бар, ә Вәликәйҙең хатта «Еңеү өсөн» миҙалы ла юҡ бит, исмаһам. Һуғыш бөткәндең бишенсе йылына ғына военкоматта тапшырҙылар. Ғөмүмән, ҡырҡ беренсе, ҡырҡ икенсе йылдарҙа һуғыш тамамланыуға табан барғандағы һымаҡ йыш бүләкләмәй торғайнылар һалдатты.

Юҡ, ҡатыны уны командир булып та, орден тағып ҡайтмағаны өсөн дә битәрләгәне булманы. Тере ҡайтҡан — Аллаға шөкөр. Бик күптәр был бәхетте күрә алманы. Әммә ул уны бүтән яҡтан битәрләне. «Быҙау кеүек үтә йыуашһың. Эшкинмәгән. Һин анау Сабиттан кәмме ни? Ул бригадир, ә һин тиҙәк киҫәге». Йәки: «Әмирхан һинән ҡайһы яғы менән өҫтөн? Дүрт класс белеме менән идарала ултыра, ә һин етене бөткәнһең — һаман шул тиҙәктә ҡаҙынаһың». Вәлиәхмәт үҙенең бахырлығын белә, шуға өндәшмәй. Өндәшә алмай.

Йылдар үтә торҙо. Һуғыш тамамланыуға 25 йыл тигәндә элекке һалдаттарҙы ветеран тип атай башланылар, миҙалдар бирҙеләр. Был миҙалдарҙы Вәликәй ғүмер эсендә бер кейгән берҙән-бер арыуыраҡ костюмына беркетеп ҡуя һәм уға һуғышта күрһәткән батырлыҡтары өсөн бик һуңлап бүләкләйҙәр һымаҡ тойола ине. Ошо турала уйлай башлаһа, күңеле яҡтыра, яурындары яҙыла. Ниһайәт, йылдар үтә килә ул, ҡатыны әйткәнсә, үҙенең быҙау, ғүмер буйы тиҙәктә ҡаҙынған мәхлүк түгеллеген, һалдат булғанлығын аңланы. Ә уның ер һөргәне, иген иккәне, кешеләргә һөт, икмәк биргәне, ғаиләһен ҡарағаны, балалар үҫтергәне — былары әллә нимә түгел, дөрөҫөрәге, былар уның тормошонда иң мөһиме түгел, ул һуғышты, яуҙа булды — бына уның ирлек ғорурлығы, бына уның шатлыҡ-ҡыуанысы. «Ватан һуғышы»ның беренсе дәрәжәһен тапшырғас, ул үҙен бөтөнләй герой итеп хис итте, ғорурлығы артты.

Миҙалдар, орден беркетелгән ҡуйы зәңгәр төҫтәге пинжәген кейеп ҡунаҡҡа барғанда янында атлаған бисәһе эстән генә ғорурланалыр кеүек тойола, ошо костюмын

кейеп ҡалаға ҡыҙҙарына ла барҙы, йомошо төшөп ауыл Советына йәки колхоз идараһына юлланырға тура килһә лә шул пинжәген кейә торғайны. Ҡай саҡ былай ғына, миҙалдарын йылтыратып, яңы алған эшләпәһен ҡырын кейеп урам буйлап йөрөп килә, йәнәһе, магазинға бара, ә үҙе бер нәмә лә алмай.

Йылдар артынан йылдар үтте, пинжәккә һары миҙалдар ҙа өҫтәлә торҙо, пенсияһын да арттырҙылар. Вәлиәхмәт яйлап ҡартайҙы, сир ҙә йәбеште. Хәҙер инде нисек тә төп миҙалға — еңеүҙең 50 йыллығына бирелә торғанына етеү өсөн тырышты. Етте ҡарт һалдат, дөрөҫөрәге, етә яҙҙы, тик үҙен паралич һуғып ҡуйҙы. Унын бар теләге шул: миҙалды алырға, ҡулға тотоп ҡарарға ла пинжәккә тағып ҡуйырға — унан үлһә лә ярай.

Бына апрель дә үтеп бара, көндәр оҙонайҙы, күк ҡабағы киңәйҙе, тәҙрәнең теге яғында йылыға ҡыуанышҡан турғайҙар сырҡылдашты. Оҙаҡламай май тыуасаҡ... Бөгөн нисәһе икәнен белер өсөн ҡарт тешһеҙ ауыҙындағы телен борғолап ниҙер әйтергә теләне. Аңланы ҡатыны, алтыһы, шәмбе, тине. Бына етеһе лә йәшәлде, һигеҙе етте һәм ҡарт борсола башланы... Туғыҙы иртән, диванда йоҡлаған Сания, ғәҙәте буйынса иртүк торҙо, тышҡа сығып килде, кергәс, ул өйҙә тып-тын булыуына иғтибар итте, ҡартының тын алыуын, хырылдауын ишетмәне. Янына барҙы, яурынына ҡағылды. Ҡарт ҡуҙғалманы, ул үлгәйне, күрәһең, йоҡоһонда үлгән. Ҡарсығы әллә ни борсолмай, ҡайғырмай ғына (ниһайәт, йонсоуҙан ҡотолдо) күршелә йәшәгән ҡыҙына китте.

Кәңәшләшкәндән һуң былай тип хәл иттеләр: бөгөн, байрам көндө, ҡалала йәшәгән уртансы ҡыҙҙарына шылтыратмаҫҡа, ҡарттың үлеүе тураһында бер кемгә лә әйтмәй торорға. Сөнки Сания белә: ҡартының 9 майға тиклем йәшәргә, үҙенә тейешле миҙалын алырға теләге бик ҙур ине. Үлгәнен белһәләр, бирмәйәсәктәр. Ана, Еңеүҙең 40 йыллығына бер нисә көн генә ҡалғас үлгән күршеләре Ғабдуллаға бирмәнеләр бит. Сания үҙҙәре килтереп бирерҙәр тип көттө. Килтермәнеләр. Төш етер алдынан тотто ла үҙе китте ауыл Советына. Ауыл Советы рәйесе, хәҙергесә әйткәндә, ауыл хакимиәте башлығы — ветеринар Әхмәҙулланың улы Салауат. Бикле булып сыҡты хакимиәт. Үҙенең ҡапҡа төбөндәге эскәмйәһендә ултырған Мәүзифа ҡарсыҡ, түрәләр бында юҡ, клубҡа китте, тине. Сания клубҡа атланы. Клубтың төкәтмәһендә, телевизор ултыр-

ған бүлмәлә, ҡыҙҙар ветерандар өсөн өҫтәл әҙерләй. Салауат та шунда.

— Минең ҡартҡа ҡасан миҙал бирәһең? — тине Сания кереү менән.

— Бәй, ул үлгән бит, — тине Салауат тыныс ҡына.

«Белеп тә өлгөргән!» — тип аптыраны ҡарсыҡ, шулай ҙа юғалып ҡалманы.

— Ул бит бөгөн иртәнсәк кенә үлде, таң алдынан, туғыҙына сыҡҡас. Үлер алдынан миҙал да миҙал тип ятты, — тине.

— Ярамай, — тине Салауат тыныс ҡына.

— Нисек ярамай? Ул ике тапҡыр яраланған, ғүмер буйы колхозға бил бөктө, ә һин ярамай... — Санияның былай ҙа көр тауышы был юлы бик талапсан сыҡты.

— Һуңғы йылдарҙа ауылда ун биш ветеран үлде. Уларға ла миҙал тапшырайыҡмы ни? Бөгөнгө көндә иҫән булғандарға ғына бирәбеҙ.

— Әйтеп торам даһа, ул бөгөн үлде, иртәнсәк. Хәле насар ине, ошо миҙалды көтмәһә күптән үлгән булыр ине инде. Шул өмөт кенә йәшәтте.

— Үлгән кешегә нимәгә ул?

— Ә һин уның үҙенән һора.

Салауат ирекһеҙҙән йылмайҙы, башын сайҡаны, бер ни тиклем өндәшмәне, унан теләр-теләмәҫ кенә:

— Ярар, — тип ҡуйҙы. Мөйөштәге шкафҡа барҙы, асып, ҡумта, полиэтилен тоҡсай алды һәм ҡарсыҡҡа тотторҙо, унан көсләп кенә. — Ҡотлайым! — тине.

Өйөнә ҡайтҡас, Сания иң тәүҙә тоҡсайҙа нимә барлығын тикшерҙе. Бер шешә араҡы, колбаса, ҡаплы кәнфит, ниндәйҙер китап. Унан пластмасса эсенән ҡара, һары һыҙыҡтар йүгертелгән колодкаға эленгән һарғылт, яңы илле һумлыҡ тимер аҡсаға оҡшаған миҙалды алды. Тәүҙә ҡартының пинжәгенә беркетеп ҡуйырға ниәтләнгәйне лә, кире уйланы, мәйет янына барып миҙалды уның киң, һалҡын усына һалды.

— Бына миҙалың, — тине ҡарсыҡ һәм тегенең ҡатып өлгөрмәгән усына йомдорҙо. Уға ҡапыл, бер мәлгә генә ҡартының көл төҫөнә ингән, ҡыҫҡа һаҡал-мыйыҡ баҫҡан йөҙө ҡапыл яҡтырып киткәндәй тойолдо.

Ҡартты эскәмйәгә күсереп һалдылар, аҫтындағы тамам һаҫыған матрасты тышҡа сығарып ырғыттылар. Хушлашырға туғандары, күршеләре килде. Киске яҡҡа ике ҡар-

сыҡ — Сәкинә менән Рәбиға кереп тиҫбе тарта-тарта төнө буйы үҙҙәре лә аңламаған доға уҡып сыҡтылар.

Иртәгәһенә ҡаланан уртансы ҡыҙы, кейәүе, ейәнсәре ҡайтты. Ике ҡарт — Искәндәр менән Сәлимйән керҙе. Икеһе лә гонаһҡа батҡан эскеселәр, ошо урамдағы үлгәндәрҙе йыуа, ерләй торған кешеләр. Әле лә ҡыҙмасалар. Иҙәнгә полиэтилен клеенка йәйҙеләр, өҫтөнә эскәмйә ултырттылар, эскәмйәгә сисендереп Вәлиәхмәттең мәйетен һалдылар. Ҡатын-ҡыҙ өйҙән сыҡты.

Йыуып бөтөп кәфенгә төрә башлағас, Искәндәр ҡарт ҡапыл мәйеттең ҡыҫылған усында нимәлер барлығын шәйләне. Бармаҡ араларындағы ярыҡтан һарғылт-ҡыҙыл ниндәйҙер тимер киҫәге ялтырай ине.

— Сания, мәйеттең ҡулында нимәлер бар бит! — тип ҡысҡырҙы Искәндәр.

— Миҙалы, миҙалы, — тип яуапланы ҡарсыҡ соландан. — Бир бында, пинжәгенә ҡаҙап ҡуйайым.

Искәндәр ҡарт мәйеттең бармаҡтарын яҙырға маташып ҡараны, әммә һалҡын бармаҡтарҙы төҙәйтә алманы. Әлбиттә, көс һалып ҡайырырға ла була ине, тик әллә нисек бит. Унан килеп Вәлиәхмәт усынан бүләген ысҡындырғыһы килмәгән дә һымаҡ. Сәлимйән дә булашты, ул да үле йоҙроҡҡа көс ҡулланыуҙан ҡурҡты.

— Сания, ул бирмәй! — тип һөрәнләне Искәндәр, ишек янынараҡ килеп.

— Ярар, улайһа, үҙе менән алһын, — тип яуапланы ҡарсыҡ...

## *Йыназа*

Ғәтиәт — фронттан бронь менән тороп ҡалып, һуғыш йылдарында колхозда рәйеслек итеүсе ҡарт, үлде. Һигеҙенсе тиҫтәне ҡыуһа ла бер йыл элек кенә егеттәрсә төшөрә, тарта, таҙа ҡырынып ҡунаҡҡа йөрөй, мотоциклда елдерә ине әле. Бесәнен дә сапты, утынын да ярҙы. Фетр эшләпәһен ҡырын һалып кейеп йөрөргә лә күп һорамаҫ ине. Үткән ҡыштың февраль бурандарында Зиннәт ҡорҙашына барырға, тигән уй инде лә башына — уныһы Пожар тауы артында йәшәй — уны-быны уйлап тормай, китте лә барҙы. Дөрөҫөн генә әйткәндә, уның әҙерәк

төшөргәһе килә ине. Ә аҡса юҡ, пенсияға бер аҙна ваҡыт бар. Эсмәһәң, күкрәккә йәбешә, йөрәкте бөрә, аяҡ һуҙып ҡуйыуың да ихтимал, йөҙ грамм сәпәнеңме, йөрәк тигәндәре, яңы мотоцикл моторы шикелле, эшләп ала ла китә. Ә Зиннәт шыпырт ҡына көмөшкә ҡыуа, үҙе лә эскеләй.

Ғәтиәт ҡорҙашына һуң ғына барып инде: бер аҙ эстеләр, сәйәсәт, бүтән нәмәләр хаҡында һөйләштеләр, бөгөнгө тәртиптәрен, имандарын тамам юғалтҡан йәштәрҙе һүктеләр һәм төн ауғас Ғәтиәт хушлашып, ҡайтырға сыҡты. Ғәҙәттә ул Зиннәткә тауҙы урап килә торғайны, сөнки тураға текә, үргә атлауы ҡыйын, ә бына ҡайтҡанда тураға ла һуҡтырырға була, атларға бик йыбанһаң, артыңа ултырып шыуып төшөргә лә мөмкин. Әллә көсөн самаланы, әллә күберәк тейәгән, бала-саға шыуып ҡатырған юлдан атлай торғас, тайып китте лә боҙға әйләнгән юлға башы менән төштө лә ҡуйҙы... Ҡарсығы эҙләргә сыҡмаһа, ошо тау итәгендә ҡатыр ҙа ҡуйыр ине. Шул кистән ул түшәккә ятты, күҙгә күренеп бирешә, тире-һөйәккә ҡалғансы йонсоно ла китеп тә барҙы.

Үлер алдынан, кис, Ғәтиәт ҡарсығына: «Баҡсаға сығар әле, донъяны, Урал тауҙарын ҡарағым килә», — тине. Әбейе ҡултыҡлап тышҡа сығарып ултыртҡас, баҡса артында ғына ағып ятҡан йылға, йылғаның теге яҡ ярында зәңгәрләнеп күренгән Урал үркәстәренә, йыуылған шикелле таҙа күк көмбәҙенә оҙаҡ ҡарап ултырҙы. Хәҙер ҡарт быларҙың барыһына ла өмөтһөҙ күҙҙәре менән баға — әйтерһең, иртәнсәк кенә әсәһенең итәгенә йәбешеп ошо йылғаға килгән дә кисенә, алйып бөткән ҡарт рәүешендә донъя менән хушлаша. Тормоштоң аяуһыҙлығы бына ҡайҙа, ә ул донъяның бар ҡыуанысы-шатлыҡтарын, тәмен татып бөтә, тормош тигәндәренең мәғәнәһен дә, серен дә төшөнә алманы. «Бына ул, Урал итәктәре, урман, бесән еҫе килә, — тине ул хәлһеҙ генә тауыш менән, — картуф сәскә ата. Һөйөнөп туймаҫлыҡ матурлыҡ, тәм, йәм бар! Эх, донъя! Ярар, ҡарсыҡ, индер инде, үлергә ятайым!» Диванға ятты ла тыштағы һүҙен дауам иткәндәге ише: «Ғәфү ит, кисер мине, бисә, нисә йылдар йонсоттом. Үтә лә тынғыһыҙ булдым, шул түрәлектә йөрөнөм, иртүк китеп һуң ҡайттым», — тип өҫтәне. Иртәнге яҡҡа үтеп тә китте.

Ҡарт үҙен һөйәктәре таралышып ятмаһын өсөн ағас йәшниккә һалып ерләргә, ҡәберенә рәшәткә яһарға ҡушты. Йыназа ла уҡырға тейешлектәрен өҫтәне. Быныһы инде Аллаға ышаныуҙан, йәки теге донъя барлығынан

түгел, тәртип өсөн. Ауылда музыка менән ерләмәйҙәр, ҡәбере өҫтөндә телмәр һөйләп, мылтыҡтан атып та йонсомаҫтар моғайын, әллә ниндәй ҙур түрә була алманы, шулай икән, әйҙә, атай-олатайҙарса ябай ғына ерләһендәр.

Зиннәт менән Мөбәрәк уның кәүҙәһен йыуып кейендергән арала, туғандары, күршеләре ҡәбер ҡаҙғансы, Ғәтиәттең улы, кейәүе йәшник өсөн таҡталар йышты. Йышыуын-йыштылар ҙа, ә бына ул йәшник тигәне нисегерәк яһалғанын үҙҙәре күҙ алдына килтерә алмай. Мәйеттең буйын үлсәнеләр ҙә аптырашып ҡалдылар. Артабан ни эшләргә? Был урыҫ табуты түгел бит. Мосолмандарса булырға тейеш. Киттеләр ҡарттарҙан кәңәш һорарға. Баҡһаң, йәшник әлеге табут һымаҡ аяҡ яғына тарайтып яһала икән, ҡапҡасы һай була. Яйлап килтереп сығарҙылар тәки, былай арыу ғына яһалды ла шикелле, Ғәтиәт ҡарттың һуңғы йорто — сайыр еҫтәре аңҡып торған матур, ныҡлы табут хасил булды ла ҡуйҙы. Йыназаны Мөбәрәк уҡыны. Ул ауылда төрлө ғөрөф-ғәҙәтте белгән, доғаны, ҡөрьән сүрәләрен хәтерләгән берҙән-бер оло кеше — ул ауыл муллаһы улы булған һәм малай ғына көйө изге китаптарҙы уҡыған. (Ул да үлһә үҙенә кем йыназа сығыр икән һуң?) Йыназанан һуң мәйетте балаҫҡа төрҙөләр ҙә носилкаға һалып зыяратка алып киттеләр, ә йәшник арбала айырым барҙы. Ауылдаштары араһында байтаҡ ғүмер итеп һәм байтаҡ гонаһтар ҡылған Ғәтиәт тегеләрҙең баш өҫтөнән үҙенең әллә ҡасан сереп ятҡан атай-олатайҙары янына китеп бара... Ер йөҙөндәге һуңғы юлы. Ҡапҡа төптәренә уйсан кешеләр сыҡҡан. Сыға алмаған әбей-һәбей тәҙрәгә ҡапланған — тәҙрә быялаһына танауҙарын терәп тышҡа сыҡҡан бала-сағаға: «Ғәтиәт ҡартты ла ерләргә алып киттеләр», — тип аңлатма бирә.

Зыяратта, әҙер ҡәбер янында, носилканы ергә төшөрөп, балаҫты алдылар ҙа мәйетте йәшниккә күсерҙеләр. Унан ололар, ҡәбер ҡаҙыусы ирҙәр, Ғәтиәт ҡарттың туғантыумасалары йәшник тирәләй ултырышты, ҡатын-ҡыҙ, ҡыҙыҡһыныусан бала-саға ситкәрәк баҫты. Икенсе йыназаны башлар алдынан Мөбәрәк ҡулдарын доға ҡылғандағы ише йөҙөнә килтерҙе лә тоноҡ ҡына тауыш менән:

— Мәрхүм арыу кеше инеме? — тип һораны.

Йола шулай һорарға ҡуша. Уның артынан ғәҙәттә: «Арыу ине, тупрағы еңел булһын», — тигән һүҙҙәр әйтелә. Ә был юлы ошо һүҙҙәрҙе ҡарттарҙан берәү ҙә әйтеп

өлгөрмәне, Ғәтиәттең күршеһе Сәғәҙәт һикереп торҙо ла (ҡәбер ҡаҙығанда төшөрөп алғайны):

— Юҡ, эт кеше ине! — тип ҡысҡырып та ебәрҙе.

Был инде ерләү йолаһын тамам боҙоу ине, сөнки мәрхүм хаҡында, етмәһә ерләгәндә, насар һүҙ әйтеү ҡабул ителмәгән. Барыһы ла аптырашта ҡалды. Ололар иҫерек Сәғәҙәттең нилектән былай әйтеүен бик яҡшы белә. Ул һуғыш йылдары осоро малайы булды, хәҙер инде оло йәшкә етеп барған кешенең йөрәгендә ас һәм яланғаслыҡта үткән балалығы иҫке әрнеткес бер яра булып ултыра. Һуғышта һәләк булған атаһын да бөтөнләй хәтерләмәй, әммә әлеге Ғәтиәттең, ул саҡта йәш, көслө ирҙең, төндәрен үҙҙәренә килгәнен һәм әсәһе янына ятҡанын, һаҡ һына шыбырлашыуҙарын, әйләнә-тулғана ҡалтыраныулы тын алыуҙарын хәтеренә ныҡ һеңдергән. Әсәһе Ғәтиәтте ҡыумай, улай ғына ла түгел, төнгөлөккә ишекте бөтөнләй бикләмәй ята торғайны. Нишләйһең, Ғәтиәт колхоз рәйесе, утын, бүтән кәрәк-яраҡ килтерергә ат бирә, келәттән ике килограмм он яҙҙыртып алырға ла була.

Һуңынан, ҡартайғас, эскән саҡтарында Ғәтиәт: «Йөрөнөм тиһәм дә йөрөнөм, ауылға бер үҙем генә ҡалғас ни, бөтә һалдаткалар менән дә йоҡлап сыҡтым», — тип маҡтанырға ярата ине. Барыһы менән дә йоҡлауын йоҡламағандыр, уныһын арттыра, әлбиттә. «Минең атай һуғышта ятып ҡалды, ә был бронгә эләгеп үҙ тиреһен һаҡланы, етмәһә әсәйҙе ҡыйырһытты», — тигән уйҙар Сәғәҙәттең йәнен үртәне, һарыуын ҡайнатты, әммә мәңге бөтмәҫ был күңел яраһы яйлап тыныс үпкәләүгә әүерелә барҙы. Күршеһе күҙенә салынған һайын унның иҫергәнсе эскеһе һәм үлгеһе килә ине.

Сәғәҙәттең һүҙҙәренән һуң Мөбәрәк тә Ғәтиәт хаҡында насар уйланы. 1939 йылда, ауыл Советы рәйесе Ғәтиәт Мөбәрәктең атаһы Юламан мулланы төрмәгә ултыртты. Юламан мулла, дөрөҫөрәге, элекке мулла, ошо зыяратта ураҙанан һуң ауыл ҡарттарын йыя ла ғәйет үткәрергә була. Ә Ғәтиәт тота ла тейешле урындарға ошаҡлай, йәнәһе элекке мулла дингә ҡаршы көрәшкә аяҡ сала, халыҡты Совет власына ҡаршы ҡоторта. Юламан беренсе герман һуғышында полк муллаһы булған, революция башланғас мосолман һалдаттары уны депутат итеп һайлаған. Питерҙа революцияла ҡатнаша, Совет власын ҡабул итә һәм, ауылына әйләнеп ҡайтҡас, ауыл муллаһы вазифаһын баш-

ҡара, сөнки тап мулла булараҡ ауылдаштарына кәрәк була ла инде. Йәштәр өйләнешә — никах уҡырға мулла кәрәк, бала тыуғас уға исем ҡушҡанда ла муллаһыҙ булмай, кеше үлеп барһа, ясин сығыу ҙа уның елкәһендә, үлгәс, йыназа уҡырға ла кәрәк. Утыҙынсы йылда коллективлаштырыу башланғас, Юламан мулла колхозға аттарын, инвентарын тапшыра, тимер менән ябылған ҙур йортон бирә (унда колхоз идараһы урынлаша) һәм ябай колхозсы булып эшләй башлай. Әммә халыҡҡа, бигерәк тә ололарға, мулла кәрәк. Ауыл ҡарттарының үтенесе буйынса зыяратта (мәсетте мосолмандар клуб итә) ғәйет уҡый... Һуғыштан имен-аман ҡайта, кулак итеп һөрөүҙән ҡотола, ә юҡ ҡына өсөн Белорет төрмәһендә серей.

Рамазан да Ғәтиәт тураһында шәп уйҙа түгел ине. Һуғыштың бөтә мәхшәрен үтеп, өс мәртәбә госпиталдә ятып һәм уң аяғына аҡһап, 1945 йылдың яҙында тыуған ауылына ҡайтып төшә Рамазан. Алабута баҫҡан ташландыҡ урамына килеп инһә, апаруҡ үҫкән ике улы янында ике йәштәр самаһындағы йөҙө бысраҡ ҡыҙҙы шәйләгәс, тәүҙә малайҙары янына уйнарға кергән күрше ҡыҙылыр, тип уйланы, әммә ҡартайған, ҡурҡыуынан ағарып киткән ҡатыны муйынына ташланғас, теге ҡыҙ «әсәй» тип ҡысҡырҙы ла ебәрҙе. Рамазан һағайҙы, ҡыҙ ике йәштән дә артмай, өс йәштә булһын, ти, тимәк, Рамазандыҡы түгел, уның барлығы хаҡында исмаһам яҙманы ла бит ҡатыны. «Кемдең ҡыҙы?» — тип һорауға ҡатыны ҡото алынып: «Минең гонаһ... Ғәтиәттән», — тине лә илай-илай иренән ғәфү үтенергә кереште. Хурлыҡҡа түҙә алмай ҡатып ҡалған Рамазан өйөнә кермәне, дөрөҫөрәге, керә алманы, тупһаһына ятып үкһеп-үкһеп иланы ла әсәһе йортона китте. Һуңынан әсәһе килененең был ҡылығын хатҡа яҙмауының сәбәбен һуғышта ла еңел булмағандыр, яралы тәнеңә йөрәк әрнеүҙәре лә өҫтәйһе килмәне шул, тип аңлатты. «Бәлки кисерә алырһың?» — тип тә өҫтәне әсәһе. Юҡ, ғәфү итеlә торған хәл түгел ине был. Бер аҙҙан Магнитогорскиға юлланды, заводтарҙың береһендә вахтер булып эшләне, баракта көн күрҙе, тормошо тураһында уйланды — әсенеүҙәре яйлап тоноҡланғандай итте һәм ул бер йыл тигәндә йортона кире ҡайтты. Юҡ, тулыһынса ғәфү итә алманы алыуын, шулай ҙа хөрт йәшәмәнеләр, ҡатыны тағы ла өс бала табып бирҙе. Барыһын да үҫтерҙе, тәрбиәләне, аяҡҡа баҫтырҙы. Ғәтиәттең ҡыҙын да үҙенекеләрҙән айырманы. Ваҡыты еткәс

кейәүгә лә бирҙе. Ә Ғәтиәткә булған асыуы яйлап һүнә барҙы.

Сәғәҙәттең асыулы һүҙҙәренән һуң барыһы ла тынып ҡалды, барыһы ла иҫтәренә үткәндәрҙе төшөрөп мәрхүм хаҡында насар уйҙарға бирелде. Һәм артабан мәйетте күмеү нисек дауам итер ҙә, Мөбәрәк йыназаны ни рәүешле уҡып бөтөрөп ҡуйыр икән, тип аптырашып ултырғанда ҡырҡтар тирәһендәге урман йығыусы Ғаяздың тауышы яңғыраны.

— Нишләп насар кеше булһын, ти? Һуғыш ваҡытында балаларҙы кем ас үлемдән алып ҡалды? Ул булмаһа, мин дә, бүтәндәр ҙә ҡырылып бөтөр инек. Аслыҡтан шешенеп бөткәйнек инде, үлем хәлендә инем. Һин, Сәғәҙәт, юҡҡа уны хөрт кеше, тиһең. Юҡ, ул һәйбәт кеше ине!

Ауыл ҡарттары Ғаяздың ни хаҡта һөйләгәнен беләләр. Һуғыштың өсөнсө йылында ауыл ныҡ асыҡты. Күп ғаиләләр үҙҙәренең берҙән-бер һыйырҙарын да һуйып ашап бөттө, орлоҡҡа ҡалдырылған ашлыҡ та ҡалманы. Йәйгеһен нисек тә йәшәнеләр, бер-бер артлы үлән, кесерткән, ҡуҙғалаҡ, ҡырағай һуған өлгөрҙө, еләк беште, унан алабута, йәй аҙағында картуф, башаҡтар йыйыу осоро килде, ә бына яҙға табан ҡарт-ҡоро, бала-саға ҡырыла башланы. Колхоз рәйесе Ғәтиәт ошондай ҡарар сығарҙы: кемдең һыйыры бар, кем әлегә бик асыҡмай, шулар ас балаларға өлөш сығарырға тейеш. Ул үҙе ҡатыны менән өй беренсә йөрөп һөт йыйҙы һәм ас балаларға өләште. Шул рәүешле байтаҡ сабыйҙы ас үлемдән һаҡлап ҡалғайнылар. Ҡартайғас, иҫәрлеге сығып, бар һалдаткалар менән дә йоҡлап сыҡтым, тип һөйләргә белде, ә бына һалдат балаларын ҡотҡарғаны хаҡында ләм-мим өндәшмәне.

— Һәйбәт кеше ине! — тип ҡабатланы Рамазан.

— Арыу ине, арыу, — тине башҡалар ҙа, — тупрағы еңел булһын.

Йыназанан һуң мәйет һалынған йәшникте таҫтамалдар менән ҡәбергә төшөрөп ҡапҡасын яптылар, ләхет яғына шыуҙырҙылар ҙа ҡарағай таҡталарҙы ҡырыныраҡ ҡуйып ҡыуыш эшләнеләр, унан кәҫ киҫәктәре, тупраҡ ташланылар, бөткәс, өр-яңы өйөм тирәләй ултырып йәнә доға ҡылдылар, дөрөҫөрәге, Мөбәрәк уҡыны, бүтәндәр ҡулдарын йөҙҙәре янына килтереп, ирендәрен генә ҡыбырлатты. Һуңынан мәрхүмдең ҡатыны Зифа апай ҡарттар менән ҡәбер ҡаҙыусыларға хәйер-таҫтамалдар таратты, ә Мөбәрәккә өҫтәп ун һум аҡса ла тотторҙо.

Зыяраттан кешеләр яй ғына атлап өйҙәренә таралышты. Берәүҙәр ҡайғы-хәсрәткә батып атланы, икенселәр күңелдәрендә ниндәйҙер еңеллек һиҙеп, еңел барған тормоштарына эйәреп йөрөгән бысраҡты алып ташлаған ише ҡотолоу һиҙҙе. Шуныһы, барыһы ла тип әйтерлек, һәр хәлдә күпселеге, мәрхүм барыбер ҙә арыу кеше, һәйбәт кеше ине тигән уй менән атланы, ә Аллаһы тәғәләнең, теге донъяның барлығына ышанған ҡарттар, Ғәтиәттең ошо мәлдә хөкөмдар алдына барып баҫыуын һәм хөкөмсөнөң бизмәнендең бер яғына Ғәтиәттең ер өҫтөндә ҡылған байтаҡ гонаһтарын, икенсе яғына, бәлки, берҙән-бер һәйбәт эшен — һуғыштың өсөнсө йылында балаларҙы ас үлемдән ҡотҡарып ҡалыуын һалалыр ҙа үҙенең ғәҙел хөкөмөн сығаралыр, тип уйланы...

# *Диуана*

Хәҙер, йәшлек йылдарым әллә ҡайҙа алыҫта тороп ҡалғас, июль айының, йылын хәтерләмәйем инде, онотҡанмын, илаҡ бер көнөндә башҡарылған эш, әгәр уны шул һүҙ менән атап булһа, бөгөн килеп миңә төптө бер аҡылһыҙ ҡылыҡ булып күренә. Ул саҡта аяҡтарым көслө һәм етеҙ ине, тыуған ерҙең төрлө һуҡмаҡтарынан, урман, ауыл юлдарынан мине еңел йөрөттө, осороп йөрөттө, кәүҙәмдең бөгөнгө кеүек ауырайғанын, сир-ауырыуҙарын бер ҙә һиҙмәнем. Хәйер, ул саҡта сирҙәр булмағандыр ҙа. Йөрәгем ярһый, тойғоларым, хыял ҡанаттарым кәйелеп оса, шулай ҙа, үҙемә ҡалһа, мине борсоған, тынғыһыҙлаған төп тойғолар — тәмле-татлы тормоштан иҫереү, ҡатын-ҡыҙға булған тартылыу, уның серҙәренә төшөнөргә ынтылыу ине. Юҡ, был мөхәббәт түгел. Мөхәббәт... сәстәрен һары таҫмалар менән үргән күрше ҡыҙының йөҙө бер саҡ һинең өсөн ҡапыл яҡтырып китә лә малай һәм үҫмер тормошонда татлы һағыш, гел генә күрге килеп тороу теләге менән солғау ул. Мөхәббәт... Кавказда үпкә ауырыуы менән сирләгән аҡһыл ҡатынды яратып, үҙеңдең йөрәгеңде шул тиклем яндырыу һәм яңы мөхәббәткә тойғолар ҡалмау ул.

Ямғырлы ул йәйҙә мин ике туған ағайымда ҡунаҡта яттым. Көнитмеш — байрамса, ҡала ығы-зығыһынан һуң

һүлпәнләнеп ҡалған ваҡытты нисек үткәрергә белмәй яфаланам. Картуф баҡсалары артындағы бейек ярҙа ҡармаҡ тотоп ултырыуҙан да мәғәнә юҡ — йылға ташты, буйраны, балыҡ һай урынға, һыу баҫҡан туғай яғына, китте. Көндәр буйы ямғыр ҡойғанда, мин соландағы иҫке диванда, әрһеҙ ауыл себендәренең йонсотоуына саҡ түҙеп, ниндәй ҙә булһа китап уҡып ятам. Көн саҡ ҡына асылыу менән, иҫке штормовканы кейәм дә, ауыл ситенә сығам. Олатайымдар, атайым йөрөгән һуҡмаҡ-юлдарҙан йөрөйөм, ул һуҡмаҡ-юлдарҙан малай, үҫмер саҡта уҡ әллә күпме үттем: әммә нисә тапҡыр атлаһам да, беренсегә аяҡ баҫҡан һымаҡ тойғо кисерәм. Был, күрәһең, шуғалыр, тыуған яғыма һәр ҡайтыуым үҙе бер мөғжизә кеүек күренә, мөғжизә шунда, мин тере, иҫән-һау һәм тыуған еремдә йөрөп ятам, уның һауаһын һулайым, ә бит минең тиҫтерҙәремдең байтағына был бәхет тәтемәне, улар һуғыш ландарында ятып ҡалды, Волга ярынан алып немец йылғаһы Эльбаға тиклем теҙелгән һалдат ҡәберлектәрендә мәңгелек тынлыҡҡа сумды. Һәм ниңәлер ошо һуҡмаҡ-юлдар буйлап гел генә һуңғы тапҡыр атлайым кеүек тойола. Был тойғо һуғышта булыуҙандыр, тим. Татлы тойғо. Ауыр һуғыштар барған саҡта мин, окопник, иртәнсәкте көтөп алам да кискә тиклем йәшәй алыуыма бер ҙә ышанмай торғайным. Бәлки, тере ҡалырмын, тигән йәшерен уй-өмөт менән бергә был яҡты донъяла һуңғы көн, һуңғы сәғәт, хатта һуңғы минут йәшәйем, тигән тойғо ла йөрөнө. Һуңынан, һуғыштан һуң, ошо тойғо, нисектер еңел ауырыу, күңел, рух ауырыуы рәүешендә мине байтаҡ эҙәрлекләне. Утыҙға етеүемә ышанмай инем, уны уҙғас ҡырҡҡа етергә өмөтләнмәнем дә, илле-алтмыш тормошҡа ашмаҫлыҡ хыял ине. Тормош — дошмандың снайпер винтовкаһының сәбенә эләккәндәге йәки баш осонан шыйылдап мина осҡандағы кеүек ҡурҡыныс, ышанысһыҙ һәм нескә, бына-бына емерелеп йәки өҙөлөп китеүе бар. Һәм мин һәр ваҡыт тыуған яҡтарҙан сираттағы отпускыны бөтөрөп киткән саҡта: «Һау булығыҙ, бүтән осрашып булмаҫ инде», — тип хушлаша торғайным. Юҡ, пуля йыҡмаҫ, мина ла теткеләмәҫ, ҡурҡыуым икенсерәк — ҡышты сыға алмам. Йөрәк туҡтар, мейеләге ҡан тамыры шартлар йәки иғтибарһыҙлығым арҡаһында машина тәгәрмәсе аҫтына барып инермен һымаҡ... Ошо сирле, ҡурҡыулы тойғоларым арҡаһында йәшәү йәмен аса-аса, шул уҡ ваҡытта уның менән хушла-

ша-хушлаша тормошто йөрәккә яҡын итеп, һоҡланып ҡабул иттем.

... Йылғаны кистем дә Уралдың ҡырыҫ һырттарына ҡарай атланым. Дымлы туғайҙар, түмгәктәр аша, ялбыр ҡарт ҡайындар янынан тапалған, арба тәгәрмәстәре телгеләгән торфлы юлдан барам. Теүәл генә барыр ерем дә, сығыуымдың маҡсаты ла юҡ, былай ғына, тыуған ерҙе, тупраҡты тойор, ялан-туғайҙарҙың тын алышын тыңлар, ҡоштар һайрауын, һаҙлыҡтағы торналарҙың һағышлы ҡаңғылдашыуын ишетер өсөн китеп барам. Башта һәм күңелдә — байрам кәйефе, күңел йырлай, йөрәк, ҙур ҡыуаныс көткәндәй, талпынып-талпына. Ҡаратал тигән кескәй генә тау йылғаһына килеп еттем, ҡайын араларынан Урал һыртының яҡындағы битләүен күрҙем. Йыраҡтан тауҙар зәңгәр төтөн араһындағы диуар кеүегерәк күренә, ә бынан, яҡындан, бер-береһенең өҫтөнә ҡапланған, бер-береһенә үҫкән таштар һымаҡ. Болоттарға тейеп торған ҡаялар аҫтында — киң ялан. Унда, мин малай саҡта әле, беҙҙең бригада бесән саба торғайны. Шунан бирле ул һыртҡа бер тапҡыр ҙа күтәрелгәнем булманы. Тау битенә килеп етеп, тирә-йүнгә күҙ һалдым, ә бына артабан атларға, текәрәккә күтәрелергә, ҡырмыҫҡа иләүҙәрен туҙҙырып айыуҙар йөрөгән ҡырағай урман араһына инергә яңғыҙым батырсылыҡ итмәнем.

Ауылға икенсе юл менән, йәйге көтөү йөрөгән ерҙәр аша, ферма яғынан, ҡайттым. Ҡай саҡ фермаға, һыйыр һауыусылар янына һуғылғылай ҙа торғайным. Йәй көнө улар гел бында йәшәй, кескәй йорттарҙа, вагондарҙа тора. Нисектер оялып, шул уҡ ваҡытта йылы ҡаршы ала иненәр, сәй эсһәләр өҫтәл янына саҡыралар, һауын сағына тура килһәм инде, көрөшкә тултырып йылы һөт бирәләр. Ул саҡта һуғыштың тол ҡатындары йәш, тығыҙ тәнле, асыҡ йөҙлө ине, хәҙер ҙә ауылда ошо һауынсыларҙың ҡайһы берҙәрен осратам — иртә ҡартайған, фермала эшләү дәүерендә алған сир-сырхауҙан йонсоған яңғыҙ ҡатындар... Улар, йәштәр, миңә оҡшай торғайны, әммә яндарына барып та булмаҫлыҡ ҡайһы бер Мәскәү сибәрҙәре ише кеүек үк түгел. Һауынсыларҙың йөҙ-биттәре елгә ярылған, ҡараштары ябай, ялсан, күп йыуыуҙан төҫөн юғалтҡан халаттарынан, резина итектәренән һыйыр, тиҙәк еҫе килә, улар минән йәш ҡатын-ҡыҙ нәзәкәтлеген йәшерә. Әммә уларҙа төрлө тәмле еҫтәр аңҡытҡан ҡала сибәрҙәрендә булмаған нәмәләр бар, улар — үҙебеҙҙеке, ауылдыҡы, мин

татып ҡарамаған ниндәйҙер ылыҡтырғыс сер, туған башҡорт ҡатын-ҡыҙының сере бар. Иҫләй китһәң, минең тәүге малайлыҡ, үҫмерлек мөхәббәтем үҙебеҙҙең ауыл ҡыҙына булды, мин ауылда үҫергә, йәшәргә һәм ошо ҡыҙҙарҙың береһенә өйләнергә тейеш инем. Яҙмыш мине ҙур ҡалаға илтеп ташламаһа, тап шулай булыр ҙа ине...

Өйләнгән ике көтөүсенән тыш ирҙәр бик һирәк күренгән был төбәктә пәйҙә булыуым бер төрлө ялан тормошон нисектер йәнләндереп ебәрҙе шикелле. Тора-бара уларҙың береһенең иғтибарлыраҡ, серлерәк, оялсаныраҡ, шул уҡ ваҡытта саҡырыулы ҡарашын шәйләнем. Егерме биш — егерме ете йәштәрҙәге алһыу битле, зәңгәр күҙле ҡатын ине был. Таҙа тештәре тип-тигеҙ, көлгәндә йөҙөн асып ебәрә. Уның тураһында ҡайһы бер хәбәрҙәр ҙә ишеткәйнем. Ирһеҙ икән, өс балаһы бар, өсөһө — өс ирҙән. Һуғыштан һуңғы йылдарҙағы ауылда был ҡылыҡ әллә ни ғәйепләнмәй ҙә ине. Ҡатын-ҡыҙ күп, ә ирҙәр юҡ хисабында. Уның серле, бер кемдән дә өркмәй ҡараған ҡарашын тотоп, үҙемдең дә уға битараф түгеллегемде аңланым. Отпускылағы буйҙаҡ егеткә ирһеҙ сибәр ҡатын артынан ниңә йүгереп алмаҫҡа? Өйләнеү тураһындағы уй башҡа ла инеп сыҡҡаны юҡ. Төрлө ирҙән өс бала тапҡан ҡатын ҡалала дөйөм ятаҡта йәшәгән егеткә ниндәйҙер етди өмөт бағлар өсөн ул ҡәҙәре лә башһыҙ түгелдер, тип фекер йөрөттөм. Ул, уҙа барһа, ауылға ҡайт, тип дәғүә белдерә ала, ә мин унан да ҙурыраҡ сәбәптәр арҡаһында ауыр крәҫтиән хеҙмәтенә ҡайтаһым юҡ икәнен бик яҡшы беләм.

Көн артынан көн үтте, отпускының аҙағы ла яҡынлашты. Мин һаман фермаға һуғылып йөрөйөм, һауынсылар сәйгә ултырта, гәпләшәбеҙ, ҡатынға ҡарайым, әммә икәүҙән-икәү ҡалырға һис форсат сыҡмай ҙа ҡуя. Иртәгә юлға сығам тигән көндө йәнә фермаға килдем, ни булһа ла булыр, тәүәккәлләргә кәрәк, тип уйланым да Закира янына ултырҙым. Биленән ҡосаҡланым. Һикелә ултырған көйө ул әллә башалтай, әллә кофта бәйләй ине. Ҡулды этмәне, башын саҡ ҡына эйеп бәйләүен белде. Бер аҙҙан ҡапыл ғына ҡалҡынды ла:

— Утын әҙерләйем әле, бөгөн минең сират, — тип урманға сығып та китте.

Мин ултырып ҡалдым, шунан, бәй, уға ярҙамлашырға кәрәктер, унан килеп икәүҙән-икәү ҡалырға ниндәй уңайлы мәл, тип уйлап артынан эйәрҙем. Ерек, муйыл ағастары

араһында ҡоро-һары йыйып, уны асыҡлыҡҡа сығарҙыҡ. Нишләптер һүҙ ялғанманы. Ферманан байтаҡ ситкәрәк китергә лә өлгөрҙөк, янда бер кем дә юҡ, бер кем дә тиҙ генә килеп етә алмай. Мин ҡапыл, ниндәйҙер йәшерен, үҙем дә хужа булмаған көскә буйһоноп, Закираны ҡосаҡланым да үбә башланым. Ул үҙе үпмәне, күрәһең, үбешә белмәй ине, быуындары йомшарҙы, тын алышы йышайҙы. Тәнем буйлап эҫе ҡан йүгерҙе, баш томаланды, түҙемһеҙләнеп талапсанырак ҡылана башлағас, ҡатын мине йомшаҡ ҡына этте лә ҡарлыҡҡан тауыш менән:

— Бында түгел. Иртәгә мин бесән сабырға барам, шунда кил, — тине.

— Ҡайҙа? — тинем мин, тулҡынланыуҙан фекерләү-уйлау ҡеүәһе лә, иртәгә китергә тейешлегем дә онотолғайны.

— Ҡараталда, — тип яуапланы ҡатын, — йылғаны сыҡҡас, юлдан уңға ҡайырылаһың...

Башҡа әллә ниндәй уй-хыялдар, күҙ алдына әллә ниндәй күренештәр килгәйне, иртәгә китәсәгем иҫемә төшкәс (поезға билет алынған), айнып киттем. Һыуға ташланған торомбаш кеүек ҡапыл һыуындым, үҙемде алданған, бәхетһеҙ бер бәндә итеп тойҙом. Ҡалырға һис ярамай. Отпуск бөттө, эшкә өлгөрөргә кәрәк, бөтәһенә лә ҡул һелтәп, бер көнгә ҡалырға ла мөмкинлек юҡ — яңы билетҡа аҡса ҡайҙа? Унан килеп кеҫәләге билетты тапшырыу өсөн дә егерме биш саҡрымда ятҡан станцияға барырға кәрәк буласаҡ. Ул саҡта автобустар йөрөмәй ине, кеше осраҡлы тап булған машинаға эләгеп китә, ә уға тулы бер көн кәрәк.

— Иртәгә китәм шул, — тинем мин ҡатынға.

— Ә һин китмә. Иртәнән һуң китерһең, — тине ул бераҙыҡ тын торғас.

— Булмай.

— Ярай, булмағас булмай инде, нишләйһең...

Тормошта һирәк була торған ялҡынлы мөхәббәтте татыу мөмкинлеген башымдан сығарып ташлап, һыуындым, ҡатынды уйымдан сығарырға, ярһыу теләкте ауыҙлыҡларға тырыштым. Йыйған ҡоро-һарыны фермаға алып барыштым да, һалҡын ғына хушлашып, ауыл яғына атланым. Иртәнсәк юлға әҙерләнеү мәшәҡәте, ығы-зығы арҡаһында ул ҡатын тураһында бигүк уйланмай ҙа инем инде.

Поезд дүртенсе яртыла китә. Ҡалаға эше буйынса, туғандарына, балаларына йәки минең һымаҡ отпускылағылар станцияға тиклем нисек бара ала — шулай бара,

күберәген осраҡлы машинаға эләгә. Ә машиналар үтә һирәк йөрөй, оло юлға сыҡҡан кеше сәғәттәр буйы көтә лә ҡуя, йыш ҡына көтөп ала алмай. Еңел машина тураһында әйтеп тораһы ла юҡ. Күберәк мотоцикл йөрөй, әммә улар осраҡлы, ят кешене бик ултыртып та бармай. Үтеүсе машиналарға, ғәҙәттә, йөк тейәлгән була йәки кабинаһында кеше ултыра. Шуға күрә юлсылар ауылдан иртүк сыға, бер нисә сәғәт буйы киләһе поезды көтә — һуңлап ҡуйыуҙан ҡурҡып, ауылда дерелләп йөрөгәнсе станция эскәмйәһендә дүрт-биш сәғәт көтөүе ышаныслыраҡ.

Иртәнге сәйҙе эсеп, еңгәмдең күстәнәстәре — ҡарағат вареньеһы, ҡаймаҡ, ярты икмәк һалынған тоҡсайҙы арҡаға аҫып, туғандар менән хушлаштым да оло юлға сыҡтым. Ауылдан киткән һайын тыуған-үҫкән еремә ҙур иғтибар менән бағам, мәңгелеккә хушлашам. Һау булығыҙ, Урал тауҙары, туғай-яландар, юл-һуҡмаҡтар. Һау бул, Закира, һин бөгөн Ҡаратауда бер үҙең бесән сабасаҡһың, янына килә алмайым. Башҡа күрә алырмынмы икән һине, юҡмы?

Был юлы уңдым — ярты сәғәт торғандан һуң мине бензин ташыусы машина ултыртып алды, ҡырҡ тингә рәхәтләнеп район ауылына тиклем кабинала килдем, унан станцияға ҡәҙәр ике саҡрымды йәйәү атланым. Поезға биш сәғәткә яҡын ваҡыт бар ине. Ошо биш сәғәтте тыныс ҡына көтөргә ниәтләнеп, рәшәткә буйындағы эскәмйәгә барып ултырҙым. Ҡапыл ғына күңелде ниндәйҙер һағыш, борсолоу ялмап алды, вокзал — мине ҡалала көткән һалҡын, яңғыҙаҡ тормошомдоң башы ине. Таш ҡәлғәләр араһында ҡағылып-һуғылып оҙаҡ йөрөһәң, битараф кеше араһында буталһаң, ошо ят тормошҡа тамам күнегәһең икән, үҙеңдә хатта һыуҙағы балыҡ һымаҡ тоя башлайһың. Әммә ауылдың йылы ҡосағында ирегән күңел менән, ябай, иғтибарлы кешеләрҙең тәбиғи мөнәсәбәтенән һуң ҡала тормошона ҡайтыуҙа бер ниндәй ҙә шатлыҡ юҡ, киреһенсә, унда ниндәйҙер бәлә-ҡаза көтөп торған һымаҡ. Уй менән мин һаман да ауылда, ауылдың тирә-яғындағы ялан-туғайҙарҙа. Уларҙы өҫтән, хыялым тыуҙырған тау башынан ҡарайым һымаҡ. Ана ауыл, ағайҙың йорто, ихатаһы, унда мин юҡ инде, мин киттем: йылға, йылға аша кисеү, кисеүҙе сыҡҡас, юл туғай аша борғалана, һаҙлыҡтар эргәһенән уҙа, ҡайындар араһына инеп йәшенә, Урал һырттарына табан ҡырағай урманға кереп юғала, тегендә, Ҡаратауҙың һул ярында, юлдан уңда ҙур ялан, ялан уртаһында яңғыҙ ҡатын бесән саба... Бөгөн китмәһәм, алдан алынған билет кеҫәлә

ятмаһа, мин дә шунда булыр инем... Был уйҙарҙан һуң күңел тамам болоҡһоп, ҡара хәсрәт ябырылды, ташлап киткән, эйе, эйе, ысын мәғәнәһендә ташлап киткән ҡатынды йәлләп, башыма хәтәр уй-теләк килде лә мин, ҡабаланып, сәғәткә ҡараным. Сәғәт теүәл ун бер ине. Оло юлға сыҡһам, ун икегә тиклем машина көтәм, берҙәргә ауылға ҡайтып етәм, йүгерһәм, икеләрҙә яланда булам, унда ярты сәғәт, сәғәт ярым ваҡыт ҡала. Поезға килеп өлгөрә алам, тимәк. Был аҡылһыҙ ниәткә ҡаршы төштөм, аҡылды алға ҡуйып фекерләргә тырыштым — бер бисә өсөн ниңә баш юғалтып кире ауылға сабырға һәм поезға һуңларға һуң әле? Әммә тыйып торғоһоҙ йәшлек дәрте, ҡатынға, уның тәненә булған ынтылыш, ҡыҙыҡһыныу, мөхәббәт ләззәтен йәнә бер татып ҡарау теләге аҡылдан көслөрәк булып сыҡты — һикереп тороп, тоҡсайҙы эләктерҙем дә оло юл яғына йүгерҙем. Оло юл ике саҡрым тирәһе, ауыл осонда. Унда сыҡҡас, үҙемдең ауыл яғына ҡарай атланым, саҡрым самаһы ер үттем. Машина-фәлән һаман күренмәне. Йәйләп һыуына ла төштөм шикелле, әгәр транспорт булмаһа, ауылға биш сәғәт атларға кәрәк. Ҡараталға кискә генә барып етәсәкмен, тип уйлап кире боролорға йыйынып бөткәйнем генә, арттан мотоцикл тырылдағаны ишетелде. Юл уртаһына сығып баҫтым да ике ҡулды ла өҫкә күтәрҙем. Өҫтөнә яһалма күндән тегелгән куртка, башына фуражка кейгән ир ине был. Елдереп үтеп китте лә, илле метрлап уҙғас, туҡтаны. Үҙ башҡортом, әммә беҙҙең ауылдан түгел. Уныһы һәйбәт, юғиһә, ағайҙы күреп, энекәшеңде ултыртып алып ҡайттым, тиһә эш харап. Янына йүгереп барҙым да: «Ураҙға тиклем ал әле», — тинем. Ауылға етәрәк туҡтарға ҡуштым. Юл, ауылды урап, ҡапыл ғына һулға, совхоз яғына тартыла, ары китһәм, ауыл янындағы тыҡрыҡта, тап ағай йорто эргәһендә төшөргә тура киләсәк, йылғаға ла ауыл аша барырға мәжбүр буласаҡмын. Ә минең, билдәле, яңынан унда күренге килмәй. Ауыл осона ярты саҡрым самаһы ҡалғас, мотоциклдан төштөм, рәхмәтемде ҡабалан ғына әйттем дә йылға яғына йүгерҙем. Кисеүҙән сыҡтым, унан урман юлы буйлап киттем. Әммә был юл үрге ауылдың яландарына илтә, йәғни икенсе бригада ерҙәре. Шунлыҡтан Ҡараталға илтеүсе икенсе юлға төшөү өсөн һулға ҡайырылдым, йәнәһе, тураға сығам, юлды ҡыҫҡартам. Еүештән, түңгәктәр өҫтөнән, һаҙлыҡтан, билгә еткән бейек үләндәр араһынан йүгерҙем, бер нисә мәртәбә һөрлөгөп йығылдым, элек белмәгән-күр-

мәгән ниндәйҙер һаҙлыҡ ҡатыш батҡаҡлы шишмәне кистем. Унан ҡуйы ваҡ ҡайынлыҡ китте, ҡырағай, хатта ташландыҡ урындар башланды – аҡылын юйған кеше генә йөрөмәһә, бынан минән башҡа йән эйәһе, моғайын, үтмәгәндер. Түңгәкле яланға килеп сыҡтым, ботинкаларыма күптән һыу тулып, атлаған һайын шарпылдап бер була, ә туҡтап, түгеп алырға ваҡыт юҡ. Ашығам, йүгерәм, ҡатын менән үҙемдең араны ҡыҫҡартам, тормошомдан йолҡонған ошо ике-өс сәғәт эсендә йәшлегемдең тетрәнерлек һирәк бер ваҡиғаһын кисерер өсөн ваҡыт менән көрәшәм. Ошоға тиклем тыуған яғымдың төрлө ерҙәрендә, тыуған еремдең төрлө юлдарында йөрөгәнемдә бер ҡасан да былай өтәләнгәнемде, баш юғалтып ашыҡҡанымды һис иҫләмәйем, киреһенсә, ошо туғай-яландарҙы, сәскәләрҙе, ҡалҡыулыҡтарҙы, еҫтәрҙе, ҡырҙарҙың тауыштарын ишетер-кисерер, үҙемә һеңдерер-туплар өсөн уйланып, яйлап йөрөй торғайным. Ә хәҙер килеп ошо яландар, ваҡ ҡайынлыҡтар, һаҙлыҡлы уйһыу ерҙәргә, урау-урау, бормалы-бормалы юлдарға нисектер ят күҙҙәр менән ҡарайым, улар миңә дошман, ҡатынға барыу юлында ҡаршылыҡ, кәртә кеүек, ҡатынға булған түҙеп торғоһоҙ теләктән, ҡыҙышыуҙан тирә-йүндең матурлығын күрерлек хәлдә түгелмен. Урал һыртына, Ҡараталға илтә торған ауыл юлына килеп еттем, ниһайәт. Сәғәткә күҙ һалдым – беренсе ярты. Бынан Ҡараталға тиклем биш саҡрым тирәһе. Ҡыҙыу ғына атлаһаң, бер сәғәтлек юл. Йүгерһәң, ярты сәғәттә лә барып етергә була. Тураға шулай. Әммә юл һаҙлыҡтарҙы, Пушков карьерҙарын урап үтә, Ҡыҙыл таштар янынан ғына Ҡаратал йүнәлешенә борола. Мин йүгерәм. Юл туғайҙар, ваҡ ҡайынлыҡтар менән уратылған үрләскә китте. Бынан, үрләстән, зәңгәрһыу томан аша Ҡараталдың ыҙан-сиктәре асыҡ шәйләнә. Унда туғай, туғайҙа ҡатын бесән саба. Уның күндәм ирендәрен хәтерләүҙән, янына барып етергә бер нисә саҡрым ғына ҡалғанын самалауҙан йөрәк ярһып тибергә кереште. Хәйер, ул станциянан сыҡҡаны бирле тынысланa алғаны юҡ. Сәғәткә ҡарай-ҡарай йүгерәм. Тиҙерәк, тиҙерәк! Ҡалҡыулыҡты артылғас, дымлы туғай китте, һулда, күпмелер аралыҡта – ваҡ, сибек һаҙлыҡ ҡайындары. Ҡапыл асыҡ йәшеллектә аяҡ эҙҙәре күреп ҡалдым. Кемдер үләндәрҙе йыға-йыға әлеге ҡайынлыҡҡа атлаған. Ә ул ҡайындар араһында – һаҙлыҡ. Унан үтеп булырмы икән һуң? Әгәр үтеп булһа, әгәр ошо эҙ һаҙлыҡ аша сығарһа, ферманан Ҡараталға алып бара торған юлға

тураға төшөргә мөмкин, шулайтып араны байтаҡҡа ҡыҫҡартырға була. Кемдер үткәс, мин дә үтә алмаммы икән ни, тип уйлайым үҙем. Һәм әлеге эҙгә төшәм дә юлымды дауам итәм. Тиҙерәк, тиҙерәк! Ана, ҡайындар араһында, ҡалҡыулыҡ түбәһе лә шәйләнә, ул ҡалҡыулыҡтың итәгендә сусҡа фермаһы, арыраҡ, һул ҡулда, һыйыр фермаһы, унан юл туп-тура тауға тартыла. Ҡайындарға яҡын түңгәктәр китте, араларында — һыу. Түңгәктәр араһында теге эҙ күренмәй ҙә башланы, килә-килә бөтөнләй юғалды ла. Ул кеше ситкәрәк тайпылманымы икән? Бәлки, кире лә боролғандыр? Мин һаман эскә керәм, кире боролоу хаҡындағы уй башҡа инеп тә сыҡмай, сөнки, юлдан былай боролоп, әллә күпме ваҡыт юғалттым, ә боролһам кире юлға ун минутты әрәм итәсәкмен. Сәғәткә күҙ һалам — икенсе биш минут. Ҡайындар араһына килеп керҙем, түбәләре бынан күренмәй башлаған ҡалҡыулыҡ яғына йүнәлеш алдым. Аяҡтар торф шыйыҡлығына бата, бейек түңгәктәрҙе, ваҡ ҡайындарҙы урап үтәм, алға барған һайын, нығыраҡ батам. Ҡайындар һирәгәйҙе — сибек ағастар ҡуҙғалған, бәүелгән түмгәктәрҙә генә ултыра, түмгәктәр араһында — һоро һыу. Тиҙҙән һыу тубыҡҡа етте. Күрән, торф, һаҙҙа сереп ятҡан ағастар араһынан эләгә-йығыла атлайым. Алдағы асыҡлыҡтағы һирәк ҡайындарға тиклем илле аҙым самаһы ара бар. Һис бер икеләнеүһеҙ, станциянан уҡ этәреп килтергән аҡылһыҙ бер көскә буйһоноп, һаҙлыҡҡа ҡарай барам. Шөрләү, икеләнеү юҡ, тик һаҙлыҡты ғына күрәм һәм һуҡыр кеше һымаҡ барам да барам. Алда — туғай, туғайҙа ҡатын бесән саба, бәлки, ул мине уйлайҙыр, мөхәббәттең ләззәтле минуттарын көтәлер. Мин, әйтерһең дә, ҡапҡан барлығын һиҙгән, яуыз ниәтле ошо тимер ҡулайламаның көсөн бик яҡшы белгән, әммә аслыҡ этәргән алдатҡыс емгә ынтылған йыртҡыс — ас ҡорһаҡ талабын ҡәнәғәтләндереү теләге менән ошо емгә китеп барам...

Һыу билгә етте. Һаҙлыҡ төбө йомшаҡ, ботинкаларымды уба. Тирә-яғым — һоро һыу ҙа, серек үлән бутҡаһы. Упҡан аяҡтарҙы саҡ һурып алып, йәнә бер нисә аҙым яһаным. Бер аҙҙан һыу түшкә етте, шулай ҙа тыныслыҡты юғалтмайым әле, сөнки һаҙлыҡтың уртаһына етә яҙғайным, теге яғы, моғайын да, һайығыуға китер, тип уйлайым. Шулай тип уйлауым булды — батып та киттем, арҡамдағы тоҡсай йөҙөп китте, көрән үлән бутҡаһы эйәк аҫтына етте. Ярай әле документтарҙы, билет, бер нисә һум аҡсаны,

ямғырға элэгэ-нитэ ҡалһам тип, полиэтиленға урарға баш еткэйне. Мин йөҙгэндэге һымаҡ, һыуҙы ҡулдарым менэн ишэ, аяҡ остарына баҫып ҡалҡына, уларҙы йышыраҡ алмаштыра башланым. Хисаплауымса, ана тегендэ, төпһэлэргэ йэбешкэн зэғиф ҡайындар тирэһендэ, һаҙлыҡтың төбө ҡатыланырға тейеш, эммэ шул мэл ҡапыл ағастар араһынан урман башланған ергэ тиклем киң йэйелгэн асыҡ һаҙлыҡты шэйлэнем, тимэк, мин эле һаҙлыҡтың бер ситендэ генэ булып сығам... Шулай ҙа, боролайым, тигэн уй юҡ, мин бит ҡатынға китеп барам, был — тормошомдоң ошо мэлендэ иң ҙур маҡсатым, артҡа боролоу хыянатҡа тиң, кире китһэм, тормошомдоң бөтэ мэғэнэһе юғалыр һымаҡ. Тимэк, алға, тик алға ғына барырға, бынау ҙур һаҙлыҡты үтергэ! Әгэр ул бөтөнлэй үтеп булмаҫлыҡ булһа? Әгэр батһам? Фронтта, Карель ҡултығында, бер саҡ һаҙлыҡ аша дошман пулеметына ҡаршы барҙым һэм үлмэнем бит. Ә бында батып ятаммы? Һалдат кеүек һэр саҡ үлем көтөп йэшэһэм дэ, һаҙлыҡ эсендэ үлгем килмэй. Юҡ, үлем үҙе ҡурҡыныс та түгел, э билдэһеҙлек ҡурҡыныс. Бынау һоро бутҡала юғалһам, ҡайҙа булғанды бер кем дэ белмэйэсэк. Мин киттем, туғандар менэн хушлаштым, улар өсөн Мэскэүҙэмен, э унда бер ҡасан да барып етэ алмайым. Унда ла түгел, бында ла түгел, бер ҡайҙа ла юҡ, шул уҡ ваҡытта ауылдан ике-өс саҡрымдағы һаҙлыҡ эсендэ сереп ятам...

Күңелдэ икелэнеү ералды, шөрлэтэ башланы. Үҙем, эллэ боролайым да ҡуйайыммы икэн, тип уйланам, үҙем сихырланған кеүек ҙур һаҙлыҡ яғына атлауымды белэм. Йөҙөп тигэндэй барыуҙан арыным да, бер аҙ хэл алырға булып, туҡтаным. Йөрэктең дарҫлап типкэнен ишеттем. Тыныслан, тыныслан, паникаға бирелмэ, тим үҙемэ, ҡабаланмаҫҡа, аҡыл менэн эш итергэ кэрэк. Артҡа боролоу юҡ. Күпме кил дэ кире кит, имеш. Мин күккэ ҡараным. Түбэндэн генэ һоро, ауыр болоттар йөҙэ. Һаҙлыҡ өҫтөнэн ҡарға осоп бара. Минең тапҡырға еткэс, ул ҡара суҡышын тегелэй-былай һелтэп алды, эйтерһең, үкенесле итеп баш сайҡаны, унан ҡысҡырҙы. Ҡарға мине, һаҙға батып барыусыны, күрҙе лэ: «Ай-ай-ай, ҡайҙа килеп кергэн был диуана? Башы юҡтыр был бэндэнең!» — тине. Ҡош минең хыял-фантазиямды уятып ебэрҙе һэм үҙемде ҡарға бейеклегенэн күрҙем: быға тиклем кеше аяғы баҫмаған һаҙ эсендэ меҫкен бер кеше тора. Әгэр уны кеше тип атап булһа. Тирэ-яғында, бер нисэ саҡрым алыҫлыҡта, бер йэн эйэһе

юҡ. Тынлыҡ, һыу төбөнән сыҡҡан ҡыуыҡтарҙың шартлауынан, меҫкендең йөрәк тибеүенән башҡа бер тауыш та ишетелмәй...

Ҡапыл, бер минут туҡтап-икеләнеп торған арала, яҡында ғына тере тауыш ишеттем! Юҡ, кешенеке түгел. Ҡолаҡ һалам — сусҡа хорҡолдауына оҡшаған. Эйе шул, ана, ҙур һаҙлыҡ яғында, һирәк ҡайындар эргәһендә. Имәнес, ҙур, зәңгәр-һоро төҫтә, эсе-аяҡтары — һыу эсендә. Ҡайҙан килеп сыҡҡан был хәшәрәт? Алдағы ҙур һаҙлыҡ аша килгәндер, ахыры. Шундай ҙур сусҡа батмай үткәс, моғайын, мин дә үтә алырмын. Дәртләнеп китеп, бер нисә ынтылыш яһаным, аяҡ аҫтымда һаҙлыҡ төбөн тойҙом һәм оҙаҡламай ҡайындар араһындағы йомшаҡ төпһәләргә килеп сыҡтым. Мине шәйләп, сусҡа тертләп китте, күрәһең, ҡурҡты, шунан асыуланып ҡараны, әйтерһең: «Мин — мин инде, ә һин, кеше башың менән, нишләп бында йөрөйһөң?» — тип һораны. Сусҡаны яратмайым, минең өсөн улар һыйыр йәки кәзә һымаҡ йорт хайуаны түгел. Ауылда уҡытыусы, сөргөн һөрөлгән татар Артемовтан башҡа сусҡа аҫраусы кеше юҡ. Был хайуан үҙенең томшоғо, ярым һуҡыр күҙҙәре, һалпыш ҡолаҡтары, ҡыҫҡа, кәкре ҡойроғо менән гел генә әкиәт китаптарына төшөрөлгән шайтандарҙы хәтерләтә ине. Ә был сусҡаға яратып, рәхмәт уҡып ҡараным — ул булмаһа, нишләр инем икән? Моғайын, батыр инем. Ҡайындар аръяғында урыны-урыны менән һаҙлыҡлы туғай ине, бынан барыуы әллә ни ҡыйын түгел, тик аяҡ кейемен генә ҡара шыйыҡлыҡ һаман уба. Мин әлеге туғайҙы йүгереп үттем, ҡыуаҡлыҡтарҙы артта ҡалдырҙым, ҡалҡыулыҡҡа күтәрелдем (сусҡа фермаһы ошо ҡалҡыулыҡ битендә). Аяҡтан башҡа тиклем һыумын, бөтә еремде һаҙлыҡ үләне, күрән, сүп-сар һырыған. Кейемде һығып, ҡаҡҡылап кейгәнсе сәғәт икенсе ярты ла булып китте. Ары йүгерҙем. Был яҡҡа ер ҡоро ине. Ниһайәт, Ҡараталға илтеүсе юлға төштөм. Йөрәк дарҫлап тибә, оҙаҡламай, бына-бына Закира менән осрашасаҡмын. Ҡарағайлыҡты үттем, тиҙҙән яманһыу Урал һырттары ла шәйләнде. Кемдеңдер бесәнлеген үттем — сабылған үләнде әйләндергәндәр; йылғаға еттем. Таҙа урман һыуы йылғыр аға, һары таштар өҫтөнән һикерә. Ҡулды, битте йыуҙым, өҫтө һыпырғылап, туйғансы һыу эстем дә ары йүгерҙем. Сапҡан ерем юлдың уң яғында, тигәйне бит әле. Урман эсенә индем, ағастар араһынан йүгерҙем, кескәй генә бер яланды үттем, унан йәнә ҡайынлыҡҡа инеп кит-

тем, уны ла үткәс, туғайҙың теге яғында... ҡатынды күрҙем. Ул, был яҡҡа арҡаһын ҡуйып, бесән саба ине. Яҡынайғас, аяҡ тауыштарымды ишетте лә минең яҡҡа боролдо. Ул ҡыҫҡа еңле ситса күлдәк кейгәйне, күлдәк аҫтынан зәңгәр спорт салбары — уларҙы ҡатын-ҡыҙ яланға серәкәй, күгәүен йонсотмаһын өсөн кейә. Йөҙө яна, аҡ яулығы ситтәренән ҡара сәстәре туҙышып яңаҡтарына төшкән. Ул миңә тыныс ҡына итеп ҡарап тора.

Мин уның янына барҙым.

— Китмәнеңме ни? — тип һораны ул.

— Юҡ... киттем, станцияға барҙым да кире әйләндем. Саҡ һаҙлыҡҡа батманым бына.

— Үәт диуана... — ҡатындың йөҙө яҙылды, аптырауы бөтөп, ирен ситтәренә йылмайыу ҡунды.

Мин ҡатынды ҡосаҡланым, тоҙло ирендәренән, битенән үптем.

— Туҡта...

Ул миңә бер ниндәй ҡаршылыҡһыҙ бирелде, әйтерһең дә, беҙ — ир менән ҡатын һәм беҙҙең яратышыу көндәлек ғәҙәти эш. Ваҡыт онотолдо, мин ваҡыттың аяуһыҙ хәрәкәтенән ысҡындым да үҙ тәнемдең, үҙ булмышымдың иң тәрән, бәлки, иң тәбиғи ләззәтенә, рәхәтлегенә бирелдем. Ярай килгәнмен, юл этлеге онотолор, ә был онотолмаҫ. Ҡатындың ике имсәге араһына дым йыйылды, зәңгәр күҙҙәре йә миңә ҡарай, йә ситкә, күккә баға. Бер арала мин дә ситкә ҡарағайным, үҙебеҙҙең ауыл ҡарты Шәймәрҙәнде күрҙем. Ул, яурынына салғы һалып, ҡыуаҡлыҡтар араһынан килеп сыҡты ла, беҙҙе шәйләп, туҡтаны, оҙаҡ итеп беҙгә текәлеп торҙо. Ҡарттың ике йәш кешенең үләндәр араһында һөйөшкәнен ҡарап тороуында тулҡынландырғыс ғәҙәти булмаған ниндәйҙер сер бар ине. Ҡыҙығын тапҡас, ҡараһын, тип уйланым мин, уның тороуы миңә хатта көс-ғәйрәт өҫтәне, ләззәтте тағы ла нығыраҡ тойорға булышлыҡ итте. Ҡарт үҙ юлы менән китте, мин тынысландым, сәғәткә күҙ һалдым — өсөнсө биш минут.

— Ярай, мин йүгерҙем. Поезға өлгөрөргә кәрәк, — тинем ҡатынға. — Һау бул! — Уны ҡосаҡлап үптем — элекке тулҡынланыу, әҫәрләнеү үткәйне инде. — Ауылдың үрге осона нисек сығырға?

— Ҡыҙыл таштарға бар, ана, теге ҡарағайҙарҙы үткәс, боролма булыр, шул туп-тура юлға сығара.

— Ярай, киттем.

— Ысынлап та диуана икәнһең, — ҡатын йылмайҙы.

Тоҡсайҙы арҡаға ташланым да юлға төштөм. Ҡарағайҙарҙы уҙғас, тапалған һәм киңерәк бер юл тураға китә, ә һирәгерәк йөрөлгәне, унан айырылып, һулға ҡайырыла. Мин шунан киттем. Сәғәткә башҡа ҡарамайым — телдәренең өскә етеүен күреүҙән ҡурҡам. Ҡатын тураһында хәҙер тыныс уйлайым, ниндәйҙер еңел һағыш менән иҫкә төшөрәм, минең өсөн ул — үткән заман, алдағы көндәремдең йылы хәтирәһе. Хәҙер минең башта юл, тик юл ғына, бөтә булмышым, йәнем, тәнем менән шул хаҡта ғына уйлайым, ваҡытты ҡыҫҡартырға, уҙырға, хатта алдарға маташам — нисек тә поезға өлгөрөргә кәрәк. Яңынан баяғы ҡалҡыулыҡтар, ҡайынлыҡтар, ялан-туғайҙар... Килгәндәге кеүек матурлыҡты был юлы ла күрмәйем, улар — минең ваҡытты алыусы үле нәмәләр. Килә-килә арыта башланы, шәп йүгереп булмай, күберәк атлайым хәҙер, үҙемә был ерҙәрҙән әллә ҡасандан, бер нисә йыл буйы килгәнмен кеүек тойола башлай, ә поезд әллә ҡасан киткәндер ҙә, минең ошо йүгереүем шпалдар буйлап уны ҡыуып етергә маташыуҙыр һымаҡ. Ниһайәт, ҡаты юлға аяҡ баҫам. Бынан йүгереү еңел, әммә юл тура ғына бармай шул, һаҙлыҡтарҙы, ҡыуаҡлыҡтарҙы урап үтә, үтәһе араны оҙонайта. Сәғәткә ҡарау юҡ — телдәре күптән өстө уҙғандыр ҙа дүрткә яҡынлайҙыр, тип ҡурҡам. Бына йылға. Шаптор-шоптор кистем. Ботинкаларҙы һалып тороу ҙа юҡ. Оло юлға килеп сыҡтым. Юл ике яҡтан да буш. Машинаны йыраҡтан шәйләп булырлыҡ түгел, әммә уның артынан күтәрелгән саң өйөмөн күрергә мөмкин. Төнгө ямғырҙан һуң юл дымлы, шунлыҡтан саң күтәрелмәй. Түҙмәй сәғәткә күҙ һалдым — дүртенсе ике минут... Һәм станцияға тиклем егерме биш саҡрым. Тулҡынланыуҙан тамаҡ кибеп, йөрәк һикереп ҡуйҙы, быуындар бушаны. Һуңланым, барыбер һуңланым, тип битараф ҡына юл буйлап өҫтөрәлдем. Станция яғына. Ауылға кире ҡайтһам, алдарға тура киләсәк, мәҫәлән, билет төшөп ҡалған — бисәгә барҙым, тип әйтеп булмай бит инде; ағайҙан бурысҡа аҡса алып торорға тейеш булам. Инде ауыл яғына боролоп, илле метр самаһы ара үткәйнем, о мөғжизә! — ҡалҡыулыҡ артынан машина пәйҙә булды. Совхоз яғынан ҡайһыһылыр еңел машина менән килә. «Москвич» яҡынайғас, юл уртаһына сығып баҫтым да, ярһып, ҡулды күтәрҙем. Водитель машинаһын туҡтатыуға йүгереп янына барҙым, тотлоға-тотлоға тигәндәй:

— Станцияға ҡәҙәр ал әле, поезға һуңлайым! — тинем.

— Ун һумың йәл түгелме? — тине киң яурынлы, асыҡ зәңгәр күҙле йәш ир.

— Минең бишәү генә шул, — тинем мин, ете һумдың икәүһенә түшәк, сәй алыу өсөн ҡалдырырға кәрәклеген тиҙ генә уйлап.

— Ярар, ултыр.

Мин артҡы ултырғысҡа йығылдым.

— Шәберәк барайыҡ әле.

— Поезд нисәлә китә?

— Дүртенсе яртыла.

— Һуңлаһаҡ та, түләйһеңме?

— Түләйем.

Һәм ошо минуттан машина менән сәғәт теле араһында ярыш башланды. Сәғәт шәберәк йөрөй, әйтерһең дә, бәйҙән ысҡынған, ә машина, ҡабырсаҡ эсендәге ҡусҡар ише, саҡ-саҡ шыуыша. Бөтә кәүҙәм менән алға эйелеп, күҙемде юлдан алмай киләм — станция яғына булған ынтылышым менән машинаға шәберәк барырға ярҙам итергә тырышам. Бер ауылды үттек — ун саҡрым. Сәғәткә ҡарамайым, уның дүртенсе яртыға етеп барғаны былай ҙа билдәле. Өлгөрмәйбеҙ. Биш һум йәл. Кәйеф төштө, төшөнкөлөккә бирелдем. Яңынан ауылға ҡайтыу тураһында уйларға тотондом. Ҡунаҡбай ауылы. Юл уртаһында — ҡаҙҙар. Водитель уларҙы үткәреп ебәрә лә яңынан газға баҫа. Ун саҡрым ҡала, туғыҙ, һигеҙ...

Станцияға килеп еткәндә, поезд ҡуҙғалғайны. Йәшел вагондар, тәҙрә-күҙҙәре менән мыҫҡыллы ғына йылмайып, тиҙлеген арттыра. «Москвич» хужаһына бишлекте тотторҙом да, перронға атылдым, йән-фарманға йүгереп, поезды ҡыуып етеп, ҡойроҡтан икенсе вагондың тотҡаһына йәбештем. Бәхеткә күрә, ишек ябылмағайны, проводник та тамбурҙа ине. Проводник ҡатынға билетты күрһәттем дә үҙемдең вагонға киттем, хәлдән тайып, бышлығып барып ултырҙым һәм поезға өлгөрөүемә һәм китеп барыуыма шунда ғына ышандым.

Тормоштоң ифрат ҡурҡыныс һәм шау-шыулы сәғәтен үткәргәндәге һымаҡ, күңел ҡапыл тыныс ҡыуаныс менән тулды. Күҙ алдына ла килтереүе ҡыйын: илле саҡрымдан ашыу араны мин ялан-туғайҙар, урман-ҡыуаҡлыҡтар аша йүгерҙем, һаҙлыҡҡа баттым, хатта йөҙҙөм, машинала, мотоциклда елдерҙем. Урал битләүенең бейек үләнле, төрлө төҫтәге сәскәләре араһында ҡатын менән һөйөшөү-ратышыуҙың иҫ киткес ләззәтле минуттарын кисерҙем.

Әлбиттә, был мөхәббәт түгел ине, ә ҡатын-ҡыҙға ҡарата булған ҡанмаҫ тартылыу. Был тартылыу, был ылығыу тәбиғәттең үҙе һымаҡ мәңгелек, ул шулай булған һәм буласаҡ, уны асып бөтөрөү мөмкин түгел. Был — минең тормош, минең йәш тормошом һәм ул, бәлки, минең, үлемгә дусар ителгән йәш һалдаттың, һуңғы бәхетле сәғәттәре лә булғандыр әле...

## Ҡыртыш

Ул ҡаланан үҙенең ағаһы Сабитҡа килә — Сабит урам аша ғына минең күрше — ҡапҡаһы алдына ҡара «Волга»һын туҡтата ла ҡабаланмай ғына машинанан сыға, оҙаҡ итеп ҡапҡа янында тора. Уны тәҙрә аша шәйләп мин урамға сығам һәм уның ише бәләкәй баҡса янында тапанам. Һәм көтәм: бәлки, әйләнер, минең яҡҡа боролор? Әммә ул ҡайҙалыр урам буйына ҡарай, унан ағаһының ихатаһына текәлә, хәйер, күҙ ҡырыйы менән мине күрмәй булмаҫ. Мин дә ситкә, урам буйына, ҡараған булам, ә үҙем эстән генә: «Их һин, ҡыртыш, ҡыртыш!» — тип көрһөнәм.

«Ҡыртыш» — Сәмиғуллиндар нәҫеленең урам ҡушаматы. Ҡыртыш — сиҙәм, тупраҡтың һабан да аҡтара алмай торған ҡаты өҫкө ҡатламы. Ундай ҡатлам ғәҙәттә ҡоро ҡалҡыулыҡтарҙа, ҡоро үҙәнлектәрҙә булыусан.

Батша заманында уҡ беҙҙең ауылға Ҡазан татары Сәмиғулла тигән кеше килеп төпләнә. Мин уны саҡ ҡына иҫләп ҡалам: һирәк аҡ һаҡаллы, башынан түбәтәйен төшөрмәгән оло кеше ине. Ә уның улы Муллаәхмәтте бәләкәй саҡтан уҡ беләм — күршеләр, унан арҡам, тирем менән дә таныш. Муллаәхмәт беҙҙең икенсе бригада бригадиры булды, тимәк, ауылға баш кеше. Колхоз рәйесе, ғәҙәттә, район килтереп ҡуйған сит-ят әҙәм була, уны, рәйесте, юғарылағы түрәләргә оҡшамаһа йәки эсеүгә һалышһа, колхоздың дөйөм йыйылышында тыңлаусан ҡул күтәреүҙәр менән алып ташлай алалар, ә бригадирға, үҙебеҙҙең кешегә, ундай ҡурҡыныс янамай тиерлек. Ҡыҫҡаһы, Муллаәхмәт ағай беҙҙең ғүмерлек бригадир ине.

Ә минең арҡа уның менән бына нисек таныш. Талышман йылғаһы аръяғында беҙ ҡуна ятып бесән эшләйбеҙ.

Мин, ун ике йәшлек үҫмер, һөйрәтке һөйрәттерәм. Эштән һуң үҙем йөрөткән бейәне тышаным да ашарға ебәрҙем. Күрәһең, насар тышаулағанмын, иртәгәһенә бейәне табып булманы ла ҡуйҙы — тышауынан ысҡынған да олаҡҡан ҡайҙалыр. Мин уны ярты көн эҙләнем, урманды теттем, күрше колхоз ерҙәренә барып йөрөнөм. Бригадир Муллаәхмәт ағай минең «тапманым» тигәнде лә көтмәй, хатта тәртип өсөн әрләп тә тормай, йүгән менән тондорҙо. Йүгәндең тимер яғы, ауыҙлығы, арҡама килеп төштө һәм мин ауыртыуҙан бөгөлөп ергә тәгәрәнем.

Эйе, Муллаәхмәт ағай ҙа, «Ҡыртыш» ҡушаматы йөрөткән башҡа кешеләр кеүек, үҙ һүҙле һәм ҡаты кеше ине. Унан ат алыу, бигерәк тә яҙ көнө, сәсеү алдынан, мөмкин булмаған эш. Әйтерһең, шәхси атын һорайһың. Бының менән эш бөтмәгәс меҫкен колхозсы рәйескә бара, ул рөхсәт итә итеүен, ә бына бригадир, ҡәһәр һуҡҡыры нәмәкәй, бирмәй ҙә ҡуя. «Ҡыртыш, инәңде...» — тип һүгенә колхозсы эсенән генә, ә ҡысҡырып әйтергә, даулашырға йөрәге етмәй.

Үлеме лә үҙһүҙлелегенән булды. Йәш ине әле. Ҡыш көнө, һыпыртып ҡар яуған мәлдә был санала китеп барған. Ҡаршыһына трактор килә. Ел тракторға ҡаршы бәрә, кабинаның быялаһын ҡар һырый һәм тракторсы, күрәһең, юлды йүнләп абайламаған, ҡаршыһына килгән атты шәйләһә лә, ситкә боролор тип уйлаған. Ҡыртыш та тракторҙы күрмәй булмаҫ, әммә үҙһүҙлелегенә барып, үҙе боролһон, нишләп мин көрткә сумайым, типтер инде, трактор ҡаршыһына китеп тик бара икән. Радиатрға төкәлдем тигән саҡта ғына ат, былдай осраҡтарҙа кешенән аҡыллыраҡ хайуан, ситкә, көрткә тайпыла, ә сана гусеница аҫтында ҡала...

Икенсе бригаданың ат һарайы бригадирҙың киң ихатаһында ине. Һалам башлы урелгән конюшня, лапаҫ, бесән, кормушкалар, миңә, үҫмер малайға, сер һәм мөғжизәләр менән тулы урындар була торғайны. Арт яҡлап бригадир ихатаһына керәм дә ат тире, тиреҫ, ҡоро бесән менән аңҡыған ярым ҡараңғы һарай эсенә ҡарайым. Оҡшай миңә бында. Утлыҡсаларҙа, мөйөштәрҙә, ситән араһында кетәктәренән ҡасып тауыҡтар йомортҡа һала. Мин, гел ас йөрөгән малай, уларҙы эҙләп табам да үҙем менән алып сығам йәки шунда уҡ һытып эсәм.

Бригадирҙың биш балаһы бар. Өс малай, ике ҡыҙыҡай. Беҙ бер аймаҡта йәшәһәк тә, хатта уларҙың йорто беҙҙе-

кенән ике өй аша ғына булһа ла, мин бер ҡасан да ҡыртыштар менән уйнаманым. Йылғаға бер тыҡрыҡтан йүгерәбеҙ, бер сөңгөлдә һыу инәбеҙ, ә бергә уйнау, яҡындан аралашыу юҡ. Сөнки улар бригадир балалары, түрә малайҙары, ә мин етем, етмәһә, урам хулиганы. Мин икенсе яҡлап ике йорт аша йәшәгән Зәйнулла ағай балалары менән уйнаным — беҙҙең үҙебеҙҙең өйөр, әрһеҙерәк, хулиганыраҡ өйөр.

Бер ваҡыт мин шулай бригадирҙың, дөрөҫөрәге, бригада конюшняһына керҙем дә дүрт йомортҡа таптым, таяйым тип йыйынғайным ғына, ҡараңғынан бригадирҙың иң бәләкәй малайы Нияз килде лә сыҡты бит, ҡәһәрең. Минән ике йәшкә бәләкәй һары сәсле, һоро күҙле яшыҡ малай ине был. Юғалып ҡалдым, шулай ҙа:

— Бына, йомортҡалар таптым,— тигән булдым. Нимә лә булһа әйтергә кәрәк тәһә.

— Тукта, мин тағы килтерәм! — тине Нияз, конюшняның алыҫтағы мөйөшөнә барҙы ла тағы өс йомортҡа тотоп килде. — Һин уларға лавканан ҡармаҡтар алаһыңмы?

— Юҡ, сейләй эсәм. Һинең эскәнең бармы?

Мин йомортҡаның ҡабығын ваттым да ағы-һарыһы менән бергә һурып йотоп та ебәрҙем. Миңә эйәреп Нияз да өс йомортҡа эсте. Ҡапыл көлөп ебәрҙек, хахылдашырға тотондоҡ — үҙебеҙҙең ҡылыҡтан үҙебеҙгә күңелле ине.

Ошо көндән башлап беҙ дуҫлашып киттек. Әсәһенең итәгенә йәбешеп йөрөгән ҡыйыуһыҙ Ниязға минең һымаҡ шаян, ҡыйыу, бур малай менән тыңлаусан, ипле ағаларына ҡарағанда күңеллерәк булғандыр. Өҫтәүенә, ул да минең ише фантазер, юҡ-бар уйлап сығарыуға бик оҫта ине.

Бәләкәй саҡтан уҡ мин өйҙөң сарҙағына менеп йәшеренергә әүәҫ инем. Унда урланған әйберҙәр йәшергән бер урыным бар. Алтынан ишелгән өс быуынлы сыбыртҡы, бинокль, клубтан сәлдерелгән кинжал һынығы. Туҙып бөткән «Том Сойер» тип аталған китапты ла ошонда йәшергәнмен. Мин уны ҡаланан күршеләге өләсәһенә ҡунаҡҡа килгән малайҙан урлағайным. Иҫке фуфайкаларға, тишелеп бөткән һыйыр тиреһе өҫтөнә ятып мин әлеге китапты аҡтарам, бер һүҙ русса белмәһәм дә һүрәттәре буйынса ниндәйҙер Томдың, үҙем һымаҡ фантазер, шуҡ малайҙың тормошо хаҡында яҙылғанлығын самалайым.

Өҫтән, сарҙаҡтың әлеге мөйөшөнән, күршеләрҙең ихаталарында барған мәрәкәләрҙе күҙәтеп була. Бына Ғәлиә апай һарайҙары артына сыға ла ҙур аҡ күтен яланғаслан-

дырып ситән буйына ултыра (ул саҡта бәҙрәфтәр юҡ ине), яңы ғына кәләш алған егет йәш ҡатынын баҫтырып йөрөй, тегеһе иренә кипкән тиреҫ киҫәге бәрә, үҙе көлә, ире уны ҡыуып етә лә лапаҫ яғына, бесәнлеккә, төрткөләй... Ҡарап ятһаң әллә нимәләр күрергә була.

Мин сарҙаҡҡа Ниязды ла мендерҙем, уға «Том Сойер» китабын, үҙемдең трофейҙарҙы күрһәттем, ә ул фантазер, теләһә нәмә уйлап сығарыуға әҙер генә торған малай, телефон уйнарға тәҡдим итте. Кәтүк ебе, ике консерва банкыһы таптыҡ, епте ыҫмала менән буяныҡ, остарын әлеге банкыларға бәйләп күршеләрҙең кәртә-ситәндәре аша беҙҙән бригадир сарҙағына һуҙҙыҡ. Епте ныҡ ҡына тартып банкыға ҡысҡырһаң бер-беребеҙгә яҡын ғына тороп һөйләшкән һымаҡ яҡшы ишетелә ине.

Ялҡҡансы уйнаныҡ телефон менән. Унан Нияз яңы әкәмәт уйлап сығарҙы, хәйер, быныһы уйын түгел, ә ниндәйҙер хулиганлыҡ ине. Әкәмәт шунан ғибәрәт: ҡара бесәйҙе тотоп үлтерергә лә төнөн мунсала бешерергә. Тик бесәй ҡап-ҡара булырға тейеш, бер бөртөк аҡ йөн булһа ла ярамай. Бесәй бешкән арала ләүкә аҫтынан, таштар араһынан ҡурҡыныс йөҙлө, янып торған ҙур күҙле мунса шайтандары сығасаҡ. Улар һине уратып аласаҡ, йөҙҙәрен боҙоп ыҫылдаясаҡ, тештәрен шаҡылдатасаҡ, битеңә һаҫыҡ еҫ бөркәсәк, уҫырасаҡ һәм алама һүҙҙәр ҡысҡырып һине уратып бейергә төшәсәк. Әгәр һин ошоларға түҙһәң, ҡотоң алынып мунсанан сығып ҡасмаһаң, төн уртаһында әтәстәр ҡысҡыра башлау менән юғаласаҡтар. Ҡаҙанда бесәйҙең һөйәктәре генә ҡала. Әгәр һөйәкте алып тешләһәң шундуҡ кеше күҙенә күренмәҫлек булып юғалаһың да ҡуяһың икән... «Кешегә күренмәү нимәгә кәрәк?» — тип һораным Нияздан. «Бәй, кино килтергән саҡта клубҡа күренмәй генә инәһең дә бөтә киноларҙы ла бушлай ҡарайһың», — тип яуапланы ул. Ә мин былай ҙа киноларҙы буш ҡарай инем. Ҡараңғы төшөү менән ватыҡ тәҙрә аша керәм дә сәхнә артына йәшенәм, кино башланыр алдынан ғына сығам. Тағы нимәләр ҡылып була һуң? Ҡыҙҙар яланғас һыу ингәнен мин былай ҙа талдар араһынан күҙәтә алам. Мин, атай-әсәйемдең йомшаҡлығынан тамам боҙолған малай, унан да хәтәрерәк нәмә уйлап табыр инем. Мәҫәлән, тәүҙә мунсаларына инеп ләүкә аҫтына йәшенер ҙә уҡытыусы Борхановтың сибәр ҡатыны менән мунса төшкәнен ҡарар инем. Донъя буйлап сәйәхәткә китергә лә мөмкин, ҙур ҡалаға етеп поезға ултырыр ҙа үҙемдең күп-

тәнге хыялым булған көньяҡҡа юл тотор инем. Һине бирәү ҙә күрмәй, асыҡһаң — сәлдер ҙә аша, нәмә теләйһең шуны ал, магазинға ла инергә була, кассанан аҡса һуғырға ла көсөң етә, хәйер, аҡсаның хәжәте лә ҡалмай инде... Һиндостанға барыр инем, филгә атланып йөрөр инем...

Әммә беҙ ҡара бесәй таба алманыҡ. Тапҡан хәлдә лә төндө шайтандар араһында үткәрергә ҡыйыулығыбыҙ етмәҫ ине. Нисектер бер ваҡыт мин Зәйнулла ағайҙарҙың мунсаһында йыуынғанда ҡыуыҡһыҙ кәрәсин шәме һүнде лә ҡуйҙы. Ҡот осто, атылып мунса алдына сыҡтым да киттем, ә кире инеп йыуынып бөтөргә батырсылыҡ етмәне. Шулай булғас таң әтәстәре ҡысҡырғансы нисек түҙеп ултырмаҡ кәрәк?

Сәйәхәткә ҡара бесәйһеҙ ҙә сығып була. Минең, мәҫәлән, һал менән Йайыҡ буйлап Каспий диңгеҙенә тиклем йөҙөргә, Каспий диңгеҙенән Кавказға эләгергә, тигән күптәнге хыял бар ине. Планымды Ниязға әйттем, ул аңланы һәм ҡыуанып риза булды. Минең һымаҡ уға ла Каспий диңгеҙе беҙҙең ауылдың көньяғында зәңгәрләнгән тауҙар теҙмәһе артында ғына һымаҡ тойолғандыр инде. Бала саҡта көн ифрат оҙон, йыл мәңге бөтмәҫ, офоҡҡа тиклемге ара барып етә алмаҫлыҡ тойола бит ул.

Бригадирҙың лапаҫ артында иҫке мунсаһының серей башлаған бүрәнәләре ята ине. Кистән беҙ уларҙы яр буйына ташыныҡ, төрлө еп, арҡан, ат һарайынан тапҡан ҡайыш өҙөктәре менән быны бер-береһенә бәйләнек, өҫтөнә шул мунсанан алған таҡта киҫәктәрен ҡаҡтыҡ. Беҙҙең сарҙаҡ башында йоҡланыҡ, иртүк торҙоҡ, кистән әҙерләп ҡуйған икмәк ҡайырыһын, бер шешә һөттө тотоп йылғаға йүгерҙек. «Былар бөткәс нәмә ашайбыҙ?» — тип һораны Нияз, ҡойто ғына ризыҡтарға ымлап. «Табырбыҙ, — тип яуапланым мин. — Ауылдар күп Йайыҡ буйында. Баҡсала картуф, үлән араһында еләк, йылғала балыҡ, ә икмәкте ауылдарҙа һорарбыҙ. Йүне сығыр әле».

Оҙон таяҡтар менән этәнеп ярҙан ҡуҙғалдыҡ. Июндә бер нисә тапҡыр ныҡ ҡына итеп ямғырҙар яуғайны, шуға ла йылға апаруҡ ташҡан, күп һыулы. Яр янындағы тәрән ятыулыҡты үткәс ағым уртаһына килеп индек һәм ул беҙҙе шәп итеп ағыҙып алып китте. Һал әллә ни батмай, ышаныслы, бәләкәй булғанғамылыр өйөрөлмәктәрҙә бер нисә мәртәбә әйләнеп ала, һыу өҫтөнә ятҡан тал ҡыуаҡлыҡтарына керергә маташа, ағас тамырҙарына менә.

Күпергә тиклем йылға ла, яр ҙа таныш ине. Артабан нисектер ятыраҡ, ҡырағайыраҡ ерҙәр китте, йылға тарайып һыуы тағы ла тәрәнәйҙе, ағымы көсәйҙе, ярҙар бейегәйҙе, бигерәк тә тау яғы, һыу ашаған ярҙан ҡолап төшкән ҡоро ағастар йышайҙы, һыу өҫтөнә сығып ятҡан тамырҙар, урыны-урыны менән эйелгән ерек, муйыл, тал ағастары ифрат күп ине — бөтөнләй идара итеп булмаған һалдан беҙ саҡ-саҡ йығылмай киләбеҙ.

Көн үҙәгенә Мөхәммәт ҡултығын үттек, төш ауышыуына Ташморонға еттек. Бынан биш саҡрымда тирмән быуаһы, ун биш саҡрым самаһынан һуң совхоз буласаҡ. Тирмәнгә яҡтыла барып етербеҙ тип уйланыҡ, эңерҙә Яйыҡ ярындағы беренсе ауылға керергә ниәтләндек. Унда төнгөлөккә туҡтайбыҙ, баҡсаларға инеп йәш картуф соҡойбоҙ.

Ташморондо үтеп оҙаҡ та барманыҡ, бер боролмала һалыбыҙҙы етеҙ тулҡындар шәп ағыҙып алып китте лә шул ыңғайы һыуҙан сығып ятҡан ҡоро тамырҙар өйөмөнә, йылға өҫтөнә эйелгән ерек ағастары араһына барып та керҙек. Мин һыуға ҡолап барған ерҙән әлеге ереккә йәбешеп өлгөрҙөм, ә һал шатыр-ботор әйләнеп-тулғанып тамырҙар өҫтөнән сыҡты ла артабан аҡты. Нияз нимәлер ҡысҡырҙы, тик нимә әйткәнен мин аңламаным, тамырҙар араһында һыу ҡомаҡтарының шаптырлағаны ғына ишетелде. Еректең йыуан ботағына йәбешеп бейек ярға сыҡтым да: «Нияз, Нияз, һин ҡайҙа?» — тип һөрәнләргә тотондом. Яуап булманы. Баттымы икән ни? Ҡомалаҡ менән сырмалған ҡыуаҡлыҡтар араһынан гөлйемешкә сыйыла-тырнала яр буйлап илле метр самаһы түбәнгә йүгерҙем. «Нияз!» Аҫтан хәлһеҙ генә тауыш ишетелә: «Мин бында, һөйрәп сығар әле». Мин уны яр аҫтынан шәйләнем — һыуҙағы сүп-сар, тамыр араһынан уның башы ғына тырпайып сығып тора ине. «Хәҙер. Һал ҡайҙа?» — «Белмәйем». Мин ҡоро муйыл һайғауы табып өҫтән Ниязға һондом. Саҡ-саҡ һөйрәп сығарҙым. Ярға ул лысма һыу булып килеп сыҡты, сәстәре маңлайына йәбешкән, ботинкалары шаптырлай. «Мин һине батҡанһыңдыр тип уйлағайным», — тим. «Ә мин һин батҡанһыңдыр тинем». Бер-беребеҙгә ҡараныҡ та көлөргә, хахылдашырға тотондоҡ. Унан һалды ҡыуып етергә түбәнгә атланыҡ, ярға терәлмәһә, тота алмаҫ инек. Ул киләһе боролмала ярға һуғылғайны. Өйөбөҙгә ҡайтҡандағы ише ҡыуаныштыҡ. Иң ныҡ шатландырғаны, әлбиттә, һалға бәйләнгән тоҡсай

булды. Тоҡсайҙа — икмәк ҡайырыһы, бер шешә һөт. Икмәгебеҙ һыулanғайны.

Ялбыр муйыл аҫтына ултырҙыҡ та үҙебеҙҙе ҡырағай джунглиҙа йөрөгән сәйәхәтселәр кеүек хис итеп алмашлап шешә ауыҙынан һөт эсә-эсә икмәк ашаныҡ. Был ҡәҙәре лә тәмле ризыҡты ошоға ҡәҙәр ашаған юҡ ине әле. Һәм бер ҡасан да беҙгә әлеге ише күңелле булғаны юҡ ине. Тирә-яғыбыҙҙа — ботаҡтары менән бер-береһен ҡосаҡлаған тығыҙ урман, ерек, муйыл, гөлйемеш. Муйыл ботаҡтарын ҡомалаҡ сырмаған, ҡара ҡарағат бешеп килә, бөтнөк, тағы әллә ниндәй үлән еҫтәре аңҡый, яҡында ғына һайыҫҡан шыҡырлай, ниндәйҙер ҡоштар, күгәүендәр оса, серәкәй ябырыла, күктә ҡара ямғыр болоттары шәйләнә. Был беҙҙең Америка, беҙҙең Һиндостан. Әгәр ошо мәл ҡыуаҡтар араһынан фил томшоғо килеп сыҡһа мин бер ҙә аптырамаҫ инем. Сит-ят урмандарҙа булырға тура килмәгәс, тыуған йылғам ярҙары минең өсөн ер йөҙөндәге иң яҡын, иң мөғжизәле, иң серле урындар...

Бер аҙ ял итеп, ашап алғас, йөҙөүебеҙҙе дауам иттек. Тирмән быуаһына яҡынайған һайын ағым әкренәйҙе, йылға тәрәнәйҙе. Һал менән идара итергә маташҡан кәкре ҡоро таяҡ ҡыҫҡарҙы, һыу төбөн буйламаны, һөҙөмтәлә ағым беҙҙе нисек теләй шулай ағыҙҙы. Йылға өҫтө киң булып китте, ярҙар йыраҡайҙы, әйтерһең дә, беҙ диңгеҙгә килеп сыҡтыҡ. Тирмәнгә етәрәк туҡтарбыҙ ҙа һалды быуаның теге яғына ҡоро ерҙән һөйрәтеп сығарырбыҙ, тип уйлағайныҡ, әммә ағым беҙҙе икенсе йүнәлешкә, шарлауыҡҡа алып китте. Ә унда йылға һыуы өс метр бейеклегенән ағып төшә. Бәхетһеҙгә ел ҡаршы тигәндәй, йәшен йәшнәне, көнбайыштан беҙҙе ҡыуып еткән ҙур ҡара болоттар һыу өҫтөнә эре тамсылар ҡоя башланы. Ул шәбәйгәндән-шәбәйҙе, әйтерһең, биҙрәләп түгә, беҙ «собханалла, собханалла» тип уҡына-уҡына, тирмән яғынараҡ ишергә маташабыҙ. Әммә ағымды һис еңерлек түгел, ул беҙҙе һаман ситкә, шарлауыҡ яғына ағыҙа. Хәҙер, бына хәҙер, һалыбыҙ менән бергә аҫҡа осасаҡбыҙ, ағым беҙҙе, шаңҡыған йәки үлер сиккә етеп имгәнгән ике сәйәхәтсене, артабан ағыҙасаҡ. Ҡамышлы утрау кеүек бер нәмәне, дөрөҫөрәге, ҡамыш-күрән баҫҡан түмгәк янынан үттек. «Әйҙә һикерәйек!» — тип ҡысҡырҙым да беренсе булып һыуға ташландым. Минең арттан Нияз да һикерҙе. Йөҙөп барып түңгәккә баҫтыҡ. Уныһы кәкрәйә, бата, аяҡ аҫтынан шыла. Һыу беҙҙең билдән. Тирмәнгә ҡарай

йөҙөргә беҙҙең йөрәк етмәй — йыраҡ та, ҡурҡыныс та — бер балыҡсыны йотҡан ике метрлыҡ шамбы тураһында ишеткән бар.

Бер аҙҙан йәшен туҡтағандай итте, ҡара болоттар тауҙар яғына йүнәлде, байырға йыйынған ҡояш күренде. Тирмәнсе Василий йортонан бер ҡатын сыҡҡанын шәйләнек тә: «Э-э-й, э-э-й!» — тип һөрәнләй, ҡысҡыра башланыҡ, ҡул болғаныҡ. Ҡатын беҙҙең тауышты ишетте, күрҙе (ара байтаҡ, өс йөҙ метр ғына барҙыр), өйгә инде һәм оҙаҡламай тирмәнсе Василий пәйҙә булды. Оҙон кәүҙәле, һары урыҫ. Тирә-яҡтағы башҡорт ауылдарына тирмән кәрәк ине, Василийҙы шуның өсөн генә кулак итеп һөрмәй ҡалдырҙылар, тирмәнен колхозға алдылар.

Василий кәмәһенә ултырҙы ла беҙгә ҡарай ишә башланы. Килеп еткәс башҡортсалап: «Бында нисек килеп эләктегеҙ?» — тип аптыраны. «Беҙ һал менән Каспий диңгеҙенә йөҙөп китеп бара инек», — тип яуапланым мин. «Ну, ысынлапмы? — тип йылмайҙы тирмәнсе. — Ул диңгеҙ бик йыраҡ бит, йыл буйы аҡһағыҙ ҙа барып етә алмаясаҡһығыҙ». Өндәшмәнек. Ул диңгеҙҙең ысынлап та бик йыраҡ икәнен түңгәк-утрауҙа торғанда аңлағайныҡ инде. Ярға етәрәк тирмәнсе йәнә ҡыҙыҡһынды: «Кем малайҙары булаһығыҙ һуң?» Беҙ атайҙарыбыҙҙың исемдәрен әйттек. Ул минең мәрхүм атайҙы белгән булып сыҡты, ә бригадир, билдәле, ихтирамлы кеше, уны белмәү мөмкин түгел.

Тирмәнсе ҡатыны беҙгә сәй эсерҙе, үҙе туҡтауһыҙ: «Батюшки, батюшки, һеҙ нисек батмағанһығыҙ?» — тип аптыраны. Тамам эңер төшкәс беҙ оло юлдан ауылға йүгерҙек.

Ул йәй беҙ Нияз менән тағы әллә нимәләр уйлап сығарҙыҡ, әллә нимәләр ҡыландырҙыҡ. Нияздың уйлап сығарыу таланты асылды. Торба киҫәген трактор һабаны тәгәрмәстәренә беркетеп Контрҙар урамында йәшәгән малайҙарға һуғыш асыр өсөн пушка яһаныҡ. Ә бына дарыһын табып булманы. Шунан Нияз ниндәйҙер китапта катапульта һүрәтен күргән дә түшәмгә сәңгелдәк элә торған пружина ярҙамында боронғо һуғыш ҡоралы яһаны. Ул таштарҙы йөҙ метрға ҡәҙәре ата ала ине. Шулай бер «һуғыш» ваҡытында таш Юламан ағайҙың улы Әлтәфтең күҙенә килеп тейҙе. Әлтәф аҡырып илап ебәрҙе, ошаҡларға әсәһенә йүгерҙе. Әсәһе, Зөһрә апай, енләнеп сығып беҙҙең «армия»ны таяҡ менән ҡыуып таратты.

Көҙөн беҙ йәнә парта артына ултырҙыҡ. Мин уҡытыусы Насирҙың ҡыҙына ғашиҡ булдым һәм үҙемдә талант астым — мөхәббәт тураһында шиғырҙар яҙа башланым. Нияз минән түбәнерәк класта уҡығанлыҡтан беҙ һирәк осраша торғайныҡ. Киләһе йылына мин ауыл һарыҡтарын көттөм — уйынға ваҡыт ҡалманы. Унан ФЗО-ға киттем, армия, һуғыш, Кавказ, Мәскәү...

Илле бишенсе йылда ғына ауылға ҡайтырға насип булды миңә. Ауыл һуғыш ауырлығынан һаман мантып китә алмай ине әле. Һуғыштан иҫән йәки яраланып ҡайтҡан малай саҡтағы уйындар буйынса иптәштәр ныҡлап колхоз ҡамытын кейгән, барыһы ла тиерлек өйләнгәйне. Нияз — колхоз парторгы. Йәше буйынса һуғышҡа эләкмәне, шулай ҙа армияла хеҙмәт иткән икән. Мин уны саҡ таныным. Ике метрға яҡын буй, фырт, сибәр — билен яҫы ҡайыш менән быуып һалдат гимнастеркаһында йөрөй, ҡалын буҫтауҙан тегелгән галифе, ялтыр итек кейгән. Өйләнмәгән. Ҡыҫҡаһы, ауылдың беренсе егете инде. Күп ҡыҙҙарҙың уны уйлап һарғайыуы күренеп тора.

Дуҫтар һымаҡ осраштыҡ. Стена гәзите сығарыуымды үтенде. «Мәктәптә саҡта һүрәтте шәп төшөрә торғайныҡ бит. Бындағы бер контрға карикатура яһа әле». Ул әйткән контр Контрҙар урамында йәшәүсе Фәтҡулла ҡарт икән. Ҡасандыр ул раскулачиваниенан ҡасып алтын приискыларына киткәйне, һуғыш йылдарында ҡайтҡан, хәҙер колхозда эшләп йөрөй икән. Уның аты юғалған, колхоз аты, һис эҙләп таба алмай. Стена гәзитендә мин тауға менеп ултырып ҡулдарын ҡаш өҫтөнә ҡуйған һәм алыҫтағы туғайҙарға баҡҡан ҡарт һүрәтен төшөрҙөм дә аҫтына былай тип яҙҙым: «Атым үҙемде тапҡансы ошо тауҙа ултырасаҡмын». Ниязға карикатура оҡшаны, ә хәҙер ҡартты үпкәләткәнем өсөн үкенәм.

Алтмышынсы, етмешенсе йылдарҙа ауылға ҡайтҡандарымда Ниязды бер ҙә осратырға тура килмәне. Уны тәүҙә инструктор итеп районға күсергәндәр, унан партия мәктәбенә уҡырға киткән, тағы әллә ниндәй курстар бөтөрөп ҡайтҡас райондың идеология буйынса секретары итеп ҡуйғандар. Күрмәнем, осратманым тип әйтеүем дөрөҫ үк булмаҫ, сөнки һабантуйҙарҙа бер нисә мәртәбә күрҙем, әлбиттә. Етди кешегә әйләнгәйне ул: шәп костюм, эшләпә кейгәйне. Элеккесә буйға барыһынан да оҙон — көндәлек ауыр эш сүктергән ваҡ ирҙәр араһында ҡолға һымаҡ тура кәүҙәһе әллә ҡайҙан айырылып тора. Мин, алама ғына

кейенгән бәләкәй кеше, һуңынан студент, һабантуйҙарға килеп эләгәм ҡай саҡ. Ул мине күргәндер, шәйләгәндер, танығандыр, әммә үҙе менән ҡасандыр Каспий диңгеҙенә йөҙгән иптәшен күрмәмешкә һалышҡан да ҡуйғандыр. Әҙме ни минең һымаҡтар. Барыһына ла туҡтап, иҫәнләшеп, хәл-әхүәл һорап йөрөй алмай бит инде район етәкселәренең береһе. Мин йәмғиәттә үҙемдең бәләкәй генә урынымды яҡшы беләм, ғүмер буйы түрәләр һәм оҙон буйлы кешеләр алдында ҡаушаусы кеше, уның янына бара алманым. Ә Нияз милли көрәште генә ҡарай ҙа райком «Волга»һына ултырып китә торғайны.

Бер аҙҙан Нияз тағы ла юғарыраҡҡа үрләне — беренсе секретарь булып китте. Ниндәй секретарь булған, был эшендә ниндәй уңыштарға ирешкән — мин белмәйем, хәбәрҙар түгелмен. Эшенә йәйәү йөрөгәнен генә ишеттем. Уға тиклем беренсе булған Ваһапов, ҙур ҡорһаҡлы һимеҙ кеше, өйөнән райкомға тиклемге өс йөҙ метр араны ла «Волга»һында үтә торғайны.

Әҙәбиәт институтын бөткәс, әҫәрҙәрем нәшер ителә башланы, хатта башҡортса сыҡҡан гәзит-журналдарҙа ла донъя күрҙе. «Нияз Муллаәхмәтович әҫәрҙәреңде уҡый, яҙыусылыҡ уңыштарыңды күҙәтеп бара, тик уға псевдонимың оҡшамай», тип еткерҙеләр. Уның ижадымды күҙәтеп барыуын мин үҙебеҙҙең тирә-яҡ мөхитте тасуирлауымдың ҡайһы берҙәрен материаллаштырыуынан йәғни тормошҡа ашырырға маташыуынан белдем. Бер хикәйәмдә ташландыҡ хәлгә төшкән емерек тирмән менән быуа, кипкән Каспий диңгеҙе хаҡында әсенеп яҙғайным, Нияз Муллаәхмәтович быуа менән тирмәнде аяҡҡа баҫтырыу ниәте менән йөрөгән. Әммә тотонмағандар — әллә аҡсалары булмаған, әллә был уйынан һыуынған, белмәҫһең. Икенсе хикәйәлә Йайыҡтың Рәсәйҙе Азия менән Европаға бүлеп тороуы, беҙҙең ауылдың Азияла ултырыуы, йылғаны кисеүҙән йәки күпер аша сыҡһаң... Европаға килеп кереүең тураһында яҙғайным. Тиҙҙән Белореттың оло юлында, Йайыҡ аша һалынған күпер янында, бейек бетон бағана ҡалҡып сыҡты. Бағанаға беркетелгән тимер щитҡа эре хәрефтәр менән «Европа — Азия» тип яҙылғайны. Ҡайһы бер хикәйәләрҙә ул үҙен таныған тинеләр, «Минең хаҡта күп яҙҙы инде ул», тип әйтер булған.

Хәҙер беҙ байтаҡ йәштә. Мин уның ағаһы йәшәгән йорт ҡаршыһынан өй һатып алдым, йәйҙәрен шунда йәшәйем. Ҡай саҡ тәҙрә аша Сабиттың ҡапҡаһына ҡара «Вол-

га» килеп туҡтағанын, яҡшы ҡара костюм, ҡара күҙлек кейгән оҙон кәүҙәле кешенең ҡабаланмай ғына машинанан сығыуын күрәм. Күҙҙәре ниндәй төҫтә, тауышы нисек икәнен иҫләмәһәм дә уның Нияз Муллахмәтович икәнен беләм. Ул ҡапҡа төбөндә тапанған арала — кем дә булһа ҡаршы сығырын көтә — мин дә урамға сығам да бәләкәй баҡса янына баҫам. Беҙ әле тегеләй, әле былай ҡарайбыҙ, икебеҙ ҙә күҙ ҡырыйы менән бер-беребеҙҙе күрәбеҙ. Минең турала ни уйлай, ниңә минең яҡҡа бер нисә аҙым яһамай — мин белмәйем. Кеше күңеле ҡараңғы баҙ менән бер, уны хыял менән дә, фараз менән дә яҡтыртып ҡарай алмайһың. Ә ниңә үҙем бармайым һуң, ниңә «Һаумы Нияз!» — тип ҡулды һуҙмайым? Белмәйем, әйтә алмайым. Мин яҙыусы бит әле, үҙе килһен, тигән уй башымда юҡ. Ә ул кем? Пенсиялағы партократ. Ул минән йәшерәк, тимәк беренсе булып килергә тейешле. Уны иҫән-һау күреүемә бик шатмын. Үҙем эстән генә: «Эх һин, ҡыртыш, ҡыртыш!» — тип ҡабатлайым, үҙем янына бара алмайым. Шулай торабыҙ. Ә беҙҙең арала — тар ғына, уҙа барһа утыҙ аҙым саңлы, тиҙәк-тиреҫле ауыл урамы...

## Һыуға батҡан кеше

Бына өсөнсө йыл инде ауылды, уның баҡсаларын, иген баҫыуҙарын, бесәнлектәрен ҡоролоҡ яндыра. Ҡасандыр үтә алмаҫлыҡ булып ятҡан һаҙлыҡтар кипте, уларҙың төптәре яланғасланып, ярылып, ташҡа әйләнде, тау түбәләре ҡарайҙы, үләндәрен тамырына тиклем мал ашаған ҡалҡыулыҡтар һырты саңға әүерелде. Колхоз малын алыҫтағы тауҙар артына ҡыуҙылар. Ҡарттар әйтеүенсә, урман дымды тарта, дымды һаҡлай икән. Тик унда шәхси малды алып барып булмай. Ас һыйырҙарҙың баҡырышыуынан хужабикәләр үҙҙәре шашыр сиккә етте...

Үткән йылғы ҡоролоҡто нисек тә үткәргәйнеләр әле, өсөнсө йылғы дым ерҙән бөтөнләйгә китмәгәйне — һайыҡҡан һаҙлыҡтарҙағы түмгәктәрҙә күрән баш ҡалҡытты. Һарай, сарҙаҡ, солан мөйөштәренән күптән онотолған, тутығып бөткән ураҡтарын эҙләп табып, кешеләр ошо йәшел массаны сабырға ташланды. Ҡайҙандыр, ялан яҡтарынан колхоз малына һалам ташынылар.

Ә был ҡыш ҡарһыҙ килде, май, июнь айҙарында алыҫтағы тау аръяғында ауыр ямғыр болоттары йөрөнө, ялағай ялтланы, йәшен йәшнәне, тик кешеләр ҙур өмөт менән алыҫта яуған ямғырға күпме ҡараһалар ҙа, ул тауҙың был яғына сыҡманы. Ауыл өҫтөнә, ялан-туғайҙар өҫтөнә бер болот әҫәре булмаған яндырғыс зәңгәрһыу быяла ҡаплап ҡуйҙылармы ни?! «Ахырызаман килә, бар тереклек һәләк буласаҡ», — тине ҡарттар, баш сайҡап.

Һирәкләп булһа ла ауылға район түрәләре килеп сыҡҡылай ҙа кешеләрҙең башына төшкән афәтте еңеләйтергә теләгән йөҙ күрһәтә: уйлашырбыҙ, хәл итербеҙ, ярҙамдан ташламабыҙ. Был афәттә бер генә кеше, әйтәйек, председатель йәки агроном ғәйепле булһа, һис уйламай, алып ырғытырҙар ине. Күк кәнсәләре менән улар ни генә эшләй алһындар инде? Күк етәкселегe ерҙәге чиновник алдында яуап тотмай шул.

Элекке парторг, хәҙер инде пенсиялағы Абдрахманов Шәрип ҡасандыр олатаһынан ишеткән Ҡөрьән аяттарын хәтеренә төшөрҙө лә, ҡарттарҙы йыйып, уларҙы яланға алып китте. Улар, Аллаһы тәғәләнең ярлыҡауына ышанып, аяуһыҙ ҡояш нурҙарынан янған иген баҫыуында доға ҡылды. Юҡ, барыбер ҙә ишетмәне Аллаһы тәғәлә ауыл ҡарттарының ялбарыулы тауышын. Әллә башҡа мәшәҡәтэштәренән бушай алмай һүҙҙәрен иғтибарға алып етмәне. Июндә ергә бер бөртөк тә ямғыр төшмәне, ә июлдә нимә буласаҡ? Күҙ алдына килтереүе лә ҡыйын...

Июль башында ҡарттар йәнә баҫыуға сығып, доға ҡылды, ҡабаланмай ғына ҡайтыу яғына атлағанда баштарына төшкән әлеге бәлә хаҡында һөйләштеләр.

— Берәйһен һыуға батырмай булмаҫ, — тине араларында иң өлкәне Шәйхислам ҡарт.

— Нисек һыуға?

— Әүәле шундай йола бар ине: ҡоро килгән йылда берәйһе һыуға батһа, биш көн рәттән ямғыр яуа торғайны. Утыҙ бишенсе йылда тап шулай килеп сыҡты. Тирмән быуаһында Абдулхаҡ батты — ямғыр яуҙы. Һикһән туғыҙынсы йылда күпер аҫтында ике иҫерек балыҡсы ауға уралып үлде, шунан һуң ямғыр ике аҙна буйы ҡойҙо ла ҡуйҙы. Ә туҡһанынсы йылда Ғәйнетдинов Шәфҡәт батты — ҡоролоҡ бөттө.

— Ә хәҙер ҡайҙа батаһың? Тирмән быуаһы юҡ. Кисә минең ҡарсыҡ йылғаны калоштары менән кисеп сыҡҡан. Күпер аҫтындағы һыу малайҙарҙың кендегенә лә етмәй.

Ҡомло карьерға ғына бармаһаң... Унда тәрәнлек биш метрға етә, төбөнән шишмә сыға. Балыҡсы Нәжметдин батмаҫмы икән? Көтәйек.

— Көттөң, көтмәй ни! Нәжметдин йөҙә белә, эсмәй ҙә. Шулай булғас нисек батһын?

Көндәр үтә торҙо, әммә бер кем дә батманы, ирҙәр осрашҡанда асыулы шаяра ла башланы: «Берәйһенең муйынына таш бәйләп, карьерға ташламай булмаҫ! Өтә бит, өтә».

Июль июнгә ҡарағанда ла эҫерәк килде. Көньяҡтан ҡыуан елдәр иҫте, янған баҫыуҙар өҫтөнән ҡара саң-туфраҡ күтәрелеп, юлдарҙа өйөрөлдө.

Элекке парторг Абдрахманов Шәрип менән Шәйхислам ҡарт ауыл түрәһенә керҙе лә, шулай-шулай, берәйһен һыуға батырырға кәрәк, юҡһа барыбыҙ ҙа ҡырылып бөтәсәкбеҙ, тик береһе лә батмай, нишләйбеҙ, тинеләр.

Ҡасандыр ауыл хужалығы институтын тамамлаған, йәш сағында үҙенең тыуған колхозын алдынғылар рәтенә сығарыу тураһында хыялланған, тик был хыялынан күптән өмөт өҙгән, уңышһыҙлыҡтарынан һәм бахмурҙан асыулы колхоз председателе Салауат, Шәйхислам ҡартҡа мыҫҡыллы ғына ҡарап, былай тине:

— Һин, Шәйхислам ағай, уже артығын йәшәйһең, шулай булғас, ниңә үҙеңә батмаҫҡа?

— Бик батыр инем дә, — тине Шәйхислам ҡарт председателдең һүҙҙәренә бер ҙә үпкәләмәй, — ҡарсыҡ бар шул. Ул, сырхау ғына нәмә, минең ветеран пенсияһынан башҡа нисек көн күрер икән һуң?

— Бәлки, былайтырғалыр, халыҡты йыйырға ла шыбаға һалырға кәрәктер, ә?! — тине элекке парторг.

Ауыл администраторы Урал, түрәлек креслоһына яңы ғына ултырған йәш егет, йөҙ-сырайына яһалма талапсанлыҡ сығарып, былай тине:

— Ундай мөһим сара еңел генә башҡарылмай. Тәүҙә район менән һөйләшергә кәрәк. Һин, Шәрип ағай, парторг булып эшләгән кеше, райком менән килешмәй берәй сара үткәрә торғайныңмы? Юҡ.

— Ул саҡтағы саралар бит партия, дәүләт эше ине, ә был беҙҙең шәхси, ғаилә эше тигәндәй. Кеше бата, батҡас, ямғыр яуа башлай. Бында район етәкселәренең ни хәжәте лә, ни ҡыҫылышы бар?

— Теләһәгеҙ ни эшләгеҙ, тик был эшкә беҙ ҡатнашмайбыҙ, — тине председатель ҡәнәғәтһеҙ генә. — Белегеҙ, был турала һүҙ булманы: һеҙ әйтмәнегеҙ, беҙ ишетмәнек.

Иртәгәһенә элекке парторг идара йорто алдына халыҡты йыйҙы. Кешеләр Шәриптең парторг икәнен яҡшы белә, һаман хәтерләй, иҫке ғәҙәт буйынса һаман уға ышаналар, уны тыңлайҙар ине.

— Йәмәғәт! — тип мөрәжәғәт итте ул халыҡҡа. — Хәлебеҙҙе барығыҙ ҙа яҡшы белә. Ғүмерҙә күрмәгән ҡоролоҡ. Урожайға өмөт юҡ, сәскән игендәребеҙ яныг-көйөп бөттө, ямғыр яуһа, үлән күтәрелер әле. Мал-тыуарҙы сығара алырбыҙ, исмаһам. Көҙҙән тупраҡҡа дым һеңеп ҡалһа, ҡыш ҡарлы килһә, киләһе йылда, Алла бирһә, тын алырбыҙ, тим. Былар бөтәһе лә үҙебеҙҙән тора, йәмәғәт. Тәбиғәттә шундай тәртип бар икән: ҡоро килгән йылда кеше һыуға батһа ғына ямғыр яуасаҡ. Ундай хәл элек беҙҙең ауылда ла булған. Тик быйыл беҙҙә кеше һыуға батманы, шуға ла ҡоролоҡ һаман дауам итә. Көсләп бер кемде лә был эшкә күндерә алмайбыҙ. Мин шыбаға тартырға тәҡдим итәм. Ҡатын-ҡыҙ, балалар ҡатнашмай. Ризаһығыҙмы?

Кешеләр өндәшмәне. Улар элекке парторгҡа тулыһы менән ышанырға өйрәнгәйне, ул грамоталы, фекер-тәҡдимдәрен ихтирам иттеләр, әммә бөгөн әйткәндәре бер ҙә әҙәмсә түгел, шуға ла аптырашта ҡалдылар.

— Ә һин үҙең тартаһыңмы ул шыбағаны? — тип ҡысҡырҙы склад мөдире Мортаза, бер аҙҙан.

— Ә нишләп тартмаҫҡа! — тип яуапланы элекке парторг.

— Батаһыңдамы?

— Батам да.

— Ә мин риза түгел! — тип сыйылдап ебәрҙе ҡапыл һауынсы, тракторсы Рифаттың ҡатыны Зөләйха. — Әлеге шыбаға тигәнегеҙ иремә сыҡһа, мин ике бала менән ултырып ҡалайыммы?

— Беҙ ҙә риза түгел! — тип гөжләне башҡа ҡатын-ҡыҙ берҙәм рәүештә.

— Ярай улайһа, — тине Шәрип, тауышы хәҙер ышаныcһыҙ сыҡты. — Улайһа мәсьәләне икенсе төрләрәк хәл итәйек. Һуғышта мөһим, ҡурҡыныс заданиеларға добровольцтарҙы ебәрә торғайнылар. Ротаны теҙәләр ҙә, кем дә кем үҙ теләге менән барырға риза, ике аҙым алға, тигән бойороҡ бирәләр. Сығалар, баралар, үләләр. Бына мин дә шулай тим, кем үҙ ихтыяры менән һыуға батаһы килә?

Йәнә өндәшмәнеләр. Иҫерек Әхәт кенә, давай, һин үҙең бат, шәп булғас, тип әйтеп ҡарағайны ла, халыҡ ҡәнәғәтһеҙ генә геүләгәс, ул да хәбәрен дауам итеүҙән тыйыл-

ды. Элекке түрәгә, оло йәштәрҙәге ихтирамлы кешегә, үҙ ихтыярың менән үлемгә бар, тип әйтеүе нисектер ҡыйын шул.

Ә Шәрип йәнә һүҙ башланы:

— Арағыҙҙа, бәлки, коммунистар барҙыр? Улар фронтта ла алда булды. Бына һин, Шәрифулла, ҡарт коммунист, был тәҡдимгә нисек ҡарайһың?

— Беҙ фронтта түгел,— тип яуапланы пенсионер Шәрифулла.— Унан килеп, мин ниндәй коммунист? Һинең ул партияң ҡайҙа һуң? Таралды бит...

— Беҙҙең яҡташ Александр Матросов коммунист та булмаған, шулай ҙа күкрәге менән дошман амбразураһын ҡаплап, бөтәбеҙҙе лә Гитлерҙан ҡотҡарҙы. Шуның һымаҡ кем дә булһа беҙҙең балаларҙы ас үлемдән ҡотҡарып ҡалырға тейеш тә инде.

Йәнә өндәшмәнеләр.

Алға колхоз шоферы, хәҙер пенсионер, законға, тәртипкә йәбешеп ятыусы, йыйылыштарҙа һөйләргә яратыусы Ваһапов Хан сыҡты. Уның тураһында, эсе ҡара, кеше хаҡында ғүмер буйы бер йылы һүҙ әйткәне булманы, тип һөйләйҙәр.

— Беҙ бында юҡ-бар һөйләп, нимәгә ваҡыт әрәм итәбеҙ? Шыбаға, добровольцтар, имеш. Ауылда бер нәмәгә эшкинмәгән, ялҡау, эскесе, урлашҡан кешеләр бөткәнме ни? Бына шундайҙарҙың береһен тоторға ла батырырға. И вәссәләм, бөттө-китте.

— Йә, кемде тәҡдим итәһең?

— Ну, әйтәйек, минең күрше Исмәғилде. Айлап эсә. Эшләмәй. Араҡыға ҡайҙан аҡса таба? Значит, урлай. Йәмғиәткә бер тинлек тә файҙаһы юҡ.

— Хайуан, үҙең бат! — тип шайлап ебәрҙе Исмәғилдең ҡатыны Шәүрә, наркологияла дауаланып ҡайтҡан алкоголичка. — Ауылда ләстит һөйләп йөрөүсе бер кеше кәмер, исмаһам.

— Йәмәғәт, тынысланығыҙ. Бик етди мәсьәлә тикшерәбеҙ, бер-беребеҙҙең боғаҙына йәбешмәйек,— тине элекке парторг, геүләй башлаған халыҡҡа ҡарап.

— Ғатаулланың ҡыҙын батырһаҡ? Аҡылға бер төрлө нәмәнән беҙгә ни файҙа? Хөкүмәткә лә зыян. Пенсияны минән күберәк ала, ә аҡсаһын Ғатаулла эсеп бөтөп тора,— тигән тәҡдим индерҙе пенсионер Шайморат.

— Беҙ бит был эштә ҡатын-ҡыҙ менән балалар ҡатнашмай, тип килештек.

— Улайһа, әйҙәгеҙ, Моталлап ҡартты батырайыҡ. Йәшәүе бик оҙаҡҡа китте, үҙе лә үлә алмай йонсой шикелле.

Моталлап ҡартҡа киләһе йыл туҡһан йәш тула. Күптән түгел генә уға операция яһанылар. Һейҙек ҡыуығынан тыш яҡҡа резина шлангы сығып тора, осо шешәгә тығылған. Ҡарт, ихатаһына йәки урам буйына сыҡһа, шул шешәһен тотоп йөрөй.

— Оло кешене үлтереү — гонаһ! — тине Гөлбикә ҡарсыҡ. — Ваҡыты еткәс, Аллаһы тәғәлә һеҙһеҙ ҙә уны үҙ янына саҡырып алыр әле.

— Ниңә йәлләйһең? Ул бит заманында ошаҡ йөрөттө, шикәйәттәр яҙҙы, күп кешене төрмәгә ултыртты.

— Әгәр анау «бизнесмен»ды ҡорбан итһәк? — тип тауыш бирҙе йәнә Ваһапов Хан. — Өсөнсө көн ҡалаға барғайны. Иҫәр тигәс тә иҫәр инде, шешә тулы тоғо менән автобусҡа инеп ултырҙы ла һүгенә, юҡ-бар һөйләй башланы, шунан, салбарын төшөрөп, оят ерен күрһәтергә тотондо. Ә автобуста ҡатын-ҡыҙ, бала-саға. Үндайҙар дурдомда ултырырға тейеш, ултырмай икән, үлтерергә кәрәк — бер файҙалары ла юҡ.

«Бизнесмен» тип олигофрен егетте йөрөтәләр. Ул буш араҡы шешәләре йыя. Бәләкәй ҡул арбаһы һөйрәй ҙә ауыл, ауыл тирә-яғы, йылға буйлап сығып китә, арбаһына шешә тейәп ҡайта, шуларҙы йыуа, тоҡҡа тултырып, ҡалаға тапшырырға алып бара.

— Нишләп файҙаһы булмаһын? — тип ҡаршы төшә был тәҡдимгә ҡырҡ йәштәр тирәһендәге мыйыҡлы Әнүәр, эсмәгән, тартмаған, бөтә эшкә лә ҡулы килешкән ир — балта оҫтаһы, мейес сығарыусы, телевизор ремонтлаусы, етмәһә, картиналар ҙа яҙа. — Ул булмаһа ауылды күптән буш шешәләр баҫыр ине. Хәҙер бит шундай мода китте — өйҙә эсмәйҙәр, яланға сығып эсәләр. Йылға яры буйын да эске урынына әйләндерҙеләр. Бала-саға шуны вата ла һыуға ташлай, шуға аяҡтарын яра. Шулай булғас, шешә йыйыу беҙгә файҙа түгелме ни? Ғаиләһенә лә файҙа: төҫлө телевизор һатып алған, энеһенә мопед бүләк иткән.

Ҡаршы төшөүсе булманы Әнүәргә, барыһы ла килеште уның һүҙҙәре менән.

— Һаман аҡыл һатабыҙ, әйтерһең дә, беҙҙең арала файҙаһыҙ кешеләр юҡ, — тип яңынан һүҙ ҡыҫтырҙы Шайморат ҡарт. — Буранбай ошо эшкә ярамаймы ни?

— Бөтә Союз кимәлендәге алкоголик, — тине берәү.

«Бөтә Союз кимәлендәге алкологик» тигән почетлы исемде Буранбай үҙенә үҙе таҡҡан: «Мин, Хәкимов Буранбай, йәғни, Зәйнәпович, Зәйнәпыч, Бөтә Союз кимәлендәге алкоголик», — тигән.

Ҡырҡ йәшлек Зәйнәпыч йүнләп бер ҡайҙа ла эшләмәне. Пилорамаға урынлаштырып ҡарағайнылар, колхоз таҡталарын һатып эсте, унан пожаркаға күсте — янғынды йоҡлап ҡалды. Бер мәл «шабашка»ла йөрөнө: эске хаҡына кемгәлер өй, мунса бураны. Әсәһе пенсияға сыҡҡас, пенсия аҡсаһын тартып алып, эсә башланы, бирмәһә, туҡманы. Әсәһенә ҡул күтәргәне өсөн бер йылға ултыртып та ҡаранылар, ҡайтҡас та иҫке ғәҙәтен ташламаны. Атаһын иҫләмәй. Хәйер, ауылда берәү ҙә белмәйҙер уның атаһы кем икәнен. Берәүҙәр, уның тыуыуын был яҡтарға ҡайҙандыр килеп сыҡҡан старатель менән бәйләй, икенселәр — урлашҡаны өсөн төрмәгә ултырттылар, шунда үлгән, тип һөйләй. Шуға ла уны, Буранбайҙы, атаһының исеме менән түгел, ә шаяртып, әсәһенең исеме менән Зәйнәпович йәки, ҡыҫҡаса, Зәйнәпыч, тип йөрөтәләр.

— Дөрөҫ, тап уны батырырға кәрәк, нишләп шундуҡ иҫкә төшмәгән? — тигән ауаздар ишетелде халыҡ араһынан.

— Улайһа тауышҡа ҡуям, йәмәғәт. Кем дә кем Буранбайҙы һыуға батырайыҡ ти, шулар ҡулдарын күтәрә. Бер тауыштан. Ҡаршылар юҡ. — Ниһайәт, мәсьәләнең осона сыҡҡан элекке парторг ҡәнәғәтлек менән тирә-яғын байҡаны, әйтерһең дә, дәүләт кимәлендәге проблеманы хәл итте. — Ҡайҙа Буранбай?

— Ул юҡ, килмәгән.

— Саҡырығыҙ.

Буранбай идаранан йыраҡ түгел, зыяратҡа бара торған тыҡрыҡтан өсөнсө йортта, йәшәй. Көн иткән йорто сүгеп, ҡыйшайған, етмәһә, ауылда берҙән-бер телевизор антеннаһы булмаған йорт. Уларға кереүсе бик һирәк, юҡ фиғелендә, һуғылғандар ҙа ярлылыҡты, меҫкенлекте күреп: «Нисек йәшәйҙәр, ой, нисек йәшәйҙәр?» — тип баш сайҡап сыға.

Буранбай менән әсәһе өйҙәренән сыҡты ла кеше төркөмөнә ҡушылды. Шешенгән, бит-йөҙөн һаҡал-мыйыҡ баҫҡан, күҙҙәренә ҡан һауған, һәләмә кейемле Буранбай сүп-сар, ашанты ҡалдыҡтары ырғытҡан соҡорҙан пәйҙә булған ниндәйҙер сәйер бер йән эйәһе кеүек. Бөтәшер

сиккә еткән ҡыҫыҡ күҙ ҡараштары буш һәм томанлы, ҡан тамырҙары бүртеп торған ҡулдары туҡтауһыҙ ҡалтырай.

— Ниндәй митинг был? — тип мөгөрләне Зәйнәпыч.

— Һине һыуға батырырға хәл иттек! — тип ҡысҡырҙы халыҡ араһынан берәү.

— Нисек батырырға, ҡайҙа?

— Араҡыла.

— Араҡыла булһа, ярар, — тип ҡәнәғәт яуапланы Буранбай, шунан саҡ ҡына өндәшмәй торҙо ла. — Араҡыла мөмкин, мин риза, — тип өҫтәне.

Буранбайҙың әсәһе, Хәкимова Зәйнәп, йәш сағында, күрәһең, мөләйем генә ҡатын булғандыр, тик хәҙер, илле ете йәшендә, етмеш йәшлек әбей һымаҡ. Ҡара күҙҙәре һаҡ, ҡурҡып ҡарай. Улы һымаҡ ул да һәләмә кейемдә, ситса күлдәге күп йыуыуҙан төҫһөҙ сепрәккә әйләнгән, сал төшкән башына уңған, билдәһеҙ төҫкә ингән яулыҡ ябынған. Дөйөм был төҫһөҙлөккә таушалған зәңгәрһыу йөн джемпер, ҡолаҡтарындағы эре һары быяла алҡалар ғына йән биргәндәй. Ҡатын кәүҙәгә бәләкәй — эргәһендә торған үҫмер малайҙан саҡ ҡына ҡалҡыуыраҡ.

Зәйнәптең дә, уның улы Буранбайҙың да алдағы көндәрҙә йүнле тормош менән йәшәмәйәсәге, йәшәй алмаясағы күренеп тора ине.

— Зәйнәп, — тип мөрәжәғәт итте Шәрип. — Хәлде беләһең, өсөнсө йыл ҡоролоҡ. Тәбиғәттә ошондай тәртип бар: ямғыр яуһын өсөн берәйһен һыуға батырырға кәрәк. Ошонда йыйылған халыҡ һинең улыңды ҡорбанға бирергә ҡарар сығарҙы. Ул бөтөнләй файҙаһыҙ кеше, хатта зыянлы, бушҡа аҙыҡ серетеүсе паразит, исмаһам, үҙенең үлеме менән йәмғиәткә файҙа килтерһен. Буранбай, йәмғиәт өсөн һыуға батырға әҙерһеңме?

— Беләһеңме, ҡайҙа кит?.. — Буранбай әсе итеп һүгенде.

— Нисек инде батырырға? — тип аптыраны Зәйнәп. Улы иңенә төшкән яза мәғәнәһе уға һаман барып етмәй ине шикелле. — Минең улымды батырырға әйтәһегеҙме ни?

— Эйе, һинең улыңды шул. Халыҡ бер тауыштан ҡул күтәрҙе, значит, батырабыҙ! — тине элекке партком ышаныслы итеп.

— Нисек?.. Ул бит минең берҙән-бер балам. Мин уны йөрәгем янында йөрөттөм, ауыр таптым, ә һеҙ һыуға ташларға йыйынаһығыҙ. Юҡ, мин риза түгел!

— Әгәр быйыл ямғыр яумаһа, киләһе йыл бер нәмә лә үҫмәй, значит, беҙ һәммәбеҙ ҙә астан ҡырыласаҡбыҙ. Дәүләттән ярҙам көтәһе юҡ, элекке ваҡыттар үтте ҡул һоноп ятырға, хәҙер үҙебеҙ...

— Ҡырылһаҡ ҡырылырбыҙ, тик улымды бирмәйем!

— Зәйнәп, һуғыш ваҡытында беҙҙең әсәләр, минең ризалығым юҡ, тимәне. Ана, обелиск тора, унда йөҙҙән ашыу фамилия яҙылған, улар барыһы ла яу яландарында баштарын һалды, үҙҙәрен беҙ тере ҡалһын тип ҡорбан итте,— тине Шәрип, парторг сағында һөйләгәнсә тамаҡ төбө менән.

— Барыбер ризалығым юҡ!

— Ә һеҙ Буранбайҙың үҙенән һорағыҙ, ул үҙе ризалыр, бәлки,— тине тракторсы Садиҡов Шәфҡәт.— Эй, Буранбай, батырға теләйһеңме?

Буранбай был эште һаман ысынға алмай ине шикелле, йәки аҙағына тиклем төшөнөп етмәйҙер. Алдындағы бер нөктәгә текәлгән дә тик тора — уны бахмур бөгә, бахмур ҡалтырата.

— Ул ниндәй балаң булһын инде? Пенсияңды эсеп бөтөрөп тора, етмәһә, туҡмай,— тип хәбәрен яңынан теҙҙе Шәрип. — Унһыҙ, исмаһам, кешесә йәшәп ҡалырһың. Ял итерһең. Тормоштоң ни икәнен белерһең.

— Ризалығым юҡ!

— Ярай, улайһа һинең ризалығыңдан башҡа ғына батырырбыҙ. Халыҡ хәл итте инде. Бармаһа, тотоп бәйләрбеҙ ҙә, муйынына таш аҫып, карьерға ташларбыҙ. Шулаймы, йәмәғәт?

— Эйе, шулай! — тигән тауыштар ишетелде төркөмдән.

Зәйнәп йәнә аптырап ҡалды, бәләкәй йөҙөндәге йыйырсыҡтары тартышты, тешһеҙ ауыҙы ҡыйшайҙы, ирендәре дерелдәне. Ул ҙур ҡыйынлыҡ менән төкөрөгөн йотто ла, улына нәфрәтле ҡарашын ҡаҙап, ҡысҡырып ебәрҙе:

— Батырығыҙ! — шунан баҫҡан ерендә тапанып алды, ҡулдарын һелтәне.— Кеше түгел, хайуан тип тә булмай уны. Хайуандан кешегә файҙа, ә был армиянан ҡайтҡаны бирле ҡыл да ҡыбырлатманы. Ҡанымды эсте. Туҡманы, иҙәнгә һөйрәп төшөрөп, типкеләне. Ҡарағыҙ, ниндәй көнгә ҡалдым мин. Өйҙәге бар нәмәне һатып эсеп бөттө, хәшәрәт! Һыйырҙы һаттыҡ — яңғыҙым бесән әҙерләй алмайым. Колхоз утын менән ярҙам итмәһә, беҙ күптән был емерек өйҙә туңып үлер инек. Оҙаҡламай аслыҡтан

аяҡ һуҙасаҡбыҙ. Батырығыҙ, мин риза. Ҡотҡарығыҙ мине был паразиттан!

Зәйнәптең һүҙҙәренән кешеләр аптырап ҡалды, сөнки уй-ниәтенең шулай ҡапыл ғына кирегә үҙгәреүен һис көтмәгәйнеләр. Байтаҡ ҡына тын торғандан һуң элекке парторг Буранбайға өндәште:

— Күрәһеңме, хатта үҙ әсәйең дә һинән баш тарта. Бат, үҙеңде көс менән алып барып ырғытыуҙан ҡотҡар беҙҙе. Ямғыр яуһа, һәйбәт итеп телгә алырбыҙ, рәхмәттәр уҡырбыҙ. Бындай үлем хайуандарса эсеп үлеүгә ҡарағанда яҡшыраҡ бит.

— Баш төҙәтергә табаһығыҙмы һуң? — тип мөгөрләне Зәйнәпыч.

— Табабыҙ. Күпме теләйһең, шунса. Тик бат ҡына.

— Өс шешә... Минең үҙемә лә бындай тормош ялҡтырҙы.

Аҡса йыйҙылар, кемдер магазиндан өс шешә араҡы алып килде. Шуларҙың икәүһен Буранбай бысраҡ салбарының кеҫәләренә тыҡты, өсөнсөһөн тештәре менән асты ла, шешә ауыҙынан ғоролдатып эсә-эсә, өйө яғына атланы. Ул ҡуҙғалғас, кешеләр ҙә таралыша башланы. Атлай-атлай батырға тейешле Буранбай тураһында һөйләштеләр. Берәүҙәр, күрегеҙ ҙә тороғоҙ, алдаясаҡ ул, батмаясаҡ, зерә алып бирҙек араҡыны, тине, икенселәр, батасаҡ, ҡайҙа барһын, ә Ваһапов Хан, өс шешәнән һуң бер нәмә белмәй йоҡлаясаҡ, иртәнсәк килербеҙ ҙә бәйләп карьерға алып барырбыҙ, тине.

Төнөн кешеләр күк күкрәүгә, йәшен йәшнәүгә, тәҙрә быялаларына көлтә-көлтә ямғыр бәреүенә уянды. «Аллаға шөкөр, — тип шыбырлашты улар. — Рәхмәт инде Буранбайға, беҙҙе тыңланы, яуҙырҙы бит!» Йәшен зыярат эсендә үҫкән ҡарағастың осон атып төшөрҙө, подстанцияның трансформаторын яндырҙы, ҡайһы кешеләрҙең ҡыйыҡтарынан һыу аҡты, тауҙан урғылған ташҡын тыҡрыҡтың теге осонда йәшәгән Рамазанова Хәҙисәнең ихатаһын баҫты, баҙына төштө.

Таң атыуға ямғыр тымды, дөрөҫөрәге, ялҡау, ваҡ һибәләүгә күсте. Ә төш етер алдынан, көн ҡабағы тамам асылғас, кешеләр багорҙар алып ҡомло карьерға китте — батҡан кешене һыу төбөнән һөйрәп сығарып, ерләргә кәрәк ине. Әммә яр башында улар ямғыр һыуы менән тулы иҫке калоштарға, бер-береһенең өҫтөнә тәртипле итеп һалын-

ған төçһөҙ яулыҡҡа, зәңгәрһыу йөн джемперға, эре һары быяла алҡаларға ғына тап булды...

Ә Буранбай Зәйнәпыч был мәлдә, эскән өс шешә араҡыһынан һуң өçтөнә аҡҡан тамсыларға ла уянмай, ирендәрен сәпелдәтә-сәпелдәтә иçерек йоҡо менән йоҡлай ине.

## Мылтыҡ

Ун туғыҙынсы августа, шәмбе көн, «Маяҡ» колхозы лесниғы Ситдиҡов Харисҡа ҡалалағы тау-байыҡтырыу фабрикаһында инженер булып эшләгән энеһе Ваҡҡас шылтыратты ла иртәгә Хафизов Барый менән өйрәк атырға килергә йыйыныуҙарын әйтте. Райпотребсоюз председателе Хафизов Ситдиҡовтарға туған тейешле кеше. Өсөһө лә вазифалы, һиммәтле урында эшләгәс, ағай-энеләр бер-береһен ихтирам итә, аралаша-йөрөшә, ҡыйынлыҡтар сыҡһа, ярҙамһыҙ ҡалдырмай.

Харис, ниәтегеҙ шәп тә ул, тик иртәрәк түгелме һуң, бәлки, сезон асылғанын көтөрбөҙ, күп ҡалманы бит, тип икеләнеүен белдергәйне лә, Ваҡҡас быға, сезон асылғас, һәр бер тинтәк шаңҡыта башлаясаҡ, иң ҡулайы ошо арала инде, ҡоштарҙы ҡурҡытып өлгөрмәгән саҡ, тип яуапланы. Бәлки, минһеҙ генә барырһығыҙ, тип тә ҡарағайны Харис, тегеһе яҡын да килмәй, нисек һинһеҙ, һинһеҙ эш сыҡмаясаҡ унда, әллә ата алмай башланыңмы, тип мыçҡыллы кеткелдәне.

Юҡ, атыуҙы онота буламы һуң Харис, малай сағында уҡ осоп барған өйрәкте әйләндереп төшөрә торғайны, тик һуңғы мәлдәрҙә ҡош-ҡортҡа бүтән ҡағылмаçҡа тигән һүҙе бар ине шул. Уның был ҡылығы — тәбиғәт балаларын йәлләү йәки һунар дәрте һүнеүҙән түгел, ә ҡырҡты уҙғас мылтыҡҡа ҡарата барлыҡҡа килгән һөйһөнмәү, дөрөçөрәге, унан һағайыу тойғоһо ине. Нервылары ла тартылған кереш кеүек хәҙер, ваҡыты-ваҡыты менән башына әллә ниндәй ҡырағай уйҙар ҙа килә. Сәбәбе — йылдан-йыл йышыраҡ иçенә төшөп, шуның шауҡымы йөрәген кимергән әллә ҡасанғы бер мажара.

Биш йыл элек Харис, кесе улы армиянан ҡайтҡас, олатаһынан ҡалған 28-се калибрлы (яңы ҡушкөбәктәрҙе үҙһенмәй ине) берданкаһын һәйбәтләп майланы ла һарайҙағы утын аçтына йәшереп ҡуйҙы. Шул көндән бирле

ҡулына мылтыҡ тотҡаны юҡ. Үҙенең урман хужалығына ла ҡоралһыҙ йөрөй.

Олатаһынан ҡалған, һалҡын көбәкле, өс ҡороулы, винтовканыҡы һымаҡ йөрөп торған затворлы берданканы Харис өйҙәге, тирә-яғындағы әйберҙәрҙе таный башлағандан бирле белә. Ул стенала, урындыҡ өҫтөндә элеүле торор ине. Оҙонса, ялтыраһансы шымарған прикладтан, зәңгәрһыу ҡара тимерҙән торған был серле әйбергә ҡул һуҙырға ярамай. «Теймә, оронаһы булма, ул һиңә уйынсыҡ түгел!» — ти торғайны ололар, уның үрелгән сағын күрһәләр.

Үҫә килә Харис был әйберҙең мылтыҡ икәнен, шуның менән атаһы урманда ҡош-ҡорт атҡанын белде. Ә ҡаҙаҡҡа буйы етә, ҡулдары нығына төшөп, ауыр мылтыҡты күтәрергә көсө етә башлағас, ул өйҙә яңғыҙы ҡалғанда тегене стенанан ала ла затворын артҡа тартып, хыялы менән йәнлектәргә тоҫҡағандай, тәтегә баҫып ҡарай торғайны. Бәхеткә ҡаршы, патронникта яһау юҡ һәм мылтыҡ атмай, бушҡа ғына сиртә. Дөрөҫ, яһау тулы патронташ мылтыҡҡа йәнәш элеүле лә бит. Малай унан серек йомортҡа һәм тимер еҫе аңҡыған еҙ патронды ала, тәтене сирттергән саҡта эсен ҡарай: аҡ кейеҙ аҫтында дороп ятҡанын, яһауҙың көпшә аша бәреүен дә белә. Харистың патронды патронникка тыҡҡыһы бик килә, тик атаһынан шөрләй.

Был ваҡиға һуғыштан һуң ауыр ҡырҡ алтынсы йылда булды. Ул замандарҙа ауыл буйлап көтөү-көтөү бала-саға йөрөй торғайны. Күрше ауылдарҙан киләләр — үҙ ауылдарында теләнселәп йөрөргә оялып, тегеләрҙең ата-әсәһе сит ауылға ебәрә, күрәһең. Кем белә, бәлки, берәйһе ҡатҡан икмәк һынығы тотторор йәки ҡатыҡ арттырыр.

Атаһы, Ситдиҡов Закир, һуғыштан яраланып ҡайтты ла, әлеге Харис һымаҡ, лесник булып китте. Биләмәһенә мылтыҡ менән йөрөр, урман ҡоштары атып алып ҡайтыр ине. Картуфтары, һөт-ҡатыҡтары ла булды. Алтын приискыһында эшләп йөрөгән өлкән апаһы карточка буйынса икмәк ала һәм үҙ паегынан ғаиләгә лә өлөш сығара ине. Шуғалырмы, Ситдиҡовтар әллә ни асыҡманы.

Теләнеүселәр, билдәле, Ситдиҡовтар йортон да урап уҙманы: ҡапҡа келәһенә нисектер буйҙары етеп, ҡайышын тарталар, ихатаға үтәләр, соланға инәләр, унан ауыр өй ишеген тартҡылайҙар. Һәләмә кейенгән, ялбарыулы ҡарашлы малайҙар, ҡыҙҙар тупһаға уҡ менә, икмәк һорап, ҡулдарын һуҙа. Әгәр рус балалары булһа, кереү менән

ҡабаланып суҡыналар, аңлашылмаған телдәрендә нимәлер тәтелдәй башлайҙар. Әсәһе уларға бешкән картуф тоттора. Әгәр ашарға булмаһа: «Бер нәмә лә юҡ, үҙебеҙ ҙә ас ултырабыҙ, — ти. Тегеләр артынан ишек ябылғас, тәрән көрһөнә лә, — бахырҙар, ошо йәштән үк нужа күрәләр», — тип ҡуя.

Бер саҡ Харис (уға етенсе йәш ине) энеһе Ваҡҡас менән икәүҙән-икәү генә ҡалғайны өйҙә. Әле генә сәй эстеләр, ашағандан ҡалған аҙыҡты ла йыймай әсәһе ҡайҙалыр сыҡҡан. Ишекте саҡ-саҡ асып бер малай килеп инде. Өҫтөндә — ололар яурынынан алынған, төрлө еренән мамыҡтары тырпайып торған алама һырма, аяғында — оло сарыҡ, яурыны аша буш киндер тоҡ аҫҡан. Һәр бер хәйерсе һымаҡ, был да ялбарыулы ҡарана. Ул өйгә күҙ йүгертте лә үҙенән дә бәләкәйерәк ике генә малай икәнен аңлап, тәрилкәләге картуфҡа баҡты. Һәм ҡапыл ниндәйҙер ҡыйыулыҡ менән һикегә яҡынланы. Харис хәлгә төшөнгәнсе, теге малай картуфтарҙы етеҙ генә тоғона тултыра ла башланы. Берҙе алды, икене, өстө. Ә әсәһе Харис менән Ваҡҡасҡа берәрҙе генә бирә торғайны. Был малай һорамай ала, тимәк, урлай. «Теймә, кире һал. Һинеке түгел!» — тине Харис, аңына килеп. Тыйыуға иғтибар ҙа итмәй малай йәнә ике картуф алды. Харис мылтыҡты иҫенә төшөрҙө. Ҡотон осорайым әле, тип уйланы ул. Йәһәт кенә һикегә менде лә ҡаҙаҡтан ҡоралды алды. Шул арала теге малай ишеккә ыңғайланы. «Кире һал картуфты!» — тип ҡысҡырып ебәрҙе Харис, мылтыҡты тегегә төҙәп. Малай тотҡаға йәбеште. Шул мәл Харис тәтегә лә баҫты. Әммә мылтыҡ был юлы сыртлап ҡына ҡалманы, гөрһөлдәп атылды ла Харистың ҡулынан төшөп китте. Ҡолағы тоноп, ҡото алынған Харис малайҙың һырмаһынан төтөн сығыуын, тегенең сайҡала-сайҡала ишек тупһаһына arҡыры йығылыуын күреп өлгөрҙө. Ваҡҡас аҡырып илап ебәрҙе. Энеһендә ҡайғыһы юҡ ине Харистың, һикенән төштө лә аяҡ-ҡулдары тартышҡан теләнсе малай кәүҙәһе аша атлап ихатаға атылып сыҡты һәм мунсаға йәшенде... Кискә генә таптылар Харисты. Уны өйгә индергәндә теге малай тупһала юҡ ине, ҡанды ла һөртөп алғандар. Атаһы менән әсәһенең йөҙө ҡайғылы, стеналағы мылтыҡ та күренмәй.

Ауылда хөрмәтле кеше иҫәпләнгән Ситдиҡовҡа ҡаршы эш ҡуҙғатылманы, етмәһә, үлгән малайҙың ҡайҙан, ниндәй ауылдан, кем балаһы икәнен дә белә алманылар, ә алты йәшлек Харистан ниндәй яуап алаһың инде? Малайҙы бик

тауыш сығармай йәһәт кенә ауыл зыяратына илтеп күмделәр ҙә оноттолар. Һуңынан балалыҡ ғәмһеҙлеге һәм уйындары менән Харис был малайҙы иҫенән сығарҙы, дөрөҫөрәге, фажиғә уға ҡурҡыу, өҙгөләнеү, уйланыуға әүерелмәне. Ҙурая төшкәс, ул үҙенә аҡланыу ҙа тапты: уның, йәнәһе, бер нәмә лә аңламаған сағы. Атаһы һунарҙан һуң патронды нишләп алмаған, тимәк, фажиғәгә атаһы ғәйепле. Үлгән малайҙы иҫенә төшөрмәнеләр, күңелен яраламанылар, шулай ҙа ул ололарҙың, хатта тиҫтерҙәренең дә быны онотмағанын һиҙеп үҫте. Улар өсөн ул — кеше үлтереүсе Харис. (Ауылда йәнә бер Харис бар, тик унынһы үлтереүсе түгел).

Уға ун дүрт йәштәр тирәһендә мылтыҡ йәнә килеп керҙе ҡулына. (Атаһы уны ярата һәм бар шуҡлыҡтарына күҙ йомоп ҡараһа ла, гел киҫәтә килде: «Иҫеңдә тот, мылтыҡты бер ҡасан да ҡоролған көйө ҡалдырма, шаярып булһа ла кешегә төҙәмә!») Ҡороулы мылтыҡты алғас, Харис ҡурҡыу һиҙмәне. Ул уның көсөн белә һәм был көстө һынап ҡарағыһы килә ине. Тәүҙә ул дороп менән тишек сәйнүкте элеп шуга атты, унан малайҙарҙың һауаға сөйөлгән фуражкаларына сәпәне. Һуңынараҡ турғай, һайыҫҡан, ҡарға йәнен ҡыйҙы, тора-бара бесәйгә, эйәһеҙ эттәргә лә сират етте. «Малайын иркәләй Закир,— тип һөйләнде күршеләре. — Тағы берәйһен атып ҡуймағайы».

Ситдиҡовтарҙың бер яғында ҡартайған әсәһе менән Сәлимә апай йәшәй ине. Ҡарсыҡтың ире Баһауетдин һуғышҡа тиклем үк карьерҙағы забой аҫтында ҡалып донъя ҡуйған, Сәлимә апайҙың ире Нигмәт ағай һуғышта ятып ҡалды. Күршеләр ергә һеңеп бөткән өйҙә йәшәй. Харис ҡай саҡ уларҙың ҡыйыш, ҡараңғы тәҙрәләренән иҫке балаҫ түшәлгән һикене, мейес янындағы һары самауырҙы һәм ҡарсыҡтың күләгә һымаҡ шыуып йөрөгән арыҡ кәүҙәһен күрә. Ҡарсыҡты Харистың әсәһе ратманы, гел «сихырсы»нан һалдырҙы. Әбей күршеләренә ҡарай ҙа энәне йәшереп кенә йә тәҙрә араһына, йә бурәнә араһындағы мүккә тыға. Уның ниңә былай ҡыланғанын берәү ҙә белмәй, бөтәһе лә, ул шул рәүешле сихырлай, ти торғайны. Өйгә керһә, ниҙер ҡылып ҡуймағайы тип, күҙ яҙҙырмайҙар ине үҙенән.

Ике ихата араһында тәпәшәк кенә ситән. Ситәндең теге яғында Юлбарыҫ исемле эт тә йәшәй. Олоғайған, тыныс, юҡ-барға өрөп бармаҫ. Ауылдың бар халҡын танып тора. Ситән уртаһында ҡыйшайып бөткән ҡапҡа ишараты

бар. Һуғышҡа ҡәҙәр әбей ҙә йәш, «сихырсы»ға ла әйләнмәгән, Ниғмәт ағай ҙа иҫән саҡта әле күршеләр бер-береһенә йөрөшә торғайны. Әллә һуғыш йылдары, унан һуң килгән ҡайғы-хәсрәттәр, ярлылыҡ, әллә кеше бәхетенә йәшерен көнсөллөк (йәнәһе, уныҡы ҡайтты, ә минеке ятып ҡалды) Сәлимә апайҙы ныҡ үҙгәртте: һөйләшмәҫ булды, күршеләренә юлын һыуытты. Ҡыҫҡаһы, ике арала яйлап эске дошманлыҡ, күрә алмаусылыҡ тыуҙы.

Әлбиттә, ололар мөнәсәбәтендә балаларҙың эше юҡ. Биш йәшлек Шамил, Ситдиҡовтар ғаиләһенең иң бәләкәйе, теге яҡта Сәлимә апайҙың малайы менән уйнап йөрөгән еренән бер ваҡыт үкереп илап ҡайтты ла, ҡулындағы ҡанлы яраны күрһәтеп, Юлбарыҫ тешләүен ошаҡланы. Шамилға эйәреп артынан кергән күрше малайының әйтеүе буйынса, ул эттең ҡойроғонан тартып йөрөткән икән. Ҡойроҡҡа ҡағылһаң, һәр эт, хатта иң аҡыллы иҫәпләнгәне лә, билдәле, тешләргә мөмкин. Ҡанды күреү менән әсәһенең ҡото алынды; быға тиклем йәбешмәй ине , ҡоторғандыр ул эт, тип ысҡындырҙы. Быны ишетеп-күреп торған Харисҡа етә ҡалды — ул йәһәт кенә мылтығын ҡорҙо ла күршеләренең ихатаһына атылды һәм япма һалҡынында йоҡомһорап ятҡан эткә терәп тигәндәй атып та ебәрҙе. Эт, сыйылдап, мөйөшкә һырлыҡты, әйтерһең, тегене ҡаҙаҡлап ҡуйҙылар. Ул, ҡото алынып, аңламай, был күрше малайы ниңә миңә атты әле, тигәндәй ҡарай ине. Күҙҙәрендә — ялбарыу. Ҡабырғаһынан һарҡҡан ҡан шырт, йылтыр йөнө буйлап ергә аға.

Әбей йүгереп сыҡты.

— Ниңә атаһың? Ул һиңә ниндәй зыян ҡылды?

— Ул Шамилды тешләгән, ҡоторған этегеҙ,— тип яуап бирҙе Харис һәм эткә йәнә бер атты.

Юлбарыҫ аяғына баҫырға була ҡалҡынды ла, бар кәүҙәһе менән ҡалтыранып, ергә ҡапланды.

— Һин үҙең ҡоторған. Ләғнәт төшкөрө! Кеше балаһына аттың, хәҙер беҙҙе үлтерергә уйлайһыңмы? Мә, ат әбейгә!

Әбей шулайтып уға теге теләнсе малайҙы иҫенә төшөрҙө. Харис уны онотоп та бара ине инде. Кеше үлтереүсе тип әйтеүсе берҙән-бер кеше ана шул күрше әбей булды.

— Ҡысҡырынма, сихырсы! — тип яһилланды Харис, үлгән эткә тағы бер яһау дөмбөлдәтеп ҡапҡа аша сыҡты.

— Ләғнәт! — тип ҡысҡырҙы ҡарсыҡ. — Ҡәһәр төшкөрө! Етемдәрҙең күҙ йәше өсөн Аллаһы тәғәләнең ҡарғышы төшһөн! Үҙ мылтығыңдан үҙең атылып үл!..

Армияла хеҙмәт итеп ҡайтҡас, Харис ике йыллыҡ урмансылыҡ училищеһын бөттө лә район урман хужалығында техник булып эшләй башланы. (Атаһының юлын ҡыуҙы.) Бер аҙҙан һөнәренә өйрәнә төшөп, күҙе-башы асылғас, үҙенә беркетелгән урман-тауҙарҙа һунар мәсьәләһендә өҫтөнән тикшереүсе юҡлығын һиҙҙе. Тәүҙә ул һирәк-мирәк ваҡ йәнлектәр атты, сезонды һаҡланы, йәштәренә теймәне, бала сығарған инәләренә ҡағылманы, һуңынаныраҡ сәмгә керҙе, йәнлек-кейек ҡанынан нәфсеһе ҡоторҙо һәм, йылдың ниндәй осорона ҡарамай, күҙенә салына барған береһен йыға барҙы. Инә мышымы, ата мышымы — ҡарап торманы. Ә күпмеһен яралап ебәрҙе. Башына йәки йөрәгенә тейҙерә алмай икән, хайуан, ҡорһағында пуля бар көйө ҡанһырап, ҡайҙалыр барып йән бирә. Шулай итеп, участка браконьерҙары менән көрәшергә тәғәйенләнгән Харис үҙе ата браконьерға әйләнде. Мышыларҙың күсеп йөрөү юлдарын, япраҡ-миндек, тоҙ ҡуйылған урындарҙы яҡшы белгән Харис теләгән саҡта һағалап тора ла сәпәй ҙә ҡуя ине. Әммә ваҡыты-ваҡыты менән һаҡ ҡыланды: хайуандың тиреһен, башын ергә күмде, белә, енәйәт ҡылыуын аңлай, тик үҙен тыйырлыҡ көс таба алмай ине. Кейектәр кеше һымаҡ илай, ҡайғыра белһә, моғайын, бөтә тирә-яҡ тереклеге ҡурҡыныс утлы ҡорал эйәһе — киң яңаҡлы, ҡара күҙле тәбәнәк кеше йөрөгән ерҙәрҙән алыҫыраҡ булырға кәрәклеген әйтеп ҡалдырырҙар ине...

Биш йыл элек бәләкәй улы армиянан ҡайтты ла мылтыҡ менән булаша башланы. Ситдиҡовтар нәҫеле дауам итте — олатайҙың иҫке берданкаһы яңы быуын ҡулына күсте. Теге иҫәр карьерға өйрәк атырға барған да осҡан ерҙән тигеҙмәм тип, һыуға төшкәс сәпәгән ҡошто. Яҙа бәргән барыбер, дороп һыуҙан ҡаҡлығып, арғы ярҙа балыҡ ҡармаҡлаған Ғатаулла ҡарттың ҡабырғаһына үтеп кергән. Ярай әле ара яҡын түгел, юғиһә үлтерә ине. Шулай ҙа ҡартлас бөтә ауылға яр һалды, милицияға хәбәр итте. Икенсе көнөнә ҡаланан ике милиционер килеп, бәләкәй Ситдиҡовты алып китте. Барый райкомда эшләмәһә, судтан ҡотола алмаҫтар ине, моғайын. Милиция менән һөйләштеләр, ҡартласты юхаланылар. Әйләнеп ҡайтты теге, мылтыҡты ла кире бирҙеләр. Ҡыҫҡаһы, ағай-эне менән күмәкләп эште йомдолар. Харис берданканы майлап иҫке сепрәккә төрҙө лә һарайҙың мөйөшөнә йәшерҙе. Өҫтөнә

утын әйҙә. Шул көндән алып, бына биш йыл инде, уны ҡулына алғаны юҡ.

Бына бөгөн ул шул мылтыҡты утын аҫтынан ҡаҙып сығарҙы. Алмаҫҡа ла булыр ине, тик ир ғорурлығы һаналған һунарҙан баш тартыу шәп түгел. Барый уның хәлен аңлар ҙа һымаҡ, тик әсе телле Ваҡҡас ҡына һуңынан мыҫҡыллап күҙен астырмаҫ. Улар, ысын егеттәр кеүек, күп эштә, бигерәк тә һунарҙа, көндәштәр бит.

Харис утынды ташлап, төйөнсөктө тапты ла сепрәкте һүтте. Бына уның 28-се калибрлы үҙ берданкаһы. Нисә быуын Ситдиҡовтар ҡулы йылтыратҡан прикладты тотҡас, уның хатта күңеле тулышты — тормошоноң иң әсе һәм ҡыуаныслы кисерештәре ошо үлемесле ҡорал менән бәйләнгән шул. Ҡулдары шундуҡ уның һәлмәк ауырлығын тойҙо, төйҙәһенең һалҡынлығын хәтерләне, йөрәге буласаҡ һунар сәменә иҫереп, татлы тибеп ҡуйҙы.

Ваҡҡас Харистан бер йәшкә генә бәләкәй. Шулай ҙа йола буйынса ул Харисты ағай, ти. Ағаһына көлөбөрәк, кәмһетеберәк ҡарай, һунар мәсьәләһендә байтаҡ нәмәне шыттыра тип иҫәпләй. Йәшерәк сағында Ваҡҡас та шаярҙы мылтыҡ менән (Ситдиҡовтарҙан уға кем битараф булды икән?). Әммә һунар менән ныҡлап мауыҡманы — өйрәктән башҡаға йөрөмәне. Унынына ла онотҡанда бер сыҡты. Нисә йыл инде бына һунар тип тартҡыламаған кеше, бөгөн иҫенә төшкән.

Ваҡҡас армияға барманы. Тау институтын бөттө. Унынсы класты көскә-көскә тамамлағас, рус телен икмәк-тоҙлоҡ ҡына һупалаған Ваҡҡас институтта уҡып йөрөнө. «Ҡойроҡ»тары ла етерлек ине, шуға күрә уны өлгәшмәгәне өсөн беренсе курстан уҡ ҡыуа алалар ине. Ниңәлер ҡыуманылар, ыңғай билдәләр ҡуйып икенсе курсҡа күсерҙеләр. Артабан да шулай дауам итте. Сәбәбеме? Атаһы ҡарауыллаған урманға институт ректоры һунарға йөрөнө, ҡалаға ҡайтышлай тулы бидондар менән бал алып китте. (Ул осор атаһының ишле умарталығы бар ине.)

Институтты тамамлағас, Ваҡҡас күпмелер ваҡыт инженер булып йөрөнө, тик әллә эшен тарта, әллә кеше менән һыйыша алманы, оҙаҡламай экскаваторға ултырҙы, унан профсоюз әһеле булып китте. Шунан ҡапыл үрләне: ҡала Советы башҡарма комитеты председателе итеп һайланды. Әлбиттә, Барыйҙың ярҙамы теймәй ҡалмағандыр. Йәнәһе, райком кимәлендә хәл иткәндәр: инженер сыҡманы, экскаваторҙа ла күңел биреп эшләмәне, әйҙә, түрә булып

йөрөп ҡараһын, ҡала башы булһын, имеш. Председатель өҫтәле артында дүрт йыл ултырҙы. Әллә ни кәрәге булмаһа ла, культура һәм ял паркын кирбес һәм тимер ҡойма менән ураттырҙы. Һуңынан Ваҡкасты ниңәлер төшөрҙөләр ҙә яңынан фабрикаға смена инженеры итеп ҡуйҙылар. Ҡойманы ҡала хулигандары ауҙарҙы, кирбестәрен ташып бөттөләр, тимере һаман тутығып ята шунда.

Барыйҙың да юғары осҡан, түбән ҡолаған саҡтары етерлек булды. Белеме —ауыл мәктәбенең ете класы. Армиянан ир сырайы инеп, буйға тартылып ҡайтты, русса ла таҙа һөйләшә ине. Уны грамоталы тип әйтмәҫһәң, грамотаһыҙ тип әйтергә лә тел әйләнмәҫ. Аҡылы менән дә әллә ни маҡтана алмай, шулай ҙа аҡыллы булып күренде. Сөнки кәүҙәгә таҙа, етди, сибәр һәм аҙ һүҙле ине. Кеше аҙ һөйләшеп, күберәк тыңлаһа, кәрәкле урында йылмайһа һәм ара-тирә үлсәп кенә берәй һүҙ әйтеп ҡуйһа, ул һәр ваҡыт бүтәндәргә тәрән фекерле, төплө булып күренә шул.

Барый тәүҙә колхозда комсорг булып йөрөнө, газета сығарҙы, унда ялҡауҙарҙы, эскеселәрҙе тәнҡитләне, бер нисә йыл парторг йөгөн тартты, докладтар һөйләне, сығыштар яһаны, шунан инде үҙен райкомға инструктор итеп алдылар. Яйлап-яйлап хеҙмәт баҫҡысынан үрләй торғас, бер көн икенсе секретарь урынына ла барып етте. Ниндәйҙер курстарҙа уҡып ҡайтты, ҡиәфәтенә тәкәбберлек, йөҙөнә уйсан моңһоулыҡ өҫтәлде, ауылдаштарын күрһә лә танымай башланы, күңелендә беренсе секретарлыҡҡа ынтылыу ниәте лә юҡ түгел ине. Тик, боронғолар әйтмешләй, аяҡ аҫтындағы ерҙе toймаһаң, һаламға ла эләгеп йығылаһың икән. Ҡыҫҡаһы, уның карьераһы шуның менән осланды: ҡатыны уны бер йәш врачҡа көнләне лә оло ғауға ҡуптарҙы —Барыйҙы урынынан алдылар. ОРС начальнигы булып йөрөнө, хәҙер — райпотребсоюз председателе. Секретарлығының иҫтәлеге булып Яйыҡтың уң яҡ ярында уның тырышлығы менән ултыртылған — «Европа», һул ярында — «Азия» тип яҙылған мөһабәт тимер-бетон бағана ҡалды.

...Тегеләр Барыйҙың «Жигули»йында иртәнге алтыларҙа килеп етте. Барый джинс костюм, кроссовкалар, берет кейеп алған, йөҙө һәр саҡтағыса моңһоу-уйсан, тәбәнәк, ҡорһаҡлы Ваҡкас иҫке генә тар костюмда, эшләпәле, итекле.

Өйгә инделәр, иҫәнләштеләр. Харистың ҡатыны Камила тегеләрҙең балаларының, ҡатындарының хәлен һорашты.

— Әйҙәгеҙ, сәй эсәйек.

— Рәхмәт, эсеп сыҡтыҡ. Өйрәктәр беҙҙең сәй эскәнде көтөп ултырмаҫ, — тип баш тартты Ваҡҡас.

Эш, әлбиттә, өйрәктә генә түгел, колхозсылар йоҡонан тороп ялан-туғайға күтәрелгәнсе, карьерға етеп ҡалырға ниәттәре. Таныуҙары бар. Юҡ, ҡурҡыуын ҡурҡмайҙар былай. Барыһы ла үҙ кешеләр. Тик бесән тип ал-ял белмәй эшләп йөрөгән халыҡ — ямғырҙар йыш яуыуҙар арҡаһында һуңлаусылар алдында һунарға китеп барыуы барыбер йәпһеҙ бит.

Зәңгәр формаһын, фуражкаһын, итеген кейеп алған Харис урамға тегеләр менән бергә сыҡты ла көсөк кенә көйө ҡалалағы һунарсы дуҫы бүләк иткән овчаркаһын саҡырҙы:

— Буран, әйҙә бында!

Йәштән үк һыуҙан өйрәктәр алып сығырға, яралыларын эҙләргә өйрәткән эте яҡыныраҡ килде лә ҡунаҡтарҙы танығандай иркәләп ҡойроғон болғаны, һораулы ҡарашын хужаһына текәне.

— Бәлки, этте йөрөтмәбеҙ? — тине Ваҡҡас. — Ҡамасаулар ғына.

Харис бер килке икеләнеп торҙо: алырғамы, юҡмы? Буран ҡартая, күптән һунарға ла йөрөгәне юҡ, шуға күрә өйрәк артынан һыуға кереүе лә, ай-һай, икеле. Хәйер, кем белә, аҡыллы, тыңлаусан инде былай.

— Алып барайыҡ та машинала ҡалдырырбыҙ, — тине Харис. — Унан ебәреп ҡарарбыҙ.

— Хозяин — барин, поехали, — тине Ваҡҡас.

Ул Барый менән йәнәш ултырҙы. Харис патронташын кабинаға ташлап, Буранды тәрткөләп тигәндәй эскә индерҙе лә үҙе лә ултырып ике тубығы араһына ҡыҫты. Уларҙы Камила оҙата сыҡты.

— Һағыраҡ ҡыланығыҙ унда, бөгәсә мин яман төш күрҙем.

— Туҡта, саҡ онотманым. Балта менән көрәк тә алайыҡ әле, — тине Ваҡҡас өтәләнеп.

— Нимәгә ул?

— Аш бешерәбеҙ.

— Аш бешерәбеҙ? Ә көрәк нимәгә?

— Һуңынан белерһең.

Багажникка балта, ҡыҫҡа һаплы көрәк һалдылар ҙа карьер яғына йүнәлделәр. Камиланың үҙенә лә, һүҙенә лә иғтибар итеүсе булманы.

Туктауһыҙ ҡойған ямғырҙан һуң юл иҙелгәйне. Юл ситендәге һарғая башлаған үләндәргә, ялан моңһоулығына, өҙөк-йыртыҡ ҡарағусҡыл болоттарға ҡарап көҙ яҡынлағанын тойомларға мөмкин.

— Ҡалала ниндәй яңылыҡтар бар? — тип һораны Харис, бер аҙ килгәс энеһенән.

— Әллә нимә юҡ, әй, бар... белорустар килде. Техника килтергәндәр. Шулар, ҡайҙа ҡымыҙ эсеп була, тип һорай. Башҡортостанда һәр ерҙә ҡымыҙ булырға тейеш, йәнәһе. Үҙебеҙ ҡымыҙ тәмен күптән онотттоҡ.

Барый өндәшмәне, юлға текәлгән килеш килә бирә.

Машина менән этте йылға буйында ҡалдырҙылар ҙа, патронташтарын билдәренә быуып, мылтыҡтарын ҡорҙолар, ҡайын менән йәш ҡарағай аралашып үҫкән ташландыҡ рудник өйөмдәре аша ҙур карьерға атланылар. Иң ҙур өйөм һыртында ҡуйы ереклек тә бар. Һунарсылар һаҡ ҡына шул һырттан төштө, ереклекте үткәс, Ваҡҡас менән Барый һулғараҡ боролдо, ә Харис саҡ ҡына уңға ҡайырылып, ҡыуаҡлыҡтар араһына барып керҙе лә шыпырт ҡына ботаҡтарын айырҙы — һыу өҫтө тыныс ине.

Карьер соҡорҙарында барлыҡҡа килгән был күлдәр Харисҡа гел генә ҡырағай сер донъяһы һымаҡ. Уға һыуҙың тыныслығында кеше аҡылы етмәҫлек мөғжизә, тәбиғәт рухы йәшәй төҫлө... Өс сөрәгәй өйрәк ҡайҙандыр осоп килде лә һыу өҫтөнә төштө, арттарынан ваҡ ҡына тулҡындар ҡалдырып, ҡамыштарға ҡарай йөҙҙө. Харис япраҡтар араһынан өйрәктең йылтыр көрән арҡаһын күргәс, йөрәге нығыраҡ тибә башланы, тәне буйлап еңелсә дерелдәү йүгереп үтте, күңеле һунар ҡомары менән янырға тотондо. Ултырған өйрәккә атырға тыйылғанын белһә лә, һәр ваҡыттағыса, нәфсеһе кем тарафынандыр уйлап сығарылған закондарҙан көслөрәк ине. Әгәр ҡошто ҡурҡытһа, осҡан сағында, кем белә, тейҙерә лә алмаҫ. Сөнки күптән атҡаны юҡ, ул сағында инде оятҡа ҡалыуыңды көт тә тор. Әсе тел Ваҡҡас күҙен дә астырмаҫ... Харис мылтығын күтәреп һаҡ ҡына төҙәне, шуны ғына көткәндәй, өйрәк... һыуға сумды. Килеп сығып ҡабалана-ҡабалана нимәлер ашай башлағас ҡына, Харис тәтегә баҫты. Тейеүенә лә ышанып бөтмәне тәүҙә. Мылтыҡ тауышына ҡанаттарын һыҙғыртып бер нисә өйрәк һауаға күтәрелде. Берданкаһын яңынан ҡороп өлгөргән Харис арттағы ҡошҡа төбәне лә йәнә атып ебәрҙе һәм шундуҡ өсөнсө яһауҙы ҡорҙо. Кем белә, бәлки, йәнә

килеп сығырҙар, ә был икенсе атҡаны өҫкә һикереп китте, унан ялбырап һыу уртаһына тәкмәсләне.

Һулдараҡ икенсе атыу яңғыраны, икенсеһе, өсөнсөһө, Харистың өйрәге иң тәрән ерҙә, ярҙан ун метр самаһында, сайҡала ине. Харис тегегә бер аҙ ҡарап торҙо ла, гильзаларын йыйып, энеләре яғына атланы.

— Нисек? — тип һораны Ваҡҡас, ул килеп еткәс.

— Береһе йыраҡҡараҡ төштө, икенсеһе ҡамыштар араһында. Ә һеҙ?

— Берәр. Берәүһен алып була, икенсеһе йыраҡ.

— Буранды ебәреп ҡарайыҡ.

Харис берданкаһын ергә һалды ла машинаға китте. Этте ярға килтергәс, бойороҡ бирә башланы:

— Апорт, Буран, апорт!

Буран, теләмәйем тигәндәй, башын борғолай, сыйылдай.

— Апорт, апорт! — Харис һыу өҫтөндә ятҡан өйрәккә күрһәтте.

— Төшмәҫ, эйәһе кеүек ялҡау инде ул да, — тине Ваҡҡас, көлөп.

— Һөйләнмә, ялҡау булһаҡ та, ҡайһы берәүҙәр шикелле ҡала майы үҫтермәгән.

Ваҡҡас ағаһының яуабына йылмайҙы, Барый өндәшмәне.

Харис аяҡ аҫтынан бер таяҡ алды ла һыуға ташланы. Теге өйрәк янына барып төштө.

— Апорт, Буран, апорт!

Хужаһы шул тиклем өгөтләгәнгәме, Буран шыңшыйшыңшый, һыуға инде, унан бер боролоп ҡараны ла, уртаһына йөҙөп китте. Уның әлеге таяҡҡа йүнәлгәненме, әллә өйрәккәме икәнен аңлап-белеп булмай ине. Бына эт таяҡҡа ҡағылманы, өйрәкте тешләне лә ярға боролдо.

— Күрҙеңме? Ә һин булмаҫ тиһең.

Буран өйрәкте хужаһына һондо ла бар тәнен һелкетеп өҫтөндәге һыуҙы ҡойҙо.

— Маладис, онотмағанһың икән әле! — тип шатланды Харис, этенең башын һыйпап. — Аҡыллы хайуан һин.

Буран тегеләрҙең дә өйрәктәрен сығарып бирҙе. Тик ҡамыш араһындағы яралы ҡошҡа ебәрергә тырышҡайнылар, барманы.

— Ҡыума, төшмәҫ, өйрәк үлән араһында, үҙеңә төшөргә тура килер, — тине Ваҡҡас.

— Тура килә инде, һеҙ арғы карьерға атлағыҙ, өйрәктәр шунда осто.

Харис трусигына тиклем сисенде лә ҡамыш араһына инеп китте. Егерме минутлап ваҡыт үткәс, теге яҡтан атыу тауыштары яңғыраны. Тегеләр ике өйрәкте тотоп кире әйләнгәндә, ул һаман ҡамыш араһында тапана ине әле.

— Тапманыңмы?

— Юҡ.

— Ҡыйыш ҡул, тигеҙә алмағанһыңдыр,— тине Ваҡҡас.

— Шаулама, һин тигеҙә алмаҫҡа можешь, ә мин бер ҡасан да...

— Ярай, эҙлә. Беҙ машинаға киттек. Ашарға әҙерләйек. Ашап алғас, тағы бер йөрөп әйләнербеҙ.

Юлдаштары киткәс, Харис тағы ярты сәғәт самаһы эҙләне. Һуңынан ҡаршы яҡ ярға атланы һәм өйрәген һыуға тейеп торған талдар араһынан тапты. Ул машина янына килгәндә, усаҡ яна, үләнгә йәйелгән киң брезент өҫтөнә икмәк, һуған, помидор, ҡыяр таратып ташланған, уртала бер шешә коньяк та ултыра ине.

— Тәки таптың, ә?

— Ә һин ышанмағайның... Ағайың шайтандың үҙен дә табыр,— берданкаһын тегеләрҙең мылтыҡтары янына түгел, ә өҫтөнә һалды. Өйрәктәрҙе яңынан иҫәпләп ҡарағайны, икәү етмәй булып сыҡты.

— Һеҙҙекеләр ҡайҙа? — тине ул, ҡыйыр-ҡыймаҫ.

— Тегендә,— Ваҡҡас иҫе китмәй генә утҡа ымланы.

— Йөнөн дә йолҡманыңмы? — тип һораны Харис, ут өҫтөндә ҡаҙан-фәлән күрмәгәс.

— Эсен генә алдым да фольгаға төрҙөм. Шулай бешереп ҡарайыҡ әле. Үткән йыл Красноярскиға барғанда бер сибиряк өйрәткәйне.

Курткаһы менән фуражкаһын сисеп, Харис шишмәгә китте. Йыуынды. Ҡояш байтаҡ күтәрелгән, йылыта башлаған. Уның һайын йөрәге шатлыҡлы һулҡылдап ҡуйҙы: бөгөнгө иртә, ҡарағай ҡалҡыулыҡтары, һунар яратҡан энекәштәре алыҫ ҡалған йәшлегенә ҡайтарғандай. Үҙенең олпатлығынан, иҫәнлегенән, тормош уға тулы һәм көткән тәмле аштан ифрат татлы күренде.

— Өлгөрәме әле?

Ваҡҡас сәғәтенә ҡараны.

— Тағы ярты сәғәттән.

Ғүмеренең был ярты сәғәтен дә Харис уңышлы һунарының иҫтәлектәренә бирелеп, туғандары менән юҡ-бар

һүҙ һөйләп, ҡәнәғәтлектә, байрам кәйефендә үткәрҙе. Ниһайәт, көрәк менән күмерҙе, көлдө ситкә этте лә тупраҡ араһынан ялтырап торған ике төргәк килтереп сығарҙы. Ҡабаланмай ғына уларҙы брезент өҫтөнә тәгәрәтте, бармаҡтарын бешерә-бешерә фольганы тағатты. Тәүҙә береһен, унан икенсеһен... Танауға тәмле бешкән өйрәк еҫе бәрелде. Ваҡҡас уларҙы йөн-мамығынан еңел генә таҙартты ла тегеләрҙе май яғылған фольгаға яңынан һалды. Уратып ултырҙылар, коньяк эсеп алдылар, аһ та уһ маҡтап ашарға тотондолар, ниһайәт, Ваҡҡас көрөшкәгә йәнә коньяк ҡойҙо.

— Етеп тормаҫмы? Тағы атыр инек, — тине Харис.

— Ә-ә-ә, тәүҙә барғың килмәгәйне...

— Азарт! Һунар ене!

— Юҡ, етеп торор, — тине Барый. — Әлегә сезон асылмаған. Мин бүтән ҡуҙғалмайым.

— Барырһың, һин хәҙер райком секретары түгел, — тип хихылданы Ваҡҡас. — Бында Харис хужа, һин түгел. Уны тәбиғәтте һаҡларға ҡуйғандар, ә ул... браконьер номер один, хи-хи-хи...

— Мин һеҙҙең ише начальниктарҙан өлгө алам, — тип яуапланы Харис бик иҫе китмәй генә. — Хәтереңдәме, биш йыл элек, һин ҙур түрә саҡта, эләктергәйнем? Һин, военком, фабрика директоры Юлин? Мышы атҡайнығыҙ ҙа бүлешеп ятаһығыҙ. Лицензияғыҙ юҡ...

— Ул саҡ беҙ һиңә ит биреп ҡотолдоҡ. Һин беҙҙең өҫтән акт төҙөргә тейеш инең.

— Иттең ни ҡыҫылышы? Һин — түрә, етмәһә, туған кеше.

— Әгәр түрә лә, туған да булмаһам?

— Белмәйем, актты, моғайын, яҙыр инем. Хәҙер браконьерҙар ҡурҡыныс. Ул һинең акт төҙөгәнеңде ҡарап тормай. Дүрт йыл элек ана шул һеҙҙе тап иткән тирәнән китеп барам. Ҡараһам, мотоцикл ултыра, номер-фәләне лә күренмәй. Моғайын да, мышы йыҡҡандарҙыр, тип уйлайым. Яҡынаям. Бер заман мылтыҡтарын әҙер тотоп ике бәндә ҡаршыға сыға. «Нишләйһегеҙ?» — тим. Күҙҙәрен алартып ҡаранылар ҙа: «Ну-ка, тере саҡта тай бынан», — тиҙәр. Әйләндем дә тайҙым инде, ни ҡылаһың. Бәргесләп берәй ергә ырғытып китһәләр...

— Дөрөҫөн генә әйт әле, йәшермә, бында үҙебеҙ генә бит, барлығы нисә мышы йыҡтың?

Харис уйға ҡалды.

— Иллеләп булыр,— тине ул бер аҙҙан,— яралап ебәргәндәрен дә иҫәпләп. Алыуын егерме өстө алдым шикелле. Биш йыл элек берәүҙе яралап ебәрҙем, шул һуңғыһы булды. Яҙын һуйырға сыҡҡайным. Иртәнге мәл. Ҡайынлыҡта оҙон бот мышылар күҙгә салынды. Мылтыҡтағы дороп-четверканы картечь менән алмаштырҙым да атып ебәрҙем. Ишетеп торам, ауыр итеп быхылдап тын ала башланы берәүһе, тимәк, үпкәһенә тейгән. Эт юҡ, артынан ҡыуа төштөм. Барыр-барыр ҙа йығылыр тинем.Юҡ, китте...

Буран шыңшыны — ашарға һорауы ине эттең. Һүҙгә мауығып уны бөтөнләй онотҡандар, имеш. Ул тәртипһеҙ ташланған мылтыҡтарҙан арыраҡ ята, ҙур түҙемлек менән кешеләрҙең иғтибар итеүҙәрен көтә — тәмле ит еҫе тынғылыҡ бирмәй. Харис бер өйрәктең ҡанатын һындырып алды ла, кимерелеп бөтмәгән икенсе һөйәк менән ҡушып, эткә ырғытты. Алдына түгел, ә яҡыныраҡ, мылтыҡтарҙың был яғына, үҙенән өс метр самаһында. Эт ҡалҡынды, мылтыҡтар аша тура Харисҡа табан атланы һәм... ҡапыл атыу яңғыраны. Буран сыйылдап ебәрҙе лә утҡа баҫҡан кеүек ситкә ырғыны. Шул саҡ Харис ҡабырғаһында ауыртыу һиҙҙе, әйтерһең, утын ағасы менән килтереп һуҡтылар.

Осраҡлы тип аталған сәйер, шул уҡ ваҡытта тормошта йыш осрай торған ғәжәп ваҡиға ҡылынды... Һунарға осраҡлы ҡуҙғалдылар тип әйтеп булмай, этте алыуҙары ла осраҡлы түгел (алмай ҙа китә ала инеләр). Ике атҡандан һуң Харис, һунар ғәҙәте буйынса, өсөнсө патронды һалды. Атманы.Әммә осраҡлы рәүештә тегене кире алырға онотто һәм уны бүтән мылтыҡтар өҫтөнә осраҡлы рәүештә арҡылы һалып ҡуйҙы. Осраҡлы рәүештә берданка бәләкәй генә соҡор янына тура килгән һәм берданканың приклады ошо соҡорға төшөп ятҡас, көбәк өҫкәрәк ҡалҡҡан да осраҡлы рәүештә хужаһына төбәлгән. Эттең ашарға һорауы, Харистың уға һөйәк ырғытыуы осраҡлы түгел, ә бына эттең тәтегә баҫыуы осраҡлы.

— Кем атты? — тип ҡысҡырып ебәрҙе Ваҡҡас, ҡото алынып.

— Буран тәтегә баҫты,— тип ыңғырашты Харис, усын уң яҡлап эсе тирәһенә баҫып.

Хәлде һаман аңлап етә алмаған Барый менән Ваҡҡас ҡанға ҡарап ҡаттылар.

— Ай-һай, мылтыҡ үҙ хужаһына барыбер ҙә бер ата тип юҡҡа ғына әйтмәгәндәр,— тип иламһыраны Ваҡҡас.

Икеһе лә ашығып аяҡтарына баҫты, нишләргә белмәй аңшайышып, Харис эргәһенә килделәр.

— Әйттем бит, әйттем, яҡшыға булмаҫ тинем...— Барый әйтмәһә лә, уйламаһа ла, шулай тигән булды. Һунарға сығыуҙарына үкенес белдерҙе, йәнәһе.

— Нимә тораһығыҙ, бәйләгеҙ ҙә, әйҙә, тиҙерәк, өйгә! — тип ыңғырашты Харис.

Эше хөрт икәнен төшөнә ине инде ул. Яҡындан атылған дороп эсенә нык ингән, моғайын, эсәктәрен өҙгөләгәндер.

Харистың ҡалтыранған бармаҡтары аша ҡулдарын, салбарын буяп үләнгә ҡан аҡты. Оҙаҡламай ул ҡалтырана башланы, үҙенең хәлһеҙләнеүен тойҙо.

— Саҡ ҡына түҙ, ағай, бәйләйбеҙ ҙә ҡалаға больницаға алып китәбеҙ,— тип һөйләнде Ваҡҡас, майкаһын сисә-сисә.— Коньяк эс, еңеләйтер. Барый, ҡойоп бир әле.

Өндәшмәҫ, йөҙө ағарған Барый көрөшкәгә коньяк ҡойҙо ла Харисҡа һондо. Тегеһе ҡалтырана-ҡалтырана эсте.

— Капут миңә — дострелялся!

— Улай тимә әле... Барый, майкаңды бир!

Курткаһын һалып, Барый майкаһын систе лә Ваҡҡасҡа тотторҙо. Ваҡҡас уны оҙон таҫма рәүешендә телгеләне, үҙенекен бер нисә ҡат итеп яра өҫтөнә һалды ла тегенең менән урата башланы.

— Барый, тот! — Ваҡҡас ҡабалана-ҡабалана яраны бәйләргә тырышты. Ҡулдары ҡалтыранды.

— Ағай, саҡ ҡына түҙ инде.

Ҡанға буялып бөттөләр. Ваҡҡастың ҡулдары ла, йөҙө лә ҡан ине. Бәйләп бөтөп машинаның артҡы ултырғысына, бағажникка мылтыҡтарын, патрондарын, көрәк, балта, өйрәктәрен ташлай башлағас, ҡанлы ҡулдары менән машинаны бысратып бөттөләр. Харис был ығы-зығының барыһын да күреп торҙо. Торған һайын әллә аңы томалана барғанлыҡтан, ниңәлер үҙенең ҡаны итеп ҡабул итмәне. Яҡындағы эте, шыңшый-шыңшый, аңламаған күҙҙәре менән хужаһына ҡарап ултыра. Харистың уға асыуы юҡ. Уны этеп-төртөп тигәндәй артҡы ултырғысҡа индерҙеләр. Башын Ваҡҡас үҙенең тубығына һалды, аяҡтарын бөктө. Киттеләр. Үҙенең үлергә ҡайтҡанын төшөнә ине Харис. Тәүге мәлдәге һымаҡ, үлем хәҙер ҡурҡыныс та булмай башланы — тормош нуры күҙҙәрендә һүнә, аңы ла ваз кисеү томанында юғала бара. Яңы ғына уға нисек рәхәт

ине. Үҙен үтә бәхетле һиҙә ине. Ошо бәхет ҡапыл өҙөлдө лә ҡуйҙы. Мәңгегә.

— Ҡарсыҡ, теге күрше ҡарсыҡ ҡына...— һөйләшергә уның көсө ҡалмағайны инде, шуға күрә бер үк һүҙҙе ҡабатланы ла ҡабатланы.— Ҡарсыҡ, теге сихырсы ҡарсыҡтың ҡарғышы төштө... Эх...

Энеләре өндәшмәне. Улар ағаларын һаташа тип уйлай ине...

## *Зыярат ҡылыу*

Бала сағымда, йәшлек йылдарымда кешеләрҙең был донъянан китеп мәңгелеккә йоҡоға талған урындары миңә нисектер сит, ерҙең тере тәнендәге үле нәмә, үҙемдең рухыма, булмышыма бөтөнләй ят итеп ҡабул итәлә ине. Ҡәбер өҫтөндәге тупраҡ өйөмдәрен, рәшәткә һәм һәйкәлдәрҙе күрһәм, күкрәгем ҡыҫыла, арҡам буйлап һалҡын йүгерә. Мин дә берәй ҡасан ошонда килеп ятырмын микән ни? Юҡ, быную булыуы мөмкин түгел! Был бәхетһеҙҙәр, тормоштары килеп сыҡмаған мәйеттәр, дымлы ерҙә ята, ә мин һәр көндөң үҙемә ниндәйҙер яҡшылыҡ алып килеүенә, мәңге йәшәүемә ышанам, был тормошҡа, һәр иртәлә ҡояш сығырына өйрәнгән-күнеккән кеше булараҡ, бер ҡасан да ҡәбер ҡараңғылығына, ҡәбер тынлығына төшәһем юҡ, тип уйлайым.

Йылдар үтеү менән, бигерәк тә олоғая башлағас, айыҡ аҡыл менән үҙ ғүмереңдең дә аҙағы килеү ихтималлығын аңлайһың, был осраҡта зыярат бер ҙә сәйер тойолмай, хыял һәм тойғоларҙа үлем булмаһа ла, ул ҡайғылы пейзаж мөйөштәре кеүегерәк күҙ алдына килә.

Беҙҙең ауыл зыяраты картуф баҡсаларына терәлеп, тигәндәй, урынлашҡан, аралары күп булһа — илле аҙым самаһы. Бер урам хатта үҙенең осо менән зыяратҡа килеп үк терәлә, иң ситтәге өйҙә йәшәүселәр, ҡапҡаларын асып, ата-бабаларының, өләсәләренең, атай-әсәйҙәренең ҡәберҙәрен яҡындан күрә. Ике картә араһының бер яғында — боронғо ҡәбер таштары. Уларға ғәрәп хәрефтәре менән нимәлер яҙылған. Хәҙер уларҙы уҡый белеүсе кеше юҡ. Онотолған ҡәберҙәрҙәге ҡыйшайған рәшәткәләр, сағыштырмаса яңы ҡаҙылғандарындағы тутыҡ тимерсыбыҡ-

тар, рәшәткәләре зәңгәргә, йәшелгә буялған, фотоһүрәт йәбештерелгән арзан обелисклы өр-яңы ҡәберҙәр... Онотолған ҡәберҙәр менән яңылары араһында ҡуйы үлән үҫә, һоро таштар тәгәрәшеп ята, ҡалҡыулыҡтар, соҡорҙар күренә. Уртала — осон йәшен һуҡҡан йәйенке ҡарағас. Әйтеүҙәренсә, уға һигеҙ йөҙ йыл икән.

Кәртәнең икенсе яғында — ҙур ауыл. Унда ҡәберҙәгеләрҙең балалары, ейән-ейәнсәрҙәре йәшәй. Тыуалар, мәктәпкә йөрөйҙәр, армияла хеҙмәт итәләр, яратышалар, өйләнешәләр, бала үҫтерәләр, ер һөрәләр, көтөү көтәләр, йорт һалалар, аҡса эшләйем тип ҡайҙалыр ситкә китәләр, әйләнеп ҡайталар, эсәләр, гонаһ ҡылалар, йонсойҙар һәм ҡартаялар. Ауылда йәшәгәндәр менән мәрхүм ата-бабалары араһы илле аҙым самаһы ғына булһа ла, улар араһында ниндәйҙер бәйләнеш тураһында йәки, киреһенсә, упҡын ятыуы хаҡында һүҙ алып барыу — мәғәнәһеҙлек. Тәбиғәттә ундай әйберҙәрҙең булыуы мөмкин түгел. Эйе, үлгәндәр тураһында хәтер бар, әммә ул да мәңгелек түгел. Араларында ниндәйҙер һуҡмаҡ, аралашыу юлы барлығы хаҡында фараз иткәндә лә, ул да бер яҡҡа ғына: үлгәндәр әлеге ауыл яғына булған илле аҙымды бер ҡасан да ашатлап сыға алмай, был турала һүҙ йөрөтөү үҙе мәғәнәһеҙлек, ә бөгөн йәшәгәндәр, уларҙан һуң килгәндәр, бөтәһе лә, һуңғы кешегә тиклем, зыярат кәртәһе яғына сыға ала, сығырға тейеш. Был, бәлки, ҡот осҡос хәҡиҡәттер, әммә был — закон, уны урап үтеү мөмкин булмаған эш.

Мин, нисектер бер, йортом янындағы ҡалҡыулыҡҡа күтәрелдем дә ауылға ҡарап торҙом, шулай йыш ҡына ҡабатланғанса, уйым менән үҙемдең бала сағымдағы ауылға ҡайттым. Таҡта ярҡалары менән ябылған бәләкәй йорттар, ситән, ел ҡапҡалары. Тимер менән ябылған, урыҫ ҡапҡалы алты мөйөшлө өйҙәр бай йәшәгән заттарҙа ғына ине, уларҙы һуңынан «кулак» тип атанылар ҙа ҡайҙалыр һөрҙөләр. Ул ауыл, ул йорттар, уларҙа көн иткән кешеләр күптән юҡ инде. Уларҙың ейәндәре, ейәндәренең балалары бөгөн бейек, тимер менән ябылған ҙур алты мөйөшлө йорттарҙа донъя көтә. Ҡоймалары бейек, ҡапҡалары мөһабәт. Ҡапҡалар, семәрләп эшләнгән тәҙрә ҡапҡастары йорт алдындағы төрлө төҫтәге сәскәләргә сумып ултырған бәләкәй баҡса — урамдан китеп барғанда тирә-йүн ифрат та матур күренә.

Минең янға, ҡалҡыулыҡҡа, йыраҡ ҡына нәҫелдәш Закира апай килде. Ҡайтмай йонсоткан башмағын эҙләп

йөрөй икән. Бер аҙ һөйләшеп торҙоҡ. Ауыл ифрат матурланған, минең генә йорт емерелергә тора икән, тинем дә былай тип өҫтәнем:

— Һин революцияға тиклемге ауылды хәтерләйһеңдер ул?

— Революцияға тиклемге ауылды — юҡ, егерменсе йылдарҙағыһы иҫтә, — тип яуапланы Закира апай. — Йорттар ваҡ ине, күптәрҙең соландары ла юҡ ине бит, өйҙән туп-тура ихатаға сыға торғайнылар. Землянкала йәшәгән кешеләр ҙә бар ине. Элекке кешеләр бөгөнгө тормошто күрһә, үҙ күҙҙәренә үҙҙәре ышанмаҫ ине.

Осраҡлы ғына ошо һөйләшеү нисектер мейегә һеңеп ҡалды ла йөрөй-йөрөй төйөрөм генә фекергә уҡмашты, хатта хикәйә сюжетына тиклем үҫте. Бөгөнгө тормошто әллә ҡасан үлгән кешеләр күрһә, ниндәй мәрәкә булыр ине, ә?! Фекер, әлбиттә, ҡыҙыҡ һәм... мәғәнәһеҙ — үлгәндәр бер ҡасан да кире ҡайтмай. Ә шулай ҙа хыялда ғына терелтеп ҡарағанда? Мин — насармы, яҡшымы — яҙыусы бит әле, фантазияһыҙ кеше түгел, тимәк, үлгәндәрҙе терелтә алам, һис юғы үҙем иҫләгәндәрҙе генә булһа ла. Әлбиттә, был фантазия ғына, уйын, хыял, ә икенсе яҡтан ҡарағанда... Мейенең нисек эшләгәнен, нисек уйлағанын, хыял иткәнен, күргәнен, ишеткәнен берәү ҙә белмәй, күҙ алдына килтерә алмай. Ә молекула бит күрә. Госпиталдә мәйет ярғандарын ҡарағаным булды: баш һөйәген бысып, мейене алдылар. Сәйер: мейе тигән һоро масса эсендә бер нәмә лә юҡ. Ә бит, уйлап ҡараһаң, ул күрә, уйлай, китаптар яҙа! Быға ышаныуы ауыр, әммә был ысынлап та шулай. Әгәр минең мейе материяның һәр торошонда ла — реаль, әгәр уйлау, фекерләү, хыялланыу материаль юҫыҡта бара икән, тимәк, химик берләшмәләр йәки элементтар бүленмәләр кеүек хәтерләү һәм хыял тарафынан күҙ алдына килтерелгән объекттар ҙа материаль булып сыға. Мин йыш ҡына әсәйемде хәтергә алам, уның борсоулы йөҙөн күҙ алдына килтерәм, тауышын ишетәм: «Талха!» Минең мейелә ул — тере, йәшәй, ул үҙе лә был хаҡта беләлер һымаҡ. Беҙҙең тормош, беҙҙең көнитмеш, бәлки, ниндәйҙер гигант мейелә йәшәгән хыялдыр? Әйтәйек, Аллала йәки беҙ күрә алмаған бүтән нимәлә. Йә ул уй, теләк, барлыҡҡа килмәгән тормоштоң йәки күптән юҡҡа сыҡҡан ғәләмдең бер иҫтәлеге рәүешендә генә йәшәйҙер?

Хыялымда үткәндәрҙе терелтеп ауыл буйлап йөрөтөү теләгенән һис ҡайта алмайым... Бына зыярат. Ҡәбер ҡал-

ҡыулыҡтары, соҡорҙарҙағы серегән ләхет таҡталары... Табуттар араһында мәйет ҡыбырлай, мәйет терелә, тороп ҡалған аҙ ғына химик элементтарҙан, ер аҫты һыуҙарынан кәүҙәләр хасил була, серектәрҙән аҡ кәфендәр барлыҡҡа килә, рәшәткәләр һелкенә лә ҡәберҙәрҙән яй ғына мәйеттәр сыға, баҫып торалар, аптырашып тирә-яҡҡа күҙ һалалар. Бында — мин белгәндәр генә йәки йөҙ-ҡиәфәтен онотһам да исемдәрен хәтерләгәндәр. Йөҙгә яҡын үлек йыйыла, улар ҡарағас аҫтында тора һәм танымаған ҡиәфәттә ауылға ҡарай. Араларында, әлбиттә, һуғышта һәләк булған һалдаттар, минең ағайҙар юҡ. Ниндәй яҡтарҙа ятып ҡалғандарын, ниндәй тарафтарҙа һөйәктәре серегәнен мин белмәйем, шулай булғас, уларҙы терелтә лә алмайым. Бында шулай уҡ күптән түгел генә үлгән Әҡлимә һеңлекәшем дә юҡ, уға үҙенең туғандарын яңынан күреү бигүк күңелле булмаҫ ине — ул барыһы тарафынан да ташланып, уларға ҙур үпкә менән китте. Яҙыусы Нәжибәк Хафизов та күренмәҫ. Ул да яңыраҡ вафат булды. Заһировтарҙы ла эҙләмәҫкә кәрәк. Улар зыярат ҡоймаһының тышына ерләнгән, зыяраттың төп халҡынан ситтә ята. Оло Заһировты, ҡыҙыл партизан һәм коммунисты, ауыл ҡарттары ата-бабаларының мәңгелеккә ятҡан еренә үткәрмәне — Аллаһыҙ, тинеләр. Ә кесеһе, Хәйбулла, ихтирамлы, ғәҙел халыҡ судьяһы ине, шуға күрә уның, коммунистың, үҙе мөкиббән китеп ышанған, шуга хеҙмәт иткән кешенең идеалдары емерелеүен күрһәткем килмәне.

Мин мәрхүмдәрҙе ауылға алып киттем. Аҡ кәфендәргә төрөнгән бер көтөү халыҡ — ирҙәр, ҡатындар, ҡарттар, йәштәр. Мин былар араһынан атайым менән әсәйемде эҙләйем. Әллә таба алмайым, әллә танымайым. «Коммунистка» ҡушаматлы Хафиза апайымды ғына таныным. Оҙон кәүҙәле, ир ҡиәфәтле апайым. Ул мине танымаса. Олоғайғаным арҡаһында ғына түгел, улар өҫтөнән булған үҙемдең властан файҙаланып мин танымаҫлыҡ ҡиәфәткә ингәйнем шул. Былай уңайлыраҡ та, хәүефһеҙерәк тә.

Ауыл урамына керҙек. Мәйеттәр аптырап тирә-яғына ҡарана. Йорттар ҙур, тимер менән ябылған ҡыйыҡ баштарында телевизор антенналары һерәйешеп тора. Етмешенсе йылдарҙа үлгәндәр өсөн был әллә ни яңылыҡ түгел. Ә бына олораҡтарҙа оҙон кәртәгә ҡаҙаҡланған нәҙек торбалар, тимерсыбыҡтар — яңылыҡ. «Былар нимә ул?» — тип һоранылар минән. «Телевизор». — «Уныһы нимә тағы?» — «Радиоға оҡшаш, һөйләй, һүрәттәр ҙә күрһәтә». —

«Киномы ни?» — «Кино түгел. Кино клубта бит, ә был Мәскәүҙән тапшырыла. Һауа, күк аша». — «Әкиәт һөйләйһең, егет. Шулай була тиме ни. Ышанмайым».

Колхоз идараһы йорто янында туҡтаныҡ. Ауыл Советы, идара, почта, башҡа конторалар урынлашҡан ҙур тәҙрәле был ике ҡатлы бина етмешенсе йылдарҙа һалынғайны. Һуғыш йылдарында, 60-сы йылдарҙа үлгәндәр ҡараштары менән сельмагты, тимерсе Сергей, беҙҙең ауылда беренсе һуғыштан һуң тороп ҡалған хәрби әсир Франц йортон эҙләне, әммә уларҙың хәҙер эҙҙәре лә юҡ. Тегеләрҙең араһынан баҙыҡ кәүҙәле, сәсе ҡырып алынған, шаҙра йөҙлө ҡартҡа иғтибар иттем. Таныным: Аллаяров Фазыл, һуғышҡа тиклем һәм һуғыштан һуң колхозда рәйеслек итеүсе кеше. Ҡасандыр унан ныҡ ҡурҡа инеләр, район түрәләре лә уның һүҙенә ҡолаҡ һалды. Ялҡауҙарға, өҙгөстәргә, эскеселәргә аяуһыҙ ине. Ағай-энелекте танымай, ҡоҙа-ҡоҙағыйлыҡты инҡар итеп, һәр бер ҡаҙаҡты ҡәҙерләп, ниһайәт, колхозды күтәргән ошо кешене колхозсыларҙың дөйөм йыйылышында тоттолар ҙа эшенән бушаттылар. Теш ҡайрағандар күп ине шул — үс алдылар. Нахаҡ ярылған, шәхес культында ғәйепләнгән рәйес, һуңынан хатта ултырып иланы тип һөйләнеләр. Шул ҡәҙәре тырышып йөрөп тә, колхозсыларҙың үҙен аңламауҙарына әсенгәндер инде... Хәҙер ул баҫҡан урынында ҡыйыуһыҙ ғына тапана, үҙе тинләп тигәндәй йыйған аҡсаға һалынған идара йортона ҡарай. Яныма килде лә: «Минән һуң кем рәйес булды?» — тип һораны. «Райком ултыртҡан ниндәйҙер ситтән килгән эскеселәр». — «Ә хәҙер кем?» — «Сирай ағайҙың малайы Самат». — «Ошо ауылдыҡы икәне күренеп тора шул», — тип һүҙ ҡыҫтырҙы янда торған бер ҡарт. Йөҙө таныш, әммә исемен онотҡанмын. «Нисек күренеп тора?» — тип һораным мин. «Бәй, ана бит йорттарҙы нисегерәк итеп һалғандар. Беҙгә ундай йорттарҙа йәшәү тәтемәне. Тимәк, колхозды күтәргән». — «Бында колхоздың ҡыҫылышы юҡ, — тип аңлаттым мин ҡартҡа. — Колхоз — банкрот. Бер тин аҡсаһы юҡ, Агроснабҡа миллиондар бирәһе бар. Техника иҫке, запчастар алырлыҡ түгел. Фермерлыҡ менән дә бер нимә килеп сыҡманы». — «Ниндәй фермерлыҡ менән?» — «Ну, иҫкесә әйткәндә, шәхси хужалыҡтар менән». — «Шәхси хужалыҡтар бармы ни әле?» — тип һүҙ ҡыҫтыра аҡһаҡ икенсе бер ҡарт. Уны төҫмөрләнем: «Аҡһаҡ» ҡушаматлы Сөләймән. — «Шәхси милек менән эште күптән бөтөргәйнек бит инде.

Нимә, бында әллә Совет власы юҡмы?» — «Совет власы юҡ. Ҡыуып тараттылар. Былтыр Мәскәүҙәге иң баш сельсоветҡа танкыларҙан аттылар», — тим мин. «Алдайһың, егет, уның булыуы мөмкин түгел. Кем атты? Контра баш күтәрәме әллә?» — «Контра түгел, демократтар», — «Ниндәй домкраттар?» — «Домкрат түгел, демократтар. Ул һүҙҙе һин белмәйһең, шуға аңламайһың да». — «Совет власы юҡ, колхоз банкрот, ә ҡарағайҙан һалынған ҙур йорттарҙа йәшәйҙәр», — тип һораулы ҡараш ташлай миңә колхоздың элекке активисы Һибәт ҡарт.

«Кулактар йәнә власты алған! — тип тауыш бирә коммунистка апайым Хафиза. — Коммунистар ҡайҙа?» — «Кулактар юҡ, апай, — тип ҡаршы төшәм, — эйе, колхоздан алған эш хаҡына бындай йорттар һалып булмай. Бөтәһе лә шәхси хужалыҡтан. Техника ла. Анау бүрәнәләрҙе егерме саҡрымдан ат менән ташып буламы ни? Фәнни-техник прогресс, тип әйтмәксемен. Хәҙер бөтә ерҙә лә шулай, хатта Африкала ла. Унан — араҡы, ул инде фәнни-техник прогрестың төп двигателе. Беҙҙә хәҙер унан башҡа бер нәмә лә эшләнмәй. Колхоз тракторсыһына шешә тотторһаң, бөтә эшең дә майлаған кеүек барасаҡ». — «Коммунизм юҡ, тимәк?» — тип ғәжәпләнә Фәсхетдин ҡарт (мин уны колхоздағы етешһеҙлектәр, эш бармаған өсөн гел борсоулы йөрөгәне буйынса беләм. Йәнә бөтәһе лә кирегә китте, теге юҡ, был юҡ, шул етешмәй, етмәһә, тәбиғәт боҙолдо...) — «Хрущев бит коммунизм ун биш йылдан була тигәйне. Хәҙер нисәнсе йыл һуң?» — «Туҡһан дүртенсе». — «Үлеүенә утыҙ йыл икән дә! Улайһа нимә әле һуң беҙҙә?» — «Хәҙер беҙҙә коммунизм түгел, хатта социализм да юҡ, — тип яуаплайым мин. — Карл Маркс терелеп донъя буйлап сығып китһә, ул социализмды Америкала йәки Швецияла табыр ине». — «Беҙҙә, улайһа, капитализммы ни?» — «Әлегә юҡ, әммә беҙ шуға китеп барабыҙ». — «Нимә, нимә, нимә?» — тип йөҙө ҡарайып һораны элекке колхоз рәйесе Фазыл. Уның ғәҙәте шундай: тәртипһеҙлекте күреп ҡалһа, йөҙө ҡарая ла: «Нимә, нимә, нимә?» — тип һорай башлай. Ҡасандыр кешеләр уның ошо һүҙҙәренән уттан ҡурҡҡан кеүек ҡурҡа ине, ә бында үҙенең хужа түгел, ә мәйет икәнен аңлаптыр, ахыры, артабан һүҙ ҡуйыртып торманы, әйтеп бөттө лә башын эйҙе. Мин уның әҙерәк кәйефен күтәрергә теләп, идара ишегенә ишараланым: «Фазыл ағай, һине онотмағандар, исем-фамилияң

яҙылған таҡтаташты күрәһеңме?» — «Уныһына рәхмәт инде», — тине ҡарт битараф ҡына.

Мәйеттәрҙе мин түбән ауыл яғына алып киттем. Үҙем дә, күпселек үлектәр ҙә ауылдың шул яғынан ине. Ҡапҡа төптәренә кешеләр сығып баҫҡан, тәҙрәләрҙән ҡарайҙар, ғәжәп хәл, һәр бер ят кешегә, үтеп барған мотоциклға абалап сыҡҡан эттәр ҡапҡа төптәрендә тыныс ҡына ята. «Һеҙ кемдәр ул?» — тип һорай кешеләр. «Һеҙҙең олатайҙар, өләсәйҙәр, туғандарығыҙ. Танымайһығыҙмы ни?» — «Әкиәт һөйләмәсе, мәйеттәр кире тора тиме ни?» «Сиған» ҡушаматлы иҫерек Урал, сайҡала-бәүелә, төркөм янына барҙы ла бер минут самаһы быларға иғтибар менән ҡарап торғас, ҡысҡырып ебәрҙе: «Былар Ғәрәбстандан килгән туристар бит!» — «Зыяраттан сыҡҡан туристар, — тип аңлатам мин. — Улар бит кәфен ябынған». — «Дөрөҫ, ысынлап та, мәйеттәр шул. Зыярат яғынан килделәр», — тине Уралдың күршеһендә йәшәгән әбей. «Әстәғәфирулла, мәйеттәр терелгән, ахырзаман етеүе ошомо әллә?!» — тине ниндәйҙер әбей, ҡото алынып.

Закирҙың йорто янынан үтәбеҙ. Пенсия алғас эсеүгә ғәҙәтләнгән Закир зауыҡ менән эшләнгән һырлы ҡапҡаслы, тәҙрәле, верандалы күтәрмәһе бәләкәй баҡсаға сыҡҡан йорто алдына баҫҡан. Йәш сағында һуғыш сукмары булды, олоғая килә нимә менәндер, ныҡ ҡына ауырып алды, тамағына операция яһатты. Мәйеттәр араһында уның атаһы Мирза ҡарт та бар. «Ана һинең улың тора», — тим уға. Атай кеше улына табан атлай биреп ҡуйҙы, әммә улы атаһын танымаған төҫлө ят, битараф ҡараш ташланы. «Был бит һинең атайың», — тим мин уға. «Булһа ни! — тип яуаплай Закир һөмһөрө ҡойолоп. — Өй түренән урын бирер ҙә араҡы ҡойор тип уйлайһыңмы әллә? Хәҙер уның урыны тегендә».

Артабан ҡуҙғалабыҙ. «Бында идара йорто була торғайны», — ниндәйҙер ҡарт алты мөйөшлө яңы йортҡа күрһәтә. Йортто яңыраҡ, утыҙынсы йылдарҙа һөрөлгән кулактың серегән йорто урынына һалғайнылар. Өс бүлмәле, алты тәҙрәле, урам яғына ҡараған галереялы, бейек күтәрмәле йорт ине был. Коллективлаштырыуҙан һуң уның бүлмәләрендә ауыл Советы ла, колхоз идараһы ла ултырҙы. Тораҡ унда, колхоздың башҡа ауылдарынан килеп, икенсе бригадаларҙың һауынсылары йәшәне. Яңыраҡ йорттоң хужаһы, теге һөрөлгән кулактың улы, ҡайтып, яңы властарҙан атай йортон кире биреүҙәрен талап итеп йөрөнө.

«Йортто бирҙеләр, ул уны Фәриткә ун меңгә һатты, Фәрит йортто һүтте лә урынына улына йорт ултыртты»,— тип аңлаттым мин. «Нисек инде хужаһы ҡайтты? Аңламайым,— тип тауыш күтәрҙе Хафиза апайым.— Һөрөлгән ерҙәренән әйләнеп ҡайттылармы ни? Тиҙҙән, бәлки, батша ла кире ҡайтыр, ә?!»— «Булыр, апай, булыр,— тинем мин. — Ул әлеге көндә Францияла йәшәй, малай ғына әле, үҫеп етер ҙә ҡайтыр». — «Ағай-эне, ни һөйләй был, ә? Тыңламағыҙ! Был бит халыҡ дошманы, аҡ гвардия агитаторы. Үндайҙарҙы беҙ ата торғайныҡ. Коммунистар, беҙ ни өсөн һуғыштыҡ? Коммунистар бармы?» Араларында, әлбиттә, бар ине коммунистар, әммә бер Ғабдулла ғына, урамса әйтһәк, Апуш, алға сыҡты. Байтаҡ йылдар лесник булып йөрөнө ул, эсте-эсте лә, бауыр сиренән үлде. Коммунизмдың нимә икәнен аңлауына бик шикләнәм, партияға инеү сәбәбен де белмәйем. «Тағы кем, ҡулдарығыҙҙы күтәрегеҙ». Ҡул күтәреүсе булманы. Фәсхетдин ҡарт былай тине: «Хафиза, етте, һөйләнмә! Тере саҡта донъяны аҙ бутаныҡмы ни? Мәйет булһаң мәйет бул — шым ғына тор!»

Ары ҡуҙғалдыҡ. Өйө эргәһендә Рәйес тора. Эскән. Янында — өсөнсө бисәһе. Рәйес — һуғыш инвалиды, ҡулын шартлатҡыс пуля яралаған. Былай таҙалығы бар, ныҡ әле. Шуғалыр ҙа бына оҙаҡ йылдарҙан бирле эсә, һис йығылмай. Төшөрөп алһа, ихлас, йомшаҡ кешегә әүерелә, һөйләшеп тә була, пенсияһын эсеп бөтһә инде — өндәшмәҫ, мәңге ҡараңғы сырайлы. Айыҡ сағында күп уҡый, бигерәк тә пожаркала дежур иткән саҡтарында. Минең яҙғандарҙы ла оҡшата шикелле инде. Уның беренсе ҡатыны минең класташ Һәҙиә ине. Ниңәлер бала тапманы, эскегә һабышты, иҫерек көйө ауыл буйлап йөрөнө, кешеләрҙән бал йә араҡы таптырҙы. Рәйес уны туҡмай икән, тип тә һөйләй торғайнылар. Бер мәл, Рәйес пожаркала дежурҙа саҡта, яғылмаған өйҙә иҫерек көйө йоҡлап киткән дә туңып үлгән. Рәйес икенсе ҡатын алды. Унырһы ла араҡы тәмен белә булып сыҡты. Ғаиләнең йәшел йылан менән дуҫлығы оҙаҡҡа барманы — төшөргән көйө икәүләшеп мунсаға киткәндәр, таҙараҡ Рәйес эҫегә бирешмәгән, йыуынған да алдараҡ сығып йоҡларға ятҡан, ҡатыны — мунсала. Иртәнсәк Рәйес эргәһендә ҡатыны юҡлығын шәйләп мунсаға барһа, теге эләүкәлә ята. Һелкетә икән — үле. Шунан Рәйес өсөнсөгә өйләнде.

Төркөм эсенән бәләкәй генә кәүҙәле ҡатын килеп сыҡты ла, кәфененә урала-бутала, Рәйес янына килде. Һәҙиә ине был. «Рәйес, сволочь, һин генә үлтерҙең мине! Хәҙер бынау һөйрәлсек менән йәшәйһеңме?» — «Мин һине үлтермәнем, һин эскән көйө йоҡлап китеп туңып үлдең бит», — тине Рәйес тыныс ҡына. «Ә ниңә мейескә яҡманың? Үлһен тип яҡманыңмы? Юрамал яҡманыңмы?» — «Бәй, үҙең яғыр инең, өйҙә инең бит». — Рәйес һаман тыныс ине. Шул ваҡыт Рәйес янына икенсе бер ҡатын килде, Рәйестең икенсе ҡатыны. «Беҙ һинең менән мунсаға барғайныҡ, мин нисек ҡәбергә барып сыҡтым һуң?» — «Уныһын инде үҙеңдән һорарға кәрәк», — тине Рәйес. «Рәйес, беҙ бит һинең менән татыу йәшәнек!» — Ҡатын Рәйескә яҡын уҡ килде лә уны ҡосаҡларға ынтылды, әммә Рәйес, йылмайып, еңелсә генә ситкә тайшанды. Шул саҡ Һәҙиә кәфененән тартып көндәшен туҡтатты: «Кит бынан, кәнтәй, был минең ирем, беҙ уның менән ҡырҡ йыл бергә йәшәнек!» Кәфен ҡатын өҫтөнән һыпырылып төштө лә, ул ҡәберҙә ятҡандағы ише сыр яланғас ҡалды ла ҡуйҙы. Ҡапыл Рәйес ҡыҙып китте, тәүге ҡатындарын типкеләп ҡыуып ебәрҙе лә миңә ябырылды: «Уларҙы ниңә бында килтерҙең? Ул мәйеттәрҙе ауыл буйлап нимә тип йөрөтәһең? Килешкән эш түгел был, яҙыҡ эш!»

Яҡшы түгеллеген үҙем дә аңлайым, әлбиттә, минең шулай зыяратта ятҡан мәйеттәрҙе терелтеү буйынса иҫәр хыялым уянғас, нишләйем һуң?

Ары атланыҡ. Мәйеттәрҙән ҡайһыһылыр үҙе йәшәгән өй урамдарын таныны. Хәҙер йорттар икенсе, уларҙа ейәндәре, ейәндәренең балалары көн итә, улар инде быларҙы күптән онотҡан, танымай, таныһалар ҙа, танымаҫҡа тырышалар. Ә мәйеттәр үҙҙәренең хәлен яҡшы аңлап, йәштәрҙе уңайһыҙ хәлгә ҡалдырмайыҡ, балаларҙы ҡурҡытмайыҡ, тип улар янына бармай, иғтибар менән ҡарап ҡына торалар.

Ҙур йорт алдына Фәррух ҡарттың ҡарсығы баҫҡан. Таяҡлы. Фәррух ҡарт һуғыш йылдарында бригадир булып эшләне. Яҡшы кеше, әммә насар бригадир ине. Беҙ, колхозда ололар урынына ҡалған малай-шалай, уны бер ҙә тыңламаныҡ, алама һүҙҙәр әйтеп үсекләнек. Ә ул беҙҙе әрләй, шунан өгөтләргә тотона, саҡ иламай инде. Үҙенең ҡарсығын танып, ҡарт ифрат та ҡыуанды: «И-и-и, әбейемде, йөрәгемде! Олоғайғанһың икән. Мин үлгәндә йәп-йәш инең бит». Ул ҡатынына яҡынланы, әммә тегеһе кәфен

ябынған ҡартына яман ҡараны, таяғы менән һелтәнә-һелтәнә эргәһенән ҡыуып ебәрҙе: «Бар, кит, яныма киләһе булма!» Ҡарт үпкәләне, йөҙө һытылды, илап ебәрҙе. Унан тере сағында йыш ҡына әйтә торған һүҙҙәрен ҡабатланы: «Күрҙегеҙме, нишләй? Ә мин уның менән етмеш биш йәшкә тиклем бер түшәктә йоҡланым. Ҡәҙерҙе белмәне, ай, ҡәҙерҙе белмәне...»

Минең ике туған ағай йортона яҡынлаштыҡ. Мәйеттәр араһында өләсәйем дә, әсәйем дә, апайым да бар ине. Утыҙ йыл элек мәрхүмә булған өләсәйем ҡартайған ҡыҙын таныманы. Йәшләй генә үлгән әсәйемде лә таныманы, хатта үҙем дә таныманым. «Апай, өйгә кер, балаңдың ейәндәрен күр», — тинем мин апайыма. «Киленде күргем килмәй, — тип яуапланы ул. — Минең уға ҡарғышым ҙур ине». — «Ул бит һине ҡараны, мунсала йыуындыра, тырнаҡтарыңды ҡырҡа торғайны». — «Уныһы шулай, тик үлер алдынан миңә шуларҙың барыһын да әйтте, түҙмәне, сабырлығы етмәне. Эшләнгән изгелекте күҙеңә ҡарап әйтһәләр, уның сауабы бөтә шул».

Алты мөйөшлө ҙур йорт алдында Зәкиә апай: «Бында минекеләр йәшәйме?» — тип һораны. «Һинекеләр», — тинем мин. «Рәхмәт, һүҙемде тыңлағандар икән. Үлер алдынан йорттарын үҙем ғүмер иткән урынға һалыуҙарын үтенгәйнем». — «Бәлки, керерһең, ә? Ейәнеңдең ҡыҙы йәшәй». — «Юҡ, юҡ, ҡайҙа ти ул кереү, борсойһом килмәй». Зәкиә апай Нәжибәк Хафизовтың бер туған һеңлеһе, йәш сағында сибәр ине. Әммә яҙмышы әсе булды. Немец әсирлегенән ҡайтҡан ире үҙ-үҙенә ҡул һалды. Аҙаҡ Зәкиә апай оҙаҡ ауырыны.

Һибәт ҡарт үҙенең иҫке, ергә һеңеп бөткән өйө янында туҡтаны. Ҡарайған ҡапҡа ярыҡтары аша бейек сүп үләне, дегәнәк баҫҡан, емерелергә әҙер лапаҫ, серегән ҡойма күренә. «Бында бер кем дә йәшәмәйме әллә?» — тип һораны ҡарт. «Һинең төпсөк улың йәшәй». — «Донъяһын ниңә ҡарамай икән һуң?» — «Өйләнмәне. Эсте. Хәҙер бик эсмәй шикелле лә инде. Кер, өйҙәлер». Һибәт ҡарт ҡапҡанан инеп китте лә, күп тә үтмәй, әйләнеп тә сыҡты. «Йоҡлай», — тине ул. «Дежурствонан ҡайтҡандыр. Ул хәҙер пожарник», — тип аңлаттым мин. «Һелкетеп уятып ҡараным. Күҙен асты ла, һин кем, тип һораны. Атайың, тим. Юҡты һөйләмә, бар кит, тине, шунан икенсе яғына әйләнеп ятты».

Был рәттән һуңғы йортҡа, Искәндәрҙең йортона ла, килеп еттек. Пенсия аҡсаһын алғандан һуң күңелләнгән Искәндәр ҡарт телсән, әсе тауышлы әбейе менән ҡапҡа төбөндә тора. Мәйеттәр араһынан баҙыҡ кәүҙәле, аҡ һаҡаллы ҡарт һурылып сыҡты ла Искәндәргә яҡынлашты. Мин уның Искәндәрҙең атаһы Лотфулла икәнен шәйләнем. «Улым, мине таныйһыңмы?» Йылғыр, зирәк Лотфулла ағай утыҙынсы йылға тиклем етеш донъялы крәҫтиән ине. Яйыҡ аръяғында ере булды, һыйырҙары, аттары, һарыҡтары ла байтаҡ ине. Утыҙынсы йылда разнарядка буйынса раскулачивать итергә килһәләр, был — юҡ. Баҡһаң, кырандасына ике атын еккән дә Себер яғына баш орған. Ауылға һуғыш алдынан ғына ҡайтып төштө. Ҡайтты ла улын алып йәнә юғалды. Был юлы — Ташкент тарафтарында. Һуғыш бөткәс кенә әйләнеп ҡайтты. Тыуған ерендә үлер өсөн.

Атаһының һорауына яуап бирмәй, Искәндәр миңә һүҙ ҡушты: «Уны һин алып килдеңме?» — «Мин». — «Ниңә?» — «Һинең уны нисек ҡаршы алырыңды белер өсөн». — «Нисек ҡаршы алырымды? Ҡыуанып ҡаршы алам. Әйҙә, атай, өйгә инәйек. Ҡунаҡ булырһың. Берәй ярты эсербеҙ!» — «Юҡ, улым, рәхмәт. Үле көйө тереләрҙә ҡунаҡ булып йөрөү килешкән эш түгел. Нисек йәшәйһең һуң?» — «Арыу». Ҡарт килененә мөрәжәғәт итте: «Бик ҡыйырһытмаймы?» — «Ҡыйырһытмай буламы? Еще нисек! — тип яуапланы ҡатын. — Эт менән бер һинең улың. Эскесе. Килгән бар пенсияһын эсеп бөтөп тора. Аҡсаһы бөткәс, ауыл буйлап теләнселәп сығып китә. Ҡартайҙы, һаман туҡтала алмай». Ҡатын быларҙы нисектер асыуланмай ғына, йылмайып тигәндәй әйтте. Искәндәрҙең үҙенең дә ауыҙы йырыҡ. Был һүҙҙәргә Лотфулла ҡарт та әллә ни бөтөрөнмәне шикелле. Һүҙҙе дауам итмәй, хәбәрен икенсе юҫыҡҡа борҙо: «Власҡа хәҙер ниндәйҙер демократтар килгән, ти, бит. Улар тартып алынған ерҙәрҙе элекке хужаларына кире ҡайтара, ти. Беҙҙең ерҙе һиңә кире бирмәнеләрме?» — «Юҡ. Колхозда минең пай бар. Алты гектар. Теләһәм, колхоздан сыға алам. Миңә, пенсионерға, ул алты гектар нимәгә ул? Унда нимә үҫтерәм? Йәшерәк булғанда инде, техника, йөҙ гектар ерем булһа, икенсе мәсьәлә, — тине Искәндәр һәм миңә мөрәжәғәт итте, — Талха, һин бынау хыялың тураһында яҙырһың, моғайын. Нисек бар, шулай яҙ, үпкәм юҡ. Һин мине одеколон эсә, унан бер саҡрымдан одеколон еҫе килә, тип яҙғас, мин бит үпкәлә-

мәнем. Насарын да яҙ. Булһын, уның урынына, китапҡа кереп ҡалырмын».

Улы менән һөйләшкәс, Лотфулла ҡарт Һибәт янына барҙы. «Һин мине раскулачивать итеп ебәрҙең, Һибәт. Мин ниндәй кулак ти инде? Мин барыһын да үҙ көсөм менән таптым, тир түктем, ә бына һин ялҡауҙарҙы, бушбоғаҙҙарҙы колхозға алдың. Барыбер һеҙҙеңсә килеп сыҡманы». — «Һине раскулачивать итеүсе мин түгел — Әбүбәкер». — «Ә һин уның күтен ялап йөрөнөң». — «Ваҡыты шулай ине, Лотфулла ағай. Үпкәләргә хаҡың юҡ». — «Мин үпкәләмәйем. Үлер алдынан мин барыһын да ғәфү иттем инде».

Искәндәрҙең йортонан аҙыҡ-түлек магазинына тиклем илле аҙымдар самаһы. Ике арала — йылғаға төшә торған тыҡрыҡ. 34-се йылға тиклем үлеүселәр ҡараштары менән мәсетте эҙләне. Манараһын уларҙан һуң быҫҡайнылар, ә етмешенсе йылдарҙа һүттеләр ҙә уның урынына аҙыҡ-түлек магазины төҙөп ҡуйҙылар. Бындағы иң үтемле тауар — араҡы. Мотоциклға тейәлешеп байрамса кәйефле әллә ниндәй ирҙәр магазинға килә, шешәләрҙе арбаһына тейәйҙәр ҙә ары елдерәләр. Ҡайһылары шешәне салбар кеҫәһенә тығып йәки һатып алған әйбере менән маҡтанғандай ҡулында тотоп сыға. Баҫыу яғы урамынан комбайн күренде, магазинға боролдо, кабинанан йәш кенә егет һикереп төштө лә, бер ярты алып, яланға йүнәлде. Араҡыны ҡатындар ҙа ала, әбей-һәбей ҙә ала — шешәһеҙ һиңә берәү ҙә утыныңды, бесәнеңде килтермәй, өй түбәһен япмай. Шунда уҡ бәүелә-сайҡала ауыл эскесеһе, ҡырҡ йәштәрҙәге Һары Раил тора. Ул ҡасандыр ҡыҙыл диплом менән ауыл хужалығы академияһын бөткәйне. Аспирантурала ҡалдырырға ниәтләнгәйнеләр, әммә ул ауылға әйләнеп ҡайтты, күпмелер ваҡыт әллә агроном, әллә баш инженер булып эшләне. Араҡы осһоҙ, Раил — кәрәк кеше, уны теге эш, был эш өсөн эсерәләр, һыйлайҙар. Һөҙөмтәлә егет эсә башланы, эшенән ҡыуылды, ҡатыны ташлап китте. Хәҙер осраҡлы кәсеп менән көн күрә. Эсмәгәндә ҡулынан эш килә. Шуныһы: тапҡанын һуңғы һумына тиклем әлеге шул «йәшел йылан»ға тыға, унан берәйһенең ҡапҡа төбөндә йығылып йоҡлай. Бер туған ағаһы тупһаһынан да үткәрмәй ҡыуып сығара — бар, кит, беҙҙең йөҙҙән көлдөрөп йөрөмә, йәнәһе. Урам буйлап ул ауыҙ эсенән гел нимәлер мөгөрләп йөрөй, уның мөгөрләүенән «грязь, грязь» тигән урыҫ һүҙҙәрен генә аңғарырға мөм-

кин. «Һеҙ кемдәр ул?» — тине Раил үлектәр янына килеп. «Мәйеттәр», — тине кемдер төркөмдән. Раил күпмелер ваҡыт өндәшмәй аҡ кәфенлеләргә текәлеп торҙо ла: «Был фәнгә һыймаған эш, — тине һәм йәнә өндәшмәй торғандан һуң өҫтәп ҡуйҙы. — Грязь».

Магазиндан араҡы тотоп сыҡҡан ирҙәрҙе күргәс, аҡһаҡ Сөләймән йәнләнеп китте, терелде, баҫҡан урынында тапанып алды, берәүһенең янына килде. «Ыслушай, енекәш, эске килә бит әле. Бына нисә йыл ауыҙға тамсы ла төшкәне юҡ. Беҙгә, атҡаҙанған мәйеттәргә, бушлай берәр шешә бирмәҫтәрме икән, ә?» — «Хәҙер терeләргә лә, үләләргә лә аҡсаға ғына бирәләр, — тинем мин. — Ну, әйҙә, мин һиңә алам». Мин магазинға инеп бер шешә һатып алып Сөләймәнгә тотторҙом. Ул һирәк кенә ҡалған серек тештәре менән кимереп шешәне асты ла шыйыҡсаны ҡомһоҙланып ауыҙына ҡоя башланы. 60-сы йылдарҙа үлгән Баҡый ҡарт уның янына килде лә: «Эй, Сөләймән, бер үҙеңә күберәк булмаҫмы? Бир әле, мин дә берәй йотайым», — тине. Тере саҡтарында улар гел бергә эсте. Эсәләр ҙә һәүетемсә генә айырылышалар, унан Сөләймән Баҡый тәҙрәһе төбөнә килә лә шешәләшен саҡырырға тотона: «Эй, Баҡый, инәңдең шуныһы, сыҡ, һүҙ бар!» Баҡый таяҡ тотоп урамға атылып сыға. Сөләймән Баҡыйҙың штакетнигын аҡтарып алып быға ҡаршы баҫа. Шулай итеп улар, һүгенә-һүгенә, төн уртаһына ҡәҙәр бер-береһен баҫтырып йөрөй. «Тот шул еремде! — тип ҡысҡыра Сөләймән шешәләшенең үтенесенә. — Һинең теге саҡта уҡ миңә өс тәңкә бурысың ҡалғайны!» — «Мужиктар, әйҙәгеҙ өсөбөҙгә берҙе алайыҡ, ә?» — тип инәлә уларға татар Баҡый. Өсөбөҙгә тигәнен урыҫса әйтә, «на троих», ти. Әлбиттә, күптән үлгәндәр был һүҙҙе белмәй, ә бына Сөләймән аңланы. «Ниндәй дүрәк бер шешәне өскә бүлә ти инде? Берәү үҙемә лә етмәй». Ул күп итеп йәнә бер нисә йотом йота. Баҡый, алырға теләп, шешәгә йәбеште, әммә Сөләймән уны этеп ебәрҙе. Һуғышып китмәһендәр тип, мин: «Егеттәр, тынысланығыҙ, тағы берҙе алам улайһа», — тинем. Ярай, аҡсам бар ине, яңыраҡ ҡына журналда баҫылған повесть өсөн гонорар алғайным. Тағы ике шешә сығарҙым, береһен оло Баҡыйға, икенсеһен бәләкәй Баҡыйға тотторҙом. «Әйҙә, бында сағығыҙҙа эсеп ҡалығыҙ, теге донъяла бирмәҫтәр, — тинем мин урыҫса һәм төркөмгә өндәштем: — Тағы кем эсергә теләй?» Теләүселәр табылманы, өндәшмәнеләр, тик бик оло булмаған ҡарсыҡ ҡына: «Тере

саҡтарында ла ирҙәребеҙҙе көсләп эсерҙегеҙ, хәҙер үлгәндәрҙе лә эсерергә итәһегеҙме?» – тип ҡуйҙы. Шул саҡ тере Искәндәр аҡһаҡ Сөләймәнде таныны. «Эй, йәмәғәт, бына был ҡарт ошаҡсы булған! Ауыл Советының архивында уның яҙған доностарын таптылар, ошо доностар буйынса кешеләрҙе ҡулға алдылар, төрмәгә ултырттылар», – тине ул. «Яҙҙым шул, ә ниңә яҙмаҫҡа?! Контра менән халыҡ дошмандарын бөтөрөргә кәрәк ине. Зато мине түрәләр ихтирам итте. Райкомға килһәң, беренсе секретарь: «Әйҙә, кер, иптәш Сөләймән, ултыр, тип ҡаршы ала торғайны. Ултырам, һөйләшәбеҙ, тәмәке көйрәтәбеҙ. Мин уға һөйләйем. Кәрәген, тейешлеһен, уны ҡыҙыҡһындырғанын», – Сөләймәндең бер ҙә иҫе китмәне.

Былар яғына элекке уҡытыусы Нәжиб ҡарт килгәне күренде. Аллаһы тәғәлә ене ҡағылған уҡытыусы ине ул. Математиканан уҡытты. Уның бөтә уҡыусылары ла тиерлек юғары уҡыу йорттарына инде: уҡытыусы, инженер, агроном булып сыҡтылар, эшләп йөрөйҙәр, уҡытыусыларын оло хөрмәт менән телгә алалар. Бер уҡыусыһы, минең ике туған ҡустым Шәкүр, фән кандидаты, университетта уҡыта. Ҡыҫҡаһы, шәп кеше Нәжиб ҡарт. Әсе телле, йор һүҙле, кәрәк булғанда үҙенән шиғырҙар, ләҡәптәр, таҡмаҡтар ҡойолған ҡартты ауылда барыһы ла ярата тип әйтеп булмай, сөнки ҡай саҡ арттырып та ебәрә. Бер ваҡыт магазинда Мөхәммәт ағайҙы осрата. Мөхәммәт ағай, Ноғман хәҙрәттең улы, һуғыш ветераны, уҡытыусы, Нәжиб кеүек үк, ауылда иң оло кеше, йыш ҡына мулла вазифаһын да үтәй торғайны. Аллаһыҙ коммунист Нәжиб ҡарт тота ла уға былай ти: «Усың менән йөҙөңдө һыпырып, нимәлер мөңгөрләп кенә лә байтаҡ аҡса йыяһыңдыр, һин, ә?» Билдәле, Мөхәммәт ҡарт үсегә, ныҡ үсегә, Нәжибте ҡарғай-ҡарғай магазиндан сығып китә. Ә икенсе көнө Нәжиб ҡартты паралич һуға. Әлбиттә, осраҡлы тура килеү инде ул, әммә ауылда халыҡ, Алла ҡарғышы төштө, тип һөйләй. Ҡарттар килешә, Нәжиб ҡарт Мөхәммәттән ғәфү үтенә, хатта, үлә ҡалһам, йыназа уҡырға кил, тип һорай.

Бына ошо Нәжиб, аяҡтарын саҡ һөйрәп, мәйеттәр янына килде лә: «Бында нимә бара, был ниндәй кәмит?» – тип һораны. «Былар беҙҙең мәйеттәр, Нәжиб ағай, мин уларҙы ҡәберҙәренән сығарҙым да үҙебеҙҙең бөгөнгө тормошто күрһәтеп йөрөйөм», – тинем. «Күрһәт, күрһәт, һинең демократтарың беҙҙе ҡайҙа килтереп еткергәндәрен күрһәт». Сөләймән Нәжибте таныны. «Ҡартайғанһың, Нәжиб,

тая́к менән йөрөйһөң икән,— тине ул һуҙып ҡына, шунан һораны: — Һин үҙең кем хәҙер, коммунисмы, әллә демократмы?» — «Коммунист инем, үлгәндә лә коммунист булып үләсәкмен! — тип яуапланы Нәжиб, миңә боролоп, өҫтәп ҡуйҙы: — Бына беҙҙең Талха демократ һәм ельцинист. Коммунистар уны кеше итте, яҙыусы булғайны, уларға бысраҡ яғырға тотондо.— Ул таяғы менән Искәндәргә төрттө.— Бына был да демократ һәм анархист. Власть минең ҡулда булһа, мин ул демократтарҙы, казнокрадтарҙы, конокрадтарҙы...» — «Һаман ҡан көҫәйһең, ғәйепһеҙ кешеләрҙең ҡанын аҙ түктегеҙме?» — тип яуапланы Искәндәр. «Тыҡ өнөңдө, кулак малайы. Ана Яйыҡ аръяғында атайыңдың ерҙәре, ал шуны, минең балалар һиңә батраклыҡҡа барыр. Йә бөтә ерҙе американдарға, япондарға һат!» — «Ишеттегеҙме, иптәш мәйеттәр, беҙҙән башҡа бында ниҙәр булып ята?!» — тип ҡысҡырҙы Хафиза апай.

Шунда төркөм эсенән бәләкәй генә мәйет һурылып сыҡты ла Нәжиб янына барҙы. Нәжибтең күршеһе Миңлекамал апай, ауылдың берҙән-бер фронтовичкаһы. Йәш сағында уҡытты. Әллә алдылар, әллә үҙе теләп китте, һуғышта элемтәсе булған. Тере саҡта күршеһе Нәжиб менән һис һыйыша алманы. Араларынан ниндәй бесәй үткәндер, нимә бүлешә алмағандарҙыр — Аллаһы тәғәлә үҙе генә белә. «Ә, һин тереме ни әле? Мин үлгәндә шатланғанһыңдыр инде. Хәҙер үҙең дә кәкерәйеп бөткәнһең. Оҙаҡламай беҙҙең янға килтерәсәктәр,— ул, үҙҙәренең элекке әрләшеүҙәрен дауам иткән һымаҡ, тиҙ генә туҡтала алманы.— Һин бит һуғышта булмағанһың, ҡайҙалыр боҫоп ултырып ҡалғанһың». Нәжибтең ирендәре ҡалтыранды. «Мин һиңә документтарҙы күрһәттемме? Наградаларҙы күрһәттемме? — тине ул ҡалтыранған тауыш менән, миңә боролдо.— Һин нимә тип был ярты аҡылды терелттең, ә? Ниңә бында килтерҙең? Аҡыллыраҡтарын таба алманыңмы ни?»

«Нимә, һуғыш булдымы әллә?» — тип һораны ниндәйҙер ҡарт, күрәһең, һуғышҡа тиклем үлгәндер. «Булды шул, немецтар менән һуғыштыҡ бит»,— тип яуапланы Искәндәр. «Кем еңде һуң?» — «Немецтар еңде»,— тине Искәндәр. «Нисек инде, немецтар? Ышанмағыҙ. Беҙ еңдек,— тине Нәжиб.— Уларҙы еңеү өсөн егерме миллион кеше ғүмерен бирҙе». — «Кулак малайы, Сталинды ебәрергә ине һиңә!» — тип зәһәрләнә Хафиза апайым. «Дөрөҫ, беҙ еңдек, әммә улар еңеүселәр кеүек йәшәй, ә беҙ еңелеүселәр

кеүек». — «Һин ҡайҙан беләһең?» — «Ҡайҙан беләм? Гәзиттән уҡыйым, телевизорҙан ҡарайым. Бына тигән итеп йәшәйҙәр. Беҙҙең тормош менән сағыштырырлыҡ та түгел, беләһең килһә». — «Һин шуға ышанаһыңмы? Һинең ул демократтарың алдаша бит! Мин уларҙы!..» — Нәжиб ярһып таяғы менән һелтәнде.

Тереләрҙең ни турала бәхәсләшкәндәрен күп мәйеттәр, әлбиттә, аңламай ине, уларҙың асыуы, ҡайғыһы, мәшәҡәттәре улар өсөн һис төшөнөрлөк түгел. Аҡһаҡ Сөләймән, ике Баҡый эсеп иҫерҙе лә йырларға керəште: «Беҙгә коммунизмға юл асыҡ, коммунизм юлы сәскәләр менән тулы, йәшә коммуна, мәңге йәшә!..»

Магазин янында митинг үткәреү етте, тип мин мәйеттәрҙе артабан, бынан алтмыш һигеҙ йыл элек үҙем тыуған урамға ҡарай алып киттем. Мин донъяға килгән бәләкәй генә йорт күптән юҡ инде. Беҙҙең нигеҙҙә үҙенең ғаиләһе менән Ноғәйбәк Иван йәшәп ята. Был урамда бар йорттар ҙа яңы. Ошонда йәшәп, ошо урамда үлгән мәйеттәр йорттарҙың тәҙрәләренә, ҡапҡа төбөндә торған кешеләргә ҡарап үҙҙәренең ейәндәрен, балаларының ейәндәрен танъманы, танығандары ла яҡын барырға, һүҙ ҡушырға нисектер тартынды. Ивандың биш мөйөшлө ҡарағай йорто тәңгәленә килеп еткәс, һирәк мыйыҡлы, сәсе ҡырып алынған бәләкәй кәүҙәле ир урынында тапана башланы.

Бәй, был минең атайым, даһа! Бөтөнләй йәш кеше, ҡырҡ дүрт кенә йәшендә туберкулездан үлгәйне. Эргәһендә торған үҙенең улын, етмеш йәшкә етеп барған ҡартты, әлбиттә, таныманы. «Ошо урында беҙҙең өй була торғайны, — тине ул, тирә-яғына ҡаранып. — Хәҙер бында кем йәшәй? Талха улым түгелме?» — «Юҡ, Иван тигән кеше йәшәй», — тинем мин. «Урыҫмы ни?» — «Суҡындырылған ноғәйбәк». Атайым эргәһенә ҡуңыр йөҙлө, ябыҡ ҡына ҡатын килде. Ул үтә лә ябыҡ ине, кәфен аҫтында, әйтерһең, ҡоро һөйәк. Үҙе йәш, саҡ утыҙы үткән — атайымдан һуң бер генә йыл йәшәп ҡалды бит. «Ҡара әле, беҙҙең балалар ҡайҙа икән, нисек йәшәйҙәр икән?» — тине ул атайыма. «Бабай, беҙҙең балалар ҡайҙа? Талха, Әҡлимә, Рифҡәт?» Мин, ҡарт кеше, уларға, үҙемә балалар тейеш тура килгән йәштәргә: «Мин һеҙгә ниндәй бабай булайым, улығыҙ ҙаһа», — тип әйтә алмайым бит инде. Әйтә алам, тик миңә нимәлер ҡамасаулай, тыя, бында ниндәйҙер яһалмалыҡ бар төҫлө. Улар бит мине ун йәш кенә сағымда ҡалдырып китте, мин, алдығыҙҙа торған етмеш йәшлек ҡарт, һеҙҙең

улығыҙ, тип әйтһәм, улдары итеп ҡабул итә алырҙар инеме икән? Юҡ, ышанмаҫтар ҙа, ҡабул да итә алмаҫтар ине. Ә бынан өс йыл элек вафат булған Әҡлимә һеңлем атайым менән йәнәш ята. Атайым был хаҡта белмәй, тимәк, улар үҙҙәренең ҡыҙын танымаған йәки үлгәндәрҙең рухы йөрөгән теге донъя юҡ. Булһа, осрашырҙар ине. «Оло улығыҙ Талха Мәскәүҙә йәшәй, — тинем мин, күҙҙәремә төйөлгән йәштәремде саҡ тыйып. — Өйләнгән, улы бар, улының ҡыҙы үҫә, һеҙҙең ейәнсәр. Талха яҙыусы булып китте, китаптар яҙа». — «Маладис, зирәк малай ине». — «Ҡара һин уны, ҡайҙа барып еткән», — тип аптыраны әсәйем. — Китап уҡырға бик әүәҫ ине шул. Бар, улым, утын ҡырҡып индер, тим, ә ул китабынан башын да күтәрмәй. Хәҙер китабыңды мейескә яғам, тим, ул һаман уҡыуын белә». — «Рифҡәт Ташкентта йәшәй, Әҡлимә — ҡалала (үлде, тип әйтеп кәйефтәрен ҡырғым килмәне)». — «Әгәр беҙ тере булһаҡ, бөтәбеҙ ҙә бергә йәшәр инек, әтеү бүҙәнә балалары һымаҡ, төрлөһө төрлө яҡҡа таралышып бөткән икән», — тине әсәйем, уфтанып.

Меҫкен минең атай-әсәйем, тынысланған йөрәктәрегеҙҙе яралап, һеҙҙең үлемдән һуң беҙгә ныҡ ҡыйын булғанын, асыҡҡаныбыҙҙы, кейергә кейем булмауын, үҙемдең бер ҡараусыһыҙ сит яҡтарҙа этелеп-төртөлөүемде, һуғышта, һуғыштан һуң да әле күп тапҡырҙар үлем менән осрашыуымды, яҙыусылыҡ эшенең дә ҙур ауырлыҡ менән бирелеүен һөйләй алмайым бит инде...

Хәҙер, тыуған йортома етеп, атай-әсәйемде күргәс, мин хыялымды, бөтә ҡыҙыҡһыныусанлығымды юғалттым да — миңә артабанғы ваҡиғалар ҡыҙыҡ түгел ине — мәйеттәрҙе ауыл осона тиклем алып барып тормаҫҡа булдым. Үлектәрҙән мин, беҙҙең бөгөнгө тормош нисегерәк, үҙегеҙҙе ҡәберҙәрегеҙҙән сығарғанға ҡәнәғәтһегеҙме? — тип һорадым. «Мине алып сыҡмаһаң да була ине, — тине Сөләймән. — Мин нимә генә белдем инде? Араҡының ҡыйбатланғанын күрҙем. Совет власын эсеп бөтөргәнһегеҙ, коммунизм төҙөмәгәнһегеҙ. Быларҙың береһен дә белмәһәм, яҡшыраҡ булыр ине». — «Ә мин сыҡҡаныма үкенмәйем, — тине Хафиза апайым. — Нәжибте күрҙем, үҙемдең уның тураһында нимә уйлағанымды күҙенә бәреп әйттем». — «Һеҙҙең был тормошоғоҙҙа бер нәмә лә белерлек түгел, — тип яуапланы бигүк ҡарт булмаған икенсе бер мәйет. — Совет власы юҡ, ниндәйҙер демократтар килгән икән, колхоз — банкрот. Быны нисек аңларға?» — «Кешеләр нисек-

тер икенсе, беҙҙең заманда ололарҙы ихтирам итә инек, хәҙер ул тойолмай. Эскеселәр күп. Ул саҡта бөтә ауылға ике генә эскесе була торғайны, Сөләймән менән Баҡый, ә ҡатындар бөтөнләй эсмәне», — тине Лотфулла ҡарт.

Мәйеттәрем минең, һеҙгә мин бөтә дөрөҫлөктө лә һөйләй алмайым шул. Советтар Союзы тарҡалды, минең энем йәшәгән Ташкент хәҙер сит ил, көньяҡта әллә граждандар, әллә этник һуғыш бара, элек ҡыҙынырға, һыуында йөҙөргә барған Ҡара диңгеҙ яры буйында хәҙер аталар, Ҡырым хәҙер урыҫ ере түгел, демократия халыҡ власын аңлатһа ла, ун йыл элек булмаған кеүек, әле халыҡта бер ниндәй власть юҡ, Рәсәйҙә «демократия» — әрләү һүҙе, номенклатура халыҡҡа биргән бәләкәй генә ирек, азатлыҡ менән таҙа ҡуллы, ғәҙел кешеләр түгел, ә бурҙар, ҡалын тауышлы әрһеҙ кешеләр файҙалана... Былар тураһында һөйләһәм, мәйеттәр барыбер ҙә бер нәмә лә аңлай алмаҫтар ине. Хәйер, мин быларҙы үҙем дә аңлап бөтә алмайым.

Әгәр мин әлеге ише хыялымда туғандар ҡәберлегенән, снаряд, бомбалар емергән окоптарҙың балсыҡтары араһынан, Мәскәү янындағы уйпатлыҡ һәм урмандарҙан Белоруссия ҡалҡыулыҡтарынан, күптән үткән ҡанлы һуғыштың бөтә яландарынан, үҙемдең бөтә ауылдаштарымды, ағай-бабайҙарымды, балалыҡ дуҫтарымды күтәреп, бөгөн Ҡыҙыл майҙан буйлап оятһыҙ һәм ғорур рәүештә ҡара мундирҙарына свастикалар таҡҡан үҙебеҙҙең фашистар атлай, Гитлерҙың «Майн кампф» китабы мөйөш һайын һатыла, тип әйтһәм, улар мине иҫәрҙәр йортонан ҡасҡан кеше тип уйлар ине.

«Ҡәҙерле мәйеттәрем минең! — тип мөрәжәғәт иттем мин уларға. — Һеҙ, бәлки, ҡәберҙәрегеҙгә кире ҡайтырға теләмәйһегеҙҙер? Кем дә кем был тормошта ҡалырға ниәтләнә, шулар ҡулдарығыҙҙы күтәрегеҙ». — «Ә һин нисек ҡалдыра алаһың?» — тип һораны кемдер. «Хыялланам да, әкиәт яҙам», — тип яуапланым (фантастика яҙам, тип әйтергә телем әйләнмәне). Өндәшмәнеләр, ҡул да күтәреүсе булманы. «Юҡ, беҙ теләмәйбеҙ, — тине, ниһайәт, элекке уҡытыусы Зөлҡәрнәй ҡарт. Ул быға тиклем һүҙгә бөтөнләй ҡыҫылмағайны, үҙенең янғындан һуң күмерләнгән, яртылаш емерелгән өйө янынан үтә бошонҡо үткәйне. — Үҙебеҙгә тейешле ғүмерҙе йәшәнек, балаларҙы дәүләткә ҡалдырҙыҡ, сирләнек, йонсоноҡ, йәшәйбеҙ тип этләндек. Юҡ, йәштәр араһында буталып йөрөйһө, һауа боҙаһы килмәй». — «Дөрөҫ, дөрөҫ», — тиеште тауыш-

тар, Зөлҡәрнәй ҡарт менән ризалашып. «Фазыл ағай, бәлки, һин ҡалырһың? Колхозды күтәрер инең», — тинем мин элекке рәйескә. «Юҡ, — тип яуапланы Фазыл ағай. — Хәҙерге халыҡ менән күтәрә алмайым. Минең колхозсылар араҡы артынан комбайнға ултырып йөрөмәне. Минең кешеләр намыҫлы эшләне. Техника әҙ ине, шулай ҙа продукция бирә инек. Тәртип булды, эскеселәрҙе, ялҡауҙарҙы мин колхозда тотманым. Юҡ, теләмәйем».

Уның менән бәхәскә инге — хәҙер бит беҙ бөтәбеҙ ҙә бәхәсләшергә оҫта — үҙемдең бөгөнгө тормошто аңлауымды әйтке килгәйне лә тыйылдым. Ул саҡта колхозсыла крәҫтиәнлек, хужа була белеү, хужа булырға тырышыу ынтылышы көслө ине. Сафиулла, Фәррух, Хафиз ағайҙарҙың, үҙемдең ағайымдарҙың, ҡатын-ҡыҙҙың нисек эшләгәнен мин хәтерләйем бит, улар арыҡ трудоденгә йәки бушҡа бил бөктө. Ә бына уларҙың балаларында, ейәндәрендә крәҫтиән рухы бөттө, ҡороно. Ер бит тере йән, үҙенең өҫтөнән нисек йөрөгәндәрен яҡшы белә: унан тир еҫе сыҡҡан ир йөрөймө, әллә ауыҙынан осһоҙ араҡы борхолдаған ялҡау ир ишараты атлаймы икәнен ул бөтә булмышы менән һиҙеп тора. Тик мәйеттәр менән был турала бәхәсләшеп тороуҙан ни фәтүә?..

Шул саҡ Хафиза апайым тауыш бирҙе: «Мин ҡалырға теләйем! Ә һин, давай, бөтә коммунистарҙы күтәр, иптәш Сталинды терелт. Беҙ бында тиҙ арала тәртип урынлаштырасаҡбыҙ!» — «Беҙгә үлектәр нимәгә кәрәк ул? — тип ҡаршы төштөм мин. — Беҙҙә тере коммунистар ҙа етерлек. Улар Сталиндың портретын тотоп урамдар буйлап йөрөй, «Интернационал»ды йырлай. Халыҡ уларҙы ярата. Оҙаҡламай һайлауҙар була, кешеләр уларға бик теләп тауыш бирәсәк. Беҙгә капитализм да, царизм да кәрәкмәй, яңынан коммунизм төҙөйәсәкбеҙ. Ә һин, апай, үҙеңдең ҡәбереңә кире ҡайт та йомшаҡ тупрағыңда тыныс ҡына ят».

Һәм мин, тәбиғәт тереләр менән үләләрҙең рухын туранан-тура осраштырмай бик дөрөҫ эшләгән, тигән фекергә килдем, юҡһа үләләр, беҙҙең, тереләрҙең, аңын гел генә борсоп, яңы тормош төҙөүҙә ҡамасаулап йонсотор ине. Биллаһи, шулай булыр ине.

Һуңынан яныма аҡ һаҡаллы кеше килде. Мин уны таныным: Ноғман мулла. Коллективлаштырыу башланыу менән ул үҙенең ҙур йортон, йыйған бөтә байлығын колхозға бирҙе лә ғаиләһе менән бәләкәй генә өйгә күсте. Уны кулак итеп һөрмәнеләр, ҡалдырҙылар, әммә утыҙ һигеҙен-

се йылда кемдеңдер ошағы арҡаһында (динде пропагандалау менән шөғөлләнә, йәнәһе) мулланы әллә Себергә, әллә Ҡаҙағстанға ебәрҙеләр. Унан ныҡ ҡартайып, сирләп ҡайтты, һуғыш сығыр алдынан ғына үлде. «Ағай, минең балалар ҡайҙа икәнде белмәйһеңме?» — тип һораны минән үҙемә ҡасандыр бик ҡарт күренгән мулла. «Мөждаһа менән Мәхмүт һуғышта үлде, Камил Миндәктә йәшәй, Сөнәғәт үлде, Мөхәммәт бында йәшәй». — «Дин менән хәҙер ни хәл? Коммунистар власы булмағас, бәлки, намаҙҙы тыйыу ҙа юҡтыр?» — «Тыйыу юҡ. Ҡалала мәсет һалдылар. Ғөмүмән, халыҡ бер ҡасан да дингә ҡарашын да, Аллаһы тәғәлә һүҙенә ышанысын да онотманы, — тип яуапланым мин һәм уның үҙенә былай тип һорау бирҙем. — Хәҙрәт, әйт әле, хәҙер, моғайын, беләһеңдер, теге донъя бармы?» Мулла бер аҙ өндәшмәй торҙо, аҡыллы ғына көлөмһөрәне лә: «Эйе, хәҙер беләм, тик әйтмәйем — тереләр ул хаҡта белергә тейеш түгел», — тип яуапланы.

Мәйеттәрҙе мин кире зыяратҡа алып киттем. Зыярат ҡоймаһы менән ауыл араһындағы илле аҙымды үткәс, улар миражға әүерелде лә таралышып бөттө. Ҡәбер таштары, рәшәткәләр, соҡорҙар, уңған еләк, бейек үләндәр аҫтында шундай һиллек, мәңгелектең тыныс һағышы хөкөм һөрә ине. Мин атайымдың ҡәбере янында торам...

## *Кендек әбейе*

Ғәйшә әбей беҙҙең аймаҡтың кендек әбейе ине, ә аймаҡ ҙур, ауылдың яртыһын тәшкил итә. Үткән быуаттың башындағы болғанышлы йылдарҙа, төпкөл ауылдарҙа врачтар ҙа, акушеркалар ҙа юҡта, Ғәйшә әбей — ул заманда әле йәш сағы — түлле ҡатындарҙың ҡарынынан был яҡты донъяға сығып, кешелекте дауам итәсәк үрсемде ҡабул итә башланы. Уның ҡул арты ифрат еңел ине — ауыр тыуымдар булманы, булһа ла бик һирәк. Бала тыуҙырыусы әсәләр уға мөкиббән ышана, шунлыҡтан ул килһә, тамам тынысланалар ҙа үҙ сәғәтен сабыр ғына көтәләр. Үҙенең моңло тауышы менән көңелле генә һөйләшеп, хәбәренә ара-тирә доғалар, таҡмаҡтар ҙа ҡыҫтырып, кендек әбейе ҡаҙ майын буласаҡ әсәнең ҡорһағына мул ғына итеп һөртә лә, йомшаҡ бармаҡтары менән һыйпап, ауыр-

тыныуын еңеләйтә, тынысландыра, бөтәһе лә һәйбәт осланырына өмөтләндерә.

Революцияға тиклемге йылдарҙан алып донъяға күпселек малайҙар тыуҙы. Улар таҙа, теремек, бар ағзалары ла теүәл булып тыуҙы, ерҙәге һауаны һулап ҡысҡырып ебәрҙе, сәптерҙе, әйтерһең дә, тәүге һулам, бына беҙ тыуҙыҡ, был ергә беҙ хужа буласаҡбыҙ, үҙебеҙҙең кем икәнде күрһәтербеҙ әле, тип әйтергә теләйҙәр ине.

Хәҙер миңә, туғыҙынсы тиҫтәне ҡыуған ҡартласҡа, Ғәйшә әбей ҡабул иткән малайҙарҙың береһе икәнлегемде уйлау сәйер һымаҡ. Ғәйшә әбей әйтә торғайны: мин ифрат ауыр тыуғанмын икән — башым бигерәк тә ҙур булған. Ә балалар тыуыуға бәрәкәтле тип иҫәпләнгән ана шул егерме бишенсе йылғыларҙан хәҙер мин бер үҙем генә йөрөп ятам...

Малайҙар күп тыуһа, һуғыш сығыуға, тимәк Аллаһы тәғәлә халыҡтың имен тормошон шайтан балаларынан һаҡлау өсөн һуғышсылар әҙерләй, ти торғайны йәнә Ғәйшә әбей. Утыҙынсы йылдарҙа ул ҡабул иткән ошо буласаҡ ил һаҡсылары бөтә аймаҡты тултырҙы, икенсе бригаданың ат һарайында, кешеләргә, аттарға йоҡларға ҡамасаулап, ярты төн уртаһына тиклем тамаҡ ярып ҡысҡыра-һөрәнләй һуғыш уйыны уйнаны. Беҙ ҡорал ярата инек, ысын винтовкалар, нагандар хаҡында хыялландыҡ, тик уларҙы ағастан яһап алыуҙан башҡа сарабыҙ юҡ ине. Егерменсе йылдар башында тыуған ҙурыраҡ малайҙар баштараҡ ҡыҙылдар һәм аҡтар, Мортазин, Блюхер булып уйнаны, хәҙер, бер аҙ үҫкәс, аҡ майкалар кейеп — беҙҙең өсөн тормошҡа ашмаҫлыҡ хыял — мәктәп алдында волейбол һуҡты. Ә беҙ, граждандар һуғышын онота төшкән ыбырсыбыр, үҙебеҙгә «дошман» итеп кемде һайларға белмәй аптыраныҡ. «Беҙ фашистан ҡурҡмайбыҙ, штык менән уға ҡаршы барабыҙ», — тип йырлайбыҙ, әммә ошо фашистарҙың капиталистар менән бергә Германияла йәшәгәнен беләбеҙ, тимәк, улар — немец, тик беренсе герман һуғышында беҙгә әсирлеккә эләккән һәм шул саҡтан бирле үҙенең мәрйә ҡатыны Марья менән беҙҙең ауылда йәшәгән немец Франц һис беҙгә «дошман» була алмай. Был немец бик оҫта ҡуллы ине, ауылдың сепараторҙарын, сәғәттәрҙе, йоҙаҡтарҙы төҙәтә, етмәһә, беҙҙе төрлө ауырыуҙарҙан, ололарҙы теш һыҙлауҙан дауалай торғайны. Йәйҙәрен беҙ Францтың төрлө еләк-емешкә бай йәшелсә баҡсаһына төшөп ҡыяр урлайбыҙ. Ул беҙҙе күрә, әммә

ниҙәлер ҡыумай, башҡортса ла, немецса ла һүгенмәй, аптырап ҡарап тик тора. Беҙгә оялышып табан ялтыратыу өсөн был да етә.

Ауыр крәҫтиән хеҙмәте иңдәрен баҫҡан ҡатындар ҡарынынан кендек әбейе сығарған бөтә малайҙар ҙа һаутаҙа, хәрби хеҙмәткә яраҡлы булып үҫте. Тауҙан сана менән шыуып төшкәндә ҡар өйөмөнә сумып йәки йоҡа боҙ өҫтөнән йүгергәндә боҙ ватылып китеп, һыуға төшөп, һыуыҡ тейҙерһәм, Ғәйшә әбей мине үлән төнәтмәһе һәм сихәтле ҡулдары менән дауаланы. Нисек дауаланымы? Мин «массаж» тигән һүҙҙе тәү тапҡыр һуғыштан һуң Мәскәү янындағы бер санаторийҙа ишеттем һәм уның нимә икәнен үҙемдә татып белдем. Тулы кәүҙәле йәш медсестра хушбый аңҡып торған йомшаҡ ҡулдары менән арҡамды ышҡыны, һыпырҙы, ҡай саҡ еңелсә генә шапылдатып һуҡҡылап та алды, ә миңә, контузия алған неврастеникка, тәнемә ҡатын-ҡыҙ ҡулы ҡағылыуынан рәхәт булһа ла, һис еңеллек килмәне. Ә Ғәйшә әбейҙең ҡатынҡы ҡулдарынан минең һөйәктәр шығырлай, һынғандағы ише шартлап-шартлап китә ине. Ул мине мунса ләүкәһенә һуҙып һала ла һөйәк менән тиренән генә торған яшыҡ кәүҙәмде ҡаҙ майы менән майлап ыуырға керешә, үҙе әйтмешләй, һыуыҡ тейеп ҡаймылған йөрәгемде үҙ урынына ултырта. Һыйпамай, ышҡымай, ә устары менән ауырттырғансы ҡабырғаларыма һуға, йоҙроҡтары менән төйгөсләй, унан эҫе ташҡа мул ғына һыу һирпә лә эҫе миндек менән сабырға тотона. Йыуындырғас, мин хәлем бөтөп мунсанан сығам, иҫте юғалтыр хәлдә мендәргә ауам, унан үлән төнәтмәһе эсәм дә ҡаты йоҡоға талам. Иртәгеһенә яңынан тыуғандағы ише терелеп уянам, сәй эсәм дә йәнә һуғыш уйнарға ат һарайына йүгерәм.

Ниһайәт, ысын һуғыш башланғас, фронтҡа тәүгеләрҙән булып беҙҙең ағайҙар китте. Ҡайһы бер малайҙарҙың революцияға тиклем тыуған һәм күптән действительный хеҙмәттә булған аталары шулай уҡ беренселәр рәтендә алынды. Тораraҡ мәктәп алдында аҡ майкалар кейеп волейбол уйнағандарға ла сират етте. Улар араһында Ғәйшә әбейҙең берҙән-бер улы ла бар ине. (Ире юҡ, революциянан һуңғы йылдарҙа ауыр физик эштән, ярым ас тормоштан, етешһеҙлектән ирҙәр иртә үлә торғайны.) Һуғышҡа китеүселәрҙе оҙатҡанда Ғәйшә әбей: «Улар барыһы ла минең балаларым. Иҫән-һау әйләнеп ҡайтһындар, тип доғалар уҡырмын», — тип ҡала. Ә беҙ, ат һарайы герой-

ҙары, китеүселәргә көнләшеп ҡарайбыҙ, йәнәһе, ағайҙар тиҙҙән немец фашистары менән һуғышасаҡ, ысын винтовкаларҙан атасаҡ, ә беҙ үҫеп өлгөрмәй ҡалабыҙ, сөнки һуғыш оҙаҡламай Ҡыҙыл Армияның еңеүе менән тамамланасаҡ. Беренсе герман һуғышында ҡатнашҡан ҡарттар, етмәһә: «Беҙҙекеләргә ҡаршы һуғышырға немецҡа ҡайҙа инде ул, улар бит һуғыша белмәй. Буденныйҙың мыйығын күреү менән ҡасасаҡтар», — тип йәнде үртәй.

Ә бит беҙгә лә, ат һарайы геройҙарына ла, эләкте дары еҫкәү. Дөрөҫ, ул Сталинградтан һәм Курск дуғаһынан һуң булды. Ҡырҡ өсөнсө йылдың яҙында мине, ун һигеҙ йәшлек һалдатты, яңы ғына ат һарайының бесәнлегендә һуғыш уйыны уйнаған малайҙы, фин снайперы мушкаға алды. Әммә мин фин пуляһынан сосораҡ булып сыҡтым, алданым тегене. Ғөмүмән, бергә хеҙмәт иткән иптәштәремдең мәйеттәрен күргәнсе, ныҡлап беренсе ҡурҡыу тойғоһо кисергәнсе ысын һуғыш минең өсөн барыбер ҙә ҡыҙыҡ уйын булып күренә ине...

Ә бәлки, һуғыш, ысынлап та, уйындыр ул, ирҙәр уйынылыр. Кеше уйнарға ярата. Кешелек донъяһының бөтә тарихы һуғыш уйындарынан ғибәрәт. Ҡанлы был уйындар булмаһа тарихтың сюжеты ла булмаҫ ине. Спорт ярыштарында еңеүселәр һәм еңелеүселәр бар. Ә һуғыш уйындарында еңеүсе кем? Бер халыҡ та буштан-бушҡа юғалмаған, һәр ҡайһыһы үҙ ерендә йәшәп ята, үҙ телендә һөйләшә, үҙ Аллаһына табына. Ҡанлы уйындарҙан һуң кешеләр яраларын дауалай, тормош-көнкүрешен рәтләй, генералдар мемуарҙар яҙа, яҙыусылар геройҙар тураһында романдар ижад итә, тарихсылар менән философтар донъя тарихындағы бөтмәҫ һуғыштарҙың маҡсатын һәм мәғәнәһен эҙләп баш вата...

Унан, ҡыҫҡа ғына ваҡытҡа тыныс тормош килә. Окоптар, туғандар ҡәберлектәре үлән менән ҡаплана, кендек әбейҙәре, акушеркалар ҡатын-ҡыҙ есеменән яңынан ҡанлы һуғыш уйындары өсөн яңы йән эйәләрен ҡабул итә. Теләк кенә булһын, сәбәбе һәр саҡ табыла. Тик тороуҙан һәм оҙаҡ тынлыҡтан эс бошоу — бына яңы ҡанлы һуғыш уйыны башлау өсөн бер сәбәп. Кешелек донъяһы үҫмерлектән сығып өлгөрөп етмәйенсә шулай дауам итәсәк...

Беҙҙең аймаҡтан һуғышҡа етмеш ике ир-егет алынды, шуларҙың һигеҙе генә әйләнеп ҡайта алды. Улары ла сатан-сулаҡ булып, тәнендә мина, снаряд ярсыҡтары, контузияланған мейе һәм һынған рух менән ҡайтты. Фәрүәз

менән Тәлғәт аҡылдарынан яҙҙы, Ғабдулла эскегә бирелде, һөҙөмтәлә бауыр циррозынан үлеп ҡуйҙы, Шәфҡәт ниндәйҙер ағыулы шыйыҡса эсеп үлде, Бәлхиәне үпкәһендәге немец ярсығы һәләк итте. Колхоздың ат һарайы һәм бөйөк һуғыш геройҙарынан бер Рәйес кенә етмеш биш йәшенә етә алды, ул да эселеп бөтмәгән араҡы шешәһен ҡосаҡлап йән бирҙе...

Мең туғыҙ йөҙ илле бишенсе йылда, һуғыштан һуңғы ауыр йылдарҙа сит яҡтарҙа йәшәп, эшләп, иҫән-һау көйө ауылға ҡайтып төштөм. Минең былай ҡапыл пәйҙә булыуыма ауылда бер кем дә шатланманы. Әгәр атай-әсәйең көтмәй икән, һин — етемәк, бер кемгә лә кәрәгең юҡ. Ғәйшә әбейҙән шуны белдем: уның берҙән-бер улы Әхмәт хәбәрһеҙ юғалған. Хәбәрһеҙ юғалған ғына, һәләк булмаған бит. «Бәлки, ҡайтып та килер, бына һаман көтәм, доғалар уҡыйым. Ә һине һуғышта дошман тимеренән Аллаһы Тәғәлә аралаған. Ул һине юҡҡа ғына тере ҡалдырмаған, бел. Дөрөҫ, намыҫлы йәшә, ҙур кеше бул. Миңә лә шатлыҡ булыр. Һеҙ барығыҙ ҙа — минең балаларым. Имен тормош өсөн йәшәһен, тип ҡулыма алдым һәр сабыйҙы, ә балалар, ҡанлы һуғышҡа китеп, баштарын һалды...»

Илле бишенсе йылда ҡайтыуымда Ғәйшә әбейҙе, етмеш йәште уҙһа ла, әллә ни ҡарт итеп күрмәнем. Унан һуң тағы биш йыл ҡайтырға насип булманы. Һуғыштан һуң ун йыл буйы тамам йонсоған, хәлһеҙләнгән, хәйерселектән саҡ сыға, аслыҡтан саҡ ҡотола башлаған ауыл миңә аяғына саҡ баҫҡан ауырыу һымаҡ ҡыйыуһыҙ ғына йылмайғандай күренде. Колхоздың ат һарайында һуғыштан һуң тыуған малайҙар һуғыш уйнамай, ғөмүмән, ауылда бала-саға бик аҙ ине.

Ғәйшә әбейҙе мин урамда, өйө тапҡырында, осраттым. Был юлы нык ҡартайғайны, сүккән, бөкрәйгән. Мине таныны ла һораны:

— Бына һин дә ҡайттың. Тегендә Әхмәтте осратманыңмы?

Мин уның зиһене лә ҡартайғанын аңланым.

— Юҡ, әбей, осратманым...

— Ә мин һаман үҙебеҙҙең аймаҡ малайҙарын көтәм. Хәбәрһеҙ юғалғандар ҡайта тип һөйләйҙәр. Көтәм дә көтәм бына.

Әбейҙең аңы тамам буталды, алйыны тинеләр ауылда. Тереләрҙе танымай, үлеләрҙе эҙләй икән. Аймаҡ буйлап йөрөй, берәйһененең ҡапҡа төбөндә туҡтай, әммә кермәй,

оҙаҡ итеп баҫып тик тора. Берәйһен тап итһә, йәки өйҙән хужабикә сыҡһа, һорай: «Үзбәк ҡайтманымы әле?» Кешеләр быны аңлай һәм уйынсалап: «Юҡ, ҡайтманы әле», — тип яуаплай.

Киләһе ҡайтҡанымда Ғәйшә әбей мәрхүмә ине инде. Бәләкәй өйөнөң тәҙрәләренә таҡта ҡағылған, бағаналары ҡыйшайған асыҡ ҡапҡаһынан үлән баҫҡан ташландыҡ ихатаһы күренә.

Миңә, һуңғы йылдарҙа Ғәйшә әбей гел генә район үҙәгенә илтеүсе оло юлға сыҡты ла йөрөнө, тип һөйләнеләр. Һуғыш йылдарында гармун һыҡраныуы аҫтында ауыл егеттәре йырлай-йырлай ошо таш юлдан һуғышҡа киткәйне һәм күбеһе әйләнеп ҡайтмағайны. Көндөң ниндәй тороуына ҡарамаҫтан, кендек әбейе ошо юлға сыҡҡан да томанлы алыҫ офоҡтарға текәлеп торған. Үҙенең малайҙарын көтөп ала алмайынса бына шулай гүргә ингән...

## Һин аҡ ҡайын янында тора инең...

Мәрхүмә ҡатыным Әлиәгә

*«Вот тот мир, где жили мы с тобою,*
*Ангел мой, ты видишь ли меня».*

Федор Тютчев

Минең ҡатыным бар ине, шул мөғжизәнең ысынбарлыҡ булыуына хәҙер ышанғы ла килмәй. Эйе, эйе, Әлиәм, һин бар инең. Етмеш өс йылдың утыҙ дүртен мин ғаиләле кеше — ир, атай, олатай булып йәшәнем. Ошо йылдарҙа, үтә һирәк көндәрҙе хисапҡа алмағанда, көнөн дә, төнөн дә һин минең менән булдың — айырым йоҡлаған саҡтарҙы хәтерләмәйем дә. Йәшәй-йәшәй мин быны, шулай булырға тейеш, тип ҡабул иттем һәм, дөрөҫөн әйткәндә, әллә ни оло бәхеткә иҫәпләмәнем дә.

Никахтар күктә ярала, тиҙәр. Бәхетле никахтар шулайҙыр, әммә беҙҙеке, тойомлауым, һиҙеүем, ысынлап та, күктә, әйтергә яраһа, Аллаһы тәғәләнең ҡушыуы буйынса, яралды. Күҙ алдына килтереүе лә ҡыйын, миңә ҡырҡ йәш яҡынлай, минең буйҙаҡ һәм бигүк таҙа булмаған түшәгемдә байтаҡ ҡатындар ауналы, шуныһы ғәжәп, уларҙың барыһы ла миңә кейәүгә сығырға теләйҙәр ине. Дөрөҫөн әйткәндә, әллә ни күркәмлек тә юҡ, етмәһә урыҫ түгелмен,

ярлымын, уның ҡарауы эсмәйем. Әҙәбиәт институтында уҡыйым, коммуналь фатирҙа бүлмәм бар. Дөйөм алғанда, уларҙың һәр ҡайһыһы һәйбәт ҡатын була алыр ине, тип уйлайым. Әммә миндә өйләнеү тураһында уй юҡ, мин унан ҡурҡам, сөнки иртәгәһе көнөм үтә ышаныслыһыҙ, билдәһеҙ, тормош маҡсатым — яҙыусылыҡ эше — барып етә алмаҫлыҡ йыраҡ һәм ауыр тойола. Ғаилә, балалар быға ҡамасаулар, минең самалы ғына булған талантымды асылып етмәҫ элек томалар, тип фараз итәм. Бәлки, мин берәйһен көткәнмендер, яҙмышыма яҙылғанын, Аллаһы тәғәлә ебәргәнен? Йәғни, һине, күгәрсенем, һине көткәнмен булып сыға. Ете йыл...

Измайлов паркында үткән һабантуйҙан һуң ете йыл. Ә һабантуйға мине ябай бер ҡыҙыҡһыныу килтерҙе — мин бит бала саҡ һабантуйҙарын ғына беләм, ә бында, Мәскәүҙә, паркта, Мәскәү татарҙарын, яҡташ башҡорттарҙы осратырмын, бәлки, тигән теләк бар. Көрәште күҙәтеп торҙом, татар ҡыҙҙарына күҙ һалдым...

Һин ҡайын эргәһендә, дөрөҫөрәге, ҡайын аҫтында тора инең. Ап-аҡ ҡайын аҫтында. Яңғыҙһың. Төҫһөҙ генә йөҙҙәр араһында һинең йөҙөң сүп үләндәре ҡамауындағы сәскә кеүек балҡып, айырылып тора. Ҙур һоро күҙҙәрең тирә-йүнгә таҙа һәм балаларса ҡыҙыҡһыныусанлыҡ менән ҡарай. Оҙон, ауыр толомоң биленә тиклем төшкән. Ҡыҫҡаһы, ҡайын суҡтары аҫтында матур кейенгән, килешле буй-ҡиәфәтле сибәр ҡыҙ баҫып тора ине.

Мин һинең яныңа барҙым да һүҙ ҡуштым. Нимә әйткәнемде хәҙер хәтерләмәйем дә инде. Беҙҙең янға ниндәйҙер татар егете килде. Һүҙ ҡушыуы буйынса бер-берегеҙ менән таныш икәнлегегеҙҙе аңланым, тик һин уға һалҡын, хатта күрә алмаусылыҡ мөнәсәбәт күрһәттең. «Ирҙәргә тышҡы ҡиәфәт ул ҡәҙәре мөһим түгел, аҡылы булһын», — тине лә әлеге егет китеп барҙы. Уның был һүҙҙәре минең бәләкәй кәүҙәгә ишара ине — ул мине һинең егет итеп ҡабул итте. Кем ул, ниңә һин уға дорфалыҡ күрһәттең, тип һорағас: «Коля. Миңә тәҡдим яһаны, ә мин кире ҡаҡтым», — тинең. «Нишләп? Сибәр егет бит». — «Эсергә ярата, етмәһә маҡтансыҡ», — тип яуапланың һин.

Мин, әйҙә, парк буйлап йөрөп киләйек, тинем. Аллеялар буйлап атланыҡ, унан киноға керҙек, үлтер, ниндәй фильм ҡарағанды иҫләмәйем, шуныһы ғына хәтерҙә ҡалған: минең кассаға һонолған ҡулды һирпеп, үҙеңә билетты үҙең алдың.

Унан мин һине «Тынысլыҡ проспекты» метроһына тиклем оҙата барҙым. Киләһе йәкшәмбелә осрашырға һүҙ ҡуйышып, айырылыштыҡ. Дөрөҫөн әйткәндә, килереңә ышанманым, әммә һин билдәләнгән ваҡытта шунда инең. Матур кейенгәнһең, тимәк, оҡшарға тырышҡанһың. Ул осрашыу күренештәре лә иҫтә ҡалмаған, ресторан йәки кафеға, моғайын да, саҡыра алмағанмындыр, йәнә киноға кергәнбеҙҙер.

Һинең Преображенский майҙанындағы аяҡ кейемдәре магазинында эшләүеңде белдем. Шул көндән башлап эш урыныңа кергеләп йөрөй башланым. Ҡай саҡ прилавка янына ла бара инем. Әхирәттәрең миңә иғтибар менән ҡарай, йылмая, йылмайыуҙары серле. Мин ул саҡтағы үҙемә улар күҙе менән ҡарайым да нимә уйлағандарын бөгөн бик яҡшы аңлайым.

Әммә осрашыуҙар оҙаҡҡа барманы. Бер көн: «Бүтән килмә, бүтән артымдан йөрөмә!» — тип өҙә һуҡтың да ҡуйҙың. Байтаҡ йылдар үткәс, һин әлеге ҡылығыңды былайыраҡ аңлаттың, һин минең менән араларҙы боҙорға теләмәгәнһең, әммә ҡыҙҙар: «Фу, тапҡанһың инде кепкалы метр, етмәһә, эшсе. Һинең буй-һының, төҫ-башың менән унан арыуыраҡты таба ала инең», — тигән. Ул йәштә ҡыҙҙар принц көтә һәм йәш йөрәк өгөт-нәсихәткә тиҙ бирелеүсән була шул.

Мин ныҡыш, тәүәккәл булырға ҡарар иттем: тыйыуыңа ҡарамай, магазинға кереп йөрөнөм һәм, магазин ябылғанын көтөп алып, һине оҙатырға тағылдым. Әммә һинең сираттағы «артымдан йөрөмә» тигәнеңдән һуң «Комсомол» метроһында, әллә ни асыулы ла һүҙ түгел ул, уның ниндәй һүҙ икәнен һин яҡшы хәтерләйһең, «алыҫҡараҡ» ебәрҙем дә үсегеп, үпкәләп, эйәрмәй тороп ҡалдым. Бер нисә йыл үткәс, әлеге метроның өҫкө галереяларынан үткән саҡта беҙҙе оҙаҡҡа айырылыштырған урынды күрһәттем. Нимә, рәхәтләнеп көлөштөк инде...

Шул ваҡиғанан һуң ете йыл буйы һин минең тормошомдан ситкә киттең. Дөрөҫ, ҡай саҡ, үәт, яуыз, кире ҡаҡтың, бәлки, өйләнер ҙә инем, тип хәтергә төшөргөләй инем.

Ете йыл үтте, алтмыш өсөнсө йыл бара. Әҙәбиәт институтының өсөнсө курсында уҡып йөрөйөм. Яңғыҙ ҡалырмын, ғүмер буйҙаҡлыҡта үтер ахыры, тигән уй менән килешеп тә бөткәйнем инде. Хәйер, икенсе уй ҙа юҡ түгел ине: ниндәй булыуына ҡарамаҫтан, танышҡан беренсе ҡатын-

ҡыҙға өйләнәм дә ҡуям. Мөхәббәтһеҙ. Яратыуһыҙ. Был йәштә ниндәй мөхәббәт ти инде ул. Малай табып бирһә, шул еткән.

Беҙгә, дөйөм ятаҡ егеттәренә, Люся Медведовская тигән бәләкәй кәүҙәле, йәмһеҙ генә бер йәһүд ҡыҙы кергеләп йөрөй торғайны. «Толя, ҡасан өйләнәһең?» — тип йыш ҡына миңә бәйләнә был. «Өйләнерҙәйен тапмағанмын әле», — тип ҡотолорға тырышам. «Давай, мин һине бер татарка менән таныштырам, — ти Люся бер ваҡыт, — бергә эшләйбеҙ, матур кейенә». «Сибәр, аҡыллы» тиһә бер хәл, «матур кейенә», имеш. Кейеме миңә нимәгә хәжәт? Унан килеп, бер татарка ла баштан ашҡан, тип уйлайым үҙемсә.

Таныштырырға ниәтләнгән татар ҡыҙы менән Люся «Колхоз майҙаны» менән «Самотечный» араһындағы аяҡ кейемдәре магазинында бергә эшләй икән. «Ярар, берәй һуғылырмын, татарканды ҡарармын», — тинем һәм... ул турала бөтөнләй оноттом.

Мәскәү урамдарынан мин «Сретенка» менән «Кузнецкий мост»ын ярата инем. Унда — китап магазиндары, күргәҙмәләр, Мәскәүҙең мәҙәни һәм сәнғәт үҙәге. Әлеге урамдар буйлап йөрөгәндә, мин ҡала тойғоһон тоям, уның еҫен, булмышын һиҙәм, күперҙәге таштар әле лә Толстой ҡарттың аяҡ һөйрәп атлағанын, Есениндың штиблеттарын хәтерләй. Ун туғыҙынсы быуаттың гуманитар еҫе бөгөнгө бензин еҫе менән һаман ҡыҫырыҡлап сығарылмаған кеүек.

Бер көн шулай «Лермонтов» метроһынан «Колхоз майҙаны»на китеп барам һәм «Сретенка» йүнәлешенә боролайым тигәндә генә магазин, Люся димләгән татар ҡыҙы иҫкә төштө бит. Урам аша сыҡтым, аяҡ кейемдәре магазинын эҙләп таптым, эскә керҙем, прилавкаларҙы ҡарай-ҡарай уң ҡулда теге ҡыҙҙы, һине, күгәрсенем, күрҙем. Тән-кәүҙәң бер аҙ тулыланған, ҡатын-ҡыҙ нәзәкәте менән тулышҡан, ә бит-йөҙөң бынан ете йыл элекке кеүек һаман шундай таҙа, шыма, асыҡ.

Мин, Люся икенсе ҡыҙ хаҡында әйткәндер, ә һин күптән тормоштаһыңдыр, ике балаң барҙыр, тип уйлайым. Үҙ шаһыңды таба алмаһаң да, һинең кеүек күҙгә салынырҙай ҡыҙ иректә оҙаҡ йөрөй алмаҫ. «Сәләм! — тинем мин, эре генә. — Беҙ һинең менән таныш шикелле?» — «Килгән, саң да ҡунмаған, — тинең һин. — Һаман йөрөйһөңмө?» — «Йөрөйөм инде, нишләйем? Саң да ҡунмаған, имеш...»

Йәнем көйөп боролдом да китергә ниәтләндем. Тик артымдан: «Толя, ярай инде, мин шаярттым бит», — тинең. Һәм мин кире боролдом. «Исемең нисек әле?» — «Бына күрәһеңме, мин һине онотманым, ә һин онотҡанһың. Әлиә мин». — «Тормошҡа сыҡтыңмы?» — «Юҡ». — «Нишләп улай? Шундай һылыу ҡатын?» — «Алыусы юҡ».

Шулай һөйләштек беҙ. Эш сәғәтең бөткәнсе көтөп торҙом да «Банный переулок»ка ҡәҙәр оҙата барҙым. Ә бер аҙнанан: «Әлиә, сыҡ миңә кейәүгә», — тип тәҡдим яһаным.

Һуңынан утыҙ дүрт йыл бергә... Бәхетле булдымы һуң ул йылдар? Өс-дүрт йыл кеүек тиҙ үткән был ғүмерҙе мин ваҡыт берәмеге, тарих, яҙмыш рәүешендә ҡабул итеп тә өлгөрмәнем, сөнки улар бит тиҙ үтте, әйтерһең дә, төш кенә булды.

Йәшәү, тере ҡалыу өсөн тырыштыҡ беҙ. Көнкүреште әҙәмсә итеү өсөн, сир-ауырыу менән алышып, улыбыҙҙы ҡурсалап үтте был йылдар. Ул мәктәпте тамамланы, унан институт бөттө, өйләнде, ейәнсәребеҙ тыуҙы, мине Яҙыусылар союзына алдылар, әҫәрҙәрем нәшер ителә башланы. Ҡулға аҡса керҙе, хатта бер мәл билдәле яҙыусы фиғелендә лә йөрөп алдым.

Эйе, былар барыһы ла һинең йөрәк аша үтте, төрлө ығы-зығы, мәшәҡәт уны туҙҙырҙы, ҡаныңа адреналин бутаны. Әммә беҙҙең арала бер ҡасан да һыуыныу, төңөлөүҙәр булманы, хатта етди бәхәстәр тыуыуын да хәтерләмәйем. Эйе, ҡай саҡ мыжыным, асыуландым, үсектем, һөйләшмәй йөрөнөм, ара-тирә һиндә лә татар темпераменты тоҡана ине, әммә барыһы ла: «Ярай, Толя, бөттө,» — тигәнең менән, көлөү, шаярыу, үбешеү менән ослана торғайны.

Ә бәхетебеҙ булдымы һуң? Журналдарҙа әҫәрҙәрем донъя күргән саҡтарҙы, бәлки, бәхет тип хисапларғалыр? Әммә мин, көтөп арыған, үҙ-үҙемә ышанмай башлаған, мөхәррирҙәр тарафынан әрләнгән, тибелгән, үҙҙәренә яҡынайтылмаған кеше, быны бәхет күреп ҡабул итә алманым. Ә һин шат инең. Ҡулдарыңды сөйөп бейергә төшөп китер инең. Әлбиттә, гонорары өсөн дә ҡыуандың. Бәхет тигән төшөнсә, моғайын да, беҙ «Курская коса» тип аталған ижад йортона барған саҡта булғандыр, тим. Ҡом кисеп, ҡом өйөмдәре, ҡарағайлыҡ аша Балтик диңгеҙенең күбекле ярҙары буйлап йөрөнөк. Һин быларҙың барыһын да беренсегә күрә инең.

һуңынан, октябрь айында булһа кәрәк, ГДР-ға киттек. Берлин, Лейпциг, Эрфурд, Вернигород, башҡа ҡалаларҙы күрҙек. Киләһе йылына — Венгрия, йәнә бер йылдан һуң — Италия. Бына Италияны күреү, ысынлап та, бәхет булғандыр. Ул йылдарҙа был илгә сығыу еңел түгел ине. Венеция каналдары, Флоренция музейҙары, Тоскана тауҙары, Рим, Изге Петр соборы. Алыҫтан булһа ла Папаны күрҙек һәм һинең, диндар кешенең, һоҡланыуҙан, күңелең тулыуҙан күҙҙәреңә йәштәр тығылғайны.

Һиңә, һуғыштан һуңғы йылдарҙағы ярлылыҡта үҫкән, бөтә йәшлегеңде прилавка артында тороп, аяҡ кейемдәре һатып үткәргән кешегә, (ә эшеңде ярата инең) мин оло донъяны, Европаның изге таштарын, уларҙың тауар менән тулы магазиндарын күрһәттем. Мин һыныңды турайтыуыңды, башыңды күтәреүеңде, үҙеңде ғорур, үҙ аллы кеше итеп тойоуыңды теләй инем.

Ә ысын мәғәнәһендә беҙ тик ауылда, минең Ураҙҙа ғына, бәхетле булдыҡ шикелле. Үҙебеҙгә өй һалып алғас, бигерәк тә. Һин ул йорттоң, мунсаның, һарайҙың хужабикәһенә әйләндең. Ураҙҙа йәшәүе оҡшай ине һиңә, йыш ҡына: «Ауылда һин мине нығыраҡ ярataһың», — ти торғайның. Эйе, бала сағым илендә, беренсе яратыу хисе кисергән еремдә, ата-әсәйемдең ҡәберҙәре янында мин тынысыраҡ, аҡыллыраҡ, ихласыраҡ, иғтибарлыраҡ булғанмындыр.

Беҙ йылға буйлап алыҫҡа-алыҫҡа китә торғайныҡ, бала саҡтан таныш һәм яратҡан ерҙәргә. Август айында ялантуғайҙарҙа кәбәндәр ҡалҡа, беҙ шуларҙың төбөнә ултырабыҙ ҙа ҡояшта йылынып, хыялдарға биреләбеҙ. Әгәр мөмкин булһа, мәңгелеккә ошолай йоҡоға ла талыр инек.

Әгәр мин яҙға тиклем йәшәй алып ауылға ҡайтһам, һинһеҙ нисек ҡайтырмын да, кем менән әлеге һуҡмаҡтарҙан йөрөрмөн? Хәйер, яңғыҙым инде. Әммә һин һәр ваҡыт минең эргәмдә буласаҡһың, һинең менән һөйләшәсәкмен, бәхетем минең.

Һай, яңы мунсаға нисек ҡыуанғайның! Беҙ бит үҙебеҙгә мунса һалыу хаҡында күптән хыяллана инек — кешеләйыуыныу эш түгел. Шуға ла, мунса төҙөп кергәс, һин ифрат шатландың...

Былар барыһы ла, шаулы оло юлдан тыныс һуҡмаҡҡа төшкән беҙҙең мәңгелек үк булмаһа ла, оҙаҡ дауам итер кеүек тойола ине. Беҙ ҡышты ауылда йәшәргә ниәтләнгәйнек һәм саҡ ҡына һуңыраҡ, әйтәйек, бер-ике йылдан,

һиңә йөрөүе ҡыйын була башлағас, ҡалған ғына ғүмерҙе ошонда үткәрергә, беҙҙең ауыл зыяратына йәнәш ятырға теләгәйнек. Хатта атайым эргәһенән урын да һайлағайныҡ. Мин «Тау артында ниҙәр бар» тигән автобиографик повесымда башымды һинең тубыҡтарыңа һалып үлергә теләйем, тип тә яҙғайным. Эйе, беҙ уйлайбыҙ, ә Аллаһы тәғәлә үҙенсә хәл итә. Мин түгел, һин минең ҡулдарҙа был донъянан киттең...

*«Слезы людские, о слезы людские,*
*Льетесь вы ранней и поздней порой...»*

Федор Тютчев

Үҙ ғүмерендә байтаҡ ҡайғы-хәсрәт күргән Тютчев ятраҡан ҡатынын юғалтыу фажиғәһен кисермәгән, үҙе лә йәшләй генә үлгән пәйғәмбәр Пушкинға ҡарағанда тормош аянысын һәм кеше ҡайғыһын нығыраҡ аңлай.

Егерме етенсе ғинуарҙа беҙ, ғәҙәттәгесә, беҙҙең урам, беҙҙең яратҡан аллея буйлап йөрөнөк. Мин Тургенев шиғырына яҙылған «Утро туманное, утро седое, нивы печальные, снегом покрытые...» тигән романсты йырларға маташам, дөрөҫөрәге, ауыҙ эсенән генә көйләйем, ә һин көләһең, әле лә йәш йөҙөң асыҡ, ихлас. Һәм ҡапыл: «Толя, һин мине яратаһыңмы?» — тип һораның. Һуңғы йылдарҙа һин был һорауҙы миңә йыш, төрлө ерҙә, төрлө саҡта бирә торғайның. Эйе, бер ваҡытта ла минең туп-тура, яратам тип әйткәнем булманы, гел генә: «Үҙең нисек уйлайһың?» — тип яуаплай торғайным йәки: «Яратмаған булһам, күптән яратҡан булыр инем», — тием. Әммә һиңә: «Әлиә, мин һине яратам, ныҡ яратам, шашып яратам!» — тигән ҡәтғи яуап кәрәк. Был һүҙҙәрҙе мин һиңә әйтә алманым. Яратмауҙан түгел, ә ул һүҙ миңә ғүмер буйы ифрат юғары, яуаплы тойолғандан, уның эсенә һалынған ҙур мәғәнә кешенең эске рухынан, булмышынан атылып сығырға тейеш, тип аңлағандан. Юҡ, был ҡурҡыу йәки алдауҙан килмәй ине, шул һүҙ асылының бәләкәй генә бер өлөшөн дә һиңә еткерә алмам кеүек тойола торғайны.

Ә бит бергә йәшәүҙең тәүге йылдарында, һине үҙемдең яҙмышым тип иҫәпләһәм дә, етерлек кимәлдә яратмайымдыр, тигән уйҙа инем. Эйе, оҡшай инең, танһыҡ инең, көн һайын һинең йөҙөңә, күҙҙәреңә һоҡлана инем. Телефондан тауышыңды ишетһәм, эшеңдән тиҙерәк ҡайтыуыңды

көтәм, шунан, түҙмәй, янына йүгерәм. Йәшермәйем, һәр ир-атҡа хас булғанса миндә лә ниндәйҙер идеал ҡатын тураһында хыял бар ине. Бер көн урамға сығырмын да ҡаршымда, хушбуй еҫтәрен таратып алиһә пәйҙә булыр кеүек ине... Таныш булмаған ул гүзәлдәр янымдан күп үтте, әммә береһе лә туҡталманы, әйҙәмәне, ә һин, минең үтә таныш яҙмышым, бәхетем, ҡайын төбөндә тора инең...

Егерме етеһендә аллеялар буйлап йөрөгән саҡта һин йәнә лә: «Һин ниндәй матур!» — тинең һәм оҙаҡ итеп йөҙөмә ҡарап торҙоң. Ҡарашыңда нимә бар ине — мөхәббәтме, әллә ҡартайған иреңә булған йәлләү, йылылыҡмы? «Тапҡанһың матурҙы!» — тип көлдөм мин.

Ҡайғы килер ул көндөң кисендә беҙ телевизор ҡараныҡ, нимә ҡараған иҫтә юҡ инде хәҙер, үҙемдең әрләшкәнде генә хәтерләйем — экранды ун минут буйы һыра, сәйнәү, ҡауаҡ бөтөрөү средстволары менән тултыралар ҙа ҡуялар. Мин ҡыҙам, ә һин көләһең. Һуңғы йылдарҙа һин минең әрләшеүгә, ҡәнәғәтһеҙлеккә әсәйҙәрсә көлөп, йылмайып ҡараның, нишләйһең, иҫәр әле тип иҫәпләнең, ахыры.

Ҡапыл: «Һин ниндәй матур!» — тип ҡабатланың. «Мин түгел, бына һин ысынлап та матур», — тинем мин яуапҡа. Һәм ирендәреңде, бит-йөҙөңдө, күҙҙәреңде үбергә тотондом. «Ҡуй, мин ҡарт бит инде», — тинең, көлөп. «Минең өсөн һин һәр ваҡыт йәш», — тинем. Дөрөҫөн әйттем. Һине көн һайын күргәнгәмелер, минең ҡарашҡа гел йәш булып ҡалдың, эйе, йөҙөң саҡ ҡына ауырайҙы, әммә ул һаман сырышһыҙ, элекке кеүек шыма, йәш, асыҡ. Ә күҙҙәрең бөтөнләй үҙгәрмәгән, тик ҡараштарың ғына аҡыллыраҡҡа, тынысыраҡҡа әйләнде.

Бер аҙҙан һин йоҡларға йыйындың. Һин ятҡас, мин, һауа торошо үҙгәрә, магнит тулҡындары ҡоторалыр, ахыры, дарыуҙарыңды эстеңме, тип һораным. Эйе, эстем, тип яуапланың. Һәр ваҡыттағыса. Бәлә килере башҡа инеп тә сыҡманы. Зарланманың, үрһәләнмәнең. Ҡайҙа йығылырымды белһәм, һалам түшәп ҡуйыр инем, тиҙәр. Белгән булһам, ул дарыуҙарҙы көсләп ауыҙыңа тултырыр инем. Шунан мин уянып киттем — һинең тороуың һәм кухняла йөрөүең уятты. Иртәнге алты ине. Ҡапыл кухняла нимәлер ауған ише дөбөрләү ишетелде. Дарыу алған саҡта һыуытҡыстың кәштәһе йәки бүтән әйбер төшөп киткәндер, тип уйланым мин. Тик бер минут та үтмәне — йөрәк ярғыс ҡысҡырыу яңғыраны. Һин мине исемем менән атап та

ҡысҡыра ала инең, ә был ҡурҡыу, үлем алды ҡурҡыуы ине, күрәһең, һүҙҙе әйтергә хәлең етмәне һәм, һуңғы көсөңдө йыйып, һөрәнләнең. Һикереп торҙом да кухняға ташландым. Газ плитәһе яҡлап ултырғыста ултыраһың, башың күкрәгеңә һәленеп төшкән, ҡулдарың өҫтәлдә, шунда уҡ таблеткалар һибелеп ята. «Нимә булды?» — тип ҡысҡырҙым мин, йөҙөңә эйелеп. Телең һәленеп төштө, ауыҙыңдан шайыҡ китте. Көрмәлә-көрмәлә һин нимәлер әйтергә тырыштың, мин ул һүҙҙәр араһынан «баш» тигәнде генә аңланым... Ошондай уҡ хәл әсәйем менән булғайны: ул минең менән һөйләшеп ултырған көйө ҡапыл башын эйгәйне...

Мин ҡысҡырып илап ебәрҙем, һине ҡосаҡлап: «Үлмә, мин һине яратам бит, үлмә!» — тип һыҡтаным, тормошобоҙҙоң, бәхеттең һуңғы минуттары килеүен аңлағайным инде. Ни ҡылырға белмәй, сәй сынаяғына валокордин тамыҙҙым да ауыҙыңа килтерҙем, һин эстең, тимәк, аңың бар ине әле, минең әйткәндәрҙе аңларлыҡ хәлең бар ине. Барыһы ла ифрат тиҙ, көтмәгәндә булды, уны, ул сирҙе, юҡҡа ғына «удар» тип атамайҙарҙыр. Һиңә ҡыйын булғандыр, ауыртынғанһыңдыр, ҡурҡыуҙан ҡысҡырғанһыңдыр, минең һыҡтауҙы ишетеп, аңыңды юғалтҡанһыңдыр. Үҙеңдең үлеп барғаныңды аңлай алдыңмы икән?

«Зинһар, түҙ, хәҙер тиҙ ярҙамды саҡырам!» — тип ҡысҡырҙым мин. Ярҙам килде, тик һуң ине инде: йоҡоға талғайның. Һәм бер сәғәттән үлдең дә. Мин һуңғы мәлгә тиклем ҡулыңды тотоп ултырҙым, пульсың саҡ ҡына беленә ине әле, унан ике мәртәбә тәрән итеп тын алдың да йөрәгең тибеүҙән туҡтаны. Ошо мәлдә ни нәмә тойғаныңды, туннель аша яҡтылыҡҡа сыҡтыңмы, юҡмы, Аллаң йылы һүҙҙәр менән ҡаршы алдымы — быларҙың барыһын да һин үҙең генә беләһең.

Был һинең икенсе инсульт ине. Бынан ун ике йыл элек табип миңә былай тигәйне: «Һеҙ ҡатынығыҙҙы юғалта яҙҙығыҙ». Мин был һүҙҙәргә әллә ни иғтибар итмәнем — юғалтманым, терелде, йөрөй башланы бит. Һин тағы өс йыл йәшәй ала инең, һиңә етмеш йәш тулыр ине, миңә етмеш биш, беҙ, бергә үк булмаһа ла, бер тирәлә үлә ала инек. Март айында һин уколдар алырһың, апрелдә ауыл яғына ҡуҙғалырбыҙ, тип ниәтләнә инек, килеп сыҡманы, хыялдар тормошҡа ашманы...

Теләгең буйынса беҙ һине Көньяҡ Бутоволағы ҡоро зыяратҡа ерләнек. Ҡәберең — ҡайындар араһында. Һин

ҡайындарҙы ярата инең бит. Беҙ Уралда ҡайын сауҡалығы араһында йөрөгәндә, һин арҡаң менән йыуан ҡайынға һөйәләһең дә, ул миңә энергия бирә, тип әйтә торғайның. Үҙең дә миңә йәшәү өсөн көс, бәхет биреүсе ҡайын инең бит. Һине осратҡанда ҡайын аҫтында тора инең һәм әле лә, яҙҙар еткәс, ҡәбereң янында ҡайын япраҡ ярып, шаулап ултырасаҡ...

«... Ангел мой, где бы души наши
ни витали,
Ангел мой, ты видишь ли меня?»

Нимә ул үлем? Бөтә аңлы тормошом буйы үҙемә ошо һорауҙы бирәм. Һәм унан ҡурҡам. Һуғышта, госпиталдә үлемде күп күрҙем, атайым менән әсәйемдең үлемен, йәш булғанлыҡтан, улай уҡ ауыр кисермәнем. Һеңлемде лә ул ҡәҙәре бөтөрөлөп ерләмәнем, дөрөҫөрәге, этләнеп көн итеүҙән ҡотолдо, ниһайәт, тип еңел тын алдым, ә һинең үлем үҙемдең үлемгә әйләнде лә ҡуйҙы. Хәҙер кем инде ул мин? Кемгә кәрәгем бар? Ғәҙәт буйынса йәшәйем, дөрөҫөрәге, көн итәм, ҡырынам, ашайым, гәзит уҡыйым, телевизор ҡарайым, ышанысһыҙ ғына ауыл тарафтарына ҡайтыу тураһында уйлайым. Ҡайтһам да, һинһеҙ нишләрмен икән һуң?

Үлереңде алдан тойҙоңмо икән? Һуңғы ваҡытта һин үҙгәрҙең. Юҡ, ҡартайыуҙы әйтмәйем. Һин нисектер тыныс, һил, бар нәмә менән ҡәнәғәт кешегә әйләндең, иркәләүиркәләнеүҙәргә лә ҡаршылығың булманы, туҙына башлаһам: «Толя, ҡысҡырма миңә!» — тип кенә әйтә торғайның. Ҡыҙған мәлдәремә хәҙер нык үкенәм. Шулай килеп сығырын кем белгән инде. Мин һинең өсөн күңелемдә әллә күпме матур һүҙҙәр һаҡлап йөрөттөм, уларҙы мин һинең тубыҡтарыңа ятып үлгәндә әйтермен, тип ниәтләнә инем. Һөйөү, үкенеү, ғәфү үтенеү, рәхмәт һүҙҙәре ине улар. Әйтә алмай, әйтеп өлгөрә алмай ҡалдым. Бик йәл...

Хәтереңдәме, үлерҙән бер аҙна элек күргән төшөмдө һөйләгәйнем. Ниндәйҙер шаҡмаҡ рәүешендәге ҙур, ҡара нәмә инде төшөмә. Ул әллә ҡаранан һуғылған балаҫ, әллә стенаға уйылған ҡара тишек, аңламаҫһың. Ошо ҡара нәмә мине үҙенә саҡырған, тартҡан һымаҡ. Миңә ҡурҡыныс. Уяндым да ошоно һөйләнем. Ғәҙәттә, һин минең төштәрҙе юрай торғайның: аҡсаға, шатлыҡҡа, хат килеүгә һ. б., һ. б. Ә был юлы бөтөнләй өндәшмәнең, был мине аптыратты.

Төш тура килде — ҡара ҡайғы мине үҙенә тартып индерҙе...

Йыш ҡына төн уртаһында мин һинең уҡынғаныңды, Аллаһы тәғәлә менән һөйләшкәнеңде ишетә торғайным. Һинең унан нимә һорағаныңды, нимә үтенгәнеңде беләм хәҙер. Һин минән алдараҡ үлергә теләнең — минең үлемде күтәрә алмаҫыңды әйткәнең бар ине. Бынан тыш оҙаҡ ауырымаҫҡа, паралич менән ятмаҫҡа, Аллам һаҡлаһын, әсәһенеке кеүек аяғында гангрена башланмаһын, үҙе лә түшәктә ятып этләнмәһен, башҡаларҙы ла йонсотмаһын, ире менән улы ауырыуға юлыҡмаһын, ғүмерҙәрем оҙон, яҙған әҫәрҙәремә уңыш юлдаш булһын...

Һин егерме һигеҙенсе ғинуарҙа үлдең, изге рамаҙан көнөндә ерләнек. Кемдер, был көндә гонаһһыҙ, изге кешеләрҙе генә ерләйҙәр, тине. Был, ысынлап та, шулайҙыр.

Һинең үлемеңә, янымда булмауыңа, бынан ары бер ваҡытта ла янымда булмаясағыңа һис ышанғым килмәй. Кәфенгә төрөнөп, өйҙә ятҡаныңда, миңә, бәхетһеҙлектән, ҡайғынан шаңҡыған кешегә, һинең менән әле генә хушлашмайымдыр һымаҡ тойолдо. Һин минең янда, хәҙер торорһоң да көндәлек өй мәшәҡәттәренә сумырһың, донъя ығы-зығыһына бирелерһең төҫлө ине. Артабан йәшәүҙең мәғәнәһе юҡ, был — һуңғы нөктә, сик. Ә кистәрен һинең кухняла ҡашығаяҡ йыуыуыңды, ванна бүлмәһендә теш таҙартыуыңды, төнөн янымда тын алғаныңды ишетмәгәс, мин үҙемде тере килеш ҡәберҙә ятҡан кеүек хис итәм. Иртәгеһенә бушлыҡта уянам. Ерләгәндең икенсе көнөнә, улыбыҙ менән киленебеҙ ҡайтып киткәс, фатирҙа япа-яңғыҙым ҡалдым һәм саҡ аҡылымдан шашманым. Төнө буйы бүлмәләр буйлап йөрөп сыҡтым, һинең менән һөйләштем, һин бындамы, янымдамы, әгәр бындаһың икән, әгәр һинең рухың, астраль тәнең өйҙә икән, күрен, шәүләңде күрәйем, исмаһам, тип һораным, ишетһәң, күрһәң, унда һиңә рәхәт икәнен белгерт, тип инәлдем...

Ҡөрьән уҡығанда мин һинең эргәңдә ултырҙым, уң ҡулыңды тотоп ултырҙым — аҡ кәфен аша ул боҙ кеүек һалҡын. Мине иркәләгән, массаж яһаған, ваннала йыуындырған һинең йомшаҡ, йылы ҡулдарың үле есемгә әйләнгәйне. Уны нисек аңларға, нисек күҙ алдына килтерергә — элекке көн генә беҙ үҙебеҙҙең аллея буйлап йөрөнөк, Хромов урамындағы беҙҙең ҡайындар янынан үттек, ә бөгөн һин юҡ. Баш етмәй, был хәлде аңлауы ҡыйын. Һинең рухың, уйҙарың, мөхәббәтең, шатлыҡ-ҡыуаныстарың,

ҡайғы-хәсрәтең, өмөттәрең, йәлләүең ҡайҙа булды һуң? Һин ҡабул иткән минең булмышым ҡайҙа? Былар барыһы ла һинең мейеңдең нейрондарында, молекулалар йыйылмаһында ғына булдымы икән ни? Улар хәҙер үле, тимәк, беҙ тормош тип иҫәпләгән нәмә тулыһы менән көл, мәйет, үлемме?.. Әгәр был ысынлап та шулай икән, Тыуҙырыусы үҙенең ижад емешенә үтә аяуһыҙ. Миһырбанһыҙ эволюцияның үлергә тейешле тере ҡорбандары ғынамы ни беҙ?

Кем белә, бәлки, ул Алла тигәндәре барҙыр ҙа. Һәм, әлбиттә, була ҡалһа, ифрат ҙур йыһан хужаһы һәр кем яҙмышын ҡарап-күҙәтеп тора алмай, сөнки беҙҙән, ерҙә көн иткән йән эйәләренән башҡа ла Галактикала бүтән бик күп, миллион, миллиард фекерләй белгән тере организмдар бар. Ә беҙ, меҫкендәр менән, уның фәрештәләре генә етәкселек итәлер. Ниндәйҙер өмөтһөҙлөккә бирелеп, мин ҡайсаҡ, ғүмерем буйы янымда фәрештәм йөрөгәндер, ахыры, тигән уйға киләм. Миллиондар араһынан ул мине табып алды ла гел генә һаҡлап йөрөттө бит. Тормоштоң һалҡын тулҡындарына ырғытылған етем инем, яҡтылыҡҡа, белемгә ынтылдым, әҫәрҙәр ижад иттем. Һуғышта йөҙ мәртәбә үлә ала инем, тере ҡалдым, әйтерһең дә, миңә тоҫҡалған пуляларҙы, мина ярсыҡтарын кемдер ситкә һирпеп торҙо. Өйләнешеү. Танышып айырылышып китеүебеҙгә ете йыл уҙҙы, мин һине онотоп та бөткәйнем, ул беҙҙе йәнә осраштырҙы...

Һәм мин йыш ҡына, һин бит үҙең минең өсөн ер ҡатыны төҫөнә ингән фәрештә булғанһың, тип уйлайым. Шулай икән, ниңә улай иртә киттең һуң? Икебеҙгә ниндәй рәхәт, күңелле ине. Бәхетле мәл үтә тиҙ үтте. Бәлки, һин минең алда ҡарт булып күренергә теләмәгәнһеңдер, мин, маразмға бирелгән ҡарт, һине, ҡарсыҡты, ҡыйырһытыр, тип ҡурҡҡанһыңдыр. Мин һине һәр йәһәттән дә үтә күрәм, һинең турала бөтәһен дә беләм, тип уйлай торғайным. Һинең йыйнаҡлыҡты, таҙалыҡты, ихласлығыңды беләм, һиндә үҙ-үҙең тураһында ғына уйлау юҡ. Ун йыл буйы һинең елкәңдә ултырҙым да ҡуйҙым, үҙемдең хикәйә, повестарымды яҙҙым, һин бер үҙең эшләнең, мине ҡараның, ашаттың һәм был турала бер ҡасан да әйтмәнең, хатта төрттөргәнең, ишаралағаның да булманы. Мыжыҡ, ваҡ түгел инең һин... Һәм бер кемдән дә көнләшмәнең...

Ә шулай ҙа, хәҙер килеп аңлауымса, мин бик мөһим һәм тәрән нәмәне барыбер ҙә белә, аңлай алмағанмын. Оҙаҡ йылдар минең менән ниндәйҙер сәйер ҡатын йәшәгән, тип

тә уйлап ҡуям ҡай саҡ. Һинең менән бер ваҡытта ла юғары төшөнсәләр, юғары материялар тураһында һөйләшеп ултырғаныбыҙ булманы. Һинең баш минеке кеүек китап сүбе менән тулмағайны. Тәүҙәрәк йыш ҡына быны мин һинең кимәлең, белемең түбәндер, тип уйлай торғайным, баҡһаң, йәшәйештең төп аҡылын һин китапһыҙ ҙа бына тигән итеп үҙләштергәнһең икән. Күпме генә аҡыл һатма, барыбер ҙә бер төп фекергә — бөтә нәмәнең дә мөхәббәттән яралғанына киләһең.

Мин сәйәсәткә төшөп фәлсәфә һата башлаһам, һин өндәшмәй торғайның. «Һин мине тыңлайһыңмы, юҡмы?» — тип һораһам, «Эйе, тыңлайым, шулай тинең, былай тинең», — тип яуаплайһың. Әммә бер ҡасан да ҡаршы төшмәнең, бәхәсләшмәнең минең менән. Шәхси фекерең булһа ла, иргә ҡаршы хәбәр һөйләргә тейеш түгелмен, тип иҫәпләнең, күрәһең.

Беҙҙең һөйләшеүҙәр, нигеҙҙә, тормош, бала саҡ тураһында була торғайны. Пенза ҡалаһында йәшәгәнеңдә баҙарҙа буяуҙар һатҡаныңды бәйән иткәнең хәтерҙә. Пакеттарға ҡойолған ул буяуҙарҙы кешеләр яҡшы һатып алған. Һин шул рәүешле ас һуғыш йылында ғаиләгеҙгә ярҙам иткәнһең, әммә мәктәптә дәрестәреңде ҡалдырғанһың. Класташ малайҙарың: «Ул баҙарҙа буяуҙар һата», — тигән. Оят булған һиңә. Мәскәүгә күскәс, һине тимер юлына күмер йыйырға ебәргәндәр. Йәнә дәрес ҡалдырыуҙар, йәнә насар билдә алыуҙар...

Үҙ сиратымда, мин ун бер генә йәшемдә атайһыҙ ҙа, әсәйһеҙ ҙә ҡалыуым тураһында һөйләйем. Шунан бирле, һиңә өйләнгәнсе, ғаиләм дә, үҙемде яратҡан кеше лә булманы, тим. Мине йәлләп, һин илайһың...

Оло ышаныс менән шуны әйтә алам: һин минән күпкә яҡшыраҡ, аҡыллыраҡ булғанһың икән. Һин ғорур инең, тыумыштан килгән ихласлыҡ, ҡатын, әсә киң күңеллеге һәм дә зыялылыҡ бар ине. Һәр ваҡыт минең, улыбыҙҙың һаулығын хәстәрләү менән йәшәһәң дә, йомоҡ, кәйефһеҙ булманың. Беҙ көлә, шатлана белә торғайныҡ — көлөүеңде ярата инем. Мин һинең юҡлығыңа һаман ышана алмайым, мин һине — әсәһен юғалтҡан бала һымаҡ, үлгән итеп ҡабул ҡыла алмайым. Ваҡыт үтә килә асыҡ йөҙөңдө онота ла башлармын, әммә көлөүеңде, тауышыңды, һоро-ҡара күҙҙәреңде, асыҡ йөҙөңдө онотоуҙан ҡурҡам, ныҡ ҡурҡам, уларҙың гел генә күҙ алдымда тороуын теләйем...

һинһеҙ оҙаҡ йәшәй алмамдыр. Һине бер кем дә алыштыра алмай. Шулай ҙа үҙеңә саҡырмай тор, саҡ ҡына булһа ла йәшәйһе килә әле. Ҡырҡ көндән һуң кейемдәреңде туғандарыңа таратып бирәм дә апрелдә ауылға китәм. Июндә яныма Маша киләсәк. Беҙ ейәнсәрем менән йылға буйында йөрөйәсәкбеҙ, ялан, туғай, кәбәндәр төбөндә ултырасаҡбыҙ һәм һине иҫләйәсәкбеҙ. Һуңынан, бик ашыҡтырмаһаң, әлбиттә, ҡайын төбөнә килермен. Ауылда үлһәм, беҙҙең һөйәктәр бер-береһенән айырым-айырым ятасаҡ, ә рухтарыбыҙ теге донъяла ҡушыласаҡ. Хәтерләйһеңме: «Унда һин мине танымаҫһың да әле, эргәнән үтеп китерһең, берәй һарыҡай артынан сабырһың», — ти торғайның. Танырмын, борсолма. Теге ваҡыттарҙа эштән йәки магазиндан ҡайтҡан саҡта атлауыңды үсекләгән ише үсектерәсәкмен әле. Рәхәтләнеп көләсәкбеҙ, унан ҡосаҡлашырбыҙ ҙа иларға керешербеҙ. Һәм мәңге бергә булырбыҙ. Унда айырылышыу юҡ, тиҙәр.

Быларҙы мин нимә тип яҙам әле? Әҙәби әҫәргә дәғүә итмәйем. Һәр ваҡыт уйлаған һәм кистәрен һиңә һөйләгәндәрҙе машинкала баҫтым. Үлемһеҙлек барҙыр, тим. Рух үлемһеҙлеге булмаһа, ерҙә йәшәүҙең мәғәнәһе лә ҡалмай. Һәм һин, минең үлемһеҙ ҡатыным, минең янда осоп йөрөйһөң һәм, эсеңдән генә ҡағыҙҙағы хаталарҙы төҙәтеп, ошо яҙмаларымды уҡыйһың...

Бәлки, икенсе кешегә әүерелеү, йәғни, реинкарнация барҙыр. Шулай икән, күпмелер ваҡыттан һуң һинең асыҡ, таҙа рухыңды минең гонаһлы, әммә ғәфү ителгән рух менән берләштерер ҙә Тыуҙырыусы яңы биологик тышлыҡ ижад итер. Һәм сыуаҡ бер яҙҙа, йәп-йәшел яҙҙа, мин паркка килермен дә һине осратырмын...

Һин аҡ ҡайын янында торасаҡһың...

# ЙӨКМӘТКЕҺЕ

*Повестар*


Быуа һуғыш бөтөр ҙә... 3
Кисеү 67
Ҡара баҫыу 177
Ҡапҡа 238
Йонсоу көндәр 286
Томан эсендәге яңғыҙ йорт 352


*Хикәйәләр*


Үзбәк 391
Сибәркәй 408
Һыҙлай иҫке яралар 415
Миҙал 430
Йыназа 435
Диуана 441
Ҡыртыш 455
Һыуға батҡан кеше 465
Мылтыҡ 475
Зыярат ҡылыу 490
Кендек әбейе 509
Һин аҡ ҡайын янында тора инең... 514



*Литературно-художественное издание*

**ГИНИАТУЛЛИН Талха Юмабаевич**

**ТЫ СТОЯЛА ПОД БЕРЕЗОЙ...**

Повести, рассказы

*(на башкирском языке)*

Мөхәррире *Эльвира Нигмәтуллина.* Рәссамы *Сергей Ефименко.* Биҙәлеш мөхәррире *Фазлетдин Ислахов.* Техник мөхәррире *Венера Абдрахманова.* Корректорҙары *Айгөл Хәкимова, Альбина Баязитова, Гөлсирә Таһирова*

Йыйырға бирелде 12.02.07. Баҫырға ҡул ҡуйылды 14.05.07. Форматы $84 \times 108^{1}/_{32}$. Офсет ҡағыҙы. Балтика гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды. Шартлы баҫма таб. 27,72. Шартлы буяу отт. 28,14. Иҫәп-баҫма таб. 29,17. Тиражы 2000 дана. Заказ № 1.0010.07.

Башҡортостан Республикаһының
«Башҡортостан «Китап» нәшриәте» дәүләт унитар предприятиеһы.
450001, Өфө, Левченко урамы, 4а.

Башҡортостан Республикаһының
«Өфө полиграфкомбинаты» дәүләт унитар предприятиеһы.
450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.



**Талха Йомабай улы Ғиниәтуллин**
**(Анатолий Генатулин)**

1925 йылда Учалы районының Ураҙ ауылында тыуған. Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнаша, байтаҡ хәрби наградалары бар. Яҙыусының китаптары, нигеҙҙә, Мәскәүҙә, үҙәк нәшриәттәрҙә сыҡты, айырым хикәйә, повестары Германияла, АҠШ-та, Һиндостанда, Ҡытайҙа, Чехословакияла, Польшала һ. б. илдәрҙә донъя күрҙе. Башҡортса ике китабы нәшер ителде – «Тыуған тупһа янында» (1994), «Тау артында ниҙәр бар» (1997). Ҡулығыҙҙағы «Һин аҡ ҡайын янында тора инең» – өсөнсөһө.

Әҙип Мәскәүҙә йәшәй, русса яҙа. М. Горький исемендәге Әҙәбиәт институтын тамамлаған. Ижадының төп темаһы – һуғыш, һуғыш ҡалдырған тән һәм йән яралары. Һуңғы осорҙа тыуған яғына, замандаштарына арналған автобиографик юсыҡтағы әҫәрҙәргә лә йыш мөрәжәғәт итә.

КИТАП